Таңсулпан Ғарипова

Бөйрәкәй



Таңсулпан Ғарипова

Бөйрокәй

Роман-эпопея

КИТАП

ӨФӨ - 2004

УДК Х2 3-512.141
ББК 84 4(2 Рос=Баш)
Ғ 21

Ғарипова Т. Х.
Ғ 21 Бойрэкэй. Өфо: Китап, 2004. 768 бит.

ISBN 5-295-03399-6

Был китапка ютош быуат һыйған. Ниндәйҙер мөғжизә менән гарих китаптары юкка сыкһа, Таңсулпан Ғарипованың роман-ЛОПеяhы буйынса егерменсе быуатты ҡайтанан тергеҙеп булыр ине. Тарих тирмәненә бойҙай бөртөктәреләй төшкән кеше яҙмыштары матурлыкка һәм батырлыкка һынау тота. Бәғзеһе онға әйләнә, бәғзеһе - кәбәккә...

УДК 82–3-512.141
ББК 84–4(2 Рос=Баш)

ТП-091/04

5-295-03399-6

© Т. Х. Ғарипова, 2004
© А. Р. Мөхтәруллин, 2004

Беренсе өлөш

МӨҢРӘЙ-МӨҢРӘЙ КИЛӘ БӨЙРӘКӘЙ

Беренсе бүлек

Иртәнсәкәй тороп, тышҡа сыкһам,
Мөңрәй-мөңрәй килә Бөйрәкәй.
Бейрәкәйҙе һауған шул ҡыҙҙы уйлап
Өҙөлә шул минең үҙәккәй...

— Аптыраттың әле һин, Мәҙинә, — Гөлбаныу эллә төтөндән, эллә моңсан йәшкәҙәгән күҙҙәрен ҡыҙына төбә-не, — кемдән отоп алдың һин был йырҙы, ә?!

— Әлләсе... — Ҡыҫҡа ғына күлдәк кейгән ҡакса ҡыҙ урынынан һикереп торҙо, нәҙек кенә беләктәрен, беләктәре кеүек үк нескә аяктарын тирә-якка болғаслап, күнегеүҙәр яһай башланы: — Бер, ике, өс!

— Ипләп, ҡустыларыңды уятырһың! Ай, ата Ғәбиҙә...

«Ата Ғәбиҙә» тимәҫлек тә түгел ине Мәҙинәһе ошо минутта: торғаны малай. Бынау муйылдай күҙҙәрендәге ҡыҙҙарға ғына хас шаянлык менән һикерешкән осҡондар һәм улар өҫтөндә яңы тыуған айҙай ҡыйылған ҡашы булмаһа, кем ышанырине икән уның ҡыҙ бала булғанына?

Гөлбаныу көлдөксә эргәһенә сүгәләгән еренән торғас та ҡыҙына һаман тамһынып ҡарауында булды: тал сыбығылай нескә үҙе, эсендә йәне нисек тора, ә тауышы... моңо... Шундайын мондоң ҡәҙимге бер баланан сыкканына ышанырлык та түгел.

Гөлбаныу үҙ алдына тәрән көрһөндө лә сөйҙәге ҡыҫҡа тунына үрелде:

— Фермаға китәйем инде мин, балам. Ҡуҙ төшкәс, ҡаҙандағы һыуҙы самауырыңа һалырһың. Ҡайнап сыҡһа, баҫ та ҡуй - мин оҙаҡламам. — Әсәһенең һуңғы һүҙҙәре инде соланға сыҡҡас ишетелде. — Кәртэ яғын байҡа — һыйыр сыуын өҙгән бөгөн! Ҡустыларыңдан күҙ яҙлыҡтырма — самауырға бешеп ҡуймаһындар!

Мәзинә иһә әсәһе әйтмәһә лә һыйыр янына олағырға ғына тора: бсзәүкәй донъяға киләсәк бөгөн! Мәҙинә уға Бөйрэкэй тип исем ҡушасаҡ. Әлеге йырҙы ла бит ул шуға йырланы...

Иңбашына көпнһөн һалған, аяғына әсэһенең тэрэн калушын кейгән Мәҙинә, ҡура ишеге төбөнә еткәс, баҙабыраҡ ҡалды. Эстә өҙәк-өҙәк тырһылдап тын алған тауышты ишеткәс, тағы ла нығыраҡ ҡаушаны.

— Билдэш! — Үҙ исемен ишетеү менән ғәҙәттә ызылдап ҡуя торған һәүкәш был юлы өндәшмәне. — Билдәш, һиңә әйтәм! — Мәҙинә әллә һалҡындан, әллә баҙауҙан тыңлауһыҙға әйләнгән бармаҡтарын көскә ҡыбырлатып, ишектең бауын систе, һаҡ ҡына баҫып, төпкә, һыйыр ятҡан яҡҡа ыңғайланы. — Билдәшкәй, һәүкәшкәй...

Билдәш йәнә тауыш бирмәне. Мәҙинәнең, әлбиттә, һыйыр быҙаулағанын күргәне бар, тик унда, фермала, әсәһе, башҡа өлкән кешеләр була. Өйҙән сыҡҡанда быҙауларға ятҡан һыйырҙы күреп былай ҡаушармын, ҡурҡырмын тип уйламағайны ул. Мәҙинә һыйыр тиҙәге менән һыланған, хәҙер инде тош-тош ерҙән ҡубып төшә башлаған ситән кэртэнең тишеге аша эскә ҡараны. Күҙҙәре уның туп-тура һыйыр күҙҙәре менән осрашты. Ярабби... Хайуан күҙҙәренә эркелгән өнһөҙ ғазап бына-бына шартлар ҙа күҙе менән бергә атылып сығыр! Йә хоҙай, була торған булһаң, ярҙам ит Билдәшкэ?! Мэҙинэ йөрэге дарҫлап типкән килеш эскә үтте һәм Билдәш эргәһенэ сүгэлэне:

— Тэңрем... Аллам... Хоҙайым!.. — Билдәштең хәлен еңелэйтэ торған доғалар булһа, ошо минутта Мәҙинә уларҙың меңен берсә ҡабатлар ине. — Әсэй, эсэкэйем... Әсэй! — Ул хәҙер генә фермаға йүгерер ине — Билдэште был хәлдә нисек ташлап китһен?!

Өҫтөнә ҡаплаған көпөһө күптән инде шыуып төшөүҙән күлдэксэн ҡалған ҡыҙыҡай, ҡапыл бер ҡәтғи ҡарарға килгәндәй, кәүҙәһен турайтты, унан, ашыҡмай ғына, эсәһенә оҡшатырға тырышып, һэлмәк баҫып, һыйыр янына килде лә тулғаҡ ҡыҫымында тартышҡан йән эйәһенең осаһына ҡулын һалды. — Билдәш, йәнем, эйҙә инде, тырыш!

Бесән наҡыҫ булыуҙан күтәртеү хәленә еткән һыйыр ауыр быҙауланы. Мәҙинә, терһәгенэ тиклем ҡанға буялып, быҙауҙың һәр ағзаһын инәһе ҡарынынан бушатышты. Быҙауҙың артҡы тояҡтары толҡаттан айырылғанда, Мэҙинә, үҙе лэ хэлһеҙләнеп, арҡаһы менэн туң ергә салҡан төштө. һыйыр йөгэнәкләнергә, торорға ынтылды ла көсө етмәне, кире урынына ятты, унан, ызылдап, быҙауын күрергә була, башын артҡа борҙо.

— Хәҙер... Сабыр ит... — Мәҙинә ҡанлы-һүлле еүеш йән эйэһен нисек итһә итеп әсәһе алдына һалды. — Инәйең ул һинең, безәүкәй, инәйең...

Билдәш ас хайуан ҡомһоҙлоҡ менән быҙауын ялаған арала, бер ҡосаҡ бесэн күтәреп, Мәҙинә өйгә инде лә һүрелгән усаҡтың таңцыр йылыһы төшкән урынға шул бесәнде түшәне.

— Апый... — уянышып, мыжырға уйлап ятҡан ҡустыларына бойороулы тауыш менән:

— Шымығыҙ! — тине лә тағы тышҡа атылды. Хәҙер генә өйгә индермәһә, быҙау бит өшөр, туңып ҡуйыр! Мәҙинә үҙенең елкэһенэн шыуып төшөп ҡалған көпөһөнә быҙауҙы һалды ла, балаһы артынан ҡуҙғалырға, йөгәнәклэргэ маташҡан Билдәштең йөрәкте эрнетеп ызылдағанына ҡарамай, теше-тырнағы менән көсәнеп, быҙау ятҡан көпөнө өйгә табан өҫтөрәне...

Кис булды. Мәҙинә, дәрестәрен алып, усаҡта ялпылдаған утҡа яҡын барҙы. Гөлбаныу көлдөксэ эргәһендә, бүкән өҫтөнә тас ҡуйып, көл тоноғонда Мәҙинэнең, үҙенең бысранған кейемдэрен йыуа. Ут уның оҙонсараҡ нэфис яңаҡтарын, ҡуйы керпектәре араһынан тонйорап ҡараған күҙҙэрен яҡтырта. Матур шул Мәҙинэнең әсәһе, йәш кенә.

— Әсэй, хәҙер һиңә нисә йәш ул?

Гөлбаныу ауыҙ сите менән генэ көлөмһөрэне:

— Әсәйендең йәше ниңә кәрәк булды, ҡыҙым?

Ьылай ғына, — Мәҙинә, йылыға иҙерәп йоҡлаған быҙауҙы уятып ҡуйыуҙан ҡурҡып, шыбырлауға күсте, — мин тыуғанда һиңә ун алты ғына йәш булғанмы ул, әсәй?

— Шулай ғына ине шул, балам.

— Уй! - Ҡапыл тетрәнеп, Мәҙинә күҙҙәрен йомдо. — Ә мин, осой, кейәүгә бер ҙә сыҡмайым!

— һы... Ҡыҙыҡ икән...

- Әсәй, атайым... Ул ҡайтһа... — Мәҙинә ҡапыл, үҙ уйынан үҙе оялғандай, тотлоҡто.

— Нимә... атайың?

— Былай ғына... Ул ҡайтһа, һиңә ҡыйын булмаҫ ине тигәйнем...

— Һиңә түгел, беҙгә тиң...

— Беҙәүкәйебеҙ матур, эйе бит, әсәй? — Мәҙинә атаһы тураһындағы һүҙҙе тиҙ генә икенсегә борорға тырышты. Әсәһенән дә ул бөтөнләй икенсе нәмә: «Ниңә һин урыҫ Хашимға кейәүгә сыҡтың?» — тип һорарға иткәйне.

Ҡаҡҡанын хәтерләмәй Мәҙинә атаһының. Эсеүен эсте. Әле ул саҡта, һуғышҡа тиклем, ауылда төшөрөштөргән ирҙәр булһа ла, Хашим кеүек илергәнсе эсеп йөрөгәндәре юҡ ине. Баҙарғамы, он һалдырырға барһынмы — Хашимдың айыҡ ҡайтҡаны булманы. Шуға күрә лә ауылдаштары ике **Хашимдың бсрсһснө** «урыҫ» ҡушаматы таҡты. Икенсе Хашпмга яҙған ҡушамат та шәп түгел шәплеккә: Уҫыраҡ Хашим. Мәгәр **Мөҙинә** ло атай булған кешеһенә «Урыҫ Хапшм» **тейеүҙәренә ғәрләнә.** Был исем уның атаһын нисектер **ЯТ итеп** күрһотә һымаҡ. Аталарына шундай исем таҡкастар, балаларына ни тимәҫтәр? Мәҙинә башта оялды, унан ғорлондс, һуңынан, тейер-теймәҫтән кәмһетелмәҫ-хурланмаҫ өсөнмө, ҡырағайланды, илгәҙәк тәбиғәтле, алсаҡ күңелле ҡыҙ баланан ҡырыҫ, сая үсмергә әүерелде. һуғыш та бит, ана, күптәрҙе бөктө. Элек күршеһенә сәләм бирмәгән бәғзе берәү, хәҙер инеп шуның сәйен бер эсеп сығыр өсөн генә лә бит-йөҙ һыуын түгә.

Мәҙинәләр ҙә артыҡ тук йәшәмәйҙәр. Иншалла, һыйыр быҙауланы. Мәҙинә быға тиклем дә туҫтаҡ-сеүәтә күтәреп күршеләренә йомошҡа бик йөрөмәне, бынан һуң инде ул бөтөнләй сыҡмаясаҡ. Бик кәрәк булһа, ана, әсәһе Йәнтимере менән Иштимерен йөрөтһөн. Улар, ике күпкәк ҡорһаҡ, ашауҙан башҡа бер нигә эшкинмәйҙәр. Әсәһе уларҙы кис булһа иркәләп туймағандай: әле береһен, әле икенсеһен тупылдатып һөйә, әллә ниндәй ҡолаҡҡа ятышһыҙ иркә һүҙҙәр әйтә. Ә бына Мәҙинә бары тик мал балаларын ғына ярата. Иҙәндә йоҡлап ятҡан анау беҙәүкәй булмаһа, өйҙөң ни йәме булыр ине? Мәҙинә үҫһә, кәртә-ҡураһын тултырып мал аҫрар, ә инде элегерәк тыуһа — өйөр-өйөр йылҡылары Ҡаратау һыртын иңләп йөрөр ине. Эйе, эйе: бына шулай бай булыр ине ул! Үҙенең силсәүит Ихсанбайҙыҡы ише ҡара айғыры, ҡулында ҡамсыһы булыр ине.

Ҡара айғыр тигәс, Мәҙинәнең хәтеренә ҡылт итеп тағы Ихсанбай килде. Үҙ ғүмерендә уның йәнен ҡурыштырып, тынын быуғандай кешеләр бар бит ул. Шуларҙың береһе — атаһы, Урыҫ Хашим. Ярай, уныһы һуғышҡа китте. Кем белә, бәлки, алланың рәхмәте төшөп, ҡайтмаҫ та әле. Икенсеһе — Ихсанбай, уныһы күҙ алдында. һуғышҡа үпкәһе сирле булғанға алмағандар, тиме шуны... Үҙе былай сирлегә лә оҡшамаған, бурһыҡ майын эсә торғас, бурһыҡтан былайыраҡ һимергән. Уны ниңә шул тиклем күрә алмағанын Мәҙинә үҙе лә төшөнмәй. Был һөмһөҙ кешенең итләс битенә ҡыҫылған зәңгәр күҙҙәренең Мәҙинәгә тишерҙәй итеп ҡарауымы, ҡорһағын кәпәйтеп, бисәләр шикелле ваҡ-ваҡ баҫып йөрөүеме — өҙөп кенә ни ҙә булһа әйтерлек тә түгел. Хатта уның һөлдәләй ит-ашһыҙ, оҙон буйлы, сығыңҡы бите өсөн үтә бәләкәй уйылған ауыҙлы, йоҡа иренле, сомтор танаулы ҡатынын да мөрһәтһенмәй Мәҙинә. Шул танауға танау рәүешен бирерҙәй нескәлектәрҙе башҡарып тормай йәбештерелгән оролай танауға, иренһеҙ генә уймаҡтай ауыҙға көлөү бер ҙә килешмәй. Ә ул, Сәбилә, шуны һис төшөнмәй, туктауһыҙ көлә. Көлгәнендә йөҙө: «Ҡуйығыҙсы әле, мине ниңә ыҙалатаһығыҙ инде?» — тигәндәге кеүек, ҡыҙғаныс булып тартыша. Әйткәндәй, Мәҙинәне күрһә, быныһы ла ҡапыл үҙгәреп китә. Төҫһөҙ күҙҙәренең ҡаяуын ҡаҙамайынса үтмәй...

Әсәһе эштән ҡайтҡас, уңайын сығарып, ошо хаҡта белергә лә тырышып ҡарағаны бар уның:

— Әсәй, Ихсанбай кем ул?

Әсәһе башта ҡаушабыраҡ ҡалған кеүек булһа ла, яуапты ҡыҫҡа тотто:

— Ницә, Ихсанбайҙың кем икәнен белмәйһеңме? Силсәүит, шэй...

— Беләм...

— Белгәс...

— Әсәй, ә ниңә ул мине күрә алмай?

— Ксм эйтте уны? Ихсанбай үҙеме?

— Бер кем дэ эйтмәне, үҙем беләм.

— hы... — Ғүмергэ ашыккан, ғүмергэ бушамаған әсәһе был юлы ла тсҙгенде ҡыҫҡа тотто. — Тейешһеҙҙе төбәшкәнсе, ана, ҡустыларың тороуға тамаҡ йүнәт.

— Шулар арҡаһында мин мәктәпкә йөрөй алмайым!

— Мэҙинә!.. — Әсәһе артынан ишек ябылды.

Йөрәгеп ҡара бесәй кеүек тырнаған һорауҙарын күкрэгенә ҡыҫып, Мәҙинә иҙән уртаһында тороп ҡалды. Юҡ! Әсәһенән һорап бер ни белерлек түгел! hис бер һорауға яуап табырмын тимэ! Сэйер ҡылыҡтары бар шул әсәһенең. Мәҙинә бит ҡустылары тыуырын да һуңғы минутына тиклем белмэне. Урындыҡ ширлегенэ шыҡырайып тотонған хәлдә:

— Ҡыҙым, Фәүзиэ инәйенде генә алып кил әле?! — тип ялбарҙы әсәһе. Эйе, эйе! Ҡойоп ямғыр яуған төндө Мәҙинэ ғүмере бер тупһаһын ашаҡламаған өйҙөң тәҙрәһен шаҡырға мәжбүр булды.

Әсәһенсң тағы бер ҡылығын аңлай алмай ул: аталарынан хат килһә, ҡобараһы осоп, төҫө боҙола. Хатты ашығып-ашығып аса ла укымай кеҫәһенә һалып ҡуя. Укый башлаһа, ҡағыҙҙы күҙе менон тишерҙәй булып, Йәнтимер менән Биктимсргэ ҡағылышлы юлдарҙы эҙләй. Мәҙинә лә бит шунда ҡарап тора, эсәһе өсөн ул юҡ кеүек.

Бер саҡ Мэҙинэ түҙмәне. Әсәһенең һырмаһы кеҫәһенән өскөл хатты алды ла тәҙрэ эргәһенә килде. Башта атаһы бөтә күрше-күлəнгэ сәләм күндергән булып сыҡты. Сәләмен «күптин-күп, суктин-сук» тигән һүҙҙәр менән семэрлэп тә ебәргән. Бер кемдең дә был рәүешле һөйләшкәнен ишеткәне юк Мәҙинәнең: тикмәгәме уның атаһын «Урыҫ Хашим» тиҙэр? Был хәлдэн ул шундай һығымта яһаны.

Атаһы шунан мал-тыуарға күскән, бесэндең етер-етмәүен һорашкан. Өшөйһөгөҙҙөр инде, тип ҡайғырған. Мәҙинәнең йөҙөн мыҫҡыллы йылмайыу ҡыйып үтте: «Бахыр... Иә, үҙең бында саҡта бесән әҙерләп, утын ҡырҡып йәлсеттең». Йәне көйөп артабан укымайынса хатты кире һырма кеҫәһенә тығырға торғанда, уның күҙенә «малайҙар» тигән һүҙ салынып ҡалды. «Теге маңҡаларҙы һораша бит был!» Мәҙинә хатка тексэйҙе. «Малайҙарҙы якшы ҡара, — тиелгән ине унда, — ҡайтмай ҡалһам, тоҡомомдо дауам итерҙәр, үҫкәс, үҙеңә таяныс булырҙар. Мәҙинәбеҙ ул бит инде ҡыҙ кеше. Кеше балаһы. Их, Гөлбаныу, һуғышҡа тиклем тормоштоң ҡәҙере ниңә беленмэгән икән?!»

Артабан укып торманы Мәҙинә: атаһының һуғышҡа тиклем ниндәй булғанын унһыҙ ҙа белә ул, э бына үҙенә ҡағылған һүҙҙәрҙән тәне семерҙәне, тыны ҡыҫылды: кеше балаһы! Дөрөҫ, бер яктан ул үҙенең «Урыҫ Хашим» балаһы булмауына һөйөнә лэ, икенсе яктан, атаһыҙ булырға ни... көсөк түгел дэ инде ул! Теге саҡта ук әсәһенән шуны һорарға иткәйне — һөйләштереп буламы ни уны?

— Нәсибуллиндар ошонда торамы? — Бәлэкәй генә өйҙө һыуыҡ болотона тултырып килеп ингән өс ир Мәҙинәгә әкиәттәге төҫлө ер аҫтынан ҡалккандай тойолдо. һыуыҡ болото таралғас ҡына Мэҙинә уларҙың йөҙөн төҫмөрләне: бәй, алдан килеп ингэне генэ таныш түгел икэн. Береһе быларҙың Ихсанбай, икенсеһе — идарала төймә тарткан Ишмәмәт. Ысын исеме шуның Ишмөхәмэт шикелле лэ. Башкалар Ишмәмәт тигәс, Мәҙинә лә шулай ти ҙә ҡуя... Ә теге таныш түгел ағай аяғына ҡупшы аҡ быйма кейгән, ҡулында папка. Ул шул аҡ быймалы тәпэйҙәрем бысрап ҡуймаһын, тигән кеүек, быҙау яткан ергә ҡарап-ҡарап ҡуя.

Мәҙинә был саҡырылмай килгән, сәләмһеҙ ингән ҡунаҡтарға ни ҙә булһа өндәшергә өлгөрмәне, баяғы аҡ быймалы ир үҙе һүҙ башланы:

— Нәсибуллиндарҙың һин кеме булаһың, ҡарындаш?

һорау Мәҙинәгә мэрәкэ тойолдо:

— Мин ни Нәсибуллиндарҙың бер туған... ҡыҙы булам.

Ят ирекәй төшөнмәне, кэүҙәһе-ние менән боролоп, юлдаштарына ҡараны:

— Как, туйыс, бер туғаны, туйыс, ҡыҙы?

Ишмәмот йәһәтләп быға ярҙамға килде:

— Ни бит, Мәҙинә, ни, беҙ бик етди хөкүмәт эше менән йөрөйбөҙ! Беҙгә, ни, срочно әсәйең... Гөлбаныу кәрәк, эйе!

— Әсәйем ни... эштә. һауын ваҡыты бит!

Быймалы тауышын көрәйтә, кәүҙәһен турайта биреп, йәнә юлдаштарына боролдо:

— Ҡыҙҙың әсәһе... туйыс, Нәсибуллина, беҙгә бит постольку поскольку ғына кәрәк! Эйе. Бында өйҙөң хәҙерге хужаһының, туйыс, Нәсибуллинаның личносы ни при чем! Эйе. Так что, иптәштәр, яңылышмағыҙ: мәсьәләгә конкретно, по-деловому ҡарағыҙ! Эйе!

Ихсанбай үҙ сиратында Мәҙинәне көйҙөргөс ҡарашы аша үткәрҙе:

— Шулай, шулай! Йорттоң аснаунай хужаһы фронтта!

— Ни бит, ҡарындаш, — Ишмәмәт торған ерендә тапанып алды, — Нәсибуллин Хашим Хажиәхмәт улының, — папкаһынан ул бер ҡағыҙ килтереп сығарҙы, — үҙе һуғышҡа киткәнендә... түләнмәгән һалымы ҡалған булған. — Шунан ул йоҡоһонан уянып ҡыбырлай башлаған балаларға ҡараны ла туктап ҡалды. Түшәктәрендә тороп ултырған малайҙар Ихсанбайҙың да иғтибарынан ситтә ҡалманы, тик ниңәлер төҫө боҙолдо:

— Эйе. Атайындың түләп бөтмәгән һалымы ҡалған. Шуның күләме хәҙер... күпме әле, Ишмөхәмәт ағай?

Ишмәмәт йәнә баҫҡан ерендә тапанды:

— Хәҙер... тучныһын әйтәм. Тучныһы: бер һыйыр!

— һыйыр?! — Мәҙинәнең аңына әле ишеткән хәбәренең асылы барып етмәй, мәгәр үҙенә, бынау ике йәнгә, тағы изәндә бер хәсрәтһеҙ йоҡлап ятҡан анау быҙауға, әсәһенә үлемесле ҡурҡыныс янағанын шунда уҡ төшөндө. — һыйыр...

Ҡаршыһында торған ирҙәрҙең кемелер: «Бурыс. Хөкүмәт. Төрмә», — тигән һүҙҙәрҙе әйтте. Ә Мәҙинәнең күҙ алдында шул саҡ шырт баҫҡан, эскенән шешенгән йөҙлө атаһы килде. Ул! Киткәнендә лә балаларының ризығын урлап киткән! Өс көнлөк быҙау эргәһендә торған Мәҙинә йоҙроҡтарын төйнәне, күкрәген ярып, ирендәрен бешереп, атаһына рәнйеү бәреп сыҡты:

— Дөмөкһәңсе шунда, Хашим...

- Егеттәр ат алып килгән, сыҡтыҡ. — Был һүҙҙәрҙең мәғәнәһе Мәҙинәнең шаңҡыған зиһененә барып етмәне, уны бары тик әсе итеп ҡысҡырған әсәһенең тауышы ғына асылына алып ҡайтты:

— Нишләйһегеҙ?! Йырткыстар, ҡанһыҙҙар! — тип өҙгөләнә ине ул тауыш. — Алығыҙ! Йәнемде алығыҙ! Балаларымды аҫрай алмағас, ул йәндең миңә ни кәрәге?!.

Уңарсы Гөлбаныу атылып өйгә инде, ҡысҡырыштан ҡурҡынған малайҙарын утын шикелле итеп ҡосаҡланы ла кире тышҡа йүгерҙе:

— Алығыҙ, быларын да ҡалдырмағыҙ! Аслыҡтан тилмерешеп ятып үлгәндәрен күрмәм, исмаһа-ам... Быҙауы ла... Билдәштең быҙауы-ы-ы... — Гөлбаныу йәнә өйгә ташланды, быҙауҙы күтәреп алып сыҡты ла, малайҙарын бырғаған кеүек, быҙауҙы ла быларҙың алдына ташланы. Ул арала йыйылып киткән күршеләре араһынан кемдер Гөлбаныуҙың үҙен тотто, кемелер игеҙәктәргә йәбеште. Кемдер йыуатты, кемдер әрләне...

Ана, Билдәштең мөгөҙөнә бау таҡтылар, сананың тәртәһенә бәйләнеләр. Меҫкен һәүкәшкәй туктауһыҙ артына ҡайырыла, дүрт аяғы менән ҡарышып тарткылаша, өҙөлдәп баҡырған быҙауын ҡалдыра алмай, йән тетрәтерлек тауыш менән баҡыра...

Мәҙинәнең иҫе инерле-сығырлы. Билдәш тирәләй ҡупкан ығы-зығыға ҡараған да ҡатҡан. һыйыр китте йорттан. Ҡот китте. Инде уларҙың һауыт-һабаһы бер ҡасан да һыйыр ағына сыланмаҫ, иртәнге һауаны зыңғырлатып, һыйыр елененән күнәккә һөт аҡмаясаҡ, киске һиллектә үрештән йөрөп ҡайтҡан, туйған һыйырҙың еңелсә уфылдап ҡуйыуы тултырмаясаҡ, ә безәүкәйҙең ирендәре иркә бер ҡомһоҙлоҡ менән әсәһенең елененә төртөлмәйәсәк...

— Туктағыҙ! — Фарман кеүек яңғыраған эсе тауыш барыһын да һиҫкәндереп, артына әйләнеп ҡарарға мәжбүр итте. — Туктағыҙ... — Мәҙинә быҙауҙы елтерәтеп килтереп санаға һалды. — һыйырҙы алғасығыҙ, быҙау ҙа китһен, быҙау киткәс, мин дә китәм.

— Балам... — Әсәһенең үҙенә өндәшкәнен ишетте Мәҙинә, ләкин артына әйләнмәне: уның ихтыярынан тыш, үҙҙәренән-үҙҙәре урғылған йәштәрҙе ул бер кемгә лә күрһәтмәйәсәк...

һыйыр киткәндән һуң мәйет сыкҡандан да яманыраҡ, толҡаһыҙыраҡ ҡалған өй эсендә уҙышмаҡтан сиңерткә сырылдай. Игеҙәктәрҙе күршеһе Маһинур алып ҡайтты. Кеше ҡайғыһын, кеше ғәмен еңеләйтер өсөн генә яратылған кеүек шул ҡатын. Кеше ятратҡанғамы, хоҙай үҙен дә ярата: илдә ҡытлыҡ, йорттарҙан бәрәкәт киткән, э ул гөрләтеп ике һыйыр һауа. Шуныһы ғына ҡыйын: күп һөйләшеп бармай. Ә Гөлбаныуға бөгөн һуңғы өс йылда йыйылған, инде күмһей башлаған хәсрәттәрен һөйләр кеше кәрәк. Сараһыҙлыҡ ҡоршаны уның тормошон. Яҙмыштың шауҡал ҡулы боғаҙынан маткып тотоп алды. Әсәһенә таяныр ине — мәрхүмә иртә китте донъянан. Атаһын ул бөтөнләй иҫләмәй. Әсәһенең, был ауылға ситтән килгән кешенең, нәҫел-нәсәбе лә юҡ. Шунан инде ярҙам, кәңәш һорап барырҙай кеме булһын Гөлбаныуҙың? Әгәр тағы Ихсанбайға барһа? Бәлки, ул бөгөнгө аҙымын районлан килгән кешенэн уҙа алмай ғына яһағандыр? Ул да бит хөкүмәт кешеһе. Улай тиһәң, шул Ихсанбай арҡаһында кисергәндәре аҙ булдымы? Елегенә үтмәнеме? Теге саҡ, ҡыҙын ФЗО-ға алып китергә йөрөгәндәрендә, ярҙам итте лә бит, ләкин ниндәй хаҡҡа? Гөлбаныуҙың ҡыҙы өсөн ҡурҡып аңҡы-тиңке йөрөгән сағында теге ике ҡыҙ тәҙрә сиртмәгән булһа? Хәҙер, ваҡыт үткәс, хөкөм сығарыуы анһат та ул, ә ул саҡта?

Ул кис, ул төн... Тәҙрә сирттеләр. Ишекте Гөлбаныу үҙе асты. Тәҙрәнән төшкән һүрән генә яҡтыла Гөлбаныу ике ҡаҡса ғына, ҡураныс ҡына һынды шәйләне.

— Апай, беҙҙе фатирға индермәҫһеңме икән?

— Кемдәр булаһығыҙ үҙегеҙ?

— Баҙ, апай, алыҫтан, Магниттан киләбеҙ... — Гөлбаныу хәлде шунда уҡ анланы: ҡасҡындар. Индерһә, үҙенә ҡыйын, индермәһә... Юҡ, юҡ...

— Әйҙәгеҙ...

Түрьяҡҡа үтә башлаған ҡыҙҙар артынан балауыҙҙай һап-һары итеп ҡырып йыуылған иҙәндә бысраҡ ҡатыш ҡанлы эҙҙәр ҡалды.

— Балаҡайҙар... — Гөлбаныуҙың аптырашлы ҡарашы ҡыҙҙар кейеп килгән ботинкаларға төртөлдө — аяҡ кейемдәренең табаны юҡ ине.

Ҡыҙҙарҙы Гөлбаныу тағы ике көн йәшереп йәшәткәс кенә оҙатты. Иҫке калуштар табып алып шуларға кейҙерҙе. Ҡыҙҙарҙы оҙатыуға бер ай тигәндә, бәлә үҙ башына килде: ФЗО-ға ебәрелергә тейешле исемлектең иң башында уның Мәҙинәһе тора. «Бәләкәй бит әле ул, йәше етмәгән!» — тип Гөлбаныу зыулап илап йөрөп ҡараны — тынларға ла телэмәнеләр. Ахырҙа ул, Ихсанбайҙың ат эсерергә сыкҡанын ҡарауыллап тороп, ҡаршыһына сыкты. Ғәҙәттә Гөлбаныу арыуыраҡ кейенеп урамға сыкһа, Ихсанбай бисәһе тәҙрә ҡорғандарын йәһәт кенэ тартып ҡуя. Берэй-яры киткән сағы булдымы икән Сәбиләнең — был юлы ул-был тойолманы.

Ихсанбай атын кеше һыу алған ҡойонан байтаҡ юғарыла эсереүсэн. Ҡоҙоҡ эргәһендә туктап тормаҫтан, Гөлбаныу ҙа йылға үренэрэк китте.

— Күрше һыу юлын яңылышҡан түгелме?

Гөлбаныу Ихсанбайҙың тел төбөн аңламамышҡа һалышты:

— Миңә бит ни... мунсаға йылға һыуы кэрэк.

— Кейәү индергәнһендер тиер инем, кейэүгэ мунсаны иртән иртүк яғалар.

— һуғыш күп нәмәне бутаны, Ихсанбай. Иртэн тигәнең кис була, кис тигэнең иртән була.

— Әгәр был буталыуҙар һинең менән минең файҙаға булһа, хатта һуғыш та насар түгел, Гөлбаныу.

— Ауыҙыңдан ел алһын, Ихсанбай!

— Алл-а-а... Шаяртырға ла ярамай икән дэ...

— Үҙең күреп тораһың: шаярыу ҡайғыһымы миндэ?

— Ярҙам итәм мин һинэ, Гөлбаныу, тик...

Гөлбаныуҙың йөҙөндә аптырау ҡатыш өмөт яралды:

— Ысынлапмы, шаярмайһыңмы?

— Ысынлап, шаярмайым, тик... хаҡын үҙең беләһең...

Ихсанбайҙың мырылдау дәрәжәһендэ шым ғына әйткән хәбәренән Гөлбаныу ҡолаҡтарына тиклем ҡыҙарҙы. Ихсанбайҙың иғтибарынан, әлбиттә, был ҡыҙарыу ҙа, байып барған ҡояштың ҡыҙғылт нурында айырыуса нэзэкэтле күренгэн Гөлбаныу тәненең һыҙаттары ла ситтэ ҡалманы. Шәп инде, шәп Гөлбаныу, әйтерлек тэ түгел. Нескә генә ҡыҙ сағында ла был тән уны татлы бер хәсрәткә һала ине, хәҙер ҙә, ҡатын ҡорона тулғас та. Уның Сәбиләһендә ошо ҡатын матурлығының һис юғы яртыһы ғына булһасы... һыу үренә

был ҡатындың ниңә килгәнен шунда уҡ төшөндө, әлбиттә, Ихсанбай. Иссмлекте лә бит ул үҙе төҙөнө. Белэ ул: Мәзинәһенен йәше етмәгәнен дә, Гөлбаныуҙыщ инәлерен дә... Бөтоһс ло дөрөҫ бара, Ихсанбай уйлағанса. Хашимдың **Ихсанбайға** һәр сак бүре күҙҙәре менән ҡараған сандыр ҡараҡайын ҡайта алмаҫтай ергә оҙатҡанда ла насар булмаҫ **ине** ло, ул сағында Гөлбаныуҙан төңөләһе ҡала... Ә ауыҙына **үҙе** килсп төшкән һары майҙы ҡайһы ирҙең йотмай кире **төкөргәне** булыр? Бер һөйгәнем арҡаһында алтмыш һөймогондс һөйөрмөн, тигәндәре шул, ахыры...

Иөҙвнэн шул йылмайыуы китмәгән хәлдә Гөлбаныу күнәктэрснә эйелде, Ихсанбай унының ҡуш беләҙек кейгән йомро беләктәрснэ, иҙеүенән күренә биреп торған шыма муйынына, күлдәк аша ла үҙенең тығыҙлығын һиҙҙергән күкрәктәренә диҡкәт менән ҡарауын дауам иткән хәлдә бышылдауға күсте:

— Бөгөн кис... Ошонда көтәм!

* * *

Ул кисте Гөлбаныу ҡапма-каршылыҡлы хистәр менән көтөп алды. Урыҡ-һурыҡ иҫкән көслө ел ҡырҙағы усаҡтың һүнеп бөтөп барған ҡуҙҙарын баҙлатҡандай, Гөлбаныуҙың да иҫенә Ихсанбай менән бэйле төрлө ваҡиғалар төштө. Киске һауын мәлендә үҙенең нимә эшләгәнен, ҡайһы һыйырын һауғанын-һаумағанын үҙе лә төшөнмәне. Һәнәк һорап өндәшкән күршеһенә көрәк, көрәк һорағанға күнәк тотторғанын үҙе лә абайламаны.

Хотер, хэтер...

...Ана ул, Ихсанбай, һайғау араһынан башын тығып, Гөлбаныуҙы уйнарға саҡыра. Ҡулында ике кәнфит. Шуның береһен яңы ғына йоҡонан тороу арҡаһында сәс-башы туҙған Гөлбаныуға һуҙа.

— Кем билде?

— Әсәй.

— Миңә ләме?

— һиңә лә.

— Тәмлекэй...

— Ыһы... Беҙҙә ишшү бар!

— Тағы биләнме?

- Ыһы. Тик һин миңә кәләш булаңмы?

— Булам.

...Бына улар Аҡйылғала һыу инәләр. Йылғаның йәйелеп киткән еренә Ихсанбай йәйпәк таштар елгэрә:

— Бер кәләш! Ә-ә, юҡ, икәү. Икәү, Гөлбаныу, икәү! — Малай шатлығынан үрле-ҡырлы һикерә, ҡыҙыҡай ашыҡ-бошоҡ кейенә башлай.

— Ҡайҙа бараң ул?!

— Ҡайтам.

— Нигә?

— Шәп булғасың, ана, кәләштәрең менән уйна!

Хәтер, хэтер... Ана улар, Гөлбаныу менән Ихсанбай, бер парта артында ултыралар. Мәктәпкә йөрөткән моҡсай-ҙарында дәфтәр, китап, ҡара һауытынан башҡа тағы эллә күпме нэмә бар. Ихсанбайҙыҡынан башлыса икмэк сыға һәм мотлаҡ ике өлөш. Гөлбаныуҙың да моҡсайы шөйлә ҡоро йөрөмәй: кипкэн ҡорот, эремсек, талкан, муйыл, сейә, еләк... Әсәһе йыйынсаҡлы, бөтмөр кеше булды. Башҡалар ашағанда балам ауыҙҙарына ҡарап ултырмаһын, тигәндер инде.

Дәрес башланһа, парта аҫтынан китә алыш-биреш, быш-быш килеш: Гөлбаныу үҙ күстәнәсен, Ихсанбай үҙенекен һуҙа. Был икәүҙең саманан тыш татыулығын уҡытыусы апайҙары өнәмәне шикелле: бер көндө дәрес мәлендә икеһен ике партаға айырҙы ла ултыртты. Ошо сэғәттең уларҙың яҙмышын билдәләр мәл булыуын эйт әле! Ихсанбай, башын аҫка эйеп, иренен ҡанатҡансы тешләп, Сәбилә партаһына, ә Гөлбаныу көтөлмәгән хәлдән һүҙһеҙ ҡалған килеш — Хашим партаһына. Сэбилэ был саҡ әхирәттәренә тәкәббер, еңеүле ҡараш ташланы, ҡыуанысынан ауыҙы ҡолағына еткән Хашим үҙен-үҙе белешмәй сәпәкәй итте. Тик шатлығы оҙаҡҡа барманы Хашимдың. Тәнәфескә сығыу менән Ихсанбай Хашимдың май сәскәһеләй йылмайған йөҙөнә төйгөстәй йоҙроғо менән килтереп бәрҙе. Алыҫыҡтан, өндәшмәй-нитмәй килтереп һуҡты...

Ошо көндән башлап аҙыҡ та йөрөтмәй башланы Ихсанбай моҡсайында. Хэлле йэшәгән Сәбиләнең үҙенә тәмле-томло һуҙыуына ла шулай уҡ ҡарап та ҡуйманы. Бишенсе класты бөтөүгә Гөлбаныуҙың әсәһе ауырып түшәккә ятты. Гөлбаныу әсәһе урынына фермаға быҙау ҡарарға китте лә шул китеүҙән мәктәпкә кирЬә йылнеп ҡайтманы.

Гер. фил. № 97

Йәш кенә көйө нужа баҫҡан, эшкә егелгән Гөлбаныу кистәрен һуң ятты, таң һарыһынан торҙо. Тиңдәштәре менән клубҡа, ултырмаларға ла йөрөй алманы. Берҙән-бер таптыр һабантуйға йыйынғайны ул, уныһы ла...

Хәтерсндә, әсәһе һандыҡтан таҫмалы күлдәк, укалы елән, ҡыҙыл итектәр сығарып алдына ҡуйҙы.

— Ҡыҙым, инде ҙур үҫтең, ошоларҙы кейеп бер йөрөп кил әле.

— А-та-аҡ... Ошондай ҙа кейемдәрең бармы ни һинең, әсәй?! Ниңә бер ҙә күрһәтмәнең ул?

— Бәләкәй инең бит...

— Ә ниңә үҙең бер ҙә кеймәнең?

— Әллә инде... — Үҙе тураһында һөйләргә яратмаған әсәһе был юлы ла хәбәр сурытманы.

Ғүмерендә күрмәгән затлы кейемдәр һушын алды Гөлбаныуҙың. Үҙенең ун биш йәшендә тиңдәштәренән буйсанлығы менән айырылып торған ҡыҙға итектәренә тиклем йәтешле булды. Балтырҙарын ҡуңысы хатта ҡыҫыбыраҡ торғандай. Ә күлдәге... еләне... Биле бик нескә икән шул Гөлбаныуҙың. Иә ҡыҙҙар тамсыгөл тип көләләр... Әсәһе генә быуа Гөлбаныуҙың сәстәрен үреп бөтә алмай мыштырлай. Юкка үҙе тотонманы. Сулпыларына тиклем бар бит әле!

— Тиҙерәк үрсе, әсәй, сәсемде!

— Ҡабаланма, халыҡ яңы ҡуҙғала ғына башланы.

Сэсен икегә ярып үргән, толомдарын ҡалҡыу түше буйлап төшөргән, итәкле күлдәк, укалы елән, бейек үксәле ҡыҙыл итек кейгән Гөлбаныу көҙгөлә үҙ шәүләһен күреүҙән үҙе телһеҙ ҡалды: иҫ китмәле һылыу ҡыҙ икән дә ул! Әммә шул саҡ Шәһәрбаныуға эллэ ни булды:

— Ҡыҙым, — тине ул шикле бер тауыш менән, — был кейемдәрҙе һиңә кейҙереп эллэ яңылышам инде?

— Нишләп, әсәй?

— Әлләсе... йә, ярай. — Ҡайһы әсәнең балаһының ҡыуанғанын күргеһе килмэй. Шәһәрбаныу ҙа йомшарҙы. — Хыҙыр Ильяс юлдаш булһын инде үҙеңә.

Һабантуй булған ергә Гөлбаныу туранан, үҙҙәренең кәртә артынан ғына сыкты. Эй шул йылғы йәйҙең йэмлелеге, байлығы! Кәртә артында ла үлән билгә етеп үҫеп, күпереп сәскә атып ултыра ине бит! Гөлбаныу үҙе атлай, үҙе йылмая. Яғаһындағы, сулпыларындағы, беләҙектәрендәге тәңкәләр ҙә

бер-береһенә һүҙ ҡушып, сылтыр-сылтыр көләләр төҫлө. Их! Гөлбаныу бөгөн донъяһын онотоп, онотолоп байрам итәсәк! Фермаға унын урынына әсәһе бара. Тик бына әллә нишләп охирәттәрен көтмәне. Япа-яңғыҙы сыкты ла киттесе...

Оҙағыраҡ йыйынғанмы — ул килгәндә һабантуй апаруҡ ҡыҙғайны. Ҡыҙҙарҙан тәүге күргән кешеһе Сәбилә булды. Әберкәләр һалдырып, яңы күлдәк тектереп кейгән кейеүгә, әммә уның ҡоро тарамыштан торған тәненә һис кенә лә килешмәй шул: ҡараскыға кейҙергән тоҡ кеүек аҫылынып тора. Гөлбаныуҙы күргәс, төҫө боҙолоп китте бит эле бының. Кәйефтең шәп сағында ниңә әле уны бер аҙыраҡ ирештереп алмаҫҡа?

— Сәләм ҡыҙҙарҙың аҫылына! — Гөлбаныуҙың сәләменән Сәбиләнең йоҡа тире менән һөйәктән торған йөҙө тартышып, ағарып китте, үҙе шулай ҙа һыр бирмәҫкә тырыша:

— Сәләм.

— Көрәш ҡайһы ерҙә, эхирәт?

— Мин дә шунда барамсы ул...

Эйе, эйе... Көтмәгән Сәбилә Гөлбаныуҙың был дәрәжәлә сынъяһау булып килерен, уйламаған. Гөлбаныу был тәкәббер нишананың кикреген бер төшөргәс, кәрәген биргәнсе төшөрөргә булды:

— Ихсанбай көрәшәме икән?

Сәбилә ҡапыл ҡутэрелеп Гөлбаныуға ҡараны, Гөлбаныу уның күҙҙәренең ҡыҙарып шешенгәнен шунда ғына абайланы.

— Гөлбаныу... — Сәбилә, артабан һүҙ таба алмағандай, тотлоҡто, — мин һиңә әйтермен тигәйнем... Беҙ бит... Ихсанбай менән... — Гөлбаныуҙың да уны тыңлап бөтөргә көсө етмәгәндәй булды, йөрәгенең низер һиҙенеп дарҫлап тибә башлауын еңергә тырышып, көлөп ебәрҙе:

— Нимә-э? Ихсанбай тиһеңме? Һиңә генә эллә кем бит ул. — Гөлбаныу үҙе көлә, ә үҙенең тауышы бер ҙә тәбиғи сыҡмай. Кешеләрҙе үҙенә эйләнеп ҡарарға мәжбүр иткәнсе көлә-көлә, Сәбиләнән айырылып, майҙанға йыйылған халыҡ эсенә инеп китте Гөлбаныу.

Аклан эйләнә. Ул ҡатын-ҡыҙ кейеменең, туғай сәскәләренең мең төрлө төҫө булып тулҡына. Сабышҡа әҙерләнгән малайҙар дәрәжә һаҡлап ҡына ат өҫтөндә ултырып торалар. Атҡа менгән ир-аттың ҡылыҡ-фиғеленең үҙгәреүен элек тә күҙәткәне бар Гөлбаныуҙың, э инде уларҙың ярышҡа

әҙерләнгәндәре самаһыҙ үҙгәрә. Бына ул үҙе ир-ат булып тыуһа, ат өҫтөнән төшмәҫ ине, моғайын.

Башта көрош була икән — Гөлбаныу көрәшселәргә ҡарарға баҫҡан түңорәккә килеп торҙо. Ихсанбай ҙа ошонда. Ул бик етди, күроһең, көс һынашмаҡ. Эреләнеберәк тэ киткән шикелле ул: етенс бөткәс, ҡалаға барып, ниндәйҙер курс уҡып ҡайтты бит. Тыштан тыныс күренһә лә, ҡара бөҙрә сәстэре аҫтында йылтыраған йәшкелт күҙҙәре айырым бер дәрт менән янғандай. Аҙаҡ гармун да тартыр инде ул, эргәһенән ҡыҙ-ҡырҡын өҙөлмәҫ. Иәштәр генә түгел, буйҙаҡ ҡатындар ҙа эргәһенән китешмәй торған. Үҙенә төбәлеп ҡарауын тойҙомо, Ихсанбай ҙа күрҙе Гөлбаныуҙы. Күрҙе лә шаҡ ҡатты. Таныған да, танымаған да кеүек. Бер аҙға ғына күҙҙәре осрашты. Оялманы Гөлбаныу, керпектәрен элеккеләй аҫка төшөрмэне: ул бит бөгөн ауылдың бөтә егеттәрен дә үҙенә ғашиҡ итергә килгән!

Ихсанбайға Хашим менән көрәшергә тура килде. Былар иң һуңғылар, кеме еңә, шул еңеүсе була. Иң һуңғы мәлдә Ихсанбайға әллэ ни булды — Гөлбаныу күҙ асып йомған арала Ихсанбай Хашимдың аҫтында ята ине. Хашимдың уң ҡулын күтәрҙеләр. Ҡатын-ҡыҙ еңеүсегә килтергән бүләктәрен бирә башланы. Гөлбаныу ҙа янсығын Хашимға һондо...

Ат сабыштырыу тамамланғас, бейеү башланды. Бында инде урынында түҙеп тора алманы Гөлбаныу. Үҙендә шул тиклем дәрт, оҫталыҡ йәшеренеп ятҡанын, дөрөҫөн әйткәндә, ул үҙе лә белмәй ине.

— Шәһәрбаныуҙа бар икән бер ҡыҙ! — тигән тауыштар килеп ишетелде уның ҡолағына.

— Бына һиңә шымыҡай...

— Ҡыҙ түгел, һыу һөлөгө!

— Ут!

Ул көндө Гөлбаныуға Тирәклснән дә матур ер, унан да бәхетле кеше юҡ кеүек тойолдо. Йәштәр менән бергәләп «Наза» уйнарға баҫҡан сағында кемдср уның усына ҡағыҙ тотторop китте.

Уйнайбыҙ бергә-бергә,
Эшләйбеҙ бергә-бергә.
Кэсилкә, молотилка,
Сортировка, веялка!

Уйын да ҡыҙҙы — ташлап китеүе йәл, усындағы ҡағыҙ ҙа яндырып алып барғандай. Хашимдан ғына булмаһа ярай ҙа...

Етмәһә, янсыҡ тотторҙо бит әле шуға. Ҡыҙыҡһыныуы енде Гөлбаныуҙы. Ситкәрәк китеп, тирләгән усында уҡмашҡан ҡағыҙҙы яҙҙы. «Гөлбаныу, һине һыу буйында, тирәктәр янында көтәм». Их, Ихсанбай! Үҙе! Күпме көттө ошо минуттарҙы Гөлбаныу, йөрәгенең янмыуын баҫа алмайынса ҡайындарҙы ҡосто, Ай тулаһа, ҡауышыу һораны, йондоҙ атылһа, Тәңренән Ихсанбай күңеленә үҙенә ҡарата һөйөү ялбарҙы. Ниһәйәт, ишетте илаһи, ирешге теләгенә Гөлбаныу, моратына етте! Рәхмәтем ҙур һиңә, Тэңрем!

Гөлбаныу Ихсанбай көткән тирәктәр янына ашыҡты, үҙе илай, үҙе көлә.

— Гөлбаныу! Ҡыҙым, туҡта әле, ҡыҙым!..

Инәлгәнгә лә, бойорғанға ла оҡшаған тауыш Гөлбаныуҙы хыял донъяһынан ысынбарлыҡҡа ҡайтарҙы, ҡаршыһында башынан ҡара шәле мәңге төшмәгән, ут шикелле янған ҡара күҙҙәрен үҙенә төбәгән Фәүзиә ҡарсыҡты күргәс, Гөлбаныу ҡурҡып артҡа тайшанды.

— Ҡайҙа юл тоттоң, ҡыҙым? — Тауыш һаман да бойороулы, буйһондороусан.

— Мин ни... — Ихсанбайҙың әсэһенә ни тип яуап бирергә белмәй албырғап ҡалды Гөлбаныу, — мин ни... ҡайтайым тигәйнем, һуң бит инде...

— Әсәйең дә көтәлер, эйе, һуң, ҡайтыр кәрәк, ләкин бит ауыл, — ҡарсыҡ эйәге менән Гөлбаныуҙың килгән яғына ымланы, — артында!

Был тишкәнсе, үтәнән-үтә ҡараусы ҡараштан былай ғына ҡотола алмаҫын аңланы Гөлбаныу. һәм, ғөмүмән, ниңә ҡурҡа әле ул был эбейҙән? Ошо кеше көн һайын мәктәпкә киткәндә улының тоҡсайына Гөлбаныу өсөн өлөш һалманымы? Ә Гөлбаныуҙар йортона ҡытлыҡ килгән саҡтарҙа уларҙың нигеҙҙәренә ризыҡты əҙ ултыртып киттеме? Әлбиттэ, Фәүзиә быларҙы төндә, кеше күрмәгәндә, эшләне, әммә Шәһәрбаныу ҙа, Гөлбаныу ҙа был «Хыҙыр Ильяотың кем икәнен күптән төшөнгәндәр. Унан һуң, Ихсанбайҙы донъяға бар ҡылған кеше ҡасан да булһа дөрөҫөн белергә тейештер бит?

Ҡыҙыл итегенән дә, ҡыҙыл күлдәгенән дә нығыраҡ ҡыҙарған Гөлбаныу һүҙ башланы:

— Мин, беҙ... Ихсанбай көтә мине!

— Ихсанбай, — Фәүзиә ҡарағусҡыл йөҙөндә аҡ һыҙыҡ булып ҡатҡан иренен көскә айырғандай, ә ҡулдары

Гөлбаныуға һуҙыла. Нишлэй ул?! Ҡосаҡларғамы, эллэ... быуырғамы итә?

— Инэй! — Гөлбаныу маңлайынан, арҡа буйынан һалҡын тир бәреп сығыуын тойҙо.

— һин, һин... ҡыҙым... бер ҡасан да Ихсанбайҙың кэлэше булмаясаҡһың! Ишетәһеңме? Бер ҡасан да!

- һин, инэй, ни һөйлэйһең ул? Ни зыяным тейҙе һиңэ?! — Гөлбаныуҙың йөрәгенән сыҡкан иңрәү Фэүзиэнең күңелен саҡ ҡына ла йомшатманы, шикелле.

- һин һаман аңламаныңмы, ҡыҙыкай?! Был кейемдэр ҙэ, Ихсанбай ҙа һиңә бәхет килтермэйэсәк! Сис уларҙы, ташла, утка яҡ...

Ҡурҡынған Гөлбаныу, артка сигенә барып, ағасҡа бэрелде, унан ҡото алынып, килгән яғына, ауылға табан йүгерҙе.

Ошо мэлдэ Гөлбаныуҙарға ҡаршы ғына ергә һендерэ биреп һалынған, ҡыйығы бөрөп ябылған, урыҫ ҡапкалы йорттоң берҙэн-бер варисы булған Ихсанбай сатырмаҡланып, ирәйеп үҫкән тирэк төбөндә Гөлбаныуҙы көттө. Бөгөнгө һабантуйҙың үҙенә еңеү килтермәүенә артыҡ хафаланмай ул: еңелһә лә, алты көрэшсене ыһ та итмәй күтәреп һуғып өлгөрҙө. Әммә уны ҡалаҡ һөйәгенә һалыусыһы кем бит әле? Хашим! Теге саҡ мэктэптә шуның муйынын ҡыйшайта ғына елгәрмәгәненә үкенә хәҙер Ихсанбай. Ҡалаға олағыуы йәтеш булғайны ла, ҡайтҡан бит әле. Ихсанбайҙың еңелеүе Гөлбаныуҙан да булды, шикелле. Үҙенең кейемдәре, төҫ-һыны менән ҡапыл килеп сыкты. Хашим да башҡа берәү менән дә көс һынашып тормаҫтан, Ихсанбай менән көрэшергә булды. Шулай ҙа, Гөлбаныуҙы күреп ҡалып баҙамаһа, бирешмәҫ ине әле Ихсанбай. Әле лә нисек ҡаршыларға белмәй ул Гөлбаныуҙы. «Кәлэшем бул, ғүмерлек йәрем бул!» — тиһә, ни тиер икән? Улының был тәҡдименә атаһы нисек ҡарар тағы? Эсеп алған һайын: «Мин бөйөк хан тоҡомо!» — тип күкрэк һуғырға яратҡан нәмэ хэйерсе ҡыҙы кәрәкмәй беҙгә тиер микән? Бэлки, әсәһе күндерер атаһын? Башҡа күршелэре менэн эйәк ҡағып ҡына иҫәнләшһә лә, Гөлбаныуҙы ла, уның сирле генә әсәһе Шәһәрбаныуҙы ла ифрат яҡын күрэ бит ул. Эйе, бар өмөт эсәһендә. Йәһәтләмәһә, Ихсанбай Гөлбаныуҙан тиҙ арала ҡолаҡ ҡағасаҡ. Бөгөнгө һабантуй Тирәкленең генә түгел, күрше яткан Сабаҡлы егеттәренең дэ күҙен асты. Ә Хашим?.. Ихсанбай, күҙҙәрен йомоп, тешен шығырлатты: Гөлбаныу бит шуға... шул ҡыутомшоҡҡа янсыҡ бүләк итте.

— Ихсанбай!

— Гөлбаныу! — Әммэ уның ҡыуанысы бушҡа булды: күҙен асҡанда, йөҙөнэ йылмайыу ғәләмәте сығарып, Сәбилә баҫып тора ине.

— һин-н-н?

— Эйе, мин... — Сэбилэ, ике ҡулын алға һуҙып, уға ынтылды, — эйе, мин... Ситкә типмэ мине, яңғыҙ итмә! Ул... ул бит һиңә бер ҡасан да... килмәйәсәк...

— Н-нимэ һөйләйһең һин? — Ихсанбай уның иҙеүен йомарлап тотоп алғанын үҙе лэ һиҙмәй ҡалды. — Артымдан ҡарауыллап йөрөүеңде ҡасан ташлайһың һин?!

— Теләһәң, ҡолоң, телэһэң, олторағың булырмын — кире ҡаҡма мине, Ихсанбай!!!

Ихсанбайҙың маткып тотоуынан төймэләре ҡойолоп, түше асылып ҡалған Сэбилә егеттең муйынына һарылды, ут бөрккэн ирендәре менән уның муйынын, ирендәрен ялманы.

— Нишләйһең һин, Сэбилә?! — Тән яҡынлығынан ихтыяры һына барған Ихсанбай был һүҙҙәрҙе ыңғырашыу ҡатыш әйтте. — Мин бит һине яратмайым!

— Яратма... Минең яратыуым икебеҙгә лә еткэн! — Сәбиләнең ирендэре кеүек үк ҡомһоҙ, уттай янған бармаҡтары һаман да түбәнгәрэк йүрмәлэне. — Ташлама мине, ҡыҙған... Беҙҙең бит... балабыҙ буласаҡ...

Гөлбаныуҙан тороп ҡалып, Фәүзиэ күпме ултырғандыр... Бына ул Гөлбаныуҙың ҡоралайҙай еңел һыны торған ер. Ошонда торған еренэн ярҙам һорап, ялбарып, үҙенең аккош канатылай нескә ҡулдарын һуҙғайны ул... Өҙҙә баланың омөтөн Фәүзиэ, селпәрәмэ килтерҙе. Әммә үҙенең ҡыҫылыуы мснән уларҙы хаҡ тәғәлә ҡушмағанды ҡылыуҙан араланы: канға ҡан ҡушылыуҙан ҡотҡарҙы! Эй, был яҙмышты! Ҡайһылай уйламаған яҡтан килтереп һукты ул тағы

Фэүзиэгэ... Кемдэрҙең ҡаты ҡәһәре төшөп кенә Барсынбикэ — Фәүзиәгә ошондай ҡәһәрле, мунса йүкәһеләй сыбалған яҙмыш ебәрҙе икэн Хоҙай?! Фэүзиэ — Барсынбикә. Сибәғәт Диңгезхан. Эй, яҙмыш, яҙмыш, яҙмыш... Ил инәһе, ил ағаһы булыр Диңгеҙхан менән Барсынбикәнэн, ҡараларына ҡатҡан ялпы хәленә ни ҡалдырҙы, кем ҡалдырҙы беҙҙе?.. Көтөү-көтөү өйөрөлөп, ялан иңлэп баҡырышҡан малдарыбыҙҙан, ҡымыҙ-айран күпереп ултырған һабаларыбыҙҙан, диңгеҙҙәй йәйрэп ятҡан дала-йортобоҙҙан ни айырҙы беҙҙе, ни яҙҙырҙы... Эй Ихсанбай, балаҡайым... Ошо мәл һин ҡыҙҙарҙың иң һылыуын сиртеп йөрөп эйттерер буҙ егет булыр инең дә һуң... Гөлбаныуым... Гөлбаныу ҙа түгел ине бит исемең: Күкһылыу һин! Күҙҙәреңдә күкшел юшан төҫө булғанға күрә ҡушҡайным һиңә шул исемде. Аҡ тирмәмдең ҡото булып, сырылдап-һайрап уйнап йөрөгән ике ҡошсоғом йөрәк майҡайҙарымды һыҙҙырып, бср-бсрегеҙгә ғашиҡ булдығыҙ... Әгәр бөгөн мин һеҙҙе айырмаһам, үҙ балам үҙ тупһама килен булып ҡына төшә ине бит... Оҙаҡ уйланым был хаҡта, Ихсанбайҙың Гөлбаныуға барыр юлына кәртэ артынан кәртә ҡуйҙым... Ай, оҙаҡ интектем, оҙаҡ яфаландым... Хаҡ тәғәлә бутаған яҙмышты ҡәҙимге бэндә ихтыяры менән нисек тағатайым?!.

И раббым!.. Аптырағас, һиңә лэ тел тейҙерәм. Ә бит үҙем, бары үҙем ғәйепле барыһына ла!.. Нисек кенэ мине ер йотмай ҙа, нисек кенә бынау ҡояш киптерсп, сарсатып үлтермәй?!

Фәүзиә янып барған усы менән әле генә Гөлбаныу быҫап торған ерҙәге үләнде һыйпаны: ә ниндәй килешә уға эсәһенән ҡалған ҡыҙыл күн итектәр... елән... сулпылар...

Ана ксмдер Ихсанбай Гөлбаныуҙы көткән тирәктәр яғына йүгерҙе. Бармай булмай: яҙмыш ҡуласаһына килеп ҡапҡас, көсөң бөткәнсе көрэшмәй, ҡарышмай әмәлең юҡ.

«Ошондай саҡта әсәһе генә етмәгәйне!» — тирәктәр төбөндә салҡан төшөп ятҡан Ихсанбай тиҙ генә итәк-еңен йыйып өлгөрмәгән Сэбилә эргәһенэн янтайҙы. Фәүзиэ бик экрен яҡынайҙы былай ҙа, уларға сәс-баштарын рәтләргә ваҡыт ҡалдырҙы. Шунан Ихсанбайҙың ҡолағына әсәһенең бойороулы, һәр өнө һәр күҙәнәгенә үтеп инерлек тауышы яңғыраны:

— Беҙгә эйтмәй-нитмәй, ҡушағанды тапандыҡ тибендэн алырға ҡарар иткәнһең икэн, улым, инде мине тыңла: күмереӊ ахырынаса шуны иш итәһең, килен кеше алдында башын юғары сөйөп, ирем — Ихсанбай, мин уның бисәһемен эле, тип йэшәрлек булһын! Ишетһен ҡолағың, Ихсанбай! Мин ике һөйләмэм.

Әсәһе ҡаршыһында ер ярылһа, шунда инеп юғалырҙай уңайһыҙ хэлдә ҡалған Ихсанбайға өнһөҙ буйһоноуҙан башҡа әмәл ҡалманы.

Шәһэрбаныу ҡыҙының ҡайтҡанын йөрәкһеп, тыны менән тартып алырҙай булып көттө. Ферманан Гөлбаныу ҡараған быҙауҙарға һөт эсереп ҡайтҡас та кәртә артына сыҡты. Ҡыҙы артынан үҙе лә сығып китер ине, аяҡтары ғына зыулап һыҙлай шул. Әллә тешен ҡыҫып сығырға ла китергэме? Ай, был бала, бер бэлэгә генэ осрамаһа ярар ҙа... Әллә ниңә кейҙерҙе бит анау үҙе йоғанырға ла ҡурҡҡан кейемдэрҙе, шайтанмы тартты уның ҡулынан, Иблесме ҡоторттo... Әҙәм күрке сепрэк, йәнәһе. Күптән ташлайһы ине шул кейемдэрҙе, ташҡын мэлендә йылғаға ғына бырaҡтырaһы ине.

Йә хоҙай! Ишеттергэн Шәһәрбаныуҙың хафаһын Гөлбаныуға! Ана килә уның күгэрсене! Йэшел хэтфә өҫтөнән йөҙөп кенэ килэ уның алтын сабағы! Түҙеп тора алманы Шэһэрбаныу, һыҙлаған аяҡтары менән туйтан-һайтан итеп, ҡаршыһына атланы. Аһ-аһ, ни булған был балаға? Ниңә әле уның иртэнсәк кенә май ҡояшылай балҡыған йөҙөн ҡара болот баҫҡан?

— Әсэй!.. — Күкрәгенә һыйынып буҫлыҡҡан балаһы йөрәгенең ауға элэккән ҡошсоҡтай талпыныуын тойҙо Шэһәрбаныу. И бала, бала... Үҙ йөрәге аҫтында йөрөтмәһә лә, гулғаҡ ғазаптары менән үҙе тыуҙырмаһа ла, бар булмышы, бар ғәйрәте менән ярата бит ошо баланы Шәһәрбаныу һәм уның тойғоларының ихласлығына күктәге ҡояш та бер хоҙай шаһит.

— Ни булды, балам? Кем көлдө? Кем рәнйетте?!

— Әсэй!.. — Тыйыла алмай, һүҙен әйтә алмай Гөлбаныуы, уның күҙҙәренән Шәһэрбаныуҙың яланғас

муйынына аккан йэштәр яндырып, бешереп кенә бара. Ҡайҙан йыйылған был саклы ялкын йэш кенә бер балаға?

— һөйлә, балам, әйт... Еңелерәк булыр. — Шәһәрбаныу үҙе лә илай, уның тарамыш ҡына, ҡураныс ҡына кэүҙәһе ҡыҙын рәнйеткән билдәһеҙ кешегә рэнйеш менән тулыша.

— Әсәй! Минә... Ихсанбайҙың әсәһе... Фәүзиә әбей... был... кейемдәрҙе... утка яғырға ҡушты. Ихсанбайға... мине... бер ҡасан да, — Гөлбаныу үкереп илап ергә йығылды.

— Фәүзиә?! Был кейемдәрҙе?! — Шәһәрбаныу башта көл кеүек ағарҙы, унан, ҡәтғи бер ҡарарға килгәндәй булып, ҡыҙын ашыҡтыра башланы. — Улай икән... Тор, балам, сеү! Кеше ишетер! Гөлбаныу һабантуйҙан мәсхәрәләнеп ҡайткан икән, тиерҙәр.

Төндә эсә лә, ҡыҙ ҙа керпек тә ҡакмай үткәрҙе. Ә үҙҙәре шәмгә ут алып та торманылар. Ҡаршы йортта, Ихсанбайҙар өйөндә лә йоҡламанылар — унда килен төшөрҙөләр.

Иртәнсәк Шәһәрбаныу идара яғынан ат егеп ултырып килде. Ашығып өйөнә инде лә әле түшәктән дә тормаған ҡыҙы янына яҡынланы:

— Тор, балам. Китәбеҙ. Күсәбеҙ.

— Ҡайҙа?

— Урыҫ утарына!

— Ниңә?

— Суска ҡарарға кеше таба алмайҙар ине — риза булдым.

— Суска?! — Сикһеҙ аптырауҙан олоғайып киткән күҙҙәрен әсәһенә текәп, Гөлбаныу тороп ултырҙы. — Ысынды әйтәһеңме, әсәй?!

— Аптырама, балам, тереклектең барыһын да аллаһы тәғәлә яраткан.

Шул сәғәттә үк Шәһәрбаныу ярһыу бер ҡыҙыулыҡ менән тәҙрәләренә арҡыс-торҡос такта ҡаҡты, барлыҡ ҡына монаятын арбаға тейәне лә, аттың ҡабырғаһына шыйыҡ сыбыҡ менән шыйырҙы.

«Урыҫ утары» уларҙы ҡотһоҙ яңғыҙлығы, тирә-яғына өйөлгән сүп-сарҙан, мал һарҡындыһынан таралған укшыткыс еҫе менән ҡаршы алды. Революцияға тиклем үҙенең мөһәбәтлеге, баҫыуҙарының ундырышлылығы менән эҙәмдең

күҙен ҡыҙҙырып яткан был алпауыт ере хәҙер Шәһәрбаныу менән Гөлбаныу кеүек етем-еһерҙең морон төртөр еренә — Гирәкле ауылының Себеренә әйләнгән.

Ана, сүп-сар өйөмө араһында шуларҙан да бысрағыраҡ Шәңгәрәй йөрөй. Шәңгәрәй — уның мулла ҡушкан, силсәүиткә теркәлгән исеме. Унан тыш бала аҡыллы еткән сгетте Шарик тип тә йөрөтәләр. Был ҡушаматты уға кем таҡкандыр, мәгәр ошо тумалаҡ битле, ҙур башлы, ҡыҫҡа ғына аяклы хоҙай бәндәһенә исеменә ҡарағанда ҡушаматы нығыраҡ йәбешкән. Ишмөхәмәт-Ишмәмәттең тәүге ҡатынынан тыуған был малай әсәһе тере сакта урамда эт талаштырып, эбей-һәбейҙең кәртәһенә төшөп йоморткаһын урлап, баҙына төшөп ҡаймағын ялап, эт өрҙөрөп, кеше көлдөрөп, ауылда йәшәне. Ишмәмәт мунсала еҫ тейеп кенә үлгән ҡатыны урынына балдыҙын бисә итеп килтергәс, йәш ҡатын Шәңгәрәйҙе тиҙ үк тай типтерҙе, Ишмөхәмәт малайын утарға алып килеп, Әптеләхәт исемле етем малайға ярҙамсы итеп ҡушып китте.

— Әйҙә, апай, урынлашығыҙ, — Әптеләхәт уңайһыҙланып ҡына йылмайҙы, — тормош беҙҙә шәптән түгел инде...

— Ҡыш бик һыуыҡтыр инде. — Шәһәрбаныу үрмәксе ауҙары һырыған түшәмгә, еүештән мүк ҡаплаған стеналарға күҙ йөрөттө.

— Яҡһаң, йылына, былай... Мейесе төтәй. Утын етештереп булмай, йәйҙән әҙерләргә кешеһе етешмәй. Ярҙамға Шәңгәрәйҙе ебәргән булдылар ҙа — уныһы үҙе генә ун сусҡаға торошло.

— Исмаһам, стеналарҙы аҡлап алырға ине, — Шәһәрбаныу ҙур өйҙөң бер мөйөшөндә ҡатып торған ҡыҙға ҡараны, — Гөлбаныуға күңеллерәк булыр ине тейеүем...

Әптелэхәт тә шунда ғына иғтибар итте шикелле ҡыҙға. Шунда уҡ эсенә йән инеп киткәндәй булды. Икенсе көнөнә үк өй алдына бер йөк аҡбалсыҡ килтереп ауҙарҙы, утындың да ҡороһон тапты.

Бына шулай дүртәүләп йәшәп алып киттеләр улар утарҙа. Йәй ҡайһылай ҙа үтте. Әммә ҡыш... Күҙ аскыһыҙ бурандарына ла, һыуығына ла түҙер инең, сусҡаға аҙыҡ етмәү үтте үҙәктәренә. Кеше — кеше инде: ас булһа ла түҙә, бына сусҡа асыҡһа... Улар шикелле лә мал аҡтығы күргәне булмаҫ Шоһәрбаныуҙың, саҡ ҡына ҡарамайыраҡ күҙ яҙлыҡтырһаң,

инәләрс үҙ бәрәстәрен һоғона ла ҡуя. Сырылдатып, йырткыс ҡомһоҙлоғо мснэн кинәнеп ашайҙар шуларҙы.

Ошоларҙы күргән һайын Гөлбаныуы илай, ауылға ҡайтайыҡ, ти башлай. Етмәһә, астан үлгән сускаларҙы Әптеләхэт менән эсәһе тунайҙар, ҙур ҡаҙанға һалып бешерәләр ҙә арлы-бирле көрпә ҡушып, сускалар алдына ҡуялар. Кыш етеп, һыуыҡ төшкәс, Шәңгәрәй бөтөнләй көйһөҙләнде, мал аҫтын таҙартырға ла тыңлатып сығарып булмай.

- Бар инде, Шәңгәрәй, сыҡ, Әптеләхәттең бер үҙенә ҡыйын бит, — тип инәлә уға Гөлбаныу.

— Ы! Тыста буран, мин бурандан ҡурҡам!

- Беҙ ҙә буранда йөрөйбөҙ. Әптелэхэт менән Гөлбаныу, буран тип тормай, утынға баралар, һалам килтерәләр...

— Ы!

— Нигә? Нигэ тыңламайһың, Шәңгәрәй?!

— Ҡыҙыңды кәләс итеп бирмәйһең бит үҙең...

— Бирәм, Шәңгәрәй, бирәм.

— Ҡашан?

— Бына көн генә йылыһын да...

— Кишә лә су-сулай тигәйнең...

— Шунан мин ҡалайтайым? Әйт ана буранға, өрмэй торһон!

— Ярар, шығам.. Тик ҡыҙыңды Әптеләхәткә биреп ҡуйма!

— Ярар, тинем бит.

— Мин матур, Әптелэхэт ямаҡай!

— Эйе, Шәңгәрәй, һин матурһың.

— Уңғанмын!

— Уңғанһың, Шәңгэрэй.

— Аҡылдымын.

— Аҡыллыһың, Шәңгәрәй.

— Ҡыҙыңды ыстубы бирәһең!

— Бирәм, Шәңгәрәй, әйттем бит!

— Мин оштом, Сәһәрбаныу апай! Кәртәне виш көрәп шығарам, шушҡаларыңцы ла көрәп түгәм!

— Ай, шаҡшы, Шәңгәрәй! Тейеп кенә ҡара сускаларға! — Шәңгәрәй артынан ишек ябылырға өлгөрмәй, Шәһәрбаныу һырмаһына йәбешә — булыр был һармаҡтан, ҡарап ҡына тормаһаң, туңдырып үлтереп бөтөр хайуандарҙы.

Төтөнгә, буранға, юҡлыҡа, хәсрәткә сәсәй-сәсәй көндәр бер-бер артлы үтә торҙо. Теге хәйерһеҙ һабантуй көнөнән һуң Гөлбаныуҙың күңеле шиңеп, һүнеп ҡалды. Ярай әле эргәһендә Әптелэхәт бар. Кис булһа, тальянкаһын алып, һағышлы моңға тулы йырҙарын һуҙа:

Ағас сүлмәк, ауыҙы тар,
Бешә һалдат аштары...
Коштар осоп етмәҫ ергә
Китә һалдат баштары.

Гөлбаныу ҙа, Шәһәрбаныу ҙа, һәр ҡайһыһы үҙенсә монданып, йыр тыңлайҙар. Шәңгәрәйҙең генә ҡолағы ла, күҙе лә иҙән ярығында: ул, донъяһын онотоп, сысҡан аулай.

Их, үҙкәйем, их үҙкәйем,
Их, үҙем кайын булһам,
Их, үҙкәйем кайын булһам,
һин былбыл булып кунһаң...

— Әсәй, ниңә һин бер ҙә атайым хаҡында һөйләмәйһең ул? — Гөлбаныу йөрәкһенеп әсәһенә ҡарай.

— Үлгән кешенең тупрағын ҡуҙғатырға ярамай бит, ҡыҙым. — Шәһәрбаныу ҡыҙының һорауынан инде нисәнсе тапкыр ошо рәүешле тайҡала.

— Үлгән кешене иҫләргә лә ярамаймы?!

— Беҙ бит оҙаҡ йәшәмәнек. Ул үлгәндә һин тыумай ҙа ҡалғайның. Ул... яҙғы ташҡында батып үлде. Ағып китте. Хатта һөлдәһен дә тапманылар.

— Ул хаҡта һөйләгәйнең...

— һөйләгәс...

— Юҡ, ул быңа ниндәйерәк кеше ине? Төҫө, холҡо...

— Ниндэй тип, кеше ниндәй була һуң? Ҡәҙимге ине, һинең кеүек ине, матур ине.

— Ә ниңә беҙ ауылыбыҙҙан күсеп киттек?

— Ул заманда... күптәр күсте.

— Алыҫмы ул ауыл?

— Төбәшмә инде, балам. Ул ауылда һинең бер ниндәй чат-зәүерең юҡ. Юҡ менән баш ҡатырғансы, ана, бәйләмендә ал, үҙеңә бирнәлек әҙерлә.

— Ниңә кәрәк ул?

— Бэй, һин ҡыҙ түгелме? Кейәүгә сыҡмайһыңмы?

— Әллә шул, — «кейәү» һүҙен әсәһенән тоүләп ишеткәнгоме — ҡолаҡтарына ут ҡапты Гөлбаныуҙың, — инде сығып тормамдыр шул кейәүгә.

— Атаҡ, иҫке ауыҙҙан яңы һүҙ, тигәндәй. — Шоһорбаныу ҡыҙына аптырап ҡараны. — Ул ни тигән һүҙ?

— Кеше көлдөрөп... Суҫка ҡараусы ҡыҙҙы кем алһын?

— Эштең ғәрлеге юҡ.

— Ғәрлеге булмағанға суҫка ҡарарға кеше тапмайҙар икән!

Ә тышта төн. Яҡында ғына бүре олоғаны ишетелеп ҡала. Әптеләхәт, гармунын ҡуйып, мылтыҡ алып, ҡуралар тирәһен байҡарға сыҡҡан арала кемдер тәҙрә сиртте. Шәһәрбаныу һағайҙы, утын ағасы тотоп, ишек эргәһенә килде.

— Кем бар унда?

— Яусылар килгән, Шәһәрбаныу, асығыҙ!

— Атаҡ-атаҡ, — Шәһәрбаныу ишектең келәһен ысҡындырып ебәреүгә Хашим, тағы ла уның атаһы менән бер туған ҡустыһы килеп инделәр. Шәһәрбаныу ҡаушаны, ҡулындағы утынын ҡайҙа ҡуйырға белмәй аптырап өтәләнде.

— һеҙ инде, Шәһәрбаныу ҡарындаш, кейәү егете менән бергә ҡыҙ һорарға килгәнгә асыуланып китмәгеҙ. Убыр йөрөмәҫ төндә Хашимһыҙ ҡайҙа сығып китә белеһең?

— Төндөң күҙе бар, — Шәһәрбаныу уның исемен иҫенә төшөрә алмай аҙапланды, — теге ни.. кем...

— Бәшәр.

— Эйе, Бәшәр, көн бар, йола бар.

— Шулай ҙа ул, — Бәшәр унайһыҙланып тамаҡ ҡырҙы. — Хашим бит... Ҡаланан әңерҙә генә ҡайтты ла...

— Ҡайтһа шунан? — Шәһәрбаныуҙың ныҡ көйгәндә йә тулҡынланғанда күҙе тартышыусан. — Ут алырға ҡайтмағандыр бит ҡаланан?

— Алайға китһә, — «Димсе дингеҙ кисерә» тип бирешмәҫкә булды микән, тауышын көрәйтә төштө, — үҙенсең дә уттан ҡыҙыу саҡтарың булманымы?

— һинең менән миңә, кем, Хәйербәшәр, ғишҡи хәтирәләргә бирелеү килешмәгәндәй.

— Уныһы шулай ҙа... Йәштәр ни тиер бит әле?

— Йәштәрҙең ата-әсәһе бар, Хәйербәшәр. Төндә килеп баҫып, ҡыҙ һорау йолаһын күргәнем юҡ илла! Биғәйбә.

— Бәй, сәй ҙә эсермәй кире бораһыңмы?

— Ғәмәлегеҙгә күрә әмәле.

Өнһөҙ ҡалған Гөлбаныу Шәңгәрәй менән Әптеләхәт яткан яҡты бүлеп ҡоролған шаршау артынан сыҡманы; Хашим, баҫҡан ерендә тапана бирҙе лә атаһының яурынына ҡулын һалды:

— Ҡайттыҡ эйҙә, уңманыҡ.

Ошо хәлдән һуң күп тә үтмәй, Ишмөхәмәт килде. Малайына алмаш кейем, аҙыҡ-түлек тапшырғандан һуң, Шәһәрбаныуға өндәште:

— Ҡыҙыңды камсамулға алалар. Миңә, ней, ултыртып алып ҡайтырға ҡуштылар. Юл, ней, тын — көрт һалған. Атка, ней, ауыр булһа, була инде. Райком, ней, ҡуша бит.

«Камсамул» тигәнде ишеткәс, Шәһәрбаныу ҡаршылашманы ла, ҡарыулашманы ла: «камсамул»ы ла, «партия»һы ла — хөкүмәт ғәмәле, тип уйланы, э хөкүмәткә ҡаршы барып буламы?

Ул көндө комсомолға байтаҡ йәштәрҙе алдылар. «Ун биш-ун алты йәшлек үҫмерҙәрҙән ФЗО-ға китергә шул көндө үк ғариза яҙҙырҙылар. Ғаризаны Гөлбаныу ҙа яҙҙы. Уның был шайтан элмәгенә эйләнгән донъянан ысҡынаһы, икенсе тормошҡа осҡоһо килде. Китергә лә ҡабат ҡайтмаҫҡа! Хашимы ла, Ихсанбайы ла, Сәбиләһе лә, суҫкалары ла — бөтәһе бергә суҡынып ҡына китһендәр! Әсәһе генә йәл бына...

Шул уйҙары менән клубтан сығып, Гөлбаныу өйҙәренә табан атланы. Моғайын, ул бөгөн Маһинур күршеһенә инеп кенә йоҡлар, ә иртәгә... Иртәгә ул ҡалаға китәсәк. Ауылда инде бер көнгә лә ҡалмаясаҡ Гөлбаныу. ФЗО тигәндәре суҫка ҡарауҙан да хәшәрәтерәк түгелдер әле. Әсәһенә элегә хәбәр итмәй торор, белеп ҡалды ниһә, ебәрмәйәсәк.

— Гөлбаныу!

Ҡарҙы шағыр-шоғор ҡарғандырып артынан йүгергән эҙәм Хашим инде әллә?

— Ай!..

— Ниҙән ҡурҡтың, Гөлбаныу? Фызыуыға китеүҙән ҡурҡмаған батыр камсамулка артынан егет эйәргәнгә генә ҡурҡырмы?

— Һин үҙең ҡанса замандан ҡалала йөрөйһөң — үлмәгәнһең.

— Ул бит мин, Гөлбаныу, йә нимэ эрелэндең? Килгэн яусылырҙы кире бор, артынан килгэн егеттэр менэн йүнлэп һөйләшмэ... Хан улын көтэһеңме эллэ? Хан малайҙары суска есе килеп торған ҡыҙҙарҙы вапшы-ты үлеп яраталар, ти!

Уның ҡарауы суска есе сыҡкан ҡыҙҙар араҡы есе аңҡыған егеттәрҙе үлеп күрә алмайҙар, ти. — Гөлбаныу был һүҙҙәрҙе әйткәндә үҙҙәренең өйөнөң ҡапкаһына килеп еткәндәр ине.

— У-һу-у... Шулай ук тиме ни?! Хәҙер мин һиңэ суска ҡараған ҡыҙҙарҙың эскэн егеттәрҙе нисек итеп күрә алмағанын күрһэтэм икән...

— Нишләтмәксеһең? — Бер кластa, бер парта артында ултырып укыған кешеһенән ҡурҡыу башына ла килмәне Гөлбаныуҙың.

— Хәҙер, күрерһең... — Хашим күҙ асып йомған арала Гөлбаныуҙың ҡулдарын артка ҡайырҙы ла, бер ҡулы менән шаҡарып тотто, икенсеһе менән уның башын ҡыҫып, ирендәрен араҡы есе аңҡып торған ауыҙы менән баҫты. Ҡатын-ҡыҙ ҡулы менән генә нығытылған өй ишеге бер тибеүҙә бер ниндәй ҡаршылыкһыҙ асылды. Хашим типмәһә лә, енлэнеп килгән ел бэрелеүенә лэ асылыр ине әле ул.

— Ы! Кит! Ҡағылма!

— Ҡыскыр, ила! Урыҫ утарында уйнаш итеп туймаһан, туй бына!

— Хэш-әрэт!.. — Гөлбаныуҙың сараһыҙлыктан ҡалтыранған ирендэрен тағы шул һаҫык ауыҙ упты, йүгерек ҡулдар эс кейемдэрен өҙөп-йыртып быраҡтырып, үҙен урындыкгың ҡак тактаһына килтереп бәрҙе. Шул минутта тийерлек имәнес ауыртыу Гөлбаныуҙың күҙ алдында уттар уйнатты, тактағамы, бүрэнэгәме бэрелгән башы иҫтэн яҙҙырҙы...

— Әсэй... һыу... һыу бир эле, әсэй? — Тамағы кипкэн Гөлбаныу күҙен асып тирэ-яғына ҡараны,

— Аһ!.. Хашим?! һин бында нишлэйһең?!

— Әсэй... — Хашим кеткелдэп көлдө. — Әсэндең генэ ҡыҙы шул һин хәҙер...

— Ай!!! Нишләнең һин, Хашим?! — Үҙенең яланғас тэнен күреүҙэн иҫенә килгән Гөлбаныу ҡыскырып илап ебәрҙе. — Ыырткыс һин, Хашим!

— Иҫендэ тот, Гөлбаныу: ирҙәрҙең барыһы ла йыртҡыс. — Ул тағы хихылдап көлдө. — Әлбиттэ, Әптеләхәт менэн Шариктан башкаһы. Ике имгәк. Бешеп, ауыҙҙарына төшөргә торған алманы йота алмағандар.

— Инде нишләргэ минә, инде ҡалайтайым?! Әсэй!..

— Нишлэйһең... Бына мин нишләйем һуң? Күрэһендер бит: усакка ут яғып ултырам. Өй йылытам. һин дэ тор, итәкенендә рэтләштер. Йыртылған ыштаның йэл булһа, ҡаланан ебәгэн әпкилеп бирермен.

Гөлбаныу ҡапыл теше-тешкә теймәй ҡалтырана башланы.

— Өшөйөм... Мин өшөйөм!

— Хэҙер... Берәй күнәк табып, йылғанан булһа ла һыу килтерһәң, ҡайнатырбыҙ, эсенә йылы төшөрөрбөҙ...

— Мин... атлай алмайым!

— О-о! һин бигерэк: ҡыҙлык алыу — табанды ярып тоҙ һалыу түгел бит ул. Фызыуы тип алкынһаң, уныһын да эшләрбеҙ.

— һин ниндәй... ҡанһыҙ! — Гөлбаныу йэнэ һулкылдап илап урындыкка ауҙы: йәшел аклан, көрәштә еңгән Хашим, уға янсыҡ һонған ҡулдары, Ихсанбайҙың ҡараштары, үҙенең өмөттэре, татлы-зәңгәр хыялдар менән сарҙакланған төндәре Гөлбаныуҙың күҙҙәренән асы йэш булып ақтылар ҙа актылар...

— Дөрөҫ, Гөлбаныу, йырткыс мин. — Ҡапыл уйсанланып киткән Хашим, усаҡ эргәһенән тороп урындык ширлегенә килеп ултырҙы. — Ҡанһыҙмын. Мәгәр һине яусылар өсөн егерме саҡрымда яткан утарға төнө менән юлға сыҡканда, мин шөйлә арыуыраҡ инем. Ышан, Гөлбаныу: был дөрөҫ. Әгэр ҙә шунда беҙҙе кире бормаһан, яғылмаған өйҙөң ҡак тактаһында түгел, ҡәйнэ йортоноң түрендэ — сымылдык эсендэ күпереп ятыр инең. Эйе, Гөлбаныу, был да дөрөҫ. һин егетлектең ҡәҙерен белмэһәң дә, матурлыктың баһаһын әҙерәк белә инек ул.

— Ҡэбэхэт һин!

— Иофар төнө өсөн ҡатыраҡ әйтелгән һүҙҙәр, элбиттә. Шулай ҙа... — Хашим ашыкмай ғына салбар төймәләрен ыскындыра башланы. — һылыу ҡыҙ ауыҙынан сыпскан

һүҙҙәрҙең ниндәйен дә бүләкһеҙ ҡалдырыу килешмәç, — усакта ялпылдаған уттар унын еңеүле, маһайыулы йөҙөн яҡтыртты, - - бынан һуң да шундай һүҙҙәренде йәлләмә, йәме, кэләш?!

Хашимдың ауыр кәүҙәһе аçтында ҡалған Гөлбаныу баяғынан да ныҕыраҡ ауыртыу тойҙо... Аҙаҡ ул был язалау сараһына әйләнгән ғибрәт хэлдең иçәбен-хисабын юғалтты.

Ҡапыл асылған ишек һиçкәндерҙе Гөлбаныуҙы. Мәҙинә икэн. Ҡызыҡай сүместэн көлә-көлэ, һөйләнә-һөйлэнэ һыу алып эсте лә тағы сығып йүгерҙе. Гөлбаныуға уның һүҙҙәренең мәғоноһс барып та стмәне. Атаһынан да, эсәһенән дә артыҡ наҙ тәтемәһэ лә, алсаҡ, матур ҡыҙ булып үçеп килә унын Мәҙинәһе. Әсәһенең бөгөн кис үҙе, Мәҙинә хаҡына, әҙәм ышанмаçлыҡ, эйтергэ тел әйләнмәçлек яҙыҡ эш ҡылырға китергә ултырғанын белһә әгәр… Ах, яңылыша бит Гөлбаныу, яңылыша... Бәлки, Мәҙинәне ФЗО-нан алып ҡалыуҙың икенсе юлы ла барҙыр ҙа, тик уны Гөлбаныу ғына белмәйҙер? Ә, бәлки, артыҡ ҡурҡыныс та түгелдер ул ФЗО тигэндәре? Юҡ, юҡ... Теге ҡасаҡ ҡыҙҙар онотолоҡмо һуң?! Аллам һаҡлаһын!.. Көфөр, көфөр уй уйлайым...

Буйға кесерәге сығып киткәс, Гөлбаныу ойоғон ямап ултырған икенсеһенә һүҙ ҡушты:

— Әхирәтендең бөтөнләй көйө юк, көлмәй ҙа, һөйләшмәй ҙә тигэндәй.

— Ауырлы ул, апай, йөклө...

— Ошо ҡыҙмы?!

— Эйе, мастер көсләне...

— Аһ...

— Үҙенә өндэшеп ҡуйма инде, апай. Былай ҙа әүрәтеп кенэ апкайтып барам. Үҙенә ҡул һалған ерҙэн алып ҡалдым.

— Аслан ҡул һалмаһын үҙенэ... — Гөлбаныу китабына текәлгән ҡыҙына күҙ һалып алды, — бала ни... үçә лә китә ул.

Кешегә кәңәш биреүе еңел дә ул... Ә үҙе Хашим менән булған ҡот осҡос төндән һуң ауырға ҡалғанын белгэс, нисегерәк илағайны! Мәкегә төшөп үлергә булып бөткәйне бит. Төн ине. Башын мәкегә инде тыҡтым тигәндә, тэнен шыйыҡ сыбыҡ яндырып үткәнен тойҙо.

— Ай!..

— Ауыртамы? Тағы кәрәкме?! — Ҡаршыһында ҡыш көнө ялан аяҡ, ялан өç Фәүзиә ҡарсыҡ баçып торғанын күргэс, үҙенең бында ниңә килгәнен дә онотто Гөлбаныу. Гөлбаныуҙың уйын ҡайҙан белгән ул? Бер кемгә лә бер һүҙ ҙә әйтмәгәйне бит ул... Хатта эсәһе ҡыҙының сығып киткәнен гоймағайны...

— Нишләүең был, инәй?!

— Һорарға рөхсәт ит: ә һинең был нишләүең?

— Мин... донъянан туйҙым... Минең йәшәгем килмәй, инәй! Бөтәһенә лә һин, һин ғәйепле! Һин… һин... айырҙың мине Ихсанбайҙан!

— Сеү... Ярһыма. Хәҙер генә инеп ят. Әгәр тағы бөгөнгө ҡылығыңцы ҡабатларға итһәң, үҙеңә ҡарап үпкәлә: өйөңә утлы торонбаш менән баçтырып апарып индерермен!

— Мин бит... ул... Хашимдан тыуған баланы яратмаясаҡмын! Күрә алмаясаҡмын!

— Иҙел күрмәй — итек сисмә, ҡыҙым. — Фәүзиә инде баштағы уçаллығын ҡуйғайны. — Туғыҙ ай буйы йөрәгең аçтында йөрөгән сабый үҙенән-үҙе яраттыра ул. Бар ҡайт, бар... Шәһәрбаныу уянһа, ҡото осор...

Ниңәлер буйһондо Гөлбаныу. Хэлһеҙлэнеп, бәлийерәп киткән аяҡтарын өйөнэ табан өçтөрәнэ.

Комсомолға инергә тип киткэн еренән инде өс көн ҡайтмаған ҡыҙын юллап, күҙ асҡыһыҙ буранда утарҙан йәйәүләп сығып китте Шәһәрбаныу. Буш өйҙөң ҡаҡ урындығында кәкрәйеп кенә яткан ҡыҙын күргэс, йөрэген баçып, иҙәнгә ултыра төштө. Эш, ауырыу менән миктәгән Шэһәрбаныу шул ятыуҙан мандыманы, өс айлыҡ ҡына сабыйы менән Гөлбаныуҙы ҡалдырып, яҡты донъя менән хушлашты.

Мәйет тәрбиәләргә ололар, йәнә күрше-күлән йыйылды. Гөлбаныу нишләргә белмәне: кәфенлеге лә юҡ бит, исмаһам. Шул саҡ, әмәлгә ҡалғандай, ишектән Фәүзиә килеп инде. Мәйет ҡашында ултырғандар менән эйәк ҡағып ҡына иçлилэште. Мәйет тәрбиәләргә түгел, ғөмүмән, кеше йыйылған ергә бер ҡасан да йөрөмәгән ҡатынға барыһы ла

ғәжәпһенеп, аптырабыраҡ ҡарағанды ҡарсыҡ аңланы, шикелле: үҙенә төбәлгән күҙҙәргә ҡурғаштай ауыр ҡарашын ташлағас, ултырып доға ҡылды, унан:

Күрше хаҡы — Тәңре хакы, — тине. — Бынау төргәктә мәйет өсөн кәрәк бөтә нәмә бар. Хәйерлеге лә шунда. Гүр саҙаҡаһына һарыҡ ҡуйғанмын. Былар менән үҙ үлемдегем ине, күрше алдараҡ киткәс, күрәһең, уға яҙған. Һыу йылыттығыҙмы? Мәрхүмәнең кәүҙәһен үҙем йыуымаҡсымын.

Үҙен ғүмергә бәхетһеҙ яһаған ошо ҡатынды күпме аңларға тырышһа ла булдыра алмаҫ инде Гөлбаныу. Кем ул? Ниндәй кеше? Иблесме, фәрештәме? Үҙе шикелле иҙеүенән бөрөп алып, йәнен төндә тышта ҡалған бесәйҙәй тырнаған һорау-ҙарына яуап алғансы һелкетһәң ине! Ана эле лә, бер ни булмағандай, Гөлбаныуға өндәшә, дөрөҫөрәге — бойороҡ бирә:

— Шаҡ ҡатып торма, ҡыҙыкай! Оло мәйеткә — оло тәрбиә. Йәһәт ҡыбырла: йомаға саҡлы ерләп өлгөрөр кәрәк. Илау менән күҙ сығарһаң, сығарырһың, эш сығара алмаҫһың. Мәрхүмә хоҙай бәндәһе булған икән, йома көндө, изге Рамаҙан айында үтте. Ҡылған изгелектәре алдына килеп, Хоҙай ҡаршыһындағы сөәлдәрен еңеләйтеп, йәнен ожмах түрҙәренә эйләһен!..

— Амин, шулай булһын, — тине йыуырға була мәйетте уратып алған ҡатындар. — Ситтән килһә лә, халыҡ үҙен яратып торҙо. Кешегә ауыр һүҙле булманы, түрәләр ҡайҙа ебәрә, шунда эшләне.

Хашимдың бер туған апайы, Гөлбаныуҙың ҡайынбикәһе Зарифаға ғына мәйет өҫтөнә яуған маҡтау һүҙҙәре оҡшаманы:

— Үлгән кешегә ожмах юрайһың инде уны... Ну бит ирһеҙ бала табыу — зинасылар хөкөмөндә. Зина — тамуҡ өлөшө.

Фәүзиә бының ауыҙын тиҙ япты:

— Кемдең ҡайҙа элэгере бер хоҙайға мәғлүм, Зарифа! Килененден әсәһен, ҡоҙағыйынды, хурлап ҡына тамуктан ҡотолормон, таҙарынырмын тиһеңме? Шулайтмағас... һүҙҙәрем нахаҡ булыр ҙа өҫтөмә оло гонаһ алырмын, тип тә уйламайһың бит әле һин?

Зарифа башҡаса ҡабарынманы, шулай ҙа:

— Әлләсе... — тип үҙен яҡлап ҡалырға тырышты, — мин үҙем ни... әүәл-әүәлдән гонаһтан ҡурҡып ҡына йәшәгәс ни... Кешенең төрлөһө була инде, мин ни...

Етте, Зарифа! — Мэйет тэрбиэлэүселәрҙең иң олоһо ҡаты итеп тамаҡ ҡырҙы, — мәйет ҡашында ғәйбәт һөйләү үҙе оло гонаһ.

— Эйе, эйе...

- Мин дә шуны эйтә алмай тора инем.

- Аллаһы тәғәлә Шәһәрбаныуҙың ауыр тупрағын еңел ҡылһын, — мәйеттең баш осонда илап торған Маһинур эйтте быны, — күпме йылдар күрше йәшәп, бер-беребеҙгә ҡырын ҡараған сағыбыҙ ҙа булманы.

Әсәһен юғалтыу ҡайғыһынан иҫе инәрле-сығарлы йөрөгән Гөлбаныу ҡатындарҙың хэбәрен тыңланы ла, тыңламаны ла ксүек. Мәҙинәһен күтәреп, кешегә ул-был нәмә алып биреп, инэ-сыға йөрөгән арала ул шуға ғына иғтибар итте: Фәүзиә оллә беҙ уйлағанса ҡарт та түгел микән? Бәлки ул һәр саҡ оҙон күлдәк, башына, күҙенә төшөрөп, ҡара яулыҡ бәйләп йөрөгәнгә генә ҡарт күренәлер?..

Уңарсы мәйетте өйҙән сығара ла башланылар. Йөрәк майҡайын һыҙҙырып, йәндәрен ут-ялҡындарға көйҙөрөп, осәһе сыға өйҙән. Башы менән түгел, аяғы менән сыға. Барып кына ҡайтыр ергә түгел, ҡайтмаҫ та ғына ергә китә...

— Аh, аh! — Гөлбаныу ҡулынан балаһының шыуа башлауын тойҙо. — Аh!

— Баланы!.. Бир мында баланы... — Маһинур балаға, Фэүзиә Гөлбаныуға йәбеште. Фэүзиә ҡапыл ғына ҡап-ҡара күҙҙәрен Гөлбаныуға тонйоратып текэне лэ уң ҡулы менэн еңелсә генә битенән һыпырҙы. Гөлбаныу шул минутта уҡ, бар донъяһын онотоп, сабый тыныслығы менән йоҡоға талды...

Үлгән артынан үлеп булмай, тигәндәре дөрөҫ икән: Гөлбаныу Мәҙинәһен ҡайҙа күршеһе Маһинурға ҡалдырып, ҡайҙа үҙе менән алып фермаға эшкә йүгерҙе. Хашимы һаман шулай ҡаланан килә-китә йөрөнө. Бала тыуҙы тип, ҡулына влып һөймәне, килгәнендә лә гел эсеп килде. Ирлек нәфсеһен ҡандырыу менән хырылдап йоҡлап китте. Төшөндә эллә иındәй Зоялар, Людмилалар менән һаташты, кемгәлер янаны, кемделер наҙланы. Бер нисә тапҡыр Хашимды индермәҫкә итеп ҡарағайны, Гөлбаныу аҙаҡ үҙе һыу эскеһеҙ булып ятты: ир көсө менән туҡмалыуҙың ни икәнен шунда гатыны Гөлбаныу. Ҡыҙғандымы ул Гөлбаныуҙы, күрэ

алманымы, әллә яратыуы шул булдымы? Гөлбаныу Хашимдың холкон һис кенә лә төшөнә алманы. Был хәл күпме дауам итер ине һәм ни менән барып бөтөр ине, әгәр ҙә уны тукмалғандан һуң Фәүзиә ҡарсыҡ күрмәһә.

Фәүзиә менән Гөлбаныу ҡоҙоҡ эргәһендә һыуға барған ерҙәрендә осраштылар.

— Атаҡ, ҡара янғанһың бит?! Кем эше был?!

— Кем булһын: ирем бар ҙа һуң минең.

— Тукта әле, ирлеген ҡайҙа ҡуйырға белмәһә, күрһәтәйем әле мин уға!

Гөлбаныу аңҡы-тиңке булып һыуҙан ҡайтып ингәнендә Фәүзиә урындыкта ҡырын яткан Хашимдың боғаҙынан маткып алғайны.

— Үлтерәм, Хашим, түҙемлегем бөттө!

— Ы-у-ы-ы...

— Ҡуйсы, инәй, нишләйһең ул, инәй?! — Гөлбаныу килеп Фәүзиәнең тарамыштан да ҡатыраҡ ҡулдарына йәбеште.

— Эткә — эт үлеме! Ул бит һинең тырнағыңа ла тормай! Ниңә тукмай ул һине, ниңә мәсхәрә итә?! Ниңә ул батшаларға ла тәтемәҫ бер һылыуҙың йөҙөнән көлә?!

— Ы-у-ы-ы...

— Ошоноң менән! — Әллә ҡайһы ике арала ҡулына уклау эләктереп алған Фәүзиә үҙен-үҙе белешмәҫлек хәлдә ҡыҙғайны. — Үлтерә генә һуғам, Хашим, биллаһи...

— Ҡуйсы, инәй?! — Ҡурҡынған Гөлбаныу аҙарынып илап ебәрҙе. — Алла хаҡы өсөн, балам хаҡы өсөн теймә!

Гөлбаныуҙың илауы ғына айындырғандай итте Фәүзиәне, унда ла тотошлайға түгел. Фәүзиә уклауҙы Хашимдың баш осонан алып, йән еренә килтереп терәне:

— Ҡысҡыр, эттән тыуған нәмә, ниңә ҡысҡырмайһың? Атанды, апайыңды саҡыр ярҙамға! Ниңә саҡырмайһың?!

— Судка бирәм, а-а-а... Инэнде...

— Ҡурҡытма ла, инәмә лә йәбешмә, Хашим: бел — бәндә хөкөмөнән күптән үткәнмен! Ә һине, — ул уклауҙы тағы ла нығыраҡ батырҙы, — ошо нәмәҫтәнде төйгөстәп, эт ылкаһы итеп йорттан сығарып ебәрәм! У-у-ух!..

Фәүзиә сығып китте, ҡурҡынған Мәҙинә һике аҫтынан тауыш бирҙе:

— Әсәй, үлдеме инде, Урыҫ Хашим?

— Үлмәне, балам. Терелмәне лә...

Шунда ишетте Гөлбаныу Хашимдың илағанын. Иҫерек **гиер** инең — иртә әле, эсеп өлгөрмәгән. Ҡанға буялған \|шндыҡта аунап-тәгәрәп, бала шикелле үкһеп-һыңҡылдап **гороп** илай ине.

Гөлбаныу уны инде бөтөнләйгә китер, был тупһаға ҡабат аяҡ баҫмаҫ, тип уйлағайны — киреһенсә килеп сыҡты. **Хашим** аталарынан шул көндө үк кейем-түшәк килтерҙе, (|)ермаға фуражсы булып эшкә төштө, ғариза яҙып, колхозға инде. Эсеүен генә ташламаны ул. Эсергә аҡса табыу өсөн ни генә уйлап сығарманы, хатта бахыр Шәңгәрәйҙе лә «һауырға» өйрәнеп алды.

— Кәләш алғың киләме? — тиер ине уны күреү менән.

— Ыжнамы! Үҙең алғанһың да!

— һиңә лә эпирәйек.

— Ы!

— Нигә?!

— Миңә Гөлбаныу кәрәк!

— Бирәм Гөлбаныуҙы, ал!

— Алдайһың!

— Антым-шинтым, ып-ысын! Түлке һинән мәгәрис, Шарик!

— Мәгәриш?! Алдасмайыңмы?

— Бына инде, ышанмайсы? Алдашһам, торған ерҙә ер упһын, аяҙ көндә йәшен атһын!

Был һүҙҙәрҙе ишетеү менән Шәңгәрәй, «Хашим торған ер убылып, мин дә төшөп китмәйем» типтер инде, ситкәрәк гайшана, муйынһыҙ башын күтәргәндәй итеп, күккә ҡарап ала:

— Алайһаң, оштом! — Тоҡоя Шәңгәрәй. Инәлеп, тәкәтен коротоп, атаһынан бер яртылыҡ аҡса ала ла кире Хашимға йүгерә. — Бына һиңә аҡша!

— Та-ак... Барып ҡарайыҡ әле лавкаға. Түлке һин ошонда ғына ултырып тор, көт.

Көтә быны Шәңгәрәй. Бер көйө булып алған Хашим быныҡ эргәһенә байтаҡтан ғына килә:

— Әй Шәңгәрәй, дуҫ кеше! Аҡсаң етмәне бит яртыға!

— Инде ниместәйем?

— Нимә эштәйһең... Бисәле булғың килһә, атандың һаҡалынан тотоп һелкетһәң һелкетәһең, ну аҡсаһын сығартмай ҡуймайһың!

— һы-ы-ы... Күп кәрәкме?

— Күп тип, әйттем дә инде: бер яртылыҡ.

Тағы токоя Шәңгәрәй меҫкен. Ҡәнәғәт Хашим өйөнөң ишеген осорта яҙып асып килеп инә:

— Кәлә-әш! Мин һине Шәңгәрәйгә бер яртыға һатып эстем! Ха-ха-ха!

Гөлбаныу ғына көлмәй ҙә иламай ҙа. Ҡаткан унын күңеле. Ҡоролоҡ йылдағы сатнап, ярғысланып яткан тупраҡ кеүек, толкаһыҙ, көлһөү ергә әйләнгән унын йәнкәйҙәре...

Ошо хәлдә оҙатты һуғышка ла ирен Гөлбаныу.

— Ярай, кәлэш, — тине Хашим ишектән сығыр сағында, — тормош булғас, — Гөлбаныуға был алпамыша кэүҙәле, уйнаған кеүек кенэ йәшэгән кешенең ҡапыл баҙап, йыуашайып китеүе сәйер тойолдо, — төрлө саҡтар булғандыр. Үлмәһәм ней... ҡайтырмын... Малай эштэй алмай киттем бит, моғайын ҡайтырмын. — Шунан ул аптыраулы ҡарашын үҙенә текәп торған ҡыҙына эйелде. — Әсэйеңә ярҙамлаш, һин ҙур үҫтең инде!

Оҙатыусылар төркөмөнөң иң аҙағында барҙы Гөлбаныу. Былай ғына барҙы. Ирен оҙатыу ниэте менән дә түгел, ил өҫтөнә төшкэн хэсрэтте ил менэн уртаҡлашыу өсөн генэ барҙы...

Һуғышҡа ул ирен йәллэмэй ебәрҙе лә бит, э ҡыҙын? Был афәт унын берҙән-бер ҡыҙын йотмаҡсымы? Балаларын ебәрмәгән ата-эсэләрҙе хөкөмгә тарттыралар, хатта хөкөмгэ тарттырылыусылар араһында ун өс йэшлек ҡыҙҙар бар. Мәҙинәһе бигерәк бала ғына бит әле, майырыҡ ҡына. Әсәһе булһа, моғайын, бер сараһын күрер ине. Юҡ бит Гөлбаныуҙың таянысы...

Ә эңер төшөп тә килә. Табаға төшөп ирегэн һары майҙай, ҡояш үҙе инде байыҡ юғалды, күк йөҙөнә унан ҡалған ҡыҙғылт нурҙар ғына таралды. Тау башында үҫкән анау ҡайындарҙы шул нурҙар бешерэ, өтә төҫлө. Гөлбаныу йөрәгендә лә шундай уҡ ут. Ҡояшмы бешерэ уны, эллэ оятымы?! Урамының эсендә иләҫ-миләҫ торған Гөлбаныу янына шул саҡ Мәҙинәһе йүгереп килде.

— Уф, ҡотомдо алдың, нимә ул?!

Мәҙинәнең ҡарағускыл бите ҡыҙарып киткән, ике сикэһе бешкэн сейәме ни!

— Кем бирҙе?

— Бирмэне, үҙем тоттом. Утауҙан ҡайтышлай, һыу төшөргэ туктағайныҡ...

— Шунан нисек итеп тоттоң?

- Баҫтырып! Эй шәп ҡаса!

Аһ-аһ, шамбы икэн шул... һаман тере...

- Хәҙер беҙ уны ҡурабыҙ, эйе бит, әсәй?

— Эйе-эйе... юҡ та... сабыр ит... Өйҙә генә ултыр...

- һин ҡайҙа бараһың ул, эсэй? Ә беҙҙе... бригадир ағай әйтте, ни... ике көндән алып китәләр, тине.

— Беләм, беләм... Саҡ ҡына сабыр ит...

Ул арала күкте ҡайҙандыр аңғармаҫтан килеп сыҡкан болот ҡаплап алды, һалкынса, дымлы ел иҫте. Намыҫы менән көрәккә төшөрөрҙәй кэрәк көрэшенэн ярһыған Гөлбаныуҙың ҡыҙын күкрэгенә ҡыҫып бер һөйгөһө килде, оммэ көсө етмәне, үҙен-үҙе тыйҙы. Гонаһ ҡылырға ниәтлэнгэн бер сағында сафтан-саф балаһына кағылырға баҙнат итмәне.

Атланы аяҡтар, киттеләр. Ҡапыл ғына ҡараңғылыҡ ҡаплаған күктән эре-эре ямғыр тамсылары атыла. Яуһын эйҙә, атылһындар, исмаһам, битем буйлап тэгэрэгэн йәштәрем күренмәҫ... Төн ҡараңғылығында атлауын атлай ҙа Гөлбаныу, яктырғас нимэ эшлэр ул? Төндә бысранған иамыҫын ни менэн йыуыр?!

— Имгәнеп ҡуйма, Гөлбаныу, иплэп баҫ. — Ихсанбай уны билдэлэнгэн урындан күпкэ яҡынырак килеп ҡаршы алды. — Ғәфү итерһегеҙ инде, ханым, килер юлдарыңа келәмдәр түшэй алманым.

Гөлбаныуҙың ғәрлегенэн тыны быуылды: мәсхэрэ итэ бит Ихсанбай, күрәләтә көлә!

Сыҙай алманы Гөлбаныу, яуап бирмәйенсә түҙә алманы:

— Эй, Ихсанбай, — тине ул эске бер рәнйеү менән, — бала ҡайғыһы алкымымдан алмаһа, һин балаҫтар йәйгән хэлдә лә мин унда төнөн түгел, көндөҙ ҙә аяҡ баҫмаҫ инем.

— Уҫалһың, — Гөлбаныу түштэренә Ихсанбайҙың ҡайнар усы ятыуын тойҙо. — Унан да бигерәк... татлыһын, — унын комһоҙланып, ажарланып үбеүенэн Гөлбаныу бер ни ҡәҙәр тын ала алмай торҙо. — Ҡайнарһың... һылыуһың... — Ихсанбай, Гөлбаныуҙың баҙнатһыҙланып ҡаршы торорға маташыуына ҡарамай, ҡулдарын билдән түбәнгә күсерҙе, түшенә тештәрен батырҙы.

— Ыһ! — тине Гөлбаныу, оялышынанмы сыкты был ауаз, ауыртыныуҙанмы...

— Хәҙер, хәҙер... Күпме көттөм мин ошо минуттарҙы! — Уңайһыҙ хәлдә ҡалған Гөлбаныу оялыу ҡатыш татлы бер

ләззәт киссрҙе. Хашим менән күпме йәшәне, ә ниңә ул бындай тойғоно бер ҡасан да татыманы? Эй алла! Шул тиклем дә гонаһлы микән ни Гөлбаныу?!

Үҙ ирсгенән тыш килде был осрашыуға Гөлбаныу, ә киткәндә... ошо минуттарҙы ҡәһәрләргә лә, әрләргә лә һүҙ тапманы.

Тура өйөнә инмәйенсә, болотло төндә ҡараға әйләнгән Аҡйылғаға төштө Гөлбаныу. «Шиктәремде... гонаһымды ағыҙып алып китһәң ине, һыу?!» Ерҙәге бысраҡты ағыҙа ла бит ул, эстәге бысраҡты ни менән йыуырға?! Әгәр ҙә Ихсанбай уны көсләһә, талаһа, Гөлбаныуға, бәлки, был тиклем дә ҡыйын булмаҫ ине. Ә ул, Гөлбаныу, ошо ҡәһәрле, урланған осрашыуҙан бығаса татымаған рәхәт кисерһенсе әлең... Кеше түгелдер ул, хайуандыр... Ә, бәлки, былар бөтәһе лә төш кенәлер? Бына ул уянып китер ҙә ҡот осмалы төш күргән өсөн береһенә хәйер бирер...

Мәҙинәһен ул саҡта хәтәрҙән алып ҡалды ҡалыуға Ихсанбай. Мәгәр Гөлбаныуҙың кисергәндәре ҡурҡыныс бер төш кенә булманы: Гөлбаныуға ул игеҙәк малайҙар сифатында ысынбарлыҡ булып әйләнеп ҡайтты. Был хәл Хашимдың һуғышҡа китеүенә ун, Ихсанбай менән осрашыуына туғыҙ ай үткәс булды.

Ахыры яҙмыш Гөлбаныуҙы гүргә инмәйенсә тынысландырмаҫҡа итә. Башҡа бер кемдекен дә түгел, уның һыйырын тартып алалар. Башҡа бер кемдең дә хөкүмәткә бурысы ҡалмаған, бер Хашимдыҡы. Һыйыр, һыйыр... бынау саҡлы сабыйҙарҙы аҡһыҙ нисек үҫтерермен? И тәңрем, шулай уҡ сабыйҙарымдың ауыҙынан һуңғы ризыҡты тартып алырһыңмы икән?! Гонаһлы булһам да бер мин гонаһлы бит! Төн сыҡҡансы бик күп уй үтте Гөлбаныу башынан. Хашимға ла, Ихсанбайға ла уйҙары әллә нисә ҡабат әйләнеп ҡайтты. Тәүгеһе бер ни булмағандай малайҙарым, тип хат яҙып ята, икенсеһе башта осрашыу талап итеп йөҙәтте. Аҙаҡ, Гөлбаныуҙың ҡорһағы беленә башлағас, иҫәнлек бирмәҫ, урап үтер, эштә ерле-юҡҡа бәйләнер булып китте.

Хөкүмәткә түләүегеҙ бар, тигәнгә лә аптырай йәнә Гөлбаныу. Хашим эсеүен эсте, ләкин иң элек хөкүмәткә

бурысын түләр ине. Үҙҙәренең май-ҡаймаҡ ашап ултырғанын кәтерләмәй ҙә Гөлбаныу: булған ғына ризыҡтарын ҡырып-һсперсп тапшырып торҙолар. Мөйөштә мыш-мыш килеп йоҡлап ятҡан анау ике сабый, бәлки, хоҙайҙың уға ебәргән таһылыр ҙа, тик Гөлбаныуҙың уларҙы бер ҙә юғалтаһы килмәй бит әле. Күҙгә күренһә, тауыҡ себеше лә йәл, былар бит әҙәм балалары, Гөлбаныуҙың үҙе ярған сәскәләр. Гонаһын күтәреп, табыуын тапҡас, нисек кенә астан үлтерһен?!

Гөлбаныу ҡапыл бер ҡарарға килде: район түрәләренә барасаҡ ул! Һыйыр таптырып килгән анауы упалнамучтан башҡа ла кешеләр барҙыр әле. Береһе аңламаһа, береһе андар, береһе тыңламаһа, береһе тыңлар...

Балалары менән хушлашты ла таң тишегенән юлға сығып китте Гөлбаныу: бер түгел, ҡырҡ биш саҡрымды үтер, мәгәр дөрөҫлөктө тапмай ҡайтып әйләнмәҫ.

Ихсанбай йоҡоһонан баҫлығып уянды. Төшөн иҫләргә тырышып, күҙен асмай ғына зиһенен тупларға тырышты. Тукта, тукта... Гөлбаныуҙың үҙеме, әллә ҡыҙы Мәҙинәһе баҫтырҙымы уны? Эйе, эйе... Ихсанбай эйләнеп, һуғайым ғына тигәйне, ҡыҙыҡай ҡыҙыл үгеҙгә әйләнде лә ҡуйҙы. Китте шунан алыш, китте көрәш... Етмәһә, абалап, көсөктәр гарткылай башланы сабыуынан, уларын тибеп осорам тигәнсе, көсөктәр юҡ булды — улар урынында Гөлбаныуҙың игеҙәктәре, имеш. Икеһе лә моҡсай аҫҡандар, хәйерсе кейемендәләр. Ҡулдарын Ихсанбайға һонғандар ҙа: «Бир», — гип үлтереп алып баралар. «Бирҙем бит!» — ти Ихсанбай, ҡасырға итә, ә улар килеп тағы ла салғыйына йәбешә...

— Ах-ха-ха... — Ихсанбай үҙе лә һиҙмәҫтән тауышлы мтеп көрһөндө, — атам ахыры мине һуғыштан алып калманы, ә тамуҡҡа һалды... — Йөрәген тырнаған уйҙарҙан касырға тырышып, ул ҡабырғаһына боролоп ятты. Әйләнгән |.щғайға тубығы менән Сәбиләһенең эсенә төртөлдө. Тегеһе, һиҫкәнеп, ауыҙ эсенән ниҙер мығырҙаны ла, ауыр һулап, пренә арты менән боролдо. «Көсөкләргә йөрөгән кәнтәй ксүек тултырған эсен». Бисәһенең ауырлы сағын ене һөймәй Пхсанбайҙың. Эсе күпкән яшыҡ һыйырҙы хәтерләтә бындай

сағында Сэбилә. Былай ҙа һынһыҙ нәмә торғаны албаҫтыға әйләнә: күм-күк ирендәре һалынып төшә, анһыҙ ҡураныс танауы, ҡоро һарғылт тиренән торған йөҙөн сөрөштөргәнсе тартылып, өҫкә сәкәйә. Бер-береһенән ҡәҙимге эҙәмдекенә ҡарағанда шаҡтай алыҫ урынлашҡан күҙҙәре ҡыҙарып шешмәкләнә, тар ғына маңлайының яртыһын ҡаплап үҫкән ҡаштарының ике осо түбәнгә ҡарай аҫылына. Эйе... Алды ул бисәнең елләһен! Әсәһенән генә булды, ит үлтерергә генә барып йөрөгән был ҡыҙҙы алыу уйында ла юҡ ине Ихсанбайҙың. Ауырлы, имеш. Әйтәм балаға күмде: йыл һайын икешәрләп тороп үле бала таба.

Гөлбаныу... Уны хәтерләһә, Ихсанбайҙың тәненә татлы бер тулҡын йүгерә. Бөтә булмышы ләззәтләнеү талап итеп тулыша. Әммә теге төндән һуң улар бер тапҡыр ҙа осрашманылар. Башта Гөлбаныу Ихсанбайҙың йөҙөнә күтәрелеп тә ҡараманы, ишараларын күрмәмешкә һалышты. Ә инде ҡорһағын күргәс... Ихсанбай, йәнә ыңғырашып, икенсе ҡабырғаһына әйләнде. Ҡорһағын күргәс, тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китте. Ошо минутта ук уға килерҙәр ҙә:

— Ах, һин, хэшәрәт! Беҙ унда ҡан ҡоябыҙ, ә һин, дезертир, һалдат бисәләренән көлөп ятаһың икән! — тиерҙәр кеүек. Ихсанбайҙың бәғзе ҡорҙаштары яраланып ҡайта ла башланы. Бөтәһе лә асыулы, ҡара янып йөрөйҙәр. Уларҙың эсендә ни ятканын эт белһенме? Улар эргәһендә бигүк әтәсләнеп бармай Ихсанбай. Тәкәбберлеген артка ташлап, саманы онотмаҫҡа тырыша. Ауылда тик бер кеше Гөлбаныу игеҙәктәренең кемдән икәнен белеп ҡалһа ла, көн бөтәсәк Ихсанбайға. «Йә ярай, тыныслан, — тип йыуатырға тырышты ул үҙен. — һыйырын тартып алғас, күпкә бармаҫ ул малайҙар, былай ҙа сыкмаған йәндәре саҡ тора».

Күпме генә тырышып ҡарамаһын, Ихсанбайҙы барыбер йоҡо алманы. Аптырағас, тиртунын эләктереп тышҡа сыкты. Мал өйөндә ут янғанға аптырап китте Ихсанбай: шул тиклем иртә торғандармы, эллә ятып өлгөрмәгәндәрме? Ҡарттың бәйеле аҙҙы шул: көн дә тиерлек иҫереп ҡайта. Шул йоҡламай эсәһен ҡаңғырта микән?

Ихсанбай иплэп кенэ тәҙрә янына килде: атаҡ, атаһы башын устары менән ҡыҫып тотоп, мейес ҡаршыһында ултырасы? Әллә илай ҙа инде? Әсәһе түр башында, ойоҡмо, бейәләйме бәйләй. Асыуы алкымына тығылды Ихсанбайҙың, шул асыуының еле менән килеп ишектәрен асты:

— Төнө менән буҙлап ултырмаһаң, нимә етмэй һиңә?

— Ҡас мынан, өтөк! Ҡас, һалып осормаҫ борон! Атаң булырға кәрәк әле, маңҡа!

— У, ҡартлас... Эскесе! — Ихсанбай, ҡыҙып, унын ҡаршыһына баҫты, атаһы уға ҡаршы баҫырға иткәйне, быуыны тотманы — мәтәлләп барып төштө.

— һуғыштан... алтын биреп... алып ҡалғанда... атаң, шэт, якшы ине?

— Ҡысҡырма! — Ихсанбайҙың бармаҡтары йоҙроҡка укмашты. — Мин һораныммы һинән? Инәлдемме? Ялбарҙыммы?

— Ә-э-э... ту-ты! — Сибәғәттең ирендәре салшайып бәлшэйҙе. — һораманыңмы ни? Кәмиссиәгә апарғанда, ҡаршылашып, сананан төшөп ҡалдыңмы? Әллә мин һине бэйҙэп, арҡандап апарҙыммы?

— Етте, йоҡла! — Ихсанбай, сигенеп, ишек яҡтауына һөйәлде. — Икенселәй эсеп ҡайтып төнө буйы буҙлап илап ултыр әле...

— Үҙең йоҡла, маңҡа! Минэн йоҡо ғына киткәнме? Өйөр-өйөр малдарым, көтөү-көтөү һыйырҙарым, донъя ҡаплап йөрөр һарыктарым киткән минән! Китэйек, тинем эсэйеңә, Төркиәгә ҡасайыҡ, тинем! Тыңламаны! Мине... ошонда әпкилеп, колхозға көн-төн бил бөгөргә ҡушып ҡуйҙы! һиңә... анһат! Һин — түрә! Ә мин...

— Күберәк эсеп, хан заманында юғалған малыңды иҫеңә төшөрөп буҙлап ултырһаң, — Ихсанбай калуш кейгән аяғы менән ҡабат усаҡ ҡаршыһына сүкәйгән атаһының башына төрттө, — бына бынындан да яҙырһың.

Фәүзиә бәйлэмен бэйләүен белде, ата менән ул араһындағы бәхәскә ләм-мим һүҙ ҡыҫтырманы.

Ихсанбай кире тышҡа сыкты. Тукта, тукта... Гөлбаныуҙың ҡапкаһы шығырҙаны түгелме? Был ваҡытта ни... һауынсылар ҙа тормай әле... Берэй ир килеп сыкһасы шунан. Ихсанбайға был етә ҡалыр ине: аҡ эттең бәләһе ҡара эткә булыр ҙа ҡуйыр ине. Бәй, Гөлбаныу үҙе лә һуң был? Ай шундай якты, танымаһа уны, һукыр ғына танымаҫ... Ана ул урам буйлап китте, әһә, ферма тыкрығына боролманы, туп-

тура оло юлға ынтылды бит эле был. Инәһен эт йыккыры... Әллә райкомға ялыу менән китте?

— Нимә һин... кәртәнән сыға алмаған тоҡом үгеҙеләй сапсынаһың? — Ихсанбай эргәһендә әсәһенең тауышын ишетеп һиҫкәнде. Ҡайһы арала сыҡкан да, ҡайһы арала килеп баҫҡан?

— һы... кем сапсына?

— Был ваҡытта йүнле ирҙәр йылы түшәктә... бисәһе ҡосағында ята!

«Бисәнең нәгез генә ҡосағынан сыкмай торғанын алып бирҙең шул!» — тиергә теле ҡысытһа ла, Ихсанбай өндәшмәне. Үкенескә ҡаршы, әлегә өйҙә әсәһе хужа, ҡарт бары тик уның ҡуләгәһе. Ихсанбай ҡарыулашмай ғына өйөнә шылды. Ярар, тип фекер йөрөттө зсенэн, китэ бирһен әле Гөлбаныу. Йәйәүләп ҡайҙа бара ул? Урыҫ ауылы Казанка бар юлда, күп булһа, шунда барып йоҡлар. Шунда ҡыуып етер уны Ихсанбай.

Бер ҡарарға килеп тыныслана төшкэн Ихсанбайҙа шул саҡ ҡырағай дәрт уянды. Күп уйлап торманы, йәһәт кенә бисәһененң йомро ҡорһағына атланды.

— Ай! — Йоҡлап яткан ҡатыны ҡото алынып ҡысҡырып ебәрҙе. — Харап... Харап итәһең баланы!

— Шым-м! — Иренең теш араһынан ҡыҫып сығарылған һүҙе Сәбиләнең ауыҙын шундуҡ япты.

— Ипләп һуң?! — тине Сәбилә ыңраша биреп. — Ай, ай...

— Сыйылдама, кэнтэй... — Ихсанбай ҡулдары менән бисәһенең ыуыҙға тулыша башлаған түштәрен иҙгесләне, тештәрен батырҙы. Ҡатыны ауыҙынан сыҡкан һаңғырау ыңғырашыу Ихсанбайҙың шашкан дәртен оторо ярһытты.

— Уй! Алла! Аһ! — Сэбилә эсен тотоп өҙгөләнә башлауға, Ихсанбай, тынысланып, йоҡоға талды

— Аҡыртма баланды, илатма! — Ир екереүе үҙенә буйһондора, әммә Барсынбикә бер ни ҡыла алмай: йылы йомғаҡ булып күкрәгенә һыйынған балаһы, үҙенән әллә нисә тапкырға ҙурыраҡ тауыш сығарып, һил төндө яңғырата.

— Сеү, ҡыҙым! — Барсынбикәнең бер ҡулында ярһып сапкан аттың теҙгене, йәнә үҙенең кейемдәре уралған

гөйөнсәге, икенсеһендә — тынмай илаған Күкһылыуы, **Дингеҙхан** ҡулындағы Ихсанбайҙың игеҙ һыңары. Әллә ҡойон **булып** өйөрөлөп сапкан ире менән уның иптэшенэн торорға **ла** ҡалырғамы? Ҡалыр ҙа инең — баланың бит берәһе ирендә

Диңгеҙханда! Ай, нишләргә?! Ни әмәлдәр менән баланы тыйырға?! Берәй ере өҙөлгәндер бының илауына ҡарағанда... Артта эт өргән тауыштар ҙа айырым-асыҡ ишетелә башланы. Ҡыуып етеп кенә киләләр. Алда — йылға. Шуны кисеп сығып өлгөрһәләр генә ҡотоласаҡ улар эҙәрләүҙән. Унда урман ҡарайып күренә, урманда юлдар һәр саҡ төрлө яҡҡа тармаҡлана. Бала ғына иламаһасы?!

— Ташла! Ташла тим баланы! — Барсынбикәнең баланы ҡыҫып тоткан ҡулын Диңгеҙхандың ҡамсыһы көйҙөрөп ярып үтте — шарылдап илаған Күкһылыу Барсынбикәнең ҡулынан гөшөп тэ китте. Шул уҡ минутта Диңгеҙхан Барсынбикэ менгән бейәнең ҡабырғаһына шпорлы итектәре менән йән асыуына төрттө. Барсынбикэ ҡыҙ асып йомған арала һыуғамы, ярғамы осҡан балаһы артынан затлы кейемдәре уралған баяғы төргәкте ташлап өлгөрҙө.

— Балам! — Шаптырлап һыуға инә башлаған ат гояҡтары, йылға шауы аҫтында уның ҡысҡырыуы ишетелмәне лә, шикелле.

Артабан булған хәлдәр ҙә Барсынбикә күҙ асып йомған арала башҡарылды: волость түрәләрен үҙе менән бергә төндә һуйып сыҡкан юлдашының арҡаһына һыуҙан сыҡмаҫ борон уҡ хэнйәр ҡаҙаны Диңгеҙхан, шунан Барсынбикәгә әйләнде:

— Ошонан башлап, мин — Сибәғәт, һин — Фэүзиэ. Малайҙың исемен үҙгәртмәнем. Ә Күкһылыуҙы онот: йәне йәннэттә булһын. Документтар миндә.

— Ҡайҙа китәбеҙ? — Ҡалтырауын еңә алмаған, шаңҡыған Ьарсынбикәнән Фәүзиәгә әйләнгән ҡатын иренә төбәлде. — Ҡайҙа юл тотабыҙ?

— Йыраҡҡа... Фэүзиэ. Былар оҙаҡҡа килде. Был яҡтарға, болки, бер ҡасан да әйләнеп ҡайтмабыҙ...

...Фәүзиә тамам уянып, күргән төшөн иҫләргә тырышты. **Гөш** тиһәң... Шул уҡ күренеш: арттарынан ҡыуалар... Күкһылыу тынмай илай. Диңгеҙхан Барсынбикәнең сабый тоткан ҡулына ҡамсы һыҙыра...

— Уф! — Ул тороп ултырҙы. Сибәғәте усаҡ ҡаршыһында ултырған ерендә йоҡлап киткән. Биреште ҡарт. Күп эсэ шул,

былай булһа, тейешһеҙҙе күп лығырҙауы менән башына етәсәк ул Ихсанбайҙың. Ни аталы-уллы тыныша алмайҙар. Береһе оломон тип ҡуймай, икенсеһе тукта, кесемен тип тынмай. Нимә эшләп ҡарарға быларҙы? Ихсанбай ҡәҙерһеҙ шулай ҙа: атаһының алтындары булмаһа, йөрөр инең ошо көндө күтән һурпаһы эсеп...

Фоүзиәнең мал өйөнөң кескенә тәҙрәһенән тышҡа ҡарауы булды, уға үҙенең күңеле кеүек үк шомло, шөбһәле ҡара төн баҡты. Ошондай төндәрҙең уның серҙәшенә әйләнгәненә инде нисәмә йыл. Бер кемгә лә, хатта иренә лә әйтә алмаған серҙәрен ул төн менән уртаҡлаша. Әҙәм балаһы ғүмеренең байтаҡ өлөшөн йоҡлап үткәрә, э Барсынбикә-Фәүзиә йоҡламай үткәргән төндәре иҫәбенә ғүмерен ике тапҡырға оҙайтҡан кеүек... Күпме уй уйланы икән Фәүзиә үҙ ғүмерендә, күпме юл үтте икән? Төркиәгә сығып китмәйенсә, йылға буйлап ошо яҡтарға ҡабат килер өсөн Сибәғәтте күндермәгә күпме көс сарыф итте икән? Фәүзиәнең бөтә өмөтө бит үҙҙәре кисеп сыҡҡанда балаһы тороп ҡалған йылғала ҡалды. Ә, бәлки, Күкһылыу терелер? Ә бәлки ул, йылғаға төшмәй, ярҙа ҡалғандыр? Төн ине бит, ҡараңғы ине, яҡында ғына ауыл булғандай ине...

Ҡаҙаҡ далаларында бер ҡәҙәр йәшәгәндән һуң, улар ошо яҡҡа юлландылар. Сибәғәт-Диңгеҙхан ауылдар буйлап йөрөп быйма баҫты, самауыр, һауыт-һаба яманы. Ихсанбайға ете йәш тулғанда, Фәүзиә ҡайҙандыр бала табып алып, ауылынан сығып киткән Шәһәрбаныу исемле ҡыҙ эҙенә төштө. Фәүзиә-Барсынбикә мең михнәттәр менән табып алған ҡыҙын ғүмеренә ҡурсып йәшәрмен тип уйлағайны — юҡ, барыбер ул теләгәнсә килеп сыҡмай. Фәүзиә теләүе менәнме — хоҙай бит үҙенсә бойора.

Фәүзиә тәһәрәткә була тышҡа сыҡһа, ҙур өйҙөң тәҙрәләре яҡтырып торғанын күрҙе. Был ни хикмәт? Тукта, инәйем әле...

Ҡәйнәһе килеп ингәндә, Сәбилә ишек төбөндә сүкәйеп ултыра ине.

— Ни булды, килен?

— Ах, әсем... Үләм! Әсем!

— Хәҙер үк түшәгеңә менеп ят!

— Уй, ҡәйнә, Ихсанбай... бала...

Нимә Ихсанбай? һин бала таба алмағанға ла ирең әйепләме? — Ярһыған Фәүзиә артығырағын әйтеүҙән дә тыйыла алманы, — зыяраттың яртыһы һинең үле тыуҙырған оалаларың менән тулған былай ҙа!

— Нишләйем һуң?!

— Тик кенә ят! Хәҙер үлән ҡайнатып бирәм, һис юғы ауыртыуын баҫыр. — Күп тә үтмәй, Фәүзиә боҫо бәрелеп горған касаны килененә һуҙҙы ла төпкө бүлмәгә, Ихсанбай яткан яҡҡа йүнәлде.

— Ихсанбай, уян әле, тор! һүҙем бар һиңә.

— Ә...

— Бала түгелһең, иләмһерәп ятырға! Әйтәһе һүҙем шул, — Фәүзиә аш өйҙән төшкән һүрән яҡтылыҡтан улының күҙҙәрен эҙләне. — Бала тыумайынса киленгә яҡын килмәһе, йоғанаһы булһаң, зыяратта ҡаҙыласаҡ сираттағы ҡәбер һинеке буласаҡ!

— һуң инде, әсәй...

— Төшөндөңмө, төшөнмәнеңме? Эй, бәндәләр... хайуан-дыҡылай ҙа тотанаҡтары юҡ...

Фәүзиә йәнә урамға сыҡты. Айға ҡараны. Кәртәләнеп ора ул бөгөн. Былай булғас, көн боҙолор микән? Көн яманы китер ҙә ул... Бына Фәүзиәнең күңеле ҡасан бер тынсыр икән? Сибәғәт ише малы бөткәнгә ҡайғырмай ул: І өлбаныуы әрнетә уның йөрәген. Бына ул тағы аҡһыҙ тороп калды. Өй тулы бала. Нисек йәшәрҙәр, нисек йән аҫрарҙар? Лнау ике сабый... Нишләп кенә яңылышты икән Гөлбаныу? Барсынбикәләрҙең дә, Диңгеҙхандың да тоҡомонда юҡ ине бит ундай хәлдәр... Ни булды уның Күкһылыу-І өлбаныуына? Уның яңғыҙлығынан, башына төшкән хосрәттәренән файҙаландымы береһе? Ана, тағы кисә көпә-кондөҙ һыйырын талап алып сыҡтылар. Ихсанбай ҙа йөрөнө шунда. Кемде талағанынды белһәң икән, балам?! Исмаһам, Гөлбаныуға Фәүзиә асыҡтан-асыҡ инеп йөрөй ҙә алмай — Ихсанбайын күршеһенән үлеп ҡыҙғанған килене уның һәр азымын ҡарауыллап, Ихсанбайға ошаҡларға ғына тора. Ихсанбай хәҙер үҙе лә ҡатынынан бойондороҡло: башта армиянан, аҙаҡ һуғыштан алып ҡала торған ҡағыҙҙарҙы (обиләнең районда врач булып эшләгән ике туған ағаһы яһап бирҙе... Ах, шул бармаҡтарҙы: ҡайһыһын тешләһәң, шунаһы ауырта.

Гөлбаныу ай яктыһы менэн юлды ыратып ҡалһам, кис урыҫ ауылы Казанкаға барып етеп туктармын да иртәгәһенә районға түрәләрҙең эш сәғәте бөтмәҫ борон барып етеп, йомошомдо йомошлармын, тигән уй менән сыкты юлға. Боронғолар ай кәртәләнһә, кэртэвде нығыт, тигән дэ ул, нишләйһең, бармай әмәле юк: тамаҡ тамукка төшөрә.

Ауыл өйҙәре артта ҡалды. Уның ҡар шығырлатып ауыл урамынан үткәнен хатта эттәр ҙә абайламаны кеүек, берәһе-бер өрөп тә ҡуйманы. Ихсанбайҙарҙың малухаһында ғына ут яна ине, шикелле. Шул Фәүзиә ҡарсыкты: «Ул бит ен нәҫеленән, шуға бөтә эшен төндә бөтөрә», — тиҙәр. Әллә шул ысын микән?

Барҙы эш итергә Гөлбаныу ҙа иренеп тормай ҙа бит ул. Ҡоролоҡ йылды улар картуфтың һәр төбөнә һыу ҡойоп үҫтерҙеләр, ә һыуҙы бит йылғанан ташынылар. Ә быйыл картуфы ла уңманы: үҙе эштән бушаманы, ауыры ла ҡамасауланы. Һыйыр ағы менән ҡараға баҫырҙар ине әле — бына ҡайһылай килеп сыкты.

Әсе ел, ҡыҫка һырмаһының эсенә үтеп, йәнен ҡурыштырғандай итте. Гөлбаныу аҙымын шәбәйткәндән-шәбәйтә барҙы. Ҡайһы тирэгэ килеп етте һуң әле ул? Бэй, үҙҙәренең сабынлығына боролор һукмаҡ түгелме был? Ана ла һуң күк тирәк ҡарайып күренэ, унан күп тэ бармайһың — Торна кисеүе, унан, Тәңребирҙе йылғаһының аръяғында, уларҙың сабынлығы. Ҡасандыр шул ерҙәрҙә Шәһәрбаныу Гөлбаныуға салғы тоторға, бесэн сабырға өйрэткэйне, быйыл Гөлбаныу үҙе Мәҙинәһен өйрәтте. Игеҙәктәр булмаһа, бесэнде икэүләп шөйлә арыу эшләп алыр ине улар.

Игеҙәктәр булмаһа... Әҙәм балаһынан да аңлайышһыҙ зат юктыр был донъяла. Гөлбаныу бына үҙендэге ҡатмарлы тойғоларҙы үҙе лә аңлап бөтмэй. Балаларҙы ул ике осракта ла хоҙайҙан теләп-һорап алманы. Мәҙинә күҙенә күренгэс тэ имеҙҙе лэ кире урынына һалды, ныйылдап, бипылдап иркәләтеп ултырыуҙың ни икәнен дә белмәне. Мәҙинәнең ҡырыҫыраҡ холоҡло булыуын да үҙе шунан күрә: наҙ етмәне уға. Ә ниңә эле бынауы игеҙәктәр өсөн үлеп бара икән ул? Эштән шуларҙы һағынып, йүгереп ҡайтып инә, йоҡлаһалар, уянғандарын көтөп ала алмай йөрөй. Мәҙинә кеүек теремек

гә түгел бит эле үҙҙәре. Ашау етмэгэс, күпкэк кенә корһаклы, нәҙек кенә аяклы, ҙур ауыҙлы йән эйәләре. Мэгэр үҙенә баккан ике пар зәңгәр нур көлтэләрен күрһә, үҙенең дә күцсленән шундай ук зәңгәр нур ағыла башлай. Бөтэ донъя ошо күҙҙәрҙән таралған зәңгәр нурға тулған кеүек була.

Ә Ихсанбай йөклө йөрөгән сағында ла, сабыйҙар тыуғас га күпме осрағаны булды, туктап хәлен дә һорашманы, ойтерһең, артынан кемдер ҡарауыллап килә. Ә инде һыйырын алырға килеүселәр араһында Ихсанбайҙы күргәс, укшыны Гөлбаныу. Ошо кешегә ҡарата ҡасандыр йөрөткән хистәрен дә, уның менән үткәргән теге төн тәьҫораттарын да - бөтәһен бер юлы ҡоҫоп сығараһы килде...

Юл тауға үрмәләне, унан төшһәң — Тэрән үҙәк. Үҙәкте үтеүгә таң да яктырыр. Таң атһа, бэлки, артынан берэй атлы ксше килеп сығып, ултыртып та алыр. Үр еле әсе шулай ҙа. Гөлбаныу ике баш ҡорот, бер икмәк урап алған төйөнсөгө менән битен ҡапланы. Шулай итеп, бер алды, берсә арты мснән бара торғас, үҙэккә төштө. Бында тау башындағы ксүек көслө ел юк, әммә ойоҫкота. Тәрән үҙәк буйлап байтаҡ бараһы бар бит әле, ойоҫкоткас, буранға әйләнеп китмәһә ярай ҙа... Гөлбаныуҙың арка буйынан ниндәйҙер һалкын ҡалтырауык йүгереп үтте. Ҡыҙыу атлағас, өшөмәне лә кеүек, минә былай ҡалтыратып алып китте әле?! Гөлбаныу менән былдай хәл булғаны бар барлыкка, тик ул ниңәлер ташкын накытындағы ағымды күргәндәй була. Төшөндә лә ул, үҙен поторға килгән тулкындарҙы күреп һаташып, баҫлығып уянғаны бар. Бэләкәй сағында әсэһе уны бағымсыға ла алып барып ҡараны. «Һыуҙан ҡурккан был бала, — тине әбей, — боләкэй сағында баткан йә ағып китэ яҙғаны булманымы?» Бында ни... тып-тыныс бит. Тирә-яғында ерек шәүләләре генә сайкала. Бэй, әллә инде юлда ут та күренде? Бесәнгә килгән ксшеләр тиер инең — был мәлдэ урлашырға ғына кплмәһәләр? Унан һуң, яңы сана юлы ла күренмәне, шэт. Әллә күренеп тә Гөлбаныу үҙе абайламанымы? Уттар инде һлбырғанан да күренә башланы, артына әйләнде — унда ла уттар. Таң алдынан төшкән ҡуйы ҡараңғылык әллә ошо уттарҙан, эллә көслө елдән сайкала. Шул сак Гөлбаныуҙың нөрәген үткер бәке менән телделәрме ни:

Бүреләр!!! — Икмәк һалынған төйөнсөгө менән битен клмлап, Гөлбаныу әкрен генә ергә сүгәләне...

Ихсанбай эшкә таң һарыһынан йөрөй. Бөгөн иһә бигерәк иртәләне. Беренсенән, мөйөштә шыңшып яткан бисәһен күргеһе килмәй. Икенсенэн, әсәһенең бөтә нәмәгә ҡыҫылып йөрөүе һарыуын ҡайната. Ихсанбайҙың Сәбиләгә өйләнеүе лә шул әсәһенең темеҫкенеп, андышып йөрөүенән килеп сыҡманымы ни? Шуның арҡаһында Сәбилә менән йәшәгән ғүмере ерек утын, арыш икмәге кеүек: уты яна — йылыһы юҡ, ашап эсең тула — кәйефең күтәрелмәй.

Әсәһе менән атаһының бөтмәҫ талаштары ла туйҙырҙы уны. Атаһы әле булһа үҙенең Совет власы тартып алған малын йәлләп илай, шуға ҡайғыра торғас, эскегә һалышып бөттө. Әсәһе, ҡулынан дәүләте китһә лә, һаман булһа, хан ҡыҙы ҡылыҡтарын ташлай алмай. Дөрөҫөн әйткәндә, Ихсанбай атаһын хәҙер эшкә һанап та бармай. Ул уның эскән баш менән тейешһеҙ ерҙә юҡ-бар хәбәр һөйләп ҡуйыуынан ғына ҡурҡа. Ә бына әсәһе... һис аңламаҫһың уны, һис төшөнмәҫһең. Кисә булған хәлде генә әйт әле һин. Колхоз фронтҡа ойоҡ-бейәләй ебәрҙе. Ҡараһа, әсәһе лә килгән, ҡулында оло бер төйөнсөк. Алып килгән ойоҡ-бейәләйҙәрен һәр берәһен һанап яҙҙырҙы. Секретарь сыҡҡас, Ихсанбай әсәһе менән икәүҙән-икәү ҡалды. Ихсанбай һүҙҙе алыҫтан уратып маташманы:

— Бына ҡайҙа яткан ул патриотка! Белмәгәнмен...

— Инде белдең.

— Тик бер әтнәкәһе бар бит әле, — Ихсанбай эсәһенең күҙенә тура ҡарарға тырышты, — патриоттың балаһы... дезертир булмай.

Әсәһенең былай ҙа ҡымтылған ирендәре тағы ла нығыраҡ ҡыҫылды, иллә-мәгәр йөҙөн үҙгәртмәне:

— Ихсанбай, һин барыбер һәйбәт һалдат була алмаҫ инең, сөнки һин... һәйбәт ул була ла белмәйһең. — Шулай тине лә ишекте ҡаҡлыҡҡансы ябып сығып та китте.

Сәйер ҡатын уның әсәһе, бик сәйер. Йә, бөгөн иртән нимә тине? Имештер, сираттағы соҡор һинеке буласаҡ... Ә инде Гөлбаныу игеҙәктәренең айышына төшөнһә, ул сағында... Ул сағында әсәһе Ихсанбайҙы тереләй тунаясаҡ. Кеше ысынды һөйләһә, заманында ул алланан да, бәндәнән дә ҡурҡыуҙың ни икәнен белмәгән Хашимды инеп тукмап сыҡкан ҡатын...

Иверктәр кеше тел-тешенә кергеләгәнсе донъянан киткәне хәйерле инде, әлбиттә. Уныһы — ул: Гөлбаныуҙы нисек тә туктатыр кәрәк. Бына һиңә — йыуаштан йыуан сыҡкан. һис уйламағайны, ул бисә быңдай ҡарарға килә алыр тип, башына ла килтермэгәйне...

Үҙ уйҙарынан үҙе өшөгән Ихсанбай ҡулын мейескә герәне. Мейес эҫе әле. Рауза мейесте күптән баҫкан, күрәһең.

Ихсанбай кэнсэһендэ байтаҡ уйланып ултырғандан һуң, Рауза килеп инде. Үҙенең ҡолас ярым кэүҙәһен ишеккә тыңҡыслап тултырыш үтте лә, ике ботон кирэ биреп, эскәмйәгә йәйелеп ултырҙы. Ихсанбай бөгөн кэнсэгә саҡыртылаһы кешеләрҙең исемлеген яҙып бөткэнсе, Рауза ауылдың һуңғы яңылыҡтарын түкмәй-сәсмәй тасуирлап һөйләп бирәсәк. Ихсанбайҙың ҡулында — ҡәләм, бер ҡолағы гелефонда, икенсеһе — Рауза ауыҙында. Шулай ғәҙәтлэнгэн.

— Эй был әҙәмде, эй, был халыҡты... — Ихсанбай ишетеп ултырғанын белдермәйенсә, Рауза артабан китмәйәсәк — өйрәнешкәндәр.

— Нимэ булған, Рауза апай?

— А!-А! Ошо Ихсанбайҙы... Нимә булды тип, минән көлә лә ултырасы? һуң, һин силсәүитме, минме?

— һуң инде, Рауза апай...

— Рауза апай, Рауза апай... Мин инде аллаға шөкөр, гыуғандан бирле Рауза...

— Шулайын шулай ҙа...

— Шулай булмай, — уның ҡыҫылған ҡабаҡтары эсендә ике муйыл бөртөгөләй генә ҡалған күҙендә хәйлә ғәләмәте уйнап үтте, ике сикәһендәге түңәрәктәр ҙурая биреп, күҙ төптәрендә лә уйым-уйым өрөлөп үтте, — мин бит атаң менән эсэнцең һине етэктэп, монаяттарын ике тәгәрмәсле арбаға тейәп, Тирэклегә килеп ингәндәренә тикте иҫтәйем. ')йе, эйе! Ауылда тэүҙэп осраған кешеләре мин булдым. Сәүит йортон да мин күрһэттем уларға. Еҙнәң бүләк иткән геге алтын балдаҡ юғалмаған ине әле ул саҡта. Эйе, эйе! Башҡа бармаҡтарыма ярамағас, уң ҡулымдың сәтэкэйенэ ксйгәйнем шуны...

«Еҙнәң бүләк итән алтын балдаҡ» Ихсанбайҙы эллә ҡасан туйҙырған, туйҙырыу түгел, екһетеп бөтөргән. Бүктергән. Шулай ҙа түҙэ Ихсанбай, Раузаны туктатмай, сөнки белә: ул бынан утыҙ йыл элек үткенсе бер татарҙы йортона индереп, шуның менән бишме-алтымы ай йәшәгән дәүеренән бер

балаһын — Хөсэйенен — һэм «алтын» тип алдап биргән, шул арҡала урлатҡан балдағын һөйләмәйенсә ары китмәйәсәк. Ярай ҙа һүҙенең башы балдаҡ менән генә бөтһә? Әгәр ҙә шул татар менән Ҡыҙыл Мәсет баҙарына барғанын, шунда аймылыш булып, бер-береһен юғалтып, яңғыҙ ҡайтҡанын һөйләй башлаһа? Ә балдағын урлатыу ваҡиғаһына керешһә, үҙе бер ҡисса, үҙе бер хикәйәт. Шәһризаданың әкиәттәре ары торһон. Күрмәйме икән ни был бисә Ихсанбайҙың бөгөн кәйефе юҡ икәнен? Туктарға уйламай ҙа бит, исмаһам! Ана, аяҡтарын тағы ла киреберәк ултырып алды. Йәйелде. Арты эскәмйәгә йәбешкәнсе ялпашыр инде, былай булғас... Ихсанбай, ул һөйләгән арала буш урын табып, һүҙ ҡыҫтырып ҡалырға, тегенең иғтибарын ситкә йүнәлтергә ашыкты:

— Мейесте баҙлата яҡканһың... — Түрәнең маҡтауына барометр кеүек һиҙгер Рауза быны шунда уҡ эләктереп алды. Ихсанбай, ниһәйәт, иркен тын алды.

— Ҡыҙыу яғам да ул яғыуға, Ихсанбай ҡустым-түрә. Яғам, ул яғын... — үҙенең үтә лә тоғро хеҙмәт итеүен телгә алырға форсат сығыуына ҡыуаныуҙан Раузаның ирендәре ҡалтыранды. — Түлке мына утын етештереүе...

— Унынһын мин ҡайғыртам да инде, Рауза апай.

— Ҡайғыртыу менән дә... Ана әле кисә кис утынға киткән Ишмәмәт нимэ эштәп ята... Йә бит был ни бары шул Зарифаның ҡомһоҙлоғо арҡаһында килеп сыҡкан хәл! Урамының эсе тулы, шәт, уларҙың утыны. Ул кешенән ташытҡан ҡайҙа, ул үҙҙәре ташыған... Әйтэм дә: ни бары Зарифа арҡаһында Шәңгәрәй байғош атаһыҙ, Зарифа бисура ирһеҙ ҡала яҙҙы. Әллә, мэйтәм, Ихсанбай ҡустым-түрэ, апайының ҡарғышы төшөп...

— Аңламайым...

— Аңламаҫҡа ни... Ишмәмәттең тәүге бисәһе Зарифаның бер туған апайы ине бит.

— Уны әйтмәйе-е-ем... Кисә кис Ишмөхэмәт ағайға ни булған?

— Мин дэ какырас шуны һөйҙәй генэ баштаным түгелме? — Раузаның муйыл күҙҙәре ризаһыҙлыҡ осҡондары сәсте. — Ни бары шуны һөйҙәмәксемен. Зарифаға тел тейҙерә тиһендер инде? Ну бит үҙенең дә тел — я ти дам! Былай-алай уның теле! Кисә орҙоҡ таҙартҡан ерҙә һөйҙәп тора, ти. Имештер, Гөлбаныуҙың игеҙәктәре ҡустыһынан... теге ни...

Урыҫ Хашимдан түгел, тип. Ышанмаһағыҙ, тип эйтэ ти, оармаҡтарығыҙҙы бөгөп һанап ҡарағыҙ: Хашимыбыҙ ҡасан китте лә и һәм Гөлбаныу ҡасан бәпәйҙәне, тип. — Лрҡаһынан тир бэреп сыҡкан Ихсанбайҙың башы әйләнеп, кмағы кипкәндәй булды — графиндан йәһәт кенә һыу алып эсеп ебәрҙе.

— Рауза апай, ни... — Ихсанбай, ҡандала талағандай, гош-тош ерҙәрен тырнаштырҙы, — һинең әйтергә теләгәнең...

— Какырас шуны әйтәм дә инде: Зарифаны и һәм Ишмәмэтте. Ишмэмэткә барған бит Гөлбаныу. Һыйырҙы алырға һин ҡушканһың, район түрәләренә ялыу менән барам, үҙ һыйырынды килтереп бирерһең, тип. Зарифа бит инде шуға ла ҡоторона. Элек тэ бит улар Гөлбаныуҙы ярҙы тип яратманылар. Ишмэмэт Гөлбаныуға: «Минең ғәйебем юҡ, роспрэжинийәне күршең, силсәүит Ихсанбай бирҙе!» — тип сығарған. Үэт мына, оятһыҙҙыҡ ҡайҙа?! Һин бит инде ҡош балдары шикелде ауыҙҙарын асып ятҡан сабыйҙарҙы үҙ белдегең менән ҡалайтып ризыҡтан мәхрүм итәң? Ундай (|)арманды һин, Ихсанбай ҡустым-түрә, үлгәндә лә бирмәйһең! Гөлбаныу бит фырантауик бисәһе, районға барып етеүен етһә, уның һүҙе раҫ булмай, кемдеке раҫ була? «Ишмөхәмәт — төлкө, — тип уйланы Ихсанбай, быны ишеткәс, — кешенең шәхси малын, фермалағы падежды ҡапларға була, алыуҙы улар бит икәүләп уйланылар. Ихсанбай ғәйепле булһа ла, исемлеккә Гөлбаныуҙы индереүе менән генә ғәйепле».

— Рауза апай... — һаман тәмләп-тәпсирләп һөйләүен белгән был ҡатынға ни эйтергә иткәйне әле? Хәтерең бар булғыры... — Ә, эйе... Мине һораһалар, кашарҙарҙың хәлен бслергә ҡырға китте тиң, йәме?! Хәҙер ат ектерэм дә...

— Мин бит баянан бирҙе һиңә шуны нығыйым. Утынға тип барған Ишмәмәтте, — Ихсанбай ҡолағына «бүреләр» тигән һүҙ салынып ҡалды, әммә уның бер аяғы эстә, икенсеһе тышта ине. Ашығырға кәрәк, туктатырға кәрәк Гөлбаныуҙы! Яңыраҡ ҡына һуғыштан яраланып ҡайтҡан Камалетдиновка >нокһә, әллә ни ереңдән аҫып ҡуйыр. Һуғышҡа иармағандарҙы, «тыл крысалары» тип, яман нығ яратмай, гиҙәр...

Гөлбаныу сабынлығын ҡыялатып, яр аҫтынан килеп сыҡкандар, ти бүреләр. — Ихсанбай сығып китһә лә, Рауза ı \ к гай алмай һөйләүен белде. — Ярай әле Ишмэмэт теге

һары айғырҙы еккән булған! Айғыр булмаһа, ошо көндө Шәңгәрәй меҫкен үкһеҙ етем, Зарифа һантый ирһеҙ ҡала ине. Ирһеҙ ҡалһаң, андар инең һин дә ирһеҙ бисәләрҙең хәлдәрен. һин, мужет, икәүҙе түгел, өсәүҙе берсә табып ултырыр инең. Артым һаҫыҡ, тип тормайһың, кеше менән булышаһың: апайындың үҙ үлеме менән үлмәгәнен, ни бары һинең, еҙнәңә ғишыҡ тотоп, мунса ташына тауыҡ тиҙәге ырғытып, еҫ тейгеҙеп үтергәненде бөтә ғәләм белә! Яңғыҙҙыҡ... — үҙен йәлләүҙән күңеле тамам йомшарып, танауы ебеп киткән Рауза, итәгенең һыртын әйләндереп бер һеңгерҙе лә, тамам тынысланып, иртүк тороп эш бөтөрөүҙән талсыҡкан кәүҙәһен эскәмйәгә һуҙҙы. Ауырлыҡ менән булһа ла, аяҡтарын да өҫкә күтәрҙе. Кәүҙәһенә күрә шөйлә бәләкәй күренгән башын йомро беләгенә сумдырҙы ла уш та пыш йоҡлап та китте...

Ихсанбай ат һарайына барып ингәндә, Раузаның улы Хөсәйен лапаҫ аҫтынан сығып килә ине. Был, күрәһең, аттарҙы эсерергә самалап йөрөй. Эсермәй тороп, атты екмәй кирелэнер, микән? Хөсәйенде был эштә ат йәнле булған өсөн тоталар ҙа бит, ана шул сифаты өсөн мейеһен уя һуҡҡы килгән саҡтар ҙа аҙ булмай.

— Һарайғыр бындамы, Хөсәйен?

Хөсәйен яуап бирергә ашыҡманы: күренеп тора — һулаҡай ҡабырғаһы менән торған.

— һиңә әйтәм, Хөсәйен, айғыр бындамы?

— һарайғырмы? — Хөсәйен теш араһынан сырт төкөрҙө: — Ул пизди!

Бына бер ғәләмәт: армияға тиклем ҡәҙимге бер егет шунан «в» өнө урынына «п» тип, ҡыҙып киткән саҡтарында урыҫса тиргәшеп ҡайтты. Берәүҙәр уны ҡайтып килгәнендә поездан быраҡтырғандар, шунан шулай булып ҡалған, тиҙәр. Икенселәр армияла хеҙмәт иткән сағында тукмалғандан бер көйгә әйләнгән, тиҙәр. Ҡайһынныһы дөрөҫтөр инде, әммә уға ат ене ҡағылыуы бәхәсһеҙ.

— Нисек инде визди, Хөсәйен? һарайғыр колхозда нисәү?

Йөҙ, мең — бына нисәү! — Сығырынан сығып кысҡырған Хөсәйенгә Ихсанбай шикләнеберәк ҡараны: әллә быға ат ененән башҡа төрлө лә зәхмәт ҡағылғанмы?

— Шаяртма, Хөсәйен! Атты ек, сана минең өйҙә. Районға сығам.

— Һорайҙар ҙа һорайҙар... Әле генә берегеҙ бүренән ашата яҙҙы! Псим нада! Пси просят! Юк һарайғыр, псю! — Әйткән ыңғайына Хөсәйендең тире туны эсенән ҡукышы ла килеп сыкты.

— Кем менән һөйләшкәненде оноттоңмо? Әйтелгән — үтә!

Ихсанбайҙың ҡыҙғанын төшөндө ахыры Хөсәйен, ялбыр төлкө кәпәсе аҫтынан бүре кеүек ҡарап, лапаҫ эсенә шылды.

Урам араһынан өйөнә ҡайтып барғанда уҡ Ихсанбай елдең буранға әйләнеп ойоҫкота башлауын тойҙо. Толоп алмаһа ла булмаҫ...

Толопҡа тип мал өйөнә ингәнендә әсәһе әлеге шул йөн менән булаша ине.

— Буран башланырға торғанда юлға сығырға булғанһың икән... — Фәүзиә уға ҡаш аҫтынан һөҙөп-һынап ҡараны. — Ул ниткән ашығыс йомош?

— һуғыш мәлендә бөтә нәмә лә ашығыс, — тине Ихсанбай толобона үрелгән ыңғайға. — Үҙенде белһәңсе: йомаһына егерме пар ойоҡ-бейәләй өлгөртәһең...

Әйтте лә сығып та китте. Әле ҡасан ғына берәй якка китер булһа, эсәһенән фатиха һорар, теләктә тороуын үтенер ине. Әсәһе иһә сеүәтә тултырып һөт һөҙөп эсереп оҙатып ҡалыр ине.

Гөлбаныуға бәйле ни генә ҡыбырлатһа ла, ахыры хәйерле үтмәгәненә үҙе лә аптырай башланы Ихсанбай. Уны осрашыуға саҡырам тигәнсе, Сәбиләгә өйләнде; йәнә бер осрашыуының әсе емеше булып, игеҙ бала тыуҙы; колхозға өөр уның һыйырын тартып алманылар — райкомға ошаҡлашырға ул китте. һәм, ғөмүмән, Ихсанбай күңеленең гүмере буйына ярға сығарып ташланған балыҡтай и.шырсыныуына ошо Гөлбаныу ғына ғәйепле түгелме икән? Улай тиһәң, ғәйепте бер Гөлбаныуҙан ғына эҙләү ҙә дөрөҫ

түгелдер: Ихсанбай бит ғүмере буйы йылғаның ике ярылай, икегә бүленеп, үҙе йәшәгән тормошто яратмай, шикләнеп, икеләнеп йошәне. Ихсанбай: «Йәшәһен партия, коммунис-тар!»— тине, эсәһе: «Зилзилә, вэхшиҙәр», — тип ҡарғанды.

Хәтерендә унын пионерға ингән көнө. Ҡыҙыл галстук тағып, шатлығынан сәсәр сиккә етеп ҡайтып ингән улына эсәһе:

— Был ниндәй галстук булһын?! Күпме әҙәмдең башына еткән элмәк был! — тине.

— Таҡмайыммы әтү? — Аптыранған малай бер әсәһенә, бер атаһына ҡараны.

— Тағаһың инде... таҡмай ҡайҙа бараһың? һин тыуғансы ук тағылғайны бит ул...

— Элмәк булғас... мин уға быуылып үлеп ҡуймайыммы?

— Үҙенде түгел, хәтеренде быуыр өсөн уйлап табылған нэмә ул.

— Хәтерем барсы минең, — тип, ырыя ғына булһа ла үҙен яҡларға тырышты Ихсанбай. — Бөгөн әле арифметиканан биш алдым.

— Хэтерең булғас, һин минэ ете быуыныңды, ырыуыңды, ил һаҡлаған батырҙарҙы һанап күрһәт!

— Ней... бабабыҙ... Лилин. Атайыбыҙ...

— Партия...

Ихсанбай бер атаһына, бер әсәһенә ҡараны:

— Минең атайым икәүме ни, эсәй?!

— Хәтерем бар, тиһең бит, үҙең уйла.

Төштән һуң уларҙың класы мэктәпкә барырға тейеш ине. Кикреге шиңгән Ихсанбай, галстугын сисеп кеҫәһенә тыҡты ла, ғәҙәт иткәненсә Гөлбаныуға инде. Ҡыҙыҡайҙың сикәләре лә галстугы кеүек балҡып, нурланып яна, зәңгәр күҙҙәре осҡондар сэсэ. Ихсанбайҙы күреү менән ул урынынан һикереп торҙо:

— Ленин, Сталин эше өсөн көрәшкә әҙер бул!

Ихсанбайҙың ҡулы бик әкрен, лэкин барыбер күтәрелде:

— һэр ваҡыт әҙер...

Шунан улар икәүләшеп мәктәпкә сығып киттеләр. Мәктәп ҡапҡаһына еткәс, Ихсанбай галстугын кеҫәһенән сығарҙы ла муйынына таҡты.

Ул саҡтан бирле күпме ғүмер үтте. Ихсанбай ҙа күптән инде бэндэнең ата-инәһенең берлеген аңланы. Әммә бер нэмэ

үҙгәрмәне: кеҫәһендә йөрөгән галстуктай, уйы — бер, эше икенсе булды.

һарайғыр бышҡыра-бышҡыра тауға менеп етеүгә, ел ҡаршыға әйләнде.

— Инэвде... — Ихсанбай толобона ныҒыраҡ уранды, — эт талағыры нәмә! Хет кире борол, ауыҙыңды ҡайырайым!

Шул мәл өйрөлтөп-өйрөлтөп осонған буран Ихсанбай ҡолағына үҙәк өҙгөс тауыш сағылдырҙы. Был йөрэк ярырҙай инрәүгә бихисап олоу, ҡанға сарсап ырылдашҡан ауаздар ҡушылды. һарайғыр, ҡолаҡтарын ҡайсылап, ҡапыл үрәпсене лә артҡа шаҡарылды. Янтайған сананан ҡолап ҡала яҙған Ихсанбай, бөтэ көсөнэ, санаға һеңерҙәй булып, тәртәгә йэбеште. Дилбегә! Дилбегәне ҡулдан ысҡындырмаҫҡа! Ул арала баяғы тауыш йәнә ҡабатланды. Был рәүешле йә ер, йә сл генэ үкерәлер, ҡәҙимге әҙәм балаһы бындай инрәү сығарырға һәләтле түгелдер.

— Малҡай?! Ҡотҡар, малҡай?!

Ҡырағай ярһыу менән сапҡан аты ауылға яҡынайғас ҡына Ихсанбай үҙенең нимәне ҡыҫып тотоп ятҡанын шәйләне: мылтыҡ икән. Эйе лә баһа: толобо менән бергә мылтығын да элэктереп сыҡҡайны бит ул! Эсенә йылы йүгергән Ихсанбай шунда ғына артына әйләнеп ҡарарға тәүэккәлләне — унда бср нәмә күрерлек түгел: таң яҡтыһы еңә барған юл аҡ буранда ҡайнай. Шулай ҙа һаҡланғанды һаҡлармын, тигән хоҙай — Ихсанбай ҡалтырап торған еүеш бармаҡтарын көскә кыбырлатып, ҡушкөбэген һауаға тоҫҡаны...

Ферманан ҡайтыу менән Мэҙинә усаҡҡа ут яҡты. һыуына пашлаған өй ҡаҙанда ҡайнаған боҫ болото менән тулды. (амауырға шул ҡайнаған һыуҙы һалғас, утлығына усаҡтан гере ҡүҙ төшөрҙө. Өй ҙә йылынған кеүек булды, самауыр ҙа йырлап ҡына ултыра. Бәләкәстәрҙе инде күршеһенән инеп алһа ла булыр ине, тик улар инеү менән ашарға һораясаҡ, ә өйҙә бер нәмә лә юҡ. Баҙға төшөп, тағы картуф эҙләп ҡараһа әллә? Уйланы ла баҙ эсенә төшөп тэ китте Мәҙинә. Бына чнкмәт: эҙләй торғас, буралған таш араһынан өс картуф осоп сығарҙы! Инде йәшәргә була. Усаҡ аҫтындағы утты

терелтеп, Мәҙинә шул картуфтарҙы ҡайнар һыуға төшөрҙө лә күршеләренә йүгерҙе.

— Әсәйең ҡайтҡансы, беҙҙә генә булһалар ҙа ярар ине...

— Маһинурҙың изгелеге һәр саҡ күңелен йомшарта Мәҙинәнең. Бына әле лә уның шул һүҙенән күҙенә йәштәр килеп тығылды.

— Уй апай, былай ҙа инде... — ул йәшкәҙәгән күҙҙәрен күрһәтмәҫ өсөн сабыйҙарға эйелде. — Кис тағын китәм инде фермаға. Әсәйем районға бөгөн генә барып етә алмаҫ инде, ней, хәйерсегә ел ҡаршы тигәндәй, бураны сыҡты.

— Ихсанбай иртүк ат егеп алып оло юл менән киткәйне, ултыртып алманымы икән?

— Әллә шул... — Мәҙинә борсолоу тулы ҡара күҙҙәрен тәҙрәгә элдән-әле килеп һуғылған буранға төбәне. — Апай, мин быларҙы һиңә тағы индерермен инде... тамаҡтарына ашатайым да...

— Индермәй ҡалайтаң? Мин һеҙ килгәнсе малды ҡарап инәйем дә...

Ике баланы күтәреп, буранға сәсәй-сәсәй килеп инде өйөнә Мәҙинә. Былай булғас, бөтә өмөт Ихсанбай ағайҙа. И раббым-аллам, ултыртып ҡына алһасы?!

Мәҙинә иртәнсәктән ҡалған бер сынаяҡ бүрткән бойҙай һәм картуфты ҡабығы-ние менән ҡуша төйөп игеҙәктәрҙең ауыҙына ҡаптыра башланы. Бәләкәй булһалар ҙа, ифрат күп ашай шулар — Мәҙинәнең үҙенә үҙәк ялғарлыҡ ҡаламы, юҡмы? Маһинур күршеһе ас та тотмаған бит инде былар-ҙы — ана ла ауыҙ тирәләрендә ойоткан эҙҙәре бар.

Ул арала ҡапыл шығырлап ишек асылды.

— Аба... — Мәҙинә унайһыҙланып китте. — Буран булғас, ҡапҡа асылғанын да ишетеп булмай. Кеше ингәнен аңғармай ҙа ултырамсы? — Мәҙинә шулай тиһә лә, дөрөҫөн әйткәндә, табынының ярлылығынан оялды. — Үт, инәй, эйҙә, сәйгә яҡынла... — Үҙенә һәр саҡ ҡап-ҡара күҙҙәре менән йоторҙай итеп ҡарап йөрөгән ҡарсыҡтан ҡурҡынҡыраһа ла, ул алсаҡ һөйләшергә тырышты.

— Әсәйең ҡайҙа?

— Райкомға китте, Таулыға.

— Ҡасан?

— Сәхәрҙә үк...

— Йомошо... — Фәүзиә ҡарсыҡ, тамағына талҡан торғандай, ҡапыл туктаны.

— Йомошо ни һыйыр буйынса инде. һалымды түләмәй ҡалған сағыбыҙ булманы, ти. һыйырҙы тартып алыу — пындағы түрәләрҙең... этлеге, ти.

— һуң бит... — Фәүзиә өҙгәләнеп тәҙрәгә ҡараны, — буран сыҡты лаһа!

һыйырҙы алырға килеүселәр араһында ошо ҡарсыҡтың улы Ихсанбай ҙа булыу Мәҙинәнең эсенә йәшереп торған асыуын бер тыналай тышҡа һирптерҙе:

— Бынаулар бит... буран тип тормай, ашарға һорайҙар!

— Әле нимә ашатып ултыраһың? — Мәҙинәгә ҡарсыҡтың һорауы берәшәнерәк бирелгәндәй тойолдо. Уның былай ҙа ер гишегенә инерҙәй булып торғанын күрмәйме ни ул?

— Аллаға шөкөр, былай, ни бирһәң дә ашайҙар, — тигән оулды Мәҙинә. Ҡарсыҡ, түрбашҡа үтеп, игеҙәктәргә эйелде:

— Йә хоҙай, был тиклем дә оҡшамаһалар...

— Бәй, игеҙ булғас. — Мәҙинә шунда ғына ҡарсыҡтың юҫө үҙгәреп китеүен күрҙе. — Ни булды, инәй?

— һыу, һыу бирсе әле, балам...

Ҡарсыҡ һыуҙы ҙур-ҙур йотомлап ашыҡ-бошоҡ ҡына эсте лә, йөрәген баҫып, ишеккә йүнәлде, унан, артына боролмайынса ғына:

— Соландағы эйбер һеҙгә, — тип мығырланы ла сығып га китте. Уның артынан соланға сыҡҡан Мәҙинә ҙур бер юргәккә абына яҙҙы. Индереп тағатҡас, унда байтаҡ он, галкан, кипкән эремсек, һары май, тоҙ төрөлгәнен күрҙе.

— Ата-аҡ... рәхмәт тә әйтә алмай ҡалдымсы? — Мәҙинә гәҙрәгә ташланды: юҡ, бер ни күренмәй. Тәҙрә тун, тышта — буран.

Үҙҙәренең ҡапҡа эстәренә барып ингәс тә Фәүзиәнең **пыны** буыулып, һулыш ала алмай торҙо. Лапаҫ аҫтында кыскырышҡан тауыштар ишетелгәс, өйөнә инеп китмәй, туктап ҡалды. Тауыштарына ҡарағанда, Ихсанбай менән **Көсәйен.**

- Айғырҙы аҡ күбеккә төшөргәнһең!
- һин хужамы ни уға?!.
- Ат һинеке лә түгел — колхоздыҡы!
- Бына мыны еҫкәгең килмәйме?

— Пси хужа! Пси командир! һабантуйҙарҙа ал бирмәгән хайуанды юкка сығарҙығыҙ? Хатта утынға ла егэгеҙ!

— А ну марш мынан!

— Атты шулай һыуыталармы? Тэрбиэлэй белмәгэс, йөрөмә!

— Сыҡ тиҙэр һинә мынан, шыл тиҙерэк!

— Хәҙер! — Хөсәйен күҙ асып йомғансы ат өҫтөндә ине.

— Төш, төш тиҙәр һинә! — Ихсанбай ат эргәһендә арлы-бирле ыуаланғансы, Хөсәйен Фәүзиә аскан ҡапканан сығып та китте.

— Нимә тип һин уға ҡапка асып тораһың?! — Ярһыған Ихсанбай әсәһенә екергәнен үҙе лә һиҙмәй ҡалды.

— Мин ни... ҡайтып килә инем...

— Ҡайтып... — Әсәһенең сығып йөрөгәнен ене һөймәгән Ихсанбайға был етә ҡалды. — Ҡайҙан? Йэ, ҡайҙан ҡайтып килә инең?

Үҙен ҡулға алырға өлгөргэн Фәүзиә кәүҙәһен турайтты, ҡапканы шартлатып бикләне:

— Нимэ һин, улым, терпе йоткан айыу шикелле тиреңә һыйыша алмай йөрөйһөң? — Әсәһененең беҙ кеүек ҡаҙалған ҡарашы аҫтында Ихсанбай баҙай, хатта кесерәйә барған кеүек тойҙо үҙен:

— Ниңә, минә инде хәҙер бер кем менэн дэ һөйлэшергэ ярамаймы?

— Гөлбаныу ҡайҙа?

— Ниндэй Гөлбаныу?

— Таң тишегенән кем артынан тороп сапкайның?

— Мин ни... кәбәндәрҙе генә ҡарап килдем...

— Әгэр Күкһылыуға бер-бер хәл булһа... — Шунда ғына Фэүзиэ ҡыҙын кеше алдында беренсе тапкыр үҙ исеме менән атауын төшөндө.

— Торған ерҙән төш күрә башланың шикелле һин, эсэй! — Ихсанбай ҡапканан сығып китте, Фәүзиә аласыҡ-өйөнә тәнтерәкләне...

Аласыҡка ингэс, Фэүзиәнең йэнэ хәле бөттө. Ярай әле улы янында бөтөнлэй ебеп төшмәне. Дерелдәп торған

бармактарын йөрәге тәңгэленә ҡуйып, Фәүзиә урындыҡ ширлегенә ултырҙы.

— Тап шулар, үҙҙәре... — Фәүзиәнең инде нисәмә йылдар йәш түгеүҙең нимэ икәнен оноткан күҙҙәренән борсаҡ-борсаҡ йәштәр атылдылар ҙа һарғайып ҡорғаҡһыған бите буйлап аҡтылар. — Малайҙар хәс тә Күкһылыуҙың игеҙ һыңары — Ихсанбай. Ихсанбайҙың үҙенэн тыуһалар ҙа был тиклем оҡшамаҫтар... Күкһылыуҙың үҙен теге төн ярға быраҡтырғанда ул да шулай кескенә, алһыу ғына, күҙҙәре юшандай күк кенэ ине бит... Сибәғәт!.. һинең бойороғоңа буйһонорға мине нимә мәжбүр итте? Ҡамсымы? Әллә балаларҙың икәүһен дә юғалтыуҙан ҡурҡыумы? Йэш ине шул Барсынбикә үҙе лә. Дөрөҫ, Диңгеҙханға сыҡкас, ул ун ике йыл тыу йөрөнө. Заман тамуктай кайнаған бер мәлдә Тәнре сабыйҙарҙы уға ни тип ҡушарлап бирҙе икән?!. Ила, Барсынбикә, ила... һуңғы тапкыр ҡасан илағайның эле? Иҫемдә ул көн, иҫемдә...

Барсынбикә менән Диңгеҙхан ошо Тирэклелә ике ай йәшәгәс булды был хәл. Раузаның эсәһе иҫән ине әле ул саҡта, шуларҙа фатирҙа торҙолар. Быйма ла баҫтылар, самауыр-ҡомған, күр-ер яманылар. Барсынбикә ара-тирэ түлһеҙ ҡатындарҙы имләштерҙе, сыҡкан быуындарҙы ултыртты, йөрәк тә һыланы, ҡот та ҡойҙо.

Тимерлеккә эшкә килеүен һорап, Диңгеҙханға рәйес үҙе килде. Уйлай бирәйем әле, тине Диңгеҙхан-Сибәғәт, һүҙҙы. Кырка бер ҡарарға килер ине — Барсынбикәһенән үтә алмай. Ә бисэһенең ике күҙе тәҙрәлә, көн дә китеүҙе генә һөйләй. Барсынбикә үҙе иренең хәлен төшөнә лә кеүек: ялкты ул илдән илгә йөрөүҙән, ултыраҡ тормошҡа күсәһе, донъя көткөһө килә.

— Арыу өй бирмәкселәр, — тип һүҙ башланы ул бер көн, ҡалабыҙмы әллә?

һөйләшеү ҡара танда башланғас, Барсынбикә иренең йөҙөн күрмәй. Тауышына ҡарағанда, Диңгеҙхан был хаҡта күптән уйланып йөрөгәнгә оҡшай.

— Әллә шул... — өҙөп кенэ ни ҙә булһа эйтмәй Ьарсынбикә, уйҙарын төпкә йэшерергә өйрәнгән инде ул. Уйламай һөйләп, серенең сиселеүенән ҡурҡа. «Илдэн илгә, өйҙән өйгә йөрөп, Барсынбикэ балаһын эҙләй» тигэн уй ике ятып бер төшөнә лэ инмәй бит бының. Ярҙамы, һыуҙамы

ҡалған Күкһылыуҙы ул, исмаһам, бер иҫенә лә алып ҡуйманы. Дингеҙхандың бар шөрләгәне — танылып ҡуйыу. Ә Барсынбикәгә бынан алты ай элек Атйетәр ауылында ишеткән хәбәр тынғы бирмәй: берәү менән шипкерт исеме сыҡмаған, әүлиәлэй бер ҡыҙ, бала табып, хурлығынанмы, ата-әсәһенон ҡурҡыуҙанмы ауылды ташлап сығып киткән. Ҡайҙа киткәнен һорашһа ла, бер кем бер нәмә әйтә алманы, әммә ҡыҙҙың исеме Барсынбикә йөрәгенә уйылып ҡалды: Шәһәрбаныу. Был ауылдан тиҙерәк киткәндә, шул ҡыҙҙың эҙенә йәһәтерәк төшмәҫтәр инеме икән?

Өндәшмәйһең? — Ире, ҡабырғаһына әйләнеп, Барсынбикәгә боролдо.

— Мин нимә әйтәйем...

— Ҡасан да булһа бер төпләнер кәрәк тә, бисәкәй!

— Кэрэкмәй тимәйем дә инде...

Дөрөҫөн әйткәндә, ауыл күнеленә яткайны Барсынбикәнең: мул ғына һыулы, ярҙарында эре-эре тирәктәр үҫеп ултырған йылғаһы бар, ауылдың үҙен иһә бейек-бейек тауҙар уратып алған. Әлбиттә, уларға, ялан башҡорттарына, был тиклем бейек тауҙар, урмандар оҡшап етмәй, әммә шул ук тауҙар, шул ук урмандар ҡурсый ҙа, һаҡлай ҙа кеүек.

Барсынбикә түшәгенән ҡалкынды, ынтылып ҡорғанды күтәрҙе. Һыҙылып ҡына, моңландырып ҡына атып килгән таң уның йөрәгенең әллә ҡайһы еренән моң урғылтты:

Аҡ ҡуянҡайҙарҙан тун тектерҙем —
Тышҡынаһын ниҙән тышлайым?
Йәйгенәһен һиндә йәйләгәйнем,
Ҡышҡынаһын ҡайҙа ҡышлайым?

Барсынбикә йырлап бөтөп, бер талай ултырғас, әйләнеп ҡарағанында Диңгеҙхан түшәгендә йөҙ түбән ята ине.

— Аһ! Ы-ы...

— Маңлайға яҙылған яҙмыш был, Диңгеҙхан. Хоҙай әмере.

— Хоҙай әмере түгел был, Барсын... Иблес ҡушыуы.

— Ихсанбай хаҡына...

— Түҙәм бит инде былай ҙа! Күрмәйһеңме: түҙәм!

— Түҙһәң, бер һинме?..

— Һин... бисә кеше...

— Кәмһетмә, Диңгеҙхан! Тоҡомом ил азатлығы өсөн башын һалған уҙамандарҙан килә. Өләсәм — Бэндәбикә! — I орурлығына тел тейеүҙән Барсынбикәнең йөрәге дарҫлап ı ибергә кереште. Бер боланан һуң ҡалмыҡтар килендәрен, сйэн-ейэнсэрҙәрен ҡыуып алып киткәс, хэтерҙәренә кемдәр, ҡайҙан килгәндәр икэнен төшөндөрөп торормон, унайы сыҡһа, үҙе генә белгән юлдан тоҡомомдо алып ҡасырмын, гип эйәреп киткән өлэсәһе күҙ алдына килеүҙән Ьарсынбикәнең күҙҙәренә йәш эркелде.

— Барсын...

— Тукта! — Ярһыған Барсын бирешергә теләмәне. — (Эндәшмә! һин... Бисә-Барсын менән ҡасан хушлашҡа-ныңды...

— Етте, Барсын... Аңланым! — Бирешеп, кесерәйеп киткән Диңгеҙхан-Сибәғәт урындыҡ ширлегенә шыуышты.

— Ҡасма, Диңгеҙхан...

— Сеү, Ихсанбай уяныр...

— Йөрәгең... йөрәгең юҡ һинең!

— Ай эттэгенәһе... — Диңгеҙхан ҡаушаған, таушалған йөҙөн бисәһенә борҙо. — Йөрәк... Йөрәк бер һиндэ генэме ни оллә, э?!

Шунан ике хэтер, һәр ҡайһыһы үҙенә генә билдәле юл менән шар баҡырып илаған аҡ йомғаҡ артынан киттеләр, күрәһең. Уларҙың яҙмышын бер төйөнгә бәйләгән дә, ҡасандыр дөрләп торған һөйөү ҡауыштырған был ике йән араһына гүр һалкынын өргән дә ошо йомғаҡ...

— Бөгөн нимә эшләйһең? — Барсынбикә быны иренә лйлэнеп ҡарамай ғына әйтте. — Бер пар быйман ҡалған, шуны баҫ та, һиңә әйтәм...

— Унан башҡа ла эш бар әле, — Диңгеҙхан, тороп, сөйҙә эленеп торған тунының кеҫәһенә тығылды. — Ошоно бер бисэ, ҡаштарын ныҒытып бир әле, тип килтергәйне кисә. Һин кара әле шуны: беләҙек алтынға оҡшаған, ҡаштары фирүзә...

— Фирүзэ ҡашлы алтын беләзек?! — Барсынбикә, отәләнеп, беләҙеккә үрелде. — Шырпынды сый әле, Диңгеҙхан!

...Шул, үҙе... Баланы биләгән саҡта Барсынбикә үҙенең чатлы кейемдэрен, сулпы-беләҙектәрен ҡуша төргәйне. Һохара яғынан, олатаһы хажға барғанда килтергән был неләҙектәр икәү булған, тип һөйләйҙәр ине. Уларҙың береһе калмыктар ҡыуып алып киткән әсирәләрҙе ҡурсып киткән

I Д 471

өләсәһе ҡулында булған, икенсеһе, бына, Барсынбикәгә яҙған ине лә бит. Ҡомартҡы Барсынбикәгә килеп еткәнсе ете быуын үткән, тип һөйләй торғайнылар.

— Ҡайҙан алдың? Кем бирҙе уны һиңә?

— Әйтәм бит: бер бисә. Исемен ни... һорашманым. Ҡыҙҙар кеүек кенә үҙе, сырайы бик аҡһыл. Сирле микән был тип, ҡарап та ҡуйҙым үҙенә...

— Ҡаштарын ныҡ тот та үҙемә бир!

Инде арыуыҡ яҡтырған иртә Диңгеҙхандың йылмайыуын йәшерә алманы:

— Барсынбикә яңынан бисәгә әйләнә түгелме?

— Уйнап әйтһәң дә, уйлап әйт, атаһы! Биш өйөр йылҡыһын, биш тирмәнен, үҙем кеүек биш бисәне алтынға ялатырлыҡ байлығын юғалтҡан кеше... бер беләҙеккә тамһынырмы?!

— Ай әттәгенәһе... шаяртырға ла ярамай.

Беләҙек эҙер булғас, шәлен еҙәтенсә баҫыра ябынып, Барсынбикә урамға сыҡты. Сыҡҡас та тәү осраған кешеһе Рауза булды. Ул саҡта ла Рауза, әсәһенә эйәреп, кәнсә ҡарай ине. Әле лә ул, ирҙәрҙән былайыраҡ һыҙа-һыҙа баҫып, шунда китеп бара.

— Рауза, кил әле бында!

— Мин, апай, килер инем ул, — Рауза, кире боролоп, Барсынбикә-Фәүзиәгә табан атланы, — төндә бит силсәүитте наганлы кешеләр килеп алып китте. Хәҙер мин ике кеше урынында эштәйем: үҙем өсөн дә, силсәүит өсөн дә!

— Мин һине оҙаҡ тотмайым, — Фәүзиә тирә-яғына ҡаранып алды, — ҡара әле, Шәһәрбаныу исемле ҡатын йәшәйме был ауылда?

— Ауылда Шәһәрбаныу йәшәргә ни... өйһөҙ шәт ул! Фермаласы ул, баракта. Мүжит, калхуз яҙға бер зимнәмкә эштәтер... Түрә ауыҙынан сыҡҡан һүҙ буғанға әйтәм. Үҙенекенә бумаһа, бумай, ситтән килгәнгә шәп тә беҙҙең түрәләр. Эй-йе-е-е... һеҙгә лә өй эштәп бирмәкселәр. Һөйҙәшкәндәрен үҙем ишеттем. Сибәғәттең ҡулы алтын, ауылда төпләнһә, өй эшләп бирәбеҙ, тинеләр.

— Рауза...

— Апай, ике эштә эштәгәс, һинең менән оҙонгон һөйҙәшеп тора алмайым шу. Силсәүитте алып киткәстәр ни... Теге саҡ мөғәллимде ристауать иткәстәре бер интеккәйнем. Клддарға ни хэрефте үҙем өйрәтеп йөрөнөм бит. Хәҙер мына икенсегә. Унан да алда хәҙрәт олатайҙы алып киткәндәрен әйтмәнем бит эле...

Рауза... һеңлем, ҡара әле: Шәһәрбаныу кем менән **йәшәй?**

— Атаҡ, атаҡ, кем менән йәшәй тип ни... Ситтән килгән **берәүгә** мында ир әҙерҙәп ҡуялар тиһеңме? Тот ҡапсығыңды! Мында әле балалы бисәләргә түгел, сиртһәң ҡаны сыҡмалы ҡыҙҙарға кейәү сыҡмай тора.

Раузаның инде туҡтай торғаны юҡ. Иргә сығыу — унын луырткан ере. Шуға баҫтыңмы — бөттөң. Барсынбикә-Фоүзиә, унын һөйләп бөткәнен көтмәй, ферма яғына атланы. Кемдә нимә ҡайғыһы, тиһәң дә, Раузаны ла аңларға була: **унын** бит әле үҙенән башҡа өс һеңлеһе кейәүгә сыҡмай ултыра.

Фәүзиэ аҙымын бер ҡыҙыулатты, берсә әкренәйтте. **Ғәжәп:** ошоға тиклем ул күпме юл үтте, күпме һыу кисте — прмманы. Ә хәҙер ауылға бер саҡрым ярым ятҡан утарға **барып** етер әмәле юҡ.

Ниһәйэт, ферманың оҙон тәпәш ҡаралтылары, уларҙан саҡ ҡына ситтәрәк ултырған ике өйө күренде. Фәүзиә, өйҙәрҙең ҡайһыныһында Шәһәрбаныу йәшәй, тип кешенән һораманы. Аяҡтары үҙҙәренән-үҙҙәре атланы, ишек кнҡаһына нисек үрелгәнен дэ, тупһаны ашаҡлағанын да һиҙмәне. Ҡараңғы мөйөшкә өйөлгән түшәк-мендәр араһында кыбырлаған йән эйэһен абайлағас, сөбөрҙәк кеүек нескә генә тауыш салынды унын ҡолағына:

Күкһел тауҙың башында
Күкйән балам илайҙыр.
Май бирһәм дә тынмайҙыр,
Бал бирһәм дә тынмайҙыр...

(абый күкрәгенән сыҡкан был арбаусы моң Фәүзиәне саҡ аяҡтан йыҡманы: быуындары бушап, әкрен генә иҙәнгә түгәлэй башланы:

Күкһылыу! Балам!

Мендәр өҫтөнә ҡара бөтөркәле баш ҡалҡып сыҡты:

Күкһылыу түгелсе мин... Гөлбаныу минең исемем. Исем — Шәһәрбаныу. Бәпәйҙәремдең береһе Күкйэн, икенсеһе — Бикйән. Икәү берсә шулай. Әсәйем тағы бер кызыкай эштәп бирәм әле, тине...

— Ә теге... йырҙы... ҡайҙан ишеттең?

—Әллә... Бәлкем, әсәйем йырҙағандыр, шунда откан-мындыр. Мин бит илаҡ булғанмын, әсәйемде иммәй илағанмын...

— Күк... Гөлбаныу, ә һин... — Ул арала ишек асылды, унан үҫмер ҡыҙҙар кеүек кенә сираҡлы, аҡһыл сырайлы ҡыҙ килеп инде.

— Уф, күҙ тышта ҡаламы, әллә өй шулай ҡараңғымы? Балам, ни хәлдәһең? — Ул шунда ғына сүгәләп ултырған еренән тороп килгән Фәүзиәне шәйләне. — Аһ, ҡунаҡ бар икән дә? — Шәһәрбаныу, ҡыҙы менән тубыҡланған килеш һөйләшеп торған ҡатынға сәйерһенеп ҡараны ла ашығыс рәүештә урындыҡҡа, Гөлбаныу янына йөгәнәклэне.

Фәүзиә экрен генә турайҙы, шунан, кеҫәһенән беләҙек сығарып, Шәһәрбаныуға һуҙҙы:

— Мә, эшләне...

— Рәхмәт... Хаҡын...

— Кәрәкмәй... — Аяғына йығылып рәхмәт әйтер был ҡыҙ янынан өндәшмәй ҙә сығып китте Фәүзиә. Ниндәй выжданы етеп танытһын ул үҙен? Ниндәй намыҫ менән төйәген, йортон, ата-инэһенең йылы ҡосағын, хатта ҡыҙ намыҫын ошо сабыйға алыштырған, төртмәйенсә лә йығылырға торған сибек был ҡыҙға үҙен, баланың эсәһе мин булам, тип таныштырһын?

Барсынбикә, сыҡҡас, үҙенең ҡайҙа барғанын, ниҙәр ҡылғанын үҙе лә төшөнмәне. Бер иҫенә килгәндә, мәкегә ятып, йотлоға-йотлоға боҙло һыу эсә ине, икенсе бер юлы зыярат эсендә сәстәрен йолка-йолка илай ине. Ниңә килгән ул бында? Тәңреһенән үлем һорапмы, әллә бэндәләрҙең ҡыҙыҡһыныусан ҡараштарынан ҡасыпмы? Үлергә, тиһәң... Үлем нимә уға? Үлем Барсынбикә өсөн күптән үҙе үлгән. Шул йәш кенә, сибек кенә ҡыҙға Күкһылыуҙың бөтә килэсэеген тапшырып үлергәме? Шуның өсөн илдән илгә, ҡырҙан ҡырға йөрөп эҙләнеме ул балаһын?

Барсынбикә йәшәп яткан фатирҙарына шәмгә ут алғас ҡына ҡайтып инде. Өҫ-башын сисеп тэ тормай түшәккә ауған ҡатынына Диңгеҙхан-Сибэғәт һүҙ ҡушып ҡараны:

— Берәйһенең ҡатыны бәпәйләнеме әллә? — Яуап булманы. Уттай янған Барсынбикә-Фәүзиәнең ауыҙына Диңгеҙхан өс көн, өс төн буйы һыу тамыҙып ултырҙы, ясин сығартыр ине — ҡурка. Туктауһыҙ һаташҡан, өҙлөкһөҙ балаһын саҡырған ҡатыны һаташып ниҙәр һөйләнмәҫ? Ихсанбай ғына бер ни белмәй. Ауыл малайҙарына өйрәнеп, йөләшеп тә бөткән. Өйгә ҡайтмай уйнай шулар менэн. Уйнаһын әйҙә, өйрәнһен, тип уйлай Диңгеҙхан. Иленэн Кителеп, ситтәрҙән сителеп йәшәргә хоҙай ҡушмаһын уға. Бына Барсынбикәһе үлһә нишләр Диңгеҙхан? Бисә генә түгел шул уға Барсын. Диңгеҙхандың кисергәндәре, башынан үткәргәне, күргән-белгәне-ҡылғаны башка берәүҙең күкрәгенә һыя торғаны бармы? һыйҙырһа ла, көйҙөрһә лә чмю Барсынбикә генэ. Барсынбикэ ҡулынан ағыу эсергә лә риза Диңгеҙхан, тик йэшәһен генә үҙе, Диңгеҙханды төндән караңғы уйҙары, уттан да эҫе йөрәге менән ҡуҙмә-күҙ калдырып китеп кенэ бармаһын...

Дүртенсе көндө, ниһәйәт, күҙен асты Барсынбикә. Күҙен асыу менән эргәһендә тораташ кеүек ҡатып торған Диңгеҙханға өндәште:

— Теге саҡ һеҙ... волос түрәләренең балаларын да... һуйып сыҡтығыҙмы?

— Барсынбикә!

— һорауға яуап бир!

- Барсынбикә... тубылғылай һинең тоҡомондан, кесерт-кән тамырылай таралған минең тоҡомомдан... кемдәр ҡалды һуң ҡырылмай?! Ҡанға ҡан менән яуап бирмэгән дошманды күргәнең бармы һинең?!

— Ҡарғыш тора беҙҙең өҫтә, Диңгеҙхан! Ҡарғыш! Мин... шупы күрҙем...

Шунан тағы иҫтән яҙҙы Барсынбикә. Аҙаҡ йайлап һауыға, Гороп ултыра башланы. Бер көндө эҙерәк ит һурпаһы эсте. Шуны эскәс, Диңгеҙханды эргэһенэ ултыртты:

- Мин бында ҡалырға риза, — тине ул. — Өй һалырға урынды үҙем күрһәтермен. Тик... — Барсынбикә ҡапыл ҡулығын һыпырҙы, Диңгеҙхан уның бөртөгө ҡалмай ағарған кенә шаҡ ҡатырға ла өлгөрмәне, ҡатыны уктан осло Мрашы менән бәгерен көйҙөрҙө. — Бынан кире, — тине Барсынбикә, — башынды минең мендәргә терәйһе булма! — Шунан ул ҡоро һөйәккә ҡалған эйәген һикелә яткан бысаҡка ымланы. — Бысаҡты уны, бисә булһаҡ та, беҙ ҙә күтәрә беләбеҙ!

Диңгеҙхан, телдән ҡалып, Барсынбикәгә ҡараны: юҡ, юҡ! Ул түгел! Ҡайҙа унын тирә-яҡ байҙар менән ярышып, бер өйөр йылкы биреп, типһә тимер өҙөрлөк егеттәрҙе бәйгеләә, көрәштә еңеп алған, һылыулығы, һөйкөмлөлөгө менән дан тоткан Барсынбикәһе?! Уның ҡаршыһында ап-аҡ сәсле, һап-һары йөҙлө, алашаныҡы төҫлө сығынҡы яңаҡлы, һүнгән күмерҙәй йәнһеҙ күҙле, урттары эскә баткан ҡарсыҡ ултыра.

— Барсынбикә! — Ҡото алынған Диңгеҙхан, шыуып, иҙәнгә төштө, теҙләнеп, ҡатынының аяҡтарын ҡосаҡларға итте. — Барсын?!

— Ҡағылма. Тор. Шулай яҡшы булыр. Икебеҙ өсөн дә.

Ошо көндән башлап улар араһында ир менән ҡатын мөнәсәбәте өҙөлдө. Барсынбикә Фәүзиә исемле ҡаты ҡуллы, ҡаты бәғерле хакимәгә, ә Диңгеҙхан Сибәғәт атлы унын шәүләһенә, өнһөҙ ҡолона әүерелде.

...һуңғы күҙ йәштәремде шунда түгеп бөттөм икән, тип уйлағайны Фәүзиә. Юҡ, ҡалған икән әле. һаҡлай алманы ул Гөлбаныуҙы. Табып та өлгөрмәҫтән юғалтты ул Күкһылыуын.

— Тәңрем? Ниңә инде мине бөгөн таңца һиҙгерлектән мәхрүм иттең? Гөлбаныуҙың ҡапҡаһы шығырлаған һайын тороп ҡарай инем бит. Ниңә генә был юлы ярҙамындан мәхрүм ҡылдың, мәүләм?!

Икенсе булек

Тәрән үҙәккә еткәс, ел баҫылғандай булды. Хашим, ҡулындағы һалдат тоҡсайын арыраҡ ташланы ла ҡарҙан әрселгән түбәләскә салкан төштө. Район үҙәгенән сыҡҡаны бирле йәйәү атлаған аяҡтарының балтырҙары тартышып-тартышып ҡуйҙы шул саҡ, табандары ла ут кеүек яна. Шулай ҙа рәхәт, саҡ ҡына ятып хәл йыйыр ҙа, үргәрәк күтәрелеп, Тәңребирҙе шишмәһенең һыуын эсер. Ошо шишмәнең башындараҡ — Хашимдарҙың сабынлығы ине. Атаһы мәрхүм булды инде, хәҙер кем саба икән? Зарифа менән Ишмәмәт ялмағандыр әле. Хәйер, былар ваҡ мәсьәлә, иң мөһиме — ул тере, ул имен ҡайтып килә.

Хашим тороп ултырҙы, үлтереп тартҡыһы килде, тоҡсайының төбөнән берәй урам тәмәке тапмаҫмы... Бауҙы сискәс, ҡулы йылы, йомшаҡ тукымаға тейҙе — Гөлбаныуға

гигән бүләк ул. Көмөш һаплы хәнйәренә алыштырып алды ОШО иҫ киткес шәлде Хашим. Госпиталдән сыҡкас, Ялта баҙарына барҙы, ана шунда әллә сиған, әллә молдован ире һатып тора ине уны... Хашимды тере күрәм, тип уйлай шһеңме Гөлбаныуы: яраланыу, контузия алыу, һукырайыу, ı оспиталдән госпиталгә йөрөүҙәр, аҙаҡ килеп үлеү... яңынан герелеү. Терелеү генә түгел — яңынан сырағы асылыу.

Баш осонда ҡарға ҡарҡылданы, яҡында ғына һайыҫкан шыҡырланы, артынса ҡоҙғон ҡыскырҙы.

— Ҡыскырма, ҡоҙғон, ашыҡма: Хашим һуғыштан түгел, геге донъяның үҙенән ҡайтып килә!

һалдат торҙо. Ҡыуаҡ артынан йәшәреп моронлап килгән күгүләнгә ҡарап йылмайҙы: Хашим һуғышҡа тиклем ошондай матурлыҡты, ошо ерҙе, ошо һауаны ташлап ниңә ситтә йөрөнө икән? Хәҙер ул ғәзиз тупраҡтың бер бөртөк йәшел үләненә үҙе әйләнергә риза булыр, әммә ситкә китмәҫ. • Их, Гөлбаныу!.. һинең йөрәгенде яулай алмағанға ғына, косһеҙлөктән, сараһыҙлыктан сығып киттем бит мин теге саҡ...» Гөлбаныу тураһындағы уй Хашимдың битенә ҡыҙыл мүгертте, йөрэген йышыраҡ тибергә, ашығырға мэжбүр итте. Хәҙер бит-ҡулын Тәңребирҙе шишмәһендә йыуыр, услап Һыуын эсер ҙә — ауылына атлар, күп ҡалманы...

Моҡсайынан көрөшкәһен сығарманы Хашим. Бына ул Гәңребирҙе шишмәһе, яҙ, әлбиттә, киңәйгән, һыуы ла һлрғылтыраҡ, караш-ятышы ла икенсерәк. Ҡышын да, йәйен ıа унын һалкынлығы бер сама була: туңмай ҙа, йылымай ҙа. ()шонон һыуына госпиталдә, үпкәһенә операция яһаткас, Сарсап яткайны ул, гел күҙ алдында булды ул Хашимдың, күңеленән уны эсте, усында тотоп торҙо, ҡойондо. Ошо шишмэ нисәмэ тәүлек буйы Хашим менән йәшэү өсөн бергә Керәште.

— һаумы, Тәңребирҙе!

Хашим, усына аккан күҙ йәше менән әҙерәк тоҙланған Һыуға ирендәрен тейҙерҙе. Эскәс, ҡапыл быуындары пимшаны, аяҡтары быуынһыҙланып, сүгә башлауын тойҙо. п мрыр ер эҙләп, ул япраҡ араһынан шөйлә ҡалҡып торған мннка эйелде. Ҡулы шып-шыма каты нэмэгә тейҙе. Тукта, пипмы әллә... Ҡапыл тәне эҫеле-һыуыҡлы булып ҡулын гартып алды, бәй, баш та һуң был, баш һөйәге. Тәүге ҡаушау уткәс, ул һөйәкте ҡаплап ҡойолған япраҡ араһынан өҫкәрәк

ҡалҡытты: шик юҡ, был һөйәк эҙәмдеке. Тип-тигеҙ булып теҙелгән бынау тештәренә ҡарағанда, был ҡатын-ҡыҙ башына оҡшай. Күрәһең, был баштың йәне сыҡҡанға күп тә үтмәгәндер: тештәре лә ап-аҡ, мәрйен кеүек теҙелеп торалар. Шул саҡ Хашим ҡапыл артҡа сигенде, зиһене томаланып, башы әйләнеп китте: баш, әйтерһең дә, ҡапыл йәнләнде, ул шул тип-тигеҙ, мәрйен кеүек теҙелгән тештәре менән... Гөлбаныу булып йылмайҙы...

— Тәүбә, тәүбә! Юҡ! Юҡ! — Хашим, артына әйләнеп ҡарарға ла ҡурҡып, килгән яғына ташланды. «Мираж, мираж!» — тип ҡабатланы уның ағарған ирендәре. — Хәҙер бына ҡайтып етер ҙә Гөлбаныуын күрер, тере килеш, оҙатҡанда күргән моңһоу ҡарашы, күңелһеҙ генә йылмайыуы, ҡыҙҙарҙыҡылай нескә һыны менән бөп-бөтөн, теп-теүәл килеш күрер!

Фәүзиә үҙенең бөгөн төндә үлек кеүек йоҡлауына аптырап уянды. Уянғас, күргән төшөн иҫенә төшөрөргә ашыҡты. Күңеле тоя: уның был төшө ҡәҙимге төш түгел ине. Туҡта, төш күрҙеме ул, әллә өләсәһе Күкһыу һөйләгәндәрҙе иҫләнеме уның тынғыһыҙ солғанышҡа күмелгән күңеле?

— Өләсәй, ниңә һинең исемең Күкһыу?

— Булһа, уның нимәһе?

— Тик, былай ғына, сэйер һымаҡ. Башҡаларҙың өләсәләрендә ундай исем юҡ.

Фәүзиә, ул саҡта Барсынбикә, өләсәһенән ҡурҡыңҡырай ҙа, ярата ла. Белә ул: ырыу-зат тирәһендәге бөтә тормош уның тирәһендә әйләнә: һыйырҙарының елене шешһә лә, һарыҡ-кәзәгә сырхау төшһә лә, бер-берәүҙең балаһына рәнйеү ҡағылһа ла киләләр уға. Ҡайһыларын бик ихлас ҡабул итә өләсәһе, был саҡта уның битендәге сырыштары яҙылып, күҙҙәре йәшәреп киткәндәй була. Ҡайһы берҙәрен тыңлай ҙа, тыщтмай ҙа кеүек. Һөмһөрө ҡойола ла ҡарашы бер нөктәгә ҡипсәлә. Әле бөгөн килделәр уға, әйттеләр, йыраҡтан, тип. Ҙур ғына малайҙы атаһы күтәреп индерҙе; әсәһе, күҙҙәрен мөлдөрәтеп, Күкһыу ҡарсыҡҡа баҡты:

Зинһар, ярҙам ит, инәй... Ун бер йәш малайға, үҙе һпман атламай.

Күрәм... — Күкһыу «күрәм» тине, э үҙе күҙҙәрен всманы. — Үпкәләмә, һеңлем, рәнйемә миңә: был баланы ҫауалай алмайым.

Ярабби... Нисәмә зыярат аша, нисәмә һыу кисеп килдек...

– Андайым. — Шунан өләсәһе шаршау менән бүленгән шрмэнең теге яғына өндәште. — Айбағош, мосафирҙарға һыуһын бирҙер, бәләкәс киленгә әйт: ҡаҙан аҫып, аш Һ.шһындар, үҙҙәренә ял итергә урын-ер әҙерләһендәр.

— Инәй... — Күҙҙәренең йәше сөбөрләп аҡҡан ҡатын иәнә Күкһыуға өндәште. — Бөтә өмөтөм һиндә ине, инәй.

- Ашгайым. — Күкһыу шунда ғына күҙҙәрен асҡандай булды. — Тынла: әгәр был зәғиф улыңды һауыҡтырһам, өйҙә ҡалған өс улыңа, мал-тыуарыңа зыян килер. Ырыуығыҙға мнпкән ҡарғышты ошо баланың сире тотоп тора.

Ярраби!.. — Ҡатын башын түбән эйҙе, ире тамаҡ ҡырҙы. Малай, бер ни аңламаған күҙҙәрен сылт-сылт йомоп, берсә атаһына, берсә әсәһенә ҡараны.

Күкһыу тағы күҙҙәрен йомдо:

- Малайҙы рәнйетмәгеҙ, тамағынан тартмағыҙ, яҡшы мөғәмәләлә булығыҙ.

— Хәйергә тип... һарыҡ килтергәйнем...

һарығығыҙҙы алып ҡайтығыҙ, юлда бер тотҡарлыҡ мшсп сыйыр, шул һарыҡ менән ҡотолорһоғоҙ...

— Йә хуш, инәй...

– Хушығыҙ.

Выларҙы тирмә түренә өйөлгән ҡаралты артында тыңлап \ п ы рған Барсынбикә бик йәлләне, өләсәһенең аҡ йөҙлө, ЦОНһоу күҙле малайға ярҙам итмәгәненә йәне көйҙө. Көйһә лә, гуранан-тура бәреп-ярып әйтергә баҙнат итмәне...

Оләсәһе эле генә юлаусылар менән һөйләшмәгәндәй, < м.шсоре менән үҙенең араһында һүҙ өҙөлмәгәндәй, ирен сите Иенән генә йылмайҙы:

- Исемең сәйер тиһең инде...

Сәйер тимәйем, кешелә юҡ исем, тинем. — Барсынбикә ҡыйыулана төштө. Белә ул: өләсәһенең сырыштары күҙ осонда ғына ҡалһа, уға һораուҙы ҡурҡмай бирсп була.

— Тыңлаһаң, һиңэ бер нэмә һөйләйем, Барсынбикә.

— Әкиэтме?

— Әкиэтте көндөҙ һөйләмәйҙәр... Бик борон булған хэл был.

Беҙҙең ҡәүемдәр, ырыу-ырыу булып, бик алыҫта, ҙур һыу буйында йәшәгәндәр ул саҡта. Малдары ишле булып, даланы инләп йөрөгән, ҡыҙ-ҡатындар бик көслө булып, ырыуҙың көс-ҡеүәтен ебәрмәҫ өсөн, үҙҙәренең уҙағын майҙан йыйып, тирэ-яҡ батырҙарын ярыштырып һайлаған. Әммә бер саҡ, хоҙайҙың рәнйеүе төшөп, далаға оло ҡоролоҡ килгән: ер-һыу көйгән, малдарға үләт-ҡырғын төшкән, хоҙайҙан ни тиклем ямғыр һорамаһындар — тәңре ярҙамға килмәгән, дала буйлап йомрандай һыҙғырған ҡоро елдәр яңынан-яңы бөлгөнлөк килтергән.

Ырыу күҙ алдында ҡорой, аслыҡтан, һыуһыҙлыҡтан ҡырыла; оло диңгеҙ эргәлә генә, иллә-мәгәр һыуы тоҙло, эсергә яраҡһыҙ...

Сараһыҙлыҡ ҡамауында ҡалған ҙур ырыу күҙгә күренеп һайыҡҡан, бигерәк тә балалар күпләп ҡырылған. «Бөлдөк! — тигән улар. — Был ҡарғыштан инде ҡотолоу юҡ. Барымта өсөн был!»

Аптыраушта, ҡаңғырышта ҡалған ырыу. Ырыу башлығы, Тыумәрэс ҡатын, төнгө йоҡоға талған ырыуҙаштарының баш осонда тәрән уйға сумған. Ырыуҙы күп бәләләрҙән әрсәләгән ошо ҡатын сараһыҙлыҡтан бөгөн шартлар хәлдә икән. Етмәһә, унын буйында ике йән бар. Ошоларҙы тапһа, Тыумәрэс ырыуҙан ҡаласаҡ. Хәҙер инде унын майҙандарға сығып батыр һайлар мәле үтте, ә түл ҡыҫтап, ит үлтерер өсөн генә ул ир заты менән яҡынлыҡ һис бер ваҡыт ҡылманы һәм ҡылмаясаҡ! Шул саҡта унын һиҙгер ҡолағы бүре олоған тауышты сарпылтҡан.

— Бүреләр... — Күптән ишеткәне юҡ ине унын бүре тауышын да. Ҡоролоҡ башланғас, улар ҙа ташлағайны даланы. Күрәһең, былары ла үткенсе генәләрҙер, ырыуҙың ҡалған ғына малының еҫенә һырығып килгәндәрҙер.

Ырыу нәмә белмәй йоҡлай. Көндөҙ сарсауҙан, көйҙөргөс ҡояш нурынан әлһерэгән әҙәм үлек кеүек хәрәкәтһеҙ. һыу эҙләп ҡыҙырған был далала бүре уларҙың тәү осраған тере йән эйәһе.

Тыумәрәстең йөрәге берсә ярһып тибә, берсә тынып, гөнгө һиллеккә ҡолаҡ һала: хоҙайҙан ебәрелгән ҡотолоумы, ҡырылыу-ҡырғынмы сараһы был?! Бүре көтөүе ишлегә оҡшаған, әгәр улар, аҡтыҡ дөйәнең башына еткәндән һуң, үҙҙәренә йәбешһә?..

— Ах тәңрем, ярҙам ит, зиһенемде яҡтырт, аҡылыма •сыҡлыҡ бир?! Нишләргә миңә, нишләргә... Буйындағы сабыйҙар тыумаһа, ырыуы короясаҡ, һыуһауҙан бәлйерэгән мрыуҙаштары түл йәйер әмәлдән уҙғандар... Улар... бер-береһенең ҡанынан һыуһын яһар сиктәләр. Ах, тәңрем...

Тыумәрәс, ҡара төндәй күҙҙәрен тағы ҡара төндөң ҡара ҡарынына төбәй, баҙлаған ут нөктәләре яҡынайған һайын күбәйә, олоуҙары ла тынды хатта, ит-ҡан еҫе тояларҙыр, ахыры. Ярабби!.. Ана, дөйә торған еренән кире гөрһөлдәп ергә ауҙы. Йөрәгеме ярылды урталай?!

Тыумәрәстең дә йөрәге, әгәр берәү булһа, ярылыр ине, юк шул: унда өс йөрәк, өс йән. Ә бүреләр һаман яҡынираҡ КИЛЮ, ҡоршау булып ҡамай ике тиҫтәнән дә аҙ ҡалған әҙәм өиөрөн.

Шулай ук һуңғы сараға мөрәжәғәт итергәме, ах, Глцрсм?! — Тыумәрәс ашығып ергә тубыҡланды, башы менән өс тапҡыр ергә һуғылды, ауыҙынан ҡасандыр ишеткән, лэкин бер ҡасан да эйтеп ҡарамаған татран яңғыраны, шул са к бүреләр ҙә, түҙемен юйып, ҡорбандарына тәүге һөжүмгә Ырғыны, ләкин... әҙәм тигәндәре һарыҡташтар булып сыҡты, а берҙән-бер дөйә үлеге янында үҙҙәренең тоҡомдашы күк и ılы инә бүре ята...

Күкһыу, ҡулын күтәреп, ейәнсәренең шоморт ҡара иэн һыпырҙы, ә Барсынбикә уға һыйынды:

- Ҡартәсәй, Тыумәрәстекеләй көсөм булһа, был баланы мин нрекле бер ҡошка әүерелдерер инем!

И бала...

Ҡартәсәй, Тыумәрәс... бүреләр менән киткәндер, йеме, ҡартэсэй?..

Бар, уйна, унынһын — һуңыраҡ.

Уйна тип, мин бит инде... үҙем өләсәймен!

Беләм, шуға ла әйтеүем: уйна.

Аңламаным: нисек инде...

— Бар, бар... Ярай әле исеменде алыштырғанһың. Алыштырмаһаң, рэнйеш һине күптэн килеп тапкан булыр ине!

— һин... Ниҙер һорарға иткәйне, әтэс ҡыскырҙы, Фәүзиә-Барсынбикэ күҙҙәрен асты.

— Аһ! — Күргән төшөнә иләмһерәп, Фәүзиә тороп ултырҙы. — Нимә булды был?! Төшмө, әллэ бала сағымдағы хәтерләүме яңырҙы? Фәүзиә урындыктың икенсе осона ҡараны: Сибәғәт юк, ҡайтмаған. Ҡарт бүре... Раузаға эйәләгән тигәндәре ысындыр, ахыры.

Йөрәге болоҡһоп, ҡулдары ҡалтыранған хэлдә Фәүзиә ҡомғанына үрелде: Раузанан нисек биҙҙерергэ был ҡарт алашаны?

Ихатанан сығып, тэһәрәт алырға ла өлгөрмәне, өй ишеге асылды. Унан килененең туҙған сэсле башы, элеккенән дә нығыраҡ һарғайған йөҙө күренде:

— Ҡәйнэм, улың бөгөн дэ ҡайтманысы...

Фэүзиәнең башына килгән тэүге уйы «Яман ҡатындан яр биреһе ҡаскан» булһа ла, үҙен тыйҙы, килене алдында тыныс, ғәмһеҙ, донъяһы теүәл бер әҙәм булып күренеп өйрәнгән бит ул.

— Аһ-аһ! — тине ул, ҡомғанынан ашыкмай ғына услап һыу алып. — Ҡайтмаһа ни, үлергә китмәгәндер бит! Бар, ана, ирем ҡайтманы, тип урамға сығып яу һал, ҡыскыр, ила...

Сәбилә былай ҙа сомтор танауын юкка ҡалдырып тигәндәй сырыштырҙы:

— Мин улай тимәйем дә...

— Тимәгэс, һейгәк бисэләргә оҡшап, сарбайҙанма. Бар, ана һыйырынды һау, елененә бәләкәй теге майҙан һөртөп ебэр, кисэге ише тағы йылан имеп ҡайтармаһын... — Фәүзиә ашыкмай ғына, килененә бойора-бойора, күтәрмәгә менде. — Самауырҙы кистэн килтергән һыуҙан ҡойма, уны йыуынырға ғына тотон...

— Ярай, ҡэйнәм, шулайтырмын. — Киленен яратмаһа ла, күндәмлегенә шуның иҫе китә Фәүзиэнең. Ихсанбайы ни тиклем хаттин ашһа ла, бер ҡайтып китмәне, үҙ туғандары менән аралашыуҙың ни икәнен белмәне. Ауылда халыҡ: «Фәүзиэ киленен сихырлаған», — тип һөйләй. Фәүзиэнең иһэ был тәңгәлдә иманы камил: Ихсанбайҙың күләгәһе ише йөрөгән ҡатынды тиләргә ни ҡулы барһын?!

Сибәғәт йоҡонан әллэ ниндәй еңел тойғо менән уянды. Күптән былдай еңеллекте тойғаны юк унын. Ҡыҙык, Ихсанбайын ҡарауыллап ҡына барғайны кәнсәгә, аҙаҡ ҡарауылсы булып төштө, эскән баш менән, ирмәк өсөн генэ иморөнә төрттө ошо Раузаның. Рауза ла шаярыу менән яуап бирҙе. Шаярып ҡына ишара ҡылдылар — хәҙер бына икеһе бер түшәктә, баштары — бер мендэрҙә. Тиҫтә-тиҫтә йылдар тткондa зарыҡкан тойғолары бәйҙән ысҡынды микән (ибәғәттең? Эсмәне түгел, эсте, эсен көйҙөрөп барған һағышын араҡы менән йыуырға итте — булманы. Фәүзиәнең, өҙөлөп яраткан ҡатынының, унан баш тартыуына, тораташтка әйләнеүенә лә ни заман... Хәҙер ул дәрәжәһен, малын, данын, катта исемен юғалтканға ла, берҙән-бер улының үҙенә бүре күҙҙәре менән ҡарауына ла, бисәһенең төн биреһенә әйләнеүе ıә, нисәмә йылдар бәндәнән йәшеренеп, ҡара тимерлектә ҡара рухка әйләнеп йәшәүенә лә ҡайғырмай. Үтте, бөтәһе лә утте... Сибәғәттең бөтэ йәне-тәне һиллек, тыныслыҡ һорай, э \ гсарҙы ул ошо ҡарамаҡҡа һантый ғына күренгән йыуан бисәлә тапты. Ҡара һин уны, Сибәғәт үҙе лә әлегә тиклем карыуҙан ҡалмаған булған икән... Ана ла баһаң, Рауза, унын кулпык аҫтына бәләкәс кенә танауын төртөп, нәмә белмәй мышнап йоҡлай.

– Их, гел ошолай ғына булһасы! — Быны Сибәғәт үҙе ıə һиҙмәҫтән ҡыскырып әйтте. Рауза күҙен асты, башын калҡытты, һимеҙ бармаҡтары менән маңлайына һырышкан кулса-ҡулса сәстәрен артка һыпырҙы:

Ни тинең?

Әйтмәнем. Йоҡла. — Сибәғәт Раузаның түңәрәк яурынына юрғанды күтәрә төштө. — Иртә әле, йоҡла.

Таң һыҙылған... — Раузаның ирендәрендә йылмайыу уянды. Уңайһыҙлана нимәгәлер. — Ҡара әле, мин һине... уятмай йоҡлап киткәнмен...

Уятһаң да ҡайтмаҫ инем... — Сибәғәт битен Раузаның иıəı енә терәне. — Эргәндән тороп китә алмаҫ инем. — Рауза ка ҡкынды, йомро алһыу белэгенә таянып, унын йөҙөнэ тексәйҙе, шунан, бармағын төкөрөкләп, Сибәғәттең һендәге минде ышкып ҡараны.

Һы, ысын миң икэн. Элек... юк кеүек инесе...

— Ҡырындым бит, һаҡалды ла ҡырып ташланым...

— Нигэ?

— Йэш күренәйем тип, әтү яратмаҫһың тинем.

Раузаға был ҡыҙыҡ тойолдо, һене ҡатып көлөп, мендэренә ҡапланды. Сибәғәткә лэ был мәрәкә күренде, һаһылдап көлөп ебәргәс, үҙ тауышын үҙе танымай торҙо — был рэүешле көлмэгәненә күпме ғүмер үткән!

Ҡапыл ишек шаҡыныляр. Рауза һикереп тороп ултырҙы.

— Уй, әллә ҡарсығың!

— Юктыр, — Сибәғәт, йәһәт кенә тороп, салбарына үрелде. — Ят, ят! Үҙем...

Ҡоролған тэҙрэле бүлмэлә һиҙмәгәндәр икэн — ишекте асып ебәреүгә — биткә яңы тыуған ҡояштың ап-аҡ нуры бәрелде. Таныш түгел ирҙе күргәс, Сибәғэт шунда уҡ тынысланды.

— Кем кәрэк?

— Кэнсә йыйыштырыусыһы... ошонда торамы?

— Ошонда.

Килеүсе Сибәғәттең яңы ғына йоҡонан уянғанын шәйлэнеме, тауышын төшөрә бирҙе.

— Ошонда булһа, эйтегеҙ: миңә тиҙ генә председатель менән силсәүитегеҙҙе табып килтерһен. Камалетдинов үҙе эҙләтэ тип эйтһен.

— Ярар, хәҙер!

Камалетдинов, ҡапыл уға төбәлеп ҡарағандай, ҡашын төйөрэ биреп, шаңҡыған ҡиәфэттә ҡапҡаға атланы.

Рауза сығып киткәс, Сибәғәт, ҡайтыр якка юлланмайынса, Зарифалар тыҡрығына төштө. Элек булһа, ул бында баш төҙэтергэ, янып барған йөрәген хэмергә бушатырға барыр ине. Ә бөгөн — юк. Ғәжәп, ниңә уның эскеһе килмәй икән? Ә бына Ихсанбайҙы табыр кәрэк. Харап бит: Камалетдинов үҙе эҙләп килгән. Районды башҡарма комитеты рэйесе күрше Юлдаш ауылынан тиҙәр ине, шунан ҡайтып барышлай юл һуғыуы микән, эллә икенсе берәй етди сэбәп менәнме? Табылһа ярар ине Ихсанбай, Зарифала төн ҡунһа, шыр иҫеректер әле ул...

Ҡапка эстэн бикле булып сыкты. Сибэғәт ярыктан ҡараны. Әһә, эстә Шәңгәрэй йөрөй түгелме?

— Шәңгәрәй!

Яуап урынына Шәңгәрәйҙең эт булып өргәне ишетелде.

Шәңгэрәй, иҫэрлэнмэ эле, малай! Миңә Ихсанбай Кврөк, һеҙҙә юкмы ул?

Яуап урынына — тағы өрөү.

— Шәңгэрэй, ҡуй, ташла эле! Ас ҡапканды!

— Уаф-уаф! Ыу-уаф, ыу-уаф!

— һеҙҙәме Ихсанбай, юкмы?!

- Тестэмэҫ борон, балағындан алмаҫ борон, һыпырт!

— Йә етәр, мин һиңә «этһең» тимәйем бит!

- Шарифа сулай ти! Аҙбар басында йоҡлата. Йортто яксы ҡарауыллаһаң, асатам, ҡарауылламаһаң — юк, ти!

— Йә, ҡуй, икмәкте мин һиңә үҙем бирермен.

— Икмәкте ышын бирерһеңме?

— Валлаһи-биллаһи!..

— Алдасмаҫһыңмы?

— Ант!

— Ике һыныҡ итеп бирерһеңме?

— Ә ниңә ике һыныҡ?

— Мин уларҙы Гөлбаныуҙың малайҙарына асатырмын.

— Бирермен, бирермен.

- Гөлбаныуҙың малайҙары бит — минеке! Гөлбаныу — минең кәләсем ине! Белдеңме?

— Белдем, белдем!

— Малайҙар кемдеке?

һинеке, Шәңгәрәй.

— Ышын эйттеңме?

— Ант!

Әләйһәң, ашам ҡапканы. Юғиһә, Шарифа — әпшэй ни гэ, — ҡалған, ти, һиңэ малайҙар, ти. Малайҙарҙы Гөлбаныу елдән тапты, ти!

- Хашим ҡайтһа, кәрәген бирер әле Зарифаның!

Шарифа Хасимдан ҡурҡмай-ай!

Ну, Ишмәмэт атайың ҡайтһа...

Атайым наган алып ҡайта, үэт! Шарифаны — тох, тох! Һинең Ихшанбайыңды — тох, тох! Белдеңме?

Ауыҙыңдан ел алһын, Шәңгәрәй!

Ха-ха-ха! — һыны ҡатып көлә-көлә, Шәңгәрәй (!ибәғәтте эскә үткәрҙе. — Ҡара уны: икмәк бирмәһәң, мин **Һине лэ — тох, тох!**

Өйгә ингәс, Сибәғәт баҫҡан ерендә ҡыбырлай алмай торҙо: Ихсанбайы шәрә килеш иҙәндә аунай. Зарифа күренмәй. Төпкө өйгә үтте — Зарифа унда ла юҡ.

— Кәнтәй...

Сибәғәт эйелеп, Ихсанбайҙың яланғас ботонан тартты:

— Эй! Тор... — Ихсанбай ҡабырғаһына әйләнде, мәгәр торманы, хатта уянманы ла, шикелле. — Ихсанбай, Камалетдинов эҙләтә һине!

— Ә?.. — Ихсанбай уянғандай булды, әммә күҙен аса алманы. Сибәғәт уның өҫтөнә мейес буйында торған бер биҙрә һыуҙы елгәрҙе. — Мә, хаин, эсә белмәй эсһәң!

— һәй! Кем ул, ә? Атай?!

— Камалетдинов эҙләтә һине, тор, тиҙ бул штобы!

Сибәғәт сығып китте. Әлдә Шәңгәрәй күренмәне, икмәк һорап өйөнә тиклем оҙатыр ине. Их малай, һуғыштан алып ҡалып, яңылышты ахыры. Үҙе лә эсте шул, үҙен онотор өсөн эсте лә бит, күрәһең, үҙен түгел, Ихсанбайҙы онотто...

Өйөнә етәрәк, Сибәғәттең аҙымдары ышанысһыҙыраҡ була барҙы. Хәҙер уны Фәүзиәнең дөм-ҡара ҡарашы өтәсәк. Ни уйлағанын сырамытырға тырышып, күпме генә уның йөҙөнә баҡмаһын, нык итеп ҡымтылған йоҡа ирендәрҙән, керпек аҫтына, төпкә йәшеренгән күҙҙәренән уның бер ни ҙә уҡый алмаясаҡ... Ошо минутта ул ҡабаттан үҙ тупһаһын аша атламаҫ өсөн генә әллә ниҙәрен бирер ине...

* * *

— Малайҙар-ар! — Өйөндә күренмәгәс, Мәҙинә, ҡустыларын эҙләп, тышҡа сыҡты. — Малайҙар тим! Йәнтимер, Биктимер, һеҙ ҡайҙа? Юҡтарсы... — Мәҙинә, уларҙы артабан эҙләмәк булып, урамға сығырға иткәйне, үҙҙәренә табан килгән әхирәтен күрҙе, унаһы килеп етер-етмәҫтән ҡыскырып һүҙ ҡушты:

— Нимә унда себештәрен йыя алмаған тауыҡтай тораң, әхирәт?

— Малайҙар эллә ҡайҙа сығып олаҡкан. — Мәҙинә Ғәлимәнең өҫтөндәге эре ҡыҙыл сәскәле йәшел ситса күлдәкте шунда уҡ шәйләне. — Күлдәгең беше икән, — тине ул әхирәтен семтергә үрелеп. — Ҡайһылай... өндәшмәйһең дә...

— һәй! һине осратып буламы? — Ғәлимә быйыл яҙҙан бирле колхоз идараһында ҡағыҙҙар менән эшләй. Ата-әсәһе булғас, етене бөтә алды шул ул, Мәҙинә шикелле ҡара эштә интекмәй.

— һиңә киләм, эхирэт, кәнсәгә кешеләр килеп тулды, персиҙәтел мине сығарып ебәрҙесе...

— Кемдәр икән? — Мәҙинәлә әле хаҡһыҙға тартып алған һыйырын кире ҡайтарыу өмөтө һүрелмәгән.

— Камалетдинов тиме шунда, этем белһен! Ихсанбай ҙа килеп инеп ҡалды...

— Камалетдинов районда... баш кеше була түгелме?

Әммә Ғәлимә Мәҙинәгә оҙон тәбәрәккә төшөргә ирек бирмәне:

— Эй, Мәҙинә! Уның Ихсанбайы ни ҙә, Мирхәйҙәровы ни. Түрә бит улар! Әллә уларҙа һинең менән минең ҡайғы гиһеңме? Лутсы үҙеңә бер нәмәкәй күрһәтәм.

— Ғәлимә...

— Әйҙә эле... Теге саҡ әйткәйнем бит! — Ғәлимә, эргә-тирәлә кеше-фәлән күренмәһә лә, Мәҙинәнең ҡолағына)йелде.

Мәҙинә ҡыҙыҡһыныуын еңә алманы:

— Әйҙә һуң...

Өйгә ингәс, Ғәлимә төйөнсөгөн таратты:

— Бына!

— Кемдеке был?

— Уҡытыусы Сәрбиназ апайҙыҡы.

— Уй... ҡайһылай ирмәк! — Мәҙинә йоҡа аҡ туҡыманан ике бала башлығын бергә тоташтырған кеүек итеп тегелгән ойбергә иҫ-аҫылы китеп ҡараны. — Н-нисек кейергә икән?

— Артында... бына лаһаң төймәһе бар!

— Уф әйкәйем... Үҙең һорап алдыңмы?

— һорамайса... Ҡарап тегәбеҙ ҙә килтерәм тинем!

— Ә нимәнән тегәбеҙ?

— Ҡайғырма! — Ғәлимә икенсе төргәкте тағатты, унан метр самаһы аҡ тауар килеп сыҡты.

— Быныһын ҡайҙан алдың?

— һауынсыларға халат тегергә тип бирҙеләр, шунан хэмсенем.

— Уй Ғәлимә-ә... тотолһаң?!

— Этем белһенме?

— Әй, ҡурҡмайһың да инде, әхирәт!

— Ҡурҡып торһаң... — Ғәлимә сыңғырҙап торған тауышы менән йонә ҡысҡырып көлдө. — һинең менән мин туйыс тигәи һүҙҙе өйрэнер инекме? Әйҙә: ал ҡайсыңцы, еп, энә килтерҙем!

Ни сыҡһа, ошо Ғәлимәнән сыға торғайны элек — эле лә шулай. Мәҙинә уға ҡарыулашмай буйһонорға өйрэнгэн. Бала саҡтарында, Мәҙинәгә күп булһа һигеҙ-туғыҙ йәш булғандыр, ошо Ғәлимә Алайғыр баҙарына барып, урыҫтарҙан урысса өйрәнеп ҡайтайыҡ тип ҡотортто. Атаһы Мөхәррәм ағай, бик ныҡ инәлгәстэре, ултыртып алып китте быларҙы. Ҡараңғынан ат егеп сыҡкас, иртәнге ундарға барып инделәр. Шул хэтлем күп халыҡты күреүҙән Мәҙинә лә, Ғәлимә лә башта ҡаушап ҡалдылар, Мөхәррәм ағай, атын ҡойма буйына туктатып, ыңғырсағын бушатты ла:

— Мин анау якка барып әҙерәк һатыу итәм, һеҙ арбанан төшмәгеҙ, аттан күҙ яҙлыктырмағыҙ!— тине. Үҙе, һатыуға тигән ҡоротон, селек һеперткеләрен алып, халыҡ эсенә инеп китте.

Мәҙинә менән Ғәлимә күпме генә тырышып тыңламаһындар, халыҡтың һөйләшкән хэбәре бында килеп ишетелмәй. Урыҫ тигәне ҡайһылайҙыр, анау йыуан-йыуан һары йөҙлө ҡатындар шулар микән?

Башкүҙ алғас, үҙҙәренән алыҫ түгел, бәләкәйерәк бер өй торғанын күрҙеләр. Ғәлимэ һикереп төштө:

— Барып ҡарайым әле, нимә икән?

— Атайың күреп ҡалһа киткәненде...

— Күрһә... — Тиктормаҫ Ғәлимэ инде өйгә барып етеп, ишек башындағы яҙыуҙы укып маташа. — Л-а-в-ка — ...«Лавка», Мәҙинә, лавка!

Ул арала лавка болдорона бер ҡатын күтәрелде, Ғәлимәгә йылмайып һүҙ ҡушты:

— Кто ты будешь, девочка. То есть, чья будешь?

Ғәлимэ, был тағы берәй нәмә өндәшмәҫ элек тип, арба яғына тоҡойҙо.

— Нимә тине ул һиңә? — Ят апай менән һөйләшкән Ғәлимә үҙе лә уғата серле булып киткәндәй тойолдо Мәҙинәгә.

— Ишетмәнеңме ни: туйыс тине.

— Туйыс?

Аҙаҡ ҡайтып барғанда Мәҙинә, Ғәлимэгә ҡарап, ауыр көрһөнеп ҡуйҙы:

— Әй... урыҫса ла өйрәнеп булманы...

— һи... «туйыоты өйрәндек тә инде?

— Уны Рауза ла гел әйтә!

...Әле бына, аҡ миткалды киҫкеләй башлағас, шул баҙарға нарыу иҫенә төштө Мәҙинәнең.

— Быны... укытыусы бисәһе кемдән отоп алды икән? Әллә мәрйәләрҙән күрҙе микән?

Ғәлимәнең бынан башҡа ла яңылыҡтары күп ине Мәҙинәгә һөйләргә.

— Әхирәт... һеҙҙең күрше, теге ҡарт алаша, нимә эшләй, беләһеңме?

— Ихсанбаймы?

— Түге-ел, теге ни... ҡарты!

— Сибәғәт апаны әйтәңме?

— Шуныһы!

— Юҡ, ишетмэнем, — Мәҙинә, һүҙ үҙе тураһында Сшрғандай, ниңәлер ҡыҙарып китте, — нимэ булған уға?

— Раузаға барған.

— Шунан? Барһа һуң?

— Уф, ошоноң... Аңламайһыңмы ни?!

Мәҙинә тағы ҡыҙарҙы: шуның һымаҡ нәмэлэрҙе нисек еңел генә һөйләй ала икән ошо Ғәлимә?

— Буштыр, кеше һүҙелер...

Кеше һүҙе, — Ғәлимә йэнэ сыңғырҙатып көлдө, — Рауза үҙе тере сакта кешегә һүҙ ҡалдыра торғаны бармы? Үҙе һөйләгән! «Мин, — тип әйтә ти, — хәҙер, — тип әйтә, ти, — экиәттә йәшәйем, — тип әйтә ти. — Мин — Зөһрә, Сибәғәт Таһир, айыбыҙ — талир, төндө көтөп үткәргән һәр Квнөбөҙ — үҙе бер ғүмер!» — тип әйтә ти.

— Әҙәм ышанмаҫты!

Ышанмаҫка... Сибэғэт ҡарт бит һаҡалына тиклем Кырған! — Ғәлимә йәнә шарҡылдап көлөп урындыҡка гәгәрәне. — Күргәс, ҡырғас... уң битендә, ҡолаҡ іргәһендәрәк, ҡара миңе килеп сыҡкан! Х-хәстэ, урыҫтың, гее... тәреһе!

Мәҙинә йәнә ҡыҙарҙы, был юлы хатта өшөп, ҡалтыранып мпкондәй булды. Тэрегә окшаған ҡара миң... Йәнтимерҙең ю илк шул урында. Шундай ук миң бар Биктимерҙә лә.

Үҙ хәбәренә үҙе иҫергән Ғәлимә әхирәтенең бер ағарып, бер ҡыҙарып ултырыуын шәйләмәне лә хатта: уға бит аҙна буйы йыйналған хәбәрен һөйләп бөтөр кәрәк.

— Әхирәт, ә беҙҙең персиҙәтел Мирхәйҙәров ағай Ихсанбайҙы... эштән ҡыуҙырам тип ҡыҙыша.

Мәҙинә йәнә һиҫкәнде: Ихсанбай тигәндән, ул барлыҡ яҙмыштарҙы бармаҡ осонда ғына әйләндереп тотҡан дәү бер ғифритте күҙ алдына килтерә.

— Булмаҫ-аҫ!

— Ысын, үҙем ишетеп ҡалдым! Теге Камалетдинов менән һөйҙәшкәндәрен ишетеп торҙом! Мирхәйҙәров ағай Ихсанбайҙы һөрһөгән мәйет тине!

— Кит, әй!

— Ишеү етмәһә, — Ғәлимә ҡупшы ирендәрен бүлтәйтте, — шул нишана Ихсанбай, кеше юкта гел минең эргәгә инергә тырыша, әкиәттәге хур ҡыҙын бер һурып үпһәң ине тисе?

— Уй, әхирәт... һаҡ бул!

— һи! Үҙең беләһең, эхирэт, миңә... кем оҡшағанын,— Ғәлимәнең дөм-ҡара күҙҙәре аҙға ғына һағышҡа мансылды. — Их, тағы килеп китмәҫ микән?

— Ә минең кисәнән бирле уң күҙемдең өҫтө тарта... — Ҡайғынан башҡа нәмә күрмәгән Мәҙинә быны үтә хафаланып әйтте.

— Ә төшөң? Төшөң болармаймы?

— Юҡ, шикелле...

— Әләйһәң, һәйбәт, уң күҙҙең аҫты тартһа ғына насар була ул.

— Шулай ҙа хәйер биреп ҡуяйым.

Ғәлимә эхирәтенә йәллэп ҡараны: нимәһен бирһен инде ул хәйергә? Әле лә, ана, түрбаштары ялтырап ята. Исмаһам, икмәк валсығы ғына булһа ла табылһасы...

Атаһы сығып киткәс, Ихсанбай «ах» та «ух» килеп тороп ултырҙы. Баш тубал кеүек, күҙҙәргә ҡурғаш тултырғандармы ни — ҡабаҡтарҙы күтәрермен тимә. Ул, кисә ни булғанын иҫләргә тырышып, башын сайҡаны. Хәйер, ни булған тиһең... Шул Зарифа, шул көмөшкә... Тукта, атаһы ни тине әле?

Әл лә... әллә... Камалетдинов тигәндәй булды түгелме? Эйе, эйе! Бәй, шулай булмаһа, атаһының башын ҡарап эҙләһенме һаҡалы биленә еткән улын?

- Зарифа! — Ихсанбай, ыуаланып, кейемен эҙләп, тирә-ш ын һәрмэштерҙе. — Зарифа!

Ул арала ишектә Шәңгәрәйҙең йомро башы күренде::

- Әй Ихшанбай, һинең... мөһөрөң... ни ерендә?

- Ауыҙывды ҡайырайым, — Ихсанбай шунда аунаған катаны элэктереп, Шәңгәрәйгә елгәрҙе. — Яп ишекте, инәңдең...

Шәңгәрәй әллә ҡайһы арала бер-икене «лаф-лаф» өрҙө лә ишекте ҡаҡтырғансы ябып ҡуйҙы. Зарифаның өйҙә булыуынан өмөтөн өҙөп, Ихсанбай мейес эргәһендәге ҡомғандан һөрпөлдэтеп һыу эсте лә ҡалғанын битенә ҡойҙо. Лх, эҙерәк хэл ингәндәй, күҙе асылғандай булды. Ай-яй-яй... Момошлайһы хэжәте лә ҡыҫтап бара бит эле ҡәһәрең!.. Болдорҙан тороп ҡына эшен бөтөрөр ине лә бит, теге тыума гемеҫкенеп йөрөй микән? Ай-яй-яй... Ихсанбай түҙмәне, зыйитеп сығып, болдор ситенә баҫты, эммә йомошон башлап кына ебәреүгә болдор аҫтынан күшеккән Шәңгәрәйҙең башы күренде.

- Уй-бай. Нимәстэйең һин, Ихшанбай?!

- Атаңдың... — Ихсанбай йүгереп тиерлек болдорҙан төшөп, ситән буйына шылды. — Тыума! Кыутомшоҡ! Дпуана!

- Үҙе баска шаптырҙы ла, үҙе эрләйсе... Мин, белгең Килһә, эт! Шарифа ҡусты! Аф, аф! — Шәңгәрәй, дүрт аяҡлап Ихсанбай тирэһендэ өйөрөлә башланы. — Аф-а-аф!

- Кит, нишана! Кит тиҙәр һиңә, диуана!

- Мин һине асайым! һин Гөлбаныуҙы асаның, мин хәҙер һине асайым!

Аптыранған, яланғас Ихсанбай арты менән болдорға ОИКте. Әллэ ҡоторған инде был Шәңгәрәй!

Шәңгәрәй, ҡустым, кеше ишетер, ниңә юкты КЫланаһың?

Мөһөрөндө күрһәт, Ихшанбай, мөһөрөндө күрһәт!

Ай алла, ниндәй мөһөр? Мисәтте әйтәңме? Кил һуң Мнсөгә, күрһэтермен...

Шәңгәрәй килеп уға тырнаҡтары менән йәбештем тигәндә, ҡапҡа асылды, унан Раузаның тирләп бешкән йөҙө күренде:

— Ай, уй! Ихсанбайулла... уф!

— Х-хәҙер, Рауза апай! — Ихсанбай йәшен тиҙлеге менән эскә атылды. — Черт, мин... хәҙер!

Бер ни төшөнмәгән Рауза берсә саң борҡотоп тәгәрәп ятып көлгән Шәңгәрәйгә, берсә ҡото алынып өйгә сапҡан шәрә Ихсанбайға ҡарап телһеҙ ҡалды.

Камалетдинов колхоздың һөрөнтө ерҙәр планын һорап алды. Ҡулдан арлы-бирле сыймаҡланған ҡағыҙға ҡарау менән үҙе иртән үткән баҫыуҙарҙы таныны. Эйе-е... ундырышлы тупраҡта ултыра Тирәкле. Күрәһең, хәҙерге Серекккүл ҡасандыр бөтә ошо колхоз ере биләгән үҙәнде биләп алҡынып ятҡан ҙур һыу булған. Революцияға тиклем, баҙарға игендең башлыса ошо Тирәкле яғынан ағылғанын һөйләй торғайнылар. Тамағы ашҡа туймаған етем малайҙың «...икмәк ошо яҡтарҙа үҫә икән, үҫкәс, ул шул ерҙәрҙе үҙ күҙе менән күрермен, икмәген туйғансы ашармын» тигән хыялы бар ине. Әлбиттә, унан һуң Азамат Камалетдинов күп юлдар үтте, илдәр күрҙе, һыуҙар кисте. Икмәккә лә күптән туйынған унын күңеле, был якка эшкә килеүе лә үҙ ихтыяры менән булманы — партия ҡушты, ул ебәрҙе.

— Ерҙәрегеҙ һәйбәт һеҙҙең... — Камалетдиновтың тәүләп әйткән һүҙе үк Мирхәйҙәровты тоҡандырып ебәрергә етте.

— һәйбәт булыу менәнме? Ауыҙыңды ҡайырайым, донъя, Ихсанбайға ҡалғас, эш бармаған! Ярай әле Ишмәмәте китеп ҡотолған, мин паразитты...

— Иптәш Мирхәйҙәров, һеҙ... һәр саҡ шулай ҡыҙыумы?

Мирхәйҙәров уңайһыҙланды. Ҡаҡса йөҙө тартышып, алһыуланыбыраҡ китте, торған еренән кире ултырғысҡа ултырҙы.

— Ғәйеплемен, иптәш Камалетдинов...

— Баҫыуҙарығыҙҙы ҡараным мин һеҙҙең... һеҙҙекенән күпкә мөшкөлөрәк хужалыҡтар бар...

— Ишмәмәт... йәнә бынау Ихсанбай. — Мирхәйҙәровтың йәнә бите тартышты. — Силсэүитме шул? Өйөр айғыры, быны кем!

Камалетдинов йәнә сыҙамай урынынан торҙо, ҡабалан-кмрһалан тәмәке ураны. Мирхәйҙәров уға тағы ниҙер эйтте, э Оынының уйҙар йыраҡта. Кемде хэтерләтте һуң иртән күргән ҡарт? Тукта, ҡартмы һуң ул? Ҡасан, ҡайҙа күрҙе һуң ул был йөҙҙө, ниңәһе бик таныш уға?..

Ишектән бурһыҡ битле, шағыр зәңгәр күҙле, шешмәк кабаҡлы кеше инде. Ихсанбай тигәндәре ошо ахыры. һуғыш иаҡытындағы колхоздың күрһәткестәрен ҡараны Камалетдинов. Насар түгелдәр. һәм, ғөмүмән, был колхоздың бөтә төрҙән дә планын үтәмәй ҡалған сағы булмаған. Ниңәһе окшамай һуң был кешенең Мирхэйҙәровка? Ошондай ныклы гыловиктар булмаһа, фронтта нисек булыр ине икән? Гыловик тигәндәй, ҡарамаҡҡа һауһаҡ ҡына күренгән был кеше һуғышта ниңә ҡатнашмаған? Күҙ төптәрендәге «гоҡтар»ға ҡарағанда йә бөйөрө, йә йөрәге бик сирлеме икән? Әллә...

— Ултырығыҙ, иптәш Моратов.

— Иҫәнлекме-һаулыҡмы, иптәш Камалетдинов? Ҡайһылай... эйтмэй-нитмәй генә йөрөйһөгөҙ...

— Үтеп барышлай мин... — тине Камалетдинов, күрешкэс, тамаҡ ҡырып. — Шунан, ниндэй ҡыйынлыҡтарың бар, иптәш Совет власы?

— Ҡыйынлыҡтар тип... әлегә зарланған юҡ. — Ихсанбай аш ығып папкаһына йәбеште. — Бына бында икенсе квартал момғаҡтары. Бына халыҡтан йыйылған май, һөт, быныһы иоморткa, йөн... Кәрәк, тиһәгеҙ... тағы тырыштырырбыҙ, питәш Камалетдинов.

— Ә халыҡ... бик йонсоумы?

— Халыҡ, — Ихсанбай Моратов елкәһен тырнап алды, — халыҡ ни... юҡлыҡты арыу күтәрә бит ул халыҡ. Халыҡ, иптәш Камалетдинов, барлыҡты күтәрә алмай.

— Ҡыҙыҡ, һы... — Камалетдинов көләмһерәне, — беҙ пимә... шул халыҡ арыу йәшәһен тип тырышабыҙ түгелме ми?

— Ызнамо шулай... — Ихсанбай тотлоҡто. Камалетдиновтың бер тешләүҙә шартлап ярыла торған сәтләүек түгел икәнен баштуҡ төшөндө ул, тик... ҡайһы

тошонан сатнай икән был? Шулай ҙа, бер байғош кеүек, яуапһыҙ ҡалыу оҡшамай. Уға һуғыштан ҡайтканы бирле ҡаныккан Мирхәйҙәров алдында һис һыр бирергә ярамай. Шуға күрә ул, бар ҡыйыулығын йыйып, Камалетдинов-сәтләүектең икенсе ҡабырғаһынан ҡапшап ҡарарға булды.

— Халыкты ҡайғыртҡас, планды төшөрәгеҙ инде беҙгә, иптэш Камалетдинов. Беҙ ни, һеҙ ни тиһәгеҙ — шул!

— Үкенескә ҡаршы, планды кәметә алмайбыҙ, иптэш Моратов. Башка хужалыктарҙа планды үтәү бик ауыр бара. һеҙгә район үҙэгендә тәжрибә уртаҡлашыу кәрәктер? Мин һеҙҙә бөгөн кискә тиклем ҡалам эле. Мал торлаҡтарының ҡышка әҙерлеген дә ҡарайһым бар һәм, ғөмүмән, хужалыҡ менән төптәнерәк танышырға ине иҫәп.

— Әләйһән, атты егеп килтерһендәр, эйтәйем. Һеҙҙеке... ял итһен, — Ихсанбай, урынынан тороп, ишеккә йүнэлде.

— Мин сәй ҡуйырға ҡушкайным. — Мирхәйҙәров, сирылып, Ихсанбайға ҡараны. — Беҙ сэй эскелэгэнсе, ат килтерәләр, әйтелгән.

Идара йортонан сыккас, Камалетдинов рэйескэ ҡырын күҙ ташланы:

— Силсәүитең менән артыҡ ҡороһоң, ағай.

— һәй… — Мирхәйҙәров ҡул һелтәне. — Тыл крысаһы! Бабник!..

— Күрһәткестәре... ялт итеп тора!

— Ете ҡат тирҙәрен генә түгел, ҡандарын һығып алғас...

— Шулай ҙа... уртаҡ тел тапканың якшы булыр ине. Әйткәндәй... — Камалетдиновтың күҙ алдында йәнә иртәнсәк күргән ҡара йөҙ пэйҙэ булды — Теге... һине саҡырып килтергән ҡарт кем булды ул?

— Сибәғәтме? Ну бына Ихсанбайҙың атаһы. Тимерсе.

— Тимерсе, тиһең...

— Килеп еттек, иптэш Камалетдинов. — Мирхәйҙәров өйҙөң ел ҡапкаһын асты. — Ошо инде минең донъя ишараты. Бисә! Сәрбиназ, самауырың әҙерме?

Баш һөйэгенән ҡото алынған Хашим, арыуын онотоп, уттан ҡаскан кеше кеүек атланы ла атланы. Хәҙер инде уға ауылға инергә лә күп ҡалмай. Ана, алда ужым арышы млшәреп ята. Ауыл өйҙәренең мөрйэләренән сыккан гөтөндәр ҙә күренгеләй. Ә тирәктәр ҡайҙа һуң? Бэй, әллэ был упың ауылы түгелме? Хашим башына бүтән төрлө уйҙар килеүҙән тынысланғандай булды. Шиктәре тарала төшөп, артына эйләнде.

— Бәй, Гөлбаныу...

Гөлбаныу йылмайҙы.

— Гөлбаныу, был мин... Хашим...

Хашимдың бөтә булмышын ҡыуаныс ялманы. Гөлбаныу... Гимәк, йылға буйында кисергәне... күргәне... мираж. I олбаныу... һис үҙгәрмәгән... Шул күҙҙәр, шул йылмайыу... Гик нинә ул артынан өндэшмәй килгән? Ҡайҙа барған, нимэ иплэп йөрөй?

— Гөлбаныу... — Хашим үҙенэ моңһоу ғына йылмайып горған ҡатынына ҡулын һуҙҙы. — Мин... һине ҡабат күрер осөн үлемдән ҡастым. Мин әжәлде ендем!

Әммэ ҡатынына атлыккан Хашим күҙ асып йоморға олгөргәнсе Гөлбаныу юҡ булды. Хашим аптырап тирэ-яғына караны:

— Гөлбаныу!!!

Юҡ, бер кем яуап бирмәне, үҙенең тауышы үҙенә яңғыраҡ булып ҡаҡлығып кире ҡайтты. Мираж... тағы мираж... Хашим, хэлһеҙләнеп, еүеш ергэ сүгэләне. Башта йөрэгэн •уыр һағыш ҡысты, әҙерәк торғас, зиһене томаланды. Ул үлгән... ул юҡ. Гөлбаныу үлгән!!! Хашим һыңкылдап илап ергә йөҙ түбән ҡапланды. Ул яткан ерҙә еүеш тупраҡлы каулан аҡтарылды, өҫтөнэ ауҙарылған әҙәм ҡайғыһы аҫтында калған йәш үләндәр был ауырлыҡка сыҙай алмай иҙыраны...

Юҡ, тормаясаҡ был ерҙән Хашим. Ул да ошонда тупраҡ булып иҙеләсәк, таш булып ҡатасаҡ, ҡар һыуы булып һеңәсәк. Ул, емеректәр аҫтында ҡалып үлгәндә, Гөлбаныуҙы ғағы бер күрер, уны бер ҡосаҡлар өсөн генә ғүмер һораны, Ошоғаса ҡылғандарынан тәүбәгә килде, кеше булып булмаһа, ЮШ булып, ҡош булып булмаһа, бер болот ҡына булып КЯЙтып булһа ла, Гөлбаныуҙы бер күрергә хыялланды...

- Гөлбаныу... Бәхиллек тэ алып ҡала алманым һинән... Оҙаҡ, оҙаҡ ҡайттым шул мин!..

— Хашим...

Хашим, берсә онотолоп, берсә һыктап, берсә иҙрәп яткан сағында ҡолаҡ төбөндэ генә ошо ауазды ишетте. Юҡ,

барыбер күҙен асмаясаҡ ул, аҫһа... тағы бөтәһе лә буш буласаҡ...

— Хашим...

— Ах, Гөлбаныу... көтмәгәнһең мине, бәхиллек тә алмай киткәнһең...

— Хашим... минең бәхиллегем — анау ике малайҙа... игеҙәктәрҙә...

— Хаттарыңдан... мин барыһын да төшөндөм, Гөлбаныу...

— Рәхмәт, Хашим...

Хашим, ҡапыл еңеләйгәндәй булды — өҫтөнә тауҙай өйөлгән ауырлыҡ, йөрәген ергә ҡаҙаҡлаған һағыш ҡайҙалыр осҡандай, уны ҡалдырғандай... Ул тороп ултырҙы. Ниндәйҙер көс уны йәшәргә, донъяға сабый күҙе менән ышанып ҡарарға саҡырғандай. Болот артынан ҡапыл килеп сыҡҡан ҡояш, бөтә булмышына, күңеленә йәшәрткес рух булып тулған бынау яҙғы һауа, ҡауландарҙы мондан дерелдәргә мәжбүр иткән күренмәгән ҡоштар һайрауы — барыһы ла уның күңелен шифалы тылсым менән тултырҙы, уны торорға, ауылына табан аҙымдарын йышайтырға мәжбүр итте.

Түбәне артылғас, юл баҫыу эсенә боролдо. Баҫыу осондағы ҡыуаҡты үттеме — ауыл. Тик... тирәктәр күренмәүе генә ғәжәп.

Ҡапыл Хашимдың күҙенә баҫыу ситендә нимәләрҙер ҡыймылдаған кеүек тойолдо. Ул, күҙҙәрен йомоп, башын һелкте, «...әллә тағы миражмы?» Күҙен асты, юҡ, һаман да шул урында ниҙер ҡыймылдай. Эт тиһәң, бәләкәйҙәр, бәрәскә лә оҡшамағандар. Йомран тиер инең, ҙурыраҡ былар, шөйлә өлкәнерәк. Теге йән эйәләре Хашимды шәйләнеләрме, тағын юҡ булдылар, ергә яттылармы, әллә соҡор-маҙарға төштөләрме? Ҡыҙыҡһыныу енде — Хашим, эре-эре аҙымлап, баҫыу аша туп-тура шунда йүнәлде.

Барып еткәс, үҙ күҙҙәренә үҙе ышанмай торҙо: ике малай булып сыҡты баяғы йән эйәләре. Уларҙың ҡап-ҡара батҡаҡҡа буялған йөҙҙәрендә яҙғы күктәй саф, зәп-зәңгәр ике күҙҙең баҙлап тороуын иҫәпкә алмаһаң, был ике йән эйәһен әҙәм балаһы тип атау ҙа ҡыйын ине.

— Нимә эшләйһегеҙ бында?

Малайҙарҙың береһе йөҙөн икенсеһененең арҡаһына ышыҡланы, ә икенсеһе, үҙ сиратында, ҡулындағы өҙөлгән арыш ҡыяҡтарына ҡарап тора бирҙе лә ҡысҡырып илап ебәрҙе.

— Сеү!.. Мин бит һеҙгә... теймәйем... Кем балалары һеҙ? Нинә килдегеҙ бында?

Малайҙар, бер-береһенә тотоношоп, баҫыуҙан китергә ынтылдылар, Хашим, ҡарҙан яңыраҡ эреселгән ыҙан буйҙарындағы эҙҙәргә ҡарап барыһын да төшөндө.

— Малайҙар... малайҙарым минең...

Хашимдың күҙҙәрен йәш әсеттерҙе, тамағына ҡурғаштай төйөн төйөрөлдө:

— Ҡәһәр төшһөн һуғышты уйлап сығарған бәндәләргә! Ҡәһәр төшһөн сабыйҙарҙы үлән ашарға мәжбүр иткән хаиндарға. — Ул ашҡынып ошо ике йән эйәһен ҡосағына алды, бысраҡ биттәренән алмаш-тилмәш үпте: йоҡа ғына һәләмәләре аша ҡуян йөрәгеләй типкән тамырҙарын тойоу уның күңелен бер үк ваҡытта йәлләү һәм яратыу менән тултырҙы. Ила, Хашим, ила... һуғышҡа тиклем илай белмәгән гоҡәббер бер зат булыуың өсөн түгәһе йәштәреңдән башы ғына әле был...

Йылғаға төшөп, үҙе лә йыуынып, малайҙарының да бит-ҡулдарын сайҡап алғас, Хашим юл тоҡсайын асты.

Унан берәр киҫәк икмәк, берәр шаҡмаҡ шәкәр сығарҙы. Малайҙар икмәкте шундуҡ ҡайыра тешләп алдылар, ә бына шәкәргә икмәк ашалып бөтһә лә оронмайҙар.

— Ә быныһын нинә ашамайһығыҙ?

— Ә ул... нимә? — Малайҙарҙың икеһе лә устарында ятҡан аҡ шаҡмаҡҡа төбәлде.

— Шәкәр.

— Ә уны... ашайҙармы? Әллә ялайҙармы?

— Ялайҙар ҙа, ашайҙар ҙа... һеҙҙең кеүек бәләкәс малайҙарға ул бик кәрәк ризыҡ.

Тәмләп-тәмләп шәкәр һурған малайҙарын етәкләп алғас, Хашимға йәнә көс ҡайтҡандай булды. Әйтерһең дә уның •ртында һуғышта кисергән ғазаптар ҙа, үлем дә, ауырыуҙар ҙа булмаған. Ул бына ошо кескәй ҡулдарҙың назын үҙ усында тоя-тоя барған да бара...

Әсәләре тураһында бер ауыҙ һүҙ менән һорашманы ул малайҙарҙан, үҙҙәренең дә кем малайҙары икәнен төбәшеп шрманы. Ауылға ингәс, башлап ҡайһы йортка атларға икән

тип тэ икеләнмәне — тура үҙҙәренә, Гөлбаныуҙың ел ҡапҡалы бәләкәс кенә өйөнә йүнәлде.

Малайҙар, устарындағы шәкәр валсыҡтарын ялай-ялай, өй артындағы эскәмйәлә ултырып ҡалды: Хашим, йөрәкһеп, ярһып һағыныуҙан йығылыр сиккә етеп, ишекте асты.

Урындыҡта нимәләр тегеп ултырған ҡатын-ҡыҙ башын күтәрҙе, шунан ипләп кенә, шыуып тигәндәй иҙәнгә төштө. Хашимға Гөлбаныу менән бер иш йөҙ баҡты. Эйе, шул уҡ йөҙ, шул уҡ кәүҙә, тик бының Гөлбаныу түгел икәненә ҡара күҙҙәре генә ишара яһай...

— Мәҙинә...

«Балам» тигән һүҙ әйтелмәне, Хашим был һүҙҙе тағы эсенә йотто. Элек, һуғышҡа тиклем үҙенең, ғәрсел, алама холҡо арҡаһында әйтә алманы был һүҙҙе... Имеш, Гөлбаныу Хашимға үҙ ирке менән бирелмәне, йөрәген асманы... Ә хәҙер... уның ҡаршыһында Хашим белгән нәҙек сираҡлы, сиңерткә кеүек еңел сабый урынына хәсрәттәрҙән яралған ҡарашлы етем ҡыҙ баҫып тора, ҡулында... эйе, ул яңылышмай, еткән ҡыҙ булған уның Мәҙинәһе.

— Мәҙинә... — Был юлы Хашимдың тауышы ҡарлығып сыҡты. Был тауышта Мәҙинәнең йөҙөнә яҙылған хәсрәттәрҙең Гөлбаныуҙы, әсәһен юғалтыуҙан килгәне лә ҡушылды. Ҡайғы уртаҡлашҡанда кем ҡосаҡлашмай ҙа, кем бер-беренә һыйынмай?!

— Атай! Атайым!.. — Мәҙинә үҙе таныш түгел ят яҡ еҫтәре сыҡҡан, ҡатҡыл, бер үк ваҡытта йомшаҡ кәүҙәгә һыйынып үкһеп ебәрҙе...

Өсөнсө бүлек

Фәүзиә, Хашим ҡайтҡанды ишеткәс, йәнә тыныслығын юйҙы. Ай-һай холоҡһоҙ әҙәмгә тап булды уның Гөлбаныуы. Хәҙер килеп анау сабыйҙарҙы ҡыҙғана. Бик рәнйетер инде уларҙы Хашим, бик ҡағыр... Улай тиһәң, ниңә әле Хашим һуғыштан тура үҙ йортона ҡайтманы? Ата-әсәһе донъя ҡуйһа ла, мал-тыуарын Зарифа ҡарындашы үҙенә күсереп хужа булып алһа ла, нигеҙе тора бит, әлмисаҡтағы ҡарағастан ҡоршалған йорт әллә нисә Хашимды ҡартайтып, гүр эйәһе яһар әле.

Фәүзиә икеләнде, уйҙарының осона сыға алмай аҙапланды, Гөлбаныуҙан ҡалған ике сабый ғына етмәгәйне уның былай ҙа теткеләнеп бөткән йөрәгенә. Ней шул сабыйҙар донъяға килгәне бирле Ихсанбайы холоҡһоҙланды. Үҙе генә түгел, Сәбиләһе аша күҙәттерә Ихсанбай әсәһе артынан. Өйҙән берәй һыныҡ икмәк, берәй тәгәс ҡатыҡ яҙлығып ҡараһын — Ихсанбай күҙенә осраған бер нәмәне ната-ҡыра. һай, балалар... Бармаҡтар тиң түгел дэ бит, мәгәр кайһынынһын тешләһәң дэ ауырта шул... Сэбиләһе лә, ҡәйнәм дә ҡәйнәм тип торған кеүек тэ бит — торғаны менэн ошаҡ, торғаны шымсы.

Фәүзиә, урам ашаһында ғына торған ейэнсэренең хәлен сцеләйтә алмауына уфтанып, ҡара янып ултыра. Ул уйлаған арала табалағы һары майға шыжлаған күмәс ҡара янып көйә башлаған әллә? Уф!..

Ул арала аласыҡ ишеге асылды.

— Нимә көйҙөрәһең унда? — Боролоп ҡарамаһа ла, күрә Фәүзиә: улының йөҙө был мәлдә көйгән табикмәктән дә карараҡ икәнен. Мәгәр Фәүзиә элеккесә үҙенең был йортта хужа икәнен онотмормаҫҡа тырыша. Ихсанбай әсәһе менән... иҫәпләшергә тейеш!

— Ҡашығаяҡ тирәһендә сыуалыу һинең эшеңме, Ихсанбай?

— Бында... был донъяла — бөтәһе лә минең эшем. Гошөндөңмө? — Ихсанбай был мәлдә әсәһенә яҡын уҡ килеп баҫты. — Ҡайҙа теге... ҡарт алашаң?!

Фәүзиә, арҡаһы менән Ихсанбайҙан килгән уҫал көстө кжһа ла, яуап бирергә ашыҡманы, көйгән күмәс урынына иңыһын һалғас, ҡул һырты менән күҙенә төшөп барған яулығын рәтләне, усаҡ ҡаршыһына ҡуйылған тэпэш ултырғысҡа ботон киреп, йәтешләп ултырып алды.

— Нимә өндәшмәйһең? Ҡарт ҡайҙа, тием!

— һин һораған ҡарттың өндәшер исеме бар, Ихсанбай уиым.

— Төк-көрҙөм мин уның исеменә. — Ихсанбай лас мпергәнсе аласыҡ иҙәненә төкөрөп өҫтөнә һеңгереп ҡуйҙы. Бөтмәҫ һеҙҙең исемдәр!..

— Исемдәрҙе беҙ уйлап сығарманыҡ, беҙ ҡәберебеҙгә лә алып китмәбеҙ!

— һин нимә... минең... түҙемде һынайһың... Үҙенцең... ҡарт айғырынды яҡлайһыңмы?!

— Ипләп, Ихсанбай! Атайың менән беҙҙең түшәк бүлешмәгәнгә ни заман! һин минең... ырыҫымдан көләһең!

— Ха-ха-ха! Ырыҫы... һеҙҙең ырыҫығыҙҙы, эсәкәй, р-революция тигән ас бүре йотҡан. Белдеңме? Ә ҡарт шайтаның... бөгөн үк ҡырған һаҡалын кире йәбештереп ҡуймаһа... минэн яҡшылыҡ көтмәһен!

Ихсанбай сыҡты. Фәүзиә, аласыҡ тәҙрәһенән унын лапаҫ аҫтына инеп киткәнен күрҙе. Йә хоҙай! Тағы ниҙәр күрер унын башы! Ах, Ихсанбай, иҫерек баштан атаңа бәйләнһән, бөлдөң бит, бөттөң!

Ул арала ишектән Сибәғәт тә килеп инде. Нимәһе үҙгәргән һуң бынын? Иҫерек тә түгел. Ә-ә... һаҡалы! Ысынлап та ҡырып ташлаған бит был һаҡалын!..

— һаҡалың... һаҡалынды ниңә ҡырҙың, ҡарт ишәк?!

— Бөттө! Етте! Сибәғәт срогын тултырҙы!

— Атаһы... — Фәүзиә, быуыны ҡороп иҙәнгә йөгәнәклэне. — һуң... минең, яңағындағы... тәренде ни тип уйланың, атаһы?!

— Етте, бөттө! Срогым сыҡты. Туйҙым! Ҡурҡып йәшәүҙән, — уң ҡулының һырты менән боғаҙын ышҡыны, — мин... бына былай туйҙым!!!

— Сеү... Тауышланма, зинһар... Ихсанбай... өйҙә икәненде... белмәһен...

— Ха-ха-ха! Минең баш... ғәзиз түгел һиңә, Барсынбикә... һиңэ... Ихсанбайындың... шул сүбәк башындың башы ғәзиз.

— Ул... һинең ҡаның... Ул беҙҙең тоҡом!

— Тоҡом... Тоҡом! Ха-ха-ха!!! Ана, тоҡомдо күк бүре лә үрсетә! Ха-ха-ха!

— һин... аҡылындан яҙғанһың, Диңгеҙхан!

— Во! Хан мин, хан! Ханмын! Тик хәҙер минең ҡулымдан дан да, шөһрәт тэ, мал да, алтын да киткән, әммә мнн барыбер ханмын! Үҙ ғүмеремдең, үҙ яҙмышымдың ханы мин! Ә һин ҡол, Барсынбикә... Ихсанбайындын, йолаларындың, күршеләреңдең, килендәреңдең... хатта төштәреңдең ҡолo һин...

— һине сихырлағандар, Сибәғәт... һине...

— Сихырламанылар мине, Барсынбикэ. Киреһенсә, булған сихырымды ҡайтарҙылар. Мин ҡайтанан тыуҙым донъяға... Йәшәргә тыуҙым.

— Сеү!.. Тукта...

Ихсанбай ялан кәртәләге атын эйәрләп, баҫыуҙарҙы байкап әйлэнергә сыҡты. Был Камалетдинов күберәк игенселеккэ иғтибар йүнәлтергэ оҡшай. Шильма. Яланды бер үҙе генә килеп ҡарап йөрөгән. Мирхәйҙәров — алйот. Кешене күп тыңлай. Етэксе булған кеше эҙәмде йэлләнеме — бөттө, тигән һүҙ ул. Халыкты ҡайғыртһаң, юғарылағы түрәләргә ярап булмай. Шуны бит төшөнөр кәрәк — түрә өҫтөндә түрә ултыра. Кем нығыраҡ быуырға, һығырға ярата — шул юғарыраҡ үрләй. Их, бына Ихсанбай килештерер ине! Күрмәгәндәрен күрһэтер ине! Йәл, белеме етеңкерәмәй. Атаһы менән әсәһенең берҙән-бер балаһын ситкә ебәреүҙән куркыуҙан ғына булды был. Хәйер, Ихсанбай үҙе лә ата-әсә ояһынан ситкә китергә талпынманы. Талпыныу, тигәс тә — унын өсөн ҡанат кәрәк бит, ә Ихсанбайҙың ҡанаты булманы ул. Үсмэне. һәр аҙымын: «Кем икәненде белеп ҡалмаһындар, **Сеү,** ишетерҙәр, сағырҙар!» — тип иҫкәртеп торғас, ҡанат үҫә **гиме?!** Хәҙер бына Мирхәйҙәров... Ошо йәшенә тиклем үҙенә сл-ямғыр тейгеҙмэй йәшэгән Ихсанбай тарамыш Мирхэйҙәровка бирешерме? Ә атаһысы... Күп түҙҙе былай ҙа Пхсанбай атаһының иҫерек килеш күрһэткэн тамашаһына. Ярай, һуғыш мэлендә элеп алып, һелкеп һалырлыҡ ирҙәр булманы, ә хәҙер... Хәҙер донъя башҡаса... Ҡарт аҙҙы... үҙ башына ҡоторона. Хәҙер ул, атай булыуҙан бигерәк, ер оҫтөндә йэшәгән артыҡ бер шаһит. Шаһиттарҙан ни тиклем гиҙерэк ҡотолһа, Ихсанбай шул тиклем оҙағыраҡ, шул шклем тынысыраҡ йәшәйәсәк...

Ат шаптырлап сит-боттары ҡытырмаҡ боҙ менән капланған йылғаны кисеп сыҡты. Ҡыуаклыкты үткәс, Ихсанбайҙың ҡаршыһына ужым арышы сәселгән ер йәйелде. Лрыш арыу быйыл. Урыны-урыны менән һыу йыйылып нткан уйпаттарҙа тонсоҡкан ужымды иҫәпкә алмағанда,

башкаһы теремек. Ул, атынан төшөп, баҫыу ситенә килде. Тукта, баҫыуҙың өй урынындай ерен нимә шулай тапаған? Мал эҙенә лә оҡшамаған... эллә эт көтөүе ҡарыкканда аунаған? Юк, юк... бэй, бынау ялан аяк бала эҙҙәре... Ялан аяк... Ҡар китеп тә бөтмәгәндә кем балаһын ялан аяк, етмәһә баҫыуға сығарһын?..

Ихсанбай, сүкәйеп ултырып алып эҙ тикшергән еренән ҡапыл ырғып торҙо: «Мәҙинә! Мәҙинә көсөктәре!»

Ул, тиҙ генә һыбай атланып, атының башын ауылға шакарҙы ла, шпорлы итектәре менән хайуандың ҡабырғаһына төрттө һәм, күҙенә аҡ-ҡара күренмәй, ауыл яғына сапты...

Мәҙинә, ферманан сыккас, силос, тиҙәк, һалам, ер еҫе аңҡыған һауаны һулай бирәйем, тигән һымаҡ, ауыл яғына ыңғайламайыраҡ тора бирҙе.

һауынсылар ҙа, ана, кеме берэмлэп, кеме икешәрләп ҡайта башланы. Бөгөн беренсе тапкыр уның эштән ҡайтыуын оло йән эйәһе көтә. Атаһы. Ҡайһылай ирмэк инде — атаһы. Атай. Бала сағынан уға бүре күҙҙәре менән сәс аҫтынан ҡарап үҫкәс, Мәҙинә уға «атай» тип өндәшкәнен дә хәтерләмәй. Әсәһен тукмағанын онотор лоҡмо? Бала күңеленә бит иң сағыу күренештәр генә уйыла. Мәҙинә ғәйепләме ни хәтере уның Хашимды яман яктан ҡылыкһырлаған күренештәрҙе һаклағанға?

Кисәге кис тэ бик көсөргәнешле булды. Хашим малайҙарына ағастан юнып аттар, арбалар эшләп бөттө, сәй эскәс, икеһен ике яғына һалып, йоҡларға ятты. Мәҙинә лә урындыҡтың бер ситенә генә үҙенә урын йәйҙе, лэкин күҙе йоҡоға талманы. Тартыныуҙан сисенмәй генә яткас, тәне йүнләп ял да итмәне.

Хашим да, сөйгә яткан кеүек, әйләнде лә тулғанды. Бер сак, тороп усаҡ башын асып, тәмәке быҫкытты. Мәҙинә уның ах та ух килеп көрһөнгәнен таңға тиклем ишетеп ятты...

Артабан нисек йәшәр улар икеһе бер ҡыйыҡ аҫтында? Етмәһә, эүәлге кеүек, эсә башлаһа? Юк, башы етмәй Мәҙинәнең, осона сыға алмай ул уйҙарының. Шулай ҙа ҡайтырға кәрәк. Картуф булһа ла бешереп, тамаҡты ялғар кәрәк, кисә бит уларға күршеһе, Хашимды йэллэптер инде, бер биҙрә картуф индерҙе...

Мәҙинә өйөнэ килеп еткэндә, ел ҡапка шар асыҡ ине. Бағана төбөндә аҡ тапсыктар ҙа күренә. Ә-ә... Атаһы серегэн бағананың осон бысып, яңынан ултырткан икэн. Хәйерлегә булһын, ерҙең иплэп ирегәнен дә көтмэгэн...

— Мэҙинэ! — Ҡолаҡ төбөндә илэмһеҙ яңғыраған һөрәндән, йәнә таптыр-топтор иткән ат тояғы тауышынан Мэҙинэ сак һуштан яҙманы.

— Мэҙинә! — Аттан төшөп, сыбыртҡыһын болғап, күҙҙәрен алартып, ҡыҙыҡайға ул һуғырҙан-был һуғырҙан скеренэ башланы Ихсанбай. — һин, ҡәбәхәт, көсөктәренде иинә ужымға һөслөтәһең? Нимә, эллә шуларҙы быҙау кортәһенә бикләп ҡуйғанды, йә булмаһа бесэй балаһы урынына һығып үлтергәнде көтәһеңме?

— Ах... Ихсанбай ағай! Мин... ҡайҙан беләйем?!

— Ах, һин белмәйһең! Көсөктәреңде тыя белмәйһең! — Ихсанбайҙың Мәҙинәнең муйынына һонолған ҡулы иимәнендер шарт итеп бәрелеүенэн сабылған үлэн кеүек һалынып төштө.

— Ҡәбәхәт... — Ер аҫтынан пәйҙэ булғандай килеп сыккан Хашим икенсе бер һелтәүендэ Ихсанбайҙы ергэ салкатан яткырҙы. — Мин һине, шакшы эҙәм, һығып түгел, шпкеслэп үлтерэм хәҙер!

— Ебәр... Үҙ башына, үҙ башына! — Хашим аяктары аҫтында бөгәрләнеп тәгәрәп йөрөгән Ихсанбай, ҡапыл үрелеп, Хашимды ботонан тартты, тегеһе уның өҫтөнә ҡолай яҙҙы, мэгэр атланып алырға өлгөрөп ҡалды:

— Үлтерәм! — Хашимдың ҡыпһыуырҙай устары эсендэ калған муйынын инде хәҙер Ихсанбай ҡыбырлата ла алмай. Бына уның сикә тамырҙары бармаҡ йыуанлығы булып бүртенде, ирендәре салшайып, зәңгәр күҙҙәре ҡурғаштай аларып аңшайҙы. — Харам йәненцең донъяла йәшәүенә капут килде. Ихсанбай! Ғазраилың, эжэлең килде!

Былар эргәһендә торған Мәҙинэ таш һын кеүек ҡатты, кыскыра ла, ҡыбырлай ҙа алмай.

Шул сак Мәҙинәнең күҙ алдында әллә нимә булды: Хашим башта Ихсанбайҙы һыккан ҡулдарына, тэү

ги.

күргәндәге һымаҡ, аптырап ҡараны, унан иплəп-иплəп Ихсанбайҙы ысҡындыра, үҙе артка сигенә башланы, бына ул ҡарашын иплəп кенә юғары күтәрҙе, әйтерһең дә кемделер күрҙе, ксмдер уны был әҙәмдең йәнен ҡыйыуҙан иплəп кенə араланы.

Күпмелер яткас, Ихсанбай иҫенә килде. Йәнәшәһендә яткан сыбыртҡыһын һәрмәп усына алды ла, әжэл менән алышҡанда мул ғына еүешлэнеп өлгөргөн арты менән тышка мүкәйләне...

Фәүзиә-Барсынбикә йылға буйына төшөргә була күнәктәрен алып сығыуға, ҡаршыһына килене килеп баҫты:

— Аһ, аһ! Иртән иртүк кенэ һыуға барғайнымсы!

Фәүзиә килененә ҡаш аҫтынан һөҙөп ҡараны:

— Минең һиңә, һыу килтермэйһең, тигәнем юҡ.

— Ҡана һуң үҙем генэ барайым! — Фәүзиә килененең ниңә ныҡышҡанын якшы аңлай. Ихсанбай ҡоторта, ҡарсыктың һәр аҙымын улы ҡарауыллата. Йәнәһе, Фэүзиә Гөлбаныу көсөктэренә аҙыҡ ташый! Әле лә Фэүзиә ҡуйынына ике киҫәк икмәк тыккан, арыу ғына итеп май ҙа һылаған. Ҡайһылай кэнтэй сэүек кеүек әсе тешләргә тора уны бынау тарамыш килене! Кем арҡаһында Ихсанбайға барып байманда йәшәгәнен онотто байғошоң. Фәүзиә Ихсанбайҙан да ҡурҡмай, тик элеге ғаилэлә оло ғауға-ҡара яу сығармайым, тип кенә телен тешләй. Шуға күрә ул был юлы ла килененә, эсенән һыҙылһа ла:

— һинең былай ҙа эшең күп бит. Мин күнәктәрҙең тышын ҡыҙыл балсыҡ менән бәләкәй ышҡыштырып килэйем әле, — тиеү менән сикләнде.

— Аһ, аһ... Улың тағы «карт ҡәйнәнде һыуға ебәрәһең» тип орошор инде. Холҡон беләң дә инде.

— Холоҡ кемдә юк?! — Фәүзиә, көйәнтәһен бер ҡулына, биҙрәләрен икенсе ҡулына тотоп, ҡапҡанан сыкты.

Их, ҡана һуң Гөлбаныуҙың сабыйҙары һыу буйындараҡ йөрөһә. Нисәмә тапкыр алып сыккан ризығын бирэ алмай ҡайтканы бар. Хашим ҡайткан, тигән хәбәр ҙә һөйөндөрмэне уны. Үҙ ҡаны Мәҙинәне ҡағыпмы-каккан бәндә бынау ике

ыйҙы ни хэл түҙер? Гөлбаныу... Ниҙэр кисереп йәшәгәнеңде белә алмай ҙа ҡалдым шул... Ниндәй генэ гонаһ мюмлоғонан яралды икэн был сабыйҙар?!

Иылғаға килеп етеп, баҫмаға күҙ һалыуы булды, яр |ҫтынан Шәңгәрәйҙең йомро ҡак башы күренде. Абау! Әллә Кейеме-ние менән һыу эсендә йөрөй...

- Нишләйһең ул, Шәңгэрәй? — Ҡото алынған Фәүзиэ аҫка әйелде. — Был нишләүең һинең, ә, алла бәндәһе?

Шәңгәрәй, шаптыр-шоптор булып һыуҙан килеп сыкты, үҙенең теше-тешкэ теймэй ҡалтырай.

- Ы! Әйтмәйем. Әйтһәм, һин Ихшанбайыңа осаҡтайһың!

- Ай эттэгенәһе!.. Ҡасан минен ошаҡлашканым бар?

Ы! һин бит унын... эшәһе!

– Булһасы... Унын үҙ тормошо, үҙ мэйеле...

— Икмэк бирһәң, музит эйтермен...

— Бирәм, бирәм!

—Ә һин хәҙер үк бир...

Фәүзиэ ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырған һыныктарҙың береһен \ı а һуҙҙы.

- Мә, Шәңгэрәй, һинән ризыҡ йәлләгәнем юк.

— һинең иссу бер телемең бар.

— Ҡайҙан белдең?

- Беләм. Береһе Йәнтимергэ, иссу береһе Биктимергә...

— Нимә, үҙҙәре әйтәме?

Ы!

— Ә кем әйтә?

– Әйтмәй.

- Ә ҡайҙан белэң?

— Белгәнгэ беләм.

Ә ниңә икмэкте ашамай һалып ҡуйҙың?

Икеншеһен дэ бир ҙә — асармын.

- Ай, Шәңгэрәй... Бәлки, һин бирерһең малайҙарға?

Ыжнамо бирәм. Мин асатмаһам, улар күптән, — Шлнгорәй эйәк осо менән зыяратҡа ымланы. — Сунда ЦЫрҙар ине.

– Әлдә һин барһың... — Фәүзиә ошо минутта был дәү башлы, бысраҡ битле эҙәмдең арҡаһынан һөйгөһө килде. Бахыр, ул да әҙәм балаһы бит. Әсэнән тыуған. Хәҙер шарифала эт типкеһендә йөрөй.

— Атайындан... хәбәр юкмы? — Фәүзиэнең һорауын Шәңгәрәй ҡолағына ла элмәне, үҙенекен һөйләүен белде.

— Улар бит минеке! Мин уларҙың атаһы!

— Ҡуй, Хашим ишетһә... Беләһендер: ҡайтҡан бит!..

— Исетһен, Мин Гөлбаныуҙы Хасимдан һуғышҡа тиктем үк бер яртыға һатып алдым. Малайҙар — минеке! Хасимға — осо! — Шәңгәрәй улар яғына ҡукыш төбәне.

— Ай, алла бәндәһе... Дорфа һөйләйһең! Хоҙайҙан ҡурҡыр инең!..

— Һин үҙең бер ҙә алла тип тормайһың!

— Ниңә?

— Ниңэ, ниңә... Алланан ҡурҡҡаш, ниңэ кеселәргә мөһөр басаң?

— Ауыҙындан ел алһын, Шәңгәрәй! Кемгэ ниндэй мөһөр баҫҡаным бар?

———Атаҡ... иреңэ, Йәнтимергэ, Биктимергэ. һинең икмэгенде асамайым суға... Асаһам, миңә лэ йоғоп ҡуйыр. Ана һин уларға асатаң гел, суға уларҙың бер ис мөһөрө бар, тәре һымаҡ.

— Гонаһ шомлоғо икәнһең, Шәңгәрәй!

— Ы! Мин... мин улай түгел! Мин улай булһам, Гөлбаныуҙы ҡотҡарыр инем!

— һин... Гөлбаныуҙы... — Фэүзиэ, хәлһеҙләнеп китте, маңлайына һалҡын тир бэреп сыҡты. — Үлде бит инде ул! Һин нимэ һөйләйһең?!

— Ы! Үлмэне. Үлһэ... ҡайҙа уның басы? һөйэктәрен күрҙеңме?

— Ул йыл ҡар ҡалын булды... Ҡар һыуы көслө булды, хатта бүрәнэлэрҙе ағыҙып алып китте...

— Осо йылғаға... Тэңребирҙе тигэн эүлиә ҡылышын, йэсергән. Тапмаған уны берәү ҙә. Суны тапһам, Гөлбаныуҙы ҡотҡарам!

— Нисек... Ул бит зинданға ябылмаған!

— Ябылған! Ул... Ихшанбайындың эшендә ултыра...

— Кит, Шэңгәрэй... кит!..

— Китәм... Йә әтү миңә лә мөһөр баҫып ҡуйырһың, Шибәғэттеке һымаҡ — битемэ... — икмәк һыныҡтарын ҡабалан-ҡорһалан ала һалып, кейемдэренән һыу ағыҙып китеп барған Шэңгәрэй Фэүзиэнең өнөмө, әллә көпә-көндөҙ күргэн төшөмө?

I нрәклегә яҙҙың быйыл иртэ килеүе кемделер һөйөндөрҙө, кемделер көйөндөрҙө. Бесәне наҡыҫ булған Кроҫтиән өсөн, элбиттә, был оло ҡыуаныс. Халыҡ малын күптән инде иртүк сығарып ебәрә. Әйҙә ҡурпы утлап, көйөш шлырлыҡ тамаҡ ялғап йөрөп ҡайтһындар. Хужалар өсөн Юбиғөттең ваҡытынан алда уяныуы шәп түгел: орлоҡ гяҙартылып бөтмэгэн, аттар йонсоу, һыйыр егеү ҙә эш түгел.

Ихсанбай ошоларҙан үҙенә нисек тэ файҙа яһарға тейеш. Ввтө район буйынса хәл бер ишерэк инде ул. Кемдэ артыҡ көс, ксмдэ артыҡ орлоҡ бар, тиһең? Әммэ белә ул: ҡабан ны ны ҡайһылай ҙа ҡалъялы була, эҙ-мэҙ тырышлыҡ күрһәтһәң, абруйыңды нығытып ҡалып була...

Ул, мунсанан сыҡкас, өйөнэ инеп китмэй, болдорона ултырҙы. Яҙ ҡояшының йомарт нурына, тэнгэ сихәт биреп орı эн йомшаҡ еленә ирәйеп, аяҡтарын һуҙып ебәрҙе. Ана бит ı и ро-яҡ ҡайһылай йэмлэнде: сыйырсығы-турғайы ı мркылдаша, кәрниз буйҙарында тыҡылдашып, бер-береһен Кыуып, күгэрсендәр тормош көтә; Күкбүре, ҡояшҡа иҙерэп, урам уртаһына йэйрәгән, имсәктәре буйлап һуҙылған алты көсөгө, инәлэренең өнһөҙ буйһоноуынан файҙаланып, ға мша-сыйыша тәғәм йыя; э әтәс ҡайһылай фырт ҡылана! Кикрек һытылыр сиккә етеп ҡыҙарған, э ҡауырыйҙарына ҡараһаң, күҙ ҡамаша. Ихсанбай үҙенә был әтәстең гел ҡырынырак, яратмай ҡарауын һиҙә. Әле лә ул, Ихсанбайҙы күрıәс, алъюҫыҡҡа ҡанат ҡағып донъя ярып ҡысҡырып алды. Йәнәһе, күр: һин кем дә, мин кем. Унан күккә ҡарап ҡыртыш күҙен хәйләле шекәрэ менән ҡаплап, төйлөгән күренмәһә лә ҡурҡыныс янауҙы иҫкәрткән тауыш менән көтөрлэп ҡуйҙы. Б лэ, ҡэһәрең: бындай тауыш тауыҡтарҙы ышыҡҡараҡ, ҡойма ш ынараҡ йыйыштыра, әтәскә нимә, шуны ғына андып тора. Әле ло ул быны Ихсанбайҙың күҙ алдында оло бер кинәнес

ıн башҡарҙы. Башҡарыу менэн ҡоймаға менде, тағы елпенеп ҡысҡырып алды, ә үҙенең ике күҙ — күрше ıында. Күптәндән һағалай был дуңғыҙ шуларҙы. | уршеләре былтыр, ҡарт әтәсен һуйып, йәште ҡалдырҙы, шуның көсөн самалай алмай йөрөй был. Ҡанға туҙып һуı ышыр көндәре алда әле был икәүҙең...

Их, ошо ҡоштар, хайуандар донъяhы шикелле бер яҡлы, бер ҡатлы ғына булhа икән тормошоң... Сүп өҫтөнә — сүмәлә. Бына Хашимдың тере ҡалыуын әйт эле. hуғыш бөткәс, ике йыл тигәндә ҡайтып төшөү ни бысағыма кәрәк булды? Ҡайтып төшөү менән Ихсанбайҙы ҡалаҡ hөйәгенә hалды... Мәҙинәне яҡлайым тип кенә эшләнеме ул быны... әллә берәйhе игеҙәктәрҙең... «тарихын» татылдап өлгөрҙөмө? Ихсанбайға ҡалhа, ул серҙе Гөлбаныу үҙе менән теге донъяға алып киткән булырға тейеш ине лә...

Атаhының ҡартайған көнөндә тыртайыуы, аҡылдан яҙыуы ни тағын? Тормош бит. Үрелгән септә кеүек: осон бер табып алhаң, хәҙер hүтелергә тора. Атай тип ҡарап тороп буламы бындай осраҡта?

Әй-йе... төрлө яҡтан килтереп ҡыҫты уны тормош. Мирхәйҙәров шул ҡоршауҙың иң тарына, иң нәҙегенә оҡшаған. hиҙә Ихсанбай: уның менән асыҡтан-асыҡ көрәшеү ҡурҡыныс. Таянғаны ҡайраҡ таш түгел шул Ихсанбайҙың, э ҡумырыҡ, бына-бына убам, тип сайҡалып ятҡан күтер. Шулай булмаhа, ике ҡабып бер йотор ине ул шул маңҡа малайҙы!

Мунса ишегенең шығырҙағанына башын күтәрҙе Ихсанбай. Күрәhең, Сәбилә сығып килә. Бисәhенең яланғас hынын күҙ алдына килтереүҙән ул танауын сыйырылдырҙы. Сәбилә Ихсанбай өсөн яҙмыштың бер ормошо. Ауыртҡан еренә — йән еренә килтереп бәреүе. Шул әҙәм рәүешлерәк булhа, Ихсанбай Зарифаның ҡурайына бейер инеме? Гөлбаныу юҡ. Зарифа — ит үлтереү сараhы. Ә күңел буп-буш.

Шул мәл ялан кәртәhенең башында ҡот осмалы зилзилә ҡупты. Әhә! Әтәстәр hуғыша! Күрәhең, күршенең йәш әтәсе Ихсанбай әтәсенең әҙәпhеҙ мин-минлек менән үҙ тауыҡтарын күҙләүенән тамам биҙеп, үҙе hикереп менгән ситәнгә. Ихсанбай был hуғыштың үҙ әтәсенең еңелеүе, йә зәғифләнеүе менән бөтөү ихтималын тойhа ла, күрше әтәсен ҡыуманы, араларына инмәне. Нинә? hуғышhындар! Кем еңә, шул ота. Ә кем ота — шул донъяньщ кендегенэн тота...

Хашим Ихсанбай менән булған хәлдән hуң хәтhеҙ ваҡыт зиhенен туплай алмай аҙапланды. Ҡапыл ярhып, ҡыҙып китеүенең сәбәбен төшөнә лэ, төшөнмәй ҙә кеүек. Элекке

иҫәп-хисап ҡайтарыуымы был, әллә уға яңыларының өҫтәлеүеме... Дөрөҫөн әйткәндә, Хашим был ике сабыйҙың юнъяға килеүе хаҡында бер ни белмәй. Тик күңеле бер номәгә ныҡ ышана: Гөлбаныу менән үҙенең малайҙары <>\ нырға тейеш ине. Хоҙай Хашимдың теләгән ишеткән — бер юлы икәү итеп биргән. Ә хоҙайҙың биреү юлдарын да, I араhын да аңлау мөмкин түгел. Берлинда, емеректәр араhында ҡалып, фани донъя менән хушлашҡан бер мәлендә, Кашим иҫәбе буйынса, айҙан ашыуға hуҙылған төшөндә күргән ҡарт та бит шулай тигәйне. «Ҡайтыуынды ике игеҙ йән, ике хоҙай бәндәhе көтөп торор — hин уларҙы яҙмыштан бүләк итеп ҡабул ҡыл hәм ярат!»

Күп нәмәләр әйткәйне кеүек ул ҡарт Хашимға, аҙаҡ, карабаларҙы аҡтарғанда ҡапыл ауыртыу тойоу уны кире фани донъяға ҡайтарғас, барыhы ла онотолған кеүек булды. Унан hуң ике йыл буйы госпиталдәрҙә ятыу, hанhыҙ операциялар, яңынан баҡыйлыҡ менән фанилыҡ араhына омәттән күпер hалыуҙар, тетрәнеүҙәр, кире төңөлөүҙәр — берене лә ул ҡарый әйткәндәрҙе хәтерендә тергеҙә ;шмағайны. Ихсанбай менән булған алыштан hуң әллә шшдәй ҡөҙрәт менән шул тылсым эйэhенең әйткәндәре усаҡ гөөндәге ҡуҙҙай емелдәй башланы. Хәтерендә, Хашим ул пмитәрендә үҙен оҙон аҡ күлдәк кейгән малай рәүешендә күрҙе. Ул ҡарыйҙан: «Ауылда бөтә йәнем-тәнем менән күрэ алмаған кешем ҡалды. Ғаиләмде аҡhыҙ итеп, аслыҡҡа дусар цткән шул мәлғүн, ун икеhе лә тулмаған ҡыҙымды ситкә ш ікә ҡыуырға маташҡан. Ризығым бөтмәй, илгә ҡайтып, \п|.|ң менән осрашhам, эсемдә янған утымды ни әмәлдәр м.|лып баҫырмын?» — тип hорағайны. Яуап ҡыҫҡа булды: «Унда hине ҡатыныңдың рухы көтә. Сабыйҙарҙы ярат, катыныңдың рухы шуларҙы ҡурсый!»

Ул рухтың ниндәй көскә эйә булыуын кисә аңланы \;нпим: Ихсанбайҙы hыҡҡан ҡулдарында ҡапыл ҡатын-ҡыҙ к) цары пәйҙә булды. Мәҙинә килеп тоттомо, тип башын күтәреүгә Гөлбаныуҙы күрҙе. Аптырауҙан, тетрәнеүҙән Кшпим Ихсанбайҙың муйынын әкренләп бушата барғанын ЮЙҙо. Ошоға тиклем hис бер нәмәгә ышанмай, hуғышҡа гиклем ҡалала типтереп йәшәгән Хашимдың әле лә быға hүҫсле ышанып етмәй. Бөтөнләй ышанмай ҡуйыр ине, үҙен фирле лә тоймай. Йәнә үҙенең айҙан ашыу харабалар

араһында ятҡандан һуң терелеүен, һуҡырайғандан һуң ҡабат күреүен, һаңғырауланғандан һуң ишетеүен уйлай ҙа, был донъяның серлелек, тылсым менән солғанып алыныуын күңеле менән нығыраҡ тоя. Бына эле ул район үҙәгенә йыйына. Камалетдиновтың үҙенә инеп, хәл-әхүәлен һөйләмәксе. Хашим таланған малын кире ҡайтарырға, бынау сабыйҙарҙы, ниһайәт, аҡҡа тейендерергә тейеш. Моғайын, тынларҙар уны, аңларҙар. Әммә зиһене уның бер нәмәне төшөнмәйэсәк: Гөлбаныуҙың балаларын аслыҡтан үлергә дусар итеү кем өсөн, ни өсөн кэрэк булды икэн?!

Хэйер, алда ғүмере булһа, был һорауына ла яуап табыр. Тегe саҡ ҡарт әйтте бит: «Бэндәнән һорау алма — яуап үҙе килер. Ғүмерең ағышы — аҡылың табышы булыр».

Хашим шул минутта уҡ юлға әҙерләнэ башланы: биштәренә көрөшкәһен, ҡалағын, фляғаһын һалды. Бәлэкәй генэ сапер көрэген дә алды. Нисэмэ госпиталдән госпиталгэ күскэндә лә юғалтмаған һалдат монаятын үҙе менән алмаһа, йә юлы уңмаç. Унан һуң бит әле Тәңребирҙе йылғаһы үрендэ күргән баш һөйәге тынғы бирмәй уға...

Фәүзиэгә һыу буйында Шәңгәрәйҙең әйткәндәре тынғы бирмәй. Бигерәк тэ уның «мөһөр» тигәне. Сабыйҙарҙа Сибәғэттеке ише миң булыуға аптырамай ул: олаталарынан бала ни мираç итмәç? Тик бына уның шул турала һөйләп йөрөүе. Ә Ихсанбайҙың эсен телергә ҡылыс эҙләүе ни һуң? Бәндә булғас, бәндәлеген итеп, Гөлбаныуға күңеле төшкэн икән, ниңә әле ул Хашимға ҡаныҡмай?

Уйҙарының осона сыға алмай яфаланған Фэүзиә, үҙен эш менән әүрэтергә була, ҡурмас ҡыҙҙырҙы, талкан майланы: унан алда тартҡан һолоһонан буҙалыҡ ҡайнатырға һалды: өй башынан кипкән ҡыҙыл эремсеген дэ алып төштө, тартып, майлап ҡуйырға ниэтләне быныһын да. «һы... туйға әҙерләнгәндәй әҙерләнэмсе», — үҙенә-үҙенең һыны теймәй Фәүзиәнең. Инде онотолдом, эшкә әүрәнем тиһә, күҙ алдында Шәңгәрәйҙең ялтыр башы хасил була. «Диуана бит ул, уның һүҙенэ кем ҡолаҡ һала тиң?» — тип йыуатырға тырыша аҡылын, ә күңеленең ни ерелер бының менән килешмәй.

Элек, ошо Сибәғәт-Дингеҙханға кейәүгә сығырға йөрөгәнендә, бер диуананың «кыҙынды миңә бир», тип, өләсәһен ҡаңғыртҡаны хэтерендә.

Барсын ҡырҡ көнлөгөнән йәрәшелгән был егеткә. Вәғәҙә — иман! — тип сабыр ғына энгэмэләшкән өләсәһенә вптырап ҡараны ул.

Уф! Ниңә шуны ялсыларҙан ҡыуҙырып ҡына ебәрмәйһең, өләсәй! — тип ярһыны Барсынбикә.

Өләсәһе иплэп кенә уның толомонан һыйпаны:

— Ярамай, ҡыҙым...

– һы... Ярамай! Диуана ла булды кеше!

Күкһыу был саҡ эркетме, һөтмө ҡайната ине, ижауҙы Барсынға тотторол, үҙе ситкәрәк китеп ултырҙы.

— Хоҙай бәндэгэ зиһен менән тойомдо тигеҙ бүлешмэй, кызым. Берәүҙә зиһен — тойом юҡ: икенселә тойом көслө — шһен юҡ. Йыландың юлын бүлгән — арымаç, һөйөүҙең юлын КЫЙған — бәхеткә тарымаç...

Өләсәһенең ныҡышып-серәшеп аҡыл өйрэтеүен «өгөтләү» пш аңлаған Барсын аптырауының сигенә етте:

— Өләсәй! һин... мине... диуанаға димләйһең әллә?!

- Иçәр... һинең сэңгелдэктән йәрәшелгән кешең бар. Хоҙай үҙе иш иткән уны һиңә! Дингеҙханды...

— Шулай булғас?

- Әммә һинең һатыбалды диуана тип тэкәбберлэнеп кире ҡағыуың яҙыҡ. һин унан... кисереү, ярлыҡау һорарға гвйешһең!

Хәҙер барам да һатыбалдың алдында теҙләнәм. йонөһе: «Кисер мине... Мин, үкенескә ҡаршы, икенсе кешегә илрошелгәнмен. Мин вәғәҙәмде боҙа алмайым!» — кфсынбикә быны өләсәһенә тубыҡланып, ҡулдары менән ншпралап һөйләп күрһәтте.

Дингеҙхан менән Барсындың туйы гөрләп үткән бер ММДӘ, диуана ҡаянан ташланған, тигән хэбәр яңғыраны. Флүшәнең тирмэн тотҡаһына йэбешкән ҡулы тирләп, йөрәге Мберҙәп типте: «Минең өләшкә төшкән был бихисап каигылар өләсәһенең «һөйөүҙең юлын ҡыйған — бәхеткә гарымаç» тиеүенэн киләме әллә?!»

(ойер кеше булды уның өләсәһе. һөйләгән һүҙе лә, м.пиан эмәлдәре ҡәҙимге эҙэмдеке төҫлө булманы. ()и,иаһының өс ҡатыны булып, берeһе генә ул тапҡан, уныһы

ла, Барсындың атаһы, һунарға китеп үлде. Айыу өңөнә төтөнлөк һалып булашканда, өҫтөнә һеләүһен ырғыған. Тирэ-якта даны сыккан һунарсының аңғармаҫтан, юктан ғына үлеүе бөтэһен дә тетрэтте. Өләсәһе генә быға аптыраманы, шикелле, улын ерлэгэс, өҙгөләнеп илаған килененә, Барсындыңәсәһенә:

— Илама, килен. Тәкдирҙән үтеп, бер ни эшләп булмай. Ҡарахан тыуған-тыуғандан йән ҡыйыуға еңел ҡараны, үҙенең дә йәне шуға күрә аңғармаҫтан ҡыйылды. Шуныһы яман — беҙҙең тоҡомдан бер Барсын ҡалды, уныһы ла ҡатын-ҡыҙ затлы...

Ул сакта сабыйҙарына, Ихсанбай менэн Гөлбаныуға, йөклө йөрөгән Барсын өләсәһен йыуатырға ашыкты:

— Ҡайғырма, өләс... Мин бер үҙем ете ул табырмын!

— Ете? — Күкһыу ҡарсык ғәжәп итеп ейәнсәренэ ҡараны. — Ете... ҡайҙан телеңә килде был һан?

— Ниңә?

— Етенең серен берэү ҙә белмәй... Ете эсендә бер ҙә бар, бер башында ниҙәр бар? Уны ла бер кем белмэй...

Өләсәһе эйткэн раҫ булды: етенең береһе булып Ихсанбай ҡалды. Унық башында ниҙэр бар?

Уйҙары ауыр Фәүзиә-Барсындың. Сибәғәт-Диңгеҙхан ҡартая белеп ҡартайып, үҙ аҡылында булһа, унық башы был саклы буталыр инеме? Фәүзиәнең етмеш төрлө сирҙән шифа ла, саманан сак ҡына арттырып ебәрһәң, ете минутта эҙэмдең тынын быуып, йөрәген туктатыр тамыр тоткан ҡулдары берсэ хәлһеҙләнде, берсә һиҙелер-һиҙелмәҫ ҡалтыранды. Нишлэргә... Ярай... алдына бынау тәғәмдәрҙе теҙер. Нигеҙендә болло йәшәгән, боронғо тархандар тамыры үҙе лэ. Әйҙә, ғүмеренең ҡалған сәғәттэрен, исмаһам, байманлыкта үткәрһен. Эскеһе килһә, эсһен... Барыбер эсте. Эсмәһә, Раузаға барып юлығыр инеме лә, ҡартайған көнөндә һаҡалын ҡырыуға тиклем барып етер инеме? Эй иҫэр... эй диуана! Иҫәрҙәрҙе сәсмәйҙәр, улар үҙҙәре үҫә, тигәндэре ошомо икән? Ахмактың ахмағы Шәңгәрәй аңғарырлыҡ булғас, нимә тип уйланы икән битендәге миңен? Миңе миңише генәме — тәре бит! Хәс тә урыҫтың тәреһе! Әгәр теге төндә, волость

гүроләренең йэнен ҡыйып сыккан ҡәһәрле төндә, бер генә эзэм йәшенеп тороп ҡалған булһа ла, тере шаһит, тере дәлил |)ш... Эй Диңгеҙхан, Диңгеҙхан... Ихсанбайы ла килешкэн. Лтаһына гел оторо тора, оторо һөйләшә. Әллә шул да кирелеҽе менән ҡарттың һарыуына тейеп бөттө кәрәк... Ни иыуанырға, күңел баҫырға Сэбиләһе бәпәй тапманы. I олбаныукайымдың анау ике малайы — ҡойоп ҡуйған Диңгеҙхан да бит... Ә ҡыҙғынаһы — Мәҙинэ — хэс тә ул үҙе, Флүзиә-Барсынбикәнең йәш сағы...

Яҙмыштары ошолай сыуалмаған булһа, шул балаларҙы (ибәғәт тә, моғайын, һөйөп туймаҫ ине лә бит. Былай ни — ' >п толкаһыҙ. Дөрөҫөн әйткәндә, өй биреһе төҫлө, арандай моргта бер Сәбилэ йөрөй. Йыл да ауырлы, йыл да, алты айы гулғас, үле бала таба үҙе. Шунан ни Ихсанбайы бер башка, ı гаһы икенсе башка — икеһе ике ерҙә күңел аса.

Ә Фәүзиәнең уйҙары бихисап. Сыуалсыҡ. Етмәһә, ул гәүлегенә бары ике, уҙа барһа, өс сәғәт йоҡлай. Ҡалған нлкыпы буш үтә. Эште лә ул тәмен белеп эшләмәй хәҙер. Кем всөн тырышһын? Ихсанбай, Ихсанбай, тине — уныһы ла күңелде йылытмай. Андығаны — тэзрә. Шул тәзрәнән I плбаныуының өйө күренеп тормаһа, ул, моғайын, аҡылдан •ҙыр ине. Сабыйҙарҙың өҫтөн ҡарар кәрәк. Тик нисек итеп пслгертмәй бирергә? Мэҙинәһе лэ бит уға һәр сак сәйерһенеп, ҡуркыбыраҡ ҡарай. Әгәр был ҡарт фашланһа, \ ны ц үҙенә лә, Ихсанбайға ла тормош бөтә. Фәүзиә инде үҙен мшамай, ә бына Мэҙинәләргә кем ярҙам итер? Улар бит, дөрөҫөн әйткәндэ, Фәүзиә арҡаһында ғына йән аҫырап килоләр...

Кортә араһынан ингән Сибэғәт еҙ ҡомғандан ҡулын • иизы. Аласыҡҡа таралған тәмле еҫтәр танауын ҡытыкланы, |ХЫры. Танауын мыш-мыш тарта-тарта түргә уҙҙы. Фәүзиә ' ш ташмай генә ашъяулыҡ йәйҙе. Сибэғәт-Диңгеҙхан нимәлер Һиҙенде. Әллә был ҡарсык үҙе башлап һүҙ ҡуҙғатмаксымы? | ши булһа ни, бигерэк шэп!

('ой яһалды, Сибәғәт алдына ҡуйылды. Сибәғәт тә ншыкманы. Тәм-том етерлек. Фәүзиә йыйынсаклы булды • ••• ıє ул. Ана бит хатта сейәле, еләкле, муйыллы майҙары бар

әле унын. Әммә һыуынған ул ҡарсығынан, биҙгән, етмәһә, унын бынау сөм-ҡара үткер күҙҙәренең һәр саҡ һынаулы, иҫкәртеүсән-бойороулы ҡарашы туйҙырған. Ошоларҙы күрмәһә, Сибәғәт әллә еңелерәк йәшәр ине. Үткәндәре ошо көндән-көн һөйкөмһеҙләнә барған ҡарсыҡтың күҙҙәренә яҙылып, уйылып-соҡолоп ҡалған түгелме?! Сибәғәт-Диңгеҙхан ниңә, ни өсөн һуң әле ошоларҙан элегерәк ҡотолоу сараһын күрмәне? Башҡа шаһиттарынан ул бит шундуҡ, бик ваҡытлы арына алғайны... Фәүзиә-Барсындан ҡотолорға тырышыу түгел, унын күләгәһенә, ғәрип бер ҡолона әүерелде... Эй ахмаҡ, ахмаҡ! Ни бысағыма кәрәк булған уға был донъяны төҙөү, һуңғы алтындарына тиклем биреп, Ихсанбайҙы һуғыштан алып ҡалыу?.. Барыһына ла ошо ҡарсыға танаулы, төйләгән ҡарашлы ҡарсыҡ ғәйепле. Имештер, ерҙә үҙенең тоҡомон ҡалдыра!.. Ҡалдырҙы ҡалдырмай. Ихсанбайҙың үле тыуған балалары менән инде зыярат тулып килә. Әгәр ҙә Сибәғәткә ейән һөйөү бәхете тейһә, был тормош ул тиклем екһетмәҫ тә ине, ҡайҙа һуң улар? Рауза, ана, еләк кеүек эле. Тапһам, таба ла бирәм бер малай, ти. Бына нисек бит ул, Сибәғәт-Диңгеҙхандың тәне ҡартайғас ҡына ожмахҡа тейенде. Ҡартайғас тип, Сибәғәттең ирлек ҡомары һүнмәгән дә, шиңмәгән дә — йоҡоға ғына талған булған. Бына хәҙер уянды, йырылған быуаны бар туктатып ҡара, ташҡынды бар кире быуып ҡара! Булмай ул, тик бына ҡарсыҡты нишләтергә? Сибәғәт-Диңгеҙханға сығып китергә лә, уйһыҙ донъя көтөргә лә ирек бирмәйәсәк ул... Сибәғәттең башынан барыһы үтте, э бына был осраҡта ул ҡылған эмәлдәрҙең береһе лэ бармай кеүек. һы... әгәр ҙә төндә, йоҡлаған сағында битенә мендәр ҡаплаһа?! Бөгөн төн ҡараңғы... Фәүзиә-Барсынбикә элүктән йоҡомһорап, сайкалып ултырғандай...

— Ә?! — Барсынбикә-Фәүзиәнең ҡапыл тетрэнеп, үҙенә өндәшеүе Сибәғәтте һиҫкәндерҙе, шулай ҙа үҙен ҡулға алырға өлгөрҙө.

— Ни булды?.. Мин ни... бер нәмә лә тимәнемсе? — Фәүзиә Сибәғәт алдындағы сынаяҡҡа сәйнүгенән һыу ағыҙҙы:

— Йоҡлап барамсы... өндәшкәндәй булдың. Эс бынау үлән сәйен. Көн йонсоу, һыҙланмай йоҡларһың...

Ҡарсығының ултырған еренән ойой башлауы Сибәғәттә ашҡыныулы-ярһыулы дәрт уятты, йөрәген йыш-йыш тибергә

млжбүр итте. Йөрәкһенеүен белдермәҫкә була тамағын **кырҙы,** ҡалағын әле сейәле, эле муйыллы майға һондо:

— Яман көндә — якшы аш, тигәндәй... Мынауҙарҙы **сығарып,** ҡайһылай якшы эштәгәнһең...

— Күптән тамаҡты ҡараған юҡ, — Фәүзиә ҡарты алдына, нляғынан да ҡуйыраҡ итеп, тағы сәй яһаны. — Эс, эс, кушып, тәмләп, ҡапҡылап эс... Килендең бәпэйе булһа, килгән-киткәнгә тип һаҡлағайным, булмаҫ ахыры, тағы эсен **готоп** ята.

Сибәғәт-Диңгеҙхан сәй эскән һайын, тәненә иҙерэткес рохәтлек, йылылыҡ таралғанын тойҙо. Тәне ауырая, йоҡоһо килә башланы. Эйе, башта ул бәләкэй ятып алыр... Эйе, эйе... Фәүзиә-Барсын йоҡлай ҙа инде, ашъяулыҡ ситендә, ҡолаҡсын мсндэргә башын һалды. Энерҙэ йөҙө ағыраҡ тойола, маңлайынан шыуған яулығынан ҡыйылған ҡаштары күренә, керпектәренән күләгә төшөп, күҙ төбөн ҡарараҡ күрһәтә. Матур саҡтарың бар ине һинең дә, Барсынбикэ! Ажар саҡтарың бар ине! Шулай булмаһа, Диңгеҙхан һине йыйын һынлы йыйында көрәшеп яулар инеме?! Әммә һәр нәмәнең үҙ ваҡыты, үҙ миҙгеле! Әллә ҡасанғы данынды — матур **сағынды** хөрмәтләп, былай ҙа күп йәшәне Диңгеҙхан һинен мснән, күп **түҙҙе.** Инде етте. Тыныс йоҡла, Барсын... һин инде күптән **үҙең** дә йәшәмэйһең, миңә лә йәшәргә ирек **бирмэйһең...**

Бишенсе бүлек

Камалетдинов ҡыҫҡа ғына йоҡоһонан һыҙланып уянды. **һай,** был яралар, инде бөтәшмәҫ тә, мандытмаҫ та. Ниңә шулай тормош уға гел оторо торҙо икән? Алты йәштә **сағында** етем ҡалыу... Етем ҡалыу ғынамы? Әгәр ҙә һин **уҙенде** донъяға бар ҡылған иң якын кешеләрендең үлемен үҙ **күҙҙәрен** менән күреп торһаң... Ата-эсәһе тигәндәй, эле төшөндә уларҙы күрҙе түгелме Әйүп? Тик бына... атаһынмы-эсәһенме күрҙе ул? Кеме менән һөйләште? Ниңә әле Әйүп һуңғы ваҡытта күргән төштәрен уянғас хәтерләй алмай **Итегә?** Хәйер, унын ни кәрәге... Улай тиһәң, ул ғүмере **буйына** ата-әсәһен тик төшөндә күреү менән генә йыуанып м.шюне бит? Хатта һуғышта ла... Унда ла ҡыҫҡа ғына ял

ваҡыттарында ошо ике ҡәҙерле кешеһен күрһә, әллә ни тиклем ваҡыт күңеле булып, тынсып йөрөр ине.

Тышта төн. Ҡара яҙҙың ҡара төнө тышта. Ул саҡта ла... теге ҡэһэрле төндә лә... ошолай айһыҙ ҡараңғы ине. Ишек шаҡынылар. Әйүп иң алда уянды, шунан атаһын уятты. Атаһы, ишек асыр алдынан, ҡапыл уны мейес артына тыҡты.

— Нишләйһең ул, атай?

— Тыс... Тауышың сыҡмаһын.

Атаһының келәнә ысҡындырыуы булды, эсен тотоп бөгөлөп тә төштө.

— Ах-ах!

— Ғәзиз... — эсэһенең тауышы ҡабат сыҡманы. Ҡулына бысаҡ тотҡан кеше шырпы сыйҙы. Караурат артын, мөйөштәрҙе ҡараны. Икенсеһе һыҙған шырпыһын мөйөшкә ташланы.

— Шылдыҡ. Бер кем дә юҡ бында!

— Тукта...

— Ашыҡ! Тағын өс өйгә инәһе бар.

Улар киткәс, Әйүп байтаҡ ваҡыттан һуң иҫенә килде. Танды атаһы менән әсәһе мәйете араһында үҙе лә ҡанға батҡан килеш ҡаршыланы. Ауылдағы өләсәһе ғазраил хаҡында һөйләгәйне. Төндә килеп инеп, атаһы менэн эсәһен һуйып сығыусыларҙы ана шул ғазраилдарҙыр тип уйланы. Аҙаҡ үҙенән револверлы кешеләр ни булғанын һораша башлағас:

— Ғазраилдар килде, — тине, — ағай кеше тауышы менән ишек астырҙылар.

— Ниндәйерәк инеләр? Йөҙҙәрен күрҙеңме? — тип һоранылар.

— Күрҙем. Шырпы сыйғанда күрҙем, — тине Әйүп.

— Элек берәй ерҙә күргән-осрағаның булманымы берәйһен?

— Юҡ.

— Хәҙер күрһәң, таныр инеңме?

— Әйе.

— Нисек итеп?

— Битенән.

— Бите ниндәй ине?

Әйүп уйлана төштө. Береһененң битендәге ҡара нәмәһе нимәгә оҡшағайны әле шул? Ҡайҙа күргәйне Әйүп шуға

оҡшаған нәмәне? Ә-ә — белде: ҡалаға барғанда. Әйүп втаһынан: «Был ниндэй осло түбәле өй?» — тип һорағайны, •таһы: «Сиркәү», — тине, «Башындағы нимә ул?» — тигәс, • • Горе!» — тине.

— Битенә унын... тәре эштәлгәйне.

- Тәре?!

Тәре... һуң... бөгөн эле яңы күргән төшөндә әсәһе... уны нык итеп етәкләп алған. Үҙҙәре, ахыры, ҡалаға барғандар. Әсәһе нимәгәлер төртөп күрһәтә, Әйүп төшөнә алмай... Нимәгә, нимәгә күрһәтте эсәһе. Тукта! Улар бит... Сиркәү ›ргәһенән үтеп баралар ине. Әсәһе уға... — тэрене күрһәтте!

Камалетдинов шыбыр тиргә батып тороп ултырҙы. Күрше бүлмәлә Әптеләхәттең тигеҙ тын алғаны ишетелә. Уятһа, йәл инде. Тик бер үҙенә, ҡара төндә, етмәһә бынау юштө күргәс, бигерәк яманһыу...

— Әхәт, Әптеләхәт...

— Ә-ә... Әйүп ағай? Ни бар? — Әптеләхәт шундуҡ уянды.

— Бер ни ҙә юҡ... Төш күрҙем.

— Төш?.. — Әптеләхәт, сығып, һәрмәнеп уға яҡынланы. Ниндэй төш, ағай?

— Ят, ят... юҡҡа торғоҙҙом.

Нисауа... — Әптеләхәт шырпы табып сыйҙы: — I;фтанмы?

- Әйҙә. Әптеләхәт... Мин бит үткэн аҙнала Тирэклегә Һуғылдым.

— Белэм.

– һин үҙең шунан бит. Һорашманың да...

– Нимэһен һорашаһың, Әйүп Ғәзизович?

Яҡындарынды... шулай уҡ бер кемең дә юҡмы?

Юҡ... Хәҙер юҡ...

— Нимә, әллә?

– һуғышҡа тиклем, утарҙа ятып суска ҡараным. Шунда бор ғаилә менән бер өйҙә йәшәнем.

— Улар ҡайҙа һуң?

- Шәһәрбаныу апай... донъя ҡуйған. Ҡыҙы... Гөлбаныу...

1)ителәхәт ул фажиғәне үҙе лә һуғыштан ҡайтҡас ишетте. Хәйер, һуғышҡа тиклем дә ул Әптеләхәттеке булманы. Һум.пиҡа тиклем ашанылар ҡыҙыҡайҙың башын... Ә һуғыш мәлендә — бүреләрҙән ашатҡандар...

– Юҡ инде ул, Әйүп Ғәзизович. Үлгән.

— Үлгән?
— Эйе, бүре ашаған.
— һы... бер ҙә өндәшкәнең булманысы...
— Нимәһен өндәшəhең? Ғаилэле ине инде ул...
— Балалары ҡалғанмы?
— Ҡыҙы бар ине... Да... Ҙурҙыр инде ул... — Әптеләхəттең күҙ алдына сөм-ҡара керпектәр менән ҡаймаланған зәп-зәңгәр күҙле Гөлбаныу килеп баҫты. Этлек менән йәшәп, этлек менән үлеп китер өсөн генә шул тиклем һылыу булып донъяға килеү нимə кәрәк булды икән Гөлбаныуға? Шул һылыулығы булмаһа, Әптеләхәт тә, бәлки, ҡыйып һүҙ ҡуша алған булыр ине уға...
Хэйер, барыбер өндәшә алмаҫ ине, йәш ине бит эле Әптеләхәт, бөтөнләй малай ғына ине...
— Әптеләхәт... һинә... Тирэклегә барып ҡайтыр кәрәк.
— Нинә?
— Нинә тип... эш бар...
Камалетдинов, тороп, ялан аяҡтарын иҙәнгә төшөрҙө.
— Разведкаға, иптәш өлкән лейтенант.
— һы... Тыңлайым, иптәш генерал-полковник. Ни бойораһығыҙ?
— Тыңла...

Ихсанбай йыйылыштан ҡара төндән дә ҡараҡ булып ҡайтты. Мирхәйҙәров һарыуын нығ ҡайната. Тамаҡҡа ҡаҙалған ҡылсыҡтай булды шул: ни үҙе китмәй, ни йоторға бирмәй. Ҡара, ҡайһылай әтэсләнә! Имеш, улар ҡан ҡойған, э бында ҡайһы бер етәкселәр тырай типтергән. Ул ғына түгел, фронтовиктарҙың ғаиләһенән көлгән, һыйырҙарын тартып алып, үҙҙәрен ас бүреләр көтөүенә бырақтырған, хәмер эсеп, һалдаткаларҙан көлөп йәшәгән... Ә бит, эйтелгэндэр үҙенә төбәлгәнен һиҙһә лә, Ихсанбай, тороп, ҡаршы һүҙ эйтә алманы. Үҙен яҡламаны. Әйтерһең дә уны ултырған ултырғысына йән еренән ҡаҙаҡлап ҡуйҙылар. Үҙен яҡларлыҡ дэлилдәре юҡ инеме ни унын? Шул уҡ һыйыр. Райондан иткә планды арттырғандан-арттыралар, шул уҡ ваҡытта һөткә лә планды кәметмәйҙәр. Ҡыҙ ҙа булһын — быуаҙ ҙа булһын... Ихсанбай нишләһен? Дөрөҫ,

халыҡтан һыйырҙы алдап алдылар, тартып алдылар. Кемгә көстәре етте — шуларҙыҡын алдылар. Башҡа юл тапманы Ихсанбай... Ә бит ул һыҡһа — һыҡты, ҡыҫһа — ҡыҫты — илгә итен дә, һөтөн дэ, игенен дә бирҙе. Бында иисек ҡаты булмайһың? Ҡаты булды Ихсанбай — уныһы ла раҫ. Ураҡ ваҡытында игенде кисеп йөрөнө халыҡ — үҙҙәренең ашағаны быҡтырылған үлэн, һыйыры барҙыҡы — ҡатыҡ булды. Булды инде, иген урлап ашағанды тиҙәктәрен соҡоп ҡарап тотҡан сағы ла булды. Шунһыҙ һин унын урлашҡанын нисек иҫбатлайың? Бер икәүһен шул юл менән тотторол, төрмәгә сбэргэс, урлашыусы ла булманы... Хәмер эсте, имеш... Эсhэ, эсте инде. һалдаткалар менэн теттерҙе, тиҙәр икэн, көнләшеүҙән әйтәләр. Арҡыры ятҡанды ашаҡламаны Ихсанбай. Уныһы — раҫ. Мәгәр улар ҙа һуғыштан суфыйға лйләнеп ҡайтмағандарҙыр. Шулай инде ул. Шулай иратылған. Уларҙы бит һуғышҡа береһен дә көйҙөртөп сбәрмәнеләр...
Ә шулай ҙа Мирхэйҙэров ҡаныға... Гөлбаныуҙың игеҙәктәре хаҡында хәбәрҙе ҡолағына тишһәләр?.. Бөгөн үк ул: «Килэһе йыйылышта ҡайһы бер иптәштәрҙең партия сафында ҡалыу-ҡалмауын ҡараясаҡбыҙ!» — тип торҙо, артабан ошолай барһа, бөттө баш. Етмәһә, атаһы. Ҡарт шайтан, Камалетдинов бик тексәйҙе уға, бик төпсөштө. Пхсанбай бер-бер сараһын күрмәһә, ул ҡарт менән әллә нигэ тарыуың бар. Ашарын — ашаған, йэшэрен — йәшэгән. Уныһы ла раҫ.
Ихсанбай, Зарифа йәшәгэн тыҡрыҡҡа еткәс, бер аҙ гапанып, уйлана биреп торҙо. Инергэме, юҡмы? Ә өйөнә ҡайтҡыһы килмәй, мэгэр атаһы мәсьәләһе хэл итеүҙе көтә. Иишләргә? Юҡ, бөгөн ҡайтһын эле ул. Баш осонда болоттар куйыра, төштәре болара. Сэбиләһе, йән көйөгө, тағы үле бөпәйләр микән? Ҡыҙыҡ был донъя: Сәбилэ хоҙайҙан һорап га бала ала алмай, Гөлбаныуға иһә бер төн, бер миҙгел юендә бер түгел, ике сабый бирҙе. Хәҙер ана, улар, Ихсанбай енәйәтенең тере шаһиттары булып, күҙгә күренеп үҫәләр. Бысраҡтан арындырып, йыуындырып, кейендереп алһаң — Юрғаны Ихсанбай. Соҡсоноу ҙа, эҙләү ҙә кәрәкмәй.
Береһенән-береһе шомло уйҙар менән ул ҡапҡаһын асты. \ п ҡайтыуға һәр саҡ эстән эленеүле була торған ҡапҡа был ЮЫ асыҡ булып сыҡты. Әсәһе ҡапҡаны асыуға күнеккэн

Ихсанбай. Мал өйөндә ут та күренмәй, быларға ни булған? Ҡарт шайтан, ярай, Раузаһындалыр. Ә эсәһесе? Ихсанбай мал өйөнөң ишегенә барып етте, ҡолаҡ һалды, — тауыш-тын юҡ. Эстән бәрелгән шомло тынлыҡ унының күкрәген ҡурыштырҙы. Кәртә эсендә әтәс ҡысҡырҙы. Әтәсме был... Әллә тауыҡмы? Тауыҡ, ахыры. Эйе, тауыҡ. Әтәсе бит күрше әтәстән таланып үлде. Ихсанбайҙың йөрәге ҡыҫылып, тыны ҡурылды. Хәйерлегә булһа ярай ҙа... Тауыҡтың әтәс булып ҡысҡырыуы оҡшамай ҙа... Етмәһә, әнерҙә. Иртәгә ук һуйып бырактырыр кәрәк. Тик ҡайһыһы икэн?..

Әптеләхәт үргә торо атының яйына ҡуйҙы. Ошо үрҙе менһә, Тәрән үҙәк. Унан күтәрелһә, Тирәкле үҙе лә күренәсәк. Әптелэхэттең район үҙәгенә ҡайтып эшләй башлауына ла йылдан ашыу ғүмер үтте. Тирәклене ҡайтып күреп килеү теләге көслө булһа ла, ниҙер тыйҙы. Унда ла бит Әптеләхәтте күңел әрнетерлек иҫтэлектәрҙән башҡа бер ни көтмәй. Етемлектә үткән бала саҡ. Утыҙ өсөнсө йыл. Әсәһе йоттан үлгәндә Әптеләхәткә ни бары өс йәш ине. Эш, кәсеп эҙләп ҡалаға сығып киткән атаһы артынан имсәк балаһын күтәреп, Әптеләхәтен етәкләп, юлға сыккан эсәһен ул бәләкәй булһа ла, якшы хәтерләй. Ошо рәүешле ауыл һайын туктай-туктай барҙылар улар. Ҡайһыһы индереп ҡатыҡ эсереп сығарҙы, ҡайһыһы эт шикелле өрөп ҡыуып та сығарғыланы. Эҫенәнме, аслыҡтанмы — ҡустыһының эсе китә башланы. Әсәһе, ҡасандыр бик һылыу булып, хәҙер инде аслыктан, нужанан аскаҡ яңаҡлы, һарғайып кипкән ҡатын, йылғаға төшөп бәпәйҙең сепрәк-сапрағын йыуып, ағаска элә. Үҙе лә ағас күләгәһенә ятып ял итеп ала. Әптеләхәттең башынан шырауға әйләнгән ҡулы менән һыйпай ҙа:

— Түҙ инде... Күп ҡалманы. Ҡалаға барып еткәс, атанды табырбыҙ. Күп итеп икмәк әпирер атаң, — ти...

Әптелэхәттең күп икмәкте күргәне юҡ. Күп булғас, ул атай хэтле буламы икән, эллә атай үҙе икмәк хәтле микән?

— Әсәй, ҡала икмәк буламы?

— Юк, балам, кешеләр йәшәй торған ер.

— Ауылда ла кешеләр йәшәй бит, эсәй?

— Эйе.

— Ә ниңә унда икмәк юк?

Әсэһе өндәшмәй. Бәпәй тағы илай. Әсәһе унын ҙур асылған ауыҙына имсәген тыға. Сабый бер-ике һура ла, тағы ауыҙын ҙур асып илай башлай.

Әптеләхәттең шул саҡ ошо ҙур ауыҙлы, күпкән ҡорһаҡлы, нәҙек аяҡлы йән эйәһен үлтереп ташлағыһы килә.

— Әсәй... әйҙә шуны... үлтерэйек!

— Алйот! Нигә улай тиһең, ҡороғоро?!

Әптелэхәткә ҡыйын. Әсәһен йәлләп кенә әйтте, ә әсәһе аңламаны. Ирешә. Ә бит белә Әптеләхәт: кеше үлһә, ашарға һорамай. Өләсәһе лә шулай итте. Оҙаҡ итеп урындыкта һуҙылып ятты. Әптелэхэт әсәһенә:

— Өләсәй ниңә сәй эсмәй ул? — тигәс, эсәһе:

— Үлгән, — тине.

Шул саҡ Әптеләхәттең һуҙылып яткыһы ла, үлгеһе килде: исмаһам, икмәк тураһында уйлауҙан туктар ине.

Бәпәйҙең тағы эсе китте. Әсәһе, сепрэктәрен алып, һыу оуйына төштө.

— Ҡустынды ҡара! Әтү тағы шыйыҡ сыбыҡ эләгер!

— Әһә... — Әммә эсәһенең китеүе булды, Әптеләхәттең ағаска үрмәләп, ҡош ояһын ҡарарға менеүе булды. Бэлки, унда йомортка ятыр? Малайҙарҙың һайыҫҡан ояһынан иомортка алып төшөп, һытып эскәнен күргәне бар бит ул. Тик нисек менеп етергә? Әптелэхэт ботаҡтан ботаҡҡа баҫты. Лна, ояға ла күп ҡалманы. Шул саҡ ҡапыл эт ырылдаған тауыштар ишетелде. Аһ-аһ, улар бында табан килә. Ана ғаһаң, бөтөнләй яҡындар! Тештәрен ыржайтып килгән эттәр камыл һағайҙы. Береһе Әптелэхәтте күреп ҡалды, тағы ла ныҡыраҡ ыржайҙы. Ағас тирәһе эт менән тулды, шарылдап илаған бала ҡапыл тынды — бер нисэ минуттан ҡанға ыланған эт морондары ғына ҡалды.

— Әсәй! Әсә-ә-әй!

Һуйыл тотҡан әсәһе яр аҫтынан килеп сыҡҡанда, бәпәйҙән йүргәктәрендәге ҡанлы таптар ғына ҡалғайны...

һуғышта күпме ҡан күрҙе Әптеләхәт. Үҙе яраланды. I осмиталдә лэ ятты. Мэгәр ана шунда күргән ҡан иҫенән Оыҡмай, ҡан күргән һайын шул фажиғә ап-асыҡ булып күҙ дына баҫа.

Атаһын да тапманы улар. Ҡалала әллә ниндәй баракта мпклап йөрөнөләр. Ә бер көндө әсәһе йоҡонан торманы.

Баракка йоҡларға килгән юлаусылар Әптеләхәтте кире ауылға ултыртып алып ҡайттылар. Әсәһенең һеңлеһе, бөкрө Ниса ҡарап үҫтерҙе уны. Әптеләхәт сусҡала эшләгән саҡта, ул да мәрхүмә булды. ФЗО, һуғыш. һуғышта командирының якташ булып сығыуы нык шатландырҙы Әптеләхәтте. Камалетдинов та уға тиҙ генә эҫенде. Ике етем уртаҡ телде тиҙ таптылар. һуғыштан һуң, мәҙәниәт буйынса китергә лә Әйүп Ғәзизович кәңәш бирҙе.

— Гармунды һәйбәт тартаң, тауышың да моңло, укып ҡайт та, мәҙәниәтте күтәр, — тине ул. — һуғыш йәрәхәттәрен уңалтыу өсөн хәҙер йыр кәрәк, һағышты баҫыр өсөн — моң кәрәк, — Әптеләхәт ҡарыулашманы. Уҡып бөткәс, ҡайҙа барайым, тип баш ватманы — тура Әйүп Ғәзизовичҡа туктаны. Шунан бирле икәү йәшәйҙәр, терәккә — таяу һымаҡтыр инде.

Әле бына Тирәклегә китеп бара. Көтмәгәнсәрәк килеп сыкты. Атының башын кемгә борор? Тыуған ауылына килеп, кәнсәгә туктауы ла уңайһыҙ бит әле. Дөрөҫ, күршеләре бар ине. Рауза апай. Телгә бөткән бер ҡатын ине. Уға төшһәң, иртәгеһенә бөтә ауылға күлдәгендә нисә һәҙәп барлығы билдәле була ла ҡуя инде. Бер яктан ҡарағанда, Камалетдинов ҡушкан йомошто үтәү өсөн нәгеҙ шул Рауза апай кәрәк тә инде: белмәгәне юҡ. Әлбиттә, оҙағыраҡ һөйләй, уның ҡарауы аҙмы хэбәр ишетәһең.

Шулай итеп, Әйүп Ғәзизович Ихсанбайҙың атаһы Сибәғәт ҡарт менән ҡыҙыҡһына тиң... Дөрөҫөн әйткәндә, Әптеләхәт ул ҡартты бик томанлы хәтерләй. Тимерлеккә ат дағаларға барғанда бер күреп ҡалды. Бите-башын һаҡал-мыйыҡ баҫкан бер бәндә ине. Тағы нишләптер күҙҙәре иҫендә ҡалған, бәлки, күҙҙәре, ҡуңыр йөҙгә бигүк хас булмағанса, зәп-зәңгәр булғанғалыр? Ә бына гел генә оҙон ҡара күлдәк, ҡара елән, башына, ҡашына төшөрөп, ҡара шәл ябынып йөрөгән ҡарсығы иҫендә Әптеләхэттең. Әптелэхэт уға һәр саҡ ҡурҡыу ҡатыш ҡыҙыҡһыныу менән ҡарай торғайны.

Ҡыҙыҡ, ләкин шулай ҙа булды: Әптеләхәттең яланғас ҡатын-ҡыҙ тәне менән беренсе осрашыуы нәҡ шул ҡатын менән бәйле. Кем ине әле уның исеме? Фәүзиә ине, ахыры...

Әлеге лә баяғы суска фермаһының аты юғалды. Бер көн эҙләне Әптеләхәт, ике көн эҙләне. Йәйҙең уртаһы ине микән, ни булһа ла көн бик эҫе ине. Көллө әҙәм бесәндә. Әптелэхэт,

сарсауына сыҙай алмай, шырлыҡ йырып булһа ла, оҙон кисеүгә һыу эсергә төштө. Ботаҡтарҙы йырып һыуға барып сығыуы булды, йылға уртаһында шыр-яланғас ҡатын-ҡыҙ коуҙаһе пэйҙә булды. Теге арты менән тора — Әптеләхәтте күрмэй. Ике ҡулын юғары күтэргэн дэ:

— Тәңрем... Күкһылыуыма баланан имен-аман ҡотолорға ярҙам ит... тәңрем?! Бигерэк ауыр йөрөй... — тыуыр сабыйы хаҡына ҡыймасы ғүмерен! — тип ялбара.

Башта Әптеләхәт уны бирелер тип уйланы: дөм-ҡара оҙон состоре тубығынан аҫка төшөп, һыу ағышына һибелгән, ул сэстәр үҙҙәре лә, өҙлөкһөҙ һурылып, аға ла, аға кеүек: тар һына иңбашы, нәҙек биле, тулы, ҡеүәтле янбаштары әллә миндәй һүрәттә күргән илаһи бер һынды хәтерләтә. Ҡатын-бире ҡапыл һиҫкәнде, артына әйләнде — ярай эле Әптеләхәт ботаҡ, абаға араһына боҫоп өлгөрҙө. Боҫһа ла күрҙе: был Фәүзиә ине. «Бына һиңә... ҡарсыҡ!» — Әптеләхәт хатта уның тсп-текә тулы түштәрен дә аңғарып өлгөрҙө. Ғәжэп. «Яланғас бисэләр был тиклем дә матур була икән» тигән уй үҫмер сгеттең башына ла килгәне юҡ ине. Фэүзиә ҡарсыҡ был дэрәжәлә матур булғас, башҡалары, йәшерэктәре, нисек икән Пыларҙың? Әптеләхәт иплэп кенә артына шыуышты...

Утарға кире ҡайтыуына, аты шунда йөрөй ине. Әптеләхәт күргәндәренең төш түгел икәнен аңланы, тик бер нэмәне шһене һыйҙыра алманы: Күкһылыу кем ул? Кемгә ғүмер ялбарҙы Фәүзиә? Күкһылыу... ҡолаҡ ишетмәгән, ете ят мсемсе...

Камалетдинов Сибэғәт ҡарттың битендэге миңененң ни роүешле булыуына тиклем белергә ҡуша. Ул саҡта миң-фоләне юҡ ине бит уның, Сибәғәттең. Бәй, йөҙөн һаҡал-мыйыҡ баҫҡас, күренмәгән микән булһа ла?..

Тәрән үҙәккә төшкәс, йылғанан елаҫлек бәрелде. Ниса апайы менән шунда бесән сабырҙар ине. Аҙаҡ, апайы үлгәс, был ерҙәр кемгә күсте икән? Әптеләхәт ундағы һәр тирәкте, һәр муйылды белә торғайны. Юҡ, былай ғына үтеп булмаҫтыр, туктамайынса, ятып һыуын эсмәйенсә, түҙмәҫ.

Ни тиклем ғүмер үткән, ә ер-һыу шул уҡ, хатта йылға ситендәге анау тирәк тэ... Әптеләхәт, атынан төшөп, йылғаға атланы. Кисеүҙе ҡараштырҙы, бер ыңғайҙан атын да эсереп алһа, йыуынып, саң-һаңын ҡағыштырып, хәл йыйыр.

— һаумы, Әптеләхәт! — Ҡапыл ҡолаҡ төбөндә ишетелгән тауыш уны һиҫкәндерҙе. Бәй, бер кем дә юҡ кеүек ине бит? Әптеләхәт артына әйләнде:

— Хашим?!

Хашим ҡулын һуҙҙы:

— һаумы әле, Әптеләхәт ҡустым...

Әптелэхэт уның һалдат кейемендә булыуына иғтибар итте. Шулай уҡ яңыраҡ ҡына ҡайтты микән? Хашим уның ҡарашын һүҙһеҙ анланы:

— Шулай килеп сыҡты инде, ҡустым. Госпиталдән госпиталгә йөрөй торғас, ваҡыт үтте лэ китте.

— Хәҙер нисек һуң?

— Шөкөр... һылтаҡлайым, мәгәр үҙ аяғым менән йөрөйөм. Күҙгә мөсһөҙмөн, мәгәр күрэм. Ҡолаҡҡа ҡатымын — ишетәм.

Әптеләхәт берсә өшөнө, берсэ янды. Гөлбаныу ошо әҙәмгә кейәүгә сыҡҡас, күпме йэш түкте, күпме рэнйене... Икенсегә, бөтөнләйгә етем итте был кеше Әптеләхәтте...

— Әле... ҡайҙа юл тотоуың?

— Районға... түрәләргә. Йомош менән.

— Берэй... подвода булманымы?

— Булыр ине лэ... Юл ыңғай эшләп китер эш бар ине. Әйҙә, — Әптеләхәт Хашим артынан эйәрҙе. Ҡалҡыуға менгәс, яңы ғына ҡаҙылған, сит-башы таштан буралған тупраҡ өйөмө күрҙе. Ҡиблаһына таш та ҡуйылған...

— Ҡәбер?!

— Ҡэбер... — Хашим таш алдына сүкәйҙе. — һуғыш ҡорбандарын, Әптеләхәт ҡустым, беҙ әле шулай оҙаҡ, бик оҙакерлэрбеҙ...

— Хоҙайғолова Гөлбаныу Тэңребирҙе ҡыҙы... — Әптеләхәт әкрен генә ергә сүгәләне. — Уны, ошонда...

— Эйе, ошонда...

— Матур ергә... ерләгәнһең...

— Хәлемдән килһә... мин уны, Әптеләхәт ҡустым, ожмах баҡсаһының... уртаһына ерләр инем. Дөрөҫөрәге... хәлемдән килһэ... ер ҡуйынына бер ҙә бирмәҫ инем.

Әптеләхәт аптыраулы ҡарашын Хашимға төбәне: был һүҙҙәрҙе ысынлап Хашим ауыҙынан ишетэме, эллэ яңылышамы?!

— Ҡыҙы бар ине... Гөлбаныуҙың. Ишеткәйнем.

— Мәҙинә, эйе, бар. Ауылда. Унан башҡа тағы ике малай бар. Игеҙәктэр. — Хашимдың тауышы ҡапыл йылынды, ниндәйҙер эске балҡыу, ғорурлыҡ менән тулды. — Өс бала атаһы мин, Әптелэхэт ҡустым. Гөлбаныуымдан ҡалған өс бөртөк аманат...

Әптеләхәт Хашим менән тағы байтаҡ һөйләшеп ултырҙы. Элекке зимагорҙан шулай уҡ тышҡы ҡиәфәт-һыпат ҡына калды микән? Шулайҙыр, ахыры. Күҙҙәре лә хатта башҡаса ҡарай, уларҙан, ниндәйҙер төпкөлдән йән эретерлек йылы нур эркелә.

Айырылышҡанда улар дуҫтарса ҡул ҡыҫыштылар.

— Йомошондо Камалетдиновҡа һөйлә, — тине Әптеләхәт. — Тура өйөнэ бар. Минең бүлмэ буш. Шунда йоҡла. Арыу кеше ул Әйүп Ғэзизович. Күпте күргән. Тыңлар, ярҙам итер...

— һин дә ауылда кемгә төшөргә белмэй йөрөмә, — тине Хашим. — Туп-тура беҙгә ин. Мәҙинә ферманан кис ҡайта ул. Атайыңды күрҙем тиң, әсәһен... Гөлбаныуҙы белгәненде һөйлә... — Хашимдың һуңғы һүҙҙәрен әйткәндә тауышы карлығыңҡыраны... — һеҙ бит уның менән... пашти иәштәштәр инегеҙ... йэ ярай, хуш...

Алтынсы бүлек

Рауза ғәҙәттәгенән иртәрәк уянды. Уянғас, йомро бсләгенә башын һалып, кистән ҡорғаны тартылырға онотолған тәҙрэ аша төшкән иртэнге ҡояштың сағыу нурына күҙен ҡыҫа биребеҙәк уйланып ятты. Ат ене ҡағылған улы күнтән инде шунда, ат һарайы ихатаһына төкәтеп һалынған карауылсы өйөндә йәшәй. Мунсаға ла ҡайтарып булмай бсрәҙәкте. Өйләнергә лә уйламай. Үҙенә башҡа бер тормош менән йәшәп тик ята. Рауза утынды ла бит хатта кешенән влдырта. Улына әйтһә:

— Не хватало лошадей мучить, так-итак им достаетея!— ги. Русса әйтэ. Рауза уны барыбер аңлай. Үҙ балаһы бит.

Сибәғәттең әсәһенә эйэләүенә лә улының иҫе китмәне.

- Ладно, сама знаешь. Наверно лучше, чем домовой,— тине. Рауза, дөрөҫөн әйткәндә, домовой тигәне менән дә иәшәргә әҙер. Яңғыҙлыҡ бер аллаға килешһен, тимәҫтәр ине, |Hhат булһа. Теге татар менән күпме генэ торҙо ул? Ҡоро

шул ни урыҫ, ни башҡорт түгел бер ул ҡалдырҙы. Унынһы ла Раузаға түгел, аттарға яҙған йэн эйэһе булып сыкты...

Кеше ирҙәренә күҙ-каш һикертеп тэ барманы Рауза. Намыҫ һаҡланы. Берәү булһа ла улы бар, йөҙөнән көлдөрмәйем тине. Ә бына Сибәғәтте, моғайын, хоҙай үҙе белеп ебәрҙе! Шулай булмаһа, улы Ихсанбай менән ни ғүмерҙән бергә эшләп, аралаша-катнаша йөрөп, бер булмаһа, бер осраштырыр ине бит. Юҡ, ундай хәл булманы. Ә бер көндө ул үҙе килеп инде. Килеп инде һэм ҡайтманы. Шунан инде был хәлде нисек итеп хоҙайҙан тимәйһең? Тик бына кисә кис килмәне. «Ҡарсыҡка әйтәм дә, сәпсимгә күсеп сығам һиңә», — тигэйне. Теге албаҫтыһы ебәрмәй сат йэбеште микэн? Ир менән йәшәрлек ере лә ҡалмаған да бит был Фэүзиэнең, юҡ, ныкыша һаман. Уйлап ҡараһаң, Сибәғәт бит хәҙер Раузаның өлөшө. Кеше өлөшөнә ниңә болашмаҡ кэрэк? Рауза үҙе ул яктан ныҡ тоғро булды. Кеше өлөшөнә аслан ҡағылманы.

Бына хәҙер килеп, унын өлөшөнә ҡағылғастары, Рауза ни ҡылһын? Бирмәҫкә, көрэшергә, шуныһы дөрөҫ тә булыр. Нимэ эшләп ул өлөш ашатып йәшәргә тейеш?! Татарын тартып алғандары ла баштан ашкан. Ҡуйынына үҙе килеп ингән ирҙе сығарып ятмаға...

Рауза торҙо. Башка ваҡыттағы кеүек, түшәгендә кирелеп-һуҙылып ултырманы, ырғып тороп урҙалағы һыйға кейэ торған япмалары өҫтөнән таҫмалар һалынған күлдэгенә үрелде. Ошоно кейеп алһын да, китһен Сибәғәтте алырға. Камзулы тарыраҡ, шулай ҙа бата: унын ҡарауы уҡалары ялт итеп тора.

Урамға сыҡҡас, үрҙә, зыяратта, ҡәбер ҡаҙған кешеләрҙе күреп, Рауза туҡтабыраҡ ҡалды. һорашырға эргә-тирәһендә кеше күренмәгәс, юлын дауам итте. Әлбиттэ, ул Фэүзиэ ҡарсыҡтың ҡарашынан бөжөмләй. Ну бит бүренән ҡурккан — урманға утынға бармаған. Ә Сибәғәт — унын бэхете. Ошоға тиклем унһыҙ нисек йәшәүенә аптырай Рауза. Олоғайған һайын ғишыҡ көслөрәк була, тигәндәре дөрөҫ, ахыры. Аһ, ана Шэңгэрэй килә. Бөтә нэмэне ул белә торған.

— Шэңгэрэй, ҡустым, аһ, нигә һауҙыҡ һорашмайһың у?

— Уаф, уаф!

— Аһ, аһ! У ни тигән һүҙ?!

— У хәҙер мин эт тигән һүҙ. Уаф, уаф!

— Кем һине эт ти, шунын теле ҡороһон! Минең һине эт тигәнем юҡсы...

— Уаф! уаф!

— Аһ, аһ... Шәңгэрэй, зыяратка... кешелэр китеп бара, ллә берәй... хәл бармы?

— Юҡ, бер нимә юҡ.

— Берәү ҙә үлмәгәнме?

— Берәү ҙә үлмэгән!

— Алдашмайһыңмы?

— Антым-синтым! — Шэңгәрэй, алмаш аяҡлап һикерэ-һикерә зыярат яғына сапты, үҙе көлә. — Алдаттым, бешэй күтен ялаттым!

— И... һантый! — Рауза юлын дауам итте. — һин иҫәрҙән һораған мин алйот!

Сибәғәттәргә етэрэк, ҡойма буйында һөйләшеп торған өс карсыҡты күрҙе Рауза. Ҡарсыҡтар, тәү ҡат күргәндэге кеүек, Раузаға, унын кейгән кейемдэренә текәлделәр. Береһе генэ бүленгән һүҙен дауам итергә онотманы:

— Шул. Ихсанбай мулла саҡыртмаҫка итэ, ти. Коммун өйөндә какуй һеҙгә йыназа, тип эйтә, ти.

— Ихсанбайҙың әсәһе бар бит эле! — Ҡарсыҡтар баҫкан срендә тораташтай ҡаткан Раузаға тағы күҙ һирпеп алырға онотманылар.

— Булыу менәнме? Донъяға бит хәҙер балалар хужа!

— Шулай, шулай... Улдың атаһын, ҡыҙҙың инәһен тыңлар саҡмы?

Рауза, телен көскә әйләндереп, ниҙер һорашмаҡсы булды:

— Сибәғәт...

Ҡарсыҡтарҙың береһенең ҡоро ғына яуабы ишетелде:

— Эйе, эйе... Ҡарт киткән, гүр эйэһе булған.

— Сибәғәт... — Раузаның ҡолаҡтары шауланы, башы ойлэнеп, күҙ алды ҡараңғыланды. Аяҡ аҫтында бына-бына ер убыласаҡ, һәм Рауза шул упҡынға осасаҡ. Ер менән бергә убылып, йэһәннәмгә китәсэк. «Ярҙам, ярҙам итегеҙ!» — кысҡырыр ине — тауышы сыкмай. Бынау ҡарсыҡтарҙың һис юғы береһе генэ ҡул һуҙһа — ер ҙә, Рауза ла урындарында калыр ине. «Ярҙам, ярҙам!!!» — Рауза бит һеҙҙең һәр бсрегеҙгә ярҙам итте. һәр берегеҙҙең ҡайғыһын бүлеште. Ашығып ҡына кэнсәгә саҡыртырға инһэ лә, ҡайғығыҙҙы пушатышыр өсөн, ултырмаҫ еренән — ултырҙы, тыңламаҫ еренән — тыңланы һеҙҙе! «Ай-й-й!» — Рауза үҙенең эсенэн м.ппка бәреп сығырға өлгөрмэгән ауазы менән гөрһөлдэп ергә ҡоланы...

Әптеләхәт зыяратта ҡәбер ҡаҙған кешеләрҙе тәрән үҙәкте менгәс тә күрҙе. «Бөгөн булған икән... Әйтерһең, Әптеләхәттең килеүен көтөп торғандар». Шулай уйланы ул, ауылының күренешен бер талай байҡағас. Ауылы әллә ни үҙгәрмәгән, тик ауылға яҡын саукалыҡ, тирәктәр ҡырҡылған. Күрәһең, һуғыш ваҡытында атһыҙ ҡатын-ҡыҙ ошонан ташыған утынды. Шула-а-й. Бына Әптеләхәт тә ҡайтты. Күңел йылытырлыҡ бер генә мөрйә булһасы. Тап шуның булмауы сәбәп түгелме ни Әптеләхәттең ауылына ҡайтыуын кисектереп йөрөүенә. Тыуған ауылында үткәне менән бөгөнгөһөн бәйләр исмаһам бер генә йорт булмауы ҡайһылай насар.. Ана, һаҙ юлынан берәү ат менән килеп сыҡты. Туктаны әле был. Аттың яҡшы булыуы иғтибарын йәлеп итте микән?

— һаумы, ҡустым... Кем тип торам... үҙебеҙҙең Әптеләхәт тә инде һин?!

Әптеләхәт тә таныны уны. Районда күргеләгәне лә бар:

— Мирхәйҙәров... ағай! һаумыһығыҙ!

— һаумы, ҡустым, һаумы! — Мирхәйҙәров, ике ҡуллап килеп күрешеп, Әптеләхәттең яурынынан ҡаҡты. — Ир булғанһың, мыҡтыланып киткәнһең! Әйҙә, арттан төш. Туп-тура үҙемә алҡайтам. Еңгәңә тауыҡ һуйып биреп киткәйнем, ҡайһылай яҡшы булды!

— Зыяратта, — Әптеләхәт эйәге менән шул яҡҡа ымланы, — кемделер ерләйҙәрме шул?

— Ә-ә... Эйе, эйе... һөйләрмен. — Мирхәйҙәров ҡырандасына менеп ултырҙы. — Әйҙә, ҡустым. Килеп ҡайһылай яҡшы иттең!

Мирхәйҙәровтың уның килеүенә бала төҫлө һөйөнөүен күреү Әптеләхәттең күҙенә йәш эркелтте: «Мин кем инде уға, әйтерһең бер туған ҡустыһы...» — тип уйланы ул Мирхәйҙәровтың уңған гимнастерка кейгән арҡаһына ҡарап. Шулай ҙа бирешкән, ныҡ бирешкән ул. Колхоз рәйесе — хәҙер шул, тип ишеткәйне Әптеләхәт. һуғышҡа тиклем мәктәп директоры ине ләһаң ул? Күрәһең, көслә ҡуйғандарҙыр. һуғыш мәлендә ҡорғаҡһыған хужалыҡты етәклэү, ай-һай, еңел түгелдер...

— Бисәкәй! Ас ҡапҡанды! Ҡунаҡ әпкилдем.

Ҡапҡа асырға йүгереп сыҡҡан түңәрәк йөҙлө ҡатынды шундуҡ таныны Әптеләхәт: был бит теге йырҙан уҡытҡан Сәрбиназ апай! Ысын исемен әйткәндәрен Әптеләхәт хатта хәтерләмәй ҙә. Бөтәһе лә уны яратып «Матур апай» тип йөрөттө.

— Матур апай! һаумыһығыҙ, Матур апай!

Үҙенең йомошо хаҡындағы һүҙҙе Әптеләхәт ашап алғас, лапаҫ аҫтында, күләгәгә сығып ултырғас ҡына башланы. Дөрөҫөрәге башламаһа ла үҙенән-үҙе шулай килеп сыҡты.

— Әйткәндәй, кемделер ерләйҙәр... — Әптеләхәттең ауылдаштарының яҙмышын тиҙерәк белгеһе килә, ә Мирхәйҙәров ул һөйләшеүҙе һаман артҡа шыуҙырғандай, кисектергәндәй.

— Теге ниҙе бит... Сибәғәт ҡартты.

— Тимерсенеме?!

— Эйе, эйе... Ихсанбайҙың атаһын. Төндә, йөрәге туктап, үлгән дә ятҡан... — Мирхәйҙәров көләмһөрэне. — Саҡ ҡына йәш бисәгә сығып китеп өлгөрмәй ҡалды.

— Йәш... бисәгә?

— Ну... ана, кәнсә ҡараған Раузаға бәйләнеп китте бит ул. Ҡарттың табаны аҫтына ут ҡапҡайны ҡабыуын...

— Да-а...

— Нигә? һин уны... шулай яҡшы иҫләйһеңме? — Мирхәйҙәров Әптеләхәткә сәйерһенеберәк ҡараны. — Улар ни... был ауылға күсеп кенә килгән кешеләр...

— Ҡайҙан?

— Ҡайҙан икәнен кем белһен... Элек ни ундай халыҡ күп Пулды бит. Этем белһен... мужет, раскулачиваниенан ҡасып йөрөгән бәндәләр булғандыр...

— Ундай уй... — Әптеләхәт әйтеп тә бөтмәне, Мирхәйҙәров әләктереп тә алды.

— Ундай уй килә шул башҡа. Ҡапыл килеп ошонда төпләнһәләр ҙә, ярлы йәшәмәнеләр. Урыҫ ҡапҡалы йорт, шитай, бер уларҙа.

— Эйе, эйе... хәтерләйем. Йылға буйында ғына.

— Ихсанбайын һуғыштан алып ҡалды...

— Ауырыу булманымы ул?

— Ҡайҙан ауырыу булһын? Ул эле лә бурһыҡ һымаҡ. Ә бисәһе... Фәүзиә. Ул бит кеше менән аралашманы. Биклэнеп йәшәне.

— Килендэре бар ине, шикелле.

— Эй-йе-е... Сэбилэ. Аныhы инде — исем өсөн. Ихсанбайҙың бисэ — өй беренсэ...

Әптеләхәттең башына эҫе ҡапҡандай, бит остары янып китте: шулай ук ул hуңланы микэн? Шулай ук Камалетдиновтың йомошон үтәмэй ҡайтыр микэн? Хэйер, үлгэн кешенэн hорау алып булмай.

— Миңэ уны күрер кэрэк ине, Сынтимер ағай.

— Кемде, Ихсанбайҙымы?

— Юҡ, атаhын.

— hы! Уны хэҙер күр ни ҙэ, күрмэ ни...

Мирхэйҙэров менэн Әптелэхэт зыяратка килеп еткэндэ, ҡарт төшөрөлгэн соҡорға тупраҡ өйөмө өйөлгэйне инде. Килгэн кешелэр уны-быны уйламаны, түрэ бит, хушлашырға килгэндер, тигэн уйҙа ҡалдылар. Бер ҡарт Әптелэхэт янына баҫты:

— Мэйетте арытмайыҡ тинек. Йомаға тиклем ерлэү хэйерле...

— Уныhын үҙегеҙ белэhегеҙ инде, — Мирхэйҙэров тэмэке тоҡандырҙы. Ҡарт китергэ ашыҡманы:

— Тик мына... hөлдэ өҫтэнэ ерлэнек. Мындай хэлдең булғаны юҡ ине аслан...

— Нисек... hөлдэ өҫтөнэ?

— Шулай. Ҡэбер ҡаҙып төшкэйнелэр — кеше күмелгэн булған. hөлдэне ҡуҙғатып торманыҡ — өҫтөнэ ерлэнек.

— Ғэжэп... — Мирхэйҙэров менэн Әптелэхэт китеп барҙылар. Әптелэхэт Ихсанбайҙың үҙгэреүен күреп аптыраны: шешенгэнме, hимергэнме шунда. Үҙе районда иң шэп ауыл Советы рэйесенэн hанала. Әйткэндэй, клубтар Әптелэхэт ҡарамағында булғас, Ихсанбайҙы ла күрмэй булмай. Эш шуны талап итэ. Ә Камалетдиновтың йомошон үтэй алманы Әптелэхэт: hуңланы. Күрэhең, бэндэ телэй — алла бойора, тигэндэре шулдыр...

Атаhын ерлэп ҡайтҡас, Ихсанбайҙа уянған иң ҙур телэк үлтереп эскеhе килеү булды. Бер яктан күңеленең бер осо тынсыны: ни тиhэң дэ ҡарт йүгэнhеҙ холҡо менэн Ихсанбайҙы көсөргэнештэ тотто. hуңғы осорҙағы ҡылығы,

ғөмүмэн, эҙэм анларлыҡ булманы. Теге кэнтэйен, Раузаhын, иртэгэ үк эштэн ҡыуыр кэрэк. Сыҡhын колхоз эшенэ, аҙ булhа ла майы кэмер, нэфсеhе баҫылыр.

Икенсе яктан, атаhының ҡапыл юҡ булыуы Ихсанбайҙы нык ҡына тетрэндерҙе. Нимэ өсөн йэшэне ул? Ғүмер буйы кешенэн ҡасып-боҫоп ғүмер итте, ҡаты бэғерле бисэhенэ габан-түшэк булды, э үҙе шуның бер йылмайып ҡарауына ирешэ алманы. Ихсанбайҙың үҙенэн дэ бер йүнле hүҙ ишетмэне. Бэлки, уның Раузаға бэйлэнеүе ғүмерендэ бер булhа ла ҡоллоҡтан ысҡынырға тырышыуы, аҙ булhа ла үҙенсэ йэшэп ҡалырға ынтылыуы булғандыр?

Ихсанбай үҙе hуң... ғүмер буйы бер төрлө уйлай, икенсе төрлө эшлэй. Ниндэйҙер аңлашылмаған күрэ алмаусанлыҡ йэшэй уның эсэhендэ тормошҡа. Шул тойғоно ул үҙе лэ hиҙмэҫтэн улында ла тэрбиэлэне. Ихсанбай ҡысҡырып көлөр сағында тешен ҡыҫты, шашып hөйөр, мөхэббэтен яулап утка керер бер саҡта hөйэ алманы, сигенде: ҡулына килеп ҡунған аҡҡошто таҙғараға алмаштырҙы. Башҡалар туфан булып калкып ил hаҡларға китте, э Ихсанбай боҫто, боҫҡан hайын hаҙға, ҡумырыҡҡа нығыраҡ сумды. Хэҙер уға үҙ өйө лэ hалкын бер төрмэ кеүек... Зарифаға ла аптырағандан бара ул... Ваҡытлыса булhа ла онотолорға була бара. Оҡшаш улар икеhе лэ. Икеhенең дэ күгелйем-йэшкелт күҙҙэрендэ кеше белмэгэн хэтэр упҡындар бар. Үҙенэ-үҙең ҡарау, үҙенде-үҙең нисек бар, шулай күреү ҡыҙыҡ түгел... Эсмэгэн сағында Зарифаны ене hөймэй уның, хатта, айығып, уянып киткэн сағында, эргэhендэ яткан шул бисэне күреп укшығаны, үҙе лэ hиҙмэҫтэн шуны карауаттан тибеп төшөргэне бар.

Сеймэлгэн уның тормошо, сыбалған. Хэҙер ептең осон үҙе лэ таба алмай. Мирхэйҙэров ҡаҙала, бик ҡаҙала. Әптелэхэт менэн зыяратка килергэ ни ҡалған ине уларға? Сэйер, сэйер... Серҙең төйөнө, эсэhенең ҡара ятыу кеүек күҙҙэренэ йэшеренгэн кеүек тэ бит... тик эйтэме hуң ул, асамы ни ул күңелен?..

Ихсанбай ҡапҡаhы алдында тапана биреп торҙо ла эскэ үтте. Әсэhе йэшэгэн бэлэкэй өйҙөң ишеге асыҡ. Ҡарсыҡ ойҙэлер, моғайын... Ҡэбер ҡаҙған кешелэрҙе ашатып сығарған, күрэhең: түрбашта йыуылмаған ҡашығаяҡ тулып ята.

Әсәһенең ҡарашы менән осрашҡас, Ихсанбайҙың йөрәге жыу итеп ҡалды, ғазаптан атылыр, һытылыр сиккә етеп тулышҡан был күҙҙәргә ҡарап тороу мөмкин дә түгел.

— Әсәй... — Ихсанбай үҙенең тауышын үҙе танымаңы. Ҡасандан бирле былай йылы итеп өндәшкәне юҡ эсәһенә? Әсәһе ҡапыл күҙҙәрен йомдо, ирендәре, ағарып ярылған, көс менән ҡыҫылған ирендәре:

— Сыҡ... кит... сыҡ, — тип ялбарҙы.

Етенсе бүлек

Атаһының ҡайтыуы Мәҙинәнең рәнйеш, һағыш, юҡлыҡ менән ҡатҡан күңелен эретеп, йөрәгенең иң тәрән бер ерендә киләсәккә өмөт осҡондарын уятты. Өмөт һүнеп бөтмәгән булған икән әле. Ана ул саҡ ҡына һауа инеү менән баҙрап тоҡаныр, ялҡынланып дөрләр сиккә етеп тулышты. Бынан һуң малайҙар, уларҙың тамағы тураһында ҡайғыртыр кеше бар! Әлбиттә, Мәҙинә унан тартына, бала саҡта «атай» тип ҡосағына һыйынмағас, хәҙер килеп яҡыная, һырыға алмаясаҡтыр инде. Шулай булһа ла һәйбәт. Картуф ерен дә һөрҙөрҙө атаһы. Ҡыйралған ҡоймаларҙы ла рәтләне. Мейестең торбаһы ҡолағайны, уны ла, «һә» тигәнсе, яңынан сығарып ҡуйҙы. Ә теге ике малай, күпкәкмен тип тормайҙар, берәһе алдында булһа, икенсеһе — елкәһендә. Аталары улар нимә эшләһә лә түҙә, исмаһам, «ҡуйығыҙ әле» тип тә ҡуймай.

Кис йоҡларға ятҡас, Мәҙинәнең башына төрлө уйҙар килә: ни өсөн эсәһе ҡарамаҡҡа һөйкөмлө, хатта уҫал да түгел кеше менән бәхетле була алмаған? Әсәһе иҫән булһа, Мәҙинә, әлбиттә, тартынмай һорар ине, юҡ шул һәм булмаясаҡ.

Ә атаһы уфтана. Бер көндө Мәҙинә уның әсәһенең күлдәген тотоп илап торған сағын күрҙе. Хатта ул шуны аңланы: атаһы эсәһе тере саҡта кейгән генә түгел, тотҡан нәмәләрҙе лә изгеләштерә. Бер көн өй йыйыштырғанда урындыҡ аҫтынан иҫке бер бумала тапты Мәҙинә. Шуны ҡыйлыҡҡа сығарып ташларға һалып ҡуйған еренән атаһы кире өйгә индерҙе:

— Бынауҙы, — тигән була, — ташлама әле, Мәҙинә.

— Ни итәһең уны, ашалып, ҡатып бөткән.

— Торһон әле, — атаһы шуны мейес башына һалып ҡуйҙы, — әсәйең... Гөлбаныу бер май байрамына шуның менән өй аҡлағайны. Бауынан танынм... Бумалаһы тарала ла китә, — ул көлөмһөрәне. — Мәйтәм, ҡана, Гөлбаныу, үҙем рәтләп бирәйем. Тимер сыбыҡ менән сырмап бирҙем шунан...

Быҙдай саҡта Мәҙинәгә үтә нығ ҡыйын. Эс-бауырҙары өҙөлә. Ә ҡайһы саҡ атаһына:

— Етәр, етәр һаташырға! Ҡайтмай бит инде ул, ҡайтмай! — тип ҡысҡырғыһы килә.

Эйе, ҡайтмаясаҡ әсәһе. Ул уй менән Мәҙинә инде килеште. Ә йәшәр кәрәк. Хоҙайҙан ғына булып, атаһына һыйырҙы кире юллап бирешһәләр, исмаһам, бынау ике малай аҡҡа туйырҙар ине. Ул сағында атаһы ла, бәлки, түшәгендә аҙыраҡ борһаланыр ине.

— Әхирәт! — утҡа ҡарап уйланып ултырған Мәҙинә ҡапыл артына әйләнде: Ғәлимә икән. Ауыҙы ҡолағына еткән.

— Шул тиклем, тының бөткәнсе йүгергәнһең... Айыу баҫтырҙымы әллә?

— Әхирәт... Райондан кеше килгән. Әптеләхәт тиме шунда. Шул бөгөн клубҡа йәштәрҙе йыя. Һөнәре бар кешене уҡырға алып китә, ти.

— Шунан?

— Шунан ни... Мин ишетеү менән һиңә йүгерҙем!

— Миңә... нимәгә?!

— Нисек: нимәгә? Йырларға!

— Миңә ҡалған...

— Атаҡ, атаҡ. — Ғәлимәнең аптырауҙан күҙҙәренең ҡаралары төбәһенә инеп юғала яҙҙы. — Һин дә шулай гигәс! Атайым әйтә: уҡыу эләкһә Мәҙинәгә, ысын әртис буласаҡ, ти!

— Әртис... — Мәҙинә тағы моңайҙы. — Бармаҡтарым һыҙлауҙан төндә йоҡлай ҙа алмайым... Миңә таналар бирҙеләр, Ғәлимә...

— Әртис булһаң, һыйыр ҙа һаумайһың, тиреҫ тә күрәмәйһең!

— Мин бит... уҡымаған.

— Әйтәм бит: уҡырға әпкитергә килгән. Талантлы йәштәр кәрәк беҙгә, тип әйткәнен үҙем ишеттем!

— Йәш кешеме? — Мәҙинә үҙе һораны ла, үҙе ҡыҙарҙы.

— Ҡарт түгел инде. һәйбәт кенә һөйләшә. Культурный.

— Минең унда... кейеп барыр нәмәм дә юҡ...

— Ә теге... әсәйендең, — Ғәлимә алан-йолан ҡаранды, — кейемдәре ҡайҙа?

— Һандыҡта...

— Ас әле һандығынды!

— Эй, улар бит... эсәйемдең төҫө. Аманат.

— Булһа! Һин уларҙы һатырға алып бармайһың да!

— Әллэсе... Ҡуй, Ғәлимә, оялырмын йэ...

— Әллә кем һиңә өй һата! — Ғәлимә һандыҡтан укалары ялтлап торған еләнде, семәрле итектәрҙе, таҫмалы күлдәк, йөҙөк, беләҙектәрҙе сығара ла башланы. — Их! Ошолар миндә булһасы! Юҡ, башта үҙекэйем кейеп ҡарайым!..

Мәҙинэ эхирәтенең бер хэсрәтһеҙ, шаталаҡ йөҙөнә аптырап та, көнлэшеп тә ҡарай. Уны ла шулай хэсрәттәре аҙға ғына, бик аҙға ғына булһа ла ҡалдырып торһасы... Әллэ Ғәлимә дөрөҫ тә һөйлэй микән? Әллә... Мәҙинәгә бәхетен һынап ҡарарғамы? Ах, исмаһам, атаһы өйҙә юк, ул ниндәй кәңэш бирер ине икэн?

Ҡыҙҙың йәне — ҡырҡ, тип, күрәһең, юҡҡа әйтмэгәндәр. Рауза ла аяҡҡа баҫты. Әлдэ улы, Хөсэйене бар. Әсәһен алып ҡайтып, өшкөргән тоҙ, үлэн эсереп, терелтеп, әҙәм итеп алды. Төн сыҡкансы эргәһенән китмәне. Ниндэйҙер бурыл тураһында һөйләнеп ҡуйһа ла, аттары янына сығып олаҡманы. Шуныһына тағы аптыраны Рауза: эсәһе менэн һөйләшкэндэ русса һүҙ ҡыҫтырманы.

— Ну ҡурҡтым. Миңә бит, әсэйең үлеп ята, тип килеп әйттеләр, — тине ул әсәһенең аҡ маңлайына һылашҡан ҡара ҡулсаларын-сәсен һыйпап, — көймә инде ҡабат. Мин гел эргәндә булырмын, йәме?

Эх, улы элек тә Рауза менән шулай һөйләшкән булһа! Әллә ни булды ла ҡуйҙы бит, ен алыштырған тиерһең... Ә көймэй булмай Раузаға. Тик ул был юлы кемгә көйөргэ белмәй. Әгәр Сибәғәтен ҡәҙимге бер бисә тартып алһа, ул аптырамаҫ ине, кемде ҡарғарға, кемде тезәләргэ белер ине! Ә бында бит хәл башҡаса: Сибәғәте аяҙ көндө йәшен атҡандай юҡ булды! Аллаға рәнйер ине — уға һүҙ тейҙерергә ярамай, яҙмышына ла зарлана алмай: нимә тиһә лэ ул Раузаға алма кеүек ул бүлэк иткән...

Ә йөрәк бит яна. Ялҡыны бөтэ тәненә тарала. Ай, ҡыйын бит түҙеүҙәре. Ана тағы яҡтыра. Ниңә ата ул таң? Кем өсөн сыға был күҙҙе сағылдырған ҡояш?! Көн яҡтыҡайҙары кыуандырмаҫ шул инде хәҙер...

Рауза торҙо, һалҡын һыу менән сайынып алды. Ойрәнелгән хәрәкәт менән самауырына һыу ҡойҙо, һыйырын һауып, көтөүгә ҡыуҙы. Хөсэйенгә сәй эсергән арала үҙенә лә сәй яһаны, тик тамағына аш ҡына барманы, хатта сәйҙән дә кол тәме килгән кеүек...

Эш ҡалдырып өйрәнмәгәс, аяҡтары үҙенән-үҙе кәнсәгә атланы. Бөгөн һуңлабыраҡ та китте микән, ҡояш күтәрелеп үк киткән. Ихсанбай ҙа Сибәғәтенең яңғыҙ улы. Ирем киҫәге итем киҫәге, тигәндәй... Ирем. Ә булдымы һуң Рауҙаның ире?

Кэнсә ишеген асыуға, күҙенә ысынлап та һөмһөрө ҡойолған Ихсанбай күренде. Ярабби! Уның был тиклем уҫал сағын күргәне юҡ ине әле Раузаның. Ҡайғымы уны шундай киәфәткә индергән, эллә булмаһа, кистән самаламай юшөргәнме?

— Һаумы әле... Ихсанбай... улым.

«Улым» һүҙенең теленән нисек ысҡыныуын үҙе лә һиҙмәне Рауза.

— Мин һиңә ниндәй ул булайым! — Ихсанбай ултырған сренән ырғып торҙо, ҡулы өҫтәл өҫтөндәге ҡара һауытына йәбеште. — Ошоно битеңә... алып бәрмәҫ борон... тай мынан, уйнашсы!

Рауза башта ҡаушаны, лэкин үҙен тиҙ үк ҡулға алды, мөрәген өткән һүҙҙәрҙе сәпәргә кеше табылыуҙан тәненә хатта рэхэт дерелдэү йүгерҙе. Кемдендер бүлмәгә инеүе лә, уның нимәлер тип, кемгәлер өндэшеүе лә туктата алманы уны. Аяҡтарын айырыбыраҡ баҫып, ике ҡулын бөйөрөнә гаянды Рауза:

— Кем тинең, Ихсанбай? Ҡабатла әле? Ула-ай булып, мин нимә эштәгән? Ғүмерем буйы ике ир күрҙем — эсеп поромәнем, аҙманым. Ул нимәштәп мин уйнашсы булайым, ә?

Ихсанбай ҙа һытылыр сиккә етеп бүртенде:

— Нимә, кеше ирен өйөндән сығармай яҡырыуың уйнашка инмәйме?!

— Ул миндә ятһа, настәйәшнә ятты! Ул, мин яратыштыҡ! Ә һин, өйөр айғыры, ирҙәр юктан файҙаланып, менмәгән бисә ҡалдырманың!

— Нимә һөйләгәненде белеп һөйлә!

– Ә мин белеп һөйҙәйем һәм берәүҙән дә ҡурҡмайым! Кеше өндәшмәгәс тә Гөлбаныуҙың игеҙәктәре күктән төшкәндәр, тип беләңме?! һин генә, эт, еттең меҫкендең башына!

— Дәлилең юк! Нахаҡ!

— Ә-ә... һиңә дәлил дә кәрәкме ни? Кәрәк булһа — пажалыста: ике малайҙың ике миңе — олаталарыныҡы! Тағы дәлил кәрәкме?!

— Сыҡ, юғал күҙемдән!

— Ғүмер буйы эштәгән кәнсәмдән былай ғына сығара алмаҫһың — пыркарурға барам! Камалетдиновтың үҙенә инәм! — Рауза кинәт боролған арала Әптеләхәт менән йөҙгә-йөҙ осрашты. — А-а-ә, Әптеләхәт ҡустым, һин икәнһең? Мына күрҙеңме Тирәклелә һалдаткаларҙан нисек издеват иткәндәрен! Һеҙ тегендә ҡан ҡойҙоғоҙ, был тылда көн-төн эсте, типтерҙе! Хәҙер, ана, типтергән бисәләренең кемен бүренән ашата, кемен эсереп юлдан яҙҙыра!

— Нимә, һинең менән дә типтерҙемме?

— У-уй, алла һаҡтаһын! Хоҙай һинең кеүек эткә дәл итмәһен!

Рауза әйтеп бөтмәгәндәрен урам буйлап ҡысҡыра-ҡысҡыра сығып китте. Әптеләхәт уның:

— Барам пыркарурға! Ялыу менән барам! — тип ҡысҡырғанын ғына айырым-асыҡ ишетте.

Ихсанбай ярһыуынан ҡалтыранһа ла, үҙен ҡулға алырға тырышты. Ни тиһәң дә ҡаршыһында элекке сусҡа ҡараусы булһа ла, хәҙер районда хөкүмәт этәсе булып эшләгән кеше баҫып тора бит. Етмәһә, теге албаҫты эллә нәмәләр ҡысҡырып өлгөрҙө, уның һүҙҙәренә иғтибар итте микән был маңка малай, юкмы? Эсенән шулай уйлаһа ла тыштан тыныс күренергә тырышып, бөтөнлэй икенсе төрлө өндәште Ихсанбай:

— Кисә йүнләп һинең менән һөйләшеп тә булманы, әйҙә, ултыр Әптеләхәт ҡустым.

Әптеләхәт тә элеңге күргән-ишеткәненә ваҡ-төйәк тип ҡарауҙы хуп күргән кешеләй ҡыланды:

Йе, эйе, кисә минең ҡайғы булырлыҡ инеме? Ауыр тупрағы еңел булһын, тибеҙ инде бындай сакта, ни хәл иөһсн...

Шу-ла-ай... Атай ҡарт ҡапыл ғына китте лә барҙы, — шуның Ихсанбай йәшкелт күҙҙәрен ҡабат ишеккә төбәне, йтерһең дә унда Рауза һаман ҡысҡырынып баҫып тора, — . . ю момәһе, ҡартайғанда тыртайған тип, ошо бисэгә й • юшп ебит... Түҙмәнем...

Өптеләхәт, портсигарын сығарҙы:

Көйрәтеп алмайыҡмы?

Була инде, — Ихсанбай эле Әптеләхәттең ни йомош менән йөрөүен белмәй. Мирхәйҙәровтарға туктаған, шикелле. Мирхәйҙәров бының башын да бутап өлгөрмәгән тиһеңме? — һине мәҙәниәт тирәһендә эшләй тип ишеткәйнем...

Эйе... Әле һиңә килеүем дә шул: һәләтле ҡыҙҙар, егетгәр эҙләйбеҙ. Үҙебеҙҙең кешеләрҙе укытып алыр кәрәк.

Ихсанбай йәнләнә төштө:

Нимә теге... йырлаған, бейегән кеүектәрме?

Эйе, эйе... Бик сағыуҙары булһа, әлбиттэ...

Табабыҙ, йыябыҙ. Колопка килһендәр, саҡыртайым мәйһәң!

Гирәкленең дә клубы, башка ауылдарҙыкы кеүек үк, элекке мәсет. Был мәсеттең манараһын төшөргәндәрен Вптеләхәт үҙ күҙҙәре менән күрҙе. Малай ғына булһа ла ДОеренә уйылып ҡалған. Ул сакта йөҙйәшәр муллаһы ла тере ине әле. Арҡандарҙы мәсеттең манараһына бәйләп, ат п һөйрәттереп төшөрөп маташкан ир-егет эргәһенә Кмлеп:

Юк менән булаһығыҙ, уландар, — тине ул. — Хоҙай Корттарының ҡайҙа һалыныуы ер яратылғанға тиклем үк билдәләп ҡуйылған. Мин күрә алмам, һеҙ, моғайын, Күрсрһегеҙ: үҙегеҙ булмаһа, уландарығыҙ шуларҙы кире моеетка әйләндереп йөрөйәсәк.

Эй олатай, беҙ нимэ? Ҡушалар бит! Бойороҡ ЮПфынан килә. һин инде беҙгә бер үк бәддоға укыма, — I ине шунда берећe.

— Ҡарғыш ике осло, уландар, — тине мулла, быға ҡарап, — бер осоноң ул кешегә барып етеү-етмәүе икеле, ә икенсе осо мотлаҡ бондәнең үҙендә ҡала.

Ихсанбайҙың «колоп» тигәне бына шул мәсет инде. Боронғо оҫталар тарафынан ҙур зауыҡ мснән һалынған был ҡарағас йорт тағы әллә нисә быуынды алыштырыр әле. Үҙе, шау ҡарағастан һалыныуға ҡарамаҫтан, тыштан да ҡарағас таҡталар менән көпләнгән. Тәҙрә ҡапҡастары иҫ китмәле һырҙар менән һырылған, ҡарап торһаң, быны эшләгән оҫталарҙың түҙеменә, маһирлығына иҫең китә. Был тиклем камиллыҡҡа ирешеү өсөн халыҡ был ырыу сәнғәте менән ҡайһы дәүерҙәрҙән алып шөғөлләнергә тейеш булды икән?

Әптеләхәт шулай бала сағынан күреп ғәҙәтләнгән бинаны өр-яңынан күҙ уңынан кисереп тора бирҙе. Хэйер, ана, Мирхәйҙәров үҙе лә килә. Сыҙамаған тынғыһыҙ йэн.

— һәй, ҡустым, оҙаҡлап киттем, эш ни бөтәме... Ишетмэнеңме әле? Мин ни уларҙы ҡайһыһын һыуҙан, ҡайһыһын ферманан һөйрәп тигәндәй алып килдем.

Улар ингәндә дүрт ҡыҙ, өс егет эскәмйәлә ултыралар, ҡалғандары арттараҡ, мейес буйына теҙелешкэн. Күрәһең, ҡаралырға килгәндәре шул етәүҙер.

Ҡыҙҙар ҡыҫтаталар, сығып йырларға уңайһыҙланалар. Әптелэхәт уларға бының әле һайлап алыу алдынан ҡарап сығыу ғына икәнен, ә уҡырға алып китер өсөн һайларға ул музыка белгесе менән тағы ике аҙнанан килерен аңлатты. Шунда бер ҡыҙ:

— Беҙ барыбер үтә алмабыҙ. Ана, Мәҙинә генә йырлаһын да ҡуйһын, — тине.

— Кемегеҙ Мәҙинә?

Боронғо башҡорт ҡыҙҙары кейемендә килгән талсыбыҡтай нескә, ләкин бик һомғол буйлы ҡыҙ урынынан ҡалҡты.

— Гөлбаныу?! — Әптеләхәттең башына эҫе ут ҡапты, йөрәге өҙөлөр сиккә етеп алҡынып тибә башланы.

— Мәҙинә мин... Гөлбаныуҙың... ҡыҙы...

— Гөлбаныуҙың... ҡыҙы?!

Ошо минутта уҡ үҙен ҡулға алырға тейеш Әптеләхәт, юғиһә ҡыҙ ҡаушаясаҡ, смотр шайтан белһен нимәгә эүерелэсэк!

— Ниндәй йыр һайланың, Мәҙинә?

Бвйрәкәй...

Шү п саҡ курайсы аяғүрә баҫты. Башта талғын ғына ҡурай моңо ағы ыды. уға әллә ҡырҙарҙан, әллә төрлө сәскәләрҙән, • яҙғы слдән, әллә һакыштан, әллә шатлыктан яралған иҫ китмәле гаүыш кушЫЛДЫ.

Иыр гынилы Әптеләхәттең иисәмә йылдар етемлектән, һ\ гыштын кырыҫлығынан, ырыҫының бәғерһеҙлегенән каз кан I гүйа ирсне, үиә уның күңеленән килер ....ктарҙы обыуып горған ҙур бср ташты алып I III........р

!...........и һауынсыһыҙ **калдырҙың** беҙҙе, ІМ **Мирхпйррон Мәҙинәгә** яҡыи уҡ килде, ' ш.....әрһең **кыҙыкай?**

Мәҙинә **Мирхәйҙәровтын гау.........ща** уҫаллыҡ юҡлыҡты шүм |\ к аилаиы

Ммнл тигәндә шул имдс ул, ағай. Мәктәптә укып **Аулманы һуғыш сыкты. Инде һеҙ...**

Шаяртам, шаяртып ҡына әйтәм. — Мирхәйҙәров **нп** ркелгән **йәште** күрһотмоҫкә була башын ситкә борҙо. ОМТСЛЙХЯТ тә тыя алманы йәштэрен, аптырағас, клубтан > ып ып **китте.**

Шул китеүҙән ул хэтһеҙ ер йөрөнө. Башлап ятып һыу и шишмоһе лә, малай сағында баштарына үрмәләгэн гирәктәре лә ҡалманы. Донъяның матурлығына, уны гыуҙырған осоһенэ, буй еткерткән ошо ергә рэхмәт!

Маҙинәнең йыры, башҡарыусыһының сафлығы, Һылыулығы башына киткән Әптеләхәткә хәҙер гармун ғына етмәй. Етмәйәсәк тэ уға гармун. Уның күңеле гармун П ' юренә баҫырға ғүмере буйы сарсап йәшэйәсәк. Әптеләхәт ' шы п йоҡоһонан уянғандай, уң ҡулының бармаҡтарына Кирамы: бэлки, берэй төрлө мөғжизә менэн улар ҡабат индер? Юҡ шул, юҡ: унда бары ике бармаҡ һерәйеп тора, ' шры ла тупыс...

Эх!.. — Әптеләхәттең ауыҙынан был иңрәү әллә ' ы кі м, оллә сыҡманы. Ни тиклем һыуһаған уның күңеле шул • іф моңға, шул һағышлы, йөрәктең үҙенэн урғылған илаһи мпшм. Һин, һин генә кәрәк миңә, Мәҙинә! Һин генә мине йә Кукко күтәрэһең, йэ ергэ бэрәһең. Ҡабат бер ҙэ тормаҫлыҡ итеп бәрәһең.

Шәһәрбаныу апай, Гөлбаныу... Улар менән бергә үткәргән кистәр. Тәүге һөйөүгә генә хас ярһыу менән Гөлбаныуға ғашиҡ булыу... Хашимдың шул бәхетле кистәрҙе тартып алыуы... Юҡ, был юлы мәмәй булмаҫ Әптеләхәт. Ерҙән түгел, күктән, Хоҙайҙың үҙенән һорап алған танһыҡ йәрен яттарға ҡалдырмаҫ! Йәрен... Иш итерме һуң Мәҙинә Әптеләхәтте? Ә йәш айырмаһы... Зәғифлек... Ә күңел, күңел бит яңы ун етелә кеүек, ә бармаҡтары... Төштәрендә ул ниндәй генә көйҙәр уйнамай ҙа, ниндәй генә көйҙәр сығармай. Эйе, эйе... Көйҙәр сығара ул! Ниңә әле үҙе лә уҡырға самаламай? Шуларҙы ул нотаға һалһа, көй сығарһа, ә Мәҙинә башҡарһа...

Баштан-аяҡ хыялға сумған Әптелэхәт баҫыу юлынан ауылға ашыҡты, ауылға килеп ингәс тә туп-тура Мәҙинәләргә атланы...

Гөлбаныу кейемендә килеп ингән Мәҙинәне күргәс, Ихсанбай башта аҡылдан яҙып барамдыр, тип уйланы. Күҙен бер асты, бер йомдо. Маңлайынан һалҡын тир бәреп сыҡты, аяҡ быуындары бушап, әкрен генә ултырғысҡа сүгәләне. «Ул! — Ихсанбай уға күтәрелеп ҡараны, — ул түгел!» — Гөлбаныуҙың күҙҙәре, Ихсанбайҙыҡы кеүек үк, күгелйем-йәшкелтем ине. Уларҙа юшан төҫө, юшан йомшаҡлығы бар ине. Бының күҙҙәре дөм-ҡаралар. Ҡарашы ла Гөлбаныуҙыҡы кеүек наҙлы түгел, һынап бағалар уның күҙҙәре, ҡаты ҡарайҙар. Ә башҡа ере, буй-һыны, төҫ-фиғеле — торғаны Гөлбаныу. Ошоға тиклем ул Мәҙинәне ҡара яулығын ҡашына тиклем төшөрөп бәйләп, һырмаһын билбау менән ҡыҫып быуып, аяғына сабата кейгән килеш кенә күрә ине. Ә был хур ҡыҙы. Хатта елгә ярылған, ҡаны сырҡырабыраҡ торған ирендәре лә үтә лә ҡупшы, үтә лә ныҡ үҙенә тарта. Йылмайғанда соҡорайған алһыу бите, нескә генә оҙонсараҡ эйәге, дөм-ҡара, һөрмәле күҙҙәре, шул бер аҙ ҡыяраҡ, ләкин түп-түңәрәк күҙҙәре өҫтөнә дуғаланып сөйөлгән ҡаштары, эйәк осондағы ҡара миңе — бөтәһе, бөтәһе лә Гөлбаныуҙы хәтерләтә. Биле нескә генә үҙенең, яурыны тар, елән кейгән ҡуйыны тулып-күпереп тора. Ошондай тал сыбығылай ҡыҙҙа былдай ҡалҡыу түштәр ҡайҙан барлыҡҡа килгәндер ул?

Ихсанбайҙың ауыҙында төкөрөк кипте хатта. Бына ҡайҙа I><I ән ул бәхет? Эргәлә генә булған, күршелә генә йәшәгән. Был хур ҡыҙын ҡосаҡлап йоҡлаған бер төнөң бер ғүмергә горошлолор ул. Ә уның йылан кеүек йылҡылдап биленән гүәән гөшкән толомдарысы... Гөлбаныуҙың да сәстәрс ОШОЛай ине, үҙҙәре сөм-ҡаралар, үҙҙәре ҡояшта ҡыҙғылт I гкын тҫөнә инеп яналар ине...

Мәҙинәнең йырын яҡшылап тыңлай ҙа алманы Ихсанбай. hава етмәгәндәй булғас, күлдәк иҙеүен ысҡындырҙы, РИр ләгән усы менән сәстәрен һыпырғыланы. Ана, Мәҙинәнең иҙылып кипкән ирене йырлағанда тартышты, унан энә күҙәүендәй генә ҡан сырҡырап сыҡты. Юҡ, йырлағанда йәнселмәне ул, гүйә уны Ихсанбай үбеп ҡанатты. Башҡаса I \ жер эмәле калманы Ихсанбайҙың: Гөлбаныуҙың түмен . гатып ҡарағаны бирле ул йәнең-тәнең менән тартылған бисөнең ысын тәмен белә! Белгән өсөн дә Мәҙинәгә ҡарап ултыра алмай ул: эллә ҡасан һүнгән, әллә ҡайҙа йәшеренгән комар-нәфсеһен уятты унда бөгөн Мәҙинә. Теге саҡ, I елбаныу мәсьәләһендә, ҡурҡты. Тормоштоң күҙенә туп-тура Карауҙан бөжләне. Ә хәҙер — юҡ. Хәҙер, Мәҙинәгә ҡарап, ул юғалтыуҙың, ул хатаһының хаҡын яҡшы анланы Ихсанбай.

Моҙинә, өйөнә ҡайтҡас, байтаҡ ваҡыт өҫтөн һалмайынса, урындыҡ ширлегендә шаңҡыған һымаҡ ултырҙы. Әллә ЦИИДЭЙ көн булды был. Әллә нисек ҡыйыулығы етеп, бынау Кейемдәрҙе кейҙе, әллә ҡайҙан йөрәге етеп, клубҡа барҙы, районда н килгән ағай алдында йөрьәт итеп, ауыҙ күтәреп имриап ебәрҙе. Аптырамаҫлыҡ та түгел шул. Етмәһә, шул кеше Мәҙинәнең күҙҙәренә шундай итеп ҡараны. Әле уға бер юң дә шул рәүешле ҡарағаны юҡ ине. Ә ниңә ул Мәҙинәгә ҡапыл: «Гөлбаныу!» — тип өндәште икән? Тимәк, \ ағай Мәҙинәнең әсәһен белгән булып сыға?! Иҫтәрең дә КИтер! Әгәр ҙә Мәҙинәнең йыры оҡшап, уҡырға алып китеп барһалар... Уй! Була торғаны бармы? Етмәһә, игеҙәктәр... \|.|к, улар күренмәйсе... Әллә нишләп шулар һуңғы ваҡытта шлыҫҡа китеп уйнарға ғәҙәтләнделәр.

Моҙинә, кейемдәрен йәһәт-йәһәт сисеп, кире һандыҡҡа Гултыра башланы. Өҫтөнә шулай ҙа элекке аламаһын кейгеһе

килмәне, атаһы алып ҡайтҡан батистан күршеһе тегеп биргән күлдәген кейҙе, аяғына яңы ҡаталарын эләктерҙе. Уға теге клубта күргән ағай тағы осрар, тағы йә Гөлбаныу, йә Мәҙинә тип һүҙ ҡушыр һымаҡсы...

Һигеҙенсе бүлек

Күкбүре көсөктәре менән мәж килеп кәртә артында ята. Төндә һөйрәп килтергән емтекте шулар кинәнеп талай. Бөтәһе лә бер иштән генәләр: күк кенәләр. Әҙәм шуларҙы был тиклем дә инәһенә оҡшамаҫтар, ти. Ә Күкбүре белә: улар үҙҙәренең урмандағы аталарына күберәк тартҡандар. Бынау баш осондағы күктең үҙе кеүек уларҙың атаһы. Күҙҙәре лә шулай. Күкбүре хәҙер ни өсөн ауыл арҙандарын хушһынмағанын, ни өсөн гел генә үле көсөктәр табыуын төшөндө. Быйыл ғына төшөндө. Күңеле өйкәлеп, әрнеп, һыҙланыу ҡатыш рәнйешкә сыҙай алмайынса, кәртә башында ултырған килеш олоп ебәрҙе ул бер төндө. Уның олоуына ауыл эттәре ҡушылманы, киреһенсә, тынып, шымып ҡалдылар. Ә урман яғынан уны тиҙ ишеттеләр һәм шундай уҡ олоу менән яуап ҡайтарҙылар. Белә хәҙер Күкбүре: танһыҡһырап тапҡан көсөктәре бауыр ҡалҡытһа, ул ана шул урманға эйәртеп китәсәк уларҙы. Урмандағы аталары былар янына инде әллә нисә тапҡыр килеп китте. Саҡыра ул Күкбүрене. Ә теге саҡ, Күкбүренең олоуын ишетеп, көтөүҙәре менән кәртә башына тулғастары, шатлыҡтан күҙҙәре атылып сыға яҙҙы уның. Бер нисә төн рәттән Күкбүре буласаҡ балаларының аталары менән туй яһаны. Туй, әлбиттә, кәртә башына ғына һыйманы, ул башта картуф баҡсаһына, унан урмандың үҙенә күсте. Уҙамандың Күкбүрене ҡайтарғыһы килмәне, әммә Күкбүре көсөктәрен урманда табыуҙан ҡурҡты...

Инде хәҙер китер. Ҡаны яңы йәшәү ҡомарын, танһыҡ, көслө уҙамандың сәм-дәртенең үҙенә эркелеүен көтә. Ауыл эттәренең эрһеҙлеге, бәйһеҙлеге аҫтында күпме ғүмере заяға үткән... Ниңә шуларҙың муйындарын сәйнәп кенә быраҡтырманы икән?! Их, әгәр ҙә уны ҡасандыр, кемдер әсәһенең йылы ҡуйынынан айырып башын томалап, ҡайҙалыр алып китмәгән булһа! Алып китеүҙәре етмәгән,



сынйырға бәйләнеләр, тыңларға, бойороҡтарын үтәргә өйрәттеләр.

Күкбүре, һыу яғында шыпырт ҡына һөйләшкән тауыштар ишетеп, ҡолаҡтарын шымартты. «Тегеләр!» — тигән уй йүгерҙе кәнтәйҙең башынан. — Гел шул ергә киләләр! Элек ярыҡтан ғына унын күсөктәренә тамһынып ҡарап торалар ине. Хужа, бер таҡтаны ҡайырып алып ташлап, юл яһағас, баштарын да тыға башланылар. Күкбүре һиҙә: былар унын балаларына көндән-көн нығыраҡ ҡыҙыша. Әгәр улар эргәһендә инәләре ятмаһа, былар шуларҙы күптән берәмләп ташып бөтөрҙәр ине. «Йәгеҙ, йә килеп ҡарағыҙ!» — Күкбүре юрый, башын алғы тәпәйҙәренә һалып, йоҡлағанға һалышты. Малайҙар, шуны ғына көткәндәй, теге ярыҡтан ҡыҫыла-кипсэлә инделәр һәм, әҙерәк тирә-яҡтарына ҡараңғылап торғас: «Маһ-маһ!» — тип әкрен генә шыбырлап, күсөктәргә яҡыная башланылар. Күкбүренең бындай әрһеҙлеккә талағы ташты, шулай ҙа, түҙемлеген йыйып, ни булырын көтөргә булды: был әҙәм селбәрэләре унын өсөн үтә лә ваҡ мәшәкәт бит. Уларҙың ҙурыһынан ғына ҡурҡа Күкбүре: мэсәлэн, Ихсанбайҙан. Был икәүҙең Ихсанбай менән бер оянан икәнен дә яҡшы төшөнә ул, тик Хужаның ошоларҙы ниңә үҙе менән эйәртеп алып йөрөмәүенә аптырай.

Селбәрәләрҙең береһе аҡһыл, нескә генә бармаҡтары менән Күкбүренең бер көсөгөн тотоп алды, теге бахыр, эсе бүҫелә яҙғансы туйынған сабыйы, малайҙың ҡыҫып тотоуынан хатта ыңғырашып ҡуйҙы. Икенсеһе лә үрелде көсөгөнә. О! Ул былай ҙа сибек. Кинйә. Төпләмеш. Берэй ерен имгәтһә, у ләғнәт! Күкбүре бер һикереүҙә малайҙың муйынын боғаҙланы, тағы бер ынтылып, икенсеһен дә тамаҡланы. Малайҙар, ҡысҡырырға түгел, «ыһ» итергә лә өлгөрмәй, йәшел үләнгә һуҙылдылар. Көсөктәр, сыйыл-дашып, кире ояларына йүгерҙе. Күкбүре, ояһы тирәләй арлы-бирле йөрөштөрҙө лә, кире инеп ятты.

— Ихсанбай ағай, беҙҙең малайҙарҙы күрмәнеңме? — Кәртә артынан ҡайтып килгән Ихсанбайҙы Мәҙинәнең ҡапыл осрауы ҡаушата төштө.

— Юҡсы... Мин ни бая киткәндән яңы ҡайтып киләм...

Кешеләр ошо яҡка киткәндәрен күргән.

Әлләсе... һаҙ эсендә йөрөмэһәләр, — Ихсанбай тирә-яғын байҡаштырған арала Мәҙинә йүгереп китеп тә барҙы. Ихсанбайҙың йөрәге тағы ла ашҡынып тибә башланы: ниҙер Һиҙена бит күңеле. Малайҙар бит күптән инде Күкбүренең көсөктәренэ күҙ һала. Ихсанбай ҙа быны эллэ ҡасандан һиҙә йөрөй. Шуға ла ул теге таҡтаны алып ташланы. Бала бит \ [ар, ымһынмай булмаҫтар. Ә Күкбүре, көсөктәренә яҡын оара башлаһаң, торғаны аждаһа. Әгәр ҙә инде хәл-ваҡиғалар Ихсанбай уйлағанса шыма барып сыҡһа, юғиһә, бит каҙалалар! Ана ла баһаң, Рауза нимә тип сығып китте... I гмәһә, Әптеләхәт алдында! Атаһы үлеп, уны оло Мвшәкәттән ҡотҡарғайны, былары ла шулай тауыш-тынһыҙ I ына китеп барһаларсы... Ә бит Ихсанбай үҙ гонаһының тере шаһиттары менән ғүмер буйы күрше йәшәй алмаясаҡ. Хашим, ана, ҡайһылай теш ҡайрай. Мирхәйҙәровсы? Уларға Раузаһы килеп ҡушылды. Ҡайһылай ғына булмаһын, Ихсанбай муйынындағы элмәк көндән-көн нығыраҡ ҡыҫыла. Өгәр ҙә ул ҡылғандарҙың барыһы ла өҫкә сыҡһа, Мәҙинәне, \ ienen ҡолағын мәңге күрә алмаған кеүек, бер ҡасан да күрә влмаясаҡ.

Ихсанбай, бейек келэгә эленгән арҡы ҡапҡаны гауышһыҙ ғына асып, баҡса эсенә үтте. Күкбүре ояһынан башын сығарған да тәпәйҙәренэ һалған. Хужаһын күреүгә ул башын күтәрҙе, мәгәр урынынан ҡуҙғалманы. Оҙон үлән враһынан күренеп ятҡан, мәтегә буялып бөткән аяҡтарҙы күреп, Ихсанбай баҫкан ерендэ ҡатты ла ҡалды: бер-береһенән алыҫ түгел йөҙ түбән ятҡан ике бала Йәнтимер мсцән Биктимер ине...

«Нишләргә?!» — башынан йәшен тиҙлегендә үткән уйҙан Ихсанбайҙың тубыҡтары ҡалтыраны, тамағы кипте: «Нишләргә?!» Башынан тағы бер тулҡын уй йүгерҙе: «Юҡ, КҮк! Бында унын ғәйебе юҡ... Әлбиттә, Ихсанбай уларҙың ГЫуыуын да, йәшәүҙәрен дә теләмәне, ләкин... Ул сәбәпсе Гүгел быларҙың үлемендэ! Түгел!!!»

Ьашына ут ҡапкан Ихсанбай картуф һабаҡтары аша лапаҫ аҫтына йүгерҙе, күҙе кәртэ мөйөшөндә торған көрэккә төштө, шуны тиҙ генә эләктереп, кире теге урынға килде. Ҡайҙа, Квйҙа йәшерергә?! Әгәр быларға әжәлдең Ихсанбайҙың Квнтәйенән килгәнен белһәләр... Былай ҙа һүҙ күбәйҙе...

Былай ҙа уның өҫтөндә болоттар ҡабара... Соҡор ҡаҙһа, эҙләрҙәр, **белерҙәр.** Ә бына... Ихсаибай олс сәскә атырға өлгөрмәгэн, ике-ос япраҡта ултырған ҡыяр түтәленә ҡараны. Тиреҫе калын, соҡоро ла ярайһы тэрән. Ҡаҙып мәшәкәтлэнеү ҙә кәрәкмәй. Иң мөһимс — ҡыяр үҫеп ултыра!

Ихсанбай шэп-шэп итеп йәшелсә түтәленең аҫтын өңә башланы. Әлегә бында бер кем дә килмәҫ, ә һуңынан... Унан һуң әллә ҡасандан ҡыяр үҫеп ултырған түтәлде шик аҫтында ҡуйыу кемдең башына килһен?!

Тоҡка һалынған икс бала мәйетен соҡорға өҫтөрәгәндә йөгөнөң еңеллегенэ аптыраны Ихсанбай: малайҙар **үҙҙәре** шул тиклем ябыҡмы, «әллә үҙ йөгөң ауыр булмай» тигәндәре шулмы?..

Әптеләхәт Мәҙинәнең ҡапҡаһына үрелгәс-иткәс баҙап, ҡаушап ҡалды: бына шулай, көпә-көндөҙ ҡыҙ кешенең өйөнә килеү килешерме? Улай тиһэң, Әптеләхәт Тирәклегә мөһим эш менэн килгән: милли сәнғәттең киләсәге өсөн кадрҙар эҙләй, һәләтле йәштәрҙе күреп һөйләшергә килгән. Клубта яйлап һөйләшә алманы, килгәс-килгәс, ул бит Мәҙинә менән яҡшылап һөйләшсп, көнкүреше менән дә яҡшылап танышып китергә тейеш.

— Һаумыһығыҙ...

Урындыҡ ширлегендэ ниҙср зшләп ултырған ҡыҙ аптырап ҡаушап ҡалды, йөҙөнә бәреп сыҡҡан ҡыҙыллыҡты хатта ҡарағусҡыл йөҙө лә йәшерә алманы.

— һаубыҙ эле, Әптеләхәт ағай, үтегеҙ.

— Килгәс, үтмэй ярамаҫтыр, ни... һеңлекәш... Мәҙинә. Шәһәрбаныу апайҙың өйө, тимәк, ошо инде?

— Ошо... һеҙ, ағай, минең әсәйемде лә белэ инегеҙме әллә?

«Тауышына тиклем Гөлбаныуҙыҡы!» — хэтирәләре яңырыуҙан күңеле тулған Әптеләхәт стеналағы фотонан күҙен алмай ғына яуап бирҙе:

— Белэ инем, утарҙа бергә эшләнек. Өләсәйең дә, әсәйең дә, — ул көләмһөрэне, — йәнә Шәңгәрәй...

«Шәңгэрэй» тигәнде ишеткәс, Мәҙинә йылмайҙы:

- Шәңгәрәй ағай ни ул әле һаман әсәйемде, ней, яратам гип һөйләп **ТИК ЙөрӨЙСӨ ул...**

Шәңгәрәй дөрөҫтө һөйләй, Мәҙинә. Әсәйенде беҙ... **бөтәбеҙ** ҙә яраттыҡ. — Шунан Әптелэхәт ҡапыл Мәҙинәгә **әйләнде.** — Яраттыҡ, ләкин һаҡлай алманыҡ! — Ошо ммиутта ҡаршыһында торған Мәҙинә Әптеләхәткә үтә лә **кәҙерле,** үтә лә яҡын тойолдо, бына бит ул — ғүмер буйы эҙләгән бәхете, һыуһыны, йәншишмәһе. Ул эргәлә генә! Һмптәренә инеп кенә лә үҙенән башҡаны һөйҙөрә лә, яҡын килтерергә лэ ирек бирмэне бит ул! Гөлбаныуға шул тиклем **дә** оҡшар икәнһең! Килеп еткэс, инде тапҡас, үрелмәһенме? (арсаған ирендәре һыуға йомолмаһынмы? Алйытыр сиккә **степ** талсыҡкан хистәренә баш була алмайынса, Әптеләхәт ҡапыл **ҡыҙҙы** ике ҡуллап тартып алды ла күкрәгенә **ҡыҫты,** күҙҙәренән алмаш-тилмәш үбеп, янып барған ирендәрен Мсг}инәнең көйҙөргөс ирендәренә терәне. Ҡыҙҙың үҙенән шртынғанын, тартылғанын аңлап, Әптеләхәт уны кире ике куллап, иплэп кенә артҡа этәрҙе:

— Ғәфү ит! Бер һөйләрмен, аңлатырмын! Мәҙинә... һиңә укырға кәрәк! һинең тауышың... Халыҡҡа хеҙмәт итергә **гсйеш!** Ә мин... йыр яҙырмын... Һинең хаҡында... әсәйең... үҙем, ер... йәшәү... тормош, мөхәббәт хаҡында! Көт мине... һинһар, көт! Аҙнанан да ҡалмай килермен. Ә хәҙер... хуш!

Биктимер менән Йәнтимер юғалған, тигән һүҙ Тирәклелә **икенсе** көнөндә бөтә ауылға таралды. Тәүге көндә, кискә ı абан Мәҙинә үҙе генә эҙләне. Һыу буйҙарын байҡаны башта, ърı лләге саукалыҡҡа инеп йәүкәләне — һис берәү тауыш **бирмәне.** Төнгә ҡарай, хәлһеҙләнеп, йонсоп бөткән Мәҙинә, ү ı алып та тормай, урындығына ауҙы.

Фәүзиәнең аласығында был көндө, киреһенсә, ут һүнмәне, **уның** ҡара төндөң үҙе кеүек дөм-ҡара **күҙҙәре** күптән инде **бер** нөктәгә төбәлгән дэ ҡатҡан. Төрлөсә кисерә әҙәм **ҡайғыны,** аҡылдан да төрлөсә яҙа.

Шул ике сабый өшөмәһен, астан үлмәһен тип, Фәүзиә аҙ п.фышманы. Шулар арҡаһында килене уны һәр саҡ **боҙҙан Һалкын** ҡарашы менән ҡойондорҙо, Ихсанбайына ла һыуыҡ **күҙ** күренде, ә инде үҙенең изгелеген асыҡтан-асыҡ күрһәтә

алмай, киреһенсә, күрһәткән ярҙамдарының эҙен йәшерергә тырышҡас, Мәҙинә лә, малайҙар ҙа уға сәйерһенеп, ятһынып ҡарауҙан уҙманы. Ихсанбайының шул игеҙәктәрҙе ни өсөн ене һөймәгәнен дә аңламаны ул. Күңелендә төрлө шиктәр ярала биреп ҡуйҙы ҡуйыуға, тик Фәүзиә ул уйҙарҙы башына эйәләтеүҙән ҡурҡты. Әгәр улар табылмаһа, Мәҙинә бахыр ҡалайҙар итер ҙә, Хашим байғош нисек күтәрер был ҡайғыны? Эйе, эйе, Хашим. Фәүзиә шул Хашимдың фронттан икенсе кешегә әйләнеп ҡайтыуына иҫе китә. Ул ҡайтҡаны бирле малайҙарҙың төҫө сығып, ирәйеп, ирәбеләнеп киттеләр; Мәҙинәнең дә йөҙөнән етемлек сырайы китте. Ә инде ҡыҙҙың клубта йырлап, районда килгән түрәне илатҡанын ишеткәс, Фәүзиәнең түбәһе күккә тейҙе: үҙ ҡаны! Фәүзиә-Барсынбикә үҙе лә бит йыйындарҙа ҡыҙ-ҡырҡындың ғына түгел, ил ҡарттарының күҙенә йәш эркелдереп ултыртып ҡуйыр ине. «Моңло кеше бәхетһеҙ була», — тиер ине өләсәһе, был юрау берүк Мәҙинәгә ҡағыла күрмәһен, уларҙың затына төшкән ҡарғыш берүк Мәҙинәне урап үтһен. Тапмаһын уны, юлы яҙлыҡһын... Фәүзиә-Барсынбикәнең өлөшөнә төшкән ләғнәтте дуҫы түгел, дошманына бирмәһен...

Ә тышта — төн. Мәҙинә тәҙрәһендә лә ут тоҡанманы. Эй, бала... Атаһы ҡайтмаһа, ҡурҡалыр ҙа, ҡустыларын уйлап ҡайғыралыр ҙа. Исмаһам, ҡапҡа тышына сығып ултырайым. Ҡыҙ бала йәшәгән ошо өйҙө таң атҡанса яман күҙҙәрҙән, яман телдәрҙән ҡурсып ҡарап ултырайым...

Хашим, районда эштәре бөткәс, Тирәкле яғына ат-маҙар сыҡҡанын көтөп торманы, төш ауған булһа ла, йәйәүләп юлға сыҡты. Ашығырлығы ла бар: Мәҙинәгә һөйөнөслө хәбәрен тиҙерәк еткергеһе килә. Әле лә ул Камалетдинов менән булған әңгәмәһен ҡайтанан ҡайта күңеленән үткәрә, иҫенә төшөргән һайын күңеленә рәхәт, йылы тулҡын йүгерә.

— Көйәләнмә, Хашим. Ҡағыҙҙарың тулы тәртиптә, бер ниндәй бурысың юҡ хөкүмәткә. Тартып алған һыйырыңды өс йыллыҡ түле менән ҡайтарһындар. Ә Ихсанбайға «Дело» асылған...

Хашимға ни һыйырҙың өсәүһе түгел, бәрәүһе лә еткән. **Башынан** ашҡан! Малайҙарының тамағы аҡҡа тейенһә, тағы **нимә** кәрәк? Әлбиттә, биргәстәре Хашим уның икәүһен алыр. **Береһен** һатып, Мәҙинәһенең, малайҙарының өҫ-башын иүмотер. Унан һуң үҙенең өйөн һиплэтеп, шунда күсенерҙәр. **Ғүмер** буйы ни тип Ихсанбайға күрше йәшәһен ул? «Дело» **асылған** ти ҙә ул Камалетдинов, йыландың бит ағыуы члрыбер үлмәй...

Камалетдинов йәнә Ихсанбай урынына кеше кәрәк, урыҫса ла яҡшы беләһең, әйҙә, һине ҡуяйыҡ, ти бит әле. Әллә, әллә... **Хәйер,** кеше эшләмәгән эш түгел. Эш башында тормоштоң ксһен-сөсөһен татыған кеше ултырғаны яҡшы инде.

Хашимды осратыуына, уратып булһа ла, Мәҙинәгә булған мпмәсәбәтен еткерә алыуына малайҙар шикелле шатланды Әптеләхәт. һүҙ, нисектер, үҙенән-үҙе килеп сыҡты.

— Уҡырға китеүенә мин ҡаршы түгел дә, — тине Хашим, тик ҡыҙ бала бит: ҡурҡыта.

- Ни бит, Хашим ағай, мин үҙем дә уҡырға итәм... Ну **бына,** бергәләп уҡыһаҡ, тимәксемен...

Хашимдың ғәҙәттә бойоҡ күҙҙәрендә тере ҡуҙҙар ныптыраны:

Йәштәрҙе белмәҫһең... Әле ҡасан ғына Тирәклелә **кемдә** туҡтарға белмәйем, ти инең...

Әптеләхәт Хашим алдында үҙенең малайҙар шикелле **кыҙарып** баҫып торғанын төшөнә, ләкин ни хәл итһен?

- Хашим ағай, — Әптеләхәт үҙ тауышын үҙе таныманы, Мәҙинәне бәхетле итер өсөн мин... барыһын да эшләргә әҙер.

Йылы хушлашты Хашим Әптеләхәт менән. Әлбиттә, Әптеләхәт Мәҙинәнән өлкәнерәк инде. Бер уйлаһаң, шулай о\ ІҒАНЫ ла яҡшы: ҡатындың ҡәҙерен дә бит ирҙәр өлкәнәйә импкәс кенә белә. Хашимдың Гөлбаныуҙың ҡәҙерен белмәүе ю. бзлки, уның йәшлегенән килгәндер? Унан тыш Ихсанбай |**раға** төштө. Хашим Гөлбаныуҙың Ихсанбайҙы яҡын күреүен **КИСерэ** алманы. Әле бына Гөлбаныу ҙа юҡ, ул барыбер **Катынын** шул уҡ Ихсанбайҙан ҡыҙҙана. Гөлбаныуҙың хатта **рухын** көнләй ул башҡаларҙан.

никахка ҡаршы торҙо. Ә ни өсөн Ихсанбай көрәшмәне? Корошмәне, сөнки ул үҙ-үҙен анлағаны бирле ике тормош менән йәшәне. Береһе уны алға әйҙәне, икенсеһе артҡа этәрҙе. һәр ваҡыт икеләнергә, боҫорға, ҡасырға мәжбүр итте.. Мохәббәте өсөн көрәшеү түгел, уны үҙенең... нәфрәтенә әйләндерҙе. Эйе, Гөлбаныу уға бары тик нәфрәт менән ҡараны. Был нәфрәт Ихсанбайға хаслашыу, үсләшеү теләген м>сэйтте... Аҙаҡ инде... Аҙаҡ нимэ: аймылышҡан ике яҙмыштың асы емештәре Ихсанбайҙың ҡыяр түтәле аҫтында ята.

Ҡайһы саҡ Ихсанбайҙың шул мәйеттәрҙе асып, бөтә донъяға һөрән һалғыһы, тамағы ярылғансы ҡысҡырғыһы килә. Бигерәк тэ әсәһе күрһен ине: ул бит, ул яҙлыҡтырҙы улының тормошон! Эйе, эйе, ул, эсәһе... Ихсанбайҙың тиндәштәре, туфандай ҡалҡып, ил һаҡларға китте. Ихсанбай ҡулына ҡорал алмаҫлыҡ егет инеме? Юҡ, әсәһе ҡаршы юштө. «Баламды һуғыштан алып ҡала алмаһаң, өйөмдөң гупһаһына баҫма! — тине ул иренә, — күҙемэ ҡайтып күренмә!» Ихсанбай үҙе лә ныҡышманы, аҫҡа ҡарап, иренен гешләне.

Хәҙер инде... Мәҙинә. Күңеле төбөндәге һуңғы саткынан яралған был һөйөү үтә ҡиммәткә төшмәксе Ихсанбайға. Барыһынан яҙырға риза ул. Әйҙә партиянан да сығарһындар, илснэн дә ҡыуһындар — мәгәр ул Мәҙинәһеҙ китмәйәсәк. Лтыны бар, аттары әҙер — Мәҙинәне генэ күндереү кәрәк. Кыҙ бала, әлбиттә, унының менән ҡасырға үҙе теләп риза оулмаҫ, Ихсанбай ҙа мәгәр бирешмәҫ: Хашимдың Хашимы үҙ заманында Гөлбаныуҙы үҙенеке итеү сараһын тапты, Ихсанбай унан кәмме ни?! Ихсанбай ошонан һуң шәмде юрбаһынан өрөп һүндерҙе лә шырпы сыйҙы. Кистән иртә \лйерлерәк. Башҡаһын ул иртәгә уйлар...

Зарифа, үҙен ҡайҙа ҡуйырға белмәй, бүлмә буйлап арлы-бирле йөрөштөрҙө. Өйөнөң урам яғына ҡараған тәҙрәһен асып, тыштағы тауыштарға ҡолаҡ һалды. Унда-бында эт врөп ҡуйҙы, көтөүҙә инәһенән аҙашып ҡалған бәрәс бакырыуын иҫәпкә алмағанда, ауыл тып-тын. Ә көндөҙ ул бөтөнләй икенсе ине. Гөлбаныуҙың игеҙәктәрен эҙләргә бөтэ

ауыл менән сыҡтылар. Зарифа сыҡманы. Һыуға барғанында бөтәһе лә ғәжәпләнеп уға ҡараны. Һәр береһенең ҡарашында: ағайындың балалары юғалған, һин нисек түҙеп өйөндә ултыраһың, тигән һорау ярылып ятҡанын күрҙе Зарифа. Ҡайһылары ҡарап ҡына ҡуйманы, туранан-тура һорау алыу ойошторҙо:

— Ыста-а-а... һин өйҙәһеңме ни?!

— Күреп тораһың — өйҙәмен, — тип яуап ҡайтарҙы ундайҙарға Зарифа һәм, улар оялмағас, үҙе лә шул алымды һайланы, — ә нимә? Юғалған һәр бер тыума өсөн мин сабырға тейешме?

— Хоҙайҙан ҡурҡыр инең!

— Хоҙайҙан курҡкан өсөн дә мин тыума тапмайым! — булды Зарифаның яуабы.

Эйе, ул хәҙер шуны төшөндө: кешенең үҙенән дә әрһеҙерәк, әсерәк телле булмаһаң, хәҙер өҫтөңә менергә торалар. Ә Зарифаға былай ҙа еңел түгел: Ишмөхәмәте һуғыштан ҡайтманы, ҡалай ҙа ир ине әле. Һуғыш бөтөп барғанда тиерлек китеп, үлергә лә өлгөрҙө микән? Ни бер хәбәр юҡ... Дөрөҫ, ул өйҙә сакта иренең китеүен теләне Зарифа. Ихсанбай менән осрашыуға ҡамасаулай кеүек күренде. «Ишмөхәмәт китһә, Ихсанбайҙы баш-көллө үҙемдеке итермен» тигән уй ҙа булманы түгел. Хатта Ихсанбай менән бергәләп Ишмөхәмәттән нисек тиҙерәк ҡотолоу юлын эҙләй торғайнылар. Һәм ҡотолдо: Ишмөхәмәт тә юҡ, Ихсанбай ҙа онотҡанда бер, уныһында ла эсергә генә инеп сыға. Яғырға утынһыҙ ултырған саҡтары күп хәҙер Зарифаның: Шәңгәрәйҙең сауҡанан йөкләп кенә ташыған утыны менән ус ялап буламы? Хәсрәткә тарыу килешмәй Зарифаға: һыр әҫәре ҡунмаған йөҙөндә, күҙ төптәрендә шырыш күреүҙән һиҫкәнде ул бөгөн. Һәр ваҡыт буялған кеүек ҡыҙарып-тиртеп торған ирендәре лә төҫһөҙләнгән... Былай булһа, ул тиҙҙән ҡарсыҡҡа әүереләсәк, э шунан уға кем ҡараһын? Ишмөхәмәт барҙа ул иртән тороп усаҡҡа ут яғыуҙың, көйәнтәләп һыуға барыуҙың ни икәнен белмәне. Тороуына өйө йылынған, сәйе ҡайнаған булыр ине, мунса төшһә, өйөнә күтәреп алып ҡайтыр ине бахыр... Эх, терһәк яҡын да, тешләп булмай икән шул. Ишмөхәмәт китеүен китһә, бергә тора башларбыҙ, тигән вәғәҙәһен тиҙ онотто Ихсанбай... Улай ғына түгел: эскән килеш нисәмә тапҡыр ҡул

яҡты ул Зарифаға. Эйе, эсә хәҙер Зарифа. Ихсанбай өйрәтте >ссргә лә! Шуға ярайым тип, бергәләп эсте. Эсә торғас, ойрәнде, исеме сыҡты... О-о! Әгәр хоҙай була торған **булһамы!..**

Зарифа, серәкәй тулыуҙан ҡурҡып, тәҙрәне япһа ла, һауа сгмэгэндэй быуылып барғас, кире асты, тағы төнгө һиллеккә ҡолаҡ һалды: күңелендэ яралған шик тынғы бирмэй уға — Ихсанбай берәйһенэ эйәләмәгәнме икән? Ана, кәнсәһендә лэ ут юҡ, ошо ваҡыттан ҡайтып өйөндә йэм табып ултыра горған кешеме ни ул?! Зарифаны ошо көнгэ төшөргәндән һуң, берәйһенә эйәләшһә, ғәфү итә алмаҫ Зарифа, булдыра алмаҫ!

Ҡалтыранып торған ҡулдары менэн Зарифа, шырпы габып, етеле шэмде тоҡандырғас, мейес башындағы мискәнэн ҡурын һарҡытып, бер сеүәтәләй бал һыҡты. Шуны төпрәһенә гиклем күтәреп эскәс, ҡулының ҡалтырауы баҫылды, үҙенэ ышаныс, дәрт өҫтәлде. Етеле шәмде ҡулына тотҡан килеш, сгеналағы көҙгө алдына килеп баҫты. Көҙгөнэн ҡараған ҡатын Чарифа уйлағандан күпкә ҡайтышыраҡ булып сыҡты: күҙ төптәрендә тәрэн соҡорҙар, ҡабаҡтары шешенгэн, ирендәре лә күгәргән, тупаҫланған... Эйе-е, Зарифа, элекке һылыулығындың эҫәре лэ ҡалмаған шул һинең... Ошолай күрһэ, хатта Ишмөхәмәт тә танымаҫ ине. Ә бит ярата ине Ишмөхәмәт уны! «Бала сағындан, һиңә еҙнәй булып барған конөмдән яраттым мин һине!» — тиер ине. Бала шикелле кулында бәүелтеп йоҡлатты, маңлайынан һыйпап, үбеп уятты... Башта Зарифа уны яратҡан кеүек ине. Яратмаһа, **апайын,** бер туған апайын үлтереү хәленә барып етер инеме?!. I оүбә, тәүбә... быны бер кем белмәй, быны хатта Ишмөхәмәт ю белмәй! Тик анау ҡотһоҙ ҡара ҡарсыҡ Фәүзиә генә Зарифаны үтәнән-үтә күрә, әллә нәмәләр һиҙенә кеүек...

Юҡ! Ошо саҡлы исеме сыҡҡандан һуң Зарифа Пхсанбайҙы бер кемгә лә бирмәйәсәк! Кем менән ҡараланған, шуның менән аҡланырға тейеш ул! Хәҙер сығыр Зарифа... Шиклэнгән бисәләрҙең һәр береһенең өйөн тыңлар, мәгәр Пхсанбайын табыр. Кэнсэһенән ҡайтмағас, ҡайҙалыр күңел аса торғандыр, ниндәйҙер тол ҡатындың күңелен күрәлер...

Зарифа өйөнән инде сыҡтым тигәндә кире боролдо, |үрбашта ятҡан икмәк бысағын алып, ең эсенә тыҡты: Зари-(|)аиың һутын һурып ташлар емеш түгел икәнен күрһәтер ул!

Болдорға сыҡҡас, тағы һил төнгә ҡолаҡ һалды: шипкерт тэ юҡ. Ихсанбай, моғайын, мунсаһында йоҡлай торғандыр, иртә ята бит ул. Ишек асылғанды ишетеп, мөңрәп ебәргән һыйыры ғына һиҫкондерә бирҙе уны — һауырға онотҡан икән байғошто. Ярай, уныһы — һуңынан...

Зарифа, юлдың үҙҙәренә борола торған ерендә туктап, уйлана бирҙе: ошонда көтөргәме, әллә... юҡ, бынан үтмәҫ Исханбай. һуңлап ҡайтҡан саҡтарында, кеше күҙенэ салынмаҫ өсөн, йылға аша һалынған аҫылмалы күперҙән йөрөүсән ул. Аҫылмалы күперҙе үткәс, өйөнэ кәртә артындағы ҡапҡаһынан барып инә.

Йөрәге дарҫлап типкән Зарифа бысағының һабын ҡыҫыбыраҡ тотто: «Бөгөн, йә бер ҡасан да!»

Хашим Мәҙинәнең ут кеүек янған маңлайына һалҡын һыуға еүешлэп әлдән-әле сепрәк ҡуя. Әгәр ҙә Мәҙинә лэ ташлап китһә, ул нисек йәшәр был донъяла? Малайҙар табылманы. Гөлбаныуҙың һөйэктәренә Хашим аңғармаҫтан барып юлыҡҡандай, кемдер берәү шул гонаһһыҙ сабыйҙарҙың да һөлдэһенә юлығыр. Әгәр ҙә инде Мәҙинә уйлағанса күтергә батҡан булһалар, бер ҡасан, бер кем таба алмаҫ һөйәктәрен дә. «Ер генә упты инде **үҙҙәрен,** ер!» — тип сеңләй Фэүзиә ҡарсыҡ. «Ер уба торған булһа, уның Ихсанбайын убыр ине ул. Был сабыйҙарҙы ниндәй гонаһтары өсөн ер упһын?!» — шулай уйлай Хашим.

Күршеһе Фәүзиәнең был араларҙағы ҡылығы үтә лә сәйер тойола Хашимға. Уларҙың Хашим һуғыштан ҡайтҡаны бирле күҙмә-күҙ осрашҡандары юҡ ине. Күҙмә-күҙ улар шырлыҡта осрашты. Бында уларҙың икеһен дэ бер хәсрәт килтергәнен һүҙһеҙ аңланылар.

— Тәңребирҙе буйлап, Оло тауға тиклем барҙым, — тине Хашим, маңлай тирен һыпырып.

— Ул тиклем алыҫ китергә, бәләкәй бит әле улар. — Фәүзиә ботаҡҡа тотона биребер әк ҡайынға һөйәлде. — Кәртә артынан ары китмэй торғайнылар.

— Аптырағандан, — балаларҙың юғалыуын тағы кемдеңдер ауыр кисереүенән Хашимдың күҙҙәренә йәш эркелде. — Инде ҡайҙан эҙләргә, нимә эшләп ҡарарға...

Хашим, - - үҙенә атап өндәшкән тауышҡа ул башын **күтәрҙе** һәм ҡарсыҡтың ҡап-ҡара күҙҙәрендә әйтелмәгән, **19КИН** үҙенә төбәлгән һорауҙы уҡыны. Барыһын да төшөндө **Хашим,** тик ул һорауҙы бирергә ҡарсыҡтың ни хаҡы бар? **Бик** торәнгә киткән һорау был. Әммә шуныһы ла мәғлүм: **был** теге урам ғәйбәтселәренең сираттағы сәйнәм итеп **сөйнәр** ҡыҙыҡһыныуы түгел. Баҙабыраҡ ҡалды Хашим. Хәлэл мпынының рухын Хашимды рэнйетә торған кеше? Бәндәләрҙең донъялыҡтағы эштәре лә, яҡшы исеме лә үҙе ү иондән һуң да яҡлауға мохтаж икәнен төшөнгән шул инде Хашим. Әммэ... дөрөҫ булмаған яуабы менэн ҡарсыҡты ла роийеткеһе килмэй.

- Фәүзиә... инәй, — тине ул шунан икеүһе араһындағы көсөргәнешле тынлыҡты боҙоп, — Гөлбаныуға ҡағылышлы **бөтә** нәмә изге миңә. Был ике сабыйҙы мин... унан ҡалған **аманат** рәүешендә ҡабул ҡылдым. Шул.

- һин... изге кеше, Хашим, — ҡарсыҡ бите буйлап аҡҡан йлштәрен әллэ тоймай, әллэ онотҡан, — Мәҙинә өсөн... инде күңелем тыныс, рәхмәт һиңә...

Шунан улар тағы икеһе ике яҡҡа китте. Ҡумырыҡ ргәһендә, муйынынан күтергә батҡан Мәҙинәне Ихсанбай **тартып** сығарып маташҡан урында йәнә килеп осраштылар. Дорөҫөрәге ҡарсыҡ һөрән һалды:

- һе-ей! Кем бар унда, килегеҙ ярҙамға!

Иөрәге күкрәк ситлеген ярып сығырҙай типкән Хашим **килеп** еткәндә, ҡарсыҡ Мәҙинәне, инә ҡаҙ шикелле ҡамап, Пхсанбай менән ярайһы ғына ярһып һөйләшә ине:

— Теймә! Аслан ҡағылаһы булма! Алып ҡайтырға уның үҙ атаһы, ятырға үҙ өйө бар!

— Мин килеп етмәһәм, батып үлә ине бит ул! Мин коғҡарҙым, мин яуап бирәм уның өсөн!

Хашим төшөнөп ҡалды: Ихсанбай ҡыҙҙы үҙҙәренә алып ҡайтмаҡ.

— Кит әле, Ихсанбай, яҡшы саҡта кит! Күрәһеңме, ул һлман иҫенэ килмәгән!

Хашим килеп башын күтәреүгә, Мәҙинә күҙҙәрен асты:

— Атай...

Ҡыҙым! Һин иҫән, һин тере! Атайынды ғүмерлек ҡайғыларға һала яҙғанһың бит, ҡыҙым...

— Малайҙар... ошонда... - - Мәҙинәнең күҙҙәренән йәш тәгәрәне, — ошонда кеүсктәр.

Ҡыҙын күтәреп өйөнә йүнәлгән Хашим артынан Фәүзиә менән Ихсанбай ҡарап ҡалды. Фәүзиәнең шатлыҡ йәштәрен күрҙе Хашим, ә Ихсанбай ауыҙынан ризығы тартып алынған, енле бер януарға оҡшаш ине.

Хашим үҙенең һалҡын ирендәрен ҡыҙының янып барған маңлайына терәне: ҡыҙы һауыҡһын, ҡыҙы бәхетле булһын өсөн ул үҙ йәнен дә уйлап та тормай бирер ине. Эйе, эйе, йәне хәҙер ошо Мәҙинәлә, ул йәшәһә — йәшәйәсәк, ул йәшәмәһә — йәшәмәйәсәк. Мәҙинәһеҙ унын үҙ-үҙенә кәрәге ҡалмаясаҡ.

Ихсанбай, урам сатында туҡтап, уйлана бирҙе. Тыҡрыҡҡа боролһа, Зарифаның һағалап тороуы бар — нисәмә тапҡыр ул Ихсанбайҙы шунда көтөп тороп өйөнә индерҙе. Күргеһе килмәй уның Зарифаны. Биҙҙе. Тегенеһе шуны аңламай, ҡарышыуын белә. Ҡарышыу ғына түгел, эҙәрләүгә күсте. Сабыйҙың сабыйы һөтө булмаһа, яры имсэкте тылҡымай. Был бит шуның шуныһын аңламай. Күрҙе ниһә: «Китәйек бынан, ҡасайыҡ!» — тип һенәне ҡорота. Үҙенең дә, атаһының да өйөн, мал-тыуарын һатып китергә риза. Ихсанбайҙың бөтә тупаҫлыҡтарына түҙә. Был бисәләрҙе аңламаҫһың: үҙе өсөн үлергә әҙер ирҙе һуғышҡа ебәреп, үҙен сүп шайы ла күрмәгән берәү мснән йәһәннәмгә олағырға риза.

Аҫылмалы күперҙе үткәс, Ихсанбай тәмәке тоҡандырҙы, папиросын ашығып-ашығып, ҡомһоҙланып һурҙы ла күпергә баҫты. Урта тирәгә еткәс, алда бер ҡараҫҡы шәйләне. Кем...

— Ихсанбай!

— Зарифа?! Һин... — Ихсанбай һорап та өлгөрмәне, ай яҡтыһында бысаҡтың йөҙө ялтлап китте.

— Миңә булмаһаң...

— Зарифа! — Ихсанбай артҡа тайшанған-янтайған ыңғайға Зарифаның тубығына тибеп өлгөрҙө, тростан ҡулы ысҡынып киткән Зарифа күҙ асып йомғансы йылғаға осто.

— Ҡот-ҡа-ар! — Зарифаның тауышы бер-ике генә ишетелде лә тынды. Төнгө йылғаның ҡараһыу-йоҡоло гулҡындары көнсығышҡа, билдәһеҙ киңлеккә нисек ығыштан, шулай ығышыуын белде.

Әле генә күҙ асып йомған арала булған ваҡиғанан ҡото алынған Ихсанбай, артына ла әйләнеп ҡарамаҫтан, өйөнә ;пиыҡты. Ҡайһылай ҙа Мәҙинәне урларға, урларға ла касырға! Ысҡынырға. Тирәклелә уның инде бер көн млшәрлек тә әмәле ҡалманы. Әлбиттә, Зарифаның юҡлығын бер-ике көн берәү ҙә аңғармаҫ — эскән ҡатынды кем эҙләп морөһөн? Ә һуңынан... Ул турала уйлап тороуҙың ни хэжәте

ҡасырға тигәс, ҡасырға! Ихсанбайҙың кеҫәһендә ике ксшегә паспорт та әҙер: унда улар икеһе лә завод эшселәре. Иц ҡыйыны эсэһенән алтынды таптырыу буласаҡ. Әсәһенең \олкон яҡшы белә Ихсанбай: үлһә, үлер, һүҙендә торор.

Ихсанбай аяғы аҫтында яткан нимәгәлер һөрлөгөп ҡоланы: нимә тигәне этәс емтеге икән. Теге күрше әтәстән галанып үлгэн үҙ әтәсе. Фу... Ихсанбай әтәсте ботонан алып ситкә бәрҙе. Ә күңеленең төбөндә әтәс емтеге үкенескә оҡшаш тойғо уятты: был ҡоштоң да бар ине бит шәп саҡтары! Күршенең әтәсе түгел, эте инэ алмай ҡойроғон бот араһына ҡыҫтырып торор ине.

Арт ҡапҡаға яҡынлашҡанда, Ихсанбай эргәһендә генә ырылдау ишетте. Йөрәге эҫеле-һыуыҡлы булып, тәне семерләп китте:

— Күкбүре!

Юҡ, Күкбүре тауыш бирмәне: ҡапка артынан тағы ла етди иҫкәртеүгә оҡшаған ырылдау ишетелде. Шунан һуң ырылдаусының үҙе лә күренде: ҡараңғы булғанға күҙенэ шулай күрендеме икән — был башмаҡ ҙурлығы бүре ине. Уиың артынса Күкбүре үҙе сыкты, уның артынан сыйылдап косөктәре эйәргән.

- Күкбүре... — туҡтатыу өсөн түгел, ярлыҡау, яҡлау һорап шыбырланы этенә Ихсанбай. Көсөктәрен эйәрткән бүреләр тар һуҡмаҡ буйлап һаҙ араһына инеп күҙҙән юғалһа ла, Ихсанбай урынынан ҡуҙғала алманы — аяҡтары йөрөмәҫ булды. «Бүреләр!» — ҡалалағы Михаил ҡорҙашы биргән контәйҙең эт затынан булыуына шикләнгән саҡтары булһа ла, был тиклемен көтмәгәйне Ихсанбай. Күрәһең, урман ҡунағы үҙенең тоҡомо артынан килгән, ҡанмы, йәнме тартып килтергән.

Ҡулының бармаҡтарына тиклем йән тиренә батҡан Ихсанбай, көскә ҡуҙғалып, эскә үтте. Эт ояһы эргәһенә генә бәйләгән аттарын күрмәгәс, йөрәге йәнә «жыу» итеп ҡалды: әллә... бүреләр?! Ә — юҡ... юҡтар. Бөтөнләй юҡтар! Аптырауҙың һәм ҡурҡыуҙың сигенә сыҡҡан Ихсанбай әле һаман ҡалтырауҙан туҡтамаған бармаҡтары менән өй ишегенең тотҡаһына йәбеште.

Йоҡоһо кеүек, төшө лә ҡыҫҡа ғына булды Фәүзиә-Барсынбикәнең. Имештер, дала күҙ асҡыһыҙ буранға солғанған. Шул ер менән күк араһын тоташтырып тулаған зилзиләлә йылҡы көтөүе саба. Буранға сәсәй-сәсәй, бер-берсһен тапай-тапай ҡайҙалыр йыраҡҡа, билдәһеҙлеккә атыла аттар. Фәүзиә үҙе лә һыбай, яҡшы ат менгән, ҡулында — ҡамсы. Өйөрҙө өйөрөп, кире йыймаҡ, кәртәгә индермәк уның уйы, — әммә булдыра алмай: меңәрләгән ат тояҡтарынан сыҡҡан тауыштан ҡолағы тона, буран күҙҙәренә, танау тишектәренә өшәнес ҡарын бәрә. Күп тә үтмәй, ул үҙе лә, хәле бөтөп, атынан ҡолай...

— Ах! — Фәүзиә күҙҙәрен асты. — Ҡайһылай... осор төш булды. «Төшөндө кешегә һөйләмә, кеше мәскәй кеүек — гел яманға юрар», ти торғайны өләсәһе. Фәүзиә күргән төштәренең береһен до кешегә һөйләмәне лә бит, әммә бөтәһе лә, мәскәй юрағандай, дөрөҫкә сыҡты.

Ана, ишек шығырланы. Күрәһең, Ихсанбай ҡайтты. Айыҡмы, иҫерекме инде? Бөгөн уның һис ҡасан булмағанса айыҡ булыуын теләй Фәүзиә. Ул арала түр яҡтың ишеге асылды. Айыҡ Ихсанбай, айыҡ. Тик йөҙө ниңә шул тиклем ағарған? Аттары өсөн генә түгелдер бит? Мәгәр Ихсанбайҙың тәүге һорауы ла ат тураһында булманы:

— Килененә ҡайҙа?

— Атаһының бер туған ҡустыһы... Ансар ҡайнағаң үлгән. Шунда китте.

— Аттарсы? Шуларҙы егеп киттеме әллә?!

— Әлбиттә, йәйәү сығып китмәне, ир ҡатыны, шәй. — Әсәһенең һуңғы һүҙҙәрендә әсе кинәйә ятҡанын тойҙо Ихсанбай, ләкин уның ҡайғыһымы?

— Һин... нимә һөйләгәненде беләһеңме?!

- Белмәҫкә... Урам эсендә бөтәү һоло ашап, балыҡтай ммлтҡылдап торған аттар барында, килен, һинеңсә, кемдән сығып ат һорарға тейеш?

- Һин! — Ихсанбайҙың тештәре шығырланы. — Минең бөтә теләгемә, эшемә, хыялдарыма ҡаршы төштөң! Мине... бохетһеҙ яһаның! Инде килеп, һуңғы... У-у-ух... быуып ҡына үлтерәм, биллаһи!!!

- Ихсанбай... — Аҡылдан шашҡан кеше кеүек, үҙ башын үҙе стенаға бәргесләгән улына ҡарап ҡаушай төшһә лә, ҡурҡҡанын белдермәне Фәүзиә: ундай хәлдәрҙә күрмәгәнме ул? — Ихсанбай, — тип тыныс ҡына өндәште ул йәнә, — һине мин түгел, беҙҙең өлөшкә төшкән яҙмыш, шул яҙмыш аша килгән ҡарғыш бәхетһеҙ яһаны, балам!

— Ниндәй яҙмыш? Ниндәй ҡарғыш? Ул ниткән бөтмәгән һаташыу?!

— Минең һаташҡаным булманы, Ихсанбай.

— Һин... һинме һаташманың?! Улыңды йән һөйгәненән айырып, май һөртөп ташлаһаң, эт тә яламаҫ Сәбиләгә өйләндергәндә лә үҙ аҡылыңда инеңме?!

— Үҙ аҡылымда инем.

— Аҙаҡ, Гөлбаныуҙың ауырлы беленә башлағас, Сәбиләне айырам тигәндә ҡаршы төшкәнендә лә үҙ аҡылыңда инеңме?!

— Үҙ аҡылымда инем, Ихсанбай.

— Әле лә, Мәҙинә менән ҡасырға тип әҙерләгән аттарҙы сығарып ебәргәнеңдә лә үҙ аҡылыңдаһыңмы?!

— Үҙ аҡылымда... — Фәүзиә-Барсынбикә, саҡ ҡына күтәрелеп, йөгәнәкләп ултырҙы. — Һин Мәҙинәгә бер ҡасан да... Ишетәһеңме? Бер ҡасан да!

— Был юлы инде һинән һорамам! — Күҙҙәре атылып сығып килгән Ихсанбай эсәһенә яҡын уҡ килде. — Алтын ҡайҙа?!

— Алтын?!

— Белмәмеш булма: барып сыҡмаҫ! Үҙемә тейер өлөштө генә һорайым. Бир — и вәссәләм — мин юҡ булам!

— Мәҙинәгә йөгонмайың икән — ана бара юлың!

— Мәҙинәһеҙ мин... китмәйем! Кәрәк икән — Хашимды, кәрәк икән — кем юлыма арҡыры төшә — шуны, — ул муйынын ышҡыны, — мәгәр мораҙыма етермен!

— Ихсанбай, — хәле бөтә барған Фәүзиә улының күҙенә бсренсе тапкыр ялбарып ҡараны. — Улым... Ташла ул

уйынды! Башындан сығар — ул бит һинең... һеңлең! Туғаның!

— Мәҙинәнең йәш икәнен һинән башҡа ла беләм! Аҡылдан яҙмағанмын!

— Аңламаның... Ул... Гөлбаныу менән һин... бер туғандар! Игеҙәктәр һеҙ!

Устары менән башын ҡыҫып тынып ҡалған әсәһенә Ихсанбай шөйлә яҡын килде:

— Ух, йыла-ан... Юлыма арҡыры төшөр өсөн ниҙәр генә уйлап сығармай, иблис!

Үңәсе тирәләй ҡымтылған ҡулдар, улының шашҡан ҡарашы ла ҡурҡытманы Барсынбикәне:

— Был ысын! Гөлбаныу менән һиңә никахҡа инеү ярамай ине!

— Әкиәтенде тыңларға ваҡытым юҡ: алтын ҡайҙа — шуны әйт! Баландың именлеге хаҡына ғүмерендә бер тапҡыр, бер аҙым эшләй алаһыңмы, юҡмы?!

— һинең бәхетең... именлегең хаҡына... мин бөтәһен дә эшләнем, Ихсанбай!

— һин?!. Бөтәһен дә?! — Шашып, урындыҡҡа ятып, тәгәрәп көлдө Ихсанбай. — Көләгә һин! Бына кем! Үҙең дә йәшәмәнең, мине лә йәшәтмәнең!

— Уйлап һөйлә, Ихсанбай... һинең именлегең хаҡына мин... атайыңцың ғүмерен ҡыйҙым!

— Һин?.. Атамды?!. Һин...

— Эйе, мин! — Урындыҡтан төшөп, сығып китергә йыйынған Фәүзиәне улының күҙҙәрендә ялтыраған сәйер яҡтылыҡ туҡтатты. Мин! Мин! Илде интектермәй, ырыуҙы тарҡатмай тотоп торған тархандар тоҡомо ҡоромаһын өсөн, мин бөтәһен дә эшләнем! Бер нәмәлә хаҡлы һин: үҙем күләгәгә, ҡара торонға тороп ҡалдым! Һине һаҡланым... тик бары үҙенде... теленце... көүҙәнде... һаҡлағанмын. Мин һинең... рухынды һаҡлай алманым! Хәҙер үкенәм: ниңә мин ил менән бергә күрер ҡазаларҙан һине ҡурсыным икән?! Һин бит һаҡлаған һайын илерҙең, яҡлаған һайын... тилерҙең!..

— һеҙҙең ҡасып-боҫоп, икенсе исем аҫтында йәшәүегеҙгә лә, үҙегеҙ йәшәгән тормошто үҙегеҙ күрә алмағанға ла мин ғәйеплеме?

- Аҡылыңа кил, Ихсанбай: илдең аҫтын-өҫкә килтерер **шлзиләне** мин яһаманым!

- Ә хәҙер... минең үлемемде теләйһеңме? Хәлем ҡыл **өҫтөндә!** Аңла?!

— Мин һине... тотмайым!

Алтынһыҙ һәм... Мәҙинәһеҙ мин бер кайҙа ла китмәйем!

Мәҙинәне мин һиңә... — ярһыған Фәүзиә, тыны быуылып, туҡтап ҡалды.

- Алтынһыҙ ҙа юғалмам, — Ихсанбайҙың ирене бер яҡҡа салшайҙы. — Ә Мәҙинәне... туғаным булмай черт булһын, Хашимға, яҙмышыма, һиңә үс итеп алып китәм! **Бәлки,** мин уны ташлап та, башын ҡумырыҡҡа тығып та китермен, әммә унан алда — ул минеке булырға тейеш! Ә һинең кеүек алйыған ҡарсыҡтарға, — ул кеҫәһенән наган смғарҙы, — ошо ла...

— Ихсанбай! — Фәүзиә ҡапыл турайҙы, йөҙөнә сая кырҡыулыҡ сыҡты. — Мин бит әле һинең әсәң!

— Юҡ минең эсәм! Еүешләнгән һыуҙан ҡурҡмай, — ул иаганы менән күкрәгенә төрттө. — Үҙ балаларымды үҙ баҡсамдың түтәленә тыҡкан кеше мин...

— Ихсанбай, аҡылыңа кил, балам?! Миңә үҙ ғүмерем күптән йәл түгел... Мәҙинә, Мәҙинәгә генә... ҡағылма?! Ысранмаған, гонаһ ҡылмаған, ирекле бер кеше ҡалһын беҙҙеңтоҡомдан?!.

— Юҡ һинең тоҡомоң! Юҡ һинең улың! Ул булыуҙан да, кол булыуҙан да арыным мин! һуңғы сараға мөрәжәғәт итергә... һин мине үҙең этәрҙең... — Ихсанбай наганын сирттерергә өлгөрмәне, етеле шәм менән дерелдәп кенә яҡтырған өйҙә шартлау яңғыраны. Ҡулынан ҡоралы төшөп киткән Ихсанбай, мөйөштә ҡап-ҡара күҙҙәрен секерәйтеп баҫып торған әсәһенә табан бер аҙым яһаны ла гөрһөлдәп иҙәнгә ауҙы.

...Үлек кеүек йоҡлаған халыҡ төндә янғын булғанын да һиҙмәне. Башҡа өйҙәрҙән ситтә, яңғыҙ-ярым ултырғанлыҡтан, Ихсанбайҙар өйөндә сыҡҡан янғын башҡа йорттарға күсмәгән. Төнө лә елһеҙ ине бит. Иртән һыйырға торған

ҡатындар был урыҫ ҡапҡалы ҙур йорттан бер өйөм көл дә күмер ҡалыуын күреп, үҙ күҙҙәренә үҙҙәре ышанманы. Янған йорт эргәһендә Ихсанбай ҙа, Фәүзиә лә күренмәне, Сәбилә лә күҙгә салынманы. Тик бер һыйыр ғына, Фәүзиәнең яратып, гел үҙе һауған Бөйрокәйе генә, үкһей-үкһей баҡырып, бөтә ауыл өсөн ят, тик үҙенә генә яҡын булған ҡара күҙле бойоҡ ҡатынды эҙләне.

– Елене һыҙлайҙыр, әллә һауып ебәрәһеңме шуны? — тип өндәште Хашим ҡыҙына.

— һәү, һәү... Кил, Бөйрәкәй, әйҙә, мә!

Бөйрәкәй үҙен әйҙәгән Мәҙинә артынан әүҙем генә эйәрҙе, күп тә үтмәй күнәккә сың-сың, сыж-сыж килеп аҡ ептәр ағыла башланы. Ошоларға ҡушылып, Мәҙинә күҙенән дә йәштәр аға күнәккә.

«Бөйрәкәйҙе һауған шул ҡыҙҙы уйлап, өҙөлә шул минең үҙәккәй», — тип үкһей бөгөн Мәҙинәнең күңеле. Бөйрәкәйҙең хужаһын ғүмер буйы уйлап, ғүмер буйы һағыныр Мәҙинә, тик быны бер кем белмәҫ, бер кем уйламаҫ. Эсенән генә һыҙыр ул, эсенән генә көйөр. Ошо һағыш күңеленән йырлар йырҙарына күсер, тыңлаусыларҙың йөрәген арбап, мөхәббәтен яулар. Ә хәҙергә бары аҡ мондар, аҡ юлдар һуҙыла — күнәккә йырлай-йырлай йылы һөт ағыла...

Икенсе өлөш

БАШҠЫНАЙЫМ ҠАЛДЫ ЙӘШ КЕНӘ

Беренсе бүлек

Мәҙинә үҙенең дөйөм ятаҡтан сығарылғас урынлашҡан фатирына кисләтеп ҡайтып инде. Квартира хужаһы, йөҙгә һылыу, телгә сэсэн татар ҡатыны Нәфисә, йәш квартирант-каһының буй-һынын һынсыл ҡарашы аша үткәрҙе:

— Ай яныҡайым!.. Әллә инде Бутыркала табырға булдың бәпескәйеңде?!

Мәҙинә, көскә эйелеп, бутыйҙарын systе. Аяҡ кейеменең эсе лыҡа тулы һыу...

— Эй был Мәскәү кышы!...

Нәфисә тел шартлатып баш сайҡаны:

— Әстәғәфирулла! Нисек... һығып алмалы еүеш бит ойоҡтарың! Сис тиҙерәк, кей бынау ойоҡбаштарҙы!

Теше тешкә теймәй ҡалтыраған Мәҙинә шешенгән аяҡтарына ойоҡбаштарҙы кейә алмай хитланған арала Нэфисә унын эргәһҫнэ батмус ҡуйҙы, эҫе сәй килтерҙе.

— Күрҙеңме?

— Юҡ...

— Инде нишләмәксеһең?

Мәҙинә һорауҙы яуапһыҙ ҡалдырҙы. Нимә тиһен? Әптеләхәт ҡулға алынғаны бирле унын күргэн-кисергәндәре... Ятаҡтан да сығарҙылар, ярай, унда комендант булып эшләгэн ошо ҡатын өйөнә алып ҡайтты. Уныһы ла ваҡытлыса, алыҫ йөҙөүҙә йөрәгән ире ҡайтҡансы ғына...

— Эс сәйенде... эҫе көйө эс... — Нэфисәнең тауышынан уйҙарына сумған Мәҙинә тертлэгэн кеүек булды.

— Давид... килмәнеме?

— Эй хәтерең! — Нэфисә, үҙенә лә сәй яһап, Мәҙинәнең ҡаршыһына ултырҙы. — Күрҙем! Ятаҡҡа үҙе килеп сыҡты. Мәҙинәгә эйт, өйҙә торһон, бөгөн кис... Ах! Шаҡыйҙармы? Ахыры, ул үҙе!

Ишектән инеүсе ысынлап та Давид ине. Давид Соломонович Гредель. Әптеләхәт менән бер курста уҡыған егеттәренән бер ул ғына дуҫлыҡҡа тоғролоҡ һаҡлап килә.

— Хәйерле кис! Мин һеҙҙе... уңайһыҙламаныммы?

— Һис юҡ! — Алсаҡ Нәфисә батмусҡа тағы бер сынаяҡ, шәкәр ҡуйҙы. — Өшөгәнһеңдер, әйҙә, яҡынла! Беҙҙең һылыуҡай бөгөн бөтөнләй аяҡһыҙ ҡайтты. Әйт эле шуға... уның хәлендә... бына шулай яраймы инде, ә?

Давид Мәҙинәгә ҡаршы ултырғысҡа ултырҙы:

— Нисек?

Мәҙинә өндәшмәне. Нәфисә кухняға сыҡкан арала Давид кеҫәһенән ҡағыҙ сығарҙы ла Мәҙинәгә һуҙҙы.

Мәҙинәнең тәне буйлап ниндәйҙер ҡалтырау йүгерҙе. Ҡағыҙҙы ҡулына алғас, таныш ҡулды күреп, хәрефтәр сыбарланды. Давидтың ҡарағусҡыл йөҙөндә, ҙур асылған ҡара күҙҙәрендә лә үҙендәге кеүек түҙемһеҙлекте күрҙе. «Мәҙинә һөйөклөм! Хатты алыу менән бынан кит. Ҡайт. Баланы һаҡла. Ошонан терс ҡалһам, ҡасан да булһа күрешербеҙ. Ә хәҙергә хуш!»

— һиңә нык булырға кәрәк, Мәҙинә.

— Аңлайым да ул...

— Мин бөгөн... скрипкамды һаттым.

— Тимәк...

— Эйе, һиңә ҡайтырға аҡса кәрәк бит...

Нәфисә ингәндә Мәҙинә менән Давид тәҙрәнән Мәскәү йылғаһына ҡарап өнһөҙ торалар ине. Икеһенең дә йөҙөнә хәсрәт мөһөр баҫҡан. Нәфисә Мәҙинәне аңлай. Уның йәш башына төшкән ҡайғыһының ни тиклем ҙур икәнен төшөнә. Ә был еврей? Ул да ҡайғыра бит. Мәҙинәнең ире менән шулай нык дуҫлашып өлгөрҙөләр микән?

Өйҙә тынлыҡ. Сәғәт һуҡҡаны, крандан тыпылдап һыу аҡҡаны ғына ишетелә. Үҙенә төбәлгән ҡараштарҙағы кәйефте сағылдырғандай, тышта ойоҫҡоп ҡар яуа башланы. Мәҙинәнең

сараһыҙлыҡ ҡоршауында өнһөҙ тыпырсынған йәне талашынан **өҫкә** ниҙер емерелеп төшөр, ҡыҫыр, баҫыр кеүек...

- Скрипканды һатҡанһың... — Мәҙинә быны ҡысҡырып **ӘЙттеме,** шыбырланымы — Давид ишек төбөнән бер төргәк **килтерҙе,** сепрәген тағатты.

Бына... теге мин әйткән скрипка... Мин уны эшләп **бөтөп** киләм инде.

Эшләп бөтөп киләһең... — Мәҙинә ебәктәй нәфис оарматарын скрипканың ҡытыршы һабына һалды...

- Тиҙерәк бөт инде, Давид Соломонович. Эх!.. — ҡапыл Мәҙинә ҡулдары менән тәҙрә тотҡаһын ҡыҫып, башын **гәҙрәнең** һалҡын быялаһына терәне:

Йәнкәй йәнәш китте, ай, һунарға...
Ашкаҙаркай буйына шәшкегә...
Шэшкеләргә китеп вафат булды —
Башкынайым калды йәш кенә...

Ыыр берсә ҡарлы буран булып өйөрөлдө, урманға, ҡалын корт ҡаплаған кырҙарға алып сыҡты, берсә ул бер-береһен өҙөлөп һөйгән ике йәш йөрәктең ҡайнар хисе булып асмандарға ашты, берсә уларҙың өнһөҙ хушлашыуы булып йөрәкте **өҙҙө.** Ғазап та, шатлыҡ та, һөйөү генә уҡмаштырыр кос тә, ғәйрәт тә, сараһыҙлыҡ та, үкенес тә... Эйе, үкенес... Шул тиклем яратып та айырылышыуға дусар булыу үкснесе...

— Рәхмәт! Рәхмәт һиңә, Мәҙинә. — Бите буйлап һаҡалына борсаҡ-борсаҡ йәштәре тәгәрәләгән скрипкасы еврейҙың кулдары, ирендәре дерелдәй ине. — Мәҙинә! Бындайын мондо башҡаса... мин бер ҡасан да... Скрипка яһай торған **вғасты** мин гел һеҙҙең бүлмәлә тоттом... Бына быға, — ул эйә-ГС менән алдында яткан, эшләнеп бөтмәгән музыка коралына **ымланы,** — һинең моңоң... тик һинең моңоң ғына һеңгән. Моҙинә, бәлки, һине... институтта алып ҡалыр өсөн... мин **бөтәһен** дә эшләп ҡарамағанмындыр? Бәлки, мин тағы ла **ниҙер...**

— Юҡ, Давид... Әптеләхәт миңә ҡайтырға ҡушкан. Тимәк, шулай кәрәк. Бала менән... фатирһыҙ, эшһеҙ, аҡса-**һыҙ...** Үтенәм, Давид, Әптеләхәтте ярҙамыңдан ташлама! Әптеләхәт... йәшәргә тейеш!..

— Бөгөн нык һаташтың. • Тыштан ҡарағанда бер ни менән дә әҙәм йәшәр төйәкте хәтерләтмәгән, тау ҡыуышына һайғауҙан йышлап яһалған өйҙөң сыуалы янында нимәлер ямап ултырған, йөҙөн һаҡал-мыйыҡ баҫҡан ир һәндерәлә салҡатан ятҡан ҡунағына ҡараны. «Ҡунаҡ» яуап бирергә лә, «нимә тип?» тигән һорау менән хәлде асыҡларға ла маташманы, бәлки ауыҙ эсенән үҙе генә ишетерҙәй итеп мөңгөрҙәп ҡуйҙы ла тағы йоҡлап китте.

Быныӊ ҡаршыһында ултырған хужа ямау һалған кейемен утка яҡыныраҡ ҡуйҙы.

— Ошо бет тигәнеӊ ниҙән ярала икән? — Үҙ-үҙенә төбәп бирелгән һорауҙан һуң ул ҡабат ҡунағына ҡараны. — Сәбилә тип тә, Гөлбаныу тип тә ҡысҡырғандай булдың. Мәҙинә тигән исемде лә телгә алдың, шикелле. Әллә мэйтэм... — «Ҡунаҡ»тың хырылдап ҡайтанан йоҡоға китҡәнен күргәс, хужа шымды. Ошо минутта уның йөрәген, зиһенен: «Был әҙәм, теге ни... Ихсанбай булмағайы!» — тигән уй телеп үтте. Үтеп кенә ҡуйманы, аңын болғатты, бер юлы бер нисә уй уҡмашып, серәшеп зиһенен симәлдәрҙе: уны, Ихсанбайҙы, Зарифа менән сыуалды, тип яҙҙылар. Гөлбаныуҙың малайҙары Ихсанбайҙан икән, тигән хәбәрҙе Зарифа яҙғайны бит уға. Ул, Ишмөхәмәт, Зарифа тураһындағы шиктәренең буш икәнен раҫлар өсөн Себергә елдереүсе хәрби поездан һикереп, ҡалғайны... Ошонан һуң ниҙәр булғанын, ниҙәр кисергәнен, нисек итеп дизертирға әйләнгәнен, шунан бирле ҡасҡын булып ошо таш ҡыуышында йәшәгәнен — бөтәһен үҙе һөйләп бирҙе Ишмөхәмәт эле хырылдап йоҡлап ятҡан ҡунағына, эсен бушатты. Күпме ваҡыт хәсрәтен эсенә йомоп йәшәгәндән һуң, инде килеп эсен бушатырҙай тере йән, үҙе кеүек бәхетһеҙ бер байғош осрағанына ҡыуана-ҡыуана һөйләне бит ул. Был һыңар, уныһы ла янып сөрөшкән күҙле, әҙәм ҡарағыһыҙ булып зәғифләнгән тере түмәр Ишмөхәмәттең йоҡоһоҙ төндәренең, йылдай оҙон көндәренең шаһитына әүерелде.

Ара-тирә күңелендә төрлө шик ярала, ләкин уны ҡыуа. Ҡурҡҡанға ҡуш күренә, тигәндәй, уны ҡасып-боҫоп йәшәргә мәжбүр иткән яҙмышы шулай тимә бер кешенән шикләнергә мәжбүр итәлер? Йыйған тиреләрен тапшырыуға бирә торған

Гвулылағы Мөғлифә ҡарсыҡ Тирәклеләге ваҡиғаларҙы һӨЙЛӨП шаҡ ҡатырғайны бит инде. Мөғлифә алдамайҙыр уны. Пшмохомоттең килерен мунса яғып көтөп торған, өс-башын Ныуған, икмәген бешереп биргән ҡарсыҡ ниңә алдаһын уны?

Пшмохәмәт, төтөнгә йәшкәҙәгән күҙҙәрен йөрөтөп, ӌенен млшеренгән төләгән тәү күргәндәй байҡап сыҡты. Эйе, К кын осөн бынан да уңай урынды көндөҙ сыра яндырып ҙләһәң дә таба алмаҫһың. Мәмерйәгә инеү юлын тамыры бер ятҡан ҡупҡан дәү ҡарағас ҡаплаған, ингәс тә уның тау КЫуышы икәнен шәйләү мөмкин түгел — эскә үткән ярыҡ кабырға яҡтан өңөлгән. Шуныһын ғәжәп итте Ишмөхәмәт: ошл гөлөктә ҡасандыр кешеләр йәшәгән. һауыт-һабаларына карағанда, бер бүлә генә түгел, кәмендә ике-өс бүлә ғүмер һөргәндәр бында. һуңғыһы ошонда ятып үлгән. Әле «ҡунаҡ» м ҡан анау һәндерәлә йән биргән. Һөйәктәренә ҡарағанда, Олорак кеше булғанға отапай. Әруах, рух тигәнгә Ишмөхәмәт шек һис ышанманы. Ә бына ошо һөйәктәрҙе ерләп ҡуйғас, уиулы-йоҡоло ятҡанында сәйер генә хәл булып алды.

Хәтерендә, ул саҡта ла сыуалда ут ята ине. Быҡтырылған куян итен ашап ауырайған Ишмөхәмәт төләгәнә күнегеп етә алмаһа ла, арыу үҙенекен итеп, йоҡомһорап китте...

— Эй мосафир, шыл тегеләйерәк... — Ишмөхәмәт был һаҡалтайҙы шундуҡ танығандай булды: был теге һөйәктәрҙең...

— Эйе, эйе... Бөгөн ерләгән әруах мин. Рәхмәт, алла бәндәһе... Йәнем тынсыны. һөйәктәрем ниһайәт ысын донъяға ҡайтты.

Ғәжәп, Ишмөхәмәт үҙенең әруах менән һөйләшеүен гошөнә, шулай ҙа күңелендә тамсы бер ҡурҡыу юҡ.

— Ниндәй яҙмыш килтергәйне бында һине, рух эйәһе? — Пшмөхәмәт янында ултырған заттың йөҙөнә ҡарарға, күҙенә юбәлергә тырыша.

— Яҡшы көндән әҙәм ҡасҡынға әүерелмәй. Һөйгәнемде бер күреп китеү хаҡына ат урланым мин заманында...

— Ә мин... — Ишмөхәмәт күҙҙәрен асы йәш өтөүен тойҙо, - мин дә, уның хаҡына, уны бер күреп китеү хаҡта... Ә ул...

— Ғүмер ҡайһылай ҙа үтә, Хоҙай бәндәһе! Һөйгәнемдең үлгәнен ишеткәс, ҡырҡ көн ашаманым, ҡырҡ беренсе көн йәнем тәнемдән айырылды...

— Эх, белһәм былай булырын! — Ишмөхәмәт бармаҡтарының йоҙроҡҡа уҡмашыуын тойҙо. — Белһәмсе, шунын кәнтәй икәнен!

— Минең һөйгәнем — ир ҡатыны ине. Йоланы ашатлай алманы. Мин уны ғәйепләмәйем!

— һин бәхетле... — Ишмөхәмәт уға асыҡтан-асыҡ көнлэшеп ҡараны. — Бәхетле йән һин, әруах!

— Әруахтың бэхетлеһе, бэхетһеҙе булмай, Хоҙай бәндэһе! Ә хэҙер — хуш.

— Туҡта әле, эруах, китмәй тор! Ошо тыныс мөйөштө Хоҙай нисек насип ҡылды икән миңә?

— Күк тейенде иҫләйһеңме?

— Эйе, эйе, — Ишмөхәмәт бит остарының ҡыҙарыуын тойҙо. Атырға тип мылтыҡ тоҫҡағайны шул тейенгә, ә ул, килде-килде лә, ҡарағас төбөнә еткэс юҡ булды.

— Иҫләһәң, шул: унын ярҙамы менән тапҡан төйәгең был. — Әруах тороп, усаҡ янына килде. — Йәнлектең йәнен былай ҙа күп ҡыяһың...

— Ашаған да, кейгән дә шул бит, әруах! — Әммә Ишмөхәмәткә был ҡыҙыҡ түгел, икенсеһе мөһим. — Әруах! Әйт әле зинһар, бында миңә... йәнә күпме йәшәргә?

— Ғүмерең ахырынаса, ләкин күп түгел.

— Нисек... күп түгел?

— һиңә килер берәү — ҡунаҡ түгел.

— Әруах?! — Ишмөхәмәт, төлөктән арты менән сыға башлаған әруахты туҡтатырға теләп, йән көсөнә ҡысҡырҙы. Ҡысҡырыуы булды — үҙ тауышына үҙе уянды. — Әруах... — Шул уҡ күренеш: сыуалда — ут, ут өҫтөндә — баҡырса, төлөккә инер өвдә — яҫы таш. Ул Ишмөхәмәт нисек теркәгән — шулай тора, ҡымшанмаған да хатта.

Ишмөхәмәт әле генә илаған күҙҙәренең йәше лә кипмәгән бер хәлдә тороп ултырҙы. Нимә булды был? Өнмө, һаташыуымы, төшмө? Әруахтың яңғыҙлыҡтан талсыҡҡан йөҙө унын үҙ йөҙө түгелме? Ниңә һуң унын мәлендә военкоматҡа барып енәйәтен һөйләп бирергә көсө етмәне? Төрмәнән ҡурҡтымы? Төрмә... Яңғыҙлыҡтан да ҡурҡынысыраҡ түгелдер бит ул?! Эй алла... Бына ниндәй сараһыҙлыҡ ҡоршауында ҡалды ул. Ярай әле Мөғлифә ҡарсыҡ бар. Йәнлек тиреләрен шуға апарып бирә, тегеһе дарыға алыштыра, һатып, кейем, аҙыҡ, күр-ер ала. Төндә килеүенә

Мун< ... яғып ҡуя, икмәген бешерә. Ә һуңғы ике йылда ул ... «ҡунаҡ»ты әҙәм итеүгә әҙме көс түкте. Ишмөхәмәт ... кортлап, ҡорттан ашалып бөтөп бара ине бит ул. ...ң ... ирендәрен, хатта ҡолағының берәүһен ҡорт ашаған. И ... Пулып һаҫыған бер ит киҫәге ине. Шуны әҙәм итеп ... I һммохомәт. Ҡайһылай булһа ла, янында көңгөр-ҡаңғыр ... гере йән булыр, тип уйланы. Дөрөҫ, ҡунағы ... то, үҙе тураһында һөйләп тә бармай. Тик әлеге таш ... үткәргән ҡышҡы оҙон төндәрҙә эргәһендә тын ... ятҡан эҙәм затының һулышын ишетеү үҙе бер бәхет

Камалетдинов райком бинаһында эш сәғәте бөткәс, ығы-н.и ... баҫылғас яңғыҙ ҡалырға ярата. Тып-тын коридорҙың ... оашында йыйыштырыусы Гөлмәрйәм апайҙың биҙрәһе ШЫЛТыраП китеүен иҫәпкә алмаһаң, бында һиллек, тынлыҡ, ГЫНЫслыҡ. Көндөҙ умарта ояһы һымаҡ геүләп-ҡайнап торған ... сәғәт һуғыуы ғына ишетелә. Әле ул үҙенең тоноғораҡ, ... тауышы менән донъя яралғаны бирле ваҡыт ме барлығын һэм кешенең генә түгел, бөтә йыһан юнең башының да аҙағының да хакимы Ваҡыт икәнен ... итә.

)ш сәғәте бөтһә, Әйүп Камалетдинов яңғыҙ ҡала. ...шларҙың тормошо сәғәткә буйһонмағанын белә: зат-р, туған-тумаса, никахлашалар, туйға баралар, үләләр, ... Камалетдиновтың бер кеме лә юҡ. Ул шулай ... Уға бөтә район халҡы ҡарап тора, Әйүп тә уларға ... о бына күңелен аулаған, зиһенен яулаған бер кем юҡ. Ьвм шулай яҡшыраҡ та: етәксе халыҡ менән туғанлыҡ, ҡоҙа-|.|йлыҡ ептәре менән бәйләнмәгәндә генә азат тоя үҙен бср кем дә уға ни менәндер тейеш түгел, ул үҙе лә кемгә ... ла бурыслы түгел. Колхоз председателдәренең I ... ғына алһаң да шул ауылдан сыҡҡан кеше. ... ҡырҡар-иллешәр туған-тумасаһы. «...Нигә тегене ... быны былайтмайһың?» — тиһәң, йөҙ сэбэп таба ул: ... ҡайғылы, бының ауырыуы, унын кәйефһеҙ сағы... ... үҙе балалар йортонда үҫкәнгәме, туғанлыҡ,

ҡоҙа-ҡоҙайлыҡ мөнәсәбәттәрен һис ҡабул итә алмай! Мөмкин булһа, ул етәкселәрҙең барыһын да балалар йортонда үҫкәндәрҙән ҡуйыр ине! Әйҙә, кил дә бойороғондо бирә башла. Фронттағы кеүек: бойороҡто насармы, яҡшымы тип тикшереп тормайҙар, үтәйҙәр генә.

Юлбашсының төндә эшләүе, төнөн һор телефон шылтырауына, һәр ауазға әҙер тороу Камалетдиновты ла йоҡоһоҙ яһаған. Артабан нисек эшләрҙәр, кемдәр килер...

Ваҡыт һуң булыуға ҡарамаҫтан, Камалетдинов өйөнә ҡайтырға ашыҡманы. Өҫтэл өҫтөндәге ҡара телефон аппараты берсә өлкәнәйгәндәй, бергә кесерәйгәндәй. Тағы ниндәй хәбәр алып килер ул Мәскәүҙән? Сталин үлде. Ул барҙа көсөргәнеш нисек кенә көслө булмаһын, барыбер күңел тынысыраҡ булған икән. Халыҡ бит кисәнән бирле инәһен юғалтҡан умарталай гөжләй. Кем килер уның урынына? Илде икенсе бер юлбашсының Сталин кеүек етәкләп алып китеренә ышанмай күңел. Юҡ ул ундай кеше.

Буталсыҡ ваҡыт килде.

Мәмерйә алдында һуҡмаҡ юҡ. Ишмөхәмәт төлөгөнә йәйен-ҡышын ҡыраздан-ҡыразға баҫып, өҫтән йөрөй. Юғары менһәң, ҡая таштар ышығында ултырып, күҙ күреме ерҙәрҙе байҡарға була. Аяҙ көн булһа, уң яҡта ятҡан Таулы төтөндәре, ҡаршылағы Тирәкле өйҙәре күренә. Йылғалар ҙа бынан көмөш уҡалай ялтырап, бөгөлдәрҙә алтын алҡалай йылҡылдап сағыла. Йөрәге һыҡрай Ишмөхәмәттең: унда улын, ата-олатаһы һөйәктәрен һаҡлаған зыярат, йорто, аҡылға зәғиф булһа ла берҙән-бер балаһы Шәңгәрәй йәшәй..

Шәңгәрәйҙең әсәһен дә оҡшатып ҡына алғайны ул. Арыу ғына йәшәнеләр башта. Әммә ҡатыны, ошо Шәңгәрәйе бер көй булып тыуғас, Ишмөхәмәттән биҙҙе лә ҡуйҙы. Ирен түшәк яҡынлығынан мәхрүм итте. Уның биҙеүе Ишмөхәмәттең дә күңелен ҡатырҙы, кәрен алды. Ләкин ниҫек итһен! Ишмөхәмәт тә тере кеше бит, ҡатыны һыуынды тип, уны бит берәү ҙә көйҙөртөп ебәрмәне — нәфсе тигәнең үҙе менән ҡалды. Күп тә үтмәй, күҙе-башы уйнап торған балдыҙы

күҙ ға юшөрҙө уны. Ҡатын менән йәшәп-йәшәп бындай ш ы к ғы күрмәгән Ишмөхәмәт Зарифа ҡосағында, рлек гә түгел, ҡояшҡа тейенгән майҙай эрене. Әйе, әйе, Зарифа үҙенең наҙҙары менән ҡылйылан кеүек уның үҙәгенә .... п ултырҙы. Ҡатыны мунсала еҫ тейеп үлмәһә лә Ишмохәмәт барыбер Зарифаға өйләнер ине. Зарифаның Пурһыктай шыма тәнен бер һыйпау бәхетен татып китер псом генә был ҡәһәрле донъяға ҡабат тыуыр ине... Ул ғына ш гүгсл: Зарифа тураһында үҙенә килеп еткән хәбәрҙәрҙең і йбәт икәнен белеү теләге тотош булмышын биләне, ... вуҙан-йоҡонан мәхрүм итте... Әммә ҡайтып етә алманы, биҙәр өсөн ҡаралған закондар Ишмөхәмәт теләгенән катыраҡ ине...

І һпмөхәмәт, үрмәләп, үҙенең яратҡан ҡаяһы эргәһендә гуҡтаны. Ошо ҡая ышығында ултырғанда шәйләп ҡалғайны и бында төлөк тота башлағаны бирле тәүге күргән әҙәм ш гын. Алыҫтан күренгән һында ҡатын-ҡыҙ һөрмәләнгәс, Ншмохәмәт мылтығын алып торманы. Кем генә булһа ла І ирәкленән булыуы шикле: берҙән, алыҫ, икенсенән, юл өҫтө І ү СЛ.

Урман эсенә инеп, ағастарға ышыҡланып, Ишмөхәмәт Ынды яҡынданыраҡ күҙәтте. Оло кеше булһа кәрәк. Йөҙөн гәрән йәрәхәт эҙҙәре йырғыслаған, өҫтө-башы рәтһеҙ. Ҡарсыҡ үлән йыя ине. Өҙгән үләнен бик ентекләп, оҙон-оҙаҡ ҡарап ГОра, унан, ауыҙ эсенән мыңғырҙап ниҙер әйтеп, моҡсайына и,и;|. Капыл Ишмөхәмәттең зиһенен бер исем ҡыйып үтте: Меғлифә ҡарсыҡ! Әйе, әйе! Нисек итеп Ишмөхәмәт уны баш гуҡ танымаған? Һуғышҡа тиклем, әле Зарифа менән шконлап өйләнешмәҫ борон күргәйне Ишмөхәмәт был Таулының Кәкере ауыл яғында иң осҡо өйҙә йәшәгән карсыкты. Зарифа алып барҙы уға. Кемдәндер уның ноҡотсо, пм юмсо, күрәҙәсе икәнен ишеткән дә, шуға барайыҡ тип Ишмохәмәттең йәненә генә тейҙе. Таулыға эш менән ғар анында ултыртып алып китте балдыҙын Ишмөхәмәт. Үҙенең ташҡын дәрте менән туҡтауһыҙ ярһыта торғас, Таулыға барып ингәндә Ишмөхәмәт күшеккән көсөк дәүмәле генә булып ҡалғандай булды. Баҡшы уларҙы урындыҡ Ширлегендә бәләкэй генә килелә ниҙер төйөп ултырған юндә ҡаршыланы. Һаулыҡ һораштылар. Алды. Күҙенә

төшөрөп бэйләгән яулығы аша бер һирпелеп ҡараны ҡарсыҡ. Ишмөхәмәт иһә өйҙәге китаптарҙың күплегенә хайран ҡалды. «Сихырсы ошолай буламы икән?» тигән уй йүгерҙе башынан. Ишмөхәмәт албырғап торған арала ҡарсыҡ үҙе телгә килде:

— Күрәһең, шулай була, улым...

Ишмөхәмәттең ҡолаҡ остарын ялҡын өттө:

— Нимә, инәй?

— Һин уйлаған нәмә, — ҡарсыҡ көләмһерәне, килеһен ситкәрәк ҡуйҙы. Ул арала Зарифа ла баш-күҙ алып өлгөрҙө.

— Инәй, беҙ, мин һәм бына еҙнәм, эй, Ишмөхәмәт, ней, ноҡот бүлдерәйек, яҙмыш юратайыҡ, тип... бергә булыр-булмаҫты ҡаратайыҡ тигәйнексе ул...

— Ултырығыҙ, — Мөғлифә ҡарсыҡ, үрелеп, боронғоса өйөп йыйылған ҡаралды араһынан бер янсыҡ алды, бауын систе һәм шымарып бөткән йәшкелт таштарҙы балаҫҡа бушатты. Ишмөхәмәт ишек эргәһендәге ултырғыстан, Зарифа ҡарсыҡ ҡаршыһынан, ширлектән урын алды.

Ҡарсыҡтың нәҙек оҙон шауҡал бармаҡтары башта таштар өҫтөндә ойоғандай булды. Бармаҡтары ғына түгел, әбей үҙе лә ойоно, ахыры. Әйтерһең дә бер кем юҡ, ул бер үҙе, ултырған ерендә талсығып серем итә...

Күпмелер ваҡыттан һуң ҡарсыҡ бармаҡтары аҫтындағы таштарҙы һәрмәштерә, урындарынан ҡуҙғата башланы. Ауыр итеп бер көрһөндө, иҙеүен тотоп, ниндәйҙер доға уҡыны. Түҙемен юғалтҡан йәш Зарифа ултырған ерендә борһаланды, бер Ишмөхәмәткә, бер ҡарсыҡҡа сабырһыҙ ҡараштарын ташланы.

Ҡарсыҡ, бармаҡтарын таштарға ҡуйып, ҡапыл нисек ойоп китһә, шулай уҡ ҡапыл һүҙ башланы:

— Берҙән-бер баландың диуана булып тыуғанына нык көйәһең икән, улым, көймә — ҡылған ғәмәлдәрегеҙгә күрә нәҫелегеҙгә һуғылған мөһөр шул. Башҡаса һеҙҙең нәҫелтоҡом үрсем бирмәҫтер. Һуңғыһы шул. Төшөндөңмө? — Нык аптыраған Ишмөхәмәт урынынан торҙо:

— Ҡыҙҙар ҙа тыумаясаҡмы, инәй?

— Тыуыр ине лә... Ризығың ситкә яҙған бит...

— Ә мин? Минсе?.. — Зарифа ла аяҡ өҫтө баҫты.

— Һин, ҡыҙым... — Ҡарсыҡ бер аҙ уйланып ултырҙы: — һиңә, ҡыҙым, йәлсеп ғүмер итергә яҡын кешеңә һинең

ғрафтан ҡылынған рәнйеш ирек бирмәҫ... Дөрөҫөн ......ә үикәләмәгеҙ, — ҡарсыҡ икеһенә лә күҙ һирпеп ҡарап алды, — доға-ясин менән оҙатылыр һуңғы төләгегеҙ-үрмойсм...

Ишмохомэт ҡаушаны, Зарифаның да һылыу йөҙө Ирыш ағарынды.

Кыуандырманың бит әле беҙҙе, инэй, — тигән булды шунан Ишмөхэмәт. — Шулай ҙа, — ул ҡуйын кеҫәһенә үҙе - сәйлек бирәйем, бөтөнләй буш оҡшамаҫ.

Корәкмәй, — Мөғлифә ауыҙ сите менән генә ......мһороне. — Шул аҡсаңа Хоҙай бэндәһе улыңа күстәнәс ҡайт. Хәйер-фатиханы күберәк шул баланан алырға ГЫрыш. Диуананы рәнйеткән бәндә тамуҡта яныр булыр...

Ярай, инәй, — Ишмөхәмәт Зарифа сығып киткән ИШСКе япты ла, тағы бер аҙ ҡарсыҡ ҡаршыһында тора бирҙе. ойепләмәй ҡал инде. Донъя булғас, бөтәһе лә була ГОрғандыр. Мин дэ былай килеп сығыр тип уйламағайным да...

Тәҡдир бит, улым, — Мөғлифә йәнә көләмһерәне, — гүш кеҫәндә ятҡан ҡыҙыл тышлы ҡатырға ғына маңлайыңа яҙылғанды үҙгәртә алмай...

Пшмөхәмәт үҙенең партия ағзаһы өсөн ғәфү итмәҫлек юлдан йөрөгәненә йәне әсенгәнен һиҙҙермәй булдыра Влманы:

Теге ни бит әле, инәй, күршеләрегеҙ сағып-фәлән кү ймаһын инде...

Ниндәй күрше... Ике өй бар, улары ла бикле, кәндәр....

Ярай, инәй, бәлки тағы... Ярҙам кәрәк булһа...

Моғлифә шунда ғына уға күтәрелеп, оҙаҡ ҡына төбәлеп ҡарап алды...

Тау менән тау ғына осрашмай, улым...

Пшмөхәмәт йәнә баҫҡан ерендә тапанды:

Ғәжәп инде, ғәжәп... һуғыш-фәлән сығып китер микән лә, инәй?

Мвғлифә таштарын кире янсыҡҡа тултырған ыңғайға Щнбайыштка ҡараған берҙән-бер тәҙрәһенә күҙ һалды:

Болот ҡуптан инде, улым. Килә ята инде ул ҡара болот. Күк менән Ерҙе беректереп, һыуҙан — һүл, һүлдән I яһап китергә килә болот...

Әле бына ҡаршыһында шул әбейҙе күрә Ишмөхәмәт. Йә Хоҙай! Өнөмө, төшөмө?! Башҡа берәүҙе осратһа, танылыуҙан ҡурҡыр, өндәшмәҫ ине... Ә был бит... «Башҡа осраша алмабыҙ, улым», — тигәйне бит ул. Күрәһең... баҡшылар ҙа яңылыша. Таш ҡыуышында йәшәгән дәүерендә һис бер әҙәм затын осратмаған Ишмөхәмәттең аяҡтары хәлһеҙләнде.

— Инәй! Мөғлифә инәй?!

Ҡарсыҡ үләнде өҙөргә тип үрелгән еренән ҡапыл турайҙы, яра-йөйҙәр йырғыслаған битен ҡалҡытып, ҡап-ҡара күҙҙәрен Ишмөхәмәт йәшеренгән ағасҡа төбәне:

— Кем... һин?!

— Мин — ҡасҡын. Йәнем — Хоҙай ҡулында. Эргәтирәндә кеше юҡмы?

— Хафаланма, Хоҙай бәндәһе. Йәне йән көҫәй торған бәндә мин түгел. Ышанһаң — сыҡ, ышанмаһаң — үҙең ҡара.

Ишмөхәмәт сыҡты. һаҡал-мыйыҡ ҡаплаған был бәндәгә ҡарсыҡ бер һирпелеп ҡараны, ләкин өндәшмәне. Күрәһең, танымаиы.

— Таулы һынлы Таулынан нисек килеп еттең бында? һаман шунда, остағы өйҙә йәшәйһеңме? Хәтерләйһеңме, һуғышҡа тиклем мин һиңә йәш бер ҡатын менән килгәйнем? һин унда, башҡа осрашмабыҙ, минең урынға икенсе берәү килер, тигәйнең.

Ҡарсыҡ үлән тулы моҡсайын арҡаһына аҫты.

— Берәй аҙнанан үҙең белгән шул йортҡа килеп сыҡ... Хуш.

Ҡарсыҡ китте. Ишмөхәмот тын алырға ла ҡурҡып уның артынан тексәйҙе: кешеме, әллә берәй өрәкме? Күп тә үтмәй, тәҡдире уны теге кешегә дәл итте: төрмә ҡушаматым — Бурһыҡ, тине ул. Ишмөхәмәт иһә уға «Ҡунаҡ» тип исем бирҙе. Ошо ҡарсыҡтан алған төнәтмәләр менән шуның ҡортон бөтөрҙө, яраларын бөтәштерҙе Ишмөхәмәт. Тормошо арыу ғына рәтләнде: Мөғлифә ул атып алған йәнлек тиреләренән бүрек тегеп баҙарға сығарып һатты, итек-сарыҡ та оҫталаны, килгән саҡтарында мунса төшөрҙө, әммә үҙе менән ҡасан да булһа «Ҡунаҡ» ты алып килеүҙе, уға был йортто атауҙы тыйҙы... Мөғлифәнең элек күрәҙәлек итеүенән ҡалған тәьҫораты буйынса Ишмөхәмәт унан ноҡот бүлеүен бер нисэ тапҡыр һорап ҡараны, мэгәр яуап бер төрлө булды:

I **әҡдирҙе** яҙлыҡтырыр көс булһа икән... Шулай булғас, юрау нимәгә?

Касаҡ булып... үлгем килмәй, инәй... Анау малайҙың ына ксйҙерермен тип, кеш тиреһенән бүрек теккән »* N 'II аиным...

I оҡдирсң ҡушмаһа, үлеп булмай, яҙмаған әйберҙе и булмай... Өҙгәләнмә, Хоҙай бәндәһе!

Был һойләшеү күптән түгел генә, уҙған барғанында ғына н\ ллы. Мунсаға инер алдынан ҡарсыҡ уға аҡ меткалдан п.ш ор-яңы эс кейемдәрә тотторҙо:

Ыларҙы кейгәс, кэләш ҡуйынына инергә ине, инэй, гип шаярған булды Ишмөхәмәт, унан ҡапыл етдилэнде.

Кәйер, гүр эйәһе булғанда ла таҙаға төрәләр, ниңәлер... Н ка п.фмайҙар...

Карсыҡ өндәшмәне.

Ишмәмәт! — үҙенең ауыл ҡушаматын ишетеүҙән **Ынҫкәнеп,** Ишмөхәмәт аяғүрә баҫты. Баҫыуы булды — мылтыҡ гауышы яңғыраны. Үлемдең ҡайҙан, кемдән килеүен ....кнюргә өлгөрмәгән Ишмөхәмәт бер ҡулы менән **ртындағы** ҡая ташҡа тотонорға теләне — ҡулдары буйһонманы, шул секундта тиерлек ул, ҡаянан айырылған бер **гаш** кеүек, түбәнгә, ҡалын ҡар менән ҡапланған, хәтәр чнмоидор йэшергән йылғаға атылды, әммә яр ситендә үҫкән ' **1рама** уға тәғәйен ерено төшөргә ирек бирмәне — кәүҙә дәү ....иктарҙан торған сатырға эләгеп тороп ҡалды...

Гиулының артта ҡалыуына ла әллә ни саҡлы ваҡыт үтте. ' ктдиновтарҙан атылып килеп сыҡҡан ҡыҙыулығы алды**ирп.пш** ҡарамай атларға мәжбүр итте уны. Белмәне Мәҙинә Өйүп Ғошзовичтың өйләнгәнен. Күтәренеп барып инерҙән алда пом һорашҡылаған булһасы! Үҙенең кәрәкле кишер ш ш ы икәнен инеү менән, теге затлы халат кейгән аҡ йөҙлө ІМДЫН үҙенә сирҡанып ҡарауын күргәс тә төшөндө лә һун, ...' шундуҡ сығып китмәне икән Мәҙинә? Ә ул торҙо. ика ханым булам», — тигән ҡатындың ырыя тәкәбберлеге ш іа ҡарышлауыҡтай бөгөлөүөн, йәненең күренмәҫлек ' р жәлә кесерәйә, ҡурыша барыуын тойһа ла торҙо.

— Әптеләхәттең ҡатынымын тиһеңме? — Мәликә, Мәҙинә аша таныш булмаған Әптеләхәтте күрергә иткәндәй, күҙҙәрен ҡыҫты. - - Флориданың атаһының бер ниндәй ҙә Әптелэхәтте тслгә алғаны юҡсы...

— Беҙҙең Мәскәүгә киткәнгә... ике йыл. — Мэҙинэ теленең үҙенә буйһонмауын, ауырайып ҡатыуын тойҙо.

— һы ... беҙҙең Әйүптең кешелэ хаталана торған ғәҙэте бар инде ул. Бар.

— Улар... Камалетдинов ағай менән Әптеләхәт... һуғышты бергә үткәндәр, — Мәҙинә тамағына төйөр тығылып, тынын быуғандай булғас, тунының үрге төймәһен ысҡындырҙы...

Мәликә ханымдың быға ҡаршы яуабында дорфалыҡ хаттин ашҡайны:

— Ах шул һуғыш! Әйтерһең, унда һәр кем йәне теләгәнде һайлаған! Әптеләхәт тигән берәүҙән... бандит сығырын белһә, Әйүп уны яҡын юлатыр инеме?!..

— һеҙ... нисек... — Мәҙинә башҡаса һүҙ таба алманы, бер ҡулы үҙенән-үҙе ишек тотҡаһына йәбеште, икенсеһе ашығып-ҡарһаланып иҙәнгә ҡуйып торған төргәген һәрмәне. Мәҙинәнең ауыртҡан еренә — сәпкә тейҙереүен төшөнгән Мәликәнең тауышы уның һайын көрәйҙе:

— Нисек, нисек... Мин — аллаға шөкөр! Бына һеҙ, һинең ирең... нисек итеп үҙен әҙәм иткән халҡына дошманлыҡ ҡыла алды икән?!

— Әптеләхәт дошман түгел! Булманы ла!!!

Мәҙинә һуңғы һүҙҙәрен Камалетдиновтарҙың өйөндә әйттеме, әллә сыҡҡасмы — уны хәҙер үҙе лә хәтерләмәй.

Күҙ алдында аҡ ҡар ҡыҙыл ҡан булып болғанды, аяҡтары үҙҙәренән-үҙҙәре Тирәклегә киткән юл буйлап атланы. Шунан бирле килә ул. Мәскәү консерваторияһының дөйөм ятағынан, аҙаҡ укыуҙан сығарғандарында ла был тиклем ҡыйын булмағандыр. Ул саҡта эле Мәҙинәне тыуған төйәгем, беҙҙе яҡындан белгән кешеләр бар, улар анлар, улар һыйындырыр, тигән уй йылыта, шул уй йэшәргә көс бирә ине, ә хәҙер...

Ҡапыл Мәҙинә ҡарынындағы йән эйәһенең сабырһыҙланып тулағанын тойҙо.

— Аh! Әллә инде мин...— Мәҙинә сараһыҙлыҡтан атылып сығыр сиккә еткән күҙҙәрен оҙон юлға, юл ситенэн

сикһеҙлеккә китеп юғалған аҡ ҡар менән ҡапланған яланға .....>ие. — Нишләнем мин?!!

()шоға тиклем үҙе менән бер йән, бер тэн булған I ябыйҙың тәүлектең теләгән бер ваҡытында донъяға килеүен, нагин осәһенэн айырылырын ҡапыл төшөнөүҙән Мәҙинәнең аяҡтары хәлһеҙләнде, йөрэген ҡурҡыныс билдәһеҙлек h\ икылдатты. «Нишләнем мин?! Ниңә мин йәйәүләп ҡышҡы Юлдан илле саҡырымда ятҡан Таулынан сығып киткәнсе, дауахана ишеген шаҡыманым?!»

А-у! — Мәҙинә, эргә-тирәһендә тере йән юҡлығын белһә лә, һуңғы өмөтөн бағлап, йәнә ҡысҡырҙы — Э-һе-ей! \в-а!

Март ҡояшы күҙҙе ҡамаштырырлыҡ ярмалы ҡар өөртөктәрен нур-ептәргә теҙә. Хашим, юлдан боролоп, I влбаныу ҡәбере янында туктап китергә уйлағайны ла, тәрэн Квр1 ирек бирмәне. Иртэ яҙ көнө ерләне ҡатынын Хашим, ергәһенә тағы ҡар һыуҙарының ташҡыны баҫылғас, ҡаулан |стынан тирткән умырзаялар мәлендә килер ул. Ошо Цсерткес, илерткес миҙгел күҙҙәре — умырзая төҫлө ине I влбаныуҙың күҙҙәре лә. Ғүмеркәйе лә уның ошо миҙгел ккәләрендәй зая һэм ҡыҫҡа булған икән...

Тлрән үҙәкте үткәс, Тәңребирҙе буйлап өҫкә күтәрелгән сана юлынан китте Хашим. Бөгөн тейэй торған бесән шул гирәлә булырға тейеш, Хашим үҙе ослағайны ул кәбәнде.

Икс санаға ла ауалатып бесән тейэгәс, Хашим ҡайтыр Юлға сыҡты. Оло юлға төшөп алһа, ашыҡмай ғына, уй йомгағын һүтә-һүтә ауылға табан юлланыр. Ә уйҙары уның икһеҙ-сикһеҙ, бынау ҡояшы көлөп, күге күгәреп торған Котоптоң үҙе кеүек төпһөҙ. Һәр кешсне, һәр үләнде, һәр йән йәһен аңларға, төшөнөргә тырыша Хашим, тырышҡан һпйым, төпкәрәк төшкән һайын уйҙары ҡатмарлана, һи ыш гары тәрәнәйә. Әле бына Шәңгәрэй яҙмышы ла, Мнрхойҙәров менән булған һөйләшеү ҙә тынғы бирмой.

Шоцгәрэй тигәндәй, Хашимдың бала сағындағы бер хәл иҫенә төштө. Айыт көнө ине, буғай. Хашим, әсәһе тегеп Лирглн борсаҡлы бәз күлдәк-ыштандан, усына йоморолай

бешкән бер йомортҡа тотоп, урамға сыҡты. Сығыуы булды, малайҙар һырып та алды уны.

— Э-һе-е-ем, күлдәге беше икән! — Бер-икәүһе килеп, Хашимды бора семтене. Хашим өндәшмәне, түҙҙе. Тәртибе шулай. Яцы кейемдс кейгең килгәс, бер-ике көн семтектәгәндәренә түҙмәй әмәлең юҡ.

— Усындағы нимә ул?

— Йомортҡа, — Хашим «аша мине, йот мине!» тип тетрәп яткан йомортҡалы усын асты.

— Һәй-й-й, — малайҙар алданған, мәсхәрә ителгән бер ҡиәфәт менән ситкә ҡараны, — йомортҡа тип торған була... Картуф бит!..

— Түгел! — сәменең сәбенә тейгән малайҙарға Хашим эстән рәнйеһә лә, үпкәһен белдермәҫкә тырышты. — Ышанмаһағыҙ, ни... ашап ҡарағыҙ.

— Ҡана... — Хашим аңғармай ҙа ҡалды, әллә ҡайһы арала эллә күктән, әллә ер тишегенән пәйҙә булған Шәңгәрәй ауыҙында ине йомортҡа. Шарик шуны сәйнәмәй-нитмәй йоморолай көйөнсә йотто ла ҡуйҙы.

— һы! — Ымһынған малайҙар йәнә Хашим үҙе Шәңгәрәйҙең ауыҙына ҡарап байтаҡ өнһөҙ торҙолар.

— һармаҡ! Йоҙроҡтары ҡысылған Хашим Шәңгәрәйҙең икмэк шүрлегенә бер-икене менеп төшкәнен үҙе лә шәйләмәй ҡалды. Шул ике арала эллә ҡайҙан әсәһе килеп сыҡҡан:

— Нишләүең был, Хашим?

— Үҙе нимештәп минсң йомортҡаны ашаны?

— Шоңгәрәй түгел, юҡлыҡ талаштыра һеҙҙе, балам! — Балаларҙың араһына ингән әсәһе, Хашимды етәкләп, өйҙәренә тартты. — Әйҙә, улым, тауыҡ тағы йомортҡа һалһа, мин һиңә тағы бешереп бирермен. Шәңгәрәй, һин дә ошонда көтөп ултырып тор, йылы икмәктең сауабы ҙур — йылы икмәк сығарып бирәйем.

— Шәнгәрәйгә бирмә! Алйот бит ул, диуана!

— Сеү! — Әсәһенең ҡото алынып улының ауыҙын ҡапланы. — Диуананы рәнйеткән кешегә ҡот йоҡмай! Ул Хоҙай бәндәһе!

Шулай тигәйне әсәһе. Ә Хашим уның һүҙҙәрен шундуҡ онотто. Унан бирле әҙме рәнйетте ул Шәңгәрәйҙе! Бахырҙың Гөлбаныуҙы донъяуи булмаған һөйөү менән яратыуынан әҙме

. . . . . . .Пх, үткәнде ҡайтарып булһа!.. Һуңғы ваҡыт ул Хоҙай

Ж на хәленән килгән ярҙамды күрһәтергә тырышып

I ырған булды ла бит, барыбер һаҡлай алманы... Дөрөҫөн

ш ҙә, Шәңгәрәйҙән көлгән дә, ҡаҡҡан-һуҡҡан да, тартҡан-

ыған да бер Хашим ғына булманы. Төндә ут тирәләй

і іәі с лә, себене лә, серәкәйе лә йыйылып әйләнгән кеүек,

Ш ші әрәй тирәһендә лә кем генә әйләнмәне! Зарифа уны эткә,

И іноаи беткә, тағы кеме нимәгә генә әйләндермәне! Ҡайһы

сик Хашимдың башына шундай уй килә: диуаналарҙы Хаҡ

іаі әлә бәндәнең игелеген үлсәр өсөн яратмаған микән?!

Хашимдың уйҙары кеүек үк ауыр йөк тейәлгән саналар

гарт кан аттар бышҡыра-бышҡыра тауға артыла. Алдағы йөк

башында ултырған Хашим әлдән-әле Тураҡҡа әйләнеп ҡарай.

Уҡыллы мал. Теле булһа, кешегә сисә алмаған уй-серҙәренде

ошоі а һөйләп булыр ине. Ошо ат менән юлға сыҡһа,

Хашимдың күңеле тыныс. Тирә-яҡ тын. Ара-тирә һайыҫҡан

шы кырлағаны, шуларҙың пырылдап ағастан-ағасҡа

Һикергеләгәне генэ ишетелә. Ә, юҡ, һайыҫҡан ғына түгел

ИКОн: кемдендер санаһынан көнъяҡта үҫкән ҡыҙыл алмалар

Һибслеп ҡалғандай, өйкөм-өйкөм булып ҡантүш турғайҙар

) ырған. «А-а-а!» — ниндәйҙер тауыш ишетелгәндәй

булкас, Хашим атын туҡтатты. Уның артынса Турат та,

ко іағын ҡайсылап, туҡтап ҡалды. Тауыш йәнә ҡабатланды.

Был юлы ул баяғынан да әсерәк, хәүефлерәк яңғыраны.

Ҡатын-ҡыҙ ҡысҡыра! Хашимдың зиһенен бер уй телеп үтте:

Вүрсләр! Тик... тауыш биреүсе нишләп күренмәй?

Юл ситендәге көрткә йәбешеп бөгөлөп төшкән ҡатын-м.ты абайлағас, Ихсанбай бер талайға ҡаушап ҡалды. Ул! Мәзинә! Ҡатын-ҡыҙ көсәүҙән талсыҡкан нәфсеһе оторо црһыкаи саҡтарҙа күңеле уға Мәҙинә һынын күҙ алдына Оихисам тапҡырҙар баҫтырһа ла, осрашыуҙың бындайын іәі ойне Ихсанбай. Бына ул үҙе. Теге ҡәһәрле төндөң пссһе. Ихсанбайҙың Хоҙай тарафынан ебәрелгән язаһы. ул үҙе. Ошоно Ихсанбайға дәл итмәҫ өсөн әсәһе Фаүзиә ҡарсыҡ ниндәй генә мәкерле ауҙар ҡорманы: ИМсппср, ул Гөлбаныуҙың ҡыҙы, ә Гөлбаныу һинең... игеҙ Һмңнрың! Ха-ха!

— Ы-ы-ыһ! Эсем, билем! Өҙөләм, ағай, үләм!!! — ирендәрен ҡанатҡансы тешләгән Мәҙинәнең юл ситендәге ҡар һырынтыһына йәбешеп бөгәрләнеүен Ихсанбай өнһөҙ күҙәтте. — Ярҙам, ярҙам ит, ағай?!

— Ҡалайтып... нисек? — Ихсанбай, эйелеп, уны күтәрергә маташты, ләкин ҡатын йәнә бөгәрләнде, йәнә һырынтыға йәбеште.

— Ю-у-уҡ! Аһ! Ат... Ауылға... — Мәҙинәнең күгәргән ирендәренән өҙөк-һурыҡ сыҡҡан һүҙҙәр Ихсанбайҙы йәнә ысынбарлыҡҡа алып ҡайтты. Ауылға?! Ат?! Ә ул яңғыҙы ҡалһа?!. Юҡ... Ихсанбайҙың аяғында — саңғылар. Ул һунарсы түгел дәһә! Ул лаһаң... йәһәннәмдең үҙенән ҡайтып килә!

Тулғағы ебәреп торҙомо, Мәҙинә ҡапыл турайҙы, хәлһеҙ ҡулдары менән көрттө ҡапшап, янтая биреп, юл ситенә ултырҙы.

— Һин кем, ағай?

— Танымайһыңмы? — Ихсанбай тауышының элеккегә һис тә оҡшамағанын, ғырылдап, янған, утҡа бешкән тамағынан шыйылдап сығыуына һөйөндө. Сырамытмайһың дамы?

— Юҡ...

— Ишмөхәмәт ағайың мин... Атайындың... Хашимдың еҙнәһе.

— Ә?! — Аптырауҙан ҡара күҙ алмалары ҡатып ҡалды Мәҙинәнең... — Һин һуғыштан... — Ихсанбайҙың йолон буйы семберләне, маңлайынан тир бәреп сыҡты:

— Эйе, ҡарындаш... Мин һуғыштан... йәһәннәмдең үҙенән яңы саҡ... ҡайтып киләм. Күпте күрҙем, түҙҙем. Һин дә түҙ. Саҡ ҡына түҙ...

— Шәңгәрәй... — Мәҙинә йәнә тулғаҡ ҡысымында тартышты. — М-м... меҫкен... шатланыр инде!

— Түҙ! — Ихсанбай Мәҙинәне йәнә күтәреп алырға итте, әммә ҡулбашының һеңере янған ҡулы көсһөҙ ине. — Ыһ!

— Кәрәкмәй, ағай... Ни, Ишмөхәмәт апа, мин үҙем...

Ихсанбай, аптырап, тирә-яғына ҡаранды. Бына ул урын! Гөлбаныуҙың башына еткән урын! Бүреләрҙән ҡамалып, йөрәге ярылып ҡына үлдеме икән?.. Ихсанбай үҙе шул йыртҡыстар менән күҙмә-күҙ нисәмә осрашты, мәгәр тегеләр теймәне бит уға. Әгәр ошо үҙәкте сығып, тауға күтәрелһә...

һин ултырып тор, Мәҙинә. Быуа шулай, саңғыға... Мип чәҙер! — Ихсанбай, ҡарһаланып, тауға үрмәләне. Бер ш, ул Тирәкле кешеһе менән тәүге һынауҙы үтте. һәйбәт, шыма үтте. Әгәр ҙә ауырлы ҡатынды ҡотҡара ла алһа, **Ихсапбайҙың** Тирәклеләге киләсәк тормошо өсөн бер ҙур мәртәбә лэһаң!

Үргә менеп, Тирәкле яғына ҡараш ташлау менән **Ихсанбай** туҡтап ҡалған бесән ылауын күрҙе. Ана, бесәнсеһе **былай** табан килә. Ах!... Хашим ҡәһәрең! Шул... үҙе...

Икенсе бүлек

Ирен көтөп ала алмаған саҡтары йыш була Мәликәнең. Iилдә ҡыҙғынаһы, бәләкәс Флоридаһы бар. Шуның «Ә-ә!» тип кескәй ҡулдарын һуҙыуы була — Мәликә барлыҡ эс **вошоуҙарын,** шикле уйҙарын, иҫенә төшөргәндә арҡаһынан **быу** бәрҙерерҙәй үткәнен — барыһын онота. Әле ул йоҡлай. **Мвликәнең** тырышлығы менән буйҙаҡ ирҙең толҡаһыҙ ioнъяһынан ожмах сүрэтенэ ингән фатирына Мәликә киске **Һүрөн** ут яҡтыһында ҡарап ултырырға ифрат ярата. Эйе, оары ла үтте. һуңға тиклем эшләүен, ғөмүмән, эштән иммамауын иҫәпкә алмағанда, Мәликә ирҙең еллеһен ләктерҙе. Райондың иң төп хужаһы булыу өҫтөнә, эсмәй, **НГСлекле,** аҡсаны ҡайҙа ҡуйҙың, күпме тотондоң, теге-был гип бәйләнмәй. Флоридаға ҡарата уғата итәғэтле. Шмлтыратһа, башта уның һаулығын һораша. Гел ошолай барһа ине ул тормош...

Моликә асыҡ иҙеүле халат эсенән күпереп күренә биреп **Горған** түштәренә ҡараны, ҡулы, ирекһеҙҙән, шунда күтәрелде: баланы имеҙеүҙән туҡтаһа ла улар шулай тығыҙ, **Гүнорәк** көйө ҡалыр микән? Мэскәүҙә, дөйөм мунсаға йөрөгәндә, Мәликә төрлө рәүешле, төрлө һыпатлы ҡатын-ҡыҙҙы күрҙе. Тәүбә, тәүбә!.. Әлегә унын килеш-килбәтенә һүҙ мчмсрерлек түгел, тик... Эйе, тик Әйүп кенә һирәк ҡағыла ғыл мохәббәт алиһәһе булырҙай һынға. Хәйер... Мәликәгә ул **|Ктан** да яҙмышына үпкәләрлеге юҡ. Әйүпкә сыҡҡанда шул ир штарының ҡомһоҙ ҡараштарынан ғына түгел, ҡомһоҙ ҡарынан да тамам арығайны, биҙгәйне, үҙенә кеше итеп |рар бсрәй бәндә осратыуынан өмөтө өҙөлгәйне...

— Ә-ә... йоко аралаш һаташкан кыҙы Мәликәнең уйҙарын бүлде.

— Нимә, кыҙым, бәү, бәү... Йокла, минең матурым!

Әммә кыҙы күҙҙәрен асып өлгөргәйне. Бына шулай ул: төн еттеме, ун ике тулдымы — күҙҙәрен аса. Шул уяныуҙан таңға тиклем керпек тә какмай. Бер ере ауырталыр тиһәң, бик илап та бармай. Мәликә балаһын докторҙарға ла күрһәтеп караны — береһе-бер айырым-асык фекер әйтмәне.

— Эй бала, — Мәликә кыҙын түшәктән алып күкрәгенә кыҫты. — Йоклар сактарында йоклай алмай ыҙалайһың бит... Атайыңа әйтеп карарғамы? Ҙурырак ергә алып барыр кәрәктер һине...

«Ҙурырак ер» тигән уй башына килеү менән Мәликә көндөҙ ирен һорап килгән катынды иҫенә төшөрҙө. Уға капыл каты бәрелеүенең сәбәбен башта үҙе лә аңламағайны. Бына әле, тәҙрәләр аша караңғы, толкаһыҙ, битараф төн баккан бер мәлдә, ул шулай ук капыл үҙ кылығының серенә төшөндө: ошо йөклө, кайҙа барып морон төртөргә белмәй килеп ингән йәш катында ул үҙенең... эйе, үҙенең... хәтирәләргә бирелеү өсөн артык күңелле булмаған үткәнен күрҙе. Эйе, эйе!.. Ул осраған берәүгә яклау эҙләп баккан кара күҙле был йәш катынды түгел, был нәзәкәтле йыһаз менән биҙәлгән, байлык-байманлык еҫтәре бөркөлөп торған өйҙән үҙенең үткәнен кыуып сығарҙы!

Телефон шылтыраған тауыш Мәликәне лә, уның бәләкәй кыҙын да һиҫкәндерҙе.

Фәүзиә-Барсынбикә Мөғлифә карсыктың өйөн тыштан да, эстән дә байкап үҙенә яңынан-яңы асыш яһай бара. Йорт касандыр оло бер урамдың осонда булған. Әммә өй янында үҫкән тирәктәр, унан һуң кыярак яткан ике уба ситтән карағанда уны бәндә күҙе абайламаҫлык иткән. Убаларҙың береһенең ситенән сөбөрҙәп һыу аға — уға торба куйылған. Торбанан сөптөрләгән һыу янында — мунса. Өй эргәһендә бәләкәйерәк аласык та бар. Уныһы аш өйө. Фәүзиәнең хәтерендә: борон аш өйҙәре һәр сак төп йорттан ситтәрәк төҙөлә торғайны.

Ихатаның бер як ситендә — лапаҫ. Күрәһең, карсык ... срәк мал да тоткандыр. Ситән кәртәгә өс аттың кыу баш Һмйәгә эленгән. Лапаҫка инер капка башына салғы гырылғанын да шәйләне Фәүзиә. Кыҙык, тап Фәүзиә-Барсынбикәнең бала сағында йәшәгән йорто кеүек, тик бында ... исәмдәр башка, кесерәк...

Карағас йорттоң касан һалыныуын билдәләүе кыйын, м.ч әр карағас такта менән көпләнгән һәм шундай ук такта менән уратып коршалған был өйҙөң тағы әллә нисә быуын ҙвмгә хеҙмәт итеренә шик юк. Иҙәндәре лә карағастан, Иыуғас, кыҙарышып, баҙырап киттеләр.

Өй эсендәге монаяттың боронғолоғона ла иҫе китте Фәү ню-Барсынбикәнең. Ниҙәр генә юк бында! Төрлө ҙурлыктағы батман-күнәсектәр, ағас табак-сеүәтә, ырып яһалған ижауҙар, ағастан яһалған кул тирмәне, киле, ялғаш... Ошо саклы монаят һаклаған йортка карсык киткәне бирле ... рәү инмәгән, берәү теймәгән.

Бохара, Мәккә якт арынан килгән ком көршәктәр, ком Гвгөстәр ҙә бар бында. Фәүзиә-Барсынбикә хатта бында ... есең бала сағында һаклап кына тоткан, шуның семәрҙәренә сәғәттәр буйына карап ултырырға яраткан йәйенкә тәгәсе ИШС һауытты ла осратты. Тәндәре эҫеле-һыуыклы булып, күҙҙәренән йәш бәреп сыкты: ошо һауыт уны кеҫәртке КОЙрого шикелле замандың теге яғында, яҙмыш дарьяһының теге ярында өҙөлөп калған ғүмере менән ялғаны. Барсынбикәнең өҙөк-һурык, коршау-ямауҙарҙан торған булмышын бер бөтөн кылды... Бына ул, Барсынбикә, тирә-... үҙснә тивдәш-көндәш белмәгән башкорттоң һомғол н.|, муйылдай кара күҙле һылыуы, тәгәсен тотоп өләсәһе каршыһында баҫып тора. Яраткан ейәнсәрен күреүҙән күҙ йәштәрендә йүр-йыйырсыктар уйнаткан өләсәһе ағас калак ... шул семәрле һауытка күбек майы һала:

Аша, кыҙғынам, күбек майҙай йомшак булырһың.

Ә ниңә һары май кеүек тимәйһең, өләсәй?!

Һары май етеҙ була, күңелгә тиҙ тейә, бүктерә...

Эйе, күбек майҙай сағы тиҙ үтте шул Барсынбикәнен!.. ...ктең үҙе кеүек: шивде лә юк булды. Калған ғүмере уның һары майҙай етеҙ булды, ул ғүмерҙән Фәүзиә эргәһендәгеләр ... үгеп бөттө, үҙе лә туйҙы. Юк, етәр! Башкаса ул кәһәрле

көн хәтирәләренә сумыу кәрәкмәҫ! Көсө етмәҫ Барсынбикәнең ул көндө хәтерләргә... Бөгөн уға тыныс. Ошо боронғо һауыт-һабалар, боронғо бүрәнәләр уға бығаса бында йәшәгән кешслорҙең көс-ҡеүәтен өргәндэй, уны һаҡлағандай, ҡурсалағандай. Барсынбикәнең һиллеккә сарсаған күңеле ахыр килеп ошо йортта тынғы тапкандай...

— У-у-у! Аh! — Ҡапыл ишетелгән тауыш семәрле тэгәс тоткан Фәүзиә-Барсынбикәне һиҫкәнергә мәжбүр итте. Кем йөрөй икән төнө менән? Әллә, — уның йөрәге «жыу» итте — Ихсанбай, улы, булмағайы? Тәҙрәнән урам эсенә күҙ һалды — бер ни күрерлек түгел. Инде ишекте сапсығанмы, бәрелгәнме тауыш ишетелде. Фәүзиә, ҡыуыкһыҙ шәмде ҡулына алып, әкрен генэ солан ишеген асты. Асты ла аптырап ҡалды: тырышып-серәшеп инергә маташыусы зат эт ине. Күгелйем һыртлы, ҡара йөнтәҫ йөнлө, арығаи-йонсоған һарғылт күҙҙәре хәс әҙәмсә ҡарай.

— Аh, аh!.. Ни кәрәк һиңә, хоҙай ҡунағы? — Эт был һүҙҙәргә ҡыуанғанын, шулай өндәшеү менән бик тә риза икәнен белдереп ҡойроғон болғаны. — Килгэс, әйҙә, өйгә рәхим ит. Әллэ ни һыйым юҡ, шулай ҙа тамаҡ ялғатырлыҡ ризыҡ табырмын. Әйҙә... — Хужабикәнең якшы мөғэмэлэһенә эт көрһөнөп яуап бирҙе лә, ят йортка тэү таптыр ингән әҙәм һаҡлығы менән тирә-яғына һынсыл ҡарап, эскә үтте...

Камалетдинов ултырған көйөнсә йоҡлағанда күргән төшөн башта иҫләй алмай иҫәнгерәп ҡалды. Ҡулындағы ҡәләмдә абайлағас, тағы аптыраны: врачтыҡы бит был! Дауаханала ауырыуҙарҙың тукланыуы ҡәноғэтләнерлек түгел, тип ялыу менән килгәйне ул. Лидия Николаевна Башкирцева. Ҡуңыр йөҙөндә тәрән күлдэй тонйораған ҡараһыу-зәңгәр күҙле был ҡатын дауахананың баш табибы Лоҡман Талипович менән һыйыша алмай. Башкирцева өҫтөнән ялыу тотоп Лоҡманы ла бит бик йыш килэ. Камалетдинов, тҙынып, был мәрйәнең кәрәген бирэм инде биреүгә, тип саҡырта ла, һуғыштың башынан ахырынаса фронттың алғы һыҙығында хеҙмәт иткән медицина

Майорының зәңгәрһыу күҙҙәренә бер ҡараш ташлауы була — барыһын онота. Бойоғораҡ, хатта үҙенә лә, бөтә донъяға ла битарафыраҡ ҡарағандай күренгән ошо ҡарашты ҡасандыр, КВЙҙалыр күргәндәй була. Хәйер, Камалетдинов был фани донъяла аҙ юл үттеме лә, бәндәнең кемен осратманы...

Бына әле ул Лидия Николаевна ҡалдырып киткән ҡәләмде тоткан килеш ойоп киткән... Төшөндә ҡыҙы Флориданың койкаһы янына әкрен генэ баҫып килде. Ҡыҙының йоҡлаған сағында, эргәһендә бер кеше булмаған сакта, ҡарап торорға ярата Әйүп. Әллә гонаһһыҙ сабыйлыҡ-сафлыҡ тарта үҙенә, әллә шул пак йөҙҙән үҙенеңме, әсәһенеңме алыҫта ҡалған йөҙ һыҙаттарын эҙләй...

Флорида, ҡыҙым!.. — Әкрен генә өндәшеүенә, кьҙыкай күҙҙәрен асты. Бәй! Ҡара бөҙрә сәсле, зәңгәр күҙле кьҙыкай бит был! Уның Флоридаһы икенсерәк, башҡараҡ...

Кем һин?!

- һеңлең... Хәтирә! Оноттоң дамы?!

– Хәтирә?! — Әйүп, үҙ тауышына тертләп, уянып китте. Хәтирә...

Һәм ҡапыл, аяҙ күктән дөрһөлдәгән күкрәү, ҡара төндө кап уртаға ярған йәшен кеүек, зиһенендә шул исем йәшнәне

Хэтирә! Эйе, эйе! Бар ине уның һеңлеһе! Бар ине! Уны... Хәтерендә, әсәһенең имсәге шешкәйне. Әсәһе урындыҡта һызланып тәгәрәп йөрөй, бала астан илай.

- Астан үлә инде был бала! — Был атаһы тауышы. Шунан өй ҡаршыһына ат туктаны. Толопка уранып килеп ингән ҡатын биләүҙэге баланы ҡулына алды. Әсәһе, ике ңмсәген ҡуш усы менән тотоп, иҙәнгә бөгөлөп төштө:

— Ай! Ай, үләм!..

Башкаһын хәтерләмәй Әйүп. Унан һуң булған ваҡиғалар СЫЛбыры, юурәһең, бала йөрәгенә һыя алмайынса, барыһын • нкмторған... Ошо хаҡта кем менәндер бүлешкеһе, һөйләшкеһе килеп, Әйүп төн уртаһында ҡатынын ҡуҙғатты. (ымдың теге яғында битараф тауыш ишеткәс, әҙерәк һмуынғандай булды. Шулай шул. Иҫләне лә ти. Дөрөҫ тә »\ |һын ти. Шунан нимә? Әйүптең генә яҙмышын турағыстан ү кәрҙеме был заман? Әйүпкә үҙен донъяға яратыусыларҙан иҫтәлек булып бары бер рәсем ҡалған. Унда — атаһы, әсәһе, ө ү рт йәштәр тирәһендәге итек буйы ғына Әйүп. Ә һеңлеһе

юк. Күрәһсң, фотоға төшкән саҡта ул әле тыумаған булған. Әйүп ҡарлы-боҙло йылдар аша бары шул рәсемдә генә һаҡлай алды...

Графиндан һыу алып эскәс, тыныслана төшкәс, Камалетдинов сәғәткә ҡараны. Өс. Төнгө өс. Ҡәләмде иртәгә хужаһына кире ҡайтарыр. Ҡәләмә лә ябай ҡәләм түгел был ҡатындың — тимер көпшэгэ ултыртылған. Көпшәһе, моғайын, көмөштөр. Әллә ниндәй семәрҙәре лә, яҙыуҙары ла булған ҡасандыр. Эйе, тормош иркәләтмәгәнгә оҡшай уны: юҡҡа рәнйетәлер Лоҡман был ҡатынды.

Мәҙинә күҙҙәрен асты. Ҡапыл-ҡара ҡайҙа икәнен аңлай алмайынса, тирә-яғына күҙ һалды. Өй эсендә, бүлмәлә ята кеүек ул. Ҙур бер тәҙрә. Шунан төшкән ай яҡтыһы дүртмөйөштәргә бүленгән кеүек бүлмәне йән көсөнә секерәйеп яҡтырта. Дүртмөйөш тигәне... бәй, карауат бит былар! Карауаттар... Шул саҡ Мәҙинәнең ҡуйынында ниҙер йыбырланы. Мәҙинә, һиҫкәнеп, шул йән эйәһенә үрелде: ҡулы йәш баланың ыуыҙ ғына ирендәренә тейҙе. Бала!.. Был бит... Мәҙинә шунда ғына нәғеҙ асылына ҡайты: ул, Мәҙинә, әсә булған. Уның кескәй генә улы бар. Эйс, эйе! Улы! Әптеләхәте, ҡыҙ тыуһа, Нәфисә тип исем ҡушырбыҙ, исеменә оҡшап, нәфис, наҙлы булыр, ә малай булһа, скрипкасы дуҫы Давид исемен бирсрбеҙ, ти ине. Мәҙинә сикәһен көйҙөрөп мендәргә тупылдаған йәштәрен һөртөргә уйламаны ла. Ҡуйынында мышнап ятҡан кескәй йән эйәһен — үҙенең йөрәге аҫтында йәнендәй ҡурсып йөрөткән сабыйын — имен күреү бәхетенән аға бит йәштәре. «Эй Хоҙайым! — Мәҙинәнең сарсап ярылған ҡыҙыу ирендәрен көйҙөрөп сыҡҡан был ауазды төнгө йоҡоға талған палаталағыларҙың береһе лә ишетмәне. — Ошо баланы бүләк итеүеңә сикһеҙ рәхмәтлемен! Инде, Хоҙайым, шуның ҡайғыһын күрһәтмә!»

Йәп-йәш эсә ауыҙынан сыҡҡан инрәүгә оҡшаған был теләк ай нурына йәбешеп бүлмәгә тулған яҡтылыҡ менән күккә олғашты. һәр хәлдә ул Мәҙинәгә шулай тойолдо. Ерҙә яралған һәр бэндәнең ырыҫ-бәхете Тәңренен ҡулында, тип

мшаиы ул. Шулай булмаһа, инде үлдем, донъяға тыуып та Ялгөрмәгән балам менән бергә яҡты донъя менән хушлаштым Гигәндә, күктең үҙенән төшкән кеүек атаһы килеп сығыр инсме? Эйе, эйе! Атаһы — Хашим — һарайғыр санаһына гейөлгән бесәндең апаруғын юл ситенә бушатты ла Мәҙинәне голобона урап һалып, район үҙәгенә сапты. Ә теге һыңар күҙле һаҡалтай... Эйе, Ишмөхәмәт, бесән тейәлгән икенсе санаға ултырып, ауылға йүнәлде. Ҡыҙыҡ донъя: әллә ҡасан үлгәнгә һаналған кеше ҡайтып төшһөн эле! Бәлки, уның . Әптеләхәте лә шулай көтмәгәндә-уйламағанда ҡайтып төшөр?

Шул саҡ бала тынғыһыҙланып ҡытырлай, ирендәрен кыбырлатып ниҙер эҙләгәндәй булды. «Имергә һорай!» Мәҙинә ҡулын ыуыҙ тулы түштәренә тейҙерҙе. Нисек, кайһылай башларға? Койкаларында тыныс йоҡлаған катындарға ла ҡарап алды. Әлдә уның был ҡаушап, баҙап калған мәлен бер кем күрмәй. Колаҡ остарына тиклем Кыҙарған Мәҙинә күлдәк иҙеүен асып әкрен генә бер түшен Ығарҙы. Ауыртыр микән, бала алыр микән? Әллә һөт еҫен, Млә тән йылыһын тойоуҙан сабый тамшанды, күп тә үтмәй, Мәҙинә күкрәгенән бар булмышына эркелгән татлы дерелдәү, ниндәйҙер йылы ағым үтеүен тойҙо. Сабый йотлоғоп-сәсәп тәгәм йыйыу хаҡына тәүге үҙаллы эшен башланы.

Моҙинә, тулышып һыҙлай башлаған түшенең бушай Варыу рәхәтен тойоуҙан кинәнеп, күҙҙәрен йомдо...

Ихсанбай ваҡиғаларҙың оло юлға сығыуы менән үҙенең фвйҙаһына ыңғай хәл ителә башлауына шатланып бөтә Лманы. Беренсенән, бирәйем тигән ҡолона сығарып ҡуя Юлына, тигәндәй, Мәҙинәне осратты. Етмәһә, яңғыҙы, ярҙамға Мохтаж мәлендә. Ихсанбайҙың үҙенә ярҙам итергә п.‖и,1шыуын, ташлап китмәүен ул бит ҡасан да булһа Баһалаясаҡ! Икенсенән, аты килеп сыҡты. Ауылға ул буш ҡул менән түгел, сана тулы йөк өҫтөндә ҡайтып төштө. Хашим Иенән тәүге әңгәмә генә күңелен ҡырынҡыраны, уның шайы м.шл булыр инде, унан да шәберәк ҡаршы алыуҙы, Ишмөхәмәттең үҙе ҡайтып төшкән хәлдә лә, өмөт итмәҫ ине.

Атты тапшырыуын тапшырам да... Кем һин?! — тине Хашим. уға тишерҙәй итеп ҡарап.

— Кем булһа ла, ат менән түгел, яраплан менән дә был һыпат менән алыҫ китерлек түгелмен. Күрәһендер: тотош тамғанан ғына торам, — тине Ихсанбай үҙенең ғәҙәти булмағанса ҡыҫылыи сыккан тауышы менән.

— Тамғаларың нисауа... Нимә, танкта яндыңмы?

— Булды инде... — Ихсанбай-Ишмөхәмәт тоноҡ хәтәр ятыуҙар һаҡлаған берҙән-бер күҙен ергә төбәне. — Һинең һорашмағаның, минең һөйләмәгәнем яҡшы, Хашим. Минең хәлдә өндәшмәүем көмөш булһа, һөйләшмәүем — алтын.

— Хашим тиһеңме? Мине ҡайҙан беләһең?

— Белмәй, — Ихсанбай, янғындан ҡалған киртек танауын өҫкә күтәрҙе, — Ишмөхәмәтте, еҙнәнде, танымайһыңмы?

— һы... — Хашим ни әйтергә белмәне. — һы!

— Мин дә һине тере килеш күрермен тимәгәйнем, йә, ярай, һеҙгә ашығыр кәрәк. Һинең менән мин был хәлдә Мәҙинәгә ярҙамсы түгелбеҙ.

— Бесәнде тура нигә... фермаға, — Хашим, атының санаһына менеп ултырҙы ла ҡаты итеп дилбегәне тартты, унан, сыбырткыһын болғап, һарайғырға көсөндө йәлләмә тигәнде белдерҙе. Йөктән бушанған айғыр, шуны ғына көтөп торған кеүек, йән-фарманға район үҙәгенә атылды.

Ихсанбай, йөк башына үрмәләп менеп ултырып алғас, түш кеҫәһендәге документтарын ҡапшаны: барыһы ла урынында. Имен-һау хәрби иҫәпкә тороп, военкоматты алдаһа, янғындан һуң яңы сүрәткә ингән ҡиәфәте уны ышанысллы һаҡлаясаҡ.

— Эйҙә-ә-ә, малҡай!

Ҡайтыуға тигәндә ылдым хәрәкәтләнгән сана башында Ихсанбай арыған аяҡтарын иркенләп һуҙҙы, күҙ алдына Мәҙинәнең киң асылған ҡара күҙҙәрен, ауыртыныуҙан тешләнеп ҡаны сырҡырағанирендәрен килтереүҙән, кендек аҫтын һыҙлатып, бөтә тәне буйлап ләззәтле һәм ғазаплы йылы ҡан йүгерҙе.

Кибеттә һатыусы булып эшләй башлағас, үҙенә беренсе бурыс итеп Рауза атлауын үҙгәртеүҙе ҡуйҙы. Элек, кәнсә йыйыштырыусы булған сағында, уға нисек атлаһа ла ярай

ИНС Хәҙер ярамай. Ни тиһән дә уның ҡулына бөтөн Тирәкле карап тора! Ишшу етмәһә, ҡулында — асҡыстар. Берәү үгел, тотош бәйләм, унлап булыр. Шуға күрә лә бер аҙ артка кайҡая, эсен шөйлә алға сығара бирҙе Рауза. Йөрөгәндә лә коҙер ашыҡмай ул. Нинә, персиҙәтелдең йомошон үтәргә йүгермәй ҙә ул! Әлбиттә, ҡайһы саҡ ул килсүгә кибет ірі әһенә кеше йыйылғылап киткән була. Йыйылһындар. Ьлрыр ерҙәре баҙар түгел. Ашығып, Раузанан былайыраҡ эш кыйратып йөрөмәйҙәр әле.

Ьыл юлы ул кибет эргәһендә ике-өс ир, бер ҡатын күрҙе. һы! Катын тигәне — Ғәлимә. Нишана, күп булһа кисә кибеткә «Сирень» хушбуйы килгәнде ишеткәндер. Былай булғас, уның зафферма менән бутала тигәндәре дөрөҫкә сыға гүгелме? Ир тигәндең береһе — үҙенең улы Хөсәйен. Шул, корогор, тартырға ныҡлап кереште. Шулай инде: упыҙҙы үтте, ни бисә, ни һөйөргә бала юк. Әпәт ҡайтмай был шул вттары янынан. Тәки шунда ҡуна, шунда йәшәй.

Ирҙәрҙең анау берәүһе, төлкө кәпәслеһе, Хашимдың иғаһысы... Быға ни кәрәк икән? Бисәһе Хөсниямал йөрөй сорғайны лаһаң йомош-юлға? һай, ҡәҙерен белмәйҙәр ҙә инде бәғзе бисәләр ирҙәренең. Ошо тиктем ҡарағайҙай ирҙе копрәткә йөрөтөп ҡуя торғаның бармы? Юҡ, эсендә йәне юмыр был Хөсниямалдың...

Тағы ике ирҙең береһе Ғәлэүгә оҡшаған. Уныһы Ғәләү булһа, икенсеһе Вәләү инде. Ағалы-ҡустылы берәҙәктәр. Коләүенә эсергә кәрәк, Вәләүе шуны эсермәйем тип ныҡышып артынан эйәреп йөрөй. Эскән кешене ҡарауыллап өлгөрөп буламы? Унан һуң, Ғәләү ише үҙ ырыҫына үҙе кжоргәндәр булмаһа, Рауза нисек план тултырыр ине? План гултырыу Раузаға ғына түгел, хөкүмәткә лә кәрәк. Шулай булғас, Рауза быларҙы әбижәйт итергә аслан тейеш түгел! Аиа, Хашимдың ағаһы Ҡасим, огоротын ундырышлы итәм гип йылғанан селәү ташый. Кемгә нимә. Рауза ла: әҙәм ни гиклем күберәк эсһә, ул хөкөмәткә шул тиклем күберәк аҡса РВПшыра. Политика был. Ә Рауза, ҡара йәшенән хөкөмәт нмсндә йөрөгәс, политиканы яҡшы төшөнә, яңылышмай.

һаумы, Рауза апай! Ни хәлдәһең? — Ғәләүҙең бөтәһенән алда сәләмләүе Раузаны һағайтты: был, ҡәһәр,йәнә үтескә эсергә килгән!

— һаумы, тип, хәлсә инде, Ғәләүетдин ҡустым. Һеҙҙең фатихала. — Шунан ул Хөсәйенгә боролдо. — Нигә ҡайтып икмәк тә алып китмәйһең?

— Асыҡмайым. — Хөсәйен күҙ ҡараһы шешмә ҡабаҡтары аҫтына йәшеренеп бөткәнсе йылмайҙы. — Һиңә эконом булһын тием...

— Бирермен мин һиңә экономды!

— Ярай, бөгөн ҡайтырмын.

— Ҡасим, нимә, Хөснимал ҡорҙашбикә ауырып киткән мәллә?

— Юҡ-у-юҡ, бушамай әле ул. Хашимдың донъяһында ҡалған.

— Хашим ҡайҙа? — Эсенән генә буйҙаҡ Хашимды ҡулға төшөрөү теләге менән янған Рауза һиҫкәнеп, ҡалтыранып китте. — Әллә... бер-берәй ергә бисә эҙләп сығып киткәнме?

— Ю-у-юҡ, Хашим ни, Мәҙинәне балниска, Таулыға алып киткән.

— Мәҙинәне?! — Рауза көтөлмәгән яңылыҡ ишетеүҙән ҡаушап, ҡалбырҙап китте, йәтеш танауына хатта тир бөрсөктәре бәреп сыҡты. — Мәҙинә тиһеңме?..

— Әйе лә, — Ҡасим торған ерендә калушлы быймалары менән тапанып алды. — Мәҙинәне Хашим бесәндән ҡайтып килгәнендә, Тәрән үҙәктә осратҡан и һәм шундуҡ Таулыға сапҡан.

— Аh, аh! У нигә?! — Рауза, донъяһын онотоп, Ҡасим ауыҙынан сыҡҡан һәр һүҙҙе сыҫҡан аңдыған бесәй иғтибары менән тамһынып күҙәтте. — У нигә Таулыға?

— Әйттем дә һуң балниска тип. Мәҙинәнең теге ни ... көнө еткән булған.

— Ыста-ыста! Кем әйтте быларҙы? Кемдән ишеттең?!

Ҡасим башын күтәреп, бөтәһенә лә күҙ йөрөттө.

— Бәй, ишетмәнеңме ни: Ишмөхәмәт ҡайтып төшкән бит!

— Ишмөхәмәт?! — Рауза, хәбәрҙең ҡолатмалыһын ишеткәс, Ҡасимға йәбеште. — Ысынды һөйҙәйһеңме, буштымы?!

— Ысын... Үҙем күрҙем. Шәңгәрәй ҙә юҡ, Зарифа ҡарындаштың өйөн ҡараштырып сығайым тип барғайным, кейәү... Ишмөхәмәт ултыра.

— А-т-а-а-ҡ! — Рауза Тирәкле тормошонда булһа ла йөҙ йылға бер була торған быңдай хәлде үҙ күҙе менән барып

күрмәй түҙмәҫен шундуҡ аңланы. — Кәпрәттә кемдең нимә алаһы бар? Йәһәт булығыҙ!

- Кейәү ҡайтҡас, үҙең беләһең... — Ҡасим арлы-бирле гапанды. — Мәҙинәгә лә кәрәк-ярак кәрәк. Хөснимал кушты.

Аh-аh, ҡушһа ни, ҡуй, үҙе килеп алыр. Бисәләр момошон үтәү ирҙәр эшеме?! Уны шикелдегә кеше ирҙе сбәрәме? — Ул йыйылғандарҙың башы аша урамға ҡараны. Һиңә тартырға өйҙә лә бар. Алып ҡуйғанмын. Кит, Хөсәйен, кәпрәт ҡаршында сабыуылдап йөрөргә һин Ғәләү йә булмаһа Вәләү түгел. Шулай бит, Ғәләүетдин? — Рауза ашыға-ҡарһалана йоҙаҡты аса башланы. Ҡабаланғанда, йәне смккыры, бынаһы ла асылмай. һиңә кәрәкмәгән саҡта, алланың ҡаты кәһәре төшкөрө, бикләнмәй ҙә тороп ҡала!

Ниһайәт, кибет асылды. Рауза бейәләйен сисеп прилавкаға һалды ла, Ҡасим биргән аҡсаға үрелде:

— Теүәлме?

— Теүәл шикелле. — Ҡасим ары-бире иткән арала Рауза, ҡулындағы аҡсаларҙы һанап та тормаҫтан, ике ярты консерваны шап итеп өҫтәлгә ҡуйҙы. Ыңғайына Ғәләүетдингә лә өндәште. — Миңә бирәсегең дүрт тәңкә булды, Ғлләүетдин ҡустым. Бурысыңды ҡайтармай тороп, башҡа кмлсп йөрөмә.

— Дүрт?! — Вәләү ҡаршы төшөргә иткәйне, Рауза омәлен тиҙ тапты.

- Ашаған белмәй, тураған белә, Вәләүетдин ҡустым. Йә, боттөме? — ул Хөсәйенгә бер пачка «Казбек» ташланы. — Бар, бар, тексәйеп тормағыҙ! Алырығыҙ бөттө!

Рауза кибетте шартлатып бикләне лә, ҡасан аяҡ баҫҡанын да онотҡан Ишмөхәмәт өйөнә табан осто. Әйе, әйе, осто. Был юлы ул үҙенең яңы уйлап тапҡан атлау-йөрөшөн дә онотто. Бер юлға ярап торор: йәшенән хөкөмәт эшендә йөрөгәс, хәл-каҡиғаларҙы ул «йүкә телефон» аша ишетеп өйрәнмәгән. Ысвежый көйө үҙ күҙе менән күреп ғәҙәтләнгән. Уф, Ҡасим һөйҙәп бөткәнсе йәнгенәһе сыға яҙҙы бит. Йә бына, һау кеше күпме ваҡыттан һуң да ҡайтып төшкән, уның Сибәғәткенәһе генә ҡайтмаҫ ерҙә ята. Хоҙай Раузаға мулы менән дәрт биргәнсә, хөрәсән генә булһа ла бер ир йораты бирһәсе! Юҡ шул, насибы юҡ. Хәйерсенең мороно ашҡа тейһә, ауыҙы канай тигәндәре шулдыр. Мына бит Ишмөхәмәт ҡайтҡан —

Зарифа юк. Бер нәфсеһенә баш булалмай харап булды ул да. Тәүбә, әстәғәфирулла! Рауза уң яурынына ҡайырылып өстө төкөрҙө лә һуңғы ваҡыт Шәңгәрәйҙон башҡа эт тэ ишеген асмаған йорттоң ҡапҡаһына үрелде...

Шәңгәрәй, фермалағы ҡарауылсы өйөнөң тәҙрәләре бик бәләкәй уйылғанға күрэ, яҡтылыҡ етмәүҙән күҙҙәрен ҡыҫырға мәжбүр. Эше күп унын. Муйындан. Төндэ лә эшләр ине ул, ҡараңғы булмаһа. Туйға эҙерләнә, ҡый, ул. Кемдең тиһегеҙ? Мәҙинәнең. Мәҙинә менән Әптеләхәттең туйына. Аттар әҙер. һәр санаға икешәр итеп ат егәсәк. Шәңгәрәй мөйөштәге аяҡтарынан бәйләп ҡуйған тараҡандарға ҡарап алды. Иң шәбе — һарайғыр. Ҡалғандары ла бирешерлек түгел. Сабыш әкәмәт көслө буласаҡ. Шәңгәрәй һарайғырҙы үҙе егә. Хәҙер, ошо сананы яһап бөтһә... Ул, ҡатыраҡ ҡағыҙ эҙләп, тирә-яғын ҡапшаны. Ыңғайы бер тараҡандарға икмәк валсыктарын яҡынайтты: ашаһындар. Туйға бараһы ат ләғир булырға тейеш түгел! Саналар ҙа әҙер. Хәҙер Шәңгәрәйгә аттарҙы егергә лә, туйға барасаҡ ҡоҙаларҙы саналарға парлап ултыртаһы ҡала. Һарайғыр менән Ерәнде мисәп егеп, анауы ҡурғашлы санаға үҙе ултырып алыр: ул «Шәңгәрәй» атлы ҡағыҙ-егетте тотоп, һыйпап ҡараны — матур. Иң матуры! Шулай булырға тейеш тэ: ул бит Гөлбаныу йэнәшәһендә ултыра! Бәй, шулай инде: ирле-бисәле кешеләр бергә ултыра инде ул. Гөлбаныу эргәһенә (ул ҡағыҙ-кешеләрҙе ҡапшаны) ике малай — Иәнтимер менән Биктимер — ҡунаҡлар. Ә бынау санаға — иң ҙурыһына — атаһы Ишмөхәмәт менән Зарифа әпсэй ултыра инде. Ә үҙенең әсәһе ҡайҙан урын алыр? Туйға барыр өсөн ул яңы күлдәк тектергэн, аҡ быйма баҫтырған. Атаҡ, ул ни Шәңгәрәйҙәр санаһына ултырыр! Бына шулай. Урын, аллаға шөкөр, етерлек.

Инде бынау кәкере, ҡалдыҡ-боҫтоктан яһалған санаға сират. Бында, әйҙә, Ихсанбай менән бисәһе Сәбилә барһын. Ихсанбайға тигэн ат та мөсһөҙ булырға тейеш. Ул шулай уҡ аяҡтарынан бәйләп ҡуйған ике ҡандалаға ҡараны:

Ихсанбайҙың аты артта ҡалһа, ошо «бүреләр» һөжүм итәсәк. Йә үҙен, йә атын, йә бисәһен ашарҙар. Эй-й-й... бисәһен... лшаһындармы икән? Йә, ҡуй, моғайын, теймәҫ уға бүреләр: гә һөйәккә ташланмай тиҙәр. Сәбиләне нишләтһен улар? бына Ихсанбайға шул кәрәк: ашалһын бүренән, йәшәмәһен!

Фәүзиә ҡарсыҡ менән Сибәғәткә лә сана әҙерләгән Шлцгәрәй. Тар ғына сана. У-һу-у! Фәүзиә шәл тышынан бүрекме кейгән, таҫтармы ураған. Әкәмәт ҡарсыҡ — ниңә кәрәк булды икән уға былай яһаныу?!. У-у... Рауза килеп илап торасы?! Мин һине ҡайҙа ултыртайым? Етмәһә, Хөсәйен ат бирмәй һенәне ҡоротто... Әйҙә, Сибәғәттең кузлаһына ултыр. Әллэ Ихсанбай санаһына күсереп ултыртырғамы? Юҡ, унда ярамай... Бүре ашап ҡуйыр... Һимеҙһең, аяуһыҙ көрһөң, бүрегә ем генә булырһың...

Их ҡына! Бөтәһен дә урынлаштырып бөтөп бара Шәңгәрәй. Инде үҙе ултыра ла, эргәһенә сынъяһау олбаныуҙы балалары менән урынлаштыра и һәм... Атаҡ... Ул ситтә генә мейескә һөйәлеп торған оҙонтораҡ һынға ҡпраны.

— һин ниместәп тораң, Хасим?!

— Туйға барырға сыҡтым да...

— Аһ-аһ... Ҡайҙа ултыраң инде?!

— Санаға.

— Кем янына?

— Гөлбаныу янына.

- Ҡукыс һиңә! Гөлбаныу минең менән ултырған!

— Ул минең законный бисәм.

— Булһашы?! Мин уны һинән бер яртыға һатып алдым ца инде?!

— Кит, Шарик, тай бынан!

— Ы!

— Кит тиҙәр! Төс!

— Мына! — Шәңгәрәй тоҡос бармаҡтары араһынан шулай уҡ тоҡор ғына, байтаҡтан йыуылмаған ҡукыш шлрәмәте сығарҙы. — Мына!

Шул саҡ ишек бәләкәй булғанлыктан шаҡтай иңкәйеп-кәкерәйеп, март ҡояшы тышта алып ҡалған күҙен ҡыҫа гөшөп, Хашим үҙе килеп инде. Башта ул ҡараңғы мөйөштә

тараҡандар менән булышҡан Шәңгәрәйҙе сырамытмайыраҡ торҙо.

- Фу... бср нәмэ күрсрлск түгел. Шәңгәрэй?

— Ҡышҡырма... атты өркөтэң!

— Ат һиңә атаң башын! Шэңгәрәй! Яңылыҡ бар бит әле һиңә, эй!

— Яңылыҡ кәрәкмәй миңә!

— Әләйһәң... һөйөнсө!

— һөйөншөһөнә — тараҡан бото!

— Минең Мәҙинәм ҡайтты, Шәңгәрәй! Әле балниста. Ә һинең, Шәңгәрәй, атайың. Ишмәмәт... Ул ҡайтты...

Өсөнсө бүлек

Мәҙинә өйөнөң ишегенән ингәс, биләүҙәге йәш балаһын ҡайҙа һалырға белмәгәндәй, аптырап ҡалды. Ҡайһылай кес кенә, үтә лә тар ғына, тәпәш кенә булған икән уларҙың өйө. Ошонда өләсәһе, әсәһе, ике ҡустыһы, атаһы йәшәнеләр бит! Урындыҡ, һике, мейес, өҫтәл, ишек төбөндә — бүкән. Элек тәҙрә төптәрендә гөлдәр ине, хәҙер юҡ инде улар. Берәүһенең генә һауыты ултыра, күрәһең, иң һуңынан ҡороғандыр.

Ишек буйындағы стенала шаршау ҙа юҡ, ғөмүмән, ҡатын-ҡыҙ ҡулы тейгән нәмә күренмәй. Стеналағы ҙурайтылған рәсемдән башҡа бында яңылыҡ юҡ. Ә рәсемдән уға әсәһе менән атаһының йәшлек, дәрт, сәләмәтлек бөркөп торған йөҙҙәре ҡарай. Әсәһе боронғо башҡорт ҡыҙҙары кейемендә. Мәҙинә уларҙы әле лә үҙенән ҡалдырмай алып йөрөй. Эйе... Оҡшаған Мэҙинә әсәһенә. Фотоһүрәттә — бигерәк тә. Тормошта әсәһенең күҙҙәре зәңгәрһыу-һорғолт ине. Ҡап-ҡара керпектәр менән ҡаймаланған бындай ғәжәйеп күҙҙәрҙе Мәҙинәнең ҡабат осратҡаны булманы ла. Ә атаһы үҙенең фронтта төшкән фотоһын ҙурайтҡан. Әсәһенең күҙҙәре аҙашҡан болан балаһыныҡылай, атаһыньщ ҡарашы уйсан, ҡырыҫ...

— Әйҙүк, ҡыҙым... — Ҡасимдың ҡатыны Хөсниямал ҡулдарын балаға һуҙҙы. — Аталарына, Мәҙинәне үҙебеҙгә апҡайтайыҡ балнистан тиһәм, ризалашманы, уның үҙ нигеҙе, үҙ тайсаһы бар, тине лә ҡуйҙысы...

Рәхмәт, былай ҙа күпме мәшәҡәт яһаным, — бвлаһынан бушанған ҡулдары менән Мәҙинә бутыйының гөймәләрен ысҡындыра башланы. — Йыуғанһығыҙ өйҙө, йылытҡанһығыҙ...

Эй, уныһын! — Инәһе йән эйәһен урындыҡтағы мендәргә һалды ла, баланы ауыҙландырырға әҙерләп ҡуйған килаҡтарға үрелде. — Быныһы — бал, быныһы — май! Балдай татлы телле, майҙай йомшаҡ холоҡло бул, балам!

Ул арала ишектә күршеһе Маһинур күренде:

- Аһ-аһ! Иртәнсәктән бирле көттөм, инде бэләкәй ятып горайым тигәнсе... Аһ-аһ! Мәҙинә, ҡыҙым, һаумы?!

Игелеген күп күргән Маһинур күршеһен күргәс, Мәҙинәнең күҙ йәштәре үҙенән-үҙе атылып сыҡты.

- Бына, апай... Мин тағы... яңғыҙмын.

— Улай тимә, ҡыҙым, атайың бар.

- Эйе, эйе, — яулыҡ осо менән алмаш-тилмәш күҙен һорткөләгән Хөсниямал да һүҙгә ҡушылды. — Аталары ла шулай ти. Бәндә хөкөмө нимә ул? Ана, Хоҙай ҡушҡас, ни роүешле имгәнгән булһа ла Ишмөхәмәт тэ ҡайтып төштө. Ризығы бөтмәһә, ҡайтыр Әптелэхәт кейәү ҙә.

— Ҡуй, — Хөсниямал инәһе уның ҡаршыһына баҫып ннлап ҡына тун төймәләрен ысҡындыра башланы. — (абырһыҙланма, һин бит хәҙер әсәй булдың. Әсэ кеше сабыр була ул. Гөлбаныуҙың сарбайҙанып башын ташҡа бәргәнен күргәнең булдымы? Бына кеше! Бөтөн хәсрәтен, һағышын эсенә йомған көйө китте донъянан. Ауыҙына тулған ҡара ҡанды ла кеше алдында түкөрмәне бит ул. һинең хәҙер иорәгеңә баҫыр балаң бар. Хоҙай шунывдың һауҙығын, тоүфиғын бирһен!

- Эйе, эйе... — Маһинур Мәҙинәне урындыҡ ширлегенә ултыртты. — Мына мине алып ҡара: өйөм бар, бабайым бар, мал-тыуарым етерлек, балам юҡ. Анау бабайға бер-бер хәл Оулһын — япа-яңғыҙ ҡалам бит! Эй, Мәҙинә, Хоҙай йән биргәнгә йүн бирә, илдә сыпсыҡ үлмәй. Ҡайтырынды шулай пыҡ көттөм, ҡиәмәтлек әсәй итеп алһаңсы мине, балам?!

Мәҙинә, урындыҡ ширлегенән әкрен генә шыуып төшөп, күҙҙәренән сөбөрләп йәш аҡҡан башын Маһинурҙың алдына һалды:

— Ах, Маһинур апай!..

Рауза Ишмөхәмәтте был тиклем ҡиәфәттә күрермен тип уйламағайны.

— Атаҡ-атаҡ... -- ул инде лә усаҡ каршыһында ут яғып булашҡан һыңар күҙле, йөй-йөй булып сөрөшкән йөҙлө кешегә ҡарап шаҡ ҡатты. — Тәүбә-әстәғәфирулла тип әйтэйемме... һинме был, Ишмөхәмәт?

— Үт, Рауза... ни... күрешәйек... — Ишмөхәмәт, бер яҡҡа ҡыйыш уңалған биле яҙылмағанлыҡтан ыҡтыра баҫып, Рауза ҡаршыһына ығышты. — Быңа... әҙәмде йәнтәслим ғәрипләмәһә һуғыш тимәҫтәр ине уны...

— Аһ, аһ! — Рауза устарында Ишмөхәмәттең һалҡын, дерелдәберәк торған ҡулын тойҙо. Был тиклем дә һалҡын ҡул суғын тәү тапҡыр ҡыҫыуылыр уның. Әйтерһең дә кеше түгел, яңы-юры ғына ҡәберҙән һөйрәлеп килеп сыҡкан өрәк...

— һый тәҡдим итә алмайым, ни... ғәфү ит, Рауза. Ауылда ниндәй хәлдәр бар? Үҙегеҙ нисек йәшәйһегеҙ.

Иҫенә килә төшкән Рауза бүкәнгә ултырырға самалап ҡараны ла, ултырышын һыйҙыра алмаҫтай булғас, туры үтеп, ширҙеккә ялпашты.

— Беҙ ни... тере йәнгә ни... ризығы ла, монаяты ла табылып тора. Хөсәйен һаман шул атта...

— Килен алманыңмы?

— Килен!.. Килен алыу түгел, мунса төшөрөргә аттарынан айырып алып ҡайтып булмай. И һәм үҙем дә килен йомошап, һәндерәлә ятыр йәштә түгелмен. Йәштэй генә таптым да инде мин, Ишмөхәмәт, Хөсәйенемде. Күп булһа, егерме ете өҫтөндә буғанмындыр. И-и-и... какуй һиңә егерме ете, уҙа барһа егерме биш тирәһе буғандыр?.. Ә?

— Үҙең һуң ҡайҙа эшләйһең? — Бер нәмәне сәйнэй башлаһа сүбәккә эйләндермәй туктамай торған холҡон белгәс, Ихсанбай-Ишмөхәмәт һорау бирергә ашыҡты.

— Үҙем ни... Атаҡ, яңы ҡайтҡас, ишетмәһәң ишетмәгәнһендер шу. Мин ни... Ишмөхәмәтулла ҡорҙашбай, бик һур кеше булып киттем бит! Сәүиткә рәхмәт, бартияға рәхмәт: ҡатын йортон ныҡ үҫтерҙе, ғэләмэт күтәрҙе. Вис вули ҡуйҙы. Йә, мин кем инем? Анау шаҡшы, ҡәберендә лә тыныс ятмағыры Ихсанбайҙа убыршица инем!

Хоҙср кемһең? — Башына эҫе ҡабып, ҡолағы шаулай бвшлаған Ихсанбай-Ишмөхәмәт һаҡалын семтекләп ҡыҙып яна башлаған ут ҡаршыһына сүгәләне.

Атаҡ, шуны әйтәмсе, хәҙер кем икэнемде. Мына... гәртипте йәшәгәс, Хоҙай насип итеп, бартияһына инеп киттем. Бартияға ингәс, эш хутка китте, кем, Ишмөхэмәтулла ҡорҙаш: кәпирәт ағзалары мине һатыусы итеп үрҙэтте лә ебәрҙе! Әлдә теге йэне йәһәннәмгә киткере пельменной Мхсанбайҙан ышшут тартырға өйрэнеп ҡағанмын! һөнәрһеҙ ҡыйын булыр ине күтәрелеүе. һөнәре буһа, мужет, һинең дә Зарифан Ихсанбай менән йэбешешеп көн-төн уйнаш итеп итмаҫ ине. Эштәп ашар ине. Өҫтәренә, тәүбә әстәғәфирулла, Үҙем килеп сыҡтым бит! Бахыр Шәңгәрәйендән эт яһап ҡуйғандар ҙа уйнашҡа керешкәндәр, мин һиңә әйтәйем! Ьашҡынаһы йоп-йөморо булып, шаулап өрөп торған була байғош. Ихсанбай, тамуҡтың ҡыҙыуында янғыры, шәп-шәрә килеш, көпэ-көндөҙ Зарифаны баҫтырып йөрөй.

Урынында ултырып сыҙай алмай, ах та пых килгэн әнı эмәсеһенә иғтибар ҙа итмәҫтэн, Рауза һүҙен дауам итте:

— Мына шулай ул, ҡорҙашбай, донъя — ҡуласа, йә мына һин әйт әле, үҙең донъяға бар ҡылған балдарҙы үҙ ҡулың мснән үтерә алыр инеңме?

Кит, юҡты!.. — Тэненән һыуыҡ тулҡын үткән Пхсанбай бөрөштө, арҡа мейеһенең өшөүен ныҡлап ҡыҙған усаҡ йылыһы ла йылыта алмай.

— Юҡты! Бер ҙә юҡ түгел. Малайҙарҙың һөйәге бығаса габылыр ине инде — табылманы. Шул ғазрайыл ғына кумырыҡҡа тыҡкан уларҙы. Бөтөн ауыл шулай һөйҙәне. Пхсанбай ошо көн тере буһа, биллаһи, таш менэн бәргестэп үлтерерҙәр ине!

— Юҡты.. Ихсанбайҙың ул... сабыйҙарҙа ни үсе булһын?!

— Аһ-аһ!' Как рас шуны эйтеп утырамсы: игеҙәктәр бит... I олбаныу мәрхүмәкәйҙең сабыйҙары... шул инэһен эт йыҡкыр Ихсанбайҙан буған бит! У-у-й! Тылда ҡаған ирҙәр бисәләрҙән күп көлдө! Ихсанбай, бәдбәхет, бөтәһенэн арттырҙы!

— Һин үҙең һуң... — Ихсанбай, асыуын йәшерергә була, ммәкеһенә көс төшөрҙө... — Үҙең...

— Аһ-аһ! Миңә ни булған? Мужет, мин сыҡмаҫ та инем. Мужет мин Хөсәйенемде үгәй күҙенә ҡаратып утыртып ҡуймаҫ та инем: минең ише сиртһәң ҡаны сыҡмалы

бисәләргә ирҙәр хут бирәме әллә у?! Эйе, итэки хут бирмәнеләр, тимерсе Сибоғотулла, ауыр тупрағы еңел булғыры, һората килде.

— һората?!

— Атаҡ, үҙенә бисәлеккә һораны! Эйе!

— Нигә.. унын... ҡарсығы бар ине бит?

— Юҡ ине! — Рауза, япмалы итәгенең эс яғын әйләндереп, ебей башлаған үтэ лә ыҡсым танауын кинэнгәнсе һеңгерҙе.

— Булмай ни... Фәүзиә ҡарсыкты кем белмәй?

— Улар ни бергә йоҡтаманы бит! Бергэ йоҡтамағас, у ниндәй бисэ буһын?! Сибәғәтулла байғошом үҙе әйтте миңә. Бергэ йоҡтамағас, у нимәгә ир занимать итеп йәшэргэ?! Ә?!

Төпсөгө ҡулын бешерә башланымы, Ихсанбай тәмәкеһен утка ырғытты.

— Фәүзиә ҡарсыҡ... Сибәғәт... ағай.... иҫәндәрме? Ихсанбайыҡкайҙа?

— Атаҡ... берәү-бер яҙманымы? Вис үлеп бөттө бит улар! Вис! Исмаһа, Сибәғэтуллам тере ҡалманы! Фәүзиәһе лә, Ихсанбайы ла, Сәбиләһе лә... Уй... ул көндө һин һорама, ҡорҙаш. Зарифаң да шу төндө юҡ булды. Бөтәһен бер төн эсендә ер упты! Ихсанбайҙың өй урынында көл-күмер хәҙер. Әҙәм унда якын барырға ҡурка! һинең Шәңгәрәйең әйтә: төн буһа шунда ап-актан кейенгән Фэүзиэ сығып ултыра, ти. Көл араһын соҡоп, Йәнтимер менән Биктимерҙең һөйәктәрен эҙҙәй, ти... үәт!

— Эске килэ, Рауза.

— Аһ! — Рауза ҡуйынынан ярты сығарҙы. — Эсеп йөрөгән бисә түгемен. Ну һинең кайғынды уртакташырға тип һалып алдым. Эс, Ишмөхәмәт, Шәңгәрәйҙе табып апкайт. У бахыр һинһеҙ йонсоно, ней анау Гөлбаныуҙы онота алмай. Мына: ҡарап торһаң, сей алйот бит. Был ғишыҡ уты тигэнең алйотто ла аямай икән ул, э?!

Үҙенән һуң кәнфит-перәник, тағы әллә ниндэй тәмле еҫтәр ҡалдырып Рауза сығып киткәс, Ихсанбай тышы ҡайышкакланып бөткән ҡолаксын мендәргә янтайҙы. Эй-йе... Ихсанбай был өйҙә, буйлы балаҫ түшәлгән ошо урындыкта

аҙ лэззәтле төндәр кисермәне. Уйлап ҡараһаң, Зарифа уға башка бер ҡатын-ҡыҙ бирә алмағанды бирҙе. Бүтәндәр менән уның мөнәсәбәте нисектер урыҡ-һурыҡ, ваҡытлыса булды. Ә Чарифа... Әлбиттә, Ихсанбайҙың Зарифаға ҡарашы I олбаныуға булған мөнэсәбәтенэн дэ нык айырылды. I олбаныу унын өсөн эсен-тышын көйҙөрөп-өтөп барған хис-гойҙо ине. Унын менән Ихсанбай тик бер тапкыр якын булды, бары Гөлбаныуҙың ҡурҡыу һәм ғазап менән ялбарған күҙҙәрен, телендә уның ниңәлер тоҙ тэм иткән ирендәрен гойҙо. Гөлбаныу тәне менән үҙ тэненең тоташыуын кисереүҙән Ихсанбай үҙе лә тотош ут-ялкынға әйләнде, ете ҡат ер менән ете ҡат күк тоташып, ахыр сиктә ялкындан гына торған күсәр ҡалды.

Юҡ! Зарифаға ул был дәрәжәлә көслө тартылыу кисермәне. Әммэ... Зарифа унын ирлек нәфсеһен ҡәнәғәтләндерер өсөн нимәләр генә эшләмәне. Ихсанбай тәненең һәр күҙәнәген йоҡоһонан уятыр, мәле менән Ихсанбайҙан тотош теләктән торған ғифрит яһау ҡөҙрэтенә ийә ине Зарифа! Ихсанбай үҙенә самаһыҙ ауырлыҡ килтергән саҡтарында ла түҙем булды Зарифа. Бахырҙың тешен ҡыҫып ыңғырашкан ауазы Ихсанбайҙы оторо ярһытыр ине, унан аяуһыҙ һәм бәғерһеҙ бер арлан яһар ине. Шул саҡтарында ла, Пхсанбай киткәндә ит киҫәге хәлендә ятып ҡалһа ла, унын икенсе килеүен ҡояштай балкып, сайкалып торған тулы гүштәренән хушбуй еҫтәре аңкытып, йөҙөн тулған айҙай балкытып ҡаршы алыр ине.

Эй тормош! Ана хәҙер унын һөйәктәре ҡайҙалығын этем дэ белмәй. Әгәр теге ҡәһәрле төндө Ихсанбайҙың юлына ҡаршы сыҡмаған булһа, хәҙер ни булыр ине? Ул, моғайын, Ихсанбайҙы шундуҡ таныр ине. Кем-кем, ул яңылышмаҫ ине.

Рауза Шәңгәрәйҙе табып алып ҡайт ти бит әле! Ниңә кэрәк уға ул диуана? Ене һөймәгәне элек-электән шул Шәңгәрәй булды. Шул суска хәҙер Ихсанбайға атай тип өндәшергә тейешме? Ул тиклемде нисек күтәрер Ихсанбай?!

Рауза сығып киткәнгә хәтһеҙ ваҡыт үтте, Ихсанбай тәҙрә янына килде, алыҫта яткан тау һырттарына ҡараны. Эйе, уны ике йылға якын йәшереп тоткан Күктау артта ҡалды. Бынан ул тау һыҙаты булып ҡына төҫмөрләнә. Үҙәккә үтерлек яңғыҙлыҡ, һалкынлыҡ шунда ҡалды. Хәҙер инде бәйләнһәләр ҙә бер унын документтарына ғына бәйләнерҙәр. Ә, бәлки,

бәйләнмәҫтәр ҙә: кеше һыпаты ҡалмаған был ғәриптең тормошон төпсөнөүҙең кемгә кәрәге булыр икән?

Эскән араҡы үҙенекен иттеме, Ихсанбай ҡарынының бүренекеләй асығыуын тойҙо. Тоҡсайынан бурһыҡ ите алды. Ҡаҙандағы һыуҙың ҡайнап сыҡҡанын да көтмәй, тамыр тәм иткән һыуыҡ ит киҫәген сэйнәргә кереште...

Төнө буйы ашап инде һыуһаған аттар Хашимды тыныс, ләкин ҡыуанyслы кешнәү менән ҡаршы алды.

— Эскегеҙ килдеме, малкайҙар? Хәҙер... — Хашим, береһен менеп, икенсеһен етәкләп, Тәңребирҙе кисеүенә төштө.

Хашимдың эше ферманы ҡарауыллау булһа ла бесән ташыу йыш ҡына унының елкәһенә төшә. Фермала мал ҡараған Йәғәфәр менән Сәйғәфәр — Хашимдың ике туған ҡустылары. Хашимдың күндәм холҡонан файҙаланып, әлдән-әле яңы сәбәп табып, был мәшәҡәтле эштән янтайырға ғына торалар. Быларҙың хәйләһен аңлап торһа ла, Хашим ҡарыулашмай — сит бауыр түгел, үҙ туғандары, нисек итеп Мирхәйҙәровтан һүҙ тейҙертәһең? Унан һуң, ферма мөдире Саяф та, йомаҡ кеүек йомоҡ бер зат. Ағаһының юғалыуының да, Зарифа менән унының бәйләнешенең дә, еңел холоҡло Зарифаның үсен Хашимдан алғандай. Зарифа менән Хашимдың бер ҡарындан тыуһалар ҙа асылда ҡапма-ҡаршы холоҡло булғандарында унының эше юҡ. Хашим ҡарамаҡҡа һылыу, ләкин еңел холоҡло апайының айышына үҙе лә төшөнә алманы. Килке-килке хәтеренә төшкән, зиһене ҡапыл яҡтырған мәлдәрҙә Зарифаны яңынан күргәндәй, низер һорағандай була — мәгәр ул юҡ. Ихсанбайҙы, Фәүзиәне уптан төн унының апайын да йоткан, зым-зыя юҡ булған бит Зарифа.

Хашим ике санаға ике ат егеп, толобона уранып ултырып юлға сыҡҡанда ла кистән йөрәген шомло һыҙланыу менән ҡыҫылырға мәжбүр иткән уйҙарынан арына алманы. Нәфсеһенә ирек ҡуйып, типтереп тә йәшәп ҡараны, зил-зиләгә бәрәбәр һуғышын да үтте, мөхәббәттән дә, һағыштан да ауыҙ итте — мәгәр барыбер үҙен дә, кешеләрҙе лә,

......яны ла, йыһанды ла аңлап бөтөрә алманы. Кисә генә Мирхәйҙәров менән һөйләшкәне ҡолаҡ төбөндә.

Күптән түгел иртәнге нарядтан һуң алып ҡалды уны пр (ссдатель. Тәмәке тоҡандырҙылар, икеү-ара оҙаҡҡа һ) ылған тынлыҡты Мирхәйҙәров боҙҙо:

Ҡыҙыңдан хәбәр бармы?

Мәҙинә яҙып тора.

Ә кейәүең...

Ул да яҙа... былай. — Яуаптың Мирхәйҙәровты һиҫкәндереүен тойҙо Хашим. — Нигә, әллә... кейәү хат яҙмаҫлыҡ кешеме?

Түгел... — председатель төпсөгөн ҡара тәмәке һауытына баҫты. — Былай ғына. Үҙеңдең һуң... өйләнеп ебәрергә уйың юҡмы?

Һорауҙарҙың тиктәҫкә түгел икәнен һиҙенгән Хашимдың үземе етмәне:

Быныһын да өҫтән һорарға ҡуштылармы? — һарыуы КЯЙнай башлаған Хашим Мирхәйҙәровка туп-тура ҡараны. — Iшрлһалар әйт: ҡыҙыу, бисә тукмай торған ғәҙәте бар — ГОрмош ҡорорға һәләтле түгел тиң.

Ҡуйсәле, Хашим... Мин бит... былай ғына, дуҫтарса.

Түрәнең... дуҫы буламы?

Әпәт бер балыҡ башы. — Мирхәйҙәров тамаҡ ҡырҙы ш ике ҡулын өҫтәлгә ҡаушырып, Хашимға төбәлде. — Кыҙык кеше һин, Хашим. Партияға ла инмәйһең, яуаплы штән дә ҡасаһың... Оло башыңды кесе итеп, Шәңгәрәй кеүек кеҫәр менән бәйләнәһең... Аңламайым мин һине!

Йыһанда күпме йондоҙ бар, Азат? — Мирхәйҙәровка Меккесә исеме менән өндәшеүенән ояლғандай булды Хашим, шкин һуң ине.

Аны кем һанаған... Һин һүҙҙе ситкә борма.

Бормайым. Как рас шуны әйтмәксемен, иптәш кодатель. Ниңәлер бер кем дә йондоҙҙарҙы бер сафка маташмай.

һы... йондоҙҙо нисек... сафка теҙәһең?!

Бәй, шулай булғас, нигә әҙәмдең барын бер төрлө итергә тырышаһығыҙ?! — Шулай тине лә Хашим, сығып гс. Мирхәйҙәровтың ҡара ятыуҙай ялтыр күҙҙәрендә асыу ҡоканып, ҡакса бите ризаһыҙлыҡ белдереп тартышып ҡалды.

Шул инде... бер нәмәне ишетеп, һиҙеп төпсөнмәксе булған ул. Хәҙер бына Мәҙинә ҡайтыи төштө.

Таң яҡтырған һайын һирогәйә барған йондоҙ күсеЛәй, Хашимдың да уйҙары көн яҡтырған һайын бер һағышҡа, бер ут-ялҡынға төйөрөлдө. Ай һағышын кисен Зөһрә тип, иртән Сулпан атаһалар, Хашим һағышының исеме бер генә — Гөлбаныу. Бына ул хәҙер шул һағыш, Хашимды хәтерләүҙәр аша ла тетрәнергә мәжбүр иткән аҫыл һөйәктәр һаҡлаған ҡәбер янынан үтәсәк. Йөрәгенең тулҡынып тибеүенән, тамағына тығылған төйөрҙән Хашимға эҫе булып китте. Ул, толобон һалып, санаһына турайыбыраҡ ултырҙы, һөйгәне менән тәүге осрашыуға барған үҫмер кеүек ҡыланғанына йәне лә көйә үҙенең. Ҡырҡҡа етеп килгән ир ҡылығымы. был?! Әммә, нишләмәк кәрәк, йөрәккә бойороп булмай.

Хашим, хужаһының уйға сумыуынан файҙаланып үшәнләнә төшкән атының дилбегәһен ҡағып, тәртә араһында ятҡан сыбығын ҡалҡытты:

– Әйҙә, малҡайҙар!

Ағаһының мал аҙбарҙарына терәтеп һалынған малухаһының берҙән-бер тәҙрәһендә баҙнатһыҙ йылмайып ҡышҡы таң һыҙылды. Тәҙрә бәләкәй, шулай ҙа ҡылау-ынйылар менән семәрләнгән быялалар әленән-әле яҡтыра, бихисап төҫтәр солғанышы менән баҙлай-баҙырай бара.

Үҙен тышҡы донъя менән бәйләгән ошо бәләкәй тәҙрә аша яңы көн тыуыуын күҙәтеү Сәбиләнең күптәнге ғәҙәтенә әйләнгән. Ошо быялаларға төрлө төҫтәр булып яғылған ҡояш күп тә тормай бауыр ҡалҡытты һәм бар донъяны ҡосағына ялманы. Ошо рәүешле, хәстәрле әсәләй, көн оҙонона көллө үҫемлекте, кеше, үрсем-йәнлекте үҙ нурында ҡойондорғандан һуң, кискә табан арып, тонйорап, хәлһеҙләнеп, тауҙар һыртына салҡан төшә. Сәбилә лә эсә. Тырыша-тырмаша, сераша-көрәшә торғас, ул да, ниһайәт, эсә булыу бәхетенә ирешә. Ҡарындан айырылып, донъяға үҙенең барлығын хәбәр итеп ҡысҡырған сабыйы тауышьш ишеткән минуттары!.. Ул бына ошо илаһи яҡтылыҡ сығанағы кеүек сабыйымды, Әбүбәкеремде, ғүмерем буйы иркәләрмен, наҙлап уятырмын, наҙлап йоҡлатырмын, тип хыялланғайны.

Пакин ул Әбүбәкерҙе был донъяға табып ҡына бирҙе, гыһ ырыу менән уны ағаһының ҡатыны тартып алды. Дөрөҫ, ы шита малайҙы имеҙергә индерҙеләр. Таш аласыҡтың ошо ы рҙа оер тәҙрәһенән Сәбилә еңгәһе Рәшиҙәнең аҡ төргәккә ураған танһыҡ бәпесен сығарғанын күҙәтте. Малай башта йоклай торғайны. Алһыу ирендәренә төртөлгән имсәкте үжәт >, теләмәй генә ауыҙына ала. Артабан, шәрбәт тәм иткән ины ты Һөт ирендәрен сылатҡас, ҡапыл һиҫкәнеп, йотлоғоп-Карһаланып һура башлай. Илап туйғас, уны ике ҡатын — < обилә һәм Рәшиҙә — береһенән-береһе һаҡсыл хәрәкәттәр менән кире юрғанына урайҙар.

(лбилә ошо бәхетле минуттар өсөн дә Хоҙайға гел шөкөр ит ге. Оло йортта балама яҡшыраҡ, яҡтыраҡ, йылыраҡ, ргәһендә бала бағыусы ла бар, шулай ышанысЛыраҡ, тип ,им йыуатты. Әммә... Әбүбәкер шулай йоҡлай-йоҡлай, Галсыға-тала имә торғас, бер мәл холҡон үҙгәртергә булып ге: ҡапыл имеүенән туктай ҙа, имсәкте ысҡындырыбыраҡ ГОра, геүләп әсәһенә һүҙ ҡуша, йылмая, тешһеҙ ирендәрен йәйелдереп көлөп ята.

Тәүбә-эстәғәфирулла! Былай булһа, ул мәңге туймаҫ! Бы таш ҡапсыҡта үпкәһенә һалҡын тейҙергәнсе ятыр!

I цгәһенең ҡылығын Сәбилә үҙенсә аңланы:

Эйе лә баһаң... Баланы минең... үҙемә инеп имеҙеү Корәк!

Тәүбә-әстәғәфирулла! Ағайың ишетеп ҡалһа! — I ш аһе ҡото алынған бер ҡиәфәттә ишеккә ҡараны. — һин — а а имеҙергә ялланған ҡатын. Онотма шуны!

Онотманым да ул... — Сәбилә ҡолаҡтарын яндырып кан йүгереүен тойҙо. — Онотманым...

Рәшиҙә әсәһе итәгендә имеп-иҙерәп ятҡан сабыйҙы Мпыл ынтылып ҡулына алды ла юрғанына урай башланы.

Улым ҙур үҫте инде... хәҙер һыйыр һөтөнә күсһәк тә йиреш мәҫ...

Еңгә-э! — Сәбиләнең аҙарынып, сикһеҙ иңрәп ин ҙәшеүе ишектәң ҡаҡлығып ябылыу тауышына күмелде.

Ул саҡҡа ла байтаҡ ваҡыт үтте. Мәгәр таң атҡан һайын ! ібилә ошо тәҙрә эргәһенә килеп баҫа. Баҫа ла ҙур өйҙөң ише с асылыуын, унан аҡ юрғанға уралған ҡәҙерле йән |һсн алып сығыуҙарын көтә...

Атаһы өрләктәге сөйгә элгән сәңгелдәккә башлап һала улын Мәзинә. Ҡыйыҡ эсендә торған был бишек заманында Мәзинәнеке булған, унан һуң ике ҡустыһын тирбәлткән. Сәңгелдәктең төбөнә тегелгән сепрәктең серемәүен эйт әле! Мәзинә уға яҡшылабыраҡ ҡараны: бәй, был бит... ҡылдан һуғылған. Быны яһаған кешенең башы эшләгән: ҡыл бит һыу тотмай. Ах! Әсәһе әйткәйне лә инде! Был бит унын, әсәһенең, бишеге! Шәһәрбаныу өләсәһенең ҡыҙы Гөлбаныу өсөн эшләткән сәңгелдәге был! Ул, ул...

— Бисмиллаһи... — Түштән айырылған сабый имеп ятҡандағы кеүек ирендәрен һурып алды, мәгәр күҙен асманы. — Йоҡла, улым, бишегендең дүрт мөйөшөндә дүрт фәрештәң ҡурсыһын йоҡондо.

Йәш балаға ҡағылышлы тағы нимәләр белә ине әле Мәзинә? Ә... бысаҡ! Ҡырҡы тулмаған баланы яңғыҙын ҡалдырып тышҡа сығырға тура килһә, сабый өҫтөнә бисмилла әйтеп бысаҡ һалыр кәрәк. Юғиһә...

— Инергә яраймы? — Сәңгелдәктең ҡорғаны ышыҡлап, Мәзинә инеүсене тиҙ генә күрә алманы.

— Инегеҙ, инегеҙ! — Мәзинә ҡаршыһында таныш, ләкин... — Һин?! Ғәлимә?! Кит, әй, башҡа ерҙә осратһам, танымаҫ инем!

Кәүҙәгә йомороланып, ит ҡунып киткән Ғәлимә Мәзинәгә ике ҡуллап килеп күреште:

— Ә һин... шул көйөһөң. Әллә инде тағы ла матурая төшкән?!

— Ҡала ҡаласы килешкәндер... Шунан? Нисек йәшәйһең? Тормошҡа...

— Ҡыҙ үҫтерәм! — Ғәлимә бер тын алыуҙа быны әйтте лә шыңғәндәй булды. — һәр кемгә лә... райондан килгән түрәләр тәтемәй бит...

— Нигә улай тиһең? Ә кемгә... сыҡтың?

— Сыҡманым. Әй әхирәт... һин бәхетле. Ҡулға алынһа ла, һинең баландың... законный атаһы бар.

— һәр бала үҙ ырыҫы менән тыуа, әхирәт. Эшләйһеңме? Ҡайҙа?

Ҡайҙа булһын — фермала! һыйыр һауам! Эй әхирәт! һин дә кил фермаға! Әй, һин кәнсә йә клуб тирәһенә бмрырһың ул. Мәскәүҙәрҙә уҡыған кеше ни!

)штең... нindәйе лә бер, Ғәлимә. Етмәһә, ферма эшенә ммпөнгәнмен.

Ул арала тәҙрә аша ихатаға ир кеше ингәне күренде. Мвҙинә самауырға йәбеште:

Атайым ҡайтты! Сисен, Ғәлимә, бергәләп сәй эсербеҙ.

Ә һин беләһеңме, Ишмәмәт ҡайтты бит ауылға! | урһәң!..

- Беләм. Күрҙем. — Мәзинәнең эсендә низер өҙөлгәндәй булды. - Өй йылымы ул беҙҙең? Ҡалтыратасы... Сисен, ' цсен, һыу ҡайнаған!..

Ҡабаланам бит әле. Киске һауынға китеп барышлаймын. Ә һинеке...

Улым бар. Малай. Дауыт тип яҙҙыртам исемен. Әптеләхәтемдең дуҫынын исеме...

– Хә-тә-әр...

— Ә нимә «хэтәр»?

- Былай ғына әйтәм. Әптеләхәттең... халыҡ дошманы Икәнең белһәң, һин дә, эхирәт, сыҡмаған булыр инең уға йәүгә, эйе бит?

- Ғәлимә! — Тамағына әхирәтенең һүҙҙәре төйөр булып Гығылған Мәзинә рәнйеү тулы күҙҙәрен Ғәлимәгә төбәне. — Ммңо... башҡаса... ул турала!..

- Бөттө, бөттө! Ай алла! Кеше әйткәнгә генә... Ярай, мип китәйем! Ана, атайың килеп туктаны. Үпкәләмә, әхирәт!

Ғәлимә нисек ҡапыл килеп ингән булһа, шулай ҡапыл сығып китте. Мәзинә, хәлһеҙләнеп, ширлеккә ултырҙы: •.|.;пиланды!» Эйе, был башы ғына. Ләкин бесәнгә киткән атаһы атын туғарып бөтөп килә. Инер. Мәзинәне был килеш |үрмәгәне яҡшы. «Ҡыҙым ҡайтты!» тигән ҡыуанысын Мәзинә үҙе үк тартып алмаҫмы, былай булһа?

Мәзинә, йәһәт ҡыбырлап, самауырға ҡайнар һыу һалды, утын ына ҡуҙ төшөрөп баҫҡас, мейескә тыҡкан сөгөндө картып сығарҙы. Өйгә быҡып бешкән картуфтың тәмле боҫо таралды. Аллаға шөкөр. Маһинур апайы май-ҡаймаҡтан өҙмәй индереп тора, үҙҙәренең дә һыйыры елен төшөргән. Мәзинә ҡомғанға йылы һыу һалып, һөлгөһөн иңенә һалды — |ТнҺы бит инеп тә килә!

Камалетдинов эштән гәзәтенән иртәрәк сыҡты. Ике ҡатлы ҡарағай бүрәнәләрҙән һалынған райком бинаһы алды көрәлгән. Ат ҡараусы Йыһанур ҡарт үҙе лә, райком бинаһын йыйыштырыусы әбейе Гөлмәрйәм дә бик тә тәртип яратҡан әҙәмдәр булып сыҡты. Камалетдинов, кискә ҡарай тундырһа ла көндөң яҙға ҡарағанын тойҙорған һауаны иркенләп һулай-һулай, ат һарайына атланы. Бында биш ат. Шуларҙың икәүһе Тирәклеләге һарайғыр тоҡомдары. Хужаның һарайға яҡынлағанын иң алда Айкашҡа һиҙҙе. Ҡолаҡтарын үрә торғоҙоп, сыңғырлатып кешнәп алды. Аттар алдындағы һолоға ҡарағанда, Йыһанур ҙа ошо тирәләлер. Арғы ҡапҡа шығырҙап асылды, унан ҡарттың төлкө кәпәс кейгән башы күренде.

— Ә... Камалетдинов ҡусты... һин икән... Әллә берәй-яры бараһың бармы?

— Бөгөн... юҡ. Бесән етерлекме?

— Юл ҡалмаҫ борон, Ҡарағайтүбәләге кәбәнде шылдырыу мишәйт итмәҫ ине...

— Ә-э... Иртәгә. Онотторамаҫһың әле.

— Ярай. — Ҡарт оҙон-оҙаҡ һөйләшеп торманы, йәнә арт ҡапҡанан сығып юҡ булды.

— Да... малҡайҙар. Яҙ килде, яҙ... — Камалетдинов уларҙың ҡайһыһының ялынан, ҡайһыһының морононан һыйпаны, «Сапай» ҡушаматлы ҡара айғырға шәкәр һоғондорҙо. Өйрәнгән. Бирмәһәң, һиҙгер ирендәре менән кесәләренде ҡапшай башлай. Аттан да аҡыллы мал юҡтыр. Ошолар менән бер йән, бер тән булып һуғыш йылдарын үтелде. Әптеләхәттең Саптары менән Камалетдиновтың Сыбарайғырының дуҫлығы! Саптар үлгәс, айғырҙың күҙҙәренән йәш сөбөрҙәп аҡты. Саптарҙы торғоҙорға тырышып, йәнтәслим кешнәп, эргәһендә ер тырнап сырҡырап-һыҡрап йөрөнө. Тора-бара ашауҙан яҙҙы, ә мөсһөҙ хайуан командирға юлдаш була алмай...

Ни тиклем генә башынан алып ташларға тырышмаһын, Әптеләхәт иҫенән сыҡмай Әйүптең. Электән белгәс, улы урынына ла, дуҫы урынына ла күргән был егеттең халыҡ дошманы булыуына күңеле ышанмай. Тик бит... яҙғандар. Мәскәүҙән ҡағыҙ ебәргәндәр. Ғаиләһен, туған-тумасаһын

...шерергә ҡушҡандар. Етем үҫкән Әптеләхәттең кеме ...һын? Катынын бөтәһе ике күрҙе: тәү тапҡыр Таулыла, Кырға китергә йөрөгәндәрендә, икенсегә Мәскәүҙә — дөйөм ...тҡта. Ул саҡта Камалетдинов пленумға барғайны. ...наҡханала танышып, шул пленумдан эйәртеп алып ҡайтты ...Моликәһен. Дуҫының ҡатынының — Мәҙинәнен — ...алырлыҡ һылыу икәнен күреү ярһыттымы — ...йыләнгәнен үҙе лә һиҙмәй ҡалды Әйүп. Мәликә лә бит үҙенә ...күрә һылыу ҡатын. Ресторанда дуҫтары менән әҙерәк күңел ...алған Әйүпкә ул мәлдә шул еткән булғандыр инде... ...мәһә, оҙатырға вокзалға төшкән Әптеләхэттән: «һинеке Мәҙинә булһа, минеке — Мәликә. Айырма юҡ, дуҫҡай!» — ...колдө. Хәҙер аңлай ҙа ул: йыры, сихырлы ҡараштары менән һеңгәҙәтеп ултыртып ҡуйыр Мәҙинә һәм һалҡын, ...өббер Мәликә араһындағы айырма — ер менән күк араһы. Ләкин нишләйһең, терһәк яҡын да, тешләп булмай.

Иорто партияның район комитетының ҡаршыһында ғына булғас, Әйүп Ғәзизович тиҙ килеп етте. Инергә ашыҡманы, гомәке көйрәтте. Яҙ үҙенекен итә — урам эсендә иртән бер ип ҙә юҡ кеүек ине, хәҙер күләүек йыйылған. Йырып ебәрергә ине — көрәгенең барын-юғын белмәй. Ярай, бәлә ...гел. Иртәгә Йыһанур ҡартты ебәрер. Ул килеп китһә, урам ...ер талайға ялт итеп көлөп ҡала торған.

...скә үтеп, өҫкө кейемен һалып, ҡулъйыуғысҡа ҡулын ...ғанда ла башынан Әптеләхәт сыҡманы. Дөрөҫөн әйткәндә, Әйүп дуҫтарын күп юғалтты. Был тиклем мәхшәрҙән үҙе ...ек иҫән ҡалғандыр? Балалар йортондағы етем үткәнеме, ...әллә ата-әсәһенең контра ҡулынан үлеүеме коткарҙы уны?.. Ҡулын һөртөргә таҫтамалға үрелгәс, Әйүп көҙгөләге үҙ күҙҙәре менән осрашты. Шәп түгел — күҙ тирәһендә ...ырыштар, маңлайҙа һырҙар. Малай сағында йөҙөнә ...һөйкөмлөлөк биргән бит соҡорҙары ике буй һыҙат булып ...ткан. Ҡушылып үҫкән ҡаштары, оҙон керпекле ҡара күҙҙәре ...гена ...элекке Әйүпте танырлыҡ итә. Камалетдинов шырт ...ҡсҡан сикәһен ҡапшаны: ахыры иртәнсәк ҡырынмай ҙа ...ығып киткән.

Ҡайһылай, — халатын елберләтеп килеп сыҡҡан Мәликә, иренең ҡырыҫ йөҙөн күреп, туҡтап ҡалды. — Аш... ...өң голдә.

Өҫтә бала тауышы ишетелмәгәс, Әйүп күтәрелеп торманы, ашарға ултырҙы.

Күренеп тора: көнө буйы яңғыҙ, бала менән талсыҡҡан Мәликәнең һөйләшкеһе килә. Иренең телен асырлыҡ һүҙ тапмағандай үҙе. Башлап Әйүп телгә килде.

— Флорида... йоҡланымы?

— Әллә... бер сәғәт тирәһе күҙен йомғандай булғайны...

— Доктор... килдеме?

— Үҙем барҙым.

— Кемгә?

— Теге.. Баш врачҡа... Лоҡман Талиповичҡа барғайным. Психиатр ҡатынды саҡыртты.

— Лидия Николаевнанымы?

— Эйе, шуны...

— Ни тине?

— Анализдар бирергә ҡушты. Бала сәләмәт кеүек, ти. Йоҡламаҫтай сәбәп юҡ кеүек, ти... Аш өҫтәйем?

— У-һу...

— Теге... урмансы ебәргән болан итен бешергәйнем...

— У-һу...

— Бер юлы Лоҡман Талиповичтарға инеп сыҡтым. Малайҙары шәбәйеп киткән, йүгереп йөрөй...

— У-һу...

Һүҙ артабан ялғанманы. Әйүп тәрилкәһенә текәлеп ашауын белә. Балаһы йоҡоһоҙлоҡ сире менән интекмәһә, Әйүп өйҙә телһеҙ кеүек йөрөр инеме икән? Ләкин Мәликә бирешеп бара торғандарҙан түгел. Мишәр ҡатындарына хас булғанса, телгә әүәҫ.

— Теге саҡ... бер йәш ҡатын һине һорап килгәйне...

— Ҡайһы саҡ?

— Теге!.. Байтаҡ булды инде, ике-өс аҙна элек.

— Кем тине?

— Теге!.. Мәскәүҙәге... әйттең бит, ҡағыҙ килде тип.

— Әптеләхәттең!

— Эйе, шунның ҡатынымын тине. Әллә үҙе ҡорһаҡлы ла инде шунда.

— Шуны яңы әйтеп ултыраһыңмы?

— Бәй! Үткән-һүткән ҡатындар һине ҡыҙыҡһындыралыр тип...

Әйүп, ҡалағын ташлап, һикереп торҙо:

— Ә һин... кем?

Мәликә телен тешләне. Эйе, Мәликәгә шикле үткәне менән телен ҡырҡ ерҙән тепшеп йәшәү хәйерле. Быны Мәликә күптән аңлаған. Аңлау менәнме? Әле лә ул иренә яуапһыҙ ҡала алманы:

Абау! Берәүҙең әнкәйе терелеп ҡайтҡан тиерһең!

Камалетдинов башҡаса һүҙ ҡуйыртып торманы, ишек яҡтауында эленеп торған бушлатын арҡаһына һалып, тышҡа ҡыртырға сыҡты...

Ҡайтыу менән өй йыуырға керешкән Мәҙинәне, бала ҡарашырға ингән Маһира күршеһе менән үҙҙәрен генә ҡалдырып, Хашим фермаға юл тотто. Ара-тирә мал тиҙәге, бесән, һалам менән сыбарланған, март ҡояшы аҫтында ирмаланып ауырайған юлдан атлағанда үҙенең олатай булыуы айҡанлы ҡыуаныслы ла, һағышлы ла уйҙар кисерҙе. Ҡыйбаныуы ғына юҡ янында. Йәнә Мәҙинәнең күңеле бойоҡ. «Ҡыҙ йәштән тол ҡалырмын тигән уй башына ла килмәгәндер лә бит... Эшкә сығам, тигән була. Йоҙроҡтай балаһын ҡалдырып, Хашим уны ни йөрәге менән эшкә сығарып ебәрһен?!

Уйҙың осона сығырлыҡ түгел. Фураж һалынған келәт ишегенә еткәс, санала бесән өҫтөндә нимәлер ҡарайып ятҡан кеүек булғас, Хашим шунда йүнәлде.

Эй, кем бар унда?!

Кем түгел, мин!

Ҡарала аунаусының Шәңгәрәй икәнен белгәс, Хашим сананың алды. Яталыр. Уға ни, арҡаһын ҡояш ҡыҙҙырһа, ш \ еткән. Бөгөн хатта һыйырҙар ҙа, танһыҡ ҡояшҡа һырттарын ҡуйып, оло кинәнес менән көйөш ала. Шәңгәрәй Ғифрит исемле тоҡом үгеҙенән ҡурҡа. Шуға ахыры, саналағы һаламға күмелгән.

Нимә эштәп ятаң бында? — Хашим түш кеҫәһенән ток [әнгән гәзит алып, тәмәке урай башланы.

Күктә һуғыс бара, суны ҡарайым.

Күктә?! Ә кемдәр һуғыша?

Ҡара фәрештәләр менән аҡ фәрештәләр.

Фәрештәнең ҡараһы ла була тиме?

— Була. Бөгөн улар күберәк. Улар бөгөн... беҙҙең мөрйәнән шыға.

— Юкты!

— Ышын! Ант!

— Мин әле һине үҙ өйөндә, атайың алдында ултыраһың тиһәм...

— Атам юк минең!

— Кит, иҫәүән! Әллә һаман күрмәнең?

— Ы!

— Нимә — «ы»?

— Ы! Ҡайтмайым. Беҙҙең өйгә... убыр эйәләсте!

— Ҡуй, Шәңгәрәй, алай һөйләнмә! һуғыш бит. Мин бынан яманыраҡ ғәриплэнгән кешеләрҙе күрҙем. Ҡайһылай булһа ла үҙ атаң...

Шәңгәрәй былай ҙа тыржыҡ танауын асыуҙан һауа етмәгәндәй таржайтып, тороп ултырҙы.

— Юҡ, минең атам! Үлгән! һинең менән, ҡарауылшы өйөндә йәсәйем!

— Мин бит, Шәңгәрәй, ҡыҙым ҡайтҡас, гел өйҙә булам. һиңә тәрбиә кәрәк. Ашарыңа кем бешерер?

— Асарға бар! Күп! һөт — бына! — Ул тыңҡыш муйынына ҡағылды. — Үңәштән! Икмәкте... һауыншы апайҙар бирә!

Шәңгәрәй ҙә бирешмәй, ул бит иҫәр генә түгел, тиҫкәре лә.

____И-и... минең атам ҡайтһа-а! Мында түҙеп ятыр инемме?!. Миҙалдары күптер әле уның, ә бәлки, шәкәр ҙә алып ҡайтҡандыр...

Шәңгәрәй Хашимдың һүҙҙәренә ҡолаҡ та һалманы шикелле:

— Ә Мәҙинәнен бәпеше матурмы?

— Матур. — Шәңгәрәйҙең ҡарашынан Хашимдың «матур» тигән ыңғайына йылмайып ҡуйыуы ситтә ҡалманы.

— Миңә... оҡсамағанмы?

___һиңә?! — Хашим сәсәне. — Ул нигә һиңә оҡшаһын? Уның атаһы бар. Атаһына оҡшаған.

— һы!.. Ә ҡайҙа... йоҡлай ул?

— Сәңгелдәктә...

— Минең атам да сәңгелдәктә ята... Алыҫта!

Хашим тәмәке төпсөгөн йырғанаҡҡа ташланы.

Һиңә әйттең ни, әйтмәнең ни!
Әйтмә, мин үҙем беләм!
Беләң атаң башын!
Беләм!

Хашим, кәйефе ҡырылып, ары китте. Теләһә ҡайҙа аунап нории һалҡын тейҙерә инде был шаҡшы. Атаһын әйт әле: йәһәннәмдән ҡайтырға хәле еткән, фермаға килеп балаһын күрә алмай...

Мирхәйҙәров, Мәҙинәнең ҡайтҡанын ишеткәс, оҙаҡ үмжшды. Ул саҡта Мәскәүгә консерваторияла уҡырға галантлы кешеләрҙе бөтә ил буйынса эҙләнеләр. Моңло кешеләр күп, э бына Мәҙинәнекеләй тауыш... Кыҫҡаһы, Млскәүгә Тирәкле ҡыҙы алынды. Йыйылыштарҙа, мәктәптә сығыш яһарға тура килгән һайын Мирхәйҙәров Мәҙинәне маҡтаны, Тирәкленең шундай ҡыҙ үҫтереүе менән ı орурланды, Хашимдан да уның хәлен әлдән-әле һорашып горҙо, сәй эскәндә лә, икәүҙән-икәү ҡалған башҡа ваҡыттарҙа ла (орбиназының да телендә Мәҙинә булды.

... Һәм бына ул ҡайтты. Көтмәгәндә, уйламағанда ҡайтып гөштө. Яңғыҙы ла түгел — бала күтәреп. Әптелэхәтте лә яҡшы белә Азат. Ҡайҙа ҡушһаң, шунда эшләне, эште таҙаға-бысраҡҡа айырманы. һуғышта ла башынан ахырынаса булды. Наградалар менән ҡайтты. Әле килеп Камалетдинов шылтырата: ғаиләһен контролгә алырға ҡушалар, ти... Хәҙер инде Мирхәйҙәров сәсеү ваҡытында, бер кеше бишкә ирылырҙай саҡта, Мәҙинәне ҡарауыллап ултырырға гсйешме? Башҡа ҡайғыһы юҡ ине... Ҡар быйыл ҡалын ·· [ды, әкрен ирене, ә бит юғарынан сәсеүҙе 1-се майға гамамлап рапорт бирергә ҡушасаҡтар! Ни бер йүнле агроном гюрмәйҙәр, ни бер йүнле техникаһы юҡ, ирҙәр — бармаҡ Менән һанарлыҡ. Ишмөхәмәт ҡайтты тигәстәре ҡыуанғайны, барып күрҙе — үҙ хәле үҙенә саҡ. Хәҙер бына... Мәҙинә. Кәнсә йыйыштырыусыны ебәргәненә лә байтаҡ булды. Ә, бына, инеп килә.

Мәскәүҙең үҙенән ҡайтып төшкән йәш, һылыу ҡатынды ултырып ҡаршылауҙы килештермәгәндәй, Мирхәйҙәров ияпүро баҫты.

— hаумыhығыҙ, Азат ағай! — Мәҙинә үҙенең нескә hылыу бармаҡтарын председателдең усына hалды.

— Арыубыҙ. Беҙ ни... ҡарттарса. Әйҙә, ултыр, hөйләп ебәр хәлдәревде.

Мәҙинә берсә Мирхәйҙәровҡа, берсә уның өҫтәле эргәhендәге бейек булып үҫкән, лэкин емеш биреүҙән мәхрүм лимон ағасына ҡарап, hүҙhеҙ ултырыуын белде.

— Шунан? Мәскәү нисек?

Мәҙинә ҡыҙарҙы.

— Әллә инде, — беренсе тапҡыр был йәш ҡатын күтәрелеп Мирхәйҙәровҡа ҡараны. Азат шунда ғына үҙенең ҡаршыhында ауылдан сығып киткән бер ҡатлы сибәркәй түгел, ә күп нужа күргән, хәсрәт сиккән ҡатын ултырыуын төшөндө.

— Да-а... — Мирхәйҙәров артабан hүҙҙе нисек ялғарға белмәй аҙапланды. — Бына... сәсеү етә... hөрөргә, сәсергә... ней эш көсө етешмәй. Беҙ ҙә шул инде: юрғанды ҡайҙа тартырға белмәйбеҙ.

— Мине... ни өсөн саҡырҙығыҙ?

— Ә... hинеме? Үҙең инеп тә сыҡмайhың. Ана, клуб буш тора. Эш рәтен белгән кеше юҡ. Агитбригада төҙөргә, кэнсирт күрhәтергә ҡушалар. Әллә мәйтәм...

Мәҙинә, hүҙҙе бөткәнгә hананымы, аяғөҫтө баҫты.

— Башҡа тәкдим булмаhа, мин уйлап ҡарармын, ағай. Балам да бик бәләкәй бит әле минең...

Мирхәйҙәров та торҙо, ҡулдарын ыуғыланы:

— Беҙҙең крәҫтиән халкы... баланы сәбәп итмәй инде ул, ҡарындаш... Бала ни ул, ҡырҙа тапhаң, ҡырҙа, фермала тапhаң, hыйыр араhында үҫә, тигәндәй... Беҙҙә ни... шулай бит инде ул.

— hау булығыҙ, Азат ағай...

Тәмәке, төтөн, сэләркә, дегет, ҡайыш еҫе hеңгән кэнсәлә әллә йәшлегенән, әллә үҙенең матурлығынан яралған ниндәйҙер аңлашылмаған аңҡыш-балкыш ҡалдырып, Мәҙинә сығып китте. Мирхэйҙәров дүрт тәҙрәле идара йортоноң әле бер, әле икенсе тәҙрәhенә яҡын килеп, алыҫая барған hынды күҙәтте. Хур ҡыҙы! Ләкин был балала hылыулыҡтан башҡа тағы ниҙер бар бит? hуң, иллене үткән башың менән ошо тал сыбығылай hын алдында төҙгә ҡаткан hалдат шикелле баҫып торсәлең!.. Эш булғас бит, төрлө саҡ була, икенсе юлы Азат

был сибәркәй менән hис шикhеҙ ҡатыраҡ hөйләшер, теҙгенде кыҫкараҡ тотор. Райком шулай ҡуша икән — үтәмәй ни эмәлең бар?..

Таулыға военкоматҡа барып ҡайтҡандан hуң шөйлә клйсфе күтәрелде Ихсанбайҙың. Военком, сандыр кэүҙәле сулаҡ егет, Ихсанбайҙың ҡиәфәтен күргәс, тиҙерәк сығарып ебәреү яғын ҡараны. Әммә Ихсанбай мәмерйәлә ятканында гөндәр буйы ижад иткән «хикәйәт»ен түкмәй-сәсмәй яҙзырырға тырышты. Нисек итеп Себергә китеп барған поезды бомбаға тотҡандарын, вагондарҙың янғанын, I Ьпмөхәмәттең дә шул ут эсендә ҡалыуын... Осо оска ялғанмаған нәмәләр ҙә булғандыр инде, военком үтә-үтә караны, әммә иҫе инәрле-сығарлы ғәриптән ни көтмәк кәрәк? Апа бит эле уның үҙен дә hуғыш йәшhең, матурhың тип аяп трмаған. Уның да бынау оҙон, ҡамыштай төҙ бармаҡтары, бәлки, гармун телдәре буйлап та йүгергәндер...

Их, гармун... Гармун уйнау бөттө инде! — I Ішмөхәмәттен ауыҙынан ғыжылдап сыҡкан ошо hөйләм иоснкомдың күҙендәге юшан төҫөп ҡараhыулатты:

— Гармунда уйнай инегеҙме?

«Ишмөхәмәт» янып кэкерәйгән ҡулын hелтәне:

— hэй...

Сәпкә тейҙе Ихсанбай: военком йөҙөндәге ҡоролоҡ йвллөү, ниндәйҙер hағыш менән алышынды.

- Бисә лэ көтмәгән, — Ишмөхәмәттең тауышына илау |.1иомэте сыкты, — ғәрип ни... кемгә кәрәк?!

- Ярай, ағай, ҡайтығыҙ. Кәрәк булhа, саҡыртырбыҙ. Председателегеҙгә шылтыратырмын. Ярҙам итерҙәр.

Рәхмәт, рәхмәт инде, ҡустым... Бөтна бит. Якшы Кешелөр бөтмәгән. Ғәриплекте кеше hорап алмай икән... — Ихсанбай, таяғына таянып, ишеккә туйтанланы. — Шунда Ь«Н ҡармаhалар, янып үлhәм, был ыҙаларҙы күрмәгән булыр цяем.

Шунан бирле өйҙә Ихсанбай. Зарифа үлгәс, мал бөткән. Шврик, күрәhең, ҡыш фермала, йәй бында, аласыҡта, и.ммлгән. Ҡапҡаны асып тормай, ҡапҡа аҫтынан ятып инеп ипрпномө икән — урталыҡ шымарып, соҡорайып ята.

Ишмөхәмәт ғүмеренә түрә булып ултырғас, йорт-каралтыһы былай иnheҙ түгел. Малухалар, мунса — бөтәhe бүрәнәнән һалынған, картуф ере лә ҙур, кәртәле. Әммә яңғыҙына тормошто башлап китеүе ауыр буласаҡ. Хәйер, Ихсанбай бер ҡасан да юҡтан бар итеүҙе белмәне. Атаhы һалған әҙер донъяла, әсәhe әҙерләгән әҙер hыйҙа — барлыкта-байманлыкта йәшәне.

Эйе... ҡатын-ҡыҙhыҙ ауыр буласаҡ уға. Ихсанбайҙың был хәлендә ниндәйҙер хур ҡыҙын өмөт итеү урынhыҙ. Үҙен-үҙе белгән — әүлиә, тигәндәй, уны ғына якшы аңлай ул. Был хәлдә уға үҙ теләге менән Мәҙинә түгел, теге Ғәлимә лә килмәйәсәк! Унан hуң бит Ихсанбай Сәбиләгә — күндәм холоҡло бисәгә — өйрәнгән. Ауылда яңғыҙ ҡатындар күп күплеккә, ә бына Ихсанбайҙы ошо килеш ҡабул иткәндәйҙе... Әллә, олораҡ булhа ла, Раузаның ҡылын тартып ҡараhа? Магазинда эшләй, ыбыр-сыбыры юҡ, иргә сығып алыуын алhа, ел-ямғыр тейҙермәҫе көн кеүек асыҡ. Ул бахырҙың бит бер генә тапкыр ҙа эҙәм рәүешле кейәүгә сығып ҡарағаны юҡ. Ул бына ғәрип тип тормаҫ ине. Әллә инде, бөтә ҡыйыулығын йыйып, Раузаға тәкдим менән бараhы?

Ҡәйнәhe: «Бала ике йәшенә ҡәҙәр имергә тейеш», — ти торғайны. Дөрөҫ, башта Сәбилә hөтөн hауып биреп торҙо, әммә бала йылыhын тоймаған түштәре, Сәбиләнең ихтыяр-теләгенән тыш, тиҙ шинде. Хәҙер улар Сәбилә күкрәгендә кәрәкhеҙ бер яры булып, hәленеп-hәлпәйеп яталар. Әйтерhең дә улар бер ҡасан да алhыуланып, турhыҡтай тулғанып тормаған.

hирәк күрә хәҙер улын Сәбилә. Ошо таш аласыҡ ҡасандыр ниндәйҙер байҙың келәте булған тиҙәр. Хәҙер ағаhының, ошо район дауаханаhының баш табибы Лоҡмандың, өйө менән йәнәш ултырған дауалау йортоноң кер йыуыу урыны. Дауахананың керен ошонда килтерәләр, Сәбилә уларҙы йыуып-үтекләп ҡуйғас, алып китәләр. Көн-төн ҡаҙан аҫтына яғырлыҡ утынды ла Сәбилә үҙе ҡырка, үҙе яға, унан тыш ағаhының ишле генә малын да ҡарай. Сәбилә сираттағы халатты ялғашҡа hалыр алдынан, кеҫә төптәрен ҡағып таҙартыр өсөн, ҡулын тыҡты. Кеҫәhенән ике ҡағыҙ

килеп сыҡты. Икеhендә лә хөкүмәт гербы, Таулы район үҙәгенең никах теркәү бүлегенең мисәте. Уларҙың икеhендә лә Әбүбәкерҙең исеме бар. Беренсеhендә уның атаhы — Моратов Ихсанбай Сибәғәт улы, икенсеhендә — Ҡарағужин Лоҡман Талип улы. Атаhы Моратов Ихсанбай тип яҙылған ҡағыҙҙа әсәhе ул, Сәбилә. Атаhы тигән ергә Лоҡман яҙылғанында — Ҡарағужина Раиса Максимовна. Эйе, улының ата-әсәhе тип йәштәре илленән уҙған ағаhы менән еңгәhе теркәлгән! Ғүмер буйы бала күрмәй йәшәгән-мошәгәндәр ҙә, иллене үткәс, ҡапыл ғына бала табып алғандар! Теге әкиәттәге ҡамырҙан әүәләнгән батыр кеүек...

(әбилә ошо ҡағыҙҙарҙы йәһәт кенә өрлөк бүрәнәhендәге еккә хыҫтырҙы. Ҡайhылай итергә, ни сара күрергә?! Белгәнен паҫырып ҡалдырhа, улын ғүмергә юғалтасаҡ. Ҡағыҙҙарын күтәреп янъял сығарhа?... Юҡ! Үҙ аҡылы ғына етмәй уға! Их, ошо мәл эргәhендә ҡәйнәhe Фәүзиә булhасы?! Ни кәңәш оирер ине икән ул? Ейәндәре булыуҙы нисек көткәйне, нисек гслэгәйне уның ҡәйнәhe... Теге төндә лә... Ул төнгә Сәбилә әлегә тиклем hөйөнөргә лә, көйөнөргә лә белмәй. Эсен косаклап яткан килене эргәhенә киске энерҙә килеп ингән ҡәйнәhенең тауышы ҡыркыу яңғыраны.

— Килен?! hин өйҙәме?

Өйҙә... — Илап ебәреп ҡәйнәhенең асыуын кнлгереүҙән ҡурккан Сәбилә аҡланырға, ғәфү үтенергә п.фышты. — Шәмгә ут алмай ултырамсы...

Кәрәкмәй. Йыйын. Бер аҙ hауыт-hабанды, арыу кеиемдәреңде ал. — Шунан ул үрмесендәге аҫкыстарын урындыҡҡа ташланы. — hандыҡтағы алтын-көмөш Калакгарҙы, селтәр-ҡашмауҙарҙы ла ҡуша төр. Мин ат егәм.

«Кайҙа китәбеҙ?», «Ни өсөн?» — тигән hорауҙы бирмәне (әбилә. Ҡәйнәhe тоҡтомалдан ярhып йөрөмәҫ. Йөрәгенең с ıкенгәнен, ҡулдарының ҡалтыранғанын көскә еңеп, Сәбилә ҡәйнәhe ҡушҡандарҙы үтәне. Йыйынған ыңғайға ҡулы бер-ЦИСӘ тапкыр Ихсанбайҙың кейем-hалымына ҡағылып КИтеүҙән тәне эҫеле-hыуыҡлы булып, тыны быуылды: әгәр ул белеп ҡалhа, әгәр ул йәшенеп торhа... Ҡасандыр бөтә йәнен-гәнен мөхәббәт менән тулышырға мәжбүр иткән ошо кешенең бөгөн килеп... Мәгәр Сәбиләнең хәтерләүҙәргә бирелер хәле юҡ, эсендәге сабыйы сабырhыҙланып тулғанып Куйғас, ул ашығыбыраҡ, ашҡыныбыраҡ йыйына башланы.

— Аттар әҙер. — Ҡәйнәһенең тауышы был юлы ла үтә ҡороо ине.

— Уй! Бөтә нәмәмде лә йыйып өлгөрә алманым ахыры!

— Ике-өс минутта түгел, бәндә ғүмере буйына ла бөтәһен дә йыйып бөтөрә алмай!

— Шулай ҙа ул... — Сәбилә, төйөнсөктәре эргәһенә баҫып, ғәҙәтенсә күндәм генә фарман көттө.

— Ултырайыҡ. — Ҡәйнәһе әнерҙә аҡһыл кеүек күренгән сырайы, ҡара күҙҙәре менән килененең арҡырыһын-буйын үлсәгәндәй, тишеп-һынап ҡараны. — Әйтәһе һүҙем шул. Ошо аттарға ултырып Таулыға, Лоҡманға бараһың. Бынан киткән бер нәмә лә кире ҡайтмай. Аңланыңмы! — «Аттар ҙамы?» — тип һорарға итте Сәбилә, ләкин ҡаушаны. — Шунда йәшәйһең. Унда икәневде һис кем белмәһен! Баланы имен-һау табып, — ошо урында ҡәйнәһенең тауышы дерелдәне, — үҫтер. Эйе. Хәлеңдән килһә, буйын ғына түгел, аҡылын да үҫтерергә тырыш. Анау алтын ҡалаҡ, һауыт-һабаны Лоҡманға бир — иткән игелегенең әжере шул булыр. Бөгөн һинең юлға сығыуыңды ул ғына белә.

— Ҡәйнәм!.. — Сәбилә бергә йәшәгәне бирле тәү тапкыр ошо гүр эйәһеләй ҡара ҡарсыкты ҡосаҡлап алғыһы килде, әммә ҡәйнәһе теҙгенде ғәҙәттәгесә ҡыҫҡа тотто:

— Әйтер һүҙем бөттө. Аттар якшы ял иткәндәр — ҡыу, йәлләмә. Үҙеңә лә, тыуыр сабыйға ла фатихамды бирәм. Аллаһы әкбәр!..

Шулай хушлашты улар. Анау ҡағыҙҙарҙы ҡәйнәһе күрһә, нишләр ине икән?..

— Сәбилә?! — Ағаһының тауышын ишетеү менән ул урындыктан иҙәнгә һикереп төштө.

— Ни булды, ағай?!

— Тағы... ағай!

— Әй әттәгенәһе... Ни, Лоҡман Талипович бит әле...

Лоҡман, аҡ халаты күренә биреп торған ҡыҫҡа күн тунының төймәләрен ысҡындырып, урындыҡ ширҙегенә ултырҙы.

— Шунан, Сәбилә, кәйефтәр нисек?

Сәбиләнең һүҙе күп ағаһына, ләкин ул Лоҡмандың ҡыҫык ҡабаҡтары араһынан һөңгөләй ҡаҙалған үткер ҡарашы аҫтында баҙаны:

— Әлләсе... Кәйеф ни...

Йомошоң юҡмы ни миндә бер ҙә? — Ағаһы уға баяғынан да һынабыраҡ тексәйҙе. — Бер һорауың да юҡмы? «һынаймы, тикшерәме? Теге ҡағыҙҙарҙың Сәбиләлә икәнен белһә, Лоҡман уратып һөйләп маташмаҫ ине. Һунарсы бит ул. һунарсы эҙәрләгән йәнлегенең йомшаҡ яғын белгәнгә күрә лә һунарсы ул, ти торғайны ҡәйнәһе». Яуап мснән ашыҡманы Сәбилә, өндәшмәй тороу ҙа килешмәгәндәй, ағаһының йоморо башына бер-бер шикле уй юшөүе бар...

- Әлләсе, — тине тағы Сәбилә, кипкән керҙәрен бауҙан ала-ала. — Таң ата ла кис була, ғүмер үтә...

- Ғүмер бер беҙҙән генә үтәме? — Лоҡман дауаханаһы яғына ымланы. — Ана, унда көн дә тиерлек кеше үлә.

— Шулайҙыр инде: үлем менән ҡунаҡ һорап килмәй, ти трғайны Әбүбәкерҙең өләсәһе, — Сәбилә үрелеп усаҡ морйәһен асты. — Тик инде, йәл бит. Йәл. Кеше түгел, бэпкә япып үлһә лә йәлләмес...

— Унының да ҡәйнәң ҡарсыктан ишеттеңме? — Лоҡман, ҡапыл ҡалкынып, тун төймәләрен ҡаптыра башланы:

— Бына нимә, Сәбилә ҡарындаш: Әбүбәкерҙең донъяла оарлығын онотторға кәрәк һиңә.

— Әбүбәкерҙе?! Онотторға?! Ағай!.. — Сәбилә үрһәләнеп уның алдына килеп баҫты. — Мин бит уның... эсәһе!

- һинең балаң булманы, Сәбилә! — Лоҡмандың ялбыр бүрек аҫтынан уҫал ялтыраған ҡараштары йәнә Сәбиләгә ҡаҙалды.

- Вәғәҙәңде онотоуың шулмы?! «Балам!..»

Лоҡмандың «с» хәрефен әйткәндә ҡапыл салшая торған вҫҡы ирене ғәҙәттәгенән нығырак бөгөлдө:

– Сәбилә! Мин ҡабатларға яратмайым! Әбүбәкергә һин мимә бирә алаһың? Ошо... балнис аласығынмы?!

- Балам... Сабыйым... — Йыйған керҙәрен аңғармаҫтан күкрәгенә ҡыҫҡан Сәбилә, өңөрәйеп ятҡан оло буш ҡара ҡаҙанға ҡараны ла тораташтай ҡатты.

Шәңгәрәйҙең табалағы ҡоймаҡтай түңәрәк тормошон фермаға Ғифритте килтереү боҙҙо. Фермала мал араһында һыуҙағы балыҡ һымаҡ йөрөгән Шәңгәрәйҙе шул нәҫел үгеҙе

тәү күргәндән яратманы. Унының йоморо яланғас түбәһе күренсүе була — ер тырнап үкерергә керешә хайуан, алдында үҙе шайы ғифрит торғандай күреп, һөжүмгә ташланырға самалай.

Дөрөсөн әйткәндә, Ғифрит ҡушаматлы был үгеҙҙән һауынсылар үҙҙәре лә бөжөмләй, малсылар ҙа уға бик яҡын юлап бармай. Шәңгәрәй шуға аптырай: ҡурҡҡастары ниңә уны һатып алдылар икән? Ана, башҡа үгеҙҙәрҙе егеп тә йөрөйҙәр, ер ҙә һөрәләр — берене лә ҡурҡмай. Шәңгәрәй ошо хаҡта бер Хашимдан һорай биреп тә ҡуйғайны. Хашим һәр ваҡыттағыса оҙон-оҙаҡ сурытманы.

— Тегеләр көйҙөртөлгән... Ну бына... бестерелгән, ә был — юҡ.

Ғифриттең ни өсөн әҙәм ҡурҡырлыҡ көслө икәне Шәңгәрәйгә һуңлап ҡына барып етте: бөтә ғилләүгеҙҙең моҡсаһында! Көсө шунда уның! Башҡа үгеҙҙәрҙекен ҡырҡып ырғыталар, ә быныҡы тора. Шәңгәрәй бына үҙе лә көйҙөртөлгән. Эйе, атаһы бер бабайҙы алып килеп, үҙе ҡарап тороп ҡырҡтырҙы. Ҡырҡып бөткәс, бабай:

— Ауыртамы, улым? — тине.

— Ауыртмай, ҡырҡҡың килһә, иссу ла ҡырҡ, — тине Шәңгәрәй.

Бабай атаһы биргән аҡсаны кеҫәһенә тыҡты ла йәһәт кенә тайҙы. Хәҙер шуға үкенә Шәңгәрәй: алйотланып ҡырҡтырып әрәм итмәһә, ул да хәҙер Ғифрит кеүек көслө булыр ине! Бөтөн эҙәм, әтәсе, ҡаҙы, күркәһе — һәммәһе унан ҡурҡып торор ине! Сүплеккә сығып, ҡырҡылған ағзаһын эллә нисә тапҡыр эҙләп тә ҡараны Шәңгәрәй — тапманы. Әллә ҡорт ашаны, әллә инде берәй оңҡото табып алып үҙенә йәбештерҙе. Эйе, эйе!.. Үҙенән был донъяла бер кемдең дә, бер нимәнең дә ҡурҡмағанына ныҡ йәне көйә Шәңгәрәйҙең. Ана, Сталиндан да бөтә йән эйәһе ҡурҡып торҙо. Кеше ҡурҡытырлыҡ булғас, уныҡын, күрәһең, ҡырҡып ырғытмаған булғандар.

Их! Терһәкте бит тешләп булмай. Әгәр ҙә теге саҡ атаһы бабаны өйөнә алып ҡайтмаған булһа, бөгөн Шәңгәрәй өҫтәл артында түрә булып ҡуҡ итеп ултырыр ине! Ана, Мирхәйҙәров шикелле. Ә бына хәҙер Шәңгәрәйҙән этем дә ҡурҡмай, үгеҙенең үгеҙе һөҙөшә!

Шоцгэрэй һыйыр аҙбарының бер мөйөшөн кәртәләп камап ҡуйылған Ғифритте ситәндең тишеге аша оҙаҡ күҙәтте. Әлдә тсге күрмәй. Атуса, тояҡтары аҫтындағы сүп-сарҙы күккә сойорғота башлар ине.

- Нишләп тораһың ул? — Хашимдың тауышын ишетһә лә Шәңгәрәй күҙен ситән ярығынан алманы. — Һиңә әйтәм, Шәңгәрәй!

- Хасим! Мал шала торған бышаҡ кәрәк миңә!

— Аны нишләтәһең?

- Ғифриттең... муҡшаһын ҡырҡып ырғытам.

— Ә?!

- Эйе, йоҡтаған сағында арттан киләм дә! Ҡых!..

- Ҡара, ҡара! Нимә уйлап тора! Алйот! Колхоздың үгеҙ всөн күпме аҡса түккәнен беләһеңме һин?

Шәңгәрәй аҡсаның ҡөҙрәтен белә: үҙе күпме түләне I олбаныуға!

— Үҙе нигә мине баҫтыра?!

- Бар, тай бынан, Шәңгәрәй! Килеп көнө-төнө тексәйеп йәнен көйҙөргәс, баҫтыра инде! Бына мине нигә баҫтырмай? Бар, кит бынан, тай!

— Ы!

— Нимә тағы «ы»?

— Әҙерәк ҡарайым әле.

— Фу, инәнде эт йыҡкан нәмә!

Хашим малға фураж таратыр мәл еткәнгә ашығып китеп барҙы, Шәңгәрәй, ситәндәге тишекте бармағы менән соҡоп .\ райтып, туйған үгеҙҙең йоҡларға ятыуын көтөп ҡалды.

Ҡалын һымаҡ күренгән көрт көндән-көн нығыраҡ шиңә. Гау баштары асылды ла инде. Күкбүренең өңө алдында ла кара ср көндән-көн ҙурая. Күкбүре, ҡояшта ҡыҙынып алмаҡ булып, өңөнән сыҡты. Сыҡты ла ары китмәне, йылынған сандауға ятты ла, аяҡтарын һуҙып, моронон өҫкә күтәрҙе, көнбайыштан иҫкән йомшаҡ ел менән килгән еҫтәрҙе ауланы. Ауыл яғынан тиреҫ, мал еҫен килтерә ел. Хәҙер ярмалы ҡарҙа Куян, төлкө эҙҙәре ярылып ятмай, ауыл йыраҡ. Унан һуң, Уҙаман үлгәне бирле Күкбүренең яңғыҙы һунарға сыҡҡыһы, ппрогәһө лә килмәй. Уҙаманды иҫләүҙән уның йәне тағы

нығыраҡ һыҙланы, ул сыйнап, тештәрен шаҡылдатып, өңө алдында түңәрәк яһап йөрөп алды ла тағы ятты. Эх! Оҙаҡ булманы уларҙың ҡыуанысы! Күкбүре үҙенең теге саҡ айға ҡарап сараһыҙлыҡтан олоп ебәреүен иҫләне. Ул саҡта һәр тереклеккә һалынған тоҡом дауам иттереүгә сарсау ауазын ишетеп, Уҙаман килгәйне. Ә хәҙер — юҡ. Ул килмәйәсәк. Күктау мәмерйәһенең ауыҙы янында ята уның һөйәктәре. Ырашҡылап торған үткән йылғы яҙҙа һунарға китеп харап булды ул. Күкбүре, йөрәгенә осло ҡаҙауҙай сәнселгән үсен алмаҡ булып, эллә нисә барып әйләнде шул урынға — әммә кеше еҫе танауына бәрелмәне... Әллә инде әҙәм төләгөнән китеп яңылышты микән Күкбүре? Ауыл эттәренең ни, кәнтәйе үләме, арҙанымы — ҡайғырған зат юҡ. Бүреләрҙең яңғыҙ инәне ситләтеү, өйөргә яҡын юлатмау ҡанунын ул да бит белмәй ине! Яҡын барып ҡара берәйһенә: инә бүреләр хәҙер боғаҙыңа йәбешер!

Күкбүре яңғыҙлыҡтан, асығыуҙан, һағыштан йәнә сыйнаны, йәнә башын юғары сөйҙө: ауыл яғынан килгән таныш, тәмле еҫтәр йәнә күңелен ҡытыҡланы, эсендәге һағыш, сараһыҙлыҡ менән ҡушылып, баяғынан да көслөрәк ярһыу менән олорға мәжбүр итте...

Ихсанбай мәмерйәлә йәшәгән сағында һиҙгерлеген уяу тоторға күнектерҙе үҙен. Ер өҫтөндәге йәнлектәр генә түгел, ер аҫтындағы сысҡандар ҙа уға зыян килтерер кеүек тойолдо. Мәмерйә тормошона унан алда өйрәнгән Ишмөхәмәт уға үтә һаҡһыҙ ҡыланғандай ине.

— Көндөҙ ҙә, төндә лә мәмерйә алдында дежур итәйек, алмашлап йоҡлайыҡ, — тине бер саҡ Ихсанбай Ишмөхәмәткә.

— Нишләп?!

— Нисек... «нишләп»?!

— Кеше был яҡтарға килмәй, йыртҡыс-кейектәр инде... Улар менән мин дуҫ йәшәйем.

— Дуҫ... — Мин үткәндә, ҡоралай атҡанда... бүре эҙҙәрен күрҙем.

— Ә-ә! Бүре... Ҡашҡар ул, — Ишмөхәмәт һыңар күҙе менән үҙенә тишә яҙып аптырап ҡараған ҡунағының аңламауын төшөндө. — Маңлайында ҡара сыйайы бар ул бүренең. Шуға Ҡашҡар тиеүем. Мәмерйә — уның биләмәһе. Ул тере саҡта бында башҡа йыртҡыс аяҡ баҫмаҫ...

Ышан бүрегә!

— Ә нигә... ышанмаҫҡа?!

- Бүрегә ышанамы кеше!

Ишмөхәмәттең бер ҡатлылығы Ихсанбайҙың һарыуын ҡайнатты. Ләкин мәмерйәлә ул — Ишмөхәмәт хужа, унан уҙып Ихсанбай нишләй алһын? Ә Ҡашҡар эрһеҙләнгәндән эрһеҙләнде, бәғзе төндәрҙә мәмерйәгә яҡын уҡ килеп олой башланы мәлғүн.

- Нимә кәрәк был оңҡотҡа? — Ҡунаҡтың тамаҡ төбөнән ыжылдап сыҡҡан ярһыуына Ишмөхәмәт ғәҙәтенсә тыныс яуап бирҙе.

- Теге ни... һинең килгәнеңде оҡшатманы, ахыры. Мин мыны шундуҡ һиҙҙем. Миңә улайтманы, һине нишләптер ҡабул итә алмай урман хужаһы...

— һинең бүрең... Әйтерһең, бер министр.

— Бында улар министр. Беҙ теге ни... ҡунаҡ.

Йоҡоһоҙ төндәргә бүре олоуы ҡушыла. Ихсанбай инде оллә нисәнсе тапҡыр баштан-аяҡ әйләндереп иҫенә төшөрә үткәндәрен. Тормошонда йүнле бер нәмә лә булмаған кеүек. Һер генә теләгенә лә ирешә алманы бит! Шул бойомға ашмаған теләктәренең иң аяныслыһы — Гөлбаныу. Мәмерйә тбонә килеп олоған бүре... шул Гөлбаныуҙың башына еткән мыртҡыс түгелме? Ә бәлки был Ҡашҡар Ихсанбайҙың кәнтәйен урманға әйҙәгән арҙандыр? Хужаһының күҙ алдында бөтә көсөктәре менән алып сығып китте! Ниндәй эрһеҙлек! Ниндәй тәкәбберлек! Ихсанбай үҙ ғүмерендә аҙ юғалтыу кисермәне, нишләп әле ул, серек дүңгәк кеүек, ботәһен дә һендерергә, үс алмаҫҡа, ҡон ҡайтармаҫҡа тейеш? Пишләп әле ул байғошҡа әйләнгән Ишмәмәттең өнһөҙ күләгәһе булып йәшәргә тейеш? Атаһы, бер нимә булһа, мин ырхан тоҡомонан, тиер ҙә күкрәк һуғыр ине. Ихсанбай ҙаһан уның улы. Уның да бит тамырҙарында ҡуян түгел, тархан ҡаны йүгерә.

Шулай уйланы Ихсанбай. Көндәрҙең береһендә, Ишмәмәттең Таулыға киткән мәлен тап килтереп, ҡырпаҡ ҡар яуған кисте, мәмерйә төбөнә ултырып алып тороп олорға ксрешкән урман хужаһының ауыҙына ҡушкөбәген төбәне Ихсанбай...

Киреп ҡуйылған бүре тиреһен күргәс, Ишмәмәт башта һүҙһеҙ ҡалды. Һуныраҡ тирләгән маңлайын бүрке менән һыпырып, түмгәккә сүгәләне:

— Бынан кире, пажали, һунарға икәүләп йөрөргә тура килер...

— Нигә?

— Беҙ кейектәр донъяһының законын боҙҙоҡ.

— һы! Ҡарасәлең!..

— Мин һиңә ҡарағанда бында оҙағыраҡ йәшәйем. — Шулай тине Ишмәмәт, ауыр көрһөнөп. Әммә шул арҙанды үлтергәс, Ихсанбай тынсыны. Йоҡоһо тәрәнәйҙе.

...Бында ла, бигерәк тә военкоматка барып ҡайтҡас, йоҡоһона зарланмай ине. Ә бына бөгөн, айҙың түңәрәк күлдәй тулған төнөндә, бүре олоуын ишетеп уянды. Ауылға яҡын уҡ килеп олорға уны нимә мәжбүр итә? Йәнлектең олоуы баҫылғансы, Ихсанбайҙың тәненән һалҡын тир бәреп сыкты. Мәмерйәлә үткәргән толкаһыҙ ғүмере иҫтәлектәре яңырып, йөрәге өшөнө. Таңды көскә көтөп алғандан һуң, Ихсанбай, усағына ут алып та тормаҫтан, яҙғы туңғакта таяғы менән туҡылдап, Рауза йортона ығышты.

Ошоға тиклем төндәрен бер ҡабырғаһынан икенсеһенә әйләнеп тә ятмай йоҡлаған Рауза бөгөн керпек тә ҡаҡманы. Артығын ашап ятты тиер инең — кистән көндөҙҙән ҡалған һурпаны ғына эсте. Ҡоротлап шуның менән тамаҡ ялғағас, тәһәрәткә сығып инде, кәртәләге һәүкәшенең тын алышын, бәрәкәйҙәренең көйөш алышын тыңланы. Тулған айҙы күргәс, өйрәнелгән хәрәкәт менән башындағы шәлен аса биреп, күккә ҡараны:

— Ай күрҙем иман менән, кәртәм тулһын мал менән! — Шунан ул кире өйөнә йүнәлде. Кәртәһенең мал-тыуарҙан бушамағаны өсөн Рауза бик рәхмәтле айға. Бына ниңә әле ул ошо тулған айҙан үҙенә бер ҙә тормош иптәше һорағаны юҡ? Тора ла мал һорай, тора ла мал һорай. Ир менән йәшәмәҫкә ни, кешенән кәм ере бармы Раузаның? Һимеҙ, ну тулыраҡ кәүҙәле инде. Булһа тағы? Донъяла Раузанан башҡа һимеҙ бөткәнме? Ә бит улар барыһы ла ир менән йәшәй! Ярай инде, һуғыштан һуң тол ҡыҙ-ҡыркын күбәйҙе. Рауза үҙе, тағы

ос һеңлеһе ирһеҙ ултыралар. Ярай әле Раузаның берәү булһа па балаһы бар, күп тормаһа ла иргә сыкты тигән исеме бар. Гегеләр бит тыуған-тыуғандан ир төҫө күргәндәре юҡ! Бына ҡарт берәҙәк кеүек, йылдай оҙон төндә, бүре олоуын тыңлап, япа-яңғыҙың ят инде. Хут шуға үҙең ҡушылып оло! Барыбер берәү ҙә ишетмәҫ, берәү килеп тәҙрәнде сиртмәҫ. Анау Хашимы ла әллә ниндәй бисә һөймәҫ йән булды — әллә шуны Гөлбаныу үҙенә сихырлап ҡалдырҙымы икән? Һылыулыкҡа ла һылыу булды инде бисәһе — әйтерлек түгел. Ну бит Рауза ла төшөп ҡалғандарҙан түгел! Етмәһә, үҙе урында эшләй, бөтә ауыл, шитай, Раузаның күҙенә ҡарап тра! Кемдең ҡулында — шуның ауыҙында. Эштән ҡайтҡас, унын да кем менәндер сөкөрләшә-һөйләшә кәнфитләп такта сойен якты сырай менән эскеһе килә.

Йоҡоһоҙ төнөн уфтана-һыкрана үткәргәс, Рауза таң бсленеү менән тороп ултырҙы. Кәнсә ҡараған сағында газәтенә әйләнде микән — ул таң беленер-беленмәҫтән тора. Гүшәгендә белэктәрен, боттарын ыуып ултыра биргәс, Рауза ойоғона үрелде, ашыкмай ғына кейенде, шунан, бисмиллаһын әйтеп бит-ҡулын сайҡағас, көлдөксәлә кибеп яткан утынға тотондо, мөрйәһен асып, усаҡ аҫтына ут якты. Казандағы һыуҙы ҡоро утын тиҙ ҡайнатып сығарҙы, самауыр капкасын һыу һалырға була инде астым тигәндә, нык ҡына шпек шаҡыған тауыш ишетелде. Рауза, бик иртә булғанға күрә, тура ишеккә бармай, урам эсенә ҡараған кескәй тәҙрә >ргәһенә килде:

— Аһ-аһ! Был кем таң... Атаҡ-атаҡ! Әллә... Ишмәмәт инде?!

Сэбилә ҡарындашы менән һөйләшкәндән һуң Лоҡман үзен ҡайҙа ҡуйырға белмәне. Кер йыуыу бүлмәһенә ингәндә ул Сәбилә менән бындай һөйләшеү булыр тип тә \ млламағайны, Әбүбәкерҙең тыуыу тураһындағы ымыҡлығының йыуырға сискән халаты кеҫәһендә ҡалыуы Капыл иҫенә төшкәнгә барып инде ул унда. Сәбиләнең үҙен югошо, ҡарашы теле әйткәндәргә ҡарағанда Лоҡманға күбсрәк һөйләне. «Инә кейек! Торғаны инә арыҫлан! (әбиләнең хәлендә Әбүбәкерҙең ышаныслы ҡулдарҙа үҫеүе

мөһим түгелме ни? Анра! Ҡырағай! Шул тоҡомдан бала сағынан айырылып Лоҡман ҡайһылай дөрөҫ эшләне!» — ошондай уйҙар дауылында Лоҡман кабинетында ары-бире йөрөштөрҙө лә аҫты — подвалы — таштан, өҫтө бүрәнәнән һалынған йортона ынңғайланы.

Рәшиҙә килеп ингән иренә аш бүлмәһенән башын ғына сығарып ҡараны, ишек асылған тауышҡа ике йәшлек Әбүбәкере йүгереп килде:

— Ат-та! Ат-та ҡайтты. Зәй эзә! Атта зәй эзә!

Лоҡман Әбүбәкерҙе күтәреп юғары сөйҙө. Сабый күҙҙәрендәге шатлыҡ зәңгәр ут көлтәһе булып тирә-яҡҡа сәсрәне. Бүлмә бала ҡыуанысынан яралған ауаздар менән тулды. Тауышҡа Рәшиҙә сыҡты:

— Етер, Әбүбәкер, эттә сисенһен! Һинә әйтәм, иртәләгәнһең?

Лоҡман, баланы төшөргәс, ҡатынына ҡарамай ғына, аҫҡа — подвалға илткән баҫҡыстан төшә башланы.

— Сэй әҙерләмә. Эшем күп.

Иренең аҙ һүҙлелегенә, үҙ яйы менән йәшәүенә күнеккән Рәшиҙә төбәшмәне.

Лоҡман ауыр ишекте асып подвалдың төпкө бүлмәһенә үтте. Төрлө ҙурлыҡтағы һәм формалағы бияла шешәләр, кәштәләр, китаптар, үләндәр, имән өҫтәл, ултырғыстар, тапчан, ваҡ ҡына герҙәр, схемалар менән сыбарланған бүлмә һәр ваҡыттағыса тыныс. Стенанан уға күҙлек кейгән, йоморо һаҡаллы Степан Ильичтың үткер ҡарашлы күҙҙәре ҡарай.

— Степан Ильич... — Лоҡман мөйөштә торған оло ҡорһаҡлы шешәнән стаканға спирт ҡойҙо, шкафтан кәнсир алып асты. Икмәк артынан өҫкә менеп торманы. «Былай ҙа ярай», — тип ҡул һелтәне. Стакандағы эсемлек башта тамағын өтөп, укшыта биреп үтте лә, аҙаҡ бөтә тәненә йылы йүгерҙе. Лоҡман эскесе түгел, мэгәр күңеленең болоҡһоған мәлдәрендә килке-килке үҙенән башҡа бер кем инеп йөрөмәгән ошо бүлмәлә бикләнеп ятып ала. Эсенән генә үҙенең тышҡы донъянан һаҡлау ҡөҙрәтенә эйә ошондай ҡабырсағы булғанға ла һөйөнә. Үҙе лә ул Ҡыҫала йондоҙлоғонда тыуған, күрәһең, ошондай тыныс ятыуҙарға мохтаж булыуы уның өсөн тыумышы тарафынан уҡ билдәләнгән.

Уйлап ҡараһаң, күп тә йәшәлмәгән кеүек, Лоҡман, яңы иллене үтеп, алтмышҡа саҡ аяҡ баҫҡан ир, ләкин тормоштоң күпме һикәлтәләре, упҡын-даръялары, кисеү-боролоштары аша үтеп өлгөрҙө. Атаһы Талип ҡарт, Тирәкленең «мал докторы», Лоҡман үҙен белә-белгәндән насар йәшәмәне. Степан Ильич менән дэ атаһы ана шул кәсебе аша таныш ине. Өйәҙ халкын дауалаусы Илья Николаевич 18-се быуаттан уҡ бында йәшәй башлаған. Сәйәси сәбәптәр менән Петербургтан һөрөлгән лекарь ошонда төлөк кенә түгел, башҡорттар араһында танылыу, дәрәжә лә тапкан. Аҙаҡ, был нктарҙа алтын эше йәнләнеп киткәс, Солтан приискыһының хужаһы Навалихиндың ҡыҙына өйләнеп, мөлкәтен арттырған, эммә ауылдан-ауылға йөрөп ерле халыҡка хеҙмәт итеүен ташламаған, төп кәсебенә тоғро ҡалған. Әжәле лә уны гопкөл ауылдарҙың береһенән Күктау аша ҡайтып килгәндә аты алып ҡасып, арбаһы-ние менән түңкәрелеп яткан сағында килеп тапкан.

Атаһының эргәһендә дарыуҙар яһарға сеймал әҙерләшеп, үлсәү-турау кеүек эштәр башҡарған Степан ошо йортта әсәһе менән генэ ҡала. Мөлкәт етерлек, әммә бэләкәйенән башын подвалдан сығармай хеҙмәткә өйрәнгән Степан баш баҫып мнләй ҙә эшләй. Тирә-яҡ ауылдарҙан уға кеше ауырыһа ла, мал сирләһә лә киләләр. Айырма шунда ғына: кеше менән аралашыуға әүәҫ Илья Николаевич кузлаға күсерен ултырта һалып саҡырған ергә үҙе сапһа, Степан, килеүсене тыңлағас, коштәнән шешэ алып тоттора ла нисек ҡулланырға аңлата.

Бәлә яңғыҙ йөрөмәй, тигәндәй, Степандың атанан иртә ҡалыуы өҫтөнә, күп тә тормай эсәһе лә донъя ҡуя, приискылағы мастер Михаилдың ҡыҙына өйләнә Степан. Әммә ҡарамаҡка эре һөйәкле, кәүҙәгә лә таҙа Любаша ни собәптәндер б,алаһын тыуҙыра алмай, Тирәклелэге кендексе карсыкты барып килтергәнсе әсә үҙе лә, тыуыр бала ла донъя менән хушлашып өлгөрә.

Любашаны ерләгәс, Тирәклеләге «мал докторы» Талип шакумына килә Степан. Былар Талиптың аласығында, дарыу, дегет еҫе һеңеп бөткән, яртылаш ергә һендереп һалынған кескәй өйҙә, төнө буйы ҡунаҡтың күстәнәсе менән һыйланып сығалар. Лоҡман аласыкка ҡолаҡ һалғылап, эсәһе оешергән бишбармаҡты, һауыт-һаба, ҡорот, һурпа, ҡаклаған ит, тултырма, ҡаҙы ише ризыҡты индереп йөрөй. Аласыҡтың

ишеге асылған ыңғайға тышҡа берсә «Буранбай», берсә «Ой мороз, мороз» бәреп сыға, атаһының ҡурайы берсэ «Ҡарабай»ҙы, берсә «Барыня»ны һыҙҙырта. Степан менән Талиптың был «шайтан туйы» Талип ҡарттың улы Лоҡманды кейендереп, Степандың кузлаһына ултыртып, ошоларҙы эйтеү менән тамамланды:

— Миндә һинән башҡа ла малайҙар етерлек. Степан һине әҙәм итер, һөнәргә өйрәтер. Мин һиңә байлыҡ ҡалдыра алмайым мираҫҡа, мираҫым шул — һөнәр булыр. Әйткәнен тында, сығынсылама. Хуш. Әйҙә, малҡай! Хоҙайға тапшырҙыҡ! — Талип ҡарт, ҡапҡа асып, уларҙы оҙатып ҡалды, атаһына ҡаршы өндәшеп өйрәнмәгән әсәһе ауыҙын шәле менән ҡаплап ҡына балауыҙ һыҡты.

Ишле ғаиләлә, эшләп ашауға күнеккән крәҫтиән балаһына Таулылағы яңы тормошо артыҡ мәшәҡәтле тойолманы. Утын ҡырҡа, мал ҡарай, Степанға дарыу эшләргә ярҙам итә. Русса өйрәнеп алғас, Лоҡман анатомия, физиология буйынса китаптар ҙа уҡый башланы. Николай Ильичтан ҡалған бай китапхана Лоҡмандың тотош булмышын яуланы, тора-бара Степан үҙе кәңәш менән Лоҡманға мөрәжәғәт итә торған булды.

Степан өйләнгәс, Лоҡман китаптарға күберәк ваҡыт бирә башланы. Таулынан етмеш саҡырымда ятҡан ҙур ауылда тирмән тотоп торған Максим Кудряшевтың ҡыҙы Раисаны алды Степан. Йомошҡа килгән халыҡ уға Рәшиҙә тип өндәште. Башҡортсаны һыу кеүек эскән Раиса Максимовнаға эйәреп, Степан үҙе лә апаруҡ ҡына телгә өйрәнеп алды.

Йәш, егәрле ярҙамсы эшләгәс, Степандың матди хәле күҙгә күренеп рәтләнде. Лоҡмандың үҙенә айырым кузлалы арба, яҡшы ат йүнәттерҙе. Төрлө эпидемия ваҡыттарында Лоҡман, дарыуҙар һалынған ҡумтаһын тейәп, халыҡ араһына яңғыҙ сыҡты, ә инде Рәшиҙәнең аҫырау егетте айырым хәстәрлек менән бағыуы Лоҡманды ябағаһын ҡоймаған тай шикелле күрекһеҙ үҫмерҙән һырты ялтырап торған һәүреккә әйләндерҙе. Тығыҙ түшле, текә янбашлы, түңәрәк йөҙлө, зәп-зәңгәр күҙле, биленән түбән төшөп торған етен сәсле был ҡатын менән Лоҡмандың тәүге яҡынайыуына ла ошо бүлмә, һүрәттәге Илья Николаевичтың үткер ҡараштары шаһит.

Степан ниндәйҙер ауылға, дүртенсе тәүлек бэпәйләй алмай яфаланған ҡатын янына киткәйне. Лоҡман тығыҙ итеп

ашаған киске аштан һуң ошо бүлмәгә төштө, «Криминальная пматомия» китабын алды... Шул саҡ өҫтә баҫҡыс шығырланы, ғоҙәттә ул Рәшиҙәнең тулы кәүҙәһен күтәргәндә шундай гауыш сығара. Бына ул үҙе лә күренде, Лоҡман ниндәйҙер һағайыу ҡатыш баҙау менән ҡатындың йөҙөнә ҡараны:

— Әллә... Степан Ильич... ҡайттымы?

— Күгэрсенем! Нигә... — ҡапыл Рәшиҙә руссаға күсте, — я болыпе не могу! Сокол ты мой ясный! Не томи меня! Не ғони. Ах!..

Лоҡман муйынына һарылған йомшаҡ, ниндәйҙер татлы сҫтәр сыҡҡан беләктэрҙән, ҡайнар ирендәрҙән, шашҡын зәңгәр нур сәскән күҙҙәрҙән арынырға, ҡасырға телэне:

— Нимә эшләйһең ул... Рәшиҙә апай! Раиса Максимовна!

— Возьми меня! Прошу... Ох! Какой ты... сладенький ты мой!

Ҡалғанын үҙе лә хәтерләмәй Лоҡман: ул тулыһынса бөтә булмышы менән ошо һылыу мәрйәнең ярһыған хистәренең солғанышында ҡалды...

Бик оҙаҡ ваҡыт Лоҡман хужаһының күҙено күтәрелеп карай алмай йөрөнө. Рәшиҙэ иренә элеккенән дә наҙлыраҡ өндәшкән кеүек, йөрөш-тороштары ла үҙгәрҙе ҡатындың, йөҙөнән һәр саҡ бәхет нуры, күҙҙәренэн һөйөү осҡондары китмәй. «Минең менән булған... ахыры... төш булды?! — тип аптырай Лоҡман. — Ана бит улар нисек күгэрсендәй гөрләшә!»

Һығымта яһарға ашыҡҡан булып сыҡты Лоҡман: Степан Ильичты ниндәйҙер етди эш менән Ырымбурға саҡырып алған төндө үк яңынан ҡауышты улар. Рәшиҙә Лоҡмандың үпмәгән ерен, эйтмәгән наҙын ҡалдырманы, берсә иланы, берсә көлдө, Лоҡман, аҙна-ун көн буйы подвалдан сыҡмай, хужабикәһенең танһыҡ һәм ярһыу теләген үтәне. Икеһе лә күҙгэ күренеп ябыҡтылар, икеһе лә өҫтәренән ошоға тиклем ниндәйҙер баҫып торған йөктөң төшөүен кисерҙеләр, һәм ун ете йәшлек Лоҡман үҙенең бынан кире ошо һылыу, инде утыҙҙы үткән ҡатындан башҡа бер көн дә йәшәй алмаҫын төшөндө...

Революция, граждандар һуғышы, продразверстка, яңы иҡтисад сәйәсәте, колхозлашыу — бөтә был революция тыуҙырған сәйәси шауҡымдар Степан Ильичты ла, Лоҡманды ла урап үтеп килэ ине, шәхес культы тигән нәмә

килеп сыкты. Нимәлә ғәйеплэгәндәрҙер Степан Ильичты — унынһын Лоҡман белмэй, мәгәр хужаһын нисек 33-сө йыл төндә алып киттеләр, шунан кире ҡайтманы. Рәшиҙә ирен ҡулға алған төндө үк Лоҡманды өҫкө ҡатка, үҙҙәре ире менән яткан түшәккә сакырҙы, танды шунда бер-береһенең тәненэ быуар йыландай уралған хәлдә ҡаршыланылар. Ҡояш сыккас, Раиса органдарға барып, үҙ телэге менэн иренэн баш тартыу ҡағыҙы яҙҙы...

Бына шунан бирле бергә улар Рәшиҙә-Раисаһы менэн. Балалары ғына булманы. Лоҡмандың махсус укыу йорто тамамлау тураһындағы ҡағыҙы булмаһа ла, батрактан сыккан зыялы белгес булараҡ, үрләткәндән үрләттеләр. Һуғыш мэлендэ унын абруйы һәм байлығы ишэйҙе. Ихсанбайҙы ла ул фронттан ҡарындашы Сәбиләнең шәмәреп илауы хаҡына ғына алып ҡалманы. Изгелектең ҡәҙерен генэ белмэне Ихсанбай, аҙҙы. Фәүзиә ҡарсыҡ, Таулыға килеп, килененең һәм тыуасаҡ ейэненең хәлен һөйләгәс, шул төндө үк Лоҡман ҡәтғи бер ҡарарға килде. Тик ул наганын бер Ихсанбайға ғына төбәгәйне: этка эт үлеме. Ниңәлер шул төндә Фәүзиә ҡарсыҡ та юкка сыккан — унынһына Лоҡмандың һаман иҫ-акылы етмэй. Үрт Ихсанбай йәшәгән йортка ғына һалынғайны, ә ҡарсыҡ йәшәгән өй имен бит, һаман ултыра, хужаһы ғына юҡ. Әйтерһең, ер йотто. Күңеле тыныс түгел шуға Лоҡмандың. Ауыл халкы Ихсанбайҙың да, ҡарсыктың да, янып үлгән мал-тыуарҙың да һөйәктәре йорттоң һыйҙырышлы баҙына төштө, ти ҙә бит... Кем белә! Ни бына Әбүбәкерҙе бөтә күңеле менэн яратып өлгөрҙө Лоҡман. Әйтерһең дә күҙенән зэңгәр осҡондар сэскән көләс был бала бөтөнләй Сәбиләнеке лэ, Ихсанбайҙыкы ла түгел, ә Лоҡман менән Рәшиҙәнең гонаһлы, ләкин ҡайнар мөхәббәтенең емеше. Был бэхетте һис кем менән уртаҡлашырға телэмэй Лоҡман. Әгәр хәлдәрҙең былай үҙгәреүен белһә, Лоҡман, моғайын, ашарын ашаған, йэшәрен йэшәгән Фәүзиэ ҡарсыктан да пуля йәлләмәгән булыр ине. Бәлки, ул ысынлап та шул янғын мәлендэ үлгәндер?.. Тере булһа, килене Сәбиләне күптән килеп табыр ине ул. Шулай ҙа бөгөн Лоҡмандың ғаиләһенә иң нык ҡурҡыныс янаған кеше — Сэбилә. Рәшиҙәгә лә ошо уйҙар тынғы бирмәй. Ҡатыны ҡайһы саҡ ирен революция башланыу менән Себер яғына күсеп киткән туғандары янына китергә лэ өгөтлэй.

Бәлки, унын һуҙҙәрендә дөрөҫлөк юҡ түгелдер. Лоҡман ҡайҙа ла, тэкэ бестереп булһа ла аҫырар ғаиләһен. Алтыны ла, аллаға шөкөр, етэрлек. Ә бына Сәбилә баламды алып ҡастылар тип дау күтәрһә?!

Көнсығышта ҡырлас болоттар бауырын ҡояштың тәүге нурҙары ҡыйғанда алдындағы араҡыһын да, тэмэкеһен дә онотоп уйға баткан Лоҡмандың мейеһенә бер уй ярсығы ҡаҙалды: әгәр ҙә ул Сэбиләне... аҡылға зәғифтәр дауаханаһына япһа? Әйҙә йәшэһен шунда! Ана үткәндә бер ҡатынды килтереп бикләнеләр, тоткан да үҙен: «Мин бойғәмбәр әсэһе!» — тип иғлан иткән. Яңылышкан кеше мснэн яңылышмағанды был иманы аҙашкан заманда айырып ҡара! Лидия Николаевна ғына хирес кеше инде. Ауырыуҙарҙы үҙенә батрак итеп тота тип, Камалетдиновҡа ялыу менән барып йөрөй. Кэртэ көрәгәндэн уларҙың укалары ҡойоламы инде?

Лоҡман, йэнлэнеп, тәмәке ҡабыҙҙы, стаканына йәнэ өсемлек һалырға итте лә, кире уйланы: Әбүбәкер торһа, фу, һаҫык тип, якын да килмәҫ...

Мирхэйҙәров менэн һөйләшкәндән һуң Мәҙинәнең күңеле күтәрелә төштө. Илдә сыпсыҡ үлмэй, тигәндәре ошолор. Мәскэүҙә Әптеләхәтте ҡулға алыу менән Мэҙинәне ятаҡтан кыуҙылар, күп тә тормай, укыуын ташларға мәжбүр иттеләр. Кисә генә унын тауышына һоҡланған, уны тиңе булмаған йырсыға һанаған укытыусылары хатта Мәҙинә эргәһенэн күрмэмешкә һалышып йәһэтерәк үтеп китеү яғын ҡаранылар. Үҙенә булған йылы мөнәсәбәттән ҡанатланған Мәҙинә бала моҡлаған арала өйөн, мейесен аҡлап алды, ҡапка башына, ҡолғаға нығытылған ояға сыйырсыҡтарҙың оялауын йөрәге кыҫылыр сиктә ҡыуаныл күҙәтте. Нигеҙ буйына ҡыҙыл мәрйендәй теҙелгән диңгэзэйҙәргә ҡарап туя алманы, ә тәүге мылы нурҙарҙы әсәһеләй күреп бипылдап килеп сыккан йәш үләнде күреү Мәҙинә күҙҙәренән мөлдөрэмә һөйөнөс булып акты... Эй йырлағыһы килде унын шул саҡ! Тулышкан күңелен бушаткансы бер йырлап ебәрер ине — бәләкәй генә өйөнөң стеналары тауышты һыйҙыра алмаҫ һымаҡ. Мәҙинәгә

ҙур сәхнә, йә булмаһа иркен дала, йә мөһабәтлеге күккә ашҡан ҡарурман кәрәк!

Уянып килгән тәбиғәткә ғажиз булып торған Мәҙинә аяҡ аҫтында күләгә күреп һиҫкәнде.

— Мәҙинә... -- Ҡапҡанан инеп килгән атаһының үҙгәреп киткән йөҙөн күреп, Мәҙинә һағая төштө:

— Ни булды, атай?

— һин... былай ғына... мин... һин бит... әсәйендең күлдәген... — Хашим, таянырға ниҙер эҙләгәндәй итте лә, хәле бөтөп, нигеҙгә ултырҙы.

— Ә, эйе! — Мәҙинә берсә атаһына, берсә кейеменә ҡараны. — Өй аҡланым бит, әсәйемдең... иҫке бер күлдәген таптым да...

— Уф!.. — Хашим еңенең осо менән тирләгән битен һыпырҙы. — Эш күп булды бөгөн. Ҡарауылға тиклем ятып торайым әле.

— Бэпэй йоҡлай... Атай, мин... Менәүәрә ҡотоғона барып киләйем әле, был ҡотоҡҡа һары һыу төшкәндәй...

— Алыҫ тимәһәң ни...

Мәҙинә, ялтыратып йыуып ҡоймаға элгән биҙрәләрен көйәнтәһенә элә-элә йүгерә-атлай сығып та китте.

Өйөнөң тәҙрәһенән Фәүзиә ҡарсыҡтың аласыҡ өйөн Мәҙинә көн дә күҙәтһә лә, эргәһенән үтеүе былай ҡыйын булыр тип уйламағайны. Аяҡ быуындары ҡороп, кэүҙәһенең ҡамырҙай йомшарыуын тойҙо Мәҙинә. Йә инде! Әллә ҡайҙан маһайып, һеҙ кем дә мин кем тип ултырған олоғара донъя бер төн эсендә янып күмергә ҡалһынсы әле?! Келәт, кәртә-ҡура — ут бер нәмәне аямаған, э шуларға тоташтырып һалынған аласыҡ — бөтөн. Хатта стеналарын ялҡын да һуҡмаған. Фәүзиә ҡарсыҡ тураһында, сихырсы, баҡшы, убыр, тигән төрлө хәбәрҙәр йөрөгәс, билдәле, был урынға эҙәм мал эҙләп кенә һуғылмаһа, үҙ ирке менән аяҡ баҫмай. Ә Мәҙинә Фәүзиә әбейҙең башҡа сифаттарын да, эсәһе Гөлбаныу һәм уның балалары өсөн нисек өҙөлгәнен белә. Унан һуң бит, Фәүзиә ҡарсыҡ Шәңгәрәй менән дә бик ихлас һөйләшә торғайны! Шәңгәрәй иҫәрлеккә иҫәр инде, ләкин сабый хөкөмөндәге бэндәләр, ат менән эт кеүек, уҫал кешене үтэнән-үтә күрә, имеш. Мәҙинәнең дә ауыр саҡтарында, ошо ҡарсыҡтың итэгенә ятып, һулҡылдап-һулҡылдап илағыһы

КИЛЬ торғайны. Эйе, Мәҙинәлә уға ҡарата һәр саҡ ике хис **йөшәне:** ҡурҡыу һәм... яратыу.

Мәҙинә, өй эргәһенән туҡтамай үтеүҙе килештермәгәндәй, **КӨЙӘНТӘһен** ҡоймаға элде. Баҙнатһыҙ ғына баҫып, эскә үтте. **Ишех** йоҙаҡлы. Ул ишек башына үрелде, ҡулы һалҡынса әйбергә гейҙе. Асҡыс! Әгәр ул был өйгә... инһә?! Ҡарсыҡ тере **МКТа** баҙнат итэ алмаған аҙымды... хәҙер яһаһа?!

Ҡыҙыҡһыныу енде — Мәҙинә ишекте асып төпкә үтте. І әҙрәләре бәләкәй булғас, өй эсе ҡараңғыраҡ. Усаҡ. Төптә — **казан.** Өйҙөң буйынан буйына урындыҡ һалынған, унда **балаҫ,** эргә юрғандар түшәлгән, ябыныу-яҫтаныу монаяты **бейек** итеп һандыҡ өҫтөнә өйөлгән. Ҡомған, аш-һыу **ейберҙәре,** ағас табаҡ, көбө, сеүэтә кеүек нәмәләр. Бөтә әйберҙән дә боронғолоҡ, һиллек, мәңгелектең үҙе **карағандай...** ә урын-ер буйына эленгән үләндәр, балан, елэк, **карағат** тәлгәштәре... Хатта ҡарсыҡтың иләп яткан йөнө, **орсого** — барыһы үҙ урынында. Әйтерһең дә Фәүзиә ҡарсыҡ **был** донъянан бер генә көн дэ айырылып тормаған, гүйә ул әле і снә кэртә артына сыҡкан...

- Ах! Был... — Болан мөгөҙөндә элеүле торған ике әйберҙе күреп, Мәҙинә иҫе инэрле-сығарлы хәлдә иҙәнгә **сүгәләне.** — Былар!.. Уларҙыҡы!.. Малаҡайҙарҙыҡы!..

һыуға сығып киткән Мэҙинә **күҙҙән** юғалғас, Хашим өйөнә **инде.** Баланы уятып ҡуймайым, тип ҡурҡып ҡына өҫ кейемен һалды, ҡомғандағы йылы һыу менән ҡулын йыуғас, түргә **утте,** сәңгелдәк шаршауын асып, йоҡлап яткан сабыйҙың тигеҙ һулыш алыуын тыңланы. Ыҡсым итеп йыйыштырылған таҙа ӨЙ өсе, ялт итеп торған түрбаш, ап-аҡ мейес, сәңгелдәк, бала мышнауы, тәҙрә төбөндәге сәскәгә бөрөләнгән гөлдәр — иарыһы ла Хашим күңеленең иң нескә ҡылдарына ка ылғандай, наҙлағандай... Сымыры шул Мәҙинәһе, матур **көтә** донъяны. Нәк әсәһе. Гөлбаныу шулай булды. Үҙенең һәр члрокәте килешле булған кеүек, өйөндә лә бөтә нәмә ыҡсым, урынлы ине бит уның. Әле бына Мәҙинэне Гөлбаныу тип уйлап тертлэүе! Саҡ йығылманы. һуң инде, үлгән кеше герелеп ҡайтамы инде? «Эй, Гөлбаныу!» — Хашим ятып трорға уйлаһа ла, һиҫкэнгән күңеленән йоҡо әҫәре ҡасты.

Әлдә Дауыт бар. Етмәһә, ошо сабый теге мәрхүм уландарына оҡшағандай. Был оҡшашлыҡҡа Хашимдың иҫ-аҡылы китә. Мәҙинә: «Дауыт әсәйемә оҡшаған!» — ти ҙә ул. Ярай, шулай ҙа булһын. Гөлбаныуҙың күҙҙәре Дауытта. Биктимер менән Йәнтимер ҙә әсәһенә — Гөлбаныуға оҡшаған ине бит. Эй теләгәйне ул ҡатынының ул табыуын! Бәлки, Гөлбаныу Хашим киткәнсе үк буйға уҙып ҡалған булғандыр? Улай тиһәң... әҙәм балалары туғыҙ айҙан донъяға килә. Бәлки, былар үҙҙәрен ниндәй яҙмыш көткәнен һиҙеп тә әсә ҡарынынан айырылырға теләмәй оҙағыраҡ ятҡандарҙыр?! Мөғжизә юҡ, булмай тиер инең — Хашимдың был донъяла йәшәп ятыуы үҙе бер мөғжизә түгелме? Нисек кенә булмаһын, Хашим Йәнтимер менән Биктимер аша үҙен ата итеп, ҡурпыларын ҡурсырҙай кеше итеп хис итте. Хоҙайҙың бирер юлдары киң. Ул ике сабый Гөлбаныу менән Хашим йортона яҙған балалар ине. Ә уларҙы был йортҡа ниндәй юлдар менән килтереүҙе мәүлә үҙе белгәндер, үҙе ҡайғыртҡандыр. Хоҙайҙан һорап, теләп алған шул ике танһыҡ йәндәрҙең ваҡытһыҙ гүр эйәләре булыуҙары ғына үкенесле. Әхирәттә яңғыҙыма күңелһеҙ, тип тартып алдымы эллә уларҙы Гөлбаныу? Әллә инде, эсәнән ҡалып интегеп, этелеп-төртөлөп йөрөмәһендәр, тип шул ике сабыйҙы үҙ янына әйҙәнеме әсәләре? Эх Гөлбаныу! Хашимға шул ике баланың күҙ ҡараһылай ғәзиз икәнен белә алмай киттең! Аңламай киттең ирендең йөрәген! Хәҙер бына Хашим: «Мин һине яратам!» — тип бөтә донъя ишетерлек итеп ҡысҡырыр ине лә, бәндә тауышы барып етер ерҙә түгел шул йәреней йәнгенәһе...

— Атай! — Ҡыуғынсынан ҡасҡандай йыш-йыш тын алып ҡаршыһында баҫып торған Мәҙинәне күргәс, Хашим һикереп торҙо:

— Нимә?!

Мәҙинә уға кокардалы ҡара фуражка менән һыңар сандали һуҙҙы.

— Бына!

Хашимдың күҙ алдына береһе кокардалы тимер юлсы фуражкаһы, икенсеһе йондоҙло пилотка кейгән малайҙары килде. Аталары һуғыштан ҡайтҡас, улар шул ике баш кейемен көн дә алмашлап кейеп йөрөнөләр. Пилотка берәү генә, ә малайҙар икәү булғас, Хашим фуражканы ҡыйыҡ эсенән төшөрөп бирҙе.

Лтайығыҙ тик һуғышып йөрөмәне, тимер юлында ла . . . . . тине ул ҙур фуражканы күҙенә төшөрөп кейеп щ Йонтимергә ҡарап. — Кем белә, бәлки, һин дә минең к

Атай, илтэгә Биктимел пилотканы билһен миңэ, мин ы һалдат булам! — тигәйне шул саҡ Йәнтимер.

\;ипим сандалиҙы ла хәтерлэне. Үҙенә тейешле Ьыйырҙарҙың береһен һуйғас, ике малайына ла күстәнэскә влма, сандалиҙар алып ҡайтып биргэйне. Аяҡтарына ғүмере ММӨ киймэгән балалар, шуларҙы кейҙергәс, атлап китэ алмай интеккәйне...

Ҡайҙан... таптың? — Тамағы төбөнә төйөр тығылыуҙан Хашимдың тауышы ҡарлығып сыҡты.

Мәзинә мөлдөрәмә йәшле ҡара күҙҙәрен тәҙрәгә текәне:

Мин... Фәүзиә инәйҙең... өйөндә булдым.

һы! — Ҡапыл ағарып һурылып киткән Хашим ни >м гергә белмәне.

Хашим ни сана, ни арба юлы түгелгә әйләнгән яҙғы высраҡта фермаға ашыҡты. Теге фуражка менән сандалиҙы күр әндән һуң Мәҙинә менән һөйләшә-сөкөрләшә сәй эсеү ҙә, йоҡоһо туйып кирелеп-һуҙылып уянған баланы ҡулына алыу күңелен йыуатманы. Әле лә уға бер уй тынғы бирмәй: гимәк, Фәүзиә ҡарсыҡ хәкиҡәткә — малайҙарҙың юғалыу йоктәһенә — яҡын булған. Тик ни өсөн ул был эйберҙәрҙе Хашимға йә Мәҙинәгә күрһәтмәгән? Нимә ҡамасаулаған? И ‧ ı был һорауҙарына Хашим инде яуап таба алмаясаҡ. ı шондай һорауҙар тулҡынында ары һуғылып, бире һуғылып ᴵᴵ ш ıә р өсөн генә табылдымы икән был әйберҙәр? Бәлки, улар малайҙарҙың зым-зыя юҡ булыуҙарының осо сыға башлауылыр?

Күцелендә ҡайнаған уйҙар тәьҫирендә берсә ҡыҙыу, берсә ми втлаған Хашим фермаға килеп тә етте, ахыры: танауына ı илос, яна башлаған тиреҫ еҫе бәрелде. Эйе, ана Шәңгәрәй, іна ниҙер тотоп, елдереп кәртәгә инеп бара. Туҡта... пап га алған түгелме был? Иҫәргә дим бир, ике ҡулына ı \ кмар бар, тигәндәй... Хашим йүгерә-атлай Шәнгәрәй һеңә и иисп киткән ҡапҡаға йомолдо. Сынйырҙа бәйле торған ныйырҙар, Хашимды күргәс, дәррәү баҡырыу менән ımләнеләр.

Шәңгәрәй! Эй! Шарик!

Шул саҡ тоҡом үгеҙе яткан арғы мөйөштә зилзилә ҡупты:

— Үлтерә-ә!

— А-а-а!

— һәнәк! Бир һәнәгенде!

— А-а-а!

Хашим эләгә-йығыла шунда йүгерҙе һәм... үгеҙ мөгөҙөндә салкан яткан Шәңгәрәйҙе күрҙе. Халыҡ ҡысҡыра, ҡайҙалыр йүгерә, әммә ҡоторған үгеҙ эргәһенә береһе лә яҡын бармай. Үгеҙ хәҙер Шәңгәрәйҙе мөгөҙө менән йә бүрәнәгә ҡуша һевдерә һуға, йә ергә һалып иҙә. Хашим бер ынтылыуҙа арттан килеп үгеҙҙең киң арҡаһына һикерҙе лә Шәңгәрәйҙе күтәреп кәртә аша ташланы. Ғифрит башын сайҡап, ни булғанын аңларға ла өлгөрмәне — Хашим үҙе лә Шәңгәрәй артынан һикерҙе.

Ҡанға баткан Шәңгәрәйҙе күтәреп тышҡа алып сыҡтылар.

— Атаң башын ҡарап үгеҙ эргәһенә индеңме?

Шәңгәрәй ыңғырашты, һүҙ әйтә алманы.

— Нишләтәбеҙ быны, йәмәғәт?

Хашим, күләгәлә ятып ҡалған ҡарҙы алып, Шәңгәрәйҙең ҡанлы битеп һөрттө:

— Ҡарауылсы өйөнә һалайыҡ. Бергәләп ҡарарбыҙ...

— Ә нигә — ҡарауылсы өйөнә? — Телсәр Ғәлимә күҙен асалаҡ-йомалаҡ итеп Хашимға тексәйҙе. — Унын үҙ өйө юҡмы ла, атаһы юҡмы? Ишмәмәт ҡайтканы бирле балаһын килеп бер күргәне юҡ — ҡараһын!

— Ысын әле! Дөрөҫтө һөйҙэй бит ҡарындаш!

— Кем апара?

— Кем булһын? Хашим, һин инде! Ишмәмәт һиңә еҙнә тейеш, шэй!

Күңеле тартмаһа ла, Шэңгэрэйҙе тейәп алып, Ишмөхәмәт йортона ат саптырыуҙан башҡа әмәл калманы Хашимға...

* * *

Тирәклеләге үгеҙ менән булған хәл районға әллә нисәгә түкмэсеп барып етер инде, тип Мирхәйҙәров ишекле-түрле йөрөп көйэләнде. Нисек әле Камалетдинов һаман шылтыратмай? Ишетһә, үҙе килеп етер микән, эллә саҡыртып алырмы? Килмәгәне яҡшы булыр ине: баҫыу эштәре, ҡар әкрен ирегәс, һүлпән бара; фермала малға аҙыҡ

накыҫ, быҙауҙар эсе китеп үлә; аттарҙы йырағыраҡҡа - Уралға ебәрмәһә, яҡын-тирэлэ ашарлыҡ ҡаулан да I ı ıı ıаны... Бәлки Мирхәйҙәровҡа юҡ йомошто бар итеп ғı ııонı а сығып әйләнергәлер? Ниңә әле ул Камалетдиновтың саҡырғанын көтөп ятырға тейеш?

Уйлаған эш — бөткән эш: Мирхәйҙәров ат һарайына **йүнәлде.** Хөсәйенгә әйтергә кәрәк: атты әҙерләһен, таң **Һарыһынан** иртәнге туңғаҡта сығып китерлек булһын.

Карауылсы өйөндә Хөсәйен күренмәгәс, Мирхәйҙәров **•ттар** фгәһенә үтте. Әһә! һарайғыр урынында. Алдында **бесәне** лэ мул ғына. Юғарыла һөйләшкән тауыштар **ИШСтелгәндәй** булғас, Мирхэйҙәров баҫҡыс буйлап лапаҫ **башына** үрмәләне. Унан Хөсәйенден йөрәкһеп, айырым бер ıәззәı менән гөрөлдэгән тауышы ишетелде:

Эх малайҙар! Бына һеҙ ышанмайһығыҙ. Аҡбуҙат ысын **Оскан!** Толпарҙар, дөлдөлдәр тоҡомонан буған бит ул! **Һарайғыр** ана шул нәҫелдән! Сапҡан саҡта бит унын эле лә **Гояңы** сргә тейгән ерендә тейә, теймәгэндә — юҡ! Оскан ı **вкта** уларҙың танау тишектәренэн ут бөркөлөп торған!

Ә ништәп ул хәҙер осмай?

Өйрәтелгәндәр! Емгә әүрәгәндэр! Толпарҙарҙы ла омр.тгкәндәр, емгә эүрәткәндәр, ишү етмәһә алар ерҙә генә **йврөй** торған тарпандар менән ҡан ҡатышҡандар. Ана теге н оүреләр мыһаҡ.

Тарпандар осмағанмы?

Ҡайҙан осһон! һыйыр мыһаҡ, ер хайуандары буған \ **пар.** Ә дөлдөлдәр осҡан, һыуҙа ла йөҙгән! Аттың ите нигә ıı **ңмай?**

Эйе шул: туңмай...

Ту-ты! Што ҡаҙ ите, што йылкыныҡы. Йөҙгән алар! һөйҙәшә лә белгәндәр!

Шыттыра-аң! — инде Мирхәйҙәров Ғәләү менән Вәләүҙең тауышын айырым-асыҡ таныны. Ғәләү — төшөрә торған сгет. Был егетте эсергә өйрәтеп ҡуймаһын шул!

һы! Шыттырам ти мин һиңә! Ат һөйҙәшкән, ир- **цсггэр** кәңәште аттан һораған! Толпарҙар күктән төшкән ГЫлсым эйәһе буған у!

Ә улар нисек... осҡан?

Организмдары шулай эштәгән. Газ булған эстәрендә. Ганах шшектәренән ут юҡҡа бөркөлгән тиһеңме?

— Кит, әй!..

— Бер ҙә кит түге... Ҡустым, һинең эле башың йәш! Ышанмаһаң, эсендән сыҡҡан газға ут төртөп ҡара! Янырмы, янмаҫмы?!

— Ә хәҙер нигә һөйҙәшмәйҙәр?

— Хәҙерме? Кеше яманайҙы. Үҙен күп белгәнгә һанай. Атты тындау түге, ғөмөр буйы шуны егеп йөрөп, бер тапҡыр ҙа аттың күҙенә ҡарамаған әҙәмдәр бар...

— Һин китап яҙ, Хөсәйен.

— Мин китап яҙһам, һарайғырҙы кем ҡарай? Уны хәҙер теләһә кем егә баштай.

— Мин, мин ҡарап торормон! — Ғәләүҙең тауышы апаруҡ ихлас сыҡҡандай булды.

— Һиңә ышанһаң... — Хөсәйендең теш араһынан сыртылдата төкөргәне ишетелде. — Ат араҡы еһен яратмай. Һарайғырҙың, мына, эскән түрәләрҙе ене һөймәй. Ярай әле быныһы төшөрмәй.

Һүҙ үҙе тирәһенә күсә башлағас, Хөсәйенде иҫе китеп тыңлап торған Мирхәйҙәров тамаҡ ҡырҙы:

— Эй! Кем! Хөсәйен! Һин ҡайҙа?!

Лапаҫ башынан Хөсәйендең нисектер аяҙып, баланыҡылай сафланып киткән йөҙө күренде — Мирхәйҙәров был һаҡал-мыйыҡ баҫҡан кешенең күҙҙәренә беренсе тапҡыр яҡындан һәм... яратып ҡараны: былай, матур ғына кеше икән был Хөсәйен!

— Ней, ҡустым, иртән миңә... Таулыға сығырға. Һин... нейҙе... әҙерләп ҡуй инде, ҡустым. — «Һарайғыр» тигән һүҙҙе Мирхәйҙәров юрый әйтмәне. Әйттең — бөттөң: Хөсәйен: «Псим нада һарайғыр!» — тип тоҡана ла китә. Ә ҡыҙҙырмай ғына, ынғайына һыпырып сығып китһәң, нисек кәрәк — шулай эшләп ҡуя, һүҙҙе йыҡмай.

Камалетдинов Мирхәйҙәровты шундуҡ ҡабул итте.

— Килеп яҡшы иткәнһең, — тине ул Азаттың ҡулын ҡыҫҡас. — Юғиһә, иртәгә үҙемдең һеҙҙең яҡҡа сығырға ине иҫәп.

«Ишеткән! — тигән уй йүгерҙе Мирхәйҙәров башынан, — Шулай инде — беҙ ҡапсыҡта ятамы?»

(осеүгә төшкәнһең, ярай... Тик нигә аҙна буйы алты процент?

Ер өлгөрмәгән, батҡын...

Ярай, кипкәнен көтөгөҙ. Тик миңә, — Камалетдинов лсндарын асты. — 1-се майға рапорт бирегеҙ!

Нигә... булыр, — тине Мирхәйҙәров, булмаҫын белһә I Ваҡыт бар әле. Ер кипшенһә... өс смена сәсәбеҙ инде, ОрЛОК бар, етерлек...

Йөҙ һыйырға илле быҙау алдығыҙмы?

Илле тип... нишләйһең... һыйырҙар ҡыҫыр ҡалғас. — \ ташты Мирхәйҙәров: һыйыр быҙаулай ул, тик бына... урсемде һаҡлауы ҡыйын!

Ярай, тиҙҙән вапшы... бер һыйырығыҙ ҙа быҙауламаҫ! Нишләп инде... Ул тиклем...

Ниңә: шулай инде! Берҙән-бер тоҡом үгеҙегеҙгә балта МСНЕН ташланғас!...

Ул бит... Ул бит, Әйүп Ғәзизович, осраҡлы хәл!

Социалистик хужалыҡта осраҡлы хәл булмай! Нимә? < вботажмы был?! Хөкүмәт милкенә ҡул һуҙыусы ҡулға Мындымы?!

Һәй... — Мирхәйҙәров маңлайына тир бәреп сығыуын гоиҙо. — Ней бит ул! Теге Шәңгәрәй алйот...

Алйоттар бөтә ауылда ла бар!

Анлайым. Кем уйлаған. Ҡарауылсы...

Ҡарауылсы кем?

Хашим... һиндә булғаны бар уның. Теге бисәһен бүре ашап ан кеше...

Әптеләхәттең... кайныһы әллә?!

Шул... Мәҙинәнең атаһы.

Аңлашылды. — Камалетдинов бер талайға уйға ҡалды. Ни осон «аңлашылды» тиеүен, дөрөҫөн әйткәндә, ул үҙе лә Щламай. Хәтерләй Әйүп ул кешене. Ғаиләһенең үҙе һуғышта хаҡһыҙға рәнйетелеүен дә белә. Игеҙәк малайҙарының ю.......у ваҡиғаһы ла... Туҡта! Тап шул малайҙар хаҡында ғлғайны түгелме теге... Ихсанбай Моратов тураһындағы Шнкойәттә? Ә бит ул саҡта... бер кем дә Хашимды шик ыҫтына алманы...

Хашим менән... теге алйот тигәнең ниндәй менән ғәбәттә?

— Мөнәсәбәт тип... Шәңгәрәйҙең бит атаһы ҡайтып төштө. Хашим, йәлләптер инде, Шәңгәрәйҙе үҙендә йәшәтте, тамағын ҡараны...

— Хашим... һуғыштан... бер йыл үткәс ҡайттымы әле...

— Эйе... госпиталдән госпиталгә йөрөп... Ул бит, ней, Берлинда харабалар аҫтында ҡалған булған.

— Союзниктар ҡотҡарған. — Камалетдинов тәҙрә эргәһенә барып баҫты. — Ҡара таптарҙы асыҡламай булмаҫтыр. Әптеләхәте бына... Мәҙинә эшкә сыҡтымы?

— Клуб тирәһенә саҡырғайным...

— Ярамай! Ире ҡулға алынған! Әпэт атаһы. Күренгә ебәр!

— Йәш балаһы бар...

— Бала бөтәһендә лә!

Мирхэйҙэровтың күҙ алдына ебәктэй наҙлы бармаҡтар, һөлөктэй һығылмалы һын килде.

— Нимэгә өндәшмәй ултырыуыңды беләм. — Камалетдинов тамаҡ ҡырҙы. — Ауылдан сығып китергә ярамауы хаҡында иҫкәртелдеме Мәҙинә? Фермаға ҡуш. Ә атаһы менән махсус органдар шөғөлләнер.

Мирхәйҙәров сығырға була аяғүрә баҫҡас, Камалетдинов та ҡуҙғалды:

— Ашханаға һуғылдыңмы?

— Тура бында килдем, э нигә?

— Ябыҡ ул... ремонт. Әйҙә минә.

Мирхәйҙәровтың Камалетдиновтарҙа булғаны булһа ла, ҡатыны Мәликәнең: «Ошо ауыл кешеләре әллә ҡайҙан беленә, тиреҫ еҫе зэһәр ахыры, эйәреп килә бит!» — тигәнен иҫенә төшөрөп, баш тартыу яғын ҡайырҙы:

— Ә-юк... Төшкә ни... мин ҡайтып та етәм!

— Ярай, ярай, атың ял итер! Иыһанур ашатып, эсереп ҡуйыр!

— Килен... ни тейер?

— Ул... улар өйҙә юҡ. Ҡыҙ сирле бит. Мэликә әле Мәскәүҙә, ҙур ерҙә дауалатып ҡарамаҡсы... Әйҙә, әйҙә... Сэрбиназ еңгәнең ашын күп ашалды инде!

Мирхэйҙәров, унайһыҙланыуын еңеп, Камалетдинов артынан эйәрҙе, үҙе эсенән: «Детдом балаһы шул. Яңғыҙлыкка өйрәнмәгән. Әҙәм өйөрөндә йөрөү ғәҙәтенә һеңгән», — тигән һығымта яһаны.

I Ішмөхәмәттең үҙенә яусы булып килгәненә лә хәтһеҙ ііякы үтте — Рауза һаман булһа һушына килә алмай. Көтмәгәндә булды был тәҡдим, хатта Рауза һынлы Рауза аптырап ҡалды. Ҡаушаны. Бер уйлаһаң, уны ошолайтып, әҙәмсә итеп, тәүге һоратыуҙары. һоратып кейәүгә сығыу, цөрөҫөн әйткәндә, унын хыялы ине бит инде ул. Ғәриплеккә гәрип инде — нишләйһең? Бөгөнгөһө көндә, тип уйланы ул, Гвртһән ҡаны сыҡмалы ҡыҙҙар ирһерәп яңғыҙ ултыра. Шулай да даланы бар Раузаның: үҙ ғүмерендә өсөнсө ирҙең килеп ИШетен шаҡыуы! Йэ, кемгә элэгә был бэхет? Әллә инде шуға ОСОНОП китеүе булды, әллә инде ни тимэ урында эшләүе I әбәпсе булдымы — Рауза шундуҡ ыңғай яуап бирмәҫкә үҙендә КвС тапты, тукта әле, кем, Ишмөхэмәт мулла, уйлашайыҡ, I кне. Лһ! Шулай инде! һөйләшер-кәңәшер өсөн берәү булһа ла п.имһы бар. Ир бала бит. Әсәһенең ир йорто менән бәйләнешкә ИНеүе намыҫына теймэһен. Хөсәйендең аттан башҡа нәмәлә и це юҡ, тиҙэр ҙә бит ул, анау Сибәғәт менән булған хэлдән Һуң ҡайһылай ҡайғырҙы! Шул ҡайғы касафатынан хатта бер пҙға руссаһын онотоп торҙо! Шуға күрә был юлы ашыҡмаҫка булды Рауза. Ней Хашимдан өмөт өҙөп өлгөрә алмай ҡалды. УНыһы һаман, йәнде көйҙөрөп, яңғыҙ йөрөй. Аҡкош мөхәббәтенә дусар булған йәнәһе берәү! Байғош... Ана шуны уЙлап та: «Ишмөхәмәт, кем, мулла, бы һөйҙэшеүҙе әйҙә көҙгә I и.файыҡ», — тигәйне Рауза. Ә яҙ көндәре болоҡһоу! «Яҙ көнө тапсыҡ та шаяра!» — ти торғайны өләсәһе. Рауза лаһаң гере кеше. Бар кейәүҙэн баш тартып, нишләп әле ул япа-яңғыҙы бүре олоуын тыңлап ятырға тейеш?!

Ошондай уйҙар солғанышында йайлап баҫып лавкаһынан ҡайтып килгәндә Ғәләү тап булды.

Ишеттеңме яңылыҡ, Рауза апай? — тине теге бурысы булғанлыҡтан Раузаға ялағайланып.

Ниндәй яңылыҡ?

Шәңгәрәйҙе Ғифрит һөҙгән! Ғәләмәт яралаған!

Аһ-аһ! Шәңгәрәй ҡайҙа?!

Өйөндә! Хашим ағай өйөнә апарып һалды! Шунан ғәм. Хәле ауыр меҫкендең!

Аһ-аһ!

Ғәләү ары китте, Рауза ары тапанды, бире тапанды — нисек итергә белмэй яфаланды. Бына ҡайһылай ул! Меҫкен Ишмәмәт — үҙе зэғиф, бәндогэ бәндә булып ултыра. Хәҙер Шәңгәрәйе — хоҙай бәндәhe. Бына ҡасан кәрәк ул кеше! Инде килеп Рауза ла баш тартһа, ул ике ғәрипте кем ҡарар? «Ҡуй, барайым... эллэ тағы, — Рауза ярҙам, кәңәш һорағандай, тирә-яғына ҡараны. — Исмаһа, Хөсәйене күренмэй! Ни булһа ла булды инде!»

Рауза, ныҡлы бер ҡарарға килеп, Ишмәмәттең бөрөп ябылған алты мөйөшлө өйөнә атланы.

Бала ла тынсып йоҡлап китте, Мәҙинә лә тигеҙ тын алған кеүек, Хашим ғына йоҡлай алмай түшәгендә борғаланды. Ҡарауылсы булғас, төнө буйы тигәндәй йөрөп сыға, быҙаулай торған һыйырҙар булһа, серем дә итмәй. Шул рәүешле йәшәй торғас, күрәһең, йоҡоһоҙға әйлэнде.

— Йоҡо алмаймы, атый? — Мәҙинә ай яҡтыһында ғәҙәттэгенән ағыраҡ күренгән йөҙөн атаһы яғына борҙо. — Мин дэ... башта мең төрлө уй... — Хашим, тороп ултырып, тәҙрә ҡорғанын күтәрә төштө:

— Ай кәмей башлаған... Мирхэйҙәровты әйтәм... ул ништәп мине ферманан ҡайтарып ебәрҙе икән?

— Әллә индс... үҙе бер нәмә лә әйтмәнеме?

— Әйтмәне шул... сәйер генә күренде. Әллә районда берәй нэмә...

— Шәңгәрәйҙең бәләһең, бәлки, һиңә япһарырға итәләрҙер?

— Үҙем дә шулай һиҙенәм... Мин, ҡыҙым, бирешмәм дэ ул. Күргән баш — түҙгэн баш, тигәндәй. һине йәлдәйем...

Инде Мәҙинә тороп ултырҙы:

— Минең өсөн дә бөтөрөнмә. Минең күрәсәкте барыбер һин күрә алмайһың.

— Шулай ҙа бит ул... Матур гөлдәрҙең сәнескеһе була... шуны абайлағаның бармы?

- Әллә... әй... эйе шул!

Ә һинеке юк. Бына бит ул нисек: болонда мең төрлө I **эскә** үҫә, ә бәндәнең күҙе ҡыҙылға төшә, иң алда шуны **вҙөргә** ынтыла...

Мәҙинә байтаҡ ҡына тын ултырҙы, Хашим да уйға **сумды.**

Нимэ, атый, эллэ һин мине бөтөнләй бешмәгән, **йьуаш** тиһеңме?

- Тимәйем. Эш һиндә түгел. Минә ҡалһа, Хоҙай ҡатын-**кьвҙьщ** зәһәр матурын ирҙәрҙәге кешелек миҡдарын үлсәү **өсөн** ебәрә. Үкенескэ ҡаршы, беҙ, ирҙәр, бөтәбеҙ ҙә ул **Ьынауҙы** «бишле»гә үтә алмайбыҙ...

- Үҙенде лә шулар рэтенә... — Мәҙинә һорауҙы туранан-**гура** ҡуйырға кыймай, баҙап ҡалды.

- Мин дә алыҫ китмәгэн инде. Эй Мәҙинә! Әсәйең дә **Һылыу** булды бит. Уны бит мин дә... көслөк менән алдым. Башкалар өҙөп ҡуймаҫ борон үҙем өҙә һалайым тигән кеүек...

— Яратып алманыңмы ни?

Хашим көрһөндө, яланаяҡ иҙәнгэ баҫып, усаҡтың иүшкеһен асты, тәмәке тоҡандырҙы:

Яратыу һуңыраҡ килде... Гөлбаныуҙы юғалтыу **сигендә** торғанда аңланым мин яратканымды. Уны минэ... Фәүзиә карсыҡ төшөндөрҙө.

Фәүзиэ инәй?!

Эй ҡыҙым... булды инде. Башта, яратыуымды аңпағас ги тойғоларымдың, һөйөүемдең ҡоло булғым килмәне. **Иөшәүем** мәғәнәһенең Гөлбаныуҙың һәр хәрәкәтенән, **уйланыуынан,** көлөүенән, моңайыуынан тороуын таныу еңел • шрслмәне. Эстем. Башымды иҫәргә һалдым. **Аҙаҡ,** һуғышта, **М ЭЙен**ә булған һөйөүем йәнемде һаҡланы. Үлем кисеп йөрөп Гв иҫән ҡайттым. Гөлбаныуымды, балаларымды күрмәй **китергә** тейеш түгел инем мин!..

Үткәндәр менән генэ йәшәп булмай, атай... һин әле... **ООЛКИ...**

Эй ҡыҙым... гөлдәрҙең гөлөн, сәскәләрҙең сәскәһен **Кулда** тотоп, еҫен еҫкәп ҡарағандан һуң... Юҡ!.. — Тағы бер **цлайға** тынып ҡалдылар. һәр кем үҙ уйына бирелде. < Әптеләхәт тә Мэҙинәгэ... матур булған өсөн генә өйләнгәндер I ' Юк! Әптеләхәт яратты Мәҙинәне! Мәҙинәгә арнап **|ырҙар** яҙҙы, йәй көндәре болон-ҡырҙарға сыҡҡан

саҡтарында бала шикелле гел күтәреп йөрөтөр ине. Ауыр һүҙ әйтмәне...

Башта Хашим телгә килде:

— Шуға ҡыҙғанам һине... һылыулығың арҡаһында яҙмыш һине бер утҡа, бер һыуға һалыр... Ирҙәр бит шундай: аты яҡшы, бисәһе һылыу булһын... Өҫтәүенә йырсыһың, монлоһоң...

— Моңло кеше бәхетһеҙ була, ти торғайны әсәйем...

Унының шулайҙыр ҙа, тик бит... йырһыҙ ҙа булмай йәшәп! Бәндә бит күңеленә дауаны ла шул йырҙан ала. Йөрәк менән күтәрергә тура килгән ауырлыҡтарҙы йыр менән еңеп сыға. Шуға күрә, ҡыҙым, һин йырҙан үҙенде тыйма. Ҡасан күңеленә йыр килә — йырла ла ебәр. Йырҙың аның йыртығы юҡ...

— Уҡып булманы!

Хашим, йүшкене ябып, кире урынына барып ятты. Былай итеп, асылып, күптән һөйләшкәне юҡ ине ҡыҙы менән. Күңеле һилләнеп, ҡайһылай рәхәт булып ҡалды!

— Унынына ла ҡайғырма. Әҙәмде моңло иткән сәхнә түгел — тәбиғәт.

— Унының шулай инде... — Бала уянып мыжый башланы. Мәҙинә тороп сабыйын ҡулына алды, йүргәген алыштырҙы. Имеп туйған бала әсәһенең күкрәк моңона иҙерәп, йәнә йоҡлап китте:

Йокла, балам, йом күҙең,
Йом-йом күҙең, күҙ нурым.
***Кистән** покоң кала ла —*
Илап утэ көндөҙөң...
***Әли-бэли** көйләрмен,*
Әкиэттәр һөйләрмен.
Һиңә теләк телэрмен —
Бәхетле бул тиәрмен...

Хашимды ла ойотто бишек йыры. Имештер, бал ҡорттары геүләп, сәскәләре шыбырлашып, шишмәһе сылтыраған ерҙә ял итергә туҡтаған. Бейектә — күҙ күреме етмәҫ ерҙә — һабантурғай сырлай. Хашимдың шул һабантурғай сынын ишеткеһе килә, ә күҙҙәре йомолғандан-йомола, рәшәһе дерелдәп торған йылы тупраҡ уны үҙенә торған һайын ныҡыраҡ тарта...

Мәҙинә менән Хашим иртәнге сэйгә ултырған ғына **инслэр,** тәҙрәнән Маһинур күршеләренең елпелдәп инеп кип лие күренде.

Иртәләгән күрше...

Мәҙинә ни ҙә булһа әйтергә өлгөрмәне — Маһинур **ишскте** асып та ебәрҙе. Хашим, шылып, күршеһенә урын ҡ шатты.

- Әйҙә, күрше, иртәнге хәйерле ризыҡтан ауыҙ ит.

Уй! Мин бит... — Маһинур яулыҡ осо менән йөҙөн **Кйпланы.** — Апағыҙ... тормайсы!

Апа?! Тормай?! — Ырғып торған Мәҙинәне Хашим тынысландырырға тырышты:

Тукта! Тынысланығыҙ! — Ул тороп аяғына кейҙе. — Һин **өйҙә** бул, Мәҙинә, имеҙеүле кешегә... ярамай!

Лтаһы менән Маһинур күршеһе сығып киткәс, күп тә **гормай,** был яҡҡа табан халыҡ эркелә башланы. Ул арала иом, көрэк тотҡан кешеләрҙең зыяратҡа киткәне күренде.

Апа үлгән! Кисә генә йөрөй ине!

Лна, унын атаһы ла китте зыяратҡа! Атаһы мәйет **>ргәһенә** барыуҙан тыйҙысы Мәҙинәне... Уф! Күршеһе, ярай, үҙе **инеп** килә.

Мәҙинә! Апаң китеп барҙы бит, Мәҙинә! — Маһинурҙың йоҡа ғына кәүҙәһен ҡосаҡлап, Мәҙинә лә **Кушылып** илай. Өнһөҙ-тынһыҙ, күҙҙәре менән генә көлөп йәшәгән бэлэкәй генә был ҡарт донъяның бер ҡото, унын ы исемлы бер мөйөшө кеүек ине бит!

Һиңә генә ҡарап ҡалдым инде, — Маһинур, яулыҡ осо мгпли күҙҙәрен һөртөп, ширҙеккә ултырҙы. — Ҡәбер ҡаҙып ҡайтыуҙарына аш өлгөртәйем. Һин һалма йәйеп ҡырҡ.

Һеҙгә барайыммы?

Юҡ! Атаң әйтте бит. Тыңца. Йәш имсәкте кешегә **Мәйет** сыҡҡан өйҙә... Юҡ! Юҡ! Балаң йәш — ярамай! Ошонда ғына агҡарыш. Мин ни ике арала йүгереп йөрөрмөн. Йә, ярай, он әбиндем, йоморҡтаһы ла бар. Ништәйһең, үлгән **•ртынан** үлеп булмай. Меҫкенем! Йома көн үтте бахырым. Үҙе **бср** әүлиә ине бит апаң! Ергә лә яҡшы кәрәк ти бит ул...

Күршеһе сығыу менән Мәҙинә, алъяпҡысын бәйләп, **ииалык** ҡамыр баҫырға кереште. Әсәһе: «Баҫҡан ҡамырың **булһа,** ҡаҙанда һалмаң тере көйө йөрөр, иҙелмәҫ!» — ти

торғайны. Тырыша Мәҙинә. һәр эште эсәһе өйрәткәнсә еренә еткереп башҡара. «Атаҡ! - - Мәҙинә үрелеп тәҙрәгә ҡараны. — Милициясы?! Улар бында...»

— Мөмкинме? Хашим... ошонда йәшәйме?

Уҡлауын тоткан килеш Мәҙинә инеүселәргә төбәлде:

— Ошонда...

Мәҙинәне күргәс, икенсеһе, арттараҡ ингән йәшерәге, иҫәнләшеп үтеүҙе кәрәк тапкандай, тамаҡ ҡырҙы:

— һаумыһығыҙ тинекме шул?

Мәҙинә ниңәлер алъяпкысын сисә башланы:

— Сәләм алдыҡ. Беҙҙә... йомошоғоҙ бар инеме?

— Ә һеҙ Хашимдың... кеме?

— Ҡыҙы.

— Ә атайың...

— Ул зыяратта...

— Туйыс, нисек... зыяратта?

— Күрше үлде. Ерләйҙәр.

— Ә-ә...

— Ҡарындаш, атайығыҙ ҡайтканс... һиңә бер-ике һорау бирһәк...

— Хет бишге бирегеҙ...

Олораҡ милиционер урындыҡ ширлегенә ултырҙы. Мәҙинә йәйгән йәймәләрен шылдыра башланы:

— Протокол яҙырға... өҫтәл кәрәктер бит инде?

Мәҙинәнең ҡаушамауы, хәлде тиҙ баһалауы килеүселәрҙе аптырата төштө, шикелле, өлкәне шул арала «һеҙ»гә күсте:

— һеҙ... атайығыҙ, туйыс Хашим менән генә йәшәйһегеҙме?

Мәҙинә аңланы. Артабан биреләсәк һорауҙар сылбырын да — барыһын да төшөндө. Әммә тиҙҙән ҡәбер ҡаҙыусылар ҡайтасаҡ, ашты ла өлгөртөргә кәрәк. Ул йәһәт кенә һалма тактаһын урындыҡка күсерҙе: һалма ла киҫер, яуап та бирер.

һорау ҡустылары үлеменә килеп еткәс, Мәҙинә аптырабыраҡ ҡалды: теге сандали менән фуражканы... Әйтергәме, юҡмы? Әйтергә кәрәктер, бәлки, быларҙа малайҙар тураһында ниндәй ҙә булһа мәғлүмәт барҙыр...

Шәңгәрәйгә ҡарата һорауҙар башланғас, Мәҙинә борсола төштө: атаһының ферманан эштән сығарылыуы, әле бына былары...

— Шәңгәрәй атайыма кем булһын? Бер кем дә түгел. Тик... беҙҙең атай шундай кеше бит инде ул...

Пиндәй?

Нимә тип әйтәйем: йыуашмы шунда... йәллэй горғанмы...

Быны һеҙ ҡыҙы булараҡ әйтеүегеҙ.

Ҡыҙы булған өсөн дә беләм инде. Белгәнгә әйтәм.

Әсәйегеҙ менән... татыу торҙомо атайығыҙ?

Ә уныһы ниңә кәрәк?

Беҙгә бөтәһе лә кәрәк.

- Әсәйемдең... үлгәненә ҡасан...

Атайығыҙ... фронтка ҡасан китте, хәтерләйһегеҙме?

Ул турала мәғлүмәттәрҙе, моғайын, военкомат •нынырак бирер. Ә! Ана, атай үҙе лә ҡайтып килә!

Хашим хәлде килеп инеү менән төшөндө:

Ҡыҙым, апаң ысын донъяға барып ятты. Тупрағы момшаҡ булды. һеҙ... миңәме?

Олорағы Хашимдың баҙап калмауын оҡшатты булһа кәрәк:

Күренеп тора: донъя күргән кеше!

Хашим, аяҡ кейемен сисеп, ултырғыска, тегеләр Мфшыһына, иплэп ултырып алды:

– Донъяны ни тиклем күрһәң дә ҡыҙыңы бөтмәй. Бәндә иәшәүенең, күрәһең, асылы шулдыр.

Хашим милиционерҙарға күҙ йөрөттө: йәшенең күҙ — Мәҙинәлә. Бахырың ауыҙын асҡан да ябырға оноткан. Хашим Гүҙмәне, мәрәкәләп алырға булды:

– Ауыҙыңа... турғай инеп китә бит, ҡустым!

Егет, матур төш күреп яткан еренән уянған кеүек, һиҫкәнеп, аяғүрә баҫты:

Турғай! Так точно! Турғай...

Барыһы ла еңелсә көлөштөләр. Олорағы, юлдашы өсөн ... ғандай, андатма бирергә ашыкты:

Егет армиянан яңыраҡ, үткән аҙнала ғына...

Күренеп тора. — Хашим, етдиләнеп, быларға ҡараны. һөйләшеүҙе... урын-еренә барғансы кисектермәйекме? Бында ни... өй бәләкәй, йәш бала...

Хашимдың үҙен ашыҡмай, баҙамай, ирҙәрсә тотоуы Щгеләрҙең дә артабанғы ҡылығына, үҙҙәрен тотошона ,и эреш индермәй ҡалманы.

Беҙгә ни... барыбер. Тик ашығырға ине...

— Мин — хәҙер. Мәҙинә, миңә алмаш кейем кәрәк булыр. Утының етерлек, һыйыр быҙаулаһа, үҙең беләһең, тәрбиәләрһең.

— Атый!

Хашим, сәңгелдәк шаршауын асып, бәләкәскә ҡараны:

һөйләштек! Минең ейәнем асы йәш түгел, аҡ һөт имергә тейеш! Биктимер менән Йәнтимерҙең йәш имгәне лә етәр! Ә миңә, ҡарт ағасҡа, ҡасан ауһам да барыбер. Ҡурпылы ағас ҡайғырмаҫ. Киттекме, егеттәр?

Биштәр аҫҡан атаһын урам тышына сығып оҙатып ҡалды Мәҙинэ. Әптеләхәтенең ошо рэүешле китеүен кисермәгән булһа, нисек түҙер ине Мәҙинә йөрәге?!

— Атый!

— һөйләштек!

Арбаһына өс ир тейәгән туры ат оло юл менэн ауылдан сығып китте.

Аңҡы-тиңке килеп йөрөй торғас, Күкбүре Уҙамандың һөйәктәре ятҡан Күктау һыртына килеп сыҡты. Ҡаяташҡа баҫып, Олоғыр яғын күҙәтте. Ул үҫкән ауыл шул яҡта. Бынан уның өйҙәре ҡарағусҡыл бер ятыу ғына булып күренэ. Күкбүре олоуға оҡшаш тауыш сығарҙы ла ҡояшҡа йылынған ҡайраҡташҡа башын һалды. Күп барҙы Күкбүре ауыл яғына, үҫкән нигеҙендә лә булды. Унан көйөк еҫе килә. Үҙе тамаҡлаған малайҙар үлегенә лә һуғылды. Күпме йөрөһә лә ауыл малына зыян ҡылманы, тик бер барыуында һыу буйында йөрөгән бер ҡаҙ менән асығыуын баҫып китте. Әле лә ул ас. Иртән иртүк бер ҡуян балаһы менән тамаҡ ялғағайны, уныһы ни, оҙон теленэн үтеп, кесеһенә барып та етмәне. Уҙаман юҡ. Ул булғанда тамаҡҡа ҡытлыҡ кисермәне Күкбүре. Хәҙер уларҙың биләмәләре лә көндән-көн тарая. Аҡмаңлай хужа уларға. Атаһына оҡшамаған — малай ҡаты. Хәҙер инде Күкбүрегә ошо Күктау һырты ҡалды. Нишләмәк кәрәк: көслөнөкө — замана. Күкбүре урманға килгән йылды йәрһеҙ ҡалған бер кәнтәй бүре ҡаңғырып йөрөгәйне. Йөрөй торғас, зиһененә әллә ни булды: көндәр буйы тиктомалға олоп ултырҙы-ултырҙы ла, олоп ултырған килеш йән бирҙе.

Ауырға тура киләсәк Күкбүрегә лә йән аҫырауы. Когоүлеккә һөжүм итә алмай — көтөүсенэн ҡурҡа. Етмәһә ул шул һарыҡ-кәзәләр менән бер аҙбар аҫтында үҫте. Уҙаман аптырамай ине. Ул юҡ, хатта һөйәктэрен үлән ҡапланы.

Күкбүре тороп кисеү буйына төштө: һалҡынса һыу эсһә, **болки,** асығыуы ла баҫылыр... Сэскәле оҙон үлән, селеклек араһынан үткәндэ Күкбүренең моронона ғәжәп таныш еҫ **бөрелде.** Осраҡлы хэл булдымы был тип ары еҫкәнде Күкбүре, бире еҫкэнде... Юҡ, еҫ йәнә ҡабатланды. Ә бынау өҙөлгән үлән тотошлайы менән шул еҫтэн тора! «Күкбүре!»

еҫ артынса **үҙен** яратып өндәшкән тауыш салынғандай **булды** уның ҡолағына. Күкбүре, яңынан сабый сағына клмгкандай, көсөккә әйләнгәндэй, шыңшыны. Шул наҙлы **Гвуыш,** тэмле еҫ эйәһен тиҙерәк таптыһы килде. Үләндәр араһында сыбалып-сыуалып йөрөгән таныш еҫ бер **аҙҙан** оҙон **бср** һукмаҡ буйлап китте. Күкбүре тамһынып-шашынып шул вҫ буйлап китте...

Үлән йыйырға сыҡкан өс көнлөк сәфәренән Фэүзиә талсығып ҡайтты. Эте Ҡарабаш уны йылға башына килеп үк ҡаршы алды. Һағыныуын бер-ике һырпаланыу менән **бвлдергәс,** үлэн тултырылған тоҡсайҙы тешенэ эләктереп, һукмаҡ буйлап өйөнә атлыҡты.

Өйҙә лэ бөтәһе лә тәртиптә. Тауыҡтары байтаҡ йомортҡа ha ;ш, ҡарт тауығы Сыбарҡай баҫырға ултырған. Баҡыр **Вүҙҙәрен** ялтыратып, өс йәйҙәүес бәрәсе менән кәзәһе лә **Циеҙ** буйында керт-керт «һағыҙ» сәйнәп ята.

Өйөн бикләп йөрөмәй ул — Ҡарабашҡа тапшырған. I 1рабаш бәғзе әҙәмде һис бер тоткарлыҡһыҙ үткэрә. **Кужабикә** өйҙә булмағанда ғына килгән бер кешегә ырылдап, **ИНСрә** ярамағанды иҫкәртә. Асыҡһа асыға, мәгәр нәмәгә **Ороимай** был эт. Фәүзиә уның килеп инеүен дә, үҙенә хеҙмәт **ИТеүен** дә Хоҙайҙың бер ярҙамы тип уйлай. Барыһын да анлай **уск** Карабаш — һөйләшергә телгенәһе юҡ меҫкенден...

)гснә аш ҡойғас, Фәүзиэ баҡырсаһын яңынан ҡайнатып I ығарҙы, йыйған үләндәрен тағатып, күләгәгә йәйеп һалғас, ирсауын баҫыр өсөн тәмлэп сәй эсергә әҙерләнде.

Уңышлы йөрөнө Фәүзиә. Үләндәрҙең бит ҡайһынының йоҡола сағында, бәғзеһен ысыҡ кипкәс йыяһың. Фәүзиә уларҙы йолҡа һалып моҡсайына тыҡмай, үҫемлектән рөхсәт һорай, татран-доғаһын әйтә, өҙгәс тағы рәхмәтен әйтергә онотмай. Өләсәһе лэ шулай йыйҙы үлэнде. Фәүзиә уның һүҙҙәрен, һәр хәрәкәтен хәтерлэй.

«Бер генэ үлән дэ, — ти торғайны мәрхүмә, — уҫал уй менән өҙөлмәһен. Шул саҡта ғына ул бәндэгә сихәт була». Фәүзиә өләсәһенең васыятын гел иҫендә тотто, мәгәр үҙ ғүмерендә бер тапҡыр Хоҙайҙың ошо дауа-ниғмәтен бәндә ғүмерен ҡыйыу өсөн файҙаланды. Ах, Диңгеҙхан! Диңгеҙхан-Сибәғәт! Кешенең Хоҙай биргән исемен алмаштырыуҙан килэме әллә былдай бешэлкәһеҙлек?! Улай тиһәң, үҙе лэ бит инде күптән Барсынбикә түгел. Мәүлә был заманды бәндәләрен һынамаҡҡа ебәрҙеме, әллә бәндә үҙе Хоҙай эшенә аяу-аҡыл белмәй ҡыҫылдымы?!

Баҡырса ҡайнап сыҡты. Фәүзиә ҡайнар һыуға ҡарағат, еләк, бөрлөгән япрағы төшөрҙө. Ошо үләндәр уның арыуын аласаҡ, еләк япрағы юғалған ғәйрәтен ҡайтарасаҡ. Ашын ашап бөткән эте лә Фәүзиәгә ҡаршы һыҙылды: йәнәһе ул да сәй эсэ. Һөйләшә-сөкөрләшә эсәләр...

Ҡапҡа асылғандай булғас, Фәүзиә үрелеп килеүсегә ҡараны. Янғандан һуң мөсһөҙләнгән күҙе алыҫтан күрмәгәс, кире урынына ултырҙы. Эт сыйнап ҡуйҙы, лэкин өрөп ҡаршы сыҡманы.

— Инәй, мөмкинме һеҙгә?

— Ҡайҙан киләһең?

— Тирәкленән. — Ҡатын иплэп кенә табынға яҡынланы. — Май-ҡаймағым, ҡоротом бар.

— Өйҙән үҙеңә сынаяҡ, ҡалаҡ алып сыҡ. — Фәүзиә арыған аяҡтарын иркенләберәк һуҙҙы, йәнәнә үтеп һыҙлаған һул аяғын салауат әйтеп өшкөрөп алды. Ул арала йәш ҡатын сынаяғын батмусҡа ҡуйҙы:

— Сарсап килгәйнем, шәп булды лаһаң!

— Тирәкленән тиһең инде?

— Эйе...

— Һауынсыһың әллә?

— Эйе! Ә ҡайҙан белдең, инәй?

Фәүзиә көлөмһөрәне:

Күмәк һыйырҙың ҡаймаҡ-майының таты үҙенә бер 1>;ипка була. һауынсы булып, эллә шуны ла белмәйһең?

— Атаҡ ! Әлләсе...

— Исемең кем?

— Ғәлимә.

— Ғэлимэ?!

— Әллэ.. беләһең, инәй?

- Юҡ! — Фәүзиә һыуына башлаған сэйенә баҡырсанан ιҫе һыу өҫтэне. — Ҡайҙан беләйем! Килгән-киткән кешенән **ишетәм** хәбәрҙәрҙе. Таныштар ҙа бар. Хашим... ни хәлдә?

- Уй! — Ғәлимэ эскән сэйенә сәсәй яҙҙы. — Уны ҡулға **алдылар!**

— Ҡулға?! Ни өсөн?!

- Бушҡа ғына! Шәңгәрәй тигән иҫәр бер нэмэҫтә өсөн. **Гөрлө** хәбәр йөрөй ауылда. Ишмәмәт көтмәгәндә ҡайтып гөштө. Теге саҡ ауылдан ике игеҙәктең юғалғанын мшеткәнһегеҙҙер? Ана шулар Ихсанбай тигән берәүҙән **булған,** имеш, Хашим, һуғыштан ҡайтҡас, тегеләрҙе юҡ **иткән,** тигән дә хәбәр таралды. Рауза тигән ҡатын, һатыусы **Һөйҙәй.** Шул Рауза Ишмәмәткә кейәүгә сыҡты. Әллә Пшмәмәттән, әллэ Раузанан сыҡҡан хәбәр...

Фәүзиәнең был хәбәрҙәрҙе сәй түгел, ут йотоп тыңлағаны иимына ла килмәгән Ғәлимә һаман тәтелдәүен белде:

Ҡыҙыҡ ул беҙҙең ауыл! Мәҙинә тигән берәү бар. Ну **минен** кеүек йәштә. Әхирәт инде ул. Әллә кем булып, **районда**н килгән түрәгә кейэүгэ сығып, Мәскәүгә сығып **киткәйне** — ҡайтты! Ҡайтмай ҡайҙа барһын? Эт тә ашаған **ерено** кире ҡайта...

- Мәскәүҙән... Ә нигә ҡайтҡан?

Кейәүен ҡулға алғандар! Ҙур кешегә сыҡтым тип **уйҙағандыр...** Ҙур кеше тип тормағандар!

- Бэлэ-ҡаза ағас башынан йөрөмәй, — Фәүзиэ, эсенэн **КЯра** янып ултырһа ла, үҙен тоторға тырышты. — Миндә... **Иин**дәй йомошоң?

Шуны ғына көткәндэй, Ғәлимә алсаҡланып китте:

Уф инәй! Мин бит алдынғы һауынсы! Кәртишкәгә ннпорөп, райком алдына ҡуйҙылар рәсемемде.

Ярай, бик һәйбәт...

һәйбәт ине лә ул. Ана шул Мәскәүҙән ҡайтҡан эшкә фермаға ҡушһалар, миңә...

— һинең һыйырҙарынды уға бирмәҫтәр шәй...

- Минец һыйырҙарҙы?! Уға?! — Ғәлимә һауынсыларға хас ҡыҙарған, тупаҫланған баш бармағын ике бармағы эсенә сумырҙы. — Бына!

— Ә нигә борсолаһың? Кем дә булһа, ҡайҙа булһа ла эшләргә тейеш.

— Эшләһен! Түлке фермала түгел!

— Аңламайымсы...

— Ну, инәй, шул Мәҙинә төҫкә теге ни... сибәр! Уға ғашиҡ булыу өсөн ир-аттың бер күҙ һалыуы етә!

— Шунан?

— Шунан ни шул: любой завферма унан алдынғы яһаясаҡ! Завферма яһамаһа, район түрәләре! Депутат итәсәктәр, орден бирәсәктәр... — Ғәлимә, көлдәк итәген ҡайырып, йәшкәҙәгән күҙҙәрен, емшегән танауын һөрттө. — һин, инәй, нокот бул әле: Мәҙинә киләме фермаға, юкмы...

— Тағы?

— Тағы... Һинән йәшергәнде эт ашаһын, инәй. Саяф... Завферма миңә яратам да яратам, бисэмде айырам, һине алам, ти... Шу ысын мине алыр микэн?

Фәүзиә ҡойондай урғылған, өйөрөлгән уйҙар ҡамауында өндәшмәй ултыра бирҙе. Усаҡ аҫтында ут та һүрелде, баҡырсаның ҡапкасы ла күптән инде дерелдәмәй. Ҡарсыктың ауыҙынан өн-ауаз сыкмауы Ғәлимәне лә борсолдора башланы — ҡайтып етергә кәрәк бит Тирәклегә!

— Инәй... мин китәйем инде...

— Ә! Кит, кит... һин, ҡыҙым, кеше юлына кәртә ҡорғансы, берҙән-бер баландын һаулығын уйла!

— Ә минең... балам барын ҡайҙан...

Фәүзиә әйләнеп уға күҙ һирпте:

— Балаң барын беләм, баландың атаһының исемен дөрөҫ яҙҙырмағанынды ла беләм. Бала үҙ атаһының исемен... йөрөтөргә тейеш!

— Ah-ah! Инде мин ҡалайтайым?!

— Уныһын үҙең ҡара. Кайғы юкта хәсрәт эҙләп сабыуыллап йөрөгәнсе ана шуны уйла.

— Хуш... инәй...

— Хуш...

Ғәлимә киткәс Фәүзиә көс-хәл менән урынынан торҙо. Шул, шул: юл түгел, ғәм арыта бәндәне. Өйгә инеп, бәләкәс

цыып торайым тип бер-ике аҙым яһауы булды, Ҡарабаш, чмлм ырылдап, ҡапкаға ташланды.

Себә! Юкты!

Капка артында ла шундай ук уҫал ырылдау ишетелде.

Был кемдең эте? Себә! Атак... Был... Һин бит... үкбүре!

Шуны ғына көткән йәнлек хайуан ихласлығы менән Фөүзиәгә ташланды. Ҡарсыктың битен, ҡулдарын ялап бөттө, берсә сыйнаны, берсә ергә ятып шыуышты...

һин! Күкбүре! Кит, алмаша!

Үзен генә түгел, Тирәклелә үткән тормошоноң елен килтергән Күкбүре менән осрашыуҙан илауҙы күптән ОНоткан күҙҙәренән, ярылған ирендәрен әсеттереп, йәш акты. Фвүзиә, этенең башын шаукал ҡулдары менән ҡыҫып, күҙҙәренә ҡараны. Ғәжәп: ошондай ук йэштор йыртҡыс күҙҙәренән дә тәгәрәй ине...

Камалетдинов, Лидия Николаевна ингәс, ручкаһын Ьондо:

Үткән килгәндә ҡалдырғанһығыҙ...

Рәхмәт! Мин уны тапмай... — Ҡатындың талсыккан П ш ҡарашының беренсе тапкыр йылыныуын күрҙе Әйүп. — Мимең өсөн бик иҫтәлекле ручка ул.

Шулайҙыр. Ғәжәп: һеҙҙең ручканы ҡулыма алғас, Миндә лә әллә ҡасанғы хәтирәләр яңырҙы.

Ниндәй, сер булмаһа?..

Мәҫәлән, ғаиләлә мин... берҙән-бер бала булмағанмын. Һсцлем бар ине минең...

Ғәжэп шул! Ошоға тиклем хәтерләмәй инегеҙме?

Юк! — Әйүп тороп ишекле-түрле йөрөнө. — Минең грғон-кургәндәр баланың түгел, оло кешенең иҫен Юйырлык ине бит.

Тимэк, ҡәләм... һеҙҙең аҫкы анды хәрәкәткә псргән... Ул һеҙгә шул кимәлдә йоғонто яһаған...

Табиптар телен мин төшөнөп етмәйем, әлбиттә, ә бына... архивка һорау ебәрҙем, ниндәй яуап килер...

Ә һеҙ миңә ниндәй йомош менән, иптәш Башкирцева? рйткондәй, ҡыҙык фамилия. Гел һорармын тием дә...

— Йомош бик ҡатмарлы түгел: психбольницаға насар сифатлы ризыҡ килтерәләр. Ә фамилияға килгәндә, балалар йортонда биргәндәр уны. Ниңә икәнен аныҡ әйтә алмайым. Бәлки, быға минең ярайһы уҡ ҡарағусҡыл тәнле булыуым булышлыҡ иткәндер, ә бәлки, фамилиямда ниндәй милләт вәкиленән булыуымды «мәңгеләштерергә» иткәндәрҙер...

— һеҙ ҙә, тимәк...

— Эйе, мин дә шунан — балалар йортонан. Ете йәшкә еткәс, шәфҡәт туташы булып эшләгән Анастасия Петровна үҙҙәренә алып ҡайтты. Уҡытты. Һуғышҡа тиклем үк институт бөтөрҙөм. Тик, фронттан ҡайтҡас, үҙҙәрен таба алманым. Ленинград блокадаһында... ғөмүмән, туғандар ҡәберлегендә сәскәләр шәлкеме генә ҡалдырып киттем...

— Бына нисек... — Камалетдинов ни әйтергә белмәне. Кешенең күңелен һөйләшмәй тороп аңлап булмай шул. — Ингеләп йөрөгөҙ, Лидия Николаевна!

Ҡатын һүрән генә йылмайҙы:

— Мин былай ҙа һеҙҙе бихисап йомоштарым менән ҡаңғыртып бөтәм.

— Йомош менән генә түгел... Беҙ бит... полкташтар.

— Уныһы шулай... — Китергә тип ишек тотҡаһына үрелгән табибәне Әйүптең үҙенә төбәлеп ҡарап тороуы туктатты. — Берәй... һорауығыҙ бар инеме әллә, Әйүп Ғәзизович?

— Нимә тиһәм дөрөҫөрәк булыр икән? — Камалетдинов тәҙрә эргәһенә килеп үҙҙәренең йорто яғына ҡараны. — Беҙҙең хәлде... ишеткәнһегеҙҙер?

— Ниндәй... хәлде?

— Ҡыҙыҡай... Флорида йоҡламай бит. Әсәһе Мәскәүҙә врачтарға күрһәткән. Ауырыу тапмағандар.

— Медицинала ундай хәлдәр теркәлгән. Сәбәбен белмәйҙәр. Шуны ғына кәңәш итә алам: сабыйҙың организмын дарыу менән ҡаҡшатмағанығыҙ яҡшы булыр ине. Был хәлдең үҙенән-үҙе үтеп китеүе лә бар... Флориданы күргәнем бар. Матур бала.

— Рәхмәт.

Лидия Николаевна ишекте асты, ыҡсым, килешле кәүҙәһен тура тотоп, башын ғына борҙо.

— Хушығыҙ!

— Осрашҡанға тиклем!

Флориданың яҙмышы менән көндән-көн ныҡлап борсола **башлаған** Әйүп сараһыҙлыҡ ҡоршауының ҡыҫылғандан-**ҡыҫыла** барыуын тойҙо. Кемдер әкрен генә ишекте асты. Пыйыштырыусы ҡатын икән — Гөлмәрйәм инәй.

— Уй! Һеҙҙе юҡ икән тип...

— Ин, ин!

- Яҙ көнө бысраҡ, көнөнә ике һөртмәһәм...

— Ин тием бит, һөрт.

Түрәләрҙең бәғзеһе эштәп утырғандарында иҙән һоргкәнде яратмай... Килен Мәскәү киткән тиҙәр ине, **ҡайттымы?**

— Ҡайтты...

- Шуны әйтәм әле, ҡустым, әллә нимәштәп һәҙер кеше **балнис** ти ҙә сабыуыллай, шитай, беҙ үҙебеҙ балнисһыҙ үҫтек.

— Ауырымағанһығыҙҙыр...

— Берәүгә лә тимер үҙәк ҡуйылмаған. Элек бит шәп **баҡшылар,** муллалар булды. Шулар доғалыҡтар өшкөрөп **бирҙе,** шифаяттар иҙеп эсерҙеләр. Ана беҙҙең Таулыла ла бар **бер** ҡарсыҡ. Ул ни әллә ниндәй ауырыуҙарындан һлуыҡтырыр! Апарығыҙ шуға!

— Партийный башым менәнме?

Иҙәнде һөртә һалып сығып барған еренән Гөлмәрйәм **кире** боролдо:

Абруй һаҡтап ултырһаң, ҡустым, баланан ҡолаҡ **ҡағағыҙ** инде. Ҡатының... килен дә йәш түгә. Тағы бала **габырҙыҡмы,** түгелме әле ишеү... Ярай, биғәйбә, Әйүп ҡустым! Мин ни, ҡарт кеше, дөрөҫөн әйтәм дә ҡуям!

— Рәхмәт, апай...

Гөлмәрйәмдең тупһыҙыраҡ ҡылығына йәне көйә бирел **ҡуйһа** ла, икенсе яҡтан Камалетдиновҡа еңелерәк булып **ҡалды:** бәлки, уның һүҙҙәрендә дөрөҫлөк бөтөнләй юҡ түгелдер?..

Хашим Таулыла фермала килеп сыҡҡан ваҡиға буйынса Һорашырҙар ҙа ҡайтарырҙар, тип уйлағайны, ләкин хәл ул үмшкандан ҡатмарлыраҡ булып сыҡты. Ғифрит мәсьәләһенә **Биктимер** менән Йәнтимер үлеме килеп ҡушылды. **Кашимдың** үҙен тикшереү аҫтында тороусылар эргәһенә **бикләнеләр.** Хашим, ҡасан һорау алһалар ҙа, нисек бар,

шулай һөйләне. Тикшереүсе, Әлимов, өлкән генә йәштәрҙәге мыйыҡлы ир, һорауҙы күберәк шул малайҙар тирәһендә ҡуйыртырға тырышты:

— Юғалған ике малайҙың, туйыс Йәнтимер менән Биктимерҙең, һеҙ кеме булаһығыҙ инде?

— Нисек кеме? Атаһы.

— Фронтка китеү көнөгөҙ? Так, так... малайҙар граждандарҙың тыуыу актына һеҙ фронтка алынғандан һуң ун, эйе, ун ай үткәс теркәлгән... Был хәл һеҙгә мәғлүмме?

— Мәғлүм.

— Был хәлгә үҙегеҙҙең, атай булараҡ, шәхси ҡарашығыҙ нисек?

— Ыңғай.

— Туйыс...

— Бына мин үҙем... теркәлеп тә тормағанмын. Минән алда тыуып үлгән баланың танытмаһы менән йәшәп ятам.

— Нисек инде?

— Шулай. Атай менән әсәй шулай хәл иткән. Гөлбаныуҙың балалар тыуыуға бер ай үткәс тә барып яҙҙырып ҡуйырға башы еткән әле!

— Тимәк, һуғыштан ҡайтҡас, балаларҙың донъяға килеү мәсьәләһе буйынса ир менән ҡатын араһында... низағлашыу булманы?

— Булманы.

— һөйләшеүҙәр булманымы?

— Булманы.

— Нисек улай... бик шыма, эйе, теге... нисек тип әйтәйем...

— Мин ҡайтҡанда ҡатын үлгән ине...

— Ә, эйе... ғәфү үтенәм.. эйе...

— Ә бына Ихсанбай Моратов менән мөнәсәбәтегеҙ?

— Күрше хаҡы — тәңре хаҡы...

— Шулай ҙа... Бына бында берәү яҙыу ҡалдырып киткән. Фронттан ҡайтҡас һеҙ Ихсанбай Моратовты тукмағанһығыҙ, тиелә. Ә халыҡ араһында игеҙәктәр Ихсанбай Моратовтан икән тигән хәбәр йөрөгән. һәм, ғөмүмән, Ихсанбай Моратов менән һеҙҙең мөнәсәбәт бигүк ыңғай булмаған.

Хашим уйға ҡалды. һуғыштан ҡайтҡас Хашимдың Ихсанбайҙы салбарын еүешләткәнсе быуғанын бер кем күрмәне. Ҡыҙыҡ.

— Ғәйбәт дәлил була алмай. Шаһиттар юҡ. — Хәҫпим үҙе ... аңламаҫтан хөкөм теленә күсте. — Минә яла яғыу өсөн ... л дәлил була алмай.

- Так, так... — Тикшереүсе тороп ишекле-түрле йөрөп алды. — Ихсанбай Моратовтың донъяһы ла бик сәйер шарттарҙа яныП юкка сыға, Ихсанбай үҙе лә, әсәһе лә бик сөйөр үлем менән үлә...

Хашим беренсе тапкыр күтәрелеп тикшереүсенең күҙенә ҡараны:

- Ә Ихсанбай Моратов менән Фәүзиә Моратованың үлемен дәлилләгән факт бармы? Уларҙың үле кәүҙәләрен кем күргән?

— Бәй... Улар ерләнмәнеме ни?!

Тирәкле, — Хашим ауыл яғына ымланы, — илле саҡырымда ғына. Теләгән ваҡытта барып тикшерә алаһығыҙ.

Тикшереүсе арыған ҡиәфәт менән һаҡсыға өндәште:

– Бөгөнгә... етеп торор. Алып сығығыҙ...

Камалетдинов өйөнә төрлө уйҙар ҡойононда ҡайтты. Иң гоүгеһе — сәсеү барышы тураһында сводка һорап быуып алып баралар. Эшсе көсө лә, тартыу көсө лә етешмәгән вуылда нисек тырышһаң да график талап иткәнсе эшләп булмай. Етмәһә, һуғыш мәлендә сәселмәй яткан ерҙәрҙе •рем, ҡарағура баҫҡан. Урындарға барып, хәлде үҙ күҙе менән күреп йөрөй Камалетдинов. Халыҡ тырыша, шыйыҡ вйрә эсеп, билен биштән быуып эшләйҙәр. Әммә юғарыла быны белмәгән, аңламаған кеүек ҡыланалар. Әйүп ни чплоһен — вәғәҙә бирә. Үтәйбеҙ! Була! һүҙебеҙҙә торабыҙ, ги... Ҡайтып инһә, Мәликәһенең шелтәле-ризаһыҙ йөҙөн күреүҙән ҡурка. «Флорида бөгөн дә йоҡламаны!» — тип ... арланыуҙан башлап китә, әйтерһен, ҡыҙыҡайҙың мимдәйҙер тайпылыу менән тыуыуына бер ул ғына, Әйүп ı эйепле...

Камалетдинов, төпсөгөн һүндереп, өйөнә инде. Аш-һыу щрлһендә йөрөгән Мәликәнең йөҙө аяуһыҙ талсыҡкан, Күҙҙәре шешенгән:

– Был ҡыҙ, биллаһи, мине үлтерергә тыуған!

Нинә?

— hорап торahың?! Ә hин көн-төн йоҡламаған бала янында берәй көн ултырып ҡара!

— Ҡарармын. Һин минең урынға эшкә бар!

— hин генә эшләйhең!

— Мәликә!

— Биллаhи, шул бала менән күперҙән генә осам!

Камалетдинов ҡатынына ҡул күтәргәнен үҙе лә hиҙмәй ҡалды:

— Тағы ауыҙыңдан... шул хәбәрҙе!

— А-й-й!

Өйҙәге ҡысҡырышыуға күрше бүмәләге Флорида илап ебәрҙе. Камалетдинов hүрелә төштө:

— Баланы ҡурҡыттың!

Мәликә тынды.

— Китәйем мин бынан, Әйүп.

— Ҡайҙа?

— Килгән еремә.

— Өлгөрөрhөң...

Тамам тынысланған Әйүп, баланы ҡулына алып, өҫтәл артына килеп ултырҙы.

— Ярай, ғәфү ит, Мәликә. Эштә лә тыныслыҡ юҡ. Хәҙер ҡыҙымды... әбейгә алып барабыҙ.

— Әбейгә?! — Аптырауҙың сигенә сыҡҡан йөҙөн Мәликә иренә борҙо. — Әбейгә тинеңме? hинме?

— Мин, мин...

Ашты hөйләшмәй ашанылар. Ҡашығаяҡты йыйғас, Мәликә ҡыҙы менән уйнаған Әйүп янына килде:

— hин бая... ысынлап әйттеңме?

— Ниҙе?

— Әбей турahында?

— Эйе, кейен. Китешләй Гөлмәрйәм апайға инеп, ҡайҙа йәшәгәнен беләйек тә...

Фәүзиә-Барсынбикә Күкбүренең ҡайтыуын нимәгә юрарға ла белмәне. Нимә был? Ҡот-ырыҫтың ҡайтыуымы? Әллә юҡhа, берәй... бәләнең килеүеме? Ҡарабаш башта ҡабул итә алманы урман кәнтәйен, аҙаҡ күнде, хатта дуҫлаштылар ҙа. Урманға сығып туй-мажар ҙа яhап алманылар микән? Фәүзиәнең генә йөрәк урынында түгел: күрше-тирәнең мал-тыуарын зыянлап ҡуймағайы. Элек бер ҙә малға теймәй ине лә бит. Хәтhеҙ нағып юғалып торған нәмә хәҙер нисектер инде...

Эйе, тыныс түгел Фәүзиәнең күңеле. Ҡандай хәбәрҙәр hөйләп китте Тирәкленән килгән Ғәлимә! Тимәк, уның күҙ караhылай ғына күргән ейәнсәре ҡайтып төшкән. Әсәй булған. Улай ғына түгел: әсәй булып та өлгөрмәҫтән тол ҡалған.

Барсынбикәне, Гөлбаныуҙы бәхеттән мәхрүм иткән ҡарғыш уның Мәҙинәhен дә эҙләп тапты микән? Эҙләп тапты иа килер көндәренә, атыр тандарына ҡара бөркәнсеген яигымы? Улынан яҙҙы Барсынбикә. Иәнен дә, тәнен дә курсый алманы Ихсанбайының. Үҙе яна-бешә янғындан hөйрәп сығарҙы, хәле бөтөп, hуштан яҙып йығылғансы hөйрәне. Йөрәк аҫтында йөрөтөп тапҡан улын ташлап китергә көс тапманы ул үҙендә. Хәлдән тайған, тәне, бите-башы бешкән Барсынбикә шул йығылыуҙан күпме ятҡандыр хәтерләмәй. Күкрәгеп өтөп алып барған сарсауҙан уянып киткәнендә янында бер кем юҡ ине...

Түбәнән ау hуҙып төшөп килгән үрмәксе салынды Флүчиәнең күҙенә. Кемдер килә. Бынан кискә, эңер төшкәс, ул кем йөрөр икән? Усаҡ аҫтындағы ике торонбаш берсә нлпылдап тоҡана, берсә hүнә. Шәм менән йәшәмәй Фәүзиә, кояш менән бергә йоҡларға ята ла иртән ҡояш менән бергә юра. Сәскәләрҙең сәскәhе ҡояш байыуға күҙҙәрен йома, иатта еләктәр ҙә кис булғас йәшерена. Фәүзиә, сығып эттәргә аш ҡойғас, тәhәрәт алды, йәстү намаҙын укыны ла түшәк йәйеп, йоҡларға әҙерләнде.

— Мөмкинме?

— Аh! — Фәүзиә ишектән инеп килгән ирле-ҡатынлы ксшеләргә әйләнеп ҡараны. — Эт өрмәне лә...

— Ә беҙ эт күрмәнек.

— Ә-ә... Әләйhә, урманға шылғандар икән. Әйҙә, ултырышығыҙ. Бәпесегеҙ йоҡлағанмы? Ҡыҙым, энерҙә Сабыйҙы йөрөтөргә ярамаҫ ине...

— Ә нигә, инэй? — Камалетдинов, ҡараңғыла hәрмәнеп, урындыҡ ширҙегенә ултырҙы. — Ултыр, Мәликә, бына бында!..

— Нигә тиме ни? Был донъяла әҙәмдең йәшәү арауығы ҡояш ҡалҡҡандан ҡояш батҡанға тиклем. Ҡалған ваҡыт — бәндәнән башҡа заттар өсөн...

Камалетдинов көлөмһөрәне:

— Әлләсе... минең кешенән башҡа зат осратҡаным юҡ... Былай, балалар йортонда... малайҙар төрлө хәл һөйләй торғайнылар...

Фәүзиә, аяҡтарын иҙәнгә төшөрөп, көлдөксәгә яҡынлап ултырҙы, торонбаштарҙы ҡаҡҡылап, утты тергеҙергә, өйгә яҡты бирергә маташты.

— Тотоп булғанды ғына күреү — күреү түгел шул әле, уландар. Тотоп булғандан тотоп ҡарап булмағаны күберәк... Хәйер, былар һеҙгә ҡыҙыҡ түгел. һеҙ бит... хөкүмәт кешеһе.

— һеҙ мине... танынығыҙмы?

Фәүзиә көлөмһөрәне:

— Күргәнем юҡ ине. Ишеткәнем бар. Нимә, ҡыҙығыҙ сирләнеме?

Камалетдинов шундуҡ етдиләнде:

— Эйе, инәй. Ҡатын ҡайҙа ғына йөрөтмәне — сәбәбен тапмайҙар. Беҙҙең ҡыҙ... йоҡламай.

— Алай... — Фәүзиә-Барсынбикә алыҫтан уратып, әйләндереп-тулғандырып әллә күпме уй уйлап өлгөрҙө, — тау менән тау ғына осрашмай!

— һеҙ... кем тураһында? — Камалетдинов ҡарсыҡҡа табаныраҡ эйелде. — Әллә беҙҙең... һеҙҙең менән...

Фәүзиәнең тауышы ҡороораҡ яңғыраны:

— Бөгөнгә күп һорауыңа яуап бирә алмам. Ваҡыты етмәгән. Беҙ әле һинең менән байтаҡ осрашырбыҙ.

— Ләкин, инәй, мин түгел, бала сирле!

— Әйүп! — Мәликә һаҡ ҡына иренә ҡағылды. — Тыңлап ҡына ултыр әле?!

Фәүзиә тороп бала янына килде:

— Килен, сабыйҙы көндөҙ килтер. Өс тапҡыр. Үҙең менән аҡ ҡурғаш ал. Ҡот ҡойорға кәрәк.

— Ҡурҡҡанмы ни? — Әйүптең «кот ҡойоу» йолаһы хаҡында ишеткәне булғас, әллә ни аптыраманы.

— Ҡыҙың ҡурҡмаған, атаһы ҡурҡҡан булған... — Фәүзиә, ниндәйҙер доға әйтеп, сабыйҙың маңлайынан һыпырҙы. — Бөгөн йоҡлар ул, ләкин, йоҡланы тип, ҡот ҡойҙормай

ҡалмағыҙ: бала ете быуыны алған рәнйеш ҡыҫаһында яралған.

- Рәнйеш... — Камалетдинов көрһөнөп ҡуйҙы. — Кем күберәк рәнйетелгәндер...

- Ах, уны үлсәп булһа! Ҡыҙым, һин сабыйың менән сыға тор. Минең ҡустыға әйтер бәләкәй йомошом бар...

— Рәхмәт, инәй!

Ярай, ярай... Әле һеҙ миңә киләһегеҙ... — Фәүзиә соланға сыҡҡан Мәликә артынан ишекте япты, үҙе Камалетдинов ҡаршыһына ултырҙы. — Йомошом шул...

— Әйт, инәй, әйт...

— һиңә йәш бер ҡатын килер. Ярҙам ит уға! Үтә үтснесен! Ни һөйләһә лә тоғро һүҙ булыр — ышан, зинһар. Һүҙҙәренә ҡолаҡ һал шул баланың!

— Исеме кем ул ҡатындың?

— Исемен үҙе әйтер. Ҡустым, мин сабыйыңа гел кәрәк буласаҡмын!

— Әллә инде, — Камалетдинов торҙо. — Райком секретары һәм... сихырсы ҡарсыҡ. Хәтәр дуэт, ә?!

— һыуҙы яратҡан Хоҙай утты ла бар ҡылған.

— Мин аллаға ла, муллаға ла ышанмайым.

— Ә үҙең килгәнһең миңә...

— Бала хаҡына... аптырағандан...

— Минең үтенесем дә шул уҡ: балдан татлы, әремдән әсе бала тигән емеш өҙә үҙәкте. Хуш, Әйүп улым.

- Хуш, инәй... Баланы... йоҡлаясаҡ тиһең инде?

— Йоҡлар...

Камалетдинов сығып киткәс, Барсынбикә оҙаҡ ҡына гәҙрәһе аша эңер биҙәктәренә күмелгән тәбиғәткә ҡарап уйланып ултырҙы. Ана, Күктау һырттары өҫтөнә тартылған ал шәфәҡ эсенә ҡара болот һыҙаты уҡтай сәнселде. Таулы ҡапыл ҡарайып, ҡараңғыланып ҡалғандай булды. Барсынбикә, йоҡо килеүҙән бигерәк уйҙарынан ауырайып, Пашын ҡолаҡсын мендәргә һалды. Бына бер саҡ мендәре шыуғандай, ҡыбырлағандай була башланы. Был ни хәл? Барсынбикәнең йөрәге тертләп, зиһене асылды: мендәр тигәне уралып ятҡан ҡара йылан булған, имеш! Башын алыр ине — мәхлүкте ҡурҡытып, сағылыуҙан ҡурҡа, алмаҫ ине — йылан өҫтөндә ята алмай бит инде ул? Ҡурҡышынан тамағы

кипте, тәненән һалкын тир бәреп сыкты. Уф! Нинә онотто икән ул йылан арбай торған доғаһын? Ҡырҙа, үлән йыйғанда ғына иҫендә ине бит... Үҙ-үҙе менән көрәшеп-серәшеп ята торғас, Барсынбикә күҙҙәрен асты: «Ах!» Тәҙрәләрҙә — күкшел яктылык. Шулай ук таң атты микән? Ул ипләп кенә баш аҫтындағы мендәрен ҡараны: төш! Төш булған! Йылан юк, ул үҙенең мендәренә һалған башын! Шулай ҙа ҡыҙык төш. Мендәр урынына йылан яҫтап ятасы?!

Барсынбикә ҡомғанын алып тәһәрәткә сыкты. Намаҙ укығас, ете быуын әруахтарға хәйер биреп килер. Әруахтарҙан Мәҙинәһенә, Сэбилә килененә һәм унын улына, йәнә Хашимға хәйер-фатиха һорар, тыуған һәм әле тыумаған нәҫел-ырыуына һәр ике донъяның рәхәтен юрар...

Әбүбәкерҙең үҙен килтермәгәстәре, Сәбилә балаһын йортка инеп күрергә булды. Әлбиттә, ағаһы ҡарындашының унда ингеләп йөрөгәнен яратмай. Мәгәр Сэбилә улын аҡылдан яҙыр сиккә етеп һағынды. Кер йыуамы, утын ҡырҡамы, мал ҡараймы — күҙ алдында улы. Шул баланың зәңгәр күҙҙәренән үбеп, алһыу битенең йылыһын үҙ күкрэгендә сакка ғына булһа ла тойһа — Сэбилэгэ шул етэ, башка бер ни кәрәк түгел уға.

Ағаһының эшкә киткәнен һағалап тороп, Сәбилә күлдэксэн генэ көйө өйгә инде. Инеү менән танауына мейестән сыккан ит бәлеше еҫе бәрелде, еңгэһе Рәшиҙә аш бүлмәһенән ишек тауышын ишетеп үҙе лә килеп сыкты:

— Уй! Сәбилэ?! Нимә кәрәк һиңә?!

— Кэрэкмәй, — Сәбилә ҡаушаны, — бөтәһе лә якшы... Мин Әбүбәкерҙе күрәйем тип...

Олпат һынлы Рэшиҙә кәүҙәһе менән бөтә йорт эсен Сәбилә күҙенән ҡапларҙай булып ҡаршыһына баҫты:

— Аңламайым... Ә ниңә һин уны... күрергә тейеш?

Сәбилә баяғынан да нығыраҡ баҙаны:

— һағындым, — тине ул, телен көскә әйләндереп. — һеҙ уны миңә... бөтөнләй күрһэтмэй башланығыҙ!

Ах, шулаймы?! Больницаның кере менән һинең бүлмәңә күпме сир, бысраҡ инә! Үҙең — мал араһында. Һин нимә: Әбүбәкергә зыян килтерергә итәһеңме?!

— Мин... таҙа кейенеп индем...

Әбүбәкер хаҡында тик Лоҡман Талипович менән һөйләш! Мине бынан кире ул мәсьәлә менән борсома! Булды?! — Еңгәһе ишекте асты, Сэбиләгә сығып китеүҙән башка сара ҡалманы...

Шәңгәрәйҙе ҡарауҙан, эшенән бушай алмаған Рауза байтактан бирле улын күргәне юклыкты иҫенә төшөрҙө. Эйе, эйе! Был тиклем дә бушамай донъя көткәне юк ине унын быгаса. Хәҙер бит бер донъя урынына икәүҙе ҡарай. Күберәк Пшмәмәт донъяһында булһа ла үҙ өйөн дэ һыуытып ҡуя алмай: Хөсәйене әллә ниҙә бер ҡайтһа ла күңелһеҙ булмаһын ш. Кейәүгә сыккас, ирҙе лә ҡарамай булмай. Ул донъяның бысрағын таҙалап сығарыуға ғына күпме көс түкте! Ярҙамға һеңлеләрен саҡырманы: Рауза Ишмәмәттен тәүге ҡатынының хнтаһын үлһә лә ҡабатламаясаҡ! Интекһә интекте — Пшмәмәттең донъяһын сыньяһау итеп ҡуйҙы! Бирнәгә тип Нух заманында ук йыйған ҡорған, балаҫ-түшәктәрен алып барҙы. Ишмәмәттең күҙенә улар салындымы-юкмы, әммә үҙе ҡәнәғәт ҡалды: ир йортона килен булып төшөү йолаһын еренә еткереп аткарҙы.

Күрше-тирәне сәйгә йыйырҙан алда, Хөсәйенен барып күреп, һөйләшеп килергә булды ул. Сәй-шәкәрен, икмэген, мшмаҡ-майын төргәккэ төрөп, Рауза ат һарайына мцкайланы. Ыңғайлауын ыңғайланы ла бит — барып етэ алмай хитланды. Эш кешеһе был тип тормайҙар — тоталар ҙа туктаталар, туктаталар ҙа һораша башлайҙар:

— Күҙгэ-башка күренмәйһең, Рауза?

Рауза аптырай:

- Атаҡ-атаҡ! Нисек күренәйем? Ир ҡарауы еңелме һиңә! Мин бит хөкөмәт эшендә йөрөгән кеше!

– Ишмөхәмәткә барғаның дөрөҫтөр шул?

- Дөрөҫ булмай, Ишмөхәмэтулла бармаҫтык кешеме? Унын ише ир эләкһә!

— Һы, шулайҙыр шул... Шәңгәрәйҙе рәнйетмәй көтөгөҙ инде. Хоҙай бәндәһе бит ул!

— Иремдең балаһын рәнйетергә ни. Үҙемдә лә бар бала!

Бына шулай һәр берешенә яуап бирә-бирә килә Рауза. Ә инде ҡоро иҫәнлек һорашып киткән кешене Рауза үҙе өнәмәй.

— Ҡайһылай эреләнгәнһең? Рауза, ни хәл, тип һорашҡан юҡ, һөйләшкән юҡ...

— Һәйбәттәр хәлең... Иргә сығып ятаһың, шәй... — Быҙың эше хәбәрҙе күберәк тол ҡатындарҙан, кейәүгә сыҡмаған ҡарт ҡыҙҙарҙан ишетергә тура килгәнгә күрә, Рауза һыр бирмәҫкә тырыша, форсат сыҡҡанда семтеп алырға ла онотмай.

— Ирҙәргә ҡытлыҡ килгән заманда, — ти ул, — иргә сығып ятыу насар түгел инде! Аллаға шөкөр! Әлдә үҙемдән бай — һимеҙ, ярҙы — ябыҡ тигән кеүек, Хоҙай төҫ-баш йәлдәмәгән. Эт тә бит һөйәккә таштанмай...

Ат һарайына нәсилә килеп еткән Рауза, өйгә ингәс, Хөсәйенендең түрбашына күҙ һалды: ҡатҡан ҡашығаяҡ, икмәк һыныҡтары... «Әй меҫкен! — Рауза, йәшен ең осо менән һыпырып алды, — нигә ошо баланы Хоҙай бы рәүеште итеп яратты икән?! Әҙәмгә ғибрәт өсөнмө, әллә фәһем өсөнмө?! Йыйын алйотто ҡарау ни өсөн бер Рауза башына төштө икән? Тегендә — Шәңгәрәй, бында — Шәңгәрәйҙән ары китмәгән Хөсәйен...» Рауза йыйын йәше лә кибеп өлгөрмәне, Хөсәйен килеп инде.

— Уй балам! Ништэп йөрөйһөң у, ҡайтмай?!

— Ваҡыт юҡ!

— Ваҡытыңа ни булды?

— Сәсеү бөткәс, һабантуй! Аттарҙы сабышҡа әҙерҙәйем. Һарайғырҙы — район һабантуйына! Персиҙәтелгә әйттем бөгөн. Сабышта ҡатнаша торған аттар — во! Егеү бөттө тинем!

— Хөсәйен... Әсэм ни хәлдә ята, тип тә уйҙамайһың бит... Яңғыҙлыҡтан алйып үлмәҫ борон тип, әсәң кейәүгә сыҡты, шуны ла белмәйһең бит...

— Ашарға әпкилдеңме?

— Нигә, кемгә сыҡтың, тип тә һорамайһың?

— Һарайғырҙы персиҙәтел үҙе һораһа ла бирмәйем. Екһен, ана, Таштояҡты! Ул да шәп ат! Түлке сабышҡа ярамай. Тиҙ ярһый! Вәт бер хайуан!.. Сабыш күрһә, ярһып ала ла китә. Шунан тиҙ арый!...

— Мин һиңә «а» тием, һин «б» тип тораһың!

— Персиҙәтелдән өҫтәп һоло яҙҙырттым. Көн дә күнекмә кәрәк! Малайҙарҙы йыйҙым. Башта шуларҙы өйрәтәм! Аттың йәненә үҙендекен ҡушһаң ғына...

— Әҙәм түгелһең һин, Хөсәйен! — Үпкәләгән Рауза, ишекте ҡаҡлыҡтыра ябып, сығып китте. Ҡайтып бара, күҙенән йәше сөбөрҙәп ағып бара. «Эй хоҙайым, — ти илауҙан бүрткән ирендәре. — Хөсәйен ише бәндәнә эсә итергә минэн башҡа эҙәм заты юҡ инеме ни эргә-тирәндә?!»

Атаһының оҙаҡлауы Мәҙинәнең бәғерен көндән-көн нығыраҡ, тәрәнерәк телде. Әсәһенең борсолоуы бирелдеме

Дауыт та мыжый, көйһөҙләнә башланы. Етмәһә, һыйыр елен еткергән. Мәҙинә унан күҙ яҙлыҡтырмаҫҡа тырыша. Картуф ере ло баҫылмаған. Мәҙинә балаһы йоҡлаған арала ер Паҫып инә лә ул — яңғыҙы ырата алмай.

Ә тәбиғәт, йылыға иҙерэп, ҡотороп япраҡ яра, сәскә ата. Һыу буйынан килгән муйыл еҫенән хатта баш әйләнә! Мәҙинә һыуға ла йүгереп бара, йүгереп ҡайта. Бәпембә һибелгән туғай күҙҙең яуын ала. Әйтерһең дә, йәшел хәтфәгә тере ҡуҙҙар сәселеп ҡалған. Их! Әптеләхәт эргәһендә булһа, улар, моғайын, ошо бәпембәле туғай буйлап йүгерерҙәр, коҡүк тауыштары яңғырап торған ҡайынлыҡты бер итеп колөрҙәр ине. Дауыт та былай булып гел мыжып ятмаҫ ине: ата-әсәһенең ҡыуанысы, бәхете уның да сабыйлыҡ дәүерен аяҙ һәм яҡты итер ине. Ә хәҙергә — барыһы ла хыял ғына. Ике йыл буйы ауыр эш күрмәгән тәне һыҙлай, күрәк тотҡан устары ҡабарып сыҡты, уларҙан хатта ҡан сырҡырай. Ҡыҫҡа ғына бала йоҡоһона яраҡлашҡан төндәрендә Әптеләхәтте тоштә күрмәмме, тип күҙҙәрен йома. Әммә Әптелэхәте күренеүе була — бала уяна...

Күңеле китек булһа ла, атаһы барҙа нисек тә гошөнкөлөккә бирелмәҫкә тырыша ине Мәҙинә. Ни өсөн кайтармайҙар уны? Шәңгәрәйҙең үгеҙгә һөжүмен сәбәп птәләрме? Улай тиһәң, Ғифриткә бит бер ни булмаған. Кисә

генә күрҙе уны Мәҙинә, донъя емереп үкереп, бихисап һыйырҙарына хужа булып, йәшәп ята.

Мәҙинә сабыйының йоҡлап китеүенә тамам ышанып, инде сығам тигәндә Маһинур күршеһе килеп инде.

— Өйөмдә толҡа тапмайым. Киләм дә инәм, киләм дә инәм... һыйырың арғы оска китеп бара ине. Шуны әйтәйем тинем. Аптырап эҙҙәп йөрөмә.

— Көтөүгә ебәрмәнем, быҙаулап ҡуйһа... Алдына һалырға йә бесән юҡ...

— Ул яҡта үлән шәп шу... һыу буйы бит. Ереңде баҫып бөтә алманың йә...

— Шуға сығырға торам да... Бала эргәһендә ултырып тора алмаҫһыңмы икән, инәй?

Маһинур, бәйләмен алып, урындыҡ өҫтөнә менеп китте:

— Шуға килдем, бар, эшенде эштә.

Мәҙинә ҡырҡка ярылырҙай булып, ҡарһаланып өйөнән сыҡты.

Рауза эшкә киткәс, Ихсанбай иркен тын алды. һайыҫҡан кеүек туктауһыҙ шыҡырлауы теңкәһенә тейҙе шул ҡарсыҡтың. Үҙе, ҡарсыҡмын тип тормай, йәштәрсә ҡыланған була. Килгән-киткән йәштәргә, еңгә булып, йөҙөк, янсыҡ, ҡулъяулыҡ тарата. Берәү, йәнәһе, килен булып төшкән! Дөрөҫөн әйткәндә Ихсанбайҙы унын менән түшәккә лә тартмай. Әбей — эбей инде. Сәбиләһе яшыҡ, йәмһеҙ булһа ла тыныуы ҡайнар, теләге ихлас булды. Ә был... центер ярым ит. Ярай эле Ихсанбайҙың Раузаны баштуҡ айырым ятырға өйрәтергә башы етте. Ситке бүлмәлә, түрбашҡа тоташтырып һалынған һикелэ йоҡлап йөрөй ул. Ихсанбай йоҡлар алдынан түр яктың ишеген дә ныҡлап ябып ҡуя: йә төнөн һаташыр, йә берәй нәмә ысҡындырыр...

Ихсанбай, иртәнге еләҫ һауаны иркенләп һулап, кәртә артына сыҡты. Бөтмөр эҙәм булған Ишмәмэт. Картуф баҡсаһы ла ҙур, яртыһында үлэн үҫэ, бал ҡорто ла тотҡан — оялары етемһерәп ултыра. Эргәлә генә йылға аға. һуңғы йылдарҙа, ҡарау булмағас, ҡойманың ғына бер өлөшө ауған. Ихсанбайҙың, зәғифләнһә лә, көс күп әле беләгендә, телэһә

ı ҡоймапы һыңар ҡулы менэн күтәреп тә урынына ултырта

Ихсанбай, тиреҫ өйөмөнә баҫып, тирә-яҡка күҙ һалды. ı ı уянған. Ҡайҙа ла төтөн сыға, халыҡ йәбешеп ятып ер ıı ıı ı Ферма яғында малдарҙың баҡырышҡан тауышы ıııı гє пә. Ихсанбай үҙе ҡасып яткан Күктау һырттарына ла **йөрөттө.** Унда кисергән яңғыҙлыҡ, ташландыҡ хисенэн **килеп** йөрэге өшөнө. Юҡ! Ихсанбай ҡалған ғүмеренең барлыкта, байманлыҡта үтеүе хаҡына барыһын да **КИЛӘЙӘСӘК!** Ана, үткэндә районға военкоматка барғанда, прокурорға арлы-бирле генә сыймаҡлап, Хашим өҫтөнэн шикәйәт яҙып киткәйне — нисек әйләнде тәгәрмәс! Халыктын хәҙер бөтэ иғтибары күктән төшкәндәй ҡайткан Пшмлмоттэ түгел, э ҡапыл ғына енәйәтсегә әйләнгэн Ч.имимда. Әйҙә суҡыһындар Хашимды! Изге булып йөрөмәһен Хашим, өлөшөнә былай ҙа бәхет мул төштө. **Уеню** гсйимәҫ ҡыҙға өйләнеүе етмэгән, хәҙер килеп тиндәше, көндәше булмаған бер һылыуҙың атаһы булып маһайып йөрөй! Нисауа... терәкһеҙ ҡалған Мәҙинәне лә һындырырбыҙ. **Ихсанбай** хэллэнеп кенэ алһын... Хәлләнеү тигәс... Ихсанбайҙың ҡоро ыумас менэн тамаҡ ялғауы яҡшы түгел. Ылек тә улар насар йәшэмэне, иттән, һөт-ҡаймаҡтан өҙөлмәнеләр, э тегендә, мәмерйәлә, иткэ ул бөтөнлэй ныҡ **Күискте.** Хәҙер уның хәле өйрә эсергә мәжбүр бүренеке

к. Ней Рауза ҡарсыҡ сэй ҡайната ла сэй һемерә... Елгэ Һимсргән күркә кеүек, сэй эсеп һимереп тик йөрөй шул бисә. Гимакты алдап булмай. Ихсанбай инде урамына килеп ингэн ıı р нкс күрше тауығын да йолпаҫланы. Артабан нисек |#шоргэ?

Ул, тиреҫ өйөмөнэн төшөп, өйөнә табан һылтаҡланы. Инайскде! Уларҙың тайсаһына йыуан бер ала һыйыр инеп Горгансы?! Үҙе нэк үҙҙәренең элекке һыйырына оҡшаған ıı ы: тарбаҡ мөгөҙлө, оҙон ҡойроҡло. Быуаҙ микән был, әллә һимезме? һыйыр, кәртәгэ инергэме, сығып китергәме тип **юнэ** биреп торҙо ла, ауыр тын алып, күләгәгә, лапаҫ |ҫгыпа йүнәлде. Ихсанбайҙа ҡапыл ҡан эсеп өйрәнгән йырткыс ҡомары уянды: ашҡына-ярһый Шәңгәрәй яткан ı ıı ыктың ишеген тыштан терәтте, ҡапҡаны бикләне, үҙе, ıı ллып, һыйыр артынан лапаҫ эсенә йомолдо.

Еңгәһенән ҡыуылып сыҡҡандан һуң Сәбилә үҙен ҡайҙа ҡуйырға белмәне. Ағаһы уны ҡәйнәһе өйөнән яҡшы аттар, алтындар, күрекле урын-ер ҡаралдыһы менән алып китте. Килгәс, уның күңел донъяһынан аллы-гөллө йәйғор яһап Әбүбәкере тыуҙы. Ә бөгөн? Бөгөн ул көнө буйы кер ҡайнауҙан түбәһенән тамсылар тамып торған таш иҙәнле толҡаһыҙ аласыҡта япа-яңғыҙы... Етмәһә, уба-туба кер йыуыуҙан себешләп бөткән ҡулдары һыҙлай, таш иҙәндә тапаныуҙан аяҡ быуындары ла шеште. Ә кәртә-ҡуралағы эштәр? Сәбилә — тиҙәк көрәүсе лә, һауынсы ла, утын ҡырҡыусы ла... Ағаһының баш йоморо. Йоморо булмаһа, хан һарайылай урыҫ донъяһына бер үҙе хужа булып ҡаламы?

Сәбиләнең, әлбиттә, Ихсанбай менән үткән ғүмере лә рәхәттән булманы. Уның ҡарауы, ул унда әрһеҙләнеп ҡара эш эшләмәне, бөтә хәстәре иренең тамағын, өҫ-башын ҡарау булды. Күрше-күләндән, дуҫ-дошмандан да тел-теш теймәне Сәбиләгә. Ҡәйнәһе, Фәүзиә ҡарсыҡ, һүҙҙең кәрәген генә һөйләне, килененә ярағанын, тейерен генә әйтте. Сәбилә тышҡы донъя менән Моратовтар ғаиләһе араһында упҡынға тиң айырма ятҡанын, уларҙың һәр ғәмәле бер сәйер сер ҡоршауы эсендә яралғанын да тоя-һиҙә йөрөнө. Шул сер йомғағын күпме генә тағатырға тырышһа ла — Сәбиләнең быға аҡылы етмәне, зиһене буйламаны, аңы инләмәне. Ә бына хәҙер ул япа-яңғыҙы. Алтыны ла юҡ. Балаһын тартып алдылар. Бәлки, бер өй эсенә бикләнеп, кешеләрҙән ярҙам һорамай дөрөҫ эшләмәйҙер Сәбилә? Уны тыңлар, аңлар кешелэр бөтөнләй юҡ микән ни был донъяла? Район хужаһы Камалетдиновты маҡтағандарын ишеткәне бар уның. Хашим да теге саҡ шул кешегә барғайны бит. һыйырын алып бирҙе. Бәлки, Сәбиләгә лә тоторға ла шул кешегә барырғалыр? Улай тиһәң, Сәбилә ундай ҙур кешеләр менән һөйләшеп өйрәнмәгән. Нисек барып инер ҙә, ни тип һүҙ башлар?

Эңер төшөүгә ҡарамаҫтан, Сәбилә кейенә башланы. Кейенә тип, нимәһе бар инде уның? Шул. Кейеп йөрөгән күлдәге, башындағы яулығы ла ҡатаһы. Иң мөһиме — уға барып етергә һәм ишегенән инеп китергә.

I ібилә райком бинаһына килеп еткәндә йыйыштырыусы ш коридор йыуып йөрөй ине. Оло ғына апай. Ни яғы щдер Тирәкле әбейҙәренә оҡшаған.

Аиай, эллә һин Тирәкленәнме?

Йыйыштырыусы аптыраулы ҡарашын төбәне Сәбиләгә:

Лһ-аһ! Элек шунда йәшәнем шу... Мында килен булып Гшнкәнемә ҡырҡ йыл. Кем кэрэк, кемгә килэһең? Мин I илмәрйәм апайың булам. Мында эштәгэнгэ лэ хәтһеҙ ғөмөр. Картым ат ҡарай, үҙем иҙән йыуам...

Мин, апай, Камалетдиновты күрәйем тигәйнем.

Аһ-аһ! Ҡобараң осҡан, берәй нәмә булдымы?

(обилә үҙен йәлләгән кешене осратыуҙан тик илап ірмәне:

Булды шу! Апай! Ярҙам ит...

Әйҙә әләйһәң, индереп ебәрәм, нужанды түлке үҙең һөйҙәрең!

(әбилә, алпан-толпан килгән Гөлмәрйәм артынан, яулыҡ 0СО менән ауыҙын ҡаплай-ҡаплай, өҫкә күтәрелде...

Камалетдинов баҫыу эштәренән ҡәнәғәт бөгөн. Ниһайәт, ||\им.| колхоз сэсеүҙе тамамлауы хаҡында рапорт бирҙе. Күп хужалыҡтар малдарҙы йәйләүгә сығара башланы. Күсеү мәлендә, әлбиттә, һөт бер аҙға кәмейәсәк, уның ҡарауы I иләһе аҙнанан эштәр көйләнәсәк. Камалетдиновты хәҙер иң ныҡ борсоғаны — буласаҡ һабантуй. «һарайғырығыҙҙы карарға барам эле!» — тине Үҙе! Шәп! Быйыл бәйгелә еңгән Колхозға «Москвич» биреләсәк. Машина килеп етеүгә бәйле Һмбантуй көнө. һарайғырҙы яҡшы әҙерләгеҙ тип, Әйүп инде Мирхәйҙәровтың ҡолаҡ итен ашап бөттө. Колхоз рәйестәрен ныш ан һайын һабантуйға әҙерлектәрен һораша I амалетдинов. Аты беренсе урынды алған хужалыҡҡа еңел машина биреләсәген дә әйтте. Әйтеүе булды — барыһы ла ялт итеп Мирхэйҙәров яғына ҡараны. Азат шул саҡ бер карышҡа үҫеп киткәндәй булды. Үҙе, мут йылмайып, тыныс күренергә ГЫрышкан була. Шәп инде һарайғыр, шәп... Районда Иылткысылыкты үҫтереп, тоҡом аттары үрсетергә ине лә — Квндәлек мәшәҡәттән, юҡсыллыктан сығып булмай. Шулай ҙа

быйыл көҙ, арыу бейәләрҙе һайлап алып, һарайғырға ҡушып, Тирәклелә — «Алға»ла нәҫел эшен яйға һалмай булмай. Табышлы тармаҡ булырға оҡшай. Ана, үҙебеҙ нәҫел үгеҙҙәрен алтын хаҡына төшөрөп ситтән һатып алабыҙ шәт...

Көндөҙ бушап булмай. Ығы-зығы, мәшәҡәт... Камалетдинов яңғыҙ ҡалып кабинетында уйланып ултыра биргәс кенә өйөнә ҡайтырға ғәҙәтләнгән. Халыҡ менән умарталай гөжләгән бина тып-тын. Гөлмәрйәм апайҙың ғына ҡайһылыр кабинетта биҙрәһе шалтырай. Бөтә ер таҙа. Бина эсендә яңы йыуған иҙәндең, шишмәнән килтергән һыуҙың еләҫ еҫе генә аңҡый. Балалар йортонда йәшәгән сағында ла Әйүп, мәктәп бушап ҡалғас, класҡа инеп тынлыҡты тыңлап ултырырға ярата торғайны. Шул ғәҙәтенән һаман арына алмай. Тынлыҡты түбәндән килгән Гөлмәрйәм апайҙың тауышы боҙҙо:

— Әллә инде... ҡабул итеү ваҡыты түгел дә бит...

Гөлмәрйәмдең тауышын ишетеп, Камалетдинов ишеккә йүнәлде:

— Кем унда, Гөлмәрйәм апай?

— Бар, әйт кем икәневде, ин...

Ишектән килеп ингән ҡобараһыҙ, ябыҡ, хөштәмһеҙ ҡатын ҡурҡынған тауыш сығарҙы:

— Камалетдинов һинме ул?

— Мин.

— Уй! — Ҡатын, яулығы менән битен ҡаплап, ҡысҡырып ебәрҙе. — Уй-й... баламды... минең баламды... ағайым... уй-й-й...

Камалетдинов, графиндан һыу ҡойоп, ҡатынға стакан һуҙҙы:

— Бер нимә лә аңламайым! Мә, эсегеҙ! Тынысланығыҙ!

— У бит минең... балам! Мин таптым! Мин... Уй-й-й...

— Балаң... кемдә? Кем ул ағайың?

— Уй-й-й... Лоҡма-а-а-н... брач... уй-й-й! Ярҙам ит, ағай! Ә бит... минең... у-й-й!

Аптыранған Камалетдинов ҡабул итеү бүлмәһенә йүнәлде:

— һеҙ... ултырып тороғоҙ! Мин — хәҙер!

Коммутатор дауахананы тиҙ тоташтырҙы.

— Лоҡман Талипович! һеҙме был? Ни бит... һеҙҙең апайығыҙ бармы? Борсоғанға ғәфү итегеҙ, ул бит бында. Эйе, миндә! Ниндәй бала һөйләй ул? Килеп етегеҙ? Ярай, ярай! Аңлайым! Әлбиттә, дауаланһын. Ярай, ярай!..

I амалетдинов Лоҡман Талиповичты йәллэп ҡуйҙы. Башһаң, ул сирле һеңлеһен ҡарай икән! Ҡурҡыныс, ти. Б нәгән ваҡытта Сәбиләнең бала эргәһенә килеп инеүе, алып іуы бар, ти.

Өйүп кире кабинетына ингәндә, ҡатын тыныслана төшкәйне.

һеҙ... ултырып тороғоҙ.

Минең бында ялыу менән килгәнде... ағайыма әйтә Күрмәгеҙ!

Ьер туған ағайыңмы инде ул һинең?

Бер туған! Тик ул урыҫта үҫте. Улдыҡҡа алдылар. Марйәһенең... балаһы булманы. Минең... — ҡапыл ишек ш ЫЛДЫ, унан бер-нисә врач оҙатыуында Лоҡман Талипович килеп инде. Быны көтмәгән Сәбилә хәлһеҙләнде, үҙенә ИИНДәйер ҡурҡыныс янауын шундуҡ һиҙенде:

Ағый! Мин...

Ҡайтҡас һөйләшербеҙ.

Мин ҡайтмайым! — Сәбилә үҙендә инә арыҫландай кiк ташыуын тойҙо. — Миңә баламды бир! Закун минең ИПа! Миндә уның метрикаһы! Хаҡығыҙ юҡ!

Ул ҡурҡыныска әйләнә! Бәйләгеҙ! — Лоҡмандың йітеүе булды — ике халатлы ир Сәбиләгә килеп йәбеште.

(обиләнең аңына шунда ғына барып етте: ирҙәр... Инитарҙар... Улар бит... психбалнистан!

Мин унда бармайым! Хаҡығыҙ юҡ! Унда туҡмайҙар! \\ ырыуҙарҙы астан интектерәләр! Миңә... балам! Балам ғына Мрвк! — Сәбиләнең һуңғы һүҙҙәре тыштан, инде асыҡ ишек аша и,|на ишетелде...

Ғәфү итегеҙ, Әйүп Ғәзизович... — Лоҡман Талипович ашығыс ҡына көплө машинаның кабинаһына инеп ултырҙы...

Был ваҡиғанан һуң Әйүптең дә кабинетында яңғыҙ ҡалғыһы килмәне. Муйыл, сирень еҫенә иҫергән яҙғы һауаның йәме бөткәндәй, кото киткәндәй тойолдо. Күҙ | ı (ынан йәмһеҙ ҡатындың алйыған күҙҙәре, һеләгәйен ЦЫзып тартышҡан йөҙө китмәй.

Ярай әле уның Флоридаһы шәбәйҙе. һәйбәт йоклай ||. . . амы, уйнай, шаяра. Теге ҡарсыҡ тағы киләһегеҙ әле мим.1 тигәс, ҡурҡкайны — барыһы ла яҡшы бара. Хәҙер инде Камалетдинов ҡыҙының «әттә» тигән тәүге өн-ауаз ı ығарыуын көтә...

Лидия Николаевна ауырыуҙарҙың һәр ҡайһыһын үҙе ҡарап ҡабул итсргә ғәҙәтләнгән. Иртән эшкә килеп, биш минутлыҡ әңгәмәгә дауахана хеҙмәткәрҙәрен йыйғас, яңы кеше һалыныуы асыҡланды.

— Кем ул?

— Моратова Сәбилә Талип ҡыҙы.

— Ҡайҙан?

— Таулыныҡы... Лоҡман Талиповичтың бер туған һеңлеһе, буғай...

— Бер туған һеңлеһе? — Лидия Николаевна ауырыуҙың «тарихы»на үрелде. — Ни дэрәжәлә...

Ҙур кәүҙәһенә, көсөнә ҡарата бирелгән «Алпауыт» ҡушаматлы санитар урынында борғаланды:

— Әҙерәк көс ҡулланырға тура килде, Лидия Николаевна. Бик ярһыған, ҡурҡыныс ине. Башта бәйләп һалдыҡ, укол эшләгәс, тынысланды.

— Ҡарарбыҙ. — Ул арала телефон шылтыраны. Тауышты Лидия Николевна шундуҡ таныны. — Эйе, тыңлап ултырам. Әле шул турала һөйләшеү алып барабыҙ. Мине саҡыртыр кәрәк ине! Борсомайыҡ тинек тип... эшем шулай булғас... Хәҙер үкме ни? Әле мин ауырыуҙы ҡарап өлгөрмәгәнмен... Ярай... килегеҙ... эйе, эйе...

Лидия Николаевна ғәжәпләнә биреп ҡуйҙы: Лоҡман Талипович ҡайһылай матур һөйләшә! Шулай шул. Дауахананың ашнаҡсыһы, кемдең итәгенә ут төшә — шул яна, тиергә ярата. Бына: Лоҡман Талиповичтың итәгенә лә ут төшкән — бер туған һеңлеһе сирләгән. Бынан һуң ул, бәлки, быйндағы ауырыуҙарға эҙәмсә мөғәмәләлә булыр?

— Та-ак... Эш урындарығыҙҙа булығыҙ барығыҙ ҙа... Тәртип булдырығыҙ. Хәҙер Лоҡман Талипович килә. Аҙаҡ оперативканан оперативкаға һуҙып һөйләнеп йөрөргә урын ҡалдырмағыҙ. Аңлашылды?! — Хеҙмәткәрҙәр сығып китеүгә Лоҡман Талипович үҙе лә күренде.

— Хәйерле иртә, Лидия Николаевна! — Лоҡман Талипович, кеҫәһенән ҡулъяулыҡ сығарып, тирләгән маңлайын һөрттө. — Бына...

— Бәлә һорап килмәй. — Лидия Николаевна, баш табиптың тартмағанын белгәнгә күрә, сигарет тәҡдим

ш әне. Үҙе, сигаретын тоҡандырып, асыҡ тәҙрә ҡаршыһына п.| Мин, әлбиттә, тәүге мәғлүмәтте ауырыуҙың үҙенән ырға юҙәтләнгәнмен, лэкин... был осракта...

Шуға ла килдем инде. Ҡыҫҡаһы: ул миндә йәшәй. ошко урынлаштырҙым — дауахананың керен йыуа. Ирҙә ы ылы ул. Оҙаҡ ҡына йәшәне — бала-сағаһы булманы. Шм,||| инде... минең ҡатын бәпәйләгәйне, үҙгәрҙе лә китте. П ихикаһында үҙгәреш һиҙһәм дә башта үтер тип уйланым. **Ьор гуған** карындашымды нисек итеп...

Аңлайым мин һеҙҙе, Лоҡман Талипович. Бына һеҙҙең **ихикаһы** экренләп үҙгәрҙе тип әйтеүегеҙ күңелгә шом Ь.| Әгәр ҙә был хәл көслө нервы шогы йоғонтоһонда ғына **булһа,** һауығыуына өмөт ҙурыраҡ булыр ине... Ярай, **ГЫрышырбыҙ,** һеҙ бик борсолоп китмәгеҙ...

Борсолмаған ҡайҙа? Атай-әсәй юҡтар инде... Бөтәһенә **рок** булып бер мин ҡалғанмын...

Мин һеҙҙең һеңлегеҙгә көнләшеп тыңлап торам: минең шпомдай ағайым булһа!

Рәхмәт инде. — Лоҡман Талипович урынынан торҙо. **һеҙ...** ауырыуҙарҙың ашау мэсьэлэһе менән Камалет- **ДОновҡа** ингән икәнһегеҙ, уны ғына... үҙебеҙ ҙә хәл итер **Инск...** Заявкаларҙы караным... бөтәһе лә һеҙ тигәнсә булыр. булығыҙ.

Һау булығыҙ, — Лидия Николаевна баҫҡан ерендә шаҡ тора бирҙе: ауырыуҙарҙы ашатыуҙың сиктән тыш |р булыуы хаҡында ул бит Лоҡман Талиповичҡа **ОИсративка** һайын әйтә килде! Ул ҡалтыраған бармаҡтары •мщ икенсе сигаретҡа үрелде...

Лидия Николаевна Сәбилә Моратова эргәһенә ин һми.шаи инде. Ҡураныс ҡына кәүҙәле ҡатын карауаты Ифлһендә ниҙер эшләп булаша.

һаумыһығыҙ!..

Катын Лидия Николаевнаға ялт итеп әйләнеп ҡараны ла, бармағын ирендәренә яҡын килтерҙе.

Ты-с-с! Йоҡлап китте...

Кем йоҡлап китте?

Бала! Әбүбәкер...

Шуида ғына Лидия Николаевна мендәр өҫтөнә кофтанан төрөлгән, яулыҡ ябындырылып, одеалға урап һалып I Имлган «бала»ны күрҙе.

— Ә-ә... ғәфү итегеҙ!

Ҡатын Лидия Николаевнаға яҡын уҡ килде:

— Былар сығып китһен! Үҙеңә генә бер нәмә әйтәм!

Лидия Николаевна үҙе менән ингән медперсоналға сығырға ишара яһаны.

— Һин мине мынан сығарма, йәме? Атыу Лоҡман баламды урҙарға итә, теге... кәнтәйе менән бергәләп. Иҙәненде, керенде йыуырмын... Түлке сығарма... Ишшү... Әбүбәкергә дарыу бирмәгеҙ... Ҡәйнәм үҙе үлән эсерер. Ул шул үләндәрен эсереп кенә таптырҙы бит был баланы.

— Бөтәһе лә һеҙ әйткәнсә булыр... Тик үҙеңә дарыу эсергә кәрәк. Башың ауыртамы?

— Минең бер ерем дә ауыртмай. һөтөм дә етәрҙек... Мине мынан сығара күрмә инде?! Лоҡман киһә, ауырый ул, йәки үлде тиген дә ҡуй...

— Ярай, беҙ һине бүлмәндә биклэп кенә тоторбоҙ...

— Биклә, биклә! — Күҙҙәре сәйер яҡтылыҡ бөрккән ҡатын, ҡапыл эйелеп, Лидия Николаевнаның аяҡтарынын, халат остарын үбә башланы. — Мәңге онотмам һине... Рәхмәт, рәхмәт!

Лидия Николаевна сығыу менән санитар ишекте биклэп ҡуйҙы.

Бәлә яңғыҙ йөрөмәй тигәндәре, ахыры, дөрөҫтөр: атаһын ҡулға алыуҙарына күп тә үтмәне, Мәҙинәнең быҙауларға етешкән һыйыры юғалды. Ике-өс көн тирәһендә эҙләмәгән ере ҡалманы, көйәлэнеүҙән имсәгенең һөтө бөттө. Үҙе лә йоҡонан, ашауҙан яҙҙы.

— Ҡайһы бер мал ҡасып быҙаулаусан була. Быҙауын эйәртеп ҡайтып инер әле, — тип йыуатты берәүҙәр.

Бәғзелэре:

— Күтер-мүтергә батҡандар... Быҙаулай алмай һәләк булдымы икән әллә? — тип аптыраны.

— Һуңғы ваҡыт, бигерәк тэ иртә яҙҙа ауыл осонда ғына бүреләр олоно. Шулар тамаҡтап китмәнеме икән? — тигәндәре лә булды.

Маһинур күршеһе генә:

Етәр, эҙлэмэ. Яҙған мал булған булһа, ҡайтыр. Йәмағанды көстәп яҙҙырып булмай. Минең һыйырҙың ағы [illegible] гә лә етер... — тип артыҡ бошонманы. — Күптән Итәйем гип йөрөйөм: бергә генә торайыҡ та ҡуяйыҡ. Таяуға терәк булып йэшэрбеҙ эле бергэ-бергә...

Мәҙинә өндәшмәне. Ни тиһен? Атаһы ҡайтыр, өйө мөрйәһенән төтөн сыҡмаһа, ни тиер? Әптеләхәт ҡайтып ЦШһә [illegible] башта ошо өйҙөң тәҙрәһен сиртер...

Инэй, һин үҙең минең эргәгә инеп йоҡлап йөрө... Мин, [illegible], нигеҙ ташлай алмайым...

Шунан һуң Мәҙинә һыйырын эҙләүҙән туҡтаны. Маһинур күршеһе генэ бер сэй эскәндә:

Әй яҡшы тоҡомло мал ине! Фермала унын тоҡомо ЮЛГандыр эле. Был теге, иҫтәйһевдер әле, үҙегеҙҙән тартып [illegible] малдың тоҡомо ине бит... Фэүзиә ҡарсыҡтың һыйыры [illegible] шу бер тоҡомдан ине — уны ла, донъялары үртәлгәс, ферма малына апарып ҡуштылар.

Мин ул һыйырҙы һауғайным бер... — Мәҙинэнең ул ЫЙерһеҙ таңда ер йыртып үкереп үҙҙәренә килеп ингән һыйыр күҙ алдына килде.

Шул, шул! Ярай, яҙғаны булыр. Минең үҙем дә, малым да һинеке инде хәҙер, ҡыҙым...

Инэй! Мин районға... атайыма барып ҡайтһам, Дауыт...

Аһ, аһ! Бар, бар әйҙә! Дауыт тип ни... аллаға шөкөр: ҡаймаҡ, ҡорот бар. һин бар, бар! Түлке йәйәү сығып китмә, [illegible] һора!

Бирерҙәр микән?

Ә һин Мирхәйҙәровҡа инеп тә торма! Тот та Кнсәйенгә әйт! һабантуйға әҙерлэнгэн аттарын көн дә малайҙар сабышҡа өйрэтә. һиңә ни булған? Ҡыҙ сағында ат бәйгеһенән ҡайтманың, эйәр өҫтөнән төшмәнең. Бар әйҙә,

Мәзинә ат һарайына барып ингәндә Хөсәйен һарайғырҙың ялын тарай ине. һарайғыр Мәҙинэне күргәс, Хөсәйен аша ҡарап кешнэп ҡуйҙы, шунда ғына Хөсәйен Мәзинәгә боролоп ҡараны, йөнтәҫ ҡаштары, шешенке [illegible]ктары аҫтында ҡарағаттай йылтыраған күҙҙәрен көлдөрҙө:

Таныны бит ҡэбэхэт!

Мәҙинә кесәһенән бер шаҡмаҡ шәкәр сығарҙы:

— Бирәйеммс?

— hинән башҡа шәкәр ашатҡан кеше юҡ ул уға, әйҙә, бир...

Мәҙинәнең усындағы шәкәрҙе һарайғыр һиҙгер ирендәре менән ялманы. Мәҙинә уның томшоғонан, ялынан һыпырҙы. Хөсәйен, ситкәрәк китеп, ҡойма буйына сүгәләне:

— Ҡасан ҡайттың?

— Күптән. Әллә ишетмәнең?

— Ҡайҙа-а... Эш күп бит. Ирең дә ҡайттымы?

— Юҡ. Уны ҡулға алдылар, Хөсәйен.

— Ҡайты-ыр...

— Ә һин... өйләнденме?

— Ҡайҙа-а-а... Эштән бушап буламы?

— Эш-эш менән... Минең балам бар.

— Кем?

— Малай.

— Яҡшы. Өс йәше тулһа, миңә әпкилерһең, мин уны һарайғырға мендерермен!

— Ярар. Ә мине... мендерәңме?

— һин, әйтәм, минән һорап менә торғайның...

— Элек бит ул...

— Хәҙер ни булған?

— Булмаған... — Мәҙинә ҡаушай төштө. Нимә тиһен инде? Балам бар, ир ҡатынымын тиһенме? Күреп тора: Хөсәйен өсөн ул һаман элекке Мәҙинә. Аттарҙа уктай елгән, һабантуйҙарҙа ал бирмәгән Мәҙинә...

____Эх! — Эскерһеҙ Хөсәйен менән һөйләшеүҙән Мәҙинәнең күҙҙәренә йәш эркелде. — Бөтә кешеләр ҙә нигә һинең кеүек түгел икән, Хөсәйен?!

— Илама, Мәҙинә. Күрәңме, һарайғырҙың һырт буйы дерелдәп китте. Сабыш алдынан уға борсолорға ярамай. һиңә лә. һин бит... бала имеҙәһең.

— Мин олоғайҙым, Хөсәйен...

— Олоғайҙым... Ҡултыҡ аҫтынан ел үткәреп, бер йөрөп кил. һарайғыр һинең менән елергә түгел, осорға әҙер. Күрәңме, тояҡтарын алмаш-тилмәш бейетә...

— Хөсәйен, миңә Таулыға барып ҡайтыр кәрәк.

Атаҡ, мен дә ос! Һинең ҡайҙа киткәнеңде кем ҡарап ГОра! Ярыш алдынан Һарайғырға тир сығарып, еңеләйеп I ыр корәк. Йәлдәмә — ҡыу!

Булды, Хөсәйен!

Хәҙер эйәрҙәйем... һин бар, ҡайтып салбарҙанып кил.

...Камалетдинов, кабинетына килеп ингән Мәҙинәне Күргәс, үҙ күҙҙәренә үҙе ышанманы: ул да, ул түгел дә Һымаҡ. Ленинградҡа, Мәскәүгә барған саҡтарында һүрәткә Мшөрөлгән сибәр ханымдарҙы күп күрҙе, ләкин...

һаумыһығыҙ, Әйүп ағай...

Әйүп Мәҙинәнең ҡулын устарына алды, үҙенең ҡара эш Иүрмәгән йомшаҡ ҡулдарында Мәҙинәнең һөйәлле, ҡытыршы ЧОКИН ҡайнар усын тойҙо:

Ауыл үҙенең мөһөрөн баҫып өлгөргән...

Мәҙинә көрһөндө: ауыл тормошо ғына мөһөрөн баҫҡан булһа икән! Ә йөрәгенә заман баҫҡан мөһөрҙәрҙе һанай бяшлаһаң?! Айырма шунда ғына: йөрәктәгеһен асып кеше усына һалып булмай...

Шунан, ниндәй елдәр ташланы? Мирхәйҙәров әйтә бирсп ҡуйғайны, былай... — Камалетдинов, Мәҙинәне ултырғысҡа йүнәлтеп, үҙе ҡаршыһына ултырҙы. — Внтсләхәт менән ни булды?

Әйүп... — Мәҙинә, Камалетдинов менән оҙаҡ |ралашмай тороуҙан барлыҡҡа килгән ятһыныуын еңә алмай чф.шанды. — Ул ни... Ул бер ҡатлы ғына, эскерһеҙ кеше бит. Имгоштәре уны хөрмәт итте: фронтта булған, башкаларҙан и чпко лә оло... Фәлсәфәнән имтихан биргәндә... Ҡыҫҡаһы, \ нан: «Һин дөйөм тигеҙлек булырына ышанаһыңмы?» — тип һораған уҡытыусы. Әптеләхәт тотҡан да: «Юҡ, ышанмайым. I I шсләргә аҡыл дә, зиһен дә, талант та, дәрт тә тигеҙ бирсләмәгән. Кемдәлер ул күберәк, кемдәлер — әҙерәк. Ә I |пс тобиғәте шундай: булмағанды булдырғыһы килә, Кимиллыҡҡа, бөтөнлөккә ынтыла. Ә барлыҡ кеше бер тиң Һологлс булһа, ул ынтылыш бөтәсәк, кешелек үҫеүҙән \ к гаясаҡ», — тигән. Уҡытыусы йәнә һорау биргән: «Ә бит... ООЦиализмдың йәшәү принцибы, юғары идеалы бөтә Ер шарында тигеҙлеккә ҡоролған йәмғиәт төҙөүгә нигеҙләнгән. Быға нисек ҡарайһың?» Әптеләхәт, һөйләшеү икәүҙән-икәү, етмәһә, профессор дәрәжәһендәге кеше менән барғас, аңынГОНон уйламаған, эсендәгеп ярған да һалған: «Быға ла

күңелем менән ышанмайым. Ни өсөн тигәндә, Ер шарындағы барса миллэттәр бер төрлө үҫеш баҫкысында тормай». Уҡытыусы Әптеләхәттең имтихан кенәгәһен үҙендә алып ҡалған, ә иртәгәһенә... ҡулға алынды...

— Ҡыҙғаныс... — Камалетдинов тәмәке тоҡандырҙы. — Тороп, тәҙрә янына барып баҫты.

— Мин әле, Әйүп ағай, атайым хаҡынан килдем. Уны, ишеткәнһегеҙҙер, ҡулға алдылар. Әле мин прокурорҙа булдым: уға әллә күпме ялған ғәйеп тағалар икән! Хатта малайҙарҙың үлемен дә уға япһарырға итәләр. Кемдер берәү атайым өҫтөнән шикәйәт яҙған — бөтә дәлилдәре шул. Хатта Фәүзиә инәй менән Ихсанбай ағайҙың үлемен дә унан күрмәкселәр. Шаһиттар юҡ, бары имеш-мимеш... Шулай уҡ...

Камалетдиновтың хәтеренә Флориданы дауалаған ҡарсыҡтың һүҙҙәре килде: «һиңә ярҙам һорап бер йәш ҡатын килер. Ни һөйләһә, шул дөрөҫ булыр. Ярҙам ит уға!» Камалетдинов үҙе Мәҙинәне тыңдай, үҙе йотлоғоп уның йөҙөнә, күҙҙәренә, ниндәйҙер мөғжизә менән ҡойоп ҡуйған һын кеүек кәүҙәһенә ҡарай... Абау! Был тиклем матурлыҡ менән ҡәҙимге әҙәм араһында нисек йәшәмәк кәрәк?! Камалетдиновтың тамағы кипте, эҫе булып киткәндәй булғас, галстугын бушатты:

— Һин артыҡ көйәләнмә... Ярҙам итергә тырышырмын.

— Башҡа ярҙам һорап барыр кешем юҡ минең, ағай...

— Аңлайым... Атайыңды ла беләм. Һуғыштан ҡайтҡас килде бит ул миңә... Үҙең һуң... нишләмәксеһең? Әйҙә, районға кил. Эш булыр, фатир менән ярҙам итермен...

Мәҙинә көлөмһөрәне:

— Ләкин... уның өсөн минең хәлдә... Әптеләхәттең ҡатыны булараҡ, рәсми процедура яғы бар.

Камалетдинов Мәҙинәнең хәлде тиҙ төшөнөүенә аптыраны:

— Эйе, эйе! Уныһы шулай инде! Ләкин бында мин бер ниндәй ҙә хилафлыҡ күрмәйем. Һиңә лә бит йәшәргә кәрәк! «Ҡулға алынған ирем менән бер ниндәй бәйләнешем юҡ», — тип яҙыуҙан ғына...

Мәҙинә аяғүрә баҫты:

— Ундай һөйләмде яҙһам, мин эле лә уҡып йөрөгән булыр инем, Әйүп Ғәзизович!

Уныһы шулай инде, — баҙап ҡалған Камалетдинов, Мвҙинәгә эйәреп, шулай уҡ урынынан торҙо. — Бына... беҙҙең башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары араһында ла декабристкалар барлыкка килде!

Мәзинә уға һаубуллашыу өсөн ҡулын һуҙҙы:

Беҙҙең халыҡта улар күберәктер ул, Әйүп Ғәзизович. Беҙ бит ирҙәре менән бергә яу сапҡан ҡатындар нәҫеленән...

Моҙинә институтта уҡығанда физкультура дәресенә йөрөр өсөн алған, тәнен һығып торған салбар кейгәнлектән тағы һылмалыраҡ, зифараҡ, һөйкөмлөрәк күренә ине был миҙутта. — Хушығыҙ, Әйүп ағай! Атайым мәсьәләһендә мин бары тик һеҙҙең ярҙамға өмөт итәм...

Ул сығып китте. Камалетдинов үрелеп тәҙрәгә ҡараны. Бой! Һарайғырҙы менеп килгән бит был! Ана, ул атҡа еңел Генә һикереп менде, кәүҙәһен турайтты. Ҡайһылай килешә м.| һыбай йөрөү! Әйтерһең, эйәрҙә үҫкән! Ә һарайғыр шәп! Өҫтөнә ниндәй затты ултыртып алғанын белгәндәй, ғорур! Күкрәк иркен, тояҡтары нескә, эсе тар ғына, ә тиреһе кеш шрсһелэй йылҡылдап, күҙҙең яуын алып тора! Былай булғас, беренселвк быйыл да «Алға»ла ҡала. Мирхәйҙәров нисек был КЬҢа Һарайғырҙы тоттороп ебәрҙе икән? Улай тиһәң, Мәҙинәнең йомошон үтәүҙән баш тартҡан ир-аттың үҙе ЮКЪр ул? Әгәр була торған булһа, күҙе юҡтыр...

Һарайғыр, ишек алдын түңәрәтеп юртып өйөрөлдө лә, өҫтөндәге һынды борсомай, һелкетмәй генә, башын текә ЮЮП, юртып сығып китте...

Хөсәйен Таулы юлынан елеп килгән һарайғыр менән Мвҙинәне ат һарайының башына менеп күҙәтте. Һай, оҫта Цөрөй шул Мәҙинә! Уҡтай атылған айғыр һыртында ул күренмәй ҙә — ҡыҙыл кофтаһы булмаһа, ат үҙе генә осоп СИЛ9 тип уйлар ине. Их! Ғүмере ат араһында үтһә лә, Көсөйен бер ҡасан да һыбай оҫта йөрөмәне. Әллә ҡайһылай сипы бер яҡта, осаһы икенсе яҡта булды, аяҡтары тарбан да Юрбан килде. Ә Мәҙинәләге оҫталыҡ сабышҡа йөрөгән ир шларҙа юҡ. Һабантуй алдынан алыҫ араға йөрөп килеү

килеште һарайғырға. Ҙур һынау үтте. Тире сыкты, икенсе һулышы асылды, үҙенә ышанысы нығыны.

Ауылды үткәс Мәҙинә әкренәйҙе, Күктау яғына киткән юл менән түңәрәк яһап йөрөп килде. Ана, унын атты муйынынан һөйгәне, иркәләгәне күренә. Был Мәҙинә ниңә инде ир бала булып ҡына тыуманы икән?

Һарайға килеп ингән ат менән һыбайлыны Хөсәйен муйыл күҙҙәрен генә көлдөрөп ҡаршы алды:

— Айғыр... бәйгелә ҡатнашырлыҡмы?

Мәҙинә баш бармағын күрһәтте:

— Бына!

— Әллә сабышҡа үҙең генә бараң да ҡуяңмы, Мәҙинә?

— Эй-й-й... уңайһыҙ булыр ул...

— Нимәһе уңайһыҙ булһын? Барыбер береһе лә һиңә етмәй...

— Әллә...

— Уйҙа, ҡыҙыҡай!

— Рәхмәт, Хөсәйен ағай!

— Йомошондо... йомоштай алдыңмы һуң?

— Булды, Хөсәйен ағай!

Мәҙинә китеп барҙы. Хөсәйен айғырҙы лапаҫ эсенә индереп һыуытырға ҡуйҙы.

Камалетдинов мунсаның башына бер үҙе барырға ярата. Бешкән ҡайын япрағы еҫе, һәр күҙәнәгенә үтеп инер ҡоро боҫ... Мунсаға ғына хас һауа, ярым ҡараңғылыҡ... Бында ғына үҙеңде тыныс тояһың... Үҙ-үҙең менән бөтөн йән эйәһе булып ҡалаһың. Донъя мәшәҡәттәре, ығы-зығы юҡ, булмаған да кеүек. Әйүп, баш аҫтына бешкән миндек ҡуйып, эләүкәгә һуҙылды. Аңын тотошлайы менән үҙенән ысҡындырырға итһә лә үткән аҙнаның ваҡиғалары бер-бер артлы кино кадрҙарылай күҙ алдынан йылтлап үтте: бала таптырып донъя ҡуптарған Сәбилә; сессия; аңғармаҫтан бүлмәгә осоп ингән аҫыл ҡоштай Мәҙинә; прокурор менән осрашыу; Хашимдың «Дело»һы менән танышыу, һәм тағы, тағы... Мәҙинәнең район үҙәгенә эшкә килеүҙән баш тартыуы. Камалетдинов, йәне көйһә лә, Мәҙинәгә һиҙҙермәне, уға биргән һүҙендә лә торҙо: Хашимға ғәйепләү акты сығарырҙан

алда шәһенән-ебенә тиклем тикшерергә ҡушты. Ә шуға гиклем тикшереү кемдеңдер шыма итеп төҙөгән шикәйәте оуиынса бара ине...

Лрҡа-үҙәк буйҙарын семерҙәтеп һалҡын сыға, уң аягындағы яра урыны ғына өшөп, ойоп торғандай. Әйүп мммдек бешкән һыуҙы мунса ташына ташланы. Ух-ху-ху! Шартлап тора эҫеһе. Әллә Гөлмәрйәм апай япраҡҡа ҡарағат, м.нрүш тә ҡушҡан инде... Рәхәт!.. Һәр хәлдә Камалетдиновты иорсоған уйҙарҙың яртыһы ошо мунса эләүкәһендә ятып каласаҡ!

Әйүп йәнә эҫе ташҡа бер сүмес хуш еҫле һыу ташланы. Шә-әп! Инде сабынырға була!

Мунса алды бүлмәһендә ял итергә ултырғас, Әйүптең күҙ Влдына йәнә Мәҙинә килеп баҫты. Башта ул тәнен һығып горған ҡара салбар, ялан сейәһеләй ҡыҙарып, өрөлөп торған нөзөн тағы ла сағыуыраҡ яһаған ҡыҙыл кофта кейгән килеш ИНе — күп тә үтмәне, ул сисенде... Камалетдинов күҙ сал ылдырырлыҡ матурлыҡ аллаһын күреүҙән күҙҙәрен йомдо. • Карт шайтан! Нимә тип... — ул үҙен әрләргә һүҙҙәр эҙләне, бвшын сайҡап, эсенә, нәфсеһенә тула барған һынды ҡыуырға гырышты. — Алйот! Бар тип белә Мәҙинә һине! Ә теге һын үш.щ һайын әрһеҙләнде, саҡ ҡына иркенә ҡуй — ул һинең ВЛДЫңа килеп ултырасаҡ, йоморо тығыҙ түштәре менән күкрәгеңә һыйынасаҡ, бешкән сейәләй ирендәрен... «Юҡ!!! Әйүп аяғүрә баҫты. — Мираж!» Ул кире мунса эсенә инде, бер биҙрә һалҡын һыуҙы башынан аша түңкәрҙе: «Шул кәрәк һиңә, ҡартлас! Йылан ите көҫәгән ауырлы ҡатындай булып, нрммағанды көҫәйһең, дуҫыңдың ҡатынын теләйһең! — Әйүп нәнә эҫе һалды: бер, ике, өс сумес! — Йөрәк янғансы, тән янһын! Утты ут менән һүндерәләр!..»

Аңы томалана яҙғансы сабынған Әйүп, ҡыҫалалай Кыҙарып, мунса соланының иҙәненә ауҙы...

Кибла яҡтан килгән йәшенле-күкрәүле болот баҫтымы — Квсәйен эңерҙән үк түшәгенә йығылды. Әллә нисә тапҡыр кире йоҡонан торорға уҡталды, баҫлығып уянды, ләкин кире лап китте. Бына ул йәм-йәшел аҡланда утлап йөрөгән

һарыбейәне күреп ҡалды. Эргәһендә ебәктәй йомшаҡ, бөҙрә ҡойроғон туҙғытып, ҡолоно сабып йөрөй.

— Юртаҡ! Юртаҡ булмаҡсы бит был ҡолон!

— Кит әй, булмаç!..

Ҡолон ҡарарға килгән халыҡ күбәйгәндән-күбәйә, бәй, кешеләр түгел, бүреләр булып сыҡты түгелме былар?! Хөсәйен ҡысҡырырға, ҡолондо ҡотҡарырға тырыша, ә бүре өйөрө ҡолонсаҡты һаман тарыраҡ ҡулса булып ҡыҫа. Ҡолон әллә ҡайһы арала ҡаты кешнәп ебәрҙе лә дөбөр-шатыр күкрәгән күктең үҙенә һикерҙе.

— һарайғы-ы-р!! — Хөсәйен үҙ тауышына уянып китте. Көсөргәнеп ятыуынан яңаҡтары ауыратйған, тамағы кипкән. Яуын үткән ахыры, күгәреп таң да һыҙылған. Ул күнәкте күтәреп, ҡотғолдатып һыу эсте лә тышҡа сыҡты. һарайғыр төшөндә кешнәгәндер... Был мәлдә аттар йоҡларға ята. Төн менән көн алышҡан ваҡыт улар өсөн дә еңел түгел...

Хөсәйен хәжәтен үтәгәс инеп ятып торорға уйлағайны ла, ат һарайында ауыр тын алған, ыңғырашҡан тауыш ишетеп ҡалды.

— һарайғыр! — Сибек кенә һыҙланыу ҡатыш кешнәү ишетелде. — һарайғыр... — Хөсәйендең һарай эсенә башын тығыуы булды — ҡанға туҙып яткан айғырҙы күрҙе... — һарайғыр... — Хөсәйен башын юртаҡтың янып барған маңлайына терәне. — Ништәнем мин... нигә йоҡтаным... нигә һине һаҡтай... — Шунан ул һикереп торҙо, күрше бүлемдәге атты йәһәт кенә сығарҙы. — Кем эше был?! Алыҫ китә алмаçһың, ҡәбәхәт! — Ат һарайын уратып, кәртә артына сығыу менән Хөсәйен ямғыр үткән тупраҡта ярылып яткан дага эҙҙәрен күрҙе: кемдер... һыбай килеп бәргән.

Башта эҙҙе яҡшы күреп барҙы Хөсәйен. Ат тояҡтары Күктау яғына киткән. Ямғыр үткәс, яңы эҙҙәр ярылып-уйылып ята. Бер урында ат тиҙәге өйөмөн дә күрҙе — тас һоло... Был ваҡытта бәйге аттарына ғына һоло ашаталар... Тимәк! Их! Исмаһам, килеп: «Был юлы һарайғырығыҙҙы сабыштырмағыҙ!» — тип әйтһәләрсе... Ниндәй затты әрәм иттегеҙ! Ул бит тимә бер әҙәмдән аҡыллыраҡ ине! Их, кешеләр!..

һыу аша сыҡкас, эҙ зым-зыя юҡ булды, күрәһең, яуыз уйын аткарған һыбайлы ҡайынлыҡ эсенән китте, эҙ йәшерҙе...

Луылға милиционер кейемендә ике һыбайлы килеп ингэс, **барыһы** ла уларҙы һарайғыр мәсьәләһе буйынса килделәр тип уйланы. Әммә былар, ауыл советы йортонан сыҡкас, Мәҙинәләр яғына ыңғайланы. һыуҙан ҡайтып килгән Мәҙинә **уларҙы** шундуҡ танының: теге саҡ килгән кешеләр.

Мәҙинә менән тиңләшкәс, аттарынан һикереп төштөләр, **исәнләштеләр.**

— һеҙ... беҙгәме?

Башта олорағы, мыйыҡлыһы телгә килде:

Ҡарындаш беҙ... махсус заданъя менән. Ихсанбай Моратовтың өйөн, туйыс, өйө урынын тикшерергә **ебәрелдек.**

Бына ул. Ҡаршығыҙҙа.

Тегеләр һайғау менән кәртәләнгән өй урынына **ҡаранылар:**

— Ошомо ни?!

Гиҙҙән өс-дүрт кеше эйәртеп ауыл советы рэйесе үҙе **Килде.** Мәҙинәгә мэсьәлә асыҡланды: былар Ихсанбай менән Флүзиәнең һөйэктәрен эҙләй... Бына улар кәртәләрҙе һүтә **бвшланы,** Мәҙинә улар янына килеп баҫты: янғандан ҡалған көл-күмер баҙға төшөрөлгән, өҫтөндә хәҙер әрем-ҡарағура үҫә, баҙға төшөрөлгән ҡый-ҡыпыр шиңгән — баҙ урыны **•йырым-асык** өңөрәйеп тора. Мәҙинә мыйыҡлы милиционер **Шына** килде:

- Протоколға ҡаҙыла торған урындың тышҡы күренешен **Гвпсирлэп** яҙығыҙ, зинһар. Был урындың кәртәләнгән **булыуын,** бер ниндәй ҙә ҡаҙыу эштәренең быҒаса алып барылмауын күрһәтегеҙ.

Мыйыҡлы Мәҙинәгә ҡарап ҡуйҙы:

- Тикшереү органдарында эшләнеңме әллә, ҡарындаш? **Белгән** кеүек һөйләйһең...

— Башыңа төшкәс...

Юҡ, шаяртам ғына, бөтәһен дә иҫкә алырбыҙ.

)ш башланыуға тирэ-яҡтан башта иң ҡыҙыҡһыныусан зат малайҙар йыйылды. Унан экренләп бабайҙар үтеп |>;фышлай һуғылған кеүек кенә булып килеп тулды. Эш **Кыҙы,** «Ихсанбай менән Фәүзиә ҡарсыҡтың һөлдәләрен ‹ ығаралар» тигән хэбэр йәшен тиҙлегендә бөтә ауылды

инләне. Бер туған Вәләү менән Ғәләү ҙә, саҡырған-әйткән кеше булмаһа ла, көрәк тотоп килеп еттеләр, лавкаһын яба һалып Рауза ла былай табан туйтанланы...

Көрэктэр инде хәҙер баҙҙың төбөндә тығырлай, нигеҙ буйҙары, элекке кәртә-ҡура урындары — барыһы ла ҡаҙылып-аҡтарылып бөттө. Тирә-яҡҡа көршәк, бихисап ҡашығаяҡ ярсыҡтары, тимерҙән яһалған тормош кәрәк-яраҡтары, янған батман, мискә, көбө ҡоршауҙары, кейемдәрҙән ҡойолған көмөш тәңкәләр, мунсаҡ-аҡыҡ, аҫыл таштар һибелде, ләкин бер-ике быҙау, һарыҡ, ҡош һөйәктәренән башҡа нәмэ, ғәжәп, табылманы.

Йәш милиционер табылған бер нәмәне протоколына теркәй барҙы, аҙаҡ йыйылған халыҡтан ошо хаҡта ҡултамға алды. Кешеләр таралып бөткәс тә Мәҙинә өй урыны эргәһендә шаҡ ҡатып баҫып торҙо: тимәк, Фәүзиә инәй менән Ихсанбай ағай... үлмәгәндәр?

Ғәҙәттәгесә, һәүетемсә генә барған Тирәкле тормошонда ҡапыл һиҫкәндереп, тетрәтеп, һелкетеп алырҙай ваҡиғалар булып алһа ла, ғөмүмән, халыҡ өйрәнелгән, күнегелгән тәртиптә йәшәүен дауам итә. Колхозда сәсеү эштәре бөткәс, һәммәһе үҙ йортона йәбеште: картуф ултырталар, ҡойма яңырталар, ҡатындар, төркөм-төркөм төйнәлешеп, бер-береһенең өйөн йыуырға йөрөй. Барыһы ла үҙ сираты, үҙ әмэл-ғәмәле менән бара.

Ә бөгөн һабантуй. Һарайғырҙың хәле яҡшырманы. Атылған аяғын таҙартып, талыҡлап бәйләп ҡуйһалар ҙа шеш һаман өҫкә күтәрелә. Ветеринар бер килгәнендә:

— Бысаҡтап ҡалырға кәрәк, юғиһә... — тип ауыҙын аса башлағайны, Хөсәйен унық тыңҡыш танауы аҫтына һирәк йыуылыуҙан аяуһыҙ ҙур күренгән елле йоҙроғон килтереп терәне:

— Ә бына бынан ауыҙ иткең килмэйме?!

Хөсәйен, күңелһеҙ генә йөрөп, биш сабыш атын сығарҙы, малайҙарға кәңәштәрен бирҙе, алда килгән аттың район бәйгеһенә барасағын әйтте.

Агтар сыға башлағас, һарайғыр ҡолаҡтарын ҡайсыланы, күҙҙәре янып китте, танау тишектәре таржайҙы, тороргa м.паша башланы. һарайҙан сығып киткән аттарҙы унық ярһып кешнәүе генә ҡыуып етте.

Аттарҙы оҙатырға сыҡҡан Хөсәйенде Мирхәйҙәровтың гауышы һиҫкәндерҙе:

Нимә приказчик һымаҡ ҡарап тораһың! Хәҙер үк барып ет! Малайҙарға ышанып ат биреп ебәреп буламы? Карай беләме улар аттарҙы, һыуыта беләме?

Хөсәйенгә һарайҙа тороп ҡалған күк дүнэнен менеп Һабантуйға китеүҙән башҡа әмәл ҡалманы...

Мәҙинә йоҡоһонан ғәҙәттәгенән иртә торҙо. Маһинур Инәһен уятмай ғына сығып, һыйырын һауып килде, сәй кайнатты, тышҡы усаҡҡа яғып, табала ҡоймаҡ шыжлатты. Маһинур Мәҙинә өйгә ҡайнаған самауырҙы боҫоратып күтәреп индергәс кенә торҙо:

Иртәлэгәнһең... Әллә нимәштәп йоҡтап тик ятам... \мац мәрхүмде төштә күреп тороп йоҡтайымсы... Аһ, әллә КОЙмак та ҡойғанһың?..

Мәҙинә урын-ерҙең ҡаралдыһын йыйыштыра ла башланы:

- һабантуй бит бөгөн.

Аһ, шулай бит әле!

Һала йоҡлай. Мәҙинә Маһинур инәһе менән сөкөрләшә-һөйләшә сәйгә ултырҙы.

һин барандыр һабантуйға?

Әллэ...

Мәҙинә ауыҙынан ишетелгән ауаздың төшөнкө булыуы һағайтты шикелле Маһинурҙы:

Нимәһе «эллэ»? һинең йэшендә!

- Йэше — йәш тә ул... Әптеләхәт тотҡонда, атай... Мин кимә тип...

Йырҙамаҫҡа булдың әллә?

Шуны әйтәм бит инде...

Йырҙамаһаң, ҡайғың эсеңә йыйылыр, һары булып, бауырыңа ултырыр — йырҙап тарата кеше ҡайғыһын!

- Әллә шул...

— Әллә-мәлләһе юк! Кейен! Баланы алабыҙ ҙа китәбеҙ! Йомортка бешереп, йыуаса, ҡаймаҡ-май төрөп алайыҡ. Берәйһеләренә ҡушылып, сәй эсеп ҡайтырбыҙ. Әйҙә, мин дэ ошоно ғына эсәм дә... — Туғыҙзы эсмәй сынаяҡ түңкәрмәй торған Маһинур был юлы ҡыҫҡа тотто. — Раббана атина фид-донъя... Амин аллаһа әкбәр! Хәйерле ризыҡ, бөтмәҫ-төкәнмәҫ бәрәкәт менән ғүмер итергә, Әптеләхәтең ҡайтып, апаң менән минең кеүек аҡ сәсле, һары тешле булғансы бергә ғүмер итергә яҙһын!..

— Амин, инәй, шулай булһын!

— Булыр, булыр! Сабыр итер кәрәк.

Маһинур инәһе сығып киткәс, Мәҙинә һандыҡты асты. Ана улар, әсәһенең ҡәҙерләп тотҡан кейемдәре! Ни тиклем аҫыл улар! Улар араһында фирүзә ҡашлы алтын беләҙек кенә юк: Мәҙинә уны Әптелэхэте менән өс минутлыҡ осрашыу ойоштороуҙа ярҙам иткән төрмә һаҡсыһына тотторҙо...

Башта Мәҙинә, көмөш сулпылар ҡушып, сәсен ике толом итеп үреп төшөрҙө. Унан ҡуҙ менән үтеген ҡыҙҙыра һалып, күлдәген үтеклэне. Ай-й! Ҡайһылай килешә уға был күлдәк! Әллә инде Мәҙинә эш күплектән тағы нескәреберәк тә киткән? Күлдәк өҫтөнән еләнен кейгәс, көҙгөгә ҡарап, сулпылы һырғаларын таҡты, бармаҡтарына тәңкәле йөҙөктәрен кейҙе. Ул арала бала уянды. Йоҡоһо туйып, шат йылмайып уянған улына, иҙеүен ысҡындырып, төн сыҡҡансы турһыҡтай тулышҡан имсәген ҡаптырҙы...

Иртэнге эштәре бөткәс халыҡ, кеме арбаға тейәлеп, кеме йәйәүләп, йыл да һабантуй үтә торған Талморон тип аталған ергә йыйыла башланы. Күптәр инде ҡаҙан аҫырға ла өлгөрҙө; самауыр торбалары төтөн урғылтты; күкле-йәшелле кейенгән халыҡ, өйкөм-өйкөм, ара-ара, ырыу-зат берләшеп, ҡаҙан тирәләренән урын алды, йәйғорҙай балаҫ, ҡораманан яһалған эргә-рәт юрғандарын түшәп, ҡолаҡсын мендәрҙәр ҡабартып, үҙ араларының оло кешеләрен, ҡунаҡтарын ҡабул итергә йыйынды.

Майҙан йәмлэнде. Йәшниктәрен тейәп, перәник-кәнфит еҫтәре аңҡытып, арбаһының яртыһын тултырғансы үҙе ултырып алып, Рауза килеп етте. Килеп тә етте, сауҙаһын башлап та ебәрҙе, һораған-һорамағанға:

— Үҙем генә килдем әле! Хөкөмәт эшендә йөрөгәс, әйҙә ҡалып булмай инде! Шулай бит, апай? Ир нисек киһен?

\илу сакты донъяһын таштап, ызнамо килә алмай! Өҫтәүенә ауырыу бала! Аллам һаҡтаһын, алйот нэмэ өйөнә үрт һалып ҡуйһа! Күрҙек шәй, ана, Ихсанбайҙың алпауыт йортолай донъяһынан бер баҙ күмер тороп ҡалғанын! — тип хәл-әхүәлен тәпсир ҡылды.

Кешеләр тыңлай, бәғзеләре, бөтмәҫ хэбәре бының, тип ары китә. Малайҙар ат өҫтөндә арлы-бирле йөрөштөрәләр; м>рошселәр ҙә, бил яҙып, тегелэй-былай борғаланалар; йүгеректәр, салбар балаҡтарын төрөп, урындарында сыҙап гора алмай туптырлайҙар...

Хөсәйенгә генә майҙан буш кеүек. Күҙе уның бер кемде күрмәй, бер кемде шәйләмәй. Ауылдың һаҡаллы эллә кеме килеп уның еңенән тартты:

- Аттарың шәп, ҡустым, кем, Хөсәйен.

Хөсәйендең йөҙө сирылды:

— Атмы ни былар?! Тфү!

һаҡал эйәһе бының янынан тайыу йәһэтен күрҙе.

Ана, майҙанға бала күтәргән, төйөнсөк тотҡан ҡарсыҡ шорткән Мәҙинә килеп етте. Аралар алыҫ ҡына булһа ла, Хөсәйенде шундук күрҙе, ҡул болғаны, Хөсэйен дэ, бөгөн беренсе тапкыр йөҙөнә йылмайыу шәрәмәте сығарҙы, йәш катынды сәләмләп, ҡулын күтәрҙе, ә үҙенең бөтә ҡиәфәте: •Их Мәҙинә! һине мендереп һарайғырҙы район һабантуйына осорорға хыял иткән булдыҡ. Ҡайҙа?! Юҡ бит инде Ьлрайғыр... эштэн сыҡты!» — тигәнде һөйләп тора. Аңланы уны Мәҙинэ, төшөндө: күрәһең, үҙенең дә үҙәге һарайғыр всөн Хөсәйендекенән кәм өҙөлмәйҙер. Кисә һарайғыр >ргоһендә ул да оҙаҡ ҡына булды, ялдарын, ҡолаҡтарын Ьыпырҙы, Хөсәйендең бығаса бер ҙә ишеткәне булмаған әллә Ниндәй назлы һүҙҙәр әйтте атка... Хөсәйендең күңелен гулыһынса Һарайғыр билэп алған кеүек булһа ла, унда ошо Млзинә өсөн дә ниндәйҙер урын бар кеүек ул...

Һабантуй башланыу иғлан ителде: аттар стартка баҫты. Мылтыктан аттылар — шуны ғына көткән аттар, тояҡ аҫтындағы таштарҙан ут сығарып, урындарынан ҡупты.

Шул мэл Хөсәйендең ҡолағына таныш кешнәү Салынғандай булды. Ауыл яғынан килде был яңғыраҡ ауаз! Һарайғыр?! Булмаҫ. Ул нисек... Йөрәге урынынан ҡупкан Көсәйен, күк дүнәнгә менеп, ауыл яғына шыҡыйҙы...

Йырларға теләк белдереүселәрҙе исемлеккә теркәй башлағастары, Мәҙинә баҙап ҡалды: яҙылырғамы, юҡмы?

— Һин ништәп ғәйепте кеше төҫтө шымып утырырға тейеш, ә?! — тип теңкәһенә тейҙе Маһинур инәһе лә. — Бар, яҙыл, әтү үҙем яҙҙырам.

— Ҡуй әле, инәй...

— Башка теләүселәр юҡмы?

Мәҙинә өндәшмәне.

Йыр бәйгеһе ат сабышы, көрәш үткәс кенә башланды. Беренсе килгән һыбайлыға хром итек бирҙеләр, көрәштә еңеүсе һарыҡ алды, иң шәп йырсыны патефон көтөп ултыра. Мәҙинәнең ул әйберҙе үҙендә бик тә булдырғыһы килә лә, тик... күңеленең ҡайһылыр ере, ярамай яҙылма, йырлаһаң да иң һуңынан, урындар билдәләнгәс кенә йырла, ти. Белә ул: Мәҙинә йырларға яҙылһа, йырсылар берәм-берәм килеп исемлектән үҙҙәрен һыҙҙыра башлаясаҡ...

Тирәклелә йырҙы әүәҫ тыңлайҙар. Ҡурайсылары ла күп, байтаҡ ҡына боронғо йырҙар ошо төбәктә, ошо халыҡ тарафынан ижад ителгән. «Түрәкәй», «Сибай», «Ильяс», «Бөйрәкәй», «Зөлхизә», «Ғилмияза» — һәр башҡарылған йырҙы Мәҙинә донъяһын онотоп тыңланы, һәр йырсы унын йөрәгендәге быҒаса ойоп торған кылдарҙы сиртте, күңелен яңы хистәргә, кисерештәргә байытты. Юҡҡа ғына Мәҙинәне тыңлаған һайын Давид Соломонович: «Ниндәй йырҙар! Ниндәй халыҡ һеҙ! Был тиклем моң ҡайһы ерегеҙҙә ярала ла, ҡайһы ерегеҙҙән сыға?!» — тип аптырамағандыр...

Йырсылар тыңланды. Патефонды ла алдылар. Шул саҡ, балаһын Маһинур инәһенә тотторол, Мәҙинә урынынан торҙо.

— Һабантуй хөрмәтенә, йырсыларға ихтирам йөҙөнән мин дә бер йыр йырлайым әле! — тине.

Мәҙинә уртаға сыҡманы, ситкәрәк, суҡ ҡайын төбөнә барып баҫты, саҡ ҡына уйлана бирҙе, күңеле менән асманға, тормош, йәшәйеш фәлсәфәһен һаҡлаған моңдар донъяһына тоташты:

Табаҡ та ғына табаҡ, ай, аҡ ҡағыҙ —

Буранбайҙың яҙған хаттары...

Был юлдарҙың, был даусыл моңдоң күңеленә тап ошо минутта ни өсөн килгәнен ул үҙе лә әйтә алмаҫ ине. Әммә йырлай башлау менән ул был моңдоң үҙенең тамырҙарында күптән аҡҡанын, ташырға етешкәнен һәм ҡапыл бәреп и.гкканын тойҙо. Ҡасан яралғандыр... Атаһын һуғышҡа орҭкандамы, әсәһен юғалтҡандамы, Әптеләхәтен көтөп, Һыйыр мөгөҙөн һындырыр һыуыҡтарҙа «Бутырка» ҡапҡаһы гөбөндә йән һөйгәнен бер күрергә зар-интизар булып юрғандамы, әллә көнсөл бәндәләрҙең яуыз уйынан атылған, юиъяға һирәк тыуа торған аҫыл заттың — һарайғырҙың — ганһығы ҡанмаған ярыш ҡомарының күҙҙәренән эҫе йәш булып түгелеүен күргәндәме... Ҡайҙа, ҡасан яралғандыр... Мәгәр хәҙер аҡ һаҡаллы ҡарттарҙың башын эйҙереп, бөтә калыкты — аҡланды-асманды тетрәнергә мәжбүр итеп, күкрэгенән йыр урғыла:

Буранбайҙың яҙған хатын укып,

Зар илайҙыр ауыл ҡарттары...

Йыр Талморон аҡланына ғына һыймай, Күктау, < > юбейек, Ҡаратау буйҙарын иңләне, әҙәмдәрҙең күңел гөпкөлдәрен айҡап-сайҡап, уй ғына буйлар аҡыл-зиһендәрен байҡаны.

Ә был мәлдә Хөсәйен ат һарайына барып етте һәм Һарайғыр торған кәртәнең һынған һайғауҙарын күрҙе. Ппмдәйҙер ғиллә менән аяҡка баҫкан ат кәртә емереп сығып олаҡкан. Хөсэйендең ҡолағына йэнә һауа яңғыраткан ярһыу ксшнәү салынды. Ҡайҙа һин, Һарайғыр?! Хөсэйен атын Гауыш килгән яҡка ҡыуҙы. Ана ул, һарайғыр, ҡолас етмәҫ ч ıын туҙғытып Шайтан тауы һыртына ҡарай елә.

– һарайғыр?!

Ел Хөсәйендең тауышын үҙенэ кире ҡайтарҙы. Ҡайҙа бвра был? Ә унда — «Бурылбейә ҡаяһы» тип йөрөтөлгән текә Кая, аҫта — Шайтан күтере.

һарайғыр?!

Дүнән йән көсөнә тырышһа ла яралы айғырға етә алманы: гаv үренэ елдерә генә һарайғыр. Шундай йәрәхәт менән, үлемесле һыҙланыуын еңеп, ҡайҙа саба был?

һарайғыр?!

Артына әйләнмәй ҙә бит, исмаһам! Бына ул, ғорур зат, Кояшта күҙҙең яуын алырлыҡ ялтыраған ялдарын һәлмәк гуҙғытып, ҡая ситенә баҫты, үҙенең ҡолонсаҡ сағында

уйнаған, аҙаҡ елдәй елдергән, йәш бейәләр менән ғишыҡ ҡосағында ярһыған яландарын, уның һәр аҙымына, еңеүенә һәм... еңелеүенә шаһит тау-урмандарҙы яңғыратып кешнәне һәм... мәңгелек ҡосағына атылды.

— һарайғыр!!!

Хөсәйен ҡаяға менде. Тирә-яҡ тын. һарайғыр тояғы аҫтында ҡупкан таштар ғына, сабый күҙҙәренән тамған эре йәштәр кеүек, түбән тәгәрәй...

— һарайғыр... — Хөсәйен әле генә айғыр баҫып торған тупраҡты усына ҡыҫты, уның ғүмере илау белмәгән күҙҙәренән ҡара тупраҡҡа ҡушылып ҡуйырған йәштәре тамсыланы... — һарайғыр...

Ул шулай күпме ятҡандыр, ер бауырын дерелдәтеп килгән ауаз башын күтәрергә мәжбүр итте: ҡайҙан килә был тауыш? Хөсәйен аяғүрә баҫты. Аҫта, туғайҙа, Шайтан күтеренән күпкә арыраҡ йыйылған бар халыҡтың башын мондан эйелдереп, йәш йәшеллеккә, сәскә-балға күмелгән тәбиғәтте мондан уйылдырып, Мәҙинә йырлай ине.

Өсөнсө өлөш

ҺАНДУҒАСТЫҢ ҺАЙРАР ҒҮМЕРКӘЙЕ

Беренсе бүлек

— һай, һай, һай, һай, һай... — рәт-рәт булып теҙелгән аҡ күлдәкле ҡара костюмлы ирҙәр бер үк ритмда бер үк һүҙҙе ҡабатлай, — һай, һай, һай... — Мәҙинә өтәләнә, дирижер иультына баҫҡан да алдындағы партитураға үрелә. Хачатуряндың «Поэма»һы. Әммә Мәҙинә иғлан итергә өлгөрмәй, уның эргәһендә, иҙән ярығынан сыҡҡан төҫлө, көмөрө профессор пәйҙә була:

— Ярамай! Тыйылған!

Мәҙинә уңайһыҙлана, үҙенә текәлгән хор коллективынан ояла, ҡулы ирекһеҙҙән икенсе партитураға үрелә:

— Прокофьев. Алтынсы симфония. — Мәҙинә дирижер таяғын күтәрергә лә өлгөрмәне, баяғы бөкөрөнөң ялтыр башы, күҙлек аша самаһыҙ ҙур күренгән шешмә ҡабаҡтары артындағы күҙҙәре усал ялтыраны:

— Ярамай! Тыйылған!

Мәҙинәнең маңлайына тир бәреп сыҡты, капелла һаман бер үк ритмда, бер үк һүҙҙе ҡабатлай:

— һай, һай, һай...

Инде Мәҙинәнең тауышы баҙнатһыҙланды, үҙенең лйткәндәрен үҙе саҡ ишетә:

— Вано Мурадели... «Бөйөк дуҫлыҡ»...

Был юлы ялтыр башлы бөкөрө профессор түҙмәне, Моҙинәнең ҡаршыһына ялп итеп килеп баҫты һәм, барлыҡ мартитураны йомарлап, киҫәктәргә йыртып, Мәҙинәнең йөҙөнә ырғыта башланы:

— Һин, Ирназарова, ВКП(б) Үҙәк Комитетының «Совет музыкаһында декадент ҡараштар тураһында»ғы ҡарарын уҡымағанһың! Уларҙы формалистик ҡараршта торған композиторҙар ижад иткән! Улар совет халҡына ҡаршы йүнәлтелгән! Ултыр, ике! Был һиңә иренцең йоғонтоһонан килә, эйе, эйе! Халыҡ дошмандарына совет консерватория-һында урын юҡ!

— Ах! — Мәҙинә, алйыған профессорҙан йөҙөн һаҡларға була артҡа тайшанды, сигенеүе булды — сәхнәнән ҡайҙалыр түбәнгә тәгәрәне. — Ах! — Осоу туҡтағас, ул күҙҙәрен асты. — Мин быларҙы белә инем, уҡығайным...

Мәҙинә, үҙенең ҡайҙа ятҡанын аңламайынса, күҙҙәрен йөрөттө: тар ғына ишек, сыуал. Ҡаршыһына һайғау тартылған, уға ниндәйҙер еүеш кейемдәр эленгән. «Мин ҡайҙа? Ә капелла, ә көмөрө профессор...» Бәй, ул бит ферманың ҡарауылсы өйөндә ята! Эйе, эйе... Шул өй... Ана баҡырса, уның морононан сыуалдағы ҡуҙға һыу тама, ҡапҡасын ҡалтыратып, боҫ бөркөлә.

Тамам уянған Мәҙинә ҡалҡынып тороп ултырҙы. Муйынын уратып бәйләгән суҡлы шәле тынын ҡыҫа, өҫтөнән һырмаһын да сисмәгән. Эй-й-й... ул бит бөгөн фермала дежур. Көн дә бер һауынсы шулай быҙаулау бүлегендә төнгөлөккә ҡала. Мәҙинә һыйырҙар янына әллә нисә барып әйләнде. Ахыр сиктә, таңғы йоҡоға түҙмәйенсә, йоҡлап киткән. Ә ҡарауылсы... Ғәләүетдин ҡайҙа икән? Ярай ҙа һыйырҙарға ул күҙ һалһа... Тышта аяҡ тауыштары ишетелгәс, Мәҙинә итәк-еңен рәтләне, шыуып, аяҡтарын һәлендереп, ширҙеккә ултырҙы. Ишектән ҡар һырыған тунын бүрке менән ҡаҡҡыслап Ғәләүетдин инде:

— Бурай ғына... Мәҙинә, әллә һин йоҡтаманың?

— Йоҡтағанмын... Яңы торҙом. Һыйырҙар...

— Мин әле шунан киләм.

— Бөйрәкәй көйшәйме?

— Көйөш алыуын ала... Бер-ике сәғәттән быҙауҙар микән?

— Уй, мин..

— Сыҡма әле, сыҡма... Ашығырҙығы юҡ. Сыуалға картуф тәгәрәткәйнем. Ана сәй ҙә ҡайнаған...

Ғәләү йышылмаған таҡталарҙан әтмәләнгән өҫтәлгә ике көрөшкә ҡуйҙы, көл араһынан сипсы менән тартып бер нисә картуф сығарҙы.

— У-у... бешерэ! Ҡарындаш, яҡында, һырманды һалып гор, тәнең ял итер. У-у... мындай тэмде ризыҡты Мәскәүҙәге һинең профессорҙарың да ауыҙ иткәндәре булмағандыр, шэй... Әйҙә, эйҙэ...

Мәҙинә боҫ бөркҡән картуфты икегә бүлде, төшө менән онө араһында албырғап, һаман иләмһерәп ултыра бирҙе. Ә гege «һау, һау, һау» тигән тауыш һаман ҡолағында яңғырай. Ул эллә ҡайҙан, тауҙарҙан, ундағы йөҙйәшәр ағастарҙан, каяларҙан килгән кеүек...

— Ғәләүетдин ағай, э... буран сығырға торған кеүек гүгелме?

— Юҡсы... Ҡар ғына яуа... Тыныс...

Ғәләүетдиндең әйткәне тынысландырманы Мәҙинәне. Уның һәр тауышҡа, өн-ауазға һиҙгер ҡолағы, ҡолағынан да Һиҙгерерәк йөрәге ҡайҙалыр алыҫта, ерҙәме, күктәме, көслө буран булып ябырылыр ғәрәсәт килгәнен тойғандай.

— Бөгөн бесәнгә нисә сана сығаралар икән?

— Әллә... Сәяф ни тиер... — Мас килеп картуф менән һыйланған Ғәләүетдин артыҡ бошонманы, Мәҙинәне лә тынысландырырға тырышты. — Калхуз малына ни булһын... I абырҙа-а-ар...

- Мин китәйем әле! Сәяф ағай килһә, әйтәйем, запас әҙерләһендәр, буран сығасаҡ, ағай! Оҙаҡһыҙ тынмаясаҡ!

Был мәлдә Тирәкле ауылы халҡы таңда ғына күрелер осор төштәрен күреп тәмле йоҡоһон дауам итте. Бары биш-алты •Йәв генә шәмгә ут алдылар. Улары һауынсылар, малсылар йәшәгән өйҙәр. Ҡар инде ҡыш урталарына тиклем байтаҡ өйҙәрҙе яртылаш, ҡайһы бер тәпәшәгерәктәрен бөтөнләй Күмеп киткән. Өйҙәр менән өйҙәр араһында «сысҡан һуҡмаҡтары» һалынған. Әле кәртәләнгән, күңелгә шөбһә һалып йөҙгән ҡараһыу болоттар аша ҡапыл килеп сыҡҡан ай |уылдың йоҡоло, талсыҡҡан йөҙөн аңғармаҫтан күрһәтеп ала |Д, пәнә шул ҡара ятыуҙай өйөрмәләр эсенә йәшеренә. Бынан,

ферма үренән, ауыл ус төбөндәгеләй күренә. Ай бер килеп сыҡҡанында Мәҙинәләрҙең дә өйөн яҡтыртты. Унығ ферма яғына ҡараған берҙән-бер тәҙрәһендә ут шәүләһе ялтыраны. Маһинур инәһе тороп, усаҡ аҫтына ут яҡмаҡ, Дауыт өшөмәһен тип, өйҙө йылытмаҡ, күрәһең. Ул барҙа Мәҙинәнең балаһы өсөн дә, өйө өсөн дә күңеле тыныс. Ут Мирхәйҙәровтар өйөндә лә ҡабынды. Иртә тора икән председатель. Сәйф тыңламаһа, бәлки, председателдең үҙенә барырға кәрәктер Мәҙинәгә? Мәҙинә кесәһендәге шырпы менән туҙҙы ҡапшаны. Ҡараңғыла оҙон кәртәгә янғыҙы барып инеү әллә ҡайһылай, ҡурҡыта. Тик, нишләмәк кәрәк, һыйыр быҙаулап, сыуын ашаһа, һөтө булмай, тиҙәр. Ҡар яуыуҙан туҡтаған булды, мәгәр Мәҙинәнең күңеленә шом һалған тауыш баҫылманы...

Төн Ихсанбай өсөн үҙен-үҙе язалау миҙгеленә әүерелде. Кеше күҙенә салынып, әҙәм балаһына ек күремсеһе булып йөрөүҙән ҡурҡыуҙанмылыр, ул көндө йоҡлап үткәрә. Ҡасандыр ел-буранда һаҡланып төнгөлөккә яптырған тәҙрә ҡапҡастарын да астырмай. Шулай ышығыраҡ. Йәне ҡурсыулы. Әсәһе, әҙәм балаһын ике яурынындағы ике фәрештәһе һаҡлай, ти торғайны. Ул фәрештәләргә генә ышанып ятһаң, хәҙер аҫҡа шәре инә башлар. Теге саҡ ул шәре ингән ерҙән ҡотолоп ҡалды ла бит, гел улай яйы сығып тормаҫ. Яйы сыҡҡан хәлдә лә ниндәй хаҡҡа? Ихсанбайҙың хәҙер кеше тип әйтер ере лә ҡалмаған.

Ней өйө эсендә күңеленә һиллек биргән зат юҡ. Рауза — торғаны һайыҫҡан. Иҫәрҙән һорама, үҙе әйтер, тигәндәй, осраған берәүгә барын-юғын шыҡырыҡтарға ғына тора. Алдындан артың хәйерле, тип ҡайтарып ҡына ебәрер ине — шыпа яңғыҙлыпсган, йәнә ашнаҡсыһыҙ, ялсыһыҙ ҡалыуҙан ҡурҡа.

Эйе... Бола шул Ихсанбайҙың күңел донъяһы, уйым-уйым ҡара ятыуҙарҙан ғына торғандай. Илдән дә тәртип китте. Сталин барҙа баш осондағы ҡоҙғондар көн дә берәүҙе сүпләһә лә, тәртип булды. Барған юлың асыҡ, тура ине. Хөкүмәт асылда уҡымышлыларҙы сүпләне. Шуларҙы яратманы. Ә Ихсанбай кеүек эшләй белгән наҙанға

ҡағылманы. Уға районда килгән ниндәй генә түрәләр теш ҡайраманы! Ихсанбай бирешмәне: алдарына күрһәткестәре яҙылған ҡағыҙҙы йәйеп һала ла, таянғаным яр булһа, тип оло кәжәтен башҡарыуын дауам иткән Хужа Насретдиндәй, тыныс ҡына ултырыуын белде. Етмәһә, Ихсанбай райондың башҡа хужалыҡтарының да күрһәткестәрен яҙып барҙы. (шыштарында сағыштырыу өсөн шуларҙы файҙаланды. Б....а шулай ҡотолдо ул күп бәләләрҙән. Хәҙер бына хөкүмәт башына Маленков тигән берәүҙе ултырттылар. Ленин менән Сталин фамилиялары үҙе ни тора ине! Был бахыр — Малснков. Шундай ҙур дәүләт һәм... «Мин бик бәләкәймен шул!» тип ҡысҡырып торған фамилиялы етәксе. Булмай ул (н.шан, тота алмай ул илде. Ярай, тота ла алмаһын, китһен дә ги. Ә унан һуң кем килер? Рәсәй кеүек ғүмер баҡый хандарға буйһоноп, улар ҡушыуынса йәшәп өйрәнгән халыҡҡа ҡаты ҡуллы хужа, ихтыярлы, көслө баш кәрәк.

Ихсанбай Тирәкле ауылы етәкселәре менән дә ҡәнәғәт гүгел. Мирхәйҙәровын да әйтер ине... Уҡытыусы булғас, уҡытып ҡына йөрөһә ярамағанмы? Председатель булғас та у кытыусы холҡонан арына алманы: кем матур һөйләй, шуны тыңлай, шуға ышана, шуны маҡтай. Ә бит тормошта күберәк шупың киреһе: ҡулынан эш килгән кеше күп һөйләмәй. Һин, •нра булмаһаң, унығ күрһәткестәренә ҡара. Шунан ғына Күтәр, шунан ғына маҡта. Юҡ, Азат яңылыша. Азат Әһли \ ны Мирхәйҙәров тигән колхоз председателенә ҡарағанда Сы нтимер Әһли улы Мирхәйҙәров тигән мәктәп директоры күпкә көслөрәк ине. Күрәһең, Мирхәйҙәровҡа мулла ҡушҡан исеме күберәк көс биргән, Азат исемен һуңыраҡ, һуғышҡа Китер алдынан алды. «Тыуыу турһындағы таныҡлығы»на цсыҙыл» атаһы шулай тип яҙҙырған булған...

- Эйе... колхоз хәҙер әйҙәнсек һарыҡ һымаҡ, гел бер \|>ында урала, гел бер урында тапана. Тракторҙары, комбайндары, сәскес, урғыстар бар. Их, шулар Ихсанбай Шманында булһа! Ауыл халҡына быҙау сығарыр ер, ҡаҙ көтәр врышын ҡалдырмай һөрөп-сәсеп бөтөр ине ул! Тапатһалар — ираф, урлаһалар — төрмә! Йәшелсәһен, емешен үҫтереп Һ.мым ҡына колхозды серегән байға әйләндерер ине Ихсанбай. Ауылда әлегә тиклем электр уты юҡ. Ыстырам! Үҫтергән нәмәләрен ҡайҙа һаҡларға белмәйҙәр. Ихсанбайҙың һуғыш мәлендә район түрәләре белмәгән келәте булды.

Йәшерһә йәшерҙе, унын̡ ҡарауы, ул яҙ орлоҡ һорап бит һыуын түгеп йөрөмәне. Ә балыҡ?.. Балыҡ менән Ихсанбай әҙәмде астан үлтермәй алып сыҡты, былар, тфү, шуны ла тотоп һатып аҡса яһай белмәйҙәр! Әгәр ҙә Ихсанбай ошо уйҙары менән Мирхәйҙәровҡа барһа?.. Һәй, аңлар тиһенме уны... Уҡымышлы кешеләрҙең бер ятраҡан һүҙе бар бит — утопия. Шулай тип әйтәсәк Азат. Был тиклем эштәрҙе башлап осона сығыр өсөн борондан, ҡанындан килгән ҡатылыҡ кәрәк — ярлыла ул сифат ҡайҙан булһын? Тай ат булғансы, хужаһы эт була, ти. Власҡа килгән бөгөнгө етэкселәрҙән хужа сыҡҡансы, илдең биле бишкә бөгөләр, өҙөлөп китмәһә эле...

— Эх! — Ихсанбай, сараһыҙлыҡтан ауыҙлыҡ сәйнәгән айғыр кеүек борһаланып, һыңар күҙен секерәйтеп, мендәренә ауҙы. Теге күрше урыҫ ауылында «айыу итенә» алыштырған көмөшкәһе лә бөтөп бара.

— Рауза!

Ҡарсыҡты баҙға төшөрөргә ине — Рауза тауыш бирмәне. Йоҡо мискәһе. Ашауҙан түгел, йоҡонан һимерә микән әллә был бисә заты? Айыу өңөнә йомарлап тығып ҡуй инең шул Раузаны. Ятһын ине усын ялап, тормаҫтан ойоп...

— Рауза! Бисә тейем! — Ихсанбайҙың тауышы был юлы ярайһы көр сыҡты. Хатта ғәҙәттәге ғыжлау-сыйылдауы кэмегән кеүек булды.

— Ним-ә-ә... — Аш бүлмәһендәге Рауза тороп ултырҙы ахыры — урындыҡ таҡталары шағыр-шоғор итте. — Атаҡ, атаҡ... У кем у?! Ишмәмәт?! Ah-ah... Теге... пельменной Ихсанбайҙы төштә күрәм... Имеш тим, кәнсәгә ут яғырға барғанмын. Үрелеп йүшкәне асып торһам, шул ҡәһәр һуҡкан килеп ас билемдән ҡыҫып тотоп алмаһынмы!

— Ярай, күп тәтелдәмә... Төш тынҫарға мин һиңә ҡарсыҡмы? — Раузаның ҡаты ҡолаҡ булыуы арҡаһында урынынан ҡупкан Ихсанбай ҡараңғыла юрған эсендә тулҡынған Раузаға берҙән-бер күҙен секерәйтте. — Төш баҙға! Алып сыҡ!

— Ah-ah... Ҡалайтып... У ни бөткән шикелде ул...

— Теләһәң ҡайҙан тап!

— Ah-ah... Табырға унын ҡойоһо бармы беҙҙә?

— Бисә-ә! — Ихсанбайҙың ауыҙынан йылан ыҫылдағандай сыҡкан был тауыш Раузаны һиҫкәндерҙе, йөрәген ҡалтыратҡан дерелдәү теҙҙәренә, унан үксәләренә төштө.

— Хәҙер...

Күп тә үтмәй Раузаның сыра яктыһында аҡ айыуҙай яктырған оло кәүҙәһе йәтеш ауыҙлы баҙға бурһыҡ имлғырлығы менән төшөп юғалды...

Баҙҙағы фляганың төбөндәге һарҡындыны сүмескә бушатып, ыштандан ғына аяҡтарын урындыҡтан һәлберэтеп күтәреп ултырған иренең алдына ҡуйғас, Рауза еңел тын алды. Ул арала Ихсанбай шәмгә ут алғайны, Рауза, өй һыуып киткәндәй булғас, кире урынына ятып, башынан аша үҙенең баҡта юрғаны менән бөркәнде.

Рауза... — Эсенә шайтан төкөрөгө ингән Ихсанбай и.шыслана төштөмө икән, тауышы көйләнеберәк киткәнгә оҡшаны.

— Йә, шунан?

Мирхәйҙәровтың мине... һорашҡылағаны юҡмы?

Кемдә кем ҡайғыһы... — уңайлап ятып алған роүешенән ҡәнәғәт Раузаның һүҙҙе сурытырға иҫәбе юҡ Икәнен һиҙһә лә, Ихсанбай төбәшеүен белде. — Ә халыҡ?

Кәпрәткә йомошҡа килгән кешелә һинең ҡайғымы?

- Ҡайғыһы юҡ та, ҡайғыһы юҡ... Һин нимә эреләнеп к итт сң эле? Йүндәп хәбәр һөйҙәгән юҡ, һорашҡанға арып та |рып яуап...

Ай алла! Кемдең тәмде йоҡо ваҡытында хәбәр һөйҙәгеһе киһен?! һин төн убыры шикелде утырғас та, миңә ои таң тишегенән эшкә!

Таш аҡтарып йөрөмәйһең әле...

Атаҡ, таш аҡтармаһам ни... Минеке бит баш эше! Шитай, бөтөн ауыл...

Ярай, ярай... Бер нәмә әйтер хәл юҡ... Нимә генә Һорайым тигәйнем әле... Анау... Мәҙинәнең һыйыры тәки Габылманымы?

Уш-пыш килә башлаған Раузаны иренең һуңғы һорауы ы ырынан сығарҙы:

Какуй делаң бар һинең Мәҙинәнең һыйырында?! Мал түгел, кеше үлән араһына, иҙән ярығына төшкән энәләй Юғала! Шитай, ана Фәүзиә ҡарсыҡтар, Ихсанбай, Сәбилә, Ғарифа, йәнә Мәҙинәнең ҡустылары! Шуларҙы йоҡтай алмай уиҙап ятһаң бер хәл, атыу... һыйыр!

Етте! — Ихсанбай ҡыҙа биреп урынынан ҡалҡынды. Іһпсттеңме?!

10 Л 171

— Диуана... - - Рауза шуны әйтте лә тынды. Кәрәсине бөткән шәм ялпылдай бирҙе лә һүнде. Өйҙө тағы мэмерйэләге шикелле ҡараңғылыҡ, шундағы кеүек үк тынлыҡ баҫты. Ихсанбай аҫтындағы түшәген һәрмәне. Кейеҙ. Унда, мәмерйәлә, йәнлек тиреләрендә яттылар. Стенаға ла йәнлек, ат, һыйыр тиреләре тартылғайны. Бер яғынан тыныс та булған. Сыуалдан утты өҙмәһәң бик ҡалтыратмай ҙа, ләкин... Ул йәнә тороп йүшкәне асты, тәмәке ураны. Ашығып-ашығып шуны һурған ыңғайға йөрәге өшөнө, ситлеккә бикләнгән йәне тыпырсынды: «Ҡәберҙәй ҡара төн, бәғереңә үтер ҡәбер һыуығылай... тормош. Ни бысағыма тыуҙы икән Ихсанбай был донъяға?! Мәҙинәнең дә хәҙер иң ауыр ваҡыты: ир юҡ, ҡайтыу-ҡайтмауы билдәһеҙ; атай төрмәлә. Әгәр Ихсанбай ошо рәүешле имгәнмәгән булһа... Бәлки, әле лә һуң түгелдер? Бисо бит инде Мәҙинә. Ҡыҙ түгел. Бисәләрҙе бит яулау, үҙендекс итеү өсөн бер ҡороҡҡа эләктереү етә... Эйе, эйе! Йәнс йәһәннәмгә киткере мәңге ҡотаймаҫ колхозды уйлап башыи ауырттырғансы, нишләп әле Ихсанбай үҙ тормошон ҡотло итеү эмәлен уйлап баш ватмай? Сүместәге шыйыҡсаны төпләгәс, Ихсанбай, йүшкәне ябырға ла онотоп, кирс урынына ауҙы. Мөрйәләге ел уйнауы бүре олоуын хәтерләтә, йәнә ҡайҙалыр алыҫта ниҙер үкерә, ҡотора, тулай кеүек... Әллэ уға тыныс йоҡлар өсөн Күкбүре етмэй микән?

Район советының сираттағы сессияһынан Камалстдиновтың башы ауыртып сыҡты. «Ҡышҡы шарттарҙа мал башын һаҡлау һәм үрсемде, малсылыҡтан килгән табышты арттырыу» буйынса докладты райондың баш зоотехнигы һөйләне. Бөтәһе лә дөрөҫ кеүек. Малға етерлек аҙыҡ берәмегс әҙерләнгән, ҡуралар йылы, малсылар етерлек, ә ни өсөндөр һауым түбэн, быҙауҙар үлә, һимертеүгә ҡуйған малдар кәрэкле көрлөктә тапшырылмай. Берәүҙәр колхоз эшенең алға бармауын шәхси стимул булмауҙан күрә. Халыҡ ярлы йәшәй, яҡшы эшләгәндәргә лә, эшләмәгәндәргә лә бер үк ҡараш. Камалетдинов бөтә хужалыҡтарҙа ла «Почет таҡтаһы» булдыртты, егәрле колхозсыларҙың фотоларын райком алдына ла ҡуйҙыртты. Ә күрһәткестәр — шул уҡ.

Райком алдында Тирэкленең председателен күргәс, Әйүп I [illegible]изович йәнләнә төштө:

Ҡайтмаған икәнһең дә... Әйҙә, ин. һөйләшеп \цтмрайыҡ.

Мирхәйҙәров үҙе лә Камалетдиновты көтөп торҙомо икән, [illegible]аныуы йөҙөнә сыҡты:

Эйе бына... Бер килгәндә...

Кммалетдиновҡа Мирхәйҙәровтың кабинетты тәү Күргәндәге шикелле байҡап ҡарап ултырыуы ҡыҙыҡ тойолдо:

Берәй нәмә үҙгәргәнме?

Хәҙер көн дә бер нәмә үҙгәрһә лэ аптырар эш юҡ, [illegible] Әле Маленков ине, хэҙер Хрущев тигәне шытып [illegible] м. Шуға ҡарайым да, мәйтәм...

Әллә инде, Азат Әһлиевич... Бынау Маленковы арыу [illegible] гартҡан кеүек ине. Крәҫтиәнгә шәхси стимул тигән [illegible]нәмәнен килеп сығыуына ла ҡыуанғайныҡ. Былай ни... ҡоро [illegible] оүлоккэ — ҡағыҙ. Бына тағы, имеш, унын эшенән дә хата щпкандар... Көн дә бер яңылыҡ... һеҙҙә лә эштәр көйлө рсммәй.

Әллә инде, — Азат Мирхәйҙәров ҡуйы ҡашы аҫтында [illegible] шйҙарса бер ҡатлылыҡ менэн йылтыраған зәңгәрһыу күҙҙәрен Камалетдиновҡа төбәне. — Мин, ҡустым, арыным шикелле. Булмаһа, ебәр мине.

һин дә шулай тигәс...

Уҡытыусы бит мин. Колхозды тартырға, ҡустым, ҙороҫон ойткәндә, көс етеңкерәмэй...

Ошоға тиклем уфтанғаның булмағайны ла?

Әллә... Ҡатын да сыҡ ти. Йәшерәк фронтовиктар бар . . . .)шлоп ҡараһындар...

Колхозсылар ни тиер... Уны бит мин хэл итмәйем... [illegible] пишлоп кэмей һеҙҙә?

Ьыйырҙар һыуалды...

|1ауынсылар... етешәме?

Ялһыҙ эшләйҙәр...

Мәҙинә нисек?

Ул тана алды. Йәй бик ыҙаланы инде...

Ыҙаланы тиһең?

Ыҙаламай буламы? Себен осоронда... тана өйрәтеү... [illegible] атаһы ҡайтманы. Сәйерерәк яҡтары булһа ла, кешегә [illegible] тейгән әҙәм дә түгел ине... Тәки теге игеҙәктәрҙең улемен шуға яптылар микән?

— Үгеҙ ни хәлдә?

— Үгеҙ? Ул ни... уға ни булһын? Йә бер үҙең килеп сыҡмайһың, Әйүп Ғәзизович. Ҙур түрәләр килеп һөйләшеп китһә лә халыҡ әүҙсмерәк ҡыбырлай башлай.

— Бына йыйылышығыҙға барырмын. — Камалетдинов калсндаргә тексәйҙе. — Ваҡыты үҙгәртелмәгәндер бит? Ә ни тиеүенде... сығам тигәненде башҡа ишетмәйем, ағай...

Мирхәйҙәров ауыр ғына ҡуҙғалып урынынан торҙо:

— Юлды һепертә ине, буран сыға күрмәһен...

— Күрһәткестәренде үҙгәртергә бер ай ваҡыт бирәм, Азат Әһлиевич!

Мирхәйҙәров өндәшмәй генә ишеккә ыңғайланы, Камалетдинов, рапорт ҡабул итергә йыйынғандағы кеүек, аяғүрә баҫты, тик: «Так точно, товарищ генерал!» тип ике бармағын сикәһенә терәүсе генә юҡ...

«Мәҙинә!» — йөрәк түрендә берсә һағышы, берсә шатлығы итеп йөрөткән исемде телгә алыу, икенсе кешенән дә шул алты хәрефтән торған моңло һүҙҙе ишетеү Камалетдиновтың ҡапыл күңелен күтәрҙе. Ни өсөн әле ул Мәҙинәне күреү шатлығын ете ҡат йоҙаҡ менән биктә тоторға тейеш? Ни өсөн ул ғүмеренең һәр минутын, йөрәгенең һәр һуғыуын үҙ-үҙе менән көрәшеп үткәрергә тейеш? Тирэклегә юл төшкән һайын ни өсөн эле ул осрашыуҙы киссктореү хаҡына унда барыуҙан баш тартырға тейеш? Эйе, Мәҙинә дуҫының ҡатыны. Камалстдинов бит уға йөрәген асырға, Мәҙинә юлына тоҙаҡ ҡорорға йыйынмай. Ул бары тик ярата! Быға тиклем бер кемде яратмағанса ярата. Камалетдинов уны үҙенән дә, үҙен уратып алған яҡындарынан да артыҡ... Ҡапыл уның күҙ алдына аҡ йомғаҡтай ғына Флоридаһы килде. «Әйүп, һин аҡылдан шашаһың! Шулай уҡ һин Мәҙинәне... ҡыҙыңдан да», — Камалетдинов, ике усы менән башын ҡыҫып, ҡаты ыңғырашып, кире урынына ултырҙы: «Кешеме һин, түгелме, иптәш Камалетдинов?!»

Мөғлифә әбейгә барып, өс тапҡыр ҡот ҡойҙорғандан һуң балаһы тынысланғас, күңеле күтәрелде Мәликәнең. Флорида уйнай башланы, ашауы ла һәйбәт. Ҡыҙыҡайҙың йөҙө

Ⅰ Йылу ғанды, күҙҙәрендә шаян осҡондар барлыҡҡа килде. Тик ш теле асылмауы ғына шомландыра. Лоҡман Талипо-.....ғарҙың Әбүбәкеренең теле телгә йоҡмай. Ә был бала... ПИүпко үҙенең хәүефен әйтер ине — ене ҡубыр тип ҡурҡа. Ишск асылған тауыш Мэликәне ҡапыл һиҫкәндерҙе. Ул. Үҙе. Нисск иртәрэк ҡайтҡан... Мәликә комодта ултырған I рисмая Москва» хушбуйын йәһәт кенә һөртөштөрөп, |..|п,||шмкы сәстәрен маңлай тирәһендә бейегэйтә бирҙе. \ нан. йөҙөнә йылмайыу сығарып, еңел баҫып, йоҡа халатының ендэре менэн елпелдәп, рәүешенэ бушамай йөрөгән катын ҡиәфәте биреп, алъяҡҡа сыҡты.

Лбау, әттәһе ҡайтҡан икән, мин әле...

Лшарға әҙерме?

Эй Әйүпкәйем... Ҡатыныңдың ире ҡайтыуына ашарға рләмәй торған сағы бар әллә?!

Булмағас, яҡшы... — Ире ҡулъйыуғыстан ҡулдарын Мыуған арала Мәликә ҡатырғансы үтекләнгән ап-аҡ таҫтамал Килгсрҙе.

Эттәһе, ошоға ғына һөрт...

Күҙенә мөлдөрәп ҡарап, өлтөрәп торған ҡатыны Әйүптең Күңслен әҙгә генә булһа ла эретмәй ҡалманы, шикелле. Ул ырыя ғына булһа ла ҡатынының бейек янбашынан ҡағып, |уш сҫ бөрккән сэстәренә иренен тейгеҙеп алды. Наҙға Һыуһап йөрөгән Мәликәгә был етә ҡалды. Йәһэт кенэ асыҡ изеүле халатынан күпереп күренеп торған тығыҙ түштәре ин иренен шауҡал, ләкин ҡайнар күкрәгенә һыйынды, аяҡ ' " гарына баҫып, уның ҡапыл йылынып киткән күҙҙәренән таш-тилмәш үбеп алды.

Иртәрәк ҡайтып, ҡайһылай...

Флорида...

Ул йоҡлай...

Өммә ир менэн ҡатын мөнэсәбэте артабан үҫеш алманы. Был л Әйүптең:

Сессия көсөргәнешле үтте. Хужалыҡтарҙа эш бармай. Ш ı Мирхәйҙәровы... Иҫке ауыҙҙан яңы һүҙ, тигәндәй... Да... I нроклегә барып ҡайтмай булмай, — тиеүе сәбәп булды. Камалетдинов ҡатыны аша стенала эленеп торған көҙгөгә күҙ һа ı ıы. буғай. Сөнки уның: «Әллә сәс тә еткән инде...» — тигәнс ишетелде. Мәликәгә артабан был рәүешле иренә Һмйынып тороу эрһеҙлек кеүек күренде. Инде ул да һыуына

төштө, артҡа сигенеп, көҙгө аҫтына, стенаға һөйәлде, күңеленә аңғармаҫтан бәрелгән рәнйеүгә яуап итеп:

— Сәсенден... биленә еткәнен... Тирәклегә барыр булғас күрҙеңме? — тигән һорау бэреп сыҡты. Ире, ҡуйы, ҡарлуғас ҡанатылай яҙылған ҡаштары аҫтындағы ҡуңыр йөҙлө кешеләрҙә һирәк осрай торған зәп-зәңгәр күҙҙәрен ҡыҫа төшөп, ҡатынына бер ҡараш ташланы ла, көрһөнөп, өҫтәл эргәһендәге ултырғысҡа ултырҙы:

— Аш ҡой.

— Ҡоям!

— һүҙең бөттөмө?

— Бөттө! — Артабан тағы ниҙер әйтеп икәү араһындағы мөнәсәбәтте ҡатмарлаштырыуҙан ҡурҡкан Мәликә, туҙан һөртә торған сепрэген эләктереп, түръяҡҡа атланы.

Иренең ашап бөтөп тәрилкәне ары этклн тауышын ишетеп, Мәликә йәнә алъяҡҡа сыҡты.

— һиңә әйтәм, — тине ул, мөмкин тиклем үҙен тыныс тоторға тырышып, иренең алдына сәй яһап ҡуя-ҡуя, — бала эргәһендә кеше, йәғни һин булғанда... Мин Кәкере ауылға барып ҡайтайым әле...

— Нигә?

— Беренсенән, ҡарсыҡты ризаландырыр кәрәк... Унан һуң... һин нисек уйлайһындыр, миңә... ниңәлер... ҡыҙыбыҙ һөйләшә башлар кеүек... Лоҡман Талиповичтың Әбүбәкере менән сағыштырам да...

Ҡыҙының һөйләшмәүендә бары тик үҙен ғәйепле һанағандай, Мәликә уйлағанын бына шулай теҙҙе.

— Ә ниңә балнисҡа...

— Әйү-ү-үп... — Мәликә инде кейенә башлаған еренән иренә табан боролдо. — Йоҡламай интеккәнендә врачтарға эҙмейөрөнөк!..

— Эйе... уныһы шулай. Ярай. Тик ҡара: кеше белмәһен. Машина... саҡырайыммы?

— Юҡ, юҡ... Мин үҙем генә. Миңә лә әҙерәк һауала булырға кәрәк тә...

Ҡатыны артынан ишек ябылғас, Әйүп иркен тын алды. Төп яҡка үтеп, Флориданың йоҡлап ятҡанын ҡарап тора бирҙе лә, ҡулына гәзит алып, ҡәнәфигә сумды. Тик ҡулдары гәзит юлдарынан йүгерһә лә, йөрәге, танһыҡ осрашыу көткән күңеле татлы ла, ғазаплы ла хистэр өйөрмәһендә бәүелде. Күҙ

I ᑊ п.ша Мәҙинәнең йә Мәскәүҙә күргән дәртле, бәхетле йөҙө, ының һарайғыр менеп килгәндәге һыны баҫты. Ахыры ныц муйынынан саҡ ҡына аҫтараҡ, иҙеүе башланған ерҙә... гүп |үцорәк кенә ҡара миңе бар. Ә, бәлки, юҡтыр? Битендәгеһен белә Әйүп, ә бына... Әйүп, тороп, тәҙрә фгәһенә килде. Тышта буран, ябалаҡлап ҡар яуа. Был Гиклем ҡарҙы ойоҫҡота башлаһа... Хужалыҡтар кэбәндәрҙе Кураларға яҡын шылдырҙылармы, юҡмы инде...

Кыш етһә, Фәүзиә-Барсынбикә китаптар донъяһына сума. Влдә өләсәһе уны бәләкәй сағында мөғәллимдәр саҡыртып, Горки, фарсы, ғәрәп телдәренә өйрәткән. Тирәклелә мәшәҡәтле тормош менән йәшәгәндә күп нәмә иҫенән дә сыға башлаған. Мәгәр бала саҡта хәтеренә һеңгән тәғлимәт онотолмай икән. Мөғлифә ҡарсыҡка аптырай ул: ошо саҡлы Китаптарҙы кайҙан алған, нисек һаҡлаған... Китап ᑊ ит мрендәге яҙыуҙарға ҡарағанда, уҡымышы ла шәп булған ви ᑊ уиың! Барсынбикәгә уға етергә... Әйткәндәй, китап ᑊ итсидәге яҙыуҙа ул шундай юлдарҙы ла уҡыны: «Туғаным... \ ᑊ шһ тәғәләнең рәхмәте киң. Зиһенең үткер, сырағың яҡты и\ |һа, мин үткән юлдан үтерһең, күңеленә бикләнгән аят-сүрәләрҙе, доға-фатихаларҙы үҙендән һун килер ҡыҙ балаға бирепкалдырырһың...»

Был һүҙҙәр Барсынбикәнең нәғеҙ үҙенә төбәлгән кеүек тә вит! Хәҙер инде Барсынбикә уйҙары менән киләсәккә ыҡмай — уй ебен әкрен-әкрен артҡа һүтә. Китап битендәге ул һүҙҙәрҙең кемгә төбәлгәнен аслан белеү өсөн Күпмс уй йомғағын һүтер кәрәк, әҙме яҙмыштар, кисерештәр, гүмерҙәр даръяһын кисер кәрәк...

I ᑊ шә ел, әллә кеше ҡағылыуҙан, ҡапка шығырланы.

Ксм йөрөй икән? Эттәр өрмәне. Тағы ҡайҙалыр олаҡты. шәй, былар... — Фәүзиә-Барсынбикә, ҡатаһын юреп, ел асмаһын тип келәһен эләктергән солан ишеген итәрҙ

Лһ... Мәликә ҡыҙым, һинме?!

Мии, инәй... — Ҡупшы, һылыу ханым ҡарсыҡтың тар нурынынан ҡосаҡланы. — Бына... Киләм эле...

— Килэһең инде, килмәй... Ишекте бәндәгә инмәк-сыҡмаҡ өсөн яратҡан Хоҙай...

— Шулайҙыр, күрәһең. — Ҡарсыҡ йоҡа ғына кәүҙәһен урындыҡ ширлегенә урынлаштырып, доға уҡып битен һыйпаны, Мәликә түрбашҡа килтергән күстәнәстәрен теҙҙе.

— Аллаһ экбор! һы... Шул саҡлы өймәһәң... Кем ашай ул хәтлене?

— Ҡыш оҙон бит, инәй... Тышта боҙолмай ул!

— Ҡыш бауыры оҙон инде оҙонлоҡҡа... Йә, сисен, һөйләп ебәр...

Мәликә, һүҙен ниҙән башларға белмәй, ҡаушабыраҡ ҡалды. һорауҙары күп уның был ҡарсыҡҡа, ләкин ул бит бөтәһен дэ белеп-күреп ултырған кеүек.

Бына ҡарсыҡ тамаҡ ҡырҙы, ҡулына янсығын алды, оҙаҡ ҡына итеп тағы ниндәйҙер доға уҡыны, шунан янсыҡтағы йәшкелт йоморо таштарҙы балаҫҡа һибеп ебәрҙе...

— Был ни була, инәй?

— Ноҡот... Күңелемә бер уй килде. Шуны таштар менән тикшерәм...

— Уй?! Минең хаҡтамы?

— Эй балалар... — Күңеленэ килгәндәрҙе, ахыры, бер тынала һөйләп бирергә йөрәге етмэне Барсынбикәнең. Әй яҙмыш! Барсынбикә-Фэүзиэгә генә уның иң кәттоһе, ин сетереклеһе яҙған икән тиһәң, уның ҡаршыһында ултырған, йәше ҡырҡҡа ла етмогән бынау ҡатын ниҙәр генә кисермәгән, ә алда күрәсэге... — Әйҙә әле, ҡыҙым, сэй эсеп алайыҡ. Самауырым ҡайнап сыҡҡан ул, бәләкәй баҫып ҡына ҡуйғанмын. Көргөп ебәрһәм, хәҙер йырлап китер! — Ҡарсыҡ, енел ҡыбырлап, самауырын соланға алып сыҡты. Мәликә, ни уйларға белмәй, ултырған ерендэ таш һын кеүек ҡатты. Бына ошолай ултырһан да ултырһаң ине. Себерҙэге, ул тыуған ерҙәге, теге таш һындар кеүек. Күккә теклэгән дә ҡатҡандар, уларға бит бер ни кәрәк түгел...

Хәҙер тоталар ҙа, кеше маймылдан барлыҡҡа килгән, ти ҙә яҙалар. Мәликә шуға аптырай: әҙәм улай маймылдан яралғас, боронғо һүрәт-һындарҙа ниңә маймылды кәүҙәләндермәнеләр икән? Мәликә йөклө сағында ла гел шуны уйланы: ниндәйҙер бер ғиллә менән, ата-бабаларына оҡшап, унан маймыл бәпәй тыуа күрмэһен! Юҡ, маймыл-

. . . . ы шыуыуын тыуманы, уның ҡарауы ҡурсаҡ кеүек матур ба а күпме мәшәкәт һаны...

Ии уйлайһың, ҡыҙым? — Ашъяулыҡҡа батмус ҡуйып, ынаяҡ теҙә башлаған ҡарсыҡтың һорауы телдән ҡалған ск ултырған Мәликәне һиҫкәндереп ебәрҙе.

Мин, инәй... бына... кеше нисек барлыҡҡа килгәнен гел и ланым. Беҙҙе лаһаң маймылдан барлыҡҡа килгән, тип яҙалар.

Маймылдан? — Ҡарсыҡ яулыҡ осо менән ауыҙын **Кйплап,** ксткелдэп көлдө. — һы... Гәзит уҡымағас, уныһын ы маймем. Шуны ғына эйтмәксемен: сәүит алып килгән күп фән **ялған.** Шуға күрэ аҙаҡ күп нәмәне өр-яңынан башларға, щҫ яцынан төшөнөргә тура киләсәк. Кеше маймылдан ира иапмы-юҡмы, мәгәр кеше тау ҙа, ағас та, хайуан да, ҡош-м>|ч та булған. Бәндә эсендэ шуларҙың барыһы ла бар. Ҡөрьән-Кәримдә бит былай тип яҙылған: «Беҙ һауаға, ергэ, **Муҙарға** үҙебеҙҙең ышанысты тэкдим итеп ҡараныҡ, ләкин) лар уны ҡабул итергэ баҙнат итмэнеләр, ә бына кеше ҡабул ı ы ı ҡы».

Шулай икэн дә... Әйүп миңэ гел уҡы ти ҙә, бигерәк аҙ **бсләм** шул. Беҙҙең яҡтарҙа ла һинең кеүек күрәҙәселәр була **Горғайны.**

Ьпрсынбикә көләмһөрәне:

Улар күп ул... Эс, ҡыҙым, күстәнэсен ашаған кеше оҙон ı үмерле була, ти торғайны минең оләсәй...

Рәхмәт, инәй. Мин бында япа-яңғыҙ кеүекмен. Һинең ми нән һөйләшһәм, рәхәт булып китә.

Бик алыҫтан икәнһең шул, балаҡайым. Ә бит һиңә шул ю ы иңынан үтергә тура киләсәк...

Миңә?! Яңынан?! Лэкин минең унда бер кемем дә ı ины! — Ҡаушаған Мәликә ҡарсыҡтың төндәй ҡара күҙҙәренә текәлде. — Ни өсөн...

Эс сәйенде, һыуытма... Сәйнүккә тынысландыра торған үлән һалғанмын...

Капыл ғына битарафҡа әйләнгән Мәликә күҙҙәрен ән алды, ҡаршыһындағы самауырға ҡараны.

Тынысландым инде. Әйт, инәй, һөйлә... Флоридам... ı хаҡына мин...

Күросәген күрмәй тороп, бәндэ гүргә инмәй, ҡыҙым.
• • һипсн оле...

Ялтыратып йышылған еҙ самауыр ҡорһағында Мәликә үҙенең оҙонсараҡ күренгән йөҙөнә, оло сырай алған күҙҙәренә ҡарап, ҡарсыҡтың кисереүгә еңелдән булмаҫҡа оҡшаған хәборен эске бер тулҡынланыу, ҡурҡыу менән тыңларға әҙерләнде...

Күктең төбө тишелгәнме ни — ҡар яуа ла яуа. Балаһын **имеҙеп** Маһинурға тотторғас, Мәҙинә йәнә һырмаһына үрелде.

— Әллә тағы китәһең? — Киске һауынға көндәгенән иртәрәк ҡуҙғалырға торған Мәҙинә үҙенә инәһенең аптырабыраҡ ҡарауын тойҙо.

— Барам әле, күңел тыныс түгел. Тракторҙарҙы урманға ебәреп бөттөк тип, бесән тарттырмаҫҡа итәләр.

— Уй алла-а-а... — Маһинур ғәмле ҡарашын Мәҙинәнән тәҙрәгә күсерҙе. — Бесәнегеҙ бөтһә, анау тикте малды ни ашатып тоторһоғоҙ икән?

— Ярай, инәй... Оҙаҡлаһам, бутҡа ашатырһың... Мал ҡарарға ла сыға алмай ултырырһың микән инде...

Фермаға килеп етмәҫ элек үк таныны Мәҙинә таналарын. Башҡа һыйырҙар һауынсыларҙы ялан кортоло ҡайһыһы ҡайҙа тороп көйөш алһа, шунда ҡаршылай, о былар һайғауҙы емерә яҙып Мәҙинә күренгәнде көтәләр. Мәҙинәнең аҡ мамыҡ шәле күренеүе була, ксм уҙарҙан баҡырышып, ҡапҡаға һерлегешә малкайҙар. Ә инде Бөйрәкәй Мәҙинәнең битен ҡытыршы теле менән ялап алырға уңайы сыҡҡанын һағалай.

Таналарға үҙе лә эҫенде Мәҙинә. Мәгәр был эҫенешеү шыма ғына булманы. Тана өйрәтергә тимә бер һауынсы ризалашып бармаһа ла, башҡа эш тәҡдим итмәгәстәре, Мәҙинә риза булды ла ҡуйҙы. Төркөмдө ул йәйләүгә сығыр алдынан ғына туплап бөттө. Бер-икеһенән ныҡ ҡына тибелһә лә, ҡурала сакта эллә ни бирешмәгәйне. Таналар унын күҙенә утты йәйләүгә сыҡҡас күрһәтә башланы! Әле битен ялап торған Бөйрәкәй ниҙәр генә ҡыланманы. Үҙҙәренән алып сыҡҡан Билдәш тоҡомо Бөйрәкәй... Хатта быға тиклем иң йыуаш тигән таналары ла себен-серәкәйгә сыҙамһыҙ булып сыҡты.

Бөйрәкәйҙе һауыуҙы ул һуңға ҡалдырҙы. Көтөүҙән үҙе иң ...а килә лә күҙенең ҡыры менән генә Мәҙинәнең һәр ...кәтен күҙәтеп тора.

«Ҡайҙа ла ғына бармай, ниҙәр күрмәй, ир-егеткәй менән ...п **башы»,** — тип йырҙа йырланһа ла, Мәҙинә ул юлдарҙың ...өрөҫләгән һыйыр малы менән — Бөйрәкәй менән — **Һынаны.** Үҙенең ҡабатланмаҫ холҡо менән тыуған тананан **Һыйыр** яһаған саҡтары мәңге онотмаҫлыҡ булып хәтеренә **уйылды.** Әле лә ул таналарҙы индереп, алдарына тоҙ һалып бәйләгәс тә Бөйрәкәйҙе һауырға ултырҙы. һөтө күп унын, ...ыуға түҙемһеҙ. Үҙенә айырым ҡараш, наҙ талап итә. Наҙлы **Һыйыр** Бөйрәкәй, иркә һыйыр. Ә йәйләүҙә... Һәүкәштең **квмыштай** имсәктәренән оҙон йыр кеүек һуҙылып аҡ һөт ағылды, Мәҙинә йөрәген берсә ҡыҫылырға, берсә шатлыҡтан ...улҡынланырға мәжбүр иткән йәйләү хәтирәләренә сумды.

Һашҡалар һауындарын күптән бөтә. Ҡаҙан аҫтарына ут чи.ш, аҡланды әскелтем төтөн еҫенә тултырып киске аш **Квстәрләй** башлайҙар.

Башка һауынсылар ҙа килсп ҡарай ярҙамға — яҡын I **борәме** ни уларҙы таналар! Ә һөттәре һәйбәт үҙҙәренең. Тана ...ына булһалар ҙа Мәҙинә фермала икенсе урында килә. **Һыйыр** ҡорона тулып алһалар, әллә кемдәрҙе йоҡоһонан ...ҙыра инде былар.

Клйһылары яртылаш һауҙырҙы, ҡайһыһы ҡалай — сират Бөйрәкәйгә етте.

Һәүкәшкәй!.. — Күп һыйыр үҙен һауғанды көтөп арып, **Цвктай** башлай. Ә был тора. Тыштан ҡарағанда шундай **Күцдәм,** ихлас күренгән була. Хатта, Мәҙинә яҡынлағас, ...ыҙауын күргәндәй, ызылдап уҡ ебәрә.

Э-э-й һылыуҡай... Бөйрәкәй... — Мәҙинә унын **Муйынын** һыйпай. Үңәсен һуҙып тора был рәхәтләнеп. Элек ...ба, һыйпатыр ине, һыйпатмай. Мәҙинә унын **КМбырғаларынан,** осаһынан һөйөп, әкренләп елененә күсте. I **[ыштан** имсәктәренә үрелде. Шунда ел төтөндө икенсе ...үнәлешкә борҙо. Танаҡайҙы ен алмаштырҙымы ни — ...шарт пағкансы күнәкте тибеп осорҙо.

)й малҡай... Шул тиклем сабырһыҙ булмасы!

Мәҙинәнең таналары менән ҡара тиргә төшкәнен ... **уселәр** элегә ситтән генә күҙәтә. Баштуҡ аяғын бәйләйек

тинеләр, Мәҙинә, һыйырҙы һынап ҡарамай тороп, холҡон боҙмайыҡ тип, үҙе риза булмағайны.

Икенсегә янына килде Мәҙинә. Төтөнлөктө инде өс яҡтан һалдылар.

— Һәүкәшкәй... Үҙеңә ҡыйын бит, иҫәркәй!

Эйе, елене һыҙлай Бөйрәкәйҙең. һөт тишектәре әле киңәймәгән, үҙенән-үҙе саптыра ла алмай, ботон алмаш-тилмәш баҫып, күҙенең ҡыры менән Мәҙинәгә мөлдөрәп-мөлдөрәп ҡарай меҫкенкәй.

Мәҙинә йәнә сүгәләне. Ике ҡуллап имсәктәргә йәбеште. Шәп кенә һауғанда... Йә хоҙа! Лэкин күп тә үтмәне, танаҡай һиҫкәнде, ҡойроғо менән Мәҙинәнең битенә тондорҙо.

— Тик кенә тор! — Быныһын ҡатыраҡ әйтеп ҡараны Мәҙинә.

Юҡ, торманы, биҙрәгә елле генә итеп типте лә, ары атланы.

— Алдына ашарға һалып ҡарарға ине. — Көтөүселәр белә инде малды нимә менән әүрәтергә.

— Ә нимә һалырға? Бер-ике бешерерҙәй генә оном бар.

— Эйе, эйе, унан һуң ул көн дә шуны там итәсәк!

- һауа алмайһың һин быны! Күп таналарҙы һауынсылар йәйләүгә сыҡҡас ташлай.

— Нисек ташлайым ти мин уны? — Мәҙинә, аптырап, бер көтөүселәргә, бер үҙенән ярайһы уҡ ситко киткән Бөйрәкәйенә ҡараны.

— Нисек тип, иткә тапшырт. Һауҙырмағас, үҙенә үпкәләһен.

— Юҡ, минең иң һөтлө һыйырым буласаҡ ул!

- Әләйһәң, үҙең маташтыр, беҙ һинең танаң тип, төнө буйы йөрөй алмайбыҙ!

— Эт ыҙаһы менән өйрәтеп алған танамды һөт күбәйгәс кенә ташлай торғаным юҡ минең дә!

Ул кисте Бөйрәкәй һауҙырманы. Арып көйөшкә ятҡан һыйырҙар көтөүен уратып йөрөнө лә йөрөнө. Мәҙинә лә хәлдән тайҙы. Ә тандан торорға. Шунһыҙ көтөү ҡуҙғалыуға өлгөрмәйәсәк.

Ҡара тандан торһа ла, Мәҙинә һыйырҙарын иң һуңғы булып һауып бөттө. Унда ла илле алла менән. Таналар һөттәрен шунда ла биреп бөтөрмәне. Ҡайһыларын тышанылар, ҡайһыларының башын бәйләнеләр. Ә Бөйрәкәй

КЯТоүгә яҡын юламай, ситтәрәк тора. Елене ҡыҙарып шкән, үҙенең күҙҙәренән йәш субырлай. Юҡҡа сыға бит Пнаҡай.

Мәҙинә кеҫәһенән бер телем икмәк сығарҙы:

Бөйрәкәй, мә, ҡара эле был яҡҡа!

Карап та ҡуймай, йәнәһе, үпкәләгән.

>ргәлә буталып ферма мөдире Саяф йөрөй:

Бәйләйек, егеттәр!

Ырғый бит ул!

Алғыларын да, артҡы аяҡтарын да тышап, муйынын шаҡарып бәйләһән, ҡайҙа барыр тиһен?

Шунан, гел улайтып бәйләп буламы?

Әйҙә үҙең бәйлә!

Кото алынды Мәҙинәнең: харап була һыйыр. Торһа, ул РШо көйөнсә тороп китәсәк, тормаһа...

һәүкәшкәй... — Мәҙинә килеп етеүгә, Бөйрәкәй бер-‖КС аҙым алға атлай биреп ҡуйҙы. Икмәк еҫе тәьҫир иттеме ы ылданы. — Мә әпәкәй, тик тор инде Бөйрәкәй... Харап иаһын бит, балаҡай!..

Гана икмәкте ялманы. Шул арала Мәҙинә етеҙ генә КЫбырлап һыйыр аҫтына сүгәләне.

Атаҡай! Еленгенәндең шешеүе... — Унының тотоноуы | |спснең һыҙлауын көсәйттеме — ни уйларға ла өлгөрмәне коростай тояҡтың күкрәгенә йән көскә бәрелеүен тойҙо. уттар оҫҡон сәсрәтеп балҡынылар ҙа һүнделәр, донъя ыраң ылыҡҡа сумды...

Иҫенә килгәндә Мәҙинә ҡыуышта ята ине. Эргәһенә инсылар йыйылған. Мәҙинә тороп ултырырға итте — Күкрәге ирек бирмәне, йүткергәйне — тамағынан ҡан I ронс.

Ни булды миңә? Бөйрәкәй һауылдымы?

Ҡайҙан һауылһын... һөтө менән китә инде малҡай. I ыырма: тана өйрәткәндә ундай хәлдәр була ул... — Оло һауынсы Шәмсинур апай ҡулын Мәҙинәнең маңлайына ы. - Ҡуҙғалма инде, ят тыныс ҡына.

Ул бит миңә... өйрәнгәйне...

Себен аҡыл таптырмай... Ҡурала һауыу менән яланда Кауыу берме? Хатта һинең Сыбарҡайың да кистән ике Имсоген һауҙырмай китте...

Мәҙинәнең күҙенә йәш эркелде:

— Бөйрәкәй... — Шул малҡайҙың йылы ҡабырғаһына маңлайын терәп, ҡайғыларын һөйләһә... эсе бушап ҡалғандай була ине...

— Бынау үлән һыуын эс әле. — Шәмсинур Мәҙинәнең башын тотоп ҡалҡытты, күкрәкте үткер бысаҡ менән сәнскәндәй ауыртыу телеп үтте.

— Эс, эс... Бөткәнсе эс. — Эсте Мәҙинә, унан уҡшый башланы.

— Тас, тас килтерең! — һары еҙ тасҡа Мәҙинә ауыҙынан киҫәк-киҫәк ҡара ҡан эркелә башланы.

— Ҡоҫоп бөтөр, күкрәгеңә сир уҡмашып ҡалмаһын...

Шунан еңелерәк булып ҡалды. Шәмсинур апай мендәрен төҙәткеләп ятҡырҙы:

— Инде тик кенә ят. Мейең төшкән. Бәләкәс тора биргәс ултыртырмын. Күкрәгенде лә һылармын. Ошо үләнде өҙмәй эс. Йәшһең, йүнәлерһең...

Ҡыуыштағылар сыҡты. Ҡыуыш һайғауҙарына ҡырҡылған ағастарҙа ҡурай башлаған япраҡтарға ҡарап ятты Мәҙинә. Йәшләй ҡырҡылып, йәшел көйө кипкән япраҡтар... Йәшләй нужа баҫһа, йәшел дә генә көйө кибәһең икән шулай.

Күҙҙәр, һуңғы арала йоҡо бите күрмәүҙән ҡыҙарып елһенә башлаған күҙҙәр, йомола башланы... Бер туйғансы ял бирергә ине. Бөгөн киске һауынды, моғайын, Шомсинур апай һауыр. Ҡыбырламай ғына ятһаң, артыҡ һыҙландырмай ҙа кеүек...

Инде йоҡоға киттем тигәндә, ҡыуыш алдында өҙөлдәп баҡырған тауыш ишетелде. Баҡырыу йәнә ҡабатланды. Был ябай һыйыр баҡырыуы түгел, бәлки, мал телендә әйтелгән йән ғазабы ине.

— Ы-ы-һ... — Тороп ултырҙым тигәндә, күкрәге сәнсте. — Бөйрәкәй...

Һыйыр тағы эс-бауырынан өҙөлөп үкһене... Мәҙинә, шыуышып барып, ҡыуыш ишегенә ҡапланған сепрәкте күтәрҙе:

— һин?! — Ҡыуышҡа һонолоп башын тығып, Бөйрәкәй Мәҙинәнең сәсенән яланы. — Эй сабый... Шәмсинур апай, күнәк менән ултырғыс килтерсе.

— Ай алла-а-а, Мәҙинә. Тәки торғоҙа бит был һине...

— Тана юҡҡа сыға...

Ыңғыраша-ыңғыраша, ауыртыуын йөрәгенә төйнәп, Мәҙинә урынынан торҙо.

Ы-ы-һ... Елендән һөт килмәй, имсәктәр тарбайып шешкән. Сепрәк йылытып килтер, Шәмсинур апай, йылы һыу әҙерлә...

Йылы сепрәк баҫып, йылымыс һыу менән йыуғас, нәҙек кенә сп булып һөт килә башланы. Бөйрәкәйҙең күҙенән дә, Мәҙинәнең күҙенән дә һыҙланыу һығып сығарған йәштәр өбөрҙәй...

Короткансы һауып, имсәктәрен майлағас, Мәҙинә ҡыуышына инеп ауҙы. Ҡоҫҡо килә, баш әйләнә, күҙ алдында һ\ ҡыр себендәй мыжғып ҡара төрткөләр өйөрөлә.

Тышта ла тыныс түгел. Ишетеп ята — таналар НЬмсииурға баш бирмәй. Тегеһе һүгә генә малҡайҙарҙы, ҙәм гслен аңлаһалар, ғәрлектәренән ятып үлерҙәр ине, ... |аhи.

Көтөүселәр ҙә арманһыҙ булдылар, шикелле. Әлдән-эле Ыбыртҡы шыйлағаны, өс-дүрт ҡатлы итеп һүгенгәндәре ... кс һауала әллә ҡайҙарға тарала.

Гөнләтеп ҡыуышҡа ингән Шәмсинур ашап та тормаҫтан Гүшәккә ауҙы.

Иртәнсәк Мәҙинәне тағы һыйыр мөңрәүе уятты.

Бөйрәкәй! — Исемен ишетеүгә, тегеһе ҡыуаныстан |рһып баҡырып ебәрҙе.

Шомсинур икенсе ҡабырғаһына әйләнеп ятты.

Кәрәкле кишер япрағы, әллә кем көтә һине...

Мәҙинә торҙо. Тышҡа сыҡһа, аптырауынан ултыра төштө: барлыҡ таналары Бөйрәкәй артынан килеп, әҙерәйешеп ҡыуышҡа ҡарап торалар.

Эй малҡайҙар... — Мәҙинәнең күҙенән йәш атылды. I ... ыҡ аҫтына йылы бер нәмә төртөлгәнгә әйләнеп ҡараһа Ьойрәкәй икән. — Малҡай... — Моҙино Бөйрәкәйҙең ... ренән үпте, яңаҡтарынан һөйөп яратты. — Бөйрәкәйем МИИСН, иҫәрем...

Мозинә күпме тырышһа ла Бөйрәкәйҙең бер имсәген нпкмндсрэ алманы: танаҡай өс имсәкле булып ҡалды. Шул КиМп лә әле ул ике-өс тананың һөтөн бер үҙе бирә. Эйе... Ьойрокәй бер имсәктән, Мәҙинэ тауыштан яҙҙы. Шунан йирле йырлағаны юҡ унын. Йырларға көсәнһә, тын юлынан ... китә. Маһинур инәһе үләндәр, төнәтмәләр эсерә, үтеп

китер, тигән була. Күңеле болоҡhoha, эрнеhә-hыҙланhа, эсендэге юшҡынын Мәҙинә йыр менэн сығарыр ине. Хәҙер ҡыйын. Күңелен бары эш менән баса...

Һыйырҙарын hауып бөткәс, Мәҙинә, ферма мөдирен күрергә була, «Ҡыҙыл мөйөш»кә инде. Саяфтың кәйефе юҡ микән, ауыҙындағы тәмәкеhен бер уңға, бер hулға күсергеләп салыш-солош ҡарап ултыра.

— Мэҙинэ, у ништэп Сыбарҡайың hөтөн кәметкән?

— Мин уны Алаҡай эргәhенә бәйләгәйнем. Тик торғанда hөтө ҡайта башланы, холҡо ла үҙгәрҙе. Баҡhаң, иҫемә төштө: ул бит быҙаулағансы Бөйрәкәй эргәhендә торҙо! Күрәhең, Алаҡай менән биреhе килешмәне... Әле рәтләнде. Мин, Саяф ағай, әле бесәнлеккә күҙ hалдым. Запас уҙа барhа ике көнгә етерлек...

— Шунан?..

— Шунан — шул. — Мәҙинәне мөдирҙең тауышындағы сәнскеләр баҙата төштө. — Буран сыҡhа...

— Мәҙинә, hин бында кем булып эштэйhең?

— Нисек кем? Һауынсы...

— Шулай булғас, бар, ана, таналарынды бел. Ә малға запас ҡайғыртыу...

— heҙ ҡайғырта башлағанда hуң буласаҡ!

— Һиңә нимэ кәрәк?

Мәҙинәгә сығып китеүҙән башҡа әмәл ҡалманы.

Ә йөрәк hиҙә. Теге төшөндә күргән «hау, hау» тигән ауаз hаман тынмай, торған hайын ул тәрәндәнерәк сыға. Хәҙер ул «hау-hау» тип түгел, бәлки, «hу-hу» булып олой. Әгәр ҙә Мәҙинэ Мирхәйҙэровҡа барhа? Ул да Саяф кеүек ҡыуып сығарыр микән? Ә, бәлки, Мәҙинә, ысынлап та, үҙенә күпте алалыр? Ә, бәлки, ул яңылышалыр? Етәкселәр бит бөтәhe лә ауыл кешеләре, малсылыҡта ла беренсе йыл эшләмәйҙәр. Улар бит тып-тыныс...

Шундай уйҙары менән Мәҙинә идараға барырға ынтылған еренән кире боролдо. Ҡайтып, шиктәрен Маhинур инәhенә hөйләгәс, уныhы ла:

— Ауыртмаған башыңа таяҡ эҙләп йөрөйhөң, — тип орошҡан кеүек булғас, бөтөнләй тынысланды, Дауытын алдына алып, hөткә сыланған иҙеүен асып, тулышҡан күкрәген сығарҙы.

Гаулылағы йәненә яҡын кешеләә йәшәй башлағас, Күкбүре фкен тын алды. Ҡарабашҡа йәне көйөп китhә лә, түҙә. Был гүзәмгә йөнтәҫ ҡара арлан үҙе лә сэбәпсе: әрhеҙ түгел, •үрегә нимә кәрәк, ә нимә кәрәкмәй икәнен әллә ҡайҙан Һиҙә. Күкбүре үҙе яҡынламаhа, ылығып бармай. Ҡарабаш I укоүренең үҙенән бер башҡа юғары булыуын — урман . йеге икәнен дә иҫенән сығармай. Таулы ситендәге урмандарҙа улар икәү бергә hунар итеп тә алғылай. Төлкө, I I куян тотhалар бик шәп, hайыҫҡан ише менән кушhынырға тура килгән саҡтары ла булғылай. Табышҡа бер ан да Ҡарабаш, ир затынанмын тип hауаланып, беренсе ташланмай... Табыштың күп өлөшө уның көсө булған хәлдә I Күкбүрене алдан ҡуя. Уға юл бирә. Шуға ла hыйышалар. ище Күкбүре алыҫҡараҡ юл тотhа, Ҡарабашҡа: «Етте Һицо!» тип теш күрhәтеүе була, тегеhe тороп ҡала.

Өле лә, кискә табан, Ер менән Күк бергә ҡушылып үкереп сбәреүгә, Күкбүре тынысhыҙланды. Ауыл ситенә сығып, убаға баҫып, буран тауышына оҡшатып олоно ла эре-эре •Ҙымдар менән алға ынтылды.

Лсылың ниндәй — булмышың шундай инде. Көс тә, йірәт тә, болоҡhoy ҙа бүрегә тәбиғәттән күскән. Ана ул, Юендәге шул ярhыуҙы еңә алмайса, тиреҫтән өргән ел-Цуылға ҡаршы атылды. Бына тәрән үҙәк. Буран әле генә сноып уҙған тоҡомдаштары еҫен килтереп бәрҙе моронона. \кманлай өйөрө был. Атаhы Уҙаманға оҡшап көслә, таҫыллы ш Локин әсәләрен улар үҙ итмәне: Күкбүре бит яңғыҙ ылған кэнтэй. Етмэhэ, үҙенэн әҙәм, торлаҡ hэм ЫТырғандырғыс эт еҫе килә. Күкбүре hыҙланды, уларҙың үҙенә ҡарап, көтөүҙең ҙурлығын, йәшен, көсөн самаланы. \ ҙенең шулар араhында була алмауына йәне әсене, эсе өҙөл lө, сараhыҙлыҡтан ултырып бер талай олоп алды.

Әммә ул бөгөн Тирәклегә сыҡҡан. Шунда бер барғанында Моронона таныш, үтә лә яҡын еҫ бәрелде. Әлбиттә, элек был ырҡыуыраҡ, әсерәк ине. Уға тиреҫ, ат, дегет, ҡайыш, ка олло нисә төрлө аңҡыш hәм әле үҙе йәшәгән яҡын ....снең еҫе ҡушылғайны. Хәҙер унда күп еҫтәр Мосhеҙләнгән, ләкин тик үҙенән генэ сыға торған еҫ тороп ам. Күкбүрелэ буран ана шул кешене барып табыу хисен

көсәйтте. Табырға гсйеш ул шул Еҫте! Сынйырға бәйләһә лә, бойороҡтарын тыңларға өйрәтһә лә, шул Еҫ уны асыҡтырманы, өшөтмәне. Көсөк сағында атына эйәреп икенсе ауылға барһа, арбаһына алды, ауыл эттәренән талатманы. Шул Еҫте ҡабат тапһа, бәлки, йэне йәһәннәмдәй тулау-ярһыуҙан туҡтар ине Күкбүренең.

Буран нисек ҡапыл башланһа, елдең тиҙлеге лә шул тиклем үк йылдам артты. Күкбүрегә ул ҡурҡыныс түгел, ә юлда бына бер әҙәм заты күренмәй. Бөтәһе лә тынған, бөтәһе лә, Тәбиғәт тыуҙырған ғәрәсәт ҡаршыһында көсһөҙлөгөн танып, шымып ҡалған. Эйе! Эйе! Кеше тәбиғәт көсө алдында көсһөҙ! Күкбүре генә тантана итә, олой, ярһый, саба, булмышының, яралмышының, көс-ҡеүәтенең тәбиғәт менән айырылғыһыҙ булыуын аңлауҙан ул аҡылдан шашыр сиктә рәхәтлек кисерә!

Ана ауыл, буранда ул тағы ла тәпәшәйеп, шиңеп, шымып ҡалған өйҙәре менән аңра ғына, йомшаҡ ҡына айыу балаһын хэтерләтә. Ферма яғынан буран уның танауына үткер еҫтәр килтереп бәрҙе, улар араһында ҡан-һүл еҫе лә бар. Йән үрсем биргәндә сыға торған был еҫ Күкбүрегә яҡшы таныш. Үҙе көсөктәрен тапҡанда ла шундай еҫ таралғайны. Был танһыҡ, тереклектең тере шишмәһенең еҫен татыуҙан кэнтәй күҙҙәренә йәш эркелде. Бурандың моронона ыуыҙ тәмсн килтереп еткереүе унытң йән әрнеүен тағы ла көсәйтте, бөтә һаҡлыҡ сараларын онотоп, үрсеүгә ынтылыш тәкәтен еңә алмайынса йән асыуына олоп ебәргәнен үҙе лә һиҙмәй ҡалды...

Күрәҙәсе ҡарсыҡҡа барып ҡайтҡаны бирле Мәликә үҙенә урын таба алмай. Эшләйем тиһә, ҡулынан әйбере төшә, һөйләйем тиһә, тамағына төйөр тығыла. Ҡарсыҡҡа ышанмаҫ ине — Мәликәнең бөтә үткәнен дөрөҫ тойомлап һөйләп бирҙе. Күп тә әйтмәне ул, мәгәр Мәликә тормошоноң ҡара ятыуҙарын прожектор утына тотҡандай сумырып-сумырып яҡтыртып сыҡты:

— Баландың бөтөнләй һөйләшмәү ҡурҡынысы бар...

Лх, инәй... — ни эйтергә белмәгэн Мәликә башын |,н ы түбәнерәк эйҙе.

Мин уны үткәндә... үҙен күргәс үк аңланым. Тик... цуаһы был тирәлә булмағас, өндәшмәй торорға булдым.

Дауаһы?! Тимәк... — күҙҙәрендә өмөт саткыһы уянған Мәликә, турайып, ҡарсыҡтың ауыҙынан тағы ниндәй хәбәр ı ы ырын көттө. Ҡарсыҡ ашыҡманы, сәйе менән тамаҡ ı келәп, күҙен алыҫка теклэп ултыра бирҙе. Эңер ҡараңғылығында аҡһыл, сырыштары юҡ һымаҡ күренгән битендә ҡап-ҡара ҙур күҙҙәре айырым-асыҡ яҡтыра. Мәликә ОШоға оҡшаш муйыл кара күҙҙәрҙе тағы ҡайҙалыр күргәндәй. Бы и гиклем дә куйы ҡара күҙҙәр тормошта һирәк осрай.

Үткән тормошоң еңел булмаған. Бик яҡын кешеңә күңелеңдә ҡаты рәнйеш һаҡлайһың... Бөтә булған ғәләләреңде унан күрәһең... Тыуған йортондо ташлап алыҫ ı эфәргә юлланыуың да шул кеше арҡаһында булған. Хата ЮЛДа йөрөүенден башы шунда. Ырыу ярыуың да шунда башланған.

Күҙенән йәштәре субырлап ҡойолған Мәликә үкһеп |ртындағы мендәргә ауҙы:

Нишләргә миңә, инәй?!

Башҡа һиңә бер ни ҙә эйтмәйем. Ирең килһен минең ини а!

Иремә... һин ошоларҙы һөйләмәксеһеңме?

Нигә мин иреңә быларҙы һөйләргә тейеш?!

Ә уны...

Күрергә кәрәк! — Ҡарсыҡ, кинәт бер ҡарарға ЦИЛГӘНДӘЙ, яулығын эйәк аҫтына ҡымтып бәйләнэ. — Күп нәмәне тик ул ғына хәл итә ала!

Флориданың... төҙәлеүен дәме?!

Эйе, уны ла...

Әле бөгөн Әйүп ҡайтмаясаҡ. Өфөгә киткән. Ҡыҙы Сыкырынан сығып ҡоторған буран тауышына ойоп, иҙерәп йоҡлай. Шул тиклем ҡоторған буранды Мәликә Себерҙең үҙендә лә күргәне булманы. Бына ҡайҙа ул афәт! Эргәһендә МЫШнап ятҡан ҡыҙы булмаһа, Мәликә, ҡурҡыуына ирек бирси, йоҡларға күршеләренә тайған булыр ине, моғайын. \ ı а был хәлендә буран олоуын, уның бихисап кейек-януар •уаздары сығарып, ҡыйыҡ эсенә, тәҙрә ҡапҡастары араһына, Ммрйәгә инеп тулағанын тыңлай-тыңлай бауырына һары

һауҙырған алыҫ хәтирәләренә бирелеүҙән башҡа һис бер әмәл юҡ.

Үҙенең әсәһен хәтерләмәй ул. Түтәйҙәренең һөйләүенә ҡарағанда, Ғәйшә исемле ул ҡатын Мәликә тыуған саҡта вафат булған. Атаһы, Абдрахман приказчик, йәшләй яратып өйләнгән ҡатынының үлеменә бик ҡайғырған, үлемдең сәбәпсеһе Мәликә булғас, яңы тыуған сабыйҙың йөҙөнә бер ҡарап та ҡуймаҫтан, балаһыҙ интеккән ҡайынбикәһенә: «Ите лә, һөйәге лә һиңә булһын!» — тип сабыйҙы тотторол ебәрә. Камила түтәйенең үҙен ҡаҡҡанын-һуҡҡанын хәтерләмәй Мәликә. Дөрөҫөн әйткәндә, ҡаҡманы ла, артыҡ иркәләтмәне лә. Туш йылғаһы буйында ултырған Ҡыҙылҡаш исемле ҙур ғына Себер ауылында лавка, ҡунаҡхана тотоп торған был ханымдың тәүге хәсрәте эш булһа, икенсеһе үҙенән күпкә йәш, сибәр, типтерергә яратҡан иренән күҙ яҙлыҡтырмау булды. Ун йәшкәмә еткәс, Мәликә ауыл мәктәбенә уҡырға төштө. Икмәк-тоҙлоҡ уҡырға, яҙырға, һанарға өйрәнгәс, Камила түтәйе уға мәктәпкә барыуҙы тыйҙы. Көнө буйы ҡунаҡхана керҙәрен, ҡашығаяҡ йыуыуҙан тишелгән бармаҡтары сәңкеп һыҙлауын баҫа алмайынса йоҡоға китеп өлгөрмәй — таң беленә. Таң беленеү менән күсер Мәликә ятҡан бүлмәнең тәҙрәһен ҡаға:

— Ҡыҙыҡай, тор! Ут яҡ ҡаҙан аҫтына! Һыу килтерҙем, мискәне бушат!

Мәликә тора, өйрәнелгән хәрәкәт менән көндәлек, тауыҡ сүпләһә лә бөтмәҫлск йорт эштәренә сума. Камила түтәйендәге тормош тағы шулай күпме дауам итер ине, мәгәр үҙенең ун биш йәшендә тиҫтерҙәренән шөйлә айырылып торған буйсан, текә янбашлы, ҡалҡыу түшле, йоморо беләкле, түңәрәк аҡ йөҙлө ҡыҙға икенсе енес кешеләре тарафынан иғтибар көсәйә башланы. Шулар араһында иң әрһеҙе, иң тишә ҡарағаны Камила түтәйенең ире Шафиҡ еҙнәһе булып сыҡты. Башта уның был ҡылығын ҡыҙыҡай еҙнәһенең уны башҡаларҙан ҡыҙғаныуы, ҡурсыуы итеп ҡабул итте. Уның сәсәләнеүе бер саҡ Мәликә һалҡын тейҙереп түшәктә ятҡанында эргәһенә яҡын уҡ килеп, арҡаһынан тапап:

— Имсәктәрең тығыҙ,
Битекәйең ҡыҙыл,
Сирләп кенә ятаһыңмы,

Мликәкәй ҡыҙым, — тип һамаҡлауға барып олғашты. Гане ҫеле-һыуыҡлы булған Мәликә уның ҡулын алып ташлапты, артҡа шыуып, стенаға һырыҡты:

Яҡын килһәң, абыстайға әйтәм!

Гүтәң төнһөҙ ҡайтмаясаҡ, йортта һин дә мин. — Күҙе майланған, ауыҙынан араҡы, һарымһаҡ еҫе аңҡып торған Шйфиҡ имгәкләп Мәликәгә йылышты. — Мин һиңә бер насарлыҡ та... Икебеҙгә лә һәйбәт буласаҡ... һин бит эле иратышыуҙың тәмен белмәйһең... Мин һине бәхетле игосәкмен!

Үҙ-үҙен белгәндән бирле Шафиҡ еҙнәһен атай урынына күргән Мәликә баҙаны. Буй-һынға ҙур ғына күренһә лә ғы ты менән сабыйлыҡтан сыҡмаған булмышы үҙенә ....дәйҙер ҡурҡыныс, насар, ахыры йүнле булмаҫтай бәлә ишауын тойҙо.

Эй абый... Минең һиңә ни зыяным тейҙе? Улай булғас, ҡаитарығыҙ мине әткәмә!

Донъяла бар тип белә ти һине эткәң! Ха-ха! Бер килеп кәленде белмәне! Бөлгән инде әткәйең! Ә бөлгән урыҫ — и еп үлгән.

Бер ҡатлы ҡыҙыҡайҙың үҙенән әҙәмсә ярлыҡау, аяу Һорауы эсә-эсә, ҡатын-ҡыҙ менән самаһыҙ шаяра торғас МЙуанға, аҙғынға әйләнгән Шафиҡты оторо шаштырҙы:

Мин һинең хакимың! Мин генә һине ярата ла...

Ирснснә Шафиҡтың һаҫыҡ ауыҙы терәлеүҙән былай ҙа уырып ултырған Мәликә укшый башланы.

Кит... абый... Уф... — Күңеле болғанып укшыған М.мнкә йөҙ түбән йығылды, уның артынса ҡалҡынған Шафиҡ елпеүенән етеле шәм һүнде. Ауырыуҙан, укшып ЦОҪоуҙан баҙап-хәлһерәп ҡалған Мәликә артыҡ ҡаршылыҡ та Күрһәтә алмаҫтан үҙенән өс тапҡырға оло кешенең Ьои.чркәһенә әүерелде был кистә.

Ҡулынан лавкалары, улар менән хеҙмәтселәре, боло китеп бөтөп барған, шуға күрә лә көндән-көн ярһыуыраҡҡа ш внгән Камила түтәйҙең осло күҙенән иртән иртүк үҙенә һ паҡлай-сатанлай сәй килтергән ҡыҙыҡайҙың күҙ Гвбөндәге зәңгәр тулҡындар ситтә ҡалманы, әлбиттә. үҙенә, ҡыҙыҡайҙың йөҙө илағанға оҡшаған...

Ҡабаҡтарың шешенгән. Иланың әллә? — тине ул гәзәт гәі с тыныслығын һаҡларға тырышып.

Мәликәнең шул саҡ кис менән ниҙәр булғанын түкмәй-сәсмәй һөйләп биргеhе, түтәйенең алдына ятып илағыhы килде. Әммә шул саҡ ҡолаҡ төбөндә түтәйенең уҫал ыҫылдауы ишетелде:

- Етем быҙау аҫыраhаң, ауыҙ-мороноң май булыр, етем бала аҫыраhаң, ауыҙ-мороноң ҡан булыр, тигәндәй, hин, ҡыҙыҡай, йөҙөмә оятсылыҡ килтереп ҡара! Камила абыстайындың күңеле киң булhа ла, фарманы ҡыҫҡа! Мин hине, ҡыҙыҡай, үҙем ҡарап үҫтергән бала тип аяп тормам! Төшөндөң?!

Ыуыҙ ғына йән өҫтөнә таштай яуған ана шул hүҙҙәр бөтәhен дә хәл итте: Мәликә иренен нисек тешләгән булhа, абыстайҙың йоко бүлмәhенән шул килеш сығып китте.

Шафиҡ еҙнәhенең бәйләнеүе ҡабатланмаhа, үҙе менән ни булғанын аңлар-аңламаҫ ҡалған Мәликә, бәлки, артабан да түтәйе эргәhендә йәшәп тик ятыр ине. Әммә йәш тәндең тәмен тойған аҙғын ир Мәликәне былай ғына ҡалдырманы. Бер көн кисләтеп кенә ҡураға hыйыр hауырға ингәнендо арттан килеп уны көслө ҡулдар шаҡара ҡосаҡлап алды:

— hағындым... Ер еләгем минең... Аҫылым, татлыҡайым!

— Кит, абый, ҡысҡырам!

— Ҡысҡырhаң, йорттан ҡыуылырhың. Ҡайҙа бараң hин?! Йә, ҡайҙа бараң?!

Ҡайнар тындың битен бешереүенән, ҡомhоҙ ирендәрҙең тештәренә үтеп hурыуынан ир көҙрәтен тагып ҡараған Мәликәнең быуыны йомшағандан йомшаны, ҡулынан күнәге зыңғырлап төшөп китте.

— Ах абый... Етәр!

— Етмәй... Был башы ғына... Йәнем, әйҙә... — еҙнәhе уны бесәнлеккә өҫтөрәне, ҡапыл күтәреп алды ла бесән өҫтөнә hалды, ашығыс хәрәкәттәр менән тун төймәләрен ысҡындырҙы, Мәликәнең асылып киткән иҙеүенән тубырсыҡтай тирткән түштәренән шашып үпте. — Хәҙер... Әле hин белмәйhең! Бәхеттең ни икәнен татымағанhың! Был юлы ауыртмаҫ, ваҡыт күп уҙҙы. Түҙҙем! Ер еләгем минең, аҡҡошом! Ах!

Бөтә тәне, булмышы буйлап татлы ҡалтырау йүгергән Мәликә шул саҡ еҙнәhе әйткән бәхетте тиҙерәк булдырғыhы килде:

— Ах абый! Интектермә! Үләм... Ах!

Йоием!

Шунда ике тән, ике йән берәүгә әйләнде, эргәләренә I **вмила** абыстайҙың үҙе килеп баҫhа ла туктар әмәлдәре кп |**маны.** Аҙаҡ, Мәликә үҙ ғүмерендә тәү тапҡыр татыған ләззәттән аҙыраҡ айнығас, ҡолаҡ төбөндә еҙнәhенең:

Мин hине көсләмәнем, үҙең бирелдең, ҡыҙыҡай, — I ш **оне** ишстелде.

Был hүҙҙәргә ҡарата үҙенә-үҙе хужа булыуҙан, инде хәҙер **Шафиҡ** бирер ләззәттең ҡолона әүерелгән Мәликә йылмайып ҡына **куйҙы...**

Әммә бер рәхәттең бер михнәте тигәндәй, михнәттәр аҙағы раҡ башланды. Был рәхәт Мәликәгә бер түгел, мең мимюг булып кире ҡайтты. Ыҙа сигеүҙең тәүге миҙгеле Мәликәнең ауыры беленгәс үҙен hиҙҙерҙе.

Иң ҡыйыны уға Камила түтәйе менән күҙгә-күҙ ҡарап Һшмошсү булғандыр, моғайын. Был осрашыу еҙнәhенең шык кш йомошо менән ҡалаға киткән сағына тура килде. Күрәhең, ҡарсыҡ үҙе шул мэлде hайлағандыр.

Көн тыныс үтте. Киске сәйгә ултырҙылар. Мәликә аҫҡа ҡараған да түтәйенә сәй яhай. Самауырҙың тыныс ҡына **Щаулап** ултырғанын иҫкә алмаhаң, өйҙә шылт иткән тауыш гп **ишетелмәй.** Шул саҡ, ни аҙаптандыр, комодтан Мәликәнең ба іа саҡта уйнаған ҡурсағы осоп төштө. Мәликә, йәhәт ь\ ығалып, уны ҡулына алды. Ул уны гел бәпәй итеп уйнатты. Ошондай ғына бәпесем булhа, үҙемде яңғыҙ хис итмәҫ инем, гип хыяллана ине. Икәүҙән-икәү ҡалғаны бирле түтәйе |**сренсе** тапҡыр ауыҙын асып hүҙ ҡушты:

Ҡурсаҡ... Мин уны hиңә ситтән килгән сауҙагәрҙәрҙән **бо** ған мөгөҙөнә алмашып алып биргәйнем...

Моликә өндәшмәне, башын тағы ла түбәнерәк эйҙе.

Әткәйеңдән алып ҡайтканымда hин өс кенә көнлөк сабый инең. Ҡартайған көнөмдә бер таянысым, өмөтөм ов ыырhың, тигәйнем...

Курсаҡ күтәреп алған Мәликә таш hын кеүек ҡатты. Эйе, **ила** түтәйе уға хөкөм сығара. Мәликә был сәғәтте, **Минутты** күптән көтә ине. Нимә тиhә лә түтәйе хаҡлы, эйе, йіе, ул хаҡлы...

Ниңә өндәшмәйhең?

Мәликә ҡалтыранып ҡуйҙы, ләкин яуап ҡайтарманы.

— Әткәйең быға тиклем бер килеп хәленде белмәне, донъяла бармы-юҡмы икәненде һорашманы. Бына хәҙер күрһен инде ҡыҙын. Ҡыҫҡаһы, иртән таң менән бында подвода килеп туҡтаясаҡ. Юл оҙон, арыу итеп кейен, толоп, ашарыңа ал. Күсер һине ҡайҙа ҡалдырырға белә. Унда һине нимә көтһә лә кире был тупһаға әйләнеп ҡайтыу юҡ. Иәшлегенде аяп, бәддоға уҡымайым, ләкин фатихамды ла бирә алмайым.

Мәликәнең бите буйлап субырлаған йәштәре яһалып та эселмәгән сәйенә, ҡурсағының алһыу битенә туптырлап аҡты. Камила абыстай, сынаяғын түңкәреп амин тотто ла, ойоған аяҡтарын көскә һөйрәп, ғәҙәттәгенән нығыраҡ аҡһаҡлап, йоҡо бүлмәһенә инеп бикләнде.

Көттө Мәликә. Күсер килеп ҡапҡа шаҡыған сағында ла түтәйенең ут кеүек янған маңлайына ҡулын һалып, үкһеүҙән ҡалтыраған иңбашынан ҡағып:

— Ярар... ҡал. Ғәйепле булһаң да бер һин генә ғәйепле түгел. Бер бала үҫер әле, — тип әйтерен көттө. Ләкин ишек асылманы, түтәйе сыҡманы. Күсер, сабырһыҙланып, ҡапҡаны дөмбөрләтә үк башланы. Мәликәгә, толобона уранып, бер түтәрәм икмәк күтәреп, санаға сығып ултырыуҙан башҡа әмәл ҡалманы...

Ул ауылға кисләтеп барып инделәр. Улар туҡтаған өйҙөң алдында ҡараңғыла ҡот осҡос ҙур булып күренгон ағас Мәликәнең һушын алды. Кыҙыҡайҙың ғожопләнеүен аңлапмылыр, күсер:

— Кедр сәтләүеге ағасы. Йәшәмеш ағас икән был, — тине. Шунан, атын бороп, ҡыҙға:

— Ҡапҡаны шаҡы, әткәйең ошо йортта йәшәй, — тине ло күҙҙән дә юғалды.

Мәликәнең ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына шаҡыған тауышына йорттан дәү кәүҙәле ҡатын сыҡты, бәлэкәй ҡапҡаның сылбырын оҙаҡ итеп асҡас:

— Кис ҡырында был кем тағы? Кем һин? — тип Мэликәгә тексәйҙе.

Мэликә толобон әле бер, әле икенсе ҡулына күсерҙе:

— Абдрахман тигән кеше кәрәк миңә...

— Абдрахман? Ә ниңә кәрәк ул һиңә?

Мәликә тыштан уҡ ҡалын күренгән донъяның ҡапка тотҡаһын дәү, һимеҙ устарында тотоп торған ҡатынға

Мвлдөрәп ҡарап тора бирҙе лә, сынйырҙағы ике ҡабып бер Цоторҙай булып өргән эт тауышында саҡ ишетелерлек итеп:

Ул... минең... әткәм... — тип бышылданы.

Әткәң? Абдрахмандың һиндәй ҡыҙы булһа, мин белер ИНем! Иншалла, был йортта ун алты йыл йәшәйем!

Моликә хәлен анлатырға була ауыҙын асҡанса, ҡапҡа шарт ябылды. Тиҙ арала сынйырҙан ысҡындырылған эттең эс иктан ярһып ҡапҡа сапсығаны ишетелде. Йорт эргәһенән ашығып ситкә киткән Мәликә ҡышҡы юл буйлап ҡара)үкәләй атлаған кешеләр яғына һөрләктө. Ул арала уҫал |.п ыш шәһенең:

Юлдан өс аҙым ситкә сыҡһағыҙ, йығылһағыҙ — атам! тигәне яңғыраны. Мәликэ үҙе лэ аңламаҫтан каторжандар юркомөнә ҡушылды. Улар менән бергә билдэһеҙ яҡҡа, би щәһеҙ яҙмыш ҡосағына атланы.

Iоркөм оҙаҡ барҙы. Аслыҡтан, ауырыуҙан, арыуҙан кı шсләр юлда үлә торҙо. Үлгәндәрҙе ерләмәнеләр, арыуыраҡ КСЙемдәре булһа, һаҡсылар алды, ваҡ-төйәген каторжандар ара бүлеште. Төркөмгә Мәликәнең нисек килеп кı шылғанына ла иғтибар биреүсе булманы. Барлау ваҡым.шда:

Иванова Анастасия Петровна! — тип ҡысҡырғастары, >|ч.1hсндә торған Павел исемле ир:

һиңә әйтәләр, — тине.

Тормош ағышын һүҙһеҙ ҡабул иткән Мәликә:

Мин! — тине. Шуның менән бөттө. Ә бер көн Ниндәйҙер ауылдың һарайына бикләп каторжандарҙы ялға ı \ м аттылар. Шыйыҡ ҡына өйрә лә бирҙеләр. Йылы аш Курмәгән әҙәмдәр ҡомһоҙланып өйрәгә ташланды, Мәликә енә калаҡҡа ҡағылманы. Павел быны шундуҡ күреп ҡалды:

Ниңә ашамайһың, Настя?

Моликә «теләмәйем» тигәнде белдереп баш сайҡаны.

Әллә үҙенде насар тояһың?

Мэликә эсенән бөгөлөп ҡаты ыңғырашты:

- Әсәй! Үләм... Әсәкәйем!..

Үлеү каторжандар тормошонда ғәҙәти хәлгә онлектән бер кем дә иғтибар итмәне. Тик улар һуңғы |ҙымға тиклем йәшәү өсөн көрәшеп, бысылған ағастай ауып, |Нһөҙ-тынһыҙ үлеүгә ғәҙәтләнгәндәр... Эсен тотҡан Мәликә карҙа гэгәрәп йөрөй башлағас, Павел: .

— Сисен! Тартынма! Мин дүрт бала атаһы! Бындай хәлдә беренсе тапҡыр ҡалыуым түгел! — тип бойорҙо. Тауышҡа конвоирҙар эттәре менән килә һалып етте. Береһе теш араһынан төкөрөп:

— Тапһын балаһын, барыбер бында иртәгә тиклем торабыҙ, — тип, Мәликәгә бала табырға рөхсәт бирҙе.

Мәликәнең яулығын систерҙеләр. Зәңгәр ерлеккә ҡыҙыл сейә биҙәге төшөрөлгән ошо сепрәккә күм-күк булып тыуған йомғаҡтай сабыйҙы уранылар. Бер-береһенә һырышып, кеме бесән, кеме түшәк һымаҡ нәмәләр табып, ҡарҙа аунаған кешеләрҙе йәш баланың үҙе хаҡында һөрән һалып донъяға тыуыуы хаҡында хәбәр итеүе ҡыуандырманы, бер кемден до йөҙөндә онотолған шатлыҡ нурын балҡытырға мәжбүр итмәне, буғай.

— Улың бар, Настенька, — тине Павел ғына.

«Ниңә шул тыуғас ҡына ҡыуып сығарманы икән Камила түтэйе Мәликәне!.. Был бит Хоҙайҙан улар һораған, улар теләгән бала! Ә Мәликәгә бала... кәрәкмәй. Мәликә үҙенец ҡайҙа китеп барғанын да, иртәгә үҙе менән ни булырын да белмәй», — тулғаҡтан, юлдан арыған, хәлһерәгән Мәлико Павел толопҡа урап йоҡларға һалғанда бары ошоларҙы уйлап өлгөрҙө.

Иртән иртүк улар йәнә ҡуҙғалып киттеләр. Баланы Павел күтәрҙе. Мәликәнең ике-өс саҡырым барыр-бармаҫтан хәлс мөшкөлләнде. Хәҙер инде ул Павелдың баланан буш ҡулыпа аҫылынып, аяҡтарын саҡ шыуҙырып баҫып килә. Өҙөлөп тамағы асты. Ашағыһы килеүҙән ашҡаҙан аҫты биҙенән ауыҙына уҡшытҡыс тоҙло һут йыйыла, күңелен болғандыра. Баланан һуң иплэп йыуылмаған ағзалары, ҡанға ҡатҡан аяҡтары атларға бирмәй.

— Павел, мин ҡалайым... Атһа атһындар... мин бара алмайым...

— һинең балаң бар!

Ниндәйҙер бер ҡасабаға килеп еттеләр. Бында уларҙы туктатманылар. Юл ситендә кешеләр өймәкләшеп тора.

— Каторжандарға аҙыҡ бирмәҫкә! Кем халыҡ дошмандарына ярҙам ҡулы һуҙа, шул урынында атып үлтерелә! Каторжандар! Кем урындағы халыҡ ҡулынан аҙыҡ ала, шул урында атып үлтерелә, йә эттән талатыла!

Моликә күҙ ҡырыйы менән кешеләрҙең кеҫәһендә, ı \ ш.шында икмәк бар икәнен күреп ҡалды.

Павел! Мин... икмәк күрҙем.

Т-с-с-с!

Ана бер ун-ун ике йәшлек ҡыҙ йәшен тиҙлегендә **куйынынан** икмәк сығарҙы ла Павелға тотоноп атлаған Млликәгә һондо. Әммә шул саҡ конвоирҙың:

Төркөмгә яҡын килмәҫкә! Атам! — тигән тауышы яңғыраны. Мәликә икмәкте тота алмай ҡалды, һыныҡ төшөп **КИтеп,** кутәренке юлдан түбән шыуҙы. Павел икмәк артынан **Һикерҙе.** Күҙ асып йомғансы ул икмәкте эләктереп өлгөрҙө, **Пвкин** шул ук секундта атыу тауышы яңғыраны. Мәликә ни п ıғанын аңлап өлгөргәнсе аҡ ҡарҙа бер ҡулына бала, **ИКенсеһенә** икмәк киҫәге тотҡан Павел ҡанһырап ята ине.

– А! А-а-а! — Әллә балаһына, әллә Павелға ташланған **вренән** Мәликәне ҡаты ҡуллы берәү тотоп алды:

– Аҡылһыҙ!

Артабан уны ике яҡтан кемдәрҙер тотоп алға өҫтөрәне:

- Атла, ҡыҙыҡай! Үлмәгән булһа, баландың ауыл эсендә **КВЛғаны** яҡшы. Былай ул бөгөн булмаһа иртәгә үлер ине!

Ьср генә тапҡыр булһа ла әсәһенең һөтөн татып та карамаған сабый билдәһеҙ ауылда билдәһеҙ кешеләр ҡулында итып ҡалды. Ә, бәлки, уға ла пуля тейгәндер? Павел мәйете **фгәһендә** эттәр көслө абалай ине. Ни булғандыр, уныһын **Мөлико** әле лә белә лә, юрай ҙа алмай...

Лртабанғы ваҡиғалар Мәликә тормошонда эҙһеҙ **ЮГалмаһалар** ҙа, күңелен яҡты нур булып балҡытманылар. 610-сы саҡырымға килеп еткәс, уларға туҡтарға ҡуштылар. \ нла горған бер баракка шул саҡлы юғалтыуҙарҙан һуң да ıтап менән килгән халыҡ һыйып бөтә алманы. Яңыларын **Һалдылар.** Үлэ торҙолар, өҫтәлеп килә торҙолар. Яҙ етеп, ı пы п ала боҙ киткәс, каторжандарҙы пароход менән килтерә **Вашланылар.** Мәликәне ашнаҡсы итеп эшкә ҡуштылар. Эш **|уыр** булһа ла йәш организм үҙенекен итте: Мәликә, мәле I **гкос** һутланып бешкән сейәләй, ҡыҙ ҡорона етте.

Күҙгә күренгәс, уға хужа ла тиҙ табылды. Мәликәне • ı н.гк «Верховный правителдең подстилкаһы», «Курва», **«Краля»** тип атай башланы. Мәликә башта ғәрләнде, ләкин **Нишләмәк** кәрәк? Ул — ҡол ҡыҙ, хужаға буйһона, ә хужа **вҫтөндә** — тағы хужа. Ситтән түрәлэр килһэ, уларҙың

теләген үтәргә лә ебәрҙеләр. Мәликәне шулай «арзан тауар» ҡушаматы аҫтында йөрөтөпмө йөрөттөләр...

Нисектер бер туктап ял иткән саҡта Мэликә Павелдан: «Абый, кешеләр ниңә йә яҡшы, йә яман булып тыуалар икән? Яҡшы кешеләрҙе генә тыуҙырып, ямандарып тыуҙырмай ғына ҡуйһа, Хоҙайға насар булыр инеме ни?» — тип һорағайны. «Oho, — тине Павел. — Уҡырға тура килһә, һинән, моғайын, философ сығыр ине. — Шунан ул уйланып ултыра бирҙе лә: — Кеше бит, Настенька, донъяға бер гено тапҡыр түгел, ә күп тапкырҙар тыуа. Аяу белмәгән, уҫал кешеләр, енәйәтселәрҙең йәне — йәш йән. Уларҙың үткон ғүмерҙәренән килгән тәжрибәләре аҙ, йә бөтөнлэй юҡ. Шуға күрә улар аҫ, киҫ, үлтер, язала кеүек бойороҡтарҙы ғына башҡарыуға һәлэтле. Уның өсөн уйларға, башты эшләтергә кәрәкмәй. Кемдең башы эшләй — шуларҙы лагерҙарҙа, төрмәләрҙә серетәләр, аталар, аҫалар... Ә кем эшләргә, музыка яҙырға, асыштар яһарға тейеш? Ҡалған-боҫкап халыҡмы? Настенька, мин күп уҡыным, күп ил гиҙҙем, күпто күрҙем, ләкин бындай мәхшәрҙе, үҙ граждандарына ҡарата бындай ҡырағай сәйәсәт алып барғанды... Беләһеңмс, Настенька, бөгөн беҙҙе эттән талатып кыуалаған конвоирҙар киләһе тормошонда зәғиф, алйот, кәрлә булып тыуасаҡ... Вәхшилек юлынан барып, кешелек бер ҡасан да таҙарыпа, сифат яғынан яҡшыра алмаясаҡ». Мәликә униц һэр һүҙсп иғтибар менән тыңланы. Ниңә унын атаһы ла, еҙнәһе лә Павел һымаҡ изге күңелле булманы икән? «Павел, әллә һии изге заттанмы? Бәлки, һин кеше түгел, фәрештәлер?» - тигәйне Мәликә, аптырауын йәшерә алмайынса. «Кеше мип, Настенька, кеше. Ҡәҙимге бер кеше...» «Ә Хоҙай һине нимо өсөн былай ыҙалата?» «Минеме? — Павел байтаҡ өндәшмәй ултырҙы. — Тимәк, Мәликә, миңә әсирлек тэжрибәһе ло кәрәк булған. Тормошҡа һәр кем һабаҡ алырға тыуа. Миңә кәрәк һабаҡты башҡа берәү ала алмай...» «Миңә ләме?!» - тине Мәликә. «һиңә лә, — тине Павел. — һинең күрәсәгендс башка бер кем дә күрә алмай!»

Төрмэ түрәләре лэ килә-китә, алышына-үҙгәрә торҙо. Лагерҙа йәшәүенең өсөнсө яҙында унда начальник булып тышҡы ҡиэфәте менән ике тамсы һыу кеүек Павелды хәтерлэткән урыҫ килде. Мәликә, үҙ күҙҙәренә ышанмай, бср нисэ көн уның артынан күҙәтте. «Шундай мөғжизэ булыуы

Мӧмкин микән ни?! Павел... начальник та быны һиҙҙе, буғай. М.мшко уның өҫтәленә аш ҡуйғанда:

— һеҙ мине кем менәндер бутайһығыҙ, ахыры, — тип вндәште.

— Эйе... һеҙ миңә бер бик һәйбәт кешене хәтерләтәһегеҙ... Павелды...

— Ҡайһы яҡтарҙан ине ул кеше?

- Белмәйем. Беҙ уның менэн осраҡлы һәм бик ҡатмарлы шарттарҙа таныштыҡ. Ул минең баламдың кендеген киҫте...

- Баландың?

— Эйе, юлда...

— һиңә нисә йәш һуң?

- Әле ун туғыҙым тула...

— Ләкин һинең «Дело»ла...

- Мин ул ҡатын түгел!

— Ә кем һин?

- Мин — Мәликә. Атайым Абдрахман Харисов...

Яҡшы кеше булып сыҡты лагерь начальнигы. Тыңланы Моликәне. Мәликәнең әйтеүе буйынса, уның тыуған яғына мравка һорап хат ебәртелде. Унан: «Хәҙерге көндә Харисова Моликэ Абдрахман ҡыҙы Ҡыҙылташ ауылында йәшәмәй. Бынан өс йыл элек билдэһеҙ сәбәптэр менән ауылдан сығып Киткән һәм башҡа әйләнеп ҡайтмаған. Уның тураһындағы бслешмә уны ҡыҙлыкка алған ата-әсәһенән алынды» тигән I ыу килде.

Тоҡонлоҡтан ҡотолоу ҡыуанысы менән үҙенең ни кылырын белмәгән Мәликәнең аяҡтары ергә теймәне. Влбиттә, уның барыр ере юҡ. Ләкин ул азат! Пахандың уны һәр мөйөштә һағалап тороуынан, сәйәси тоҫкондарҙың уға •рвнеп ҡарауынан, әсирҙәр өсөн көн дә һыйырға эсерергә ойенләнгән ашлы һыу кеүек баланда ҡайнатыуҙан — п.фыһынан азат!

Ә бер көндө уны йәнә начальник үҙенә саҡыртты.

- Мәликә, бәлки, бында эштә ҡалырһың? Үҙеңә айырым ои төҙөп бирһәк...

— Юҡ, начальник! Мине ебәрегеҙ!

— Ә ҡайҙа юл тоторға итәһең?

— Мэскәүгә!

— Мәскәүгә?! Ә унда кемең бар?

- Әсәйемдең һеңлеһе! Мин уны эҙләп табырмын!

— Мәскәү ҙур...

— Булһа ла... Ҙур ерҙә эш табыуы ла еңелерәк...

— Иртәгә пароход үтә. Таң менән.

Ул төндө күҙенә тамсы йоҡо инмәне Мәликәнең. Пароходтың гудогын ишетмәй ҡуйыуҙан ҡурҡты. Ә таңғы биштәрҙә уға ат, күсер биреп, пристангә төшөрҙөләр. Исемһеҙ, һандар менән генә билдәләнгән, бетле, ҡутырлы, ас, яланғас, нәфрәт һәм хәсрәт тулы лагерь юлдың һәр боролошо һайын арттараҡ ҡалды. «Юлда пароход һәләкәткә осраясаҡ, кешеләре батып үлеп бөтәсәк!» — тиһәләр ҙә Мәликә ул лагерҙа ҡалырға риза булмаҫ ине...

Нисек кенә ҡыҫып сығармаһын, Мәликәнең аҡсаһынан Мәскәү вокзалына аяҡ баҫҡанында елдәр иҫкәйне. Камила түтәйе Зәйнәп тигән һеңлеһен Арбат тигән ерҙә йәшәй тип һөйләй торғайны. Мәликә, эҙләй башлағас, Арбат тигәндәренең бик ҙур икәнен күрҙе. Кәбән эсенә төшөрөп ебәргән энәнде табыу мөмкин булмаған кеүек, Мәскәү һынлы Мәскәүҙә Зәйнәп атлы кешене табыуҙың ысынбарлыҡҡа тап килмәүен дә аңланы Мәликә.

Этелә-төртөлә вокзалда йоҡлап йөрөнө ул. Ас булғас, буфет янында, пирожки һатҡан ҡатындар тирәһендә ураланды. Яҡын барыуын бармай, әммә күҙен дә ала алмай. Бер көн уға буфетты йыйыштырыусы иғтибар итте.

— Бик сибәр ҡыҙһың... Үҙең асһың, йә, был нимәгә ярай?! — тип баш сайҡап тел шартлатты итләс ҡатын. — Барыр ерең юҡмы ни?

— Юҡ.

— Документтарың?

Мәликә костюмының түш кеҫәһендә ятҡан, лагерь мисәте менән бирелгән ҡағыҙҙы Мәскәүгә килеү менән йыртып ырғытҡайны.

— Юҡ.

— Әйҙә, сәй эсерәм...

Эсенә йылы төшкәс, кәйефе күтәрелде Мәликәнең.

— Апай, миңә лә һеҙҙең янда берәй эш булмаҫмы? Кухня, ҡашығаяҡ тирәһендә эшләү тәртибен беләм.

— Ҡайҙа ла бер һүҙҙе әйтәсәктәр: паспорт, прописка.

— Ә миңә нишләргә?

— Эш сәғәте бөткәнде көт, минең менән китерһең...

Шул китеү Мәликә яҙмышының йәнә бер битен асты. Гсгс катын уны бик ҡупшы кейенгән, битенә кершән-и\ ураны йәлләмәй яккан Магдалина менән таныштырҙы. М.|| дални уны янсыҡ суғы кеүек кейендереп, һылап-һыйпап, I юопатра тигән тәкәббер һәм, йәшәүенә ҡарағанда, бай бер иым менән осраштырҙы. Шунда Мәликә бер ай буйы ял НТте. Магазиндарға, рестарандарға йөрөттөләр, һылыу-һылыу ҡыҙҙар менән таныштырҙылар, нәзәкәтле манераларға •Йрәттеләр, ҡыҫҡаһы, уға профессиональ фәхишә курсын уткәрҙеләр. Исеменән тыш уның «Белый пудель» тигән кү шаматы барлыҡҡа килде. Күрәһең, Мәликә тәненең аҡлығы Шул исемде йәбештерергә булышлыҡ иткәндер. Тиҙҙән •Бслый пудель» хужабикәһенә арыу ғына табыш килтерә бвшланы...

Моликә нисек кенә үҙ эшенең оҫтаһына әүерелмәһен, күңеленең түрендә ирле, балалы, йортло булып йәшәү шялын йөрөттө. Сигергә әүәҫ ҡыҙҙың иғтибарын Магазиндағы әҙер өлгө йәлеп итте: эшләпәле ир менән ҡупшы КСЙенгән ҡатын тротуар буйлап атлай, алсак йөҙлө, картиналарҙағы фәрештә кеүек ҡыҙ бала әсәһенә сәскә Шәлкеме һуҙа. Күк йөҙө аяҙ, ара-тирә ҡыйғас болоттар ғына йөҙә, ағастар, сәскә түтәлдәре, ҡыҙыл кирбестән төҙөлгән йәшеллеккә сумған йорт...

Шул өлгөнө алып ҡайтып, диҡҡәт менән эшкә тотондо Мәликә. Эшенән арып, тәмәке төтөнө, вино-араҡыларҙан, каиуан дәрәжәһенә еткән ирҙәрҙән арып, талсығып ҡайтҡан I актарында ла күҙ алдына башлаған эше килеү уның юрмошона яңы мәғәнә, күңеленә йылы бирҙе. Өйҙө ул аиырыуса дәртләнеп нағышланы, әйтерһең дә нағыш һырымай, ә уның һәр кирбесен үҙ ҡулдары менән һала... Ә бына ирекәйҙең күҙҙәре өлгөлә һоро ине, Мәликә, уйланып ултыра бирҙе лә, энәһен зәңгәр еп менән һабаҡланы: күк гөҫөндә булһын эйҙә, һаүа төҫө — йәшәү, өмөт төҫө...

Мәликә тормошоноң шул йылдарын хәтерләткән берҙән-бер иҫтәлеге булып хәҙер стенаға рамлап, быяла аҫтына Куйған ошо күренеш тора. Мәликә Әйүпкә эйәреп Мәскәүҙән Киткән сағында бары шул сигеүле туҡыманы ғына алды үҙе Иенән...

Өйгә эре-һәре яҡтылыҡ тула башланы. Йоҡоһоҙ, бөтә юрмошона байҡау яһап үткәргән төндән Мәликәнең күҙҙәре

ҡыҙарҙы, башы шауланы. Хәҙер бына күрәҙәсе ҡарсыҡ Әйүпте үҙенә саҡырта. Нимә әйтергә итә ул иренә? Мәликә иренә бөтәһен дә түкмәй-сәсмәй һөйләй алманы. Йөрәгс етмәне. Ә ҡарсыҡ әҙәмде үтәнән-үтә күрә. Мәликәгә әленгә тормошо ҡәҙерле. Нисек кенә ҡырыҫ булмаһын, Әйүпте ул яратып өлгөрҙө. Бәлки, ул Әйүпкә, үҙенсәлекле үткәне арҡаһында, тән-түшәк йылылығын биреп бөтөрә алмағандыр... Ләкин Мәликә ире менән ихлас йәшәй, балаһының аталы булыуы, атаның да баланы яратыуы унын күңелен күктәргә күтәрә. Шулай уҡ Мәликәнең Таулылағы тормошо тандарҙа күрелә торған ҡыҫҡа һәм татлы төш кенә булыр микән?!

Буран тыныу түгел, көсәйгәндән-көсәйҙе. Тәбиғәт ҡоторона башларҙан ике-өс көн алда Ихсанбайҙың яралары күҙенә ут күрһәтеп һыҙлай башланы. Мейескә ҡыҙынып та, ыуынып та ҡараны — мәгәр тән йәрәхәттәренең үҙәккә үтеп әрнеүен баҫырға әмәл тапманы. Үҙенә нисек кенә һалҡып мөғәмәләлә булмаһын, Рауза ла уға йәлләп ҡараны, һыҙланыуҙарын баҫҡандай им-том өйрәтеп маташты:

— Шәңгәрәйҙе... улынды мин ҡымыртҡа майы мснон ыуып һалам гел... һин дә шуны һөрт... Анау айыу майың ҡалманымы? Ҡана шуны эретеп бирәйем?

— У ниндәй айыу майы?!

— Аһ, теге... үҙең...

Ихсанбай артығын ысҡындырғанын аңланы: онотторға тейеш түгел ине бит ул ниндәй «айыу майы» хаҡында һүҙ барғанын. Теге саҡ аңғармаҫтан кәртәһенә килеп ингән һыйырҙы, былай көсө етмәҫтәй булғас, обрездан атып йыҡты. Башы-тояғын, тиреһен, эсенән сыҡкан быҙауын картуф баҡсаһына өйөлгән ҡыйлыҡ эсенә күмгәс, Рауза ит ҡайҙан тип төбәшмәһен тип, һунарсылар айыу алған, шуны һатып алып ҡалдым, тине. Үҙе йәһәт кенә Ҡасимдың атын алып тороп, урыҫ ауылына иттең байтаҡ өлөшөн тейәп китте һәм тәмәкегә, көмөшкәгә, дарыға, он, ярма, күр-ергә алыштырып алып ҡайтты. Әҙемтәләренән ныҡ ҡына шөрләһә лә, «һунарсыларҙан һатып алып ҡалған айыу ите» ваҡиғаһы

шыма үтсп китте. Әле бөгөн килеп әллә ҡасан ашалып, һөйәктәре этҡә ташланып бөткән «айыу итен» Рауза алйот ІвЛГЭ алып ултырасы?!

Сепрәк баш, — Ихсанбай гәзиткә уралған самосадын ишын |,ш-ашығып, йүтәлләй-йүтәллэй һурҙы, — Нух Шманында ашап бөткән бер бәс айыу итенең әллә булған, әллә булмаған майын хәбәр итеп һөйләп ултырмаһаң...

Бср бәс тип... Урыҫ ауылынамы, Тубин баҙарынамы щшрырға тип тейэгән итенде күргән дәһа у Шәңгәрәй... Әле ....п ı енә һөйҙәне шуны. Айыу һәләк тигәнсә һур ине ти бит \ Мунсаның ишек ярығынан ҡарап торҙом тейсе у...

Шәңгәрәйгә ышанһаң!..

Шәңгәрәй тигәс тә... Иҫәр тиһәң дә... У, бахыр, бер ҙә ı ı ши белмәй ҙә у!

Алдамаһа, йәшә шуның менән! Мында минең башты юк бар хәбәрең менән серетәһең, — Ихсанбай, ярһыуын тыя |ЛМайынса, мейес алдында яткан утынды Рауза яғына елсәне.

Юға-а-ал! Күҙемә күренмә-ә-ә!

Утын Раузаға теймәһә лә, һикеләге етеле шәмдең Кыуынын селпэрәмә килтерҙе. Ул арала ишек асылды, унан каштарына, һаҡал-мыйығына тиклем ҡар һырыған Мирхәйҙәров күренде:

Мөмкинме? Хужалар... өйҙәме?

Омондә ҡуптан зилзиләне баҫырҙай кеше килеп ингәс, ıı ıa Хызыр Ильястың үҙен күргәндәй шатланды:

Аһ! Аһ! Ҡалай ваҡытлы йөрөйһөң Сынтимер, әй, Азат ш ый! Ул Мирхәйҙәровҡа һүҙ ҡушыр булһа, гел исемдәрҙе ıи. Уныһы — ул, Мирхәйҙәровтың бисәһе иренә ıның «ағай» тип мөрәжәғәт иткәнен яратмай. Раузаны Мирхәйҙәровтан күпкә оло яһай торған нисәмә нисә дәлил Щлгсрә. Раузаның да быға бик иҫе китеп бармай.

Ыстурия бит у! Кешенең йәшенә ыстурия бер ниндәй пиҙәтмә индерә алмай, апай! — ти ҙә ҡуя.

Иренән байтаҡҡа йәш, йөҙгә һөймәлекле ҡатынды Рау аның «апай»ҙан һалдырыуы ла кэмһетмэй ҡалмайҙыр, ш ı Әле лә Рауза «ағай» һүҙен айырып, яҡынлыҡ, улай ғына түгел, туғанлыҡ сифаты бирә торған «ағый» рәүешле итеп шп ге.

— Әллә мәлһеҙ йөрөйөм инде? — тип ҡаушабыраҡ ҡалды Мирхәйҙәров, һикеләге утынды, иҙәндәге быяла ярсыҡтарын абайлағас.

Утын ағасын кире усаҡ алдына, ҡыуыҡ ярсыҡтарын сүп биҙрәһенә ташлаған арала Рауза уға ҡарап тулған айҙай йылмайҙы:

— Ошо ағайым булһа, юҡтан уңайһыҙҙаныр ҙа торор... Килеп яҡшы иттең, саҡырып алырға эштән бушап булмай... Үт, әйҙә, ултыр! Мынау... бесәй, ҡороғоро, арты бешо баштағанса плитәлә ятҡан да, тура шәмгә һикерҙе, башы баҙҙан сыҡмағыры нәмә...

Килгән кешегә һүҙ ҡатмауҙы Ихсанбай ҙа килештермәгәндәй итте:

— һыҙҙандыра, Азат Әһлиевич... Ҡуй инде... был һуғыш тигәнең... Үлтерер кенә ҡуйған булһа...

— Йә-ә... үлергә ашыҡмайыҡ әле... Бына мин дә... теге... буранда нимә ҡыҫтай тигәндәй... һиңә килеп ултырам...

— Рәхмәт, иҫкә алыуыңа...

— Тик мин һине йәлләргә килмәнем, Ишмөхәмәт... Мии һине, ҡорҙаш, эшкә саҡырырға киләм.

— Эшкә?!

Мирхәйҙәров, түш кеҫәһенән гәзит осмото сығарыи, Ихсанбай һуҙған самосадҡа үрелде:

— Ҡатыраҡ булыр микән?.. Элекке шэптск юҡ...

— Эшкә тиһең, ә ниндэй?..

— Фермаға. Хисапсы булып... Саяфҡа ла кәңәшсе кэрәк. Әллә йәш, эллә иҫәр... Йүнләп тарта алмай. Гелән тегенс тегеләй, быны былай ит тип туҡып торор кәрәк.

— Әллә... минең хәлдә... Көс етер микән?

— Кеше араһында булһаң, әҙерәк һыҙланырһың. Унысу дауаһы шул.

Ул арала Рауза ҡаҙандан картуф һоҫто. Синдектән һары май, ҡорот, ҡыҙыл эремсек индерҙе, ашъяулыҡ түшэгэс, ашһыуға яҡынлаған ирҙәрҙең алдына күктән төшкэндой «аҡбаш» ҡунаҡланы.

— Әйҙәгеҙ, етешегеҙ. Яман көндә — яҡшы аш...

Ихсанбайҙың күңелен лезвия менэн телгэндэй һағыш сыйып үтте: был мәҡәлде әсэһе гел ҡулланыр ине... Әсәһс барҙа ҡайһылай ҡурсыулы, аяулы булған ул, тик ҡәҙерен гено белмәгэн.

Фсрмала мал ас», тип өҙгөләнгән Мирхәйҙәров, ыҡта ризыҡ муллыҡҡа ымһынып, оҙаҡ ултырманы.

Инеп кенә сығайым тигәнсә, — тине ул тун рен зләктергән ыңғайға Раузаға ҡарап, — әллэ и мыйынсыҡтарывды сығарып бөттөңсө, Рауза?

Аһ-аһ, — Рауза, үҙ сиратында, уның бүркендә эрегән һыуын һелкеп төшөрҙө, — майһыҙ таба ҡупмай, кем, тулла ағайым. Беҙ ни икебеҙ ҙә хөкөмәт әтәсе бит. Берға Помошобоҙ төшмәй түгел төшэ...

һинең менән килештек, — ул Ихсанбайға ҡул һуҙҙы. Иртүк үҙенде фермала хисапсы урынында күреремә шам. Ишмөхәмәт.

Әй-йе... Һөйләштек. Самалап ҡаралыр... Эштәмэгән эш Ихсанбай, ҡулына таяғын алып, ишекте асты. — мына бураны... һыйырҙар күтәртһә, белмәйем, мал итеп ары...

Шул саҡ алдан сығып болдорға баҫҡан Мирхәйҙәров Ихсанбайҙы, уның артынан сыға башлаған Раузаны йыға м иртка сикте:

Уй!

Косок кенә ул! — Ихсанбай, Мирхәйҙәров үҙе яңыраҡ п п.шйырға ултырҡан көсөгөнән ҡурҡты тип белеп, олдап көлгәнгә оҡшаған тауыш сығарҙы. — Үҙе һинән ы р оле ул меҫкен. Рауза, берэй нәмә сығарһаңсы шуға. Ләкин... ырылдау етди тойолғас, Ихсанбай болдорға үҙе ы

I укта, тороп тор! — Ихсанбайға ташланып, уны щ йыҡҡас, биттәрен, ҡулдарын ҡалдырмай ялаған, ан, илаҕанға оҡшаш ауаз сығарған башмаҡ ҙурлығы күрюс, Мирхәйҙәров та, уның артынса икмәк һынығы сыҡҡан Рауза ла өнһөҙ ҡалдылар. Дәү эттең тәпәйҙәре аунаған, хайуандың ялауынан тонсоғоп барған и шоаи

Тукта, Күкбүре! Шашма! — тип ғыжылдағас, ||||1 иҙәров, һуғышты разведка часында үткән өлкән и.ни, ҡулындағы бүреген дә кейергә онотоп, буран •| >ын ын сығарған ҡапҡанан нисек сығып киткәнен дә Ә Ихсанбай бәйләп ҡуйған тыңҡыш ҡара көсөк, ни.ш аик араһына йомолоп, йәтеш ҡойроғон ҡайһы еренә ' \ш.|рға белмәй, дер-дер ҡалтыранды...

Буран тынманы. Ферма малы өсөн бесәнгә барыу түгел, малсылар мал янына эт ыҙаһы менән килеп етәләр. Кем иртәрәк тора, кемдең ишеге эскә асыла — шулар күршеләренекен көрәп аса. Мәҙинә һыйыр аҙбары эргәһендә туктаны: ҡапҡаһы төбөнә күсереп алып килеп һылап-йәтешләп тау өйөп ҡуйылған... Эскә инһәң, эстәре үткәшкән малдар уны күреү менән, бер тауыштан баҡырып, сынйырҙарын сыңғыратып уның яғына әйләнәсәк. Мәҙинә, бурандың тауышында берсә Буранбай, берсә йәш кәләшенә тунлыҡ йәнлек ауларға Ашҡаҙар буйына шәшкегә киткән егет һағыштарын, берсә ялан ғына ерҙән боландай йүгергән Зөлхизә, берсә ер ҡыртыштарында аяҡ табандарының ҡанын туҙғытып, «илкәйем» тип атлыҡҡан Ғилмияза әрнеүҙәрен тыңлап, тышта тора бирҙе. Мәҙинәнең дә һағыш-рәнйештәре, тойғо-хәсрәттәре эсенә һыймай ҙа бит, тик Ер менән Күк тулаған кеүек тулай алмай, барсаһын күкрәгенә һыйҙыра. Хәҙер ул сараһыҙлыҡтың ни икәнен белә. Ошо сараһыҙлыҡ уны һындырырмы, бахыр, мәжнүн бер йән итерме, әллә сараһыҙлыҡтың үҙенән дә саяраҡ, ҡеүәтлерәк көскә әйләнерме? Тегендә, алыҫта ҡалған Мәскәү кистәренең береһендә, дөйөм ятаҡтың Мәҙинә менән Әптеләхәт йәшәгон бүлмәһендә, Давид Соломонович менән булған бср әңгәмә иҫендә Мәҙинәнең. Был һөйләшеү Әптеләхәт өҫтөндә болоттар ҡуйыра башлаған мәлгә тура килде.

— Әгәр хәкиҡәт, ғәҙеллек тип даулаша башлаһаң, аҙағы дар ағасы йә булмаһа Иисусты көткән яза менән тамамланасаҡ, — тине Давид, һаҡалын нәҙек оҙон бармаҡтары менән семтекләй-семтекләй.

— Тимәк, һинеңсә, — тине Мәҙинә, — көрәш мәғәнәһеҙлек?

— Көсөн тауҙар, ҡаялар менән көрәшеүгә сарыф итһә, йылға бер ҡасан да диңгеҙгә барып етә алмаҫ ине, Мәҙинә!

— Ә һин, Әптеләхәт, һин нисек уйлайһың?

Әптеләхәт эңерҙә тағы ла аҡһыллана төшкән сырайында ҡара күмер кеүек күренгән күҙҙәрен тәҙрәгә йүнәлдергән килеш:

— һәр кем күрәсәген үҙе күреп бөтөргә тейештер тим мин. Йылға инештән генә башлана. Аҡҡан һайын киңәйә,

.....ә, үткән юлы уны үлемһеҙ итә. Һин күрә торған ғыны ла, рәхәтте лә икенсе кеше кисерә алмай. һин үткән ул һинең тәжрибәң, һинең байлығың. Арыһаң — хәл ш.иылһаң — кире тор. Һөйөүҙән генә ваз кисмә. Ни юм кыйын булһа ла, бары тик һөйөү хисе генә кешегә м.ипоүенә мэғәнә бирә, — тине.

Һеҙҙең менән миңә шундай рәхәт, еңел, ләкин... — инә «Был бәхет оҙаҡҡа бармаясаҡ!» тип әйтергә итте лә, н гешләне. Уның урынына: — Ниңә һеҙҙең кеүек еләр күберәк түгел икән! — тип көрһөндө.

hиңә генә түгел, беҙгә лә рәхәт һинең эргәлә, — Давид імонович Мәҙинәнең бармаҡтарынан һыйпап ҡуйҙы. —
карамаҡҡа ғына нескәһең, Мәҙинә. һиндэге көс...

Мәҙинә һүҙҙе шаярыуға борҙо:

Ҡыҫҡаһы, герой!

Ләкин Давид шаярмай ине:

Изге кешеләр һәм геройҙар... донъяға икмәк шифатында, кешелекте туҡландырыу маҡсатында, үҙҙәренең сәскән, ләкин Күктә йыйған уңыштарын алып килә. һин рҙың, моғайын, береһелер, Мәҙинә...

Өшнй башлаған Мәҙинә, ышыҡтан сығып, йәнә буран ын гылды. «Ҡыҙыл мөйөш»тә, бәлки, береһен осратыр. |.||>Я>| ҡотҡарыу өсөн кемдер, нимәлер эшләргә тейештер ипдс?! Бына, мәҫәлән, көршәк яһаусы балсыҡтың бөтә ірен, игенсе тупраҡтың, тәбиғәт шарттарының эллэ іс хикмәттәрен белә. Ә малсы? Малсы ни өсөн teлəhə ı ы шарттарҙа ла кеше күҙенә мөлдөрәп ҡарап торған идарҙы аслыҡтан ҡотҡарыу юлын белмәҫкә тейеш?! инәнс тынламанылар, бөтә булған аттарҙы бесән ташырға шммлар. Хәҙер, ас малдың үҙҙәрен генә ҡалдырып, іһыһы кайҙа ҡасып бөттө.

«Ҡыҙыл мөйөш»тә лә бер кем булмай сыҡты. Ҡарауылсы ı ı аптырашып ултыралар микән? Мәҙинә һыуына ығған мейескә ҡулдарын терәне, күҙе стеналағы шсыларҙың көндәлек һауымы яҙып барылған таблицаға ғы

к!.. - һауым ныҡ кәмегән. Хатта егерме литр һөт н Бөйрәкәй өс литрға төшкән. Таблицала Ғәлимә шен ıəı е һандар ғына мин кем дә һеҙ кем тип ҡуҡырайып

тора. Ниндәй ҡөҙрәт менән башҡа һыйырҙар астан күтәртеүгә етешкәндә был мул һөт һауыуға ирешә икән?

Ул арала таяғы менән тукылдап, ығышып, ятып тигәндәй, Ишмәмәт килеп инде:

— Һаумы, Мәҙинә һылыу? Хәлең нисек?

— Рәхмәт, Ишмөхәмәт ағай, шөкөр, — һыйырҙарын алып сығып киткән кешеләр араһында ошо Ишмәмәттең дә булыуын онота алмаһа ла, Мәҙинә тыныс күренергә тырышты. Әптеләхәте бит уға йыш ҡына: «Кешеләр күберәк сәскәне түгел, ә уның һабағындағы энәләрен иҫендә һаҡлаусан. Ә һин, Мәҙинә, энәләрен оноторға, сәскәләрен генә хәтерләргә тырыш», — ти торғайны.

— Стенанан шул тиклем... ни күҙләйһең?

— Күҙләйем шул... Малдар астан үлергә етешкәндә ҡайһы бер һауынсыларҙың һауған һөтө кәмеү түгел арта барғанға аптырайым!

— Аҡыллы булһаң, уныҡы түгел, һинеке артыр. Бөтәһе лә үҙеңдән. Ғәлимәгә, ана, Герой бирергә итәләр, депутат итеп һайланылар... — хисапсы ғыжылдығы сығып йүткереп, мейес алдына сүгәләне. — Бәхет ҡошо... үҙ ҡулында.

— Ағай! — Тауышындағы ҡырҡыу ноталарҙы йәшерә алмаған Мәҙинә хисапсының алдына килеп баҫты. — Нисек тә булһа йән аҫырарға тырышыу — ул хайуандар өлөшө.

— Ха-ха! Ә һинең өлөш? һинең, минең өлөш ҡайҙа?!

— Беҙҙең өлөш, кеше өлөшө, башҡалар бәхете өсөн үҙеңде ҡорбан итеү, йонендс фиҙа ҡылыу!

— Уһу! Улай шәп булғаһың, бар, ана, ас малдарҙы туйҙырыу әмәлен тап! Бар, бар! Тышта буран олой, эсенде аслыҡ тырнай! Бар, ҡорбан ит үҙеңде. Фиҙа ҡыл йәнеңде!

Мәҙинә, уны тыңлап бөтмәй, сығып йүгерҙе. Ул, Мәҙинә, әмәлен табырға тейеш! Элегерәк, фермала бесән бөткәс, улар тумар баштарын балта менән тумырып малға ашаттылар. Әле уны эшләп булмай. Ҡырға сығыу түгел, өй араһында аҙашырлыҡ. Ҡапыл Мәҙинәнең башына бер уй килде: әгәр ҙә ул һәр бер өйгә инеп, һәр өй хужаһын фермаға берәр генә тоҡ бесән илтергә күндерә алһа?! Башына хәтәр уй килеүҙән аяҡ быуындары йомшаны. Быны кемгәлер әйтергә һәм бергәләп, өй беренсә йөрөп... Ғәлимәме уны аңламаҫ? Күрһәткестәре шәп булһа ла уның да бит һыйырҙары ас, күтәртеү хәлендә. Әгәр бөгөн малды шул рәүешле ашатһалар,

...гә, һолки, буран тымып та ҡуйыр... Буран тымһа, аттар ...ы кобәндәргә китер, э, бэлки, урмандан тракторҙар ҙа ...ып етер.

Өйөнә ҡайтып, малын ҡарап, балаһын имеҙеп килгәс, ип.1 йәнтәслимгә ҡарауылсы өйөнә йүгерҙе. Өйгә оҙон һәм ҡараңғы солан аша үтергә кәрәккәнгә, ул, һәрмәләнеп, ...рәк атланы. Ҡапыл бышылдап ҡына ҡарыулашҡан ...ютеп, Мәҙинэ шымып ҡалды:

Мшмәмәт тим, ағай, ҡуй! Ярамай, ағай!

(аяфҡа ярай бит! — Ғыжылдаҡ тауыш ферманың яңы ...1'мһыныҡы, ә тегенеһе...

Мине ул ... яратам, ти! Ағай... Ҡысҡырам, ағай!

Кысҡырһаң — герой мэнсух һинә! Быҙауҙарға эсергән ...һмңә яҙып герой итергә йөрөгәндәрен белмәй тиһеңме? ...рмала бөгөн иң күп һауын, фактически, Мәҙинәлә!

һы! Унда таналар ғына бит! Кем ышана?!

Йә һин минә биреләһең, йә мин һине... фаш итәм! Бөтә ...>ща рисуай итәм!

Лғый!

Ыһ!

Уһ!

Мәҙинә, нисек ингән булһа, шулай шым ғына сыға ...ланы. «Ғәлимә! Элекке әхирәте! Ниндәй оят! Ниндәй иколек!» Биттәре ут кеүек янған, башына эҫе капҡан им.1 ауылға табан атлыҡты. «Онот! Күрмәнем тип уйла! — ...бср тауыш. — Әптеләхәт әйтте бит, энәләргә иғтибар ...с!..» — Мәҙинә һәр аҙымын буран менән көрәшеп яулап ...арҙы. Ана, өйҙәр. Уларҙан йылы бөркөлә. һәр өй ...хужаһының йә уйсан, йә моңло, йә һағышлы, йә шаян, ...күҙҙәре менән ҡарағандай. Төрлө тәҙрәләр, төрлө ...мц меһиме — битараф ҡараштар юҡ.

Мәҙинә, бөтә көсөн, иманын, ышанысын йыйып, тәүге ...шаҡыны.

• прГжназ ирен көтә. Кәрәсин тултырған шәменең ...ялтыратҡансы һөртөп, урынына ҡуйҙы. Мейескә ф мспон тауыҡтан ҡуйылған бәлеш, уның ҡаҙ майы

ҡушып баҫылған ҡамыры тәмле еҫ бөркә. Сәрбиназ, бәлештең бөкөһөн асып, ҡайнар һыу өҫтәне: Азат оҙаҡлап, бәлештең рәте китмәгәйе... Өй эсе ҙур түгел, әммә бөтә эйбер үҙ урынында. Тәҙрә ҡорғандарынан алып, мендәр тыштарына тиклем сигеүле был өй эсе тәү ҡарашҡа һоратып килер танһыҡ йән эйәһен көткән еткән ҡыҙ түрен хәтерләтә. Сәрбиназ менән Азат (ул саҡта уға барыһы ла Сынтимер тип өндәшә ине) армиянан ҡайтып килешләй осраштылар. Тирәклегә бер түгел ике сумаҙан тотоп, йәш һылыу ҡыҙ эйәртеп килеп ингән Азат ауыл осонда туҡтап ҡалды. Ҡулъяулығы менән тирләгән битен һөртөштөргәс:

— Шунан... ни ҡылабыҙ, Сәрбиназ? — тине.

— Әлләсе... — булды йәйәү атлауҙан бит остары алһыуланып киткән сибәр ҡыҙҙың яуабы. — Директор ҡайҙа йәшәй икән? Шунда апармаһаң...

— Эйе... анау саҡлы ара сумаҙанын күтәреп килтер ҙә үҙен директорға илтеп ҡуй...

Егеттең шаярып һөйләшеүеме, әллә егет үҙеме күңеленә хуш килгән ҡыҙыҡай бит остарын уйылдырып, күҙен ҡыҫа төшөп, ауылға ҡараны:

— Ошо саҡлы ҙур ауылда ҡоштоҡолай ғына йәнемде һыйындырыр бер генә өй ҙә юҡ микән ни?!

— Былай итәбеҙ, — Азат ҡыҙҙың көүҙәһен, ике ҡулы менән иңбашынан тотоп, үҙенә борҙо, — өс көн беҙҙә йәшәйһең. Әгәр өс көндән сығып китһәң, үҙең ҡарайһың. Әгәр китмәһәң, миңә кәләш булаһың!

— Абау, шулай уҡ тиҙме?! — Былай ҙа йоморо күҙҙәре ҙурайып киткән Сәрбиназ аптырап егеттең тәүәккәллек, хатта ниндәйҙер ҡырыҫлыҡ менән янған ҡарашына төбәлде.

— Өс көн минең өсөн өс йылдай үтәсәген иҫәпкә алғанда, тиҙ түгел.

— Ауылда үҙенде әллә нисә ҡыҙ көтөп торалыр әле...

— Уныһы — икенсе мәсьәлә, уныһы һиңә кәрәк түгел.

Бына шул көндән бергәләр улар. Сәрбиназ Азаттарҙан өс көндә лә, аҙнанан һуң да сығып китмәне. Тәү күргәндә үк ҡәйнәһе уны, Азат килен алып ҡайтҡан икән, тип ҡабул итте, аяҡ аҫтына оло мендәр ташланы, бикәсе һыу башланы. Азат үҙе генә һүҙендә ныҡ торҙо: кейәү менән килен өсөн сымылдыҡлы карауатҡа түшәлгән йәймәгә, ҡушлап һалынған эре биҙәкле сатин тышлы мендәрҙәргә дүртенсе тәүлектә генә

и оашын һалды. Шул көндән алып улар тормошонан ......ләи генә тетрәндерерлек ваҡиғалар үтмәне! Азаттың ҡара кмлй сэстәре ағарып һирәгәйҙе, былай ҙа ғүмере ит |.п аи коүҙәһе ҡуранысланып ҡалды, Сәрбиназ да инде кс гәү ҡараштa уҡ иҫте юйҙырырлыҡ матурлығын күптән ки илгы, тик ҡасандыр бер күреүҙә үк бер-береһенә ғашиҡ ш кан хис үҙгәрмәне. Сәрбиназ теге саҡ өс көн буйы иүгинының башын үҙенеке менән йәнәш мендәргә һалғанын ск коткән булһа, әле лә шундай уҡ ялҡын, һағыныу менән йулғанын, хәләленең күпертеп һалып ҡуйған сэскәле и (әрі ә башын һалғас:

Йә кәләш, көн нисек үтте? — тип үҙенә әйләнеүен (орбиназ башта өндәшмәй, шунан йоморо беләктәре Менли иренең иңбашынан ҡосаҡлай, алмаш-тилмәш |рсиән үбә, шунан:

Пиде һөйлә, — ти.

)мс, күберәк Азат һөйләй. Уның тормошо сыбар, Һикл поле хәл-ваҡиғаларға, кәйөнөс-һәйөнөстәргә бай.

Выл кис башҡасарак булды. Азат Сәрбиназын инеү менән іклап алды:

(орбиназ, кәләшкәйем! Бәләнән имен килеп сыҡтыҡ! иашмаҡ ҡына үлде. Һыйырҙар иҫән! Бөтә ауыл ҡуҙғалды. |||сцме, кәләш, Исрай ҡарсығы менән анау эскесе Вәләүгә іем фермаға берәр тоҡ бесән илтте!

Килтергән бесәнде бөтә ташламаһаң ярай ҙа!

Ҡалды! Иртәгәгә етә әле запас. Бурандың да көсө и оашлаған!

Кемдең башына килгән уй булды был, Азат?!

Кемдең тиһең? — йыуынырға була ҡулъйыуғыска ән Азат кире тураиҙы. — Мәҙинә! Ул өй беренсә йөрөп ік і ы куҙғатҡан!

Моҙинә?! — Сәрбиназ ашъяулыҡты күкрәгенә ҡыҫты. балаҡай! Малын тартып алып ҡан илатҡан ғаиләнән ......ли ксше сыҡһынсы әле!

Пкснсе берәү әйтһә, тыңламаҫтар ине, — Азат, • ш ләнеп, ашъяулыҡ эргәһенә килеп ултырҙы. — Әҙәм бит ц ксм икәнен барыбер күрә. Мәҙинәнең булмышын ізмышына гөшкән ғазаптар үҙгәртә алмаҫтыр, Сәрбиназ. |.нлт гә шундай ине...

— Ә шуларҙы «халыҡ дошманы» тип атарға кемдендер теле әйләнә...

— Был ваҡытлы сәйәсәт. Әле бит, ана, төрмәләргә ябылған ун миллион тотҡондоң бер миллионын сығарҙылар. Тормош үҙгәрә, бисәкәй. Сталиндың, Берияның портреттарын бик баҫырға ла ҡушмайҙар. Хәбәрҙәрҙең төрлөһө йөрөй, Сәрбиназ.

— Бәлки, крәҫтиәнгә лә ҡараш үҙгәрер...

— Шулай инде: тарих ҡасан ҡол хеҙмәтенең үҙен аҡлағанын күргән?

— Һыуытмай эс сәйенде... Әллә бәлеш ҡатыбыраҡ...

— Яҡшы, яҡшы... Бәлеш бына тигэн... Иртәрәк ятайыҡ әле, Сәрбиназ.

«Сәрбиназ» тигәнен айырым бер баҫым менән әйтеүе һиҫкәндерэ бирҙе. Етди һөйләшеү көтә, ахыры, бөгөн уларҙы. Әле һөйләшкән хәбәрҙәр ғәҙәти генә, көндәгесә. Сәрбиназ түшәк йәйә башланы. Сигеүле аҡ мендәр тыштарын сисеп, кәлеплэп комодҡа һалды, урын-ерҙе ҡабартты. Йәй йыйып киптереп, ҡолаҡсын мендәр эсенә тултырған хуш еҫле кейәү үләнен дә һуҡҡыслап-ҡаҡҡыслап еҫен сығарҙы. Азаттың аяғын йылы һыу менән йыуҙырып, ҡоро киндер сепрәк менән һөрттө:

— Аяҡтарың талалыр, ҡартыҡайым... Бигерәк көн оҙоно бушамайһың...

— Һинең эшең минекенән күберәк, Сорбиназҡайым. Өй эше бит тауыҡ сүпләһә лә бөтмәй...

Икәү сөкөрләшә-гөрләшә сымылдыҡ эсенә инеп ятҡас, әүәл Азат телгә килде:

— Сәрбиназ, мин әкәмәт бер күренештең шаһиты булдым бит әле.

— Ҡасан?

— Бөгөн түгел... Буран башланып ҡына тора ине. Һин теге Фәүзиә ҡарсыҡтарҙың этен хәтерләйһеңме?

— Күкбүренеме?

— Ҡара, исемен дә онотмағанһың.

— Онотторға ни... Ҡарсыҡҡа барғылап йөрөнөм, күҙем йылан ҡарағы булғас, шул Фәүзиә ҡарсыҡ имләне лә инде! Ә һинең биленде...

— Шул, шул... Бүре хәтлем бар ине ул эт.

Әллә ҡайҙа булды бит ул. Өй янғас, ул да юҡҡа сыҡты, ипдс бергә янып үлде...

Мин, Сәрбиназ, шул этте күрҙем.

Кит инде, атаһы!

Ысын...

Тегеләрҙең өй урынында йөрөймө меҫкен?

Юҡ шул.

Әллә ҡырҙа?!

Ишмөхәмәткә барғайным.

Шунан?

Шул. Сәй эсерҙе Рауза. Ярты сығарҙы. Оҙаҡ ...тырманым. Ишмәмәткә эшкә әйттем дә сығып барһам... ...быҙауҙай эт тешен ыржайта. Ҡурҡып, артҡа тайпылдым. ...ырағас, Ишмәмәт алдан сыҡҡайны, теге эт ташлан... ...мыһын оҫтөнә! Сыйылдай, ялай!..

Һуң... — Сәрбиназ ни ҙә булһа әйтә алмай тынып ... Дзат та бер талай өнһөҙ ятты.

Мин аптырамаҫ инем этте Фәүзиә ҡарсыҡ тупһаһында, ...ие урынында күрһәм. Мәҙинә йортонда осратһам да иҫем ...китмәҫ мне — күрше. Эттең йөрөп-йөрөп төлөгөнә ҡайтыу ...бар бит инде ул...

Был нимэ була һуң инде, атаһы? Сыйылдай, ялай ... әле...

Шул, шул...

Ия хоҙай!.. Был ни булыр икән, атаһы?!

...н опдәшмәне: иҙел күрмәй итек сисмәҫкә өйрәнгән ...к. Мәгәр Ишмөхәмәтте тәү күргәндә үк күнеленә ... мшк ҡырмыҫҡа иләүеләй мыжғый башланы.

...нктдиновты Мәликәһенән ишеткәндәре уйға һалды.

Күрөҙәсе ҡарсыҡтың һине күргеһе килә, — тине и... кис йоҡларға ятҡас.

Ниңә, һин барғас етмәйме? Әйткәндәй, — Әйүптең щщ.щц уцайһыҙланыу билгеһе сыҡты, — мынау бурандар ... Флориданы нимэ ти?

...мой...

— Йә шул бушҡа ҡорсоп йөрөйһөндөр тинем дә... — үткәндәге ҡыҙының йоҡламауы һалған хафаларҙы онота башлаған Әйүп йоҡоға китер өсөн уңайлап ята башланы. — Арытылған...

Арыһа-арымаһа ла иренең гел арты менән боролоуына күнегеп бөткән Мәликә, беләгенә башын һалып, ҡалҡыша төшөп, һөйләшеүҙең бөтмәгәненә ишара иткәндәй булғас, Әйүп һағая төштө:

— Ҡарсыҡ үҙе былай шәпме?

— Шәптер... Ул һине саҡыра, Әйүп... — Ҡатынының тауышында иплелек тә, наҙ ҙа, ғәфү үтенеү ҙә сағылғандай булғас, Әйүп уға табан боролоборак ятты. Бала өсөн яндырып ҡуйылған тонок электр лампаһы Мәликәнең тығыҙ, күпереп торған түштәрендә наҙлы һырҙар яһап ятҡан пеньюарын, ап-аҡ муйынын һырыған ҡулса-ҡулса ҡара сәстәрен яҡтырта. Ахыры ул йөҙгә һурылыбыраҡ та киткән, күҙ төптәренә яңы һырҙар ҙа ятҡан кеүек... Эйе, ҡаршыһына ултыртып һүрәтен генә яһарлыҡ был Мәликәнең. Әле Әйүп уның йәш, еләк кеүек саҡтарын күрмәне, ул мәлдә ниндәйерәк булды икән был мөхәббәт алиһәһе Венераны хәтерләткән, бәлки, унан да камилыраҡ һын? Рәсемде насар төшөрмәне йәш сағында Әйүп. Әле лә тонйорап ҡояш батыуын, тәбиғәттең гүзәл бер ерен, матур ҡатын-ҡыҙ һынын күрһә, буяу иҙгеһе килеүҙән ҡулдары ҡысыта башлай. Әгәр Әйүп рәссам һөнәрен һайлаған булһа, ул һис шикһеҙ был ҡатынды натура сифатында файҙаланыр ине. Моғайын, ул шулай булыр ине. Ә ҡатыны сифатында... Саҡ ҡына Әптеләхәттән алдараҡ осратһа, Мәҙинәне ҡулынан ысҡындырмаç ине. Мәҙинә — гөлдәрҙең гөлө рауза бит инде ул. Әлбиттә, энәләре лә бар. Әммә Әйүп уны ҡосағына ҡыçып ирендәренән бер һурып үбер өсөн, энәләре урынына йылан ҡаяуы андып торһа ла, уйынан кире ҡайтмаç ине.

Үҙенә ҡарап уйланып ята биргәс, иренең күкрәгән «уф» тигән ауаз ярып сыҡҡас, Мәликә уçалая, саялана төштө:

— «Уф» тигәндә килмә яҡын, янырһың ялҡыныма! — тиҙәр мәле, Әйүп...

— Үртәргә тиһәң, һине ҡуш... Әбей мине ниңә саҡыра?

— Барғас, ишетерһең. һүҙ, моғайын, Флорида хаҡында барыр... Ул миңә әйтмәне.

— Барырға кәрәк тиһеңме?

Һис шикһеҙ... — Иренең үҙенән биҙгәндән-биҙеүен ... енең алтынсы тойғоһо менән һиҙенгән Мәликә, ... юанғы һүҙе менән генә түгел, хәрәкәте менән дә унын ... ыуына тейеүен андап, артына әйләнде һәм бары тик үҙенә ... билдәле уйҙар диңгеҙенә сумды...

Өйүп Камалетдиновтың килеүен Фәүзиә-Барсынбикә дүрт ... мспон көтөп алды. Ул ингәс, аяғына йылы ойоҡбаш ...

()шоно кейеп ал, һүҙ **ҡыçка** булырға оҡшамаған.

Әллә инде, инәй, — Әйүп әбейҙең һүҙен йығырға ... ымағанға ғына ойоҡбашҡа үрелде. — Оҙаҡ ултырыр самам Нылай. Самаһы — сама, ваҡыты юҡ бит, ҡәһәрең...

Сталин заманы үтһә лә теҙгенде бушатып булмаймы?

Карсыгк, аяғын суҡайтып бөкләп, уның ҡаршыһына ... кунаҡланы.

Сталин булмаһа, уларҙың икенселәре бар. Ана эле ... ин баш булып алды. Ишеткәнһегеҙҙер?

Миңә уларҙың кәрэге юҡ бит, улым. Минең өсөн ... ләү бар, үлем бар. Шул ике яр эсендә йылға-ғүмер аға.

Ләкин улар бит юлбашсылар...

Фвүзиә урынынан ҡалҡына биреп тамаҡ ҡырҙы:

Енәйәтселәр. Эйе, улар ҙа кеше. Уларҙың да ғүмере ... менән үлеү арауығы. Ләкин улар шул ваҡыт эсендә ... кан ҡойорға, күпме яҙмыштарҙы баштүбән ҡуйырға ... Улар, улым, ябай енәйәтселәрҙән бер генә нәмә ... айырыла: уларҙың өçтөнә... ҡан сәсрәмәй.

Шулай ҙа, инәй, Сталин менән Гитлер араһына ... билдәһе ҡуйып булмай...

Нигә булмаһын? Гитлер бишәр мең кеше ... ц.фышлы газ камералары яһатҡан. Бер тамсы ҡан ... маиынса, күпме әҙәм баштарынан көл-күмер яһаны. ... Рәсәй тигән тотош бер илдән төрмә яһап ҡуйҙы...

Инәй, был һөйләшеү икәү арала ғына, элбиттә. Гэзит ... ным гиһәң дә...

Эйе, уҡымайым, — һөйләшеү көпә-көндөҙ барғанға карсыҡтың йөҙөнә бурандан һуң ҡапыл асылып,

Г

яҙылып киткән ҡояштың ҡышҡыса һүрән, ләкин яҡты нуры төшә. Был нур уның бөтә йыйырсыҡ-һырҙарын яҡтырта. Әйүптә йәнә рәссам ҡомары ҡайнай башланы: ошо килеш кенә туҡымала һынландыр ине был йөҙҙө! Ай-һай... харап матур булғанға оҡшай түгелме был йөҙ... Ләкин әле ул, ҡартайыу өҫтөнә, янған да. Эйе, эйе... янған икән дәһә ул, янған...

— Ҡарап-ҡарап ултырам да, инәй, һорамаҡсы булдым...

— Мин дә, улым, шуны һорамаҡсы булдым: нигә һин сәйәсәт юлын һайланың? Һин бит арыу ғына төшөргәнһең һүрәтте...

— Дөрөҫ, инәй... — Әйүп ҡайҙан белдең тип һорауҙан үҙен саҡ-саҡ тыйып ҡалды. — Әле лә мине шул әүәҫлек ташламай... Ә инде сәйәсәткә килгәндә... Эйе, шулайыраҡ булды. Институт... разведка мәктәбе... һуғыш... һәм бына — үҙегеҙ күреп тораһығыҙ.

— Кеше башта, улым, үҙен ижадта һынап ҡарарға тейештер... Рәссам булмай, ситәүкә үреп тамаҡ аҫыраһаң да ижади эш. Әгәр ҙә инде ҡулыңдан башҡа һөнәр килмәһә...

— Эх, инәй... Бәндә уйлай, Алла бойора, тиҙәрме әле? Етемлек бит аҡыл таптырмай. Балалар йорто ҡайҙа ебәрҙе — шунда уҡыныҡ...

— Һиңә икенсе юҫыҡ менән китергә лә юл асылған булған...

— Дөрөҫ... Рәсем уҡытыусыһы Ленинградҡа Художество академияһына ебәрергә документ әҙерләткәйне... Эйе, эйе... ул хәл булды.

— Ана шул булған һинең ысын юлың.

— Инәй, яҙмышымдың икенсе йүнәлеш алыуында мин генә ғәйепле түгел. Әле балалар йортонда бишенсе класта уҡығанда уҡ беләгемдең ҡаны менән ата-әсәйемде һуйып сығыусыларҙы табырға ант иттем.

— һин?! Ант иттең?

— Эйе. Ант иттем. Һуғыштан һуң хәрби карьеранан баш тартып, э миңә ҙур карьера яһарға мөмкин ине, бала сағым өҙөлөп ҡалған, ата-әсәмдең ҡанына буялған ошо ергә ҡайттым.

— Таптыңмы һуң? Үс алдыңмы?

— Тапҡайным, үс алып өлгөрмәнем. Мин эҙенә төшкәндә уға инде зыяратта ҡәбер ҡаҙалар ине.

)йс, Әйүп ҡустым, бына ҡасан килеп осраштың беҙҙең ....пр!

Беҙҙең?! Ләкин мин һеҙҙең менән...

Мин, улым, һин эҙләгән ирҙең... ҡатыны инем...

Локин...

Гыныслан, Әйүп. Мин Барсынбикә, Диңгеҙхан Моратовтың ҡатыны инем. Мин һинең ҡаршыңда ултырам.

| амалетдинов Тирәклегә колхозсыларҙың дөйөм ш шы тыштына барыуҙы башҡаса кисектермәҫкә булды. Ни Л Һа, шул булыр, тип уйланы ул. Үҙ-үҙенән ҡасып ҡотолоп булмағандай, Мәҙинә менән осрашыуҙы кисектереүҙән дә ф и үч юк. Эйе, Мәҙинәнең шоморт ҡара күҙҙәре: «Ә атайым? ы коткарыу өсөн бер ни ҙә эшләмәнеңме ни?!» тип юсок. Эйе, Мәҙинәнең ҡарашында: «Ошомо ярҙамың? һиисц ярҙамың арҡаһында имсәк бала менән көнө-төнө тиҙәк ғаһында йөрөйөм түгелме?» тигән һорау ярылып ятыр Ботәһен дә аңлай Әйүп, бөтәһен дә. Ләкин ул бит үҙе ипаулы айғыр! Нисек кенә тулаһа ла ауыҙлығын тешләп и ок гүгел. Хатта, күңеле тиңһенмәгән, тәне тартмаған иканән дә арына алмаясаҡ. Партия уставы ғаилә шоһсн үтә ҡаты ҡуйған. Ҡайҙа ынтылма — тышау, ҡайҙа има ауыҙлыҡ. Тик бына йөрәк мәсьәләһендә генә шта бср ни юк. Уға бойороп та, бик һалып та, ауыҙлыҡ реп ю булмай...

Китсргә була толобон алырға ингән Әйүпкә Мәликә щ п.ша ҡараш ташланы:

Өллә... ат менән юлға сығаһың?

Гирөкле яғында буран шэп булды, машина үтә алмаҫ

Кыңғырау ҙа таҡ эләйһәң дуғаңа...

Кыңғырау?! Ә нигә?

Беҙҙең яҡта кейәүҙәр...

Мәликә!!!

Ә һин миңә ҡарсыҡта булғандан һуң... — Мәликә, нән үҙгәреп, уйсанланып, болоҡһоп ҡайтҡан иренең н п билдәһеҙ көндәшенә ялғап ҡуйғанлыҡтан, өндәшмәй

түҙә алманы. — Ҡарсыҡ һине бик ныҡ шатландырып ҡайтарҙы буғай!

— Мәликә, һин... нимә һөйләгәненде үҙең белмәйһең!

— Әйтмәгәсең...

— Иөрөп ҡайтайым әле. Ҡарсыҡ һөйләгәндәр уйын хәбәр түгел Иренең артынан ишек ябылғас, Мәликә ултыра төштө: «Шулай уҡ ҡарсыҡ быға... Юҡ, юҡ, булмаҫ! Күрәҙәсе тигәс тә, Мәликә тормошоноң бөтә ысынбарлығын ул ҡайҙан белһен? Йә бына унның ирен атһыҙ-юлһыҙ Мәҙинәнән ҡыҙғаныуы... Телен тыйһа булмай ине микән ни? Әйүпте Мәҙинәнән ҡыҙғаныирға уға ниндәй сәбәп бар? Сәбэп юҡ кеүек, ә бына күңел...»

Оло юлға сыҡҡас, аттар ҡатҡыл ҡар өҫтөнән йылдам юртып китте. Һоло ашап, һимереп, юл көҫәп торған хайуандарға Йыһанур ҡарттың хатта сыбыртҡы болғауы ла кэрэк түгел.

Эйе, юлға ат менән сыҡты Әйүп. Күрәҙәсе менэн яңынан осрашҡанға тиклем ул күп нәмәне башынан үткәрергә тейеш. Йөрәгенә тыныслыҡ, башына һиллек кэрэк уның. Ҡарсыҡтан сыҡҡас, нишләрен белмәгән Әйүптең иң яҡын кешеһе менэн күҙгә-күҙ терәп ултырғыһы килде. Таулылағы бихисап таныштарын күңеленән барлап сыҡҡандан һуң, хәтере Лидия Николаевнаға уҡталды. Эшенэ барҙы. Араларында артыҡ хэбәр ҙә булманы кеүек. Ҡара-ҡаршы ултырып, тәмәке көйрәттеләр. һүҙ эйәрә һүҙ сығып, Әйүп:

— Лоҡман Талиповичтың теге... һеңлеһе нисек? — тип һорай ҡуйҙы.

— Улмы? — Лидия Николаевна зәңгәрһыу күҙҙәрен түшәмгә теклэп уйлана бирҙе лә бер хәбәр һалды: — Мин уньщ бер көн килеп айнығып китеүенэн... ҡурҡам!

— Ҡурҡаһың? Һауығыу насар эшме ни?

— Эш шунда: Сәбилә бәпәйенең... сепрәктән яһалғанын төшөнәсәк.

— Кеше асылына ҡайтырға тейештер инде.

— Уныһы шулай, ләкин был осраҡта...

— Ниндәй осраҡта?

һеҙ минә, Әйүп Ғәзизович, сигенергә урын к.... рмайһығыҙ: Сәбиләгә... һөт төштө...

һөт?!

һөт, Әйүп Ғәзизович... күкрәк һөтө...

Лптырауҙың сигенэ сыҡҡан Әйүп Ғәзизовичты Лидия Николаевна оҙата сыҡты һәм хушлашҡанда күҙҙәренә ҡарап:

Әйүп Ғәзизович... беҙ бит фронтовиктар. Әйҙәгеҙ әле Минсң өйгә бер килеп сығығыҙ. Күрәм: һеҙҙең дә һөйләр Ивборегеҙ эсегеҙҙе күмһетә, — тине.

Күмһетә, Лидия Николаевна... Бер ултырып алғанда м.н ир булмаҫ ине... Мин бит, — Әйүп үҙенең «һин»гә Ку< кэнен һиҙмәй ҙә ҡалды, — һине ҡарындашым кеүек яҡын Күром.

Рәхмәт, Әйүп Ғәзизович. Әйтергә булалыр инде: ул юнго минә лә ят түгел.

Шулай айырылышты улар. Әллә нисек еңел булып ҡалды Әйүпкә. Лоҡман Талиповичтың һеңлеһе хаҡындағы яңы мәғ иүмәт һиҫкәндерҙе уны. Әйүпкә яңыраҡ ҡына Сәбиләнең Пилдоһеҙ шарттарҙа ғәйеп булған Ихсанбайҙың ҡатыны «н инлеге һәм уның ире өйөнән йөклө китеүе мәғлүм ı ıı ıны. Бына нисек! Тимәк, Сәбилә һуғыш йылдарында ı советын етэкләгэн Ихсанбайҙың ҡатыны! Ә Ихсанбай Гвгс күрәҙәсе менән Сибэғәттең, ҡарсыҡ әйткәнсә, Дингеҙхандың улы! Ул сағында, эҙ йәшерергә була исем-фамилияларына тиклем үҙгәрткәс, ни өсөн ул ҡарсыҡҡа янған рмпын яңынан ҡаҙҙырыу, хәкиҡәтте асыҡларға маташыу ı ıр ıк Пулды? Хашимды ҡотҡарыу өсөнмө? Ә Хашим уға ни и ыма? Хашим Мәҙинэнең атаһы. Ә Мәҙинә... Тимәк, ıhı >| ла Мәҙинәгә барып тоташа! Мэҙинә кем уға? Эйе, ... Ул сакта ҡарсыҡ әйткәйне, бөтэһенең дә бала хаҡына ....иеүенә ишара яһағайны... Бәлки, Мәҙинәне күреү, уның щ һойләшеү күп нәмәгә асыҡлыҡ индерер?

\ нан һуң ҡарсыҡ үҙе лэ бит хушлашҡанда: «Был — !.....лшеүҙең башы ғына. Дауамы булыр. Әҙерәк башың һил и килерһең, — тине. Шунан ул көләмһөрәне: — Әгәр ıı а алырға уйлаһаң... алыҫ ҡаса алмаҫмын. Күп булһа, 1>уиы ер китермен. Ә сабыйынды телле итеү әмәлен мин ı ілегә әйтә генә алмайым».

Бына ул тормош тигәнең: Аллаға ла, муллаға ла ышанмаç Әйүп бер гуҙып бөткән ҡарсыҡтың им-томона, уның ауыҙынан сығыр һәр һүҙгә интизар.

Буран нисек ҡапыл башланһа, шулай тиҙ тымды. Уйламаған ерҙә тауҙар яһап, ҡыш башында өйгән убаларын күсереп, ҡайҙалыр юл һалып, э ҡайҙалыр булған юлды ҡамап, аҙна буйы ауылда ла, ҡырҙа ла, урманда ла хакимлыҡ итеп, бөтәһен үҙ ҡурайына бейеткәндән һуң арып, талсығып тынып ҡалды. Уның ҡарауы, эҙәм аҡылы етмәç һырҙар менән семәрләнгән көрт күгелйем сафлығы менән ялтырай, ә ҡояш, үҙенең оҙаҡ юғалып тороуына ғәфү үтенгәндәй, бар ғәләмгә йәлләмәйенсә көлтә нурҙарын сәсә. Ферма һыйырҙарын да кордонға сығарғандар. Аслыҡтан, һыуыҡтан миктәгән малдар, шауҡал ҡабырғаларын ҡояшҡа ҡуйып, әкрен генә, туҡлыҡтың, йылының ҡәҙерен белеп кенэ, көйөш ала.

Көн йонсоуынан арыған малсылар ҙа, йыйылышып, тәмәке көйрәтә. Урталарында, санаға йәйелеп ултырып алғаны, Шәңгәрәй булыр. Үгеҙҙән һеҙәләп, һөйәк-һаяғы имгәнеп, мунсала дауаланып ятҡандан һуң, был уның халыҡ араһына тәүләп сығыуы. Колхозсыларҙың дөйөм йыйылышы була икән тигән һүҙҙең Рауза ауыҙынан сығыуы ҡорсотоп ебәрҙе уны. «Ебәрмәһәң, ҡашып барам!» — тигән белдереү яһағас, Рауза уға ошо муйынын боғалаҡтай ҡыҫып, быуып ҡына барған аҡ күлдәкте кейҙерҙе. Аҡ күлдәк кейеп алғас, Шәңгәрәй галстук таптыра башланы. Раузаның:

— Ул нимәгә һиңә? Уны түрәләр генә тағасы у! • тигәнен ишеткәс, Шәңгәрәйҙең ене ҡупты.

— Тап тигәш, тап! Түрәләрҙең минән ҡайһы ере артыҡ?! — тине ул аяҡ тибеп. Башҡа берәү булһа, бәлки, ыжламаç та ине, кеше йәнле Рауза, етем хаҡы — тәңре хаҡы тип, магазинынан килтереп бирҙе галстукты. Галстуктың ҡыҙыл булыуы ғына Шәңгәрәйҙе сирылырға мәжбүр итте:

— Раужа эпшәй, мыны шикелдене мәктәп балдары таға!

— Атаҡ, уларҙыҡы икенсе бит. Уларҙыҡы — өсмөйөш! Был нәстәйәшней ирҙәрҙеке! Самай һинеке!

— Ирҙәр ҡыҙылды тағамы?

I аҡмаһа, хөкөмәт уны нимештәп сығарһын?! Түлке күберәгенә тэтемәй!

Ярай, әтү тағайым...

\к күлдәк, ҡыҙыл галстук, Рауза алып биргән йәшел Иииҗлк, ҡара салбар тышынан Хөсәйен өçтөнән систерелгән, ' и пм ҡарамаҡҡа ярайһы бөтөн һырма, табанлы булһа ла ı ни һыйы китмәгән аҡ быйма, ҡышҡы ҡуян тиреһенән ıгән. хужаһының өлкән башында ҡош ояһы һымағыраҡ еукаиып ултырған бүрек кейгән Шәңгәрәй, теге ҡазанан һуң нерлек һылтаҡлап, ләкин таяҡһыҙ көйөнсә ферма юлы ппилап оçкә күтәрелде.

Бына ул фермала эшләгән барлыҡ ир-аттың иғтибар идә, мул итеп һалам түшәлгән санаға ялпашҡан.

Шоңгәрәй, кем һине былай кейендерҙе?

Раужа әпшәй!

Ярата икән эпсәң үҙенде!

Мжнамы ярата! Мин матур, иссу аҡылды.

Шоңгәрәй, э улар һине асыҡтырмаймы?

Лсау — мына! — Шәңгәрәй эшһеҙ-шөғөлһөҙ ятыуҙан ıı ırып, нәзегәйеп ҡалған бармаҡтары менән үңэсен ышҡыны.

\ иы у ите асаныҡ! Күп айыу ите!

Уны ҡайҙан алдығыҙ?

Раужа-эпшәйҙең ире, теге убыр атып алды!

Кит, эй, булмаçты!

Ышын!

К)кты!

Ант! Үҙем исеттем! Атты!

Кайҙа ишеттең? Һин бит сығып йөрмәнең!

Квртәлә атты! Аҙаҡ айыуҙың басын ҡыйҙыҡҡа күмде!

ярығынан ҡарап торҙом! Басы һур айыуҙың! I..... ırҙыҡы исе мөгөҙҙәре бар... У-у-у, мин ҡурҡтым!.. Убыр гән ҡарап торғанымды күрһә, еффәрә ине...

Ха-ха-ха! Айыуҙың мөгөҙө бар, тиһеңме?

I **[ссу** нишек!

Ха-ха-ха!

ПЬңгорәй һөйләй, ир-ат эсен тырнап көлә.

Касаныраҡ булды был хәл, Шәңгәрәй?

Өллә ҡашан... Айыу ите бөттө... Раужа әпшәй хәҙер пм кмпа асата.

һин нигә өйҙә генә йәшәмәйһең, Шәңгәрәй?

— Ы!

— Нигә «ы»? Мунсала йәшәйҙәр тиме ни?!

— Өйгә убыр эйәләсте. Йә атыр... йә нимә эстәр... юҡ, инмәйем...

Ир-ат Шәңгәрәйгә ҡарап хахылдап тороп, эргәләренә Мирхәйҙәров менән Камалетдиновтың килеп баҫҡанын да шәйләмәне.

— һаумыһығыҙ әле, кәңәштәр берекһен!

— Ул ниндәй эш ваҡытында өймәктәшеп тороу? — асыуы килгән Мирхәйҙәров Шәңгәрәйҙе күреп ҡалды. — Ә һин, ҡустым, тағы үгеҙ ҡоторторға килдеңме?

— Нимостәп мин эт менән эт булайым ти, Ажат ағай?

— Кеше үгеҙ эргәһенә... ҡыҙыл галстук тағып киләме? Ә һеҙ, һаҡаллы сабыйҙар...

Малсылар йыуаш ҡына көлөшөп алдылар:

— Мына... Шәңгәрәй атаһының аҙбарҙа айыу атҡанын һөйҙәне лә...

— Вәт әй! Айыуы мөгөҙҙө булған бит эле!

— Ха-ха-ха!

Таралыша башлаған малсылар артынан Шәңгәрәй ҙә туйтаңланы. Мирхәйҙәров бүркен сисеп, әйләндергеләп, кирс кейҙе:

— Хашимдың бәләһенең башы ошо иҫәрҙән башланды бит инде!

— Бәй, был теге тоҡом үгеҙенә балта сапҡан...

— Шул инде, шул... Ишмәмәттең алйото. Шәңгәрәйҙән башҡа кем фермаға аҡ күлдәк өҫтөнән ҡыҙыл галстук тағып килһен!

Йыйылыш колхоз председателенең хужалыҡ эшенә йыллыҡ йомғаҡ яһауынан башланды. Камалетдинов колхоздың күрһәткестәрен райондың башҡа хужалыҡтары менән сағыштырҙы. Уртаса алғанда барыбер башҡаларҙан әллә ни артта ла ҡалмайҙар, алға ла сыҡмайҙар.

Малсылыҡ буйынса ла дөйөм алғанда насар түгел. Камалетдинов эргәһендә ултырған йәш ҡатынға күҙ ташланы. Фәлимә Минһажева тигән алдынғы һауынсы ошо, күрәһең.

Гөскә башҡа таҙа ҡатын, кәкесерәк танауы ла үҙенә килешеп юрпшдай. Баҡһаң, Мәҙинәнең дә күрһәткестәре насар түгел ш I ана һыйырҙар һауыуына ҡарамаҫтан, икенсе урында ә», тип әйтелде докладта. Камалетдинов залдың бер ......ндәрәк ултырған Мәҙинәне күреп ҡалды. Килгән. рмлла ул ни өсөндөр күренмәне. Ыҡсым ғына пальто, ына бсрет кейгән. Был килеш ул теге дәүерҙәге ими,| шсткаларҙы хэтерләтә. Унын эргәһенә аҡ кәпәсле, галстуклы, иләмһеҙ ҙур башлы фермала күренеп щ диуана ҡунаҡлаған. Үҙе шулай ғына булһа ла, кем ргәһенән урын ала белгән бит эле! Камалетдиновтың Щһсреиә Гюго романындағы Эсмеральда менән Квазимодо киичс.

I әоиғәттең ҡушыуымы был... Моцарт тыуған ерҙә мотлаҡ Сиш.срм ярала, Матурлыҡ менән йәнәш Ғәриплек йөрөй. Мәзинәнең эргәһендәге ғәриплектән ғәрләнмәй, үҙен тыныс кеселекле тотоуы аптыратты Әйүпте. Тегеһенең ҡорауҙарына яуап рәүешендә башын ҡағып, һүҙ ҡушып та ала. юғары!.. Бынау тәпәш түшәмле, стеналары һыҙырылып клуб ишараһы ла, үҙ хәсрәттәренә, ғәмдәренә, донъя ләкәт гәренә сумған колхозсылар ҙа — береһе лә Мәзинәнең булмышына йәбешмәгәндәй. Уны кесерәйтә, I......әитә, меҫкенләтә торған көс юҡ кеүек донъяла...

лмалетдинов, Мәҙинәнэн ҡарашын көс-хәл менән ширып, йәнә докладты тыңлай башланы. Мирхәйҙәровтың: I марлы тәбиғәт шарттарында бөтә колхоз малы аслыҡтан ҡырылыу хәүефе аҫтында ҡалғанда үҙенең ялҡынлы мөрәжәғәте менән халыҡты малсылыҡҡа ярҙамға күтәргәне Мәҙинә ҡарындашҡа йөрәк түренән сыҡҡан рәхмәтемде ермәй ҡала алмайым...» Зал докладты бүлеп ҡул сапты, гар Моҙинә яғына боролдо. Эргәһендәге өлкән баш эйәһе, был алҡыштар үҙенә тәғәйенләнгәндәй, урынынан и, собәкәй итеүсе халыҡҡа утыҙ ике теше күренгәнсе изы, ҡәнәғәт булыуын белдереп баш эйҙе...

(ок вдтан һуң Камалетдиновҡа ла һүҙ бирҙеләр.

Килеүен килгәс, сығыш яһамай китмәм. Шулай ҙа, ...п алда, бер үк тәбиғәт һәм эш шарттарында колхоз шса кына түгел, район буйынса рекорд ҡуйған Фәлимә һажсва һенлекәш һөйләһен әле, үҙенең бай тәжрибәһе н уртаҡлашһын.

Зал буйлап тулҡын-тулҡын шыбырлашыу, кинәйәле көлөү үтте. Бер ни төшөнмәгән Камалетдинов Ғәлимәгә ҡараны:

— Йә, һеңлекәш, ҡыйыуыраҡ бул. Шартлатып эшләгән кеүек, шартлатып һөйлә лә бир!

Ғәлимә торҙо, трибунаға яҡын килде:

— Уның нимәһен һөйҙәйһең? Әҙерәк йоҡтайһың, күберәк эштәйһең, эйе... Курмыны ваҡытында таратып, ваҡытында эсерәһең... һыйырҙарҙы ваҡытында үгеҙгә ҡушаһың!

Залдан олораҡ бер һауынсы ҡуҙғалды:

— һинеңсә, беҙ, Ғәлимә, оҙаҡ йоҡтайбыҙ, күп ашайбыҙ, әҙ эштәйбеҙ? Ә ҡасҡыһы килгән һыйыр һинән-минән һорап торамы?

Ғәлимә тотлоҡто. Мирхәйҙәров ҡәләме менән өҫтәл туҡылдатты:

— Тәртип, тәртип! һүҙ алып һөйҙәгеҙ!

Әммә тороп баҫҡан һауынсы ла бирешергә уйламаны:

— Тәртипте аны һеҙ үҙегеҙ боҙағыҙ! Ғәлимә егерме биш урынына утыҙ ике һыйыр һауа!

Уға тағы бер тауыш өҫтәлде:

— Батрак һыйырҙар биреп ҡуйһағыҙ, кем алда бармаҫ ине!

— Быҙауҙар эскән һөттө лә әйт! Уны ла бит Ғәлимәгә яҙалар!

Ғәлимә уңышһыҙ сығышынан ҡыҙарып-бешеп урынына ултырҙы. Мирхәйҙәров һүҙҙе йәһәт кено Камалетдиновҡа бирҙе. Район етәксеһенең ҡалын тауышы яңғырауы булды — бөтәһе лә тынысланды, һирәк күренгән ҙур түрәнең ни әйтерен һәр кем ихласлыҡ менән тыңларға әҙерләнде.

Йыйылыштан һуң Камалетдинов концертҡа ҡалмаҫҡа уйлағайны ла, Мәҙинәне күреп һөйләшеү теләге үҙенән көслөрәк булып сыҡты.

Залдағы рәт араларынан тағы тулҡын-тулҡын шыбырлау үтте:

— Камалетдинов... кәнсирткә ҡалды...

— Ҡала инде... Беҙҙәге ише йырсыны ул тағы ҡайҙа тыңдай ала?

— Мәҙинә йырҙамай бит хәҙер... имгәнгәндән һуң...

Быларҙы ишетеп ултырған Камалетдиновтың йөрәгенә сөй ҡаҙалғандай булды, түҙмәйенсә, Мирхәйҙәровҡа эйелде:

Мәҙинә... имгәндеме ни?

Аҙаҡ һөйләрмен эле... Йэй... тана өйрәтәм тип...

Концерт башланды. Башта партияға дан йырлаған шиғыр ... әнелде. Шунан... Сәхнә әле асылмаған, ҡалын урман, ҡая ... ар араһынан сыҡкан кеүек «һәү-һәү-һәү» тигән яңғырау гелә башланы. Шаршау әкренләп асылған ыңғайға ... ырҙын юүге **һүҙҙәре** ҡатын-ҡыҙ башҡарыуында айырым-ишетелә башланы:

рал ҡаяларын ярып үткән,
Кырлас таҡыр, берҙәм юл буйлап
Быҙау менән һыйыр ҡайтып киткән,
Гормағандар улар күпте уйлап...

Инде тауыштар күбәйҙе. һағыш ҡатыш хозур тынлыҡка ... лп залда өс тауышҡа бүленгән хор тотош бер аһәң булып ...фаны:

һелтәй-һелтәп кулдарҙы,
Әҙләп киттем шуларҙы. Һәү!
Ҡуңыр буға, һәү, һәү,
Ҡуңыр буға, һәү, һәү,
Ҡуңыр буга, һәү, һәү, һәү...

Ҡара эле, Азат, был бит профессиональ хор!

Луыҙы ҡолағына етеп ҡыуанған Мирхәйҙәров уның ... ҡыҫты:

Мәҙинә, Мәҙинә ойошторҙо!

Былай булғас, һарайғырҙың данын хор дауам иттерә

Индс!

Нигә... һарайғырҙар тыуыр әле ул... Тик бит, Әйүп I ... нтич, һарайғырҙар тыуып ятҡан мәлдә уларға ... ҡаласаҡ уктар ҙа сүкелә башлай.

Хор тамамланғас халыҡ гөж килде. Камалетдинов \ ... арҙың тойғоһоноң эсенә һыймағанын аңлай: ул үҙе лә ... оҫталыҡ, зауыҡ, ихласлыҡ менән башҡарылған хорҙы **Юулои** ишетте.

Артабан йыйылышты икенсе йүнәлешкә бороп ебәрә м,н;ш халыҡ, хор башҡарған халыҡ йырынан дәртләнеп, йәнә ... ырыман сыҡты. Конферансье «Программала...» тип ниҙер ... итергә маташа, ә былар:

— Мәҙинә йырҙаһын! Мәҙинә ҡарындаш! — тип ҡысҡырыша.

«Бейеү...» тип әйтеп ҡалырға ашыға алып барыусы, о былар:

— Ярай, Вәләүетдин ҡусты күп бейене! Ана, лутсы, ҡыҙҙар артынан сапһын! Ҡыҙҙар таралып бөтә этү! — тип шаулашты. Шул мәл көслө ир тауышы:

— Йәмәғәт! Үҙегеҙгә мәғлүм! Мәҙинә карындашты йәй һыйыр тибеп имгәтте. Йырҙағанын тывдағығыҙ килгәс, нигә уны шундай эшкә апарып тыҡтығыҙ?! Ҡоштар донъяһында бит, йәмәғәт, һандуғасҡа ҡоҙғон булып ҡорҡолдарға рөхсәт итмәйҙәр!

Камалетдинов Мирхәйҙәровтың бөйөрөнә төрттө:

— Кем ул?

— Хөсәйен... Теге һарайғырҙы тәрбиәләгән егет...

Концерттың былдай йүнәлеш алыуын көтмәгән Мәҙинә сәхнәгә сыҡты. Өҫтөнә нескә һынының һәр бөгөлөн, һәр һыҙатын белдереп торған көрән ҡыҙыл оҙон күлдәк кейгән, ҡалын оҙон сәс толомдарын иркен генә итеп үреп төшөргән. Уның бөтә булмышы: «Мин гүзәллек! Камиллыҡтың үҙе! Миңә ҡарарға, һоҡланырға мөмкин. Илһам да бирәм кәрәккәнгә, ләкин мин алиһә, мин — мираж!» — ти кеүек. Бына ул әкрен генә атлап халыҡҡа яҡыныраҡ килде.

— Хөрмәтле ауылдаштар! Йырламаҫмын тигәйнем, ләкин... яңыраҡ бурандар арҡаһында килеп тыуған афәтте еңгән ауылдаштарыма хөрмәт йөҙөнән бер генә йыр бүләк итмәксемен.

Уның эргәһенә йәнә ике ҡурайсы килеп баҫты, залға йөрәккә, йөрәккә генә түгел, үҙәктәргә үтер илаһи һәм танһыҡ, ләззәтле һәм һағышлы моң таралды:

Аршын да ғына аршын, ай, ак ука,
Камзул итәгенә артмаймы...
Минең дә генә күңелем гел һине уйлай,
һинең күңелең мине тартмаймы!
Аршын да ғына аршын, ай, ак ука,
Акбуҙ аткайыма — дилбегә.
Кшсе лә генә, йәнем, бер убәйем,
Үпкән ерем калһын билгегә...

Камалетдинов берсә янды, берсә арҡа буйҙары семерләп өшөгәндәй булды. Ул үҙенең тормошондағы иң ҙур афәт тип башта ата-әсәһен юғалтыуҙы һананы; һуғышта әҙме **гарының** күҙен йомдорҙо; хәҙер килеп ул шуны аңланы: а, мөхәббәткә, ғүмер буйы ҡанмаған һөйөлөү хисенә • • **нған** уның күңеле. Уға һыуһын булырҙай шишмә эргәлә сылтырай, йырлай, гөрләй, ҡояш нурында мең дә бер төҫтәр менән балҡый, ләкин Камалетдинов уның менән һыу һын ҡандыра алмай. Ул — башҡаныҡы, дуҫыныҡы. Шшммакәйҙең уйы ла, хыялы ла башҡа тарафтарҙа...

Әйҙәгеҙ, эйҙә... Сәрбиназдың бәлеше һыуынып китер...

Мирхәйҙәровтың ҡолағына шыбырлауы Камалетдиновты уятып, айнытып ебәргәндәй булды.

Эйе, эйе...

Моңға әсир төшкән халыҡ түрәләрҙең залдан сыҡҡанын һиҙмәне лә.

Икенсе бүлек

Март ҡояшының сағыу нурҙарына ҡойонған юл буйлап Мәҙинә ферма үренә атланы. Юл ситтәре ҡытырмаҡ боҙ . млре менән ҡапланған, ҡар ярмаланып, мәрйендәй фаған эре бөртөктәр булып укмашҡан. Иртән һалҡын о көндөҙ бынан, алтын уҡаларын емелдәтеп, камзул .....ҫәләрен сылтыратып-көлөп эллә ҡайҙа ашҡынып йүгергән I килерсэктәрҙәй, йырғанаҡтар йырлап ағасаҡ.

Мәҙинәнең дә күңелендә аяҙ март ҡояшы бөгөн. Ниһайәт, •мгеләхәтенән сәләм алыуға ирешге. Сәләмде күршеләгә Гүбәнән бер оло ҡатын килтерҙе.

һинме Мәҙинә, Әптеләхәт исемле кешенең бисәһе? — тине ул ишектән инеү менән. — Һиндер. Һин булмаһаң, бы тиктә матур булмаҫ инең. Әптеләхәт бабайға һине яман ныҡ матур гип әбрисават иткән.

Әптеләхэт?! — Быуындары йомшарған Мәҙинә, толомдарын артҡа ташлап, иҙәнгә сүгәләне. — Әптеләхәт мс, инәй?!

Тор, ҡыҙым, тор... Алай сабырһыҙҙанма! Мына минеке ып та етте, аҙна ятҡан булды ла яҡты донъя менән ....шпып та ҡуйҙы. Атуса, ул үҙе килмәксе ине! Йүнәлеп,

хэл йыйып алам да, китәм Мәҙинә ҡарындашты күрергә, тип хыялданып ҡына ятып йән бирҙе...

— Ҡайһылай аяныс!

— Инде... һауҙығын юғалтып ҡайтҡас, нимә эштәһен.

— Нимәләр һөйләне?!

— У гел һорашты. һөйҙәмәне, шитай. «Анығ нимәһен һөйҙәргә?!» — тип ҡул һелтәне лә ҡуйҙы. Бәлкем, хәле ло бумағандыр... Ней кеше күп килде. Уҡымышты ине бит у... Атаң мулла буған тип кенә харап иттеләр инде. Бэпәйең бар икән... Дауытмы исеме? Бабай әйткәйне. Ни бит ирең һиңә аманат ебәргән. — Ҡатын кеҫәһенән ҡулъяулыҡҡа ыҡсым итеп уралған кескенә төйөнсәк сығарҙы. — Мына, ошоно Мәҙинә сәсһен, үҫтерһен тигән. Был тигән, йөҙйәшәр ағас тубырсығы...

Мәҙинә изгеләрҙән изге әйбергә ҡағылғандай, тубырсыҡты ҡулына алды. Сәтләүек ағасы. Әле унан сайыр еҫе сыҡҡандай. Уны ҡулдарында ҡәҙерлеләрҙән ҡәҙерлс кешеһе тотоп торған. Тубырсыҡҡа һөйгәненең йылыһы, һағышы, мөхәббәте һеңгән...

— Рәхмәт, инәй! — Мәҙинә тормош ауырлығын күп күреүе йөҙөнә һырҙар менән яҙылған ҡатынды ҡосаҡлап алды. Күҙ йәштәре апайҙың шәл суҡтарына тупылданы.

— Ила, балам, ила...

— Ҡайтам тимәгәнме Әптеләхәт?

— Һораным бабайҙан. Ҡатыны һинең кеүек бик нық көткән булһа, моғайын, ҡайтыр, тине.

— Шулай тинеме?! Көтһә, ҡайтыр тинеме?

— Шулай тине, балам. Әйтте. Әйтмәгәндә мин һиңә анау саҡты ерҙән йәйәүҙәп килеп әйтте тип тораммы?

— Балаларығыҙ бармы, инәй?

— Юҡ, балам, ҡайһыһы сәсәктән, ҡайһыһы тифтән үлдс. Мүжит, аҙаҡ булыр ине, бабайҙы әпкитеп барҙылар.

— Ҡайтма, инәй, миндә генә тор, бергә йәшәйек!

— Әллә шу... Былай бабай ҙа әйтте шул һүҙҙе... Ул һине белгән кеүек һөйҙәне лә ятты бит! Ғәзимә, һин шул баланы эҙҙәп тап, яңғыҙыңа олоғайғас ҡыйын булыр, тине...

Ул арала өйҙө сабый тауышына, сафлыҡҡа, ҡыуанысҡа сорнап бала уянды. Утлығына тере ҡуҙ төшкән самауыр геүләне, ҡулына бәйләмен тотҡан Маһинур килеп инеи шатлыҡ уртаҡлашты; ул, Дауытты ҡулына алып:

Һотес, һәтес, һәтес тә,

Беҙҙең Дауыт бәпес тә.

А ғаһы яратып туймаҫ —

Беҙҙең бәпәй йәтеш тә! — тип һамаҡланы. Күмәге бергә м.ңлмыша-сөкөрләшә өс ҡатын ашъяулыҡ тирәләй ултырышты. Ҡунаҡ ҡатын үҙе менән килтергән күстәнәсен һипте ашъяулыҡҡа:

Әйҙәгеҙ, ынтылығыҙ...

Танау ҡысый ине, күстәнәскә булған икән...

Күстәнэсен ашаған оҙон ғүмерле була...

Мәҙинә, бәләкәй һыу ташып кит, ҡунаҡты мунса юйек... Мына шулай, Ғәзимә һендем, Мәҙинә менән таяуға герәк булып йәшәп ятҡан көнөбөҙ...

Бырама һәйбәт! Ҡыҙым мине лэ үҙ янына саҡыра әле!

И ке ҡатын сөкөрләшә-һөйләшә сәй эсеп ҡалды, Мәҙинэ **Мунса** ҡаҙанына һыу ташып тултырҙы ла китте. Ә тубырсыҡты үҙе менән алды. Әле ул костюмының түш ... һендә ҡуйынын талғын ғына йылытып ята...

Өҙәм балаһы дуҫтарын онотһа онота, мэгәр дошмандарын иҫенән сығармай, тиҙәр бит. Ғәлимә Минһажева ла үҙенең оҙон булмаған ғүмерендә тормоштоң әсеһенән дә, сөсөһөнән ... ҡантаҡ ауыҙ итте. Хәйерсегә ел ҡаршы, тигәндәй, ата-әсәһенең иртә донъя ҡуйыуҙары өҫтөнә, кәнсәлә тыныс ҡына ... ултырған ерендә, бөтә ауылды аптыратып, Ғәлимәнең ... ҡарағa буяп, ҡыҙы, Сәмәрәһе, тыуҙы. Бик йәш ... амы, Ғәлимә нисек эсә булғанын үҙе лә һиҙмәй ҡалды. Барыһына ла бер иртә сәбәпсе булды. Кистән уны ауыл и.| председателе Ихсанбай иҫкәртте:

Ҡыҙыкай, иртәнге биштә һине күпер эргәһендә көтәм. шга барып иртәнге һауымды үлсәр кәрәк. План буйынса! иис.

Аңын-тоңон, айыш-тойошон аңламаған ҡыҙ иртүк сығып |уан санаға түшәлгән ялбыр толопҡа сумды. Их, рәхәт! шһпм, оҙерәк йоҡлап алыр. Ихсанбай уны башынан аша ... толоп ситтәрен ҡымтыштырҙы:

Йоҡла, бәпесем! Бәү-бәү...

Кистән клубта табанының ҡысыуы ҡанғансы бейегоп Ғәлимә, ысынлап та, сана шыуған ыңғайға, толоп йылыһына йоҡоға талды.

Ғәлимә уянғанда таң әре-һәре яҡтырып килә ине. Эргәло ҡарайып бесэн кәбэне күренә. Ихсанбай ҡапыл атын туҡтатты, уяулы-йоҡоло ятҡан ҡыҙҙы толобо-ние менэн күтәреп кәбән төбөнә һалды. Ғәлимәнең күҙенә күкто секерэйешеп янған йондоҙҙар бейегән, унан бергэ укмашкан һымаҡ булды ла ҡапыл байыған ҡояштай ҡыҙарып тонйораны...

— Ихсанбай, ағай, беҙ... уй...

Көндөҙҙәрен дэ, төндэрен дэ тынғы бирмәй һыҙлаған түшенең ауыртыуы кәмегәндәй Ғәлимәнең, етлеккән, иш һорап донъяны тарһына башлаған күңеленең ярһыуы баҫылғандай. Ихсанбай үҙе менән мул ғына итеп ит тә, араҡы ла алған булып сыҡты. Улар шул кәбән төбөндә төшко тиклем маташтылар. Ғәлимәнең тешләнгән ирендәре күбеп, күҙ төптәре ҡара янып сыҡты. Ҡайтырға йыйына башлағас, Ғәлимә, наҙланып, ишенә һырығырға самаланы:

— Мине ташламаҫһыңмы, ағай?!

— Ҡара әле, ҡыҙыҡай, — Ихсанбайҙың күҙҙәре ҡырыҫлыҡ, буй етмәҫлек эрелек менэн ялтыраны. Кэрәккэн-кәрәкмәгэнгә миңэ һүҙ ҡушма һэм, ғөмүмэн, бөгөнгөнө... төш тип уйла. Төшөндөңмө?

Фермаға барып торманылар, ауылға бергә инмәнеләр. Ихсанбай уны кисеүҙә үк төшөрөп ҡалдырҙы.

Унан һуңғы ваҡиғалар Ихсанбайҙы онотторҙо, ләкин шул таңцың иҫтэлеге булып Сәмәрэ тыуҙы. һуғыштан һуңғы ир-атҡа ҡырғын килгән йылдарҙа, ғиффәтле ҡыҙҙарға кейоү сыҡмаған бер мәлдә, Ғәлимә үҙенең әҙәмсә тормошҡа сығыуынан өмөтөн бөтөнләй өҙҙө. Ҡыҙын ул ҡайһы саҡ берҙән-бер йыуанысылай күреп, самаһыҙ, шашып иркәләне, 9 ҡайһы ваҡыт, бөтә бәләләренең башын унан күреп. сабыйының былай ҙа арыҡ ҡабырғаларын һананы. Төҫкә Ғәлимәнең күсермәһе булып тыуған ҡыҙ баланы ауыл халҡы, нисек тырышһа ла, берәйһенә йәбештерэ алманы.

Бала тыуғандан һуң уны кире эшенә саҡырманылар, уға фермаға барыуҙан башҡа эмәл ҡалманы. Тик был юлы Ғәлимә юҡҡа ғына ҡурҡкан булып сыҡты. Ферма мөдире уны

ннкэ килгэндең иртәгәһенә үк аҙбарҙың ҡараңғы мөйөшөнә н ыҫ ı ы.

Алдынғы яһайым! Герой, депутат итәм! һин миңә ҡыҙ ып ындан бирле оҡшайһың!

Гыржыҡ танаулы, шаҙра Саяф Шәмсетдинов Ғәлимәнең Күнеленә хуш килмэһэ лэ, ир-иблис үҙенекен итте:

Ярар, — тине быуыны ҡорой барған Ғәлимә, — тик мпи барҙа башҡа бисәләргә ыҡшандама...

һин барҙа! — Саяф ҡатындың төймәһе өҙөлөп иншсондән асылып киткән күкрэгенә ҡарап шаҡ ҡатты:

- Ну байлыҡ икэн, әй, үҙевдэ! Бөгөндән башлап улар... минскс, Ғәлимэ!

Үҙенән ете йәшкэ оло, тамырҙа көйө ҡороған ағастай Кипкән бисәһе менэн сағыштырғанда, Ғәлимә ысынлап та (аяф өсөн ожмах баҡсаһы ине. Икәүҙән-икәү ҡалған саҡтарында һөйләшеп һүҙҙәре бөтмэне, яратышып шрмандарыҡороманы.

Алам да ҡуям һине, Ғәлимә, — тине Саяф бер инмороп килгәнендә. Хатта:

Ҡулымдағы балдағымдың
I кемдәре Бәҙерей.
Катын алһаң ал бисәнэн,

Әҙер һыйыр, эҙер өй, — тип тамаҡ төбө менән һамаҡлап щ сбәрҙе.

Ә партияң?

Әй, төкөрэйем дә партияһына! Уны үбеп буламы ла, Цоепклап ятып буламы? — тип йэнэ ғыж-ғыж хахылданы • ннф кэйефлэнеп, батырайып алғас.

Әммә һәр миҙгелдең сиге бар, төн үтэ, таң ата, ә таң Мсион эшкә, эштән һуң политучеба. Саяф — хөкүмэт этәсе, \ н ҵай-бындай сәйәси эштең үҙәгендэ ҡайнай.

Шулай ғүмер үтә торҙо. Ғәлимә ауырға ҡалған һайын |үГмп ос Тайба ҡарсыҡҡа йүгерҙе. «Үлтермә, инәй... Ҙурайып Пира! һарығымдың көҙгө бәрәсе һиңә!» «Ҡара, ҡыҙыҡай, гонаһы үҙеңә!» Ҡурҡыуынан ағарған, йөрәген усына йомған I ı имә ҡаҡ иҙәнгә ятьтп, ҡарсыҡтың эмэл иткәнен көтә. Ошо ı >ррн ул нисә тапҡыр ҡанһырап ятты, ятҡан һайын: н һшонан тере ҡалһам, Сәмәрәмде бер ҙә ҡаҡмам!» — тип Ҡоҙайҙан ғүмер, ярлыҡау һораны, тәүбәһенә килде. Бына әле ı кис менэн ҡарсыҡҡа килеп йығылды, инэлде, ялбарҙы,

барыбер үҙенекен эшләтте, ә ауыры һаман төшмәй. Ҙурайыл киткән, тигәйне ҡарсыҡ, ысындыр. Ах, әгәр ошонан да ҡотолһа! Юҡ, ҡотола алмаясаҡ Ғәлимә, хәҙер бит Саяфҡа хисапсы өҫтәлде. Ғәлимәнән һорап та тормай, эшкә килсү менән ҡараңғы солан мөйөшөнә ҡыҫтаны шул ғэрип. Иң сәйере шунда: Ғәлимә, эйе, был осраҡты бутап та, яңылышып та булмайҙыр, унын тын алышында, үҙен тотошонда, булмыш-бөтмөшөндә... Ихсанбайҙы таныны!

Ғәлимэ, эсен бороп тулғаҡ тота башлағас, ҡата ғына эләктереп, ялан өҫ көйө бәҙрәфкә сығып йүгерҙе. Шаурап ҡан киткәс, артынса күкәй эсендэге себеште хәтерләткән, һабынлы һыуға тонсоҡкан яралғы, яры күҙҙәрен сытырайта йомоп, бармаҡтарын көсәнеп йоҙроҡҡа укмаштырып, әбрәкәйҙең иҙәненә туп итеп килеп төштө. Дер-дер ҡалтыраған Ғәлимә уны ҡата кейгән аяғы менән тишеккә этте.

— Уф! Эшкә һуңлайым инде! — Шунан Ғәлимэ ҡабалан-ҡарһалан кейенеп, тамағына ашап та тормаҫтан, ферма үренә тәнтерәкләне...

Колхозсыларҙың дөйөм йыйылышынан һуң Ихсанбай фермалағы хәлдэрҙе тәртипкә һалыуға ныклап тотондо. Иң алда ул бөтә һауынсыларға ла һыйырҙар һанын тигеҙ бүлеп биреү мэсьәләһен ҡабырғаһы менән ҡуйҙы. Шул рәүешле Ғәлимә үҙенең ете «батрагынан» яҙҙы. Йәш быҙауҙарға эсереүгә киткән һөттөң күләмен дә асыҡланы, һәм Ғәлимә шулайтып икенсе сығанағынан да яҙҙы. Саяф хисапсы менән бер нисә тапкыр дәғүәлэшеп тә ҡараны, ләкин тегенеһе аяҡ терәп үҙенең һүҙендә тороуын белде. Ахырҙа Ғәлимэ уны үҙе аулаҡта осратып һөйләшеп ҡарарға булды:

— Нигә минең менән эттэшәһең, иптәш хисапсы?

— Эттәшергә мин һиңә этме?

— Нимэ, Мәҙинәне алға сығарырға була тырышыуыңмы? Әллә ул... һәйбәтерәк бирәме?

— Кешенән оялмаһаң, Алланан ҡурҡ, Ғәлимэ!

— Ах, һин үҙең Алланан ҡурҡа торған кешеме?!

— Миңә һин хөкөмдар түгел!

Теге саҡ... кәбән төбөндә... минән бисә яһағанда... [illegible] ҡурҡҡанға әйтәм оҡшағайның!

Аҡылдан яҙғанһындыр! Ниндәй кәбән төбө? Һин нимә һөйҙәйһең?

Ьукка тейһән, иптәш хисапсы, еҫе китмәҫ! Минең менән булһаң, мандый алмаҫһың! Мин соҡона баштаһам, **бишынды** тығыр ер тапмаҫһың!

Хисапсыны шаңҡытып, Ғәлимә ишекте шарт ябып сығып [illegible]с. Асыуынан һыҙланыуҙарын онотоп, вагонеткаға мал [illegible] тейәй башланы Ғәлимэ. Ахыры күберәк тэ һалып **Мшлаған** — көсө етмәгәс, вагонеткаға бөтә кәүҙәһе менән [illegible] [illegible]тәрә башланы, маңлайынан хатта һалҡын тир бәреп [illegible]м. Әсендәге үс, ғәрлек — барыһы бергә ҡайнаны.

• **Ихтираз!** Ҡайтҡан бит эле ҫөйрәлеп! Шунын арҡаһында **I** [illegible]әлимә еләктәй сағында һүҙ күтәрҙе, ғәйептән бала тапты! **Мунса** бәрейе кеүек булып үҙгәргәс тә, кеше танымаҫ [illegible]тигәндер! Арҙан! Өйөр айғыры!» — асыу-ярһыу менән **I |лимә** тағы ауалатҡансы вагонетка тултырҙы, йән асыуы **Мспон** этеүге булды — эсендә ниҙер өҙөлдө, тәне буйлап йылы [illegible] ағыуын тойҙо. «Уф! Ояты ни тора... Берәйһе күрһә... **Кылай** [illegible]ҙа...» — ул һыйырҙарға ышыҡланып, сүкәйеп ултырҙы. «Бәлки, үтеп китер, туҡтар, уның был һыйыр аҙбарына әҙ **Гүлс** [illegible] үшәлдеме?» Юҡ, ҡан шаурап ағыуын белде. Ғәлимәнең [illegible] (ыңлай, күҙ алдары ҡараңғылана, укшый башланы һәм, [illegible] юғалтып, көйөш алып тыныс ҡына ятҡан һыйырҙың [illegible] кабырғаһына ауышты...

Ғозизенән сәләм алған Мәҙинә осоп-ҡунып, ҡанатланып-[illegible]лнып эшләне. Һауын бөткәс, һыу йылытып, [illegible]эштәренең бер нисәһен йыуып та алды. Сират |м|йрлкэйгэ етте. Һыйыр, ызылдап, Мәҙинәнең битен, [illegible]щрын ялап алды. Йәнәһе, һағынған, ә Мәҙинә эргәһенә [illegible]юй интектергән. Былай табан аҡһай-туҡһай хисапсы [illegible] и[illegible] күренде:

Иң күп һөт һиндэ, Мәҙинә! Былай булһа, герой

• иротоидең танауына сиртэһең! — тине ул ғыжылдап.

— Ә мин, ағай, булғаны менән ҡәнәғәтмен. Миңә алға сығыу кәрәкмәй.

— Бәй, һинең герой булғың килмәйме ни? Батрактарын тартып алғас, быҙауҙар эскән һөттө айырып яҙғас, әхирәтендең танауы нисек төшкәнен күрһәң!

— һәр кемдең үҙ мәйеле, ағай... Миңә былай ҙа һәйбәт.

— Тағы ла нығыраҡ һәйбәт булыуын теләмәйһеңме ни?

— Юҡ! Йондоҙ булһаң, табыналар... йәнә ҡаныҡалар...

— Фәлсәфәң... ҡыҙыҡ икән...

— Кемгә нисектер инде...

Нисек һөйләшһә лә Мәҙинә күңеленә күпер һала алмаған хисапсы: «Тукта эле... бил бирмәç батыр, кисеү бирмәç йылға булмаç!» — тип эсенән һөйләнеп ары туйтаңланы. Мәҙинә Бөйрәкәйен һылап-һыйпап йыуыуын белде: «Вә-эт... ҡайһылай матур булып ҡалды минең һәүкәшем!.. Минең дә бөгөн кәйефем шәп! Бөгөн минең байрамым! Күптән көткән сәләм килде миңә алыҫтан! Ах, Бөйрәкәй! Һөйләшә белһәң, эсемдәге шатлығымды бүлешер инем, исмаһам...»

Мал аҫтын тейәргә вагонетка кәрәк булғас, Мәҙинә Ғәлимә янына йүгерҙе һәм...

— Ғәлимә! Әхирәт! — Ул ҡурышып, тартышып һыйыр эргәһендә ятҡан ҡатынға эйелде, күтәрергә иткәйне — ҡулы ҡанға мансылды.

Ғәлимәне атҡа һалып алып, Мәҙинә уны өйөнә алып китте. Өй һыуынған. Мейес яғылмаған. Ҡаҡ һикелә бөҙрә сәсле, зәңгәр күҙле ҡыҙсыҡ бөршәйеп ултыра.

— Ғәлимә! Ас эле күҙенде! һиңә ни булды, Ғәлимә?

Аңына килә башлаған Ғәлимә күҙҙәрен асты:

— Нимә булғанын... күрмәйһеңме?

— Әллә... һәнәккә ултыра төштөңмө? Яраң бармы?

— Ниндәй һәнәк...

— Ә нимә булды һиңә?

— Ут яҡ, һыу йылыт!

— Ах, Ғәлимә!

— Үләмдер инде... Кеше... күрмәнеме... Көлөрҙәр инде, һөйҙәрҙәр...

— Күрмәне... Мин санаға һине үҙем һөйрәп һалдым. Ә нимә булды һиңә?

— Әллә ысынлап бер ни андамайһың, эллә... һуң, һин дә бала тапҡан ҡатын да баһа!

Бында бит бала... юҡ!

Ҡан туҡтамай! Мин... — Ғәлимә йәнә иҫтән яҙҙы. ...шырап ятҡан әсәһен күреп, балаһы буҫығып илап ебәрҙе. ...луы Ғәлимәне йәнә иҫенә ҡайтарҙы. — Балам етем ...р микән ни, Мәҙинә! Иҫләйһеңме... Эй бейей инек! Иәш ... Итек булмағас, тыҡылдап торһон тип, милрмбыҙҙы һыуға тығып алабыҙ ҙа тундырабаҙ... ... Гюйейбеҙ... Баш әйләнә, э беҙ бейей...

Мәҙинә ҡурҡыуға ҡалды. Нишләргә? Бәләкәй сағында ... күршеһе уны үҙе менән ҡырға үлән йыйырға алып ... юрғайны. Дарыу үләне күрһә, Мәҙинәгә: «Үләндән и һорап, өҙ ошоно!» — тиер ине. «Инәй, ә нигә үҙең щ||сц?» «Һинең, ҡыҙым, гонаһың юҡ, ҡулың еңел. Һин щ үлондән файҙа күберәк», — тиер ине. «Ә был йоморо и.| үлән нимәгә?» «Ә-ә... Уның төнәтмәһе күп ҡан ...тыуҙан. Ул ҡан китеүҙе туҡтата...» Әбейҙән белеп ҡалған ... үлондәрен Мәҙинә хәҙер үҙе лә йыя. Ул, ҡапҡа төбөндә ... торған атҡа ултырып, йәһәт кенә өйөнән шул үләнде ...ерҙе, ҡайнатып төнәтмәһен эсерҙе, Ғәлимәнең ауыҙын ...шҡарып тиерлек асып шәкәр эретмәһе ҡойҙо.

Бер аҙҙан Ғәлимәнең битенә ҡыҙыл йүгерҙе.

һыйырҙарҙы...

Үҙем һауырмын. Торма.

Их, әхирәт! Барлыҡ яраштыра, юҡлыҡ талаштыра. Һинсң менән бүлешер нәмәбеҙ бармы ни беҙҙең?

Талаштыра?! Талашҡанылыҙ бармы ни беҙҙең?

Юҡ та ул...

Булмағас... Әйҙә, фермаға кил, бергә эшләйек, тип үҙең ...рҙың...

')йе, эйе, әйттем... Кеше һораһа, йөрәге ауыртҡан, тип йоме!

Әйтермен. Ҡыҙынды ашаттым. Ҡуҙғалма... Үтеп р...

Хәҙер һин алға сығаң инде, Мәҙинә...

Лй алла! Таптың борсолор нәмә! Башың иҫән ҡалғанға цюкор ит Хоҙайға!

Их, Мәҙинә! һин әйтәһең дә ул... һин сәхнәгә сығып йырҙаһаң бөтә ғәләмдең башын әйҙәндерәң, э минең ...ы һауынсы» тигән исемемдән башҡа...

Ҡыҙың бар, Ғәлимә...

— Ах, Мәҙинә, һинә мине андау ҡыйындыр инде... Ул бала... миңә һәр саҡ халыҡ араһында кисергән оятсылығымды иҫкә төшөрә...

— Баланың ни ғәйебе?

— Әйтеүе еңел! Юҡ!.. һин мине андауҙан... йыраҡһың! - Ғәлимә күгәреп ҡатҡан ирендәрен ҡымтып, стенаға әйләнде.

Ғәзимә Мәҙинә өсөн торғаны хазина булды. Килеү менән ең һыҙғанып кәсепкә кереште: кешенән йөн, кәзә ҡылы һатып ала ла, сандалиҙар бәйләй. Үксәһенә иҫке-моҫҡо итек ҡуңысын тегә, һәм бынамын тигән аяҡ кейеме килеп сыға. Ә иләгән йөнө! Әйтерһең дә уны кеше ҡулы түгел, Хоҙайҙың ҡушыуы менән илаһи еп һуҙыу ҡөҙрәтенә эйә үрмәксе яһай! Шулептәрҙән биҙәктәр һалып кофталар, итәктәр бәйләй. Шуныһы ҡыҙыҡ: ул был эштәрҙе бик тиҙ башҡара. Хәҙер инде уға заказ биргән кешенең хисабы юҡ. Мәҙинәләрҙең өйө ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә оҫтаханаға әүерелде лә ҡуйҙы. Маһинур ҙа шунда ҡайнай, оҫтабикә уға әллә ни нәзәкот талап итмәгән эштәрҙе ҡуша, мөһимдәрен тик үҙе башҡара. Маһинурҙың кәзәләре байтаҡ. Ғәзимә:

— Бәрәсен мөгөҙө тирткәнгә тиктсм имеҙһә, үҙе еткои. Быларҙы нигә һаман инәләренә ҡушаң? - тип аптыраны. һәр нәмәнән файҙа алыу яғына башы эшләгән Ғәзимо бәрәстәрҙе тиҙ арала инәләренән айырҙы һәм, кәзәләрҙс һауып, ҡымыҙ яһау эшенә кереште.

— Эс, ҡыҙым, эшең ауыр, бирешеп, ауырыуға һабышып ҡуйма. Үпкәң бер йәнселгәс, ҡурҡыныс ул! — тип, Мәҙинәнс бер өҙлөкһөҙ кәзә ҡымыҙы менән һыйлай башланы. Мәҙино хәҙер беләгенә көс ҡунғанын үҙе лә тоя. Кәзә ҡымыҙы эсерго теләүселәр ауылда ла табылды, Ғәзимә уларға ҡымыҙ бирә, о тегелэр он, ит, бойҙай килтерә. Бәйләгән-теккән әйберҙәрено лә Ғәзимә хаҡты тик ризыҡ менән ала.

— Ауылда тик ата ялҡау ғына ас йәшәй, — ти ураған һайын Ғәзимә. — Зингер машинамды ғына килтереп алайым! Дауытымды атаһы ҡайтыуға бурһыҡ балаһылай итеп ҡуймаһаммы!

Өйө караулы, балаһы тәрбиәле булғас, ферма эшенән н.щ ваҡытын Мәҙинә үҙе ойошторған хорҙы көсәйтеүгә Мучыка ҡоралдарында уйнай белгән кешеләрҙең [illegible] йөрөп сыҡты. Хыялы — башҡорт халыҡ йырҙарын [illegible] ғауышҡа һалыу һәм халыҡ инструменттары ансамбле [illegible] башҡарыу. Был теләк уға ятһа ла, торһа ла ц.| оирмоне, бар булмышын биләп, йәнен асмандарға [illegible] Әле ул бесэн кәбәне аҫтында туңмаған ерҙе соҡоп, [illegible] тупраҡ алып инде. Үҙе юкта ҡороған гөл һауыттарын [illegible] ппдереп, һәр берећенэ ярмаланып торған ҡара I [illegible] ултыра башланы.

Өллә инде гөл ултыртырға йөрөйһөң? — Ғәзимэ, эшен ||.п|. Мәзинә эргәһенә килде.

I [illegible] е тубырсыҡтағы ете сэтләүек морнаған...

Шулаймы ни?

Быңа... аҡһыл ғына ҡойроҡтары бар.

Бисмиллаһи-рахманир рәхим! — Ғәзимә, еңел [illegible] үҙс лә эшкә кереште. — Әлегә өйҙә үҫһендәр, аҙаҡ [illegible] арырбыҙ...

Беҙҙә былар үҫер микән?

• [illegible] нигә үҫмәһен? Әле кем уның орҙоғон мында әпкилеп ....рогән? Улар бик һур булып үҫә, тине минең бабай. [illegible] маиын һығып эскән кеше йөҙ йәшәй, тине.

Орлоктарҙы тупраҡҡа күмгәс, һауыттарҙы тәҙрә [illegible] геҙҙелэр. Өйҙә моңһоу, өмөт менэн мөлдөрәмә .....[illegible] урынлашты. һәр кем үҙенсә уй ебен һүтте.

• Нигсрлк кенә йәш бит был Мәҙинә. Көтөп тә Әптеләхэте [illegible] ғүмеркәйе заяға үтәсәк бит бының! Был [illegible] мснән арыу ғына, Дауытҡа атай булырлыҡ [illegible] осрар ине... Ә үҙе һуң? Ғәзимәгә кешеһе [illegible] ла, Ғәзимәме көтмәне? Тик был бит бигерәк [illegible] Теге... әкиәттәге хур ҡыҙы тигәндәре ошолай [illegible] ик.ш?»

[illegible] Теләгән телэктэрем ҡабул булып, Әптеләхәтем .... [illegible] Күңел яраларын бөтәштерерлек һүҙҙәр, тән [illegible] сихот булырҙай дауалар минме тапмаҫ инем?! [illegible] «Мәҙинә, мин һине яратам!» тиһен генә...» [illegible] ...старҙың һәр береһен: «Саҡырығыҙ минең [illegible] телсж-хыялдарымды елдәргэ еткерегеҙ», — тип [illegible] изге ағас икәнен кемдэндер ишеткәйне

Мəҙинə. Əптелəхəт тə был ағастың орлоҡтарын уға юкка ебəрмəгəн. Эй Хоҙайым! Бер генə нəмəне үтенəм һинəн: мөхəббəтемдэн яҙҙырма!..»

Башта Ғəзимə уйҙарынан арынды:

— Бөгөн ниндəй көн əле?

— Йома... Мин, инəй, Таулыға, атайымдың хəлен белерго барып килергə ниəтлəнгəйнем.

— Атаҡ, бар! Арыу итеп күстэнэс ал, балаң өсөн борсолма — беҙ бар. һыйырҙарыңды алып ҡалырҙар...

Уйлаған эш — бөткəн эш. Мəҙинэ, биштəренə атаһына алмаш кейем, аҙыҡ-түлек һалып алып, Таулыға илткəн оло юлға сыҡты.

Мал ҡышлатыу мəшəҡэтенэн арынып бөтмəнс, Камалетдинов өсөн йəнə яуаплы осор — яҙғы сəсеүгə əҙерлек башланды. Йыш ҡына МТС-тарға сыҡты, сəсеү техникаһының əҙерлеген үҙе тикшерҙе. Орлоҡ мəсьəлəһе л| ҡырҡыу тора, унын өҫтөнə башҡалары ҡушыла. Тəүлекто утыҙ сəғəт булһа ла өлгөрə алмаҫын белə Əйүп. Һуғыш ваҡытында миктəп ҡалған хужалыҡтарҙы аяҡҡа **баҫтырыуҙыЦ** ауырлығын үҙ елкəһендə татыған кеше генə бсләлер... **Уная** һуң район советы башҡарма комитсты, райком биналары иҫкерҙе. Бүлмəлəр етешмəй, ҡыйығынан һыу аға... Урманға юл ҡалмаҫ элек төкэтмə эшлэтер өсөн ағас килтерергə **Л1** кəрəк.

Таулының ултырған ере лэ дүрт тарафтан өргəн елдəрго түшен аҫкан. Элек эшлəгəн баҡыр иретеү заводы тирз-яғындағы урманды «ашап-ҡырып» бөткəн, хəҙер унда яланғас тау битлəүҙəре генə ялтырап ята. һəр нəмəгə рəссам күҙҙəрс менэн ҡараған Камалетдинов былтыр көҙҙəн шул тауҙарға урман ултыртыу эштəрен башлағайны, ер ҡарҙан əрселгəс то шуны дауам итергэ кəрэк, э был үҙ сиратында өҫтəмо сығымдар талап итэ. Унын араһында клубтар, китапханалар, мəктəптəр... Бөтəһе лэ иҫкергэн. Бөтəһе лə ана йығылам, бына ишелəм тип ултыра. Ауылдар ҙа иҫкерҙе, ирҙəрҙсц күбеһе һуғыштан ҡайтманы. Терəүҙэ лэ таяуҙа торған өйҙəрг|

. . . . . һ\ м.мп бөткəс тормош яҡшырыр тип көткəн тол >и царҙың омөтһəҙ йөҙҙəрен күреү бэҗерҙе телэ...

. . . . . . олоп китһəң, эшлəйһең дэ эшлəйһең, тик бит əҙəм ны шулай яратылған: эштəн генə тормай. Күрəҙэсе ыгі мспон һуңғы һөйлəшеү һаман уға тынғы бирмэй. Ш ган п.ппы Һил булған төнгө сəғəттəрҙə ул Мирхəйҙəров н һимллшсүен бер нисə тапҡыр хэтерендə яңыртты:

Ауылда Хашимды күрə алмаған кеше бармы?

Мирхəйҙəров уйлана бирҙе:

Гсге шикəйəт буйынса əйтəһеңме?

Хашимды ҡулға алыуға шул сəбəпсе булды бит.

Бслмəйем инде. — Һөйлəшеү Мирхəйҙəровтың өйөндə, ‖ч;шлыҡтан, улар ярым бышылдауға күсте. — Суд ндары ла эшлəп еткереңкерəмəй. Фэүзиə ҡарсыҡтың да, ·ызың да һөйəктəре янған өй урынында табылманы. ште малайҙарҙың юғалыу ваҡиғаһы тотоп тора...

Бслмəйем инде... Хатта малайҙарҙы ысынлап та шоаизыҡы тип уйлаған сүрəттə лə... Хашимдың м ы, Ихсанбайҙы, ике сабыйҙы бер ыңғайҙа юк итергə...

Хашим булдыра торған эш түгел был. Унан һуң, **НПуи** I зизович, суд органдары шул уҡ төндə Зарифанын, цын апайынын, Ихсанбайҙың һөйэркəһенең юғалыу иҫкə алмай...

Ърифаның ире ҡайҙа?

Ишмлмəтме? Хисапсы. Теге алйот Шəңгəрəйҙең атаһы. >и йе... Ептең осо бик ныҡ йэшерелгəн. Ə Мəҙинə... кар ыҡтың кеме?

Мəҙинəме? Бер кеме лэ түгел. Күршелəр ине улар. М.мммонең əсəһен бүре ашанымы инде?

Калыҡ шулай һөйлəй. Шул Ихсанбай, Ишмəмəттəр ап алган һыйырын юллап Таулыға сыҡкан булған бит N I

Нисск сисергə был сер йомғағын, ə, Азат Əһлиевич? I ла инде...

чргандары тағы бер кешене иҫкə алмай.

I м ЧС?

Ихсанбайҙың ҡатынын! Лоҡман Талиповичтың...

I кайҙа?

имчушкала, Азат Əһлиевич!

— У-һу-у!

- Беләһеңме, Азат Әһлиевич, һеҙ бында бер нәмә белмәй ятһағыҙ ҙа, — Камалетдинов үҙенең профессиональ разведчик булғанын Мирхәйҙәровтың иҫенә төшөрөп алырға булды, — минең разведка эшләп тора һәм һеҙгә шул мәғлүм булһын: ҡарсыҡ тере!

— Фәүзиәме?

— Фәүзиә түгел уның ысын исеме. Барсынбикә. Тсгс тимерсегеҙ ҙә Сибәғәт булмаған. Диңгеҙхан! Диңгеҙхам Моратов.

— Барсынбикә, Диңгеҙхан... Теге... тархан тоҡомонан килгән...

— Кем тоҡомолор, бик бай булғандар, шикелле.

— Ғәжә-әп... Ләкин мине тик ята икән был тип уйлаһаң, төптө яңылышырһың, иптәш генерал! Әле мин һинсң янға шундай мәғлүмәттәр менән барырмын — суд органдарыныц ике ятып бер төшөнә инмәҫ!

— «Бирһен Хоҙай!» тиҙәрме әле бындай саҡта? Мин бер генә нәмәне — Мәҙинә һәм... ҡарсыҡ ниндәй ептәр **менәя** бәйләнгәнен асыҡлай алманым.

— Уныһын әлегә... мин дә әйтә алмайым.

Бына шундай һөйләшеү булды улар араһында. Таң менән Камалетдинов юлға сыҡты. «Тәрән үҙәк»те үтконсе, Мирхәйҙәров уға тағы бер ат эйәртте.

— Нигә кәрәк ул? – тип **Камалетдинов** баш тартырға уйлағайны, Мирхәйҙәров уйынан дүнмәнс:

— Бүре күп. Һунарсылар нимә ҡарайҙыр, — тип, Әйүптец баҡсаһына таш ырғытҡандай, һуҡранып алды.

Бына хәҙер Камалетдинов йәнә ҡарсыҡ ҡаршыһына барыи баҫырға әҙерләнә. Нимә бирер уға был һөйләшеү?

Хашим байтаҡтан бирле камераһында ел олоуын тыңлап ята. Ул берсә йәш бала тауышын хәтерләтә, йә эс-бауырҙы өҙҙөрөр үкһеүгә әйләнә, йә ҡырағай йәнлектәрҙең шашып болоҡһоуын зләкләгәндәй тойола. Ул, тороп, карауатынан аяҡтарын һәлендереп ултырҙы. Төндә күргән төшөн инде нисәнсе ҡат хәтеренән уҙғарҙы. Имештер, Мәҙинәһе көҙгө

... һында торған да сәс тарай: «Атай, әллә бер генә толом и инморәйемме?» «Ҡуй, ҡыҙым, икәү ит. һиңә пар толом н ... !» — ти Хашим. Ни күрһә лә Хашим былай ҙа юлға и, ... был бит асыҡтан-асыҡ юл төшө! Ҡыҙына толомон ... үрсргә ҡушып, Хашим һәйбәт итте. һәр хәлдә, уның к'пл шулай тойола. Балаһын, донъяһын ташлап, ... килеп йөрөмәгәне яҡшы булыр ине лә... Бигерәк ... бит әле үҙе! Ейәне ултыра ла башлағандыр

Оҙаҡланы Хашим, бик оҙаҡланы. Ҡайһы саҡ ...п,!локкә бирелеп китһә лә күңеле тыныс былай. Әле ... алыштырҙылар. Ҡырҡты үткән ҡатын

Шакира Хисам ҡыҙы Әҙелғужина булам, — тип ... — һеҙҙең эште мин алып барасакмын. «Дело» н ... таныштым. Ҡайһы бер нәмәләргә генә н.| к индергем килэ.

Рәхим итегеҙ...

... мул ғына сал төшкән ҡабарынҡы сэстәрен артҡа ы ... ла уйлана төштө:

Кыҙык. Беҙ һеҙҙең менән бер дивизия кешеләре булып ык

Шулаймы ни?! — Хашим күптэнге дуҫын күргәндәй ... - Бына һәйбәт!

Был олегә... икебеҙ генә белгән сер булһын.

Йе, ше...

Инде)шкә кусәйек: Сәбиләнең ата-әсәһе тереме?

Юк, Һуғыш мәлендә үк үлгән улар.

Ниндәйерәк холоҡло ҡатын ине ул Сәбилә Моратова?

Ниндәйерәк тип... Ул бит сығып, кеше менән бигүк шм.ш морөмәне.

... срендә улай йәшәп була тиме ни?

Н ... йәшәмәһен? Ире мал тапты. Ҡәйнәһе донъяға ...с, шикелде. Эйе, эйе! Фәүзиә арыҫлан тотоп п карсыҡ ине бит инде ул...

I ... иыла уның туғандары бармы?

Бар... Ағаһы. Балнистың баш врачы. Ихсанбайҙы ... ул алып ҡалды, тип һөйҙәнеләр...

Хәҙер Собилә ҡайҙа?

... иыһын белмәйем...

Ихсанбай менән нимә бүлешмәнегеҙ?

— Беҙ... бер ҡыҙҙы яраттыҡ.

— Һинең... ҡатыныңды... Кем ине әле ул?.. Насибуллина...

— Ул Насибуллина йөрөмәне. Беҙ яҙылышмағайныҡ. Ул әсәһенең фамилияһын йөрөттө. Хоҙайғолова.

— Ә теге ике сабый. Улар...

– Малайҙар ҙа, ҡыҙ ҙа — минеке. Үҙемдеке.

— Насибуллин, һеҙ бит бөтәһен дә ихлас һөйләмәйһегеҙ. Шуның менән тикшереүҙе бик ныҡ бутайһығыҙ.

— Тимәк, дөрөҫөн мин түгел, һеҙ белеһегеҙ булып сыға? Улай булғас, тикшереү нимәгә?

— Мин һеҙгә ярҙам итергә теләйем, Насибуллин!..

— Ярҙам итергә теләгәс, Ихсанбай менән Фәүзиә ҡарсыҡты, Сәбиләне табыр кәрәк. Тик... малайҙарҙың үлеменә уларҙың да ниндәйҙер асыҡлыҡ индереүенә ышанмайым...

— Ышанмаҫҡа мөмкин, ләкин баш кейеме һәм сандали Фәүзиәнең өйөндә табылған!

— Уныһы — шулай. Ләкин ҡарсыҡ ул эйберҙәрҙе юҡ итә лә ала ине...

— Нисек уйлайһығыҙ, Насибуллин: Фәүзиә Моратованың һеҙҙең ғаиләгә мөнәсәбәте нисек булды?

— Гөлбаныуға... бик яҡшы ине. Мәҙинәнең һөйләүе буйынса, һуғыш мәлендә ул минең балдарға бик ныҡ ярҙам иткән.

— Ә Мәҙинәгә?

— Мәҙинәгә? Хашимдың күҙ алдына малайҙарҙы эҙләгән ваҡытта Мәҙинәнең ҡумырыҡҡа батыу ваҡиғаһы килде. — Һәйбәт ине. Хатта... бик һәйбәт ине.

— Бөгөнгә ял итегеҙ, Насибуллин. Өҫтәмә мәғлүмәттәр тапҡас, осрашырбыҙ...

— Рәхмәт инде, Шакира Хисамовна! Һеҙ килгәс, эске йылы инде.

Хашим урынына тынысланып, шул уҡ ваҡытта йөрәкһеп барып ятты. «Эйе, эйе! Фәүзиә ҡарсыҡ Гөлбаныуҙы ла, Мәҙинәне лә яратты! Гел ҡурсыны! Ә Хашим менән аңлашыуҙары? Уны оноторлоҡмо ни?! Мәҙинәнең атаһы бәләгә тарығанын белһә, Фәүзиә ҡарсыҡ, тере була торған булһа, түҙеп ятмаясаҡ. Тик нимәләр тота уны. Килергә, ярҙам ҡулын һуҙырға ниҙер ҡамасаулай...»

Шундай уйҙар өйөрмәһендә ятҡанында ишек асылды:

Хашим Насибуллин, на выход! Һеҙгә ҡыҙығыҙ килгән! Дежур милиционер Хашимдың торғанын көттө. — Ҡыҙың ... ибор... Ирҙәме ҡыҙың, ағай?

Атаһы менән һөйләшкәндән һуң Мәҙинә бер килгәндә ...вателде лә күреп сығырға булды. Следователь ... ... күҙҙәрендә ул баштағы аптырауҙың ҡыҙыҡһыныу ... алмашыныуын күрҙе.

Әйҙүк, сибәр ҡыҙ, һөйләп ебәр, миңә һеҙҙе ни ...?

Мин, Шакира апай, Насибуллин Хашим тигән кешенең ... исемем Мәҙинә.

Ә ә, Мәҙинә! Бына һин ниндәй икәнһең!..

Ә миндәй?

Следователь ҡатын көләмһерәне:

Беҙҙең ҡәҙимге тормош өсөн артыҡ сибәр тип ...

Мәҙинә лә бер ҡарауҙа уҡ үҙенә ышаныс, ихтирам уята ... атаһы йәштәрҙәге был ҡатын менән асылып ... хуп күрҙе:

Ҡырыҫлыҡ талап иткән һөнәрегеҙ өсөн һеҙҙең дә ... бигүк тап килмәй...

Һеҙҙеңсә, минең кеүек кешеләр ниндәй һөнәр эйәһе ... гейеш?

Уҡытыусы... йәки врач...

Афарин! Кешенең йөҙөнә ҡарап булмышын билдәләй ... ... йәш булһаң да... (Следователдең «һеҙ»ҙән ... күсүенән Мәҙинә иркен тын алды). Мин һуғышты ... ... шәфҡәт туташы булып үттем. Ә һуғышҡа тиклем ... ...

Хәҙер был эш ныҡыраҡ оҡшаймы? — Мәҙинә һорауым ... булды, ахыры, тип уңайһыҙлана төштө, ә оялдымы ... ... ҡыҙыллыҡ йүгерә...

...итагсль, Мәҙинәнең йөҙөнә ҡыҙыл йүгереүен ... инде, өндәшмәйерәк ултыра бирҙе, унан төбәне:

— һорауың... урынһыҙ түгел, Мәҙинә һылыу. Беренсенән, һуғыш һәр эште, талымланып тормай, теүәл һәм ерсно еткереп үтәргә өйрәтте. Икенсенән, күп яҙмыштарҙы күреү, үҙемдең дә бәндә ҡулы менән барлыҡҡа килтерелгән тамуҡ аша үтеүем, тән йәрәхәтенән тыш күңел йәрәхәте барлыҡты төшөндөрҙө. Ябай күҙгә күренмәгән йәрәхәтте дауалау өсөн... скальпель һәм шприцтар ғына ярҙам итә алмай...

— Шакира апай, ирҙәр мине ғәфү итһендәр, ләкин... тик ҡатын-ҡыҙ ғына эҙмә-эҙлелек, түҙемлек, аңлау һәм ваҡ-төйәк кеүек күренгән факттарҙы аша атлап үтмәйенсә, ҡурҡмайынса... эште ахырына тиклем аҡкарып сыға ала кеүек.

— һы-һы... «Дело»ла һине «Алға» колхозыныц һауынсыһы тип...

— Эйе, мин һауынсы. Тирәклелә йәшәйем.

— Мин былай ҙа һинең менән осрашыуҙы планлаштырғайным. Үҙең килеп һәйбәт иттең. Индс таныштыҡ, хәҙер һиңә бер нисә һорауға яуап бирергә тура килер...

— Яҡшы... — Мәҙинә, кире урыньша ултырып, следователь ҡатындың күҙҙәренә туп-тура ҡараны. — Мип әҙермен, Шакира Хисамовна.

— Минең һораүҙар ябайҙан булмаҫ индс, **Мәҙинв.** Беренсенән, мине... Ихсанбай **менән әсәйен Гөлбаныу** мәрхүмәнең мөнәсоботс **ҡыҙыкһындыра. Әлбиттә, яуай** биреү-бирмәү үҙ мәйелсндә. **Ләкин** алдан уҡ шуны әйтеи ҡуям: мин атайындың гәйепһеҙ икәненә ышанам.

— Рәхмәт, Шакира Хисамовна. Атайымдың Тирәклслп булған ул хәлдәрҙә бер ниндәй ғәйебе булмауын әлею тиклем мин, йәнә Фәүзиә инәй генә белә ине. Тик ул юҡ. Ә әсәйем менән Ихсанбай ағайға килгәндә... Ихсанбай ағай мине ФЗО-ға ебәреүҙән алып ҡалды. Ә мин исемлекто беренсе торған булғанмын...

— Бына ул исемлек. — Следователь Әҙелғужина уныц алдына ҡулдан яҙылған исемлек килтереп һалды. — Күр: уны Ихсанбай төҙөгән.

— Аһ!

— Ни булды?

— «Н» хәрефе...

— Уға нимә булған?

· II» хорефен был рәүешле яҙыу... **Беҙҙә** көндәлек ... яҙып баралар, минең фамилияны яҙғанда... ошо уҡ

... ксм тултыра табелде?

Пшмохәмәт ағай, хисапсы...

I ...елғужина папкаһынан тағы бер дэфтәр бите сығарҙы:

Бына ошо «Н» кеүекме? — Ул ҡыҙыл түңәрәккә ... «Н»ға төртөп күрһәтте.

)ие!

Гимэк, Хашим Насибуллин өҫтөнән яҙылған шикәйәт, ... алыныусылар исемлеге, Ишмөхәмәт Баҡтымбаевтың ...комаҡка яҙған аңлатмаһы һәм... фермалағы табель — ... оер ҡул менән яҙылған?

1әкин...

Лшыҡма, туғаным. Ихсанбай Моратовтың үлеме ...ипммаған. Төп мәсьәләгә күсәйек: Ихсанбай Моратов ... әсәйеңдең мөнәсәбәте.

М... ишо был юлы ҡолаҡтарына тиклем ҡыҙарҙы: әсәһенең ...рен Ихсанбайҙарҙың тәҙрәһенә ҡарап моңланғанын, ...ығанын. «Зөлхизә»не йырлағанын, аҙаҡ мендәрҙәре ...онсе илағанын һөйләй алмай бит инде ул. ...аиҙарҙың битендәге Ихсанбайҙыҡын хэтерләткән ...рә? Көфөр, көфөр... Баланың әсә хаҡында уйлай торған |н.| |үгел былар.

Мин... башҡаса... ни ҙә булһа... — Мәҙинә тотлокто ... йэшкә тулған күҙҙәрен Әҙелғужинаға күтәрҙе. — Һ м һойбәт кеше ине минең... Тик бына атайым менән и ... йәшәмәнеләр кеүек...

Пхлас йәшәмәнеләр? — Шакира Хисамовнаның ... һыл юлы айырыуса иркә яңғыраны.

Өллә... Ахыры, әсәйем... берәүҙе яраҡкан, икенсегә ... а.гкҡан.

Һәм ул яраҡкан кеше... Ихсанбай Моратов булған. ... ...ы?

...лләсе. Бәлки...

I ...сәйең дә һинең ише бик сибәр инеме?

Мин пимә?! Уның... күҙҙәре дингеҙ төҫөндә, юҡ... күк и ... ине! Ул... шундай сибәр, шундай һөйкөмлө һәм йәш

— һәм шундай... үлем! Ҡыҙғаныс, әлбиттә... — Әҙелғужина сигарет ҡабыҙҙы. — Ғәфү үтенәм...

— Фоүзиә инәй: «Мин уны бәндә хөкөмөнән ҡурсып ҡала алдым, Хоҙай хөкөмөнән аралау минең ҡөҙрәттә булмай сыкты!» тине.

— Ә ниңә ул шулай тине икән?

— Белмәйем. — Мәҙинә шымды. Бәлки, ул был аҡыллы, миһырбанлы сырайлы ҡатынға артығын да ысҡындыралыр?

— Ә Фәүзиә... күрше ҡарсыҡ... килене, Ихсанбайҙыц ҡатыны менән нисек йәшәне?

— Ул өйҙән артыҡ хәбәр сыҡманы. Шулай ҙа яҡшы йәшәгәндәр, тип уйламайым.

— Ни өсөн?

— Инәй беҙгә ризыҡты... килененән йәшереп ташыны.

— Мәҙинә, һеҙ... Фәүзиәгә бит сит кешеләр. Туғанлыҡ ептәре менән бәйләнмәгәнһегеҙ. Ә ни өсөн ул, ҡаршылыҡтарға ҡарап тормайынса, һеҙгә ярҙам итте икән?

— Белмәйем.

— Ә миндә ул ҡарсыҡ шундай фекер уята. — Шакира Хисамовна бармаҡтарына ҡараны. — Бына улар... бишеһс биш башҡа тора, ләкин уларҙың ҡайһыныһын тешләһәң дә... берҙәй ауырта...

— Әсәйемдең әсәһен... Шәһәрбануыуҙы **ерләгәндә** ло Фәүзиә инәй бик ныҡ ярҙам иткән.

— Шәһәрбануы **Хоҙайғолова** гураһында миндз справкалар бар. Сабаҡлы ауылы ҡыҙы булған бит Шәһәрбануы. Әйткәндәй... Мин үҙем дә шул ауылдан.

— Донъяның... тарлығы!

— Тау менән тау ғына осрашмай, Мәҙинә һылыу.

Ҡояштай йылмайып, елдәй еңел хәрәкәтләнеп сығым киткән Мәҙинә артынан Әҙелғужина оҙаҡ ҡарап ҡалды. Әлс Мәҙинә күҙҙән юғалғас та тәҙрәнән айырыла алманы. Был ҡыҙ нимәһе менәндер үҙенең йәш сағын да хэтерләтә бирҙс. Иҫкене емерәбеҙ, яңы тормош төҙөйбеҙ тип дәртләнеп-хисләнеп, башына ҡыҙыл яулыҡ бәйләп, ҡоштай осоп йөрөгән саҡтары күҙ алдына килде уның. Айырма шунда: уның йәшендә Шакира күҙҙәрендә Мәҙинәнекеләй ғәм юҡ

[illegible] оугай. Булмағандыр. Үҙҙәре хыял иткән тормошто төҙөү [illegible] гүгел, шуны дошмандарҙан яҡлап, һаҡлап ҡан да ҡойҙо [illegible] ира. Тик ниңә һуң Шакиралар төҙөгән яңы тормош [illegible] һуң килгән яңы быуынды бәхетле итмәне? Белә ул Мәҙинәнең тарихын. Мәскәүҙә уҡыуын да, ирен дә, тик ул [illegible] катындың самаһыҙ һылыу икәнен генә белмәй ине. [illegible] лт, матур ҡатындар тирәһендә тормош һәр саҡ шаулы, [illegible] хатта ҡанлы булған инде ул. Өйөрмәләрҙең иң хәтәре унир шрәһендә ҡуба. Мәҙинәнең әсәһенең башына бүреләр [illegible] гиһәләр ҙә, төп сәбәбе уның һылыулығында, ахыры. Ә [illegible] һылыулығының ниндәй өйөрмәләр яһары [illegible] оле. Әгәр ҙә инде яһап өлгәрмәгән булһа... Күп [illegible] Мәҙинә, йәшлегенә барып, аңламай торғандыр. Әгәр [illegible] һәм исемлек төҙөүсе кеше ферманың эленге икмһы булһа, йәшеренгән еренән ниңә сыҡҡан? щпыу күптән үлгән. Уйнаш иткән ҡатыны Зарифа ла юҡ. [illegible] можбүр иткән уны ғәзиз ғүмерен (ә ул ғәзиз ғүмерен [illegible] лрҡаһында һуғыштан ҡалған!) ҡурҡыныс аҫтына ҡуйып, [illegible] ҡайтырға? Эйе! Мәҙинәне күреү был ярайһы [illegible] «Дело»ға күп асыҡлыҡ индерҙе. Ә бит Мәҙинә [illegible] бөткәнсе асып та һалманы. Матур ҡатындар, [illegible] кылансыҡ, иҫәр була. Ә был — башҡа. һылыулығы [illegible] аҡыллы ла. Тик тиҙ тәьҫирләнеүсән. Был, күрәһең, [illegible] мжади булмышынан киләләр. Шулай булмаһа, йырсы [illegible] алмаҫ ине. һылыу һәм ғорур зат. Гөлбануы ҙа шм уҡ булған. Бына кемдәр өсөн үҙенең йәшлеген дә, [illegible] да фиҙа ҡылған уның... Шәһәрбануы апайы!

Һшш күтәреп билдәһеҙ йүнәлештә, билдәһеҙ яҙмыш п[illegible] сығып киткән атаһының һеңлеһе уға һәр саҡ тынғы [illegible] Шәһәрбануы яҙмышы хаҡында бала сағынан [illegible] Шакираны ошо һөнәренә дәл итте...

Шикира кире өҫтәл артына ултырҙы. Ҡағыҙға [illegible] ыҙылмағандары күберәк һөйләй уға. Ниңәләр... ипоппсе тапҡыр... уға күңеле Таулының Кәкере ауыл [illegible] илпюгән Мөғлифә ҡарсыҡты күрергә ҡуша. Был [illegible] ул һаман кисектерә килде. Ә бөгөн, Мәҙинә һәм им моион һөйләшкәндән һуң, фекер ебе өҙөлмәҫ борон [illegible] күреп ҡуйырға булды.

Мсн иифәне Шакираның һуғышҡа тиклем дә күргәне [illegible] Шакира урта мәктәптә ошо Таулыла уҡығанлыҡтан,

ҡарсыҡ тураһында күп ишеткәйне. Ә бер саңғы ярышынан һуң аяғының быуыны сыҡкас, тура шул әбейгә алыи барҙылар. Ҡарсыҡ ҡараны, оҙаҡ хитланмай ғына быуынын ултыртты. Ҡырҡ бишенсе йылдың көҙөндә лә барҙы Шакира ҡарсыҡҡа. Мөғлифә ҡартайғайны, күҙгә мөсһөҙәйгән ине. Шакира уға аяғындағы уңалмаған яраһын күрһәтте. Әбей уға үләндәр бирҙе, шуның төнәтмәһен эсергә ҡушты, ниндәйҙер доғалар уҡып, өшкөрҙө. Шунан бирле инде бер ҙә бөтәшмәҫ тигән яра арыуланғайны, һуңғы ваҡытта йәнә ҡысый, ярһый, һыулана башланы. Шакира инде Мөғлифәгә күптән мөрәжәғәт итер ине — ҡарсыҡ ҡайҙалыр йәшәгән улынамы, ҡыҙынамы киткән дә ҡайтмаған, тинеләр. Ә һуңғы ваҡыт Кәкере ауылда йәшәгән күрәҙәсе хаҡында Шакира күп ишетә, хатта, ысын булһа, халыҡ араһында, Камалетдинов балаһын әбейҙән дауалата икән, тигән имеш-мимештәр йөрөй.

Шакира, бер ҡарарға килеп, папкаһын япты. Тороп кейенде һәм, бер аяғына һылтаҡлай биреп, һепертмә буран сығып тороуға ҡарамаҫтан, Кәкере ауыл яғына атланы.

Эҙәрмән Шакира яңы-юры кеше йөрөгәне тойолмаған, һепертмә буран һылап бөтәштерә башлаған һукмаҡ менән урам эсенә инде. Өй тыш яҡтан үҙгәрмәгән кеүек, бары тик бүрәнә араларына, ҡыйыҡ, тәҙрә каиҡастарына ҡар һырығанлыҡтан тәпәшерок күрснә. Солан ишегенсц тотҡаһына тотонғас, эт өргән тауыш ишетелде.

— Себэ, кил эле мында, мэ! — Ҡарсыҡ ишектең келәһен ысҡындырҙы. — Әйҙә ин, эт тешләмәй ул... Буран сығырға итә, ахыры, этте соландан ҡыуып та сығарып булмай.

— Өрмәй ҙә, ебәрмәй ҙә ме?! — Шакира өйҙөң йылылығына, еләк, ҡарағат еҫтәре сыҡкан һауаға ирэйеп китте, тунын сисеп элеп, үҙе ширҙеккә барып ултырҙы. - Мине таныйһыңмы, инәй?

— Әлләсе, күргәндәй ҙә булам... Кеше күп була бит. Ҡайһы береһен танып бөтәһең?

— Мин Шакира. Сабаҡлы ҡыҙы. Һуғышҡа тиклем иңбашымдың быуынын ултырткайның, һуғыштан һуң уңалмаған яраға һин биргән төнәтмә килешкәйне...

— Шулаймы? Әле ни йомош?

Шпкира ҡарсыҡтың танымауын ғәжәпһенде. Ул тиклем рс насар кешегә оҡшамағайны бит ул. Ә йөҙөндәге шигандан ҡалған был эҙҙәр? Ә был һине үтәнән-үтә күрә торған караш?

Төнәтмэ, шулай итеп, килешкәйне тиһең инде?

')ме, һыҙланыуҙарҙы баҫҡайны.

Шулай... Күңел ғазаптарын ғына баҫырҙай сара юҡ. Б цпкаһына дауа табыла. — Ҡарсыҡ, тороп, Шакираға яҡын ııı ı ıı ойоғондо сис...

Шакира башта ойоғон, унан сейләнеп, һыуланып торған •ı • •һына ураған марляны тағата башланы.

!>ылай икән... — Ул, доғаһын уҡып, яраға өрҙө, ҡулын ермәй генэ өҫтә йөрөттө. — Теймә, урама, шул килеш ултырып тор.

Вбей бысранған марляны усаҡка ырғытты.

Инәй!..

Корәге бөттө инде уның...

Рәхмет... — Шакира ҡулын йыуып самауырын ҡуҙғата ....лаған ҡарсыҡҡа йәнэ бер уҡталып ҡарап алды. — Ә иында йәшәгән Мөғлифә инәй... Ул ҡайҙа?

Бындай һорауҙы көтмәгән ахыры ҡарсыҡ. Ул самауырын ı ңр урынына ҡуйҙы, Шакираның каршыһына килеп птырҙы:

Уиың бында ризығы бөткән, күрәһең...

Ә һин, инәй, Тирәкленән күптән киттеңме?

Гирәкленән киткәнде белгәс, ваҡытын нигә һорайың?

(амалайым. Самаларға тырышам. — Шакира, ҡарсыҡ мымып өлгөргәнсе, тимерҙе ҡыҙыуында һуғырға булды. Бөгөн миндә Мәҙинә булды.

Мәҙинә?!

Ул, меҫкен, атаһының яҙмышы өсөн борсола. ı ı шаныс!

Мәҙинә... — Ҡарсыҡтың борсолоуы йөҙөнә һирпелде. Бик бирсшеп киткәнме ни Мәҙинә?

Ьпрсшмәҫлекме? Иң үкенеслеһе: шундай мәлендә ı кулы һуҙырҙай бер кеме юҡ!

ı кына ваҡыт өнһөҙ ултырғандан һуң, Шакира йәнә ı ьилдс:

Ихсанбай Моратов... Улың ҡайҙа?

Белмәйем.

— Ә киленең? Сәбилә?

— Ул... Былар;ҙың һиңә, ҡыҙым, ни кәрәге?

— Гөлбаныу юҡ. Өндәшмәй генә боҫоп ятып, Мәҙинәнең башына еткәндәрен көтәһеңме?

— Мәҙинәнең? Башына? Ауыҙыңдан ел алһын, ҡыҙым!

— Әләйһәң, йәшенеп ятыуыңдың серен сис!

— Мәле етмәгән...

— Ниндәй мәл? Ихсанбай тырышлығы менән яһалыр ҡорбандар һанының... йәнә бишкә тулырын көтәһеңме?

— Ауыр һүҙ әйтәһең...

— Улыңдың ҡылған ҡылыҡтары еңелме?

— Әҙәм тарафынан ҡылынған бер генә ғәмәл дә уның үҙенән бейек тә, ҙур ҙа була алмай.

— һуғышта мин һин әле әйткәндең тап кireһен күрҙем.

— Мин һинең килеүеңә... мәсьәләне уртаға һалып һөйләшеүеңә шатмын, эҙәрмән ҡыҙым. Әммә үҙемдең хәлем дә бер-ике ауыҙ һүҙ менән һөйләп аңлатырлыҡ түгел. Мин Камалетдиновты көтә инем — һин килдең. Ҡайһылай ҙа һәйбәт. Ә Ихсанбайға килгәндә, ваҡытың булһа, тыңла бер карһүҙемдс... Бер сүл бүреһе ауылға барып ингән. Темеҫкенеп йөрөй торғас, мискәләге аҡ буяуға барып төшкән. Өйөрөнә ҡайтмай хәле юҡ. Ҡайтҡан. Ырыуҙаштарының уны күреп иҫе киткән: уйын хәлме, был бит ап-аҡ, береһенә лә оҡшамаған. Шакал да аптыраи ҡалмаған: «Мин бит күктән төштөм! Мин изгеләрҙән изге илаһи бер йән!» — тип хәбәр һалған. Был рәүешле затты күргзндорс булмағас, уға ышанғандар, уны ололағандар, хөрмот күрһэткэндәр. Әммә бер көн килеп ай тулған, бүрелор күмәкләшеп, айға ҡарап дәррәү олоп ебәргәс, изге йән үҙенец башҡаларға ҡушылып олоп ебәргәнен һиҙмәй ҙә ҡалған...

— Кинәйә менән һөйләгән ҡарһүҙеңдең мәғәнәһен дөрөҫ аңлаһам, һин, инэй, айҙың тулғанын көтәһең?

— Ҡалҡыуын ҡалҡкас, айҙың тулмай ни әмәле? Ә тулған ай көслө телэк, ләкин мөсһөҙ аҡыл йөрөткән йән эйәләреи ҡасан да асылына ҡайтармай ҡалмай...

— Әгәр Мәҙинә... һинең ҡыҙың, йә ейәнсәрең булһа... Ай тулғанын, моғайын, көтөп ятмаған булыр инең!

— Ә һин минең көтөп ятҡан-ятмағанды ҡайҙан беләһең?

— Тимәк, теге төнгө фажиғә...

— Мин уны, ҡыҙым, фажиғэ булмаһын тиеүҙән, сараһыҙлыҡтан килеп сыҡкан ваҡиға, тип атар инем... Инде һин миңә яуап бир: мин — мин инде, һинең был эштәргә ни ҡыҫылышың?

— Мин ҡасандыр Сабаҡлы ауылынан бала күтәреп сығып киткән Хоҙайғолова Шәһәрбаныуҙың... ике туған һеңлеһе б> іам.

— һин... Шәһәрбаныуҙың һеңлеһе?

Таулыға килгәндә береһенән төшөүгә икенсеһе осрап ГОрғанлысган, ҡайтыр юлында ла атмы, трактормы, машинамы ОСратыуҙан өмөтөн өҙмәгән Мәҙинә юлға сыҡты. Таулыға яҡын м гкан ауылдарҙың береһенә етеүгә, уны сана таҡкан трактор КЫуып етте. Трактор Түбәгә тиклем үк килгәнлектән, Мәҙинә Иркен тын алды: былай булғас, төндө бында уҙғарһа, иртәгә н йәүләп булһа ла Тирәклегә ҡайтып етәсәк.

)сәһе менән Түбә баҙарына килгән саҡтарында төшөп порогэн әбейҙэ йоҡлағас, Мәҙинә йәнә ҡараңғылы-яҡтылынан Ҡлш сыҡты. Бер ниндәй машина, йә трактор үтмәгән, бәлки, юлы ғына үләмһерәп ятҡан юл буйлап атлағанда атаһы Мсмон осрашыуын, эҙәрмән ҡатын менән һөйләшеүен бер гапҡыр зиһененән үткәрҙе. Атаһы бик миктәмәгән, тик иГни ыбыраҡ киткән, ҡояш, ел күрмәүҙән йөҙөнөң ҡарағусҡыл төҫө кәмеп, сырайына һарғылтлыҡ бәреп сыҡҡан. Ә күҙҙәре юккесә, уларҙа көс тә, ышаныс та кәмемәгән. Атаһын күргән һайын яңынан асҡандай була Мәҙинә. Эсеүҙән, гиптереүҙән башҡаны белмәгән кешене донъя бына ҡайһылай үҙгәртте! Әсәһе тере булһа, моғайын, иренэ һуғыштан һуң ишынан ғашиҡ булыр ине. Ихсанбайҙарҙың тәҙрәләренә ителган күләгәләргә ҡарап илап ултырғансы, үҙ иренең күңел рнсүҙәрен баҫыр һүҙҙәр эҙләр, иркәләр, наҙлар ине...

А глаған һайын елдең көсәйеүен тойҙо Мэҙинэ. Түбәләгә фйтир хужаһы: «Тиреҫтән килгән буран ҡапыл көсәйеүсән юлға сыҡмай тораһыңмы әллә, ҡыҙым?» тигәйне лә, индс тыңлау! Тиҙҙән юл күренмәй башланы. Мәҙинә нрғыма әйләнде: әле генә атлап үткән аяҡ эҙҙәрен, ҡойроғо Мспон үҙен йәшергән төлкө кеүек, буран ҡаплаған. Инде Нишләргә? Өҫтөнә кейгән тунының итәктәренән, сабыуынан п, карлы сл тәненә һыуыҡ тынын бөркә. Аҙымын ыулатыуҙан үҙе лә тирләп-янып сыҡты. Сама менән ул

хәҙер Тәрән үҙәктән өҫтәрәк булырға тейеш, ләкин бер пәмо күренмәй, күҙ алдын геүләп-ғыжлап, һыҙғырып-тулап торғап аҡ томан ҡапланы. Алға барыуҙан өмөтөн өҙгән Мәҙинә аяҡ аҫтында ерҙең йомшарыуын тойҙо: был, моғайын, кәбән төбо. Тимәк, Мәҙинә юлдан ситкә сыҡкан, баҫыуға килеп ингән. Хәҙер ул атлаған һайын юлдан алыҫкараҡ китәсәк... «Балам! Дауытым!» — Аҙашыуын аңлаған, йөрэгe өҙөлөр сиккә еткоп Мәҙинә, хәле бөтмәҫ борон, кәбән төбөн үҙе һыйып ятырлыҡ урын яһар өсөн соҡой башланы...

Күкбүре төнгө күктә йөҙөп йөрөй торған есемдең көндән-көн тулышҡанын, йомороланып ҙурайғанын күҙәтте. Күк есеме бүҫкәрһә лә, тулһа ла илаһи сабырлығын, һауалы олпатлылығын юймай. Эргәһендә бихисап нурҙар сәсси һикерешкән, өйөрҙәге тай-тулаҡтай уйнаҡсылаған ялтыр-йолторҙо ул күрмәгәндәй, шәйләмәгәндәй. Унық өсөн улар әллә бар, әллэ юҡ. Хатта уның үҙенә ҡарап, ул тулыша барған һайын йөрәкһегән, шартлар сиккә етеп болоҡһоғап Күкбүрелә лэ эше юҡ. Ә бит улар төндәрен икеһе генә ҡала. Күктә — ҙур түңәрәк, Ерҙә — Күкбүре. Күкбүре сырайыиа бер бошоноу ғәләмәте сығармаған мөлдөрәмә тулы түңорокко ҡарап олоп та алғылай, э теге — һүҙһеҙ. Эрс, тәкәббер, битараф... Ул Күкбүренсң яңғыҙ йонгеноһсно йәм табалмай элекке хужаһына ҡайтыуын да, ул Хужаның **кәнтәйҙв,** ҡыутомшоҡ эт шайы ла күрмәй, ирек һөйөүсән булмышын, яусыл-даусыл асылын аямай, сынйырға ултыртыуын да күрмәй. Сикһеҙ битарафлыҡты аңлауҙан төңөлөп, сараһыҙлыҡтан шартлар сиккә еткәндэ, әмәлгэ ярағандай, Ер менән Күктең, айырым-айырым йәшәүҙән тәкәттәре **ҡороп,** буран яһап, бер-береһенә олғашып, ҡауышырға сарсауы ҡотҡарҙы. О! Күкбүрегә таныш был хәлдәр! Уҙаман кеүск көслө, мөһабәт заттың саҡырғанын оло буран шипкерт тауыш менән белдерһә лә, бынау бығауҙы сәйнәп-шартлатып, ирек һәм нәҫел-үрсем ҡандырыу көҫәгән тәкәтенә дауа сығып сабыр ине ул.

Оло буран тулай, торған һайын шәберәк, етеҙерәк, бейегерәк һәм бөйөгөрәк була бара. Буран ҡаплаған күк йөҙөндә һирәк-һаяҡ ҡына тулыша-түңәрәкләнә барған яҡты

ıсн шзүләһе салынып ҡала. Ул бураны, ул... Күкбүренең түҙеп трорлоҡ әмәле лә ҡалманы шикелле, бынау сынйырҙы Йүрлилгә ҡуша ҡағылған сөйө-ние менән йә һурып сығарасаҡ, П.| гүҙеме ҡороуҙан, эсендәге өҙлөкһөҙ үҫә барған ирек **ВОМары** шартлауҙан йығыласаҡ...

Уянһа ла Сәрбиназдың иртәнге ризыҡ әҙерләүен гүшөгендә тыңлап ята биргән Мирхәйҙәровтың иҫенә ҡапыл шулыға киткән Мәҙинә төштө. Әгәр «балам, эшем» тип Инрлкһси, сабырһыҙланып юлға сыҡкан булһа!

Капыл тороп кейенә башлаған иренә ашъяулыҡ түшәй П нм ıаған ҡатыны көлөмһөрәп ҡараны:

Ондәшмәйерәк торайым әле, күпме ятыр икән тиһәм...

)й әсәһе! Ятырһың — ятмай! Өсөнсө көн Мәҙинә |и ıы а киткәйне бит.

Буранға ҡамалып яталыр тиһеңме?

Ятһа — бер хәл. Камалдым тип түҙеп ята торған штмы ни **ул?**

(абый түгел инде...

Упың йәшендә һин нисек инең?

Й8, әйҙә, сәй эс әле...

)сеп тә тормайым... Бәйләнеште буран өҙөп ırмаған булһа, районға шылтыратам. Ҡайтырға сыҡкан П һа мажали, хәҙер үк эҙләргә сығыр кәрәктер...

Ҡайһылай... Бураны буран ишеме? Нисек сыҡмаҡ

| рактор бар, аттар... Юл бераү бит... — Һуңғы pı и Мирхәйҙәров тунының еңен кейә-кейә әйтте лә, ı ı каҡлыҡтыра ябып, аҡ ҡар үрәпсетеп тулаған өйөрмә ı инеп юғалды.

ı ифоп сымының теге яғында Мирхәйҙәровтың ......ıи ишеткәс, Камалетдинов үткәндәге хәлде ıтелдең иҫенә төшөрөп алмай түҙмәне:

Пммо, Азат Әһлиевич, тағы бесәнһеҙ, ауыҙығыҙҙы ıлеп ултыраһығыҙмы?

— Юҡ, иптәш Камалетдинов, бесән етерлек. Тракторҙар урмандан ҡайтыу менән ҡырҙан ташып алып бөттөк. Был юлы икенсе мәсьәлә борсой: һауынсыбыҙҙы юғалтып ултырабыҙ.

— Һауынсыны?! Юғалтып?!

— Эйе, өсөнсө көн Мәҙинә Таулыға киткәйне. Атаһының хәлен белергә. Әле өйҙәренә инеп сыҡтым — ҡайтмаған.

— Так, так... — Йөрәге тамағына тығылғандай булды Камалетдиновтың. — Мин... күрмәнемсе... Миңә инәме ни ул? Хашимдың эшен хәҙер следователь Әҙелғужина алып бара. Һеҙ унда ваҡыт әрәм итмәгеҙ! Эҙләргә сығығыҙ! Юл ситтәрен яҡшылап ҡарағыҙ. Мин дә бында... — Шул саҡ бәйләнеш өҙөлдө. Тимер сымда бары тик тәбиғәт ярһыуынан ҡупҡан ауаздар геүләне...

Камалетдинов үҙен ҡапыл ярҙамһыҙ, ҡола яланда яңғыҙ ҡалғандай хис итте. Тәҙрәнән бер ни күрерлек түгел, әле бер, эле икенсе оста бәйләнеш өҙөлә, бындай көндө юлға сыҡҡан кешене эҙләү — кәбән араһына төшкән энәне күҙләүгә бәрәбәр. Ҡайҙан башларға? Районда бер вездеход бар. Һунарсылар берлегенән бер нисә саңғысыны ултыртып алыр. Ләкин юл оҙон, буран торған һайын нығыраҡ котора. **Әгәр** *р* ул алты көнгә һуҙылһа? Әле башы ғына. Мәзинәне бөгөн, хәҙер эҙләргә кәрәк.

Сымдың икснсе осонда ҡатын-ҡыҙ тауышы ишетелде:

— Эйе, мин, Әҙелғужина.

— Хашимдың ҡыҙы... Тирәкленән Мәҙинә булдымы?

— Булды.

— Ҡасан?

— Кисә.

— Ә һеҙҙән сыҡҡас ҡайҙа барырын өндәшмәнеме?

— Ул, Әйүп Ғәзизович, оло юл менән ҡайтыр яҡҡа йүнәлгәндәй булғайны! Эйе, эйе... «Өҫтө лә йоҡа, берәй транспорт осраһа ярар ине!» тип уйлап ҡалдым.

Тимәк, Мәҙинә Тирәклегә атлаған. Әгәр транспорт осраһа, ул Түбәгә килеп йоҡлаған булырға тейеш. Эйе, эйе... Транспорт Таулы менән Түбә араһында туктауһыҙ йөрөй. Машиналар руда ташый, почта...

Һуиарсылар ойошмаһынан егеттәр килеп етеү менән юлға ı ы кı ы Камалетдинов. Машина Кәкере ауылға инеү менән **ренә** күрәҙәсе ҡарсыҡ төштө: инеп сыҡмай булмаҫ. Мı ҙинә хаҡына ул бөгөн бөтә сараларға мөрәжәғәт итергә **цер.**

Ишекте шаҡыһа ла яуап биреүсе булмағас, Камалетдинов готканы үҙенә ҡарай тартты, ҡарсыҡты сэстәре туҙған, намаҙ укығандағы шикелле йөгәнәкләп ултырған килеш күргәс, **Гуктап** ҡалды. Ҡарсыҡ инеүсегә иғтибар ҙа итмәне... Аптыраған Әйүп уның һүҙҙәренә ҡолаҡ һалды:

Тәңрем! Ырыу ҡото булыр баламдың ейәр ризыҡтарын, и ıр һыуҙарын өҙмә, зинһар! Ете быуын әруахтарым, ата-I, баҡшы Бәндәбикә, өләсәм Күкһыу рухтары, ярҙам **ЦТСеҙ** Мәҙинәмә. Әсәләрен һаҡлай алмағанға күрә, үҙенең яттары, салыр ҡорбандары менән гүрегеҙҙе яҡтыртыр еиәнсәрегеҙгә ғүмер һорағыҙ мәүләнән! И раббым! Аллам! **Варыһы** ла һинең ҡөҙрәттә! Ярҙамыңды ебәр! Ҡөҙрәтең и I ı **[әмә!** Йөрәге тибә? Ул тере, ул һуға! Йә Хоҙай! Ҡөҙрәтең ҡылдың! Ҡулдарымдың ҡайнарлығы арта! Ҡулдарымдың ı аинарлығы Мәҙинәгә күсә! — Әйтерһең дә, ул алдына Мәзинәне һуҙып һалған да, һылай ҙа һыйпай...

Камалетдинов тамаҡ ҡырҙы, өндәшһәң дә ҡыйын, ı ш ıәшмәй сығып китеүе лә. Шул саҡ башын күтәрмәй генә ҡарсыҡ телгә килде:

Ваҡыт әрәм итмә! Түбә менән Тирәкле араһы... I әңребирҙе йылғаһынан өҫтәрәк... баҫыу сите... Юл ситендәге **|рсктәр...** һайыҫҡандарға иғтибар итегеҙ... Улар ҡайҙа күберәк... Ул тере! Барығыҙ! Мине күҙ алдына килтер! Минең ҡул ҡайһы яҡҡа һуҙылһа, шунда атла!

Камалетдинов сығып йүгерҙе...

Күкбүре, сынйырын һөйрәткән килеш, Ер менән Күкте **Готаштырып** тулаған буран эсенә инеп олаҡты. Ауылдан ı |.п ып Тәңребирҙе йылғаһы үҙәненә төшөү менән таныш еҫкә **Юлыкты:** өйөрҙәкөләр! Кәнтәйе йәш... Арланы оло. Яңғыҙ лн был арланды Күкбүре күптән белә. Бер мәл уның ҙонторок кәнтәйе менән сәйнәшеп тә алғайны. Көстөң тиң Гүгелен аңлаған Күкбүре сигенде ул саҡта, тешен

шаҡылдатып, ҡойроғон бот араһына ҡыҫтырып, урманға ҡасты. Йәшкә эйәләшкән икән дарман эйәһе. Былар... ниндәйҙер эҙҙән килгәндәр... Эйе, эйе, һыйыр, тиреҫ аңҡығап эҙҙән... Эҙ күп ерҙә күмелгән, ләкин яңы-юры үткәнлектән, еҫ көсөн юймаған. Ҡайһы бер урындарҙа түңәрәк яһаған, тапаған еренә кире килгән. Эҙҙәр ереклек буйындағы һалам өйөмөндә туктаған... һалам өйөмө... Эсенән йылы бөркөло, үҙенән бойоҡ йөҙлө, Күкбүрене туйындырған, башынан иркәләп һыйпаған еҫ килә. Ләкин был йәш еҫ. Эйе, эйе! Йәш! Ырыуҙан ҡалмаған, эсендә бихисап үрсем һаҡлаған еҫ! Күкбүре лә шундай! Уның эсендә лә йоморо сабыйҙар булып йәнде иркәләр үрсем ҡомары ҡымырйый. О! Был еҫ уға таныш! Был еҫте ул күптән белә! Был еҫ уны көсөк сағында эттәр өйөрө талап ташлауҙан ҡурсып алып ҡалғайны. Күтәреп алып ҡайтып, ҡапҡа аҫтынан төлөгөнә индерем ебәргәйне. Эттәрҙән ҡурҡып дер-дер ҡалтыраған көсөк рәхмәт йөҙөнән уның муйынын ялағайны...

Күптәнге һағыштан Күкбүре сыйнаны, һаламды соҡоп, шул еҫте өҫкә сығарғыһы килде. Ләкин... янында ғына киҫәтеүле ырылдау ишетелде! Тоҡомдаштары! Теге йәш кәнтәй менән дарман биреүсе! Улар ошо еҫ эҙенэн килгән... Ҡорбан туйы яһарға яҡында ғына ҡасып ятҡандар! Йәш кэнтәй, бөтә йәш-елкенсәккә хас әрһеҙлек, маһайыу, иркәлек тыуҙырған һаҡһыҙлыҡ менән Күкбүрсисң алдына килсп ултырҙы. Уның бар булмышы:

— Был һинең нишләүсң? Был - беҙҙең табыш! — тигэндәй.

Күкбүре лә бирешмәне, уның үҙенән дә әрһеҙерәк төҫ алып, йәшбикәне әрһеҙлек менән еҫкәп ҡараны. Фу! Ас бөйөр! Ҡыҙығырлыҡ нимәһе бар? Дарман хужаһы ла быныц ише менән бысраныр икән...

Күкбүре ул арала дарман хужаһыньщ алдына барып ятты. Шуның менән үҙенең ихласлығын белдерҙе. Ләкин... эт, мал, йорт, кеше еҫе аңҡып торған Күкбүренән арлан ҡапыл ситко янтайҙы, тештәрен күрһәтте. Ул был хәрәкәтте Күкбүренең үрсем көсөн еҫкәп тә ҡарамаҫтан яһаны! Ниндәй тәкәбберлек! Асыуы алҡымына тығылған Күкбүре һалам өйөмөнә, кеше ятҡан тәңгәлгә баҫты. Әммә арландан яҡлау тойған Йәшбикә унда Күкбүренән алдараҡ килеп баҫырға өлгөрҙө. Арландың сирҡаныуынан ғорурлығы кәмһетелгән,

викһеҙ рәнйетелгән һәм ырыуҙаштары тарафынан ..ы мтслгән, үҙенең яңғыҙлыҡҡа дусар ителгән ҡотһоҙ ...ашынан, үрсеү телэгеН баҫыуҙан өмөтө өҙөлөүҙән ...рһыган Күкбүренең эсендә ниҙер тулышты, күҙҙәрен ...ыҙар гып нәфсеһе башына бәрҙе, өйөрҙәрҙе тетрәтеп тоткан Башбүренең даусыл, яусыл булмышы баш күтәрҙе — ...үре ҡанға ҡан менән яуап бирер өсөн тинһеҙ алышҡа

«Алға» колхозының стена гәзитенең редколлегияһына Һиһлағастары, эш күплеккә һылтанып, баш тартырға ла ...ғайны Хөсәйен, аҙаҡ йыштраҡ клубҡа йөрөйәсәген, ...иттән ғенә Мәҙинәнең таяҡ болғап хор алдында баҫып Гороуын кинэнеп күҙәтерен күҙ алдына килтергәс, ...ы ...ығын бирҙе. Һүрәтте һәйбәт төшөрә тиһәләр ҙә ...ліенден ул яҡтан эллә ни барымы юҡ кеүек: аттары ғына ...ап килеп сыға. У-у-у! Үҙ ғүмерендә ат һарайына һыш.щдырып яһалған ҡарауылсы йортонда әҙме ат һүрәтен ...ыны ул! Бик шәп сыҡҡандарын стенаға ҡаҙаҡлап ҡуя. Чт.шенден был үҙенсәлекле күргәҙмәһендә һарайғырҙың ...ына иисэ һьшы бар.

Л гтарҙы тәрбиәләп ингәс, Хөсәйен ҡулдарын яҡшылап ...шлап йыуҙы һәм ҡороҡҡансы һөрттө — һүрәт төшөрөр ...ынан ул гел шулай итә. Шунан гәзиттең редакторы, ...озға яңыраҡ килгән баш зоотехник Рәсүл Юлдашев ....сргән ватманды өҫтәлгә йәйеп һалды. Рәсүл был ...анға өс һүрәт яһарға ҡушҡайны, Хөсәйен ул килтергән ...әфтәрҙе асып яҙыуҙарҙы уҡырға кереште. Беренсе һүрәт: ..., локин башы һыйырҙыҡы, осло мөгөҙҙәре бысылған, ...ы әһендә йәмһеҙ бер әҙәм, мылтығын шул айыуға тоҫҡаған. Иксмсс һүрәт: тауыҡ башын элмәккә тыҡҡан, ҡанаттары ...и еитең осон түшәмдәге сөйгә бәйләп маташа, иҙәндә Пш пыуан бер ханым йомортҡа тауы өҫтөндә был тамашаға ...штырап ҡарап ултыра. Өсөнсө һүрәт: трактор, машина, аттар ...ын бөйөрҙәренә таянып көлөп тора, ә һыйыр һабанға ...м, ср һөрөп китеп бара. Хөсәйен, буяу ҡәләмдәрен Һ ...ибәтләп ослап алды ла, телен арҡыры тешләп, һүрәт яһау ...а готондо...

Башы әйләнеп, күҙ алдары ҡараңғыланып торһа ла Ғәлимә эшенә китте. Фермала алмаштырыусы булһа ла Ғәлимә ялға туктамай. Бының үҙенә күрэ сәбәптәре бар: бүтән һауһа, Ғәлимәнең һауымы асылда күпме икәис асыкланасаҡ. Ғәлимэ — район советы депутаты, бәлки, Геройҙы ла бирерҙәр, унын рәсеме район үҙәгендә «Дап таҡтаһы»нда. Ҡолаһаң, тауҙың бейегенән ҡола, тиһәләр ҙә, Ғәлимэнең йығылырға уйы юҡ. Бейектән ҡолауҙыц һыҙланыуы ла көслөрәктер ул, имгәнеүең дә бар. Юҡ. Ғәлимо тауға теше-тырнағы менән йәбешеп, тырмашып-тырнашып үрмәләне. Үҙенең асманға ашыу юлында эҙәм баштары аша ла атланы, ҡырын эштәрҙән дә сирҡанманы. Данға илткән юлында Ихсанбайҙың ҡапыл пәйҙә булыуына ла күҙ йомдо: теләһә ни эшләһен, тик Ғәлимәгә генэ теймәһен. Был ғәриптең һуңғы ваҡыттағы ҡылыктары ғына һарыуып ҡайната. Мәҙинәне алға сығарыу өсөн һыйырҙар һанып тигеҙләтте, быҙауға эсергән һөттө айырым яҙыуҙы талап итә! Ихсанбайҙан ҡурҡмай Ғәлимә, ләкин ҡулында был ғәриптсц Ишмәмәт түгеллеген расларлыҡ дәлил юҡ. Ғәлимә якшы аңлай: ул берәүгә лә барып: «Уның менән йоҡлап ҡараным! Ҡатын-ҡыҙ үҙен бисә яһаған кешене бер ҡасан да башҡалар менән бутай алмай!» тип һөрэн һалмай бит инде. Шуға күро лә, бөтә күңеле менән эштең ниҙә икәнсн һизһә лә, серҙе сисер әмэле юҡ. Әгәр ҙә Ғәлимонец ҡулында бсрәй төрло дәлил булһа, балаһының атаһы тип ҡарап тормаҫ, бөгөн, ошо минутта бар донъяға фаш итер ине! Әлегә ул тешен ҡыҫа, түҙә... Ауырынан ҡотолғас өҫтөнән тауҙай йөк төшкәндәй еңеләйеп ҡалғайны ла, ауыр уйҙары тынғы бирмәй. Ғәрип хисапсыны юлынан алып ырғытырға бөгөн көсө етмәй. Ә теге Тирәкле һандуғасын... Мәҙинәне үҙенән алға сығармаҫ өсөн ул барыһын да эшләйәсәк! Бының өсөн уны өс-дүрт һөтлө һыйырынан яҙҙырыу етә. Ундай ғына эштәр үттеме Ғәлимә ҡулынан! Хоҙай уға маңлай бәхете бирмәгән икән — Ғәлимә уны яулап алырға тейеш. Оялмаған бойормағанды ашаған, тиһәләр ҙә, тормош шуның киреһен раҫлай: кем оялмай — шул ашай, шул данға үрләй. Ә кем ояла — шул үҙенә тейеште лә ала алмай. Бушҡа ғына, әрле әрләнеп торғансы, әрһеҙ эшен бөтөргән, тимәйҙәрҙер әле. Ғәлимо шуға ла фермаға иртәрәк килде. Мәҙинә район үҙәгенәп килгәнсе ул ҡылыкты ҡылып өлгөрөргә тейеш!

Ихсанбай, йоҡоһоҙ үткәргән төн ялҡытканғамы, иртән и|нүк гора. Иренең иртә тороуы Раузаға ҡыйынлыҡ ырмай, кәнсә ҡараған сағынан ғәҙәтенэ ингәнгәме, ул да иртәсел. Һөйләшмәй генә иртәнгэ сәйҙе шуптырлатып эскәс, Им.шпай фермаға йүнәлә, Рауза Шәңгәрәйҙе сәйгә индерә. Ш нсегә унын менән ултырып сәй эсә. Сәй урынын йыйғас, ри ыҡ тотторол, Шәңгәрәйҙе юхалап-йомалап, Хөсәйенгә >, о үҙе магазинына юллана.

I Ихсанбайҙың аҙабы ла, ғазабы ла — Мәҙинә. Уны Пими.шан сығара, хәтеренән юйҙыра торған һис бер ниндәй юҡ донъяла. Күҙен йомһа ла, асһа ла — ул, Мәҙинә. I ı ı Ihы саҡ улар Гөлбаныу менән бер һынға укмаша. Мәҙинә асаһенә шулай ныҡ оҡшамаған булһа... Юҡ шул. Бер үк төҫ, бер үк һын, бер үк булмыш. Эсендә бөгәрләнеп яткан нәфсе-ужарын баҫыр өсөн Ихсанбай Ғәлимәне лә баҫып ҡараны. И Ғк, Рауза ни, ул ни... Ит күрмәгәнгә һурпа ла аш, тигәндәй, Ғәлимә килешкән Саяфҡа килешһен. Әле бына Мәҙинәнең район үргенә китеүе булды, Ихсанбайҙың күңел донъяһы шпелеп төштө, ҡотһоҙланды. Ә Мәҙинә бар сағында ул эшкә шрамға барғандай йыйына. Их күңел! Ниңә ул тән ı риплеге менән әҙерәк исәпләшмәй ҙә, ниңә ул яҙғанына ı риза булып йәшәүен белмәй икән?! Маҡсаттарың үҙендән зурыраҡ булһа ғына кешемен тигән кеше булып ıрһең, ти торғайны әсәһе. Ихсанбайҙың маҡсаты буй іекме? Мәҙинэне үҙенеке итеү өсөн көрәшеп ғәриплек, оһөҙлөк, илһеҙлек алды Ихсанбай. Ниңә эле Гөлбаныу йэ нмо тип яһаған һәр аҙымы, ынтылышы Ихсанбай өсөн ппо казаға әүерелә? Шуны белә тороп, һис киҫәмәй, ...млй, бер ниндәй ҙә еңеү вәғәҙә итмәгән алышҡа яңынан и ппна...

Гышка сыҡкас, Ихсанбай һағая төштө. Ел олоуын иҫкә Ihан, ииндэйҙер сәйер тынлыҡ хөкөм һөргәндәй. Мәмерйә тормошо ғәҙәтенә индергән сослоҡ менән ул тынлыкҡа ҡолаҡ ıы

Күкбүре!

Гауыш-тын юҡ. Ихсанбай, болдорҙан төшөп, эттең ııа якын килде. Юҡ! Киткән кэнтәй! Сылбыры менән ı нмган!

— Ҡәбәхәт! — Ихсанбай, туйтанлап, өйөнә ығышты. Эт ҡайҙа?!

— Уны мин ҡайҙан беләйем? — Бот һоноп сәй эсси ултырған Рауза иренә аҡайтҡансы ҡараны. — Кемдең бәйр торғоһо киһен? Ҡасҡандыр.

— Ҡайҙа?! Ҡайҙа ҡасҡан?!

— Атаҡ-атаҡ... Эт буһын да ҡайҙа киткәнен һиңә әйтеп китһен.

— Ҫиңмай! — Ихсанбай, ишекте йән асыуы менән ябып, йәнә тышҡа атлыҡты. Аптырағас, Шәңгәрәй йоҡлап йөрөгәп мунса ишеген төрттө — асылманы. Алйот, ишеккә эстон тәртешкә һалып терәтеп йоҡлай. Иҫәр булһа ла, үҙен һаҡлау сараһын ул да белә. Күкбүре Ихсанбай өсөн табыш ине! Ишек алдында ул булғас, күңеле тынсығайны! Ниндәй хәйерһеҙ таң булды был?!

Арыған-алйыған Ихсанбай, бөтә донъяны эсенән һүгә-тиргәй фермаға килеп етте. Башта ҡураға инде — Мәҙино урыны буш. Унда икенсе суҡанлай. Һыйырҙары бынан һауҙырмай, күрәһең, һауала тоҙло-боросло һүгенеү яңғырағы эленеп тора. Ихсанбай үҙе был һүҙҙәрҙе йыш ҡулланһа ла, ҡатын-ҡыҙ шуларҙы ысҡындырһа, сығырынан сыға. Ихсанбайҙың был хаяһыҙ бисәнең яңағына ҡундырғыһы килде, шуға күрә ул Мәҙинә һыйырҙары эргәһенән йоһотсрәк үтеп китеү әмәлен күрҙе. Бына уның күҙҙәре һыйыр һауып ултырған Ғәлимә ҡарашы менән осрашты. Ҡанһырап ҡайтыи йығылған тиҙәр ине — сыҡҡан. Хәйер, кәнтәйгә...

— Төҙәлдеңме, Ғәлимә һылыу? һаумы?

— һау булмаһам, һау итәңме?

— Нигә улай тупаҫ?

— Үҙеңә күрә!..

— Соланда тотоп баҫҡанға үпкәләнең әллә?

— Юғал күҙемдән, сатан иблис! — Ғәлимәнең тауышы ыҫылдап, бик уҫал сыҡты. Ихсанбайҙың арҡа буйы семерҙәне: Ғәлимә үҙ башына ҡотора! Ләкин Ихсанбай ҙа элекке Ихсанбай түгел, таяҡты артыҡ бөгөп ташлап һындырыуҙан ҡурҡа... Ул, тешен ҡыҫып, ары, «Ҡыҙыл мөйөш»кә табан, сығыр яҡка атланы.

«Ҡыҙыл мөйөш», иртәнге һауын ваҡыты булғанғамы, буш ине. Мейестә генә, берсә һыҙғырып, берсә тел шартлатып аптырап, ут ләүкей. Ихсанбай өҫтәле өҫтөндә, инеүсене бар

гә белмәй, сысҡан битен йыуа. Тапҡан тәрәт урыны! I шм!» - сысҡан юҡ булды. Ихсанбай, ауыр тын алып, \ ғтыр ысына ялпашты. Ҡапыл уның күҙе стена гәзитенә төштө. Түбәнгә генә эленгән. һүрәттәре ирмәк... Ҡайҙа, а... Бынығы ни? һыйырмы, айыумы? Башы — һыйыр, •he - - айыу түгелме? Ихсанбай айыу-һыйыр ауыҙынан ыгирып, түңәрәк эсенә алынған һүҙҙәрҙе уҡый башланы:

Тмрокле айыуҙарының
()сло икән мөгөҙө!
Ишмөхәмәт атып йыҡҡан,
Курҡмайынса бер үҙе...

Пшкәндәр ишәк сумарын! Ихсанбайҙың алйыған ҡарашы ......сс һүрәткә йүгерҙе. Аҫылынырға торған тауыҡ бигерәк **Ирмлк** килеп сыҡҡан, ә йомортҡа өҫтөндә аунап ятҡан йыуан ш торғаны Рауза! Тауыҡ суҡышынан сыҡҡан һүҙҙәр **Гүцлроккә** алынған:

Кулдэккә лә — кукәй,
Кәнфиткә лә — күкәй.
Түҙер хәлдәрем калманы —
Аҫылынам, түтпәй!

Ихсанбай, үҙенә ниндәйҙер таяныс, ярҙам эҙләгәндәй, ишши һүрәткә күҙ һалды, секерәйеп, яҙыуына ҡараны:

Игпемдән дә файҙа,
Һөтөмдән дә файҙа.
Егәләр ҙә, һауалар ҙа —
Колхоз аттары кайҙа?

\;ф;н|! Ихсанбай ян-яғына ҡараны. Бәлки, быны бер кем кып ı олгөрмәгәндер? Кисә был стена буш ине!

Ҡобәхәттәр! — Ихсанбай гәзитте умырып алып цшаиы ла утка ташланы. — һыйыр аткан, имеш! Ә һин га иҫбат ит! Маңҡалар! Хөсәйен, хөрәсән, әсәһен һыиай рисуай иткән. — Ул енләнеп тышҡа сыҡты. Кем ....был? Хатта Рауза ла аңғарманы бит. Айыу ите тип, м ауыҙ итмәне. Тимәк, был уның эше. Шәңгәрәйҙеке! гән ул һыйырҙың урамға ингәнен, атыу тауышын да

ишеткән, йөрөй башлағас, ғәләмгә айыу күрҙем тим шапырынған!

— Алйот! Ҡәбәхәт! Күҙенцэн ут күрһәтәм икән, инәһеҙ нәмә! — Күҙенә ҡан һауған Ихсанбай, асыу-ярһыу менән, бурандан да былай туҙынып, ауылға атлыҡты...

Мәҙинә түңәрәк эсендә, малайҙар, ҡыҙҙар уны уратым алғандар ҙа туп ырғыталар. Мәҙинә улай янтая, былай янтая, ырғый, эйелә-бөгөлә, әммә туп тейеүҙән үҙен нисек тә һаҡлап ҡала. Уйын ҡыҙғандан-ҡыҙа, Мәҙинәне түңәрәктән бәреп сығара алмаған малайҙар ярһый, сәмләнә, устарына төкөрөп, Мәҙинәгә яҫҡанған йөн тупҡа хикмәтле һүҙҙәр әйтеп бәреп та ҡарайҙар.

— Ҡана әле, үҙем!

— Эшкинмәгән, мин...

— Хәҙер күрһәтәм мин һеҙгә, еүеш танауҙар, нисек...

Бәрәләр — теймәй. Мәҙинә ҡоралай кеүек еңел, тейендэй йылғыр. Ул янтайған еренән ҡапыл һиҫкәнде. Атаҡ, уны лаһаң оло кешеләр уратып алған! Телдәре ниңәлер эттекелэй һәлберәп тора. Һаҡаллы профессор, төрмә һаҡсыһы, Ихсанбай, Ишмәмәт, Ғәлимә, Саяф, тағы әллә кемдәр... Туп, ана, Мәҙинәнең башы аша осто. Аһ! Был бит туп түгел, ә... Мәҙинәнең йөрәге! Түңәрәктә торған бондәләр әллә ниндәй ҡоторған ауаздар сығара, серәшеп шул йөрәкте Мәҙинәнең башы аша бер-береһенә елсәй. «Йөрәк! Йөрәгем!» — Мәҙино үрелә, ләкин буйы етмәй. Йөрәкте тотоп алған кешегә барып йәбешеүе була, теге уны икенсе берәүгә ырғыта. Түңәрәктәгеләр бер-береһе менән сәйнәшәләр, тештәрен шаҡылдаталар, имәнес ырылдайҙар, сыйнайҙар... Ә йөрәк, осоп йөрөһә лә, тере! Ул һулҡ-һулҡ тибә, ялбара, ҡурсыу һорай! «Йөрәгем! Йөрәгемде бирегеҙ үҙемә!» — Мәҙино ҡысҡыра, ләкин тауышы үҙенән ары китмәй. Бына ул манма тир булды, эскеһе килә...

— һыу!.. һыу!

Эргәһендәге түңәрәк сайҡала, инде хәҙер теге заттар йөрәккә талашып бер-береһен таламайҙар, ҡара томан булып Мәҙинәне уратып алғандар ҙа ҡыҫалар, тын алыр әмәл юҡ... Ниһайәт, ул ҡулына килеп эләккән йөрәген усына йомдо.

| йһылай бәләкәй икән ул йөрәк! Ҡулдан-ҡулға йөрөп осҡанда ул бик ҙур кеүек ине.

Бына кемдер уның иренәнә һыу тамыҙа. Рәхәт! Әле генә Цмрткыс кеүек ырылдашалар, бөғөрҙә теләләр ине. ииаҫһың. Ә бәлки, улар, уны тирәләп торған шәүләләр, ı затынан түгелдер? Мәҙинә хәҡиҡәтте асыҡларға тырыша: кемдәр былар? Күҙ алдында йәнә бала саҡтағы ррок» уйыны, уға уйнап ҡына туп ырғытыусы бала-сағa ıә була. Аһ, кешеләр, сабый ғыналар. Йөҙҙәре болотһоҙ, иры себешләп бөткән, баштары төрлө-төрлө болон үләрен хәтерләтә. Мәҙинә шуларҙы ғына ярата. Улар |рпһында уның Биктимере, Йәнтимере, йәнә... Дауыты Һиксрондәй. Дауыт?! Дауыт!.. Мәҙинәнең күкрәгеп үткер •уыртыу телде. Әсетеп әрней йөрәк, түҙерлек әмәл юҡ. •н! Уға, Мәҙинәгә, был һыҙланыу таныш, яҡын. Был әрнеү уның йөрәгендә, булмышында...

Балам!

Уны тирәләп алған шәүләләр йәнә ҡыймылданы, хатта кемдер уға өндәшә кеүек:

Мәҙинә! Мине таныйһыңмы, Мәҙинә?!

Юҡ...

Камалетдинов мин...

Мин... ҡайҙа?

Больницала... Таулыла.

Минең... балам... — Мәҙинә күҙҙәренән йәш ырылғанын, тупылдап тамғанын тойҙо. — Минең йөрәккәйем...

Тыныслан, тыныслан... — Шәүлә уға эйелде. — Укол! \ы Гюрсолорға ярамай. Йоҡлаһын. Түше шешә башлаған. Һауығыҙ! Сыҡмаһа, бала килтерегеҙ!

Пшсткән һүҙҙәрҙән бер ни ҙә аңламаған Мәҙинә, |умрайып, талсығып йоҡоға талды...

Мәҙинә иҫенә килгәс, Камалетдинов ҡайтып түшәгенә ш ıы. Һаҡал баҫҡан, ҡарайып ябыҡҡан, күҙҙәре эскә баткан Ирспя хатта Мәликә, теле бик ҡысыһа ла, һүҙ әйтә алманы. Мәҙинәне бөтә районды аяҡҡа баҫтырып эҙләгәндәрендә Мллнкә лә ул ҡатын яҡлы ине. Үҙе йәш, үҙе шундай һылыу,

ә башына төшкәндәре... Мәликә үҙен уның урынына ҡуйҙы Хашимды бикләгән кешеләрҙе ҡарғаны, Хоҙайҙан Мәҙинәгә балаһы хаҡына ғүмер һораны. Ә бына табылғайны... Шундай ҙур етәксе башы менән... өс көн буйы дауаханала дежурҙа тор әле! «Нимә, Камалетдинов, әллә һин хәҙер шәфҡәт туташымы?» — тиергә ине, юҡ, телен тешләне.

Мәликә, Әйүп йоҡлаһын тип, ҡыҙын тышҡа алып сыҡты, ҡайҙа барырға белмәй аптырап тора бирҙе лә Талии Лоҡмановичтарға табан атланы. Эйе, эйе... балалары уйнар, • улар хәбәрсән Раиса Максимовна менән эстәрен бушатҡансы һөйләшерҙәр...

Баш мунса ташылай ҡыҙған, ҡолаҡтары шаулай, күҙҙо йоҡо заты юҡ. Камалетдинов, түшәгендә салҡан ятҡан килеш, һуңғы өс көндә булып үткән ваҡиғаларҙы хәтеренән үткәрҙе. Ҡарсыҡ дөрөҫ әйткән булып сыҡты: Мәҙинәне улар ереклеккә яҡын кәбән төбөнән таптылар. Һайыҫҡандар, ысынлап та, шул тирәлә шырҡылдаша ине. Саҡ ҡына ҡалҡыуыраҡ, ҡары осоп, түбәһе ҡарая биреп торған түбәләсто башта улар эт мәйетенә тап булды. Убаны ҡосаҡлаған кеүек дүрт аяғын тарбайтып һуҙылған йән эйәһе, ҡарашында еңеү тантанаһы шәүләһе ҡалдырып, күҙҙәрен ғорешкә тскогән.

— Эт!

— Бүре!

— Нишләп бүре булһын, сыҡйырлы бит!

— Һин дә үҙенде һунарсымын тиһеңме? Томшоғона, ҡолаҡтарына ҡара!

— Ҡойроҡсо...

— Бына әкәмәт...

Һунарсылар тирә-яҡты соҡоштора, ҡаҙыштыра башланы. Кәбән төбөнән арыраҡ, ереккә яҡын ерҙә, йәнә бер бүрс емтегенә тап булдылар. Абайлап ҡараһалар, кәбәндән алып ул ауған ергәсә ҡан таптары ҡалған...

— Былар бер-береһенең... боғаҙын сәйнәгән...

— Бүре лә берен-бере сәйнәр икән!..

Камалетдинов бер ҡолағы менән һунарсыларҙы тыңлаһа ла уйы менән Кәкере ауыл ҡарсығына әйләнеп ҡайтты. Күҙҙәрен йомдо. Күрәҙәсене күҙ алдына килтерерго

тырыш гы. Шулай уҡ ҡарсыҡ яңылыштымы? Әллә бүреләр...

ыл Камалетдиновтың зиһене яҡтырҙы: Мәҙинә ошонда!

н гөбө юлдан әллә ни алыҫ түгел! Аҙашып йәһәннәмгә П ı шмаҫ осөн, Мәҙинә шунда йэшеренгән!

Иплэп кенә... бүрене ситкә алығыҙ. Көрәк, һәнәктәрҙе шнмаҫка. Ҡул менән генә... Ул ошонда булырға тейеш!

Бүре ҡанына мансылған Мәҙинә күренгәс, Камалетдинов гик иҫтон яҙманы. Һунарсылар һауаға атты. Тиҙҙән Тирәкле Иешгноре күренде. Камалетдиновтың иң ғәзиз йөктө үҙ гүмс|)спдо беренсе тапҡыр күтәреуҙән йөрәге дарҫлап типте. |нк ул тере генә булһын! Тере булһа, Мәҙинәне һауыҡтырыу п ул бөтәһен дә эшләйәсәк! Йәненән дә артыҡ күргән и.| йөгөн бала кеүек күкрәгенә ҡыҫып, Камалетдинов пшаға инеп ултырҙы. Тирәклеләр Мәҙинә өҫтөндә ятҡан бүре емтеген шундуҡ танының:

Ихсанбай кәнтәйе. Күкбүре. — Улар, саналарына ике бүре үлеген тейәп, Тирәкле яғына юлланды.

Күҙгә һаман йоҡо инмәй. Камалетдиновтың иҫенән ı ı |\ана койкаһында иҫһеҙ ятҡан Мәҙинә сыҡмай. Ҡаштары ı у ı ас ҡанатылай ҡыйылған, керпектәре ҡуйы күләгә яһап ı |||му битенә һибелгән, сәс бөҙрәләре ҡулса-ҡулса булып гир ıэı он маңлайына йәбешкән, ике ауыр толомо, йылан гирһеләй йылҡылдап, шыма нәфис муйынына, алҡынып, ннмһн матурлыҡ менән тонйорап ятҡан түштәренә һылашҡан. Ошо илаһи йөҙгә нәзәкәтлек, нәфислек биргән танауы, ювелир оҫталығы менән яһалғандай ҡолаҡтары...

алетдиновтың уның янында яңғыҙ ҙа ултырып ҡалған Иикшры булды, мәгәр ошо матурлыҡ аллаһы булырҙай һынға.)с-бауыры өҙөлөп, йәне-тәне тартышыр сиктә тамһынһа ла, йоғонманы. Бөйөк ине Мәҙинә иҫһеҙ килеш тә. И шһи ине. Хатта бер мәл Әйүптең башынан: «Был илаһи матурлыҡ эйәһен Әптелэхәт нисек ҡатын итергә... баҙнат икон?!» — тигән уй йүгерҙе, йоҙроҡтары уҡмашты.

\ның ҡарауы Камалетдинов хәҙер Мәҙинәнең һәр йөҙ иына тиклем белә. Ул уның ебәктәй нәфис, йомшаҡ ın, хәҙер һыйыр һауыуҙан, ауыр эштән ҡыҙара төшкән ıаҡтарын йәлләне, йөҙөнә ҡуңырлыҡ өҫтәгән елдәрҙе рı ə лә, маҡтарға ла белмәне. Мәҙинәнең ҡара сәстәренең гктыһында ҡыҙыл нур сәсеүенә, ә тәненең ҡараңғыла фо фор (|)игура кеүек баҙлап-яҡтырып тороуына ғәжәпләнде.

Ошо илаһи һын ҡараған һайын Камалетдиновтан берсв алыҫлашты, ә берсә магнит кеүек үҙенә тартты. Үҙ-үҙе менвН көрәшеп-серәшеп, Камалетдинов Мәҙинә янында йоҡоһоҙ төндәр үткәрҙе...

Йоҡоһоҙ төндәр үткәрһә лә, ваҡыты-ваҡыты менән ул ойоп киткәндәй ҙә булды. Ата-әсәһенең ҡаны тамған ергә ҡайтып үс алыу тойғоһо менән һуғарылған Әйүп балалар йортонан гел ҡасты, гел ошонда атлыҡты. Ҡасып йөреүс арҡаһында колонияға ла элэкте, урам шпаналары менән до аралашты. Мәҙинә эргәһендә ултырған төндәр шул ваҡиғаларҙы хәтерендә яңынан терғеҙҙе. Балалар йортонаи беренсе тапҡыр ҡасҡас, колонияға килеп юлыҡты. Ундағы тәүге һынау, тәүге сирҡаныс... Малайҙар уның аяҡ бармаҡтары араһына гәзит ҡыҫтырып, ут төрттөләр, ә Әйүм, аяҡтарын болғарға, ләкин ҡысҡырмаҫҡа тейеш. Әйүп ауыртыуҙан ирендәрен сәйнәп ҡанатып бөттө, э гэзит һамам янып бөтмәй ҙә бөтмәй... Мәҙинәне осратҡас, ул ОШО язаларҙы онотҡандай булды, сөнки был әрнеү хәҙер уның йөрәгенә күсте...

Колониянан ҡасҡас урам шпаналары менән йөрөгәндә ло еңел булманы. Тегелгән йөй буйҙарын аҡ уҡа кеүек һырыи алған бетле кейемдәрҙе рельсҡа һалып, таш менән туҡмайҙар, унан, йән эйэләре осоп бөтһән тип, күлдәк-ыштандарын елгә ҡаршы тотоп, товарняктарҙың өҫтөнә баҫалар ҙа, ҙур тиҙлекто елгән поезд өҫтөндә баралар. Поезд ело, күмер тейәгон вагондарҙан осҡан саң һырыған ҡара шайтандар, бетгоп ҡотолоу хаҡына ғүмерҙәрен ҡурҡыныс аҫтына ҡуйып, билдәһеҙ йүнәлештә сапкан вагон өҫтэндә аяғөҫтө килә... 9 Камалетдиновтың хәҙерге хәле? Ул шунан шәберәкме? Цирк аты кеүек бер урында тапанған райондың етәксеһе булыуымы бәхет уға? Туктауһыҙ алышынып торған хөкүмәт етәкселәре, миллионлаған гонаһһыҙ кеше һөйәктәре өҫтөндә ҡалкыи сыҡкан яңы ҡоролошмо ҡыуаныс? Үҙҙәре икмэк үҫтереп, ашлыҡты кисеп йөрөп ас йөрөгән крәҫтиәндәрҙе, һайрар өсөи тыуып та, ғүмерен тиҙәк араһында үткэрергә мәжбүр бынау һылыуҙы күреү шатлыҡмы уға? Әйүп һаман да яланғас тәнеп елгә ҡаршы ҡуйып, товарняк өҫтөндә елгәндәй хис итә үҙен. Елмәҫ ине — тәнен бет ашай, вагон өҫтөндэ лэ ҡурҡыныс — секундтың һәр өлөшөндә ҡолап, йәнтәслимгә тәгәрәп ятып ҡалыу ҡурҡынысы һағалай.

...Иң ҡыйыны — күпме йөрөһә лэ, ҡасһа ла Әйүп кире ба шлар йортона әйләнеп ҡайта торған булды. Башта, корсаңғышан, беттән арындырғансы, изоляторға ябалар. Бер-бсреһенә ике тамсы һыу кеүек оҡшаған көндәр теҙмәһе һуҙыла. һин — тоткон. Ишектәге тишекте теләгән ваҡытта асалар һәм һине күҙәтәләр. Үҙең тоткон, үҙең сәп кеүек яланғас. Әйүптең Квҙерге хэлеме шунан яҡшыраҡ? Өҫтө бөтөн, тамағы туҡ, ә ишләгән урыны — хэс тә изолятор: бер кем дә борсомай, ләкин һинең тормошоң, һәр аҙымың бөтә ғәләмгә асыҡ. Әйүптең яратырға ла, яратам тиергә лә хоҡуғы юк. Тотконмо әсир, әллә әсирҙәрҙе ҡарауыллаусымы тоткон — бар, эйтеп ҡара...

ғаилә ҡараған, бушамаған кеше рәүешле йәшәү, бер Яғынан, Раузаға оҡшап ҡалды. Сәғәттәр буйы урам \|чаһында тороп ләкәп һатырға ла, сүбәккә ҡалдырғансы Кеше сәйнәргә лә ваҡыты юк. Яңғыҙ улының өйләнмәй, курпы-үрсем ебәрмәй ҡаҡ сауыл кеүек йәшәүенә лә бик иҫе Китеп бармай. Күп ғүмере магазинда үтэ, килгән бер, ингән бер кеше хәбәрен һөйләй. Кемдең нимә ашаған-эскәненән и ың, кемдең ниндәй күлдәк-ыштан кейгәненэ тиклем белә Рауза. Ана, әле Ғәлимә килеп инде кэпрэткә. Итәгенән эске |сүлдәге ике аялай күренеп тора. Берәү селтәрле эскейем Кейгәс ни... Бының ише эске күлдәкте Раузаның һатҡаны юк Цлла! Күрше ауыл магазиндарында булыуы ла икеле — бөтәһе лә тауарҙы бер базанан ала.

- Ғәлимә, эллә Мәгәнит барып ҡайттыңмы?

— Юҡсы! Ә нигә?

- Эске күлдәгең ят... Минең мындайҙы һатҡаным юк.

һатмаһаң, һинекенән башҡа кәпрэт бөткәнме? — галимә һүҙҙе икенсегә бороп ебәрҙе: — Анау ҡыҙға йәтеште күлдәк кәрәк ине.

Аһ-аһ! Нигә аны сразы әйтмәй тораң? Мына, күк соскәле генә күлдәк! Бы ни килешер ул ҡыҙыңа...

— Ни хаҡ?

Күкэйгә ул. Хаҡы — алтмыш күкәй.

Ғүмерендә тауыҡ аҫырамаған, ферма эшенэн бушамаған I ■ шмәнең битенә тимгел-тимгел ҡыҙыл бәреп сыҡты:

— Күкәйем булһа, үҙем ашар инем! Аҡсаға әйбср алырға хаҡым юҡмы әллә?

— Сэй-шәкәр — пажалыста!

— Миңә күлдәк кәрәк!

— Күкәйенде һал да, ал!

— Күкәй, күкәй ти торғас, гәзиткә лә төшкәнһең бит оле, түтәй!

— Ниндәй гәзиткә?! Гәзиткә мин ништәп төшәйем?! Кеше йәрен урҙап һөйгән бәндә лә, ирһеҙ бала тапкан бисо лә түгелмен!

— Тәүбә әстәғәфирулла, Рауза апай, телең! Алайға китһо, яңғыҙ бисә булһам да, кәртәмә килеп ингән кеше һыйырын атып ашап ятмайым!

— У ниндәй һыйыр?

— һеҙ айыу майы һөрткән һыйыр! Мәҙинәнең Билдәшс!

— Ах кәнтәй! һин нимә һөйҙәйһең?! Айыу итсн Ишмәмәт һатып алып ашаны! Ғәрип франтауиктан көлэң!

— Франтауик! Ағас франтауик! Якшы булһағыҙ, икәүлоп «Кармак»ка төшөп ятмаҫ инегеҙ! Якшы кешенэн балаһы карикатура яһамай! Ыстырам!

— Ауыҙынды иптәп ас, ҡыҙыкай! Ауырынды убырнайға таштап йөрөгәс тә, әҙәм белмэй ята тиһеңме?! Нисек алдынғы булыуынды ла беләбеҙ! Үгеҙ аҫтына ятаһың ғына ҡалды былай ҙа!

— И һәм ятырмын да! Хэлсмдән килә! — Ғолимә ишсктс лә япмай сығып китте.

Раузаның күңеле болоҡһоно, үкереп илағыһы килдс. «Тукта, бы ниндәй хәбәр булды әле? У ниндәй гәзит?» - Рауза, магазинын шарт ябып, өйөнә ашыкты.

— У ниндәй гәзит һөйҙәй халыҡ? — Рауза ярһып өйөио килеп инде. Ҡапка, ишектәр асыҡ булғас, Ишмәмопг өйҙәлер тип уйлағайны. Юҡ. Ҡайҙалыр олаҡкан! Рауза н ояһы артындағы утын өйөмөнә күҙ йүгертте: баш ятасы'.'! Эйе, эйе... Күкбүре бер нәмәне талай ине шул. һыйыр башы! Мөгөҙҙәре осло булғанға күрә бысылған... Күкбүро ҡайҙандыр һөйрәп килтергән! Эт бит. Ә хәҙер теге ни... ак эттең бәләһе ҡара эткә тигәндәй... Эйе, эйе... Мәҙипо меҫкендең һыйыры был. Был кыутомшоҡ Күкбүре, **йәнв** йәһәннәмгә олаҡкыры, Ишмәмәтте итэки ғәйепте итэ бит! Ярһыған Раузаның ҡолағына үкергән, аҡырған тауыш

ш ы Бындай тауышты Рауза бала сағында урыҫ ына ышакумдарына барғанда ишеткәйне. Баҡһаң, суска ш ар икән. Ҡото алынып ҡайтып, аҙаҡ өләсәһе ҡот орон орм итеп алғайны үҙен. Атаҡ! Тауыш кәртәнән I. муисанан килә! Шәңгәрәй, ипһеҙ, бешеп йә янып ята ш булғас!

Шәңгәрэй! — Хэле бөтөп мунса ишеген асып ебәргэн *урре* күреп өлгөргән имәнес күренештән ултыра

Юҡ! Юҡ! Юҡ! Эй, кешеләр! Ярҙамға! Ярҙамға! — и мүгсрер ине, аяҡтары тотмай, хәле бөттө, күҙ алдары ни.ианды һәм... Сибәғәттең үлемен ишеткәндәге кеүек н яҙы.

Касимдарҙың ҡолонон күрергә барған Хөсәйендең енда бөгөн байрам. Уға бынау буран нимә? Пүстэк. Ә ш ысынлап та, шәп: ҡолаҡтар шәм кеүек, муйын оҙон, ылмалы, танау тишектәре иркен, күҙҙәре осҡор, гарын текә сәнсеп тора, бәкәлдәре нәҙек, түше ғэйрәтле, һары кына. һарайғыр нәҫеле! Әсәһе артынан юртканын үрҙс. Һарайғырҙың үҙгенәһе инде!

Лғай, ҡолондо көн дә килеп ҡарап торормон инде, йә ірбиәләй белмәҫһегеҙ... — тине күҙҙәренә йәш эркелгән и

Колон ғына ҡараған бар, ҡустым...

Был бит ябай ҡолон түгел, толпар нәҫеле!

Шулаймы икән...

Шулай, ағай, шулай!

Иә, ярар, хәйерлегә юрайыҡ...

И и-и генә... — Хөсәйендең ҡолондо һыйпаған һайын иош эркелде. Эркелһен. Илаһын. Мәҙинәнең ианын ишеткәс бер илағайны. Бына тағы...

Модшә балнистан ҡайткас килеп күрер әле...

Күрһен, күрһен!.. Мәҙинә ат ярата бит.

Һарайғыр нык яратты Мәҙинәне!

Яраткандыр, яраткандыр! Мәҙинәне һуң кем

Нь Һарайғыр бигерәк тэ яратты! Нык яратты!

Хөсәйен урам буйлап атланы. Шатлыҡтан, буран тип ҡарап тормай, тунының төймәләрен ысҡындырып ебәрҙе. Кыуанысын кем менәндер уртаҡлашҡыһы килде. Әсәһе! Ниңә эле ул бер ҙә әсәһенә инеп сыҡмай? Әсәһенән яҡын уның тағы кеме бар?

Ҡапҡа шар асыҡ, мунса яғында ишетер ҡолаҡҡа сәйер тауыштар сыға, буранмы шулай олой әллә...

«Ярҙамға!» Әсәһе тауышы?! Хөсәйен аяҡ аҫтында ятҡан һайғауҙы эләктерҙе. Моғайын, эсәһен Ишмәмәттең Күкбүреһе талай! Ана, эсәһе мунсанан сыҡты ла ауҙы. Хөсәйен мунса ишегенән генә эскә ҡараны: ғәрип Ишмәмәт... Шәңгәрәйҙе... Был ни хәл?! Күҙенә ҡан һауған Хөсәйен һайғау менән Ишмәмәттең яланғас һыртына еббәрҙе!

— Әҙәм аҡтығы! Эт арҙаны! Үлтерәм, ҡәбәхәт!

Тауышҡа Рауза күҙен асты, мәтәлэй торғас, тороп, Ишмәмәт менән Хөсәйендең араһына инде:

— Уй балам! Үлтерә күрмә! Шаҡшы өсөн яҡшы башынды эрәм итмә! Улым, мине уйҙа!..

Ишмәмәт сығып ҡасырға итте, әммә тубығына төшкән салбарына эләгеп йығылды.

— Убыр! Убыр эттәне! Әйттем бы минең атам түгел тип! Раужа эпшәй! Мине мында ҡалдырма! Әпшәй! — Шәңгәрәй, бала кеүек шарылдап илап, Раузаның аяҡ аҫтына йығылды. — Алып кит мине! Алып кит! Раужа әпшәй!

Шәңгәрәйҙең асырғанып илағанын күрғән Хөсәйен оторо ярһыны:

— Үлтерәм шаҡшыны, тотма, әсәй! Әҙәм түгел был, әүернә!

Ул арала сатан булһа ла ҡасыуға йылғыр Ишмәмәт өйөнә инеп бикләнде. Ярһыған, ҡыҙған, илашҡан өс кешенән торғап төркөм Раузаның элекке өйөнә атланы...

Мәҙинә иҫән! Мирхәйҙәров, тағы бер нисә колхозсы уның эргәһенә барып ҡайтҡандар. «Аяҡҡа баҫыу менән Тирэклегә ҡайтам, хор коллективы менән «Азамат»ҡа репетиция башлайым. Мин уны хәҙер үк ишетәм кеүек!» — тип эйтен

ган һыйырҙарын һорашҡан...» Ғәлимә дөрҫ-дөрҫ типкэн иге шуышына ҡолаҡ һалды. Әйҙә ул шул хоры менэн ипһып, ә Ғәлимэ эш кешеһе. Ул фермаға күпме көсөн ы! Геге саҡ ул ниңәлер ҡаушаны. Ә был юлы... Раузаның һы Ғолимәнең ырыҫынан көләп маташты. Ғәлимә үҙенең юға һәләтле икәнен күрһэтэсэк әле! Тик уға и ,ң ламаһындар! Саяф уның ҡулында, Саяфты ул бирәүгә ирмлйосәк!..

Рау !;шан ишеткән һүҙҙәрҙән һуң һаман тынyслана ц.ш Ғәлимэ ҡараңғынан тороп фермаға атлыҡты. |.....||ц.ша еткәс, артына боролоп ҡараны. Ҡураға үтте. инәнен таналары эргәһенән үткэндә арҡаһы сымырҙаны, генен тибеше йышайҙы. Кистән эҙерлэп ҡуйған еренән п.|к алды, бутҡаны биҙрәгә һалып, эргэһендә күнэк тырағанға тора башлаған Сыбарҡай менән Алаҡайҙың на куйҙы. Әхирэттәренең шапылдағанына Бөйрәкәй ı цаны, муйынын һуҙып, аҙыҡ менән бүлешеүҙәрен ιс. үҙенен ҡара уйҙарынан ярһыған Ғәлимэ һәнәк менән н могоҙ төбөнә сәнсте. һыйыр, үкереп, башын сайҡап, ıр лһына ауҙы...

Ьсренселек миндә һәм тик миндә буласаҡ! — Ғәлимә, ı гәрҙе сайҡатып түңкәрҙе лә, һауынсылар килэ башламаҫ куранан сығып тайҙы...

\\м|) уйҙар ҡамауында ҡалған Ихсанбай төнө буйы эсте. иашҡаса бында ҡалыуҙың кәрәге бөттө. Үҙе ғэйепле. ı ш ксуск аҫтан ҡырҡып, боҫоп йэшэй белмэне. Әммә... Мәҙинәһеҙ ғүмер ниңә кәрәк? Һылыу ҡатын, яҡшы ат ш ксмдәр генә башын һалмаған? Бөтэһе лә, бәлки, |.н.ч|дср? Тирэкленән башҡа ерҙә лә тормош бар. .....ш шойлә яҙмыштан кәмһетелгэн, ырыҫһыҙ бәндә лә ı I аулыла уның эсэһе бар. Эйе, эйе! Фәүзиә ҡарсыҡтың икәнен, Ишмәмәт өндәшмәһә лә, яҡшы төшөнә .....й! Фоүзиә аша ул Сәбиләһен, улын табыр. Сәбиләнең с юк. Ә бына балаһы... Мәҙинәне күрер кәрәк! Әгәр • II ибай менән китергә риза булмаһа? Ҡурҡытыр, янар!

Ихсанбай ҡулына ялтлап торған бысағын алды. Бына ул! Әгәр Мәҙинә Ихсанбайҙыҡы булырға риза булмаһа, бер кемдеке лә булмаясаҡ. Ихсанбай бында ғүмерен ҡурҡыныс аҫтына ҡуйып, Рауза ҡарсыҡ менән йәшәр өсөн ҡайтманы! Мәҙинәһеҙ ҙә китер ул, әлбиттә. Улын алыр ҙа китер. Ҡаҙаҡ далалары, һарт яҡтары... Ҡайҙа ла бер Ҡояш, бер Ай. Тыуғап ерендә кәрәк түгел икән, башҡа тупраҡ һыйындырыр. Был яғына ул, моғайын, тормоштан отолмаҫ. Отолоу ошонда тороп ҡалыр. Ә хәҙер китмәй булмай. Оло юлға сыҡмай ғына, Таулыға тура тартыр. Әсәй ҡарсығы барыбер һыйындырыр... Көн йылығас инде...

Ихсанбай биштэренә ризыҡ, кәрәкле әйберҙәреп тултырҙы, мылтығын алды. Хуш, Тирәкле! Байғош Ишмәмәт булғансы, Ихсанбай булып, үҙе булып ҡалғаны яҡшы! Ана, Күкбүре кире ҡайтһа ла ҡасты. Сынйырын һөйрәтеп тайған! Аяҡтарына бығау һалмаҫ борон, Ихсанбайға ла һыпыртҡан яҡшы...

Буран ойоҫҡоткан ауыл урамы буйлап атлаған Ихсанбайҙы берәү ҙә күрмәне. Ферма үренә табан кемдер йүгергән кеүек булды. Хәйер, хәҙер кем булһа ла барыбер түгелме уға? Ихсанбай, оло юлдан сығып, ҡарағусҡыл һыҙат булып ҡабарып яткан Күктау һырттарына атланы. Ана улар, Ихсанбайҙы ике йыл буйы үҙендә йәшереп **йәшәткән** тауҙар! Тормош ул бер Тирәклслә генәмс?! Йәп биргәнгә Хоҙай йүи дә бирә...

Раиса Максимовна Мәликәне ихлас ҡаршы алды:

— Үтегеҙ, һылыуҡайым, үтегеҙ! Килеп ҡайһылай яҡшы иттегеҙ!

Мәликә, ғәҙәттә, урыҫ кухняһынан килә торған эскелтем-сөскөлтөм еҫле аш бүлмәһенә үтте:

— Әйүп Ғәзизович ял итә... Бала ҡамасауламаһын тип...

— Ой! Әлбиттә! Әлбиттә! Ә Әйүп Ғәзизович... Ул нисек... Көндөҙ...

— Ах! Һорамағыҙ! — Балаһын сисендергән ыңғайға, барыһын бикләп, эсенә йыйып ултырған Мәликә

рәгендәге быуа йырылдымы ни! — Ул бит, Раиса Ммм имоима, кеше өсөн үлә лә китә! Тирәкле һауынсыһы ын ы шметкәнһегеҙҙер?

(>й,)йе! Талип һөйҙәгәйне, — башҡорттоң был яҡ ı ншендә тәтелдәне Раиса-Рәшиҙә ханым. — Теге... бүре ш ы гере ҡалған ҡыҙ! Талип көлә. Бүре ул ҡыҙҙы үтә һылыу булғанға оялышынан ашамағандыр, ти. Шунан ннм ı '

Шунан ни шул: эҙләп табыуы етмәгән, иҫенә килгәнсе ір әһенән **китмәнс**..

(), эйе! Ул бик шәп йырсы тиме? Мәскәүҙә лә иммы шул...

Уҡыған... Әйүп Ғәзизовичтың дуҫының ҡатыны бит ı...

Бәй, ул ҡатын кешеме ни?

Балаһы бар...

Ул тиклемен ишетмәгәйнем. — Раиса-Рәшиҙә ханым өҫтәлгә самауыр ултыртып булышҡан арала туҡтап, уйлана бирҙе. Ни тиһәң дә, күңеле һәйбәт икән Әйүп I ı ш ювичтың.

)йе, бөтә кеше лә ундай... аҙымға һәләтле түгел, ябын ı гә...

Түгел, түгел... Ә һинең Флоридаң нисек шәбәйгән! го невеста!

Ә һеҙҙең Әбүбәкерегеҙ ҡайҙа?

Оҫтә! О, ул! — Хужабикә ҡул һелтәне. — Шундай июм. Әллә нәмәләр яһап бөтә. Флориданы шунда рлйек! Уйнаһындар! Беҙҙең Әбүбәкергә лә балалар менән ір шшыу етмәй!

Флориданы күргәс, зәңгәр күҙле, матурлығы күҙгә ..... лнып торған малай ҡулын һуҙҙы:

Күрешәйек! Мам, э нигә ул ҡул бирмәй?

()яла ул, улым! Невеста бит ул. Ул шулай оялсанырак ір нмде...

Ө ул һөйләшә беләме?

Һөйләшә, әлбиттә, әҙерәк һиңә өйрәнһен дә...

Флорида уйынсыҡтарға әүрәне, малайҙың ҡаршыһына тырып алды. Мәликәнең: «Юҡ, улым, ул һөйләшә белмәй», ш ойтергә теле әйләнмәне.

Аҫҡа төшкәс, ике түрә бисәһе тәмләп-яйлап сәй эсерго ултырҙы. Икеһе лә үҙҙәренең бушамауына зарланды. Зар шулай ҙа күберәк Мәликә ауыҙынан сыҡты. Донъяһы етеш, иренән һөйөлөп, балаһына һөйөнөп йәшәгән Рәшиҙә ханым гел Талибын маҡтаны:

— Ой! Он у меня тоже бик положительный! Әле бер ғәрипте аласыҡҡа йәшәргә индерҙе. Ашата, эсерә... Ярай, ат ҡарап булһа ла тамаҡ яллыҡ эшләр, ти.

Ул арала утын күтәргән, бер яҡҡа бик ығышып атлаған, кеше ҡарамаҫлыҡ булып янған йөҙлө һаҡалтай килеп инде, утынын бушатҡас, хужабикәгә өндәште:

— Малдарға һыу эсерҙем, аттарҙың аҫтын алдым, бөгөн кис бараһы ерем бар, юғалтмаҫһығыҙ... — Ул сығып китте.

— Тауышы ниндәй имәнес! — Ҡурҡыуҙан ағарынған Мәликәлә сәй ҡайғыһы китте. — Ҡайҙан таптығыҙ быны?

— Ой, ул бер ҡайҙа сыҡмай! Зыяны юҡ уның! һуғыш бит... Ҡатыны көтмәгән...

— Мин ғәриптәрҙе күп күрҙем, лэкин...

— Пустяки... Унан хатта беҙҙең Әбүбәкер ҡурҡмай!

— Әбүбәкер? һеҙ уға... баланы күрһәтәгеҙме?

— Ә нигә? Әбүбәкер буласаҡ врач. Яҡшыһын, яманын күреп үҫһен. Был ғәрип уны шундай ярата, ул барҙа балаға бер ниндәй хәүеф янамай!

— Хәүеф?! Уға ниндәй хоүеф янаһын?!

— Да мало ли чғ... — Раиса Максимовна зәңгәр күҙҙәрен тәҙрәгә төбәп алды. — Дуҫындан дошманың күберәк, Мәликә аппағым...

— Уныһы шулай... Ләкин мин Флориданы белмәгән-күрмәгән кешегә ышанып ҡалдырмаҫ инем...

— Ах, красавица моя, һин эле йәш... Күп нәмәне аңлап бөтмәйһендер... һинең тағы балаң булырға мөмкин. Ә Лоҡман менән миңә... Әбүбәкер у нас единственный. Ә беҙгә йортта тоғро кеше кәрәк. Был ғәриптең барыр ере, батыр күле юҡ.

— Мин китэйем инде! — Мәликэнең ҡапыл кейено башлауы Раиса Максимовнала бер ниндэй ҙә шик уятманы. «Ой бедняжка!.. Ирен көнлэй бит был меҫкен ҡатын!» — тип артынан йәлләп оҙатып ҡалды.

Мәҙинә яҡшы кәйеф менән уянды. Тороп тәҙрә эргәһенә һәм толомдарын тағатып, сэс тарай башланы. Көн ... іэй матур! Шундай яҡты, ә һауа шундай зәңгәр! Их!.. Алыҫта Күктау һырттары күренә. Күктауҙың теге яғында — Тирәкле. Тәңребирҙе, Аҡйылға... Оло Бейек, Ҡаратау... ылғаның эргәһендә генә уларҙың өйө. Хәҙер унда бәлэкэс Дауы и.1 менән Маһинур инәһе иртәнге сәй эсәлер... Ә ıмә! Әлдә ул бар яндарында. Ул, моғайын, Дауытҡа кәзә исрәлер... Ә Мәҙинәнең һөтө короно инде. Психиатр Лидия Ииколаевна, башҡа һөт төшмәҫ, ҡурҡыуҙан һөт эшләй торған биҙҙәрҙең функцияһы үҙгәргән, тине. Йә, ярай... Иң мөһиме - ул тере. Ошоға тиклем тормоштоң ҡәҙерен белеп и эн Мәҙинә. Баҡһаң, ғүмерҙең һәр көнө Хоҙайҙан оло к мкон!

\ч к гауыштары ишетелде, палатаға врач менән ... шлетдинов килеп инде.

Момкиндер бит?

Вер кат ҡына балнис күлдәгендә торған, сәстәре кәүҙәһен ... ишаі булып япҡан Мәҙинә уңайһыҙланды.

У(|), ййып өлгөрмәнем.

Шунан, һылыуҡай, — врач койка ситенә, ә кчдииов ултырғысҡа ултырҙы. — Тирэкле һандуғасы ırға эҙерме?

һайрау түгел, осорға ине!

I үҡта әле, эре ҡанат ярмай тор эле...

К)к, ысынлап. Миңә ҡайтырға кәрәк!

Касан ҡайтыу мәсьәләһен врач хәл итә!

Мпи һеҙҙән... үтенәм!

Нишләйбеҙ, Әйүп Ғәзизович? — Оло врач күҙлек ... Камалетдиновҡа ҡараны.

,и I лшзович тамаҡ ҡырҙы:

Бөгөн, былай, Тирэкле яғына еңел машина сыға, горҙар бара.

Пәкин, ҡыҙыҡай, көймәҫкә, ҡыҙмаҫҡа, һалҡын рмаҫкә ант итһәң генә сығаһың!

\п г! **Һеҙгә** бөтәгеҙгә лә ҙур рәхмәт!

Рәхмәтте үҙеңдең организмыңа эйт! Ҡөҙрәтең үҙендән

ша инструкторҙар тейәлгән «Победа»ға ултырып, | ıı ıыҡты...

Камалетдинов, Мәҙинәне оҙаткас, бушап, толкаһыҙланып ҡалған күңеленә йыуаныс таба алмай хитланды. Ауырыуҙан, ҡурҡыуҙан миктәгән Мәҙинә эргәһендә атаһының булмауы аяныс. Әйүп Ғәзизович, һуңғы көндәрен тик Мәҙинә эргәһендә үткәргәнлектән, Хашимдың эшенең нисек барыуы менән ҡыҙыҡһынырға ла онотто. Трубкала Әҙелғужинаның борсоулы тауышы һағайырға мәжбүр итте.

— Хашим Насибуллин...

— Ә нимә?! Уға нимә булды?

— Уға бер ни ҙә булманы. Ишмөхәмәт Баҡтымбаев — ул Ихсанбай Моратов.

— Ихсанбай менән Ишмөхәмәт... бер кеше?!

— Эйе, бер үк кеше. Лэкин Ихсанбай Моратов ҡасҡан.

— Мирхәйҙәров ни ти?

— Мирхәйҙәров унының Ихсанбай икәнен беҙҙән алдараҡ төшөнгән...

— Фу, шайтан!.. Ә миңә өндәшмәне!

— Партизан... Бөтәһен дә үҙе хэл итмәк булған. Факттар йыйған фашларға. Ә бер ҡыҙыу башы тоткан да Ихсанбайҙы, йәғни Ишмөхәмәтте, «Ҡапҡан»ға төшөргән...

— Аптыраттың бит әле...

— Тирәклелә булдым. Ә, ғөмүмән, һәйбәт кешеләр унда, Әйүп Ғәзизович... Ә Мәҙинәне нисек яраталар! Әсәһен бик һағынып хәтерләйҙәр, Хашимға ла мөносәбәэгторс яҡшы...

— Тирәклелә булып яҡшы иткәнһсгеҙ... Ихсанбай Моратов, әгәр ул ысындан да Ихсанбай булһа...

— Беренсенән, әгәр ул ысындан да Ихсанбай булмаһа, ҡасмаҫ ине. Ишмөхәмәт ниңә ҡасһын? Икенсенән, ул, ысынлап та, ҡурҡыныс кеше, Әйүп Ғәзизович!

— Белеүемсә, Фәүзиә лә, Сәбилә лә тереләр... Ихсанбайҙың ғәйебе...

— Ә Зарифа?! Ә малайҙар?!

— Малайҙарҙың батып үлеү ихтималы...

— Ә Сәбилә ни өсөн ҡасҡан? Ихсанбайҙың эле ҡылғаны гонаһтары... Ҡәҙимге кеше ул енәйәттәрҙе эшләй алмай, иптәш Камалетдинов.

— Ихсанбайҙан бөгөн кемгә ҡурҡыныс янай?

— Иң беренсе сиратта, Әйүп Ғәзизович, Мәҙинәгә.

Тыныслыҡ эҙләп Әҙелғужинаға шылтыратҡан Әйүп шаңҡып, башын устары менән ҡыҫты.

Ихсанбай, писә барһа ла ер үлсәгән, йә канау ҡаҙған ірҙән үтсп, уларға күренеп үҙен фашлауҙан ҡурҡып, кмрсыҡ йэшәгән өйгә яҡынлай алмай интекте. Кис • н ю парып ҡараны — инә алманы: эт лаулап өрҙө, тәҙрә |▷▷| ябылған, ҡапка ишектәре бикле йорт үҙендә йән оарлығын белгерткән бер ниндәй билдә-шипкерт н рмәне. Өҫтәүенә, Ихсанбай йэшәгән баш табип ғын а н Кәкере ауыл алыҫ ҡына ара, ғәрип аҙымы менән на әллә нисә барып урай торған яҡын ер түгел...

һыуһаҡ бабай! Бала эргәһендэ ултырып тормаҫһың ш ' Аласыҡ ишегенән башын тығып былай өндәшеүгә шоли шатлығынан саҡ ҡысҡырып ебәрмәне.

Өлбиттә! Әлбиттә!

Рошизә ханымдың уға Әбүбәкер атағанса «һыуһаҡ бабай» ш |.ипсүе ҡыҙыҡ. Элек, Тирәклегә килеп йәшәй башлағас ы лша «Алла — һыуһаҡ! Алла һыуһаҡ!» тип һөрәнләп ма ксйемле ҡарт үтеп киткәйне. Ауыл халҡы унының ша ричыҡ һалды, малайҙар, тал аттарына атланып, ты луылдан сығып киткәнсе оҙата барҙы. Ихсанбай шҙарҙан: «Был кем ул?» тип һорағайны, «Һыуһаҡ бабай!» ләр Беренсе тапҡыр Әбүбәкерҙең болотһоҙ күк кеүек .....**ары** менән осрашҡан Ихсанбай үҙенә төбәп бирелгән ы ишсткәс, күп уйлап торманы: малай саҡта осратҡан картты ҡапыл иҫенә төшөрөп: «Һыуһаҡ бабай!» тине лә м Был исем уға шунан алып йәбеште, хәҙер, ана, шга шореп, өлкәндәре лә шулай өндәшә.

I »мм.1 Һыуһаҡ бабай фәрештә ҡиәфәтле был балаға ҡапыл ıамаңы. Төндәрен усаҡ яҡтыһында ул ағастан ат, сана, шр, һыҙғырткыс кеүек уйынсыҡтар яһаны. Бөтә н ны ы н, быға тиклем күңеленең ҡайһы ерендәлер ренсп яткан осталығын һалып юнған был әйберҙәрҙе Ш а мо Рәшиҙә, йә Лоҡман аша бирҙерҙе.

Мына, — тине ул сираттағы уйынсығын һуҙып, — шга Гшрегеҙ. һыуһаҡ бабай бирҙе, тип әйтегеҙ.

I емәрләп, урын-еренә еткереп, ысын арба, ысын ат кеүек шләнгән уйынсыҡтар аша, күрәһең, сабый күңелендә иһаусыға ҡарата ҡыҙыҡһыныу уянды, ул үҙе лә рмаҫтан был сәйер «бабай»ға тартыла башланы.

— һыуһаҡ бабай ниңә килмәй? Минең уның менән уйнағым килә! — тип ҡайһы саҡ көйһөҙләнә лә башланы бала. Уның һәр теләген ҙур ихласлыҡ менән башҡарырға әҙер торған Рәшиҙә менән Лоҡман элдән-әле, үҙҙәре берәй-яры киткән һайын, һыуһаҡты бала эргәһендә ҡалдыра башланылар.

Бына улар тағы икеһе генә ҡалды. Сабыйҙы ҡулына алғас, Ихсанбайҙың бөтә тәне буйлап рәхәт тулҡын үтте. Был тойғоно, был балаға булған хисте, унда бығаса бер кем до уята алғаны юҡ ине. Хатта Гөлбаныу ҙа, Мәҙинә лә... Был башҡа тойғо. Ихсанбай танауын баланың күкрәгенә терәне: еҫкәйҙәре! Ниндәй тәмле, ниндәй иҫерткес рәхәтлек биро икән бала еҫе!

— Ах, улым! — Ауыҙынан был һүҙҙең ысҡынғанын Ихсанбай үҙе лә һиҙмәй ҡалды. Ҡайһылай йәтеш һүҙ: «Улым...» — Улым! Улыҡайым!

— һыуһаҡ бабай, — бала нескә ҡулдары менән уның битенән һыйпаны. — Үҫкәс, мин врач булам.

— Ә нигә... врач?

— Врач булам да, битевде дауилайым. һине мату-у-ур... аппасыҡ итэм. Ә һинең аппасыҡ булғың киләме, һыуһаҡ бабай?

— Аппасыҡ... — Ихсанбай көлөп быларға ҡаршы ултырып алып бит йыуған аҡ бесойго ҡараны. Бына ошоноң кеүек ап-аҡ иткең килэме мине?

— Унан да ағыраҡ! Ҡар һымаҡ! — Шулай тине ло Әбүбәкер сыңғырлатып көлөп ебәрҙе, ҡарашы өйгә зәңгор нурҙар сәсрәтте. Уға ҡушылып, ғыжылдығы сығыи, Ихсанбай ҙа көлдө. Рәхәт! Бына бала уның алдына һыйыныи йомғаҡтай бөгәрләнеп ултырып алды.

— һыуһаҡ бабай, ә һинең... әбейең бармы?

— Әбейем? Әбейем... юҡ.

— Ә нигә... юҡ? Бабайҙарҙың әбейе була бит ул! Ә... малайың?

— Малайым бар.

— Ул ҡайҙа?

— Улмы? Ул... ҡайын башында, ҡаймаҡ ашап ултыра...

Әбүбәкер тағы сырҡ-сырҡ көлә, көлгән ыңғайға күҙҙәрс зәңгәр нур сәсрәтә.

һин беҙҙә гел, гел буланмы, Һыуһаҡ бабай?

Гел, гел була алмам мин бында, балам... Китермен мо вйын.

Ҡайҙа?

Алыҫҡа... Ә һин, улым, һыуһаҡ бабайың менән алыҫка Витсргә риза булыр инеңме?

)йе-е...

Тик был турала бер кемгә лэ эйтмә, йәме!

Йэ... Ә һин, һыуһаҡ бабай, мине ныҡ-преныҡ яра ғанмы?

Бик ныҡ яратам мин һине, сабыйым... Бик ныҡ... Быға ИИ юм һине яратҡан кеүек бер кемде лә яратҡаным... шны. — Ихсанбай күҙенән атылған йәш бөрсөктәре ıы буйлап аҡты.

Мин дә һине ныҡ-ныҡ яратам, һыуһаҡ бабайым!

Яңы шау-шыуға, гөрләүектәр йырына, йылыға кинәнгән тауыштарына, ирәйеп мөнрәгән-кешнәгән ауаздар күмелгән Тирэклегә ҡайтып инеү Мәҙинәгә ҡанат үстергәндәй булды. Бында, үҙен көткән, яратҡан, һағынған дши.ила, ул, әлбиттә, тиҙерәк аяҡка баҫасаҡ. Ана уларҙың ...... Ҡолғаға беркетелгән сыйырсыҡ ояһында пыр туҙып I ыйырсыҡ менән турғайҙар даулаша. Күрәһең, ҡошсоҡтар н ı на кайтҡансы, өйҙәренә башҡалар урынлашҡан. Картуф ı hı ı ла шөйлә асылған. Мәҙинәгә уны һәрҙәрәү йәһәтен р корок. Ана, Фэүзиә инәһенең өйө. Кескәй тәҙрәләре н ул да бөтә булмышына яҡтыртҡан ҡояшҡа баҡкан. инәнең тәҙрәһенә йәнә бер ҡояш ҡапланды, быяланы ı ıэı л-сәпелдэтә, сабый әсәһен күреп шатланды.

Дауыт!

Дцуып эргәһендә йәнә ике баш хасил булды. Береһе — н ıэı с һор йыйырсығында нур уйнатҡаны — Маһинур, еһе тыйнағыраҡ, ләкин ҡәнәғәт йылмайғаны — на

Мәзинә азымын шәбәйтте, йөрәге алҡымында уҡ дарҫлап ı ғаны.

Двуыт! Уй, һин ҡайһылай... уҫлаптай булғанһың!

— Ҡайтыуыңа бурһыҡтай итергә тырыштыҡ индс баланды! Ҡулындағы бәйләмен ситкә һалып, Ғәзимо самауыр ҡолағына йәбеште. — Имеүҙе онотто индс Дауытың! Ҡабат иҫенә төшөрөп торма!

— Атаҡ... бәләкәй бит әле ул, — нескә күңелле Маһинур күҙҙәрендәге йәште яулыҡ осо менән һыпырҙы. — Баланыц тәүге ҡайғыһы имсәктән айырылғас баштана, ти. У тиклем ни... имһен әле Дауыт! Кэзэ һөтө тигәс тә, әсә һөтөнә етәмс?

— Кәзә һөтөнөң күкрәк һөтөнән кәм ере юҡ, — Ғәзимә, яулығын артҡа ташлап, мейестән сөгөн сығара башланы. — Кәзә һөтөнә генә бойҙай бутҡаһы ултыртҡайным. Әйҙә, ҡул-һалығыҙҙы йыуа баштағыҙ.

...Тиҙҙән өс ҡатын һәм бер кескәй ир затынан торған ғаилә ашъяулыҡ тирәләй ултырҙы. Оло ҡатындарҙың береһе-бер ауырыу тураһында Мэҙинәгә һүҙ ҡатмай, йәнәһе, кәрәк булһа, үҙе һөйләр. Ә Мәҙинә шат. Уның күҙе баянан бирлс гөл көршәктәрендэ тиртеп сыҡкан үҫентеләрҙе иркәләй. Бына улар, Себер кедрҙары! Уларҙың һәр береһендә Әптеләхәттең күҙ нуры, һөйөүе, йылыһы, өмөтө...

— Эшкә... сыкмаҫһың әле? — Сәй яһаған Ғәзимо Мәҙинәгә һынабыраҡ ҡараны.

— Атаҡ, бэләкәй хәл ала бирерһең, — Маһинур, хәленән килһә, Мәҙинәне өйҙән бер аҙым да ситкә ебәрмәҫ инс.

— Кеше араһында күңел тиҙерәк языла, Маһинур, быныһын донъя күргән Ғәзимә **әйтте. Мәҙинә** күрсп гора: Ғәзимә арҡаһында уның ғаилоһс асыҡмаған, стеш көн күргән. Тормош, ҡаҡкылай торғас, уны шулай бөтмөр, сая яһағандыр инде.

— Ике һыйырынды иткә һуйҙылар, — Маһинур йәнә яулыҡ осо менэн күҙен һыпырҙы.

— Нишлэп?! Улар... таналар ғына бит эле!

— Эстәре күпкәнме, елене шешкәнме...

— Көймә! — Ғәзимә Мэҙинәнең сынаяғына үрелде. — Баш һау булһын! Һинең алға сыкҡанынды күрә алмаған кешс эттеге булды ул! Бөйрәкәйең дә ауырый тиҙәр ине... Көймә!

— Кешенән ишетһәң, ҡыйын булыр... Юғалған һыйырындың башы табылды.

— Ҡайҙа?!

— Ишмәмәт ихатаһында ята. Шәңгәрәй кеше апарып күрһәткән. И! Мында ниҙәр генә булманы! Ишмәмәт юҡ

р лүылда. Сығып ҡасты. Шәңгәрәй бахыр Раузала йәшәй, в Рау ш үҙ өйөнә ҡайтты.

Бөтәһен анлап бөтмэһә лә, күңеле менән ниҙер һиҙенгән Мәзинә, кейенеп, фермаға атланы.

•Ҡыҙыл мөйөш»тә уны мөдир Саяф киң йылмайып ı ı ||ıııı **алды.**

У-у... кемде күрәм! Кемде күрэбеҙ! Һауынсы таба ı ıı йонсой инек, әлдә ҡайттың, ҡарындаш!

Мин ҡайттым да ул... Минең иң һөтлө һыйырҙар... — ıс |улған Мэҙинә, йәшен күрһәтмәҫ өсөн, ситкә ҡараны.

Әллә инде, үҙем дэ ныҡ көйҙөм. Аммиакты үлсэмәй ıэı ез тип күпме ныҡыйым!

')ш аммиакта түгел бында, Саяф ағай!

Һуң, аммиакта булмай? Уны бит бер грамм артыҡ рı.1 ярамай!

Упы үлсәмәй берәү ҙә бирмәй! Ә Бөйрәкәй?!

(**вяф** слкәһен тырнаны:

Бөйрәкәй, эйе, ауырый шул. Әле яңы тағы иткэ ııьс килеп төштө. Башмаҡтарҙы тапшырып булмай. ||ц.| Оср һыйырҙарҙы забраковать итербеҙ тип торабыҙ...

Бөйрәкәй — мал ҡото. Уға тейергә ярамай!

Ул бит былай ҙа өс имсэк!

Имсәге кәмеһә лэ һөтө кәмемәй уның! Етмәһә, быҙауы бар \ и бит ҡотло, йыуаш тоҡом!

Мин Бөйрәкәйҙе бөгөн һуябыҙ тимәйем бит! I ирроыҙ... Минә лә бит дәүләт план бирә. Үтәргә ҡуша.

Мәзинә боролоп сығып китте. Ялан кәртәгә инеү менән, ı низары дэррәү баҡырып, елтәңләтә баҫып уны һырып

И малҡайҙар! Мин дә бит **һеҙҙе** һағындым! Ай алла! Һыйырҙарынан ыҫкына алмаған Мәҙинә шул китеүҙән ı калды. Бөйрәкәйҙе генә башта таный алмай торҙо: ı ıı оахыр, йонсоған, һул күҙенә аҡ һалған. Хайуан ıı Млшнәнең беләгенә һалды, ә күҙҙәренән сөбөрләп Ни булғанын, ниҙәр күргәнен һөйләр ине — теле юҡ ан

Ммппл, һауын бөткәс, Ғәлимә эргәһенә килде:

Холен нисек, әхирәт?

\.щ ни... хэлсә инде! — Битенә тимгел-тимгел ҡыҙыл рı ıı I әлимә берсә һәнәккә, берсә көрәккә тотондо. —

Беҙ ни... эштәп тик йөрөйбөҙ. Черный рабочийға чурт булһынмы? Ана, хисапсы донъяны тигеҙҙәргә йөрөй ине! һине алға сығарам тип йән талаша ине!

Мәҙинә өндәшмәй генә әхирәтенең ҡыҙыуы баҫылыуын көттө. Унан эргәһенә яҡыныраҡ килде:

— Ғәлимә, мин һине аңлайым... Миндә әле һөтлө таналар байтаҡ. Ал шуларҙың икәү-өсәүен.

— Иң һөтлө таналарынды... минә?!.

— Иң һөтлөләре юҡ инде. Үҙең беләһең, зыянлағандар... Былары ла насар түгел.

— Ә үҙең?

— Мин яңы таналар өйрәтеп алырмын.

— Аннат! Тана өйрәтеү еңелме?! Әле үпкәһеҙ ҡала яҙҙың...

— Гел улай булмаҫ әле! Миндә лә бит... тәжрибә туплана!

— Әллә шул... Кеше ни тимәҫ...

— Кешелә ни эшен бар? Мин бит үҙем бирәм!

— Саяфка әйтһәң...

— Ул ҡаршы килмәҫ... — Мәҙинә, ихлас йылмайып, Ғәлимәне ҡултыҡлап алды. — Ҡайтайыҡ, әхирәт. Дауыт мине шундай һағынған — муйынымдан ҡыҫып ҡосаҡлаған да ебәрмәй.

— Әллә нимәм юҡ... Шулай ҙа... эйҙә минә сәйгә! — Мәҙинә ҡолаҡтарына тиклем ҡыҙарған Ғәлимәгә күтәрелеп ҡараны: йәл уға, йәл әхирәте. Ниңә Мәҙинә кешеләргә асыу һаҡлай алмай икән? Белә ул, белә һыйырҙарына кемдең ҡороҡослоҡ ҡылғанын, әммә... яуызлыҡҡа ҡаршы яуызлыҡ менән көрәшеүҙең файҙаһы юҡ икәнен дә яҡшы төшөнә...

— Сәйҙе икенсе ваҡытка ҡалдырайыҡ, әхирәт...

Мәҙинә инде өйөнә боролайым тигәндә, тыҡрыҡтаи ҡулына ҙур төйөнсөк тотҡан Рауза яһырып килеп сыҡты.

— И-и... Мәҙинә! Ҡайтҡанынды ишетеп киләм! Балниска барып хәлеңде белә алманым, шуға килеп ултырам. Тукта әле, мәйтэм, йылы икмәктең сауабы ҙур, икмәк тотоп инеп сығайым, тием. һөйҙәр хәбәр күбәйҙе! Анау ике аңра ҡарсыҡтарына һөйҙәп булмай бит инде аларҙы! һөйҙәмәһәң, эс күмһей.

Мәҙинә, ел ҡапҡаны ҡунағы һыйырлыҡ итеп мул асып, ауыҙын япмай тәтелдәгән Раузаны эскә үткәрҙе.

Барсынбикә ҡарҙан әрселгән һуҡмаҡ менән өҫкәрәк іе. Үҙенә кәрәк үләнде ул бында йәй күргәйне. Ҡара көҙ м еткәс ҡаҙып алырмын тамырын тип, эргәһендә өйкөм-......м үҫкән селеккә ҡыҙыл сепрәк бэйләп, тамғалап киткәйне. Әле бына шул тирәлә йөрөгән дә кеүек, мәгәр Вилю бойләгән селек өйөмөн таба алмай. Үлән тамыры М.мшпһенә кәрәк. Тағы бер-ике аҙнанан ер йәшэрә, м.жтәр буйлап һут китһә, һуң буласаҡ. Барсынбикә У'|сидо моғжизә һаҡлаған был үләнде йоҡола сағында ҡаҙып ылырға тейеш. һуңынан, уянғас, үҙен борсоған кешегә үлән |.....йәсәк, рәнйеше тәнәтмәһен эскән кешегә кусәсәк...

Арыған Барсынбикә яҙ ҡояшы йылытҡан ҡайраҡташҡа ырҙы. Эйе, арынҡыраны ул. Мәҙинәгә төбәлгән ҡара ырҙе үҙенә саҡырҙы, шул зәһәр ҡеүәтте үҙендә һүндерҙе. галсыкты, уның ҡарауы Мәзинәһе, яңынан тыуғандай ишләйсп. Тирәклеһенэ — балаһы янына атлыҡты. Мәгәр мнбикәгә әле көс күп кәрәк. Алда Ихсанбай менән шыр көн бар. Ай, ауыр буласаҡ Барсынбикәгэ! Әҙләй Пхсанбай, әҙләй! һуңлап килгэн тәүбәһенә сәсәй-сәсәй, іәи р булһа тере йәндең үҙен аңлауға сарсаған күңелен Гыршш-тырнай эҙләй. Барсынбикәнең дэ йөрәге таш түгел. Ах дориға! Эй Яҙмыш! һынауҙарынды алдарыма өйә һен! Барсынбикәнең арырға, туҡтарға хаҡы юҡ. Алда йондоҙо — өмөтө Мәҙинә яҡтыра. Барсынбикәнең: |Мии Барсынбикә, һинең өләсәң!» — тип ейәнсәре шмһмна баҫаһы бар. Оло әсә. Тимәк, эсәһенән дэ олораҡ ()лононң бурысы ла, күтәргән йөгө лә оло. Ләкин ибай ҙа уның балаһы. Ихсанбайҙың ошолай булыуына Барсынбикә лә, ғәйепле. Барыһын да аңлай, барыһын да кфсын. Әммә ул үҙе лә ҡәҙимге бер кеше. Уға кәңәш-м һорап күптәр килә, ә уның үҙенә кемгә бараһы? юнә ултырып аҡыл таба алмағандай булды Барсын. • яҙ булмаһа, был һиллектә, тәбиғәт кенә бирер н.‖ и.гкта оҙаҡ ҡына ултырыр ине әле ул. Күп ң ҙарына яуап, йәненә тынғы табыр ине. Йәшәйештең үҙе ь кармй, үҙен бар яһаған Тәғәләләй зирәк был тәбиғәт шһспсн асыу ҡөҙрәтенә эйә...

Барсынбикә, ҡолағына сыйылдаған тауыш бәрелгәндәй булғас, аяғөҫтө баҫты. Ҡарабаш! Ҡарабаш тауышы ишетеләсе!..

— Ҡарабаш! Мә! — Эт тағы сыйнаны, шыңшыны, ләкин үҙе күренмәне. Йомран күреп эҫендеме, әллә күргән тейененән күҙ яҙлыктырҙымы? — Ҡарабаш!

Барсынбикә тауыш килгән якка ынғайланы. Кыраз таштар ҡыуышы янында туктап, ҡолаҡ һалды.

— Ҡарабаш! — Эт эргәлә генә шыңшыған кеүек. Эйе, ана үҙе! Ҡыразға һырындырып өйөлгән таш бурама эргәһендә яткан да шыңшый, башын юғары күтәреп, хәсрәтле ауаздар сығара. — Был нишләүең, Ҡарабаш. — Эт ҡуҙғалманы, өҙөлөргә торған тауыш сығарҙы ла, башын тәпәйҙәренә һалды.

Барсын, бурама өҫтөндәге йәйпәк яҫы ташты шылдырып, эскә күҙ һалды. Йә Хоҙай! Кеше ерләнгән бит бында! Ҡулын күкрәге тирәһенә ҡаушарып, салкатан ятып, үҙен-үҙе йыйыштырып үлгән ҡатын-кыҙ һөлдәһен күргәндәй Барсын.

Гүр эйәһе унын күңеленә шул рәүешле инә...

Бармағына көмөш йөҙөктәр ҙә кейгән ахыры, муйынында күн менән тышланған бетеүе бар. Кешеләргә әйтер һүҙҙәре әйтелеп бөтмәгән, уларҙы ул үҙе менән ҡәбергә алып китерго теләмәгән. Изге йәндәр, көслө рухтар ғына ошо рәүешле үҙҙәрен-үҙҙәре йыйыштырып киткән донъянан.

Барсын, кәшәнә эргәһенә тубыкланып, оруах рухына аят сыкты, унан, изге бәндә рухы яғылған таштарға һыйынып, уңайлап ултырҙы, ойоғандай булды, тынысланды. Уйҙарын ағытып ебәреп, үҙенең тын алышын, йөрәк тибешен һөйәнгән таштарына, тәбиғәткә яраштырҙы. Бер талай ултырғандан һуң, өҙөлгән уйҙары кире ялғанды. Йөрәген һулкылдатып Ихсанбай иҫенә төштө. Барсынбикәгә ул быны-быны килер төҫлө. Уға ни тиер? Шул сак ҡолаҡ төбөндәме, йөрәк түрендәме тауыш ишетелде. Ҡатын-кыҙ тауышы:

— Аттың ялы аҡ та, саңы ҡара.

«Дөрөҫ, — тип уйланы Барсынбикә уға яуап итеп. - Ихсанбай якшы токомдан, ләкин эшләгән эштәре, ҡылған ҡылыктары ҡара». Ошоно уйлап бөтөүгә, Барсынбикә йәно тертләне.

— Саң таҙарыр ҙа, дан ҡалыр! Яман данды йыуып таҙартып та, ҡасып ҡотолоп та булмай шул...

Барсынбикә һиҫкәнде.

• I үр эйәһе ахыры, шуны хәбәр итә!» Ошоно уйлап бөтөүгә гауыш йәнә ҡабатланды:

һапдамаған сатанды сиған алдай!

«Бынылы ла хаҡ! Ихсанбай үҙе тураһында йөрөгән һүҙҙәргә ҡолаҡ һалманы, уларҙы һанға һукманы, шыма-рәмә белмәне...»

Тауыш йәнә ҡабатланды:

Данына күрә — һаны...

\ лай тиһең? Их Ихсанбай... — Барсынбикәнең тәне һыуыклы булып ҡалтыранды. Күк тә тәпәшәйгәндәй, көн кискә ығышкандай. — Изге ниәттәремде аңламаның, әйткәнемде алманың!»

Гвуыш көрһөнгәндәй булды:

Ллтындың һаны һирәк кешегә билдәле...

«Дөрөҫ әйтәһең дә бит, әруах, ләкин мин әсә! Миңә шпп юрЮ?!»

Данды һандамаһаң да дөрөҫ, атынды һанда!

\и,|цды! Атым бармы ни минең?! Мин инде нисәнсе ш иссме аҫтында йәшәйем! Исемһеҙ мин, әруах!!!»

Тауыш был юлы ҡәтғи яңғыраны:

Отолғандың онотолған заты атында сағыла, һатылғандың даны тапандыла табыла.

«Рәхмәт, эруах, — бите буйлап һарҡып кипкән и ләрен сылаткан йәштәренең тоҙон тойҙо Барсын. — ы коңәшенә».

Лғандың даны һиңә булмаҫ, сатандың саңы һиңә ңаҫ! — Ошоно әйткәндән һуң әруах тынды, , шипчаларҙан килгән рух менән аралашыу, быуаттар мшоиэн килгән ауазды тыңлау Барсынбикәне к кщдырҙы. Йәненә һәм тәненә һиллек, ныклык алған, рен яндырып барған барса һораүҙарына яуап таптан ынбикә ҡараңғы төшөүгә өйөнә ҡайтып йығылды. | ураошты саҡырһа ла, эт уға эйәрмәне. Күрәһең, элекке . һын, кәшәнә эсендәге Мөғлифә бакшы һөйәктәрен ш китергә көсө етмәне.

Ваҡиғаларҙың көтөлмәгән борролош алыуы Әҙелғужинаны ш Һалды. Ихсанбай Моратов ҡаскан. Ә ҡайҙа һун ул? н іы іе һағалаһа, йә булмаһа әсәһе менән бәйләнешкә

инергә булһа, ул Таулыла булырға тейеш. Ләкин күҙәтселор Барсынбикә өйөнә сит кешенең килеүен күрмәгән. Ошо хаҡт| Шакира Камалетдинов менэн дә һөйлэште. Яҙғы сәсеүгә әзерлек ваҡыты булғанлыҡтан һис бушамаған Әйүи Ғәзизович үҙенең дэ Ихсанбайҙың ҡасыуы сәбәпле ньП борсолоуын, берэй хәл килеп сығыуҙан ҡурҡытып, Мәҙииопг ваҡытынан алда дауахананан сығарыуҙарын һорауын әйттв Шакира Хисамовна уның кабинетынан сығыр саҡта ғына Камалетдинов:

— Хашимды ҡайтарырға кәрәк. Эштәр былайға киткос, судтың булыу-булмауы икеле. һәр хәлдә, һеҙ уны судҡа тиклем сығарып тороуҙы юллай алаһығыҙ. Ҡағыҙ кәрок булһа, яҙырбыҙ. Мәҙинәгә күҙ-колаҡ булыр ине ул, — тине.

Әҙелғужинаның бит осо ҡапыл алһыуланды, әммә үҙсн тотто, ҡаушауын белдермәҫкә тырышып:

— Мин дэ шулай уйлайым, — тине лә ишек тотҡаһыиа тотондо.

— Шакира Хисамовна, — Камалетдинов урынынан тороп Әҙелғужинаға табан атланы. — Мин бына нимә уйлайым: Ихсанбайҙы... баш врач... Лоҡман Талипович йортонан эҙлоү хәйерле булмаҫмы?

— Лоҡман Талипович йортонан?! Ләкин Ихсанбай, белеүемсэ, уның ҡарындашын, Сәбиләнс, бср ҡасан д| яратмаған! — Камалетдинов, ҡарашын алыҫҡа төбэп, тәҙрв ҡаршыһына барып баҫты. — Ләкин, Шакира Хисамовна бисәне яратмау баланан ваз кисеү тигәнде аңлатмай...

— Ә ниндэй... бала?!

— Сәбилә ауылдан ауырлы көйө сығып китэ.

— Лэкин... Сәбилә психушкала, Лоҡман Талиповичтың өйөндә... бер генэ бала.

Ҡапыл Камалетдинов эҙәрмән ҡатынға бөтә көүҙәһв менән боролдо.

— Лоҡман Талиповичтың психушкалағы ҡарындашының күкрәгенә... һөт төшкән!

— һөт?!

— Эйе, иптәш Әҙелғужина!

— һэм һеҙ... Ихсанбай Моратов... нисә йылдан һуң... донъяла барлығын белмәгән балаһын эҙләп...

Мин үҙем дә атай кеше. Ҡыҙым бар. Ул тойғо таныш булмаһа, әйтмәҫ инем... Тик... Лоҡман Талиповичтарға шигәндә артыҡ һүҙ ысҡындырыуҙан һаҡ, үтә һаҡ булығыҙ.

)йе, эйе... мин аңланым һеҙҙе, Әйүп Ғәзизович.

,..һәм бына Әҙелғужина баш табиптың өйөндә ултыра. I атын, мәрйә булһа ла, ҡунаҡсыл икән.

Рәхим итегеҙ, бик ваҡытлы килдегеҙ, һөйләмәй Ммройһөгөҙ, ҡоймаҡ майлайым, эйҙәгеҙ! — тип бар булмышы м нән йылмайып сэйгә ҡыҫтаны.

Мин эш менән генә. — Ул арала эргәләренә егеүле юҡкан малай килеп баҫты.

О! Атың ҡайһылай шәп! Ҡайҙа йыйындың, улым?

Йыраҡҡа!

Йыраҡҡа?!

Раиса Максимовна көләмһөрәне:

Фантазер!

Бер ҙә фантазер түгел! Һыуһаҡ бабай тик әйтергә иманы!

һыуһаҡ бабай?! Ниндәй бабай тураһында һүҙ бара, Раиса Максимовна?

Следователь ҡатындың ниндәй йомош менән килеүе шда ҡыҙыҡһынып та өлгөрмәгән ҡатын, һөйләшергә шбылыуға шатланып, тәтелдәй бирҙе:

Ә!.. Ғәрип бер! Әбүбәкерҙең атаһы кеше йәнле бит ул! ләп индергәйне...

Ул ғәрип түгел! — Малайҙың зәңгәр күҙҙәре үткер ком шр сәсрәтте. — Ул һәйбәт! Матур!

() Господи! Кем һиңә бабайҙы насар ти? Мин бит уны юка тинем!

()п не калека! — үсегеүҙэн ауыҙы турһайған матур ши аш өйөнән сығып ук китте.

Бына бала! Әллә ни ерен яратты бит шул һаҡалтайҙың! I \ ғы көүҙәле, түштәре халат сабыуынан бүҫелә яҙып • ли солләмәт йөҙлө ҡатындың зәңгәр күҙҙәрендә шәүлә кисип булды. Ҡурҡыу шәүләһе. — Нимә ти был окаянный ай? Китәбеҙ тиме?!

Хафаланмағыҙсы, Раиса Максимовна! Бала ни Iм әмәҫ?

һсҙ бслмәйһегеҙ! — Ҡатын ҡаушай төштө, сынаяҡҡа яңылыш сәйнүк эсенә һөт һалды. — Господи!

— Ярай, ярай... — Әҙелғужина уны тынысландырырға тырыша, ә үҙенең иғтибарынан был инде йәш булмағап, ләкин яратылыр өсөн генә тыуғандай Рубенс ҡатындары кеүек хужабикәнең һәр хәрәкәте ситтә ҡалмай. Ҡатындар бит ҡалбырҙап китеүсән, кисерештәре былдай саҡта шаңҡығап балык кеүек өҫкә сыға...

— Ирегеҙҙең һеңлеһе... Сәбилә күренмәй...

— Ә... һеҙ унын менән...

— Эйе, беҙ унын менән таныштар. Хәлен белеп сығайым тигәйнем...

— Ой, ул бит больницала! Ул бит сирләп китте. — Ҡатын шыбырлауға күсте. — Ирһеҙлектән микән... алышынды бит ул! Ҡурҡыныс булып алышынды! Башкирцевала ята. Хыялый ул хәҙер!

— Алай... Ярай, Лидия Николаевнанан һорармын хәлен...

— Ой! Кеше танымай бит ул! Моғайын, кәрәкмәҫ! Хәҙер уға һин ни, мин ни — барыбер! — Раиса Максимовна, таҫтамал алып, тир бөрсөктәре бәреп сыҡкан шалҡандай аҡ маңлайын, шундай уҡ муйынын һөрттө, ҡапыл шиңгәндәй, хәлһеҙләнгәндәй күренде. — Был тормошта бер покой юҡ...

— Мин китәйем инде, Раиса Максимовна. — Әҙелғужина көләмһөрәне. — Малайығыҙ бик оҡшаны миңә. Зирәк, матур, ихлас! Ул яраткан һыуһаҡ бабайға миндә ҡыҙыҡһыныу уянды хатта! Кемде ул шулай яҡлай икон? Миңә ҡалһа, Әбүбәкер ул ҡарт өсөн дуэлгә сығырға оҙср!

— Ой, әле ул ҡарт өйҙә юҡ. Кәкере ауыл яғына танышыма барам тигәйнс, оҙаҡланы нигәлер.

Быларҙан сығыу менән Әҙелғужина атлы ылауҙы туҡтатты һәм үҙен Кәкере ауылға тиклем ултыртып алып барыуын үтенде.

...Ҡарсыҡтың ҡапҡаһы төбөндә ғәҙәттэгесә эт абалап ҡаршы алманы. Әҙелғужина өйгә инде — бер кем юҡ. Бары һап-һары итеп ҡырып йыуылған иҙәндән яҙ, ағас еҫе килә, көлдөксәлә йөнтәҫ бесәй йомарланып йоҡлай. Әҙелғужина кире ихатаға сыҡты. Аласыҡ! Ана бит унын ишеге шар асыҡ тора. Эстә ике кешенең берсә ҡыҙып, берсә көрһөнөп, кисерешкә бирелеп һөйләшкәне ишетелә. Ҡатын-ҡыҙ тауышын Әҙелғужина шундуҡ таныны:

— Башҡа ерҙә күрһәм, биллаһи, танымаҫ инем!

Икенсе тауыш ғыжылдап, тэрәндән өҙөлөп-йолҡоноп ҡандай:

Ул янғындан, күреүемсә, һин дэ еңел ҡотолмағанһың... Бы ши булып ҡалырынды белһәң...

Ойҙө мин үртәмэнем.

Ә кем? Кем үртәне улай булғас?

Кемгә кәрәк — шул.

Лоҡман тимәксеһеңме?

Һорау алма минән, Ихсанбай. Мин һиңә барыбер әйтә | іган шклемен генә әйтәсәкмен!

Ярай, Лоҡман да булһын! Ул, ул... Сәбиләне ш ихүшкаға тыҡкан, минең баламдан... үҙенэ ул яһаған! Нигә видәшмәйһең, әсәй?! Әбүбәкер һинеке түгел, тимәксеһеңме? I)|| 1.1!ПМӘЙһеҢ...

һин дә «балам» тигэн һүҙҙе телеңә ала башлағанһың түгс имс?

Көлөүеңме был, әсәй? «Балам» тиергә... минең балам ины булдымы?!

Ә... игеҙәктәр?! Гөлбаныу игеҙәктәре?!

Улар ништәп минеке булһын?!

Мутлашаһың һаман, Ихсанбай... Шуны бел: бала ата Исү.испон ярала. Үҙ балаһын кеше... мендәр араһынан таный!

һин һаман һаташаһың! һаман әлләниндәй...

Ярай, мин оло кеше. Яңылышыуым да бар. Миңә ни кил герҙс һине?

Ксше эсәһенә килмәйме?

Беҙҙең мөнәсәбәттәр... күптән инде әсә менэн ул иәсәбәте түгел.

Ул һиңә генә шулай! Һин мине күрә алмайһың!

Бәлки... Ләкин мәмерйәлә сағында кем төнәтмәләре щ һауыҡтың? Кем һине, яна-яна, үрт һалынған өйҙән |....рли сығарҙы?! Кем?!

Өсәй... миңә һинән ярҙам бөгөн кәрәк...

I [индәй ярҙам?

|)С>үбокерҙе... миңә... Мин унһыҙ йәшәй алмайым! — Һымимпдап, ғыжлап торған үпкэһен көсәндереп, буҫығып .....ш гауыш ишетелде. — Ул шундай... матур, әсәй!!!

Ө ниңә һин... Ишмөхәмәттен йәнен ҡыйҙың? Ни зыяны һи нә ул кешенең?

— Миңә Тирәклегә... ҡайтыр кәрәк ине...

— Аһ! Тирәклегә! Мәҙинә ҡашына! Теге саҡ мин нимо тинем?! Ксмлеген әйттемме, әйтмәнемме Мәҙинәнең?! Ҡарсыҡ тауышындағы ҡырыҫ ноталар Әҙелғужинаның арҡа мейеһен семерҙәтте, башын зиңкетте.

— Ышанманым... Әле лә ышанмайым!

— Мына!

— Беләҙек... Фирүзә ҡашлы алтын беләҙек?! Әллә... Гөлбаныуҙың һөйәктәрен... — Ихсанбайҙың тауышы дерелдәне, өҙөлгәндәй булды.

— Иң ҡыҙығы... ике беләҙеккә лә — тегеһенә ло, бынныһына ла боронғо хәрефтәр менән бер исем яҙылған: Күкһыу! Өләсәм исеме...

— Ҡайҙан алдың быны!

— Таптым. Өрлөккә ҡыҫтырылған булған. Был йортта йәшәгән изге бәндә Мөғлифә ҡалмыҡтарға әсир төшкои өләсәнцең ейәнсәре булып сыға... Беләҙектең береһе Мәҙинәлә. Гөлбаныу һинең игеҙ һыңарың булмаһа, был бәләләр булыр инеме? Мин һеҙҙең никахлашыуға ҡаршм килер инемме? Ниндәй әсә үҙ балаһына бәхет **теләмәй?** Гөлбаныуҙың... Күкһылыуымдың... килмәгән бер ере бар инеме?!

— Әбүбәкер... уға оҡшаған...

— Беләм. Күрҙем мин ул баланы! Күкһылыуым, колонсағым, терелеп ҡайтты тип торам!.. Ә Мәҙинәм ул - мин. Минең йәш сағым.

— Ах, эсәй!.. — Өйҙә танау тартҡан, һулҡылдап илашҡан тауыштар сыҡты.

— Нигә былай... нигә былай килеп сыҡты һуң беҙҙсң тормош, әсәй?!

— Дөрөҫ йәшәмәгәнгә... Яуызлыҡҡа ҡаршы көс ҡулланыу ҙурыраҡ яуызлыҡ тыуҙыра! Бэндәләрҙең аңын бутай... хәтерҙәрен ала... ҡанбабалар һабағын боҙа!.. Улды атаға, атаны улға ҡаршы һөсләтә!

— Ләкин мин... игеҙәктәрҙе үлтермәнем! Улар өсөн мин... яуап бирмәйем!

— Лэкин улар һинең баҡсаңда ята!

— һин...

Мин... түтәл эргәһендә һыңар сандали, йәнә бер... фу ражка гаптым...

һин... беләһең?! Ғәфү ит мине, әсәй! Уларҙы... Күкбүре... көсөктәрен ҡыҙғанып...

Ах Ихсанбай! Малайҙарҙы Күкбүре меҫкенгә япһаң ди Ҡулдарың Ишмөхәмәт, Зарифа ҡандарына... әсәһеҙ ҡалған Мәҙинә рэнйешенә, диуана Шәңгәрәй ҡарғышына, ирһыҙ ҡалған һеңлең бәддоғаһына буялған! Ошоларҙы күтәреп, нисек йәшәрһең, Ихсанбай?! Улың, Әбүбәкерең, ҡыҙың Сәмәрэ күҙенә... нисек ҡарарһың?!

Сәмәрә?! Уныһы кем?

Аҙғынлығындан яралған әсе бер емеш. Ғәлимәнең ҡыҙы

Ул... нишләп минеке булһын?!

Ул бала ла һинеке. Әбүбәкер, ярай, бала көҫәүҙән •ичи.яға тыуҙы, Хоҙайҙан һорап алған сабый, ә Сэмәрә **Щҫкен** — артыҡ йән, уның бер кемгә кәрәге юҡ.

Нишләргә миңә... әсәй?! Үҙемде үҙем милицияға |.|||ип,1райыммы? Хөкөм һорайыммы?!

Уныһын мин белмәйем.

Әбүбәкерҙе алам да... тауҙарға ҡасам!

Юҡ! Ҡасаҡ булыу ҡыҙыҡ булһа, мәмерйәндә йәшәр шнң Һаман! Тағы шуныһы үкенесле: бер ғәйепһеҙгә Хашим кейәүен интегә төрмәлә. Барып һөйлә! Ғэйебе юҡ икәнен иҫбат ит! Исмаһам, үҙ ғүмерендә бер егетлек эшләрһең!

Әҙелғужина сигенде, иплэп кенә соландан сыҡты, эшенә, ғөт конлоҡта интеккән Хашим янына атлыҡты.

Әҙелғужина сығып киткәндән һуң Раиса Максимовна үҙен **Мйҙа** куйырға белмәне. Башта уҡ уны күргәс тә ҡалбырҙап Щткәнен иҫенә төшөрҙө. Ахыры Шакираны күреү менән ниҙер һиҙенгән ул, тик был тойғонон ҡайҙан һәм ни өсөн **рщгәнен** генэ тойомлай алмаған.

< ледователь Шакира Хисам ҡыҙы Әҙелғужина Сәбилә ғн ҡыҙыҡһына. Бында ниндэйҙер ғиллә бар кеүек. Ә Әбүбәкерсе? Күҙен дә йоммай, китәм тип тора! Бүре балаһын

бүреккә һалһаң да урманға ҡарай тимә инде шунан. Раиса па Лоҡман да уға йәнен фиҙа ҡылырға әҙерҙәр, ә ул...

Раиса Максимовна йәшкәҙәгән күҙҙәрен ишектән алманы. Исмаһам, Үҙе ҡайтып инһә! Былай ҙа китәйек тип иренен теңкәһенә тейеп бөттө. Алтындары, аҡсалары төйнәлгои, мал-тыуары эш ителгән. Ҡиммәтле тиреләрен дә елләтси һандыҡҡа тултырҙы. Алтай яғында унын туғандары. Шунд| китһәләр, кәбәнгә төшкән энәләй юғаласаҡтар. Бының ишс генә өй тапмам ти микән Локман? Был башҡорт тигән халыҡтын иленә йәбешеп ятыуын һис аңламай Раиса. Кеше ҡайҙа яҡшы, шунда йәшәргә тейеш. Ҡайҙа бәхетлеһең шунда һинең тыуған илең. Әгәр ҙэ Раисаны Лоҡманға сикһеҙ ғишыҡ бәйләмәгән булһа, белер ине ул ҡайҙа һәм нисск китергә! Юҡ шул, Лоҡманһыҙ йәшәүҙе ул күҙ алдына ла килтермәй! Ул элегэ тиклем Лоҡман косағында һары майҙай ирей, ебәктэй ишелә.

Ишек асылған тауыш уны һиҫкәндерегт, урыныпам торорға мәжбүр итте:

— Локман!

Ире ҡурҡынған, йөҙө көлһыу төҫкә ингән ҡатынына шелтәле ҡарашын ташланы:

— Нимә йәш кәләштәй үрәпсейһең, Рәшиҙә?

— Лоҡман! Беҙгә китергә кәрәк! О! Ниҙәр генә булманы! Следователь... теге сатан Шакира килде! Сәбиләне һорашты. Ә Әбүбәкерең... — Раиса бала кеүек һыңкылдап илап иренсң күкрәгенә һыйынды. Китэм, ти. Һыуһаҡ бабай меноп йыраҡка китәбеҙ, ти! Әлегэ һыуһаҡ бабай әйтергә ҡушманы, ти!

— Һыуһаҡ бабай... Был етди хәл, Рәшиҙә. Мин дэ Ихсанбай хаҡында күп хәбәрҙәр ишетеп килеп ултырам. Йыйынайыҡ. Һиҙенә инем. Бала күңеле һиҙгер. Эйе, эйе! һин хаҡлы! Документтар әҙер. Аттарҙы ашатам, ә Һыуһаҡ килһо, һиҙҙермә, матур һөйләш, бала сирләп тора, тигән булып, янына индермә!

* *

Лидия Николаевна Башкирцева асыҡ тәҙрәнән тышты күҙәтте: ағастарҙа бөрөләр тиртә, ҡоштар күңеллс сырҡылдай, әллә ҡайҙан, йыраҡтан, тау йылғаһының шашҡан ярһыу менән түбән атылғаны ишетелә. Тәбиғәт уяна... Йыл

елдоренең ниндәйе лә матур. Ләкин көҙ һағышлы, ҡыш ьпнат, моңһоу, йәй тыныс, ә бына яҙ!.. Ул ярһыу, сая, ♀ртле. Үҙендә быҒаса булмаған көс уяныуын тойоу шдыра ла, ҡурҡыта ла... Эйе, Лидия был ҡырағай матурлыҡ төйәген бөтә күңеле менән яратып өлгөрҙө. Әммә ... ны үҙе уҡыған институтҡа саҡыралар, ғилми эшен ... шатҡандар. Унан һуң, фатирында тороп ҡалған ҡатын да, ОЛшийҙым, ҡайт, тип яҙа. Ҡояшҡа, сихри матурлыҡҡа мул гөйәкһеҙ нисек йәшәр Лидия? Ә йырҙары? Лидия күңеленән ıхизә»не һуҙҙы. Эсенән генә ул шул йырҙы гел көйләй. Һүтррен әйтә алмай, ә күңеле был йырҙың әллә ниндәй ней колектәрен, сихри бөгөлдәрен сағылдыра.

Егерменсс бүлмәләге сирле... — Ишектән ингон |нитарҙы Лидия Николаевна ярты һүҙҙән бүлдерҙе.

Нимә, нимә булған?

Булмаған, ишекте ярып килә!

Хэҙер!

Лидия Николаевна ишекте асырға ҡушты, үҙе алғараҡ ык ı ы:

Ни булды, Сәбилә?!

Минең... балам юҡ! Баламды урлағандар! Итстәһегеҙме?!

Тукта, Сәбилә, яйлап һөйлә, мин бер ни ҙә ш аамайым!

(лбилә аҡайған, шашҡан күҙҙәрен бер карауатҡа, бер шәнгә ҡаҙай, асырҒана, ситлектәге инә арыҫландай сапсына, гиртҡән имсәктәренән туктауһыҙ һөт саптыра.

Юҡ! Урланылар! Йыуындырайым тип, сисендерә генә |........ағайным — юғалды! Юҡ! Әбүбэкерем юҡ! Өләсәһе, ı йнәм ни тиер! Табығыҙ, табығыҙ баламды!

Ул арала санитар Сәбиләнең ҡулын артҡа шаҡарҙы, исеһе килеп укол ҡаҙаны. Сәбилә, хәлһеҙләнеп, һирлуатына ауҙы:

Мин... табасаҡмын уны! Алыҫ китэ алмаҫтар! Минән ш кмпа алмаҫта-а-а-р...

(обилә йоҡлап китте. Лидия Николаевна ауырыу ırгәһендәге ултырғысҡа ултырҙы. Карауатта туҙып яткан ш»ға ҡараны.

Уйын тамам, Лидия Николаевна. Һине нишләтергә,

Әзслғужина Хашим эргәһенә инергә уйланы ла, туктап ҡалды. Юҡ! Ихсанбайҙы үҙенең кабинетында көтөр кәрок. Күрәҙәсе ҡарсыҡ уны барыбер Шакираға ебәрер.

Ҡул сәғәтенең тек-тек йөрөүен тыңлап, Шакира тынып ҡалды. Ҡыҙыҡ. Ул көтмәгәндә үҙен эҙәрмән булырға этәргән, зиһенен биләп, яҙмышына әйләнгән ғүмерҙәрҙең тормош юлдары киҫешкән нөктәнең уртаһында ҡалды. Нисек бутағаи уларҙы тормош! Йәшәү өсөн көрәшә торғас, ҡарайып та, ғәрипләнеп тә бөткәндәр. Ә барыбер көслө тоҡом! Барсынбикә үҙе генә ни тора! Ул әле лә инә арыҫлан кеүек. Ул барында Мәҙинәгә, моғайын, бер ниндәй ҡурҡыныс янамаҫ. Ә Ихсанбай... Хәйер, ана ул үҙе инеп килә, үпкәһс туҙған гармун күрегеләй ғыжылдай.

— Инергә... мөмкинме?

— Мөмкин.

— һеҙ... Әҙелғужинамы?

— Мин — Әҙелғужина.

— Хашимдың эшен, тимәк, һеҙ алып бараһығыҙ.

— Мин.

Ихсанбай көс-хәл менән ултырғысҡа ығышты. Күҙен Шакираға секерәйтте:

— Мин, иптәш Әҙелғужина, Хашимдың ғәйепһеҙ икәнен әйтергә килдем. Малайҙарҙы... ул үлтермәне. Уларҙы... минең кәнтәй тамаҡтаны.

— Ә һеҙ...

— Мин Ихсанбай. Ихсанбай Моратов.

— Тимәк, һеҙ... тере? Тимәк... — Әҙелғужина уныц алдына военкоматҡа Ишмөхәмәт булып яҙған андатманы, Хашим өҫтөнән яҙылған шикәйәтте, ФЗО-ға китеүселор исемлеген, фермалағы һауынсыларҙың һауған һөтн күрһәткесен килтереп һалды, — быларҙың барыһы ла һеҙҙсц ҡул менэн яҙылған?

— Минең ҡул менән.

— Ә хәҙер тағы бер аңлатма яҙығыҙ. Уларҙың барыһын да һеҙҙең ҡул менән яҙылыу хаҡында һәм Хашимдың ғәйепһеҙлеген раҫлау тураһында...

Ваҡыт яй аҡты. Әҙелғужина һаҡ саҡырманы, тырышып-тырышып аҡ ҡағыҙға ҡара эштәрен яҙған Ихсанбайға һүҙ

кушманы. Үҙе килгән. Әҙелғужина — эҙәрмән. Ҡалғаны — органдар)ше. Тәүбәгә килеп, ярлыҡау һорап аяҡ аҫтына млган бәндәне нисек бикләп ҡуяһың? Ихсанбайҙың |Лсңгс оҙәм ҡотон осормалы ҡиәфәте Хоҙай тарафынан поп пои яза түгелме? Ә бит Әбүбәкер, моғайын, атаһына охшаған. Мәгәр был әҙәмгә ҡарап, уның ҡасандыр фәрештә сур.исмдо булыуын төҫмөрләү мөмкин дә түгел... Әҙелғужина ,ц Хашимдың «Дело»һын яба. Уның ғәйебе юҡ. Шакира у ны. моғайын, Кәкере ауылды үткәнсә оҙата барыр. I м|>мошона мәғәнә, йөрәгенә дәрт, дарман биргән был суфый КИофотле кеше менән хушлашыу, моғайын, уға еңел булмаҫ. |ик нишләйһең? Ҡатын-ҡыҙҙың яҙмышы — һайлаусы ,шда. Ә ғорурлығы — үҙенән ҙурыраҡ һәм... үҙенән илдараҡ тыуған.

Яҙҙым. Ә хәҙер... миңә нишләргә?

һеҙгәме? Белмәйем. Мин бары Хашимдың «Дело»һын ......ым. Уның ғәйепһеҙлеген иҫбатланым. Хушығыҙ.

Хушығыҙ... — Аптыраған Ихсанбай түрҙән тупһаға гәнтерәкләне.

Башкирцева ҡапыл үҙен контузия алғандағы кеүек тын пыкта хис итте. Баш шаулаймы, әллә тау йылғаһы шу ндай тауыш сығарамы? Тәҙрәгә ҡараны — унда өйөрөлөп, күк менән ерҙе тоташтырып, ҡар яуа. Ғәжәп. Әле генә ҡояш . турғайҙар сырҡылдаша, ағас ботаҡтарында бөрөләр ны |ыға ирәйеп емелдәшэ ине. Яҙғы көн — ярты аҡыл, ми.чмдәре шулдыр. һыу ташыусы ҡарт: «Яҙ етте тип артыҡ иуыҙ йырмай торoғоҙ, сыбыртҡыһын бешә һелтәп «биш Купаҡ» килер әле, шунан һуң ғына көн рәтләнер», — ти ине. I ц ı ı ойткән «биш ҡунаҡ» ошомо икән? Шулай ҙа шомло. Тын ҡыҫыла, күңел тынис түгел. Лидия Николаевна коридор іап атланы. Бәй... егермеңсе бүлмә... асыҡ торасы?! Ишсктән башын тыҡты: койка буш, бары туҙҙырылған •Гшла» ғына иҙәндә аунай...

Ьншкирцева санитарканы тапты.

Моратова ҡайҙа?

— Бүлмәһендә, - - иҙән йыуып йөрөгән ҡатын палатат ашыкты. — Әле генә ошонда инесе... Йоҡлай ине ул, мин һыу алыштырырға ғына... Аһ-аһ! Атаҡ, ул...

Бөтәһе лә йүгерешә, эҙләй башланылар. Башкирцсна Лоҡман Талиповичтың өйөнә шылтыратты — трубканы алыусы булманы. Дауаханала ла юғалтҡандар баш врачты. Лидия Николаевна аптыраны, ҡапыл унын башына юлға сығыу уйы килде. Сәбилә бит әйтте... Юл тураһында низер һөйләнде... Ул шунда уҡ «Тиҙ ярҙам» машинаһын саҡырҙы.

Машина менән байтаҡ ер барып, бер кемде ло осратмағас, Лидия Николаевна шоферға кире боролорка ҡушты. Дауахана машинаһын былай ҙа рөхсәтһеҙ алды, эҙләрҙәр, кемгәлер кәрәге тейер. Күпергә етер алдынан шофер ҡапыл тормозға баҫты. Лидия Николаевнаның күҙено күпер аҫтынан ҡапыл ырғып килеп сыҡкан, сәсе-башы туҙған, имсәктәре апсайған ҡатын салынды. Ҡатын, болоттай ҡабарып, үҙенә ҡаршы килгән пар ат ҡаршыһына сыкты, аттар үрәпсене, икеһе ике яҡка тартылды, арбалағылар, Лидия Николаевна ни ҙә булһа уйлағансы, бейек күперҙән аҡ күбеккә сәсәй-сәсәй һарыҡташтар өҫтөнән ҡайнай-тулай ташҡан йылғаға түңкәрелде.

— Балам! — Әсе тауыш ҡолаҡты ярҙы, тауыш эйәһе үҙе күҙ асып йомған арала тилереп, үкереп ташҡан дарьяға атылды.

— Ярҙамға! — Лидия Николаевна машинанан сығып аҫка ҡараны. Ат та, кешеләр ҙә, тәкмәслэй-токмәслэй, аҡыра-баҡыра түбэн аға, ә бала яр ситендә үҫкән муйылға эләккән. Тулҡындар уның тирэһендә бына етәм, бына йотам тигэп кеүек үрәпсей, бала меҫкен ағастан ыскынырға, үрмәләрю тырыша. Ах! Тағы бер һаҡһыҙ хәрәкәт һәм... ул ташҡыи тәжжэленән йотоласаҡ! Уйланырға ваҡыт юҡ. Лидия Николаевна ярһыу тәүәккәллек менән текә ярҙан аҫка шыуып төшә башланы.

Хашим, Шакира Хисамовна Әҙелғужина менән хушлашҡас, аҙымын ҡыҙыулатты.

— Бәлки, бөгөнгә юлға сыҡмаҫһың, буранлап китте бит, — тине Шакира унайһыҙланыуын нисек тә йәшерерғо тырышып.

Рәхмәт, Шакира Хисамовна, был бәләләрҙән имен-им.ш ҡотолһам, ғаиләм эргәһенән бер ҡарыш ситкә китмәм ғилән һүҙем бар.

Ҡыҙынды... бик яратаһың, ахыры... — Ҡар өйөрмәһе Швкира Хисамовнаның йөҙөн шаршау булып ҡаплай, ләкин Кашим һиҙә: ул керпектәрен түбән төшөргән.

Килеп сыҡ беҙгә, Шакира Хисамовна. һөйләүегеҙ |уйынса, зат та булып сыҡтығыҙ. Шәһәрбаныу ҡәйнәм тураһында ауыл халҡында бик күп матур хәтирәләр һаҡлана. Кешеләр хэтерендэ якты иҫтәлек ҡалдырыу һәр кемдең хэленән килмәйҙер...

Беҙҙең ғаилә өсөн һеҙ — икенсе Шэһәрбаныу, Шакира Кисамовна!

Рәхмэт инде, бигерэк ҙурлайһығыҙ!

Көтәбеҙ һеҙҙе, Шакира Хисамовна!

Хәйерле юл... Хашим!

Шулай хушлашты улар. Арттан берәй ылау килһә, мшапын, ултыртып алыр. Әллә инде алда... Бәй, күпер ... дә «Тиҙ ярҙам» машинаһы тора. Ул арала берәү килеп уның еңенэн тартты:

Ярҙам! Ағай, ярҙам ит! Лидия Николаевна, уф, бата! Үлә бит был мәрйә!

Хашим аҫка ҡараны. Бер ҡулына бала тотҡан, икенсе ы менән ботаҡка йәбешкән ҡатын ярты биленән һыуға умған, ҡулы ысҡынһа, йә ботаҡ һынһа...

Арҡан, йә... трос бармы?

Бар, ағай!

Хашим йәһәт кенә фуфайкаһын сисеп ырғытты, арҡанды биленән уратып бәйләп, икенсе осон шоферға тотторҙо:

Нык тот! Ҡалбырҙама! — Хашим күҙ асып йомғансы ... оуйлап ташҡын сайыуҙан таштары ғына ыржайып торған ярға атлыҡты...

Ьоршәйеп, кесерәйеп ҡалған Ихсанбай Таулы урамы |;ш атланы. Ҡар ҡатыш ямғыр тағы ла көсәйгәндэй, еле псган йыға, һыуығы үҙәккә үтә.

Япа-яңғыҙ икән ул был донъяла. Улай тиһәң, улы бар. и күргеһе килә Ихсанбайҙың фәрештә сүрәтле шул

баланы! Бер генә ҡарарға, тағы бер генә күрергә! Магазинға инеп бер ярты, тоҙло балыҡ алды. Шул яртыны балыҡ ҡойроғона ҡушып һурып ултырғанында ниндәйҙер урыҫ кешеһе килде эргәһенә.

— Ты хор-роший мужик! — тине теге, Ихсанбайҙың яурынынан ҡағып. — Дай бог тебе... — ирекәй тотлоҡто, ахыры, Ихсанбайҙың ҡиәфәтенә ҡарағас, ниндәй ҙә булһа теләк телэргә йөрәге етмәне. Ихсанбай эсеп бөтмәгән шешәне, ҡалған балыҡты уға тотторҙо ла ары туйтаңланы, аяҡтары үҙҙәренән-үҙҙәре фәрештә сүрәтле малай йәшәгән йортҡа алып китте. Әрләһендәр! Туҡмаһындар! Типкеләһендәр! Милиция саҡырһындар! Ихсанбайҙың улын күрмәй хәле юҡ. Бер ҡарар ҙа... унан... Унан ни булһа ла булыр. Ғәлимәләгә ҡыҙын да күрергә тейеш әле ул. Әсәһс, Барсынбикә, тоҡом-үрсемен һаҡлайым тип, ниндәй генә хәлдәргә төшмәне! Күкбүренең теге арланысы?! Ҡашҡар! Ул үрсемен Ихсанбайҙың күҙе алдында, танауы аҫтында ихатанан эйәртеп алып сығып китте! Юу-у-ҡ, Ихсанбай, нимә тиһәләр ҙә, кеше әле! Кеше булыуҙан туҡтамаған ул! Йөрәге тибә, башы эшләй. Тик, ғәжәп, Лоҡман өйөндә ут юҡ, ишектәр шар асыҡ. Өй һыуыған, толка ҡалмаған, бала тауышы ла сыҡмай, ҡайнағаһының һимеҙ мәрйәһенән дә елдәр иҫкән...

— Әбүбәкер! Улым!

Тауыш юҡ. Сәғәт кенә текелдәй. Сәғәтме, әллә Ихсанбайҙың сикә тамырымы? Юҡтар! Киткәндәр! Ҡапыл Ихсанбайҙың зиһенен бер уй телеп үтте: «Аттар!» Ул ҡураға атлыҡты: аттар ҙа, арба ла юҡ. Көрттән әрселгән ергә ҡабат ҡар юрған һырыған, эҙ ҙә, өн дә юҡ. Тып-тыныс. Ихсанбайҙың арҡа буйын семерҙәтеп, башына эҫе бәрҙереп бер уй, ҡурҡыныс уй йүгерҙе: «Ҡасҡандар!»

Күбәләкләп яуған ҡарға башта борсаҡтай боҙ, аҙаҡ сәнскеле ямғыр бөртөктәре ҡушылды. Ҡаршы ел аяҡтан йыға. Ихсанбай һырмаһының еүешләнеп ауырайыуын тойҙо, елкәһенән һарҡҡан ҡарлы-боҙло һыу арҡаһы буйлап аға. Аяғына кейгән итек ҡуңыстары ла лыҡа һыу. Көсөм барҙа атлап ҡалайым тип, ул һаман алға ынтылды. Ләкин... араҡы

еле бөттө. Баш геүләй, тамаҡ кибә. Ул, тәмәке көйрәтергә Вула, ҡулын кеҫәһенә тыҡты. һыу! Бында ла һыу! Шырпы ш юмәке лә лысҡылдап ята. Йә Хоҙай! Өнмө был, төшмө? Млм, хатта июнь баштарында ырашҡыла өшәнеп үлгән мшеләр бар. Шулай уҡ Ихсанбайға шулар яҙмышы яҙҙымы икән? Ҡырҡ өсөнсө йыл, Тирэкленән йыуаға тип сығып к м геп, әсә менән ун йәшлек малай үлде. Уларҙың өйөлгән Оыпыр эргәһендә ҡулдарын «утка» йылытып ултырған кеүек катҡан кәүҙәләренә Ихсанбай бит үҙе барып сыҡты! Юҡ! Ихсанбайға үлергә иртә әле. Әбүбәкерен табасаҡ ул! (әмәрәһен күрәсәк! Әсәһе «уйнаш емеше» ти ҙә бит... Ба шының ни ғәйебе? Ихсанбай шул тиклем ниндәй гонаһ м.||ды? Бына шулай яҙ еткәс өшөп үләрлек нимә эшләне ЛС?! Зарифа үҙ башына үҙе етте... Малайҙарҙы... Эх! Күкбүре... ул...

Күкбүре... Ул да юҡ. Кешенән ҡасҡан булды, бүреләрҙе ла үҙһенмәне. Ә, бәлки, бүреләр уны үҙһенмәгәндер? Шулай булмаһа, тоҡомдашы менән боғаҙға боғаҙ килер инеме? Ах, Күкбүре... Кемдең башына һине ырыуҙаштарыңдан айырыу ны килгәндер?

Ихсанбай хәҙер үҙенең күпме барғанын да белмәй, ә бына Юлдан яҙғанын ғына яҡшы төшөнә. Ул инде атламай, Ьврмәнә, ниҙер эҙләй. Кәбән төбө булһа икән! Ләкин ул күренмәй. Ут! Ут кәрәк уға! һыуыҡ елегенә, үҙәгенә үтте. Ана ағас... Сатыры шундай ҙур... Төбө ышыҡ кеүек. Ҡороһары ла етерлек. Ихсанбай, талған, туңған аяҡтарын көскә ми.щдырып, тәнтерәкләп, шуларҙы бер урынға өйә башланы.

һинме был, Ихсанбай?

Ихсанбай турая бирҙе. һағайҙы. Ҡайҙан килә был тауыш? Күкһылыуымы өндәшә? Әллә Әбүбәкерме?

- һин бында... нишләйһең?

Ут яғам! — Ихсанбай эргәһендә тере йән булыуға ҡыуанды.

Утты улай яҡмайҙар!

Ишмәмәт?! һин...

Утты дөрөҫ яҡмайһың!

Ләкин ул яна! Яна! Күрмәйһеңме, яна! Уф! Миңә эҫе, МИҢӘ бик эҫе булып китте, Ишмәмәт!

Пхсанбай өҫтөндәге кейемдәрен алып ата башланы. Ух! I....срэ! Эҫе! Усаҡ шул тиклем ҡыҙыу яна, түҙер эмэл юҡ. Гороп ситкэ китер ине — аяҡтары тыңламай. Ә ел көсәйә.

| |71

Ҡысҡыра, тулай, үкһей! Усаҡтар күбәйҙе! Улар берәү, икоү, өсәү... күп! Бик күп усаҡ! Көслө ел сыҡты. Өҫтән, **ағае** башынан, ниҙер шаурап ҡойолдо. Ихсанбайҙың алдына баш һөйәге, тағы аяҡтар, ҡулдар тупылдап ҡойолдо. Ул! Ишмәмәт! Әле генә ошонда ултыра ине. Ул, ул шаяра! Ихсанбай баш һөйэгеп утҡа ташланы. Янһын! Ихсанбайҙыц ҡылған енәйэттәре янып бөтһөн, көлдәре күккә осhон! Ул балаһы ҡаршыһына таҙарынып, аҡтан-аҡ, пактан-пак булып барып баҫыр! Усаҡ бешерэ, эҫеhе йөрәккэ үтә, унын **үҙен** до ялҡын ялманы, ул ут эсендә ҡалды! Ана, унын эргәhемо Әҙелғужина килә.

— Мине ҡулға алығыҙ, Әҙелғужина! Гонаһтарым янып бөттө! Мин таҙарҙым, ағарҙым, Шакира Хисамовна! Әбүбәкергә ап-аҡ атай кәрәк, Әҙелғужина!

— Миңә hеҙ кәрәк түгел. Хушығыҙ. — Әҙелғужина ҡараңғыға китеп юғалды, ялкын эсенән сыҡҡандай, әсәhс пәйҙә булды.

— Әсэй!.. Ал мине бынан, эсэй! Теге саҡ ут эсенән алып сыҡтың бит, әсэй!

— Мин Күкhылыуымды эҙләп китеп барам... — Әсәhс туҡтаманы, артына боролманы.

Уф! Гөлбаныу! Ана, ул унын эргәhенә килеп ултырҙы. Күлдәксән. Бәй, игеҙәктәре лэ иҫән икэн. Имеҙеп ултыра би г шуларҙы Гөлбаныу. Ҡайһылай килешә уға бала имеҙеү! **Үҙв** ҡайһылай бэхетле!

— Ғәфү ит мине, Гөлбаныу... hин шундай яҡтыһың!

— hөйөү — бәхет. Мин бәхеттән яҡтырам, Ихсанбай!

— Иртэгэ кәнфитте мәктәпкә өсәүҙе килтерермен. Бәпестәреңә лэ ашатырһың...

— hуғыш йылында тыуғандар кэнфит ашай белмәй, Ихсанбай!

Ихсанбай ҡулдарын Гөлбаныуға һуҙҙы:

— Ҡана әле, берәүһен миңэ бир әле!

Тауышын ул үҙе лә ишетмәне. Өйөрөлөп яуған боҙлауыҡ яңынан ябалаҡ ҡарға әйләнде, күк менән ер тоташты, алға табан hуҙылған ҡулдарға яткан ҡар күптән инде иремәй, усаҡҡа тип өйөлгән сыбыҡтар өҫтөнә ҡарағастан дауылға hелкенеп килеп төшкән Ишмөхәмәттең баш hөйэген до ҡапланы ҡар. Тирә-яҡта ел, бүре олоуына, ағас баштары шаулауына ҡушылған, барыhы бергә буталған ҡуйы ҡараңғылыҡ төштө...

\ кмаңлай, өйөрөн эйәртеп, биләмәләрен ҡыҙырырға
>|.| Ырашҡы әҙәм өсөн генә бэлә. Бигерәк тә уларҙың
ı йөрөгәндәренә ҡыйын. Бүре нәҫеленә иһә ырашҡы —
рам Күк менән Ер бергә тоташып олоған, үрәпсеп
шган сағында өңөндә ни йөрәгең менән түҙеп ятмаҡ
' \кмаңлай атаhы Уҙаманға оҡшаған: көслө, ғэйрәтле,
р Ул оҙәм төлөгөндә тыуҙы, әммә урманда, үҙ иштәре
ын ла үҫте. Ҡылыҡтарҙы ла уларҙан алды. Хэҙер ул —
р илшлығы. Ошо тирэлэге биләмәләрҙең хужаhы. Бөгөн
шҡы, бөгөн байрам. Бындай көндәрҙә мылтыҡ
шп ары яңғырамай, ағас, йә таш артына ышыҡланып,
Һим ı бер кем көбәк тоҫкамай. Аҡмаңлайға әллә күпме йәш-
исәк жәргән. Тамаҡтары туҡ: ҡарт бер мышыны йығып
ırланылар. Юлдарында унан башҡа ла ваҡ-төйэк осраны,
ыл ауыҙҙарына инде. Уйнаҡлап килә бүре өйөрө, тэбиғәт
и оергә ҡотороп, тулап-аунаҡсып килә.
\и.|, алда бер ҡараҫҡы күренә. Кеше. Сыбыҡ өйөмөнә
кул һуҙған. Насар еҫ килә үҙенэн. Тәбиғэттә бындай еҫ юҡ.
Оары кешенән генә сыға. Йәне көйҙө Аҡмаңлайҙың. Ул
ıгас, ойөр ҙэ тынды. Барыhы ла кеше тирэлэй сүктеләр.
гере әле. Һирәк-hаяҡ унын ауыҙы ҡыбырҙай, алға
шпа н яланғас бармаҡтары тартышып ҡуя. Кешегэ ниҙер
ı Локин яҡын барырлыҡ түгел: еҫе яман. Тэбиғэттэ
ı ıган сҫ. Аҡмаңлай сирҡанды, үҙенең биләмәhендә яман
ı ıратып ултырған ҡараҫҡыны күрә алмауҙан тешен
ı ıрлатты. Сит уға әҙәм заты. Әйтерhең дә, бүре hәм кеше
ıсан да тэғэм бүлешмәгән, ерҙәш йә hыуҙаш булмаған,
берсhен бәлэ-ҡазанан ҡотҡарышмаған. Әле бүре кешегә
ı ксше бүрегэ килгэн. hарыуы ҡайнаны Аҡмаңлайҙың.
Мп ıыла гороп, ҡараҫҡы эргәhенә килеп, hыңар ботон
рҙс Бүре эсенән сыҡкан бысраҡ hарҡындыны ел кешенең
ıа сәпәне. Әммә кеше ҡыбырламаны, ҡымшанманы.
Аҡмаңлай артынса ошо ҡылыҡты өйөрҙәге hәр бүре
ı ıаны. Уларҙан hибелгән hарғылт шыйыҡса тиҙҙән боҙға
ıı ıс !>үреләр тантана итте: hин үҙең айырылдың бөйөк
ıı Тэбиғәттән — кеше! hин өҫтөн ҡуйҙың унан үҙенде!
Ьим! Һин ят бауыр иттең башҡа тереклеккэ үҙенде!
hынға әйлэнгэн ҡараҫҡыны ҡалдырып, үсе ҡанған
ыңғайына артабан олаҡты.

Көн нисек тиҙ боҙолһа, шулай тиҙ рәтләнде. Күк йөҙө ҡара болоттарҙан әрселеү менән ҡояш килеп сыҡты ла, үҙенең ғәфү иткеһеҙ оҙаҡ күренмәй тороуынан оялғандай, бар көсөнә яҡтырта, йылыта башланы. Ырашҡыла ергә ятҡан ҡар оҙаҡҡа барманы, бер-ике көндә йырғанаҡ булып аҡты ла бөттө. Ер өҫтөндә тәүге ҡыяҡтар йәшәрҙе, битләүҙәрр умырзаялар тиртте, сыйырсыҡтар иртәнән кискә тиклем бихисап йырҙарын яңғыратты. Ағастарҙа ырашҡыға тиклем үк бүрткән бөрөләрҙән ыуыҙ ғына ҡыяҡтар морнаны. Донъя инде нисәнсе мәртәбә үрсем-ҡурпы ҡалдырыу хаҡына сираттағы бөйөк миҙгелен башланы.

Барсынбикәнең дә бөгөн күңеле иләҫ-миләҫ. Өйөн гено түгел, урамының эсен дә, тышын да ялтыратып ҡуйҙы. Былтырҙан ҡалған сүп-сарҙы өйөп яндырҙы. Быйыл, бәлки, ул бында йәшәмәҫ тә. Күңеле уның Тирәклегә тарта. Ләкии бөгөн мәрйә врач ейәне Әбүбәкерҙе алып киләсәк. Шуға тулҡынлана Барсынбикә. Күтәп алған, шуны булдырыу, донъяға имен-һау тыуҙырыу хаҡына күп михнәттәр күрҙе ләһаң ул. Балнистан бөгөн сығаралар Әбүбәкерҙе. Барсынбикә уның эргәһенә көн дә барҙы. Үҙе лә сирләүго ҡарамаҫтан, мәрйә врач Әбүбәкер эргәһенән китмәне, Барсынбикә алып барған ризыҡты ла ҡарап, һайлап ҡына ашатты. Ә бер көн врач менән Барсынбикә араһында шундай һөйләшеү булды. Һөйләшеүҙе шундағы аҡ халатлы йәш ҡыҙ һүҙмә-һүҙ тәржемә итеп торҙо.

— Мин һеҙҙең ейәнде, Әбүбәкерҙе, бик яратам, — тине мәрйә, бер аҙ күҙгә-күҙ ҡарашып ултырғандан һуң.

— Рәхмәт, — тине Барсынбикә. — Уны һин ҡотҡарҙың. Сәбилә тыуҙырҙы, һин үлемдән алып ҡалдың.

— Тимәк, икенсе әсәһе мин булам?

— Шулай тип тә булалыр. Ул аҙымды һәр кем яһай алмаҫ ине.

— Ләкин... Хашим килеп сыҡмаһа... Бала ла, мин дә һыу төбөнә... — Мәрйә кескәй устары менән битен ҡапланы. — Ах! Баланың шул мөлдәге күҙҙәре! Уның шул тиклем йәшәгеһе килә ине!

— Шуға ла һауыҡты ул. Йәшәгеһе килгәнгә тием.

Ул миңә бик ҡәҙерле, инәй! Мин тиҙҙән Ленинградҡа ...м Уида минең фатирым бар. Яҡшы эш көтә. Баланы... ...ҙем мсион алайым, инәй! Мин уны уҡытырмын! Ҙур кеше

Һин үҙең... беҙҙең яҡтарға нисек килеп сыҡтың, ҡыҙы

Башкирцева ҡыҙарҙы, тәмәке ҡабыҙҙы.

Ул оҙон тарих, инәй. Ҡатмарлы. Быға минең фцмилиям һәм... һеҙгә ике тамсы һыу кеүек оҡшаған йөҙөм и Мин... туғандарымды эҙләнем.

Гаптыңмы?

Алай... — Ҡарсыҡ, күҙҙәрен аҫҡа төбәп, һүҙһеҙ ҡалды.

Локин... йырҙарығыҙҙы үҙ иттем. Үҙемдең, ысынлап та, башҡорт икәнемә төшөндөм.

I [зге ниәтеңә рәхмәт, ҡыҙым. Ләкин һин Әбүбәкерҙең ... кмрҡты артылғас, күңеле болоҡһоп, туғандарын эҙләп ил гиҙеүсе геләмәйһеңдер бит?

Юҡ. Быны мин бер кемгә лә теләмәйем! Ләкин... мкергә бында еңел булмаясаҡ. Әсәһе лә, атаһы ла юҡ. ...ә ҕик оло йәштә.

Мин, әлбиттә, ейәнемә тик бәхет кенә теләйем. Ләкин, ...ноңә яҙмыш тарафынан ниндәйҙер ғазаптар төшкән икән, ...ы бондә нисек яҙлыҡтырһын?! Икенсе бер кеше уны ...ле ло, бәхетһеҙ ҙә итә алмай, духтыр!

Мин һеҙҙе төшөнмәнем, инәй!

Минең ейәнем үҙенә яҙған ғүмерҙе ҡалай ҙа үҙе үтер. ... и ;па-бабалар, ғөмүмән, ир баланы ете йәшенә тиклем ...и олосэй тәрбиәһендә ҡалдырған.

I имәк, миңә баланы бирмәйһегеҙ?

Өлегә — юҡ. Йәйҙәрен кил беҙгә, аралаш. Үҫкәс — күҙ

Рәхмәт, инәй! — Мәрйә ҡапыл уның алдында |кчлнды, Барсынбикәнең ҡулдарын алмаш-тилмәш үбә шины. Барсынбикә көләмһөрәне:

Касан яратып өлгөрҙөң был баланы? Балнистамы?

Морйә ҡаушаны. Тороп, тәҙрә эргәһенә килде.

Бтәһен дә һөйләп... һүҙ менән аңлата алмам кеүек. ... и.щ биргәнендә Сәбиләнең яратыуы миңә күскәндер... ... һәр ҡатын-ҡыҙ бала хаҡында хыяллана. Бәлки,

хыялымдағы бала Әбүбәкер сүрәтендә булғандыр. Мин һеҙҙең килснегеҙҙе лә, Сәбиләне, бик йәлләй инем...

Ошондай һөйләшеү булды Барсынбикә менән Башкирцева араһында. Барсынбикә үҙе лә моңһоу күңелле мәрйәне яҡын күреп өлгөрҙө. Ләкин баланы бирә алмай. Үҙ балаларына бирә алмағанын кеше ейәндәренә бирә, ти бит. Барсынбикә Әбүбәкерен, Мәҙинәнең, йәнә Ғәлимәнең ҡыҙын әҙәм итеү өсөн барыһын эшләйәсәк.

Барсынбикә, йөрәкһеп, ҡапҡа тышына сығып баҫты. Ана килә улар! Башкирцева бер ҡулы менән Әбүбәкерҙе етәкләгән, икенсе ҡулында — ҙур ғына төйөнсәк.

— һаумыһығыҙ, инәй!

Алыҫтан уҡ сәләм биргән врачтың ҡулынан ысҡынып, Әбүбәкер уҡ кеүек Барсынбикәгә атылды:

— Өләс! Ура! Өләс! Мине сығарҙылар, өләс!

Камалетдинов, коридорҙа һуңғы аяҡ тауыштары тынғас, иркен тын алды: бөгөнгө сыбар көн дә үтеп китте! Ул, ирәйеп, урынынан тороп, тәҙрәне асты — танауға баҡсала ҡотороп сәскә атып ултырған муйылдың иҫерткес еҫе бәрелде. Ҡыҙыҡ, былтыр, ҡороған кеүек булғас, Әйүп шуны ҡырҡып ырғытырға ҡушҡайны, э быйыл был эбей ағас танырлыҡ та түгел. Эйе, сыбар булды бөгөнгө көн, бик сыбар... Район, беренсенән, сәсеүҙе тамамланы. Дауаханаға мәрхүм булып ҡалған Лоҡман Талипович урынына яңы баш врач килде. Үҙ һүҙендә тора торған, ныҡлы ғына егеткә оҡшаған быныһы.

Камалетдинов, муйыл еҫенә туйынған һауаны күкрәгә тулғансы рәхәтләнеп һулағас, кире өҫтәле янына килде. Өҫтәл ситендә тоноҡ емелдәгән әйбергә эйелде: ручка. Көмөш тышлы ҡәләм. Тағы онотоп ҡалдырған уны Лидия Николаевна! Ләкин был юлы Әйүп уны хужаһына тиҙ генә кире ҡайтара алмаясаҡ. Майор Башкирцева менән улар бөгөн генә, ошонда хушлаштылар.

— Һеҙгә инмәй китеүҙе килештермәнем, — тине Лидия Николаевна, тынлыҡты беренсе булып боҙоп.

— Хушлашмай китерһегеҙ тигән уй башыма инеп тә сыҡманы. — Әйүп ҡапыл тотлоҡто, был моңһоу күҙле ҡатын

һаубуллашыуҙың былай ауыр булырын әле генә и......юилсктән, арҡа буйы семерҙәне, тамағына төйөр тығылды. — Яманлап иҫкә алмаһағыҙ ине, Лидия Николаевна. Эштән бушап, бер иркенләп һөйләшеп тә ултырып булманы.

Эйе, уныһы үкенескә ҡалды... — Лидия Николаевнаның йәш юшан төҫөн хәтерләткән күҙҙәре И шкәҙәне. — һеҙ ҙә... Эш бит... төрлө саҡтар булды.

Шунан икеһе лә тынды. Араларында ҡара шәүләләй торған Лоҡман Талиповичты иҫкә төшөрҙөләрме — оҙаҡ .....н шым-шым ултырҙылар. Башта Әйүп Ғәзизович телгә .....е

>йберҙәрегеҙ күп булһа, оҙатырға кеше бирәйем.

Минең ни... — Лидия Николаевна көләмһөрәне, — вало плмәм юҡ инде. Үҙемде белә башлағандан бирле ноҡ....сән бер фотокарточкам, китаптарым, аҡ халатым...

Фото тигәндәй... Ҡыҙыҡ... Бер рәсемдә мин дә ғүмер портәтәм үҙем менән. Ҡайһы саҡ шул фотолағы малай-Әйүптән кәңәш һорайым.

Ә минең фотола үҙем юҡ. — Лидия Николаевна торҙо, и го аяғөҫтө баҫты. — Мин ул рэсемдәгеләрҙән юлға • ш кҫш һайын фәтиха һорайым.

Барып еткәс, үҙегеҙ тураһында, зинһар, хәбәр итегеҙ, I....н Николаевна!

Һис шикһеҙ. Мин әле был яҡтарға киләсәкмен. мкср ҡала бит!

Сәсеү бөтөү менән, саҡ ҡына бушағас та, барып ырсп белермен.

Рәхмәт. — Лидия Николаевна Әйүптең ҡулын йомшаҡ ı. үҙ итеп, йылы итеп ҡыҫты. — Рәхмәт бөтәһе өсөн дә...

Шунан китте. Был ҡәләм ҡайһы арала, нисек ятып ындыр — Әйүп хәтеренә төшөрөргә тырышһа ла, иҫләй ины, оммә бойоҡ ҡарашлы һылыу докторһыҙ ҡалған ы Әйүпкә толҡаһыҙ һәм буш кеүек күренде. Ярай әле IV ҡарт муйылды көҙҙән ныҡышып ҡырҡтырмаған. Ш пим гаралған хуш еҫ Лидия Николаевна менән киткән ı мшғонан ҡалған бушлыҡты тултырғандай.

Инергә... ярайлы? — Әйүп әңер ҡараңғылығына ш кабинеты ишеге асылыуға башын күтәрҙе.

һеҙ?!

— Эйе, мин. Барсынбикә Моратова. Мөхәммәт тауға килмәһә, тау үҙе килә торған булған тиҙәр уның ҡаршыһына.

- Мин һеҙгә күптән йыйына инем. Ултырығыҙ. — Әйүп, өҫтәл артындағы ултырғысынан тороп, ҡарсыҡты тәҙрә эргәһендәге ҡәнәфигә ултыртты, үҙе уның ҡаршыһынан урын алды. — Ниндәй йомоштар килтерҙе һеҙҙе бында, инәй?

— Асылыма ҡайтырға ҡарар ҡылдым. Шуны юллап килдем.

— Асылыңа?!

— Эйе, асылыма. Әбүбәкерем менән Тирәклегә ҡайтып китмәксемен. Мәҙинә ҡолонсағым янына. Мин унда үҙ исем-шәрифтәремдә ҡайтырға тейешмен.

— Үлгән ирендең дә, үҙеңдең дә реаль шәхестәр икәнлегегеҙ хаҡында архивтан документтар күптән алынған. Әбүбәкерҙе...

Барсынбикә ҡәнәфигә сумып, бөршәйеберәк ултырған ерәнән кәүҙәһен турайта төштө:

— Ейәнемде һау саҡта үҙем ҡарайым. Бәлийерәп бөткән ҡарсыҡ түгелмен әле.

— Дөрөҫ уйлайһың, инәй... — Әйүп тынғыһыҙланып урынында борғоланды. — Тимәк, Мәҙинә өләсәйле булды. Эй шатланыр инде!

Әре-һәре генә яҡтылыҡта сырыштары, битенең янғандан ҡалған йөйҙәре артыҡ күҙгә ташланып тормағас, Барсынбикә йәшерәк күренгәндәй, сөм-ҡара күҙҙәрсндә нур сәсеп осҡондар һикерешкәндәй.

— Мәҙинә кеүек баланың өләсәһе булыу тимә бер кешенең өлөшөнә теймәй торғандыр!

— Мин дә шулай уйлайым... — Камалетдинов йәнә тотлоҡто, ҡолаҡ остарына, сикәләренә ут ҡапҡанын ярай әле әбей күрерлек түгел, ҡараңғы.

— Мин дә бик һағындым, инәй, ейәнсәренде.

Ҡапыл ауыҙынан ысҡынған һүҙҙәрҙән һуң Камалетдинов бөтөнләй ҡаушаны, тороп, асмалы тәҙрә ҡаршыһына баҫты, папирос ҡабыҙҙы. Ҡараңғылыҡ ҡуйырғандан-ҡуйыра барған бүлмәлә уңайһыҙ тынлыҡ урынлашты. Бер талай өндәшмәй ултырғандан һуң Барсынбикә һүҙҙе үҙе ялғарға булды, ахыры:

— һағындым, тип, яусы ебәрергә ятмайһындыр бит?

Камалетдинов төпсөгөн тәҙрә аша ташланы.

Бик еборер инем...

Бярсынбикә Камалетдинов ауыҙынан көрһөнөү, һ... ырашыу ҡуша сыҡҡан ауазға ҡаршы ҡаты итеп тамаҡ ... ыр...

Ебәрәм тиһәң дә ебәрә алмайһың шул...

I ... иңә?

һ ы, — Барсынбикә уйнаған һымаҡ башланған ...әберҙең олоға олғаша барыуын тойҙо, һүҙ айышын һаман ... юи бөтә алмағанлыҡтан, тотҡан ерҙән һындырмай ... ип ... әп һөйләшеүен белде: — Нигә тип... Сәүит осоронда I, хан заманында ла ул һиңә сыҡмаҫ ине. Беренсенән, ...ренсен яу аты, аты булмаһа, эйәр-өпсөндәре ҡайтмаған...

Уиыһын мин дә аңлайым...

Ә нимәһен... аңламайһың?

Ьренсенән тигэс, икенсе-өсөнсө сәбәбе лә була ...идыр?

Ә-ә... — Барсынбикә кире килеп ҡаршыһына ултырған ...летдиновтың күҙенә тура ҡараны. — «Икенсенән — йәш ...рмаһы», тиер был ҡарсыҡ тип көтәһевдер. Аны әйтмәйем. ...ыһын үҙең дә беләһең. Икенсенән, ул һинең дошманың — ...бағат ҡурпыһы.

Уныһы инде, үткән эшкә — салауат... — ...летдинов һүҙен нисек осларға белмәй интекте. Үҙе лә ...ҡны аңлай бит инде ул хәлдең мөшкөл икәнен: партия ...лһы, етәксе, өйләнгән, балаһы бар... Әммә көнөн-төнөн ...рған, эсе-тышын өткән һөйөү утынан ҡотолор башҡа ...рп кайҙа?! Шуға күрә ҡарсыҡтан бигерәк үҙен ...ысландырыр өсөн, ахыры: — Кеше бер һөйләр ҙә тынар ...ыс. — тиеү менән сикләнде.

Эй Әйүп, һыу ағып китер ҙә ул, таш ҡалыр.

Таш? Ниндәй таш?!

Ғүмер буйы күңелендә йөрөткән таш!

Мәҙинәнең... ни ғәйебе?!

I әйебе юҡ Мәҙинәнең, һин дөрөҫ әйтәһең. Ләкин...

II шһап Гөлбаныуҙың игеҙәктәрен уйы менән тыумаҫ элек ...рған ксүек, һин дә Сибәғәт тоҡомона ғүмер буйы теш ...ғанһың, уны юҡ итеү теләге менән янғанһың! Мәҙинәне мцдам сығар! Һеҙҙең ҡушылыуҙан тамыр йәйерлек ...мәт куриы ҡалмаясаҡ!

— һин, инәй, ярай, әүлиә лә бул ти. Ләкин һин хаким түгел! — Урынынан ырғып торған Камалетдинов, нишләрю белмәйенсә, ут ҡабыҙҙы. Ҡабыҙҙы ла, башын артҡараҡ ташлап, ғорур баҫып торған Барсынбикәне күрҙе. — Ғәфү итегеҙ... Мин, ахыры, ҡыҙып киттем. Мин был турала һүҙ башларға тейеш түгел инсм. Нисектер... ҡапыл килеп сыкты. Ҡыҙым бар, Флоридам...

— Эйе, һин, улым, һүҙ башларҙан алда ҡыҙың тураһында уйларға тейеш инең. Ул һинең ярҙамға бөтәһенән нығыраҡ мохтаж.

Мәликә иренең эштән ҡайтҡас оҙаҡ ҡына гәзит укып ултырыуына ғәҙәтләнгән. Баланы йоҡлатҡас, йоко бүлмәһено үрелеп ҡараны ла аптырап ҡалды: Әйүп мендәргә ҡапланған, ауыр тын ала.

— Әйүп! — Тауышына эсендәге хафаһы сыкты Мэликәнең. — Йә Хоҙай! һиңә ни булды?

— Йоҡлайым! — Әйүп башын стена яғына борҙо. - Утты һүндер.

— Сүн... һүндерермен, — ашыкканда йә тулҡынланғанда Мәликә «үҙ телснә» күсеүсән, һиҙеп ҡалһа төҙәтә, һиҙмәһо инде сутылдай бирә. — Әллә эштә берәй...

— Арығанмын, Мәликә, йәнгә теймә. Бар, ана, бала янына ят.

— Син ҡыуа тип кенә... - Мәликә үҙен ҡулға алырға тырышты. Тормош, бигерәк тә Камалетдинов менән йәшәү йылдары, уны ла бит күп нәмәгә өйрәтте. Хәбәр әйтерҙән алда иренең кәйефен байҡарға ла, ауыҙын үлсәп асырға ла — барыһына — ул ир ҡатыны булғас ҡына төшөндө. Элек булһа, ире тупаҫ һөйләшә тип, үсегеп, ҡырт боролоп сығып китер ине, хәҙер ул башҡасараҡ эш итэ. Бына ул Әйүм ишетерлек итеп ауыр көрһөндө, юрғанды, күтәрә биреп, иренең иңбашына тартып япты, ситтәрен ҡымтыны. Ошоларҙы эшләгән ыңғайға:

— Япраҡ еле һалҡынса, тэҙрэләрҙе йыуғайным, үтәнән-үтә өрә. Эшең дә күп шул, йә, йоҡла. Үҙем дә иртәрок ятһаңсы тип әйтергә ингәйнем, — тип һөйләнде. Инде хәҙер утты һүндереп сығып китергә кәрәк, ләкин, улай итһә.

июмсң күңел төбөндә ятҡан һорауы бөгөн дә |йосок. Көн артынан көн үтә, ә төйөн, сиселмәгәс, һи шн урая. Унан һуң бит Кэкере ауылдағы ҡарсыҡ та, щц.ш, моңгелек түгелдер, оло бит инде ул...

Бөгөн бер ҡарсыкты ерләйҙәр ине...

I атынының тупһыҙ, атһыҙ-юлһыҙ төндә былай һүҙ башлауы Әйүптең ташҡан талағын сайпылдыра торған һуңғы • | и ы оулды.

Көнө бөткән — көн дә үлә!

Шулай инде, тик мин... теге Кәкере ауыл ҡарсығы Оуимшайы тип кенә... Флорида бит...

Кокере ауыл ҡарсығына... нәмә булһын? Иртәгә ул юрт аласаҡ, э унан... Тирәклеһенә һыпыртасаҡ!

Гирәклеһенә? Ә ниңә?

Мәҙинәһенен тупһаһына ятып, эт шикелле ҡарауыллап рга бына нимәгә!

Мәҙинәнең?! — Таулылағы һуңғы ваҡиғалар Мәликәне Огр нәмәгә лә аптырамаҫҡа өйрәтһә лә, ул ҡатын-ҡыҙ асылын мнманы, төпсөшә бирҙе. — Ә ниңә... Мәҙинәгә?

Моҙинэ уның ейәнсәре булып сыкты. Бына нимәгә!

Квйефе үҙгәргән Камалетдинов, әйләнеп, арҡаһына ятты, менән һөйләшкәс уға еңелерәк тэ булып ҡалды, ппе. Һәр хәлдә, йөрәгенә шыналай ҡаҙалған ауыртыу |>| әндәй булды.

гСәҙер, моғайын, ҡатыны менән дә арыулап һөйләшә I ш р Ьер уйлаһаң, бында, Әйүптең Мәҙинәне яуапһыҙ һәм п мохәббәт менән һөйөүендә, Мәликәнең ни ғәйебе? I тыны уның йәмһеҙ түгел, эммә ул ошо рәүешенән ун ı йөҙ тапҡырға матурыраҡ булһа ла, барыбер күңеле шәлә булыр ине. Әйүп әлеге хәлендә үҙен йотом һыуһыҙ, к ı ә. селлә ҡояшы аҫтында тороп ҡалғандай хис итә. нән дә тәм тапмай. Юғарыла болғаналар. Маленков н Хрущев араһында иғлан ителмәгән йәшерен көрәш Иикита Сергеевич партияның Үҙәк Комитетының исе секретаре булып алды. Крәҫтиәндәргә паспорт бирә ı нылар, төрмәләрҙән сәйәси тотҡондар ҡайта. Илдә ш. иҙеп барған көсөргәнеш кэмеүен Әйүп тә тоя, ләкин хәл уны шатландырмай. Көндәрҙең береһендә мхоттең дә бит ҡайтып төшөүе бар, тигән уйҙан ғына ла ı е шпой. Мәҙинә Әйүптеке һэм тик уныҡы ғына. Мәҙинә

унының хистәргә, ярһыу кисерештәргә бай төштәрендә, Мәзиңә унының ил, кеше ғәмен ғәмләп үткәргән тынғыһыҙ көндәрендә, уйҙарында, теләк-хыялдарында. Етмәһә, Барсынбикә мспои булған һөйләшеү бәгерҙе өтә.

- Ҡыҙынды... әсәһенең тыуған ерендә дауалар кәрәк, - тине ҡарсыҡ, Мәҙинә хаҡындағы һөйләшеүҙән һуң байтаҡ тынып ултырғандан һуң.

— Ни өсөн? Флорида бит минең дә ҡыҙым. Ә мин ошо ерҙә тыуып үҫкәнмен, — тине Камалетдинов.

Барсынбикә Камалетдинов тауышындағы ҡатылыҡты ишетмәнеме, әллә ишетмәмеш булдымы, һүҙен нисек ойотоп башлаған, шулай дауам итте:

— Мәликә тыуған өй ҡаршыһында ҡарт бер сәтләүек ағасы үҫә. Ҡыҙыҡай оҙайлы ваҡыт шуның һөтөн эсерғо тейеш.

— Ағастың һөтө буламы?

— Мин күргәнемдә эйтәм. Ул ябай ағас түгел. Ҡатыныц башта ете тәүлек буйы көнөнә етешәр көйәнтә һыу ҡойһон шуның төбөнә. Раббынан үҙенең һәм ете быуынының гонаһтарын кисереүҙе һораһын. Ағас төбөндә зат-зәүере ҡылған ҡара эштәрҙе йылғанан әсе тир сығарып ташыған һыу менән сайҙырһын. Етем-еһергә көн дә хәйер өләшһен, үҙен тәрбиәләгән ҡатындың һуңғы көндәрен еңелэйтешһен. Үҙсн үҫтергән тупраҡтың хәйер-фәтихаһын алғас ҡына үҙе теләгән яҡҡа юлланыр...

Ошондай һөйләшеү булды улар араһында. Тик быларҙы нисек итеп Мәликәгә аңлатырға?

— Мәликә, һин тыуған йорт алдында ниндәй ағас үҫә?

Ҡапыл бирелгән һорау Мәликәне аптырауға һалды:

— Ә ниңә кәрәк ул һиңә?

— Ҡарсыҡ Флоридаға шуның һөтөн эсерергә ҡуша.

— Ах, шулаймы? Кедр ағасы ул. Беҙҙә, ысынлап та, унан һөт яһайҙар! Шул ярҙам итер тиме?

— Эйе, ләкин унда оҙаҡ йәшәр кәрәк...

— Ах, Әйүп! Ә бит мин... күңелем менән һиҙә инем шуны! Күп тапҡырҙар уйланым, төштәремдә күрҙем. Мин кедрға йылғанан һыу һибәм, имеш, ә ағас беҙгә күнәк-күнәк һөт бирә...

— Ә ҡарсыҡ, ысынлап та, һиңә һыу һибергә ҡуша уға!

Ах, Әйүп! Баланы һауыҡтырыу әмәле төшөмә кергән ган бит! Ә мин, сантый... Ә һин, һине эштән ебәрерҙәрме? н с тобиғәт! Әйүп, кит эшендән! һин һүрәт төшөрөрһөң! һин оит иҫ киткес оҫта төшөрәһең рәсемде!

Йә, бар, ял ит. Иртә кистән хәйерлерәк. Иртәгә үҙең Оирми смҡ ҡарсыҡҡа. Мин ышанып бөтмәйем, әлбиттә.

Әйүп!

Бар, ят, йоҡла. Башым тубал кеүек.

Гынысйоҡо.

һиңә лә.

Моликә сыҡты. Бүлмә эсендә ул ҡалдырған хуш еҫ есп гора бирҙе лә, экренләп таралды. Әйүптең ҡатын-ҡыҙ ҡылыгын тоймауҙан талсыҡҡан, зарыҡҡан тәне ут кеүек ини Лх! Ошо хәлдә лә бит ул Мәликәгә яҡынлай алмай. Артабан нисек йәшәр улар? Ярай, Мәликә ҡыҙы менән ҡайтып га китер. Бер һөнәрһеҙ, хәҙер инде ситкә әйләнгән ерҙә писек тәрбиәләр ул Флориданы? Әйүп көсәнеп күҙен). Ҡайһылыр бер арала ҡабаҡтары эленде, күҙ алмалары а ойоғандай итте. Ана, товарняк өҫтөндә күлдәк-ыштанын флаг кеүек итеп елгә тотҡан, ташкүмер саңы һыры уҙан ҡап-ҡара шайтанға әйләнгән яланғас малай елә. Сүмсрсн ҡурҡыныс аҫтына ҡуйып шулай этләнмәҫ ине — Ившлроттәр тәненә ҡаҙала, бөтөн ере тырнауҙан ҡутырлап, сығып бөткән.

Етемлек был, ағай. Мин аңлайым һине. Үҙен дә етем игәме, һине шундуҡ үҙ иттем.

Атаҡ, Әптеләхәт түгелме һин?

Мин.

Ҡайҙа китеп бараһың?

Китмәйем, ҡайттым. Мәҙинәгә ҡайттым. Улыма.

Шатланырға ла, иларға ла белмәй Әйүп. Бына унын >рснән йәш атылып сыҡты. Тик... ниндәй йәштәр улар? К у ,| плштәре лә бит төрлө була.

Әйүп, Әйүп! — юрғанынан кемдер тартҡанға Һыңҡылдап илаған Камалетдинов иләмһерәп тороп ултырҙы.

Ксм, кем бар!?

Гынысланм... Мә, һыу эс. Әйүп, унда кемдер ишек III и ыи

— Ишек? — Әйүп ҡатыны ҡулынан стаканды алды, ҡалтыранған ҡулдары менән иреленә яҡын килтерҙе. — Ут ҡабыҙ.

— Ишеккә мин барайыммы?

— Үҙем. — Әйүп, аяҡтарына тапочка эләктереп, аҫҡа төштө.

— Кем бар унда?

— Әйүп Ғәзизович! Был мин — Әптеләхәт!

— hин?! Әптеләхәт?!

Ағас кеүек ҡатҡан ҡулдарын көскә күтәреп, Әйүп Камалетдинов келәне күтәрҙе.

Яҙ, hуңлап килеүенең әжерен ҡайтарғандай, тирә-йүнде йәһәтләп, уңған килен егәрлелеге менән, йәшелгә, гөлсәскәгә күмде. Мөһабәт һәм тантаналы йәшеллек менән ҡапланған урмандарҙы кәкүктең саф, күтәренке тауышы яңғыратты. Был тантанаға бала сығарыу шатлығына сумған башҡа ҡоштар ҡушылды. Хөсәйен, атын тапҡас, hыуы ҡайтҡан Тәрән үҙәк аша йылғаға боролдо: Күгатты йыуып, үҙе лә hыу эсеп алыр. Юғиһә, бынау хәйерсене тапҡансы ахаллаҡайымға төштө. Ҡорhағы ла асты асыуға — унынына түҙер. Кисеү буйында hыу йыуаhы, ҡымыҙлығы, ҡуҙғалағы етерлек — шулар менән алдар тамағын. Их! Хозурлыҡ. Йәш үлән араhына зәп-зәңгәр күҙҙәрен көлдөрөп күгәрсен күҙҙәре емелдәшә, болон томбойоҡтары, аҡ таждары менән бәүеләhығыла йылмайып сәләм бирә.

Селектең hары сәскәләренә бал ҡорттары ҡунаҡлаған. Ошо саҡлы матурлыҡҡа әҙәм йерәғе нисек түҙә икән? Ошо тиклем гүзәллекте ни хәлдәр итеп эсеңә hыйҙырмаҡ кәрәк?!

Хөсәйен, атынан төшөп, бит-ҡулдарын йыуҙы, hыу эсте. Иылғаның икенсе яры — ҡая. Өҫкә ҡараhаң, ҡәпәсең осмалы. Ҡырҡылған кеүек текә таш стенала бер нәмә үҫмәй тиерлек. Оҙағыраҡ аңшайып торhаң, өҫтөңә йоморо таш килеп төшөүе лә бар. Ҡаянан ҡолаған әҙме таш ята йылға эсендә. Таштар башлыса ҡыҙыл булғанлыҡтан, йылғаның hыуы ла ҡыҙғылт кеүек.

Асыҡтырған. Эсеп алғас үлән баштарын йолҡҡоларға hгрппкоп атын ботаҡҡа бәйләп, Хөсәйен ҡуҙғалаҡ йыя ıаны. Әллә ни ҙураймаған әле улар, шунлыҡтан йомшаҡ итлеләр. hыу йыуаhының да ыуыҙ ғына сағы, үҙе сөсө, үҙе йомшаҡ. Тамаҡҡа ымhынған Хөсәйен донъяhын онотто. Кипыл кул аҫтынан тиерлек ҡош осоп сыҡты. Күрәһең, ояhы ıн. баҫып ултырған. Бынағайыш! Был бит... ат hөлдәhе. Гегс кош унын башына оя ҡорған булған. Хөсәйен, эйелеп, яттын күҙенән эскә ҡараны -- ҡоро үлән, мамыҡ араhында дур|мс, бишме сыбар йоморт ка ята. Әкәмәг. Тукта, был кайhы аттың... Ҡапыл унын йөрәге йыш-йыш тибә башланы, енкә шмырҙары hулҡылданы — был бит hарайғыр! Был ıыы hолдәhе! Былтыр, ямғыр мул булғас, был ерҙәрҙә цүиоүск ятты. Ә быйыл ҡар оҙаҡ hәм әкрен ирене, дым күпме ıа. шунса ергә hеңеп бөттө. Эх! Бына ҡасан осраштыҡ hннгц менән, дуҫҡайым! Ғорур тәбиғәтле, сапсан холоҡло кнйым! Әҙме кешеләрҙең hөйөүе, әҙме бәндәләрҙең зәhәр кониэшеүе яғылды hинең йылтырап торған мәғрур hынына! П бейәләр... Уларҙың иң уҫалдары hинең ут бөрккән ıııшрың аҫтында баҙап, ҡолаҡтарын шымартып ҡаушап ı р ине... hинең тояҡтарың аҫтында таштар оҫкон сэсте, ı ирак саң болотона әүерелде; ебәк ялдарынды ямғыр, ысыҡ ы. слдәр тараны. Эй hарайғыр! Бер нэмэ лэ мәңгелек ı шул был донъяла. Мин hинең ҡәҙимге ат түгел икәнеңә, ...шрҙар, дөлдөлдәр затынан иҡәнлегеңә бөтә ауылды ш п.фып бөткәйнем. Ә hин... Хөсәйен унын hерәйеп щ юрған ҡабырғаларына ҡараны. Тукта, тукта... Әллә кабырға hөйәктәрең ике ҡат hинең? Бына бит: геләрс ҡыҫҡараҡ, улар ҡоймос hөйәгенә етмәҫ элек үк щмимланган... hуң былар бит ҡанат эҙҙәре! Эйе! Эйе! Кә энендең инде ат hөлдэhен генэ күргәне бар, лэкин |.|||и.|... hарайғыр! hин, ысынлап та, толпар тоҡомонан ınhың! Эй аҫыл мал! Ауылда әле бер ҡолон уйнаҡлап •и vл поҡ hинең сабый сағың, ул ике тамсы hыу кеүек оммаған! Күҙҙәре ҡап-ҡара, үҙҙәре Мәҙинә күҙҙәре кеүек юрап, тамылйып тора. hин Ерҙә нәселенде ҡалдырып I ıhен, малҡайым!

Хөсәйен йәштәрен тыйманы. Ана улар тупылдап болои томбойоҡтарына тама. Наҙлы күгәрсен күҙҙәренә аҫылына. Төшһөндәр. Аҡһындар. Хөсәйен бөгөн мең-мең йылдар артында ҡалған һәм һарайғыр сифатында бөгөнгөгә тоташҡан Мәңгелектең үҙе менән ҡауышты.

Атлай-йүгерэ һыуҙан ҡайтып килгән Мәҙинә арба тауышына башын күтәрҙе. Ҡарасәлең, үҙ уйҙарына күмелеп, кемдендер юлын ҡыя яҙған. Ярай әле арбалағы кеше атын туҡтатты. Ахыры, ҡатын-ҡыҙ үҙе. Мәҙинә, артҡа сигеп, дилбегә тотҡан оло ҡатынға өндәште:

— Үтегеҙ, инәй, үтегеҙ...

Арбалағы ҡатындың үҙенә текәлгән ҡарашын тойҙо Мәҙинә.

— Шөкөр, тулы һыулы биҙрәләргә тап булдым.

— Мин, инәй, юлдыҡлы ул, — Мәҙинә шунда ғына был ҡарсыҡтың эргәһендә сыҡайып ултырған баланы шәйләне, э арбаның артында, баҡыр күҙҙәрен ялтыратып, «һағыҙ»ын шартлата сәйнәп, тарбаҡ мөгөҙлө кәзә ята. — Ҡайҙа юлландығыҙ, инәй? Бәлки, туҡтап сәй эсеп китерһегеҙ, самауыр ҡайнаған.

Ҡарсыҡтың ҡарашынан айырыла алмайынса, Мәҙинә яурынын ботлоҡ биҙрәләр баҫыуын да онотто. Юлаусы ашыҡманы. Бына ул сандан һаҡланып башына икенсе ҡат итеп ябынған ҡара яулығын сисеп һелкте, унан тамһынып, бер күрергә зар булған кешеһен, ниһайәт, осратҡандай, һағышлы, шул уҡ ваҡытта еңсл бер һулыш менән көрһөндө:

— Мин килеп еттем, шикелле, балам. Туҡтар төйәгем ошонда минең, Мәҙинә ҡыҙым, — тине.

«Мәҙинә?!» Мәҙинәнең арҡа буйы зымбырланы, ҡапыл ғына йөрәге ҡабынып, тамағы кипте:

— һин?! Фәүзиә инәй!..

— Мин. Лэкин Фәүзиә түгел, Барсынбикә. һинең әсәйеңдең... Күкһылыуымдың әсәһе.

Мәҙинәнең мөлдөрәмә тулы биҙрәләре саңлы юлға дынғылдап төштө, әммә түгелмәне. Ике пар дөм ҡара, ҡуйы оҙон керпектәр менән ҡаймаланған бер иш күҙҙәр бер-

бер-беренә һынап, һорау һәм ғәжәпләнеү менән баҡты. «Был ...лыҡты нисек мин элегерәк шәйләмәгәнмен. Ҡарағаттан да ҡарараҡ күҙҙәрҙе минең башҡаса осратҡаным ...имлпы!» тигәндәй йәш, шуға күрә лә ...ҡыҙыҡһыныусанлығын, балалығын юймаған ҡараш. «Бәндә ... ...ғә был хәтлем дә оҡшар икән! Йә инде, тыуҙырған асоһсио түгел, өләсәһенә ике тамсы һыу кеүек оҡшаған ... юмсағым! Ярабби! Ошо саҡлы һылыулыҡты, камиллыҡты ...ратыр осөн ниндәй ҡөҙрәт кәрәктер Хоҙайға!» — ти ...ҡсәһе, олоһо.

Ижауың бармы?

Бар. — Мәҙинә эйелеп биҙрәнән һыу алып, І. ...ынбикәгә һондо. — Тамағыңа теймәҫме, һалҡын...

Булһын. Төпкөл шишмәһенең һыуы. Күпме м.ипшлмдым шуны эсергә.

Өләсәй... Мин дә! — Мәҙинәне бала тауышы ...шдсрҙе. Ҡайһылай матур бала! Ике күҙе — нур бөркҡән ...ксп күҙҙәре. Аһ! Әллә Биктимер менән Иэнтимер...

Ҡарсыҡ йомолоп, йотлоғоп һыу эскәс, ирендәрен ялап ... а ...ынтылған балаға ҡараны:

...)с, улым, эсәр һыуың, ейәр ризығың ошо ерҙә булһын. ...миллаһир-рахманир-рәхим...

Мәҙинә, ашығып, биҙрәләрен кире көйәнтәһенә элде:

Ҡапҡаны асайым! Атындың башын беҙҙең өйгә бор, Барсынбикә өләсәй!

Ҡарсыҡ дилбегәне ҡул суғына йомарланы:

Юҡ, ҡыҙым, минең нигеҙ ҡоромаған. Йәшәгән өйөм ...мсп. Оло йорт урынына, Алла бирһә, өй күтәрербеҙ. ...шомә, тик мин... үҙ тайсама туҡтайым. Әбүбәкер ҡустың ... морттоң төп хужаһы булыр. Олатаң Диңгеҙхан ҡорған ...к бит әле ул.

Мәҙинә тулы һыулы биҙрәләре менән Барсынбикәнең ...мә йылдар эйәһеҙ моңайып ултырған өйөнә йүнәлде, ...>. ...ын шығырлатып тәгәрәгән арбаны, арбалағы батшабикә ...ифәтле ҡарсыҡты, фәрештә сүрәтле малайҙы һәм баҡыр тарбаҡ мөгөҙлө кәзәне һөйрәгән бейә, ял һәм ҡуләгә пом, кинәнеп бышҡыра-бышҡыра, ботлоҡ биҙрәләре щромә тулы һыу көйәнтәләгән йәш ҡатын артынан

Ауылда хэбәр «йүкә телефон» аша йәшен тиҙлегендә таралыусан булһа ла, Барсынбикәне күрергә ауыл халкы һерлегешеп ағылманы. Күрәһең, ҡарсыҡтың ғәҙәти **булмаған** яҙмышы ҡамасауланы. Мәгәр Мәҙинә артынса Хашим, **унын** артынан Хашимдың һәр аҙымынан эҙ яҙлыҡтырмаған, ул ҡайтканы бирле йәшәреп, һырҙары яҙылып киткән **Ғәзимв** килеп инделәр. Дауытты күтәргән Маһинур ҙа үҙен оҙаҡ көттөрмәне. Барсынбикә үҙенә бар булмышы менән талпынған Дауытҡа ҡулдарын **һуҙҙы:**

— Собоханалла машалла! Ата-инәле, оҙон ғүмерле бул, ҡолонсағым!

Бала менән Барсынбикә араһында күҙгә күренмәгоп, лэкин күңелдән күңелгэ күпер һалынғанын йөрәге менон тойоп өлгөргән балаһыҙ Маһинур шул саҡ ҡапыл йәненсң шэме һүнеп, күңеленән толҡа китеүҙе тойҙо. Ул быға тиклем Дауытты Ғәзимәнән ҡыҙғанып ыҙалай ине, хәҙер быныһы... ҡарсығы...

— Инәй. — Аптырап ҡалған Маһинур бармаҡтарыпн кескәй ҡулдың ҡағылыуын тойҙо. — Инәй, алдыңа саҡ ҡыиа ултырып торайыммы?

Күҙенә шатлыҡ ҡатыш ҡаушау йәше эркелгән Маһинур Әбүбәкерҙе күтәреп күкрәгенә ҡыҫты:

— Ултыр, бәпесем. И алла, ҡайһылай бер матур балаһың!

Өй гөжләне. Ашъяулыҡҡа һый-ризыҡ өйөлдо, самауырҙың уттыҡсаһы төтөн урғылтты, урын-ер ҡаралтыһы ҡағылып-һуғылып яңынан түшәлде. Бер арала Барсынбико Мәҙинәне үҙ янына саҡырҙы. Шауҡал бармаҡтарын камзул кеҫәһенә тығып, бәләкәй генә күн моҡсай тартып сығарҙы.

— Бына...

Мәҙинә моҡсай эсенән сыҡкан фирүзә ҡашлы алтып беләҙеккә ҡарап шаҡ ҡатты.

— Бер нәмә лә аңламайым. Мин уны төрмә һаҡсыһына... Мәскәүҙә... Әптеләхәт менән күрешеү хаҡына...

Барсынбикә йөҙө көлһыу төҫкә инеп ағарған ейәнсәренсң ҡулын үҙенә яҡынайтты һәм беләҙекте һаҡ ҡына кейҙеро башланы:

Улар икәү ине. Был һинекенең ише. һыңары. Унын ...лығын Мөғлифә ҡарсыҡ, беҙҙең ҡәрҙәшебеҙ, Ҡөрьән ...нә яҙып ҡалдырған булған.

Рәхмәт... — Мәҙинә ҡулын күтәрә биреп ҡарауға ...ҙек ҡояш яҡтыһында меңләгән нур көлтәһе сэсте, фир... ...әләр тағы зәңгәрерәк, баҙығыраҡ булып күренде. — Иҫ ...әле бүләк бит был, Барсынбикә өләс! Торғаны мөғжизә!

Барсынбикә үҙ ғүмерендә беренсе тапҡыр Мәҙинәнең Пмип.ша ҡулын һалды, иплэп кенэ унын йылҡылдап торған ...толомдарынан һыйпаны:

Һин үҙең мөғжизә, балаҡайым. Ә хәҙер бар, кейен, ...ҙерлән.

Кейенергә? Әҙерләнергә? Ә нигә?

Шулай кәрәк, — бөтәһен дә ҡапыл асып һалып иП.чи лренең йөрәген куҙғатыуҙан, ярһытыуҙан ҡурҡкан Барсынбикә Мәҙинәне беләктәренән тотоп үҙенең эргәһенә ...ырты:

Кайғы ғына түгел, шатлыҡ та сабырлыҡ һорай. һине ...көртер өсөн юлға иртәрәк сыҡтым.

Әллә... — Мәҙинә, урындыҡтан шыуып төшөп, ...ынбикәнең алдына тубыҡланды. — Әллә...

Әйе, балам, ул, кейәү ҡайтып килә.

Барсынбикәнең ауыҙынан шул хәбәрҙе ишетеү менән ...ығып йүгергән Мәҙинәнең хәле бөткәндән бөтә барҙы. ...үрсн менгәс, алдында борғаланып яткан оҙон юлға ... Әлегә ул буп-буш. Ләкин күп тә үтмәне унда аҡ ... пәйҙә булды. Автомобиль яҡынайған һайын ...нәнен йөрәге нығыраҡ туланы. Күкрәк ситлеге тар уға ... Порәк бына-бына уны емерер ҙә бынау икһеҙ-сикһеҙ ...рлеккә һабантурғай булып олғашыр. Әптеләхәт! ...м, моңло ҡурайҙан яралған татлы һағыш кеүек ...раған был исем йылытты унын йөрәген! Ҡанат та, терәк ... ука ошо исем. Тик ниңә оҙаҡлай ул? Ниңә анау аҡ ... гүбәгә етмәй туктап ҡалды? Унан ике ир төштө.

Ҡул бирешеп, ҡосаҡлашып хушлаштылар. Береһе **машинам** кире ултырҙы, икенсеһе, арҡаһына биштәр аҫҡаны, былаи атланы.

— Әптеләхәт! — Мәҙинә үҙ тауышын үҙе ишетмәне, йүгерер ине — аяҡтары тындаманы. — Әптеләхәт...

Ул, тыны менән тартып алырҙай булып, ҡарашын ап-ак сырайлы, үҙенә табан ашыҡкан яңғыҙ һынға төбәне.

Дүртенсе өлөш

ЙОНДОҘҘАР ТӨНДӘ ТОҠАНА

Беренсе бүлек

Көйҙөргөс ҡояш аҫтында Мәҙинә йәнә алға уктаЛДы. Аяҡ аҫтындағы ҡомло тупраҡ һаман артҡа тарта, ә улының һайын сөрөшеп-нығышып күҙ күреме ерҙә автоматын тотоп күккә гек... он улына — йөрәк майҡайына, ҡан һауҙырып сит-ят ерҙә хеҙмәт иткән Дауытына талпына. «Дауыт!» — Ульт)мде. Әлегә ул үҙенә имгәклэп, шыуышып килгән әсәһен күрмәи. Әммә тауыш килгән яҡка автоматын бора. Мәҙинә ...рға, бөтә көүҙәһе менән улына күренергә итә — ҡомло ра к ирек бирмәй, һаман артҡа ишелә, ишелгән һайын **иию** ғәзизенән алыҫлаша. Дауыт үҙенә яҡынларға ...шкан йән эйәһенә тоҫҡаны... Мәҙинә үҙ-үҙен белешмәй ...кырып ебәрҙе: «Был мин — әсәң!»

Баҫлығып, әсе күҙ йәштәренә сыланып, үҙ тауышына үҙе ш киткән Мәҙинә тороп ултырҙы. Бә-эй, аласыҡ .....п.пына ятып ҡына торайым тигәнсе йоҡлап киткән н Гөшлөккә күтәрелгән ҡояш тәҙрә быялалары аша п.|,| ҡыҙҙыра. Мәҙинә кипкән, күҙ йәше тоҙона ҡатҡан ...әрен яланы. Ниндәй төш... Дауытының сик буйында ...иткән еренән яҙған хатын алғандан бирле күңеленә ...габа алмай шул. Уйҙарынан йөрәгенә, эс-бауырҙарына ... хафа торған һайын ҙурая, тауҙан тәгәрәгән епшек ҡар ...олкәнәйә, зиһенен томалап, күкрәген ауыр йөк ...иыҫа. Усаҡ эргәһендәге бактан һалҡын һыу алып эскәс, ...морәк тибеше урынына ултырғандай, башына

һиллек килгәндәй булды. Аласыҡтың асыҡ ишегенән нигеҙ ташы зргәһендә һөйләшкән тауыштар ап-асыҡ булым ишетелэ башланы.

— Кит инде, күрше, берҙән-бер һораған йомошомдо...

— Мин һиңә әйтеп торам даһа: нимә һораһаң да һора. түлке Һарайғырға теймә!

— Нимә, күрше ауылдағы ҡоҙаларға ғына сабып барым килгәнсе атындың укаһы ҡойоламы?

— Ҡойолор ҙа!

— Бирмәйһең инде?

— Бирмәйем!

— Ҡарусман! Бынан кире ҡашлы тарағымды һорап ҡара!

— Кэрәге бер тин!

— Үҙендекен юғалтҡанынды әсәй белеп ҡалһа әле!

— Мин уны юғалтманым! һынды!

— һынғас, күрһәт һынығын!

— һынған тараҡты башыма ҡаҙап йөрөйөм ти мин һиңә! Ә бына ҡарусман тигәневде әсәйгә әйтһәм...

— Йә ярай, эйтмә инде... һарайғырҙы биреп тормағасыц әйттем инде.

Мәҙинә, ҡыҙҙарының уйындан уймаҡ сығара яҙғансы бәхәсләшкәнен тыңлап, үҙ алдына йылмайып ҡуйҙы. Ҡара һин уларҙы, бэләкәс кенәләр, ә холоҡ-фиғелдәре айырым-асыҡ һиҙҙерә үҙен. Бәләкәй саҡтарында аталары Өфөнәи алып ҡайтҡан ағас ат талаштыра уларҙы. Ажар айғыр рәүешле һарыға буялған был уйынсыҡ берәү генә. Мәҙинэ әле шул саҡта һарайғыр хаҡында һөйләп, атҡа шул исемдс ҡушҡайны. Ат йәнле, малай сүрәтле Көнһылыу шунан бирлс был уйынсыҡҡа сат йәбеште, тыныс, оялсан тәбиғәтлс, һапалы Күкһылыуы уны инәлеп тә, аҙға ғына булһа ла һорап ала алмай. Ыҙғышып китеүҙәренән ҡурҡып, өй яһап, донъя көтөп уйнаған ҡыҙҙарын Мәҙинә үҙенең янына саҡырҙы:

— Ҡыҙыҡайҙар, килегеҙ эле. Инегеҙ бында.

Ишектән башта аяҙ күктәй зәңгәр күҙле, ҡыҙғылт нур бөркөп торған бөҙрә сәсле Күкһылыу башы күренде. Әсәһенең яҡларын белә ул. Уны бөтәһе лә ярата. Өләсәһе ҡомартҡым ти, олатаһы Гөлбаныуымдың төҫө ти, атаһы йәшлегем хәтирәһе ти, Мәҙинә үҙе лә, унда әсәһенең төҫ-һыҙаттарын күреп, йәшәр, йәшнәр саҡтарында ауыҙы икмәккә лә туймай, эсе тулы ҡайғы-һағыш менән донъянан киткән әсәһенең

цуамын күрә, күңеленең һыҡранған саҡтарында ошо баланы Йнрогенә баҫа.

Әсәй... — Күкһылыу Мәҙинәгә укталды ла тупһала Гукгап ҡалды, унан әкрен генә шунда сүгәләне, ултырғас, иплэп кı нэ күлдәк итәген һыйпап рәтләштереп ҡуйҙы. Инде ишектән I ниһылыуҙың да ҡыҙғылт ялҡын менән янған бөҙрәләре Күрснде. Асыуҙан күҙҙәре тағы ла ҡараҡ күренә үҙенең.

Әсәй! Күкһылыуың мине ҡарусман тиһәме тағы!

Иı ерктәрҙе икәү итеп Хоҙай бирә. Шуға күрә әсә кеше береһен генә ныҡ ярата, икенсеһен Хоҙай үҙе ҡайғырта, үҙе һаҡлай ГИгондәре дөрөҫ ахыры. Бер кем үҙе өсөн өҙөлөп, ҡурсып Гормаһа ла, етеҙ, теремек Көнһылыу Күкһылыуҙан ҡалышмай үҫсп килә. Өйҙә сыйышып китһәләр ҙә, урамға сыҡҡас Күкһылыуға ул ел-ямғыр тейҙермәй. Туғанын йәберләгән Мйлайҙарҙыщ икмәк шүрлегенә менеп төшөргә лә күп һорамай.

Күкһылыуҙы әсәһе алдына ҡапланған килеш күрмәгәс, Көнһылыу ҙа ишек төбөндә туктап ҡалды. Йәтеш танауын тартып, бер әсәһенә, бер туғанына ҡараны. Тупһала әсәһенең ш ҙәшеүен шым ғына көткән Күкһылыуын саҡырып күкрәгенә Ҡыҫып һөйгәһө килһә лә, Мәҙинә үҙен тыйҙы. Улай итһә, Көнһылыуҙың күңеле ҡатасаҡ, ситләшеп, ҡырағайға әйләнәсәк.

Кыҙым, кил әле бында, бәпесем! — Үҙенә һуҙылған ь\ ıı а Көнһылыу шундуҡ йомолдо.

Әсәй!

Тарағың... юғалдымы ни?

һынды... Һынғас сүплеккә бәрҙем.

Шунда уҡ әйтер инең.

Әсәй! Ә ниңә теге иҫәр Шәңгәрәй Күкһылыуға: «һин Миисц кәләшем!» ти...

Шунда әлегесә тупһала тын ғына ултырған Күкһылыу ҙа ıı п ә килде:

Әйтһә, ул бит — диуана. Барсынбикә өләс диуана-шрҙы ронйетергә ярамай ти!

Әллә инде Шәңгәрәй менән ыҙғышып йөрөнөн, кпокәс?

Әсәй?.. — Көнһылыу бөтөркәле башын күтәреп, КЫнрак ҙур ҡара күҙҙәрен тултырып әсәһенә ҡараны, — ıı ә теге... Хөсәйен бабайҙың Сывай ҡашҡаһы... ысынлап һарай |, ф тоҡомомо?

Ай ата Ғәбиҙә... Унда ла барып етештеңме?

Шvл саҡ эт өргәне, ҙур ҡапҡаның шығырлап асылғаны ıı' ı ıv.

— Йортта кеше бармы? — Русса һөйләшкәп ир тауышына һиҫкәнеп, улынан ниндәй хәбәр алам тип йөрә! б өшөп көткән Мәҙинә, ҡыҙҙарын алдына өйөрөп, тышҡа сыҡты. Ҡаршыһында оҙон, туҙған сәстәрен сал баҫҡни мосафирҙы күреп, Мәҙинэ туктап ҡалды.

— Мин... Мәҙинә...

— Йә Хоҙай! — Салланған ҡаштары аҫтында тағы ла ҡарараҡ күренгэн мосафир күҙҙәре уғының тэьҫиренои Мәҙинә артҡараҡ сигенде:

— Эй Алла... Был бит һин... Давид! Давид Соломонович!

— Мәҙинә...

Күҙҙәрендә табыныу дәрэжәһендә һоҡланыу нурҙарм уйнаған сал сәсле мосафир әкрен генә сүгәләп, фәрепно сүрәтендәге ике балаһын ҡосаҡлап үҙенә ҡарап ҡаткан ҡатыи ҡаршыһына тубыҡланды.

Барсынбикә намаҙ уҡығанда ойоған аяҡтарын шауҡал ҡулдары менән салауат әйтеп һыпырҙы ла әкрен генв урынынан торҙо. Намаҙлығын ҡағыштырып, урҙаға таҫлаи элгәс, урындыҡ таҡталарын көйһөҙләндереп шығырҙатыуҙан ҡурҡҡандай, рамдарға быяла аҫтына ҡуйып эленгон рәсемдәргә ҡараны. Бына улар — уны бер утҡа, бер һыуға. бер һөйөнөскә, бер көйөнөскә һалған яҡын кешеләре. Ана уның Диңгеҙханы. Төркмәнстанда, көршәксе өйөндв төшкәйнеләр был рәсемдә. Диңгеҙхан әле бында үҙенең яугир рухын, тархандарҙан килгән олпатлы-һауалы булмышып юғалтмаған. Алтындары ла хәтһеҙ ине әле ул саҡта. Һай байлыҡ ҡөҙрәте! Нисек күтәрә ул кешене! Ана Диңгеҙхандың бында, тимерлектә, эшләгән сағында төшкән рәсеме. Буйға ла кесерәйгән, тәпэшәйгән кеүек. һауалы, тәкәббер ир арыҫланынан бары бер байғош ҡалған. Ир заттарынл байлыҡтың шундай ҙур тәьҫир көсөн әле булһа аңлай алмай Барсынбикә. Хәтерендә, әле ҡарты иҫән саҡта, ҡулынам киткән малдарын йәлләп иҫереп буҙлап ултырғанында, Барсынбикә уға бер ҡарһүҙ һөйләгәйне. Имештер, Хужа Насретдин бер яҡын дуҫы менән теге донъяға киткән. Ҡараһалар, бында иҫ китмәле байлыҡ, муллыҡ икән. Ни

ишайым, ни эсәйем тимәйһең, хур ҡыҙҙары, ожмах ёмештәреләй тулышып, алдыңа тупылдап йығылырға тора. Баш га бик күңелле булған уға, эммә тора-бара бөтәһе лә иткыта башлаған. Ахырҙа Хужа түҙмәгән, фанилыҡтағы Гормошон күрһәтеүҙәрен һораған. Үтенесен ҡәнәғәтлән-дер! опдор бының. Хужа асылған күк көмбәҙенән аҫҡа ҡарап, н ры к ксйем-һалым, эш эҙләп ҡара тиргә батып унда-бында йүгер! слэгән тоҡомдаштарын күргән. Күргәс, йөрәге баҫылып, Н.шс бер талай муллыҡ-байлыҡ-байманлыҡ диңгеҙенә сумған. Нммо, күп тә үтмэй, бөтәһе лә туйҙырған. Туйҙырып ҡына Кппмай, бүктергән, екһеткән. Шул саҡ уның йоморо башына: «Тукта, был донъяның ожмахынан башҡа тамуғы ла бар бит әле. Уиыһы нисегерәк икән?» тигән уй килгән. Уйланған эш өөткән эш, ул үтенесен фэрештәләргә еткергән.

Хужаны тыңлағас, фәрештәләр: «Эй Хужа! Фанилыҡта шул кәҙәр этлектәр ҡылып, ожмахҡа эләктем икән тип уйларға нисек йөрьәт иттең?» — тигән. «Ниңә, мин ожмахта түгелме ни?!» «Һин тамуҡта, Хужа, тамуҡта!» — булған яуап. Йе, бәндәләрҙең күңеле эҙләүҙән, көрәшеүҙән туҡтаһа, гормош тамуҡҡа әйләнә. Шуны аңламаны Диңгеҙханы. И ға иыуҙарын кисерә алманы... Ихсанбайы ла бар бында. Район һабантуйында еңгән һарайғырҙың теҙгенен тотоп ......сән. Айғырҙың теҙгенен тотҡан да ул, үҙен теҙгенләй белмәне. Үҙен теҙгенләй алмаған бэндә нәфселәренең ҡолона |кмю. Ул да ҡол булды. Самаһыҙ тойғо-теләктәренең, баш бирмәҫ дәртенең ҡолона әүерелде. Шул етте башына. Бары шу и ғына үҙен ваҡытһыҙ гүр эйәһе, Әбүбәкерен етем яһаны...

Барсынбикәнең бармаҡтары һалдат кейемендә төшкән ике ипанс росеменә ҡағылды. Быныһы, диңгеҙ буйында шат йылмайып торғаны, Әбүбәкере. Ленинградта хеҙмәт итә колонсағы. Әптеләхәт кейәүенә рэхмәт, Дауыт менән икеһен жтор кеүек тиң күреп тәрбиәләне, тигеҙ ҡараны. Атай тип п үҫте уға Әбүбәкер. Үҙ атаһы түгел икәнен үҫкәс кенә іс. маспорт алғанда. Ә бына уйсаны — Дауыт. Атаһына ш, аҡһыл сырайлы, оҙонса йөҙлө, ҙур ҡара күҙле матур ег! булып үҫте ҡолонсағы. Үҙе уйсан, э гармун тартһа, бармаҡтары аҫтында бөтә донъя әйләнә, үлгән кешене тергеҙерҙәй көйҙәрен әле булһа бөтә ауыл һағына. Әйткәндәй, ИОүьокерен эллә нишләп йырсыға уҡытманылар. Тауышы ....рҙс телә бит уның. Үҫкәс, Мәҙинәнән арттырмаһа, кәм

булмаҫ. Үҙе лә әллә ниңә армия, флот тине лә йән атты. Тәки китте. Имен-һау булһалар, ике бөркөтө, ике бауыр ите, ИМ йөрәк пәрәһе, ҡайтып та төшөрҙәр. Барсынбикәнең шаукал һуҡ бармағы Дауыт рәсеме эргәһендә туҡталыбыраҡ ҡалды, Фотонан бармағына, бармағы аша йөрәгенә шомло һалҡынлыҡ йүгерҙе. «Йә Хоҙай!» — Барсынбикә ҡулыш тартып алды. һалҡынлыҡ умыртҡа һөйәген семерҙәтте, топсп ҡурыштырҙы, йөрәген әсеттерҙе. «Эй Алла!» — Барсынбикл ҡапыл һалҡынайып киткәндәй булған өйҙән тышҡа сығыу йәһәтен күрҙе. Ҡаталарын эләктереп, ҡомғанына үрелде, ҡояш нурына солғанған болдорона сығып баҫыуға ят бер һаҡалтайҙың игеҙәктәрен ҡосаҡлаған Мәҙинәнең ҡаршыһында тубыҡланып тороуын күрҙе.

Әптеләхэттең кабинетка ингәнсе ситлегенә һыймай типкән йөрәге ҡапыл тынысланды. Камалетдинов «Т» хәрефенә оҡшатып теҙелгән өҫтәлдең иң түрендә ултыра. Яңаҡтарын өҫтәлгә таянған ҡулдарына һалған да уйға сумған. Сираттағы кешенең ингәнен дә, унын Әптеләхсл икәнен дә күрмәгәндәй, белмәгәндәй, ҡарашыи билдәһеҙлеккә, төпһеҙлеккә төбәгән дә ҡаткан.

— Ултыр, Әптеләхәт...

Эргәһендәге күҙлекле кеше — ауыл хужалығы буйынса урынбаҫары — икенсе секретарь Ҡыҙрасов. Һөнәре буйынсв уны электрик тиҙәр. Бында ул ауыл хужалығын етәкләй, «һәйбәт дуэт, — тип уйланы эстән Әптеләхәт, — береһв хәрби, икенсеһе — физика закондарына ярашлы рәүешп тимер сымдарҙың үҙенсәлеген тикшереүсе».

— Та-а-ак... Ирназаров булдымы был беҙҙең? — Береһс лә өндәшмәгәс, Ҡыҙрасов үҙенә-үҙе яуап бирергә ашыҡты. - Эйе... Ирназаров Әптеләхэт Ғимран улы. «Алға» колхозыныц баш аграномы. Шунан, һөйләп ебәр, ялан батыры.... Эштор, сәсеү нисек бара «Алға»ла?

— һеҙҙе «Алға»лағы сәсеү барышы бик нык борсоймо?

Ҡыҙрасовтың түңәрәк йөҙөнә ҡыҙыл таптар бәреп сыҡты. Әйүп Камалетдиновтың керпектәре дерелдәп ҡуйҙы торошон үҙгәртмәне.

' ӧс таған»дың өсөнсөһө — Ғәлимә Минһажева, ручкаһын ı ıı ııı. ниҙер яҙышҡанға һалышты. Өҫтәл тирәләй ултырған башҡа бюро ағзаларының ҡайһыныһы тамаҡ ҡырҙы, ҡайһыныһы төҙгә ҡатып ултырыуында булды.

Кыҙыҡһындырмаһа, — Ҡыҙрасов ҡапыл нәҙегәйгән Муышын көйләй алмай интекте, графиндан стаканға һалып һы\ өсте, — беҙ һине... бында саҡырмаҫ инек! Баҫ! Баҫып н\.ш бир, иптәш Ирназаров!

Баҫһам да, ултырһам да — мин шуны әйтмэксемен: ıv зштәренең барышы өсөн нык борсолған кеше ш |мнюмды бер кеше бишкә ярылырҙай мәлдә эштән айырмай.

Унынын һинһеҙ ҙә беләбеҙ. Яуап бир: ни өсөн бойҙай ү майҙанын кәметтең?

Беҙҙең зонала арыш ныҒыраҡ уңа. Шуның өсөн.

Күрәһегеҙме! Был бит — саботаж! Хөкүмәт планын ı Мсрсү! Был коммунист һүҙе түгел, иптәш Ирназаров! Ә ни өсөн «Алға»ла сәсеү барышы һүлпән? Ни өсөн ул һаман егерме процент?

Беҙҙә ерҙәр һуң өлгөрә. Унан һуң, ҡара һолоно ҡырмай Гороп сэсеүҙең файҙаһы юҡ.

Ҡара һоло! — Ҡыҙрасов, тиреһенә һыйышмай, ғал(туғын тартҡысланы. — Бер һиндә генәме ҡара һоло? Нинә Гшшкалар улайтмай?

Башҡаларҙа минең эшем юҡ. Мин үҙ колхозымдың . ҙары өсөн яуап бирәм!

Шелтә һиңә! Ҡаты шелтә! «Личное дело»ңа индереп ......ә бирәбеҙ! Тауышҡа ҡуям!..

Вптеләхәт, шаңҡыған балыҡ шикелле ултырған Камалетдиновтың Ҡыҙрасов әйткәндәргә мөнәсәбәтен күрмәҫ өсөн, ҡапыл әйләнеп кабинеттан сығып китте.

(Мкҡас машинаһы торған яҡҡа ынтылғайны, транспортын ı менән килгән бухгалтерға биреүен иҫенә төшөрөп, ın ҡалды. Папирос ҡабыҙҙы. Райком алдында киң сатыр һап үҫкән тирәк күләгәһе аҫтындағы эскәмйәгә ултырҙы. ıттә. ул бюроға йүнле хәбәр ишетермен тип килмәне. Шулай ҙа ишеткәндәре, бигерәк тә Камалетдиновтың йөрәкһеҙ ı гөҫлө битараф ултырыуы йәнен көйҙөрҙө. Боламыҡ! А|||.им Гюламығы! Ә ниндәй командир ине! Ҡыйыулығы өсөн |,фы хаҡына йәнен бирергә әҙер торғаны өсөн дә

яратты уны Әптеләхәт. Атаһыҙ үҫкәнгәме — атай урыш.ша күреп ихтирам итте. Әйүптең Әптеләхәткә ярҙамы ла теймәт түгел, тейҙе. Лагерҙан ҡайтҡас партия сафына кирс ҡайтарыуҙы юлланы, ауыл хужалығы институтына Әптеләхәтте лә, Мәҙинәне лә ул индереште, ул тырыштырҙы. Колхоздың баш агрономы итеп ҡуйҙыртыуға ла ул көс һалды Мәҙинәне лә баш зоотехник итеп тәғәйенләргә иткәйне ло, Мәҙинә үҙе ризалашманы, партияға инеүҙән ҡырҡа баш тартты, шуға ғына әле һаман ферма мөдире булып йөрөй. ЭЙО| Әйүптең иткән изгелектәрен оноторлоҡ түгел, тик һуңғы ваҡытта Әптеләхәт уны аңлай алмай. Бер түгел, ун шелтә бирһендәр — уныһына ҡайғырмай Әптеләхәт, ә бына дуҫының үҙгәреүе, торған һайын үҙенән алыҫлашыуы һағайта. Нимв сәбәп быға? Әллә яңғыҙлығы үҙ-үҙенә биклэнергә мәжбүр итәме? Мәликәһе лә китте лә батты. һыуға төшкәндәй зым зыя юҡ булды. Ярты көнгә ярыш юҡ тигәндәй, үткән көи үткән инде, бәлки Әптеләхәткә Әйүп менән иркенллм һөйләшеү кәрәктер? Бәлки, Камалетдинов дуҫының күңеле тЫ бына ошондай һөйләшеүгә сарсағандыр?..

Ошондай уйҙар солғанышында көтөп алды Әптеләхот Камалетдиновтың сыҡҡанын. Башта яңғыҙы суҡайыи ултырған дуҫын Әйүп күрмәмеш булып үтеп китергә лә и е шикелле. Аҙаҡ туҡтаны. Сигарет ҡабыҙғас, Әптеләхәт яғына башын бормай ғына:

— Нимә унда бер яңғыҙың, теге ни... һуңғы һартай кеүск ултыраһың? — тип өндәште.

— Яңғыҙлыҡ хатта иң кәмһетелгән кешене лә күтәрә, ти китап, — Әптеләхәт тороп баҫты.

— Бәлки, шулайҙыр ҙа... Лэкин яңғыҙлыҡты көсло кешеләр генә күтәрә.

Әптеләхәт Камалетдиновҡа табан бер аҙым атланы ла туҡтаны:

— Нимэ, үҙенде көслөмөн, ә мине көсһөҙ тимәксеһеңме? Мэгәр мин дә бер нәмәне аңлағанмын: көсһөҙҙәр өйөрһөҙ йәшәй алмай. һин, иптәш Камалетдинов, өйөрҙән сыҡһаң үҙендең бер кем дә түгел икәненде яҡшы төшөндөрҙөң. һәр хәлдә, мин шуны яҡшы төшөндөм. Хуш.

— Туҡта әле!

Камалетдиновтың ҡаты, ләкин үҙ итеп бойорған тауышын ишетһә лә Әптеләхәт артына боролманы. Ҡайнаған, ташҡан

Һярмуын ни менән баҫырға белмәйенсә, хәтһеҙ ер атлап Влгорҙо. Ярһыған мейеһендә, ҡыҙған табалағы бойҙай бөртөктәреләй, уйҙар һикереште. Кем уйлаған уларҙың юлдары шулай аймылышыр тип? Тик изгелек юраны уға ....сләхәт, Камалетдиновтың Мәҙинәгә төбәлгән ҡараштарында яратыуға оҡшаш һоҡланыу һиҙгән саҡтарында үҙен ҡулға алды, көнләшеү тигән алама хискә тамыр йергә ирек бирмәне. Тора-бара эсендә саҡ ҡына булһа ла Квнс, йөрэгендә бете бар ирҙең ҡатынына һоҡланмауы Минмкин түгел икәнен төшөндө һәм бөтә ирҙәрҙе, шул иҫәптән Камалетдиновты ла — барыһын бергә ғәфү итте. Шунһыҙ Вптсләхәттең үҙенә лә йәшәү ауыр булыр ине. Лагерҙа Какшаған һаулығы, таушалған хыялдарына көнләшеү хисе өҫтәлһә, ул аяҡтан йығылыр ине.

Бирешмәне Әптеләхәт. Бөтә дәртен уҡыуына, эшенә һалды. Дауыты уға үҙенең йәш, көслө саҡтарын хәтерләтеп торҙо. Гөл кеүек үҫеп килгән игеҙәктәрендә Мәҙинә менән икәүһе ираһындағы саф мөхәббәттең емештәрен күрҙе. Бәлки, эле лэ бер иәмә лэ үҙгәрмәгәндер? Камалетдинов менән аңлашыр. Иикыт кәрәк. Ваҡыт ниндәй генә яраларҙы дауаламай...

Әптеләхәт ағай, ниңә улай ҡапҡа төбөндә тораһың? Үт, әйҙә, ин...

Әптеләхәт аптырап башын күтәрҙе:

Бәй, Ғәлимә Мөхәррәмовна, был һеҙҙең өймө ни?!

Үт, үтегеҙ! — Алсаҡ йылмайып ҡыҫтауға ҡаршы тора |Лмайынса, Әптеләхәт ике ятып бер төшөнә инмәгән өйҙөң түпһаһы аша атланы.

I олимәгә тормошона зарланырлыҡ түгел. Ҡыҙрасовтың п инеүе. үҙгәртте уның яҙмышын. һауынсыларҙың публика слетына бергә юлланыуҙары барыһын хәл итте. иттә, ул Саяфҡа ла рәхмәтле: шул һауымын арттырып ҡуҙы, шул фермалағы иң һөтлө һыйырҙарҙы уға беркетте, ш\ етем бер бисәнән герой яһаны, депутат итте, Оишкаларҙың төшөнә лә инмәгән өҫтәл арттарына ултыртты.

Әммә был, Ҡыҙрасов... Кем уны эшен, ауылын ташл;ш Свердловскиға партия мәктәбенә уҡырға барырға күндерҙе? Ул — Ҡыҙрасов. Кем унан, уҡыуҙы бөтөп ҡайтҡас, партияның район комитетына бүлек мөдире итеп ҡуйҙырттьт? Ул — Ҡыҙрасов. Кем уны өсөнсө секретарь дәрәжәһсмл күтәрҙе? Тағы ла ул... Әлбиттә, Ғәлимәнең үҙенә Л1 тырышырға тура килде. Бала менән уҡыу еңел булманы. Төндә кочегаркала эшләне. Һыр бирмәне. Бергә эшләгән рус ҡатыны, Надежда Фроловна, күп нәмәгә өйрәтте уны. Ҡасандыр сауҙа тирәһендә ҙур урында эшләп, елкәһсп.1 сығарып, оҙаҡ ҡына ултырып ҡайтҡан ҡатын Ғәлимәнсм донъяға ҡарашына, үҙ-үҙен тотошона күп төҙәтмә индерҙе. Хатта ҡаш йолҡорға, ирен буярға ла ул шул мәрйәном өйрәнде. Русса әҙәм рәүешле һөйләшергә лә ул Надежда Фроловнанан дәрестәр алды. Йыш ҡына улар араһында бәхет хаҡында ла эңгәмәләр булды.

— Бэхетле булайым тиһәң, — тиер ине Надежда Фроловна тәмәкенән тупаҫланған күкрәк тауышы менән, – Хоҙай бирмәһә, тартып алаһың. Эйе, тап шулай, күгәрсенкәйем. Кешенекен кем үҙенеке итә ала — шул мораҙына ирешә.

— Эйе лэбаһан, — тип килешә Ғәлимә уның менән. Беҙҙә биш балаһын биш мөйөшкә ҡаратып булһа ла һөй, тигән таҡмаҡ та бар...

— Бына-бына! — Надежда Фроловнаның ҡасандыр бик матур, нәфис булып, күп һәм даими эсеүҙән шешенгән йөҙв яҡтырып, күҙҙәре зэңгәр нур сәсә. — Өҫтөнә баҫтың! Һин һәйбәт уҡыусы, гүзәлем! Һиңә һэйбәт ир кәрәк! Һөйәрҙе әйтеп тә тормайым. Буҡаны май боҙмай. Ә бына үҙенде был тормошта королева итеп тоям тиһәң, королһеҙ ярамай! Король мотлаҡ кәрәк!

— Бөтә ҡатын-ҡыҙға ла ундай бәхет тэтемәй шул. — Быны әйткәндә Ғәлимәнең һорғолт күҙҙәрендә Мәҙино шәүләһе хасил булды. Ана бит, бер ҙә көс түкмәй генә яҡшы кешегә кейәүгә сыҡты, хәҙер гөрләтеп йәшәп ята...

— Ә мин нимә тинем? — Надежда Фроловнаның киң асылған күҙҙәренә ғәжәпләнеү ғәләмәте сыҡты. — һүҙ бит шул хаҡта бара! Яҡшы ир менән йәшәгән әхирәтем юҡ тимәксеһеңме?

— Бар...

Ьулғас! һалдырып ал да — йәшә! Ирҙәр бит ул мал кı уск Кайҙа яҡшы ашаталар, йомшаҡ түшәйҙәр — шунда ята нп калалар. Шахмат уйнайһыңмы?

Уйнайым...

Уйнағас, беләһең инде: король королеваны ҡорбан итә, ролева королде — бер ҡасан да! һәм беләһеңме ни өсөн? I оролһеҙ королева ул бер кем дэ түгел!

Ғәлимә өндәшмәне. Бер арала бергә эшләйбеҙ тип был мәрйәгә бөтэ тормошон һөйләп бирә алмай бит инде ул. Балаһының атаһы Ихсанбай хаҡында ла, Сайф хаҡында ла мидлшмәне. Надежда Фроловна уны, ахыры, тэжрибәһеҙ бер куыл һэперәһе тип уйлай. Белә Ғәлимә, ирҙәрҙең төрлөһөн эн. Файҙаланалар ҙа, ҡайһы саҡ үҙҙәренең дә файҙаһы өйҙәренең мөрйәләре күренеүҙән туҡтаһа, егеткә ш ı энеүҙәрен дә белә, мәгәр уны-быны һиҙенә башлаған юрснең ишекте ҡатыраҡ ябып элмэгә элеүҙәре була — ӱуыҙ шым, арт шым булып өйөнөң түренәрәк, яҙғанының Гонспо нығыраҡ һыйыналар. Бында инде ашатыуҙың да, Цомшаҡ түшәгенден дә файҙаһы теймәй. Әммә тыңлай Нйдсжда Фроловнаны Ғәлимэ. Бер иҫәрҙе, бер аҡыллыны ГЫнла, тигәндәр бит. Был күпте күргән мәрйәнән алған Гормош һабаҡтарының да бер кәрәкмәһә бер кэрэге тейер. Ана бит, Ҡыҙрасов та шундай: Ғәлимәнең бөтә йомошон үтәй, унын осөн утка ла, һыуға ла инергә әҙер кеүек. Ә бына Цилоидән кит, миңә өйлән, тип әйтеп ҡара — иртәгәһенэ үк урынын менән хушлашасаҡһың. Әптеләхәт мәсьәләһен дә I шимо ҡабырғаһы менән ҡуйҙы: «Камалетдинов яҡлаған өсөн ı ı буйланы, арт һабағын уҡытып ал», — тине. Башта, Әйүп I ииювич ни тиер, тип ыҡ-мыҡ килһэ лә, тыңланы. Бөгөн I шимә баш бирмәҫ Тирәкле агрономының ҡаршыларында ҡыҙарып-бүртенеп уҡыусы бала төҫлө баҫып торғанын күрҙе. М ı инәı о лә кәрәк ошондай ауыҙлыҡлау сараһы! Эйе, был ...ı ı ына. Теге саҡ, йырсы һайларға ауылға килгәнендә, I • шманең үҙенә тултырып-тултырып ҡарауҙарын, сәс Юломдарын йылҡылдатып ҡаршыһынан биш урап биш ҙрен күрмәне Әптеләхәт. Күрмәмеш булды. Нисауа. Ип ıı Ғәлимә лә әҙәм булды. Тирәкле генә түгел, бөтә район умың бармаҡ осонда әйләнә! Әле бына шул Әптеләхәт ı рғынып ҡына уның кухняһында сэй эсеп ултыра. Ғәлимә шгармаҫтан өйөнә килеп ингән ҡунағы алдында өйөрөлөпмә-

сөйөрөлдө, эле был, эле теге ризығын алдына ҡуйҙы, бәлокои генә графинға тултырылған эсемлек тә сығарҙы.

— Ир-ат булмағас, — Ғәлимә битендэге ике өйрөлтмәктс соҡорайтып йылмайҙы, — эскэн кеше лэ юҡ. Әллә ҡасанғы нәмә. Тәү таптыр ингән кешегә ҡуймаһам, үпкәләтермен!

— Кәрэкмэй, юҡ, юҡ! — Әптеләхәт уңайһыҙланып тынғыһыҙланды. — һүҙенде йыҡмайым тип кенэ индем.

— Юғиһә, инмәҫ инегеҙ?

— Нисек әйтергә, яңғыҙ ҡатын янына, бер йомошһоҙ...

— Эй, Әптеләхәт ағай, һеҙ ҙә шулай тигәс! — Ғәлимәнең үпкәләүе йөҙөнә бәреп сыҡты. — һеҙҙең ише ирҙәр юлда аунап ятмағас, яңғыҙ булаһың инде! Бөтә ҡатын-ҡыҙ ҙа Мәҙинә шикелле эт бәхетле түгел шул!..

Мәҙинәне телгә алғас, Әптеләхәттең бит остарына ҡыҙыл йүгерҙе — Ғәлимә Әптеләхәттең ауыртҡан еренә баҫҡанын аңланы.

— Эт бәхетле тип әйтә алмаҫ инем мин Мәҙинәне... Нисэмә йылдар көттө, нисэмә йылдар «халыҡ дошманы ҡатыны» исемен күтәреп йәшәне...

— Эй, Әптелэхэт ағай! Белэбеҙ бит инде — берго эшләнек. Камалетдиновтың бөгөнгө этлеге лә шул Мәҙило өсөн үс алыуы инде. Мәҙинә өсөн ҡатынын да ҡайтарым ебәрҙе, шэй...

— Был дөрөҫ түгел, Ғәлимә Мөхәррәмовна, — Әптеләхәт сынаяғын ситкә этәрҙе. — Әйүп Ғәзизович ундай кеше түгел. Мәҙинэ лэ.

— Их, ағай! Араларында йөрөмәгән саҡта мин дә шулай уйлай инем! һеҙ инде ғәфү итегеҙ, минең бит ауылдаш итеп, якын кеше итеп әйтеүем...

— Зарар юҡ. — Әптеләхәт тороп эшләпәһенэ үрелде. — Сэйегеҙ өсөн рэхмәт. Хушығыҙ.

Әптеләхәт артынан ишек ябылғас, Ғәлимә ҡыуаныстан көлә-көлә диванға ауҙы: «Бына шулай, Мэҙинэ эхирәткәйем! һин кем дә, мин кем, тип танау сөйгэндәрҙе беҙ ошолай итэбеҙ!»

Өйөнә ҡайтҡас тынысланырмын тигәйне Әйүп. Ишеген асып ингәс кенә өйөндә ремонт барғаны иҫенә төштө. һыҙырылған обой киҫәктәре, иҙән уртаһында ҡауһайып

ın иҫке гәзит-журнал... Нимәгә кәрәк булғандыр был ıı юнт? Мәликә киткәнгә лә тиҫтә йыл үтте. Башта көттө. Кпии.ф ҙа, кэрәк булһа, үҙе эшләр, үҙе үҙгәртер, тине. Тeı chc ҡайтманы. Әммә өмөт тигәнең үлмәне. Хэтерендә, ı сағында ниндәйҙер ауылға туғандарынамы, пнм.имтарынамы барғайнылар. Ҡарсыҡ, самауыр ҡуйыр өсөндөр инде, усаҡтағы көл араһынан секрәйә-тексәйә тере күҙ үҙләй башланы. Үҙе: «Ай эттәгенәһе, Хөмәйрә цприлктың йоҙроғон күмәм тип әйттем дә һун, ниңә һүнде н?» -- тип һөйләнә. Әйүптең атаһы: «Уныһы кем?» — . . . . .һорағас, ҡарсыҡ: «Кем булһын, ауылдың иң һаран кешеһе!» — тине. Шунық кеүек, өмөт итергә сатҡы ла ш ҡалмағанда ла көттө ғаиләһен Әйүп. Күңелһеҙ фоләре менән күҙгә-күҙ ҡалмаҫ өсөн, бар ваҡытын ИПснә бирҙе. Пландар, береһенән-береһе күберәк вәғәҙә Иткон биш йыллыҡтар, йыһан айҡаған ракеталар — Гшрмһмнда ла Әйүп үҙ хеҙмәт өлөшөн күрҙе, ғорурланды. Иген урынына кукуруза сәстергәндәрендә лә, ауыл халҡының шәхси малын бөтөргәндә лә, кәзәләргә ҡаршы яу ында ла, бер ҡарыш ҡалдырмай ер ҡыртышын һөргәндә мл ышаныс аушанманы. Тимәк, шулай кәрәк, тип фекер йпрогтө ул. Рэсэй кеүек иркен илдә икмәктең икмэге ı ртoчкаға ҡалғанда ла был ышаныс ҡаҡшаманы. Тимер ҡаҙыҡ йондоҙо нисек бер урында ҡаҙалып торһа, шулай һымшанманы унын ышанысы ла. Быға тиклем шулай м.|. Яңғыҙ булғас, кем менәндер аралашыу ҙа, ҡунаҡлашыу ҙа бөттө. Әйүп үҙ-үҙенә бикләнгәндән юнде. Өйөн йыйыштырыусы ҡатын өҫ-башын йыуа, үтекләй, кәрәк икән — ашын да бешерә. Был тыныслыҡ ı • ı ih ı ı саҡ Әптеләхәттең районға эш менэн килеп, ҡайта |лмай, йоҡлап ҡалған саҡтарында ғына боҙолобораҡ тора. район халҡы Камалетдиновтың ауыҙынан ни сыҡҡанды ı итеп төҙгә ҡатҡанда, Әптеләхәт кенә унын менән бәхәскә . . . .рго йөрьәт итте. Бәхәс, ғәҙәттә, бәләкәй генә нәмэнән ГПиилаиа ла ҙурға олғаша. Хәҙер Әйүп уларҙың күпселеген гоп та бөтөп бара, ә бына ер мәсьәләһе дуҫының иң рткан ере, ул хаҡта һүҙ сыҡһа, Әптеләхәт арыҫланға ına. Хөкүмәттең сәсеү майҙанын арттырыу маҡсатында ıм ерҙәрҙе үҙләштереүенә лә ҡаршы булды ул.

— Яҡшыға алып бармаясаҡ был сәйәсәт, — тине Әптеләхәт.

— Ниңә?

— Ул тиклем ҙур массивтарҙы үҙгәртеү экологик һәләкәткә килтерәсәк. Тәнендең бешкәне бармы? Булмаһа, мин беләм: кеше тәненең дүрттән бер өлөшө бешһә, ул инде йәшәй алмай.

— Онотмаһам, беҙ тән тураһында түгел, тупрак тураһында бәхәс алып барабыҙ.

— Тупраҡ — ерҙең тиреһе. Ул да тере. Тере булмаһа, унда бер ни үҫмәҫ ине! Айҙа үҫмәй бит — бына шунын кеүеи

— Фәлсәфә менән халыҡты туйҙырып булмай, дуҫкайым. — Әйүп үҙен тыныс тоторға тырышһа ла, эсенән яна: ошо теле арҡаһында нисәмә йыл гулаг һурпаһын эсте бит ип ю һаман шул — үҙгәрмәй. Ярай әле тыңлаусыһы башҡа берәү түгел.

— Борон-борондан крәҫтиән үҙен дә, илде лә туйҙыргам Ауыл халҡынан люмпен яһау — һәләкәт! Был ҡот осксх сәйәсәттең һөҙөмтәлэрен күрер көн алда эле! Хәҙер үк халык ҡалаға ағыла! Ауылда йәшәп ауыҙ тултырып ҡаймаҡ та ашай алмағас, ул нишләһен ауылда?

Үкенескә ҡаршы, Әптелэхәттең һүҙҙәренең дөрөҫлөгон тормош раҫлай тора. Алтмыш өсөнсө йыл бөтә ил етештергән икмәктең күпселеген биргән Ҡаҙағскш сиҙэмдәрен сәселгән орлоғо-ние менән ҡара бурандар осорои алып китте.

— Тәбиғәт үҙен-үҙе яҡлай, — тине Әптеләхәт. — һин дә ялан яҡ зонаны һөрҙөрҙөң. Тупраҡты эрозияға дусар иттен Тэбиғэттән бер кем дә көслөрәк була алғаны юҡ һом булмаясаҡ!

— Ә Лысенко? — тип Әптеләхэткә ҡаршы сыҡты Әйүм, — э академик Вавилов?

— Пүстәк! Фэнгә улар килтергән зыянды оҙаҡ ҡаплай алмаясаҡбыҙ әле.

Ә инде һуңғы йылдарҙа, Әйүптең үҙен ҡурсалағанынан файҙаланыпмы, Әптеләхәт бөтөнлэй бәйҙэн ысҡынды Ниндэйҙер тупраҡты һөрмәй сәсеү теорияһын яҡлай башланы. Сәсеүҙе лә үҙ мәле менән аткара, ураҡка ла үҙ молс менән төшә. Етмәһә, Ҡыҙрасов менән туктауһыҙ бәхэслош.1, етәкселекте бер тин шайы күрмәй, һанға һуҡмай. Пар ерея

р «закулисный пар» менән алыштырҙы, колхоз іеі нэн. ҡыҫкаһы, тәжрибә майҙаны яһай башланы. и іе Кыҙрасов менән булған һуңғы әңгәмә Әйүпте ірынан сығарҙы. Кис, кабинетында сэй эскәндә, Ҡыҙрасов:

Өйүп Ғәзизович... ғәфү итегеҙ, һеҙ Әптеләхәт рановичтың ҡатыны Мәҙинә менән ниндэй мөнәсәбәттә? гип һораны.

Иисск инде ниндәй мөнэсәбәттә? Нимэ, әллә мин п.ипогәс тэ... Ғәфү итегеҙ, мин ловелас түгел.

К ᵎ у-ук, мин улай тимәйем. — Ҡыҙрасов ҡолаҡтарына нем кыҙарҙы. — Әптеләхәт, һеҙҙән ҡыҙғанып, ҡатынына ш.ии кул күтэрә тип ишеттем. Бисэһе йәл.

Ғөйбәт! Буш һүҙ!

Утһыҙ төтөн сыҡмай, Әйүп Ғэзизович!

Бына ошо һөйләшеү Әйүптең тулған түҙеменә һуңғы ы булды. Әптеләхәтте бюроға ҡуйып тикшереүҙәренә ул каршылыҡ күрһәтмәне. Күрһен Әптеләхәт ш шиовтың да ҡаты ҡуллы була алғанын!

Оһүп, сәй эсеп алғас, диванына һуҙылырға иткэндэ ....кағыҙға төрөлгән, сургучы асылмаған бандероль калды: «Быныһы ни?!» Кире адресы юҡ. Почта ı ı һе һуккан мисәтте ҡарағас, ултыра төшә яҙҙы: һигеҙ ı ιек килгән. Килгән дә гәзит өйөмдәре араһында диван н іа саңланып ятҡан. Ә конверт тышындағы яҙыу — |.|. Моликэнеке...

Рау ш «Ишмәмәт өйө»н бикләгәс, ҙур урамға сығып, иннәләр яғына юлланды. Олоғайыу билгеһелер инде, іры унын йыуан кәүҙэһен теләр-телэмәҫ кенә иткәндәй. Телэмәһә лә телэмэйҙәрҙер — төп көс, төп •и.| к уларға төшә бит. Рауза хәҙер ашыҡмай. Ашығып ı >||ш'.' Пенсионерка ул хәҙер. Кенәгәһе бар. Колхоз уға ш пушҡа ай һайын аҡса бирэ. Күп түгел, ләкин сэй-ғі а етә. Уға Шәнгэрәйҙең зәғифлек буйынса пенсияһы ı ı • ı Хөсәйендекен ул һорамай ҙа, алмай ҙа, белмәй ҙә. шен Раузаның өйөндә, элекке донъяһында йэшэй. Әллә ш өер колон һатып алып, шуны һарайғыр нэҫеле тип ı •> Пшмэмәт өйөнэ күсеп тороуҙы уға Хашим әйтте.

«Шәңгәрәйҙе башҡаса бағыр кеше юҡ, ҡара инде, үҙеңә һауап булыр», — тине. Алғыш менән ҡарғыш бер түгел Рауза риза булды. Рауза өсөн Хөсәйен ни ҙә, Шәңгәрәй НИ — икеһе лә иҫәр. Айырма шунда — Хөсәйен ат **менән** тилерә, башҡа нәмәлә эше юҡ, ә Шәңгәрәйҙең башын төрло яҡҡа бороп була. Ҡарышҡыр яғы сығып һарыуҙы **ҡайнатһа** ла, тиҙ онота, тиҙ һүрелә. Унан һуң, сабый аҡыллы был бәндәне Рауза эсенән йәлләй ҙә. Кемгә кәрәге бар уның? Рауза ла олоғайҙы инде. Бына унан ҡалһа ни хәл итер был Хоҙай бәндәһе? Ыңғайын тапһаң, йомошоңа ла ярап тора бит эле үҙе. Бына Рауза инде нисә йыл, шитай, кәпрәттв ташлағаны бирле, Әптеләхәттә ярҙамсы булып эшләй. Эш тип, уға бирәү ҙә эш ҡушманы, үҙе теләп килде ул Әптеләхәттең Маһинур үлгәндән һуң буш ҡалған өйөно. Ошонда Әптеләхәт үҙенең тәжрибәләрен алып бара. Үҫемлектәр, башаҡ, тупраҡ, бәләкәй генә үлсәүҙәр, герҙәр — нимә генә юҡ бында! Әптеләхәт ошонда һабағы ятмам торған бойҙай сорты, юғары уңыш бирә торған арыш, **хаття** беҙҙең шарттарҙа үҫә торған ҡауын, ҡарбуз да уйлаи сығарҙы. Пенсияға сыҡҡас, үҙенең сарыф ителеп бөтмэгом көсөн ҡайҙа ҡуйырға белмәй өс ай аңҡы-тиңке йөрөнө ло Рауза ошонда килде.

— Әптеләхәт ҡустым-түрә, — тине ул телмәренә ғүмер буйы «урында» эшләүҙән йыйылған грамотаһын һалырға тырышып, — мин уйҙаным-уйҙаным да иң көстө эш һинекс тигән ҡарарға килдем. Ни өсөн тигәндә, икмәктән дә ҙур, унан да ҡиммәт һиммәт юҡ. Был һиңә кәнсә ҡарау ҙа, кәпрәттә һатыу итеү ҙә түгел. Күреп йөрөйөм: яңғыҙ ыҙалайһың. Ҡара эшенде миңә ҡуш та — үҙең китап уҡы, сифр һана.

— Рәхмәт инде, Рауза апай! Хөсәйен кемгә оҡшап шулай икән тиһәм, уның фанатизмы һинән килә икән! — тип йылмайҙы Әптелэхәт. — Миндә ни, эш күп ул...

Рауза «фанатизм» һүҙенең төбөнә төшөп торманы, мәгәр осраған-ниткән унан Әптеләхәттә нимә эшләүен һорашһа, башын ҡырын һала биреп:

— Фанатизм, — ти ҙә, артабан китэ, һүҙ ҡуйыртмай. Үтә лә етди эштә эшләгәс, кеше менән ләкэп һатып тороуҙы хуп күрмәй. Фанатизм икән фанатизм. Хөсәйен дә, үҙе лә. Шәңгәрәйҙән дә ул үҙе ыңғайына фанатизм яһаны. Ул хәҙер

Маһинур мәрхүмәнең тәжрибә участкаһына әйләнгән

һын карауыллай. Кәзә яман бит. Шуларҙы үткәрмәйем

I. . . . . .ксүек саба. Бахырға, гел кәзә баҫтырып йөрөгәс, Цпмпа» тигән ҡушамат таҡты ауыл халҡы. Шәңгәрәй яңы шмлгын тыныс ҡабул итте: Хрущевтың башы урынына п фотоһын йәбештереп, «кабинетына» — Маһинур һына элеп ҡуйҙы. Эйе, ныҡ эшләй улар бында, ныҡ ышалар. Уның ҡарауы, күҙ етһә, Шәңгәрәйҙең ауыҙы н карбуз, алма, грушаға туйына. Хатта виноградтан да рүм калмай. Үҙенән бигерәк Әптеләхәттең Күкһылыуын I. . . . лп.

Яҙмышынан зарланмай Рауза. Ошо тиклем яуаплы эште ıе ксмдең ышанып тапшырғаны бар ине?

Рвуза, инеп китерҙән алда, Хашимдың өйөнә күҙ һалды. корғандары тартыулы. Тәки Гөлбаныу өйөндә ҡалды Кшмпм. Моҙинәләргә эйәреп Барсынбикә — Фәүзиәнең яңы ш күсмәне, атаһы донъяһын да Ҡасимдың малайҙарына <)[понда еректе. Өйләнмәне лэ. һуңғы ваҡыт бөтөнләй ғаиға әйләнде, өйөнә бикләнде, хатта ҡорғанын да ш Хәйер, асһа ла Рауза ынтылып ҡарамаҫ ине — ир |.||ц.| унан күптән китте. Аллаға шөкөр. Тынсыны. ибай, йәне йәһәннәмдә интеккере, Раузаның барлыҡ Г" н һүндереп, дарманынан яҙҙырып китте.

Маһинур өйөнөң ишеге асыҡ торғанын күргәс, Рауза раи юштө: асҡыс бит унда ла Әптеләхәттә. Ингэс, йәнә шәнде Рауза: Әптеләхәт ҡаҡ урындыҡта йоҡлап ята.

Лһ, аһ... һиңә ни булды, Әптеләхәт? Ҡустым-түрә, мплм...

Булманы. — Әптеләхәт күҙҙәрен асты ла түшәмгә п >пл бирҙе. — Горшоктарҙы сығарып бөттөңмө?

Лһ, бөтмәй әллэ... Бөт тинең бит! Һиңә әйтәм, ләхәт, Мәҙинэгә уҡыған еренән урыҫ ҡунаҡ кигән тиҙәр, шунан ҡасып ятаңмы мында?!

Урыҫ ҡунаҡ?! — Әптеләхәт тороп ултырҙы. — урыҫ ҡунаҡ?

ш, Г)ының бер нәмә лә аңламағанын төшөнгәс, ишек н ләге ултырғысҡа ялпашты.

Аһ-аһ! Урыҫ тигәс, урыҫ инде! Һеҙҙең өйөгөҙҙө шын күргән кешеләрҙән ишеттем. Битен вис йөн ш ги Күҙҙәре генә күренеп тора, ти. Танауын... танауын

пажали өндәшмәнеләр. Арҡаһында сумкаһы бар, ти. Сумкаһында нәҫтәһе лә булғанға оҡшай, ти... Үҙе, былай, йәш түгел, ти... Ah-ah... Бар өйөңә! Райондан ҡайтып тороп конторҙа йоҡтап ятмаға...

Әптеләхәткә һыны теймәне Раузаның. Кәйефе эллә ҡайһылай. Унын быҙдай сағын күреп өйрәнмәгәнгәме, Рауза Әптеләхәт үҙ өйөнә инеп юғалғансы тәҙрәнән айырыла алманы...

Мәҙинәнең күренеүе Саяф Шәмсетдиновта һәр саҡ ҡаршылыҡлы һәм үҙенә лэ аңлашылып бөтмәгән тойғолар уята. Тәүге тойғоһо — кинәнеү. Әле яңы фермаға килеп эшләй башлаған сағында Саяфта Мәҙинә көслө тойғо уята алманы. Бешкән алмалай Ғәлимә бар сағында тал сыбыҡтай нескә, ел нығыраҡ иҫһә лә осоп китергә торғандай Мәҙино Саяф өсөн ойорға өлгөрмәгән һөт кеүек кенә ине. Ә бына хәҙер ул өлгөргән. Ҡайырып алып ҡабырлыҡ көҙгө ҡатыҡ кеүек. Саяф үҙ ғүмерендә, бәлки, ҡыҙ-ҡыркын араһында эшләгәнгәләр, ҡатын-ҡыҙҙы аҙ күрмәне. Күп йәшәгән күк ял булған, тиҙәр. Ҡылыҡ-фиғелдәрен дә өйрәнде уларҙың. Әгәр ҙә ки ҡатын-ҡыҙ һиңә башлап күҙ һирпкәндән һуң тағы бер текләп ҡараһа, һин унын иғтибарын йәлеп иттең тигән һүҙ. Ҡалғаны үҙендән. Ә инде нисек кенә ымһынма, нисек кено тамһынма, ул һине күрмәй икән, тимәк, эш хөрт. Мәҙино унын тормошонда ана шул уны күҙгә элмәгән, өмөткә урын ҡалдырмаған ҡатын-ҡыҙ рэтендә. Ғәлимә ауылдан киткәндән һуң Мәҙинә биләнә унын йөрәген.

Тик Ғәлимә һөйөндөрә, Саяфты ваҡыты менән күктәрго күтәрә ине — был һыҙландыра. Улай ғына түгел, Мәҙинәгә булған тойғоһо Саяфты башҡа ҡатын-ҡыҙҙарға ла битараф яһаны. Алдында ана түгелэм, бына түгеләм, тип бешкән хөрмә эленеп торғанда картуф һабағындағы алмаға ынтылғың килеп тормай икән. Ана әле ул идараға килә. Йомошо, күрәһең, Саяфталыр — башын ҡалҡытып председатель тәҙрәһенә ҡарай. Эй һыны! Эй атлауҙары! Атламай — йөҙә. Кеше тигәнең нисек шул тиклем матур була ала икән?! Шул тиклем матурлыҡҡа эйә бисәне Хоҙай,

була торған булһа, ниндәй сифаттары, ниндәй хеҙмәттәре н Әптеләхәткә яҙған йәр итте икән? Бала сағында өләсәһе уҡыған китапта Зөләйха шундай һылыу итеп тасуир ҡылына күроһең, уны яҙған кеше Мәҙинә һымаҡты күрмәгән.

Һ.1, яул алмаҫ ине. Теле ғажиз булып, ҡулы тышалыр ине. |||лhлрГ>аныу тигән ҡатынды яҙмыш Тирәклегә быраҡтырмаған булһа, Саяфтың күҙе быңдай матурлыҡты ғүмерс бср күрмәҫ ине. Тыныс үтер ине тормошо. Дауылһыҙ машәр ине. Ә был өйөрмә яһай. Ғәрәсәт ҡуптара. |» ың тиктомалдан ярһыуҙары ла уға бәйләнгән. Иципюхотте лә үҙенең юҡҡа рэнйеткәнсн ағщай. Аңлаһа ла, өллөк тынғы бирмәй. Унығы ла киткән гулагында ғына • и ятманы. Өҫтәүенә, укып әҙәм булып алды. I шәлетдинов яҡламаһа, Ғәлимә ҡулы менән Саяф күптән н муйынын борған булыр ине. Юҡ шул. Әлегә көсө йй

Икенсе ҡатҡа күтәрелгән баҫҡыста аяҡ тауыштары иисүгә Саяф урынынан торҙо, йәнәһе, сығырға бара. II шш килеп сыҡты — тупһала төкөшә яҙҙылар. Саяф, М әзинәне бэреп йыға яҙған булып, яурынынан еңелсә ткланы:

Уй! Ҡолата яҙҙым бит үҙенде!

Моҙино ғәҙәттэге һалҡын тотанаҡлығы менән яуап бирҙе:

Зарар юҡ. Әлдэ урыныңыҙҙа булдығыҙ.

Мин үҙем саҡыртырға тора инем. Иртәнсэк пинкала булманың...

Эйе, була алманым. Ҡунаҡ килгән йыраҡтан.

Мәлһеҙ ул ниндәй ҡунаҡ?

Ниһайәт, Мәҙинә йылмайҙы, Саяфтың ҡаршыһындағы ултырғыска ултырҙы:

Үлем менән ҡунаҡ һорап килмәй.

Унығы шулай. Шунан, эштәр нисек? Күсергә әҙерлек шмы мойләүгә?

Күсеү ҡасмаҫ. Зоотехник менән фекер айырымлығы

Әйтте ул миңә! Ниңә, дөрөҫ уйлай бит, Уралға уҡ корәк малдарҙы.

Быйыл йәй ҡоро киләсәк. Башта Уралда йәйләргә лә, шыу уҫалайыуға, яҡынға күсербеҙ. Мин шулай уйлайым.

— Әллә инде, әллә... — Зоотехник шул Мәҙинәнсц һүҙенән сыға алмайһың инде тигәс, Саяф икеләнде.

— Әллә-мәлләһе юк инде. һеҙ үҙегеҙ ферма мөдирс булып эшләгән кеше бит. һыйырҙың һөтөнөң телендә икәнеи һеҙгәме аңлатырға? Мин икенсе йомош менән килгәйнем. — Мәҙинәнең ҡарағусҡыл йөҙө ирендәре кеүек ҡыҙарҙы, сейәләй бешеп, өрөлөп сыкты. — Миңә бер-ике көн ял бирмәҫһегеҙме икән... Ҡунаҡты бит... ҡунаҡ итер кәрәк.

Саяф ҡуҙен Мәҙинәнең йөҙөнән муйынына, асыҡ иҙеүенән гүзәл һыҙаттар яһап ҡалкынған түштәренә күсерҙе. Ошо матурлыҡҡа ҡарап, үҙ-үҙенде язалап ултырсәлең. Мөнәсәбәтен белдереп берәй һүҙ әйтер ине — теле әйләнмәй. Мәҙинәне өркөтөүҙән, үзен ошо рәүешле булһа ла аралашыуҙан мәхрүм итеүҙән ҡурҡа.

— Кәрәк булғас... көн алаһың инде. Ферманы үҙем контролдә тотормон. Ҡунағың... арыу кешеме һуң?

Мәҙинә ашығып урынынан торҙо:

— Бик яҡшы кеше. Әптеләхәттең дә... икебеҙҙең до дуҫыбыҙ...

— Сибәр ҡатындарҙың дуҫы булмай, Мәҙинә ханым!

— Комплиментығыҙ өсөн рәхмәт.

— Ҡунаҡ килгәс, ит яҙҙыртып ал. Келэт мөдиренә, ҡана, яҙыу яҙып бирәйем.

— Уныһы өсөн дә рәхмәт. — Мәҙинә баяғынан да нығыраҡ ҡыҙарҙы. - - Барсынбикә өләс уныһын хостәрләгән булһа кәрәк.

Барсынбикә Мәҙинәнең колхоз идараһынан ҡайтып ингәнен дүрт күҙ менән көтөп алды:

— Колхоздан ит яҙҙырып алмай яҡшы иткәнһен, — тинс ул. — Тыу һарыкты алып ҡалғанмын. Шуны салдыр.

һирәк кешегә асыла Барсынбикәнең йөҙө, һирәк кешенс ул үҙе бешергән аш менән һыйлай. Бына ул итәк-еңен һыҙғанды, бишбармаҡҡа һалмалыҡ ҡамыр баҫырға әҙерләнде. Унан һуң бәлеш тышы ла хәстәрләр, йәнә бауырһаҡ өсөи ҡамыр әҙерләр. Һәр береһе үҙенсә, э шулай ҙа ҡунаҡ ашының һәммәһе бер ҡулдан үткәне яҡшы. Дөрөҫ, Мәҙинәнең дә ҡулынан аш үтемле, татлы. Әле ул көтөлмәгән ҡунаҡ

кншүри ҡаушап, баҙап ҡалған. Күңеленән тыныслыҡ киткән кыҙ кмрҡындың ҡулынан ҡамыр ашы уңмай. Ҡамыр ул I....' күңеленә бик һиҙгер, бөтәһен дә үҙенә һура, һеңдерә. ірыу берэүҙең ашы менән инә, икенсенеке менән сыға ......чоре лә дөрөҫ. Ҡатындары күрә алмаған ирҙәр ауырыуға '.....ша, хатта ҡатыны бешергән ҡәҙимге аштан ағыуланып ' лә ихтимал. Ашхана ашын ашап бәндәнең дә бит корһағы тула — күңеле туймай. Унда бешкән ашҡа күңел Щ.| п.||п.| етмәй.

Барсынбикәнең бик алыҫтан килгән был ҡунаҡҡа карау ш күңеле ятты. Май сүлмәге тышынан, тигәндәй, млығы йөҙөнә сыҡҡан. Яҡшы кеше булмаһа, йәшлек ірын ни заман үткәндән һуң да юллап килэме? Мәҙинә |....іогәйне уның хаҡында, мине ҡайтарыр өсөн ' ' риикаһын һатты, тигәйне. Кейәүе Әптеләхәт тә бик ш ы. йүгереп йөрөп мунса яҡты. Ныҡ сапҡан, күрәһең, ш Әле ҡунаҡ түр яҡта, урындыҡта салҡан төшәп ята. би! Күңелендә изгелек орлоғо йөрөткән бәндәләр әллә ш билдәле...

Бншбармаҡ ашалып, бауырһаҡ, тәм-том, бәлеш менән сәй .....ашығаяҡ йыуылғас, Мәҙинә сымылдыҡ эсендәге иниуатына ятты. Ҡыҙҙары инде күптән йоҡлай. Өләсәһе лә ' ш ы иамаҙын уҡыны. Тәҙрәнән тышҡа ҡарап шәфәҡ ш ыы ын көтөп ултыра бирҙе лә, доғаларын уҡып, ю Һуҙылды. Әптеләхәт менән Давид ҡына ятманылар. ш • иласыҡта. Әптеләхәттең эскене ене һеймәй. Ә бөгөн Иксһененң берсә көлгәнгә, берсә илағанға оҡшаш ң ш гар ы ишетелә. Бына бит яҙмыш! Баҡһаң, Давид та I'.....иагсрҙарын үткән. Себерҙә тимер юлы төҙөгән. ......һлр мстрына бер мәйет тура килә, ти. Үҙе лә ныҡ ш Әптеләхәттән күпкә һуңыраҡ ҡотолған. Ғаиләһе ' ары ла юк. Дуҫтарымды барлап, ил гиҙәмен, ти. и осон шатланып бөтә алмай, Мәҙинәнең шан хайран булды. Көнһылыуҙы шундуҡ Мәҙинәгә ы <>мтслохәт кенә сәйер тотто үҙен табында. Берсә ......һсрсо күрә алмағандай нәфрәтләнеп ҡараны

Мәҙиногә. Нимэ булған уға? Райондан ниңә ошондай булып ҡайткан? Мәҙинәнең унын бындай сағын күргәне юҡ. Шелтэ биргәндәрен ауыр кисерә микэн? Улай тиһән, ундайға ғына иҫе китә торған кешеме ул? Иртэгә көтөүгә торорға, ләкии йоҡо алмай. Беренсе әтәс, унан икенсеһе ҡысҡырҙы. Бына ишек асылды. Әптеләхәт. Карауат эргәһендәге ултырғысҡа ултырып, ауыр тын алып сисенә башланы. Мәҙинә, төпкәрэк шылып, урын бирҙе.

— Йоҡламайһың?! — Әптеләхәттең тауышынан унын иҫергәнен анланы Мәҙинэ. — Йоҡлама! Минең йөрэк яна... Иҫергән, тиһеңме? Юҡ! Аҡылым... зиһенем... асыҡ. Йөрэк... Беләһеңме, йөрәк ҡайҙа?

— Әптеләхәт... тауышланма... һин ысынлап та иҫерекһең.

— Ә һиңә... айыҡ ир кәрәкме. Камалетдинов кеүек... шундай ир кәрәкме? Ә, мадам?

— Нимә, һин минең тороп сьтғып китеүемде?.. — Мэҙинэ, асыуы килеп, тороп ултырҙы.

— Ят, ят! Мин үҙем сығам! Мин бит... ир кеше! Ирҙәр ҡатын-ҡыҙҙың ниндәйен дә... ихтирам... итергә тейеш!

— Һин нимә?!

Әптеләхәт тороп йәһәт кейенде лә сығып китте.

Таң атты. Мәҙинэ кәйефһеҙ булыуын ҡунағына күрһәтмәҫкә тырышты. Әптеләхәт иртэн иртүк, ИЖ мотоциклына атланып, баҫыуҙарына олаҡты. Мәҙинә яғына әйләнеп ҡараманы ла, һүҙ ҙэ ҡушманы. Барсынбикә Давидты һыйлапмы-һыйланы. Русса белһә, был икәүҙең, моғайып, һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәҫ ине. Мәҙинэ әле тәржемә итеп өлгөрә алмай. Өләсәһенең әле бер кемде шулай яҙылып, эсетышы берҙәй ялтырап һыйлағаны юҡ. Нимэһе менән арбапм уны Давид?

Давид бындағы үҫемлек донъяһы менән дә, ғөрөф-ғәҙәт, йолалар, йырҙар менән дә ҡыҙыҡһынды. Сәй эскәс баҡсшл сыҡтылар. Күпереп сәскә аткан муйыл төбөнә баҫкас, Давид тоғон систе, скрипкаһын ҡулына алды. Күҙҙәрен ҡыҫа төшөп, ағас төбөндә ҡыҙҙарын алдына ҡуйып торған Мәҙинәгп ҡараны. Бына ул аккорд бирҙе. Шунан унын аҡһыл оҙоя бармаҡтары ҡағылған ҡылдарҙан йөрәкте өҙгөс көй ағыла башланы. Моң. Өмөт. Мөхәббәт. Юғалтыу. Нәфрәт. Һағыныу. Талпыныу. Һоҡланыу. Хистәр гаммаһының йөҙәрсн бергә уҡмаштырған ауаз иң юғары нөктәһендә туктаны —•



әйтерһең дә ошоларҙы һыйҙырып йөрөткән йөрәк шартланы. «Юҡ!!! — Мәҙинә, ике ҡулы менән йөҙөн ҡаплап, әкрен гено ергә сүгәләне. — һин йәшәргә тейешһең, Давид!»

— Ғәфү ит, Мәҙинә...

һаҡалы буйлап эре йәш бөрсөктәре аҡкан Давид Мәҙино ҡаршыһына теҙләнде. Кеҫәһенән ниҙер сығарҙы һәм Мәҙинәгә һондо. — Бына... Мин уны һаҡсынан... Уны мии йәнә, йылдар үткәс осраттым... һәм беләҙекте кире биреүеи үтендем.

— Давид... һәм һин ошоно һатып алыуға... бөто мөлкәтенде тыҡтың?

— Мәҙинә...

— Эй, изге йән! — Барсынбикә шауҡал ҡулдарып Давидтың яурынына һалды. — Бәндәбикә өләсәйең йәшәгән дәүерҙән алып ҡуш беләҙектең бер кешегә тәүләп әйләнсп ҡайтыуы. Бынан һуң эруах өләсәндәрҙең һәм минең көсөм тулыһынса һиңә күсә. һин беҙҙең тоҡомдоң ырыҫыи ҡайтарасаҡһың. Тәржемә ит мин әйткәнде. Дауыт фәрештә. Ул — Хоҙай илсеһе. Йырла. Ул һинең бер йырлағанынды ишетергә зар вә интизар булып, оло һыуҙар аша үтеп килгән.

Мәҙинә ҡалҡынды. Беләктәренә кейгән фирүзә ҡашлы беләҙектәргә һоҡланып та, ғәжәпләнеп тә ҡараны. Унам, муйыл таждары һибелгән керпектәрси дерелдәтә биреп, уйланып торҙо ла, «Ашҡаҙар»ҙы йырлап ебәрҙе. Эйс, «Ашҡаҙар»ҙы. Ошо йырҙың аһәңе яткан Дауыт ижад иткои көйгә. Мәҙинәнең йөрәкһеүҙәре, һағышы, мөхәббәте барыһы һыйған скрипкасы йәһүд моңона. Ләкин ул сағында Мәҙинә моңона әсәлек һағышы ҡушылмағап булған. Был һағыш уның тауышына улын армияға оҙаткас өҫтәлде.

Ул саҡта башҡарған «Ашҡаҙар»ға Әптелэхәтте йәһопнәмдең үҙенән көтөү һағышы ла яғылмағайны. Улар Мәҙино моңона һуңыраҡ өҫтәлде. Хәҙерге Мәҙинә моңонда хатта бәндәләрҙең һарайғырға ҡарата ҡылған хаслыҡтарынан үртәлеү ҙә бар...

— Был тиклемде йөрәгем һыйҙыра алмай, Мәҙинә!

Бала шикелле ергә ятып һыҡтаған Давидтың башына Күкһылыу нескә генә бармаҡтарын һалды, ирендәре

...лмҙер йыуатыу һүҙҙәре әйтеп ҡыбырланы, аяҙ күктәй р күҙҙәренән йәш бөрсөктәре тәгәрәне...

Кунаҡ килеү шатлығы Барсынбикәнең унынсы тиҫтәне ... ган гүмеренән әйтерһең утыҙ-ҡырҡын алып ташланы. ... >hсмең ауырлығын, ҡатҡан һөйәктәренең шығырҙап ... шыуын тоймай, аҡ яулығын елпетеп, сағыу туҡыманан ... ган бала итәкле ҡулдәгеп күпсетеп туктауһыҙ ... нонергә мәжбүр итте. Өләсәйҙәрен был рәүештә күреү ...ктәргә лә тәьҫир итмәй ҡалманы. Ҡайҙалыр олағыуҙы ... аңдып торған Көнһылыу йорт тирәһенән китешмәне, ә һылыу Давидҡа бөтөнләй эйәләште. Бушамаған, өйөндә ...ҙер мөһим эш менән булышҡан Хашим да бәләкәй ... калды, ҡоро-һары йүнәтеп, һыу-мыуын килтереп, мһсиә булышты. Барсынбикә ара-тирә кейәүенә шаяртып ... кушкылап та алды:

Ул ниндәй таяҡҡа таяныу ти ул? Хәҙер өс аяҡһың, мимгп мошкә етһән, дүрт аяҡҡа ҡалырһыңмы?

һи-һи, — тип көлә Көнһылыу, — олатай ул сағында ... ксуск мүкәйләп йөрөрмө?

... ...олбаныу юҡлыҡтан ул, өләсәйегеҙ иҫән булһа, мин ... өйрәтеп менер инем! Эх!..

Барсынбикә уның ҡалтырап торған ҡул һыртына үҙенең ...ҫе усын һала:

Шокөр итеп йәшә. Яңғыҙ түгелһең. Ана, ҡурпың бар Комөкәс менән Күкәнәйгә ҡара! Гөлбаныуың менән и ирған сәскәнән төшкән орлоҡтар бит улар! Һин, кейәү, ... аг егеп килтер. Бөгөн ҡатын-ҡыҙ Ҡарға бутҡаһына куиаҡты ер-һыу, үҙебеҙҙең йолаларыбыҙҙы күрһәтеп, ... <... >сереп йөрөтөп апҡайтайыҡ.

Кнрга бутҡаһын байрам итеп яткан Мәмилә туғайына ... төшкә ҡалыбыраҡ килеп етте. Атты ситкәрәк туғарып, ... остаған ҡуйып, усаҡ яҡтылар. Йәш йәшеллеккә ... ср, ыуыҙ япраҡтарында нур уйнатып, гөлбөтөп ... ағастар, Күктауҙың һуйыр таштарына бәрелеүҙән ... пкшаған ауаз сығарып аҡкан тау йылғаһы, бейек күккә

йыр йомғағы булып атылған һабантурғай тауыштары һәммәһе күңелгә әйтеп аңлата алмаҫлыҡ рәхәтлек, йәшоүю дәрт, йөрәккә дарман бирә. Хашим тиҙҙән таяғын ташлаи яланаяҡланып алды, Давид та, уңайһыҙланып булһа ла, итеген сисеп, ғүмере ҡояш күрмәгән аяҡтары менән йылғаға инеп китте. Ә ҡыҙҙар шундуҡ:

Ер актарҙык һабан менән,
Тапап йөрөнөк табан менэн,
*Үҫһен **тиеп** тулкын-тулкын,*
Үҫһен тиеп кырга сыктык,
Ямгыр телэп кырға сыктык,
Ямғыр көтөп беҙ талсыктык.
Бөгөн шуға ла күмәклэп,
Ҡарга буткаһына сыктык,

— тип йүгерешкән төркөмгә ҡушылды.

Байрамды иҫе китеп күҙәткән Давид:

— Ә ниңә бында ирҙәр юҡ? — тип ғәжәплэнде, унап, үҙенә-үҙе яуап тапҡандай: — Ә-э, аңлайым. Ислам. Дип ҡушмай, — тине.

— Исламдың бында ҡыҫылышы юҡ. Ҡарға буткаһы мәжүси халыҡ байрамы, шулаймы, өләс? — Мәҙинәнен ҡунаҡка дөрөҫ яуап биреүе Барсынбикә күңеленә хуш **килдв,**

— Эйе, был бик боронғо байрам. Халыҡ ер-һыуҙан, ағас-таштан фатиха һорай. Боронғолар Хоҙай яраткан бар нэмәнең тере икәненә инанған.

— Ә ниңә, улай булғас, ирҙәр юҡ?

Барсынбикә, ҡунаҡка боролоп ҡарап, кеткелдәп көлои ҡуйҙы:

— Беҙ бит ир-ҡыҙҙар тоҡомо. Диңгеҙ буйы батшаларыи ҡурҡыуҙа тотҡан, Аттиланың үҙе менән алышҡан ҡыҙҙар ана шул беҙҙең алыҫ өләсәйҙәр булған. Беҙҙең ҡатын-ҡыҙ кейеменә ныҡлабыраҡ иғтибар ит әле. Ул бит — яу кейеме!

— hеҙ... амазонкалар тоҡомонан тимәксеһегеҙме?

— Эйе, эйе, шуны аңлатам бит инде...

— Ғәжәп, ғәжәп! Мин боронғо амазонкалар араһында! - Давид бала-саға шикелле ҡыуанып Мәҙинәгә ҡараны. — Йә әйтәм, һиндәге физик һәм рухи ныҡлыҡ мине гел аптырата

ине Бына ул ҡайҙан! Эйе, ысынлап та, тәңкәләр теҙелгән ... ул бит кольчуга! Маңлайҙарында ла шундай уҡ ... щклиор, слкәләрендэ — ҙур тәңкә. Артабан — умыртҡа ... с оуйлап теҙелгән тәңкәләр. Нисек улар уңай һәм матур ... кмлыстан һаҡланыу сараһын тапҡандар! Ә ни өсөн улар ирррҙе күрэ алмаған?

Улар көслө, сәләмэт булған. Ирҙәр ҡатын-ҡыҙҙа ... үҙен хеҙмәтләндереүсе затты күрә. Буйһонғанды ... Ә дала халҡында азатлыҡ хисе көслө. Ир-ҡыҙҙар ир |||,щ|.к ... бары тик тоҡом дауам иттереү өсөн генә кәрәк тип уЦпшам.

У-у! Мәҙинә, һин дэ, боронғо өләсәләреңә оҡшап, үтә ... аллы булып китеп, минең дуҫты, Әптеләхәтте рәнйетә ... ә!

Мәҙинә Давидтың шаяртып әйткән һүҙенә ҡапыл етди ... оирҙе:

Мин уны... яратам.

Ул арала ямғыр телэгән балалар Барсынбикәләр эргәһенә щ ... иииты:

Яу-яу, ямғырым,
Кәзә-тәкә һуйырмын,
Урамдағы балаларға
Баш-тояғын бирермен,
Урмандағы каргаларға
Тук эсэген элермен.

\ ... арала ағас баштарында йәшеренгән «ҡарғалар» ... ыра башланы:

Ҡар-р-р, кар-р-р...
Буткалары бар, бар-р-р...
Бутка ашарға шлмэгэндең
Күңеле булыр тар-р, тар-р-р...

Батмус тоткан балалар килеп еткэс, сырыштары яҙылып, ... реп киткән Барсынбикә:

һап-һап —
Балын кап,
'Кап-кап —

Майын кап,
Бал артынан корот кап,
Май артынан корот кап,
Корот кап та —
Тороп сап!

— тип бала-сағаны һыйлай башланы, ризыҡтың ҡалғаным батмустарына һалып ебәрҙе.

Бутҡа ашалғас та аҡландағы халыҡ оҙаҡ таралманы, әлло күпме уйындар уйнанылар, йырланылар, бейенеләр, теләктәрен эйтеп, ҡарт ҡарағас ботағына таҫмалар, төҫло сепрәктәр бәйләнеләр.

Барсынбикәләр үҙҙәре туҡтаған ағас күләгәһе аҫтында инде нисәнсе баҡырсаны бушата. Муйыллы, сейәле, энәлеклс майҙарын, эсенә төрлө емеш бөрөп бешергән бөккәндәрси Мәҙинә ҡунаҡ алдына өйә:

— Аша, Давид, аҙаҡ үкенерһең...

— Мин һеҙҙә былай ҙа егерме йылға йәшәрҙем.

— Ҡал, — ти Барсынбикә, — беҙҙә урын етерлек.

— Юҡ, рәхмәт, ҡала алмайым. Эшемде тәртипко килтереп бөтәһем бар. Күп көйҙәр яҙып алдым — нотаға һалырға, китап итеп сығарырға кәрәк...

— Аңлайым. Тик һаулығың өсөн беҙҙә яҡшыраҡ булыр ине, тим. — Барсынбикә Давидҡа төбәлеберәк ҡараны. - һаулығың бит... шэп түгел.

— Шәп түгел, дөрөҫ әйтәһегеҙ. Шуға ла ашығырға кәрок. һин бына, Барсынбикә өләсәй, бик аҡыллы күренәһең. Эскс һиҙемләүең дә бар кеүек... Яңылышмаһам, һин... күрэҙәһең?

Ҡунаҡтың «һеҙ»ҙән «һин»гә күсеүендә ниндәйҙер үҙ итеү, яҡынлыҡ тойҙо Барсынбикә. Мәҙинә ситкә ҡарап, онотолоборак, үҙ уйҙарына бирелеп ултыра, ә кейәүе Хашим бик тырышып Давид һәм Барсынбикә әйткәндәрҙе бөтә нескәлектәре менән тәржемә итергә тырыша. Уныҡы хатта Мәҙинәнекенән шәберәк килеп сыҡкандай. «Урыҫ Хашим» тигән ҡушаматы ла булды бит әле...

Давид тамаҡ ҡырҙы, көлһыу йөҙөнә саҡ ҡына ҡыҙыллыҡ бәреп сыҡкандай үҙенең.

— Күҙеңде йомоп, әҙерәк хәл ал. Мәҙинә, ҡунаҡтыц сәйенә күк сәйнүктәге үләнде тамыҙ. Етте. Эс ошоно, Дауыт. Ч.щ инер, тының иркенәйер. Ошо үләнде таба алмай инем, бында үҫэ икән.

Давид, әйләнеп, ҡураныс ҡына кәүҙәһен кескәй бер түшәк Менөн ҡолаҡсын мендәргә һыйҙырып ятып торған Барсынбикәгә ҡараны:

Бына һин, өләсәй, ҙур уҡыуҙар бөтмәгәнһең, әммә... фекер йөрөтөүең... донъяны аңлауың... Дөрөҫөн әйткәндә, һин Иине бик аптыратаһың...

Тормошто аңлар өсөн ҡайҙалыр барыу, ниндәйҙер ПСЫу йөрто тамамлау кәрәкмәй бит, улым. Башособоҙҙа МЙҙа ла бер йыһан, аяҡ аҫтыбыҙҙа ҡайҙа ла бер тупраҡ. йвшәүҙең асылы — үҙ асылынды асыу.

Аңлау, тимәк, үҙеңдән башлана, тимәксеһең?

Үҙеңде аңламай тороп, йыһанды, бар кешелекте нисек ш тамаҡ кәрәк?

һәм һин, өләсәй, бөтәһен дә аңлап бөттөм, тип уйлайһыңмы?

Мин? Бөтәһен дә? — Барсынбикә тороп ултырҙы. — К >к, юҡ! Ҡайҙа-а-а... Ләкин минең ейәнсәрем бар. — Ул ут ргәһендә ултырыуҙан ҡыҙара төшкән, шул арҡала бик йәш Күренгән Мәҙинәгә ҡараны. — Бына ул минән күберәкте гошонәсәк. Ҡуш беләҙектең уға әйләнеп ҡайтыуы тиктәҫкә ругел. Был — һәйбәт билдә.

Байрамда уйнап-көлөп арыған халыҡ ҡайта ла башланы. Иәш үлән ашап туйған аттың эскеһе килеп сырҡырап КОшнәгәне ишетелде. Уйнап арыған игеҙәктәр килеп сәйгә һимолдо. Көн кискә ауышты.

һине арыттым, ахыры, Барсынбикә өләсәй, — Давид іһыҙланып Хашимға ҡараны. — Тағы бер-ике һөйләмде пи.1 горжемә ит инде... Бына мин ауылдар буйлап үттем. Хоҙай йортон бары бер ауылда осраттым, ә халыҡтың иманы ı әләмәт. был ниҙән?

Ьарсынбикә, һалҡынайтҡандай булғас, кешәмир шәлен шурынына һалды, ҡанһыҙ устарын алмаш-тилмәш утҡа Һоидо:

Хоҙай йорто тигәнең... мәсет, ахыры, шулаймы?

)йе, эйе! Мәсет.

Минең анлауымса, Хоҙай йорто ул үҙе — кеше. Бына йашҡорттар, бер урында уҡмашып, ғөрөф-ғәҙәттәрегеҙҙе, Ыырҙарығыҙҙы һаҡлап, матур йәшәйһегеҙ. Хатта милләттәрҙе,

телде бөтөрөүгә ҡоролған совет сәйәсәте лә һеҙгв ҡағылмағандай. һәр хәлдә, һеҙҙе ул, аҙ һанлы булһағыҙ ҙа, бөтөрә алмаған.

- Мин шулай уйлайым: беҙҙең иман — йырҙарыбыҙҙа. Хәҙер мәктәптәрҙә әсә теле лә өйрәнелмәй. Тыйҙылар. Әлс Тирәклелә рухты халыҡ йырҙарын башҡарған хоры менои Мәҙинә тотоп тора. Ә Мәҙинә кеүек халыҡ йырҙарын оҫта башҡарыусылар милләт ғүмерен һәр берекһе кәмендә йөҙ йылға оҙонайта. Ут уттан тоҡана...

Байрамға сыҡкан халыҡ ҡайтып бөткәс, иң һуңынап Барсынбикә ғаиләһе ҡуҙғалды. Ҡолағын ҡайсылап, еккәндс көтмәй сабырһыҙланған атҡа ҡарап, Хашим аптырай төштө: ашаны, эсте, быға нимә етмэй? Ә оло юлға төшкәс, арба тулы кеше тейәгән хайуан, сыбыҡ күрһәткәнде лә көтмәй, ауылға атлыҡты.

Аттың сабырһыҙланыуын Хашим нимәгә юрарға белмәһо лә, сәбәбе бар ине. Йылғаның икенсе ярында, ҡуйы селек менән ҡапланған таш өңөндә, Күкбүренән ҡалған нәҫел тоҡом үрсетеп ята. Күкбүре үҙе лә, унан ҡалған Аҡмаңлай ҙа юҡ хәҙер, ә ҡурпы иҫән, ул йәшәй, тарала. Күкбүрегә башкөлло оҡшаған инә бүре — йәш Күкбүре — үрсемен быйыл ошо ҡая таш аҫтында тапты. Аҡланға халыҡ килеп тулғас, башта көсөктәр тынышып оя төбөндә ятты. Өңгә арҡыры ятыи. Күкбүре уларҙың юлын ҡаманы, тышҡа сығыуҙан тыйҙы. Әммә бишенсеһе, бөтәһенә ҡарағанда кәүҙәгә таҙараҡ, көслөрәк, талымһыҙыраҡ арлан көсөгө, тындырманы. Инәһс серемгә киткәндән файҙаланып, йомро кәүҙәһен Күкбүренсң ҡорһағы аша тәгәрәтеп төшөрҙө лә, артына әйләнеп тә ҡарамай, йылға буйына атлыҡты. Үҙенә лә аңлашылмағаи көслө тойғо — аҡланға килгән йән эйәләрен күреү тойғоһо — уны йылға аша йөҙөп сығырға мәжбүр итте. Әлбиттә, көслө ағышлы тау йылғаһы уны килке-килке ағыҙып алып китте, әммә ул ныҡышты, аҡланды тултырған йән эйәләренән байтаҡ алыҫҡа китеп булһа ла, йылғаның һайығайған еренон килеп сыҡты. Өшәнгән, теше тешкә теймәй ҡалтыранған көсөктө сәскә еҫе килеп торған нәҙек кенә бармаҡтар тотоп

ы. өҫкә күтәрҙе, йылы нәмә менән ҡапланы. Көсөк үҙен балаһы йөрәге кеүек леберҙәп типкән йөрәк эргәһендә, ыла хис иттем тигәндә, яҡында ырылдау ишетте. Нәҙек (шрмаҡтар уны ҡапыл ысҡындырҙы, көсөк шул саҡ был бармаҡ эйәләренең икеү икәнен күрҙе. Нескә бармаҡлы, ағы әллә ниндәй тәмле еҫтәр аңҡып торған заттар Шундук юҡ булды, көсөк елкәһендә инәһенең маҡкып алған тештәрен тойҙо. Шул тештәр эйәһе көсөк мең михнәттәр п аша сыҡкан һыуҙы бер һикереүҙә артта ҡалдырҙы ла, ғаныш еҫтәр, йоҡоло тоҡомдаштары ятҡан тау өңөнә ыр амы.

Камалетдинов янында ятҡан ҡағыҙға үҙ күҙенә үҙе ышанмағандай ҡараны: ун биш көн эсендә тапшырыу шарты >н иткә өҫтәмә задание килгән. Хәҙер яҙ. Мал яңы ҡыш ыҡты. Ҡайһы хужалыҡтарҙа аҙыҡ етерлек булып, мал ауға бик бирешмәне, ә ҡайһыларында күтәртеү сигенә ге Шуға ла Камалетдинов малды йәйләүгә иртәрәк мрыу өсөн тырыша. Яшыҡ малдың ҡоро йәнен алыу бит К<>}, һимергәс, рэхим итһендәр. Унда ла артығын ғына. Орпаы таналар һөтсөлөк фермаһына китә, ҡартайған, нгән һыйырҙарҙы алыштыра, һәр хэлдә, күҙ күпме ит пмрасаҡтарын Камалетдинов үҙе өсөн күптән билдәләп ц|. Ә был ҡағыҙҙа күрһәтелгән тонналарҙы хәҙер бирһәң, аҡтар түгел, һауын һыйырҙар ҙа китергә тейеш була. Ни юрғо? Ә бит өҫтән төшкән план — закон. Үтәмәй ҡара! карай бушап ҡалған бинала бер үҙе аңҡы-тинке булып циапдан һуң, Әйүп кистән папкаһына һалып алған икәнен хаттарын сығарҙы. Бәлки, күнел йыуатырлыҡ)мүп уларҙа табыр? Бына улар, һарғайып бөткән ҡағыҙ ре. Ҡағыҙ түгел, Камалетдиновтың ғүмере ло һарғайҙы, имдс.

геиалағы рамдан уға ҡалын ҡара ҡашлы, ныҡ ап иренле юлбашсының портреты ҡарай. гын аҫтына аҡка ҡара менән «Партия — ум, честь и п. машсй эпохи» тигән һүҙҙәр яҙылған. Унан алда бында башлы юлбашсының һүрәте торҙо. Һүрәт аҫтына

«Нынешнее поколение советских людей будет жить ирм коммунизме» тигән һүҙҙәр яҙылғайны. Унан да алда бөтә халыҡтарҙың атаһы портреты торҙо. «Атай»ҙың портрет Ы аҫтына «Если враг не сдается, его уничтожают» тигән һүҙҙәр яҙылғайны. Ә унан да алда һул тәҙрә эргәһендә Лснии портреты эленгәйне, ул әле лә тора... Әйүп уларҙың һор ҡайһыһын ышанып ҡабул итте. Тэғлимәттәренә таИ төшөрмәне. Тик Рәсәй кеүек ҙур илдең үҙ-үҙен туйҙыра алмағанына, ауыл хужалығы продукттарын ситтән нефтко, алтынға, урманға, төҫлө металға алмашып алғаныи;| аптыраны. Ауыл хужалығы машиналарына хаҡты самаһыҙ күтәреү колхоздарға «убыточный» тигән ярлыҡ таҡты, етештергән иген келәттәрҙән бөртөгөн ҡалдырмай һеперсм тапшырыла, ә барыбер етмәй. Хәҙер инде, ана, фермаларҙағы мал да бөтәсәк... Камалетдинов, йәнә бер аҙ уйлаш.ш ултырғас, йән асыуы менән тәүге хатты асты.

Беренсе хат.

Әйүп ҡәҙерлем! Минән күптән хат көткәненде беләм. Беләм, сөнки һинең урынында мин дә көтөр инем. Беләм, һине ҡыҙындың һаулығы ҡыҙыҡһындыра. Ҡыҙыҡһындырыу түгел, борсоуға, хафаға һала торғандыр.

Башта, киткән саҡта, мин һиңә көн дә яҙырмын төҫло инем. Шулай уйлағайным. Ләкин Кыҙылкашҡа килеп еткәнсс үк, Туш йылғаһы ярында, көтөлмәгән ваҡиғалар теҙмәһс башланды. Әйтерһсң дә минең күрәсәгем йылға ярына килси баҫҡанымды ғына көтөп торған...

Әйүп, мин һиңә яҙғым килмәгәнгә түгел, яҙыуы ҡыйын булғанға яҙманым. Хәҙер яҙам. Яҙам, ләкин хаттарымды ебәрерменме, юҡмы — уныһын белмәйем. Төп ҡурҡынысым — һинең мине белмәүең. Хаттар аша үҙемде һин аңларлыҡ дәрәжәлә асып бирә алырмынмы? Ә бәлки, уны аңлатып маташыуҙың да кәрәге юҡтыр. Улай тиһәң, ҡыҙың бар. һинең ҡаның, һинең берҙән-берең минең менән.

Ана, ул урманда арығансы йүгереп, йәнлектәр менән уҙышып, арып йоҡлап ята. Йоҡлағанда ул һиңә ныҕыраҡ оҡшаған: бер күҙе бөткәнсе ябылмай. Ошонда туҡтап торам. Үбәм, яратам. Мәликәң.

Икенсе хат.

Өйүп ҡәҙерлем! һине, моғайын, иң беренсе сиратта Флориданың һөйләшмәүе борсойҙор. Шулай булмаһа һин пеззс ноһәннәм тишегенә, ҡарсыҡ ҡушты тип кенә, ҡайтарып ıәрмәҫ инең. Эйе, һөйләшә ул хәҙер. Һөйләшергә уға теге карсыҡ әйткән им-томдан башҡа күп нәмә ярҙам итте. Башта \ к **шуны** әйтәм: ҡарсыҡ дөрөҫ һиҙемләгән. Беҙҙең өй алдында үҫкән акас ысынлап та сәйер үҫемлек булған ул. Беҙ ҡайтып төшкәндә уның төбөндә бер бөртөк үлән үҫмәй, ҡоштар **Вунмай** ине. Минең әсәйҙең үлемен дә, нигеҙҙең ҡороуын да ı ırттар шул ағасҡа бәйләй. Ағас төбөндә күп яуыҙлыҡтар ı ы и.ппан, ботағында күп йәндәр инрэп, рэнйеш менэн донъя лм. Шуларҙың һәр береһенең ҡарғышын йыйған ағас үҙе I ҙаҡ тамуҡ киҫәүенә әйләнгән. Эйе, беҙ Флорида менән нмплпап ташып һыу ҡойҙоҡ уға. Мин барыһы өсөн дә ıгаı ган беҙҙе, бәндәләрҙе, ғәфү итеүен, кисереүен һораным. Әммә Флорида һуңыраҡ, Павел менэн Игорь янына урманға п йәшәй башлағас, һөйләште. Ләкин былары — һуңынан. Ьоюһсн бер юлы яҙырға көсөм етмәгәндэй. Хәҙергә хуш. ı Яратам. Мәликә.

Өсөнсө хат.

Өйүп ҡәҙерлем! Ағас тураһында яҙҙым да яҙыуға, һин Ш ıаның микән? Быңдай күренештәргә һеҙ бит хөрәфәт, гика тип ҡарайһығыҙ. Тәбиғәт телен онотҡанға, йәки ıаған гә шулайҙыр ул. Мин, Әйүп, һинең кеүек ҙур ı ҙар *ул* уҡымағанмын. Бәлки, шуғалыр ҙа, мин бер ҡасан ı ı һписц кеүек фекер йөрөтә, уйлай белмәнем, үҙемдең ıшлығымдан оялдым. Әммә һинең һүрәт төшөрөүгә ı ıып ыңды күреп, их, Әйүп бында, Себергә килһә, тәбиғәт ш.шда галанты нисек асылыр ине, тип уйлай инем. Ә ı р икеләнәм. Шишкин, Айвазовский, Крамской, Ван һүроттәренә ҡарайым да, уларҙың тәбиғәттең телен белеү Һалатенә хайран ҡалам. Гүйә, улар һүрәт төшөрмәгән, ә юнгә **менән** тәбиғәт телендә һөйләшкән. Был бит бөтә

кешегә лә бирелмәй! Ә бына һинең ҡыҙына ул бирелгән! Ҡарт кедрҙың да, йәш ҡарағайҙың да телен аңлай ул. Был һүрәтте ниңә былай, ә ниңә тегеләй яһаманың тиһәң, шул ағастың тормошон, теләк-хистәрен һөйләп бирә. Эйе, Әйүп, ағастар ҙа, кешеләр кеүек, бик төрлө икән. Әйткәндәй, ач с саҡ тыуыу менән мине түтәйгә бирмәһәләр, мин дә йәшәмәҫ инем. Хоҙай аралаған. Күрәһең, Хоҙайға кәрәгем булғандыр. Яраһы түлем-сәскәләрем булғандыр. Хәйер, һин Флориданап башҡа балам барлығын белмәйһең бит. Бөгөнгә етәр. Хуш. Үбәм... Мәликәң.

Дүртенсе хат.

Әйүп ҡәҙерлем! Үткән хатымда «Флориданан башҡа балам» тигән һүҙҙе яҙып әллә яңылыштым инде? һинсң дөрөҫ, минутына-секундына тиклем һаналған, тәртипко килтерелгән тормошоңа ул буталсыҡ индермәҫ, аңлашылмаусанлыҡ тыуҙырып, сафҡа баҫҡан һалдаттарҙай торғаи уйҙарыңа болғансыҡ керетмәҫ микән... Бөтәһен дэ уйлайым. Әммә берелһен дә йәшереп булмай. Береһен йәшерһәм, икенсеһе аңлашылмаясаҡ. Мин был хаттарҙы һиңо һалырмынмы, юҡмы. Мин хатта уныһын да белмәйем. Ләкин мин һинең «дөрөҫ» кенә түгел, иманлы ксшс икәнеңде лә беләм. Шуны бслгәнгә лә беҙҙең арала аңлашылмаусанлыҡ ҡалмаһын тием. Ни өсөн мицл өйләнеүенде, ни өсөн мине үҙең менән алып китеүендс төпсөп тормайым. Уныһы — һинең эш. Һин шулай эшләгәнһең, һин шулай ҡарар иткәнһең. Минсц ризалашыуым — уныһы икенсе мәсьәлә. һиңә кейәүго сығыу менән тормошомдо үҙгәртәм тип уйланым. Һәм шулай булды ла. Ләкин үткәндәрҙән улай ғына ҡотолом булмай икән. Мәскәүҙән поезға ултыртып алып ҡайтып, өйөңә биклэп ҡуйған Мәликәне һин күңелеңә һыйҙырҙың, о уның үткәнен — юҡ. Сөнки минең үткәнем хаҡында һин бер генә тапҡыр ҙа һорашманың, ҡыҙыҡһынманың. Яраттыңмы һин мине? Мин бөтә ҡыйыулығымды йыйып һәм икеләнмәйенсә әйтә алам — яраттың. Ҡыҙыҡмы? Көтмәгәйнеңме? Әлегә хуш. Мәликәң.

Бишенсе хат.

Көзерле Әйүп! Был хатым оҙонораҡ булһа, алдан ғәфү үт ипм, сөнки күп нәмәне асыҡлайһы бар. Һинең өсөн генә түг і. үҙем өсөн дә асыҡлайһы. Әйүп, хәтерләйһеңме икән, ... һинә Мәскәүҙән ҡайтып килгән йөклө Мәҙинәне ЦИ п рмой сығарҙым тигәнде. Ярабби, уйлайым-уйлайым да, ял ыры, донъялыҡта ҡылған иң ҙур гонаһым шулдыр тием. Дөрөҫ, мин ун алты йәшемдә гонаһ ҡылдым: үҙемде ҡарап ы ои түтәйемдең ире менән енси яҡынлыҡка индем. I. . . . .а мин был хәлдәрҙә типтерергә ятҡан еҙнәйҙе генә і йеп юисм. Ләкин мин үҙем дә бит физик яҡтан иртә . . . . . рі эн ҡыҙ инем. Аҡыл юҡ, ә тэн өлгөргән. Еҙнәй түгел, м, мин уны был аҙымды яһарға этәргәнмендер. Ә бына пемдең йөклө ҡыҙ баланы яҙмыш ҡосағына ташлауы — ми.||ц,| башҡа һыймай. Гонаһ һүҙен гректар «промахнуться» |им юржемә итәләр, ти Павел. Яҙлығыу, яҙа баҫыу, яҙа тыу... Иәшлектә кем яҙлыҡмай? Берәүҙәрҙең яҙлығыуы тормошонда артыҡ хафа тыуҙырмай, ә минеке... Шул яҙлығыуҙан бала тыуҙы. Барыр ерем булмағас, мин КИюржандар төркөмөнә ҡушылып киттем. Павел шул баланың, ҡышын ҡар өҫтөндә тапҡан улымдың, кендеген киҫте. Иртәнсәк беҙҙе тағы ҡыуып алып киттеләр. Ауыл аша шдо кемдер миңә икмәк һуҙҙы. Шул икмәкте алырға ı ынтылған Павел һәм бала, бер пулянан яраланып, юл ситендә ı тып калды. Артабан мин яҙмыш тулҡынында тапсыҡтай шорөлдөм. Лагерь, курвалыҡ — барыһы ла үтте. Мәскәү ı, ииһайәт, был ҡот осҡос тормошомдан азатлыҡ бирер . . . . о ул мине фәхишәләр йортона тыҡты.

Әлбиттә, һин, Әйүп, минең үткәнем менән ҡыҙыҡһынған ||.щ, барыһын да күптән һөйләгән булыр инем. һин имманың. Улай ғына түгел, ҡатыныңдын — икенсе щдын, бигүк дөрөҫ булмаған үткәне фашланыуҙан ҡурҡа инең.)йс, эйе, ҡурҡа инең. Мин дә ҡурҡтым унан. Ә һин го: бер яҡтан һәр ҡүҙәнәгеңә тиклем үҙенә юндорған дәүләт машинаһы, ҡолдар инкубаторы — пнппм, икенсе яҡтан — мин. Ошо ҡурҡыуҙар ҡыҫаһында н Флорида яралған. Мөхәббәттән түгел, ҡурҡыуҙан п аı I. Ата-әсәһен үлтереүселәрҙән үс алыу теләге менән ш атанан, үҙен яҙмыш тамуғына тығыусы түтәйен һәм

еҙнәһен ҡәһәрләүҙән туктай алмаған әсәнән яралған. Шулай булғас, ул нисек һөйләшһен дә, нисек тыныс матур төштор күреи йоҡлаһын... Эйе, Әйүп, һин хатта түшәктә лә минец менән бәхетле була алманың: мин һинең йөҙөндә бары көслэүсене, ҡатын-ҡыҙ тәнен бысраҡ һарҡынды ҡойоу өсөн файҙаланыусыны ғына күрҙем. Минең мөнәсәбәт тиҙҙән һицв күсте, һин мине түшәк яҡынлығынан мәхрүм иттең.

Тирә-яғындағы кешеләрҙең һиңә булған мөнәсәбәте — үҙ күңелендең сағылышы, ти Павел. Ысынлап та, шулайҙыр, һинең һалҡынайыуындың сәбәбе — мин үҙем, һәм быныц икенсе төрлө булыуы мөмкин дә түгел ине. Флоридаиыц күңелен дә Павел һәм улым Игорь һауыҡтырҙы. Үҙен яратыуҙы, иркенлекте, азатлыҡты тойоу һауыҡтырҙы уны. Ул әле лә Павел ҡуйынында рәхәтлэнеп, иҙрәп йоҡлап ята. Эргәһендә — бесәй, эт, болан балаһы... Тороуын Игорь ағаһы түҙемһеҙлек менән көтөп йөрөй: улар бер аҙнаға тайгаға сәйәхәткә сығып китмәксе.

Эйе, Әйүп... Аңлайһығщыр: мин бында килеү менән үлгоп тип иҫәпләгән улымды ла, уның ҡотҡарыусыһын да таптым. Иылға аша паром менән сыкканда уҡ таныным улымды. Муйынына бәйләгән сейә биҙәге төшөрөлгән сепрәктә ул тыуғас башымдан һыпырып алып йүргәк итеп төрҕон яулығымды таныным. Шуны һаҡлаған бала. Шул яулыктап айырылмаған. Шунан бирле Павел менән ата һәм ул булып, теге атыуҙан иҫән ҡалған берәр ҡулдарын ҡуш итеп, йәшәгәндәр. Әле лә йәшәйҙәр. Тик уларҙың һыңар ҡанаттарына Флорида менән минең ҡуш канаттарыбыҙ өҫтәлде. Павел ҡулға алынғас, ғаиләһе унан баш тартҡан. Элгоре көн Павел миңә тәкдим яһаны. Өйләнешергә. Өс ком уйла, тине. Бөгөн яуап бирергә тейешмен. Ә мин ҡурҡам. Сәбәптәрен беләһең. Павелдың күңеленә нур өҫтой алырмынмы? Үҙенә яҡтылыҡ етешмәгән кеше башкаларға яҡтылыҡ өләшә алмай. Башҡаларға яҡтылыҡ, нур бирер хәлга еткәнменме? Павелды йәлләүҙән гснә ул аҙымды яһай алмайым. Хатта рәхмәт йөҙөнән дә яһай алмайым мин быя аҙымды. Мин яратырға тейешмен. Ә бәлки теге саҡ, каторжандар төркөмөндә уның ҡулына таянып ҡар ярып үткоп юлда уҡ яралғандыр миндә ул тойғо? Бик яҡын ул миңә. Сал сәстәре лә, салланған һаҡал-мыйыҡтары ла — бөтәһе ло аңлайышлы, яҡын, ҡәҙерле. Унан тыш, мин Павелдан тамсы ла ҡурҡмайым. Ҡурҡкан кешеңде яратып булмай. Һинән куркя

Цнсм I һтелдан — юк. Игорь ҙә уны «атай» ти, ул уны, ахыры, ш ын атаһы тип белә. Уға эйәреп, Флорида ла «атай» тип ин іәшә. Теле лә уның шул һүҙ менән асылды. Ни өсөн яҙам ны арҙы? һинән кәңәш-фатиха һорайыммы, әллә рөхсәтме? Мии киткәндә: «һин иреклe, Мәликә!» — тинең. Рэхмәт. Иикax кағыҙы ғына йәшәтәме кешене. һиңә бит никахтан ı |.п ырға ла ярамай. Эшең шулай ҡуша. Эшең бит һинең күптән и.ипыңа әйләнгән. Ҡоллоҡ мөһөрө баҫылған кенәгәң хужа һнң1 , йүп. Хуш. Тағы яҙырмын. Мин, моғайын, Павелдың имен ҡабул итермен. Ирле булғым килгәнгә түгел, ҡайһы сик упың тубыҡтарына башымды һалып, күккә ҡарап бер рәтһеҙ ягкым килә — шуның өсөн. Хуш. Мәликә.

I итынсы хат.

Кәҙерле Әйүп! һуңғы хатымды яҙғанға бик күп ваҡыт уис Әлегә береһен дә ебәрмәгәнмен. һинең миңә ҡарата мөнәсәбәтеңде белмэйем. Китте лә ҡайтманы, тиһендер. Ғәфү белмәгән кешеләр үҙҙәре ҡасан да булһа яратҡан иорен нығыраҡ күрә алмай, тиҙәр бит. Ләкин мин һине ш уҡ ҡаты бәғерлеһендер, тип уйламайым. Кешенең нән алда яҙмышы тыуа тигәнгә лә ышанам мин хәҙер. Ә ш гигәнең ниндәйҙер осраҡлыҡтарҙан тора түгелме? • |и.| шул осраҡлыктарҙы беҙ яҙмыш тип атайбыҙ. һине тыуым да ана шул яҙмыш тип исемләнгән осраҡлыҡ гандыр ул. Бәхетле осраҡлыҡмы, әллә киреһенсәме — һын киләсәк күрһәтер. Әлегә Флоридам матур ҡыҙ булып ı к и ıэ. Бына, бәлки, ул минең кеүек яҙлыкмаҫ, ориентиры Ш ш | айганың теләһә ҡайһы яғынан юл яҙлыктырмай тып иио. Ә мин уның аҙашмауына ышанмауым арҡаһында кала яҙҙым.

Флориданың үҫемлек, йәнлектәр телен аңлауы хаҡында ныым бит инде. Көҙ көнө урмандан ҡайтып: «Әсэй, бергә ган күк тсйендәр бик көйәләнэ, йыйған сәтләүектәребеҙ етмоҫ, ахыры, тиҙәр», — тип һөйләнеп ултырғанын |Ьлм до бигүк иғтибарға алманым. Ҡыҙыҡай март ||ч.м|да ҡапыл юк булғас ҡына шул иҫемэ төштө һәм, •м алынып, урманға сығып киттем. Флориданың саңғы и гиҙҙән ябалаҡлап яуған ҡар ҡапланы. Их, мин әйтәм, ыр юлкайҙарын тапмаҫ инде был бала. Ары һуғылдым, һvı ылдым — тиҙҙән үҙемдең аҙашканымды ацланым.

Аҙашыу өҫтөнә, эсемдә ниҙер өҙөлдө — тулғаҡ башландм. Әлеге яҙмыш! Икенсе баламды ла ҡар өҫтөндә таптым. **Кеҫәмдв** элдә бәке булған, баланың кендеген киҫкәнде генэ хәтерләйсм. иҫтән яҙып йығылғанмын. Күҙемде асҡанда ҡараңғы **төшөП** килә ине. Эргәмдә ниҙер ауыр тын ала. Ҡараһам, болан. Ина болан. Ул яланғас сабыйҙы йылы ҡорһағы менән ҡаплағаи, а сабый тамшана-тамшана унының имсәген имә. Бәрәстәрен бүрс тамаҡлаған болан ине ул. Хәҙер минең улымдың ике әсәһе бар, береһе — мин, икенсеһе — болан. Ә улыбыҙ сәләмәт Нишләптер ул һиңэ оҡшаған. Ошо хаҡта Павелға әйткәйпсм. ул: «Тимәк, һиндә Әйүпкә ул табып биреү теләге бик **көсм** булған. Улындың уға оҡшағанын теләгәнһең», — ти. Бэлки, ысынлап та, шулайҙыр? Ғаиләбеҙ түңәрәк, имен. Балаим ҡулына алғас, Павелдың шатланыуын күрһәң! Игорь Ҙ| өйләнде. Миңә өләсәй булырға ла күп ҡалманы. Әйүп! Мии балаларҙың бөтәһен дә Павел фамилияһына яҙҙырҙым. Өсөһөнөң дэ атаһы Павел булып ҡалыуы хәйерлерәктер. Беҙ матди яҡтан да насар йәшәмәйбеҙ. Кемдеңдер ярҙамына мохтаж түгелбеҙ. Телэнсе ул — һөнәр, ә байғошлоҡ характср һыҙаты, тиҙәр бит. Ә беҙҙең ғаилә — ул камиллыҡ. Бында **бвр** кемдең дә бер нәмэгә лэ мохтажлығы юҡ.

һин дә инде яңы ғаилә ҡорғанһындыр. Мин **һинеИ** бәхетле булыуынды телэйем. Бәлки, мин һиңэ башҡа хат яҙып тормам. һәр кемдең үҙ яҙмышы, үҙ тормошо. Павел **бер** кемде лэ йәберләргә теләмәй, ләкин ул һинең кеүек ата коммунистарҙы һуҡыр артынан барған һуҡырҙар, ти. **һинеҢ** хәлдэ һуҡыр булып ҡалыу, бәлки, яҡшыраҡтыр ҙа: күҙен асылһа, королдең генә түгел, үҙендең дә яланғас икәнсидо күрәсәкһең.

Сәләм менән һинең алыҫтағы яҡының *Мәликә.*

Камалетдинов һуңғы хат уҡылғас янып барған башыи устары менән ҡыҫты. Бына һиңә... Был — финал. **Ошо** финалды алыҫайтыу өсөн дә ул, бәлки, хаттар һалынгаи бандеролде күрмәй йөрөгәндер. Бына нисек... Әйүп эҙләтеп яҙған хаттарға яуаптың тик бер төрлө килеүенең **сэбәбен** аңпаны ул хәҙер: Мәликә лә, ҡыҙы ла күптән **икенсс** фамилияға күскән... Кеше динде, барыр юлын, ҡатынды **үҙе** һайлай, ти торғайны балалар йортондағы тәрбиәсеһе. **Хәҙер** килеп, Әйүп шуны аңпаны: дине юҡ, барыр юлы

ьи ı ҙәһеҙлеккә олғаша, ҡатыны — башҡаныҡы. Ғаилэ үҙенә ı ыһынса бирелеүҙе, ҡатының, балаларың хаҡына үҙенде аи итеүҙе талап итә, ә Әйүп партия мәнфәғәтен шәхси **Юрмошонан** өҫтөн ҡуйҙы. Бөйөк юлбашсыларҙың да ғаиләһе имен булмаған, тигән уй менән йыуатты **үҙен.** Балалар **|ортонда** үҫкәс, минең өйөм — тотош Ватан, тигән фекерҙә | **иизне.** Хәҙер бының фекер генә түгел, ысынбарлыҡ, әсе **Щроҫлөк** икәненә инанды. Их! Ошондай саҡта күңелен асып һ.шыр кешеһе лэ юҡ бит. Әптелэхәт. Бына кем етмәй уға **|нгин.** Ләкин унының менән дә араһын боҙҙо... | млетдиновтың Лидия Николаевнанан ҡалған көмөш ı.....ы ҡәләме инде алдында ятҡан ҡағыҙға нисәнсе тапҡыр ı елохәт» тигән **һүҙҙе** сыймаҡлай. Күҙ алдына әле I иптеләхәттең, әле Лидия Николаевнаның үҙ итеп, яҡын итеп ған ҡараштары сағыла. Мәҙинә лә күренеп китә, ул ынап. ҡара күҙҙәрен унан да ҡарараҡ керпектәре аша һөҙөп, **Мптмрап** ҡарай... Яҡлай алманы Камалетдинов берегеҙҙе лә... ниа унының өҫтәлендә Әптеләхәт менән Мәҙинә өҫтөнән ı ;ш яңы шикәйәт ята: «Әптеләхәт ҡырсылыҡ эштәре •мщ шөғөлләнеү урынына ус аяһындай тәжрибә участкаһынан сыҡмай. Етмәһә, сәсеү ваҡытында, уттай ҡыҙыу эш мәлендә, өйөндә эске мәжлесе ойоштороп, шикле бер урыҫ менән төн сыҡҡансы һүгенеп, йырлап ултырҙы, |цы ла ышаныслы түгел, халыҡты хорға йыям тип, іек ҡалдығы менән баштарын бутай. Өләсәһе ı лрррено дини дәрестәр бирә, балалары дәрестә бер- реһенә «шайтан таяҡтары» менән яҙып записка алыша».

Камалетдинов сатраш дәфтәр битенә яҙылған бысраҡ һүҙҙәрҙе йыртып сүп һауытына ырғытты. Уны ырғытты, ә ынна иткә килгән өҫтәмә заданиены ул йыртып ырғыта ı Был задание ғына түгел, Камалетдинов үҙенең шәхси тормошон ҡорбан итеп, бар көсөн һалған ауыл хужалығының Скф гармағына балта сабыу. Үҙе ултырған ботаҡҡа, үҙе рı эн ағасҡа, юғарынан ҡушалар тип, былай ҙа балтаны аҙ рмәне Камалетдинов. Әптеләхәт хаҡлы. һэм бэхетле. Үҙе ıә унының артынан эше: сығарған орлоҡтары, яраткан ны. балалары ҡала. Ә Камалетдиновтан нимә? Яңғыҙ ул. I өнән ҡурпы ла сығармай ҡороған ағас ул. Мәликә яҙған мү һәм ҡурҡыныс ағас кеүек, Камалетдинов эргәһендә р п.ипеллек юҡ. Тормош юҡ. Мәликә дөрөҫ яҙа: король,

ысынлап та, яланғас. Ул, түш кеҫәһенән алып, атаһы, әсәһе үҙе бсргә төшкән, ҡасандыр бер ғаилә, бер бөтөн булып йәшәгәндәренә ишара иткән фотоны өҫтәлгә һалды. Бөтә халыҡтарҙың атаһының үҙен бәхетле итеренә ышанып башланымы икэн Ғәзиз уҙаман үҙенең көрәш юлын' Империалистик һуғыш, Кронштадт, Урта Азияла басмачтарı I ҡаршы һуғышҡан был яугир ҡулынан күпме баштар өҙөлюм, күпме әҙәм ҡаны бер гонаһһыҙ түгелгән... Хэйер, бер уның атаһымы? Был донъяға кемдәр килеп, кемдәр китмәгән. Ярты донъяны буйһондорған Искәндэр, Аттила, Сыңғыҙхандар *ул* был донъяға буш ҡул менән килеп, буш ҡул менән киткон...

Камалетдинов йәнә алдында яткан ит заданиеһыпа ҡараны. Ферма малын ғына тапшырып ҡотолоп булмаясак бынан. һыйырҙарҙы тапшырһаң, һөттө ниңә кәметәһегеҙ, тим боғаҙҙан аласаҡтар, эш ауыл халкының яңғыҙ һыйырыма барып төртөләсәк. Камалетдинов, юлбаҫар кеүек, йәнв крэҫтиәндең боғаҙынан аласаҡ. Ошо сихырланған, ҡәһәрлс түңәрәктән бер ҙә ҡотолоу юлы юҡмы ни? Бар. Ул бероү генэ. Үлем дә бит — ҡотолоу, азатлыҡка сығыу сараһы. Уның менән бергә һуғышҡан яугирҙар, уның йәштәштәре, күптән инде, фронт һыҙығында ук, якты донъя менән хушлашты. Әйүп былай ҙа оҙаҡ, бик оҙаҡ йәшәне...

Камалетдинов сейфын асып пистолетын алды. Алды ла өҫтәлгә һалды. Сейф өҫтөнә Мәликәнең хаттарым йыртҡыслап ут төрттө. Шунан наградаларын алды. Был улар — һуғышта алғандары: Ҡыҙыл Йондоҙ, Беренсе дэрожо Ватан һуғышы, «Дан» ордендары, «Берлинды алыуҙа ҡатнашкан өсөн» миҙалы; ә былары — тыныс тормомпа алған орден-миҙалдары: «Сиҙәм күтәргән өсөн», бишйыллыҡтар, пландар, йөкләмәләр аткарған өсөн... Камалетдинов тәүгелэрен ҡәҙерләп түшенә такты, икенселәрен Мәликәнең хаттары янғандан ҡалған, леберҙәп, ҡауһайып яткан көлгә ташланы. Бөттө. Камалетдиновтың тормош менэн иҫәп-хисапты өҙөү сәғәте һукты...

Таулы район комитетының беренсе секретаре кабинстында яңғыраған атыу тауышын хатта беренсе ҡатта иҙэп йыуып йөрөгән ҡатын да ишетмәне.

...Күлдәк-ыштандарын ҡулына байраҡ кеүек тотоп, товарняк өҫтөндә малай елэ. Был поездың ҡайҙа барғанын, ҡайҙа елгәнен ул белмәй, ләкин төшөп тә ҡала алмай. Тиҙҙән



күмер, юл ңаңына буялған ҡап-ҡара шэрэ малай ҙа, поезд үҙе лэ ауыҙын йэйендэй асып көтөп торған тау ҡыуышына инеп юк булды.

Олоғайһаң йоко оса тигэндэре шулдыр. Барсынбико, ҡунаҡты оҙатҡас, мэшэкэт менэн арыбыраҡ ҡалғанғамы, уянғас түшэгендэ оҙағыраҡ ятыусан булып китте. Башта, ғэҙэттэгесэ, күргэн төшөн хэтерлэргэ тырышты. Бөгөшо төшө бигерэк эллэ ҡайһылай. Имештер, күктэ фэрештэлэр, ҡарлуғас бала осорғандағы шикелле, мыж килеп тора. Барсынбикэ лэ шулар араһында, э үҙе ҡэҙимге эҙэм кейемендэ. Бына ул фэрештэлэрҙе туҡтатты: «Нишлэйһегеҙ ул, нигэ бушамайһығыҙ?» — тип һорарға итэ, эммэ тегелэрс ҡанаттарын етеҙ елпеп китэ лэ баралар. Барсынбикэ, уларға ҡарап, үҙенең фекер ағышының яй икэненэ төшөндө, эммо бер ни ҡылыр эмэл юк. Шунан ул аңлап ҡалды: улар менои һөйлэшер өсөн Барсынбикэ лэ шэп итеп ҡанат ҡағырға тейеш. Осоп барған ыңғайға үтэ күренмэле ҡанатлы затҡа ул йэнэ шул һорауҙы бирҙе.

— Йэн аралайбыҙ, — булды яуап.

— Ниндэй йэн? Кемдэн аралайһығыҙ?

— Кеше йэндэрен аралайбыҙ. Йэн — мэңгелек. Ул яңынан тыуа. Э ҡайһыларының кеше һынын алырға хоҡуғы юк.

— Ундайҙар ҙа бармы ни?!

— Бар. Күрмэйһеңме? Анау бөкөрө ғэриптс күрмэйһеңме?

— Бэй, ул бит... минең улым! Ихсанбай!

— Бына уға кеше ҡиэфэтендэ тыуырға үткэн ғүмерендо ҡылған эшэкелектэре рөхсэт итмэй.

— Кем булып тыуа инде ул, кеше булмағас?

— Бүре булып тыуырға ризалыҡ бирҙе ул йэн...

— Ихсанбай! — Осоуҙан туҡтаған Барсынбикэ улына ҡулдарын һуҙҙы. — Ихсанбай! — Инде балаһына үрелеп еттем тигэндэ, инэ бүре, көсөгөн яҡлап, тешен ыржайтты. Барсынбикэ ҡурҡа-ҡурҡа артҡа сигенде...

Төшөн барлап бөткэс, йөрэге урынынан ҡуҙғалып, дер-р ҡалтыранды Барсынбикэ. Ахыры, тэһэрэт алып, иртэнге намаҙға баҫыу хэйерле булыр, шунһыҙ тынысланмаҫ унын ....сузғытҡан йөрэге.

Иртэнге намаҙын уҡығас, өйҙэгелэрҙе уятмаҫ өсөн, аяҡ ıa гына баҫып йэнэ тышҡа сыҡты. Игеҙэктэр аласыҡта ь, р нэмэ белмэй йоҡлай. Йэй булһа, эллэ ниңэ шулар аласыҡҡа күсеп сығыусан. Сэхрэ, иркенлек көҫэү, күрэһең, ҡарҙың да ҡандарында бар.

Самауыр торбаһына ҡоро-һары тоҡандырып төшөргэс, Барсынбикэ мал-тыуар яткан ялан кэртэне байҡаны. Өс ... ıэгэ бүлеп яҙҙырғас, Аллаға шөкөр, улар өс һыйыр тота. N парға ғаналары, башмаҡ, быҙауҙары эйэргэн. Элекке сағы һа, Мэҙинэһен йоклатып, һыйырҙы үҙе һауыр ине. Юҡ Шул. Ьулмай. Ғэзимэ барҙа ҡул ялғай торғайны, унығы Горманы, бабайға китеп барҙы. Эштэ лэ, өйҙэ лэ бөтэ Мошокэт бер Мэҙинэ елкэһенэ төшэ. Эптелэхэт телэһэ лэ ярҙам итэ алмай, ҡыр эшенэн бушап, өйгэ лэ ҡайтып инмэй. Мэҙинэне һыйыр һауырға уятып, самауыры эргэһенэ кире ураи килгэнендэ игеҙэктэр уянып, буҙ турғай кеүек һайраша йишлағайны. Таң менэн ни хаҡында шулай ҡыҙып-ҡыҙып Почлслэшэ икэн былар тип, Барсынбикэ ҡолаҡ һала ҡуйҙы.

Мин һинэн ул брошканы сэпсимгэ һорамайым. I артишкэ төшкэнсе генэ... Эсэй эйтте бит, фотограф килгэн, Цртонсэк бөтэбеҙ бергэ кэртишкэ төшэбеҙ, тине.

Коиһылыуға Күкһылыу ҙа ҡыҙып яуап бирэ:

Белэм. Эллэ миңэ эйтмэгэн тиһеңме? Эсэй белеп ıı һа? Минэн үҙендең брошкаң ҡайҙа тип һораһа?!

Өйҙэ ҡалған, тип эйт.

Улай аҡыллы булғасың, үҙең эйт өйҙэ ҡалған тип...

Мин эйтһэм, ышанмай ул. Юғалтҡанды сразы белэсэк, • һинэ ышана!

Брошка таҡҡың килгэс, юғалтмаҫ инең!

Элэйһэн, мин эсэйгэ һинең бүренэн ашала яҙғанынды эйтэм!

Унда һин дэ бар инең! Икэү бергэ инек!

Мин унын балаһына теймэнем, э һин тейҙең, ишшү эһэ, кутэрҙең!

Э ул бүре түгел, эт ине!

Эйе! Эллэ ниндэй эт урманға барып көсөклэп ята ти!

— Ярай, әйтмә инде?..

— Брошканды бирәһеңме һуң?

— Бирәм... — танауын тарта-тарта шым ғына ризалашкаи тауышынан Барсынбикә Күкһылыуҙың илағанын аңланы.

«Тәки илатып ҡуйҙы баламды теге ҡарусман!» — шулам тип уйланы ла, йәнә үкенде Барсынбикә: унына ла үҙ ҡаны бит, үҙенә ике тамсы һыуҙай оҡшаған бит Көнһылыу...

Ә бына ниндәй бүре балаһы хаҡында һөйләшә улар? Күргән сәйер төшө йөрәген өҙөүе етмәгәйне... Ҡыҙҙарҙан яҡшылап һөйләтеп алмай булмаҫ. Көнһылыу, брошканы эләктергәс, һөйләмәҫ инде ул. Серәшмә бит ул, һүҙ алыу түгел, ҡырҡһаң ҡаны сыҡмаҫ. Күкһылыуҙың уң яғына сығыя һөйләтер кәрәк. Бүре балаһын ул бит тотоп ҡараған... Барсынбикә, башы әйләнеп тыны ҡыҫылғандай булғас, аласыҡ буйындағы бүрәнәгә ултырҙы. Карашын кәртә артындағы баҡсаға ташланы. Унда, ҡырағай алмағас аҫтында. гонаһтан тыуған гонаһһыҙ ике йән эйәһенең һөйәктәре ята. Әптеләхәт кейәүгә әйтер кәрәк: ҡыҙҙары менән ныҡлаи һөйләшһен, алыҫ китеп йөрөмәһендәр. Хашим кейәүо, олаталары, уларҙан күҙен алмай торғайны, хәҙер әллә мм булды шуға: йылға буйынан таш йыйып ҡайта ла өйөна бикләнә. Донъяға тыуғас, әҙәм балаһы рәхәт түгел, хәсрги көтөргә тейеш тә бит. Хәсрәт, ғәм генэ бәндәне **Хоҙайм** яҡын ҡыла. Әммә Барсынбикә Мәҙинәһенә лә, ейәнсорейәндәренә лә — береһенә лә хәсрэтлс ғүмер теләмои. Ә үҙенең башына аҙ төштөмө ҡайғы? Әлдә ул ҡайғыларҙы тыныс үткәрергә, Хоҙайға тапшырып, үҙен ситтэн күҙәтеүсс итеп күрергә өйрәнде. Мәҙинәһенә ул аҡыл ҡасан килер?!

Мәҙинә, һуңғы осорҙа балтаһы һыуға төшкән кеүск йөрөгән ирен көскә күндереп, арыу кейемдәрен кейҙереп, ҡыҙҙарының оҙон сәстәрен толомлап таҫма ҡушып үреп, өләсәһе Барсынбикәне, атаһы Хашимды күндереп, фотограф килгән йортҡа юлландылар. Фотографтар ауылға һирок килгәнлектән, бергә-бергә рәсемгә төшә алғандары ла юҡ. Был юлы яҡшы тап килделәр, исмаһам, Дауытҡа, Әбүбәкерго хат яҙып, эсенә рәсем һалыр. Эй шатланыр балаҡайҙар!

рен каптып күргән кеүек булырҙар. Әбүбәкер ҙә Мәҙинәгә ... аһы ксуск яҡын. Ул Дауыт ыңғайына уға «әсәй» тип Ферманан ҡайтып килгәнен ҡапҡа башына менеп ҡарап торор ... Дауыттан алдараҡ: «Мәҙинә эсэй!» — тип ... ынына йүгерер ине. Әле лә унан аҙна һайын хат килеп ••һаумыһығыҙ, Мәҙинә әсәй!» — тип башлай ул хатын, ... оашҡаларҙы теҙә. Алсаҡ, илгәҙәк булып үҫте ул. Дауыт ... үсен бошора Мәҙинәнең. Хат килмәгәнгә айҙан ашты. ... әкерҙән айырмалы рәүештә, Дауыт йомоғораҡ, аҙ һүҙле, ... ии ырак сырайлы бала булды. Физика, математика, химия ... фомдәргә һалды күңелен. Самолет яһап, самолеты оло ... |үцорәк яһап осоп, колхоздың яғыулыҡ һалған багы ... гошөп шартланы. Ошо хәлдән һуң ҡайҙа ғына ... рәмәнеләр уны. Милицияға учетҡа ла ҡуйҙылар, үҫмерҙәр холоҡ төҙәтеү колонияһына ебәрмәкселәр ине — ... кгдинов яҡлап алып ҡалды. Уның ҡарауы, ата-әсәләр ... п.ппы, уҡытыусылар конфсрснцияһы һайын Мәҙинә ... Әптеләхәттең тетмәкәйен теттеләр. Ошо хәлдәр ... мы Дауытты шиғыр яҙыуҙан да. Бала шаңҡып, йәнһеҙ ... курсаҡ кеүек булып ҡалды. Эшлә тиһәң, эшләне, бар ... тиһәң, барҙы, мәгәр атлыҡманы, күҙҙәрендәге элекке осҡондар ... ҡанманы... Әле бына хат туҡтаны. Мәҙинә ҡыҙҙары менән ии чаҡмндалыр сөкөрләшә-сөкөрләшә атлаған Әптеләхәткә ... һала: олоғайған уның ғәзизе. Сэстэре элеккесә ... анланып-ҡабарып торһа ла һирәгәйгән, ағарған. Йөҙөн ... ар ғына түгел, ваҡ йыйырсыҡтар баҫа башлаған. ... гараҡ, ҡәйнәһе эргәһендә килгән атаһына — Хашимға — ... һалды Мәҙинә. Тайаҡ таянған ҡул бармаҡтары ҡыуарып, ... ергәиеп киткәндәй. Йөҙө артыҡ бирешмәгән, ләкин ......оиҙер үҙгәреш һиҙелә. Ижад кешеләрендә була торған ... ирәндән килгән яҡтылыҡ бар күҙҙәрендә. Был — яңылыҡ. ... ул нур шәйләнмәй ине. Шул йәшәтә, ахыры, уның ... н-көн тәпәшәйә, ҡуранысланa барған кәүҙәһен. Өләсәһе Барсынбикә лә таяҡҡа таянған. Элекке төҙ, ғорур һыны ......ігән, ләкин торош-килбәтенең бөтә ғорурлығы, ...п иығы ҡарашына күскән. Бөтәһен дә белеп-күреп, тишепүтеп ҡараған күҙҙәрендә хәҙер тыныслыҡ, һиллек... Ҡартайған ... ю әйтеп булмайҙыр уны. Бындай ҡарашлы, бындай о глс кешеләр, моғайын, үҙҙәре күпме теләһә, шул саҡлы иҙер. Ҡарашы менән бөтәһен дә барлағандан һуң Мәҙинә

йәнә кыҙҙарына ҡараны: көрәнһыу күлдәктәрс, *КЦ* алъяпҡыстары килешеп тора үҙҙәренә. Көнһылыуы алъяпҡысына күлдәге төҫөндәге, көрәнһыу булып бешкән сейә төҫлө итеп эшләнгән брошка ла тағып алған. Күкһылыу был тамылйыған сейә ҡашлы брошканы күргәс бии ҡыуанғайны лабаһаң, нисек таҡмаған? Онотҡан тиер инсц Күкһылыуымы онота торған бала? һәр ваҡыт йыйнаҡ, эшенән һүҙе айырылмай торған ҡыҙыҡай булып үҫеп килә бит ул. Зирәк Көнһылыу әсәһенең түшенә төбәп ҡарағанын һиҙҙе, брошкаһына һиҙҙермәй генэ ҡарап алды ла ҡыҙарҙы.

«Әһә, — тип уйланы Мәҙинә, — был үҙенекен юғалткаи Килешмәкле Күкһылыуҙан был брошканы йэ күндереп. й I берәй нэмә менән ҡурҡытып алған».

Фотоға улар беренсе тапҡыр ошолай күмәкләп, теүәл көйө төштеләр. Игеҙәктәрҙең икәүһен генә лә төшөрҙөл.1|> Мәҙинә менән Әптеләхәт тә ҡушлап төштө.

Ҡайтыр яҡҡа ыңғайлағас ҡына, уларҙы Саяфтың газш ҡыуып етте. Кабинанан сығып, Саяф былар эргәһси туҡтаны:

— Райкомдан шылтыраттылар, — тине ул ғәҙәттәгенән ҡалыныраҡ сыҡкан тауыш менән, — ишеттегеҙме икли Әйүп Ғәзизович бит... теге ни... һеҙ бараһығыҙҙыр индв Мирхәйҙәров ҡартты ла ултыртып алмаһаҡ...

— Тукта, асығыраҡ һөйлә! Әйүп Ғәзизовичҡа... — ағарыи киткән Әптеләхәт Саяфтың әле бер, әле икенсе яҡҡа тәгәрәгән ҡарашын тоторға маташты. — Ул тереме?

— Тере булһа, мин һеҙҙе тейэп алып китергә тораммы? Тик ни... халыҡҡа бик йәүкәләмәҫкә ҡуштылар... Ни бит һәйбәт үлем менән үлмэгән абзый...

— Бына уныһын һинән һорамайҙар! — Албырғап ҡалғм Әптелэхәт машина эсенә Мәҙинәне үткәрҙе лә аҙаҡ үҙе ине| ултырҙы. Аптыраған Барсынбикә, Хашим, игеҙәктәр урам уртаһында шаҡ ҡатып тороп ҡалды.

Камалетдиновты ерләп ҡайтҡас, Әптеләхәт үҙенен «контора»һына бикләнде. Мәҙинә иһә тәьҫораттары, ғәмдәре менән тағы яңғыҙ ҡалды.

Өйттем мин уға, сәйәсәт һинең эшең түгел, һин р.чсам булырға килгәнһең, тигәйнем мин уға, — тип Барсынбикә, ҡайғы уртаҡлашып. Мәҙинә шмәне. Өләсәһе менән атаһы яғып ҡуйған мунсаны сыҡҡас, сымылдыҡлы карауатына һуҙылды. Оҙон ҡыҙыу мунсанан һуң тэн ял, тетрэнеүҙәрҙән |.|кк;ш йэн һиллек һорағандай. «Ошолай ятһаң, ятһаң ғормаһаң да ҡуйһаң ине!» — тигән уй йүгереп үтте шан «Ә ҡыҙҙарың? Уларҙы кем әҙәм итә? Анау туҡһанға карсыҡмы, әллә таяҡҡа таянған атайыңмы?» — тип |.има икенсе бер уй. Бынының аҡылдан килгән уй. Аҡыл һондәне фани донъя менән яраштырырҙай, шул фани он элмәктәргә йәбештерерҙәй дәлил эҙләй. Шул < бср эләгеүең көс — йәшәй бироһең. Шайтан аһы кеүек был тормош әйләндерә генә. Камалетдиновтың да ауыҙына бөтә район ҡарап торған кеүек ине. инәгә лә ул ҡайһы саҡ дәү бер алпамышты, әкиэт рын чотерлэтә ине, үлгәйне, кескенә табутҡа һыйҙы. Быяратта кеше лэ күп булманы: барыһын да уның үҙ- һ\ и һалыуы ҡурҡыткан. Башҡалар уйлағанса түгел, үҙе ШӘ киткән донъянан. Мәҙинә, хэйер, күбеһен белеп тэ рмәйҙер. Кем уға һөйләһен? Ҡәбер эргәһендә баштан-аяҡ ксйенгән Ғәлимә килеп терһәгенән тотто. Мәҙинэ протенә башын бороп ҡарап та ҡуймаһа ла, тегеһе, ғәнеп: «Эй, әйкәйем! Ҡыйындыр инде — аңлайым. щ мчлаусынан яҙҙын», — тип бышылданы. Тура бәреп, ителгән һүҙҙәргә ҡарата ла Мәҙинә өндәшмәне, телен Юктан ҡоҙағый булып алған әрһеҙ был әҙәмгә телен итмәне, унан һуң, ҡәбер эргәһендә кеше менән шашып та булмай. Мәгәр Ғәлимэ был оятһыҙлығын |.|, Мәҙинәгә лә тел-теш күрһэтеп алмай булмаҫ.

р эргәһендә телмэр тотоуына ҡарап та, үҙ-үҙен иоиа карап та Мәҙинә артабан районды кем етәкләрен төҫмөрләне. Ҡыҙрасов. Бик олпат, аҡыллы, эшлекле ергә гырышты, сығырынан сыҡты. Камалетдиновтың и кужалығын күтәреүҙәге хеҙмәттәрен бик һаран һананы, үмыц һуңғы һигеҙ йылда үҙенең эш хаҡының етмеш гын үҙе тәрбиэләнгән балалар йортона күсереп ын да ойтмәне, ул хаҡта Мәҙинә ауыҙҙан-ауыҙға ғән хобор аша ғына белде.

Килгән машиналарына ултырып ҡайтырға торғанда, райкомда йыйыштырыусы булып эшләгән ҡатын **Мәҙинәнс** етәклэп алып китте:

— hеңлем, — тине ул илауҙан ҡыҙарған күҙҙәрен яулыҡ осо менән ҡоротоп, — hине беләм мин. Мин бит уның **өйөн** дэ ҡараным. Яҡшы кеше ине. Булыр, булыр ҙа — Әйүптой береhе лә булмаç. Ошо рэсемде оҙаҡ яhаны... Аҙаҡ нигәлер рамынан алды. Һине күргәс тә таныным. Бөтә йыуанысы – ошо hөрәт булды. Ал. hине яhағас, үҙеңә яҙhын. Ишшү... – ул кесәhенән фото hәм ҡәләм сығарҙы. — Былар|.ш кабинетынан алдым...

Фотола Әйүпте шундуҡ таныны Мәҙинә. Атаhына оҡшаған. Ә атаhы — Әйүп Ғәзизовичтың нәҡ әлеңге сакы. Әсәhе лә бик сибәр булғандыр. Мәҙинәнең уны ла ҡайҙалыр күргәне бар кеүек. Хәйер, ҡайҙа күрhен? Үлгән бит индс улар. Көмөш башлы ҡәләм генә ҡалды Әйүптең төҫө булып. hәм портрет.

...Мәҙинә тороп ут яндырҙы, киндерҙе яҙып сөйгә **элдв** Бына ул. Мәҙинә. «Башҡорт мадоннаhы» — hүрәттең аҫтыи м күренер-күренмәç сыймаҡланған яҙыуҙан Мәҙинә шул **hүҙҙв** уҡыны. Мәҙинә уның hүрәт төшөрөргә әүәçлеген белмәне ло. Әптеләхәт ҡайтҡансы ла, ҡайтҡас та аралашманы.)ш барышында hирәк-hаяҡ күреп ҡалыуҙан ғына ғибәрәт ине уларҙың аралашыуы. Ә hүрәттә Мәҙинә йөҙөндәге, тәнендогс hәр ваҡ-төйәк сағылдырылған. Әйтерhсң дә, россам **унын** йөҙөнән көндәр-төндәр буйы күҙен дә алмаған. Мәҙиномсц бер ҡулы пианино клавиатураhында, икенсеhе иркен рәүештә кэүҙәhе буйлап hуҙылған. Ике ҡулында ла фирүзә ҡашлм боронғо беләҙектәр. Икенсеhен бит Давид Соломонович **яңы** ғына килтереп бирҙе! Ә бында икәү. Уларҙың боронғолоғона ла ишара бар hүрәттә. Ғәжәп. Шулай ҙа иң аптыратҡаны Мәҙинәнең күҙҙәре. Улар ҡап-ҡара булыу өҫтөнә бик серле, гипнозлау дәрәжәhендә сихырлы. Ҡайhы саҡ улар аша Мәҙинә түгел, Барсынбикә ҡарағандай. Мәҙинә hиçкәндс: Камалетдинов Барсынбикәне... яhаманымы икән?! Әйе, **күҙҙәр** уныҡы, өләсәhенеке. Юғиhэ бынау ебәктәй бармаҡлы, hөләктәй hығылмалы йәш hында, май сәскәhеләй ыуыҙ йөҙҙә бындай күҙҙәр ҡайҙан хасил булhын?

Мәҙинә күҙен портреттағы hындан уны уратып алпш мөхиткә күсерҙе. Ҡыҙыл, кеше йөҙөн сағылдырған, ыржайкам,

яhаған, асыуҙан салшайған кеүек туҡымалар, тигеҙhеҙ ... иә hүрон, йә көслө яҡтылыҡ... Шундай ҡотhоҙ, ... трған тамуҡтай донъяла был фәрештә ҡиәфәтле, и.| рауча гөлдәй ҡатын-ҡыҙ нисек йәшәй? Яҡты нур ... клавишаларына, унда ятҡан нескә, hылыу ... ҡтарға гөшә. Бына ул кэрәкле нотаны табыр ҙа, моңға ....сан күкрәге менән йырлап ебәрер. «Мадонна»ның ... гулкын булып ҡабарған күкрэктәренән уның нәфис и hылашып төшкән бәрхэт елэненең итәк остары ... и ботмәгән. «Мадонна» тирәhендәге әйберҙәрҙең дә п.| асылмаған. Портрет тамамланмаған.

I **урьякка** инеп килгән аяҡ тауыштары ишетелгэс, Мәҙинә ргә ынтылды. Сөйҙән ысҡындыра башлағанда көҙгөлә hшец йөҙө сағылды.

Горhон, балам. Ә үҙең ят, хәл йый. — Барсынбикә ситенә килеп ултырҙы. — hин мунсала саҡта был ик эн тип тағатып ҡараным инде мин уны.

Шуман... нимә уйлайhың?

Нммо уйлайым?.. — Ҡулдарын соңҡаhына ҡуйып ... карап ятҡан ейәнсәрен Барсынбикә иплэп кенә ... ҡуйҙы. — Рәссамлығы еңә башлаған булған икән пии Һуңлап булhа ла асыла башлаған уның hәләте...

В ниңә... иртәрәк асылмаған?

h и... уның өсөн бит, бәндә асылына ҡайтhын өсөн... йә ... михоббәт, йә hағыш, йә хэсрәт кәрәк. Тетрәнеүҙән ... ира пап. Ижад та тетрәнеүҙән башлана...

Яңғыҙлыҡ... тетрәнеү була аламы?

Нигә булмаhын? — Барсынбикә нуры ҡайта башлаған ... сиппсәренән алып сымылдыҡ биҙэктәренә төбәне. ... ылыҡ бер Хоҙайға килешhен, тимәçтәр ине...

Пөкин мин уға барып, hүрәтемде яhа, тип ултырғаным

Цц күҙәрс ло... әллэ ҡайhылай...

Һүрәттәге hын бит... hин дә, hин түгел дә...

I кем олэйhәң? — Мәҙинә ҡыҙыҡhыныуҙан терhәгенә м, см.хлhснең биҙәктәрҙән ниҙер уҡығандай күҙҙәренә Ксм?!

Минс яhай башлаған ул. Хәҙерге хәлемә, торошома и.им сагымды төçмөрләргә тырышкан. Эшләгән hайын, штыратып, hүрәт көтөлмәгән боролош яhаған — ул ми.и лн.

— һы! Оҡшаһа шунан? Ниңә ул уны эшләп бөтмәгән?!

_ Һиңә булған тойғолары ҡамасаулаған. Еләне лә унын бик боронғо. Минең шундай еләнем бар ине. Атҡа атланырға тора ул ҡыҙ — ә Әйүп пианино ултыртҡан. Бөтөнләйе менән һинең һынынды төшөрөүгә күскән.

— Ә унын миңә... тойғоһо бармы-юҡмы икәнен... — Мәҙинә йөҙөнә эҫе ҡан бәреүен тойҙо, — һин ҡайҙан?..

— Сөнки эшләп бөтмәгән. Рәссам Хоҙайҙың үҙе кеүек азат булырға тейеш. Ә ул Әптеләхәттән ҡурҡҡан. Әптелэхәттең үҙен дөрөҫ аңламай ҡуйыуынан ҡурҡҡан. Ижад кешеһе үҙ асыштарынан ҡурҡырға тейеш түгел, ә ул...

— Шуға ла, тимәк, тирәсенән алған...

— Тирәсенән дә бит матур итеп киҫеп түгел, йолҡоп алған... Алыуын алған, юҡ итергә өлгөрмәгән... Әллә инде ҡулы бармаған...

— Ә кейәүең... Әптеләхәт ысынлап та аңламаһа? Ҡарар ҙа...

— Эй ҡыҙым! — Барсынбикә ейәнсәренең мендәр тултырып һибелгән еүеш сэстәренән һыйпаны. — Тик ахмаҡтар ғына бөтә әҙәмдең үҙен аңлауын көтөп йәшәй. Һин бит аҡыллы ҡатын. Аңлау һәләте бөтә ғәмгә бср тигез бирелгән булһа, ерҙә күптән ожмах булыр ине. Тыныслан. Йоҡла. — Барсынбикә ҡулы менән еңелсз генә итси Мәҙинәнең йөҙөнә ҡағылды. Мэҙинә сабый бала кеүск **иҙрәП** йоҡоға талды...

Тән-ҡапсыҡтан, тарлыҡтан азат булған Йән был саҡта һаман бейегерэк күтәрелде. Бейеклек, сикһеҙ зэңгәрлек. Унда йоҡоһоҙ төндэр ҙа, бойомға ашмаған хыялдар ҙа, пландар ҙа, әҙәмдең үҙе тарафынан уйлап табылып, аҙаҡ шул ук әҙәмдең үҙен ҡолона әүерелдергән закондар ҙа — береһе лә юҡ. Ана, Күктау һырттарының ҡая таштарҙан ғибәрәт бейек түбәләрс. Әйүп Камалетдинов шул ҡая таштарға үрләп бейеклектән ошо ергә ҡарап тороу хаҡында гел хыялланды, ваҡыт тапманы. Бынан, бейеклектән, ул ҡаялар ҙа, Әйүп урмам ултырттыра башлаған тау итәге лә ус аяһындай ғына күрено. Әйүптең күңеле, ахыры, гел ошо азатлыҡ, бейеклек көҫэп

И.ммәүснең мәғәнәһе ахыры шул булды. Ул китҡәс рҙә к>рмош шаулар. Ул ултыртҡан ағастар һәр яҙ һайын ш и нираҡ ярыр. Камалетдиновтың Ергә был килеүендә п.||)|;ш иң ҙур эҙе лә ана шулдыр, ҡаҡ тау битен ı іекҡә күмгән урмандыр...

Икенсе бүлек

Иойлоүҙән таң һарыһынан һыбай юлға сыҡҡан Мәҙинә кӧтөү кыуыуға ҡайтып етте. Әммә өйөнә инеп, иртәнге ı г\ кгап торманы, фермаға йүнәлде. Урауыраҡ булһа ла, п .ı уыл һыртынан үткән һуҡмаҡтан атлатты. Әле июль ғары, мәгәр ҡайындарҙа һары япраҡтар шөйлә ишәйгән. | шш оабайҙан илселәр килгән икән!» — тиер ине әсәһе, ı япраҡ күрһә. «Ә кешегә улар килмәйме ни?! — тип ырапы бер Мәҙинә. — Нисек инде ул, ҡайынға килә, ә ı ı юк?..» «Кешегә лэ килә, — тип үҙенең ғәҙәттәге шылы йылмайыуы менэн йылмайҙы әсәһе. — Кешегә ы ҡартлыҡ илсе итеп ебәрэ. Ҡап-ҡара сәс араларында и.| ı шган аҡ юлдар рэүешендә килә ул». Ошо ı ннсүҙон һуң Мәҙинә әсәһенең башында аҡ сәстәр неп куймағайы тип ҡурҡып йөрөгәйне. Күрәһең, ул саҡта инәгә үлем ҡартлыҡ фиғелендә күренгәндер. Эйе, Мәҙинә ма үлем менән ҡунаҡтың һорап килмәүен белмәгәндер. I ı иалетдиновты ерләгәндэн һуң Мәҙинә, теләһә-теләмәһә \ км хаҡында йыш уйлана башланы. Үҙенең йәшәү рендә үлем менән аҙ осрашманы ла бит, әммә донъянан ш һор яҡын кешең үҙе менән һинең дә бер өлөшөндө и китә. Кем булды Камалетдинов Мәҙинә өсөн? Был ıvı а Мәҙинә әлегә тиклем аныҡ яуап таба алғаны юҡ. Яҡын дуҫ тиер инең — бер ҡасан да улар серләшеп-ерләшеп ултырманылар. Ағай тиер инең — туғанлыҡ, көрҙәшлек ептәре менән бәйләнмәгәндәр. Ә шулай ҙа ша трмошоноң иң сетерекле, иң һикәлтәле миҙгел-ıı ı ı умың ярҙамын тойҙо. Әле атайлы, өләсәйле, тимәк, ıv ıы. ҡәҙерле булып йәшәп ятыуы менән дә уға, ı кч ишовҡа, бурыслы ул. Мәҙинәнең Әйүп Ғәзизовичҡа ш чмстәре — ул ана шулар өсөн рәхмәт тойғоһолор. Бер **менән** дә ҡараймаған, бысранмаған, сафтарҙан-саф

рәхмәт тойғоhо. Мәҙинәгә Камалетдинов менэн осрашырға, hөйлошергә тура килгән саҡтарҙа унының күҙҙәрендә **йотоМ** hыуға сарсаған юлсы ҡарашы сағылыуын hиҙә ине. Әммо ул hор саҡ Әптеләхәттең дуҫы булып ҡала алды. «Дуҫлыҡ» тии нарыҡланған ыҙанды аша атламаны, Мәҙинәне унайhыҙ хәлго ҡуйманы. Бынынhы өсөн Мәҙинә икеләтә рэхмәтле уға.

Ҡалҡыулыҡҡа менгәс, ферманың аҡ hыҙат булыи теҙелешеп ултырған hыйыр аҙбарҙары күренде. Ана улар - Мәҙинәнең йоҡоhоҙ төндәр, тынғыhыҙ көндәр **иҫәбена** төҙөткән ҡоролмалары. Әле унда колхоздың төҙөүселор бригадаhы эшләй. Ферманы ҡышҡа әҙерләүгә ныҡ иғтибар бирә Мәҙинэ. Аҡланмаған бер ҡарыш стена, ремонтланмаған бер метр иҙән ҡалмай. Үҙенең тынғыhыҙ холҡо, бар нәмәнс еренә еткереп эшләргә яратыуы менән етәкселәрҙең дә, ҡул аҫтында эшләүселәрҙең дә теңкәләренә тейеп бөтhә бөтә ‾ әммә барыбер үҙе теләгән hөҙөмтәгә өлгәшә. hауынсыларҙың, көтөүселәрҙең үҙе артында «Әбей батша» тип атауҙарын ишетеп йөрөй. Әйтhәләр әйтәләр инде — ил ауыҙын иләк менән ҡаплап булмай.

Теҙгенде ҡаты тота Мәҙинә. Ҡайҙа тәртип — шунда ғына эш бара. Әлбиттә, бер нәмә лә көрәшhеҙ бирелмәй. Элек көтөүселәр төшкө ашҡа ла, йоҡларға өйҙәренә лә үҙ аттарында ҡайтты. Имештер, йәйәү алыҫ, атhыҙ эшкә йөрөй алмайҙар. Ә hауынсылар йөрөй бит! Таң hарыhынан йәйәүләп килеп етәләр. Мәҙинә эш аттары өсөн аҙбар төҙөттө, ҡарарға кеше ҡуйҙы. Шуның менән ферма малының ауыҙынан тартып алынған күпме бесән, фураж ҡотҡарылды. Икенсенән, ауыл яғынан башҡа гөрлө йомош менән килгән егеүле аттарҙы Мәҙинә ферма тайсаhына индертмәй.

hауынсы булып эшләп, ни рәүешле алдынғы, депутат йо герой яhау алымдарын белгәс, Мәҙинә уға ла сик ҡуйҙы. hауынсыларға беркетелгән hәр hыйырҙың быҙаулағандан hыуалғанға тиклем hөт биреү миҡдары билдәләнгән. Бөтә hыйырҙар ҙа быҙауларға ике ай ҡалғас hыуалтыла. Йәшерен «батрак»тар ҙа юҡ, быҙауға эсергән hөттө «лидер»ға яҙыу ҙа бөттө. Әлбиттә, кеше менән эшләгәс, низағhыҙ ҙа булмай, бәндәнең төрлөhө бар. Әммә Мәҙинәнең ферма мөдире булып эшләгән дәүерендә бәхәстәрҙең ҙуры сыҡҡаны юҡ. «Мәҙинәне

ш ы ни. ул оит hипсң уйыцды ғына түгел, ер аҫтында
. . . . . . шәі әнен до бело!» тип көлөп кенә ҡуялар.
‖ ᵐ ı тып иплгнэс, төҙөүселәрҙең эшен көн дә
ı гора ı ımau Шуга күро лә, атын бәйләгәс, Мәҙинә
ı ı ı дур h ı аш ар hараиыпа токотеп hалына башлаған быҙау
ı иунал ıε ⟩леккеhен башмаҡтар өсөн файҙаланып,
ш ыҙауҙар (кои тзойҙор. Башҡа колхоздарҙағы
аҙау ар күииом үлсүгэ үлмәй, әммә бөтөнлэй
гуı ı гип vилаи Мәҙинә. Шәхси хужалыҡта
п. . . . ıызавы үлмәи. Йойләүгэ сыҡкас, Мәҙинә
щрыу үләндәрен до күплэп йыйҙыра, хатта
ше оуиынса имтихан да ала.
|. . . . . еҫе инҡып торған аҙбарға килеп
ш ултыра тошо яҙҙы Мэҙинә —
•. . . ı. . . . . . етон ı үшәгәндәр. Кемдең эше
. . . . ı ахмаҡ фарманды?
‖н шш м.шилүм кито алмаған,
мрпмҡ мспэн hуңғы
. . . . ı гормаҫтан, атын

. . . . .ппорипшка оашламып ҡына тора
штан шнеу мсилп hүҙ башларға ниэтлэнгән
ı . ı ш готанаҡлы йөҙөн күреү менән
ıвıи Әптеләхәте ло бср нөктәгә ҡарап
\м.‖и.| hүҙ кырсылыҡ эштәренә барып
ıвın былдай коцошмоләрҙән тыныс килеп

ı Ирназарова, **Саяф Сәйфулла** улы алдындағы
ıвı **Бөгөн hеҙҙе** саҡырмағайныҡ.
ыинея оаш юогсхник бында. Әллә... йәйләүҙә...

ı ррыу ы ы ҙы коrhән, hуң буласаҡ. — Мәҙинә
ш кульяулығы менән hөртөп алды ла ҡап-кара
ıııı председателгә |өбәне. — Ут бында сыҡкан:

йәш быҙауҙар өсөн һалынып ятҡан аҙбарҙың иҙәненә бстоп түшәргә кем ҡушты?

_ Мин. — Саяф Шәмсетдинов, саңҡайыңҡырап, арҡаһып креслоға терәне. — Ә нимә, ул хаҡта мин һеҙҙән һорарға тейешме?

— Минән һорауҙы түбәнлек һанағас, баш менән уйлап эш итер кәрәк!

— О-о! Бына бынығын тәүләп ишетәм. Малсылыҡҡа, шитай, егерме йыл ғүмеремде биргәндән һуң!

Бурҙаттай ҡыҙарған председатель, яҡлау эҙлоп, башҡаларға ҡараны:

— Ишеттегеҙме?! Та-ак, һеңлекәш, хәҙер **һиңә** Камалетдинов юҡ! Хәҙер һеҙ, Ирназаровтар, ни теләһәгеҙ, шуны ҡыланып йөрөй алмаҫһығыҙ! — Саяфтың тос йоҙрого төшөүҙән өҫтәлдәге быяла ҡап урталай ярылды. — Фу, черт!

Председатель ҡыҙған һайын Мәҙинә тыныслана барҙы. Ҡолағына өләсәһенең: «Юлында осраған ҡаршылыҡтар менән алышыуға көсөн сарыф итһә, йылға бер ҡасан **да** диңгеҙгә барып етә алмаҫ, маҡсатына ирешмәҫ ине», тигәне салынғандай булды. Ғәҙәттәге сабырлығы ҡайтты уға. Әптеләхәттән генә ҡурҡа: ҡатынын йәберләгәнгә түҙә алмайынса, урынынан ҡупмағайы. Шуға ла ул, йәһотлоп, ләкин тыныс тауыш менән:

— Мин бында һеңлекәш булып түгел, фсрма мөдирс булараҡ килдем, — тиис Мәҙинә. - Бетон иҙәндә ятҡап быҙауҙар үпкәләренз һалҡын тейеп ҡырыласаҡ.

— Әпәт двадцать пять! Ул ғына белә лә, председатель **дә,** баш зоотехник та бер нәмә белмәй! Әләйһәң, Мәҙинә ҡарындаш, хәҙерге комплекстарҙы күргәнен юҡтыр? **Унда** бөтәһе лә бетондан! Унда, — ул тоҡос бармағын түшәмгә тоҫҡаны, — юғарыла, мәкинә баштар ултыра тиһеңме? Бетоп иҙән — ул экономия! Гигиена! Дисциплина! Бисәләрҙең сәсе оҙон — аҡылы ҡыҫҡа тимәҫтәр ине!

— Ошо бисә арҡаһында яҙ ҡышлау башмаҡтарҙы итко тапшырыуҙан ҡотолоп ҡалдың түгелме? Малды Уралға ирто ҡыуҙырыуы арҡаһында колхозға ошо бисәнең күпме төшөм, күпме экономия килтергәнен һананыңмы? — Былары урынынан сыҙамай һикереп торған Әптеләхәт әйтте. Мәҙино уға башын бороп ҡараманы, ләкин һиҙә: ире ныҡ ҡыҙған.

— һиңә, иптәш Ирназаров, һүҙ бирелмәгән! һин үҙ и өсөн яуап бир: нигә һаман арыш сабырға төшмәйһең?

Гөшмәйем, сөнки ул өлгөрмәгән!

Башка хужалыҡтар саба! Нимә, Тирәклелә һауа ıгар ы икенсе төрлөмө?!

Һок) ағып ултырған арышты сабыуҙан ни файҙа?

Файҙа һанау һинең эш түгел!

Эшемдең һөҙөмтәһен күрмәгәс, мин ни өсөн сәсәм?!

Бысакка бысаҡ килерҙәй булып бер-береһенә тексәйешкән рҙс ҡалдырып, Мәҙинә урамға сыҡты. Тышта — ҡояш. Һәр һәр үҫемлек, һәр бөжәк тәбиғәт менән ярашып йәшәй. |ИҺ кинһы саҡ, йәй оҙаҡ һуҙылһа, гөлйемештәр икенсегә, хатта ісөгә соскә ата, аңғармаҫтан иртә яҙ йылытып ебәрһә, ы и сәскәгә бөрөләнә. Ә былай, бөтәһе лә үҙ моле менән Голкаттағы йәндең йәне билдәле бер ваҡыттан һуң ғына іон ьяға тыуа. Крәҫтиән быны күптән андағайны, тәбиғәт и ирашып, унын йөрәк тибешенә ҡолаҡ һалып йәшәй, п ш іе. Ә беҙ шуны емерәбеҙ, ниндәйҙер яһалма ҡалыптарға ірға маташабыҙ. Аҫты ҡоро булһа, мал ҡыш көнө асыҡ ш ıа бирешмәй. Улар ғүмер баҡый шулай йәшәгән. Беҙ, іәр, гобиғәттән үҙебеҙ айырылыу етмәгән, хайуандар ..... лһын да унан ситләштерәбеҙ. Мәҙинә, уйҙарына бирелеп, котәуелдәп, атын экрен генә өйөнә ыңғайлатты. Хәйер, іахәт кайтып та тормаҫ, ҡырға китер. Теге саҡ шелтә алып ı..... бирле йүнләп һөйләшкәндәре лә юҡ. Әллә ни булды I аисое булмағас, Мәҙинә лә ағутшыу өсөн тәүге аҙымды ш Низер эшләр кәрәк. Үҙе өсөн түгел, Әптеләхәт өсөн ı Былай ҙа бит унын һаулығы шәп түгел, янып-көйөп ш берәй бәләгә дусар булмағайы. Әммә иркенләп шер, лцлашыр өсөн мәле уңайлы түгел: Мәҙинә ҡыҙҙары н иаиләүҙә, Әптеләхәт иһә ҡырсылыҡ эштәренән бушамай. н аҙнала, игеҙәктәр менән мунса төшөргә ҡайтканында, ı ина иренсң «Мадонна» ҡаршыһында торған сағына тура ı Июсоһс бик матурлап, семәрләп рам эшләтеп, ике тәҙрә ı ниа казаҡлатҡайны портретты. Мәҙинә инеүгә Әптеләхәт иле. Иҫәнләшмәне. Башка ваҡыттағы кеүек ҡосаҡлап та ины Ауыҙ эсенән, ҡатынына башын бормай ғына: ины Юдифь... Ҡулына ҡылыс, аяҡ осона һөйәренең баш на етмәй», — тип мығырланы. «Әйтеп эшләтер инен,

һин йөрөнөң бит унын янына ҡуна ятып!» — тиергэ тслс ҡысытһа ла, Мәҙинә өндәшмәне. Өндәшмәүҙе хәйерле күрҙв: доиъяла ошо һүрәт барлыҡҡа килеүҙә унын бер ғәйебе юҡ. Ишетмәмеш булды. Төпкә үтеп, тәҙрә төбөндәге ҡышлау гөлдәренең тупрағын тикшерҙе. Өләсәһе ҡартайҙы, сәскәләрҙең һыуһыҙ ултырған саҡтары ла булғылай. Әйләнеп, иҙән уртаһында шаңҡып торған, тағы ла нығыраҡ ҡартайым киткәндәй күренгән ирен ҡосаҡлағыһы, наҙлы һүҙҙәр әйтси иркәләгеһе килде, эммә үҙен ҡулға алды. Тыйҙы. Әптеләхәттен, юхалана, тимәк, ғәйебе бар, тип уйлауынан ҡурҡты.

Эйе, бөгөн дә ул Мәҙинә артынан өйгә ҡайтып инмәйәсәк. Мәҙинә атаһы, Барсынбикә өләсәһе менән ултырып ҡабалан-ҡарһалан сәй эсер ҙә, атына менеп, кире Уралға сабыр. Һыйырҙарҙың иң һөтлө сағы, өс һауалар. Күҙ-ҡолаҡ булмаһаң, йә бидондарҙы йылғаға ултыртмайҙар, йо көтөүселәр малды туплауға ваҡытында ҡыумай. Ҡыҙҙары өсөн дә борсола. Көнһылыуы бигерәк шуҡ. Ҡарап ҡына тормаһаң, әллә ҡайҙа китеп олаға. Күкһылыуҙы ла эйәртә үҙе ыңғайына. Уныһы ҡурҡһа ла, әсәһенән һүҙ ишетерен белһо лә, туғаны артынан ҡалмай.

Ә председателдең аҙбарға бетон түшәтеүенән Мәҙино дөйөм эш өсөн хатта файҙа яһай ала. Ҡатнаш аҙыкты элегосо котельныйҙа быҡтырҙылар. Котельный алыҫ, һауынсыларҙЫЩ көйәнтэләп боламыҡ ташып холдэре бөтэ. Котельный иҫкергән тип, Саяф уны яҙ башыпан һүттерҙе. Эштсц барышына ҡарағанда, уны быйыл өлгөртә алмаясаҡтар. Котельный, тимәк, эле төҙөткән бетон иҙәнле һарайға күсер, быҙауҙар әлегә торған ерендә ҡалыр. Ошоно уйлағас, Мәҙинәнең кәйефе күтәрелде. «Әйҙә, малҡай!» — шуны ғына көткән юрға, лапаҫ күләгәһен, Хашим арбаһындағы йәшсл бесәнде көҫәп, батшабикә һынлы хужабикәһен өйөнә табан ихлас елдерҙе...

Кешенең иң ҙур дошманы — үҙенең хаталары. Хаталарын күрә алмай бәндә, уларға бәйле иҫтәлектәрҙе, йәнә шул хаталарҙың тере шаһиттарын күрә алмай. Ғәлимә Минһажеваның да бар ундай шаһиттары. Беренсеһе — үҙ

ы Йөрәк башына ҡан һауҙырып, Ғәлимәнең сеймәлгән, ектәр осөн артыҡ күңелле булмаған хәтирәләренең булып тыуған һәм йәшәгән, инде буй еткергән ҡыҙы (оморә; икенсеһе — гонаһ шомлоғо Барсынбикә, ул ıғы оайғош Фәүзиә, Мөғлифә.

ламанында шуға килде бит аптыранған Ғәлимә. Ә ул йәһәннәмгә олаҡкан Ихсанбайҙың әсәһе булып сыкты. ı гына гүгел — Ғәлимәнең ғүмер буйы «әхирәт» тип ш ән, нокин эсенән күрә алмаған, көнләшеп хәле бөткән ышлен олосәһе, имеш. Етмәһә, шул ҡарсыҡ: «Бала үҙ ішаның исемен йөрөтөргә тейеш!» — тип теңкәһен ı гто Ғәлимә уны сихырсылыр тип барҙы. Туранан-тура пп.ч,1 ҡағылышлы йомошон әйтте. Хәҙер, Ғәлимә юғары рı ігәс, ни уйлай торғандыр инде ул ен ҡарсығы? һ ı шуға бөтә район халҡы йөрөй. Сихырсы исеме ıııы к>к: имләй, дауалай, үләндәрҙән дарыу яһап бирә, шгэн ксшеләргә ярҙам итә — ҡыҫҡаһы, унын халыҡ |||.ш ıа абруйы артҡандан арта. Үткәне менән, ни өсөн ı икенсе исемдәр аҫтында йәшәүе менән ҡыҙыҡһынған | ı юк.

ша Ғәлимә. Бигерәк тә төндәрен ҡыйын. Иркен миа һыймай, сөй өҫтөнә ырғытылған бесәйҙәй ı шана Ҡыҙының төндә юғалыуҙарына өйрәнде инде ул. ш шбар итмәй. Үҙ яҙмышы, үҙ тормошо аяулы уға. . . . . .конона килеп еткәнсе аҙмы хурлыҡ, түбәнлек \ п! Шул хурлыҡтарҙың йәнә бер тере шаһиты — ша Әлбиттә, ул Ғәлимәне, ҡанһыраған әхирәтен, бер ı іән до алып ҡалды. Ояттан да ҡурсыны, башҡа ı һа, ауыл тултырыр ине — был өндәшмәне. Мэгәр ш оирле Мәҙинә унын тере дошманына әүерелде. Иң шүмда: фсрмалағы этлектәрҙе ҡылыусының Ғәлимә ı и һи ҙеı ю ине булһа кәрәк Мәҙинә, әммә Ғәлимәнең ы каоарған, үсе утка әйләнә барған һайын Мәҙинә уға ірик, шымлыраҡ өндәште. Шул ҡылығы менән ул шган Ғолимәне йыуашайта, үҙенә ҡаршы ҡоролған ı рҙе смсрә торҙо. Әлбиттә, Ғәлимә кешеләрҙең ... . .үрҙе. Бер дошманының да уға рәхмәт әйткәне юк. ı мфатында тормош уға, моғайын, ташлама ір І ә имә бит әле партия мәктәбен үткән кеше. ын хеҙмәттәрен төндә торғоҙоп һораһалар ҙа ул:

«Если враг не сдается — его уничтожают!» — тип **сатнатыя** яуап бирәсэк. Был тәғлимәт ҡыҙына ғына ҡағылмай — нисск тапһа ла, кемдән тапһа ла — ул үҙ балаһы. Шөкөр, **Ихсанбай** юҡка сыҡты. Ә бына Барсынбикә, Мәҙинә, Әптеләхәт... **Эйе,** Әптеләхәт тә. Ир менән ҡатын икеһе бер сыбыҡтан ҡыуылған була, тиҙәр. Был ғаиләнән үс алырға, үҙ юлыиаи алып ташларға ошоғаса Камалетдинов ҡамасауланы. Эйс, Әйүп Ғәзизович уға күтәрелергә лә ярҙам итте, шул ук вакытта Ғәлимәгә имен тыл булдырырға, артабанғы үҫеүенә хәүеф янамауҙы хәстәрләргә ирек бирмәне. Хәҙер ул юҡ. Инде бөтә нәмә уның үҙенән ҡала. Ғәлимәнең бөтә зат зәүеренә ауылдаштары «әшәке» тигән ҡушамат таккам. Күрәһең, Ғәлимәгә был исемдең зат-ырыуына юкка бирелмәгәнен раҫларға ваҡыт етте: донъя эшен донъялыкта ҡайтарған яҡшы. Ирле ҡатын — арҡалы ҡатын. Эштс Мәҙинәне яңғыҙ ҡалдырыуҙан башлаһа әгәр? Унан **индс** Барсынбикәгә тотонор. Ҡулында шундай власть була тороп, Ғәлимәме шуларҙы эшләй алмай? Әлбиттә, быларҙың береһен дә ул үҙ ҡулы менән башҡармаясаҡ. Мат куйырға башы эшләгәнгә лә ул, ябай бер һауынсы, бөгөнгә хәлсно иреште. Көрәшә торғас, оҫтарҙы, шымарҙы. Кешеләрҙсц яурындарына, баштарына баҫып күтәрелде ул **ОШО** бейеклеккә. Әммә тауҙың башына менһәң, унан икенсеһо, тағы ла бейегерәге күренә. Ҡолаһаң, тауҙың **бейегенән кола,** тигән булалар. Юҡ, ҡолар өсөн күторелмонс Ғзлимә тауга! Ҡояшҡа яҡыныраҡ, йылыраҡ, яҡшыраҡ булһын өсөн үрлопс ул. Иң мәртәбәле юл - - үргә илткән юл, э иң ауыры түбәнгә өҫтөрәгәне.

Аҫка тартыусылар булмаһа, Ғәлимә, тимәк, тағы ла шәберәк китәсәк. Яуланған бейеклек — ул кисәге коп. Ғәлимә Мөхәррәм ҡыҙы иһә бер ҡасан да кисәге көн меном йәшәмәне.

Ваҡыт һуң булыуға ҡарамаҫтан, ул Ҡыҙрасовтың ой телефоны номерын йыйҙы:

— Йоҡламайһыңмы?

— Әлегә юҡ, — булды яуап. — Гэзит ҡараштырам.

— Яңғыҙыңмы?

— һорап тораһың... Әллә янына саҡыраһың?

— Юҡ, слушай... — Ғәлимә бер аҙ тотлоғоборак торҙо.

— Йә, йә, әйт... оялма...

Ни **бит,** Заһир... урыныңа кандидатура уйламаныңмы

Бына нимэ борсой минең аҡҡошомдо...

К)к, ысын әле. Нисек инде борсомаһын? Бергә рі а бит!

Миңе пленум раҫлаймы, юҡмы, тигәндәй...

)й, уныһы! һинең мәсьәләң хәл ителгән бит инде!

Шулай ҙа булһын ти. Икенсе секретарь итеп кемде им итмәксеһең?

(!аяфты.

•Алға»ның председателен? Шәмсетдиновты?

)йе, Саяф Сәйфулловичты.

һин, ҡыҙыкай, ҡара, минең көнләшеүем бар.

Мин ысынлап! Ниңә, юғары белемле. Ауыл ілыған биш бармағы кеүек белә. Көтөүсенән, ферма ирсмон колхоз председателе дәрәжәһенә күтәрелгән! ин ордены йөрөтә! Ә инде «Алға»ла эштәрҙең нисек мимуын һиңә һөйләп тораһы юҡ...

Мирхәйҙәров ҡарттан ныҡлы экономика ҡалды бит.

Уиыһы инде... Ни генә тимә — ҡарт арыу кеше ы. локин либерал. Саяф Сәйфуллович тәртипте ҡаты ы унда!

Пиңә, ҡыҙыҡ тәҡдим, уйлап ҡарар кәрәк. Былай, ш ісетдиновтың сығынлай торған ғәҙәте юҡ шикелле?

Ю-у-уҡ! Улмы кәртә һындыра торған кеше!

Ә каилә хәле?

Хокүмәт әтәстәренең, — Ғәлимә көләмһөрәне, — хәле насар булғанын күргәнең бар әллә? Ҡатыны, імә. үҙенән олораҡ шикелле — башҡаһын белмәйем.

Ярай, — Ҡыҙрасов йәнә шаяртыу тонына күсте. — тегеҫ... үҙендең иҫәбең булмаһа... Хе-хе... Теге, шаҙра к индыра тиҙәрме?

Эй Заһир! Урам ашаһында бисә ҡосағында килеш тол ш ған көләп ятыу һиңә күңеллелер ҙә ул...

Үмколәне аҡҡошом...

Ниңә, үпкәләмәҫлекме?

Үиколәһәң, хәҙер барам янына!

Нисек?!

Шулай.

Кил.

— Килэм.

Трубканы һалғас, Ғәлимә, ырғып тороп, Мәскәүгә барғанда «Березка» магазинынан алған герман пеньюарl»ш алып кейҙе, француз духиҙарын сәс араларына, КОЛМ арттарына һөрттө. hыуыткысынан алма, апельсин сығарыи, вазаға ҡуйҙы, шешәләге коньягын графинға бушатты, түшом-стеналарға йүгереп торған һүрән яктылыҡ сәскән төнгв шәмен розеткаға тоташтырҙы. Ҡыҙрасовтың һаҡ ҡына ишеК шаҡыуына ул мөләйемлектең, рәхәтлек сығанағыныц үҙгенәһе булып тупһаға баҫты...

Ир заттарына ҡатын-ҡыҙҙы бөткәнсе аңлау тәбиғәт тарафынан, моғайын, бирелмәгән. Саяфка ҡатын-ҡыҙ бына ошо баш осондағы ҡараңғы, ләкин йондоҙ күсе менәи семәрләнгән ҡотоптоң үҙе кеүек. Ҡатыны, балаларының әсәһс Нәғимәгә лә ул серлелек шаршауын күтәреп, асылда ни бар икәнен белгеһе килгән өсөн өйләнде. Ун ете йәшлек, саҡ үсмерлектән сығып килгән, ҡырына ла башламаған егеткә ул саҡта егерме дүрт йәшлек шымыҡай Нәғимә йыһандың үҙс кеүек серле тойолдо. һүҙгә һаран булһа ла, Нәғимә йыр-такмаҡҡа шәп ине. Саяф унып асыҡ, юғары тауышын тиҫтәләгән ҡыҙҙар тауышынан шундуҡ айырып алыр, шул илаһи ауаз ҡайҙан килһә, аяҡтары шунда атлар ине. Нәғимә уны, әлбиттә, етди ҡабул итмоне. Сабаҡлы ауылынан һирәк-һаяҡ һыбай килеп-киткеләгән ир-егеттэ ине унын күңслс. Саяф был хаҡта һиҙә йөрөнө. Эсенән шул һонтор ирҙе күро алманы, бер нисә тапҡыр тукмап ҡайтарырға ла йыйынды, мәгәр яҙмыш үҙенсә хәл итте.

Бер көн, уйындан сыҡкас, Нәғимә уны үҙе туктатты.

— Саяф, әҙерәк һыу буйлап йөрөп киләйек әле?

Уйында Саяф Нәғимәнең бойоҡлоғона иғтибар иткәйне, шуға ла аптырауының сиге булманы.

— Миңә әйтәһеңме?!

— һиңә, Саяф, һиңэ...

— Әйҙә һуң...

Йылға ярына тиклем улар һүҙһеҙ атланы. Ярҙа Нәғимә туктаны:

Ултырайыҡ.

(аяф тиҙ генә пинжәген сисеп түшәне:

Әйҙә ҺуҢ...

Аҫта ай нурында тәңкә-тулҡындары менән уйнап-шаярып ... аға. Көндөҙ уның һыуы былай аҡ булып күренмәй. Моғайын, был исемдә уға ғашиҡтар ҡушҡандыр. Ғашиҡтар ... бит ул төндә йөрөй, йә күккә, йә һыуға ҡарап һоҡлана, ... бирелә...

(аяф, — тине Нәғимә һылыу, йылғаға ҡарап онотолоп ыргандан һуң. — һин миңә... өйләнер инсңме?

< аяф үҙенең ҡолаҡтарына тиклем ут ҡабыуын тойҙо:

Ә ниңә өйләнмәҫкә? Сыҡһаң — пажалыста.

Мин ысынлап әйтәм.

Мин дә шаярмайым. Ә теге... һонтор... ул ҡайҙа? Уға иаиһмңмы ни?

Ул өйләнде. — Нәғимәнең тауышы ҡалтырап сыҡты, ... кулдары менән йөҙөн ҡапланы.

I [лама, Нәғимә! Уның нимәһе — йәшәрбеҙ!

Мин һиңә... яҡшы ҡатын булырмын. Үкенмәҫһең.

Өйтеүен әйтте лә бит, Саяф ҡаушап ҡалды: артабан нишләргә? Эсенән үҙе шат. Бына хәҙер «шаҙра бәрей» тип ... күрше ҡыҙҙары күрһендәр инде Саяфты! Иртәгә ул ... иң зифа буйлы, йырсы ҡыҙын ҡушлап ЗАГС-ҡа барасаҡ! Хыял диңгеҙендә йөҙгән бер мәлендә Нәғимә уға ... с менән һыйынды:

Үп мине, Саяф!

Уҙ гүмерендә үбешеп ҡарамаған Саяф күҙен йомдо ла ... йөҙөнә ҡағылды, ирендәре ниңәлер ҡыҙҙың танауына мшдс. Оятынан ер тишегенә инергә әҙер булһа ла, имлпс. Тәү тапҡыр үпкән ҡатын-ҡыҙ ирендәренән тоҙ тәм ... һәм һалҡын булыуы ғына аптыратты уны. Аҙаҡ, ... Нәғимә ирендәренән тоҙ тәме китте, мәгәр улар ... һалҡын һәм ҡаты көйө ҡалды.

Ш... иай ҙа Нәғимә уға оҙаҡ ваҡыт сер булып ҡала бирҙе. ... троп институтта уҡыған йылдарында ла ул бисәһен ... ҡайтыр булды. Нәғимә уны берсә һалҡынлыҡ, берсә ... ҡараштары менән сылатты. Ҡайһы саҡ ул |щ.| шашып яратҡан төҫлө булһа ла, күберәген ... һалҡынлығы менән һушын алды. Бөтә

матурлығын, һөймәлеклелеген балаларына биргәндәй, **һвр** сабыйын тапҡан һайын үҙе ябыкты, ҡоро һөлдэгэ ҡалды. Саяф, дорте, көсө ташып барған ир, экренләп бисәһенпи һыуынды. Күңеле иләҫ-миләҫ булып йөрөгән **сағында** фермаға күҙе-башы, йомро кәүҙәһе уйнаҡлап торған Ғәлимо килде. Саяф уның шаян осҡондар сәскэн күҙҙәрендә йәнә төнгө серле күкте күрҙе, һайрауҙан туктаған һандуғас тауыштары ҡабат сыңланы ҡолағында, ә ай **нурында** йылҡылдап, ирәбе тулҡындары менән тирбәлгән Акъйылга уға Ғэлимә тәнеләй тойолдо. Ғәлимәне осратканға тиклсм бала-сағалы булып, партияға инеп өлгөргэн Саяф, әлбиттп, ғаилэһенән сығып китэ алманы, әммә йәре менән икэүһс араһындағы мөнәсәбәтте артыҡ йәшермәне лә. Айырым йәшәһәләр ҙә, һөйәркәһен ҡасан яраткыһы килһә, шунда барҙы, абруйын күтәрҙе, мохтажлыҡ күрһэтмәне. Ғәлимо укыуға сығып киткәс, башын эскегә лә һалып алды, ләкип үҙен тиҙ ҡулға алды: капыл уның ҡараңғы донъяһына якты йондоҙ булып Мәҙинә килеп инде. Әммә был йондоҙ **Саяф** өсөн буй етмәҫлек бейеклектә балҡыны. Саяф аҫау айғыр шикелле ауыҙлығын сәйнәне, үрәпсене, мәле менән дауылдаи ҡоторондо, йәшендәй йәшнәне — йондоҙ ҡымшанманы, үҙенән әллә күпмегә оло Әптеләхэте ышығында **тыныС** ғорурлығын һаҡлап яҡтыртыуын белде...

Ғәлимэ Минһажеваның шылтыратыуынан һуң Саяф идара йортонан өйөнә ҡайтып еткәнсе әллә күпме уй уйланы. Ниңә саҡыра ул? Уларҙың мөнәсәбәттәре **хәҙер** ҡатҡан лава кеүек: ҡасандыр урғыған, ҡайнаған эҙҙәр генә тороп ҡалған.

Барсынбикә, ҡаҙҙарын һыуға төшөргәс, өйөнә кәрто яҡтан, арт ҡапканан ҡайтып инде. Ингәс, тайсаһына байтаҡ ҡарап торҙо — Диңгеҙхан заманында бик иркен урынлашҡан икән шул: өс ыҙан картуф сәселгән, умарталар ултырған сиҙәм, емеш-елэк ағастары, йәшелсә түтәлдәре, унан һуң да әле көҙҙэүеслек йәтешерәк кэбән ултыртырҙай сабынлыҡ ҡалған. Барсынбикә ҡасандыр Әптеләхәт Себерҙән ебәргоп

ирпоҡтарынан үҫеп сыҡҡан иәш ағастар яғына атланы.
ıр үҫһә, тиреҫтән иҫкән һалкын елдәрҙе ҡаплаясаҡ, емеш гарына зыянһыҙ ҡышлау мөмкинлеген бирәсәк. Кейәүе Әптеләхәт, агроном булғас, бик яратып ҡарай баҡсаны, Чншмм да ваҡытын ошонда үткәрә, ә игеҙәктәр һәр ағасҡа иеем кушып бөткән. Әле, улар өйҙә булмағас, баҡса ҡарау ишс оашкөллө Хашим елкәһендә. һал булып ултырған ' ірағат, сейә, ҡурай еләгенән нимәләр генә әҙерләмәне: иатп.1 ла, ҡаҡ та ҡойҙо, киптерҙе лә. Эй, Гөлбаныуы иҫән ш п I ıa! Ошо муллыҡтың, ошо матурлыҡтың береһен генә лә Күрмлм донъя ҡуйҙы. Йә бына Хашимды әйт әле: торғаны берәҙәктән ниндәй кеше сыҡты. Өйләнеп, яңынан ғаилә **Щфмнуы** ғына эсен бошора Барсынбикәнең. Үлгән артынан ׀ ıı п булмай, тере кешегә тереклек итер кәрәк тә һуң? Ғәзимә лз бикматур, эшсән ҡатын ине. Хашимды бик күңел Ин н норөғәйне, быныһы ыңғайламағас, йәне көйҙө, һыпыра Ы ғып бабайға сығып китте. Таулылағы Шакира ла п кайны Хашимды. Барсынбикәгә күренәм тигән булып, бер иксис килеп тә китте. Юҡ. Мәҙинәнең атаһы **цушһыпманы,** күңелен игеҙәктәргә баҫты. Кукһылыуҙы шан төшөрмәне, өҫтөнә себен ҡундырмай үҙе ҡарап үҫтерҙе. Эйе, был донъяла Барсынбикәнең аптырарлыҡ һе калмаған да кеүек, әммә Хашим... Шунан инде, бар ш ı һсшсне беләм тип эйт.

Барсынбикә тайсаны уртаға ярып үткән һукмаҡ менән өй, ı ןוו ı ҡаралты яғына ыңғайланы. Баҡса тын. Бал ҡорттары тжләй. Сәскәләр һирэгәйә төшәр инде. Ә бында, ыла, оле улар ҡотороп атып ултыра. Ниндәй генәләре юҡ ı ын! Мунса нигеҙендэ гладиолустар сәскә атҡан, арыраҡ ı нлноләр ҡуҙ яуын ала, өй алдында — аҡ, алһыу, һары, ыл, корән ҡыҙыл розалар, нигеҙ буйында ҡуҙҙай баҙраған ферҙәр. Мәҙинәһе сәскә сәсмәгән бер ҡарыш ер ц.фмай шул. Мал кәртәгә башҡа ҡапканан йөрөғәс, ишек щ гик сәскә биләгән, бында улар хужа. Йәмдәре күҙҙең н ала, еҫтәренән һулыш иркенәйә. Барсынбикә, оҙаҡ ׀ ıан арып, нигеҙ буйындағы эскәмйәгә ултырҙы. ıга шөкөр, — тине шунан, ҡуш усы менән битен һыйпап. Хоҙайҙың биргәненә мендән-мең шөкөрмөн. ш п.|р янып, торонбаштар ғына тороп ҡалған донъяның

ҡабат торғоҙолоуон, күкрәп сәскә атыуын күрҙем, ҡәҙимге донъяла түгел — йәннәттә йәшәйем».

Иртә менән ярҙам һорап килгән халыҡтан бәғзе ваҡып арый ҙа Барсынбикә. Ошолай үҙ хәле, үҙ мәйеле менои йәшәгеһе лә килеп китә. Ләкин килгән кешене кире бора алмай. Эше ирегеп килмәйҙәр бит уға. Ә бөгөн тыныс. Мәҙинә һыйырҙарҙы ла үҙе менән Уралға алып **киткәнлектән,** мәшәкәт юҡ. Барсынбикә бер Әптеләхәт менән Хашимдың тамағына йүнәтә. Уныһын да Хашим күберәк атҡара. **Ҡарт** ҡәйнәһен бөксәндәтмәй.

Барсынбикә өйөнә инеп ятып тормаҡ булды. Намаҙға тиклем ваҡыт бар, бәләкәй башын яҫтыҡҡа терәп алһа **ла** насар булмаҫ...

Инде урынынан торҙом тигәндә, ҡапҡа асылды:

— Инәй, инергә яраймы?

— Аһ, ин.

— Этегеҙ...

— Эт юҡ беҙҙең, ин, ин... — инеүсе ҡатынды танымағас, Барсынбикә, таяғына таянып, яҡыныраҡ барҙы. — Кем тип әйтәйем... Күргән дә кеүекмен...

— Мин — Нәғимә. Беләһендер, Мәҙинәнең хорыпа йөрөнөм мин...

— Эй, иҫең бар булғыры!.. Персиҙәтелдең йәмәғәтеһсң бит!

— Эйе, инәй, Саяфтың хәләл ефете мин.

— Ярай, ултыр... Өйгә инһәң, сәй ҡуяйым. **Электр** баҡырсаһы апҡайтып бирҙе Әптеләхәт кейәүем. Биҙа рәхәт.

— Инеп тормаҫ инем... — Ҡатын ҡаушаны. — Сәскәлор күп икән **һеҙҙә,** — тигән булды шунан, үҙе **бурҙаттай** ҡыҙарҙы. — Мин дә йөрөйөм мәлһеҙ. Ҡартайғанда **тыртайған** тигәндәй, ауырға ҡалғанмын, инәй.

— Донъяла булмаған эш түгел. Бәпәйҙәрең нисәү?

— Бишәү...

— Ярай, ярай, тәүфиҡле, игелекле балалар булһын.

— Шулай ҙа ул...

— Ә нимәһе шулай түгел? — Барсынбикә уға уҡталыбыраҡ ҡараны. — Бишәү эргәһенә алтынсыһы **ла** һыйыр. Тауҙан таш артамы?

— Уныһы шулай... Тик... мин был баланы таба алмайым. **Таба** алмағандар өсөн балнис бар. Хәҙер ни Сталин ины түгел. Гонаһы ғына үҙегеҙгә...

Мин балнисҡа ла бара алмайым. Саяф белеп ҡалһа...

Бой, бслһә ни, елдән килгән бала түгелдер әле?! Ә?!

Һммон йәшереп булмай инде, инәй. һуңғы йылдар беҙ н йошәмәйбеҙ. Башта анау Ғәлимә кәнтәй менән ыне коротто кейәүең. Шулай ҙа ла беҙ әле унда... ер .. икс йыл инде... түшәгебеҙ башҡа беҙҙең.

)ш күҙ йәше түгеүҙән уҙған. Айыҡ аҡыл, һыуыҡ баш т hсцлем!

('аяф белһә, ул минең менән бер көн йәшәмәйәсәк! р >рсләнеп бөткән! Изгелегенде онотмам, инәй!

Беренсенән, — Барсынбикә тамаҡ ҡырып алды, шы ҡатҡылайғандай булды, — мин ундай эш менән үҙ ремдә шөғөлләнмәнем. Икенсенән, биш айлыҡ баланың н Лрғымдан биргем яҡын торғанда, ни тип ул гонаһты а алайым?! Мин бер генә ҡатын-ҡыҙға ла ундай йомош щ лбейҙәргә барырға кәңәш итмәйем. Биш баландың ілеген уйлаһаң, һин дә ул аҙымды яһарға тейеш |hсц!

Ай! Әйтеүе еңел! Саяфты белмәйһең! Эй Алла! Мин Он үҙ үмсремдә бер генә яңылыштым!

Башың бар, уйла! Бәндә яңылышмай булмай... Таныш иiарыңа барып ҡарайһыңмы — үҙең ҡара. Тик мин һинә ....сидә ярҙам-им була алмайым. Биғәйбә.

Шү саҡ экрен генә ҡапҡа асылды, унан ете-һигеҙ йәшлек п,||.|ц түп-түңәрәк йөҙө күренде:

Өсәй, һин оҙаҡ буланмы?

)м! Әйәреп килгән бит әле. Ярай инде, инәй, китәйем. Борсоном — ғәфү ит.

Ғөйепләмәй кит, балам. Ожмах ҡатын-ҡыҙҙың аяҡ ш м, ги китап. Бер ыңғайы сығыр.

Рәхмәт.

менән бала артынан ҡапҡа ябылды. «Эй Алла, — тип н е Барсынбикә, — бынау балаға берәй тәмлекәс горон сығарһам ни була?!»

• • ә юл йөрөүҙән, эллә көсөргәнешле һөйләшеүҙән — ынбика галсыҡты. Болдорҙан күтәрелеүен ҡыйынһынып, ка инде лә ҡолаҡсын мендәргә башын һалды...

Өйөнә ҡайтҡас, Нәғимә Саяфтың ҡайҙалыр йыйыныуын төшөндө.

— Мунса яҡ, — тине ире ҡоро ғына, — салбарҙы үтеклв Теге ни... зәңгәр күлдәкте ҡараштыр.

— Берәйһе... ҡунаҡҡа саҡырҙымы әллә? — Ғәҙәттә, һорау биреп йөҙәтмәгән Нәғимә был юлы өндәшмәй түҙмәне аҙна уртаһында Саяф был рәүешле һирәк ҡылана.

— Һиндә ҡунаҡ ҡайғыһы!

Шуның менән һүҙ ҙә бөттө. Нәғимә ниндәйҙер ашҡыныулы, ярһыулы хис менән мунса тоҡандырҙы. Ҡул араһына ингән балалары һыу ташыны.

Шул арала үҙе мейескә икмәк һалырға ла, һалмаһын ҡырҡып, ашын бешерергә лә өлгөрҙө. Саяф та эш ҡушыу менән сығып китмәне, бер ятты, бер торҙо, ауыҙынан папиросын төшөрмәне. Мунса төшөп сыҡҡас, малайҙарҙан машинаһының эсен-тышын йыуҙырҙы, шунан, ҡып итеп кейенеп, руль артына үҙе ултырып, районға киткән юл менән Таулыға олаҡты.

«Кәнтәйе саҡырған» — Нәғимәнең башына килгән тәүі е уй шул булды. Уның янына барыр булһа элек тә шулай ҡылана ине.

...Нәғимә үҙ ғүмерендә бер генә тапҡыр, унда ла мәңге өҫтөнән йөрөгән иренә үс итеп, мин дә бит әлс кемгәлер оҡшайым, тигән уй менән яҙыҡ эш ҡылды. Уныһы ла теләһв кем менән түгел — йәшләй һөйгән йәре менән. Әммә был осрашыуҙан ул бер ниндәй ҙә күңел күтәренкелә е кисермәне. Киреһенсә, үҙен ғәйепләүҙән, үҙ-үҙен күрә алмауҙан йонсоно. Бөтә кеше белә, бөтә халыҡ уға бармағы менән төртөп күрһәтә кеүек. Ә был, Саяф, оялмай. Ғәлимәһе лә хаттин ашты, йүнлерәк ҡатын булһа, Нәғимәне күрюс, оятынан инер урын тапмаҫ ине. Ә был — юҡ. Саяф унда төн ҡунып ятҡандан һуң, Нәғимәне осратһа ла таҫырайта ҡарап үтеп китә торғайны. Әйтерһең дә ул Нәғимәнең ире менән зина ҡылмай, ә Нәғимә уның хәләлен тартып алған, Ғәҙелһеҙлектән, ире тарафынан әҙәмсә ҡараш тоймауҙан ҡурышты уның күңеле. Таң ата ла кис була. Көндәр ҙә, төндәр ҙә бер-береһенә ике тамсы һыу кеүек оҡшаш. Ярай әле хор булды. Мәҙинә уны «беҙҙең сопрано» тип йөрөттө.

ı ыырға күскән һайын яңы талпыныу кисерә торған ıы Быйыл уны Саяф хорға йөрөүҙән тыйҙы. Үткәндә щ улы:

Мираҫҡа, әсәй, һин беҙгә нимә ҡалдырыр икәнһең? — ııııı ми.шлы-ысынлы һорау бирҙе.

Йыр, — тине Нәғимә. — һинән бай кеше юҡ. Мин ıııııı улым, тиҫтәнән ашыу йыр өйрәттем.

Йс, үтте ғүмере Нәғимәнең. Үҙе лә яратып сыҡманы ıııı ı Һойгәненә үс итеп барҙы. Үҙе һөйөү менән балҡымағас, ('имфки ла ҡот өҫтәй алманы. Ут уттан тоҡана, ә Нәғимә үҙе һүнгән усаҡ ине. Бер уйлаһаң, күпселек ҡатын-ҡыҙ иргә бала ıııыр, әсә булыр өсөн сыға. Сыҡҡас, иренә лә әсә була. ııı ıаи бара күптәрҙең тормошо. Нәғимә лә балаларын ıы. «түрә бисәһе» тигән исем дә уға ниндәйҙер дәрәжәлә I ıı ıныс бирҙе. Әммә күңеле һәр саҡ кемделер юҡһынды, ıе ıер көттө. Көтә, өмөтләнә торғас, әлеңге бәләһенә ıım. «Яҙмышыңа буйһон! Тормошто нисек бар — шулай ı кыл. Барына шөкөр ит, күндәм бул!» тине уға эске ıııы. Ә аҡылы: «һин кемдән кәм? Бер йәшәй торған ......ıяла мөхәббәт шарабын туйғансы эсеп тә китмәгәс...» — ıııı гәкәтен ҡоротто. һәр яңылыш аҙым өсөн, һәр рәхәт өсөн ıı ıәү барлығын хәҙер генә анланы Нәғимә...

Балаларын ул иртә йоҡларға һалды. «Бөгөн, йә бер ҡасан Үлһо үләр, ләкин Саяф алдында ғәйепле булып ıясаҡ. Ире ғүмер буйы йөрөнө, ни өсөн ул берҙән-бер ıı осон Саяфтан «кәнтәй» тигән һүҙ күтәрергә тейеш?!» ıмә ҡыҙыуы һүрелгән мунсаның иҙәненә ултырҙы. Йә ıй! Гсге саҡ, Ғәлимә Саяфтан ауырлы тигән һүҙ ишеткәс, ı ı генә шул бисәне шымсы кеүек эҙәрләнс. Бер мәлде I ı ııмә шундай эштәр менән булаша торған ҡарсыҡтын ıһен сиртте. Ҡарсыҡ уны эскә үткәрҙе. Нәғимә тәпәш өй ||к'нсң тартылып бөтмәгән ҡорғаны ситенән бөтәһен дә ıı горҙо. Хәҙер ул ҡарсыҡ юҡ, ул инде күптән гүр эйәһе, ı Ноғимә ундай әмәлдең ни рәүешле башҡарылыуын ц ҡалды. Барсынбикә ыңғайламаны. Хәйер, уның ундай ı мспон булашмағанын былай ҙа белә ине. Белһә лә, ıрағандан барҙы, ҡурҡҡандан. Ә хәҙер ҡурҡмай. Үңәсенә ıем гонаһҡа батҡан Ғәлимә гөрләтеп йәшәп ятҡанды, им.и ә ни булһын?..

Ғәлимәнең үҙен шулай һағынып ҡаршы алыуын көтмәгәйне Саяф. Ни тиһәң дә араға йылдар үҙенең **һалкын** тынын бөрккән, унан һуң, торған баҫҡыстары ла бер **тигоҙ** түгел. Ул саҡта Ғәлимә Саяфтың ҡул аҫтында эшләй ине. Саяф үҙенә нисек кәрәк, ҡайһылай оҡшай — шулай ҡыланды. Ҡыҙғаныу сәхнәләре лә ойошторғоланы. Ғәлимә **шуларҙы** өнһөҙ күтәрҙе. Был күндәмлектең сәбәбе уның **яраты** уындалыр, тип уйлағайны Саяф, ләкин улай уҡ **булмай** сыҡты: Камалетдинов уҡырға барырға тәҡдим итеү менән ҡоштай осто уның йәриәһе. Хуш, Тирәкле! Бар тип беләлор ти Саяфынды! Ошонан һуң хәтере ҡалды уға Саяфтың. Әлс лә, Ғәлимә нисектәр сынъяһау кейенеп уның алдына ни алып, ни ҡуйырға белмәй өйөрөлмәһен — ошолар артында **икенсс** бер сәбәптең ятҡанлығын Саяф яҡшы шәйләй.

— Эй гөрләтәһең, әйкәйем! һөт буйынса кем алда? «Алға». Иген буйынса кем алда? «Алға». Эреләндең, **йән** киҫәгем, инеп хәлде лә белеп сыҡмайһың. һөйгән **йәрҙәрҙе** шулай тиҙ оноталар микән? Ә?! — Асыҡ иҙеүенән түшторс апаруҡ мул күренгән Ғәлимә бит остарын уйылдырып **үҙенең** бәрхәттәй шыма тауышы менән бэғергә үтеп гөрлоио, ултырған һайын нығыраҡ һылашты Саяфҡа.

— Аптыратаһың әле мине, Ғәлимә? Нимә, әллә тол ҡатым булыу ялҡыттымы?

— Инде, — Ғәлимә, уның һайын шашып, Саяфтың алдына уҡ күсеп ултырҙы. — Кейәүгә сыҡкан тигән документым булмаһа, кем әленгә урынға үрләтер ине мине?

— Нигә, Свердловскиҙа кейәүгә сыҡманым тимәксс-һеңме?

— Сыҡманым. Эй Саяф! — Саяфтың һаман шаҡ ҡатып ултырыуына йәне көйгән Ғәлимә, төшөп, кире ултырғысҡа ултырҙы. — Әллә инде мине бер ҙә һағынмағанһың, **әлла** инде үҙең бында булһаң да уйҙарың алыҫта...

— Нигә саҡырҙың?

һөйләшеүҙең ошондай тиҙлектә етди йүнәлеш алырып көтмәгән Ғәлимә ҡаушай төштө, икенсе яҡтан, шулай яҡшыраҡ та:

Наҡытында һин мине күтәрҙең. Депутат иттең, герой
ııı Пнде минең сират. Изгелеккә изгелек менән яуап
ıрıым килә, Саяф.

Га-ак... — һәр нәмәне тиҙ төшөнөүсән Саяф бөтә
ıһе мснән алға эйелде. — Инеш һүҙһеҙ генә әйтә
ı ı ı|**ИҺЫҢМЫ?**

Әйтеп була, әлбиттә... Мин һине, Саяф йөрэкәйем,
ııı ıı с сскретарь итеп тәҡдим иттем.

һпи?!

Мин.

Һом һине тынларҙар тиһеңме?

Гыңларҙар...

Ҡайҙан һиндә быңдай ышаныс? Әйтмә. Беләм.
I ı **фасовтан.**

Конләшеүеңде ситкә ташлап тор...

Конләшеүемде?! — Саяф мыҫҡыллы йылмайҙы. —
Ши ı Һипең... Әйтмәйем, ярай...

Саяф, улай күңелһеҙ ултырмайыҡ әле?! — Ғәлимә
ı рюмкаһына йәнә коньяк ҡойҙо. — Әллә инде... ҡыҫтай
ıмәйем. Жозефинаһы алдында Наполеондың Наполеоны
илəп йөрөгән, ә һин уклау йоткан кеүек ултыраһыңсы...
һин бит Жозефина түгел...

Жозефина булһаң, мин дә мүкәйләр инем тимәк-
ıı һı нмс?

Мүкәйләр инем. Ә бәлки, мүкәйләйемдер ҙә — һин
щ бсләһең?

Ьорсаҡты эре яра торған ғәҙәтең элек тә бар ине...

Шулай инде: ауырыу китһә лә ғәҙәт китмәй бит.

(,пн|) рюмкаһын ҡулында уйнатып ултырған арала
I ı шмо икенсеһен түңкәрергә өлгөрҙө. Иөҙө ҡыҙарҙы,
ıııнаүына тимгелдәр бәреп сыҡты. «Эсә, ахыры, — тигән
I. . . .,|мта яһаны Саяф. — Тиҙ ҡыҙарҙы, тиҙ иҫерә. Күр ҙә тор,
ı ɔaııı менән планын асып һаласаҡ. Оҙаҡ көтөргә тура
. . . . .миәсәк».

Иырлайыммы әллә, Саяфҡайым?

Куй, барыбер Мәҙинә кеүек йырлай алмаҫһың.

hи-и, Мәҙинә! Пүстәк! Гел боронғо йыр йырлай, нух
ıııı. . . . .нан ҡалғанды! Ә мин... «Түңәрәгем»де, ә?!

К)к тинем бит! Йырҙан өйҙә надоел. Бисә йоҡоһонан
ııı ıан ятып киткәнсе шыңшый.

— Минең тәҡдимгә нигә ҡыуанмайһың, ә, йән киҫәк?

— Ҡыуанам. Ниндәй ир карьеранан баш тарта? Тик... һин әйтеп бөтмәнең. Уның өсөн мин нишләргә тейеш?

- һорауҙы ҡабырғаһы менән ҡуйҙың. Был минә оҡшай, Уның өсөн һин, ҡәҙерле Наполеоным, минең юлымды дошмандарымдан әрсергә тейешһең.

— Кемдәр улар?

— Барсынбикә, Әптеләхәт, Мәҙинә. Өсәү. Бог любит троицу!

— Уй-бай... — Саяф, өҫтәл эргәһенән тороп, креслоя барып ултырҙы. — Аппетиты шәп шул минсң Жозефинамдың.

— Шәп?! Ха-ха! — иҫергән Ғәлимә шарҡылдап көлом диванға ауҙы. — Шәп булһа, һин креслола йәйелеп ултырыр инеңме? Ха-ха-ха!.. Кил!.. Кил, минең Наполеоным!

— Мәҙинәнең һиңә ни зыяны тейҙе? — Сисенә башлаған Саяф утты һүндерҙс. — Юлынды тим, ҡасан арҡыры сыҡты'.'

— һинең, минең именлегем өсөн шулай кәрәк. Минсң именлегем — һинең дә именлегең. Ой! Һин ҡайһылай... ҡайнарһың... Уф! Көттөрмә! Жозефина һинһеҙ... Юҡ, һии Жозефинаһыҙ... бер кем дэ түгел... Аңланыңмы? Королеваһыҙ король бер кем дә түгел... Ха-ха-ха!

Мәҙинә йәйләүҙә ҡыҙҙары менән Әптелэхәт тирмә рәүешле итеп ҡороп биргән ҡыуышта йәшәй. Ямғырҙа ғына улар һауынсылар йәшәгән будкаға инә. Ҡыуыш ҡалҡыуҙа ултыра. Еләҫ, себен-серәкәй ҙә йөҙәтмәй. Ҡыҙҙары, ҡурсаҡтары менән күсеп килгәнлектән, ҡыуышты үҙҙәренсә биҙәгән. Мәҙиио уларҙы үлән йыйырға ла өйрәтә. Шуға күрә бында кипком сәскә, япраҡ еҫтәре. Ҡалын итеп яңы сапҡан бесән менән ҡапланғанлыҡтан, ҡыуышҡа һыу үтеп тә бармай, эҫе көндәрҙә лә уның эсендә һалҡынса һаya. Әле Мәҙнпл йәйләүгә яҡынлау менән үҙҙәренең торлағын күрҙе. Ҡыҙҙар күҙгә салынмай, емешкә киткәндер. Көтөүселәр малды һауынға ҡыуып килтергән. Биҙрәләрен ялтыратып, һауынсылар күренгеләй. Бынан, тау башынан, йәйләү

юшо йонле, яйлы донъялай йәйелеп ята. Ҡатындарҙың щ 1лгон керҙәре, усаҡтарҙан күтәрелгән шыйыҡ төтөн — һаһы ла күңелгә иҫ киткес яҡын, ҡәҙерле...

Ана, ситтәрәк, көтөүсе Сэйғәфәр, ахыры, йыр һуҙа:

Күгәреп тә яткан, ай, аркаға
Ат ектереп менһәң, көс була.
Үткэн генэ ғүмерем, юк иҫәбе —
Таң ата ла йэнэ кис була.

Мәҙинә, үләнгә үрелә башлаған атын яйына ҡуйып, п ıı ıəүҙе күҙәтте, йырҙы тыңланы.

Бвлки, тормоштоң бөтә матурлығы үткән ғүмергә иҫәп м бармауҙалыр? Тотҡонда ғына бит кешеләр үткән һәр ген, көнөн һанай. Бына Мәҙинә лә Әптеләхәт ҡайтканы Пирис гүмеренең нисек үткәнен, ваҡытының нисек аҡҡанын ншмай. Ана, йылға кеүек. Уның ярҙарынан күпме һыу исн кем һанаған? Ошо тәбиғилекте улынан хат килмәү гена боза. Әммә әсә күңеле һиҙгер: улы тере. Көтөлгән хат барыбер киләсәк. Әгәр уның менән бер-бер хәл булһа, лһе түҙмәҫ, әйтер ине.

Киске һауын тамамланып, һөттө тейәп оҙатҡас, Мәҙинә шиына күтәрелде. Ҡыҙҙар таганға сәйнүк элгән. Һәр шкыл тғыса сөкөр-сөкөр һөйләшәләр, бәхәсләшәләр ҙә:

Шул тиклем япраҡ тултырыу буламы сәйнүккә? — Кмммһы Көнһылыу тауышы. — Самалай белмәнең инде.

һалдым инде. Еләк, ҡарағат, бөлдөргән япрағы. Әсәй ірыгандыр, шуларҙы эсһә, хәл инеп китер.

Ә уның сәй эскеһс килһә?! Еңмеш Көнһылыу Аирсшсргә теләмәгәндәй.

Ятыр алдынанмы? Ул бит таң һарыһынан тора, беҙҙең гөш еткәнсе ятмай!

Ҡыҙҙарының әсәләрен хәстәрләүҙәре Мәҙинәнең күңелен күтәрҙе. Ҡыҙ бала — ҡыҙ бала инде. Әлдә генә ошолар ниилиа тыуҙы, әлдә генә уларҙы Хоҙай икәү итеп бирҙе!

(!әй хжәс, Мәҙинә һүрелгән ҡуҙҙар өҫтөнә төтөнлөк п.|. Лт өҫтөндә йөҙ саҡырымлап юл үтеү үҙен һиҙҙерә, ᕗр үҙҙәренән-үҙҙәре йомола. Тик бына ҡыҙҙары пн.клапып йоҡлап китә алмағандай, икеһе ике яҡтан

Мәзинәнс ҡыҫып-һығып ҡосаҡлай, һағынып өлгөргәндәр, иркәләнгеләрэ килә.

— Әсәй, һин беҙҙең икебеҙҙе лә бик ныҡ яратаһыңмы? Көнһылыуҙың һорауы йоҡлап барған Мәзинәнс күҙсн асырға мәжбүр итте.

— Әлбиттә. Бөтә әсәйҙәр ҙә балаларын тигеҙ ярата.

— Ә-ә... Мин әллә Күкһылыуҙы нығыраҡ яратаһмң микэн тигәйнем.

— Әсәй күберәк һинең якка ҡарап ята, мин шулай булһа ла өндәшмәйем. — Күкһылыуҙың тауышында үпкәләү түгел, сабырлыҡ сағылды.

— Йоҡлағыҙ, бәләкәстәрем. Атайығыҙ ҙа, мин дл яратабыҙ һеҙҙе. Бер тиң яратабыҙ.

— Әсәй, ә һин атайымды нығыраҡ яратаһыңмы, әлло... беҙҙеме? — Көнһылыуҙың һорауҙы былай ҡуйыуы аптырата төштө. Мәҙинә ни тип яуап бирергә белмәй ятканып ҡа Күкһылыу ярҙамға килде.

— Әсәйҙәрҙән улай һорамайҙар. Әсәй беҙҙе нығыра| яратмаһа, бөгөн бында килмәҫ ине. Эйе бит, әсәй?

— Әсәйҙәр атайҙарҙы ла ныҡ-ныҡ яратырға тейеш ул. Көнһылыу быны өҙөп әйтте. Аталары менән әсоһс араһындағы ҡапыл барлыҡка килгән аңлашылмаусанлыкты һиҙә, ахыры, сабый йөрәге.

— Мин атайығыҙҙы ла ныҡ-ныҡ яратам. Йоҡлағыҙ. Көнө буйы йүгереп тояҡайҙарығыҙ талғандыр... — Мәзинә уларҙы алмаш-тилмэш үпте. — Өләсәйеғеҙ ҙә, Хашим олатайығыҙ ҙа һағынған үҙегеҙҙс. Тағы бер-ике көндән күсәбеҙ, күҙ етеп килә бит...

— Әсәй, ә теге... Мэскэүҙән килгән... Давид ағай скрипкаһын нимэнән эшләгән ул? — Күкһылыу әсәһенец яланғас беләгенә һаҡ ҡына ҡағылды.

— Ағастан, саған ағасынан. Уның да оҙаҡ йәшәгәненән...

— Ә ни өсөн... саған ағасынан?

— Сағандан... ни өсөнмө? — Йоҡоһо оса башлағад Мәзинэ Күкһылыуға табан әйләнде. — Саған, тигәйне ул миңә, — тауыштарҙы үҙенә һендерә.

— Шуға уның скрипкаһы һинең кеүек... йырлаймы?

— Минең кеүек? — Мәзинә көләмһөрәне, ҡыҙының сәсенән һыйпаны. — Скрипка, балам, минең кеүек йырламаҫ

ııı скрипкасы минең кеүек ҡатындарҙың иөрэген ııı шмаһа...

Шул ерҙә йоҡоға китеп барған Көнһылыу түҙмэне:

Әсәй, Күкһылыуың... ҙурайғас, шул скрипкасыға Ийоүгә бара.

Пң ҙур сере асылыуҙан ярһыған, оялған Күкһылыу гүшәгенән тороп уҡ ултырҙы:

Үҙенде бел! Һин бит әле, ҙурайғас Хөсэйен бабайға барам, ул ат ярата, тинең!

Ярай, ярай, барырһығыҙ, — Мәҙинә көлөүҙән саҡ ГЬІЙылып, ҡыҙҙарының өҫтөнә юрғанды рәтләштереп япты. Ул бабайҙар һеҙ үҫкәнсе йәшәһә — барырһығыҙ.

(ср шештәре ҙурая барып, ниһайәт, һытылған ҡыҙҙары, ГЫпысланып, йоҡоға талды. Игеҙәктәр йоҡлап киткәс тә Мәзинә бер талай йоҡоға китә алманы. Көн эсендә булған Цкиғалар бер-бер артлы күҙ алдынан үтте. Йәйләүҙэн йойләүгә күсеү үтә лә мәшәкәтле эш, һауымды кәметмәй күсенер кәрәк ине. Ара якын түгел. Күсенмәй ҙә булмай: ииыv уҫалайҙы. Төндә бер һыйырҙы һуккан. Көтөүселәр кайуанды бысаҡларға өлгөргән. Итте һан-һаны менән элеп цуйғас, үҙҙәре йылғаға эсәк-ҡарын йыуырға төшкән. Шул арала һыйырҙың бер бото юк булған — айыу, авдып тороп, уҙ өлөшөн алып тайған.

Төн тын. һыйыр муйынына таҡкан ҡыңғырауҙар ғына сы.....ап китә. Ҡайҙалыр өкө ухылдай, төн ҡоштары ара-тирә Цырылдап ала. Таштан-ташҡа бәрелә-һуғыла аҡкан йылға үҙенең мәңгелек йырын һуҙа, тик ул йыр төндэ бөтөнлэй ı.....каса. Уйҙар кеүек. Уйҙар ҙа бит төндә баҙыҡлана. Көндөҙгө сыбар ваҡиғалар төндә бер бөтөнгә укмаша. Ваҡ-Гмйок, ығы-зығы әллә ҡайҙа тарала, иң мөһиме тороп ҡала. Ә Мәзинә өсөн иң мөһиме — Әптеләхәте менән аңлаша алмай Цмроү. Шул өҙә үҙэген. Шул тойҕо бынау мәңгелектең үҙе Ксуок тыныс, һил төн менән бер тән, бер йән булып кушылырға ирек бирмэй...

Өптеләхәт ел иҫкән ыңғайға берсә һарғылт, берсә аҡһыл гулкын булып йүгергән иген баҫыуынан күҙен ала алмай

торҙо. Бына уның йоҡоһоҙ төндәр емеше. Унын илһамланып ижад иткән иген симфонияһы, тупраҡ менэн ҡояш һэм кеше ҡулдарының йылыһынан тыуған сонатаһы. Орлоҡтар, бәләкәй генә лабораторияла һынау үтеп, тәжрибо участкаһынан бaсыуға күскәнсе күпме тынғыһыҙ хистор кисерҙе Әптеләхәт. Төшөнкөлөккә бирелгэн саҡтары ла aҙ булманы, әммә шундай мәлдәрендә лә унын күҙ алдыида көслө елдәргә, боҙлауыҡтарға бирешмэй, йығылмай торғам иген диңгеҙе тулҡынды, гектарынан алтмыш центнер уңыш бирэ торған арыш баш ҡосто. Йығылмай торған һабаҡлы, Әптеләхәт тарафынан «Тирәкле-1» аталған бойҙай әлегә алты гектар ғына майҙанды биләһә, «Алға-1» арышы егермс гектарға сәселгән. Тағы бер аҙна-ун көн көткәндә «Алға-1» районда түгел, республикала тиңе булмаған уңыш бирәсәк. Әптеләхәттең оҙон рәт булып теҙелгән туҡ башаҡтарға ҡарап йөрәге ҡыуаныс менэн тула: ошо хәтлем эште ул берәүҙән до ярҙам һорамай башҡарып сыҡты! Рауза менэн Шәңгәрәйго, йәнә Хашим ҡайныһына рәхмәт — улар һәр саҡ эргәһендә булды, Шәңгәрэйҙең Шәңгәрәйе Әптеләхәттең бөйөк эа башҡарғанын йөрәге менэн тойҙо: теге саҡ «урыҫ утары»нда сусҡа ҡарағандағы шикелле ҡарыулашманы, тиҫкәреләнем асыуына теймәне. Әптеләхәтте йәнә шул аптырата: асыштар уға гелән ҡапыл, көтмәгәндә килде. Өмөтһеҙлөккә бирелдем, төңөлдөм тигәндә, зиһене яңы идеялар меноп балҡыпы, дәртенә дарман, күңеленә илһам өҫтәлде.

Хәҙер ул тыныс. Күңеле бынау зәңгәр күк йөҙө кеүек аяҙ, болотһоҙ. Донъяға тыуыуының, йәһәннәм уттарын үтеп, иленә ҡайтыуының хаҡын ҡайтарҙы. Музыка яҙыу теләгән до — бөтәһен дә ошо селекция эше алмаштырҙы. Әптеләхот бөтә йөрәге менән шуны асыҡ тоя — ул үҙ эшенец Бетховенына, Моцартына әйләнде! Унын өсөн бөгөн ему тулышҡан башаҡтарҙың ҡыштырлауынан яралған тауыштан да бөйөгөрәк моң, унан да гүзәлерәк ауаз юҡ. Ленинградта, Эрмитажға барғанда, ул бик оҙаҡ итеп «Бетховендың башы»на ҡарап торҙо. Шунда ул ижадсы өсөн асыштың ҡаһарманлыҡҡа бәрәбәр икәненә төшөндө. Эйе, асыш — батырҙар өлөшө. Асыш юҡ икән — ижадсы юҡ. Бойҙайҙың һэм арыштың яңы сорттарын сығарыу өҫтөндә эшләгәндо йыш ҡына унын күҙ алдына шул һын килде — «Бетховен башы». Әптеләхәтте был эшкә тотондорған сәбәп тә, бэлки,

... һын булғандыр. Әптеләхәт осҡондо, тәғәйен, шунан I... ш ҡайтҡандыр...

Басыуҙан күҙен ала алмай, йөрәк йылыһы һеңгән ......иктарҙан хасил булған иген диңгеҙенэн айырыла алмай торҙо Әптелэхэт. Их! Әйүп Ғәзизович булһа! Ҡапыл п дуҫы, кәңәшсеһе юҡлыҡтың ҡырыҫ ысынбарлыҡ икәнен ... ıvзан Әптеләхәттең йөрәге ҡыҫылды. Ул, Камалетдинов, ... ү юллекте, ошо камиллыкты инде бер ҡасан да **цүрмойосәк,** Әптеләхәттең шатлығын уртаҡлашып, ҡуйы ......ары аҫтында ялтыраған төпһөҙ зәңгәр күҙҙәре менэн **Цылмиймаясаҡ...**

Эптеләхәт мотоциклына ултырып, ҡайтыр яҡҡа йүнәлде. Гаүзы гөшөр саҡта күҙенэ ҡушҡайын салынды. Ҡайындар. М.ммпл менэн унын яраткан ҡайындары. Икәү генә улар. Йитерһең дә тау итэгендә йүгерешеп уйнаған сауҡалыҡтан — иаштәрҙән — айырылғандар ҙа, етәклэшеп ошонда килеп имдар. Бер-берееһенең күҙенә ҡарағандар ҙа ниңә ....лмдлрен дә, кире ҡайтыр юлдарын да онотҡандар.

Пмидәй бәхетле һеҙ, ҡайындар! Икегеҙ ҙә йәшһегеҙ. һеҙ Гиидоштәр. Һеҙҙең ғүмер ваҡыттың бер һулышынан, бер |раш ташлауынан яралғандыр...

Өптеләхәт ҡайындар төбөндә мотоциклын туктатты. име үтеп йөрөйөм эргәгеҙҙән, э туктарға форсат таппманым. Ғәфү итегеҙ, ҡайындар. Мин туҡтамаған кеүек, Мәзи... лә атынан төшмэйҙер **һеҙҙең** яндан үткәндә. һеҙ цщһиглыҡ ҡылған ул йылғы хәтирәләрен күңел төпкөлөнә Илшерл биреп, эргәгеҙҙән йэ көлөп, йә илап үтәлер...»

Өптеләхәт ҡайын төбөнә пинжэген түшэне лә һуҙылып ... Клгя һелкенеп ҡыштырлаған япраҡ шауы шыбыр-шыоыр, шыбыр-шыбыр ниҙер һөйләй, Әптеләхәттең хәтеренә **Күптон** үткән ваҡиғалар хаҡында һөйләй, ахыры, ул. Бәндә рс бик ҡыҫкалыр, тип уйламағыҙ, ҡайындар! Ғүмер — ителек, тип уйлауҙан килә, ахыры, был хәтерһеҙлек.

,.Л)ителэхәт лагерҙан сыҡмаған йәнен генә алып ҡайтты ... Аслыҡ, електәргә үткән һалҡын үҙ эшен эшләмәй ...«Мәзинэм менэн улымды ғына күрһәм, үлһәм дә нмлҫ инем!» — тип уйланы ул. Шул уй йэшәтте уны, шул II коюлғоһоҙ ысынбарлыҡ булып әжәл боғаҙынан алған II гарҙа ла үлемдәрҙән алып ҡалды. «Мәҙинә йәш, һылыу, — .....күңеленең шиксэн мөйөшөндә яралған бер уй. —

Кейәүгә сыҡҡан булһа? Барыбер. Һөйгәнем йөҙөнә бер **карар** өсөн мин Себерҙсң үҙенән йәйәүләп, унынһы мөмкин булмаһа, имгәкләп ҡайтырға риза». Хоҙай унын теләген **ишетте** Әптеләхәт ҡүҙ йәштәре сикәләрен көйҙөргән хәлдә үҙен **азя** итеүҙәре хаҡындағы приказды тыңланы — **һуғыш** тамамланған көндә генә ул шулай илағайны...

Аҙаҡ, ҡайтып, Мәҙинәһен, улын ҡосаҡлағас, ҡатыныш.щ тоғрологона ҡайһы саҡ шикләнеүҙәре өсөн оятынан нишләрı 1 белмәне...

Тормош дауам итте. Ғәзимәнең кэзә ҡымыҙы, ҡәйноһе Барсынбикәнең шифалы үләндәре, бигерәк тә Мәҙинэпси иркәләгән, наҙлаған ҡулдары Әптеләхәтте әкренләп аяҡка баҫтырҙы. Тәненә ит ҡунды, беләктәренә элекке көсө **ҡайтты,** йөҙөнә сәләмәт ҡыҙыллыҡ бәреп сыҡты, тауышы көрәйҙе, үҙүҙенә ышанысы артты. Бөтә тәбиғәт ҡарҙан әрселеп, ср-әсәнең ҡарынынан тәүге тылсымлы үрсем булып шытыи сығып, сиҙәмде бөйөк матурлыҡ яһап ҡаплаған умырчая мәлендә улар етәкләшеп ошонда килде. Эй, ҡатын-ҡыз серлелеге! Эй, унын изге сафлығы! Улар, ошо ҡушҡайынға һөйәлеп, күккә ҡаранылар. Ҡайын олондары буйлап **ташкан аҙау яҙғы** һут уларға күстеме — ҡулдар ҡулға айырылғыһыҙ тартыу көсө менән уҡмашты. Мәҙинә ирендәренец ҡайнарлығы Әптеләхәттең тиҫтә йылдар буйы ойоған дәртеи йырҙы — улар, бер-береһенә укмашҡан хәлдо **ҡушкайым** үҫкән түбэнән **аҫка** тәгәрәнеләр. Ә **аҫта** — шишмәлск. Сарсаған күңелдәргә һыуһын булырҙай зсмәлек...

«Эй илаһым! — тип ярһыны Әптеләхәттең һөйгәне менои күпме ваҡыттан һуң яңынан ҡушылыу бәхетен **татыған** күңеле. — Был көнөм Мәҙинәмэ ике тамсы һыуҙай **оҡшағац** бәпес булып яңынан тыуһасы!»

Тәңреһе был юлы ла ҡабул ҡылды унын теләген: Илаһи уларға Көнһылыу менән Күкһылыуҙы бирҙе. Эйс, Күкһылыуҙы ла: Әптеләхәт Мәҙинәне унын рухы аша килем тапты бит.

Мәҙинә менән улар умырзая һипкенендә ҡүҙ күрмәҫлск бейеклектә соролдаған һабантурғай йырын тыңлап оҙаҡ яттылар. Хәтерендә, ҡатынының сәстәрендә лә, керпек-тәрендә лә, ирендәрендэ лә умырзая аңҡышы, ә күҙҙәрендл төпһөҙ аяҙ күктең нурлы балҡышы ине. Ҡайтҡан **саҡп**



Әптеләхәт Мәҙинәне күкрәгенә ҡыҫып күтәргән килеш атланы.

— һинә ярамай, төшөр! — тине ҡатыны, э үҙе ебәктон бармаҡтары менэн иренең муйынын нығыраҡ сырманы.

— Төшөрмәйем. Мин ғүмер буйы ошолай атларға риза, — булды Әптеләхәттең яуабы.

Ваҡыт аҡкан һыуҙай үтте. Ситтэн тороп институг тамамланылар. һөйөү ялҡыны уларҙы ташламаны, тауҙай ҡаршылыҡтар түбәләстэй генә күренде. Мөхәббәттең илаһп көсө үлергә ҡайткан Әптеләхәттән тауҙы урынынан күсерсп ултыртырҙай батыр яһаны. Донъя төҙөһэ, ҡулында балтаһы уйнап торҙо, ағас ултыртһа, яҙын тумаланы, көҙгә емсш бирҙе, әле диңгеҙ булып тулҡынған игендәр ҙә — илаһи мөхәббэт емеше. Йәш, һылыу ҡатынын көнләшеү тойғоһо ҡапыл тынын ҡурһа, шаҡшы хистэрҙе үҙенән тиҙерок ҡыуырға тырышты. Көнләшеп Мәҙинәһен кэмһетеүҙоп ҡурҡты. Ҡайтыу-ҡайтмауы билдэһеҙ ирен көтөп алған ҡатын иң ҡайнар һөйөүгэ, иң оло ихтирамға лайыҡ икәнен һәр саҡ иҫендә тотто... «Ә бына һуңғы ҡылығын... — Әптеләхәт битенә ут ҡабып, тороп ултырҙы. — Бер бисәнең... Ғәлимәнең һүҙенә ҡарап, нисек рәнйетә алды ул Мәҙинәһеи? Унын тураһында насар уйларға ниндәй хаҡың бар ине?! Ә һүрэт... Һуң, күңелендә ижадсы рухы йәшэгәс, тыуһа ла йеҙ йылға бер тыуыр һылыуҙы һынландырмай, ҡулыпа бумала алмай, буяу иҙмәй нисек түҙһен рәссам йөрэгэ?! Алйот мин, алйот... Әгәр Әйүп минең ихласлығыма ышанған булһа, картина яҙылып бөтөр ине! Минең көнләшеүемде тойоп йәшәмәһә, ул эшен тамамлаған булыр ине! Мин, Әптеләхәт, кәртә булғанмын дуҫымдың илһамына, дарманына дәрт биро торған урында балта сапҡанмын...»

Әптеләхәт ирендэрендә тоҙ тәме тойҙо. «Ила, ила, ошолай аҙаҡ үҙ-үҙеңде өҙгөсләмәҫ өсөн нисек хаталанмай йәшәргә? Уны көтөп алған, бахырҙан батыр яһаған, төндәр буйы лабораторияһынан сыҡмай тәжрибә яһаған ирен йоҡламам көткән, бала ҡарау, донъя көтөү мәшәҡәттәрен өнһөҙ-тынһыҙ үҙ иңенэ алған ҡатынының ғәфү итеүен ниндәй һүҙҙәр менон һорарға? Нисә йылдар ул Мәҙинәһен ҡыҙҙарына тормош бүләк иткән ошо аҡланға саҡырманы, нисә йылдар улар икәүләп ер ҡарынынан умырзая тирткәнде, ә күктән көмөш

...гөр шуыштары сығарып һабантурғай йырлауын ...маны.

...ыл бар булмышын яҡтыртып һиҫкәндергән аңлауҙан ... Онтеләхәт. Бэхеттең ҡәҙерен бәндә юғалткас ҡына ...ҙәр. Шулай уҡ... Юҡ! һуң түгел! Ашыҡ, Әптеләхэт, ...ең япына! Шиктәрең Мәҙинәнең һине көтөү-иилрыпың бер семтеменә лә тормай.

...птеләхәттең үргә торо асырғанып геүләгән тимер аты ...ғы йойләү битендә үҙен тилмереп көткән алиһәһенә ...гы...

I... ш богөн иртэ торҙо. Кистән иҙгән әсеткеһен ишәйтеп, ...ы. Кипкән еләк эремсектәрен ебетеп, турағыс аша ... Хөсәйененең тыуған көнөнә әҙерләнде. Хөсәйенде ... ... «Пожарка»ға күсерҙеләр. Ике ат, мискәле ...ирҙеләр, өсөнсөгә үҙенең һарайғырҙың тоҡомо тип ...атып алған ҡолонон ҡарай. Шунан айырыла алмай. ... п.па ҡалһа, һинең көн менән төнөндө ҡарап тормай», ... ул. Әсэ күңеле һиҙә: ни генә тиһә лә, һарайғыр ...һенән һуң ул аттарын ҡалдырып ситкә бер аҙым ... ҡурҡа. Ярай инде, Рауза ла шөйлә яңғыҙ түгел бит ...ҙәр булһа ла эргәһендә туптай тәгәрәп йөрөгән ...ән бар. Үҙе лә, олоғайыуына ҡарамаҫтан, хөкүмәт • испләхәт уға: «Рауза Ғәҙелгәрәевна!» — тип ...ра. Йә, кем әле уға ошо йәшенә етеп исеменә ...емен ҡушып өндәшкәне бар? Бер кем дә. Бына кеше, ...штырай Рауза Әптелэхәткә, етем үҫкән, һуғышын да, ... п до күргән, э культураһын юғалтмаған. Күпме бергә Рауза унын ауыҙынан бер алама һүҙ сыҡҡанын ... Торғаны әүлиә. Хоҙай Раузаға шундай культурный ... итмәне ивде. Рауза үҙе, тәҫкә-башҡа зәрә Мәҙинә ... булмаһа ла, сиған арбаһынан төшөп ҡалған да түгел Кәүҙәгә тулыраҡ булыу эле йәмһеҙ тигән һүҙ түгел. ...л... Эт тә бит һөйәккә ташланмай.

... .• гашып сыҡкас, Рауза табаға еләк бөккәндәре ... горлэп, ваҡлап күмәстәр ултыртты. Өйгә бешкэн

елэк, икмәк, табала шыжлаған май еçтәре таралғас, Шәңгәрәйҙе уятырға була, төпкө бүлмәгә инде.

— Ah! — Рауза, үҙ күҙенә үҙе ышанмай, тупhаға ултыра төштө. — Ништәүең был, Шәңгәрәй? Аҡылыңдамыhың?!

— Нимәстәгән? — Шәңгәрәй, былай ҙа бәләкәй гено күҙҙәре ҡыҫылып бөткәнсе йылмайып, ҡәнәғәт ҡиәфәт менон Раузаға ҡараны. — Сәпме мин?!

— Ишкәнhең ишан... — Тағы ниҙер әйтеүҙән саҡ тыйылған Рауза ауыҙын ҡапланы. — Яҙ ғына тектерҙем бит кәстүмеңде, әҙәм араhында кәм-хур йөрөмә тип тектерҙем.

— Раужа әпшәй hәйбәт, — Шәңгәрәй түше тулы «миҙалдар» таҡкан костюмы менэн көҙгө алдына баҫты. — Кесе ауылға Признифкигән тип уйҙар инде!

— Ярабби... — Кэнсир ҡалайынан өс йондоҙ ҡырҡып өҫкә, унан аҫтараҡ, кендегенә еткәнсе, әллә күпме шалтыр-шолтор таҡкан Шәңгәрәйҙең үҙе төпөш, үҙе йыуан кәүҙәhенә, тирмән ташылай башына ҡарап, Рауза бер hүҙҙе ҡабатланы, — ярабби...

— Мин — Призниф! Кесе бы кем тиhә, сулай тип әйт, йәме, Раужа әпшәй?

— Үәт алйот!

— Ы!

— Нимәhе «ы»?! Аҡылы бар әҙәм түшен тултырып тимер тағамы?!

— hы! Призниф та алйотмо?! Әптелэхэткә әйтеп кәрәгенде бирҙертhәм, белерhең!

— hуң, ул Брижнифтыҡылар ысын! Нэстәйәшней! Ә hин... тфу!..

— Уныҡын да кесе эстәгән. Минең hымаҡ кесе. Ә мин үҙем эстәйем. Урҙап амағанмын.

— Ай алмаша! Брижнифка hуғышкан өсөн, эштэгэн өсөн биргәндэр. Хөкөмэт биргән!

— Ә мин эстәмәйемме? Әйҙә атыу, эскә бармайым. Кәжәләрҙе үҙең ҡыу...

— Мин hиңә эштәмәйhең тимәйем. hин дә эштәйhең. — «Кәзәләрҙе үҙең ҡыу» Раузаны тауышын иретергә, йомшағыраҡ hөйләшергә мәжбүр итте. — Тик бит... берәү ҙә үҙенә-үҙе миҙал бирмәй. Миҙалды уны хөкөмәт бирә!

— Ә бирмәhә?!

— Бирмәhә ни... таҡмайhың! Бына мин таҡмайым бит!

Буhа, тағыр инең!

)и Хоҙай! Хәҙер мин нисек итеп hине Хөсәйенден ....өнөнә апарам? Бөтөн әҙәм бот сабып көләсәк! Тәүбә н||И|)улла!..

Мин әле Хөсәйенгә лә өс миҙал-йондоҙ эстәнем. ККв Ул да гел эстәй — берәү ҙә миҙал бирмәй. Мин Мип hаран баҡа түгел.

Эй, ул Хөсәйенде инде! — Улы тураhында ишеткән hүҙ, Шәңгәрэй ауыҙынан ғына сыҡhа ла, Раузаның ıен иомшартмай ҡалманы. — Хөкүмәткә униң шикелде ю хеҙмәт иткән кеше буhа ла берәү, икәү булыр. У бит, ч> Ат тип йөрөп, өйҙәнмәне, бала hөйөр сағында hөйә ы. мин үлhәм, кем ҡарар, кем ҡайғыртыр...

Мин. Мин бар бит.

Эй, байғошҡайым! Үҙенде кем ҡараhын? Шулай ҙа... и инде. Күңелең насар түгел шу hинең... Мөрйәң и.ип Пуhа ла, төтөнөң тура сыға. Ярай, миҙалдарыңцы н таҡканhың инде. Уға ҡарап ҡына бар аҡылың сығып яцыhы өҫтәлмәç...

I иҙҙән өйҙә йәнә тынлыҡ урынлашты.

ғы ## яғына hалам ҡыҫтырыуҙан күңеле булған Рауза ıур төнөнсөктөң береhен үҙе тотоп, икенсеhен күкрәге ы кплай миҙаллы Шәңгәрәйҙэн күтәртеп, hандыҡтан ы гөллө күлдәк-камзулдарын алып кейеп, ауыл урамынан ı ı баçып «Пожарка» ға туйтаңланы.

ш ция Николаевна Башкирцева баçлығып, илауҙан ıғып уянды. Уянғас та оҙаҡ ҡына күҙен асырға ҡурҡып ı балки, униң күргәндәре... төш түгелдер... Бәлки, ул ш да, бәләкәй генә ҡыҙсыҡ, йылға яры буйлап р, о униң ағаhы, «Хәтирә-ә-ә!» тип ҡысҡыра- ı, ағып китеп баралыр... «Хәтирә»... Лидия ппм каранғыла ишетелгән ауаздарға ҡолаҡ hалды: ı hуға, кран еткәнсе боролмаған, ахыры, тыпылдап hыу Пшск төбөндә йәшәмеш немец овчаркаhының ı сыйылдап ҡуйғаны ишетелде, күрэhең, ул үҙенең ығын, инэhенең йылы ҡорhағына иркә моронон

төртөп, туғандарынан ҡыҙғана-ҡарһалана имсәк имгэисп төшәй. Алыҫта пароходтың гудок биргәне лә салыма ҡолаҡҡа. Тимәк, таңғы дүрт. Ул көн дә ошо мәлдо ҡысҡырта. Лидия Николаевна үҙенең Ленинградтағы квартираһында ятҡанына инде тамам ышанды. Шулай за күргэн төшө йөрәген һыҡрата: йылға буйлап ағып киткоп малай зәп-зәңгәр күҙле ине. Лидия уға: «Әйүп аға-а-ай!» — тип ҡысҡырҙы, ҡул һуҙҙы, ә ағаһы һуҙылған ҡулдарҙы күрмәне. Ҡыҙыҡ... Хатта «ағай» тигән һүҙҙе әйткәнен ап-асыҡ хәтерләй Лидия. Ул, телен әйләндереп, төшөндәгс һүҙҙе ҡабатларға итте. «Агай» булыбыраҡ яңғыраны ул, ә төшөндә Лидия уны дөп-дөрөҫ, башҡорттар кеүек итеп әйтте. Әйүп... Әйүп Камалетдинов — бына кем ағып китте уның төшөндә! Ә нинә ул Лидияға «Хәтирә!» — тип ҡысҡырҙы?! Хәтирә... Ахыры... Ҡапыл Лидия Николаевна түшәгенән ҡалҡынды, башын йәшен сатағы ярып, яҡтыртып үткәндәй булды — «Хәтирә!» Уға бит ошолай өндәшәләр ине! Эйе, эйе! Ул үҙенең элекке исемен хэтерлэне: Хәтирә ул, Хәтирэ! Мыҡты кәүҙәле мыйыҡлы ир уға ошо исемде ҡушып йыр йырланы, э йәш кенэ башҡорт һылыуы, күрәһең, әсәһелер, Лидияны өҫкә-өҫкә күтәрә, ә ҡыҙыҡай, сырҡылдап көлә-көлә, күҙҙәренән гәлсәр нуры эркелгән кешегә табан талпына...

Лидия Николаевнаның һулҡылдап, күкрогенән инрәп сыҡҡан тауышы ҡараңғылыҡта иренс, күҙҙәренән аҡҡан ҡайнар йәше сикәләрен, ирендәрсн көйҙөрҙө — ғүмере буйына бауырына таш булып ятҡан һағышы тышҡа шулай бәреп сыҡты. «Үкенес, ҡайһылай үкенес! Әйүп Камалетдиновты бөтә булмышы менэн яҡын күрһә лә, бер иркенләп һөйләшеп ултыра алманы!» Улай тиһәң, нинә әле ул Әйүп Ғәзизович хаҡында үткән заман рәүешендә уйлай? Ленинград — Өфө араһы самолет өсөн алыҫ ара түгел, бар ҙа кил. Йәнә уның зиһененә «үлем үкенесле була» тигән һүҙҙәр теҙеме килеп инде. Лидия уларҙы, ләпәктән ҡасҡандай, башын һелкеп ҡыуырға тырышты. Үлем тураһында уйларға Әйүпкә лә, Лидияға ла иртә, бик иртә!

Артабан йоҡлай алмаҫын төшөнөп, Лидия Николаевна торҙо, эҫергәнгән битен һалҡын һыу менэн йыуҙы, һыуытҡысынан алып ниндәйҙер һут эсте — тәмен тойманы. Томан таралып көн яҡтырғансы аяҡтарын өҫкә алып бөкләп

ҡәнәфиҙә ултырҙы. Төньяҡтың һүрән ҡояшы аҫтында ҡыуарып аҡһылайған йөҙөндә, диңгеҙ өҫтөнән үткән ел кеүек, берсә тәрән, берсә еңелсә һырҙар яһап, хәтирәләр теҙмәһе йүгерҙе. Зәңгәрһыу күҙҙәрен ҡаплаған, әлегесә ҡамыштай оҙон, ҡуйы булып ҡалған керпектәре һиҙелер-һиҙелмәҫ дерелдәне. Сәғәт куранттары һигеҙҙе һуғыуға, ул, профессор Лидия Николаевна Башкирцева, кейенеп, Нева ярындағы яратҡан эскәмйәһенә сығып ултырҙы. Бындағы еләҫлек, иркенлек уның өҫтөнә ишелеп килгән шөбһәле уйҙарҙан ҡурсыр, эрсәләр кеүек...

Ошо килеш күпме ултырғандыр, эргәһендә генә таныш, Лидия Николаевнаның йөрәгенән гел эркелеп, ағылып тора торған моң ишетелгәндәй булды. Башта Лидия һиҫкәнде. Ахыры, онотолоп, эсемдәген тышҡа сығарып йырлап ебәрҙем, тип уйланы. Эйе, эйе! һүҙҙәре лә иҫендә уның, һәр саҡ иҫендә: «Ялан да ғына ерҙән болан килә...» Был йырҙың һүҙҙәрен Лидия Николаевнаға Таулыла эшләгәндә шәфҡәт туташтары тәржемә иткәйне. Шуға ҡарап, йырҙа һөйләнелгән яҙмышты төҫмөрләне Лидия, Зөлхизә йәшәгән мөхитте күҙ алдына килтерҙе. Әммә бөгөн, ошо минутта, йыр Лидияның күкрәгенән түгел, Нева тулҡындарына ҡарап көйләп торған моряк кейемендәге егеттән урғыла ине. «О илаһи! Ниндәй осраҡ! Бөгөнгө төш һәм көтмәгәндә ишетелгән бынау моң...» Башкирцева күҙҙәрен йомдо, егет күкрәгенән аҡ томандай таралған көй уны башҡорт далаларына, унығ ҡырағай йәнлек һыртын хәтерләткән бейек тауҙарына, таңғы иртәләрҙә бөркөт саңҡылдаған ҡаяларына, муйыл сәскәһе еҫенән башың әйләнерлек йылғаүҙҙәрено алып ҡайтты. Эй ғәзиз тупраҡ! Нимә, ниндәй ҡарғыш-рәнйештәр һиндә йәшәүҙән, һинең матурлығың менән хозурланыуҙан, икмәгендең татын, тел- мондарыңдың тәмен татыуҙан мәхрүм итте мине... Ниңә мин һиңә үҙ балаң, үҙ йәнең булып баға алмайым? Ниңә мин һинең хикәйәттәр-йырҙар һеңгән аҫыл тупрағыңда үрсем йәйеүҙән, ҡурпы сығарыуҙан мәхрүммен? Йырҙа һыҡтаған ҡыҙ — Зөлхизә — минән мең тапҡыр бәхетлерәк. Ул ят бауыр түгел. Үҙ халҡының, үҙ еренең ҡыҙы. Уның һағыштары һәр башҡортҡа яҡын, аңлайышлы...

Көй тынды. Егеттең китеп барыуынан ҡурҡып, Лидия Николаевна һаҡ ҡына атлап уның янына килде:

— Ғәфү итегеҙ, һеҙ... Башҡортостанданмы?

I ... уға йөҙө менән әйләнде, һорауға ғәжәпһенгәндәй ... н.жин ятһынманы:

I... гкортостандан.

\ ... п.шда торған мыҡты кәүҙәле, саҡ ҡына ҡоңғортораҡ ... зәңгәр күҙле егет Лидия Николаевнаға быҡа-быҡа: ... ипой!» — тип ҡулдарын һуҙып төҫлө. Башкирцеваның ... әйләнде, тамағы кипте, быуындары йомшаны.

һеҙгә ни булды?

Һер ни... — Лидия Николаевна күперҙең ҡорос ... тотондо. — Таулыны... Тирәклсне... беләһеңме?

Бслмәҫкә! Мин Тирәкле егете!

Гирәкле... Әбүбәкер... балаҡайым! — Лидия ... мсипа аптырауҙан шаҡ ҡатҡан моряктың киң күкрәгенә ... терәп илап ебәрҙе. — Мине, Лидия инәйенде, ... ни?! һуң, больница... Күпер... һәләкәт...

ГСидия Николаевна үҙенең сәстәре араһында Әбүбәкерҙең и.‖);шған эйәген тойҙо, ҡулына уның күҙҙәренән эре н< ... ксүек йәш бөрсөктәре тупылданы:

Мисек белмәйем ти инде! Флотҡа хеҙмәт итергә лә... ... күрмәҫменме тип... һеҙ бит минең нойем, Лидия Николаевна!

<)й! Күпме кешеләр... яҙмыштар... — Башкирцева, ... Әбүбәкерҙең йәш ҡатыш йылмайған йөҙөнә ... Ә өләсәйең тереме? Мәҙинә, Хашим — улар > Камалетдинов? Әйүп Ғәзизович, ул...

Ул үлгән... — Әбүбәкер һүҙен әйтеп тә бөтмәне, иҫтән ... Лидияның ҡулдары түбән һәленде...

< пн(‖ Iирәклегә таң беленгәнсе ҡайтып етергә ашыҡты. ... бсрҙе биш итергә генә тора. Артыҡ һүҙҙең уға юҡ. Ьигерәк тә хәҙер, үҫергә, үрләргә торғанда. Йәш цшли һаҡһыҙ ҡылған ғәмәле күп булды инде. Үҙенә ҡалһа, ... дә эшләгән кеүек ине, эммә ни ҡылһа ла аҡ еп сгслгән булып сыҡты. Әле лә Ғәлимә менән үткәргән ... юрт тә, дарман да өҫтәмәне, мәгәр ул Саяфҡа күпте и... ошо «күп» хаҡына бармаҫ ерҙән барырһың да, и|ды ҡылырһың. Әле малай ғына сағында өйҙәренә

тоҡ күтәреп килеп ингән сиған бисәһе әсәһенә: «Мальчик у вас не простой. Башковитый. Большим начальником будет!» — тигәйне.

Колхоз председателе булып эшләүен Саяф әллә ни оло вазифаға һанамай, күңеле гел ҙурыраҡты көттө, бейегерәк үрләүҙе көҫәне. Шуға ла ул Мирхәйҙәровтан колхозды «һалдырып» алыу менән хөкүмәт ҡарарҙарын өслөтә-бишләтә арттырып үтәргә кәреште. Бер кем риза булмаһа ла, ауыл халҡы салғы күтәреп ҡаршы сыҡһа ла, Әптеләхәт йыйылыш һайын: «һаҙлыҡтар йылғаларҙың аккумуляторы, ә йылғалар ерҙең ҡан тамырҙары!» — тип лаф орһа ла, Тирәкле тирәһендәге барлыҡ һаҙлыҡтарҙы киптереп иген сәстерҙе. һыуһын булыр ерҙе сәсеүлеккә әйләндереүҙән артыҡ фәтеүә булмағас, химик ашламаларға көс төшөрҙө. «Нитрат — тупраҡтың дошманы!» — тип күтәрелгән Әптеләхэткә ҡаршы көрәшеү үҙе генә күпме көсөн алды — бирешмәне. Колхозда ул хужа. Ул әйткән — закон. Йыйылыштарҙа һөйләгән һәр телмәрен партия ҡарарҙары, тезистар менән нығытты, халыҡ араһында атаһы — «Ҡыҙыл партизан» Сәйфулла — улы файҙаһына һәйбәт агитация алып барҙы. Ҡарт «Сиҙәм ерҙәрҙе үҙләштергән өсөн» тип аталған берҙән-бер миҙалын тағып, кластан-класҡа осрашыуҙарға йөрөнө. Ауыҙынан төкөрөктәрен сәсеп кулактарға ҡаршы нисек көрәш алып барыуын, нисек итеп ауыл хәҙрәтен Себергә һөрҙөрөүен һөйләне. Атаһының яҡлауына, үҙенең белеменә һәм тәжрибәһенә таянып, «партия һыҙған юлдан» Саяф юғарыға үрләне. Нинә, уның да энэнэн генә төшкән, аҡһыл, күкһел бик яҡшы туҡыманан тегелгән костюмдар, ҡаты ҡырлы тирәсле эшләпәләр кейеп, «Волга»ла ғына ҡырын ятып йөрөгөһө килмәйме ни? Уныһы — бер. Ә эргәнсә ҡағыҙ тотоп бөтөрөлөп, бейек үксәле туфли кейеп, балтырҙарын итәк ярығынан ялт-йолт күрһәтеп йөрөгән секретаршалар? Бында, колхозда, секретаре ни ҙә, бухгалтеры ни ҙә, һауынсыһы ни — ҡайһынының алһаң да яртылаш тиҙәкко баткан. һыйыр аҫтынан тура идараға йүгерәләр, идаранан сыҡҡас йәнә мал аҙбарына. Телдәрендә лә, төштәрендә лә шул уҡ мал. Шулар араһында бер Мәҙинә үҙенә генә хас нур уйнатып, һылыу кәүҙәһенән әллә ниндәй күңелгә ятышлы еҫтәр сығарып йөрөй ҙә бит — яҡын юларлыҡмы? Бәлки

...ш га булыр ине — эргәһендә быуар йыландай ишелеп ч ятмаһа. Кеше үҙ бәхетен үҙе сүкей тиҙәр ҙә бит, (нмф иинолер быҒаса баҙнатһыҙыраҡ ҡыланды. Әллә ҡурҡты, шиклопде. Әгәр Ғәлимә әйткәндәр дөрөҫкә сыға торған һ| Эйе, эйе! Ауыҙына төшкән һары майҙы инде лә |һ.|. ул урын бит Саяфҡа башҡа бер ҡасан да ммлсок.

I ш ллә һибәләгән ямғырҙан йыйылған ваҡ күләүектәрҙән рак сәсрәтә-сәсрәтә, фараларын яҡтыртмай ғына, Саяф Тирәклегә килеп инде, өй алдындағы электр бағанаһына • ю яҙып килеп туҡтаны ла, тубыҡ быуындарын ина ілай эйелдерә баҫып, ҡапка эсенә үтте, инде өйөнөң троиа баҫтым тигәндә ҡапыл ыңғырашҡан тауыш ткондой булды. Мал-тыуар зыянлап ҡуйҙымы икән тип, ягына атларға иткәндә аяҡ аҫтында аунаған кәүҙәгә гс Арҡаһынан һалҡын тир бәреп сығып, эскән коньягы пиго осҡаидай булды Саяфтың. Ҡалтыранған ҡулын кеҫәһенә ....шп, шырпы сыйҙы:

Эй, кем ул? Кем бар?

Шмрмынан тоҡанған һүрән ут үҙ ҡатынының киң асылған ірі II ЯҠТЬфТТЫ.

Нәғимә?! Бисәкәй... — Саяф ҡулдары менән унын пипшын күтәрҙе, бармаҡтары еүеш сәстәренә тейҙе.

Нәғимә! Нимә, еҫ тейҙеме мунсала? Ай әттэгенәһе...

V і йүгереп барып урам эсен яҡтырта торған лампочканы катынын күтәреп соландағы диванға һалғанда унын і паи кан икәнен күрҙе.

I аяфты оҙатҡас, ҡорған планының килеп сығыуына шысы пығынған Ғәлимә иркенләп түшәгенә ауҙы. «Хэтэгип кинәнде ул эстән, — тамсы ла көс һалмайынса, ||ц.ш да ул, Саяф Ҡыҙрасов, башҡалар ҡулы менән ік! Ихсанбай урлаған бәхетенең үсен ул уның юнан аласаҡ! Ғәлимә үҙендә һис ҡасан булмағанса көс ташыуын тойҙо. Уға хәҙер ирле булып алыу ғына Һиләгән вазифаһы шулай ҡуша. Тик уға ирҙең

телэһэ ниндэйе кәрәк түгел. Булғас, ул Ҡыҙрасов... кэмендэ Саяф кеүек булһын. Таба ла, ҡаба ла белһен. Юғиһэ, һэперэ генә бисәләр йүнле иргә сығып алалар ҙа, «мин кем дә һеҙ кем» тип күкрэк һуғалар. Ғәлимә хэҙер, экиэттәге Барсынһылыуҙар кеүек, үҙе һайлап, сиртеп йөрөп барасаҡ иргә. Шаһиттарынан ғына ҡотолһон, таҙарынып ҡына алһын...

Кухняла һыу аҡкан тауыш ишетеп, Ғәлимә башын күтәрҙе:

— Сәмэрэ?!

— Нимә?.. — Ҡыҙының тоноҡ ҡына өндәшкәне Ғәлимәне һиҫкәндерә биреп ҡуйҙы.

— Кил әле!

— Яңғыҙһыңмы?

— Ә бына унда һинең эшең булмаһын.

— Юҡ. Эшем юҡ, — ҡулына стакан тотҡан Сәмәрә йоҡо бүлмәһе ишегенең яҡтауына һөйэнде. — Был... колхоз бүгәйе һиңә тағы нимәгә кәрәк булғандыр?

— Сэмәрэ! — Ҡыҙының кәрәкмәгэнгә ҡыҫылыуына йэне үртэлгән Ғәлимэ тороп ултырҙы. — Йоморҡа тауыҡҡа өйрэтмәй, белдеңме?

— Белдем. — Сәмәрэ, ҡыҫка ғына яуап биреп, ҡотолдом бынан тип уйлағандыр, боролоп китә башланы.

— Ҡайыш эләкмәгэнгә күп булып китте! Төнгө өскә тиклем ҡайҙа йөрөнөң?

— һин миңә әйтэңме? — Сәмәрәнең тәҙрэнэн төшкэн һүрән яҡтылыкта башын ҙур итеп күрһәткән бөҙрәләре йэно ишек уйымында пәйҙә булды.

— Өйҙә һинэн башҡа кеше бармы ни?!

— Ә, ә! һинең клиенттарың өстэн алдараҡ китмәгәнго минең ғәйебем юҡ, әсәкәй!

Ғәлимә тахта эргәһендәге тапочкаһын бер ҡулы менэн һәрмәп, әсе теле менән йәнен көйҙөргән ҡыҙына елгәрҙе, ҡаты әйберҙең ябылып өлгөргән ишеккә бәрелеүенэн люстра быялалары зыңланы.

— Хайуан! һинең арҡанда... — Ҡалғанын әйтергә тыны ҡыҫылды Ғәлимэнең, башына ҡайнар һыу һипкэндэгеләй эҫе тулҡын бәрҙе. — Эх! — Ул ҡалтыранған ҡулдары менэн ҡараңғыла түгә-сәсә бокалға Саяфтан ҡалған коньякты бушатты.

УМЙлөүҙән күскән ваҡытта Мәҙинэ үҙе лэ көтөүселәргә ярҙамлаша, сөнки юл оҙон, урман аша үтә, етмәһә, көҙгә ҡарай малдар дәүбирмәнгә әйләнә. һауынсыларҙы, машинаға ултыртып, иртэнге һауындан һуң шундуҡ оҙаттылар. Улар олрып етеп усаҡ сығара, ятып-тора торған будкаларын и ҙер. Өлгөрөрәктәре, көнкүрешен йүнәтеп бөтә һалып, шрпләге тау баштарында кеше ҡулы теймәй ултырған ı иүгерергә өлгөрә.

Ь.шма үшән генә, телэр-теләмәҫ атлаған һыйырҙар, ш төйәктәренә яҡынлауҙы тойғас, шәбәйҙе. Туплау ярҙәре, бейек өйәнкеләр яһаған күләгә — барыһы ла үҙенә мһыркшдай. Улар инде эркелешеп, өзөлдәшеп алға алды. Бер ни аңламаған тана-торпо анра-һэррэ уларға Квтөүселәрҙең эттәре лә, төтөн эсеһен тойоп, һиҙгер Мороилары менән һауаны есҡэштерҙе.

Мөҙинә, яурынын баҫҡан мылтыҡ ҡайышын бушатып, ıк ял итеп алырға булды. Ужыртмаҡланып тау итәгенә шкән ҡаялар, һарыҡташтар аҫтында йылға аға. Атын м, үҙе лә сайынып сыҡһа, хәл инер ине. Ярай әле ҙарын иртүк машина менэн оҙатты. Юғиһә, Көнһылыу, өс гвн буйы ат өҫтөндә ҡайтарыуын һорап, Мэҙинәнең һен ҡоротто. Унының рөхсәт бирһәң, Күкһылыуы ы п ы рға тора. Хәленән килмәһә лә туғанынан һис иикыһы килмәй. Ә Көнһылыу — торғаны ата Ғәбиҙэ. Гтерһең, ат өҫтөндә тыуған.

\ ı йылғаға төшөр урын һайлап, экрен генә ҡуҙғала аида, Мәҙинә ырылдау ишетте. Үҙе лә аңлап нрм.ион хәрәкәт менән тиҙ генә мылтығын ҡулына алды. фаһына инеп юғалған һуҡмаҡта бер-бер артлы кешеп китеп барған балаларын ҡурсып алдына сыҡкан һүрсне күргәс, тәнен өшәндереп һыуыҡ йүгерҙе. «Ах!» нуич оллә сыҡты, эллә сыҡманы. Мәҙинә мылтығын нен ауыҙына төбәне — сирттерҙе, бөттө. Ҡапыл унын и.1 ҡышҡы юл, кәбән аҫты, өҫтөндә зил-зилә яһап, үлем тип айҡалашҡан бүреләр төштө. Оҙакка түгел, и стын ниндәйҙер бер өлөшөндә генэ зиһенен сыйып үтте ч.тгирэ. Ни булһа булыр: Мәҙинэ мылтығын аҫка ерҙе.

Бүре Мәзинәгә бер талай ҡан һауған күҙҙәре менән ҡараи тора бирҙе лә, селек араһына инеп юғалған көсөктәрс артынан сапты. Мәзинә еңел тын алды. Көс бирмәй үрәпсегән атының башын көскә ҡайырып, һукмаҡҡа төшөрҙө. Артына әйләнгәс, инә бүренең дә үҙенә ҡарағанын күрҙе. Ерҙә яралып, ерҙә тоҡом йәйгән ике заттың бер-береһено ышанмауынан, ятһыныуынан тыуған был мөнәсәбәт уларҙы тағы-тағы ҡайырылырға мәжбүр итте. Бүре эҙәми заттың үҙен ни өсөн ярлыҡағанын төшөнә алмаған кеүек, Мәзинә лә уныц үҙенә йә атына ташланмауының сәбәбен аҙағынаса аңлай алманы...

Нәғимә өсөнсө көнгә генә иҫенә килде. Эҫелектән ярылған ирендәрен көскә ҡыймылдатып:

— Мин ҡайҙа? — тип өндәште.

— Больницала. — Аҡ халат кейгән һын уға эйелде. — Берәй нәмә кәрәкме?

— Эсергә...

— Эсергә күп ярамай. Врач рөхсәт итмәй. — Сестра уның ирендәренә еүеш мамыҡ һалды. — Ошоно һурығыҙ.

— Миңә ни булды?

— һеҙгә күп һөйләшергә ярамай. - - Шулай тине лә аҡ халатлы ҡыҙ палата ишеген асты. — Ауырыу иҫенә килде. Инегеҙ.

Ишектән ингән кешеләрҙең милиционер булыуы аптыратты: Нәғимәгә форма кейгән бәндәләрҙең йомошо төшкәне юҡ. Улар артынса башын яурынына йыйыра биреп ире инде — Саяф. Ҡайһылай һурыҡҡан ул. Ҡарайған. Ҡартайған.

— Саяф... — Нәғимәнең күҙҙәренән һарҡҡан йәш тупылдап мендәргә тамды. — Балалар... ни хәлдә?

— Балаларыңды уйлағас! — Саяф гөрһөлдәп йәнәштәге буш карауатҡа ялпашты. — Ишкәнһең инде ишан сумарын!

— Эй, Саяф! Минең дә бит... эсемдә йәнем бар! Исмаһам, яратмаһаң да... яратҡан булып ҡыланһаң да! Ах!

һеҙгә борсолорға ярамай! — Аҡ халатлы ҡатын уның ынан тотто. — Ашығыҙ. — Ул милиционерҙарға ины һорауҙы һеҙ бирәһегеҙме?

Милиционерҙарҙың олоһо тамаҡ ҡырҙы:

һеҙ Нәғимә Шәмсетдинова булаһығыҙмы?

>ме.

Бит бала эсәһе. Шулаймы?

Шулай. — Нәғимә инде бөтә булмышының талсығып ын тоя. Өҫкә ҡарай: тып, тып... Баҡһаң, флакондан уның рына ҡан аға. Ҡан... — Ҡан! — Ҡапыл уның иҫенә теге мупса, шаурап аҡҡан ҡан төштө. — Балаҡайҙарым! Ҡотҡарығыҙ мине! Ҡотҡарығыҙ!

)пәне һураһығыҙ! Ҡотҡарыр өсөн дә ҡан ебәрәбеҙ! — (гра уға ике ҡуллап йәбеште. — Тик кенә ятығыҙ! Доктор!

Һауа, һауа етмәй! Тәҙрәне...

Милиционер уға бөтөнләй яҡын килде. Ул ҡаплай ины, ул Нәғимәгә тын алырға ирек бирмәй.

Чинһар әйтегеҙ: криминаль абортты кем яһаны?

һауа, һауа!

Әбейгә барҙығыҙмы?

Барҙым!.. — Нәғимә ниндәйҙер ауыр, ҙур һалҡын нәмәнең күкрәген баҫҡанын тойҙо, инде ул был әйберҙе бөтөнләй ҡуҙғата алмаясаҡ, көсө етмәйәсәк, ауыҙын асып, һүҙ әйтә алмаясаҡ.

Китегеҙ, китегеҙ бынан! — Сестра асырғанып илер ҡысҡырҙы, кемдер уны «Нәғимә!» тип үҙенә саҡырҙы. Кемдер: «Ҡан аҡмай, ҡан ойоған», — тип уның цүкроғсн баҫҡан теге ауыр йөктө алып ташланы...

Барсынбикә, иртәнге намаҙын уҡығас, өйҙәгеләрҙе уятмаҫ сжрен генә атлап тышҡа сыҡты. Аласыҡ яғына ҡолаҡ һалды - тауыш-тын юҡ. Ишекте асып, ҡыҙҙарына ҡарағыһы ле - тыйылды. Уятып ҡуйыуҙан ҡурҡты. һағынды ул • исаҡтарын йәй буйы. Ҡарап күҙҙәре туймай үҙҙәренә. мнаһын ошо Тирәклегә килеп тапҡанда ул да Күкһылыу ксна ине бит. Эй, ғүмерҙең үтеүе! Ошонда ул юғалтҡан I һын тапты, ә барын юғалтты.

Урам эсендә кеше йөрөгәнен тойоп, аранда ҡолон сырҡырап ҡуйҙы. Хөсәйен килтереп япты уны кәртәгә. «Көнһылыуға минән бүләк булһын. һарайғыр тоҡомо ҡоромаҫ — ҡыҙыкай ат ярата», — тине. Эй, донъя! Әҙәм балаларының ниндәйен генә күрмәне Барсынбикә.

Ул, тәһәрәт алып, бит-ҡулын сайкағас, таяғын алды һәм кәртә артынан тауға, зыяратка ҡарай юлланды. Күптән зыярат ҡылғаны юк, доға нуры менән якын кешеләренең мәңгелек төйәген яктыртканы юк.

Тейешле доғаһын укып, Барсынбикә зыярат ҡапкаһынан эскә үтте. Ҡарғалар әле йоҡола, кеше килгәнен күреп, бер-икәүһе генә ҡағынып елпенде, үҙ телендә тоҡомдаштарына ниҙер хәбәр итте. Эйе, ярата шул был ҡошкайҙар үлем-йыназа укыған, ҡайғы үҙенең ҡара нурын сәскән урындарҙы. Күрәһең, шул нур тукландыра уларҙы, көс бирә. «Үлемдең әллә ни ҡурҡынысы юк, — тиер ине Барсынбикәнең өләсәһе. — Ағас та бит орлоҡ сәсә, орлоҡтан йәнә яңы үсентеләр сыға. Йәшәү менән үлем дә шуның кеүек килә. Үлем — яңынан тыуыр өсөн әҙерлек. Йәшәү — ғәмәл, үлем — ял».

Барсынбикә башта Шәһәрбаныу ҡәберенә тукталды. Тупраҡкынаһы ер менән тигеҙләнгән инде. Баш осондағы сирендәр иртәнге һиллектә ҡуйы ысыҡ менән ҡапланған ҡараһыу йәшел япраҡтарын һелкетеүҙән ҡурккандай тын ғына ултыра. «Эй, изге йән! Тыныс йоҡла, һеңлем. Барсынбикә һинең рухың алдында мәңге рәхмәтле. Кесе йома көндәре һиңә бағышлап аят сыкмаған аҙнам, хәтерләмәгән көнөм юк. Күкһылыуҙың ысын әсәһе булыу һиңә яҙҙы, Шәһәрбаныу...» Шунан ул Диңгеҙханы эргәһенә килде. Ҡәбер тупрағы бейек әле бының. «Күп, бик күп ғүмер үтте киткәненә, э төштәремә һаман инәһең. Эй, Диңгеҙхан! Ниндәй һөйөү ҡауыштырғайны беҙҙе! Бер-беребеҙгә ҡарап туя алмаҫ кеүек инек. Аҡ сәсле, һары тешле ҡарттар булғас та шул көйөнсә ҡалырбыҙ, ти торғайныҡ. Заман аяманы хисебеҙҙе — һөйөү ялкынынан нәфрәт уты яһаны, ҡанаттарыбыҙҙы көйҙөрҙө, ғәрипләне, иҙгесләне. Ҡотолоу сараһын икенсе бер ҡатында тапмаҡ булдың. Ҡастың. Әммә... ләғнәт утынан изге үсентеләр сыға алмай — шуны оноттоң...»

Аят укығас, Барсынбикә томандан шөйлә әрселгән тау башына менде. Эй иркенлек! Эй йәненде йәннәткә ашырыр

рлыҡ! Бынан барыһы ла ус төбөндәгеләй күренә. ҫап үлон еҫтәре бөрккән иртәнге һауаны күкрәге ...сы һулап, Барсынбикә ҡайраҡташка ултырҙы. Гиркле!.. Нисәмә тиҫтә йылдар буйына ул инде тыуған ына лүерелде. Ҡыҙын ошонда килеп тапты, донъя ҡорҙо, ы ;аны, үрсене. Күпме изгелекле бэндәләрҙе осратты ул ы! Күиме сабыйҙарҙы башлап ҡулына алды, аҡ биләүгә оға ларын эйтеп биләне, әҙме кешеләрҙең тән яраларын ;аны, хәленән килгән тиклем йәндәренә сихәт өрҙө. • ир ш іс ул был ауылға, еректе.

\м.|, уларҙың өйө. Ул йылға буйында үҙе бер йәшел ıмә булып күренә. Кейәүҙәренең, Мәҙинәһенең ғырышлығы менән эйләнде ул шундайға. Ер үҙен яратканды щхзмдуллилаh, Дауыт улы ла ерҙә эшләргә әүәҫ. Бар ынбикә һиҙә — Дауыт өҫтөнән ҡара болоттар китә ;аны Мәҙинәһенә эйтмәһә лә, бик борсолғайны, көн-төн ı ларын укыны, ейәненең һауығып сафҡа баҫырына ı ш кон нығыраҡ ышана ул хәҙер... Әбүбәкере өсөн ıс гыныс. һөйөнөслә хәбәр килер кеүек үҙенән. Эй ı ım аллам! Күңеленән изге нур китмәһен инде баланың. шаһы өсөн яуап бирмәй, аяҙ булһын Әбүбәкерҙең юлы, п ;арын бейек, күңелен якты әйлә, мәүләм!

Бпрсынбикә нисек арт ҡапканан сығып киткән булһа, ш уҡ ҡайтып инде. Емештәре апаруҡ тулышкан алма ı ıры араһынан, тура тартып, аласыкка йүнәлде: ҡыҙҙар ш ы сой ҡайнатыр. Үҙенең дә тамағы кипте. Әммә урам көңгөр-ҡаңғыр һөйләшкән тауыш ишетелгәндәй ıры атланы. Ә инде ҡобараһы оскан Саяфты, йәнә Бер милиционерҙы, ете-һигеҙ йәштәр самаһындағы малайҙы и. аптырай төштө, арка буйын көҙән йыйырҙы.

Барсынбикә Моратова һин буланмы? — шиоı ерҙың ҡаткыл тауышы Барсынбикәне әруахтар |||.шаи ысынбарлыкка, фанилыкка алып ҡайтты.

Мим.

Һиңә бер нисә һорау бар. — Ул эскәмйәгә ултырып, ı көләм алды. — Бына был малайҙы күргәнегеҙ бармы?

Өлләсе... сырамытам кеүек тэ. Был һинең улың (аяф?

Минскс. — Саяф ҡаш аҫтынан Барсынбикәгә текәлде. Мнпскс булғанға ла килдем.

— Ә-э, — Барсынбикэ көләмһөрәне. — Һинеке булғас, минеке лэ инде ул. Ошо малайың бит әле тыуымға ултырышы менэн килгәйне?

- Ситкә китмәгеҙ, — милиционер йәнә Барсынбикәгл күрә алмаусан ҡарашының уғын ҡаҙаны. — Был баланыц әсәһе, Нәғимә Шәмсетдинова, һеҙгә килгәне булдымы?

— Миңә күптәр килә, — ҡатындың серен ире алдында сисеүҙән ҡурҡкан Барсынбикә Саяфҡа ҡараны. — Ҡыҙым Мәҙинә менән йырларға бергә йөрөйҙәр, шәй, улар...

— Эш шунда, — милиционер аяғүрә баҫты, — Нәғимо Шәмсетдинова күп ҡан юғалтыуҙан мәрхүмә булды, I ауырын ул һеҙҙән төшөрткән.

— Ярабби! — Барсынбикә хөкүмәт кешеһенән бушаған эскәмйәгә ултырҙы, ҡуш усына ҡарап, доға укый башланы.

— Улым, яҡын кил әле, — милиционер Саяфтың малайын Барсынбикәнең алдына баҫтырҙы. — Өс көн элек ошонда килгәйнегеҙме?

— Эйе, — малай башын аҫка эйҙе.

— Нимә күрҙең?

— Күрмәнем.

— Ә нимә ишеттең?

— Был өләскә... әсәйем... «рәхмәт» тине.

— Ни өсөн? Әбей берәй нәмә бирҙеме?

— Бирмәне.

— Ҡулың менән эшләгәндә иңең менән күтәрәсәкһең, албаҫты ҡарсыҡ! — Саяфтың уҫал ыҫылдауын Барсынбико ишетмәгәндәй, һаман доға уҡыуында.

— һеҙгә беҙҙең менән китергә тура киләсәк! Милиционерҙың өндәшеүе Барсынбикәне һиҫкәндерҙе. Ул доғаһын тамамлап, битен һыпырҙы:

— Ҡайҙа?

— Район үҙәгенә. Ҡалғанын суд органдары тикшерер.

— Эйе, эйе, — Барсынбикә өтәләнде. — Әптеләхо Кейәү! Сыҡ әле мында!

Ул арала өйҙән Әптеләхәт килеп сыҡты.

— һеҙ... миңәме?

— Кейәү! — Барсынбикә уның күкрәгенә ҡулын һалды. — Бында бер аңлашылмаусанлыҡ килеп сыҡты. Мәзина ҡайтмай тороп, өйҙән китмә. Ҡыҙҙарға мине... ҡунаҡҡа кт Гв тиң. Оҙаҡламам. Иншалла, шулай булыр. Күрэсәген күрси

тunion троп, бәндә гүргә инмәй. Зинһар, бөгөн сығып пм,)! Кейәү, эйткәнемде тыңла!

Ултыраған Әптелэхэттең яңғыҙ һынын тиҙҙән «уазик» н рмәстәре борҡоткан туҙан ҡапланы...

Квтынын ерләгәс, Саяф күрше ауылдан кейәүгә ;ш, күҙгә мөсһөҙөрәк апайын барып килтерҙе. Әҙерҙе реп ашатырға күп аҡыл кәрәкмәй, тип уйланы ул, ә шеү мәсьәләһен ул ҡапылғара хэл итмәйәсәк, күңеле ии.ш алырға тырышасаҡ. Ә күңеле унын, билдэле, иналә. Мәҙинә — ир ҡатыны. Әптелэхэтте юлдан ины иса, Мәҙинәне ул өйөндә күрә алмаясаҡ. Тәтемәйәсәк |н ул һылыу ҡатын. Ҡарсығын ауылдан тай типтерҙе — ..... lһы яҡшы. Барсынбикәнең ҡалған яҙмышы — минең I ги Ғәлимә. Ҡарсыҡтың ҡулға алыныуын ишеткәс, I инмәнең шатлығының сиге булманы. Бахырың, хатта • ц ҡайғылы сағы икәнен дэ онотто, ҡайғы уртаҡлашып ә ойтмәне. Өйөнә саҡыра. Нәғимә үлгәс, Саяф чимов кис һайын Таулыға елдерер, Ғәлимә тип күҙе р шмс икән? Бер кискән һыуға ике тапҡыр төшөп I Тоне лэ, йәне лэ ят уның хәҙер Саяфҡа. Онотҡан. һсидо гслэгенән янар йомғаҡка әйләндереп тәгәрэтерҙэй им.1 морөй. Ғәлимә менән Мәҙинәне сағыштырырлыҡмы? ..... азиндарында резинанан яһалған «бисә» һатыла, пгрр. Йөрөмтәл ҡатындарға ла ирҙәр, күрәһең, шул йсыҡтарға ҡараған һымаҡ ҡарай. Кәрәк икән — ғаналар, кәрәкмәһә — сүплеккә бырғайҙар. «Бәхеттең ыҙа сигеп, көрәшеп яуланғаны ғына ҡәҙерле, — ти ины мәктәптә уҡыған йылдарында Сәрбиназ апалары, ыын күктән яуғанының бәҫе булмай». Тормош — көрәш. н >и һәр кем үҙенсә көрәшә. Мәгәр Саяф Ғәлимәне лә и цнҡар итә алмай. Кәрәк кеше. Ә бына үҙе икенсе гарь булып алһа, күҙ күрер. Ғәлимэгә артыҡ шаһиттар югәндә, Саяфҡа улар ни бысағыма?

Ашы ю, — тип шылтыратты Ғәлимә бөгөн Саяфҡа. — ко гоғролоғондо иҫбат ит!

Саяф урынынан тороп, кабинеты буйлап һүгенә-һүгенз йөрөштөрөп алды: алйот бисә, бер һелтәүҙә юлдан алып ташларға... Кеше ағас түгел дәһаң! Ошоно ҡысҡырып тигәндәй әйткәс, зиһене ҡапыл асылып китте Саяфтың. Әйтерһең дә ҡараңғы төндә көслө ялағай уйнаны. Ағас! Әптеләхәт баҫыуҙан гел бер юлдан ҡайта. Юл ситендә — ике ҡайын. Тау түбәненә ул мотоциклын һүндереп елдерә, әгәр р фараларын... сымдарҙы өҙгәндә... Ҡэйнэһен алып киткәндәрен күрҙе, ул ҡыҙҙарына ашығасаҡ. Ағастарҙыц береһен генә бысып юлға ауҙарһа ла, йәне йәһәннәмгә осасаҡ Әптеләхәттең!

Имеш, берәү арыштан алтмыш центнер алырға йөрөй, имештер, бойҙайҙың эйелмәй торған һабаҡлыһын уйлап тапкан! Тот ҡапсығынды! «Алға»ла бөтәһенән дә көслөрәк Саяф Шәмсетдинов бар! Председатель! Ул иҫән саҡта үҙси аша атларға бер кемгә лә юл ҡуймаясаҡ! Ана, Нәғимәһе ятты ла үлде. Биш балаһы бар тип торманы — үлем уны һайланы. Эйе, боронғолар дөрөҫ әйткән: тыуымдан ҡалмағанды үлемдән ҡалып булмай. Әптеләхәт Саяфтың да, район хужаларының да теңкәләренэ күп тейҙе. Саяф икенсе секретарь булып һайланған хәлдә лә Ирназаров уға тыныс эшләргә һэм йәшәргә ирек бирмәйәсәк, Мәҙинэ иһә мәңгс тәтемәйәсәк.

Кистэн ауылға ҡайтып йоҡларға йыйынған Мәҙинәнсц иҫенэ атының сатанлағаны төштө. Киске һөттө алырға килгәй машина китеп өлгөрҙө. Ярай, бер төнгә... Мәҙинэ будкаға йәйелгэн түшәгенә һуҙылды. Көнө буйы йүгереү арыткам, әммә күҙгә йоҡо инмэй. Әптеләхәте мунса яғып ҡуйырмып тигәйне. Их! Көттө инде... Ә бәлки, төнө менэн булһа ла килеп тә етер. Ундай ғәҙәте бар уның. Ҡыҙыҡ та һуң был Әптеләхәт: Мәҙинәнең сэсен әле булһа мунсала үҙе йыуа. Шунан оло кинәнес таба. Ҡатынын сабып, ҡойондором, кейендереп сығарғас ҡына үҙенә сират етэ. Әлдэ аралары көйләнде — шуға шатланып бөтэ алмай Мәҙинэ. Уның тағы ла гел йырлағыһы, эшкә ынтылғыһы килеп тора. Тормош гсл шулай ғына барһасы!

йоҡо алмағас, Мәҙинә тышҡа сыҡты. һил төнгэ ҡолаҡ ы Һтрттәге йәйлэү тынлығы. Шишмә генә тынмай, іек йырын йырлай-йырлай әллә ҡайҙа ылҡынған оло шарьяга ашҡына.

Һүнсп барған усаҡка ҡарап тора биргэс, Мәҙинэ йәнә ||ц.|иа инде. Өләсәһе өйрәткән йоҡо доғаларын ҡабатлап шы ярҙамы теймәне. Тик таңға, өс менэн дүрт һендә генә, йоҡоһоҙлоҡтан тамам интегеп, ҡыҫҡа ғына керемгэ галды.

•Мәҙинә, тор! Ҡушҡайын янына бар!» — Өләсәһе шын ишетеп, ул баҫлығып уянды. Илэмһерәп тороп ірҙы. Йөрәге урынынан ҡуҙғалған Мәҙинэ ҡабат ятып торманы, будкалар буйлап һауынсыларҙы иртэнге һауынға ірға китте.

Машина тауышын ишетеп, яһаған сынаяғын да эсеп іәй йүгереп сыҡты Мәҙинә. Йәйләүгә килеп туҡтаған пмм Саяфтыкы икэнен күргэс, аптырай төштө: иртәлэгэн ка. күрәһең, ҡайғы аш түгел, үҙ-үҙенә урын таба алмай пүслер.

Һаумыһығыҙ, Мәҙинэ апай. — Машинанан Саяфтың шоферы сыҡты. — һеҙгә хәҙер үк районға сығыр кэрәк.

Миңә?! Ни өсөн? — Мәҙинә егеттең ныҡ борсолоуҙан ямган йөҙөнә текәлде.

Әптеләхәт ағайҙы төндә... ауыр хәлдә алып ін ҫәр...

Бяшка һорау бирмәне Мәҙинә, машина эсенә инеп ултырҙы.

Мәҙинәне Таулы больницаһының өлкән врачы үҙе болдорға сығып ҡаршы алды:

Мәҙинә һеңлем... сабыр бул инде, ҡаза аҡыл ||рмай...

Ни булған? Ни булған Әптеләхәткә?!

Ни булғанын органдар тикшерә инде, әммә... уның енел түгел. Баш, ҡулбаш — селпәрәмэ килгән, күп ҡан ıгкан...

Ҡайҙа?

— Эштән ҡайтып килгәнендә булһа кэрәк, мотоциклыныц фаралары эшләмәгән, юлға арҡыры ауған ағасҡа... Ғөмүмом, эш хөрт, туғаным. Бына халат, хәҙер үҙеңә... тыныслаш.|у өсөн... укол эшләрҙәр...

— Уға... ярҙам итеп буламы? — Күҙ алдында ҡара түңәрәктәр әйләнә башлаған Мәҙинә, ҡолап барғанын аңлап, ултырғыс башына тотондо. — Зинһар... Ул иҫендәме?

— Әйҙәгеҙ, тик үтенәм: ауырыу эргәһендә үҙегеҙҙе мөмкин тиклем... тыныс тотоғоҙ.

Күҙҙәрен, танауын, ирендәрен генә ҡалдырып бинт меном уралған ирен күргәс, боғаҙын йыртa яҙып «ыһ» тигән аум сыҡты Мәҙинәнән.

— Мәҙинә, йәнем, килдеңме? — Иренең көлһыу ирендәрен көскә ҡыбырлатып әйткән һүҙҙәрен бары Мәҙинә генә ишетте шикелле. — Кил, илама...

Күҙен асманы Әптеләхәте, бары етенсе тойғоһо менои ҡатынының палатаға ингәнен тойҙо. Эргәһендәге аҡ халатлы кешеләр аптырашып баш сайҡаны, күпте күргән баш врачтың да ҡулы кеҫәләре буйлап йүгерҙе — ҡулъяулыҡ эҙләне.

— Әптелэхәт, йөрәкәйем минең... — Мәҙинә һулҡылдии илап уның күкрәгенә ҡапланды, һыуына башлапш ирендәренән, күҙҙәренән үпте, ҡайнар тыны менән ғәзизен терелтерҙәй булып, уның йөҙөн эҫе тыны, ҡайнар күҙ йәштәре менән һуғарҙы.

— Илама... Мин... иң бәхетле кеше. Мине донъялағы иң һылыу, иң аҡыллы ҡатын яратты...

— Әптеләхәт! Китмә, Әптеләхәт! Мин... — һыңҡылдаи илаған Мәҙинә йәнә ҡолаҡ төбөндә иренең шыбырлауыи тойҙо.

— Йырла әле, тәҙрәгә ҡарап... «Ашҡаҙар»ҙы...

Ошо минутта Мәҙинә ире йәшәһен өсөн нимә генв эшләмәҫ ине! Бына ул, көс-хәл менән ғәзизенең кәүҙәһенон айырылып, тәҙрә төбөнә барып баҫты, һәм уның күкрәгенән мөхәббәттән, һағыштан, сараһыҙлыҡтан тыуған зар ағылды. Былай йырлар өсөн ни тиклем яратырға тейеш кешс кешене...

Әптелэхәттең күгәреп ҡатҡан ирендәренә бәхетлс йылмайыу таралды: «Рәхмәт, рәхмәт...» Өсөнсө «рәхмәт»е күкрәгенән бәреп сыға алманы, һуңғы рәхмәте уның шунда, ғүмер буйы Мәҙинә тип ҡаҡкан йөрәгендә ерләнде...

«Һуҡырҙың сырағы асылһа, унан, күрәһеңме, тип ымайҙар!» Иртән иртүк, күҙҙәрен асҡас та иҫләй алмаған р оында, хөкөм залында, Барсынбикә өләсәһен көтөп тырган сағында ҡапыл зиһенен яҡтыртып хәтеренә төштө шлпсң. Эйе, эйе! Шулай тине өләсәһе уға, таңға табан . пи эн ҡыҫҡа ғына төшөндә. Сәйер һүҙҙәр. Мәғәнәһе төпкә рсли он кеүек. «Әптеләхәт, кейәүең, вафат булды бит!» — Мәзинә, һыҡтап инрәүен күкрәгенә ҡыҫып. «Үкенмәгеҙ игә, түҙем бирһен ҡалғанға!» — булды яуап. Мәҙинә ынбикәнең ҡаҡыл тауышынан тетрәнде: «Ә ауыр ірҙа мине кем йыуатыр?». «Ә һин йәллэр кешең ыкты белеп йәшәргә тейешһең!». «Их, өләс! Тормош інан бер яңғыҙым нисек үтермен, һуңғы сәғәт-ину і шрымда үкенмәҫлек итеп йәшәү серҙәрен инде минэ мм пмрлгер?». «Ә һин, ҡыҙым, ат урынына ишәк бәйләүҙән ииклан!».

Ніс, шулай тине Барсынбикә. Төшөндә ишеткәндәрҙе рләүҙән Мәҙинәнең арҡа буйы семерҙәне: өләсәһе бында иа, сйәнсәрен ҡурсыуҙан бушамай, ахыры.

Ишек асылған тауышҡа Мәҙинә ҡайырылып ҡараманы. ||и|| и с һиҙә — Саяф инде. Улы менән. Йәнә шәфкэт туташы, і ка врачы. Мәҙинә өсөн бөгөн иң мөһиме — өләсәһен ү, уның таҙалығына, һау-сәләмәт икәненә инаныу. Судҡа м осраштырманылар. Хэйер, ирен ерлэү, ғәзизе менән гегә хушлашыу мәшәкәтенә сумған Мәҙинәгә район ил йөрөү мөмкин дә булманы. Ул саҡта көн менән төн ı ı цы, тәүлектәрҙең хисабын онотто. Аталарын өҙөлөп ираткан ҡыҙҙарының ҡапҡа асылған һайын тилмереп I рауҙары бәгерен телде. Ярай әле атаһы бар. Хужалыҡ .....ірс тулыһынса уның елкәһенә күсте, игеҙәктәрҙе, іһына ултыртып, йә тауға, йә йылға буйына алып сыҡты, бергәләп баҡса емештәрен йыйҙылар.

Л игән артынан үлеп булмай, — тине ул Мәҙинәгә, — кпиегә тереклек итер кәрәк. Мин дә бына Гөлбаныуһыҙ он йәшәй алмаҫ тәҫлә инем...» Шулай йыуатты ул ҡыҙын. ıл донъя ҡуйған кейәүе өсөн эсе өҙөлөп барһа ла, ...іна сығарманы — йәшәү, тормош дәртен һаҡларға ı> |ч.ппты.

Ҡаза яңғыҙ йөрөмәй, тигәндәре дөрөҫ, ахыры: Барсынбикә өләсәһе ошо көнгә төшөр тип Мәҙинәнең икс ятып бер төшөнә инмәгәйне. Ниндәйен ҡырыҫ Сталин замандарында хөкөмгә тарттырылмаған баҡшы, бөгөн килеп, ул осор боҙҙары ирегәс тиерлек, ошо хәлгә ҡалып ултыра. Күрәһең, бында икенсе сәбәп бар. Кемгәлер уны юлынаи алып ташлау бик тә кәрәк булған. Асыуланғандан хасланған яман, тиҙәр бит. Эйе, эйе! Бөтә был ваҡиғаларҙың башында, шул иҫәптән иренең үлемендә лә, хаслыҡ ята. Сетереклс хәлдәр тураһында Әптеләхәте менән һөйләшергә тура килгон саҡтарҙа, мәрхүмкәй, күҙен генә көлдөрөп: **«Ищитв** женщину!» — тиер ине. Бер кемдең юлын киҫмәне, бер кемдең башы аша атламаны Мәҙинә. Ә кемгә кәрәк булды икән уның һуңғы йылдарҙа тәрән ыҙандан тыныс ҡына аккан тормошон боҙоу, уның көтөп, көрәшеп, күпме юғалтыуҙар аша яулаған бәхетен емереү? Ах, кеше күңеле китап **бите** түгел, уны асып укып булмай. Эргә-тирәнцә күпме алсаҡ йөҙҙәр, татлы һүҙҙәр, яғымлы ҡараштар — уларҙың кемс тураһында насар уйламаҡ кәрәк?!

— һаумы, ҡыҙым?

— һеҙгә һөйләшергә рөхсәт ителмәй!

Уйға баткан Мәҙинә ғәйеплэнеүселәр эскәмйәһенә **ике** милиционер оҙатыуында ыңғайлаған Барсынбикәне күреп, телдән яҙҙы: өләсәһе уның гүйә хөкөм ителергә түгел, ҡәҙерле туғандары ҡашына ашҡа йыйынған: ҡәнәғәт йөҙ, тантаналы, һапалы, саманан ашмаған һауалы ҡараш.

— Баҫырға! Суд килә! — Бойороҡ Мәҙинәне ысынбарлыкка алып ҡайтты — әллә йөҙөнсө, әллә меңенсс тапкыр ҡабатлауҙан шымарған һүҙҙәр тәьҫиренә буйһоноп, аяғүрә баҫты.

«Королһеҙ королева бер кем дә түгел. Минең именлегем — һинең дә именлегең!» — Ғәлимәнең эскән баш меноп әйткән был һүҙҙәрен ысынға алып, Сәяф яңылышты, шикелле. Сәяф Шәйхетдинов кабинетыныщ тәмәке төтөнөнэп ҡарайған обойҙарын тәү күргәндәй, тирә-яғын байҡаны. Ҡарашы тәҙрә төбөндәге дәү лимон ағасына төштө: «Бэй, был лаһаң сәскә атып ултыра. Мәлһеҙ. Сәскә ата, ләкин емеш бирмәй. Әптеләхәт тәжрибә өсөн һорап та йөрөгәйне уиы,

(иф һнрмәне. Үҫәме — үҫә, ултырамы — ултыра. Уның шс миңә ни бысағыма, тине...»

< !мф, тороп, тәҙрә эргәһенә килде. Идара алдында үҫкән ... ботаҡтарында һирәк-һаяҡ һары япраҡтар күренә. һиҙҙермәй генә, аҫтыртын ғына килә көҙ. Йәйҙе нисек кенә когөп алма, үтә лә китә. Ғөмүмән, бәндә ғүмерен йәй котоп үткәрә түгелме? Ҡыҫҡа ғына ваҡытка килгән йәй өсөн кара көҙҙө, һалкын ҡышты, бысраҡ, мәшәкәтле яҙҙы түҙә. (имф га үҙ ғүмеренең йәйен көтөп йәшәне. Шул көткән йәйе ... Ғәлимә Минһажева менән баш китмәле аҙымды ккәлләне. Ярай, Әптеләхәттең үлемен бер кемдән дә п маташманылар. Ҡайынды юлға ҡолатыуҙа малай-иҙы ғәйепләнеләр ҙә, вэссәләм. Ирен юғалтыу мһынан, өләсәһенең ҡулға алыныу ваҡиғаһынан кыған Мәҙинә уны-быны төпсөнөп, тикшертеп йөрөй ины. Ғәлимә иһә, Барсынбикәне Тирәклегә башҡаса аяҡ ҫ ыҡ ергә олаҡтыртам, тип һүҙ бирҙе. Тик бына Сәяфты ... секретарь итеү эшен ниңә һуҙалар? Алда — ураҡ. ... яуаплы мәлдә ауыл хужалығын етэкләр вазифа буш ... тейеш түгел дэ бит...

Гелефон шылтыраған тауыш Сәяфтың йөрәген өтөп-өрөп алғандай тәьҫир итте. Ул! Ғәлимә Мөхэррәмовна. ' иф нисек тә үҙен ҡулға алырға, тыныс һөйләшергә тейеш. Гыңлайым.

Ни бит эле, Сәяф... Теге урынға икенсе бер и ... табылып тора.

Нисек?! — Сәяфка йөрәк тибеше тамаҡ төбөнә ,щдой тойолдо.

һин бик борсолма... Яңғыҙ булыуың, ҡатыныңдың... үлеме... Үҙең беләһең...

Ә һинең? һинең ирең бармы?

Мин — икенсе мәсьәлә.

Слушай, — Сәяф артығын ысҡындырыуҙан үҙен көскә ... Ҡасан осрашабыҙ?

Тукта... — Ғәлимәнең ыҫылдауға оҡшаған тауышы ... кусте. — Нимэ... ен кеүек быуып алып бараһың? и ... бел, эшлә! Бөгөн теге албаҫты ҡарсыктың эше ' Суд үтһен, халыҡ тынысланһын...

Черт... — Сәяф һалкын тир бэреп сыккан маңлайына ... араһынан киптергес алып баҫты. — Мин бушка п... булып сығамы?!

— Түгел!.. Һөйләшербеҙ. Саҡ ҡына бушай бирэйем. Мни саҡырмай тороп...

— Аңлашылды. — Сымдың икенсе осо биргоп сигналдарҙы тыңлап, трубканы уң ҡулы менән ҡыҫып тотҡаи хәлдә оҙаҡ ултырҙы Саяф. Шунан бар көсөнә трубканы **атып** бәрҙе: «Кәнтәй!» Ауыҙынан бар булмышын өтөп, көйҙөрои сыҡкан был ауаздан һуң ул бер аҙ тынысланғандай булды. Үҙе лә инде... Кеше Ғәлимә кеүек бисәләргә ышанамы' Халыҡ уларға «еңел холоҡло» атамаһын белмәйенсә биргли тиһеңме?

Саяфтың күҙе кинәт стена сәғәтенә төштө. Ун Малайының тәртибе буйынса мәктәпкә саҡырғандар. **Әллв** эсәләренең үлгәнен генэ көтөп торғандар — бәйһеҙләндс лв киттеләр. Бисэһе тураһындағы уйҙар Саяфты тэҙрә эргәһенл кире боролоп килергә, түбән остағы бөрөп ябылған ҡыйыҡлы йортҡа ҡарарға мәжбүр итте. Күңеле унын ана шул йо|н хужабикәһендә — һауалы, сибәр, һыу һөләгә кеүек йылҡылдап торған Мәҙинәлә. Ире бар саҡта ул хаҡта **ауы|** асып һүҙ эйтеү түгел, яҡын барып булманы уға. Хәҙер ул яңғыҙ. Хашим ҡарт донъя тотҡаһы булыр йәштән үтком. Улдары армияла. Игеҙәктәре бәләкәй. Инде иркенләп ҡылып сиртергә була был бисәнең. Кисеү бирмәҫ йылға булмаи Атты иһә ауыҙлыҡ өйрәтә. Ә ауыҙлыҡты уны Саяф кейҙерә белер. Унан һуң бит әле халыҡ, ат яҡшыһы — арҡанда. **ир** яҡшыһы — тарханда, ти.

Тархан уҡ булмаһа ла, Саяф бит эле төшөп ҡалғандарҙан түгел. Тыу бейәләй уйнаҡлап торған Мэҙинә барыбер яңғыҙ йәшэй алмаҫ, ә уға иш булырҙай үҙе шәпле, үҙе буйҙаҡ ир кем? Саяф. Саяф Шәйхетдинов. Бисәһе иҫән саҡта ул түшәк яңырта алмай ине. Хәҙер ул ирекле. Аппаратҡа **эшк|** алмаһалар ҙа, әллә ни үкенес түгел, тик Мәҙинә генэ **кир|** ҡаҡмаһын. Мәҙинэгә ҡапылғара барып һүҙ башлау — еңел ЭЦ| түгел. Башта кемдән булһа ла ҡылын тарттырыр кәрәк. Нимә уйлай? Артабан нисек йәшәргә итә? Был эшкә кем ҡулам булыр ине икән? Рауза! Бына кем аша эш итэсэк **Саяф** Иҫәрҙән һорама — үҙе һөйләр, тигәндәй, Рауза уға барым юғын хэбәр итеп торасаҡ. Шуға яҡынлар кәрәк. Бөгөп үк барып хәлен белеп сыҡһа ла артыҡ булмаҫ. Эйе, ни мәктэптэн бушау менән!

Шәңг орәйҙең үҙ ғүмерендә зыярат-маҙар ҡылып йөрөгәне булманы. Үләләр йортонан, дөрөҫөн әйткәндә, бөжөмләй ул. Һы. Ишмөхәмәт, шунда ятһа, моғайын, барыр ине. Ә Оыпии . Ә бына Әптеләхәтте Мәҙинә зыяратҡа ерләттермәне. Күш кайын түбәһенэн аҫтараҡ шишмәлек бар — шунда ята илонъя герәгә»нең һөйәктәре. Рауза уны шулай тип йөрөтә Ипс Әптеләхәт ҡэҙимге ир түгел, ә донъя терәге, ти ине. р оидәшмәй. Маһинур тайсаһында баш ҡоҫоп ултырған әргә, аунап-тәгәрэп бешеп яткан ҡарбуз-ҡауындарға, ш горе ана түгеләм, бына түгеләм тип торған йөҙөмдәргә и *ул,* ауыр кэүҙэһен һэмгелдэтэ-һэмгелдәтә, бөгөлә-ы ма илай. Шэңгэрэй иламай. Илай белмәй. Раузаға ....атып бөгөлөп-һығылып та, ергә ятып аунап та ҡараны — күҙенән йэш сыҡманы. Ә бына кукрәгенең бер ере әсетә. Ьтаһы иҫенә төшкэндә йә Гөлбаныуҙы хэтергэ алғанда эсетә |ир| ан сре һыҙлай.

Гвғы... Әптеләхәт үлгәс, донъя ҡараңғыланды. Ул барҙа ипс. Ҡояш бик тырышып, бөтэ көсөнэ яҡтырта ине — р караңғы. Әллә Мәҙинә Әптеләхәт ҡәберенә ҡояшты ла ып ерләп ҡуйҙы микэн? Әлбиттэ, күктэ яҡтыртыусы есем ше и.1 юра, тик унын нуры юҡ — Шәңгэрэйгэ шулай тойола. ю «контора» итеп тотонған Маһинурҙың мунсаһын да караны — файҙаһы теймэне. Ағастар япраҡ та ҡоймаған, в ул ипде ҡышҡы тунын, аяғына быймаларын кейеп алды.

Ни ҡыланыуың был, Шәңгәрэй?! — тип бот сапты Рш ш эпсәйе.

Һыуыҡ, — тине Шәңгәрэй, — ахыры, ҡояш Әптелэхэт | кенэ инеп ятты.

Юҡты!..

Ышын. Барып ҡайтам әле.

Китеп олағырға утыра икәнһен, әләйһәң... Ә кэзәләрҙе кыуыр?

Мин уларҙы Шаяф агарутына индереп биктәнем!

Кит артабан! Унда ни үсең?

НЬнюрәй өндәшмэне. Рауза унын бер һүҙенэ лә ышанмай. имға һөйлэр ине — Гөлбаныу өсөн үпкәһе бөтмәгән. ш ш лройгә тейешле ҡыҙҙы үҙенэ бисэ итте. Мәҙинэгэ һөйләр уны илатҡыһы килмэй. Бигерэк матур бит ул. Матур

кешеләргә илау килешмәй. Барсынбикә-Фәүзиәгә генә сисер ине серен Шәңгәрәй! Эйе, эйе! Ҡайтһын ғына! Шәңгәрәй уч\ нисек итеп Әптеләхәт үлгәс төш күргәнен, нисек итоя Әптеләхәттән: «һине кем үлтерҙе?» — тип һорағаным, Әптеләхәттен, Саяфтың йәшел ҡыйыҡлы өйөнә бармагы менән күрһәтеп, «Саяф!» — тип әйткәнен һөйләп бирәсәк. Ә башҡа һөйләрҙәй кешеһе юк. Көнһылыу менән Күкһылму бәләкәй. Ә бына Дауыт армиянан ҡайтһа... Бәлки, уға һөйлор Шәңгәрәй. Их! Мылтыҡ алып ҡайтһа ине Дауыт! Шәңгәрәй ул сакта шайтан кәзәләргә лә, Саяфка ла — тох! Шәңгәрой «атылған» кәзәләрҙе, Саяфты эләклэп ергә йығылды, мэтәлләп-мэтәлләп барып төштө.

— Нишләйһең ул, Шәңгәрәй? Өҫтөң бысрай ҙаhа! Әйҙә, сәй ҡуйғанмын, асыҡканһындыр. — Раузаның саҡырғаш.ш Шәңгәрәй ҡолағына ла элмэне.

— Шәйенде үҙең эш, Раужа эпшэй! Минең эш! — Ул муйынын ышҡыны. — Мына!

— Эй алла! Был донъяла ике иҫәр буһа, береһе һин, икенсеһе Хөсәйен! Ике тиҫкәре буhа, береhе Хөсәйен, берсhг һин! Ҡояшты юғалтып йөрөй берәү! Баш осондағы ҡояш булмай, атаң башымы?! — тип ҡыскырынған РаузанЫ ҡалдырып, Шәңгәрәй, оло юлға төшөп алып, Ҡушҡайып түбәһенә китте.

— Шәйхетдинова Нәғимәнең вафатында үҙегеҙҙе ғәйсплс hанайhығыҙмы? — Судьяның Барсынбикәгә төбәп бирюи hорауы Мәҙинәне hиҫкәндерҙе, арҡаhын семерҙэтеп, hыуык тулҡын йүгерҙе.

— Юҡ. — Өләсәһенең таяҡка таянған килеш бер нөктәм ҡарап тышыс яуап биреүе Мәҙинәне лэ тыныcландыра төштө — Мин ундай яҙыҡ эштәр менән аслан булашманым.

— Ә ниндәй эштәр менән булаштың? — Судья ҡатып, ручкаһын ситкә ташлап, мыҫкыллы ҡарашын Барсынбикогэ төбәне. — Яҙыҡ эштәр менән булашмаған кеше бер түгел ә исем аҫтында йәшәйме? Ә, Моратова? Моратова ла һинең ысын фамилияң түгелдер әле? Ниңә өндәшмәйһең? һимсң арҡанда биш бала етем ҡалды!..

Хөкөм һеҙҙең ҡулда. — Ошоно әйткәс, Барсынбикә \ мркысына ултырҙы. — Үҙегеҙҙе лэ, мине лә, башҡаларҙы чфаламағыҙ. Хөкөм ҡарары сыккан бит инде, нимэгэ әкаглэнэһегеҙ?!

Ә бына уныһы һинең эш түгел, Моратова! — Судья Мпмндың йөҙөнә тимгел-тимгел ҡыҙыллыҡ йүгерҙе. — Ҡара беҙҙең өсөн хәл итә башланы! Бында һиңә иҫәр |пиенттарың барҙыр!

||арсынбикә әкрен генә тамаҡ ҡырып алды:

Эй, балам, үҙенде йэлләп әйтәм. Өйөндә бит ирең хәл өҫтөндә ята. Минең кеүек ҡарый бәндә менән оҙаҡ мәшәкәтләнгәнсе, уның янында бул, тиеүем. Унан кире... Икспсе миҙгелгә халыҡ судьяһы булып һайланыуың да миңә сығарылған хөкөм ҡарарына бәйле.

Барыһы ла тынды. Судья ҡатын йәш төйөлгән күҙҙәрен Щисск йәшерергә белмәй аҙапланды, кире ручкаһына тотондо, һҙыра маташты — ҡулы ҡалтыраны.

- Үҙенә-үҙе хөкөм тиҙләткән кеше юҡ ине әле, — ҡалын >ле прокурор күҙлеге өҫтөнән бер Барсынбикәгә, бер Мәзинәгә ҡараны. — Күптән психбольницаға ябылырға мле кешеләргә суд яhап ыҙалайбыҙ.

Дөрөҫ әйтәһең, улым, — Барсынбикә уға күҙ һирпеп I. — һинең менән минең юлдар тап һин әйткән ерҙә, м хбольницала, киҫешәсәк.

Ха-ха-ха! Судты тиҙерәк тамамламаһаҡ, был ҡарсыҡ йшлбеҙгә лә үҙе хөкөм сығарып бөтөр!

Моҙинэ уларҙы тыңлай ҙа, тыңламай ҙа: үҙенә ошо саҡлы яғылыуҙы белгән бит өләсәһе! Ә ниңә хөкөмдән маған? Әле лә бит ул һәр береһенең ауыҙын тығырҙай һүҙ, йидлшэ алмаҫлыҡ итеү әмәлдәрен белә. Ә ул тыныс. Үҙен Иһиамай ҙа, көрәшмәй ҙә. Әйтерһең уны ҡунакка алып Кнгсргә йыйыналар.

Өләсәй! — Күңеле тулған Мәҙинә Барсынбикәгә ҡитылды. — Әйт ғәйепле түгел икәнеңде! Нәғимәнең ниңә килгәнен һөйлә! һине бит енәйәт өҫтөндә тотмағандар! һеҙгә һүҙ бирелмәгән!

(удьяның иҫкәртеү яһауынан Мәҙинә ҡаушай төштө.

Өләс?!

Кәрәкмәй. Яҡлама. Күрәсәген күрмәй — бәндә гүргә ии. Минең күрәсәк һеҙгә ҡалмаһын!

Барсынбикә эше буйынса суд тамамланғанын Ғәлимо өҫтәл әҙерләп түҙемһеҙлек менән көттө. Былай озакка һуҙылыр тип уйламағайны. һыйҙы ул залға бик һирок әҙерләй. Зэйтүнә Ғәззәтованың Ғәлимәлә булғаны бар, әлбиттә. Тик ул саҡта кухняла ашыҡ-бошоҡ ҡына сәй эстеләр. Ауырыу ир, өс бала ҡараған судьяны үҙенең яғына әүҙереү, дөрөҫөн әйткәндә, Ғәлимәгә үтә ҡыйынға Л| төшмәне. Судья өҫтәле артындағы плакатҡа ғына ул «Судья подчиняется закону и только закону» тип яҙып эленгон. Ғәмәлдә суд та, прокуратура ла партия ғали йәнәптәрено буйһона! Үҙенең аппаратта эшләү дәүерендә быны бик яҡшы төшөндө Ғәлимә! Зәйтүнә ханым менән дә «кырын эштәр»ҙе аҙ ҡылманылар. Унан һуң Ғиззәтова уға саҡ ҡына булһа ла туған. Ҡоҙаның ҡоҙасаһы, тигәндәй. Ләкин, үҙенә кәрок саҡта, Ғәлимә үҙенең сыбыҡ осо туғандарын тиҙ таба һом шуны файҙалана белә. Хәйләһеҙ донъя файҙаһыҙ. Әле бөтәһс лә ул теләгәнсә бара! Әптеләхәт дөмөктө, Барсынбико хыялыйҙар йортона эләкте. Хәҙер унда һандуғас булып сутылдап ултырһа ла, һөйләгәндәренә бер кем ышанмаясаҡ. Мәҙинә ҡалды. Кешегә ышанып барыусан бер ҡатлы «әхирәтенең» башына етеүе бер тин шайы түгел Ғәлимәго. Саяф һәм уға оҡшаған кешеләр генә һау булһындар, артабан да Ғәлимәгә тоғро хеҙмәт итһендәр. Тик икенсе секретарь вазифаһы менән генә килеп сыҡмай тора. Өҫтән үҙ кешеләрсп ебәрмәкселәр. Былай булғас, Ҡыҙрасов та оҙаҡ тормаҫ... Быныһы оҡшамай Ғәлимәгә. Ул лаһаң Ҡыҙрасовтың салғыйына ТОТОНОП кеше булып китте. Ул китһә...

Өй һалҡынайып киткәндәй булғас, Ғәлимә ултырғыс башында эленеүле торған мамыҡ шәленә үрелде һәм... шәл аҫтында таныш галстук күреп ҡалды. Ҡыҙрасов? Ул ҡасан булған бында? Ғәлимә менән айҙан ашыу күрешкәндәре юҡ... Теге ваҡыт тик йоҡо бүлмәһендә булды... Ғәлимә үҙе бүләк иткән күк ерлеккә ҡыҙғылт һырҙар төшөрөлгән галстук. Ҡырымға ялға барған еренән алып ҡайтҡайны. Иң сәйере Ғәлимә өсөнсө көн генә был галстукты Ҡыҙрасов муйынында күрҙе. Үҙенә текәлеп ҡарауын тойоп, Ҡыҙрасов, уны һыйпап, Ғәлимәгә күҙ ҡыҫты.

Галстукты тотоп шаҡ ҡатҡан Ғәлимәне ишекто шалтыраған ҡыңғырау тауышы һиҫкәндерҙе.

зәңгәр рәшәткә менән кәртәләнгән ҡәберҙе Шәңгәрәй тиҙ тапты. Әптеләхәттең баш осона ҡуйылған ташҡа сокоп яҙылған хәрефтәрҙе укый алмай ул. Кәрәге лә юҡ. Уҡый-яҙа лә эненә үҙ ғүмерендә бер ҡайғырып та ҡуйманы. Былай Пслә. Кешеләр уны иҫәр ти, ә үҙҙәре Шәңгәрәй белгәндең артыһын да белмәйҙәр. Ул хатта ҡайһы саҡ аптырай биреп тә ҡуя артыҡ күпте белгәнгә уны һармаҡ тип уйламайҙар микән? Эйе, эйе, күпте белә Шәңгәрәй, күпте күрә. Ана, әле Әптеләхәт ҡәбере ҙур шар кеүек яҡтырып тора. Хәс әүлиә Кобсре. Бәләкәй сағында эсәһе уны етәклэп «Әүлиә кәбере»нә алып барғайны. «Ошонда ятып йоҡлаһаң, һауығырһың, бәпесем!» — тигәйне. Йоҡланымы Шәңгәрәй унда, юҡмы — уныһын иҫләмәй инде. Әммә шул ҡылған ҡаплаған Гүболәстән һөйәктәренде иретерҙәй йылы килгәнен тойҙо. Вына әле лә, Әптелэхәт ҡәберенең рәшәткәһенә һөйәлеп ...арыуы булды — Шәңгәрәй тәненә, уның һуңғы ваҡытта Вер ҙә йылынмаған һөйәктәренә иҫ китмәле йылы тулҡын йүгерҙе. Ҡайһылай рәхәт! Тыныс! Әйтерһең дә ул йылыҡас КЫна аҡ болотҡа төрөнөп ятып алды ла зәңгәр күк буйлап ...йәхәткә сығып китте. Аҫта — Тирәкле. Ҡаҙҙар, тауыҡтар, бызауҙар, бәрәстәр, ҡолондар, һыйырҙар, аттар, кешелэр, йрр, ә ул юғары-юғары. Уҫал ата ҡаҙҙарҙың да, эттәрҙең дә, колхоздың тоҡом үгеҙе, Ғифриттең малайы Аждаһаның да буйы стмәй уға. Яңыраҡ, кэзәләрҙ.е баҫтырып йөрөгәнендә, ' |яфтың айғыр тәкәһе әйләнә килеп тәкмәстерә һөҙгәйне ...ны Хәҙер уның да буйы етмәй. Их! Үҙе менән Мәҙинәнең ВЫҙҙарын, бигерәк тә Күкһылыуын алып оса алманы. Эй шул ...ы баланың матурлығы. Гөлбаныуҙың үҙе кеүек. Бына ...жәп: Шәңгәрәй үҙе — күктә, шул уҡ ваҡытта ергә лә йәбешкән. Ауырайған кэүҙәһен айырып алырмын тимә. Элек . Хашим, Ихсанбай, Ишмәмәттәрҙең «Алырым-алырым ҠЫЛ ҡош» уйнағандарын ҡарап торорға яратты. Ҡайһы саҡ ...ны ла уйынға ҡатнаштырҙылар. Бына шунда берәү, мәскәй |бсй, уртаға ултырып ала ла: «Тартығыҙ, балдарым, тартығыҙ: башым күккә, осам ергә йәбешкән!» — ти. Эй ...рга балалар, эй тарталар, әммә ҡуҙғата алмайҙар. Башы күкте терәткән, арты ергә тамыр йәйгән бәндәне була тиме ни?! Ана шул мәскәйҙәй тоя үҙен

Шәңгәрәй: ятҡан һайын һөйәктәре ергә нығыраҡ һеңә, ә йәнв бейеккәрәк оса. Ул осҡан бейеклектән Тирәкле түгел, хатта Таулы ла шырпы ҡабындай ғына күренә, э үҙе ҡурсаҡтай ғына булып Әптеләхәттең нур бөркҡән ҡәбере эргәһендә ята.

— Кем олоһо, кем кесеһе булдыҡ, Вәләүетдин ҡустым, - тине бер көн Ғәләүетдин Вәләүетдингә. — Мин үлһәм, ярай, һин ерҙәрһең. Ә мына һин алдараҡ китһәң? Үҙең белмәгән ни эш бар — эскэн сағым буһа, мин запросты һине, туйыс, ерҙәүҙе, иҫтән сығарып таштауым бар.

— Аны шикелдене кеше онотамы? — Вәләүетдин, һирок мыйығын тырпайтып, Ғәләүетдингә тексәйҙе. — Ә вопшыты булыр у һинэн. Сабаҡлылағы бер алкаш эсэһен биш көм ерҙэмэй һалып ҡуйған. һаһып, кешеләр инеп ҡараһа, белмәнем үлгэнен, тип әйтә ти.

— Шуға әйтәм бит. Төрҙө саҡ була. һауҙыҡҡа туймайһың. Миңә көйөп, буған һауҙығынды бөтөрҙөң. Тере сакта минең дә һиңә бер игелегем тейһен: хут икебеҙгә бер ҡәбер ҡаҙып ҡуяйыҡ?

— Ҡәберҙе үлгән кешегә генә ҡаҙалар. Алйот. Вәләүетдин икенсе ҡабырғаһына әйләнеп ятты. — Башҡа ҡайғың бумаһа...

— Юҡ, тында, мин ысынды һөйҙәйем. Беҙ йәш сакта ауылдың муллаһы үҙенә үҙе ҡәбер хәстәрҙәгәйне. Нигә, ул да иҫәр буғанмы?

— У бит у...

— Мулла белмәй ҡыланмаҫ. Донъялыҡта хәрәм ризыҡтм еймәнек түге, ейҙек. һин дә, эсеүен эсмәһәң дә, дуңғыҙ итенән аҙ ауыҙ итмәнең. Исмаһам, үлгэндә изгеләр әмәлсм ҡылып китәйек.

— Шулай тиһеңме?

— Бәй, беҙҙең йәштә эхирәтте уйҙамай бумай инде...

Зыярат ситендә, ботаҡтары сук-сук булып һәленеп төшкән ҡайын төбөндә, өр-яңы ҡәбер барлыҡҡа килде. Тупраҡтың йомшаҡлығы хайран итте уларҙы: көрәк баҫмайынса ла батып инеп тора.

Һинме гонаҫһыҙ, минме, — тине Ғәләүетдин, Мймыкгай ишелгән ер өйөмөнә ҡарап. — Кемебеҙҙер изге...

һиндер, — Вәләүетдин төҫөнә мыҫҡыллы йылмайыу ығарҙы. - Ғөмөр буйы намаҙҙыҡтан башыңцы күтэрмәнең би1

һин, ҡустым, алай көлмә. — Ғәләү, көрәген кайынға һпи.ш, томәке урай башланы. — Теге ни... бер минең кеүек мужик үлгән икән, ти. Ызнамо, ул ожмахҡа эләкмәгән. Шу. Гам\ к, ти. Аҫта ут урғыла, ти. Мужик эйелеп ҡараһа, кемде Күро ауылының муллаһының башы саҡ ҡына күренеп И>рн, ш. «Эй, мулла абзый, һин бы тикте булып янғас, миңә ми һан», — тигән ти мужик. Ә мулла уға: «Ә һин эйелеберәк, кшы лабыраҡ ҡара: мин кем яурынына баҫып торам?» Япмлабыраҡ ҡарағас, мулланың ут эсендэге хәҙрәт яурынына баҫып торғанын күргән, ти был мужик. Шулай ул, Кустым, эш бит намаҙ укыуҙа ла, эсеүҙә генә лә түгел...

Атыу һиңә туп-тура ожмахҡа юл асыҡ инде...

Унһын мин һиңә бәләкәй баш төҙәтеп алғас •йтсрмен. Баш, зараза, зыңҡый.

Миндә аҡса юҡ.

Иигэ, мин әле һинән аҡса һорап ултыраммы?

Зыярат тау битендә. Бынан бөтә тирә-яҡ ус төбөндәгеләй Күренә. Сук ҡайындың ҡуйы ботаҡтары аҫтында әштер-........р ҡәбер ҡазыған Вәләү менән Ғәләүҙе, бәлки, ауыл Кялкы шәйләмәгәндер ҙә, ә бына улар көллөһөн күреп-белеп тора. Кушҡайын түбәһенең үҙәнендэге Әптеләхэт ҡәбере лә Курспә бынан. Ҡәбер эргәһендә ҡарайып күренгән нәмә лә уларҙың иғтибар үҙегенән ситтә ҡалманы.

Быҙаумы, кешеме? — тине Вәләүетдин.

< кҡор күҙле Ғәләүетдин аныҒыраҡ төҫмөрләне:

Ксше.

Кеше нимә эштәп ятһын унда?

Мәҙинә килеп иҫтән яҙып...

Мәҙинә Таулыла, Барсынбикә ҡарсыҡтың сутына киткән...

Ҡыҙҙары?

Улар бәләкәй, етмәһэ, икәүҙәр.

Иәшенән ҡыҙыҡһыныусан Вәләүетдингә был хәл тынғы ɪәне.

Таштә көрэгенде, барып ҡарайыҡ...

— һуң, ҡәбер әҙер ҙә түге... Сокойоҡ әле, аҫта һары балсыҡ...

— Ҡуй, теге ни, яткас-яткас, мин тупраҡта, йомшаҡта ятам, балсыҡ, фу, һыуыҡ бит ул...

— һай була ла инде!

— Ярай, ярай, үлеүен үлһәң, еренэ еткерерҙәр, уныһыиа ғына ҡалған эште...

Әптеләхәт ҡәбере янында яткан кешенең Шәңгәрәй икәнен күргәс, улар аптыраманы. Тик бына... Нисек кенә уятһалар ҙа, Шәңгәрэй байғошоң уянманы, ҡымшанманы, быйма, көпө салбар кейгән, боттары араһына ҡулыи ҡыҫтырған, йоморо ҙур башын бүркенә иплэп һалған килеш ята бирҙе.

— Үлгэн.

— Юҡты, — Ғәлэүетдин, ятып, Шэңгәрәйҙең көпо төймәлэрен ыҫкындырып, йөрәген тыңлап ҡараны.

— Ишетеләме бер нәмә?

— һуҡмай...

Инде Вәләүетдин ятып тыңланы:

— Шу-шулай шу... һуҡмай.

Шәңгәрәйҙең вафаты хаҡындағы хәбәр Раузаға аяҙ көмдо йәшен аткандай тәьҫир итте.

— Ай алла! — тип сабырһыҙланып иларға кереште ул. Ней Мәҙинэ, ней Барсынбикә юҡ. Ней Хөсәйене хәҙер а тотмай! Кемгә барайым, ни хэлдәр ҡылайым? — Үҙ ғүмерендә мәйет оҙатып, ғөрөф-ғәҙәт аткарып өйрәнмоюм Рауза үҙен ҡола яланда юлһыҙ аҙашкан мосафирҙай хис ипе

— Хашим! Хашимға барып ҡарайыҡ, аты егеүҙе түге микәм'.'

— Рауза апай, — Ғәләүетдин унын бер уң, бер һул яғыпа сыҡты. — Артыҡ йәүкәлэмә, беҙ — хәҙер. Теге ни, һин ашһыуынды, — ул Раузаның ҡолағына үрелде, — эсе-сөсөндө генә хәстәрҙә. Ҡалғаны — беҙҙең эш.

— Ярай һуң, — Рауза, күлдәк итәген эйлэндереп, йәтеш танауын һеңгерҙе, яулыҡ осо менэн күҙенэн туҡтауһыҙ сөбөрләгән йәштэрен һөртөштөрҙә. — Мин ни... унынып ғына... Йэ мына Мәҙинә, йә Әптелэхэт... Эй алла! Бы



Шәңгәрәйҙең ғөмөркәйе у тикте ҡыһҡа булыр тип ком уйҙаған? Яҡшы ҡарай алдыммы икән һине, байғошҡайым. Ризалар булып ҡына китһәң ярай ҙа бит...

Ат егеп, Шәңгәрәйҙе тейәп алғас, Ғәләүетдин, ололата, Вәләүетдингә һүҙ ҡушты:

— Аты ла, арбаһы ла тиҙ табылды. Ҡәбере лә әҙер...

— Нисек — әҙер?!

— Нисек тип, ҡустым, баяғы ҡәбер Шәңгәрәйгә яҙған буған инде. Хоҙай эшкәрткән, шуға ҡаҙғанбыҙ.

— Улай килешерме? Уға инселәнгән соҡор түге бит...

— Инселәнгәнме, юҡмы — барыбер шул бер зыярат инде. Унға биш аҙым, һулға биш аҙым — ниндәй айырма? Шәңгәрәй бәндәгә зыян ҡылманы, әсмәне, һүгенмәне, ҡыз-ҡатын менән шаярманы, етмәһә, үкһеҙ етем. Әйҙә ул ятһып йомшаҡ ҡәберҙә.

— Шулай тиһеңме?

— Ызнамо. Ҡәберҙең тупрағы мамыҡтай буғас га уйҙаным мин. Беҙгә тәғәйен ер алай уҡ булмаҫ һымаҡ ине.

— Тик инде, ағый, мәйетте йыуып, кәфенгә төрөп һалыр кәрәк тә һуң?

— Эй ҡустым, — Вәләүетдин «ағый» һүҙен үтә лә һирок, уғата етди осраҡта ғына ҡулланғанын яҡшы төшөнгон Ғәләүетдин үҙенең өҫтөнлөгөн тойоуҙан ирәйеп, бер башка үҫеп китте, — хәҙер кем мәйетте кәфенгә урай? Кем уға кәфен әҙерләп ҡуйған? Раузаны расхутка һуғырғамы? У бахыр былай ҙа Шәңгәрәйҙе ҡараманы түге, ҡараны. Бөтә әҙәм хәҙер кейендереп оҙата. Урыҫ белмәй кейендермәйҙер эле. Тормош бит хәҙер уларса бара. Йыназа уҡырҙыҡ ксшо ауылда юҡ. Барсынбикә уҡыр ине — уны ла тай типтерҙеләр. Йыуыуға килгәндә, ул важный мәсьәлә түге. Рауза аҙна һайын уны әрҙәй-әрҙәй мунса индергәнен үҙем ишетә йөрөнөм. Шулай буғас, үлгән кешенең ысын донъяға, үҙепең мәңгелек төйәгенә, тиҙерәк киткәне яҡшы. — Башы зыңҡым ауырткан Ғәләүетдин, күп һөйләүҙән тамам арып, арбаш.ш ҡаҡ һайғауына ялпашты. — Әйҙә, малҡай, мәйетте арытырга ярамай. Ҡустым, ултыр. Шәңгәрәйҙе арыу сағында ер

ммыиа тапшырайыҡ. Ә һинең менән минең ваҡыт, ...и, стмәгән. На, малҡай, Раузаның ашы ҡуйырып іһен, коткән кешегә бик-бик ҡыйын бит у...

I I мүетдин аттың башын тура зыяратҡа боророға ашытсha Вәләүетдин ҡабаланманы. Ағаһын тыңланы — үҙенсә ны

І укта әле, ағый, — тине ул күкрәгенән гөрөлдәп , ш һолмәк тауышы менән. — Башта хут медпунктҡа і аныҡ. Ауыл ситендә генә бит. Врач ҡараһын. Атыу, ы ә...

Бисмилла тигәнсе, ҡор үлеп бара, ҡустым! һин мине йҙамайһың!

Үлмәҫ. — Дилбегәне үҙ ҡулына алырға өлгөргән үсі ин муйынһыҙ башын күкрәк ситлегенә сумдырҙы, ы мыҡ тороорға булды. — һинең башындың ауырымаған юҡ.

Мә шупктта сестра ғына ине. Шәңгәрәйҙе арбала килеш і ш. яҡын барырға ҡурҡҡан төҫлө генә пульсын һәрмәне

Үлгән. Йөрәк туҡтаған. Врач районда, справканы и ҙыр, — тине.

Беҙгә справка кәрәкмәй, ҡарындаш. — Ғәләүетдин ағы Шоцгәрәйгә эйэге менән ымланы. — Уға ла кәрэге ын га гына ул ит һатырға барһаң да справка һорайҙар.

Имдс нишләйһегеҙ? — Йәш ҡыҙ, аптырап, быларға ны

Мэйетте ерҙәп, Хоҙайҙың рәхмәтен алабыҙ, ҡарындаш. ан Как же, фатихаһыҙ булмай. — Эштең ошолай аныуынан күңеле күтәрелгән Ғәләүетдин арбаға еп мсисп ултыра һалды. — Әйҙә, ҡустым, Аллаға і раиыҡ.

ина Барсынбикәне оҙатҡас ҡына ауылға йүнәлде. фатирындағы юрғаһын эйәрләп, кисләтеп булһа ла ыкты. «Минең өсөн көйәләнмә, дәртендә һүрелдермә, ын ын күңслөнә ҡайғы шаршауын бөркәмә. Түрендән

нур, күңелендән гөл китмәһен. Был донъяла үҙенцэн көслө булһаң ғына мораҙыңа ирешеп була», — тине өләсәһс хушлашҡанда. Мәҙинәгә ул тамсы йәшен күрһәтмәне — эллә, ысынлап та, иламаны. Әйтерһең дэ уның алдында юғалтыуҙарҙан бөгөлөп төшөргә торған ейәнсәре түгел, урынынан ыһ та итмэй тау шыуҙырған Алпамыш тора. Барсынбикә машинаға ултырыр алдынан ейәнсэренә һоҡланыу һәм ғорурлыҡ тулы ҡарашын йәнә бер төбәне лә, китеп тә барҙы. Бына хәҙер Таулынан Тирәклегә Күктау аша үткән тура юлдан килә Мәҙинә. Ел юҡ. Бар тәбиғәт, хатта ҡайындар ҙа, мәтам тынлығында ойоғандай. Мэмилә туғайына еткэс, һауынсылар эргәһенә туҡтап китергә булды. Уның йәйләүҙэ булмағанына аҙнанан ашты, фермаға, ҡышлауға, ҡайтырға ла ваҡыт етә. Эй, үткән ғүмер! Ҡасан ғына ошо туғай үләнгә, сэскә-бәпкәгә күмелгәйне! Улар — атаһы, өләсәһе, Давид, йәнә игеҙәктәре — ошонда «Ҡарға бутҡаһы»на сыҡҡайны.

Мәҙинә, йәйләүгә тура төшөргә була, «Почта билэне» аша юлланды. Ошо тирәлә осраҡҡайны бит әле ул теге Күкбүрегә оҡшаған йыртҡысты. Мәҙинэ уның көсөктәрен йәлләнеме, эллә үҙенме — атманы. Ата алманы. Ерҙэге бар тереклекко һалынған эсәлек тойғоһона ихтирам йөҙөнэн сирттермәнс микән мылтыҡты? Әле уның мылтығы юҡ. Үҙенең йәнго талашҡан бүре өйөрө аҫтында ятҡаны ла хэтеренән сыҡмаған. Ундағы ҡурҡыу эле булһа уның булмышында йәшәй кеүек.

— Ай! — Ат өҫтөндәге Мәҙинәнең күҙенә ҡаялар аҫтында быҙаулаған сыбар һыйыр салынды. Быҙауы ҙур ғына, тороРға, инәһенең имсэгенә үрелергә итэ.

Мәҙинә ни ҙә булһа уйларға ла, атынан төшөргә ло өлгөрмәне — селек араһынан ниҙер ҡапыл быҙау өҫтөно һикерҙе, һыйыр ер йыртып үкереп баяғы йәнлеккә ташланды. Бүре! Ул арала ҡая таш өҫтөнән икенсе бер бүре йэш бүренең өҫтөнә һикерҙе — Мәҙинәнең күҙ алдында ул үҙенең тоҡомдашын ботарланы. Ҡоралһыҙ, баш бирмәй сығынлаған атын тота алмаған Мәҙинә ҡысҡырырға итте — тауышы сыҡманы. Түбән табан елдергән аты өҫтөнән ҡайырылып йәнә бер ҡарағанында тамаҡланған быҙауын ялаған һыйырҙы ғына күрҙе.

Йәйләүгә етеп барғанында, Мәҙинә юғалған һыйырҙы эҙләргә сыҡҡан көтөүселәрҙе күрҙе. Ҡыҫҡаса хәлде һөйләгәс, олораҡ көтөүсе:

Ул бүре балаһы бик иркен ҡыланды. Ғәҙәттә, бүре үҙе ... срҙәге малға зыян килтермәй, ә был үткэндә күҙ ... каш араһында унлап һарыҡты тамаҡланы. Шул бүре Уларҙың да үҙ закуны бар бит. Закунға буйһонмағас, һе самасут яһаған да ҡуйған инде, — тине.

Эш барамы, именлекме? — тип һүҙҙе икенсегә борҙо ... Мөдирҙең тауышында элекке ихласлыҡ, дәрт ... көтөүселәр һиҙмәй ҡалманы, буғай. Шулай ҙа ... уап бирергә тырыштылар:

Һауын төшмәне. Элеккесэ. һауынсылар алмашлап ялға ... гора. Эш ни... яҡшы бара.

Ә үҙегеҙ? Ял иттегеҙме?

Беҙ... юҡ. Ғәләүетдин йәнә... — оло көтөүсе тамаҡ ... сиртте. — Ул ни, шул инде. Вәләүетдине ... цшде ҡарауыллай. Эсеп ятып, йорт-ҡураны үртәп ... ти.

... көтөүселэр менән Сыбарҡай эргәһенэ ҡабат ... булғайны, тегеләр ризалашманы, ҡайт, ял ит, тип ... спо китте.

... ютеп, көтөү ҡайтҡан ваҡытта ауылына һыбай ҡайтып ... Моҙинә Ҡушҡайын түбэһендә туҡтаны. Яңғыҙ ҡалған ... ботаҡтары дерелдәгәндәй, башҡа ағастар йәшел ... ултырған бер мэлдә, был инде һарыға һабышҡан. Бөтә ... гуплап, ҡурҡыуын еңеп, Мәҙинә түбәнгә ҡараны: унда ... Нисәнсе көн инде ул шунда яңғыҙы ята. ... рәшәткәһенең зәңгәргә буялғанын күргәс, эсенә йылы Мәҙинәнең: кемдер килгән, тимәк. Хэстәрләгән, бер ... кмлдырмаған. Атынан төшөп, ҡәбер ҡәҫенән һыңар ... Гупрак алып, Мәҙинә күкрәгенә баҫты. Әсәһе үлгәс, ... барып, Барсынбикә шулай иттергәйне унан.

Баҫ, йөрәгеңә баҫ, — тигэйне. — Үле тупрағы ... һағыш бауырыңа һары булып ултырып

... түбәһенә ҡабат күтәрелгәс, зыярат кәртәһенең ... срспон көтөүҙән ҡайтып килгән һыйырҙарҙың ... үксрсшеп бер урынға атлығыуын күрҙе. Быларға ... Ул тирәлә кәбер юҡ, күрэһен, терпе йэ йомран ... сГмргәндер.

... донъяһынан, ҡыҙҙарынан айырылып торған ... яғына атын борманы, күпме юл үткән

хайуанды йәлләне, үҙе лә һушһыҙ йығылыр сиккә етеп арығайны. Етмәһә, үҙ балаһын ботарлаған инә бүренең сараһыҙлыҡтан яһалған сара ҡылыуҙан ҡыҙарған ҡарашы күҙ алдынан китмәй.

Төп яҡта сөкөрләшкән ҡыҙҙарына ла, баҡсала эш менән булашҡан атаһына ла һүҙ ҡушып тормаҫтан, Мәҙинә түшәгенә йығылды. Эйе, йәшәргә көсө ҡалмағандай уның. Тормоштоң аяуһыҙлығы, бәғерһеҙлеге кәрен алды, арманһыҙ яһаны, йөрәге теткеләнеп, ярылып, йәнселеп бөттө. Өләсәһе янында булһа, Әптеләхәттә юғалтыу ҡайғыһын ул, бәлки, еңелерәк үткәрер ине. Барсынбикәнең тылсымлы ҡарашы, күңелде үҫтерер, рухты күтәрер һүҙҙәре етмәйәсәк Мәҙинәгә. Шул саҡ уның ҡолағына нескә, ләкин күкрәктән сыҡҡан тауыш ағыла башланы:

Шәл бәйләнем, шәл бәйләнем,
Шәл бәйләнем, шәл бәйләнем,
Шәлем түңәрәк түгел...

— Көнөкәс, һин йырлағанда ауыҙыңды ҙур итеп асма. Шәлде бит нәҙек кенә итеп иләнгән мамыҡтан бәйләйҙәр. Әнәләр ҙә йыуан түгел... Осоп ҡына торған шәл хаҡында йырлайбыҙ бит!

— Ауыҙҙы асмай йырлап булалыр шул?!

Көнһылыуҙың Күкһылыуға үпкәләп әйткән һүҙенән Мәҙинә саҡ көлөп ебәрмәне.

— Һин бит буран, йә булмаһа... һуғыш хаҡында йырламайһың!

— Йәнде көйҙөрһәң, бөтөнләй йырламай ҙа ҡуйырмын эле!

Үҙ һүҙле Көнһылыуҙың ғәҙәтен белгәнгә микән, Күкһылыу йомшара төштө:

— Ҡуй, Көнөкәс, үпкәләмә. Әйҙә инде, йырлайыҡ. Һин беренсе тауыш, мин — икенсе.

Осоп барып күрер инем,
Осоп барып күрер инем,

Йәнем күбәләк түгел,
Йәнем күбәләк түгел.

Йырлап бөткәс, ҡыҙҙар бер талайға тымып ҡалды. Саф ..... арҙы, йөрәккә үтерлек ихлас мондо тыңлауҙан ип.шсц ҡоро, ҡара ялҡын менән янған күҙҙәренә йәш ille ло эре тамсы булып беләгенә тамды. Түрьяҡтан

Күкәнәй, э һин кемде осоп барып күрер инең? — тип ы ммганы ишетелде.

Атайҙы...

Мин дә... — Ғәҙәттә бошоноп бармай торған I миһылыу көрһөндө. — Тағы... өләсәйҙе, ағайҙарҙы...

Конөкәс, әйтәйемме нимә...

Өйт.

КОлмәһәң...

Колгөм килеп ултыра тиһеңме? — Ғәрсел, ҡыҙыу I иинһылыуҙың хатта йыш-йыш тын алғаны ишетелде.

Әйтәм әтү. Мин эллә нишләп олоғайып киткән ген.

Олоғайып?! Әсәй, атай кеүекме?

Юҡ. Ныҡыраҡ. Өләсәй һымаҡ. Беләһеңме ниңә? Әсәйгә ыҙ һом Барсын өләсһеҙ ҡыйын буласаҡ. Шуға.

Һы... Уйнамаҫһың да микән инде минең менән?

Бөлки, уйнамам да...

Мин ҡурҡамсы ул, Күкһылыу! — Көнһылыуҙың ырып илап ебәреүе Мәҙинәне түшәгенән ырғып торорға ,|> и гте.

Кыҙҙар! Ҡыҙыҡайҙарым!

Өсәй! Әсәй ҡайтҡан!

нл габан атылған бәләкәстәрен Мәҙинә алмаш-тилмәш ғына алды, сафлыҡ аңҡыған биттәренән үбеп, сәстәрен ины

һағындым мин һеҙҙе, бәләкәстәрем! — Шунан өсөһө ı ı тынысландылар, ҡыҙҙарын ике яғына һалып, и ыла ғышлы мендәренә ауҙы. — Йә, нисек йәшәнегеҙ? I үкһылыуың, — Көнһылыу ҡапыл тотлоҡто, — әй, \1 .

— Ни булды, Күкэнәй? — Мәҙинә зәп-зәңгәр күҙҙәрен түшәмгә текәп шым ғына яткан ҡыҙына әйләнде. — Ни булды?

— Башлағас, һөйләп бөт, Көнөкэс...

— Бөтәм шул! — Көнһылыу ярһып тороп уҡ ултырҙы. — Әсәй! Күкһылыуың һинең анау шау биҙәк кешәмир яулығындың сәскәләрен ҡырҡып алып, аҡ күлдәгенә йәбештерҙе!

— Ысынмы, Күкһылыу?

Күкһылыу өндәшмәне. Элекке кеүек үҙен яҡларға ла, аҡларға ла керешмәне. Бер аҙ өндәшмәй ятҡандан һуң, күҙҙәрен түшәмдән айырмаған көйө:

— Ғәфү ит инде, әсәй, — тине. — Концерт күлдәге кәрәк ине бит. Кеше алдына сыҡҡас...

— Кеше алдына?

Көнһылыу йәнә телгә килде:

— Эйе! Беҙ ни... концерт ҡуйҙыҡ бит. Аласыҡта! Шунда...

— Ә концертты... кемдәр өсөн ҡуйҙығыҙ?

— Олатай, Рауза инәй, Шәнгәрәй, йәнә күрше малайҙар, ҡыҙҙар! Әй ҡыҙыҡ булды! Күкһылыу йырланы, мин бейенем, шиғыр һөйләнек, әртис булып уйнап та күрһәттек!

— Әсәй... — Күкһылыу йомшаҡ ҡына итеп әсәһенең беләгенә ҡағылды. — Яулыҡ өсөн һин көймә инде, әсәй... Мин һиңә Италиянан бик матур яулыҡ алып ҡайтырмын.

— Италиянан?!

— Эйе. Йырсылар бит төрлө илдәрҙә йөрөй! Мин картанан Италияны таптым. Мин шунда йырлаясаҡмын. Йәнә Парижда...

— Эй, хыялыйым минең! — Мәҙинә Күкһылыуҙы күкрәгенә ҡыҫты, бәғере тәңгәлендә ҡыҙыҡайының бәләкәй генә йөрәгенең леп-леп талпыныуын тойҙо. — Теләгең фәрештәләрҙең «Амин» тигән сағына тура килһен, ҡолонсағым!

— Китһәң, китеп ултыр, мәгәр мин аттан айырылмайым! Иң яҡшы тоҡомло сабыш аттары үрсетәсәкмен! Йыр менән тамаҡ туймай! — Көнһылыуҙың өҙөп, айырым бер ышаныс менән әйткән һүҙҙәре ғәжәп итте Мәҙинәне. Бына бит, өс кенә көн күрмәй торғансы ҡыҙҙары балалыҡтан сыҡҡан, киләсәк тураһында хыял йөрөтөп кенә ҡалмай, хатта ниндәйҙер ҡәтғи ҡарарға килергә өлгөргән.

I уңсләндәгән әйтеп биреүҙән тынысланған Көнһылыу и мыш йоҡлап та китте. Хәрәкәтсән бит, арый I шдыр... Ә Күкһылыу әсәһенә тағы ла нығыраҡ ||| I ышгы:

Әсәй, ә бына... моң ҡайҙан? Ул нисек тыуған?

Моңмо? — Мәҙинә уйлана төштө. — Моң... Бик борон шда, әле ерҙә кешеләр ҙә, хайуандар ҙа булмаған бер Хоҙай балсыҡтан үҙенә оҡшаған һын яһаған да йәнгә: юнон юенә ин!» — тигән. Йәндең ингеһе килмәгән, ан ҡурҡҡан. Шул саҡ Хоҙай фәрештәләргә көй рга ҡушҡан. Фәрештәләр шундай өҙҙөрөп уйнағандар, оиҙө, Йән түҙмәгән, был мондо нығыраҡ ишетер, тойор оаякы балсыҡ һын эсенә инеп киткәнен һиҙмәй ҙә Ошонан һуң кешенең Йәне үҙе моңға әйләнгән.

Әләйһәң, Йән үҙе моң буламы ни ул?

)йе. Кеше тәбиғәте үҙе үк моң. Тик ул берәүгә күберәк п ән, икенсегә — әҙерәк.

Ө һин быларҙы кемдән ишеттең? Барсын өләс һөйләне, шмы

Быларҙы миңә өләсәң һөйләмәне, ҡыҙым, — Мәҙинә ҡыҙының сәстәренән һыйпаны. — Быларҙы миңә йәш оле Мәскәүҙә уҡып ҡына йөрөгәндә, Давид имопович һөйләгәйне. Мондо тоям тип, Йән үҙенең иркен кан, оммә икенсе бер нәмәне тапҡан, кеше менән мәнге ылмаҫлыҡ булып уҡмашҡан.

Кайһылай матур әкиәт! Әсәй, һин тик йырлап ҡына и.1ме?!

Иә.

Мпм дә йырлап ҡына йөрөрмөн, йәме?

Мәҙинә ҡыҙын күкрәгенә тағы ла нығыраҡ ҡыҫты. Эй Шым! Ниндәй матур балалар биргәнһең миңә! Ошолар иии.инан туйырға хаҡым бармы ни минең?!

Мирхәйҙәров йыш ҡына тайсаларындағы «иҫке мп морөтөлгән өйгә инеп юғалыр булып китте. «Ялға әртә-ҡураны төҙәтер, баҡса үҫтерер, умарта үрсетер гип хыялланған кеше алама араһына инә лә

бикләнәсе», — тип Сәрбиназдың һуҡраныуы ла биҙҙерә алманы уны был шөғөлөнән. Әле атаһы иҫән саҡта бында Хизбулла олатаһы йәшәне. Ҡарт ине инде ул, яңы өйгә күсеп сыҡманы, радио тыңламаны, гәзит уҡыманы, ошо ҡарағастан һалынған бәләкәй генә өйөнөң урындығында көндөҙ — тәҙрәнән, кис шәмдән төшкән яҡтыла боронғо китаптар уҡыны. Әҙ ашаны, биш намаҙын ҡалдырманы, донъяуи эштәргә ҡыҫылманы. Үлеүе лә ирмәк кенә булды. Иртән иртүк, ҡола бейәһен егеп, Түбә баҙарына барып килде. Килгәс: «Ҡорҙашты саҡырҙым. Ул килгәнсе мунса кереп сығайым», — тине. Азат үҙе мунса керетә торғайны олатаһын. Был юлы ҡарттың тәпсирләп йыуынғанына аптыраны. «Шул саҡлы ышҡытмаһаң, тиреҢ тишелә бит!» — тине. Сыҡҡас, тырнаҡтарын ҡырҡтырҙы, һаҡал-мыйығын рәтләттерҙе, сәсен ҡырҙырҙы, ә китаптарын Азаттан мөйөштәге һандыҡҡа тултырттырҙы. «Аслан асаһы булма!» — тине. «Кәрәге бар ине! — тине комсомол Азат. — Һинең китаптарыңды ғына уйҙап йөрөйөм!»

Кискә табан Түбәнән ҡорҙашы килде олатаһына. Табаҡ менән аш алып ингән Азат олатаһындағы үҙгәрешкә аптыраны: түшәккә һуҙылып ятып алған, ауыр итеп йыш-йыш тын ала, күҙҙәре сәйер яҡтылыҡ менән яна.

— Улым, атаңды саҡыр, мин ауырайҙым.

— Ә?! — Бер нәмә аңламаған Азат Түбәнән килгән һаҡаллы ҡартҡа ҡараны. — Нимә ти ул олатам?

— Олатаң йән үтәргә итә. Атаң менән үҙең дә ин. Ясин сығам.

Таң атыуға олатаһын үлгән тинеләр.

Бына шулай кеше ҡаңғыртмай ғына, үҙ-үҙен тәрбиәләп китеп барҙы уның йәше йөҙҙән ашҡан олатаһы. «Аслан асаһы булма!» — тиһә лә, Азат баяғы һандыҡты асыштырҙы. Төрлө ерҙән килеп боронғо китаптар йыйған кешеләргә лә бирештерҙе ул тире менән төпләнгән ҡалын-ҡалын ҡулъяҙмаларҙы. Бәғзеләре ҡалды. Атаһы уларға ҡағылманы, ә бына Азат нилектәндер шуларға тартыла. Ғәрәпсә баҫмаларҙы еңел уҡығанлыҡтан, ул иҫке төрки телендәге байтаҡ китаптарҙы уҡыны, «Ҡөрьән һәм уның тәпсирҙәре»н ҡараштырҙы, хатта улар араһында иҫке төрки теленә тәржемә ителгән «Ҡөрьән-Кәримде», «Тарихул-әнбиә»не тапты. Был

\ны торған һайын нығыраҡ арбаны. Ҡайһыларын үҙе ...мәҫтән кириллицаға күсерә башланы...

Ошолай ултыра торғас, бәғзе ваҡыт таң атҡанын, ...ының һыйыр һауырға торғанын да шәйләмәй ҡала.

Кит инде, бөгөн дә ҡашыма инеп ятмағаның, — тип ... карсығы.

Йоҡо ҡасты әле, — ти Азат талған күҙҙәрен китаптан ... - алда әллә бар, әллә юҡ ғөмөр, ҡай тикте ғилем ... мыпауҙарҙа...

Картайған көнөмдә көндәшле иттең! — тип һуҡрана ...

...ио Азат күнәк шылтыраған тауышҡа башын күтәрҙе. ... инде карсығы, турһайыр. Ул, ҡатаһын эләктерә һалып, ...ыкты.

Хәйерле иртә, ҡарсыҡҡайым! Нисек йоҡланың?

...рГ)ииаз, һыйырының осаһына шапылдата һуғып, ... ыцғайлатты:

Геленә һалышҡансы, ҡыу ошоларҙы! Көтөүгә ҡушмай ... кире боролма, быҙауына була ҡайтып килмәһен кисәге

I ... ...ау башмағын эйәрткән сыбар ала һыйыры артынан ... ...ҙәров ауыл урамы буйлап өҫкә атланы. Төндә ауыл ...ҡушылып өрөп үткәргән Көтмөр ҙә ҡуҙғалды ...ынан Мирхәйҙәров үҙе атлай, үҙе төндә уҡыған китабы ...нән сыға алмай. Ауыл клубы эргәһенән үткәндә уны ...ғаш кыр күргән кешеләй күҙ уңынан үткәрҙе. «Аллаһ ... порпары һалынасаҡ урындар әле ер яралып ҡына ...ук билдәле булған», — тиелгән ул китапта. Клуб — ...есет. Манараһын ҡыҙыл партизан Сәйфулла ... колатты. Азат та йөрөнө шунда. Манараға арҡан ...р аттар менән тарттырҙылар. Ҡарағас ҡоролма ...ирешмәне. Башта айы ҡоланы. Ниңәлер ул Азаттың аяҡ ...илеп гөштө. Азат уны эйелеп алды ла кеше и ... ҡуйынына тыҡты һәм олатаһына алып ҡайтып «Дәһриҙәр, — тине олатаһы, — вәхшиҙәр. Йәшлегегеҙҙе ...баддоға уҡымайым. һуҡырһығыҙ әле. Күҙегеҙ бер ...илр мин булмам. Манараның таҡта-кәрниздәрен Н ...ои, мосстең ҡыйыҡ эсенә һал». «Нигә?!» — тип \|.и. «Әйткәндә эшлә, — тине олатаһы, — бер I...... уларҙы яңынан үҙең ҡорасаҡһың». Бер менеп

ҡарап төшөр кэрэк әле, моғайын, яталыр улар. Тик бына уның яңынан мәсеткә әйләнеренә күңеле ышанмай Мирхэйҙәровтың. Динде бар тип тэ белмәгән нисәнсе быуыи бауыр ҡалҡыта? Азаттар, Сэйфуллалар быуыны, ярай, тегс заманды ла белеп ҡалды, ауылдың көслө уҡымышлыларын үҙ күҙҙәре менән күрҙеләр. Хәҙрәтте һөргөнгә ебәргәндәрендо әлдә ул ауылда булманы. Сэйфулланың бик тырышҡанын һөйләне халыҡ. Китаптарын яндырғандар, ғаиләһен туҙҙырғандар, үҙен Таулыға тиклем йэйәү барырға мэжбүр иткәндәр. Ә китаптары бик күп ине унын. Мәҙрәсә тотто. Үҙгәрештәр башланғанға тиклем Азат та уның мәҙрәсәһендо уҡып йөрөнө. Дини китаптарҙан тыш донъяуи фәнде ло өйрәтте хәҙрәт. Математикаһын да, географияһын да, тарихын да белдерергә тырышты. Буяу эшләү, өй һалыу, умарта тотоу, итек тегеү, мейес сығарыу серҙәрен до күндерҙе. Йэш сағында Бохарала оҙаҡ йылдар уҡып ҡайтҡан хәҙрәт ысынлап та бик күп белэ ине.

Күҙен клубтан айырғас, Азат үҙенең нимә өсөн бында килеп сыҡҡанын аңламайыраҡ, иҫенә төшөрә алмайыраҡ торҙо. Ә-э... һыйыр. Ул һыйырын көтөүгә алып китеп бара ине. Әлдә хайуан тыҡрыҡҡа инеп юғалмаған — башмағыи ялап, баҫҡан ерендә туҡтаған.

— һәүкәш! — Хужаһының ҡыбырлауын Көтмөр ҙә көтөп торған ахыры, ялағайланып, һыйыр тирэләй сабыуыллап өрөп алды. — Әйҙә, малҡай...

Түбәгә менгэс, булған малдың зыярат ситендә үкерешси ер сапсығанын күрҙе Мирхэйҙәров. Был ни булып китте, тип тирэ-яғына ҡарауға, көтөүсенең һыбай шунда елдергәнсм шәйләне. һыйырҙарын ҡыуып килгән кешеләр ҙә зыяратҡа йүнәлгәнен күргәс, аптыраған Азат та шул яҡҡа ынғайланы

Көтөүсе баш бирмэй илергән һыйырҙарҙы сыбыртҡыһы менән яра-яра өйөрөп алып киткәс, кәҫтәре аҡтарылғам, күмәк тояҡтар аҫтында ер менән тигеҙләнгән ҡара тупраҡ күренде.

— Был ни ғәләмәт булды? — тип аптырашты халыҡ. - Ҡәбер түгелме был?

Ул арала Мирхэйҙәровтың күҙе метр оҙонлоҡтағы таҡтаға төштө. Унда «Баҡтымбаев Шәңгәрэй Ишмөхәмәт улы» тигәЯ һүҙҙәрсыймаҡланған.

— Йәмәғәт, Шәңгәрәй... үлгәнме ни?

Өлләсе... — һәр кем Шәңгәрәйҙе ҡасан, ҡайһы ерҙә ш п иҫенә төшөрә башланы.

Ауырыған кеүек тойолманы ул, — тиеүселәр булды.

Былай, йәй көнө көпө, быйма кейгәненә аптырай п куйғайным, — тине Сәйғәфәр.

Рауза үҙе килә түгелме?

У belә инде...

Рауза апай, Шәңгәрәй...

Шоңгәрәй мәрхүмкәйҙең ҡәберен күрергә килә ым, Рауза сонтор танауын, күҙҙәрен яулыҡ осо менән гөш гөрҙө. — Ғәләүетдин менән Вәләүетдин ҡустылар щ ы ситкә генә ерҙәнек тигәйнеләр.

\h-ah! — Халыҡ шаҡ ҡатты. — Шәңгәрәй үлдеме ни?!

I эләү, башы бөткөрө, бесәнгә тип ҡойған балымды ı ы ı канса эсте, башы ауырып яталыр күп буһа! Вәләү... у иико киткәндер, йә бумаһа... Ана үҙе килә бит! Әлдә у ы пар булды! Берәү тыуғанда, берәү үлгәндә кәрәк. Бөтөн ындә! Кемгә барып ярҙам һорарға белмэгәндә... Ярай ır килсп сыҡты! Түлке өйгә апҡайтып йыуманылар, шыл сиравка бирҙе тип, ынғай күмгән дә ҡуйғандар... Эй и ірәи,)й Хоҙай бәндәһе! Ҡалай ғына уйҙамағанда гүр оулдың. Ҡәберең... — Шунда ғына Рауза ҡәбер ıын ıа сандауға әйләнгән балсыҡ ҡатыш ҡоро тупраҡ күрҙе Бәрәкәт, бы ни...

Ғыны идап килеп еткән Вэләүетдин дә шаҡ ҡатты:

Бы ии ғәләмэт?!

Унынын һеҙҙән һорар кәрәк! — Мирхэйҙәров илағы таҡтаны ҡайҙа ҡуйырға белмәне. — Ошо буламы V"

Нормально ерҙәнек. Лэхет алдыҡ. Ләхетен такта менән ıыҡ. Ҡоберҙе ни... мал туҙҙырған. Йэ, әйтәм, кисәнән пмоида өймәктәшәләр ине...

Ҡәберҙе һыйыр туҙҙырғанын күргән юҡ ине, — Рауза, ерга сүгәләне. — И-и, бахырҡайым, етемдең үлгәс тә рı юҡ, баһымсаҡҡа баҡа ла айғыр тигәндәй, башҡа ı м клПерен түге, һинекен борҡота һыйыры ла...

I. . . . ı еткән Хашим алғараҡ сыҡты:

йвмәғәт, Шәңгәрәй тере көйөнсэ ерләнгән.

— Үлде! — Вәләүетдин, йоҙроғон төйнәп, уныц ҡаршыһында осондо. — Үлгәненә, мына, ыспрафка бар! Әлло һин беҙҙе...

— Спрафкаң бар, күреп торам, ҡустым. Мындай хәлдәр була ул. Ул мәртҡә генә киткән булған.

— Булмағанды!

— Булмаҫка... Мин үҙем харабалар араһында айҙан ашыу үлеп ятҡанмын. Эттәр килеп тырнағанға шул ерҙе асырға булғандар. Мал, йән эйәләре һиҙә бит ул тере йәнде, кешс һиҙмәһә лә!

— Ҡәберҙе асабыҙмы әләйһәң?

— Ҡуй, юҡ менән булмағыҙ!

— Ә тере булһа?

— Тере булһа ла быға үлде инде...

— Мирхәйҙәров ағай, нишләйбеҙ?

— Асабыҙ. һуғышта мин дә бындай хәлдәрҙе күп күрҙем. Күңелдә көйөк булып тик торор юғиһә...

Элекке председателдең әйтеүе «асырға» тигән фекерҙе нығытты, көрәктәр килтерҙеләр, ҡатын-ҡыҙға китеп торорға ҡуштылар ҙа ҡәберҙе аса башланылар.

Ҡәбер тәрән ҡаҙылмаһа ла ләхет еренә еткереп алынғаи булып сыҡты, таҡталары ла яҡшылап йышлап ябылған, о бына ергә үҙе тапшырған Шәңгәрәйҙе күргәс, Вәләүетдин ҡот осмалы итеп аҡырҙы ла телдән ҡалды. Меҫкен Шәңгәрәй тар ғына гүре күпме туларға ирек бирһә, шул тиклем тулаған, йөҙтүбән әйләнеп ятҡан, бармаҡтары ер тырнап йәнгә талашыуҙан ҡанап, тырнаҡтары айырылып бөткән, киң асылған күҙҙәрендә аптырау һәм һыҙланыу ҡатҡан. Әммә ул үлгәйне. Аяҡ-ҡулдары һыуына, ҡата башлаған, йөрәк типмәй, һулыш алғаны һиҙелмәй.

— Эй, егеттәр, — Мирхәйҙәровтың йән асыуы менән ҡарашын мәйеттән алып Вәләүетдингә күсереүе булды, тегеһе ярһыны ла китте:

— Нимә Вәләүетдин! Хәҙер Вәләү ғәйепте! һин үҙең ништәр инең, э?! Мулла саҡыртыр, ясин сығартыр инеңме? Муллаһы бармы эле? Уларҙы бит һеҙ бөтөрҙөгөҙ! Әҙәмде үлеү менән тәрбиәләмәйенсә ҡәбергә апарып тығырға беҙ кемдән өйрәндек? Һеҙҙән!

— Туҡта, Вәләүетдин, ҡыҙма, — Хашим уны еңенән тартты. — Бет асыуы һеркәгә тип, замана асыуын бер Азат

гайҙан алмайыҡ әле. Кеше йыйырға, әҙәмсә йыуҙырып, Гврбиәләтеп алып китергә була ине бит...

- Ана ята бит: йыуығыҙ, тәрбиәләгеҙ! — Ошоно әйткәс, Воләүетдин, ҡулдарын ел тирмәне кеүек һелтәп, аҫҡа, ауылға ЩраЙ атланы.

Уцарсы егеүле ат килтерҙеләр, Шәңгәрәйҙең мәйетен Таһы йортона алып барҙылар, йәштәр ситкәрәк киткәс, Мирхәйҙәров еңдәрен һыҙғанды:

Әйҙәгеҙ, тағы кем йыуа?

()лоларҙан бүтәнсә кеше юҡ икәнен күргәс, Хашим менән

• вйфулла партизан мәйет эргәһенә яҡынланы.

Әйҙә, команда бир, Хашим, — тине Мирхәйҙәров Кнломһөрэп, — һин бит баҡшы Барсынбикә кейәүе.

\;ниим быға асыуланманы, бары:

Мин баҡшы кейәүе булһам, һин, ағай, үҙең мулла ı ıı ıнеһеп, — тип Мирхәйҙәровтың сығышына төрттөрҙө.

Ярай, егеттәр, — Сәйфулла партизан тамаҡ ҡырып, • ı ııı мпкә үҙенең әҙерлеген белдерҙе, — үткән эштән төш м ппәндәй... Ағай-эне талаша, атка менһә яраша... Швцырой ҡустыны арыу итеп тәрбиәләп урын-еренә ııı ип.шимрайыҡ. Эйе.

Мәйетте йыуып, кәфенгә төрөп, йәнә зыяратҡа .... ергәнсе башҡалар бағаналар, кәртәләргә һайғауҙар ірләгән булып сыҡты. Килеп тыуған уңайһыҙ хәлдә һәр үҙен юйепле һанағандай, аҙаҡ ошо ғәйебен юйырлыҡ ı сыҡҡанға — ерләшеүҙә ҡатнашырға әмәле сыҡҡанға — иғандай.

Халыҡ гаралышһа ла Мирхәйҙәров ашыҡманы. Нимәлер ишләнеп ботмәгән, тамамланмаған кеүек. Ер ҡуйынында аҡ 1'сирокко уранып, йыуғандан һуң бала кеүек таҙарынып ....ш сабый күңелле Шәңгәрәй унан ниҙер өмөт иткәндәй, ııı ıаи. Ҡолағына уның шәкерт сағында хәҙрәттән гкәндәре салынғандай: «Йыназа намаҙының шарттары I ı намаҙҙарҙыҡы кеүек. Уның өсөн мәйеттең йыуылған ıвıуы I ына шарт...»

ı)пк) кои һәммәбеҙгә килэсәк.

ы штка һиҫкәнеп, Мирхәйҙәров ултырған еренән ıІІ н.пщ башын күтәрҙе:

I. ıı Сойфулла ҡорҙаш...

— Белһәң, ней, уҡы. Кеше мал түгел бит. Мин иртәрәк китһәм, һин, ней, ясин сығырһың инде, Азат дуҫ... һии алдараҡ юлланһаң, — ул тамаҡ ҡырҙы. — Мин...

— Уҡый беләһең әллә?

— Әҙерәк... һуң, мәҙрәсәгә икэү бергә йөрөнөк, шәй...

Мирхәйҙәров башта ижектәрҙе көйләп һуҙырға оялғандай итте, аҙаҡ тигеҙ юлға төшөп алған ат шикелле, шып-шыма алып китте: «Алла-һүммә-ғфир лихәйййинәә үә мәйййитинәә»...

Дүртенсе бүлек

Октябрь байрамы уңайы менэн районды мәҙәниәт һарайында уҡыясаҡ докладын ҡарап сығырға була, Ҡыҙрасов киске аштан һуң йэнэ кабинетына күтәрелде. Көндөҙ ығы-зығы, мәшәкәт. Докладты ҡарамайынса ла булмай: төрлө өлөшөн төрлө кеше яҙған. Өсөнсө бүлеге өсөн ул хәүефләнмәй, уны Ғәлимә Минһажева тырыштырған. Әлбиттә, уның грамотаһы самалы, ләкин идеология бүлегс мөдире башлы егет. Елдең ҡасан, ҡайһы яҡҡа табан иҫкәнеп бик һиҙгер тойомлай. Ә Ғәлимә, оҫта дирижер кеүек, береһеп дэ иғтибарҙан ситтә ҡалдырмай.

Докладтың икенсе өлөшө борсой уны. Икенсе секретарҙс баш ҡаланан ебәрҙеләр. Ауыл хужалығы министрлығында эшләгән эшләүгә, ләкин белгес булараҡ шыйыҡ күрено. Атаһы профессор, әсэһе — партия хеҙмәткәре. Ҡыҫҡаһы, үҙ көсө менән уҡып күтәрелгән егет түгел. Етмэһә, докладтыц инеш өлөшөн яҙыуҙы ла уға тапшырғандар. Хәйер, белмәҫһең, уҡымышлылар ғаиләһендә үҫкәс, сәйәси яҡтап грамоталы булыуы ла ихтимал. Улар бит, беҙҙең шикелле, кистәрен вагон бушатып уҡымаған...

Докладтың тәүге өлөшө, былай, шыма ғына башланған. 60-сы йылдар уртаһында партияның XXII съезы ҡабул итком программа хаҡында һүҙ йөрөткән. Ил менән идара итеү өсөн яңы идея — теоретик нигеҙ — кәрәк булыуы көн кеүек асыҡ. Хәҙер, 60-сы йылдар аҙағында, Брежнев бөтә сығыштарында ла, совет халҡының бөтә үткән тарихи юлында төп уңышы булып үҫешкән социалистик йәмғиәт төҙөү булды, тип билдәләй. Йәш секретарь, Әхмәҙиев, быны бик яҡшы тойомлап, дәлиллэп, ышаныслы тасуирлаған. «Эйе, — тигэп

ул, хәҙерге идеология Сталиндың 1936 йылдағы СССР-ҙа социализмдың нигеҙе ҡоролдо тигэн һығымтаһын инҡар итмәй, ләкин вәғәҙә ителгән коммунистик йәмғиәт төҙөү перспективаһын билдәһеҙ срокка алғараҡ этәрә». Әлбиттә, расов аңлауынса, үҫешкән социалистик йәмғиәт конкурент тауарҙарына үҫә барған талапты иҫкә алырға тейеш ине. Талаптың ысынбарлыҡта етештергәнгә ҡарағанда күпкә юғарыраҡ булыуы ниңәлер бер кемде лә хафаға һалмай. иск, алып-һатарлыҡ кеүек насар ғәҙәттәр сәскә атыуы ла бер кемгә лэ сер түгел. Халыҡты хәҙер элекке кеүек «хеҙмәт Копо»но алдатып эшләтеп тә булмай. Ҡурҡытырға гулагтар юҡ. Ьына ошондай шарттарҙа етэксе булып эшләп ҡара! Хйлыҡтың эсеп юҡҡа сыҡканын күрһә лә, был хәлде бер кем Суктата алмай: бөтә табыш — араҡы, шарап һатыуҙан. Унан кжән кешегә ике донъя — бер мөрйә. Өмәләрҙэ араҡы жереүҙе ул үҙе лә хуплай. Эсермәй ҡарағайны — эшкә бер м ыҡмай.

Әхмәҙиев докладта был «осло мөйөш»тәрҙе лә ярайһы шымл урап үткән. Күптән түгел генә «сталинщина» исемен сойәси репрессиялар телгә алынмаған. Кәрәге лә юҡ. Ми генә тимә, Брежнев идеологияһы шул уҡ «сталинщина»нан үҫеп сыҡты. Илағыһы килгән бала атаһының һаҡалы менэн уйнар, ти. Уның ҡарауы, әлеңге и»һ.ни стэкселекҡә, атап әйткәндә, Брежневтың үҙенә, мул маҡтау яуҙырылған. Доклад «уның аҡыллы етэкселек лрҡаһында», «еңеүле аҙымдар», «хеҙмәт вахтаһына ....., «әкиәттәге батыр кеүек ай үҫәһен көн үҫеп» кеүек һүҙәр менэн сыбарланған.

Докладтың тәүге өлөшөн уҡыуҙан күңеле күтэрелгән расов, сейфын асып, коньяк уртланы. Икенсе секретарҙе Нфоиои сбәреп, бәлки, яңылышмағандарҙыр ҙа. Шыма яҙған. рһсң, ғүмере буйы баш күтәрмәй доклад яҙып ҡына рган. Теге «Алға»ның председателен, Шәйхетдиновты, белмәйем, нисек яҙған булыр ине икән. Доклад яҙыу — (кчтереү түгел... Шул саҡ уның күҙе уңыш йыйыуҙы хужалыҡтың нисек тамамлауы хаҡында яҙылған биткә ....«Алға» колхозы бөртөклөләрҙән районда иң юғары йыйып алһа ла, малсылыҡта эштәр бик шәптән түгел. тән, унда яһалма тороҡтороу эше һүлпән бара. Сентябрь

айында эле унда бер көтөү — меңләгән баш волох тороҡторолмағайны», тиелгэйне унда...

Ҡыҙрасов аптырай төштө: Саяф Шәйхетдинов, белеме буйынса зоотехник булараҡ, бындай эштәрҙе һис кисектермэй торғайны. Хаҡһыҙ ғәйеп ташламай микән уға Әхмәҙиев?

Ҡыҙрасов «Алға»ның телефон номерын йыйҙы.

— Иҫәнлекме-һаулыҡмы, баҫыу батыры? Районда иң ҙур уңыш беҙҙә тип, бик эреләнеп китмәнеңме?

— Юҡсы... Вапшы-то, эрелэнергә лә була ла бит...

— Ярай, ярай... Беҙҙең эштә бит бер йыл тартай һимеҙ булһа, икенсе йылына бүҙәнә һимеҙ, так что...

— Аңлап торам...

— Яратам аңлы хужаларҙы. Бөтә председателдәр ҙә һинең кеүек...

— Нимә тип эрлэргэ булғайның?

— Ә ниңә... әрләргә?

— Маҡтай башланың бит!

— Ха-ха-ха! — Ҡыҙрасов креслоһына саңҡайып, боттарын айыра биреп ултырған хәлдә рәхәтләнеп көлөп алды. — Ну этһең, әй! Әллә ҡайҙан һиҙеп тораһың! Ер аҫтында йылан көйшәгәнде беләһең...

— Белмәҫкә... Тәүге йыл эшлэмэйем бит председатель булып...

— Ю-у-ук, әрләмәйем. Бөтэ күрһәткестәр буйынса иц алда барған хужалыҡ етэксеһен әрләргә... Етмәһә, байрам алдынан... Юҡ, юҡ. Тик бынау... ул ниндәй тороҡторолмаған мең баш бэрән хаҡында һүҙ бара ул? Хатта... докладка килеп ингән был хәл.

— Әй әттәгенәһе... Үткәндә яңы икенсе секретарь, кем эле, Әхмәҙиев, ҡаңғырткайны. Күп булһа, шул яҙғандыр...

— Ну-ну...

— һуң, әйттем дә инде: былар волох тинем. Волохты нисек тороҡтораһың?

— Бәй... — Ҡыҙрасов урынында борғаланды. — Ваҡыты етмәгән әле, тип аңлатманыңмы ни?

— Ваҡыты? Фу, ғлки! — Сымдың теге яғында тоҙло-боросло һүгенеү ишетелде. — Уларҙың бер ҡасан да ваҡыты етмәйәсәк!

— Как етмэйәсәк?!

Ҡоҙай ҡушмаған — шуға! Тәкәне бәрәслэтеп буламы

Черт... — Ҡыҙрасов асыу менэн трубкаһын бәрҙе лә, Әхмәҙиевтың өйөнә шылтырата башланы. — һин нимә унда бәрҙе тороҡторорға йөрөйһөң? Ҡасан, имеш, ҡайҙа, и! Докладты алдан укымаһам, бөтә республикаға анекдот ипсң бит! Ал һүҙлек, ҡара! Ярай, мин электрик, һәм дә биғәйбә! һин бит ауыл хужалығы институтын ... белгес! Ауыл хужалығы өсөн яуап биргән хужа! Колһсҙләнгән, оятынан боростай ҡыҙарған Ҡыҙрасов, ... тмәҫтән, докладын атып бәрҙе.

Ҡыҙрасов менән һөйләшкәндән һуң Саяф кабинеты и м шағыр-шоғор килтереп аллы-артлы йөрөнө. Бына ... куялар эш башына! Бына кемдәрҙе үрләтәләр! Ә п. Шойхетдинов, баш ҡалкытыр әмәлең юҡ. Иҫәр! ... ышанды! Кэнтэй... Эш күрһэтэм, районда беренсе пкснсе секретарь булып алһам, бер кем дэ уға «Үҙе ... алманы!» тип әйтерлек булмаһын, тип тырышты. Шул ... бөгөн орлоҡ та һалып ҡалдыра алманы. Күпме имр — шунсаны ҡырып-һепереп дәүләткә оҙатты. ... ныларға таратырға ла ҡалманы. Башҡа хужалыҡ >ре, тишек кәмэгә ултырмаҫ өсөн, уңышты кәметеп ... с, яҙғылығын ни сэсерен алдан ҡайғыртты. Минең ... калған кеше теләһә ни эшләһен, тип уйлағайны Саяф. ... үҙе ҡалды. Кешегә соҡор ҡаҙһаң, тәрән ҡаҙма — үҙең ... һөң, ти торғайны ҡатыны.

Нәгимәһен иҫкә алыу уны һүрелдерә бирҙе. Тере сағында ... аманы ахыры уны Саяф, хәҙер иҫенә төшөрә лә бит — ... I шоһә, балалар... Тылы нык булғанға ғына эше алға ... уның. Һыбайлының күңеле төшөнкө булһа, аты ... нулыр, тигәндәй, Саяф та үҙенән дан тигән ҡоштоң ... андан-алыҫая барыуын тоя. Яҙ күрһэтэсәк уның ... хужа икәнен. Әлегә Әптеләхәттең тәжрибә ... к.‖ц.|нан алған арышы менән бойҙайы ғына ята. Их! ... ирҙы ишэйткәндә! Сабаҡлы председателе шул ... нма алмашҡа өр-яңы «Волга»һын бирмәксе. Башы

эшләй ҡартластың, әммә Саяфтың да кәлләһе балсыҡтап әүәләнмәгән.

Баҫҡыста еңел, ләкин өҙә баҫҡан аяҡ тауыштарын ишетсп, Саяф кәүҙәһен турайтты: Мәҙинә генә шулай атлай. Тик... ул Саяфтан ҡасҡан кеүек йөрөй, ҡаршыһына тура килһл, ҡараштары менән Саяфты боҙло-ямғырлы ырашҡыпл сыландыра. Өшәндерә, елегенә үткән һыуыҡтан ҡалтырарға мәжбүр итә был ҡараштар.

— Мөмкинме? — Ишек асылды. Эйе, ул. Саяф яңылышмаған. Киң асылған ҡыяраҡ ҙур күҙҙәренд.1 ҡырҡыулыҡ, рауза гөлө таждарын хәтерләтеп бүртеп торған илерткес ирендәрендә ҡатын-ҡыҙҙарға хас булмаған ҡоролоҡ.

— Ин, Мәҙинә...

— Эш сәғәте үтһә лә, — ул оҙон керпектәренә эленгои ямғыр ҡатыш ҡар тамсыларын бармаҡтарының осо менән һыпырып алды. — Көндөҙ бушап булманы.

— һиңә ҡасан да мөмкин. Һинең өсөн эш сәғәте юҡ, Мәҙинәкәй. — Саяф үҙенең ҡолаҡтарына тиклем ҡыҙарыуыи тойҙо, әммә Мәҙинә йылмайманы, ҡарашын ябалаҡ ҡар шаршауы ҡаплаған тәҙрәгә төбәне. Үҙенең урынһыҙ шаяртыуынан баҙай төшкән Саяф әйткәненә төҙәтмл индерергә ашыҡты. — Ике толдоң уртаға һалып һөйләшср һүҙҙәре юҡ түгелдер, тием, Мәҙинә.

— Юҡ түгелдер, — Мәҙинә Саяф ҡаршыһындағы ултырғыска ултырҙы. — Миңә элегерәк килергә булған.

— Үҙең бит... ҡасып тик йөрөйһөң. — Саяф бөтә кәүҙәһе менән алғараҡ эйелде. — Был һөйләшеүҙе мин әллә ҡасандаи көтәм.

— Рәхмәт. — Мәҙинә ҡапыл күҙҙәрен күтәреп ҡәтғилск тулы ҡарашын Саяфка төбәне. — Әптеләхәт сығарған арыш менән бойҙай ни хәлдә?

— Ә-ә-ә... Шулмы ни әйтер һүҙең? — Саяф ауыҙыпап имсәген тартып алыуҙан ымһынған бала төҫлө йөҙөн һытты, кәүҙәһен кире артка саңҡайтты. — Бына нимә килтерглн һине миңә! Уларға ни булһын! Улар ни, келәттә.

— Рәхмәт! — Мәҙинәнең хәүеф тулы күҙҙәренең боҙо ирегәндәй булды. — Юғиһә, халыҡ төрлөһөн һөйләй.

— Кеше ни... һөйләр ул. Кеше һүҙенә ышанһаң...

Ғәйбәт артынан йөрөй торған ғәҙәтем юҡ, Саяф
I ...ловичь. Беләһегеҙ. Тик бында... иремдең ғүмерлек эше,
...нышы. табышы. Үҙе булмағас, минән башҡа кем
...һын?

Үлюн кешене яҡланың ни ҙә, яҡламаның ни...

...ерэк мин дә шулай уйлай инем...

Хәҙер?

Хәҙер башҡаса. Терелэр үҙҙәре өсөн үҙҙәре көрэшә ала, киткәндәргә кәрәгерәк. һеҙ үҙегеҙ ҙә, Саяф ...шович, асылда мин уйлаған кеүек уйлайһығыҙ. hcпco булһа, үлгән ҡатынығыҙ үсен бер ғәйепһеҙ ...ыҡтан алмаған булыр инегеҙ.

Моҙинә! — Саяф үҙенең председатель креслоһынан ...реп торғанын һиҙмәй ҙә ҡалды. — Мин ултыртманым щдс! «Дело»ны мин ҡуҙғатманым, мин бары тик шаһит ...сифатында ғына ҡатнаштым судта! һиңә ҡарата ...исәбәтемде беләһең, Мәҙинә!

Хушығыҙ.

< лифтың һуңғы һүҙҙәре Мәҙинә артынса ябылған ишеккә ...ыҡты.

Моҙинә...

... арала өҙҙөрөп-өҙҙөрөп телефон шылтыраны.

)йе, Ғәлимә...

Нимә тауышындың рәте юҡ? Ҡырҡ саҡрымға марафон ...үгергән кеүек тын алаһың?

Үлмәгәнгә рәхмәт эйт.

)й, бахырҡайым. Йә килеп сыҡмайһың...

Ни йомош?

Йомош шул: байрам концертының программаһын
I ... ултырам да... һеҙҙән ике номер икән. «Әбей батша»нды
...м килтермә! Етте уға! Йәштәрҙе сығар.

Көнлэшәһең?

Минме? Мәҙинәнэнме?

Һин. Мәҙинәнән.

Уф, исмаһам, башҡа берәүҙе әйт...

Йә, ярай. Был мәсьәлә менән партком шөғөлләнә.

Парткомындың һинең ауыҙына ҡарап торғанын юйсмдер. Ҡара әле...

(ляф трубканы һалды. Ғәлимәнең араларында бер ни ...ағандай һөйләшеүе һарыуын ҡайнатты. Саяф унын

ҡушыуы буйынса муйындан гонаһҡа батып ултыра. Хәленән килмәгәс, вәғәҙә итмәҫ ине! Хәйер... һәр саҡ Сәйфҡа оторо сығыш яһаған, пландарын шик аҫтына алып, халыҡ алдында абруйын төшөргән Әптеләхәт баҫты күҙ алдына. Ахыры, Сәйфтың һуңғы аҙымға мәрәжәғәт итергә мәжбүр булыуында бер Ғәлимә генә лә сәбәпсе түгелдер: Әптеләхәт күптән уның тамағына кипсәлгән һөйәк ине бит. Ғәлимә ваҡиғаларҙы тиҙләтте, ашыҡтырҙы. Етмәһә, Нәғимә вафаты. Әйе, әйе, ул да сәбәп булды. Мәҙинәне үҙенеке итергә ашыҡты Сәйф! Ә ул... Ана тағы бөгөн аша-тоша һөйләшеп сығып китте. Тапҡан яҡлар кешене! Етмәһә, Барсынбикәне килтерси ҡыҫтырҙы. Әйтерһең, уны хөкөмгә Сәйф тарттырған! Юҡ! Был ҡатындың ғорурлығын тиҙ арала һындырмаһа, унан ҡолаҡ ҡағасаҡ. Тимерҙе ҡыҙыуында һуҡҡан яҡшы. Мәҙинәнең ирен юғалтыу ҡайғыһынан аңҡы-тиңке ҡаңғырып йөрөгән мәле. Ҡатын-ҡыҙ ҡайғынан бөгөлгәндә генә йомшара. Мәлен үткәреп ебәрҙеңме, тыу бейәгә әйләнә — бар, йүгән кейҙереп ҡара! Мәҙинәне күндереү бер үҙенең генә хәленән килмәҫ төҫлө. Димсе кәрәк. Мәҙинә ихтирам иткән кеше булырға тейеш ул. Хашим! Бына кем. Ул эш сығара алмаһа, Мирхәйҙәров ҡартҡа барып ҡарар. Ҡарт был һылыу ҡатынды ҡыҙы кеүек яҡын күрә ине, шикелле. Гел маҡтаны уны, гел һоҡланды. Эх! Был юлы яңылышмаҫҡа ине Сәйфҡа! Өйләнсү уйын эш түгел. Теге саҡ, тәү тапҡыр өйләнгәнендә, йәш булды. Аңын-тоңон белмәйерәк ҡалды. Нәғимә егетенә үс итеп шул аҙымды яһай тигән уй башына ла инмәне. Баҡһаң, ана нисек килеп сыҡты. Бер бисәнең хәйләһе ун дөйәгә йөк булыр, тип халыҡ белмәй әйтмәгәндер. Халыҡ тигәс... Өләсәһе, мәрхүмкәй, аҡыллы, донъя күргән ҡарсыҡ ине. Бер саҡ шулай түшәк тартып ауырып ятҡан өләсәһенән Сәйф:

— Өләс, нисек итеп тормошта хаталанмай йәшәргә икән ул? — тип һорай ҡуйҙы. Уйы — йәшәп тәжрибә туплағаи ҡарсыҡтан бөтә ғүмеренә етерлек аҡыл алып ҡалыу.

— Бәндә хаталанмай булмай, — тине өләсәһе, тынын үрә-үрә алып. — Сабыйҙар, ана, көнөнә әллә нисә хаталана. Хаталаныуҙан ҡурҡмағанға күрә лә улар йәшәргә өйрәнә, аҡыл йыя. Тик һин бер үк хатаны ике-өс ҡабатлауҙан ҡурҡ.

Ғәлимәгә өйләнеү, өләсәһе әйткәнсә, бер үк хатаны икенсегә ҡабатлау булыр ине. Яман ағасҡа аҫылынғансы, яҡшы ағас үҙендә баҫһын, тиер ине өләсәһе йәнә. Әйе, әйе!

...ә ул аҫылынырға ла, унан баҫылырға ла риза. Тик илкмаһын. Сәйф ярты юлдан боролоп өйрәнмәгән, уңһа ... ла, маҡсатына табан барасаҡ.

< ... уйҙар менән ул, машинаһына ултырып тормаҫтан, ... Хашим ҡарт йәшәгән яҡҡа атланы.

Мәҙинәнең үҙҙәренә йәшәргә саҡырыуына Рауза нимә тип онрергә лә белмәне. Беренсенән, ул шыпа яңғыҙы түгел Хөсәйене бар. «Пожарка»һынан ҡайтмаһа ла, Рауза ...ер уның өҫтөн ҡарай, тамағына бешерә, мунса ла яғып ...рә. Икенсенән, заманында, әллә Хоҙайҙың ҡушыуы, әллә ... ғандың ҡотортоуы буйынса, Рауза Мәҙинәнең олатаһы ...ғатҡа әүрәп алды. Дөрөҫ, ул саҡта Сибәғәттең ...инәнең олатаһы икәнен берәү ҙә, шул иҫәптән Рауза ла, ... Мәҙинә үҙе лә белмәне. Барыбер әллә нисек. Телсәр ... па, Рауза оятын юйған эҙәм түгел дә инде! Ошоларҙы ...л, Рауза Мәҙинә өйөнә ике аяғының береһен баҫмаҫтай ... Ә инде икенсе яҡтан, Рауза теләйме-юҡмы, үҙенең ...ыуын ауырлыҡ менән булһа ла танырға мәжбүр. Бер Ондом һыуҙы һыңар ҡулы менән генә күтәреп йөрөткән кеше мис ... манында, хәҙер шуның бер күнәген дә ҡойонан әллә ... ултыртып алып ҡайта. Шәңгәрәй үлгәс, Ишмәмәт ... дә биҙҙе — күңеле тартмай. Үҙ өйө иҫкерҙе, Раузаның ксүек салшайып ергә ығышты. Хәҙер ул Әптеләхәт ...ратория урынына тотонған Маһинур донъяһында йәшәй. ...ләхәт ултыртҡан емештәрҙе йыйып, төйнәп, ҡумталарға ...барҙағы ише тултырып ҡуйҙы. Хашим ауырлыҡтарын п, орлоҡтарын һанап яҙып сыҡҡан булды. Артабан ...ергә лә белмәнеләр — әлеге наҙанлыҡ. Бына ҡасан ... Рауза үҙенең уҡымағанына! Әптеләхәт барҙа бөтәһе лә ...м, аңлайышлы кеүек ине, ул киткәйне — бөтәһе лә ...шотолдо. Ул Хоҙай, була торған булһа, ни тип Әптеләхәттең, ... иң кәрәкле кешенең, йәнен ҡыйған булды инде? Уның ...ына Раузаның ғына йәнен алһа, бер Хөсәйене илар ине, ш. Ә былай бит... күпме эше ҡалды, йәп-йәш, һып-һылыу ...һе, улдары, игеҙәк ҡыҙҙары. Э-й-й, ергә лә яҡшы кәрәк, ...ар ...ит. Улай тиһәң, Рауза ла бөтөнләй насар кеше түгел.

Йәш сағында ирҙәр мәсьәләһендә дәртле генә булды инде. Ләкин дәртте уға Хоҙай биргән, үҙе биргәс, моғайын, ғәйепко һаналмай торғандыр. Уны, дәртте, Рауза кэпрэттән аҡса биреп һатып алманы!

Шулай уйланы Рауза. Орлоҡтар, герҙәр, һыҙмалар, китаптар... Хужаһыҙ әрәм генэ булып ятаһығыҙ бит! Кем килер, тылсым эйәһелэй, кем күҙен алмай төндәр буйы бағыр һеҙгә? Әптеләхәт бит хирург кеүек ине: ҡулында — пинцет, скальпель. Уларҙы спиртҡа тығып тотто, саң ҡундырманы. Рауза ла бында гел аҡ халат кейеп инде. Йэ Шәнгәрәйе йәшэмәне. Йэшәрлеге бар ине әле, анау оңҡот Ғәләүетдин генә етте башына! Аҡтығын эскере, шул ғына мәлһеҙ ҡәберго апарып тыҡты байғошто. Эскэн кеше башта оятын эсә, тигэндәре шул ахыры. Ошо тиклем яңылышыуҙан һуң әҙәмдең күҙенә нисек ҡарап йэшәр икэн инде ул бәндә?!

Уйҙарының осона сыға алмаған Рауза һүнеп барған усаҡҡа йәнә утын ташланы. Соланда аяҡ тауышы ишетелгэс, яулығын рәтлэштерҙе, һыҙлаған тубыҡтарын йылытырға була асҡан итэген төшөрҙө.

— Хашим?!

— Хашим түгел әле был. Мөмкинме? — Ишектән инеи килгән Саяфты күргәс, Рауза баҙай төштө, унын ҡаушағанын күреп, тегеһе тынысландырырға ашыҡты. — Ултыр, ҡуҙғалма, миңэ Хашим ошонда тигәйнеләр.

— Ыста! У нимә эштәп Хашим мында буһын? Унын үз өйө бар, етмэһэ, ҡыҙы рядым. Хашим һине белэн мипс шикелде шыпа яңғыҙ кеше түге у...

— Нигэ... Мин дә шөйлә яңғыҙ кеше түгел — өй тулы бала.

— Баланың уны ни, берәүһе ни. Күберәк буһа ныҒыраҡ сағa, шу ғына...

— Унһы шулай инде. — Саяф ишек төбөндәге ултырғысҡа ялпашты. — Һин бында күсеп сыҡтыңмы эллэ, Рауза апай?

— Атаҡ! Иҫке ауыҙҙан яңы һүҙ. Минең мынап ҡайтмағанға ни заман?!

— һуң... хәҙер... Әптеләхэт булмағас...

— Әптелэхәт бумаһа, эше бар! Унын эшен таштап ҡайтыу түге, бер сәғәткә айырылырға ла ҡурҡам. Бартийный буғас, Аллаға ышанһаң да ҡыйын, ну Әптелэхәт көн дә килсм эшен тикшереп китә кеүек...

\а-ха-ха! — Саяф асыу ҡатыш шарҡылдап көлдө. — ... яңғыҙың ятһаң, үҙеңә ен эйэләшеп тә ҡуйыр эле! ... күҙеңә күренмэйме?! Ха-ха-ха!

Сысҡанға — үлем, бесәйгэ — көлкө, — тине Рауза, ... ганауын яулыҡ осо менән һөртөштөрөп. — Мына мин улһлм, былар кемгә ҡалыр? Исмаһам, Дауыт атаһының юлын ... ярар ине.

Әптеләхәттең иҫәрлеге, ахыры, һиңә лә йоҡҡан, Рауза ...! Ксмгә кәрәге бар был нәмәлэрҙең? Орлоҡтарҙың, герҙэрҙең, китаптарҙың? Бындай селекция эштәре менән ... институттар, ғалимдар шөғөлләнә, белгең килһә!

Унһы шулайҙыр ҙа, укыған кеше һин беләһендер, ... ксм, персиҙэтел. Әммэ ләкин асыштарҙы Әптелэхэт к, үҙең әйтмешләй, иҫәрҙәр яһай! Фанатизмдар!

Фанатизм... — Саяф, эсе дарыу йотҡандай сытырайып, ш.шан торҙо, һүҙҙе икенсегә борорға тырышты. — Нимә, ... Мәҙинәне әйтәм, кейәүгә сыҡмаймы әле? ... ыусылар... күренмәйме?

Мужыт күренәлер ҙә, әммэ лэкин, — Рауза ҡунаҡты мрга була урынынан ҡуҙғалды, — Мәҙинэ икенсегә ... һалыр тип уйҙамайым.

Ә иигә?!

Пигә тип... Ожмах биреп тамуҡ алмаҫ инде аҡылды ...

Лцламанымсы...

Пимәһен андаманың? Мына һин үҙең Нәғимэвдән ... өйҙәнер инеңме? Шуны шикелде инде Мәҙинә лә. ... алыштырырҙай ир бармы донъяла? Мин юҡ тип ...ым!

< ияф, ихатаға сыҡҡас, тигеҙ рәт булып теҙелгән, инде ҡар ... башлаған түтэлдәргә, яланғасланып ҡалған емеш шрмиа күҙ һалды. Эйе-е... Ул ғына Әптеләхэттән ..., гип йөрөй икэн. Баҡһаң, барыһы ла, хатта бынау ... Рауза ла, Мэҙинә лә унын рухына хеҙмэт итә. ... ас, Хашимды күреп тороуҙың кәрәге булырмы? |. Мәзинәгә туп-тура үҙе барырға тейеш! Ни тиһәң дә ... ул хужа! Саямын тип, тулап эллә ҡайҙа бара алмаҫ ... атты ауыҙлыҡ өйрәтә. Ә инде Әптелэхэттең рухын ... кәрәк. Уны хәтерләткән бер нәмә ҡалырға тейеш ... ылда!

Мәзинә хәҙер кистәрен клубҡа сығып йөрөй алмап, ҡыҙҙарын үҙҙәрен генә ҡалдырып йөрөгөһө килмәй. Йырларға йөрөгән ҡатындар хәҙер унын өйөндә йыйыла. Былай уңайлыраҡ та: ҡатындар ҡул эшен тотоп килә, Мәзинәгә ил, ҡыҙҙарға ла күңелле, улар ҙа ҡулдарына бәйләмдәрен, һырыи яткан нағыштарын ала. Йырға эш, мәрәкә һүҙ ялғана. Ҡайһы саҡ батмус, биҙрә сиртеп бейешеп тә алалар. Мәзинә, күңсле килһә, фортепьянола уйнай, игеҙәктәре әсәһе өйрәткоп көйҙәрҙе уйнап ишеттерә. Әле, районға байрам концерты менән Мәзинәне алып барырға булғастары, ул ансамблон йыйҙы ла тиҙ генә «Ҡуңыр буға» йырын өс тауышҡа һала башланы. Элек хорҙа йөрөгәндәрҙән бер-ике генә кеше ҡалған, күбеһе яңы, йырҙы яҡшылап төшөнмәгәндәр. Иц кыйыны уларҙы Тандыса атлаған урман, тау, ҡаялар янынаи үткәреү, шуны тойорға өйрәтеү.

— Тауышығыҙҙа ҡаяларҙағы яңғыраҡ та, бөркоч саңҡылдауы ла, уратып алған матурлыҡ менән һокланыу ҙа, кырағай йәнлектәрҙән ҡурҡыу ҙа — бөтәһе лә сағылырщ тейеш. Урамға сығып көтөү ҡайтканды ҡаршылағандағы кеүек «һәү-һәү» тип тормағыҙ инде! Һыйыр ҙа, быҙауҙар ҙ| күренмәй. Улар Тандысанан күпкә алға киткән. Бына шул салынырға тейеш тауышығыҙҙа! Һеҙҙең «һәү-һәү» тигәнегеҙ Урал ҡаяларының бер-береһенә сәләм биреүе ксуск яңғыраһын! Ҡапыл ошо тантаналы яңғыраш эсендә — э уны икенсе, өсөнсө тауыштар бирә — ҡәҙимге, ябай бер ҡаг..... тауышы — беренсе тауыш — салынып ҡала: «Ҡуңыр буға, һәү-һәү, һәү, Ҡуңыр буға, һәү-һәү».

Ҡатындар сығып киткәнсе, Мәзинә үҙе ҡара тиргә төштв Ҡыҙҙарының да ауыҙы асыла башланы, эңерҙән йоҡлары яратҡан Көнһылыу ҡолаҡсын мендәргә башын һалып әүен баҙарына китеп тә барған. Ә Күкһылыуы киреһенсә — кистән күпме булһа ла йөрөй, мәгәр иртән ауыр тора.

— Ят, балам, иртәгә байрам түгел.

Хәҙер улар өсәһө бергә урындыҡта йоҡлай. Шулай тынысыраҡ.

— Әсәй, ә нимә эштәп Тандыса һыйырҙары артынаи киткән?

— һыйырҙары ҡайтып киткән.

Ә улар юлда нисек аҙашмаған?

Сөнки һыйырҙың инәһенең инәһе шул юлдан үткән.

Э-й-й! Ҡайһылай ирмәк инде! Әләйһән, мин дә Барсынбикә өләсте эҙләп таба аламмы?

Нисек әйтергә... — Мәзинә ҡыйынһынды: бала бит — ...ләп сығып китмәҫ тимә. — Риүәйәттәрҙе улай туранан-тура ...ларға ярамай, ҡыҙым. Уларҙың һәр береһенә оло, ләкин и.чперен мәғәнә һалынған була. Бына мин әле Барсынбикә ии.койемде әле «өләсэм» тип белмәгән саҡта уҡ уға оҡшаған күп)штәр эшләгәнмен: йырланым, һыбай йөрөнөм, үлән йыйҙым, дауалар яһаным. Һин дә бына Гөлбаныу өләсәйенде күрмәнең, ә төҫ-башың, ҡылыҡ-фиғелең — бөтә уныҡы. |еҙҙең тоҡом мал ярата, ҡулыбыҙҙан мал үрсей — ул сифат ... а... а-бабаларҙан ҡалған беҙгә. Тандыса тыуған ерен гел Ьи ынған, һағышын йырҙарға һалған. Ошо һағыш, моң менән һүырылған унын артынан килгән малының үрсеме лә, һәм \ пар, бер йәйге иртәлә йөрәкһеп уянғандар ҙа, хужабикәләре килгән яҡка ҡайткан да киткәндәр...

Мин дә үҙебеҙҙең һәүкәште бик тә яратам. — I укһылыу эсәһенә тағы ла ныҒыраҡ һыйынды. — Әсәй, Минсн һиңә бик ныҡ оҡшағым килә, бик, бик!

Йоҡла, балам...

Әсәй, ә ул... Ҡуңыр буға юлы... Әле лә бармы?

Бар инде ул... Аҙаҡ Тандыса менән һыйырҙары үткән ш\ ... юлды көньяҡтан килгән сауҙагәрҙәр файҙаланған. Был цстан ҡыйбатлы тире, бал алғандар, ә үҙҙәренән ебәк килтергәндәр. Эҫе яҡтан килгән халыҡ ебәкте «кәнфә» тигәс, ул юл бер осор «Кәнфә юлы» тип тә аталған...

Әсәй, әйтәйемме нимә... Мин дә шул Тандыса кеүек алыҫ-алыҫҡа китермен кеүек...

Бәлки, китерһең...

Кире ҡайта алмай ҡуйһам?

Ҡайтырһың. Тыуған еренде Тандыса кеүек ярат һаң, юл табырһың, йә юл һине үҙе табыр...

Тандыса... аҙашмағанмы?

Аҙашып та киткән, ләкин төшөнкөлөккә бирелмәгән, Икслэнмәгән, ҡурҡмаған. Тырышкан — тапҡан, ташҡа ҡаҙаҡ ... кан, тиҙәр бит.

Эһе...

Мәҙинәнең үҙенең дә күҙе йомола башлағанда, ҡапҡа дөбөрҙәттеләр. Тауышҡа ҡыҙҙары уянып ҡуймаһын тип, Мәҙинә йәһәт кенә тороп тышҡа сыҡты.

— Кем ул?

— Апай! Мин медсестра! Апай!

— Ин, ин, — Мәҙинә ҡапҡаны асты ла өҫтөнә шәл генә ябынған нәҙекәй ҡыҙҙы күреп аптырап ҡалды. — Бәй...

— Апай! Күрше ауылдан килтерҙеләр. Бәпәйләй алмай! Бала ултырышы менән килде тыуымға! Уф, апай!..

Мәҙинәнең хәтерендә бындай күренештәр йөҙҙәрсә! Барсынбикәне кемдәр генә, ҡайҙарға ғына алып китмәне.

— Ә нигә миңә килдең? — Мәҙинә үҙенең ҡатыраҡ ҡағылғанын аңлап тора, был баланың ғәйебе юҡ. Бет асыуы — һеркәгә, тигән кеүек килеп сыҡты.

— Врач ебәрҙе. «Мәҙинәһеҙ килмә» тине!

— Мәҙинәһеҙ... Барсынбикәһеҙ тимәнеме?

— Эй, апай, ул инәй булһа...

Ҡыҙҙарын тыштан йоҙаҡлап, туңғаҡ юл менән Мәҙинә өҫкә атланы. Үҙе бара, үҙе көйәләнә: ярҙам итә алырмы ул ҡатынға? Бындай осраҡты ул ғүмерендә бер генә күрҙе. Бер ваҡыт шулай өләсәһен күрше ауылға ат егеп үҙе алып китте һәм шунда Барсынбикәгә бала ҡабул итергә ярҙам итеп торҙо. Өләсәһе ул саҡта ҡулым һыҙлай тип үҙе тотонманы, барын Мәҙинәгә ҡушты. Һыҙланымы икән Барсынбикәнең ҡулы? Бәлки был унның Мәҙинәне иплән-иплән үҙ һөнәренә өйрәтә башлауы булғандыр? Хәҙер унның янында әйтеп-өйрәтеп торған өләсәһе юҡ. Ҡалтырап төшмәҫме Мәҙинә, баҙамаҫмы? Ул эле бер, әле икенсе ҡулындағы беләҙектәрҙе ҡапшаны. Тынысланғандай булды. Балаһын тыуҙырыуҙан өмөтөн өҙгән, телен тешләп сараһыҙлыҡ солғанышында ҡалған ҡатын янына баҫҡанда ул инде тамам тынысланғайны. Врачҡа ла, уны көтөп торған башҡаларға ла һүҙ ҙә ҡушмаҫтан ҡулдарын йыуҙы. Спирт менән ыуҙы, резина бирсәткәләр һалғайнылар — баш тартты. «Ҡыҙыҡ инде был врачтар, — тип уйланы эсенән, — бөтә тылсым бармаҡ остарында лаһаң, шуны белмәйҙәр микән. Бындай саҡта улар һинән күберәк тоя».

— Ғәфү итегеҙ инде, — тип ҡыҙарып-бүртенде врач. — Мин бит терапевт. Ҡатындарға бында бәпәйләргә рөхсәт итмәйбеҙ ҙә бит, ә улар...

Мәҙинә өндәшмәне. Барыһы ла тынды, ситкәрәк китте. Мәҙинә күңеленән Хоҙайҙан, Барсынбикәнән һәм быуын-быуын ошо эш менән шөғөлләнгән ете быуын әсә-эләренән фатиха һораны. Бала табыусы ҡатынға ҡағылыу менән теге саҡ ултырышы менән килгән сабыйҙы башына йүнәлдергәндәге хәрәкәттәр иҫенә төштө. Әйтерһең дә ул Гүмер буйы тик ошо эште башҡарған!

Бер сәғәт үттеме-юҡмы — бүлмә сабыйҙың тәүге илау тауышы менән тулды. Сабый ғына түгел, врач та, сестралар ҙа санитарка ла илайҙар. Был көндө күреүенә өмөтөн өҙгән ҡатын хәлһеҙ ҡулы менән Мәҙинәнең беләгенә ҡағылды, күгәргән ирендәре ишетелер-ишетелмәҫ: «Рәхмәт...» — тип бышылданы.

Иығылыр сиккә етеп арығанын урамға сыҡҡас ҡына тойҙо Мәҙинә. Һығып алмалы тир күлдәге йоҡа туны эсендә пп.мырлап туңғандай. Бына бит ул: быуын ултырта барһа ла өләсәһе алмаш кейем ала торғайны. Күрәһең, шунһыҙ |улмай. Иртә таңдан эшкә. Нисек кенә тороп китер инде... Ләкин күңеленең ҡайһы ерендәлер рәхәт кинәнес, бәхет тоя Мәҙинә. Ошо саҡлы бәхетте ҡасан кисергәнен, ахыры, хәтерләмәй ҙә...

- Тағы шул ҡарсыҡты һөйрәп килтергәндәр!

Онотолоп йыр тыңлаған Ҡыҙрасов йәнәшәһендә ултырған |СӨНСӨ секретарҙың һүҙенә ирекһеҙҙән ҡолаҡ һалды.

Кемде әйтәһең?

- Ниңә, «Алға»ның солисткаһын күрмәйһеңме?

һы... Бөтә ҡарсыҡтар ҙа бынның эше булһа... — Ҡыҙрасов йәнә йыр эсенә, йыр тыуҙырған мәғрур тәбиғәт, Шра урмандар, күккә ашҡан ҡаялар хозурлығына сумды. Ҡәтәр шәп. Ә солисткаһы... Ҡырҡҡа ла инмәгән был ҡатынды Ролимә ниңә күрә алмай әле? Ахыры, көнләшәләр. Бигерәк Һылыу шул үҙе лә. Килмәгән ере юҡ. Ауыр эш тә, йәш бмшмна төшкән ҡайғылар ҙа һындыра алмай торғандыр йыпдайҙарҙы. Ә тауышы? Ниңә уны Өфөгә сығарманы икән быға са? Хөкүмәт концерттарына алып барып йырлатыр кәрәк ИНС. Ире, Әптеләхәт, тиҫкәре бер бәндә булды инде. Ире

йүнһеҙ булғанға ғына бисәһен йырлатмай, халыҡкн күрһәтмәй ятыу дөрөҫ түгел инде. Унан һуң, был тиклсм һылыу ҡатын менән ҡушлап «Волга»ла Өфөгә барыи ҡайтыуҙар Ҡыҙрасовтың эсен тишер инеме? Саяфтың да күҙс осло, ҡатыны вафат булды, ошоға ҡармаҡ ташлап булашмап микән ул шаҙра бэрей? Булыр унан. Ысын булһа, уныи Ғәлимә менән мөнәсәбэттәре лэ йылы ғына түгел, ҡайнар уҡ булған, тигән һүҙҙәр йөрөй.

Халыҡ йырға шаулап ҡул сапты. Ҡыҙрасов, Ғәлимәнсң нервыһын ҡытыҡлап алмаҡ булып, уның ҡолағына эйелде:

— Бисэң булғас, бына шундай булһын ине ул!

— Күршенең тауығы ҡаҙҙай, бисәһе ҡыҙҙай, — булды яуап. Һүҙгә кеше кеҫәһенә инә торғандарҙан түгел индс Ғәлимә. Ул да бит Тирәкле ҡыҙы. Ни сыҡһа Тирәкленән сыға, тиҙәр районда.

Концерттың бөткәнен көтөп тормай, тэнәфес ваҡытында уҡ ҡайтырға йыйынды Ҡыҙрасов.

— Бәй, бэй, — Ғәлимэ уның ҡаршыһында күбэләктэй өйөрөлдө. — Был мәлдә хатта бала-саға ла йоҡларға ятмай! Ней... Сәмэрә, бергә килһәгеҙ-фэлэн тип, өҫтэл әҙерлоп ҡалғайны.

— Бишбармаҡмы? — Ҡыҙрасов көлөмһөрәне. — Был юлы бишбармаҡты үҙегеҙ генэ ашағыҙ инде. Мин таң һарыһынан Өфөгә сығам.

Машинаһын ҡайтарғанлыҡтан, Ҡыҙрасов бушап ҡалған көҙгө шыҡһыҙ урам буйлап өйөнә атланы. Әсе ел өтөп алып барғандай булғас, пальтоһының яғаһын күтэрҙе, эйэк аҫтыи; шарфын ҡымтыны. Өфөгә барыр алдынан фекер туплап бср янғыҙы йөрөгәһә килэ лэ бит — көҙгә ел үҙэккә үтэ. Эйе, китергә ҡарар итте бынан Ҡыҙрасов. Ауыл хужалығы барыбер ул етәкләй торған эш түгел — шуны төшөндө. Камалетдиновтың тырышлығы менән ҡоршалған иҡтисадтың, үҙе булмағас, бик тиҙ тарҡалыуы бар. Унан инде Ҡыҙрасовтың да абруйы төшәсәк. Ярай, ата-әсәһенец дуҫтары бар, улар фатихаһынан ташламай. Ҙур бер заводҡа директор итеп ҡуймаҡсылар уны. Күңеленэн ҡуш ҡуллап риза булһа ла, уйлап ҡарармын, тигән булды Ҡыҙрасов. Әлегә ул хаҡта бында бер кем дә белмәй. Белһә, иң алда Ғәлимә, мине лэ ал үҙең менән, тип һикереп төшөр ине. Етмэһә...

Кипыл райком алдындағы өйэңке эргәһенэн бер һын шды ла туп-тура Ҡыҙрасовҡа табан атланы:

Ҡыҙрасов ағай!

Өллә инде... Сәмәрә?! һин нишлэп йөрөйһөң бында?

Лкай! Өйҙә һөйләшеп булмай... Мин... мин ауырлы ш ай!

Бына һиңә... Иҫке ауыҙҙан яңы һүҙ тигәндэй... — рисов папирос ҡабыҙҙы, ел тирбәткән ыңғайға аҫылмалы иочканан төшкән яҡтылыҡ Сәмәрәнең йөҙөн берсә яҡты, ш рі л ҡараңғы шәүлә менән ҡаплай. — Яңылышмайһыңмы?

Әсэйең...

Ул белмәй, тик... теге саҡ... галстугығыҙ беҙҙә тороп ш.

Черт... Бер кем белмәһен — ишетһен ҡолағың!

Ярай.

Хәҙер үк ҡайт. Берәй аҙнанан... үҙем табырмын. Айланыңмы?!

Кыҙыҡай, куртка көлэпәрәһенэ башын сумдырып, эре-эре ı іап китеп барҙы. Уның артынан бер талай ҡарап торғас, расов тартып бөтмәгән папиросын ҡарлы-тупраҡлы ı ш и к к а быраҡтырҙы ла, ни ҙә булһа уйлауҙан туҡтаған, ш ҡалған ҡарашын төпсөктән йән-яҡҡа сәсрәгән ндарға төбәне.

I з шмэ байрам тантанаһынан төшөнкө кәйеф менән I иттты. Күңеленэн Ҡыҙрасов менэн булған һөйлэшеүҙе ги кайта үткәрҙе. «Ирҙәр ҡатындары йә һөйәркэлэре ш іа икенсе бер ҡатынды маҡтай башлаһа — бәлә көт», — торғайны Надежда Фроловна. Бэлки ул мәрйә яңылыша ....ф? Был хэлдең икенсе төрлө булыуы ла мөмкин бит млҫолэн, Ғәлимә тарафынан иғтибар етешмәү, йә юрсп, хис-тойғоларҙы ҡыҙҙырып алыу телэге. Эйе, щ шулай булыуы ла ихтимал. Ғәлимә һуңғы осорҙа . . . . буйлап күп сапты, мәктәп, мәҙәниәт к ҫениеларының ҡышҡылыҡҡа әҙерлэнешен тикшерҙе. һә, коуҙәһенә һылашып торған көрэн-ҡыҙыл күлдәк

кейеп сәхнәгә сығып, бөтә халыҡты аяғүрә баҫмп алҡышларға мәжбүр иткән Мәҙинә китмәй күҙ алдыпкш Ғәлимәнең тырнағына ла тормаҫтай кеше лә, ир затып;ш булған өсөн генә, әллә кем булып ҡылана! Мәҙинәне килтереп йөрөтмә тип әйтелгән көйө, юрый, үҙен икенсе секретарь итергә Ғәлимәнең көсө етмәгәнгә үсләшеп эшләне Саяф быны. Ә Ҡыҙрасовтың йөҙөнә Мәҙинәне күреү менвЯ һунарсы ҡомары сыҡты, э ҡул сапҡанында ул, биллаһи. сәхнәгә осоп ҡунып тегене ҡосаҡларға риза ине! Ғәлимонси саҡырыуынан да баш тартты. Мәҙинә йырлап төшкәндән һуң, әйтерһең, унын иғтибарын биләрҙәй нәмә ҡалманы клубта ашыҡ-бошоҡ кейенеп, машинаһы килгәнен дә көтмәй, өйөнә һыпыртты. Ю-у-уҡ! Ғәлимә тырнағына эләктергәнде улай гиҙ генә ысҡындыра торғандарҙан түгел! Ғәлимә Өфөгә китквЯ саҡтарҙа ла килеп, унын ҡайтканын көтөп ултыра торпш Ҡыҙрасов бит әле ул! Үткәндә лә көтөп ултырған уп Ғәлимәнең ҡайтканын — теге галстук бит күктән төшмәгән Ғәлимәгә генә түгел, был йылдар эсендә Сәмәрәгә лә эҫендә Ҡыҙрасов. Үҙҙәренең балалары булмағанғамылыр, ҡайҙа барһа ла күстәнәс, бүләк алып ҡайтты, ирҙәр иғтибарына өйрәнмәгән, ләкин атай йылыһын көҫәп үҫкән ҡыҙы уға ньЛ эйәләште, һис бер оялыу-тартыныуһыҙ райком секретарының алдына менеп ултырырға ла күп һорамай.

Шулай булды бөгөнгө көнгәсә, тип әйтер ине, һуцгм арала, бигерәк тә йәйҙән бирле, Ҡыҙрасовтың Ғәлимәнен ишеген асыу осрағы һирәгәйгәндән-һирәгәйҙе. Ә бопш килеп... Ғәлимә өйөнә килеп еткәнен аңланы, уйлап килвН кешеһен осратып ҡуймаммы, тип тапана бирҙе. Ҡара төн Бағаналарға эленгән уттар һелкенә. Күҙгә ел эсенеп һыҙғыра, үҙе өҙгөслэп яланғасландырған донъяның шыҡһыҙлығына үкенепме үкенә, үкһепме үкһей...

Өйөнөң ҡотһоҙлоғо аптыратты Ғәлимәне. «Ҡунаҡ алып ҡайтам, бишбармаҡ бешереп, салаттар әҙерләп ҡуй!» —..... киткәйне ул ҡыҙына. Сәмәрә ҡарыулашмай ғын| ризалашҡайны. Ғәлимә кухняға үтте: барыһы үҙ урынында

ахыры, сәй ҙә ҡайнатып эсмәгән — бөтәһе лә һыуыҡ, йәнһеҙ.

>мәрә! — Залға үткәс, Ғәлимә ҡыҙының бөгәрләнеп ш иткәнын күрҙе. — һин нимә? Шыш та, пыш та юҡ. ......андырмай ятасы?! Нигә өндәшмәйһең ул? Теленде I|пи .. ю?!

има ут ҡабыҙҙы, өҫтәлдә боларып яткан ҡағыҙҙарға ..... анализға... Сәмәрәгә... Ул ниндәй... «Беременность и.».

имлпе ниндәйҙер дәһшәтле тулҡын өҫкә сойорғотто, нан гөшә алмай ҙа алмай. «Нимә?!» Әсәһенең йән ынан ҡысҡырып ебәреүенә Сәмәрә һикереп тороп ирҙы

Нимә шулай... Әйтерһең һуялар!

Бы-был н-нимә?! — Ғәлимә баяғы ҡағыҙҙы ҡыҙының ҫтына терәне. — Бы-был... Аң-аңлат...

I гте! Мин һиңә... бесәй балаһы түгел!

I • шмопсң ҡулы ултырғысҡа үрелде:

Кәнтәй! Ауырың... кемдән?! Ә?! — Һуккан һайын ышыҡланып маташты, ана, башынан, танауынан ҡан

Әйт! Кемдән?! Әйт!

I ытыл ҡыҙыҡай турайҙы, ниндәйҙер көс менән әсәһе ултырғысты тартып алды:

Яҡын килмә! Килһәң, үлтерәм!

Сомәрә!!! — Аҡылынан яҙыр сиккә еткән Ғәлимә лноне. — һуҡ! Үлтер! Былай ҙа тереләй һуйҙың! У-м,|... Минең карьера... Кү-күрә алмайым... Исмаһам, \ ғаһы... Кемдән ауырың? Мин уны... Ошо ҡулдарым н үҙем!..

I Иммойем.

Нисск, әйтмәйһең?

нпдсң... атайымдың кем икәнен әйткәнең булдымы? һормиым, иланым, ялбарҙым. «Идеаловна!», имеш! иссм буламы?! Әгәр ҙә ул ысынлап та һинең |ha, нигә уны минән йәшерҙең?!

У Үҙ балаң — үҙеңә яу! — Ғәлимә илағас һүрелә атылыҡ менән ҡыҙынан бер ни әйттерә алмаҫын да (оморә, ярай... Булған эш — булған. Иртәгә үк шдыраһың...

Сәмәрәнең йөҙө мыҫкыллы йылмайыу менән салшайҙы, зәңгәр күҙҙәре осҡон сәсте:

— Мине, күреп тораһың, поликлиникала иҫәпкә алдылар.

— Юҡ! Был мөмкин түгел! Ун бер түгел, утыҙ, ҡырҡ аҙналыҡ булһын — был мөмкин түгел! Үкенерһең! Әлв йәшһең! Онотолор... Ә былай... тыуҙырһаң... ғүмерлек серксү, үҙеңә ғүмерлек мөһөр баҫыу — уйнашсы мөһөрө...

— Миңә... — Сәмәрәнең мыҫкыллы йылмайыуын битарафлыҡ алыштырҙы, — өйрәнергә түгел. Үҙем дә бит... уйнаштан тыуған! Тыума бала!

— Сәмәрә...

— Ҡалдыр мине, — бите-башы ҡанға буялған Сәморо йыуыныу бүлмәһенә инеп биклэнде.

Байрам концертында Мәҙинәне сәхнәлә бом матурлығында күреп йөрәкһегән Саяф теҙгенде ҡыҫҡа тоторға ҡарар итте. Былай ҙа бик оҙаҡ һуҙҙы. Нисәмэ пар күҙ ул кистә Мәҙинәгә төбәлде, нисәмэ ир-егеттең йөрэге шул кистә урынынан ҡуҙғалды. Саяф күҙенең сите менән генв Ҡыҙрасовты ла күҙәтте. Донъяһын оноткайны беренсе секретарь! Ҡайҙа ултырғанын иҫенән сығарғайны. Икенсв секретарь вазифаһын биләү яҙмаһа ла, районда тинв булмаған һылыуҙы үҙенэ бисә итеп аласаҡ Саяф! Күптәр «аһ» итеп ҡалыр. Саяф ғүмер буйы ал бирмәҫкә өйрәнгән. Тормош үҙе өйрәтте уны быға. Малай сағында һары сәстәре, сәсәк йырғыслауҙан шаҙра булып ҡалған йөҙө арҡаһында күи кәмһетеүҙәр кисерҙе ул. Бер саҡ шулай малайҙар, һин бәрей, беҙҙең менән уйнама, тип, силос соҡорона сөрсөтә төрттөлор. Саяф серәшеп-көсәнеп өҫкә менергә, сығырға итә, э өҫтәгеләр ул инде сыҡтым тигәндә, битенә саптыралар Шунда Саяф: «Үҫеп кенә алайым! Ҙур уҡыуҙа уҡып, түра булмаһаммы, бөтәгеҙҙе бер иҙәндән йөрөтмәһәмме, бейетеп тотмаһаммы!» — тип үҙ-үҙенә һүҙ бирҙе. Хәҙер шул үҙен мәсхәрә иткән малайҙарҙың күбеһе уның ҡулы аҫтынад эшләй. Саяф уларҙы аҫтан ҡырҡа, уңайы сыккан һайын үсен алмай ҡалмай. Ә ауыл ерендә, үс алайым тиһәң, сәбәп -

исап сабынлығы ла, бесәне, утыны ла, игене, аты ла, йы. слиаһы ла... Донъя эшен донъялыкта ҡайтарған шы

М.ммогә килгәндә, уны «аҡылһыҙ ҡатын» тип булмай. ип |үюл, ләкин бёр кемде лә сәбәпһеҙ тиргәмәй, асыу шмай. кенә ҡыумай, ғәҙел. Фермала — тәртип. Саяфтыщ Һы,| малайҙарына Мәҙинә кеүек кеше кәрәк тэ. Юғиһә, р оулмаҫас, тдртәнән сыға башланылар. Мәҙинә лэ йәп-пиә прһсҙ ултыра алмаясаҡ. Ул да бит май яғып икмэк ш н ауылда Саяфтан да шәберәк ир бармы? Юҡ. һәм шясаҡ донъя — алпауыттыҡылай, абруй, машина, етеш юш. Иң мөһиме — тол. Мәҙинәнең Әптеләхәт ҡатыны ыу ы гына, балаларында шул дошмандың ҡаны йөрөүе кәйефте ҡыра. Тик... нишләйһең? Кемдең малын кем щ ю, кемдең йәрен кем һөймәй, тиҙәр бит. Үҙе ҡыҙҙары и (аяфҡа күсеп сығыр, ә донъяһын армиянан ҡайтасаҡ ына калдырыр. Тэүәккәлләргә булды Саяф. Ата-әсәһенә аитеп тороу кәрәкмәгәндәй — алып ҡайткас күрерҙәр. лэхәттәй ҙә була алманығыҙ, һеҙҙең укыуығыҙ ҡороһон писо Ьайлап ала белмәнегеҙ», — ти ҙә ултыра торғайны һы Пмдс күрер. Себеште уны көҙ һанайҙар.

Мі ис юн бәлешен алғас, Мәҙинә Көнһылыуға өндэште:

Бар олс олатайыңды саҡыр, бәлеш һыуый тиң.

Иомош-юлға еңел ҡуҙғалыусан Көнһылыуҙың ишектә ы ы гына күренеп ҡалды — осто. Көнһылыу сығып Мәҙинә быялалы ишектең өҫкө өлгөһөнән үрелеп түр караны: Күкһылыу тирәс менән таҫтамал башы сигә, үҙе ы ена пырлай:

Кояш яктыһы төштө кыянға —
Ятырга вакыт, еткән уйынға.
Килен аппағым, балдарға көймә,
Бөтә асыуҙы яулыкка төйнә.
***Беҙҙең** тирмәлә карындык ишек —*
һак менән Суктың бәйетен ишет...

Әсәһенең ҡарашын һиҙҙеме — Күкһылыу ҡапыл туҡтаны:
— Әсәй, ниңә инмәйһең ул?
— Ә һин был бәйетте, — ул инеп, ҡыҙын ҡосағына алды, — ҡайҙан ишеттең?
— Өләсәйҙән... Барсынбикә өләс шулай көйҙәй тирғайны...
— Мин белгәне бөтөнләй башҡа...
— Әсәй... — Күкһылыуҙың күгәрсен күҙҙәре үҫкән болондо хәтерләткән ҡарашы Мәҙинәгә текәлде. — һаҡ менән Суҡ игеҙәк булғанмы ул?
— Бәлки... Ә нигә?
— Былай ғына...
— Әйт, әйт, әйтеп бөтөр, — Мәҙинә ҡыҙының йылҡылдап биленән түбән төшкән толомон ҡулына алды. — һинең бит һорағың килә?
— Эйе. Әсәй, мин Көнһылыу өсөн ҡурҡам.
— Ҡурҡаһың? Нигә?!
— Ул ат менә лә саба! Анау тайҙы ла өйрәтеп булаша... Әллә нисә тапҡыр ат өҫтөнән... осто!
— Тайҙы?!
— Эйе. Уға берәй нәмә булыр ҙа, беҙ инде мәңге-мәңге осраша алмабыҙ һымаҡ, — күңелсәк Күкһылыуҙың күҙҙәренән нағышына йәштәре тамсыланы. — Күптән әйтә алмай йөрөйөм. һиңә әйтһәм, «Ошаҡсы, эсәң һиңә ҡыҙыл ыштан кейҙерер инде!» ти.
— Ә олатайың... беләме был хаҡта?
Күкһылыу, «эйе» тигәнде аңлатып, башын ҡаҡты.
Ул арала ҡапҡа асылып ябылған тауыш ишетелде, Көнһылыуы менән атаһы килмәме тиһә, тәҙрәгә ҡарай-ҡарай Саяф Шәйхетдиновтың инеп килгәнен күрҙе.
— Аһ-аһ!
— Нимә, әсәй?
— Председатель килә. Берәй... — Мәҙинә алғы яҡҡа сыҡты.
— һаумыһығыҙ. һаумы, Мәҙинә. — Саяф ҡулындағы төргәген Мәҙинәгә һуҙҙы. — Күстәнәс. Бәләкәй генә. Байрам үтһә лә, байрам менән, Мәҙинә!
— Бәй, — Мәҙинә аптыраған ҡарашын Саяфтан төргәкко күсерҙе. — Мин... ҡунаҡ көтмәй инем.

ифтың йөҙөнә ҡаушау билдәләре сыҡты, бүркен юкмы тигәндәй, ҡулында ыуғысланы:
Үҙең бслмәгән ни эш бар, Мәҙинә: эжәл менән никах араһында, тигән боронғолар. Мин һине, Мәҙинә, н иом ултырам.
Һо ра-та?! Кемгә?!
У ҙемә, Мәҙинә.
Быңа һиңә иҫке ауыҙҙан яңы һүҙ! Иремдең вафатына мгн оп, һәм, ғөмүмән, мин иргә сығырға уйламайым!
Ившһен бит! Барыбер сығырһың! Үкенмәгеҙ үлгәнгә, бирһен ҡалғанға, тигәндәй, мин һинең өсөн бөтәһен н!
Уҫаҡ ағасында алма үҫмәй, Саяф ағай! Етмәһә, шрым...
Киммәт таштың ауырлығы юҡ, Мәҙинә: улар бит м оллдарың! Балдар миндә лә бар! Иҫке йөрәк — яңы тигәндәй, йәшәрбеҙ әле бергәләп.
К)-у-ук... — Мәҙинә хәлһеҙләнеп урындыҡ ситенә ірҙы. — Өләсәм, Барсынбикә ишетһә...
Карт ҡарға хужамы ни һинең яҙмышҡа?! — ҡыҙарып-нгән Саяф Мәҙинәнең алдына ук килеп баҫты: — на! Лцла мине, Мәҙинә!
Ҡарғаны ситлеккә бикләмәйҙәр, председатель!
Яңылыш әйтһәм, ғәфү ит, тик өмөтөмдө өҙмә. һин н күитон, бик күптән...
аҡларға була ҡул һуҙған Саяфты Мәҙинә йән асыуы І >теп ебәрҙе:
Кит. Яҡшы саҡта. Йәрем дә, ирем дә бер Әптеләхәт !! Үҙе үлһә лә, уның рухы тере! Һәр баҫыу, һәр башаҡ, |><>|щ)к бойҙай Әптеләхәтем булып өндәшә. Кит! Бындағы ||||......ыҡһыҙ һүҙҙәрең менән бысратма! — Әллә төртөүҙән, Мәҙинә һүҙҙәренең көсөнән ишек асылып китте һәм ооландың ҡаҡ иҙәненә мәтәлләне, уның артынса теге ннәс гөргәк хужаһы өҫтөнә шап итеп барып төштө.
!)сәй!
Үҙен ҡосаҡлап алған Күкһылыуы Мәҙинәне һыуыта ....Оҫ-башын рәтләп, битен һалҡын һыу менән йыуҙы, еі ә ҡағылғандағы кеүек, ҡулдарын ҡабат-ҡабат нланы.

Ҡыҙрасов башта заводты ҡабул итте. Цехтар буйлап йөрөп, производство менән танышып сыкты. Танышты тип, бөтәһе лә былай ҙа таныш инде: электр приборҙары етештергән был заводта ул студент сағында практика үттс, унан һуң эшкә килде. Мастер булып башланы ул хеҙмәт юлын, һуңғараҡ цех начальнигы итеп үрләттеләр. Артабан карьера яһау ауырлашҡас, атаһының юғарыла эшләгән дуҫтары ярҙамға килде, һәм ул Таулы районына икенсс секретарь булып эшкэ килде. Унан, Камалетдинов үлгәс, беренсе секретарь итеп үрлэтелде. Хәҙер ул күптән көткән теләгенә ирешге: ҙур заводтың хужаһы вазифаһын билэне. һөрөлә-йығыла һикэлтэле-соҡорло юлдан килгән ауыл хужалығы ҡурҡыныс төш булып артта ҡалды. Партияға рәхмәт. Ул Ҡыҙрасовтан, ҡэҙимге кешенэн, ҙур етэксе яһаны. Әлбиттә, уға биографияһында үҫеүенә ҡамасаулаған ҡара таптар булдырмай йәшәүе еңел түгел. Тормош иптәшен һайлауҙы ла ул иҫәп менэн башҡарҙы. Ҡыҙҙың атаһы — билдәле профессор, әсәһе ҙур урында эшләй ине. Саңғы спорты менэн шөғөлләнгән Камилла һөймәлекле лә, күрмәлекле лә түгел ине. Студент кисэлэренэ лэ йөрөмэнс ул. Ә бер көндө Ҡыҙрасов тотто ла уны кисәгә саҡырҙы. Ҡыҙыҡай баш тартырға уйлағайны, Ҡыҙрасов:

— Быны һиңә комсорг үҙе эйтэ, тыңламай ҡара! — тип шаяртты.

Ҡыҙрасов кисә буйынса Камилла менән генә бейенс, көләмәстәр һөйләне, көлдөрҙө. Көлгәндә ҡыҙҙың бер яҡ бите уйылып киткәнен шәйләне, ә бына Камилланың бер күҙе йәшел, икенсеһе һоро икәнен өйләнешкәс кенэ абайланы.

Уныһы — ул, Камилла, ярыштарҙа һалҡын тейҙереп, бала табыуға һәләтһеҙ булып сыкты. Ҡыҙрасов уны ниндэй гено санаторийҙарға алып йөрөмәне — файҙа бирмәне, аҙаҡ ҡул һелтәне. Күмэк, татыу ғаилэлә гөрлэп үҫкэн Ҡыҙрасовты бала-сағa көлөүе яңғырамаған өй тиҙ еләтте. Өйләнеүенә ете-һигеҙ йыл үтеүгә, ул ситтә күңел аса башланы. Баҫҡыстан-баҫҡыска юғары үрләгән кешегә айырылыу ҙа ярамай, берго лә йэшәрлек түгел. Балалар йортонан бала алып тәрбиәләйек, тип тә әйтеп ҡараны Камиллаға. Ҡатыны ризалашманы,

гемдәргә һин барыбер ата була алмаҫһың», тине. күптән иләҫ-миләҫ булған ир, Таулыға килгәс, ие осратты. Шаян тәбиғәтле, аралашыуға ябай, е ташып торған был ҡатын уның иғтибарын бер итте. Ҡулында власть була тороп, шундай ни мнсск ярҙам итмәйһең? Уҡыуға ебәреүҙе юлланы, р оирҙе, эшкә урынлаштырҙы, эргәһенән ебәрмәҫ ы һуҙлап уҡығанғамылыр, Ғәлимә барыбер ярты наҙан и алды. Уның ҡарауы, районды, кешелэрҙе үҙенең биш п ксүск бслә. Шул арҡала ул Ҡыҙрасовтың уң ҡулына иде б1,ша уның ҡыҙы менән...

Һйпгш Ҡыҙрасов уны матур бала булғаны өсөн яратты. күргондэ ҡыҙыҡай күҙҙәрендэ тоҡанған уттар ыраҙы. Ҡара бөҙрэ сэсле, сэскәләй алһыу йөҙлө, Ч> күҙле был ҡыҙыҡай күҙ алдында баланан үҫмергә, рҙән сгкэн ҡыҙға әүерелде. Еткән ҡыҙ булып бөткәс тә Ҡыҙрасов менән шаярып, иркэлэп һөйләште. Ғәлимә яһарға булһа, үҙе килеп ҡыҫылды:

Теймә, эсәй, һинең ҡулың ҡаты, ағайымдың арҡаһына оула әтү, — тип көлә-көлә уның өҫтөнә атланып, һыйиай торған булды.

Ҡыҙыҡайҙың ҙурайғанын ҡурҡып та, ҡыуанып та күҙәтте расов. Етмәһә, ул класташ ҡыҙыҡайына, тэүге юәтенә, үтә лә ныҡ оҡшағайны.

к, бик оҙаҡ көрэште үҙе менән Ҡыҙрасов. Өфөнән һПИСИ, Ғәлимәлә ҡуна ҡалды бер көн. Ғәлимә өйҙә юҡ Ул алмай ғына көттөләр уның ҡайтҡанын, ә ул шны. Ошо төн бөтэһен дә хәл итте.

Мин һине тәү күргәндән яраттым, — тине Сэмэрэ оитың муйынын ҡайнар тыны менән бешереп. — Бала бирле, бер туктауһыҙ. Мин ҙур инде, ағай!

Гөрһәк яҡын да — тешләп булмай. Алып китеп, уны рынлаштыра ала, әлбиттә, Ҡыҙрасов. Үләнден үләне, ағасы ҡурпы ҡалдыра. Ләкин... үгеҙгә килешкән па килешә тигән һүҙ түгел бит. Ҡырын эш ҡырҡ һуц да билдәле булыр. Ҡыҙрасов өсөн бөтәһен кайны менән ҡәйнәһе белеп ҡалһа?! Ул сағында, шректорлыҡ! Хуш, махсус санаторийҙар! Юҡ. >м теге яғына үтә лә етди ҡимміттәр һалынған. штырғыһыҙ ҡиммәттәр.

Эшен тапшырырға Таулыға килеү менән эҙләп тапты Ҡыҙрасов Сәмәрәне.

— Шунан, нимә хәл иттең? — тине ул ҡоро ғына. — Мин һине аҡыллы ҡыҙ тип беләм. Килэсәгенде уйламай, эсәйенде лә, мине лә, үҙенде лэ уңайһыҙ хэлгә ҡуйырға йөрөмәйһевдер ул?

— Юҡ.

— Бына яҡшы! Машина бирәм. Абортты Өфөлә эшләт. Һөйләшелгән.

— Абортты?!

— Ниңә, әллә... эшләттең дәме?! Көт тинем бит!

— Ә мин абортҡа барырға бөтөнләй йыйынмайым! Мине иҫәпкә алдылар инде, ағай!

— Н-нисек?! Әсәйең... беләме?

— Белә.

— Ул...

— Ул нимэ тиһен? — Сәмәрэ күҙендэ йәнә шаян осҡондар һикереште. — Мине тапҡанда... атаһыҙ тыуҙырайыммы һине, тип һорамаған бит!

— Туҡта әле, ҡыҙыҡай...

— Мөхэббәт булғас, уның емеше лә булырға тейеш. Емешһеҙ мөхәббәт — мөхәббәт түгел!

— Һин йәшһең, Сэмәрэ... Бала һиңэ ҡамасаулаясаҡ! Һиңә уҡырға, үҫергә, кейәүгә сығырға кэрәк!

— Ә бына һин, ағайым, уҡығанһың да, үҫкәнһең дә, өйләнгәнһең дэ — ә бәхетең юҡ. Бэхетең булыр ине — балаң юҡ!

— Һин мине үлтерәһең, Сәмәрә!

— Һөйөү ҡаза түгел, ағай!

— Сәмәрэ! Туҡта эле, ҡыҙыҡай!..

— Хуш, ағай!

Сәмәрэ боролманы. Һомғол кәүҙәһен, ғорур башын теко тотоп тыҡрыҡтан оло урамға сыҡты.

— Ниндәй... халыҡ былар!

Шаңҡыған Ҡыҙрасов үҙен ҡапыл ҡартайып, бәләкәсэйеп ҡалғандай хис итте.

рпсонтың эштэн китеүен ишетеү Ғәлимәгә аяҙ көндә ı кандай тәьсир итте. «Бөттө! Бөттө былай булғас!» Ә иныльıкты беренсенең үҙенэн түгел, кеше аша ишетеүе икеләтә хафаға һалды, ғәрләндерҙе, мин-минлегенә п.| Шуга күрә лә ул Ҡыҙрасовҡа элекке шикелле «бәреп» щ ммоне, саҡырғанын көттө. Ингәс икеһе араһында ıы. косөргәнешле тынлыҡ урынлашты. Тынлыҡты ııı Кызрасов боҙҙо:

һиңә лә китергә тура килер, Ғәлимә Мөхәррәмовна. норюпа директор итеп ҡуймаҡсылар. Баш тартмаҫҡа ııı и гер инем...

Ял йортона?! Директор итеп?!

Кызрасов тулҡынланғанда йыш-йыш күҙлеген төҙәтеүсән:

Ә ниңә?! Насармы ни?! Бында үҙенцең... ҡайҙан шенде онотма!

Мин бында... совпартшколанан килдем! — Ғәлимәнең ıе гашҡын йырған быуалай эркелде. — Иң ҡыҙығы — иң һуңғы булып ишетәм! Мин!..

Кызрасов уның алдына графиндан һыу тултырып стакан ıы

(лбэләнмә. Эс.

Мин... һинең менән китэм! Мин һинһеҙ... һинһеҙ мин Кем?!

Мин ғаилэле кеше. Ике-өс бисә менән йәшәргә һам ҡушмай. — Ҡыҙрасов көләмһөрәне. — Нишләйһең о гтан булып тыуылмаған.

Ю-у-у-уҡ, шулай ҡапыл... бөтәһе бер юлы... Өйҙә — рә, бында — һин. Ташлама мине, йәнем, ҡыҙған, йәллә...

Ебемә, Ғәлимә. Таяуға ни тиклем ныҡыраҡ таянһаң, гиклем тиҙерәк серей. Үҙ көсөңә ышан — кәңәшем

Ә ии өсөн мине... алалар?

Яңы секретарға параметрҙарың оҡшаманы.

Ул да Өфөнән килэме?

Өфөнән.

Ьашым эйләнә! Башым ғына түгел, ер, донъя эйләнә!

— Һин кит инде, Ғәлимә Мөхәррәмовна. Ҡайт. Илағанһың, шешенгәнһең... Зинһар, кеше күҙенә күренмә!

— Кис... килерһеңме?

— Кис? Юҡ, килә алмам. Камилла Харисовнаның тыуған көнө бөгөн.

— Хушлашмайбыҙмы ни?!

— Төштәр оҙон булмай, Ғәлимә Мөхәррәмовна. Бигәйбо. — һөйләшеүҙең тамамланғанын аңлатып, Ҡыҙрасов аяғүро баҫты. — Хушығыҙ.

Өйөнә ҡайтышлай Ғәлимә аҙыҡ-түлек магазинына һуғылды. Элек эсергә булһа шоферынан алдыра ине — был юлы үҙе алды. Тиҙерәк, тиҙерәк ҡайтып етәһе лә барыи онотаһы! Түп-түңәрәк донъяһы нисек, нилектән сайрала башланы? Исмаһам, Саяфы күренмәй. Шылтыратмай, үҙенең донъяла барлығын да белдермәй.

Өйгә инеү менән ул ҡырлы стаканға араҡы һалып эсте, ҡалтыранған ҡулдары менән Саяфтың номерын йыя башланы:

— Алло! С-Саяф С-Сәйфуллович ме-менән тоташтырығыҙ! Үҙе?! һин... Саяф?! С-Саяф? Жозефинац зарыҡты. Х-хәҙер үк... к-көтәм.

Телефон сымының теге осонда шундай уҡ иҫерек тауыш яңғыраны:

— П-пошла ты! Р-разный к-кәнтәйҙс йыйырға м-минең өйөм дом терпимости түгел! П-понял?! Каналья... П-пакость...

— һ-һин ни-нимә?! — Ғәлимә трубканы атып бәрҙе. Ишеткән был Ғәлимәнең райкомдан китерен! О! Кеше нисек тиҙ үҙгәрә. Ю-у-уҡ, былай ғына ҡалдырмаясаҡ Ғәлимә Саяфты. Үрле-ҡырлы һикертәсәк! Иртәрәк ҡысҡыра! Әптеләхәтте тиҙ онотто был! Хәтерен яңыртып алмай булмаҫ бының. Ҡушҡайын төбөндә тартылған өс «Казбек» **төпсөгв** Ғәлимә шкатулкаһында! Ә Тирәклелә «Казбек»ты тик ул ғына тарта...

— Эх! — Ғәлимә йәнә стакан тултырып араҡы ҡойҙо. — Сәмәрә!

Тауыш биреүсе булманы. Өйҙәме ул, юҡмы? Өйҙә булһа ла өндәшмәҫ. Тештәнмә, серәш, ҡарышҡыр. Тоҡомона оҡшамаһа, кешенең арты ҡыйыш була ти. Ҡойоп ҡуйған Барсынбикә! «У-у, бүре тоҡом! Күрә алмайым һеҙҙе!»

ыл ишек асылды, тыштан ингән һыуыҡ Ғәлимәнең рı щ йылтенә, тирләгән тәненә ҡағылды:

(лморә!

Нимә шул саҡлы ҡысҡыраһың?!

К-ҡайҙа йөрөйһөң?!

һинә барыбер түгелме?

I гүгел! Мин — әсәйең! М-мин белергә тейеш! — ıа лраҡынан тонған күҙҙәрен ҡыҙына текәне, бер ҡулына ыһы эселеп бөтмәгән шешәне элэктерҙе. — Әйт: бала ш''

Башта һин әйт: мин кем балаһы?

Бы-бына! — Ғәлимә икенсе ҡулын ҡуҡышҡа ц ланы. — Бы-быны күрәһеңме?

Һы! — Сәмәрәнең һылыу йөҙөн мыҫҡыллы йылмайыу м үгте. — Тимәк, ысынлап та уйнаштан тапҡанһың мине, н и атарға ла ғәрләнгәс! Ә мин йәшермәйем, сөнки... порогем аҫтында... мөхәббәт емешен йөрөтәм. Ысын ı ным смешен. Баланың атаһы — Ҡыҙрасов!

I ызы артынса ишек ҡаҡлығып ябылыуға Ғәлимә хәле ·ıı ән-бөтә барып иҙәнгә сүгәләне...

|||ом ҡалғанды арыҫлан еймәҫ, тигәнде белмәй инеме ‖' Белһә лә барҙы. Өс балаһы булған көйө, эҙәмгә һанап, тырға барҙы. Мәҙинә... Унын ирлек, кешелек ырыҫын и · Һлиып тапаны! **Иҙҙе!** Бер тин шайы күрмәй ҡыуып •рҙылар! Әптеләхәт рухы, имеш!

Алло! — Саяф тынлауһыҙға әйләнгән, таяҡтай ҡаткан ıı мрм менән Сабаҡлы председателенең телефон номерын Машиналарың б-бармы, әллә ү-үҙем ебәртәйемме? Ш! Ҡрыш һинекe! һеперeп ал, бөртөгө ҡалмаһын. «Волга»? р мммең ишек алдында ултырһын. Кире уйламам! Юҡ-Мим хәҙер сығам. Келэт янында, эйе. Әптеләхәттең рухы ıı **икән!** һәр башаҡта, һәр бөртөктә. Бына! Х-хәҙер к-ıı и ı Мпсләхәттең рухы ҡайҙа йәшәгәнен!

щклмға орлоҡҡа тип ҡалдырған арышты оҙатҡас, ‖ гегеләр ҡыуып килтергән «Волга» эсенә инеп рып клраны, йомшаҡ креслоларын һыйпаштырҙы. Эйе!

Саяф Шәйхетдинов бынан кире аҡ «Волга»ла ҡырын ятып йөрөйәсәк. Бисәне ҡыҙҙан аласаҡ! Төкөрҙө ул Мәҙинәгә! Ә Мәҙинә... Илаясаҡ... Илар көнө алда уның! Был ауылда Әптеләхәтте хәтерләткән бер нәмә, бер бөртөк бойҙай ҡалмаясаҡ! Ҡараңғы төндөң ҡара ҡарыны Саяфтың түбән осҡа емерәйеп, көмөрәйеп атлаған һынын тиҙ үк йотто.

Рауза һеңлеһе менән йыуан ҡорһаҡлы еҙ самауырҙы йыҡҡансы, үпкәһе йөҙгәнсе сәй эсте. Бсренсе әтәс ҡысҡырғанда ғына ул ҡайтырға йыйына башланы.

— Йоҡла ла ҡуй, интегеп йөрөмә төндә, — тине һендеhc.

— Әлләсе, — Рауза икеләнә бирҙе, тунын кире сөйго элергә лә уйланы, йәнә ысҡындырҙы. — Ҡуй, оҡшамаç, — тине шунан. — У ҡалайтып Әптеләхәт ҡустының энә менән ҡойо ҡаҙғандағы кеүек йыйған ғилемен бер яңғыҙын ҡалдыраһың? Рухы рәнйеп ятыр, Рауза апай ҙа таштағас, тиер.

— Күҙгә төртһәң күренмәçтек төн бит — шуға әйтәм, — һеңлеһе уны ҡапҡаға тиклем оҙата сыҡты. — Йә, хуш, апай!

— Хуш! — Рауза артына әйләнеп ҡараманы. һеңлеһен йәлләй ул. Анау ҡәһәрлек Гитлер һуғыш башламаһа, ул да әҙәмсә тиңе менән йәшәп ҡартайыр, ошо көндә әсәй-өләсой булып ултырыр ине. Булманы инде. Әле был, әле тегс һуғышы ир-атты ҡырып ҡына торғас, ҡатын-ҡыҙ нисск бәхетле булһын? Кеше өлөшөнә ымһыныу ҙа яҡшы түгел. Рауза, ана, ымһынғайны бер, әле булһа оятынан нишләргә белмәй.

Ярты юлға еткәс эскән сәйен бушатып алды ла Рауза артабан атланы. Эйе, Әптелэхәт менән бигерәк ихлас эшләнс шул үҙе лә. Хәҙер уға Әптелэхәттең ҡулы тейгән һәр нәмә, һәр орлоҡ изге. Микроскоптарына тиклем ҡәҙерле. Ҡәҙимге бойҙай бөртөгөндә шул тиклем тылсым, шул тиклем сер яталыр тип ғүмерҙә уйламағайны. Әптелэхэт асты уның күҙҙәрен. Әгәр шунда эшкә килмәһә, Рауза һуҡыр көйө үлеп китер ине.

Их! Әптеләхәт эргәһендә йәштәр булманы. Әҙме ғилемго өйрәнер ине улар! Бойҙайҙың бер күҙәнәгенә микроскоп аша

ш Әптеләхәт тотош донъя, күк, ҡотоп хаҡында һөйләп мпер ине. Мәгәр Рауза ул китте тип түтэлдәрен уның эшен дауам итмәй ҡул ҡаушырып ултырмаясаҡ. пгүго бөтәһе лә әҙер булыр: горшоктарын да яһар, ктарҙың сығышын да тикшерер, элек ҡайҙа, нимә гән — тап шулай булыр. Унан инде... Дауыт ҡайтыр. күргән — уҡ юнған, тиҙәр. Бик тэ башлы бала ине Ул инде Хөсәйен дә, Шэңгэрэй ҙэ түгел — үҙе белеп и юркан зат. Анау йылды осорған ярапланы бензин мнпмәһә, күккә күтэрерҙэр ине малайҙы. Тимерҙең ИИ күс бармы?

Инде килеп еттем тигәндә, Әптеләхәт тәжрибә яһаған клра төндө ҡапыл яҡтыртып ялҡын бәреп сыҡты. «Уй! — ның хәле бөттө, аяҡтары атламаç, ҡысҡырайым тиһә, I | шы сыҡмаç булды, — ҡот...» Рауза имгәкләп тигәндәй үтте. Ялҡын ялмаған өй эсендә орлоҡтар һаҡланған әле бер, әле икенсе ҡумтаға үрелде, өрлөк янып һынып төшөүгә, ған иҙәненә сығып йығылды.

Мәзинә таң һарғайып ҡына килгән мәлдә үҙәк өҙгөс иломһерәп уянды. Эх! Төш кенә икән!... Әптелэхәте кұтәргән дә алма баҡсаһы яғынан йырлай-йырлай һлршыһына килә. Көйө лә, һүҙҙәре лә үҙәкте өҙә:

Айһыҙ төндә тәҙрә сиртһәм әгәр,
Көҙгө елдер тиеп уйлама.
Кайта торған ергә китмәне тип,
Хәсрәт кисеп яманһыулама.
Утың һүнһә яккан усағыңда,
Тышка сык та байка күк йөҙөн.
Киткәндәрҙең гүре якты булһын,
Калгандарға, Хоҙай, бир түҙем.

Ҡоргакһып та кипһә тәкәттәрең,
Таң менән сык ысык кисергэ,
Үлгэн арттарынан үлеп булмай —
Тырыш, йәнем, донъя көтөргә.

Утың һүнһә яккан усағыңда,
Тышка сык пга байка кук йөҙөн.
Киткэндэрҙең гуре якты булһын,
Калғандарға, Хоҙай, биртүҙем.

«Эй-й!» — Мэҙинәнең сикэһен өткән йәштәр, һарҡып, үҙенә морон төртөп йоҡлаған Күкһылыуы битен сылата башланы — Эй Хоҙайым!»

Мэҙинә Күкһылыуын күкрәгенә ҡыҫты — еңелерәк булып ҡалды. Ниндәй төш... Мөғжизә түгелме инде был? Әптеләхәте әйтә алмай киткән васыятын төш аша йыр меноп еткерэ! Күрәһен, уның йәне һаман өҙгөләнә, Мэҙинәне, балаларын ташлап китә алмай, күккэ оса алмай. Уны Мэҙинәнең күҙ йәштәре ебәрмәй. Барсынбикә өләсәһе бит, әруахтар артынан илау килешмэй, ти торғайны...

Мэҙинә, тороп, усағына ут якты. Самауыр ҡайнатты. Эшкә китергэ лә ваҡыт. Атаһы килеп, ҡыҙҙарҙы сэй эсереп, мәктәпкэ оҙата торған. Әлдэ ул бар. Әлдэ ул һуғыштан иҫән ҡайтты.

Мәҙинә, оло урамға сыҡмай, фермаға кәртэ артынан сығып китте. Япраҡтары ҡойолған, ботаҡтарында эре ысыҡ кеүек һирэк-һаяҡ алмалары эленеп ҡалған алмағастарға күҙ һалды. Таңға күргән төшөндэ улар сәскәлә ине. Өләсәһе, төштэ гармун тауышын ишетһәң, хэбәр алыуға була, ти ине. Хат килмәҫме икән улдарынан? Эйе, Әптеләхәт, һинсц артыңдан китергә миңә, күрәһең, иртәрәк. Донъя көтөргә, балаларҙы әҙәм итергә кәрәк. Ә һин ҡурҡма, ос! Йәнең йәннәттә булһын! Ерҙә һин бик күп изге ғәмәлдәр ҡылдың, ҡылған яҡшылыҡтарың гүр түрҙәренде яҡтыртһын. Беҙҙең өсөн хафаланма, йәнем! Мәҙинәң бит әле, әсәһе үлгәс, ун биш-ун алты йәшендә бер түгел ике ҡустыһы менән ҡалғанда ла бирешмәне. Әле лә бирешмэҫ. Ул бит Барсынбикэ затынан. Тарханлыҡ дәрәжәләре алып, ил тотҡаһы булған яҡшылар тоҡомонан.

һәр ваҡыттағыса, «Ҡыҙыл мөйөш»кә ингәс, Мәҙинә «Иғландар тақтаһы»на ҡараны: хужалыҡ буйынса сыккан бөтә приказ, ҡарарҙарҙың күсермәләре ошонда эленә. Быныһы ни тағы? Мәҙинэ аҡҡа ҡара менән яҙылғанды укый, ләкин аңлай алмай: «Бушатырға? Кемде? Мине?!» Мәҙинә

Ирназарованы. Эйе, уны эштэн алғандар. Мәҙинәне. Ул ргына әйләнмәйенсә генә хисапсыға өндәште:

Күптәнме был? .

Кистән килтереп элгәндәр микән...

Аңлашыла. Ә машина... ул ниңә килгән?

Иткә мал оҙаталар.

Мал?!

Мәҙинә ихатаға сыкты. Кисэге өсөн үсен алды Саяф. Арҙанлыҡ инстинктынан башҡа кешелек сифаттары һалынмаған ирҙән, хэйер, башҡаса ни көтэһең? Иртәнге һауанан әскелтем, ҡурмас ҡыҙҙырғандағын хәтерләткән еҫ ı ıı сүе ғәжәпләндерҙе Мәҙинәне. Иткә тапшырыр өсөн Һимсртеүгэ ҡуйған мал бында тормай, Саяф ни ғәләмэтләй? Гнрлю собәп менән имгәнгән, йә ҡартайған һыйырҙарҙы тейәй ахыры былар. Өйрәнгән хайуанҡайҙарҙан айырылыу М.ммиогә һәр саҡ ауыр. Мәҙинә тана көйө генә алып һауынға өйрэткәндәре лә була араларында. Ана, береһе үҙәк өҙөрлөк н ıı п паҡырып ебәрҙе.

Бөйрәкәй!

Кузовҡа тейәлгән, күҙе атылып сығыр дәрәжәлә хәсрәткә, ı араһыҙлыҡҡа тулышҡан хайуанҡай баяғынан да асырғанып ıзе. Мәҙинәнең үҙенә өндәшеүен ишеткәс, сығырынан и.1, гүше менән машина кузовына бәрелде һэм шартлап ғынган гакта аша түбән атылды, лэкин төшөп етмәне, кардон һайғауы ҡатылған бағанаға эсе менән ҡаҙалды.

Ьойрәкәй... Бәхил бул, һәүкәшкәй... һинең йылы ырғаңа һөйәлеп, Мәҙинә әсәһен, ҡустыларын юғалтыу и.шарын, Әптелэхәтен көтөү һағыштарын түкте. үсмде, быҙауыңды күргән шикелле, ызылдап ҡаршы ын, устарымдан, битемдән ялап, баҡырып оҙатып ын Гоғролоғоң менән йәнемде эреттең. Хуш, Бөйрәкәй, миисң йәшлегем. һин кеше яраттың, ағың менән үҙ р п.чо күпме бәндэне туйындырҙың, күпме үрсем-курпы ырҙың. Хистэр бөйөклөгө, күрэһең, кеше өлөшөнэ генә и ш нлаһи сифат түгелдер. Матур киттең донъянан. Үҙең I кап заттарҙын муйынына бысаҡ һалғанын күрмәнең. I могайын. Тандыса тигән ҡәҙимге ҡатындан, риүәйэт ı . . . . . Ҡуңыр буға затынандыр. Тормош тигән

ҡарурмандан, ташлы, ҡурҡыныстар, кейек-януарҙар һағалаи торған берҙәм һуҡмаҡтан беҙ байтаҡ ғүмер бергә атланыҡ, Бөйрәкәй.

Мәҙинә, Бөйрәкәй менән хушлашҡас, фермала оҙаҡ торманы, ҡайтырға сыкты. Үҙҙәренә етеп килгәндә Маһинур күршеһе тайсаһына йүгерешкән кешеләрҙе күреп ҡалды. Бэй! Өй юк! Ул янған! Әптеләхәттең...

— Тыныслан, Мәҙинә, — үҙен тотоп алған атаһыныц күҙҙәренә ҡарап, Мәҙинә барыһын да аңланы. — Бөтә янған. Рауза ла.

Мәҙинә иплэп кенэ Раузаға яҡынланы. Фуфайка кейгәнгәме, ул бирешмәгән. Күрәһең, янғын сыҡҡанда ул булмаған. Рауза йә төтөнгә сэсәгэн, йә йөрэге ярылған. Ә ниңэ ингэн ул ут эсенэ? Мәҙинә уның төймәләрен ысҡындырҙы. Устарына ниҙер йомған һәм күкрэгенә ҡыҫҡан.

— Атай, унда нимэлер бар.

Раузаның ҡата ла башламаған, үлем һыуығы алырға өлгөрмэгэн усының береһенэн Әптеләхәт сығарған бойҙай, икенсеһенэн арыш орлоҡтары ҡойолдо. Орлоҡтар Мэҙинәнең усына төштө...

Ситтә туған-тыумасаһы, балалары булмаға с, Раузаны шул көндө үк ерләнелэр. Хөсэйен ҡәберҙе Шәңгәрәй эргәһенэн ҡаҙҙырҙы. Йомшаҡ булды бынығының тупрағы ла. Кәүҙәнс ер ҡуйынына тапшырыуға ябалаҡлап ҡар яуып ебәрҙе.

— Ҡарҙан икмәк еҫе килгәндэй, — тине кемдер.

— Мул ҡуллы, изге кеше киткәнгә ул шулай, — тине Хашим. — Йәнең йэнәттә булһын, ҡорҙашбикә.

Ҡэбер эргәһендэ баш кейемен сисеү ғөҙәте булмаһа ла, барыһы ла бүркен һалды, тын ҡалып, бала усы ҙурлыҡ аҡ ҡар таждарының ярмаланып ятҡан ҡара тупраҡты ҡаплағанын күҙәтте. Иҫкэн ел һиҙелмәһә лә, ҡәбер эргәһендәге ҡарт ҡайын еңелсэ шаулап алды. Күрәһең, тәбиғәт үҙ балаһын үҙ ҡуйынына алыуын, тамырына башын һалып йоҡлар затҡа ризалыҡ биреүен шулай белдерҙе.

һнмрапан сыҡҡас, Хашим менән Мәҙинә тау битләп шылар. Аҫылмалы күпер аша сығып, өйҙәренә кэртә артынан кайтып инделәр.

Берэм-берэм сүплэй әжэл. — Мәҙинә ауыр көрһөндө.

Сентябрҙә генэ балҡып, баҙлап ултырған ағас ҡтары ла бит ҡара көҙ етһә ҡапыл ҡойола. Шуның ише Беҙҙең быуындың китер ваҡыты еткән. Мин дә үҙемде ҡайындың осонда ғына дерелдәгән һары япраҡтай хис ш им

Атай, һиндэ рэссамлыҡ һәлэте ерлэнгэн, ахыры.

Ерлэнгәнме, юҡмы, уныһын...

Килеп еттеләр. Әсәләрен тәҙрәнэн күреп, болдорға ялан пүюрешеп сыҡҡан ҡыҙҙары:

( )сәй! Хат бар! Икэү! — тип кем уҙарҙан ҡысҡырышты.

Балаҡайҙарым! — Мәҙинэ, өҫтөн дэ һалмайынса, рға йомолдо. Береһе — маркалыһы — Әбүбәкерҙән. Икен еһе -- Дауыттан. Йә Хоҙай! Үҙ ҡулы менән яҙылған. Гимәк, Дауыт тере! Мәҙинә ҡалтыранған ҡулдары менән рып гы асты.

«Ҡәҙерле әсэй, һеңлеләрем, олатай һәм Барсынбикә өләс! Алыҫ Көнсығыштан хат яҙыусы улығыҙ Дауыт. Белэм, катты оҙаҡ көттөгөҙ. Ул арала беҙҙең ғаилә лә ҙур иму кисергэн. Ул хаҡта минә Әбүбәкер яҙҙы. Мин дэ и'| сигендәге бәрелештәрҙә ауыр яра алдым, контузия. р солэмәтмен. Бәлки, был хат барып еткәнсе ҡайтып та и рмсп. Ҡәҙерле эсэйем! Мин һауала остом, парашюттан да шпкмрҙар ырғыным. Күктән Ергә ҡарағас, еребеҙҙең ни ем ғәзиз, ни тиклем кеше ҡулдарының йылыһына икәнен төшөндөм. Мин үҙем дэ ер кешеһе, миндә ымдын ерсэн ҡаны аға, крәҫтиән булмышына һалынған рухы йәшәй. һауа һулар, ер үҫтерер өсөн яратылған. мин күккә самолеттар осороп һине лә, үҙемде лә ифаламам. Тирәкле ерендә ата-бабаларымдан, атайымдан шоғөлдө дауам итермен. Мин иген игермен, ә һең-

леләрем һабантурғайҙыҡы кеүек көмөш тауыштары менән Ерҙе һәм Күкте данлар, күңелде күтәрер. Тиҙҙән күрешербеҙ тигән өмөттә ҡалып, улығыҙ Дауыт».

Хат уҡылып бөтөүгә Мәҙинәнең теҙҙәре, быуыны йомшаны, хәлһеҙләнде, күҙҙәренән атылған ҡыуаныс йәштәре, бите буйлап ағып төшөп, хат яҙылған дәфтәр битенә тупылданы.

— Илама, әсәй! — Көнһылыу килеп уның итәгенә һырышты. — Ағайым тере бит! Илама, әсәй!

— Ныҡ-ныҡ, күп-күп ҡыуаныстан кеше иламай нисек түҙһен?! — Күкһылыу йәштәре мөлдөрәп торған хәлдә ағаһынан килгән конвертты һыйпаны, еҫкәп ҡараны, күкрәгенә ҡыҫты.

— Бы-бынынын да, — атаһы уға Әбүбәкерҙең хатын тотторҙо. — Был малай нимә яҙа...

Фажиғәле үлемдән үҙе ҡотҡарғанғалыр инде, атаһы Әбүбәкерҙе ныҡ яҡын күрә. Әле уның түҙемһеҙлек менән янған күҙҙәрен күреп, Мәҙинә оҙаҡ мыштырлағанына уңайһыҙланып ҡуйҙы.

«Һаумыһығыҙ, Мәҙинә әсәй, олатайым, өләсәйем, һеңлеләрем! Мин һау-сәләмәтмен. Хеҙмәтемде бөттөм. Иң ҙур яңылығым — Лидия Николаевнаны таптым. Ул изге йәнле ҡатынды мин һис иҫемдән сығармағайным. Был донъяла йәшәүем менән мин бит уға һәм Хашим олатайыма бурыслы. Хәҙер мин унда йәшәйем. Консерваторияның вокал бүлегенә имтихан тоторға әҙерләнәм. Лидия Николаевна репетитор яллаңы. Имтихандарҙан һуң тыуған яҡҡа Лидия инәй менән бергә ҡайтып килергә йыйынабыҙ. Тәьҫораттарым күп! Өс көн, өс төн һөйләһәм дә артып ҡалыр, моғайын. Бөтәгеҙҙе лә ҡосаҡлайым, үбәм, яратам. Әбүбәкер.»

Был юлы сал сәсле башын, яурындарын ҡалтыратып Хашим илай ине. Атаһының илағанын беренсе тапҡыр күрә Мәҙинә. Йылы һүҙ кемдең йәнен эретмәһен. Яман һүҙ — баш ҡаҙығы, йылы һүҙ — йән аҙығы, тимәҫтәр ине лә.

И и, олатайымды! — Күңелсәк Күкһылыу олатаһының щ,| үшырып, биттәрен, сәсен һыйпаны. — Мин дә һине мратам бит ул!

I иинмлыу, ҡыҙарып-бүртенеп, олатаһын арҡаһынан ны:

I |лә мин яратмай тиһеңме?!

Млҙинә, балам, һин мине ғәфү ит инде. Ошолар ı ıс сағында ҡосағыма алып һөймәнем, һис юғы ..... һыйпаған сағым да булманы. Йүләр мин, ахмаҡ...

Йй, атай! — Мәҙинә атаһының сал сәсле башына Шаген гсроне. — Уның ҡарауы, нисәмә йылдар мине, |.||)ммды ҡурсып йәшәйһең. һин изге йән, атай!

Ә хәҙер миңә барайыҡ, балалар.

Атай, — Мәҙинә ҡаушай төштө, кәрәкле һүҙҙәр таба ш яфаланғандай булды. — Мин күптән йыйына инем рı Лңлайым — әсәйем нигеҙе һинең өсөн изге. Ләкин... ш зың бит инде. Миңә лә иптәш кәрәк... Бөтөнләй бында атай!

)й Мәҙинә, үҙем дә күптән шуны уйҙайым. Эшем ı ш юрҙо, инде тамамланым.

I [индэй... эшең?

Барғас, барғас күрерһегеҙ, — Хашим таяғын эҙләп к-. — Хәҙер күрерһең...

Мәҙинә үҙе үҫкән өйҙөң тотош стенаһына ҡаҙаҡланған и..... күргәс телдән ҡалғандай булды. Урман, тауҙар, ı ıр, һикәлтә, упҡындар. Шул тау теҙмәләре буйлап ш ғи ҡыраҙдан ике быҙауын эйәрткән һыйыр килә. ш ғараҡ - ҡатын-ҡыҙ һыны. Уның бында һүрәтләнгән күк кгүск зәңгәр күҙҙәрендә ошо мөһабәт тәбиғәт менән . им.|у, малдарын һәм тыуған төйәген табырына тәрән ....ıмыс Үҙенең ялан аяҡтары ҡанға туҙған, күлдәктәре и ыиртылып бөткән, мәгәр һығылмалы, нескә, ләкин юне һәм күҙҙәре иҫ китмәле рух көсөнә эйә. Уны ш ıмын алган мәғрур ҡаялар, олпат, сал сәсле түбәләр ошо .....ш ихтыяр көсө алдында баш эйгәндәй, уның рухына ıмын йыр сығарғандай, йәнен ҡурсып тәкбир эйткәндәй.

Ә һәүкәштәр алдан елә. Тыуған, кендек ҡаны тамған ерҙе м;ш заттары әҙәмдән нығыраҡ һиҙә, уларҙа тәбиғәт менән бергәлек, берҙәмлек хисе көслөрәк, күрәһең. Урал арҡаларын ҡыҙырып малы артынан килгән мәшһүр Тандыса йөҙөндә Мәҙинә әсәһенең йөҙ һыҙаттарын, булмыш-торошон танының Ошо хәтле оҫталыҡ, тойомлау, рәссам ҡомары талап ителгән эште атаһының йылға таштарын, башҡа тәбиғи сеймалды балсыҡҡа йәбештереп башҡарып сығыуы аптырата. Бында мүк тә, быяла ла, йомортҡа ҡабығы ла, кипкән үлән, сәсМ баштары, тубырсыҡ та, ағас ҡайырыһы ла — нимә генә юҡ.

— Атай, ҡәҙерлем, һин рәссам! Бөйөк рәссам!

— һы, — атаһы йыуаш ҡына кеткелдәп көлдө. — Быми шул. Инде күрҙегеҙ.

— Ә... Әптеләхәт... быны күргәйнеме?

— Мин, ҡыҙым, унан бер нәмә лә йәшермәнем.

— Минән генә йәшергән икәнһең...

— Ҡуҙҙы мин һинең йырҙарыңдан алдым. Ойоҡконо, ҡыҙым, һин һалдың күңелгә.

— Бына ни өсөн миңә күсмәйһең. Әлбиттә, был панноныц урыны — музейҙа. Мендәр күңеленә дәрт өҫтәй, дарман бирв торған эш бит был, атай!

— Унынһы инде, — Хашим, көлдөксә эргәһенә сүгәләп, тәмәке ҡабыҙҙы. Бик һирәк тарта ул хәҙер, күрәһең, был юлы түҙмәне. — Унынһын мин үлгәс хәл итерҙәр, музейға ҡуйырҙармы, сүплеккә бырағытырҙармы. Ижад емешси ваҡыт шымарта. Бөтөн әҙәмде ништәп эштәүем, нимә менән йәбештереүем, ҡатындың кемгә һәм ништәп оҡшауы ҡыҙыҡһындырасаҡ. Бәндәнең мине күрә алғаны, күрә алмағаны бар. Кеме генә юҡ был илдең, көнсөлө лә бар унын, кешенең аты үткәнсе, үҙемдең тайым үтһен тип, данды йәндәй күргәне лә бар унын. Эшемә лә ул үҙендәге миңә ҡарата булған тойғолары аша ҡараясаҡ, баһа бирәсок Рәссамдың хеҙмәтенә мына ошолар, — ул ейәнсәрҙәрсно ымланы, — бөтә шик-шөбһәләрҙән, эскерле тойғоларҙан а н\ ı килэсәк бирэсәк. Улар биргән баһа ғына дөрөҫ буласаҡ.

Гстронгән Мәҙинә артҡараҡ сигенде, ишек төбөндәге ıргыска, ҡыҙҙары йәнәшәһенә ултырып тынып ҡалды. ıшенән киткәнгә, Сайфтың әрһеҙләшеүенә, үслэшеүенә оигән, эй ҡайғырған булды. Был бит кеше рухының ı югө, һынмаҫ, таушалмаҫ көсө алдында бары сүп кенә! ıыı лмың ғәжәп күҙҙәренә ҡара — шунда йәшерелгән ул ıос, ул ышаныс. Тауҙар янғыраҡкан ауазға ҡолаҡ һал — ц шпстелә ул көс, ул бөйөклөк.

Бишенсе өлөш

ҠОЯШЛЫ БУРАНДАР

Беренсе бүлек

Мәҙинә йэш ҡар ҡаплаған юл буйлап идара йортона атланы. Иртэ әле. Тирә-яҡ һил. Төндә яуған ҡар <ж алдарындағы баҡсаларҙы күпереп сэскэ атҡан саҡтарындағы кеүек йомшаҡ ҡар менэн ҡаплаған. Иртәрәк торғаи кешелэрҙең өй мөрйэләренэн төтөн урғыла. Әптеләхәте иҫом саҡта улар көн дә иртән идарала үтэ торған кәңәшмэгэ бер |баралар ине. Ауыл буйлап идара йортона илткән көртло юлда тэүлэп уларҙың эҙе ҡала ине. Хәҙер юлды Мәҙинә яңғыҙ һала. Инде нисәнсе ҡат Саяфҡа эш һорап килә. Атаһы уфтана, эллә йөрөмэй ҙә ҡуяһыңмы, ти. Мәҙинә үҙен колхоз эшенән, ун өс йәштән өйрәнелгән колхоз тормошонан башҡа күҙ алдына килтерэ алмай, бер кэрэкһеҙ кеше кеүек өйзо ятыуынан толҡа тапмағандай.

Бик иртэ булғанғамылыр, Саяф кабинетында яңғыҙ ине. Кистән, ахыры, самаһыҙ төшөргэн: ҡабаҡтары шешенгән күҙ төптәренә ҡарағусҡыл «тоҡтар» эленгән, таушалған свитерынан төҫөн юйған, ҡайышланған күлдәк яғаһы күрено, таралмаған сәсе туҙған теш щеткаһы ҡылдарын хәтерләтеп, тәртипһеҙ тырпайған. Был ир-ат ҡатындары кейендереп, тәрбиэлэп торғанға ғына ахыры кешегэ оҡшап йөрөй, Нәғимэнең үлгэненә күп тэ үтмәне, ә был инде ҡараҫҡылм эйлэнде, тигән уй йүгерҙе Мәҙинәнең башынан, күңеленсң ҡайһылыр ерендә был мәлһеҙ өңөнән төртөп сығарылған

|оүешендә ултырған бэндәгә йәлләү тойғоһо ла морнай ı куйҙы.

Шунан? — Һаулыҡ алыу урынына һөйләшеүҙе һорау шн башлауы Мәҙинәнең күңелен йәһәт ҡайтарҙы. ıәхәт менән осрашыу юллап Мәскәү төрмәләрендә ıгән саҡтарында ул бындай йөҙҙәрҙе, бындай мөғәмәләне үрмәне.

Шул. Үткэн килгәндә, бер эш килеп сығырға тора, инеı еҙ...

Мин?! Эш килеп сығырға тора тинем?! — ıргәнеүҙән Саяфтың шаҙралары бурҙаттай ҡыҙарҙы. — торған срҙән төш күрэң ахыры һин, Мәҙинә! Эш юҡ! Юҡ! ıаясаҡ та! Ситтән килгэн ҡырымҡытайға түгел, үҙекеләргә таба алмайым эште!

Аңламайым: мин лэһәң ошо ауылда тыуып үҫкэн ' Әсәйем... өлэсэйем... — Тамағына төйөр тығылыуҙан инә туҡтап ҡалды, тунының төймэһен ысҡындырҙы. — Ш һәрбаныу, Гөлбаныуҙар рухы алдында һеҙгә оят түгелме, þ Сойфуллович? Минең үҙемдең генэ эш стажым оҙда егерме йылдан ашыу! Ә атайым...

Ктте! Нимә, тәрбиәләргә булдыңмы? Тәрбиәлэгең н , миңэ бисә булалар уны!

һеҙ...

')йе, мин! Саяф Шәйхетдинов. Колхозда бөгөн мин ı ıı Геләһәм — аҫам, телэһәм — ярлыҡайым! Ә һиңә, на Хашимовна, мин бында хужа саҡта ярлыҡау юҡ!

Мин бит үҙем генэ түгел. Балаларым бар. Уларҙы ныргa, кеше итергә кәрәк!

Уҡыта алмаһаң, ҡыҙҙарыңды фермаға эшкә ҡуш. шızы алам. Үҙең килдең бит ун өс йәшендә, улар ҙа эшләр. (**ияф,** кирелә биреп, креслоһына ялпашты. — Башҡа... ıı ҙарың юҡмы?

|()ҡ. — Мәҙинә тэҙрә аша буран вәғәҙә итеп олой |.п ан Күктау һырттарына ҡараны. — һэм булмаясаҡ та. мицо, иптәш Шәйхетдинов, Мәҙинэ Ирназарова өсөн оҙда)ш юҡ, тигән яҙыу бирегеҙ.

Бирмәҫ тигәйнеңме? — Саяф, ҡағыҙ битен сыймаҡлап, им.1 быраҡтырҙы. — Ал! Ялыу менән бармаҡсыһыңмы? Халыҡ дошманы, ултырып сыҡҡан Әптеләхәт бисәһенең ıı эллә кем тыңлай!

Мәҙинә, ҡағыҙҙы алып, бөклэп, тунының кеçәһенә **тыкты**
— Хушығыҙ, Саяф Сәйфуллович. Ғүмерегеҙ булһа, минен балаларымдың кем булыуын күрергә өлгөрөрһөгөҙ.
— һин!.. — Саяфтың артабан ниҙәр ҡысҡырыуы баçҡыстан төшә башлаған Мәҙинәне ҡыуып етмәне.
Көнө буйы ул **үҙ-үҙенә** урын таба алмай интекте Хәтеренэн ғүмеренең иң ауыр саҡтарын да, еңеүгә, **уңышҡа** өлгәшкэн ҡыуаныслы минуттарын да үткәрҙе. Баҡһаң, **улары** хатта күберәк булған икэн! Һуғыштан атаһы имен-һау ҡайтты, аҡыллы, киң күңелле, йомарт, эшсән, укымышлм Әптеләхәтте осратты, Мэскәү һынлы Мэскәүгә укырға **индв, ҙур-ҙур** музыка белгестәренән белем алды, үҙе өсөн **йәнең** бирергә риза дуçтар тапты, улы тыуҙы, ире йәһәннәмдән үҙенән ҡайтып төштө, беренән-бере матурыраҡ **ҡыҙҙары** донъяға килде, Барсынбикә өлэсәһе уны килеп тапты, ауыл күрке булырҙай өй һалдылар, баҡса үçтерҙеләр, улы армиямам имен ҡайтты, Әбүбәкер ҙур укыу йортона инде, э үҙе күпмс кешеләр күңелен йырҙары менәнэн байытты, йырҙар уиы үçтергән кеүек, ул да халҡы йырҙарының ғүмерен оҙайтыим ы
Эйе, артабан йэшәү өсөн көс табырға Мәҙинэ ғүмерсснң иң матур саҡтарын йышыраҡ хэтеренә алырға тейеш. Ул берсэ ҡараңғы, берсэ яҡты уйҙарға бирелеп **малым** тәрбиәләне. Мәктәптән ҡайтҡан ҡыҙҙарының, атаһының тамағына йүнәтте. Давид Соломонович уға әле Мәскәүҙә укып йөрөгән саҡтарында: «Семит халҡы туғыҙ йыл өҙлөкһөҙ эшләй ҙә, унынсы йылына туктап тора. Уйлана. Киләсәктә мөһим булырҙай эш хаҡында фекер йөрөтә», — **тип** һөйләгәйне. Ахыры Мәҙинә ғүмеренең дә шул **уйланыф** миҙгеле етте. «Көндәлек эштәр менәнэн генә шөғөлләнһлм. мөһим эш эшләнмәй ҡаласаҡ, ғүмер бушҡа үтәсәк», — тип га фекер йөрөткәне хэтерендә Давидтың. Ул яҡтан Әптеләхәте Мәҙинәгә өлгө булырлыҡ ине: колхоз эшендә көн-төн **сапһ|** ла, мөһим эшен онотманы — көндөн күберәк өлөпюм селекцияға бағышларға тырышты. Атаһы Хашим **ц** һәүетемсә генә йөрөп яткан кеүек булһа ла, үҙенең иң мөһим эшен тамамлаған — «Ҡуңыр буға» паннонһын яһағаи. Үлемһеҙ легенда героиняһының образында үҙенең донъшл ҡарашын, зауығын, идеалын, мөхәббәтен мәңгеләштерып Барсынбикэ өләсәһе лә донъя мәшәкәтенә сумманы, тормош ығы-зығыһынан һәр саҡ өçтөн була белде. Күп укыпм,

нс дауалау серҙәренә көндән-көн нығыраҡ төшөндө. Бер шмаҡ рәнйеүе менән сирләгән ҡатынды әжәл нагь|нан йолоп алғас, ҡыуанысын Мәҙинә менән ı плшты: «һин, ҡыҙым, быны мөғжизә тиһендер... Әммә был мөғжизә түгел, был уңышҡа ирешеү өсөн мин тиçтә- ı иылдар тир түктем. Мөғжизә күктән төшмәй, уны мралар», — тине. «Мин дә уны булдыра алыр инемме?» гип кыйыр-кыймаç ҡына һорай ҡуйҙы Мәҙинә. «Маҡсат . . . . .куйһаң, булдыра алырһың. Тик икеләнмэ. Икеләндең — и»ң». Шулай тине өләсәһе.
Йе, өләсәһе эргәһендә булғанда Мәҙинэ көндәлек ҡкэттэр солғанышында йәшәй алған. Унын өсөн күп гкта оләсәһе уйланы, өләсәһе әҙер ҡарарҙар тапты. Хәҙер ні ыз. Инде уға бөтәһе өсөн дә уйларға тура килә. Уйлана горгас, көн етмәй, төнгә күсә.
(!ерем итеп кенә киткәйне, тәҙрә ҡапҡастарының елгә шып мрлауынан, төнләп төлөккә килеп еткэн юлсылай ıı ырғанып, ашҡынып тәҙрә ҡаҡҡандағы тауыш сығарыуынан щ китте. «Сеү! Әллә инде Дауыты ҡайтты?!» Тороп май шом ҡабыҙҙы. Көсәйгәндән-көсәйә барған буранға ҡолаҡ ы Юҡ. Бер ни юҡ. Тәҙрәгә бәрелгән ҡапҡастар түгел, үҙ и с ҡағыуына уянды, ахыры, ул. Бер уйлаһаң, күптән ı генә Дауытынан хат алды, укыйым да, эшләп тә . . . . .м, тип яҙған ине ул. Тик бына, эшләп тә йөрөгәс, ...гитутка инерлек булып әҙерлэнә алырмы? Хэйер, нтэ яҡшы укыны, алтын миҙал бирмәһәләр ҙә, миҙал ндар математиканан контроль эштәрен уның Дауытынан рı лндәрен укытыусылары **үҙҙәре** һөйлэй торғайны. **Юҡҡа** пиа ахыры Мәҙинә. Әсә йөрәге шулай тынғы белмәй шдыр инде. Әптеләхәте менән Ҡара диңгеҙгә барғаны рендә. Алҡынып, тулҡынып, ал-ял белмәй сайҡалып ш мкһеҙ-сикһеҙ һыуҙы күргәс: «Ошо була инде диңгеҙ, иил», — тине Әптеләхәт. «Эй! Ул йөрэк кеүек икән, — Мәҙинә, — әсә йөрәге кеүек».
Вммә Мәҙинә унын көҙгө кеүек ялтырап, мең дә бер Ч> менән уйнаған, тэңкә-укаларын ялтыратып, бай ıры ксүек ирәйеп, ҡояш менән көлөшөп, күҙ ҡыçышып, ıс һом тыныс ятҡан сағын да күрҙе.
Йе, Моҙинәгә лә, улдары өсөн нисек кенә хәүефләнмәһен, ıı шиырға, артабан нисек донъя көтөү тураһында уйларға

ваҡыт. Ғүмеренең Әптеләхәт менән үткәргән өләшә ни тиклсм сағыу, бәхетле булмаһын — ул инде үткән заман. **Шуд** бәхетле минуттар, сәғәттәр, көндәр, айҙар, йылдар өсөн Хоҙайға рәхмәт әйтеп, артабан атасаҡ тандарына **атларп** кәрәктер. Барсынбикә йәнә уға: «Үҙенде йәлләр ксшс юклығын белеп йәшәргә тейешһең, — тигәйне. — Әгәр ҙа ваҡытынды үткән уңышһыҙлыҡтар, ҡайғылар, юғалтыуҙар өсөн үкенеп, илап-шыңшып үткәрмәһәң, үҙ ғүмерендә бик күи изге эштәр эшләп ҡалырға өлгөрәсәкһең. Олатандың тормошонан ғибрәт ал: уның ғүмере революция тартып **алғаи** малы өсөн ҡайғырып үтте. Ҙурҙы бәләкәйҙән айыра белмәне Диңгеҙхан. Исеменә торошло булып ҡала алманы. Диңгеҙ тулҡынһыҙ ҙа йәшәй ала, ә тулҡындар диңгсҙһеҙ — бер **ҡасан** да. Киткән тулҡын артынан йүгереүҙән мәғәнә юҡ, унан һуц бит яңылары килә. Ул шуны аңлай алманы», — тине.

Сынаяҡ аҫтына иреп йәбешә башлаған май **ШӘМ** яҡтыһында Мәҙинә ҡулына йырҙар, риүәйәттәр яҙып барған дәфтәрен, ҡәләмен алды һәм эре хәрефтәр менән «Алыш бармы, тормош, атыш бармы? Мин еңергә килдсм яҙмышты!» тип яҙып ҡуйҙы. Кемдәр генә килмәгән дә, кемдәр генә китмәгән был донъянан! Прометей, Урал **батыр,** Зәрдөштри, Будда, Ғайса, Мөхәммәт... Улар, **ярай,** пәйғәмбәрҙәр. Ә кешеләр? Беҙҙең кеүек эҙәми **заттар** араһында аҙмы ни маҡсатына тоғро кешеләр? Шекспирҙың драматург булғыһы килгән, бик теләгәс, булған. Александр Беллдың йыраҡтан тороп аралашыу сараһын тапҡыһы килгән телефон уйлап сығарған. Эдисондың кеше тормошоип яҡтылыҡ өҫтәгеһе килгән — лампочка ижад иткән. Ә **кешс** күңеленең бөтә нескәлектәрен, йәшертен ағым-бөгөлдәрспоп алып иң күтәренке миҙгелдәренә тиклем сағылдырыу һәләтенә эйә моңсолар?! Улармы маҡсат ҡуймаған, улармм маҡсатына етеү өсөн ғүмер шәмдәре янып бөткәнсе үҙ асылдарына тоғро ҡалмаған?!

Әле урындыҡта бер нимә белмәй, үҙҙәренең йәшенә тәғәйен төштәр күреп йоҡлаған анау игеҙәктәренә **кәрӘ1** Мәҙинәнең кем булыуы һәм ниндәй маҡсатҡа ынтылыуы. Тамуҡтың үҙе аша үтеп, әжәл менән яғалашып, уны еңеп **илевд** ҡайтҡан һәм атаһының юлын ҡыумаҡ булып институтҡа **инер** өсөн әҙерлек курстарында укып йөрөгән Дауыты өсөн кәрәк уның ниндәй хыялға етергә тырышыуы. Ата-әсә тәрбиәһеплн

мәхрүм ҡалып, яҙмыш тулҡынына ташланған еренән осраҡлы шта ҡотҡарылып, йыр-моң юлына талпынған Әбүбәкере ...... корәк уға моратыга етеү. Бөгөнгө көнөнә һикәлтәле ......ар, юғалтыуҙар, һағыштар аша килеп, бахырҙан батырға, ҡыйратыусынан ижадсыға, яуыздан яҡшыға әйләнгән атаһы **Кйшимға** кәрәк Мәҙинәнең кем булыуы, ҡайҙа барыуы. Ғүмере илгиләләй ярһыған, ата улды, инә **ҡыҙҙы** белмәгән заман — вулканға ташланып, шунан серәшә-өҙгөләнә, ярһый-сәсәй п юи сыҡкан, үҙ хаталарын һәм аҡылы табыштарын тормош **Кырмна** әүерелдергән һәм заманынан тотош бер башҡа бейек **Күторелгән** Барсынбикә өләсәһенә кәрәк Мәҙинәнең кем **вулыуы.** Мәҙинә менән бер осорҙа тыуып, заман менән и ı пашып йәшәргә тырышҡан, усағынан ут өҙмәгән, ҡәҙимге гено юрмоштарын йырға һалып, бәләкәй донъяларын ҙур **цурға** күмеп йәшәргә, донъя көтөргә тырышҡан ауылдаштары өсөн корәк Мәҙинәнең кем булыуы, ҡайҙа барыуы.

Мәҙинә, май шәмен тотҡан килеш, төпкө бүлмәгә инде. Һүрән яҡтылыҡ Камалетдинов ҡулы менән эшләнгән Башҡорт мадоннаһы»на төштө: төҫтәр йәнләнде, ҡатындың **|ур ҡара** күҙҙәрендә яғымлы, ләкин көслө ут ҡабынды. Бына **циндәй** итеп күрергә теләгән Әйүп уны! Мәҙинә, ı мм.фланған кеүек, һүрәт ҡаршыһында туҡтаны. Күрәһең, I амалетдиновтың был һүрәт менән ни әйтергә теләгәнен шлау өсөн, Мәҙинәгә ете төн уртаһында май шәм тотоп ун ы ң ҡаршыһына килеп баҫыу етмәгәндер әлегәсә.

Әптеләхәтте партия сафына яңынан тергеҙеү мәсьәләһе **Квралған** бюро ултырышынан һуң Камалетдиновтың каоинетында бер саҡ Мәҙинә, Әптеләхәт — өсәүләп кп ı цылар. Шунда Әйүп Ғәзизович: «Кешенең ҡайҙан килеүе мөһим түгел, ҡайҙа барыуы, элек кем булыуы түгел, кем **булырға** тырышыуы мөһим», тигәйне.

Иindәй аҡыллы кешеләр менән осраштырған Мәҙинәне яҙмышы! Тик уларҙың ҡәҙерҙәрен һуңлабыраҡ анлай икән

Ҡыштың бүре олоуына ла, бала илауына ла оҡшатып буранлаған был төнөндә Таулылағы ҡыҙыл кирбестән Һ.| и.шған, тыштан ҡарағанда именлек, ныҡлыҡ бөркөп

ултырған йортта тағы бер кеше йоҡлай алмай борһалана. Ул Ғәлимә. Уйҙары ҡортлаған ҡорот мискәһеләй тулғана, бер ниндәй тәртипкә буйһонмай ҡымйыша-ҡайнаша.

Ике кеше ятырлыҡ тахтала төндәрен бер яңғыҙы борһаланырлыҡ ниндәй хата яһаны һуң тормошонда? Ул эшләмәнеме, ул тырышманымы? Әле ете синыфлы мәктәпто укып йөрөгән сағында уҡ үҙенең бәләкәй ҡусты-һеңлеләренсц өҫтөнә кейем алыр өсөн йәй буйы үҙҙәренән әллә ҡайҙа ятҡан ҡалаға еләк, сейә, муйыл, балан һатырға йөрөнө. Бср барғанда күберәк һатыр өсөн ул емеште көйәнтәләп то ташыны. Селләләрҙә тамағы кипкәндә лә туктап һыу эсмәне, кәметмәйем тип, һатырға тигән емеш менән тамағыи сылатманы. Эйе, Мәҙинә кеүек уҡ бөлгөнлөктә йәшәмәһә лә, еңел көн итмәне улар ғаиләһе. Атаһы мәрхүм үтә йыуаш, үтә баҫалкы бер бәндә булды. Әсәһе әйтмешләй, үҙ күләгәһенәм үҙе ҡурҡып йәшәне. Утын ҡырҡырға урмансынан ҡурҡты, һунарға йөрөргә — колхоз председателенән. Әйткән бер һүҙе, белгәне: «Ҡуй, кеше ишетер!» ине. Кешегә зыян ҡылманы, мәгәр файҙаһы ла артыҡ теймәне шикелле. Ғәлимәнсц Сәмәрәгә ауырлы икәнен әсәһе әйткәс тә: «Ҡуй, кешс ишетер!» — тине атаһы. Эйе, Ихсанбай ҡаршыһына барыи яғаһынан ала торған урында ла ул үҙ ҡурҡыуының ышығына боҫто. Хәйер, ул Ғәлимәнең ауырының кемдән икәнсн һораманы ла. Әсәһе генә, ниҙер һиҙенгәндәй, Ихсанбайҙар йәшәгән яҡҡа ҡарап әленән-әле йоҙроҡ төйҙө, ҡукыш тоҫҡаны, Хоҙайҙан биттәренә ҡара яҡҡан, ҡыҙын ғүмерлек бәхетһеҙ яһаған бәндәгә үлем һораны, ҡарғыш яуҙырҙы. Унайы сыҡкан һайын Ғәлимәгә гел төрттөрөп, унының кем икәнен иҫенә төшөрөп торҙо: «Эшкинмәгән. Һинең алдынғы һауынсы булыуың ҡороһон, эҙәм рәүешле кейәүгә лә бара алмағас! Ана, кешенең балдары, өҫтөнә кейер алмаш күлдәктәре булмаһа ла, район түрәләрен эләктерә!»

«Район түрәләре»нең кем икәнен дә, алмаш күлдәкһеҙ берәүҙең кем икәнен дә, әсәһенең тел төбөндә ни ятканын да яҡшы аңлай ине Ғәлимә. Саяф менән, һуңынан Ҡыҙрасов менән бәйләнеүендә лә шул әсәһе һалған ойотҡо — түрәго кейәүгә барыу — маҡсаты ятты буғай. һәм бына финал, уйнашҡа ышанған — ирһеҙ ҡалған тигәндәй, ул япа-яңғыҙ. Мал ғына түгел, кеше баштары аша атлап яһаған карьераһы ла емерелде. Әлбиттә, ул эле лә насар урында эшләмәй.

расовтың китерен ишетеү менән, тегеһе «ял йортона шр мор булып бар» тиһә лә, рабкоп председателе урынына ку һалды. Ул вазифала эшләгән кешегә көтөлмәгәндә ропмшм яһаттырҙы. Ғәлимә менән уртаҡ «эштәре» байтаҡ ингамылыр, ҡартлас, ҡото алынып, Ғәлимәгә йүгереп

Иишләйбеҙ, Ғәлимә Мөхәррәмовна, бәлә! — тине тыны ботөп.

Ә һин ревизорҙы һыйла, ашарға ресторанға йөрөт. — I • шмә үңәсенә сиртте. — Ҡалғанын кешенән һорарға түгел. ...ин лоһәң күпте күргән күк ял.

Председатель шулай эшләне лә. Әммә, үҙең эсмәһәң, Купакты һыйлап буламы — арыу ғына төшөрҙө. Эш урынына килеп, кабинетын асып инеүгә — милиционерҙар, профсоюз ...ҙәре. Акт төҙөнөләр һәм, эш ваҡытында иҫерек булғаны өсөн, партия тарафынан ҡаты шелтә бирелеп, эшенән ...ылар. Ҡарттан бушаған урынға, һыуытмайынса ғына, I > |имә үҙе ултырып алды. Хәҙер бөтә район, бөтә түрә-ҡара уның ҡулында. Ғәлимәнең рөхсәтенән тыш бер шифер, бер штакетник, келәм һатылмай. Ә машина кеүек эре-тәрә әйбер ҡаҡында һүҙ ҙә юҡ. Врач тиһеңме, милиция, суд, хатта шул \ к ;мшарат халҡы булһынмы — барыһы унын ауыҙына ҡарап Гора. Кәрәк көрәккә төшөрә. Ғәлимә көнкүреш әйберҙәре, ри ыҡ-тәғәм етешмәүҙән үҙенә күрә йәтеш тәхет яһап алды.

Икһеҙ-сикһеҙ уйҙарынан арып, ул Сәмәрә йоҡлаған яҡҡа Колак һалды. Ауыр тын ала. Көнә етеп килә. Ғәлимә уға урамға сығып ҡорһағын кәпәйтеп йөрөүҙе тыйҙы. Белгәне п ҡалыр, белмәгәне юҡ. «Ах!..» — йөрәгенә ут ҡапҡан I , |имә, тороп, стаканға коньяк һалды. Эсте. һыу кеүек үтеп ...ю, хатта яндырманы ла. Ихсанбай, йәне йәһәннәмгә китһә ı | юҡом үрсетергә, олатай булырға ята. Булмай тор! (әмәрәнең атаһы ул икәнен хәҙер һис кем белмәй. Мәҙинәнән башҡа... Эйе, Мәҙинә! Шаһиттар ҙа, Ихсанбайҙың ...ла юҡ ителергә тейеш! «Мин Ҡыҙрасовтың балаһын йөрөтәм!», имеш. Ғәлимә менән Ҡыҙрасов араһындағы мөнәсәбәттән һуң, һөйөүҙең көйөүгә, шатлыҡтың үкенескә, рвхәттең михнәткә әүерелеүенән һуң — был хәл бер ҡасан да иаясаҡ! Ҡыҙрасовтың балаһын күтәреп, Сәмәрә был тупһаһын бер ҡасан да аша атламаясаҡ.

Такта менән генә бүленгән йоҡа стена аша СәмәрвНСЦ «Бәпесем минең, ал ҡояшым!» тип йоҡо аралаш һаташҡамм ишетелде. О, ниндәй шатлыҡ, йөрәгенә һыймаған һөйөнөс менән әйтә был һүҙҙәрҙе ҡыҙы. Ҡыҙы һәм... көндәшв, Әсәһенең бәхетен урлаусы. Юлбаҫар... Ғәлимәнең бәхетка илткән юлын баҫты... Ҡараҡ. Мөхәббәт ҡарағы.

Күрше бүлмәлә Сәмэрэнең йәнә: «һөйөү бөтәһеион көслөрәк!» тигәне ишетелде. һүҙҙәр йоҡола саҡта әйтелһо ла, тауышында — наҙ, тантана. «Юҡ, — тип тешен шығырлатгм Ғәлимә. — Бөтәһенэн дә үс, үс алыу тойғоһо көслөрок! Илағыһы килгән бала атаһының һаҡалы менән уйнар, ги Күрәһең, һинең, балаҡайым, нығ, бик ныҡ илағың килгәндер...>

Барсынбикә палатаһында ятҡан көйө тышҡы донъянан килгән тауыштарға ҡолаҡ һалды. Паровоз ҡысҡырғаны, суйын тәгәрмэстәрҙең рельс шаулатып үткэн гөрһөлдөүс ишетелде. Ел олоуы баҫылмаған эле. Япрағы ҡойолмайыиса ҡышҡа ингэн ағастарҙың, сағаи алҡалары сылтырағаны оҡшатып ҡыштырлағаны сағылды ҡолағына.

Эт өрҙө. Өс палата аша ауырыуҙың ҡысҡырғаны, ишек дөбөрләткәне ишетелә. Төн. Барсынбикә яҡшы ишетеү түгсл, яҡшы күрә лә. Быуындары ла ун һигеҙҙәге кеүек яҙылды. Бөтә тәне еңелэйҙе, рухы йәшәрҙе — ырҡ көн буйы тик һыу эсеП йән аҫырауы килтерҙе уға был еңеллектәрҙе. Врачтар ашауҙан туктаған Барсынбикәне күптән мәйеткә һанай. Уны ана үло, бына үлә тип көтөүҙәре Барсынбикәне әллә күпме казаларҙан һаҡлап алып ҡалды. Юғиһә, аҡыллы кешеләрҙе лә бымда уколдар ярҙамында бик тиҙ аҡылдан яҙҙыралар. Барсынбикопс Хоҙай араланы. Кипкән, ҡоро һөйәккә ҡалған, бер кемгә ауыҙ асып һүҙ ҡатмаған ҡарсыҡтан улар күптән төңөлдө.

Барсынбикә иһә, киреһенсә, йәшәрҙе. һөйлэшмәү уға көс-кеүәтен һаҡларға ярҙам итһә, ризыҡланмау тәненән ғүмерс буйына тупланған юшҡынды ҡыуҙы, уҡыған доғалары йәнея күккэ олғаштырҙы, быға тиклем борсоп килгән бик күи һорауҙарына яуап килде. Күңеле менән ул Тирэклегә лэ бср нисә тапҡыр ҡайтып әйләнде. Йоҡлаған сағында йөҙө илаһи нур менән балҡыған Мәҙинә ейәнсәренә оҙаҡ-оҙаҡ ҡараи торҙо, уның тын алышын ишеткэндэй булды. Бүлэсәрҙәрс

Көнһылыу менән Күкһылыуҙы ла күҙәтте, уларға ҡарап үҫенен сабый саҡтарын хәтерләне, Дауыты менән Әбүбәкере иныиа ла барып әйләнде. Барыһын барланы. Эйе, көс-кеүәте күбәйҙе хәҙер Барсынбикәнең. Ул хәҙер аллалар тураһында ||и. олпдәләр хаҡында ла төптэн белеп һүҙ әйтеү көсөнә эйә. Әммә уның белгәндәре бөгөнгө кешегә кәрәк түгел. Ленин, • ги ии п тәғлимәттәре әфиун кеүек ойотто әҙәм балаһының иһенен. һуҡырға шәм тоттороуҙан мәғәнә юҡ.

Упан һуң... нисек сыҡмаҡ, нисек ҡотолмаҡ кэрэк уға бы нан? Сығармай торған кешелэрен ошонда биклэй бит хөкүмәт. Әлбиттә, Барсынбикә ҡарашы менән йоҙағын да аса, сығып ҡаса ла ала, лэкин был кәрәкме уға? Күрәсәген ул мге кешеләр менән бергә күрергэ, ҡайғыһын да, шат лығын да бергә кисерергә тейештер. Хоҙай бар әҙәмде үҙе цмткан, тиң яратҡан. Ә Хоҙайҙан ҙур булып булмай.

Ҡапыл коридорҙы аяҡ тауыштары янғыратты. Барсынбикә һиҫкәнде, тороп ултырҙы, ахыры, бында Ки юләр. Асҡыс шылтыраны, аҡ халатлы ир күренде. Хужа үҙе баш табип. Ут тоҡандырғас, ул аптыраулы ҡарашын Барсынбикәгә төбәне:

һин... тереме ни?!

Барсынбикә өндәшмәне. Күңеле тыныс түгел хужаның. ие һил кеше ете төн уртаһында ауырыу ҡашына мшлме?!

Ниңэ өндәшмәйһең? Ҡырҡ көн тәғәм ризыҡ капмағанһың, э күҙҙәрең үтә ҡарай. Кем һин, Моратова? Кешсме, әллә теге буржуаз идеалистар әйткәнсә, рухмы?

Ьарсынбикә йәнә өндәшмәне. Эй Хоҙайым! Түҙем бир. Донъяны матурлыҡ ҡотҡарыр тиҙәр ҙә бит, ғәмәлдә цнп.яның күсэре — Түҙемлек.

Яуап бирергә ҡабаланмай Барсынбикэ. һиңэ, күҙле Һуҡырға, рухтың хайуанды кешегә, кешене илаһи затҡа ⅱ мпдерер көскә эйә булыуын аңлауы үтә ауыр. Быны аңлау Килюнгэ тиклем ошо таш зиндан эсендэ беҙгә күпме ғүмерҙе ᵌ кисерергә, ябай бэндэләрҙең илаһилыҡҡа, әүлиэлеккэ пмыу серҙәрен бергә күҙәтергә тура киләсәк. һин мине гән юҡ итергә ҡурҡаһың, сөнки һинең эсеңә яман сир іәі лн. Табип булараҡ, быны һиҙәһең, эммэ унан ҡотолоу н күрмәйһең. Батып барған кеше һаламға тотонғандай, лрауҙың һәм сараһыҙлыҡтың сигенә сығып, 7 һанлы ошо

ı 171

палатаға ете төн уртаһында килеп ингәнһең. Мин аңлайым һине, хужа кеше!

— Ярай, — хужа артында торған мыйыклы ирга өндәште. — Өҫтөн, түшәген алыштырығыҙ, бүлмәһен елләтегеҙ. Ашаһа-ашамаһа ла, ризыҡ алдында булһын.

Хужа аҡһыл ирендәрен ҡымтып, бер нөктәгә карМ ҡаткан Барсынбикәгә тағы бер ҡараш ташланы ла, башыН эйеп, ҡулдарын халат кеҫәһенә тығып, уйланып тора биргә кинәт боролоп палатанан сығып китте. Уның артынса ишек йәнә бикләнде.

Әбүбәкер йоҡонан күңелендә тумалған билдәһеҙ шатлыҡҡа сәсәй яҙып уянды.

— Хәйерле иртә, Лидия Николаевна!

— Хәйерле иртә, ыласыным, — Лидия уның карауагм ҡаршыһындағы ултырғыска ултырҙы. — Ниндәй төштәр күрҙең, минең баһадирым?

— һәйбәт! — Әбүбәкер ырғып тороп, Лидим Николаевнаны күтәреп алып, бүлмә буйлап өйөрөлдө. һәйбәт, минең изге Мариям, бәхеткә юл асыусы һомайым!

— Етте! Башһыҙ! Ә кем ул һомай?

— һомаймы? — Әбүбәкер Лидия Николаевнаны һаҡ ҡына кире урынына ултыртты. — Ул — мифик зат. Ул кош та, ҡатын-ҡыҙ ҙа була алған. Урал батырҙың ҡатыны. Ур;ш батыр үлгәс, ул инде башҡаса кешегә әүерелмәгән. Мәгәр уның ҡанатынан төшкән күләгә ҡағылған кеше алдында бөтя юлдар асыла, йәғни-мәҫәлән — йәшел урам!

— О, һин мине бына кемгә тиңләйһең! — Лидия Николаевнаның зәңгәрһыу күҙҙәре йәшкә тулышты. — Кисо оҙаҡлағас, әллә инде дөйөм ятаҡҡа күсергә йөрөй микән был бала тип, бик хафаландым... Әлләниҙәр уйлап бөттөм...

— һеҙ нимә һөйләйһегеҙ, Лидия Николаевна? — Әбүбәкер балаҫҡа ултырып, башын уның алдына һалды. — һеҙҙе табыу ҡыуанысынан мин һаман айнып етә алмайым. һеҙ бит миңә Мәҙинә әсәйем, Барсын өләсәйем кеүек яҡынһығыҙ... Ә мин оҙаҡланым, сөнки... — Әбүбәкср колаҡтарына тиклем ҡыҙарыуын тойҙо, — сөнки...

и инде, һөйлә лә ҡуй, барыбер һөйләйәсәкһең бит

кср башын күтәрҙе, арҡаһын үҙе яткан карауатка ММИ. ҡыуанысынан аяҙ көндө мөлдөрәп яткан диңгеҙҙәй күҙҙәрен түшәмгә төбәне. — Мин бер ҡыҙ менән .... ім, Лидия Николаевна!

Кыз... — Лидия баҙнатһыҙ ғына күҙен күтәрҙе. — ор музыкаға ҡарағанда һинең тормошонда ҡыҙҙар рын билэй башламанымы икэн?

<), Лидия Николаевна! Ғәйеплемен, яҙыҡтарым юк и.жин... бындай ҡыҙҙы һис осратканым юҡ ине. ндп уның берсә йәшел урман, берсә диңгеҙ, берсә күк буй-һыны, атлап китеүҙәре... Их! Лидия Николаевна, миисң күҙемә генә күрендеме икән? Әллә ул... күктән һсрэй зат булдымы икән?!

Ысынлап шулай сибәрме?

Бына инде, — Әбүбәкер тороп, арлы-бирле штөрҙө, ҡыҙҙың һылыулығын тасуирларға һүҙҙәр таба шиекте. — Шағир булһам, билләһи, шиғыр яҙыр һүрәттәре!

Бәй, ул рәссаммы ни?

Ну! — Әбүбәкер кире урынына ултырҙы. — нкулға ауылға кайтһам, игеҙәктәргә бүләккә матрешкалар ым тип, Эрмитажға барҙым. Шунда киоск эргәһендә уны. Матрешкалар бик матур ине. Әле аҡсаһын пимен, ҡулыма алып, әйләндереп-әйләндереп ҡарап һүрәттәрҙә шундай еңеллек, сафлыҡ, матрешкаларҙың лс беҙҙең Кукһылыуҙыҡы кеүек — арбап, тамылйып, гора. «Ахыры, бик оҡшаттығыҙ...» тигән наҙ тулы кл башымды күтәрһәм — ул! Күрҙем дә, уның төпһөҙ и уҙой ҡараштарынан йотолдом. Бөтөнләй баттым... «Мин |.пы ла матурыраҡты эшләй алам, кемгә алаһығыҙ?» ти нцлеләремә», тинем. «Улар шулай күпме ни?» ти был «Икәү. Бер иш. Юҡ. Береһе... һеҙгә оҡшаған. һеҙҙең Матрешка уға оҡшаған,» тинем. Ҡыҙ көлә. Мин уны гиклем оҙата барҙым. Бер аҙнанан шул урында имырға һүҙ ҡуйыштыҡ.

Иссмен... һорашманыңмы?

Исемен?! — Әбүбәкер тубығына һуҡты. — Эх! Иҫтән кин!

Эштән ҡайтыр мәл етһә, Ҡыҙрасов, ситлеген тарһышаи януар кеүек, арлы-бирле йөрөй башлай. Бушлыҡ, толкаһыҙ, эс бошорғос тынлыҡ көтә уны өйөндә. Берәй нәмәне яңылыш ватып, урынынан ҡуҙғатып ҡуймайым тигән төҫлө шым ғына йөрөгән ҡатыны, йоҡонан башҡаны белмәгән һары бесәйҙәре, эле был, әле теге кәштәнән йәнһеҙ күҙҙәре, ҡатып ҡалған ҡараштары менән күңелде өшөткән йомшаҡ, ҡаты, тимер йә фарфор уйынсыҡтары — барыһы туйҙырған, барыһм еләткән. Эшендә генә тыныс: бөтәһе лә юлға һалынған. ПлМ үтәлә. Артығын етештерһәләр продукцияны йәшерөп торалар, арттырып үтәһәләр (э уларҙың үтәмәй ҡалғаны юҡ) гөрләтеп премия алалар. Фатирға, машинаға, башҡн көнкүреш тауарҙарына сират әкренләп ҡыбырлай. Фатир һорап йәненә тейгәндәргә ҡайһы саҡ һарыуы ҡайнап: «Ницо халыҡҡа үҙҙәренә өй һалырға ер биреп, төҙөргә рөхсәт итвя кенә ҡуймайҙар икән?!» — тип һуҡранып та ала. Әммо, икенсе яҡтан, хөкүмәттең халыҡты торлаҡ менән үҙенә баҡма итеп тотоуының дөрөҫ сәйәсәт икәнен дә таный: шулай булмаһа, бәләкәй эш хаҡына нисек түҙеп эшләп йөрөһөп улар. Производстволағы тәртип тә шуның менән аңлатыла: эскән, эшкә һуңлағандар фатир алырға теләүселор исемлегенән һыҙып ташлана. Хатта баҡса үҫтереү өсөн ер биреү ҙә бында нык ҡыҫылған. Ер алыр өсөн дә һим производствола ете ҡат тиренде түгергә, эш күрһәтергә тейешһең. Шуға күрә Ҡыҙрасов бәләкәйенән ҙурына тиклсм контролдә тота, уның рөхсәте булмаһа, сүп тә бүленмәй.

Әммә эш — эш менән. Йыйған донъяһының, тапҡ;ш аҡсаһының ҡыуанысын күрмәй Ҡыҙрасов. Ҡайны-ҡәйнәһс лә бер аяҡтары менән күптән гүрҙәләр. Уларҙан зиннәтле йыһи тулы фатир, дача, машина, аҡса ҡаласаҡ. Ҡыҙрасовтмм үҙенең дә ҡуйын-ҡуңысы буш түгел: районда ул бында ҙур ғына иғәнә менән күсте. Теттереп, типтереп йәшәрлеге бар! Секретарь ҡыҙ ҙа төҫкә арыу ғына. Ерәндәрҙе йәнем һөймәй тигәс, ул иртәгәһенә үк сәсен ҡараға буятып килде; сиғаи бисәләре кеүек булғанһың тигәс, башын бер төндә аҡка әйләндерҙе. Ҡыҙрасовтан алда бер түгел өс директорҙа секретарь булып эшләгән был егерме алты йәшлек ҡыҙыҡай

нима лйтерен алдан белеп, нисек ярарға белмәй

кнопкаға баҫты.

I мииапмм һеҙҙе!

Ин

гарь ҡыҙ уның ҡаршыһына тып итеп килеп тә

ҡрасов үҙенең төпкө ишегенә ымланы:

һнсң булмаһа, әйҙә...

Тоноҡ яҡтылыҡ ҡыҙҙың йөҙөн аҡһылыраҡ, ҡара

|.ц. шундаи үк төҫтәге свитер кейгән һынын һомғолораҡ

и килтерәйемме?

һуңынан. Сисен.

I ыҙ ашыкмай ғына сисенә башланы.

расов тороп яҡты лампа ҡабыҙҙы. Яҡтылыҡ секретарь һына булмай сыҡты: тәне үҙенең ун һигеҙҙәге ын, сафлығын күптән юйған, түштәре лә көсөк копгойҙекеләй бушап, һәлпәйеп тора. Эх! Ҡайҙа инде ирәгә стеү! Уның тығыҙ, һыу һөләгөләй шыма тәненә маҫ элек үк ҡалтырата башлай ине. Ит күрмәгәнгә иа аш тигәндәй генә шул был.

Әҫәре ҡайтҡан Ҡыҙрасов, костюмын да һалып ҫтан, ҡыҙға кире кейенергә ҡушты.

кайтып ингәс тә ярһыуын баҫа алманы ул. Етмәһә, һиллаһы кәйефһеҙ ҡаршы алды:

Оҙаҡланың. Аш һыуынып бөттө, — тине ул, тегенән ныҕыраҡ көйһөҙләнеп.

Лшар инең...

Вер үҙемә күңелһеҙ, — Камилла танауын пкылдатты. — Районда эш тип саптың, бында ла шул уҡ

Күңелһеҙ булһа, — Ҡыҙрасов йән асыуы менән стенка лһеиән Камилланың нисәнселер йылда, ниндәйҙер а яулаған көмөш төплө гәлсәр кубогын алды ла, нсп сспрәккә урай башланы.

Нишләйһең ул?!

Күңелһеҙ тиһең бит. — Ул «бәпәй»ҙе бисәһенең ана килтереп һалды. — Ошоларҙы алам тип һаулығынды ргәс, шуларҙы тирбәтеп ултыр. Күңелһеҙ тиһең бит!

— Бәғерһеҙ! — Камилла алдындағы «бәпәй»ҙе паркет иҙәнгә күтәреп бәрҙе. — Ҡанһыҙ!!!

Инде төн еткәс, Ҡыҙрасов түшәгендә гәзит ҡараштырым ятҡанда, Камилла йоҡо бүлмәһенә килеп инде. Күҙҙәрс шешенгән, ҡыҙарған. Инде лә тахта ситенә ҡыйыуһыҙ ғына ултырҙы. Затлы пеньюар уйымынан аҡһыл, йәнһеҙ түштәрс күренә, ирендәре көлһыу, муйынын күкһел тамырҙар йырғыслаған. Эйе, йәл ул Ҡыҙрасовҡа. Уҫал, тәжжәл бер бисә булһа, уға еңелерәк булыр ине. Иренең бөгөнгө кылығы, күрәһең, уны бөтөнләй сығырынан сығарған.

— Заһир...

— Әйт...

— Мин, — Камилла юрған ситен бөтәрләпме-бөтәрләнә, — мин...

— Әйт тинем бит.

— Мин сабыйҙар йортона сиратҡа торҙом.

— Шунан?

— Йәш бала килһә, бирербеҙ, тинеләр.

— Шуны элегерәк эшләй алмай инеңме?

— Мин, — Камилланың нескә, ҡанһыҙ ҡолаҡ япраҡтары алланды. — Үҙебеҙҙеке булыр тип көттөм бит...

— Йүнле әҙәм бала ташламай.

Әйтте лә, Ҡыҙрасов телен тешләрҙәй булды: үҙе һуң, үҙе... Йәп-йәш ҡыҙҙы бала менән ҡалдырып, яҙмыш ҡосағына бырақтырманымы? Юҡ, әлбиттә юҡ. Ҡыҙрасов бит Сәмәрәгә аборт яһарға ҡушты, ярҙам вәғәҙә итте.

— Улар миңә... баланың... нәҫел-нәсәбен тикшереп бирербеҙ, тинеләр.

Ҡыҙрасов үҙен ҡулға алды, битараф тауыш менән:

— Теләһәң ни эшлә, бала бит һиңә кәрәк, — тигән булды, ә үҙенең йөрәгенә ләйсән яуып үткәндәге кеүек йылы йүгерҙе, йәш бала һөйөү теләге үҙендә лә көслө икәнен шунда аңланы.

Ҡыҙҙарының һаман мәктәптән ҡайтып инмәүе аптыратты Мәҙинәне. Иртәнсәк мейескә яҡҡан ут янып бөтөү менән сөгөнгә ит менән йәшелсә турап быҡтырырға ҡуйғанлыҡтан,

н сҫ таралған, самауыры ла ҡайнап сығып, өҫтәлгә

ш Әле сәғәт һуғыуынан башҡа бер ни менән

ш п.шлыктың ҡыҙҙары ҡайтып инеү менән әҫәре лә

Был тынлыҡ Көнһылыуының ишектән атылып

Һәйем! Ҡыҙҙарың бик бейек һәм бик текә фәндәр

ынын еңеү нөктәһенә бер түгел биш флаг ҡаҙап ҡайтты!

кысҡырыуы менән юкка сығасаҡ.

Эйе, иксһе ике төрлө улар, бер генә сифаттары оҡшаған:

ыи ҙар, тәрәндән фекер йөрөтә беләләр. Күкһылыу

Көнһылыуы бейеүгә әүәҫ. Әйтерһең дә улар

инәнен һәләттәрен икәүһенә ғәҙел итеп бүлешеп

ҙар

Капҡа асылып ябылды, ғәҙәттәгесә көлөшөү тауыштары

ымәне. Был кем килә икән тип, Мәҙинә тәҙрәгә

ш ын. Сеү! Күкһылыуҙы салҡатан яткырып күтәргән

ын, башын эйгән, үҙенең һәм туғанының портфелен

ргән Көнһылыуын күрҙе Мәҙинә. Ҡото алынып ялан өҫ

йүгереп сыҡҡанын үҙе лә һиҙмәй ҡалды.

Ни булды? Атай!..

Борсолма, Күкһылыу әҙерәк... танауынан ҡан китә.

')й алла! — Мәҙинә Күкһылыуҙы урындыҡ ширлегенә

I, оҫтөн сисеп, ҡанын туктатты, битендәге йәрәхәтте

мсиэн һыпырҙы. — Эй алла! Мейеһе һелкенмәһә ярар

Күкһылыуҙың башын алдына һалғас, ишек төбөндә һаман

трған Көнһылыуына иғтибар итте Мәҙинә:

һәйлә, нимә булды?! — Шунда ғына ул Көнһылыуҙың

күҙ гөбө ҡара янып сыҡҡанын, манлайында оролай шеш

ығын шәйләне. — Кем менән һуғыштың?!

Үҙҙәре бит...

Кем ул... үҙҙәре?

Саяф малайҙары...

Шунан?!

Үҙҙәре бит...

Мин һинән ни өсөн...

Ә нимә үҙҙәре миңә гел «Барсынбикә өләсәң — кулак ҡыҙы, атайың — халыҡ дошманы, Күкһылыуың — Күкәй, үҙең Күтәс-Көнөкәс» тип үсекләй?!

- Шунан?!

— Мат ҡурма инде балдарҙы, Мәҙинә, — Хашим Көнһылыуҙың ҡулынан портфелдәрҙе алды. — Сисен, балам...

— Атай, ҡыҫылма... Мин һинән һорайым, Көнһылыу: кем башланы һуғышты?

— Мин!.. Түҙмәнем!

— Шунан?!

— Шунан... — ул танауын мыш-мыш тартып зәп-зәнгәр күҙҙәрен түшәмгә текәп тын ғына ятҡан туғанына ҡарап алды. — Улар миңә күмәкләп килеп йәбешкәйне, Күкһылыу инде араға...

— һин башланың, туғаның туҡмалды. Шулаймы?!

— Мин һуғышҡанда эргәлә йөрөмә тип күпме тылҡыйым?!

— Эй балалар! — Мәҙинә ҡыҙын күтәреп түр яҡҡа диванға сығарып һалды. Күкһылыуҙың йөҙө ап-аҡ, маңлайынан һалҡын тир бәреп сыҡты. — Мейең һелкенгән, тик кенә ят, йәме?

...Кискә табан мал-тыуарын ҡарап, кәртәгә ябып килеп ингән Мәҙинә эңер ҡараңғылығында ҡыҙҙарының экрен генә сөкөрҙәшкәнен ишетте.

— Нимәгә килеп ҡыҫылдың, йә, нимәгә? Мин шуларға бирешермен тинеңме?

— Ергә һалып иҙгесләй башланылар бит һине. Нисек түҙеп...

— Түҙмәгәсең, йөйлә бит булып йөрөйһөң инде. Етмәһә, әртис булам тиһен, йөйлә битле әртис була тиме?!

— Бөтөр әле, эсәй һыйпағанда битем эҫе-е-е булып торҙо, эсәй ҙә бөтөр тине...

— Мин һуғышҡан һайын ҡыҫыла торған булһаң, битендең тиген ере ҡалмаҫ!

— Ә һин һуғышма!

— Йәберләгәндәренә түҙеп торормон бына!

— Эт өрә, бүре йөрөй...

— Йәберләүселәргә яуап бирмәү егетлек түгел!

— һин малай түгел!

— Ҡыҙҙар үҙ-үҙҙәрен яҡларға тейеш түгел тип ҡайҙа яҙылған?!

Быларҙы тыңлап торған Мәҙинәнең йөрәге өшөнө: йәш кенә, ыуыҙ ғына күңелдәргә яуызлыҡ ҡағылды. Үс алыу

иде Көнһылыуы йөрәгенә. Ҡасандыр кешелек ҡорған синфи дошман идеяһы, күпме ваҡыт үткәс эрҙәребеҙ йөрәге аша һарҡып, бүләсәрҙәребеҙ ...гып сығасаҡ, тигәйне Барсынбикә. Етмәһә, Мәҙинә менән Сайф бәрелешенең шаһиты булды. гоҡанған уларҙа Сайфҡа ҡарата нәфрәт, Сайфтың үҙе кирошергә хәлдәре етмәгәс, уның малайҙарына бүре оашлағандар. Сайф малайҙарының мөнәсәбәте — күңеле сағылышы. Нисек, ҡайһылай ырырға уларҙы? Яуызлыҡ орлоҡтарының тамыр нисек туҡтатырға? Күкһылыу эсендәген баҫырыу ...ю лә бит, ләкин ул да Сайф малайҙарын күрә

Мәҙинә уйҙарынан арынырға, иғтибарын ситкә тергә гырышты. Ҡорғанды күтәреп, эңер ҡараңғылығы алған тышҡа күҙ һалды. Ана, ҡаршылағы өйҙә атаһы ҡабыҙҙы. һаман үҙ донъяһында йоҡлай ул. Хыялынан Таңдыса—Гөлбаныуын яңғыҙ ҡалдыра алмай. иң һуңғы күмер көлгә әйләнгәнсе уның һүрәт-күҙен алмай. Ғәжәп донъя. Ғәжәп кеше күңеле. ...лек атаһындағы үҙгәреште төшөнә алмай йөҙәй ины. Һуғышмы, күргән ғазап-ыҙаларымы үҙгәртте уны, уйлай торғайны. Хәҙер аңланы: мөхәббәт үҙгәрткән уны. юмсң иң тәрән төпкөлдәрендә ятҡан гүзәл тойғоларға ул мөхәббәттә тапҡан. Әптеләхәт тә Мәҙинәне ук һөйөү менән яратты. Шул һөйөү уны үлемдәрҙән өрәк яһаны, асыштар яһатты.

Яратҡан йөрәктә хәйлә булмай тигәндәй, атаһы күңеле ш һаман балаларса саф, экиәт батыры кеүек бер ҡатлы.

Әсәй!..

Мәҙинә һиҫкәнде.

һинме, Күкәнәй?!

Мин... Эргәнә ятып ҡына торайыммы, эсәй?

Ят, ҡолонсағым. Башың ауыртмаймы?

Юҡ, әҙерәк әйләнә генә.

Үтер. Мейенде урынына ултырттым, төҙәлерһең...

Әсәй, э Урал батырҙың тылсымлы таяғы ысын булған ш?

Булған.

Эх! Әгәр ҙә миндә булһа шул таяҡ!

— Нишләр инең?

— Атайымды... терелтер, өләсәйҙе ҡайтарыр, Әбүбәкер ағайымды, Дауыт ағайымды алып ҡайтыр, тағы... олатайҙы йәшәртер инем.

Мәҙинә икенсе ҡабырғаһына Көнһылыуының йылышыуын тойҙо.

— Тик шуныһы: тылсымлы таяҡ менән Урал изге эштәр ҡылған, Шүлгән ҡулында ул яуызлыҡ ҡоралына әйләнгән.

— Ә мин... — Көнһылыу тұҙмәй тороп ултырҙы. — Минең тылсымлы таяғым булһамы!..

— Йә, йә, — Мәҙинә Көнһылыу яғына әйләнде. — Нишләр инең?

— Мин яраткан кешеләремде үлемһеҙ итер инем!

— Әлэйһәң, һин «Урал батыр»ҙы дөрөҫ анламағанһың. Унда бит «Йәншишмәнән эсмәгеҙ, миндәй хурлыҡ күрмәгеҙ» тип әйтелгән. Тағы ла унда «Донъяла мәңге ҡалыр эш — ул да булһа яҡшылыҡ. Күккә лә осор яҡшылыҡ, һыуға ла батмаҫ яҡшылыҡ, утҡа ла инмәҫ яҡшылыҡ, телдән дә төшмәҫ яҡшылыҡ» тиелгән...

— Ә уҡытыусы апай: «Урал батыр» — ул әкиәт. Ундай кеше булмаған», ти...

Инде Күкһылыу ҙа тороп ултырҙы:

— Ә мин булған тинем! Барсын өләс уны эле лә тере, рухы унының мәңгелек ти торғайны...

— Туҡта, эсэй әйтһен! — Көнһылыу Мәҙинә аша үрелсп Күкһылыуҙың күкрэгенэ ҡулын һалды. — Тик кенә ят, юҡһа...

— Нимә, юҡһа?!

— Мейең һелкенер!...

— Көнһылыу! — Мәҙинә уға асыуланып өндәште. Кеше туғанынан шулай көлә тиме?!

— Ә мин көлмәйем, дөрөҫөн әйтәм: себен теймәҫ сер итср ҙә ул. Төртһәң ҡолап бара, ҡолаһа башы ярылып бара... йә мейеһе һелкенә!

— Күкһылыу... — Мәҙинә йомшаҡ ҡына итеп унығ сәсенән һыйпаны. — Ят, балам, һиңә бөгөнгә ҡуҙғалмаҫҡа кәрәк. Ә һин, Көнһылыу, телеңә һалышма. Юғиһә, Шүлгои кеүек булып ҡуйырһың. Ата-эсәһенең һүҙенә ҡолаҡ һалмағас, ана ниндәй яуыз йән булып киткән Шүлгән!

пл батыр ысын булғанмы, юҡмы?! — Көнһылыуҙың
....иван унынң бөгөн һорауына яуап алмайынса
I ҡсын гошөндө мәҙинә.
һөйләйем, элэйһән. Иртәгә — ял. Мәктәпкә барырға
Ба п к н, азаҡ бергәләп сәй ҙә эсеп алырбыҙ, мейескә ике
, тыртҡайным.

I урғай?! Күҙҙәре йөҙөммө, әсәй?!

I урғай ҡасмаҫ, һөйлә инде, әсәй!.. — Күкһылыу янып
....итен әсәһенең һалҡынса беләгенә терәне. — Мин
ны икс ҡат укып сыҡтым, бер ҡараһаң, әкиәт һымаҡ,
инцаһаң, ысын кеүек...

Беҙ йәшәгән Ер ғәләмдең үҙе кеүек ҡарт, боронғо.
I ш >пцо, срҙе Хоҙай ете көндә яраткан, тиелә. Ә ул сакта
hар кон хәҙерге 50 мең йыл оҙонлоғона тиң булған! Тәүге
юр беҙгә бер ҙә оҡшамаған: улар тик нурҙан торған,
тары мсиән күкте иңләп йөрөгән. Миллион йылдар үткәс
умар ғығыҙлана төшкән, тик барыбер каршылыҡһыҙ
пткәндәр, бер ерҙән икенсе урынға осоп ҡына
ш 1.||1...

Гошомдә мин дә гел осам! — Көнһылыу йәнә тороп
ырҙы - Гел, гел осам!

Мип дә...

Гимәк, һеҙ осоуҙың нимә икәнен беләһегеҙ. Аҙаҡ
ын юне тағы ла ныҕыраҡ тығыҙланған — беҙгә
шганыраҡ тәүге кешеләр барлыҡҡа килгән. Улар буйға
оҙон, бик изге күңелле булған. Беҙ хәҙер уларҙы аллалар
наибыҙ. Прометей, Зевс, Марстар ана шулар нәҫеленән
ш Уларҙан «алыптар» тип аталған кешеләр барлыҡҡа
>м Улар кәүҙәгә тәүгеләренән ҡайтышыраҡ булһа ла,
ш бик бейек, бик көслө булған. Бик күпте белгәндәр, ҙур
имдалар, ҡалалар төҙөгәндәр, һауала осҡандар, үҫемлек
ш і укланғандар, һыуҙа ла, ерҙә лә йәшәй алғандар,
і гогп орендә емештәр, кәрәкле үҫемлектәр үҫтергәндәр.

Ыыу аҫты батшалығы... ысын булғанмы ни?! —
ы п ыу, тұҙмәй, Көнһылыу яғына күсеп ултырҙы. —
шпсттеңме?

< сү оле... «Аҡбуҙат»ты уҡығанда әйттем дә мин һиңә!
п |үион дэ шунан сыҡҡан тоҡом, ти бит Хөсәйен апа...

Ьүлдерһәгеҙ, башҡа һөйләмәйем. — Мәҙинә юрый
ынһа ла, ҡыҙҙар ҡурҡыуға төштө.

— Ҡап та ҡоп! Ҡара урманда — ҡара туп! — Көнһылыу ауыҙын ҡапланы.

— Нимә тип туҡтаным әле?

— «Диңгеҙ төбөндә емештәр, кэрэкле үҫемлектор үҫтергәндәр» тинең. — Көнһылыу йотлоғоп әсәһснсц күҙҙәренә ҡараны. — Шунан?

— Шунан... Уларҙың тылсымлы торбалары ла, һөйләшо торған аттары ла булған. Үҙҙәренә кәрәк ғилемдә улар мэктэптэ укып түгел, йыһандың үҙенән туранан-тура алғаи, әҙер килеш.

— Йыһанда эҙер ғилем бармы ни?!

— Көнөкэс, һин бүлдермәҫкә ант иттең!

— Ул ғилемде алыптарҙан алда йәшәгән алла затлылар ҡалдырған. Ләкин тормош гел бер көйө генә бармай. Бер заман күктән ергә бик ҙур таш килеп төшкән, алыптар йәшэгэн ер океан төбөнә киткән, ерҙе һыу баҫҡан. Шундай ҙур күк есеме менэн төкөшкэн Ер сэсәгән, ҡара һөрөм, утлы йәштәр түгеп илаған, алыптарҙың күбеһе һәлэк булған. Улар төҙөгән пирамидалар ғына ултырып ҡалған. Һыу баҫыуҙан һуң Ерҙә һауа шарттары үҙгәргән, Ер күсәренән күскән...

— Кеше... ҡалмағанмы бер ҙә?!

— Һуң, Көнһылыу, үҙең уйлап ҡара: кеше ҡалмаһа, без булыр инекме?

— Кеше әҙ-мәҙ ҡалған, ләкин улар, бөтөнлэй икенсс шарттарҙа йәшәгэс, бәләкэслэнгән, бәғзе өлөшө ҡыраҕайға эйләнгән. Әзрәкә ана шундай шаҡшылар затынан булған. Алыптарҙың ҡайһылары, Ергә янаған ҡурҡынысты алдан һиҙеп, тау ҡыуыышлыҡтарына ҡасҡан, ҡайһылары үҙҙәрс һалған пирамидалар аҫтына йәшеренгән.

— Унда йәшәп буламы ни?!

— Һыуҙың нисә хэле бар тип үттегеҙ физиканаи, Күкһылыу?

— Шыйыҡ, боҙ, йәнә боҫ...

— Ә бына уның дүртенсе хәле лә барлығын берәү ҙә белмәй, ә кеше тэнен барлыҡҡа килтереүсе күҙәнэктең күи өлөшө һыуҙан тора. Алыптар тэнде билдәле температурала серемәҫлек итеп һаҡлау серен белгән.

— Ә йәндәре?

— Йән бит мәңгелек. Кәрәк сакта йән үҙенең тәненә кирс ҡайта ала. Терелгән алыптар, үҙҙәренән һуң йәшәгән кешелор килсм, уларҙы аҡылға, ғилемгэ, изгелеккә өйрэтэ

Ә үҙҙәре телэһәләр ҡошҡа, телэһәләр атҡа әүерелә

Гы к ымлы таяҡты ла шунан алып килгәндәрме?

Ме, умы ла. Урал менән Шүлгәндең әсәй-атайы ла ана и к м лгэн чаттар булған. Ерҙә ғәҙеллек урынлаштырыр, гкшынан айырыр заттар кәрәк булғанға килгәндәр, шп Урал менэн Шүлгэн тыуған. Урал үҙе кеүек, ләкин и ю югарыраҡ, аллалар заты Самрау һәм уның ҡыҙҙары менон и,1млонсшкә инә алған, улар ярҙамында кешеләр іена ичгелек орлоҡтары сәскән, яуызлыҡты еңеп, юк даи алған. Ә Шүлгән ҡасҡан. Яуызлыҡ шулай гел ш boçoп йәшәй, мәле менэн өҫкә сыға. Сыҡһа, йәшәүгә шы смергес эштәрен эшләй.

Урал батыр... оҙаҡ йәшәгәнме?

Оҙаҡ, Көнһылыу, бик оҙаҡ. Ул бер нисә мең йыл ігэн Кешеләргә йәшэр өсөн ҡоро ерҙәр, эсерлек таҙа ір габышҡан, кеше түгел, ә тәбиғәт мәнгелек булырға шискто аңлатҡан. Үҙ миҫалында быны иҫбат иткән: тере ы мотмайынса, ергә бөрккэн. Үҙе үлгэн, ә тәбиғәт гөл-іэ күмелгән.

')х! Мин дә шундай көскэ эйэ булһамсы!

Булырһығыҙ! Гел матур уйҙар уйлаһағыҙ, кеше іена ҡанат үҫтерер йырҙар йырлаһағыҙ, һеҙ ҙә донъяны нөз. мең йылға йәшәртерһегеҙ.

Өсәй! Мин бейеүсе булам! Бейеп тә бит кеше күңелен іртеп була?!

1>ула, Көнһылыу, һуғыш мәлендә ирҙәрен фронтҡа ған гкан апайҙар, һауынсылар мине таҡмаҡ эйтеп бейетә ине ш иа. «Үлгэн кеше тороп бейей Нурфаиза көйөнә!» Эх! Ш идаи дэрт менән бейегәнмендер инде, аҙаҡ үҙҙәре лә кирза ксйгән аяҡтарын тыпырҙатып, сaң борҡотоп бейергә ....китерҙәр ине! Бейеп-бейеп, көлөшөп, еңеләйеп и.ипырҙар ине...

Әсәй, ә... Урал батырҙың йәне һаман осоп йөрөй и'

Морөй генәме?! Бәндәнең ҡолағына ул «Урал батыр» .....аталған мәшһүр эпосты шыбырлаған. Мөхәммәткә Хоҙай ьәнде, Мусаға «Ветхий завет»ты, Ғайсаға «Евангелие»ны щаренә һалған, халыҡҡа уларҙы шул пәйғәмбәрҙәр аша

еткергән кеүек, Урал батыр ҙа үҙенең үлемһеҙ тәғлимәттәрен камил шиғыр юлдары менән халыҡ күңеленә һендереү әмәлен таптан. Ниндәй ауыр замандарҙа ла, халыҡ ҡырылыуға дусар ителгәндә лә быуын-быуын, тулкын-тулкын Ергә килгәндәр араһында уны белеүсе табылған. Былар бары Урал батыр кеүек изге заттың ғына хәленән килер ғәмәл.

— Аллалар шулай күп булғанмы ни ул?

— Юҡ, Көнһылыу, Алла «Теге донъя — Йәшәйеш» рәүешендә берәү, ә пәйғәмбәрҙәр күп: Будда, Зәрдөштри, Муса, Ғайса, Мөхәммәт... Уларҙан да боронғораҡы — Урал батыр.

— Класҡа барып ошоларҙы һөйләһәк, беҙгә берәү ҙә ышанмаясаҡ, — Күкһылыу көрһөндө. — Ә белгәнде кешегә әйтмәү ҡыйын.

— Ә һеҙ һөйләмәгеҙ. Ваҡыты етер — бөтәһе лә үҙенән-үҙе асыҡланыр. «Урал батыр» эпосы яҡшыны яманда айырырға, йәшәү мәғәнәһен аңларға ярҙам итә икән — шул еткән.

— Бынан кире Көнһылыуға малайҙар менән һуғышып йөрөмәҫкә лә шәп...

Көнһылыу беренсе тапкыр яуапһыҙ ҡалды, бер аҙҙан тулкынланыуҙан тыны быуылыр сиккә етеп:

— Берәй заман бөтә кеше Урал батыр ҡушканса йәшәй башлаһа, ерҙә бер яуызлыҡ ҡалмаясаҡ! — тип бышылданы.

— Бирһен Хоҙай! — тине Мәҙинә. — Эпостағы күп нәмәне беҙ әле аңларлыҡ хәлдә түгелбеҙ, Аллалар менән бәндә араһындағы бәйләнеш үтә нығ боҙолған заманда йәшәйбеҙ. Үҙебеҙҙең аң һыйҙыра алмаған бар нәмәне «әкиәт» йә «мистика» тибеҙ...

— Әсәй һин бит беҙгә һәр саҡ эйәреп йөрөмәйәсәкһең. Етмәһә, беҙ икәү... Беҙгә нисек яңылышмай йәшәргә?!

— Күкһылыу, шуға әйтәм бит: эпосты ҡат-ҡат уҡығыҙ. Кеше хайуандан шуныһы менән айырыла: уның күңеленә үҙ аллы һайлау мөмкинлеге һалынған. Әкиәттәрҙә геройҙы халыҡ юҡҡа ғына ете юл сатына килтереп баҫтырмай. Шүлгәндең яман юлдан китеүе нимәнән башланған? Шуға яуап табығыҙ. Ә хәҙер — бәү-бәү!..

— Ә турғайҙар? Улар мейестә көйөп, ҡатып бөтһөнмө? — Көнһылыу һикереп тороп ут ҡабыҙҙы.

Гурғайҙар! — Күкһылыу ялан аяҡтарын урындыҡ генән төшөрэ башланы.

Башың әйләнмәйме инде, ҡыҙым?

Тамсы ла!

Электр уты яҡтыһында зәңгәр нур бөркқән күҙҙәрен Күкһылыу әсәһенә төбәне. Ә Көнһылыуы дөбөр-шатыр килеп гән турғай ҡаластар бешкән табаны сығара башланы... и кжәс, ҡыҙҙары йоҡлап китте. Мәҙинә Әптеләхәттең йтылған рәсеме ҡаршыһына килеп баҫты: «Нишләргә, Әптеләхәт?! Ҡыҙҙарыбыҙҙың нескә генә, ыуыҙ ғына дорс күмәк көс булып укмашкан яуызлыктан баҙап, ...ш куйыуы бар. Саяф малайҙарын артабан да һөслөтәсәк. Ган йорәхәте үтер, ә йән йәрәхәте һалһалар нишләрбеҙ?!»

МЬмбене Әбүбәкер көскә көтөп алды. Сәғәте айҙай, көнө ши гойолған был аҙна уны берсә күккә аштырҙы, берсә ыны а бәрҙе, берсә яндырҙы, берсә тундырҙы. Ҡайһы саҡ Огр имлға һуҙылыр. эштэрен бер сәғәткә еткермәй башҡарып |.|, о ҡайһы саҡ белгәнен онотто, уҡытыусылары унан галап иткәнде аңламай йөҙәне.

Тамағыңа ҡапҡылар инең исмаһам!

Пидия Николаевнаның уны йэлләп өндэшеүенэн [|.1кср һиҫкәнгәндәй булды:

Пиңә, мин ашаманыммы ни?!

Һинең инде өс көн... — Лидия Николаевнаның тауышы юшкөл сыҡты. — Сирләп китеп, имтихандарынды...

Әбүбәкергә ҡарсыҡ ысын-ысындан йәл булып китте, һенә йүгереп килеп, ҡураныс ҡына иңбашынан кланы:

Сирләмәйем мин, инэкәйем! — Ул белэгендэге \ лдарҙы ҡабартты. — Бына нисек сәләмәт мин! Тотоп але.

Нидия Николаевна көлдө, ләкин ҡарашындағы һағайыулы нос гаралманы.

Мин бик борсолам, балаҡайым, — тине ул бәкерҙең күҙҙәренэ тура ҡарап. — һинең йәштә, һинең рыйкың, һинең буй-һыйың, һэлэтең менән ҡыҙҙар өсөн ш <фөләнәләр тиме?!

— Эх, инәкәйем! Ҡалай итәйем? Батыр үлеме мәрйәнэн, тиҙәр беҙҙең халыҡта ла. Әммә... — Әбүбәкер тәҙрә ҡаршыһына барып баҫып, ҡарашын юрғанға төрөнөп тынысҡына йоҡлаған баланы хәтерләтеп томан эсендә ятҡан ҡала панорамаһына төбәне. — Ул көндө ниңә унда барғаныма, ул ҡыҙҙың өндәшеүенә ниңә боролоп ҡарағаныма үҙем дә үкенсп ҡуям... «Миңә булыр йәр булмағас, йөрөмә йөрәк яндырып!» тигән кеүек...

... һәм бына шәмбе. Осрашыу урынына Әбүбәкер Аҡбуҙатта, ҡанатлы толпарҙа, елде, ер аҫты юлы менән барғыһы килмәне — күңеле тиҙлек, иркенлек дауланы, һәм ул такси туҡтатты. Машинаның тәҙрә быялаларына боҙлауыҡ һырый, тәгәрмәстәр, бер нисә тапҡыр тайып китеп, шоферҙы тоҙло-боросло һүгенергә мәжбүр итте.

Шофер ауыҙынан башҡортса яңғыраған һүҙҙәр һиҫкәндерҙе Әбүбәкерҙе:

— Һеҙ... ҡайҙан?

— Уфанан.

— Ә бында... нисек?

— Хеҙмәт тултырғас ҡайтманым.

— Тыуған яҡтар һағындырмаймы ни?

— Эй, ул саҡта! Иҫәрлек! Ғашиҡ булдым мин, брат, бер ҡыҙға. И баста! Өйләндем.

Әбүбәкер томан, ырашҡы эсенән рельстар шәйләгәндәй булды, ана, трамвайҙың ҡыҙыл ҡабырғаһы ла күренде, шул саҡ машина секундтың бер өлөшөндә сальто-мальто яһаны. Әбүбәкерҙең ҡолағына уның асырғанып һүгенгәне, күҙенә трамвай йөрөтөүсе ҡатындың ҡот әҫәре ҡалмаған йөҙө сағылды.

— Харап!..

Бәндә теләй, Хоҙай бойора тигәндәре шулдыр. Трамвай йөрөтөүсе тормозға баҫып өлгөрһә лә, трамвай ҙа, машина Л| ярайһы йәнселгәйне. Шофер, фуражкаһын һалып, боҙлауыҡ түшәлгән ҡарға тубыҡланып, трамвай йөрөтөүсе ҡатыша рәхмәт әйтте. Әгәр ул туҡтатып өлгөрмәһә, трамнаи машинаның көлөн күккә осорған булыр ине. Авария урынына ГАИ хеҙмәткәрҙәре килеп еткәнсе, Әбүбәкерҙе, шаһит булараҡ, ебәрмәнеләр. Оҙаҡ һуҙылған акт төҙөү, ҡул ҡуйыу кеүек рәсми эштәрҙең эшләнеп бөткәнен көткәнсе,

Икенсе транспорт менән осрашыу урынына барып еткәнсе, ҡыҙыҡайҙан елдәр иҫкән булып сыҡты.

Киоск та бикләнгән, уның кес кенә тәҙрәһе тупһаһында, юнгәр күҙҙәрен мөлдөрәтеп, бер матрешка ултыра. Өҫтөнә |МГЪр ҡатыш боҙ һырыған был сибәркәйҙе, тыны менән ııы ıı п,|ц, таҙартып, Әбүбәкер ҡуйынына тыҡты. Матрешка ултырыу сәбәпле соҡорайып, ҡараһыу булып уйылып ҡалған \ рыııа үҙе килтергән өс ап-аҡ роза сәскәһен һалды Әбүбәкер.

Моктәп директоры кабинетына ингәндә Мәҙинә үҙен Кулға алырға, тынысланырға өлгөргәйне. Үҙен дә, ҡыҙҙарын ııı ıямаҫтарын беләә. Мәмәйле бала һөймәгә яҡшы, тигәндәй, ıı \ ыл ерендә хужа кеше берәүҙе тезәләһә, башҡалар ҙа ı әбәпһеҙ-ниһеҙ уға ҡушыла. Башҡаса юл юҡ: барыһы ла бер председателден күҙенә ҡарап тора. Асыуына тейҙең-ҡуйҙың, шунан бар, йәшәп ҡара! Әле Әптеләхәт иҫән саҡта, Колхоздың баш аграномы булып эшләп йөрөгәнендә күпме н иотте ошо директор Дауыт өсөн.

Йыйылыш, кәңәшмә булһынмы — баҫты ла һөйләне, горҙо ла яр һалды: «Ҡайһы бер иптәштәр, вазифа биләй Гороп, балаларына тейешле тәрбиә бирмәгән: колхоздың ягыулыҡ келәтендә шартлаған бензин багы — шуның асыҡ Миҫалы!» Директор һөйләне, башҡалар шыбырлашты, Мбәрен сатнатып һөйләп, мин тип торған Дауыттан моңһоу, уйсан, өндәшмәҫ үҫмер тороп ҡалды.

һаумыһығыҙ! — Директор кабинетында, уның уң ни.шда, Саяфты күреү Мәҙинәне ғәжәпләндермәне. Ҡапыл \ш.|ң күңелен саялыҡ ҡатыш битарафлыҡ биләне. — Беҙҙең председатель дә укырға төштөмө әллә?!

һаубыҙ, ин... — Мәҙинәнең айбарлы ҡарашынан директор йыуашая төшкәндәй булды. — һы, ултырығыҙ гиһәм...

Төшөрһөң дә! — Саяф үҙенең кабинетында фғандағы кеүек итеп боттарын айырҙы, үгеҙҙеке кеүек ҡалын слкәле кәүҙәһен өҫтәлгә эйелдерҙе. — Ҡыҙҙарыңдың... Минен малайҙарҙы үлтерә яҙғансы туҡмап ҡайтарғаны би ı ıәлеме һиңә, юҡмы? Етем тигәс тә, эте лә, бете лә!.. — ' яяф асыуынан һәм ғәрлегенән сәсәне.

— Ә... һинекеләр етем икән дә?! Минекеләр, аталарын үлтерһәләр ҙә, етем түгел! һин — хужа! Барыһын бармаҡ осонда ғына әйләндерәһең, ә минең ҡулымдан аҡтыҡ эшемде — балаларымды аҫырау сараһын да тартып алдылар!

— Үс алаһыңмы? Шуның өсөн орғасыларындан минең гонаһһыҙ сабыйҙарымды туҡматаһыңмы?

— Ауыҙыңды иплəп ас, Саяф! Мин һинең балаларыңды уйлап та, бәлки, Әптеләхәттең сәйер шарттарҙа үлеүенә тикшереү саҡырмағанмындыр...

— Уф! — Саяф ҡыҙарынып-бүртенеп һикереп торҙо. — Өләсәңцең минең бисәнең башын ашағаны ла еткән! Инде минең башты һин ашамаҡсыһың? Иптәш директор! Ишетәһегеҙме?..

Мәҙинә үҙендә иҙәндән түгел, ерҙән тамырланып үҫеп сыҡҡандағылай көс тойҙо:

— Ҡолағыңа киртеп ҡуй, Саяф: балаларыңдың киләсәген уйлағанға ла Рауза герой булып түгел, аңһыҙ, осраҡлы фажиғә ҡорбаны булып ерләнде! һин былдарҙы... белергә тейешһең.

— Иптәш директор! Был бит көпә-көндөҙ кешегә яла яғыу! Ҡаралау! Шөкөр, беҙ халыҡ дошманы тип хөкөм ителмәгән!

— Ваҡыты етер. Хөкөм һине үҙе килеп табыр!

Директор ярһыған был икәүҙең араһына инеп ҡараны, аптырап ботона һуҡты:

— Тыныслыҡ, тыныслыҡ. Балалар ыҙғышмай булмай! — Күрәһең, ул был осрашыуҙы ойоштороуына хәҙер үҙе лә үкенә ине. — һәүетемсә хәл итәйек эле, иптәштәр!

Мәҙинә асыуҙан шартлар сиккә еткән күҙҙәрен директорға төбәне:

— Балаларымдың яҙмышы хаҡында һүҙ барғанда, иптәш директор, мин инде бүтәнсә һәүетемсә һөйләшмәйәсәкмен. Минән бер ҡорбан — Дауыт еткән! Бирегеҙ ҡыҙҙарҙың «Личное дело»һын. Донъяла Тирәкленән башҡа ауыл, һеҙҙекенән башҡа мәктәп бөтмәгән!

— Саяф Сәйфулловичҡа үс итәм тип, мәктәпте отличницаларһыҙ ҡалдырырға булдығыҙмы?

— Миңә отличницалар түгел, сәләмәт рухлы шәхестәр кәрәк!

Бир «Дело»ларын, етәр! — Саяф Шәйхетдинов өҫтәлдә ш аскыстар бәйләменә ташланды. — Ҡайныһы аса? Үҙем алып бирәм!

Дмрсктор, уның ҡулынан асҡыстарын алып, ҡалтыранған ҡулдары менән сейфты аса башланы:

Зинһар, ҡыҙмағыҙ, Саяф Сәйфуллович...

Ҡыҙмаҫлыҡмы?

Һына! — Саяф директорҙан ике һоро папканы тартып ты — Ал! Алып кит! Әптеләхәттән ҡалған... октәреңдең ауылда эҙе булмаһын!

Рәхмәт. — Мәҙинә папкаларҙы ҡәҙерләп күкрәгенә и.|, кабинетка килеп ингәндән алып беренсе тапкыр • ир кторға йылмайып ҡараны. — Ҙур рәхмәт һеҙгә!

(ляф та, директор ҙа аптырай төштөләр, албырғап, баҙап Ийлдылар. Мәҙинә, папкаларҙы ҡыҫып тоткан хәлдә, буранға ЙЛвнә барған ҡарлы өйөрмәгә атылды...

Моктәптән ҡыҙҙарының документын алып ҡайтҡас, нпо туп-тура атаһы өйөнә йүнәлде. Ҡыҙын күргәс, Кашим эшенән туктаны.

һаман эшләйһеңме ни, атай?

Хашим көләмһөрәне:

Ьыл бөтә торған эш түгел, ҡыҙым.

Мәҙинә «Ҡуңыр буға» панноһына текләберәк ҡараны:

Эйе, үҙгәреш бар, йылғавда, йәнә... бынау сыбар рткалар яткан ҡош ояһы, йәш һайыҫҡан юк ине шш слле.

Эйе, эйе! һайыҫҡан бит ул кешене әллә ҡайҙан һиҙә. І |ц ысаның юлда килә ятыуын ата-әсәһенә, моғайын, ... лар шыкырыктағандыр.

Өй йылы. Мейестән өткән картуф еҫе килә.

Әллә инде картуф та бешерәһең...

І огәрәткәйнем. Дәрестән ҡайтышлай ҡыҙҙар ошонда ш бит...

БФЙ, тамаҡтарын туйҙырғас ҡына өйгә индерәһеңме

Ьулғылай, балдар бит... Ҡайһы саҡ картуф менән бергә ıөр, йә кишер ҙә тәгәрәтәм. Мейестә бешкән шсң тәме башҡа була бит...

һөйләгәс, минең дә ашағым килеп китте.

— Ал, ал, бешкән инде улар, — Хашим, урындыҡтан төшөп, ҡулйыуғыстан йыуына башланы, ҡулын һөрткәс, тигеҙ генә көйгән ҙур бер картуфты ҡыҙы алдына ҡуйҙы, икенсеһен үҙе таҙарта башланы:

— һуғышта быны шикелдене күп әтмәләнек. Йөрәккә файҙаһы күп тиҙәр ошолай бешкән картуфтың...

— Атай... — Мәҙинә һүҙҙе нисек башлап китергә белмәгәндәй, ҡаушабыраҡ ҡалды. Йәнеләй күргән ейәнсәрҙәрен ситкә ебәреүҙе ҡарт атаһы нисек ҡабул итер?

— Хәбәре барҙыр мының тип ултыра инем. һөйҙә.

— һуңғы ваҡыт, атай, мин бик күп уйландым.

— Уйҙанғанһындыр: элек эштән бушай алманың бит. Уйҙар өсөн әҙәмдең бэлэкэй эштән арынып, билен яҙыуы шарт.

— Ахыры, шулайҙыр...

— Шунан, нимэ килтереп сығарҙың?

— Мин, атай, ҡыҙҙарҙы бынан алып китергә ҡарар иттем.

— Алай...— Мәҙинә уйлағанса, Хашим яңылыҡты аяҙ көндө йәшен атҡандай ҡабул итмәне, тыныслығын юйманы, тик маңлайындағы һырҙары тәрэнәйеп, ҡарашын күләгә ҡапланы. — Шулай инде, — Хашим, күптән тартмаһа ла, мейес башынан папирос алды, усаҡтағы ҡуҙҙы ҡыҫҡыс менән ҡыҫып шуны тоҡандырҙы ла, көлдөксә ҡаршыһына сүкэйҙе. — Ҡош та бит балаларын ояһында оҙаҡ тотмай. Эре ҡауырһын ярһалар, төртөп төшөрә башлай. Тик ҡыҙҙар бит эле эре йөн ярырға өлгөрмәгән. Иртәрәк түгелме тиеүем...

— Мин бит, атай, турғай үҫтермэйем. Минекеләр бейегерәк оса торған ҡош булырға оҡшай. Ояларында оҙаҡ тотһам, ҡыйыҡ башынан юғарыраҡ күтәрелә алмаҫтар. Донъяның ҙур икэнен күргән кеше генә бейеклектән ҡурҡмай торғандыр...

— һүҙең дөрөҫ. Ошоларҙы миңә еткерә алмай ыҙалайһыңмы?

— һуң... — Мәҙинә ҡыҙарҙы. — һин уларға, улар һиңо ныҡ эҫенгән бит...

— Миңә ҡыуаныс булһын өсөн генә эргэңдән ебәрмәй тоторға уйынсыҡ түгел дәһә улар...

— Рәхмәт, атай.

— Дөкәминттәрен бирҙеләрме һуң?

Лдым. — Мәҙинә көләмһөрәне. — Саяф менән ныҡ ...кәләшергә тура килде. Ғүмерҙэ эйтмэм тигән һүҙҙәр ...кынды инде...

Хашим унан, ни хаҡында, тип һорамаһа ла, Мәҙинә уның ...унан бөтәһен дә төшөнгәнен аңланы.

Өйтеп яҡшы иткэнһең. Бәләкэй һиҫкәнер, юҡһа, ...цай ҡаныҡты беҙҙең затҡа был Саяф. Үҙендән башҡа ...нс пүлиә тип бел, тиҙәр ҙә бит. Ҡылған ҡара эштәрен ...ҙә белмэй, һиҙмәй тип йөрөй микән?

...)й атай! — Күҙенә эркелгән йәштәрен күрһәтмәҫкә I, Мәҙинә тәҙрәгә ҡарай әйлэнде. — Ҡырын эш ҡырҡ ... һуң да беленә. Тик ғүмеремде кеше эшәкелеге эҙенән и үткоргем килмәй.

Дорөҫ, дөрөҫ. Ҡайғынды көн дә яңыртайым тиһән, ...ларыңды ас та тоҙ һал инде... Ҡарарың дөрөҫ. Ҡасан ...шмаҡсыһығыҙ? Кенишкэлә пенсиям да йыйылған. Алып ...бирэйем, мужит, Әбүбәкергэ лэ барып етерһегеҙ, мужит, ...мҡа бер-бер нәҫтэ кэрэк булыр... — Хашим, эле бер, әле ...с номэгә тотондо. — Кешегә йэүкәлэмә, ҡыҙҙарың ... уҡығанын да белмэһендэр. Күкһылыуҙы нығыт, ...һылыу былай ҙа һөйҙәмәҫ.

Мәҙинә атаһы эргәһенэн күңеле үҫеп килеп сыҡты: ...ргәндә үҙенде аңлаған, серҙәрең һыйған оло кеше булыу ...ылай яҡшы!

...юсәһенең: «Балаларым, беҙ ҙур юлға сығырға торабыҙ. ...әрләнег еҙ, өҫ-башығыҙҙы ҡарағыҙ, йыуығыҙ, үтекләгеҙ», ... Конһылыуҙы һиҫкәндерҙе. Әсәләре ниңә «ҙур юлға» икон, ниңә «оҙон юлға» тимәне? Ҙур юлға... Кәнһылыу ... Күкһылыуҙың әкиәткә оҡшаш донъяһынан, шул донъя ...рендә әйләнгән бала сағынан айырылырға шулай уҡ ...ғына көндәр ҡалды микэн? Ул донъяһын онотоп ш укыған Күкһылыуға ҡараны: был бер ни ҙә һиҙмэй, ... Лйырылабыҙ бит! Ә ни өсөн айырылабыҙ, беҙ бит ... юлланабыҙ. Көнһылыуҙың һирәк, бик һирэк илай И>риш күҙҙәренә йәш эркелде: «Күкәнәй!» Ҡысҡырып ...әне ул туғанының исемен, ә ул башын китаптан айырҙы: Өү...

— Әсәйҙең әйткәнен ишеттеңме?

— Ишетмәҫкә әллә, ишеттемсе. Шунан?

— «Ҙур юлға» тигәненә иғтибар итмәнеңме?

— Иттем, әлбиттә.

— Айырылабыҙ бит, Күкәнәй! Йөрәгем һиҙә... айырылабыҙ! — Көнһылыу Күкһылыуға ынтылды, уны ҡосаҡланы ла һыңҡылдап илап та ебәрҙе. — Инде һине кем яҡлар, Күкәнәй?

— Илап бөт. Мин бөттөм инде, — Күкһылыу йәшкәҙәгән күҙҙәрен туғанына төбәне. — Мин китеребеҙҙе күптән һиҙә инем.

— Нисек... һиҙә инең?

— Мин әйтһәм, һин ышанмаҫ инең. Айырылырыбыҙҙы ла белеп йөрөнөм. Элек үк, Барсын өләс «һаҡ менән Сук» бәйетен өйрәткәндә үк... Беҙ бит, Көнөкәс, төрлөбеҙ. Минең тормошом һиңә, һинеке миңә ҡыҙыҡ булмаясаҡ.

— Мин һине күп илаттым, күп йәберләнем. — Көнһылыу көрһөндө. — Ҡайһы саҡ юрый, һин мәмәй булмаһын өсөн эшләнем. Бигерәк йыуашһың — шуға эсем боша.

— Кәрәк саҡта уҫал да була беләм мин.

— Уныһы бар. Дәрестә бит хатта укытыусылар ҙа һинең алда һүҙен самалап һөйләй.

— Уҫал булһаң, аҫалар, һин дә бел шуны.

— Беләм дә ул. Ялғанды ишетһәм, берәйһен йәберләгәнде күрһәм, усым ҡыҙа башлай...

— Ә китмәй булмай беҙгә. Өләсәй: «Бөтә бөйөк эш бәләкәйҙән башлана, шуға күрә бөйөктө бәләкәй сағында эшләй башлағыҙ», ти торғайны.

— Бөйөк тә бөйөк... һин тик бөйөк булыу тураһында хыялланаһың да ултыраһың, шикелле...

— Бәй, ә ни өсөн йәшәйем мин? Ни өсөн укыйым?

— Миңә лә хыяллана башларға микән?

— Хыяллан, хыял булмаһа, бер нәмә лә булмай.

— Их Күкәнәй! һинең кеүек сабыр ғына хыялланып ултыра белмәйем шул мин! Миңә ат та, бейеү ҙә, йыр ҙа, тағы күп-күп нәмә оҡшай!

— Бәләкәйҙән бер генә юлды һайлағандар араһында генийҙар күберәк. «Вокруг света»ла шулай тип яҙғандар.

— Ярар, мин уйлармын. Тышҡа сыҡмайһыңмы?

Күкһылыу китабының укылмаған яғын әйләндерҙе:

Һу-у... быны бөткәнсе әле...

Әсәй... мине эҙләмәһен, йәме, Күкәнәй. һораһа, әле ... мкты, инер, тин, йәме?

Мо. Тик китеп олаҡма.

Кайҙалыр олағыу был юлы Көнһылыуҙың башына ла килмәне. Башта ул ялан кәртәләгә дүнәне янына килде:

Һарыса, — Көнһылыуҙың усында яткан шәкәрҙе дүнән р ирендәре менән ялап ҡуйҙы. — һарысаҡайым, мин ... м бит!

Дүпон башын эйеп тик тороуын белде, башҡа ваҡыттағы ..., һыртына башлап ултырып, бер йән, ҡуш ҡанат булып шкпи кешеһен күреүҙән талпынманы, сыңғырата кешнәп илап кәртәне уратып, Көнһылыуға күҙ алмаларын Лмылйыпып ҡарай-ҡарай йүгергеләмәне.

һарысай... Бәхет юра миңә, йәме?! Күкһылыуға ла, Үҙең дә бәхетле бул! һинән таралған нәҫел ялын Һймдай итеп тау биттәрен ҡаплап утлап йөрөһөн, ә һиңә ярыштарҙа гел еңеү насип булһын. һабантуйҙарға мин ҡайтырмын, мин бар саҡта һинең һыртыңа башҡа берәү мрмаҫ!

Копһылыу аттың ялдарын һыйпаны, томшоҡтарын һөйҙө, ... әне. Дүнэн дүрт аяғынан ҡаҙаҡланған кеүек тик торҙо. І ниһылыу уның ҡара бәрхэт менән ҡаймаланғандәй дымлы күҙҙәренә ҡараны — һарыса күҙҙәренән мәрйен-мәрйен йәш ı н ... рәй ине.

Ат ан һуң Бөйрәкәй-һәүкәшен дә, уның үҙенә оҡшаған |;иын да, һарыҡ, кәзә бәрәстәрен дә берәм-берәм ... идатып һөйҙө Көнһылыу. Хашим олатаһы күрһә: «Эй, ы м, ҡыҙым, мал ене ҡағылған шул һиңә! Тандыса рухы •и һиндә!» — тиер ине. Әле ул яңғыҙ, уның илағанын да бер ксм күрмәй, бер кем шәйләмәй.

Квртәнән сыҡкас, Көнһылыу баҫҡыс буйлап ҡыйыҡ мма үрмәләне. Был уның донъяны байкай торған урыны. Кар ҡаплаған, бурандан һуң тулкын-тулкын һырҙар яһап Ыммрап яткан ҡырҙар ниндәй гүҙәл! Уның ошо зәңгәрһыу к|||ык менән хозурланыш саңғыларҙа күпме елгәне, ... шыуғаны бар! Ҡыш көнө гәлсәрҙәй боҙ менән ... һыу юлы буйлап йылға үренә, кеше аяғы баҫмаған Һмрпарға күтәрелгәне бихисап. Асыҡһа, ҡып-ҡыҙыл ... лштәрен һуҙған балан бар. һабағында туңған

гөлйемештэр, хатта ышыкта көҙҙән ҡоиолмаи ҡалған муиылы ла осрай. Ошо саҡлы матурлыктан нисек айырылыр икои Көнһылыу? һарыса уны хыял ғына етер тау түбэләренэ алып менде, сәскәгә күмелгән йылға үҙәндәренә лә еткерҙе.

Көнһылыу, әйләнеп, көнсығыштағы тауҙар теҙмәһено ҡараны. Олобейек, Ҡаратау һырттарына күҙ һалды. Был тауҙар Күктау һырттары кеүек ҡаялы ла, урманлы ла түгел. Мэгэр йэйғор гел ошо яҡтан ҡалка. Унық аша сыккан ҡыҙҙар малайға, ә малай ҡыҙға әйләнә тигәнде ишетеп ҡалғайны бер Көнһылыу. Ҡыҙҙарға һалынған күп тыйыуҙар малайҙарға һалынмаған, ирекле йэшәгәс, улар көслөрәк тэ, таһыллыраҡ та. Көнһылыу был мөмкинлекте ҡулынан ыскындырмаҫҡа булды... Нисектер, ямғырҙан һуң йәйғор ҡалкканын күтөп алды ла, Олобейек яғына уктай атылды. Арып, арманһыҙ булып тау түбәһенә күтәрелгәс, йэйғорҙоң алыҫҡа, күҙ күремс етмәҫ дала өҫтөнэ атланғанын күрҙе. Нык һемэйҙе Көнһылыу, лэкин иламаны. Баткаҡ сэсрәгән бит-кулын йыуҙы ла, шэмтерәп кенә кире Тирәклегә ыщғайланы. Унық быидай сағын бер кем күрмәүенә һөйөндө. Әммә Барсын өләсе уны ҡапка тышында көтөп ултырған булып сыкты. Ҡайҙа олағым йөрөнөң, тип һораманы, ейәнсәренең мөшкөл йөҙлө башып күкрәгенә ҡысты:

— Хоҙай һине юкка ғына ҡыҙ бала итеп яратмаған. һинән тыуған сабыйҙар ҡашка сифатлы ир булыр. Бына улар барып етер йәйғор башланған ерҙәргә. Бәндә ғүмере быуын-быуын, балам, — тине. Шунан ул Көнһылыуҙы мунсаға алым инде, йыуындырҙы, хуш еҫле үләндәр төнәтмәһе менәп сайындырҙы. Өйгә уны Хашим олатаһы күтәреп индерҙе, күрәндән, таштан ярылған табандарына, селек һыҙырғап боттарына май һөрттөләр. Көнһылыуҙы бәплом йоҡлаттылар...

Иртәнсэк уны әсәһе сәсенән һыйпап уятты:

— Хыялың бойомға ашмағанға көйәләнмә, бөтэ хыял да тормошҡа ашып бөтмәй ул, мэгэр хыяллана белмәгои кешенең бер теләге лә үтәлмәй, — тине. Эйе, әсәһе шулай тине. Бөгөн дә, ана, Күкһылыу хыялланырға ҡуша, о Көнһылыуҙың тәүге хыялы селпәрәмә килгәндән һуң икенсеһе тыумай. Тыумай ҙа тыумай...

Ҡыйыҡ башында ултырған көйө ғәзиз өйәңкеләре, йылМ ҡуйындары, тау һырттары менән хушлашҡас, Көнһылыу

>сеиэ инде. Был унық бэлэкэй донъяһы. Бында унық ҙағы, ағас ҡылыстары. Уктарҙы ул һырлап, матурлап и.| Һарыҡ, кэзэ тиреләре түшәлгән, яндауҙарға герергә эленгән үләндәр солғанышында ул үҙен үтә лә ыс, ышанысл тоя, ошонда аунай-тәгәрәй тәүге китаптарын укыны. Баҡсалағы һәр алмағастан ул бында р сым тарттырҙы. Ботаҡ һелкенһә, сымдар тирбәлә, улар >hho, бындағы ҡыңғырауҙар сыңлай. Шуны ғына көткән һылыу, ҡалканын күкрэгенә, ҡылысын биленә тағып, пират гар» ҡаршыһына барып баҫа. Ә ҡайһы саҡ, аҡ яуындар ына и мәлдәрҙә, донъяның ҡыҙығы, ҡото китеп торғанда, нмумш ҡарағас бағана башына менэ лэ, ҡулын төпкә умда үҙен иҫләй башлағандан алып төшөрә барған ыкгары ята. Шуларҙы берәм-берәм ҡулына ала өнһылыу, шулар менэн артта, бала саҡ илендә ҡалған сыуаҡ ренә, шул эйберҙәргә бэйләнгән тэьсораттарға әйләнеп Ҡашлы тараҡ һынығы ла, сейэле брошканың бер һаҡлана унда. Бик һирәк, ахыры, йылына бер генә уларға Көнһылыу. Ул әйберҙәр Көнһылыуҙы гоуҙан, кэйефе төшөүҙән һаҡлай. Тылсым көсөнә эйә Әле ҡыш. Ул бағанаға Көнһылыу әле күтэрелә алмай. •> наҡыт, Көнһылыу, моғайын, бер егеткә ғашиҡ булыр, гет, моғайын, унық кейәүе, Барсын өләсе әйткән теге сифатлы егеттәрҙең атаһы булыр, шул сағында ылыу сере менэн уртаҡлашыр — ошо хазинаһын һ.пср...

Коиһылыу иң һуңынан Тирэкленән ҡала яғына сығып оло юлға ҡараны: нимә кәрәк булды икэн әсәһенә ҙур оҙатыу? Көнһылыу ошонда ғына ултырһа ла, ошонда мш млшәһә лә, яҙғаны уны килеп табыр, ҡашка сифатка эйә ирҙар унан барыбер тыуыр, Көнһылыу хыял иткэн |уаг күпере»нә лә етерҙәр...

Конһылыуҡайҙа?

Күкһылыу өндэшмәне. Дөрөҫөн әйтһәң, Көнһылыу мйосок, э әйтмэһэн, әсәйҙе алдау була.

Кортэ араһындалыр, ҡайҙа булһын...

— Әйберҙәрегеҙҙе йыйыығыҙ тинем, ҡолағына ла элмәне инде ул. Аҙаҡ ни етте, шуны тултырасаҡ сумаҙанына.

— Әйберҙәрен... һалдым мин уның... — Күкһылыу бер ҡыҙарҙы, бер бүртенде. — Кейәүгә оҙатылмайбыҙ ҙа...

— Кейәүгә оҙатылмаһағыҙ ни, — ҡыҙының ярайһы тапҡыр яуабынан Мәҙинә ҡаушабыраҡ ҡалды. — Ғүмер буйы Көнһылыу артынан эйәреп, артын йыйыштырып йөрөй алмаҫһың бит.

— Ышаныр кешеһе булмаһа, йыйыштырыр...

— Абау ошоларҙы! Берeһенә бер һүҙ әйтер әмәл юҡ! Ҡайҙа сумаҙандарығыҙ, асып күрһәт әле...

Күкһылыу башта үҙенекен, шунан Көнһылыуҙыҡын асты: барыһы үтекләнгән, тәҫләп һалынған.

— Тегә торған ерҙәре юҡ инеме?

— Юҡ, әсәй.

— Көнһылыуҙы әйтәм, юлға сығыр алдынан өйҙә ултырһа ла булыр ине. — Мәҙинә үҙенең көйһөҙләнеп ҡыҙҙарына бәйләнеүенең сәбәбен шунда ғына аңланы: саҡ ҡынаға булһа ла янында тоҡоһо килә уларҙы, бергә йәшәү бәхетен исек тә оҙайгкыһы килә. Әммә ваҡыт көтмәй. Каникул ваҡытында балаларҙы уҡырға урынлаштырған яҡшы. Унан һуң Өфөнө күрһәтергә, үҙҙәре йәшәй торған ҡалаға йылы тойғолар уятырға ла кәрәк. Бер сыҡкас, Әбүбәкергә лә барып етмәй булмай: һағынды уны Мәҙино, төштәренә бик йыш инә, бушҡа түгелдер. Ҡунаҡханаларҙа йәшәргә тура килһә тип, аҡсаны ла мул ғына алырға булды. Умартанан улар быйыл балды күп кенә алды, тоннанан ашыу бал тапшырҙы атаһы районға. Студент егеттәргә, ҡыҙҙарына, үҙенә лә кейемдәр алырҙар. Лидия Николаевна Башкирцева ла Әбүбәкер хат яҙған һайын сәләм әйтә, үҙенә ҡунаҡҡа саҡыра. Эйе, филдең ҡойроғон тотоп ҡарап, эй, был сысканға оҡшаған икән, тигән һуҡыр кеүек, донъя ошолай һәм бүтои төрлө булыуы мөмкин дә түгел тигән уй менән үҫмәһен ҡыҙҙары.

— Өйҙә кем ҡарар инде беҙҙең? — Күкһылыуҙың һағышлы тауышы Мәҙинәнең йөрәген йәнә ҡыҫылырға мәжбүр итте.

— Өйҙөмө? Олатайың бар бит. Ут яғып, үҙенә ашарш бешереп, малды тәрбиәләп торорлоҡ ҡына көсө бар әлс олатандың...

Луырып китмәһә ярай ҙа...

Китмәҫ. һеҙ йөрөп ҡайтҡас, Әбүбәкер улым янына м (>прып ҡайтам, тип йөрөй әле ул.

Дауыт ағайым беҙҙең менән Ленинградҡа барыр Микон?

Мәҙинә Көнһылыу менән Дауыт араһында туғанлыҡ ҡына п. унан да тәрәнерәк — рухи дуҫлыҡ барлығын күптән ı ı ı ш Әле Күкһылыу Көнһылыуының күңелен ҡайғырта, шуға вләнә Дауыт ағаһы өсөн. Ә үҙе ул күберәк Әбүбәкер ı һын ярата, уны яҡын күрэ.

Әбүбәкергә күстәнәскә нимә алып бараң? — тип н.|кһынды Мәҙинә.

Кипкән еләк. Ул шуны сәй итеп эсергә ярата. Иәй ныйганда уҡ мин уны Әбүбәкер ағайыма инселәнем.

Ә Көнһылыу... Дауытка берәй күстәнәс әҙерләнеме •ш?

Әҙерләгән...

Нимә?

Ҡырағай бал ҡортоноң балын! Бер банка!

Уны шулай... күп йыйып буламы ни?

Булмай ҙа бит... Көнһылыу бит ул...

— Эй бала!

Уңарсы соланда таяҡ туҡылдағаны ишетелде, Хашим цшск асты, тиҙҙән һыуыҡта ҡарағусҡылланып ҡыҙарған битендәге уйымдарын көлдөрөп, айҙай балкып Көнһылыу килеп инде. Оҙон керпектәренә әллә ҡылау һырыған, әллә ......ш? Үҙе шат, үҙе... Мәҙинә уның йөҙөндә буласаҡ иүҙын һыҙаттарын күреп шатланды. Эйе, уның ҡыҙҙары тарамыш ҡыҙ остоҡтарынан һылыу ҡыҙҙарға әүерелеп Тиҙҙән, бик тиҙҙән Мәҙинәнең һылыулығын кыҙҙары Нөзөн күкрәп сэскә атҡан йәшлек һипкелдәре күмәсәк...

Ғдеиз Әлмөхәмәтов исемендәге балалар музыка интернат-юбенә ҡыҙҙарын алып килгән Мәҙинәне алсаҡ ҡаршы шр.

Бишенсе класта бер урын бар, бер уҡыусы ҡайтып әl эр имтихан бирә алһа, был сибәр ҡыҙҙы алабыҙ ҙа ıбыҙ, — тине директор.

— Уларҙың икеһе лә сибәр, — тип һүҙгә ҡушылды уҡыу эштәре мөдире. — Игеҙәктәрҙе айырғы ла килмәй бит әле.

Башта Күкһылыуҙы тыңларға булдылар. Ҡыҫылыбыраҡ ҡалған ишек аша коридорға Күкһылыуҙың саф, юғары, күкрәктән сыҡҡан тембрлы тауышы яңғыраны:

Сывай ҙа ғына кашка, баҫма ташка,
Юлһыҙ ҙа ғына
Ерҙән үткәндә.
Был донъяла ауыр яңғыҙ башка —
Дуҫ-иш кәрж донъя көткәндә.

Унан һуң ҡыҙының Огинскийҙың «Полонез»ын фортепианола башҡарғаны ишетелде.

— Полонез?! Ниңә? Ҡара әле, Көнһылыу! Күкһылыу бит икенсе эҫәр әҙерләгәйне!

— Уға Тирәкле менән хушлашыу ныҡ ҡыйын булды. Шуға уйнай ул Огинҫкийҙы...

— Әйтһә, мин... иғтибар итер инем, эҙерләр инем!

— Былай яҡшыраҡ, — көй тәьҫирендә һағышы тәрәнәйҙеме, Көнһылыуҙың күҙҙәренән йәш атылып сыҡты — Ошоно уйнағас, моғайын, уға еңелерәк булып ҡалыр...

Эйе, Күкһылыу был көйҙө һайлап яңылышмаған булып сыҡты. Башта ышаныс һыҙырыраҡ яңғыраған моң үҫкәндән-үҫо, баҙығыраҡ, тәрәнерәк яңғырай башланы, күңелдең иң неско ҡылдарына ҡағылып үтеп, донъяға, йыһанға таралды. Ҡыҙының кес кенә йөрәгенә ошо саҡлы һағыш һыйыуыи Мәҙинә лә көтмәгәйне. Күкһылыу бит әле унын ҡыҙы ғына түгел, уҡыусыһы ла. Мәскәүҙә алған белеменең тамсыһын да сайпылдырмайынса ул ҡыҙҙарына бирҙе.

— Мин улай уҡ уйнай алмаясаҡмын, әсәй! — Йәшс кибеп, ҡоро ялҡынға әйләнгән ҡарашын Көнһылыу әсәһсил төбәне. — һин мине, әсәй, бында ҡалдырма!

Моң, экренэйә барып, тынды. Мәҙинәне саҡырып индерҙеләр. Бөтәһе лә тын ҡалған. Күкһылыу башын эйеи, нескә бармаҡтарын пианино өҫтөнә һалып баҫып тора. Әсәһен күргәс, сикәләренә ҡыҙыллыҡ бәреп сыҡты, күрәһең, ул әйткәнде башҡармаған өсөн уңайһыҙлана ине.

Был ҡыҙҙы уҡырға бирмәйем тиһәгеҙ ҙә алабыҙ. һеҙгә ричм.и. Һсҙ унын уҡытыусыһы ла икэн. Икенсе ҡыҙығыҙҙы ыңлап ҡарарға ине...

Ул, — Мәҙинә ҡапылғара ни әйтергә белмәне, — ул... ғороп юрһон әле.

Күкһылыу, һин сығып тор. — Директор Мәҙинәгә уҡталыбыраҡ ҡараны. — Игеҙәктәрҙең икеһе лә йырлай ҙа, ... ҙа тинегеҙ бит?

Йырлай ҙа, уйнай ҙа... Хатта бик һәйбәт тә килеп сыға. Гик ... унда түгел. Уларҙы айырырға кәрәк. Бер-береһен Кн(ш глайҙар. Көнһылыу булдыра алмаһа, Күкһылыу эшләй, һылыу булдыра алмағанды һиҙҙермәй генә Көнһылыу ... сарып ҡуя. Унан һуң... Күкһылыу музыканан ныҒыраҡ Һ • ... ӘТЛЕ, тауышы ла... Күкһылыуҙы маҡтаһалар, Көнһылыуға ... ии.ш буласаҡ...

Уныһы шулай инде. — Сал сәсле директор һаман Гнцмп торған Мәҙинә алдына ултырғыс ҡуйҙы.

һеҙ ултырығыҙ, зинһар. Сер булмаһа, әйтегеҙ әле: һеҙ Нисек баланы шулай әҙерләй алдығыҙ, ҡайҙа белем алдығыҙ? Дөрөҫөн әйткәндә, бында беҙгә уҡытыусылар ҙа етешмәй...

Мин Мәскәүҙә, консерваторияла уҡыным. Ләкин, ... мныска ҡаршы, тамамларға насип булманы. Ә инде ... ылыуға күскәндә, эш уҡытыусының талантында түгел, ... кыусының биргәнде ала белеү оҫталығындалыр ул...

Эйе... Йырлайһығыҙ ҙамы? Хэйер, эсәһе йырламаһа, ...шла бындай тауыш ҡайҙан булһын?

Йырлаштырам, лэкин һөнәрем буйынса зоотехникмын. Алай...

Беҙҙә уҡыу эҙерәк түләүле. Һеҙҙең бында килтергән ... иранкаға ҡарағанда, балаларҙы яңғыҙ тәрбиәләйһегеҙ икән... Гимок, Күкһылыу бушлай уҡыясаҡ.

Рәхмәт.

Инде корпусты ҡарап, уҡыу, йәшәү шарттары менән ... пп.имып сыға алаһығыҙ. Ә инде каникул тамамланыу менән уҡырға! Тик һеҙ, зинһар, кире уйлап ҡуймағыҙ!

Уйламам. — Күкһылыуын уҡыуға урынлаштырыу ... тиҙ һәм ыңғай хэл ителеүҙән кәйефе күтәрелгән М...зинә бар булмышы менән балҡып ҡыҙҙары эргәһенә ... ғы.

Лидия Николаевнаны Әбүбәкерҙең кәйефһеҙ йөрөүе көндән-көн нығыраҡ хафаға һалды. Иркенләп һөйләшеп алыр ине — ваҡыттары юҡ. Үҙе укытҡан медицина институтында кафедра мөдире лә булғас, һис бушай алмай Лидия. Унан тыш, ғилми конференциялар, симпозиумдар. Әбүбәкер ҙә иртә китә лә кис ҡайта, йоҡлап киткәнсе үҙенең ҡулынан китап төшмәй. Имтихандары бөткәс, иленә ҡайтып килергә лә йыйына буғай: теге матрешка эргәһенә таҫма, көҙгө, тараҡ кеүек әйберҙәр килеп ятты. Лидия Николаевнаның уның ҡайтып туғандарын күреп килеүенә ҡаршылығы юҡ, ләкин, ҡайтыр ҙа, кире килмәҫ тә ҡуйыр кеүек. Шунан ҡурҡа. Әбүбәкерҙең уның янғыҙаҡ тормошона килеп инеүе үҙе бер мөғжизә, якты бер нур булды. Шул нурҙың юғалыуынан ҡурка. һөйләшеп ултырыу гел тәтемәһә лә, уның барлығын тойоу бөтмәҫ рәхәтлек бирә. Әле, укып күҙҙәре талғас, Лидия Николаевна Әбүбәкерҙең бүлмәһе ишеген шаҡыны:

— Мөмкинме? Сәй эсеп алмайһыңмы?

Әбүбәкер укып яткан китабын ситкә һалды:

— Була ул.

Өҫтәл артына ултырғас, Әбүбәкер алсаҡ ҡарашын Лидия Николаевнаға төбәне:

— Лидия инәй, укыу мотлаҡ ауыр булырға тейешме ул?

— Ниңә?

— Ну бит... Фән тауҙары бик бейек, текә, унда тик тырыштар ғына менә, тиҙәр. Ә мин...

— һин тырышмай ғына менәһең, шулаймы?

— Тырышам мин дә, укыйым, ләкин... — Әбүбәкер артабан уйлағанын аңлатыу өсөн һүҙҙәр таба алмай баҙабыраҡ ҡалды.

— Тир сыҡмай, тип әйтергә итәһең инде?

— Эйе, шулайыраҡ...

Башкирцева, сынаяғын ҡуйып, уйға ҡалды:

— Бөтә кеше лә еңел укымай. Әммә һинең әйткәнеңдә лә хаҡлыҡ юҡ түгел. Ә ни өсөн яраткан эшеңде башҡарыу ауырлыҡ килтерергә тейеш? Еңел укыйһың икән, тимәк, һин үҙ тәрилкәңдә тигән һүҙ. Тимәк, һин тап ошо өлкәлә ҙур уңыштарға өлгәшәсәкһең. Эйе, дуҫкайым, был шулай.

' округ: «һәр кеше уңышҡа ирешер өсөн үҙенә нимә эшләргә ık икәнен белә, ләкин эшләмәй», тигән.

Ҡайһы саҡ мин, Лидия инәй, үҙ бәхетемә үҙем ышанмай китәм! Мин, Әбүбәкер Моратов, Тирәкле малайы, консерваторияла укыйым!

Иидия йәш дуҫының, улы кеүек яҡын егеттең, ошондай һөйләшеү алып барыуына эсенән генә шатланып ултыра: үҫә • г. күҙ алдында һалдаттан зыялыға әүерелә.

Мин һине аңлайым, — тине Лидия Николаевна, — Ышанмай ҙа китәһевдер. Ул шулай. Кеше өсөн иң ҡыйыны — үҙ бейеклеген таныу: әгәр ошоно төшөнә алмаһа, башҡалар күҙендә ул һаман сүп булып ҡала, ырыҫы кәмей.

Ә бына һеҙ, профессор булһағыҙ ҙа, бик ябай бит, 1идия Николаевна, мин шуға гел ғәжәпләнәм.

Эрелек ул рухһыҙлыҡтан, культураһыҙлыҡтан килә, ы ын мәғәнәһендә зыялы кешеләр һәр саҡ ябай була. Ябай һәм ксшелекле.

Лидия Николаевна Әбүбәкерҙең бөгөн һөйләшеүгә оүлҫлсгеи күргәс, иплэп кенә теге фәрештә сүрәтле ҡыҙ ҡаҡында ла һорашмаҡсы булды:

Кәйефең һуң нисек, Әбүбәкер? Ҡайһы саҡ бик (мшонҡо күренәһең.

Кәйеф... — Әбүбәкер ҡыҙарҙы. — Мәҙинә әсәй, һеңлеләр, Дауыт каникулда бында килмәкселәр. Хат алдым.

— Хат?! Шуны әйтмәй йөрөйһөңмө?!

Мәшәкәтләмәйем тинем. Мин уларға фатир табырмын, Пидия Николаевна!

Фатир?! — Лидия Николаевнаның йөҙө ҡапыл кпртайып, йыйырсыҡтары тәрәнәйҙе, көлһыу ирендәре ш.цылды, карашын Әбүбәкерҙән айырып, билдәһеҙ бушлыҡҡа төбәне. Арала уңайһыҙ тынлыҡ урынлашты. Әбүбәкер уны ни менән рәнйеткәнен белә алмай яфаланды:

- һеҙ миңә асыуландығыҙ, шулаймы?

Эй Әбүбәкер! Мин һинең аша үҙемә туғандар таптым гип шатланам, ә һин... уларҙы минән ситләштермәксеһең...

Лидия инәй! Мин бит... — Әбүбәкер йәнә «һин»гә Кусте, урынынан йәһәт кенә тороп, уны индәренән һаҡ ҡына ' <м аҡланы. — Мин бит һине борсорға ҡурҡканға ғына!

Борсорға! Мин, Әбүбәкер улым, ғүмер буйы яңғыҙмын. Шул яңғыҙлыҡтан котолоу өсөн һуғыштан һуң

Башҡортостанға олаҡтым. Туғандарымды, һис юғы береһен... кемде булһа ла тапмаҫмынмы тинем. Баҡһаң, таптан ерҙә юғалтканмын, эргәһендә йөрөгәнмен — танымағанмын.

— һеҙ... кем хаҡында?

— Камалетдинов. Әйүп Ғәзизович. Ул бит минең бер туған... ағайым булған.

— Лидия Николаевна? һеҙ... башҡортмо ни?

Аптырауҙан күҙҙәре олоғайып киткән егеткә Лидия Николаевна көләмһөрәп ҡараны:

— Нимә, оҡшамағанмынмы?

— Лидия Николаевна! — Әбүбәкер ҡапыл ағарынды.

— Нимә, ни булды?

— һеҙ уға оҡшағанһығыҙ...

— Кемгә?

— Теге... фәрештә сүрәтле ҡыҙға. Матрешкаға һүрәт төшөрөүсегә...

Мәҙинә Ленинградҡа билетты самолетка алды. Дауытка, армия мәктәбен үткән, парашют менән һикергән кешегә, бейеклеккә күтәрелеү ҡәҙимге күренеш булһа ла, ҡыҙҙар өсөн был осош иҫтәрендә ҡалырлыҡ ваҡиға буласаҡ, тип уйланы.

Ваҡыт еткәс, уларҙы самолетка ултырырға саҡырҙылар. Күкһылыу Дауытка сытырман йәбешеп, күҙҙәрен йомдо:

— Ҡурҡам, ағай!

— Ә мин — юк! — Көнһылыу әллә ҡайһы арала әсәһенец итэгенән ысҡынып, траптың башына ук менеп баҫҡан.

Самолет эсенә инеп ултырғас та, ерҙән күтәрелеп, болоттар өҫтөнән ҡоштай шыҡыйғанда ла Көнһылыу тыныслана алманы, унын әлдән-әле:

— Әсәй, ҡара әле! Ҡара әле, эсәй! — тигән һоҡланыу һәм ғәжәпләнеү тулы тауышы янғыраны. Ҡапыл ул шымды, әсәһенең ҡолағына үрелде лә: — Әсәй, беҙ йәйғорҙан бейегерәкме, әллә йәйғор — беҙҙәнме? — тип бышылданы.

— Беҙ бейегерәк, — тине Мәҙинә көләмһөрәп.

— Тимәк, мин барыбер йәйғорҙо ашатланым! Мин хатта унан да бейегерәк күтэрелдем, эйеме, эсэй?!

Мәҙинә эйәген Көнһылыуҙың хуш еҫтәр сығарып аңҡыған сәсле башына терәне лә, яурынынан ҡосаҡланы:

Бейеклеккә күтәрелеүгә ҡарағанда, ҡыҙым, тормошта ғин бейеклекте һаҡлау ҡыйыныраҡ. Унын өсөн күп, бик кос кәрәк.

Ьарсын өләс, Хашим олатай, атайымдыҡы кеүек нн мә?

)йс, балам. Улар көслө кеше.

Ә һин?..

Мин, ҡыҙым, көслө булырға тырышам.

Мин дэ... тырышырмын.

Әбүбәкер, Лидия Николаевна менән күрешеү-таны-шыуҙан, ҡаланың архитектураһын, һәйкәлдәрен, метроһын Апшлап күреү тәьҫораттарынан арыған ҡыҙҙар баштары юргә тейер-теймәҫтән йоҡлап китте. Һөйләшеп һүҙҙәре бөтөрлөк булмаған Дауыт менән Әбүбәкер, әҙерәк йөрөп КИлобеҙ тип, урамға сыҡтылар. Мәҙинә Әптеләхәт үлгәндән һ ı ı яҙа башлаған көндәлек-дәфтәрен кухня өҫтәленә асып һа ıды. Бында ул көндәлек ҡыуаныстарын, балаларының ш.мптарын яҙа. Күнеле килһә, сағыу сюжеттарҙың һүрэтен па яһап ҡуя.

Камалетдиновтан ҡомартҡы булып ҡалған көмөш башлы Црломен ҡулына алып, Мәҙинә уйлана төштө: нимәнән башларға? Күкһылыуҙың музыка мэктэбенэ имтиханды якшы ьпргүснәнме? Дауыттың укып та, эшләп тэ йөрөүе, өҫтөнэ һәйбәт-һәйбәт кейемдәр алып кейеүенә шатланыуынанмы?

Бөтәһе лә мөһим, бөтәһе лә Мәҙинә өсөн ҡыуаныс. Ә Әбүбәкер нисек үҙгәргән?! Бөтөнләй малайлыктан сыҡкан. Күҙҙәрендә етдилек, бар булмышында ыҫпайлыҡ, зыялылыҡ. М.чшюгә таныш булмаған башҡа һыҙаттар ҙа бар унын ырайында. Берсә һағыш, берсэ серлелек сағылып китә ı ирашында. Әллэ инде берәй сибәркәйгә ғашиҡ булған унын \ |ы? Эйе, Әбүбәкер үҙ балаһы кеүек якын Мэҙинэгә. Тәҫ-ошы бигерәк әсәһе Гөлбаныуға оҡшаған шул үҙенең дә. \.и га улар Күкһылыу менән бер тәҫ кеүектәр. Әптелэхэт тә \ ны бик ярата ине.

Уйға бирелеп, Мәҙинә эргәһенә Лидия Николаевнаның килеп баҫҡанын да абайламай ҡалған.

— Яҙаһың... Ә нимэ яҙаһын, сер булмаһа? — Лидпч Николаевна үҙенең йомшаҡ, бәғергә үтеп инмәле йылмайыуы менән Мәҙинәнең күҙҙәренә ҡараны. — Башҡорт һылыуы икән һеҙ, Мәҙинә. Белмәгәйнем. Тағы шуға ғәжәпләндсм: Әбүбәкер игеҙәктәрҙең береһенә ике тамсы һыу кеүск оҡшаған.

— Әбүбәкер... — Мәҙинәнең ҡара күҙҙәренә уйсанлыҡ ятты. — Унын тарихы... оҙон. Ә инде ҡыҫҡаса әйткәндә, унын атаһы һәм минең әсәйем — игеҙәк балалар.

— Йә Хоҙай! — Лидия Николаевна Мәҙинә ҡаршыһынн ултырҙы, терһәктәре менән өҫтәлгә таяныи, башын устарыпа һалды. — Ә психбольницалағы ҡатын... Сәбилә... Әбүбәкерҙең ысын әсәһе инеме?

— Ысын.

— Ул меҫкенкәйҙе мин... бик йәлләй инем, бик... — Ҡапыл Лидия Николаевнаның күҙе Мәҙинә ҡулындағы ҡәләмгә төштө. — Көмөш башлы ҡәләм? Ул һеҙгә...

Мәҙинә үҙенең ҡапыл ҡыҙарып китеүен тойҙо:

— Ә, был... бүләк, юҡ, ҡомарткы тиһәм дөрөҫөрәк булыр. һеҙ уны, моғайын, белгән булғанһығыҙҙыр. Әйүп Ғәзизовичты әйтәм... Камалетдиновты...

— Ҡәләм уныҡы инеме? — Лидия Николаевнамың күҙҙәрендә сәйер балҡышты күреү Мәҙинәне һағайта лл. аптырата ла төштө.

— Ул минең иремдең дуҫы ине. Ул үлгәс, йыйыштырыусыһы... зыяратта... миңә ошо ҡәләмде, йәнә бер фоторо семде бирҙе.

«Башҡорт мадоннаһы» хаҡында өндәшеүҙе артыҡ күрҙе Мәҙинә.

— Ғәфү итегеҙ, ләкин был... минең ҡәләм! Мин уны Әйүп Ғәзизовичтың кабинетында онотоп ҡалдырғанмын... Ниса йылдар үткәс... Йә хоҙа! — Лидия Николаевнаның зәңгәрһыу күҙҙәренән эре-эре йәш бөрсөктәре атылып сыҡтылар y,\, ҡуңыр шыма бите буйлап түбән тэгәрәнеләр.

— Зинһар, ғәфү итегеҙ, Лидия Николаевна, — Мәҙим.ч аяғөҫтө баҫты, — мин белмәнем...

— Ултыр, ултыр. — Башкирцева кухнянан сығып китте, күп тә үтмәй, бер фото тотоп яңынан инде. Инде Мәҙинәисц аптырауы сиктән ашты:

ф(мо?! Әйүп Ғәзизовичтың... партбилет эсендә ш фото бит был! Мин уны... альбомыма ҡуйғайным!.. һеҙҙә?

олма, аҡыллым. — Үҙен ҡулға алырға өлгөргән ш ва россмде һаҡ ҡына һыйпаны. — Ата-әсәйемдең, ||ымдың берҙән-бер тоҫө — ошо рәсем.

Әйүп... ағайымдың?!

')йс, матурым. Камалетдинов — минең бер туған ıган. Мин үҙем дэ бер ниндәй ҙә Башкирцева ла, Ппколаевна ла түгел. Камалетдинова Хәтирә Ғәзиз ш

)|| алла! — Мэҙинә устары менэн башын ҡыҫты. — ск иула инде?

Заман! — Лидия Николаевна тороп, ишекле-түрле ıı ы. Шунда ғына Мәҙинә уға өр-яңы күҙлектән һом... Әйүп Ғәзизович менән унын араһындағы иҫ •ҡшашлыҡты күрҙе:

һеҙ... һеҙ бит шундай оҡшағанһығыҙ!

||.)м һсҙ бер-берегеҙҙе танымайынса...

Бвтә бәлә лә шунда: аңлау миңә унын вафатын ксна килде. Мин унда, Таулыла саҡта, гел ı ı ым уға, э ни өсөн икәнен аңлай алманым. Хәҙер бер нимәне лә кире ҡайтарып булмай, бары унын м ə, упың ышығында үткән көндәрем, йылдарым өсөн шыма рәхмәт әйтергә ҡала.

Нппдәй заман был, Лидия Николаевна?! — шишыуҙан Мәҙинәнең тыны быуылды. — Атаны уиды атаға һөсләткән, ҡан ҡәрҙәш кешеләрҙе бер- ı дсшшан яһаған тағы шундай заман булған микән

>и сибэрем! — Лидия Николаевна плитаға сәйнүк тты. - Әгәр ҙә минең ата-әсәйем синыфтар көрәше ||ц.| мснон ағыуланмаған булһа, миңә мираҫҡа ошондай пи яҙыр инеме? Ярай, миңә яҡшы кешеләр осраны, ар, тәрбиә бирҙеләр, э бит минең хэлдэ ҡалған күп приют, балалар йортонан сыҡҡандан һуң үҙ юлдарын аи төрмәләрҙә серене...

Мипсң әсәй ҙә шундай уҡ яҙмышҡа дусар ителгән н ан, күршелә йәшәгән ҡатындың үҙ әсәһе икәнен

белмәй барып донъя ҡуйған... Былары — мин белгоп тиклеме. Барсынбикә өләсәй миңә әле барыһын да һөйлои бөтмәгәндәй...

Лидия Николаевна, сэй яһап, Мәҙинәнең алдына ҡуйҙы:

— Әйүп ағайым һине, Мәҙинә, бик ныҡ яратҡандыр.

— Ниңә?! — Йөҙөнә ҡапыл ҡайнар ҡан бәрелеүҙән ҡып-ҡыҙыл булған Мәҙинә ҡарашын сынаяғына төбәне. — Уныц бик сибәр ҡатыны бар ине...

— Белэм. Күрҙем мин уны. Эйе, сибәр генә ҡатын ине ул. Хәтерләйем. Флориданы ла иҫләйем. Лэкин... нисек әйтерго... Әйүп Ғәзизович күңеле менән бик таҙа, камил кеше ине. Ул үҙе хыял иткән бейеклектә йәшәне. Камиллыҡ камиллыҡка ынтыла. Әгәр һинең ирең уның яҡын дуҫы булмаһа, ул үҙенең хисен йәшерә алмаған булыр ине... Мин быны һине күргәс тә төшөндөм.

Йә хоҙай! Ҡайһылай күрә белә ул **кешене!** Әйүп Ғәзизовичты ла белгән, өйрәнгән, тип уйланы Мәҙинә. Әммо «Башҡорт мадоннаһы» хаҡында ла, Әптелэхәт менән уныц һуңғы мөнәсәбәте хаҡында ла һүҙ ҡуҙғатманы. Мәҙинә өсои уларҙың икеһе лә яҡын, икеһе лэ ҡәҙерле. Барыһын да Мәҙинә бер йөрәгенә биклэгән... Әптеләхәт **менән** Камалетдинов кеүек ике ҙур яҙмышты — ике шәхесте — ул үҙенең кескәй генә бер йөрәгенә һыйҙырған... Мәҙинопең һағыш тулы күҙҙәренән атылып сыҡкан ике бөртөк йош, сикәлэрен яндыра-көйҙөрә, түбән тэгэрэне.

Бер аҙ тын ултырғас, Лидия Николаевна иплэп **кена** Мәҙинәнең ҡулын үҙенең устарына алды:

— Мәҙинэ, миндә бер идея тыуҙы. Ҡыҙҙарындың береһс, һиңә оҡшағаны, бик һығылмалы, белгестэргә күрһәтеп ҡарарға ине!

— Уй! — Мәҙинә ҡаушай биреп Башкирцеваға ҡаранм. — Бейеү — уның яратҡан шөғөлө! Лэкин... балет мәктәбе өсөн ул ҙур инде! Үҫкән.

— Юҡ! Юҡ! Мин уны күҙәттем. Уның күҙҙәрендә күпмс ялкын, көс! Ул теләһә кәүҙэһен осороп та йөрөтөр кеүек!

— Ағас, ҡойма, ҡыйыҡ башы инде уның яратҡан урындары, әллә...

— Минең бик яҡын танышым бар. Көнһылыуҙы күрһэмс! Борисҡа ул оҡшаясаҡ! һин риза булһаң, әлбиттэ.

... мсион игеҙәктәр киткәне бирле Хашим йоҡоһонан ... торып ҡалған ике донъяны ҡарау арытманы ... к талсыктырҙы. Көндәрен мал араһында йөрөп, ... щрлһе менән аралашып, ҡайһылай ҙа үткәрэ, ә бына ... үҙснә урын таба алмай. Тирә-яҡта бүре шәбәйгән ... ҙэ тынıслығын юйҙырҙы. Башта ул быға артыҡ Һилмағайны, әле килеп, Ғәләү менән Вәләүҙең яңғыҙ ... клртәһенә килеп ашап киткәндәр тип ишетте. ... ианырғамы, ышанмаҫҡамы, тип йөрөгәнсе, барып, ... мсмон күрэйем, тип йөрөп әйләнде. Шул. Хэбәр ... Оулып сыҡты. Көтөүселәрҙең йәйләүҙә, Уралда ... ырында бүреләр менән тороҡкан эттәренән тыуған эт-... пислер тиер инең — «урман ҡунаҡтары»ның эҙҙәре ... пмксаһында ярылып ята. Был тиклем эрһеҙлекте ... имрлнмәгән ауыл халҡы умарта кеүек гөжләй, ... Һороға ауға сыҡмаҡсы.

... нәҫеле һарыса дүнэнде ҡыҙғана Хашим, шуға ... ып кәртә яғын ике-өс урай. Әлегә тын. Бөйрэкәй, ... һарыса — барыһы ла имендәр.

... да һағыныуҙан үләләр яҙа Хашим. Шуларға ... ул стем күңелен. Шул ҡыҙҙарҙың эргәһендә турғай ... күреп кинәнде, шуларҙың бөткөһөҙ ... уны башлаған эшен дауам итергә, үҙе һайлаған ... барырға ярҙам итте. Мәҙинәнең: «Кыҙҙарҙы ... булдым!» тигәнен ишеткәс, Хашимдың йөрәге ... төшмәне. Кисерештәрен Мәҙинәгә генә ... гырышты. Эйе, юлдарына арҡыры ятманы ... Коҙокто бит эскең килгәнгә тиклем ҡаҙыр кәрәк. ... эш итэ: ҡыҙҙарының киләсәген сабый ... ҡайғырта.

Ч.шшм оле Әптеләхәт иҫән саҡта, ҡәйнәһе бында ваҡытта ... кмпкән фотоны ҡулына алды. Ике улы, Әбүбәкер и ... ғына, юҡ бында. Кейәүе Әптеләхәт тә иҫәнән ... Хашимдың. Ошондай ҡышҡы оҙон төндәрҙә улар м.ш.1 икәүләп йә сәй эсер, йә һөйләшеп ултырыр ... борсоған, үҙе уйлап башы етмәҫтәй ... ул Әптеләхәткә бирер ине. Бер саҡ унан:

— Ништэп Ленинға шул саҡлы күп халыҡ эйәрҙе икән? Сере нимэлә бының? — тип һораны.

— Әҙәм үҙенән яҡшы яғы менән айырылып торған кеше артынан эйәрә, — тине Әптеләхэт. — Күрәһең, халыҡтың күпселеген үҙенә эйәртерлек сифаттары булғандыр.

Хашим иһә Әптелэхәткә эйәрҙе. Уның тыныслығы, эштс еренә еткереп, ихлас, яратып башҡарыуы, маҡсатына бер нигэ ҡарамай тоғро булыуы эсир итте уны. Әптеләхәттең селекция эшенә ышанып, яҡты хыялдар менән тотоноуын күреү үҙендә бала сағынан йәшэгән рэссамлыҡ комарыныц ялҡынланып, дөрлэп яна башлауына килтерҙе. Эйе, утты ул Әптелэхәттән алды. Уның ҡарашын тоймаған, уның баҫалкы тауышы ҡолағына салынмаған бер көнө юҡ Хашимдың. Ҡайһы саҡ ул уның үҙен күргәндәй ҙә була — тертләп китә. Гөлбаныу ҙа, Әптеләхәт тэ Хашимда йәшәйҙәр. Уның уйҙарында, эштэрендә, төштәрендә. Күрэһсц, Хашимдмц ҡалған ғүмере лә тереләр һэм киткэндәр мснән йонлш барасаҡ. Һуңғы һулышына тиклем улар Хашим менэн берго атлаясаҡ.

Хашим, болдорҙа торған көйө, Тирәкле урамдарындп өйөрөлөп, күккә олғашып, Күктау урмандарын ярһыткаи буранға ҡолаҡ һалды. Тиреҫтэн иҫкән ел ҡырағай йәнлектор ажгырған, ботаҡтар шартлап һынған, ағастарҙың ыңғырашып ауған тауыштарын ҡолаҡка салындыра. Хәс тэ һуғыш яланындағы кеүек. Йәп-йәш, имәндәй мыкты ирҙәр уның күҙ алдында яңынан баҫҡандай, тештэрен шығырлатып, йәшәлмәгән йылдар ялҡынын йөрәктәрендә шартлатыи һүндереп, ауғандай. Хэтер тырнаҡтары каҙалыуҙан асырғанып һыҙлаған йөрәгенә усын баҫып, бер талайш Хашим тупһаға сүгәләне, унан ҡабат ҡалҡынды: бирешмәско, Мэҙинә ҡайтканcы нигеҙҙе һаҡларға, ҡыҙын тере килеш ҡаршыларға...

Көнһылыуҙы атаҡлы балетмейстер дуҫына алып киткән еренән Лидия Николаевна ҡанатланып ҡайтты:

— Ҡотларға мөмкин! Алдылар ҡыҙҙы! — тине ул Мэҙинәне ҡосағына алып. — Ҡыҙыкайҙың һығылмалығы, музыкаллеге барыһын да хайран итте. Башҡалар оҙайлы,

ı и.| күнекмәләр арҡаһында өлгәшкән хәрәкэттәрҙе щыу бер ниндәй көс түкмәйенсә эшләй!

ии.1, шатлығы эсенэ һыймаһа ла, өндәшмәне: млыуҙың бөтә йәшәү рәүеше күнекмә бит инде ул. улһа, ул йомғаҡтай йомарлана, кәрәк булһа, иһыҙ йыландай һуҙыла, аяғынан эленеп тора ла, рында атлап та йөрөй, бер ағастан икенсеһенэ һикерә. ыуҙын әйтеүенсә, ул сабып барған аттың бауыры сығып, кире эйәргә ултыра. «Ата Ғэбиҙә»не ı ı ııı пмрк аренаһына сығар — гимнасткалар эшлэгәнде уәл эшләйәсәк. Әммә... Мәҙинә ҡыҙының яҙмышы ктер капыл, көтөлмәгәндә киҫкен боролош алыуын ıı ıı оотә алмайыраҡ, ҡыуанырға ла, иларға ла ıı рәк гора.

Үҙе ҡайҙа һуң?

Ой, улар аҙағыраҡ килә! Дауыт ағаһы менән Нева щ оср аҙ йөрөп ҡайтабыҙ, тинеләр! Бына, Мәҙинэ пкаиым, барыһы ла яҡшы бара! Бәлки, үҙеңә лэ бында ырғалыр?

ı|)к, Лидия Николаевна, рәхмәт. Дүрт баланы уҡытыр м инә хәҙер алһыҙ-ялһыҙ эшләргә кэрәк. Әбүбәкер менән ıı ıыуҙы ла мин һеҙҙең елкэгә генә һалып ҡуя алмайым.

<)м, уныһы! Уныһы минең өсөн ҡыуаныс ҡына! Тик I үҙең... — Лидия Николаевна Мәҙинә ҡаршыһына рҙы Үҙең нисек йәшәмәксеһең? Колхозда эш Ч> гиһең...

Колхозда эш биргэн хәлдә лэ... Кыҫҡаһы, унда эшләп ıып оулмаясаҡ. Колхозда эүәл-эүәлдән кем урлашты, ына якшы йәшэне.

I>шпмләмәксеһең?

Нишләмәксемен? — Бер аҙға аҫҡа ҡарап тынып ҡалды. га Ьарсынбикә өлэсәһе менән дә байтаҡ һөйләшкәне Коммунистик режимдың оҙаҡ хөкөм һөрә алмаясағын иткәине ул. «Брежневтың эргә-тирәһендәге ҡарт цистар берәм-берәм китеп бөтәсәк, улар урынына м.ипсрэк быуын донъяны үҙгәртәсэк, — тине. — ынындың береһе ауған көндө һин яңғыҙ ҡалырһың. ı ıына мал-тыуар менэн ҡотайыу ауыр буласаҡ — рындан яҙма. Шулар һиңэ нәҫеленең боронғо һен кире ҡайтарырға ярҙам итер». Элек ул баҡшының

һүҙҙәренә бигүк ҡолаҡ һалмағай икән, ә бәлки, тормош ығы-зығыһы, көндәлек мәшәҡәттәр онотторғандыр?.. — Минец умартам бар бит, — тине Мәҙинә ҡарашын иҙәндән алып. - Быйыл бал күп булды. Беҙ эле унының бер тоннаһын ғына тапшырҙыҡ, тағы дүрт тоннаға яҡын бал бар. Ҡайтышлай, Өфөлә туҡтап, магазиндар менән һөйләшмәксемен. Моғайын, улар ҡыйбатыраҡ хаҡҡа алыр...

— Был бик яҡшы! — Лидия Николаевнаның күҙҙәрендо осҡондар ҡабынды. — Әбүбәкер ҡайтҡан саҡтарҙа унының аша ла ебәр! Башҡорт балы бында бик баһалана!

— Эйе, бөтә юлдарҙы ла файҙаланып ҡарармын.

— Бына яҡшы! Колхозда эшләһән, һин ирекле була алмаҫһың! «Акса эшләр өсөн тәү шарт — ирекле булыу!» ти торғайны мине ҡарап үҫтергән инәйем. Транспорт кәрәк булыр бит һиңә.

— Машина алам. Быйыл уҡ. Әптелэхэт күптон теләй ине — ваҡыт тапманы.

— Тимэк, йәй каникулға Әбүбәкер, Көнһылыу һәм мин ҡайтып төшкәндә, һин беҙҙе станциянан өр-яңы «Жигули»ҙа ҡаршы аласаҡһың? Браво, браво! Ой! Шылтыраталар!...

Лидия Николаевна, йылдар һалған ауырлығын онотои, осоп-ҡунып үҙе ишекте асты. Унан һыуыҡ ҡыҙартыуҙан тағы ла матурыраҡ булып күренгән игеҙәктәр, шыршы күтэргои Әбүбәкер, пакеттар тотҡан Дауыт килеп инде.

— Ах! Иртәгә Яңы йыл! — Мәҙинә, бар булмышы меноп яҡтырып, Яңы йыл ҡаршылау мәшәҡәттәрен үҙ өҫтөнә алғап йәштәр ҡаршыһына атланы.

Икенсе бүлек

Оҙаҡҡа һуҙылған аҡман-тоҡман бурандары Ергә мәңгегз килгәндәй, бөтә үҫемлек һәм тереклек донъяһын үҙ ҡеүәтено буйһондороп, бағындырып алырҙай булып дуланы. Күкбүренән таралған тоҡомдо дауам иттереүсе, Тирәклего яҡын ятҡан Мәмилә өҫтөндә эйәр ҡашы кеүек ҡалҡынған Күктау ҡаяларына баҫып, буранға тонсоҡҡан һауаны еҫкәне. һунар өсөн ошонан да уңай мәлдең булыуы мөмкин дә түгел. Унын бауыр ҡалҡытып бүре ҡорона ингән ике көсөгө лә инәһенең ҡылығын ҡабатланы. Ике-өс көн элек ҡоралайҙы

ы **улар,** шунан бирле ҡорһаҡтарына йүнле-башлы ягканы юҡ. Буран моронға төрлө еҫтәр килтереп Н ыкгы көсәйтеп, эсәктәрен көҙән йыйыра — мәгәр кмаи. Улар йәшәгән төлөккә ситтән килгән ят, төтөн и.щ сптарҙың килеп тулыуы һағайта уны. Үҙҙәре юүргә кесерәк, мәгәр уҫаллыҡтарын, әрһеҙлектәрен кәм к)к. Үҙе йәшәгән төлөктә әҙәмгә лә, малға ла мау ҡағиҙәһен бер түгел, өс боҙған өсөн Инә бүре ....ерәһенең башына үҙе етте, ҡалған икәүһе ана шул гәр арҡаһында һәләк булды. Тегеләр кешенең нляпланы, ә атҡыс тотоп сыҡҡан әҙәмдәр унының рен ауланы. Хәҙер унының бары ике ҡурпыһы ҡалды: ул в кыз. Үзе лә парһыҙ. Иш эҙләп тау-урман ҡыҙырып .....итер ине — ҡурпыһын ҡурсыуһыҙ ҡалдырыуҙан гегеләр, ситтәр, әрһеҙләнгәндән-әрһеҙләнә. Инә иси мосһөҙләгөнән файҙаланып, уларҙың морон һунар итә. Күкбүре йылға башында сауҡалыҡта ш карт инә мышыны күптән күҙәтеп, ауларға м. карҙың батҡыл сағын көтәүеллэп йөрөй ине — ны гып баҫтырмай тотоп ашаны. Был — уғрылыҡ. чоньяһы Оло Тәртипкә буйһонған — былар шуны

үрһолонде, йәнә елде тыңланы, еҫ араланы. Алыҫтан, урмиидар ҡаплаған тауҙарҙан, сабыр һиллек, уға ҡуша гәре лә килеп бәреләә. Ул, Инә, балаларына тоҡом- иерсп йәшәрлек ышанысылы мөхит булдырырға

ір оаҫҡан, үҙенең һәм ҡурпыһының үрсем ҡаны аҡҡан ....|рып китеү еңел булмаһа ла, Инэ тэүәккәлләргә

Мин ҡайҙа?! — Сэмәрә, күҙен асып, тирә-яғын Мин... балам!

ш иҫенә килерен көтөп торғандармы ни: аҡ халатлы шундуҡ хәрәкәт итә башланы:

Ьореолма! Иң мөһиме — тереһең! Бына шатланыр нп п м ш ц!

Сәмәрә үҙе менән ни булғанын, ваҡиғалар сылбырын хәтерләргә тырышты. Эйе, эйе! Ул ауырлы ине. Ҡорһағындағы балаһын иркәләп туймай ине, ҡасан уның яҡты донъяға тыуырын зарығып көтә ине! Сәмәрә система ҡуйылмаған ҡулын экрен генә өҫкә күтәрҙе, бармаҡтары бушлыҡҡа ҡағылды. Йөй?! Эсендә йөй?! «Балам»!

— Һиңә һөйләшергә ярамай! — Аҡ халат кейгән ҡатындың бойороулы тауышы ҡапыл әсәһен хәтерләтте. Ул ҡайҙа икән?! Ах! Бөтәһе лә иҫенә төштө! Башта унын хәлен бик яҡшы тинеләр... Алпамышалай ул табасаҡһың, тинеләр. Әсәһе лә ҡыҙының хәле менән килешкәндәй булды, хатта бәләкәскә тип кейем, юрған, алмаш йүргәктәр ҙә күтәрсп ҡайтты. Унан һуң бер килгәнендә, врач уға: «Ауырынды операция менән алырға тура килә. Бала ҙур, һинең тач һөйәгең үҫешмәгән. Балаң тере тыуһын тиһәң, ричалаш!» тине. Әсәһе уны больницаға үҙе килтереп һалды. **ОперащЦ** бүлмәһенә Сәмәрә үҙ аяғы менән инде, өҫтәлгә ятты, ә башҡаһын хәтерләмәй. Тимәк, унын балаһын операция мспои алғандар! Эсен ярғандар...

— Бала ҡайҙа?!

— Тынныслан!

— Баламды килтерегеҙ!

— Ярамай. Хәлең арыуланғас... Ул әле бик...

Шул саҡ ҡайҙандыр тәрәндән, баҙҙан сыҡҡандағы ксүск тауыш ишетелде, эсәһе тауышы:

— Ниңә дөрөҫөн әйтмәйһегеҙ?! Шул төндө үк үлде бит бала! Бөгөн ерләнек. — Әсәһе ҡульяулыҡҡа төрөлгән **низер** сығарып унын усына һалды. — Тупраҡ. Ҡәбер тупр;п ы Күкрәгенә шуны баҫ, тиҙерәк онотораһоң.

— Ай! Юҡ! Ай! — Сәмәрә үҙен ҡап-ҡара **упкындаЯ** йотолғандай хис итте.

— Алло! Камилла Харис ҡыҙы Ҡыҙрасова һм булаһығыҙмы? — телефон сымынын теге осонда яңғыраған тауыш үтә серле кеүек булғас, ул һағая төштө.

— Мин. Тап үҙе.

— «Сабыйҙар йорто»нан борсойҙар һеҙҙе, теге ЭШ буйынса.

< ш пә... — Камилла бөтә тәне буйлап тулҡын йүгереүен Миңә... барырғамы?!

| илегеҙ. Өскә. — Яғымлы тауышлы ҡатын трубканы юн-оҙон сигналдар ғына ишетелде.

йо хоҙай! Камилла, ҡапыл хәле бөтөп, диванға Кемде күрер ул?! Үҙенеке итеп ҡабул итә, ярата

мы 'ә ире? Әммә ваҡыт көтмәй. Машина! Ярай, такси

рыр ә урарға?! Бәй, уны яланғас көйө бирмәҫтәр инде. ММ п.фырға кэрэк буласаҡ, йэнэ ашатырға. Камилланың ры үҙҙәренән-үҙҙәре күкрэктәренә күтэрелде һәм үҫмер ірзыҡылай үҫешмәгән, шул көйө ҡороған имсәктәрен іх! Хәйер, баланы бит ул үҙе тапманы, тимәк, иәсәк тә...

Ищ, ләкин сәйер, ят хистәр солғанышында юлға ш Камилла. Көтөп алған, ләкин билдәһеҙ, ят йән н.|, миңәлер, ҡыуандырманы. Әйткән һүҙ — атылған .... ртта хатта еңелеү көткәнен белгән сағында ла алға ып ойрәнгән Камилла, бар көсөн йыйып, таксопарк рын йыйҙы.

Бішин ыц ике тамсы һыу кеүек үҙенә оҡшауы аптыратты ш ы.

Биш кило ла егерме грамм булып тыуған, — тине Сабыйҙар йорто»ноң баш табибы. — Баһадир. — Шунан ул быйға, бер Ҡыҙрасовҡа ҡараны: — Әйткәндәй іһын, бала һеҙгә оҡшап та тора! Һеҙҙеке кеүек киң өҫкә сөйөрөлгән ҡаштар, ҡыр морон, тфу-тфу... ......ыуһа ла был тиклем оҡшамаҫ!

Кямилла ханым, — ул бер яҡ ситтәрәк торған ....|ми ҡараны, — миңә оҡшаған ғына ул табыу •..... хыялланғандыр.

Ахыры шулай. Былдай хәл һирәк була. Тимәк, баланы |улдымы инде? Дөрөҫөн әйткәндә, былдай баһадир инең гслэһэ кемгә тоттороп ебәрергә ҡулым бармай. күрюс, күңелемә еңел булып китте!

ны алып ингән шәфҡәт туташы Камиллаға:

и ослэһегеҙме? — тип өндәште.

— Ни бит әле, иптәш баш врач, — Ҡыҙрасов бер ҡатынына, бер уға ҡараны, — Камилла ханымды баланыц кемдән тыуыу мәсьәләhе бик борсой. Беҙ алырбыҙ, ә әсәhе таптырып йөрөй башлаhа? Ә унан hуң, нисек кенә инҡар итергә маташмайыҡ, нәçелселек тигән нәмә бар бит инде ул. Мэçәлән, серек картуф сәсеп, яҡшы уңыш алып булмай...

— Мин hеҙҙең менән тулыhынса килешэм! Иçәрҙои аҡыллы бала тыуғанын күргәнем юҡ минең дә. Ни сәсhәң шуны ураhың. Мэгәр был сабыйҙың донъяға килеүе... **Беҙҙә** бөтә мәғлүмэтте лә hөйләргә ярамай, ләкин ул яҡтан hеҙ тулыhынса тынıс була алаhығыҙ!

Баш табип, шэфҡәт туташы баланы урап бөткәс, Ҡыҙрасовтың ҡулына hалды:

— Улығыҙ менән ҡотлайым **hеҙҙе!** Үҙегеҙгә иптэш, ҡартайған көнөгөҙҙә тсрэк булhып, **егет** корона тулып, фамилияғыҙҙы данлаhын, нәçелегеҙҙе **ҙурлаhын!**

— Амин! — Быға тиклем әйтеп өйрәнмәгоп **Һеҙҙен** ауыҙынан еңел генә сыҡканына ғәжәпләнде Ҡыҙрасов. - Шулай булhын.

Урамға сыҡкас, руль артына үҙенә ултырырға кәрок булғас, Ҡыҙрасов баланы Камиллаға тотторорға итте, әммо ҡатыны уны йэ төшөрөп ебәрер, йә килештереп тота алмаçтай тойолдо шикелле:

— Башта машинаға инеп ултыр, шунан алдыца hалырмын, — тине ҡабаланып. Ҡатынының йәhэт ҡыбырлам алмай шаҡ ҡатып тороуы hарыуына тейҙе. — Нимә **күҙле** бүкэн кеүек тораhың?! Баланы өшөткөң киләме?

— Аh! — Камилла hөрөнә-йығыла машина ишегепсц тотҡаhына йэбеште.

— Алға түгел, артҡа ултыр!

Баланы өйгә индергәс, Ҡыҙрасов йэhэт кенә сисендс, өçтөн алыштырып, уға ашарға әҙерләй башланы.

— Эшеңә китмәйhеңме ни?!

— Ниндәй эш?! Ниндәй эш?! Был эш түгелме?!

— Унынhын ғына мин үҙем дә...

— hин, ана, ваннанды ҡара. Артыҡ-бортоҡ эйбср булмаhын. Ашарға үҙем әҙерләйем, үҙем йыуындырам. Һим бала ҡарап өйрәнгән кешеме? Ә беҙ күмэк үçтек...

Бала мыҡырлай, иларға самалай башлағас, Камилла йоҡо бүлмәhенә атлығырға иткәйне, Ҡыҙрасов алдан өлгөрҙө:

... гаатма, тирләгән булhа, hалҡын тейер!

Унынhын ғына белэбеҙ инде.

... ышанhаң... — Баланы алдына алып, шешәләге ... имеҙә башлағас, Ҡыҙрасов ҡатынына инде ... и.шыслана төшкән тауыш менән өндәште: — ... исләhеңме нишләйбеҙ?

II.

Ьнланың hинән тыуған булыуына документ йүнәтәбеҙ, ... йорто»ноҡон юҡ итәбеҙ.

йллә... Был мөмкинме икән?

Лкса бөтэhен дә эшләтә. Улым өсөн аҡса ... — «Улым» hүҙенең еп-еңел эйтелеүенә **мсопләнде** Ҡыҙрасов, Камилла ла уға сэйер генэ ҡараш ... Ҡыҙрасов быны **hиҙҙе.** Ашап, тынысланып, йоҡлап ... йөҙөнән күҙҙәрен айыра алмайынса: — ... ашас, атай-әсэй булып уйнай алмайбыҙ инде, ҡатын. ... ысын әсэй булабыҙ. Эйе, — тине.

... Сәмәрәне больницанан машина менән барып ... булған инде. Ҡыҙының ауырлы йөрөгәнен ... иа күрҙе, ҡыҙ көйө бала тапканын инде ғәләмдән ... п оулмаçын төшөндө. Кеше гөж килеп hөйләп алыр ҙа ... отор. Унын ҡарауы оятсылығын сәғәт, минут hайын ... рөп, йәшлектәге хаталарының тере шаhиты, килер ... кортәhе булып, балаhы йөрөмэйәсәк янында. Бәндә ... булмай, э үҙе хаталарын аҙаҡ күрэ алмай. Сәмәрэ ... барып, күп нәмәне төшөнмәй. Ул әле Ғәлимә ... кисереп өлгөрмәгэн. Бөгөн уға был асы хэкикэтте ... аңлата алмаçын төшөндө Ғәлимә. Шуға күрә лэ ... яhаны: баланы тыуыу менән «Сабыйҙар ... сабыйҙың тере икэнен врачтан башҡа ... бслмәне. Иртән иртүк зыяратта арҡырыhы-буйы ... гимер кәртә барлыҡҡа килде, кәртә эсенэ ҡағыҙ ... гупраҡ килтереп өйөлдө.

... бала тыуҙьфыу йортонан тотоп сыҡкан ҡып-... юмоферҙәре таң атҡансы ҡар ҡаплап өлгөргән кес ... оçтөндә ятып ҡалды...

Барсынбикәне йоҡо алмай. Көн менән төн унын өсон күптән буталды. Бында, дауаханала, ваҡыт аҡҡаны ла, ғүмерҙең үткәне лә һиҙелмәй. һөйләшмәү унын ҡеүәтен арттырҙы. Бәндәнең был шөғөлгә күпме көс сарыф иткәнен ул ошонда ғына төшөндө. Ана, төнгө һиллек хөкөм һөргон коридорҙы аяҡ тауыштары янғыратты. «Бында киләләр!» тип уйланы Барсынбикә, һәм, ысынлап та, унын палатаһынын биге шылтыраны — ишектә баш табип үҙе күренде:

— Хәлдәр нисек? — табип тотлоҡто, артабан ни әйтерго белмәй, туктап ҡалды.

— Төрки ҡәүеменән икәнһең. Ярай. Үҙемдең урыҫса белмәүемде әйтәм... — Барсынбикә, карауатынан ҡалҡынып, аяҡтарын иҙәнгә төшөрҙө.

— Мин иҙәнгә... балаҫ түшәттерермен. Иҙән һалҡым. — Баш табип өтәләнде, ултырғыстан бер торҙо, бер ултырҙы. «Тынғыһыҙлана, — тип уйланы уға ҡарап Барсынбикә. — Тимәк, ул барыһын да бер тынала һөйләп бирәсәк. Шул аркала башкөллә Барсынбикә нәрәтәһенә килеп ҡабасаҡ. Эйе, сәбәләнеү әҙәм балаһынан эшләргә кәрәкмәгән ғәмәлдәрҙе ҡылдыра, ҡоллоҡҡа этәрә. Мин иһә ашығырға, үҙем башлаи ярҙам тәкдим итергә тейеш түгелмен. Үҙ сәғәтем һукканды көтәсәкмен. Әле унын Барсынбикә ярҙамына мохтаж саҡтары бихисап буласаҡ. Эйе...»

— Минең исемем Роберт. Роберт Эдуардович. һеҙғо Роберт тип өндәшергә мөмкин.

— Яҡшы, Роберт улым.

— Улым... — Баш табип ирен сите менән көлөмһөроп ҡуйҙы, ләкин ул тирәлә башҡаса һүҙ ҡуйыртманы. Моратова, әйтегеҙ эле: һеҙ ниңә бында килеп ҡаптығыҙ?

— Хөкөм ҡағыҙҙары һинең ҡулға килеп инмәнеме ни, Роберт улым?

— Инде! Уҡыным... Ләкин... Минә ҡалһа...

— Был бик ҡатмарлы мәсьәлә. Мин ата улды, инә ҡыҙҙы танымаған, бәндәләрҙең күҙен шайтан бәйләгән, зиһендәреи иблис томалаған сакта йәшәнем. Эйе, ул саҡта мин йәш, көслө инем. Мин ана шул өйөрмәнең ҡап уртаһында ҡалдым. һыуҙан ҡоро сығып булмай: еүешләндем. Әгәр мәүлә миңо

... ... икән, тимәк, мин ғәйепле. Донъялыкта ҡылған ... яуап биргән яҡшы.

('лмер кеше һеҙ. Ә бәлки һеҙ бер ниндәй ҙә тылсым ... ло түгелһегеҙҙер? Улай тиһәм, һеҙ ҡырҡ көн ... о үҙегеҙ һау-сәләмәт. Ҡандың анализы — йәш ни ... кеүек.

... һин үҙең, улым, тылсым көсөнә ышанаһыңмы?

Юҡ.

Мпи дә... ышанмайым.

Ышанмайһығыҙ?!

Эйе, ышанмайым. Ләкин мин, һеҙҙән айырмалы ШТО, Ерҙе һәм Күкте, бар тереклек, үсемлек, утты-һыуҙы ... ккл килтергән илаһи көскә ышанам. Ул көс һәр кешелә ... Мин уға ышанам.

Бына миңә ҡарап... нимә әйтә алыр инегеҙ?

... нимә ишетергә теләгәйнең?

... габип өндәшмәне. Барсынбикә лә ашыҡманы. ... >ш сығарып булмаҫын белә ул. Дауаланыу ... булһын өсөн дауаланыусының уға ышаныуы, ... асылыуы кәрәк.

... йәнә ҡабырсығы эсенә инеп бикләнеүен ... Роберт Эдуардович урынынан торҙо.

Һеҙ... Ниндәй ризыҡҡа өҫтөнлөк бирәһегеҙ?

М.иелсә-емешкә, — тине Барсынбикә, табипты йылы ... мспон оҙатып. — Мөмкин булһа инде...

Булыр... — Хужа, башын көмөрәйгән яурындары эсенә ... һирсм, палатанан сыҡты, унын артынса ишек бикләнде. ... мибикә еңел тын алды. Аллаға шөкөр! Хәҙер уға ... оутаусы уколдар ҡаҙамайҙар, теләмәгән ризығын ... м.гжбүр итмәйҙәр. Хатта бер тапҡыр һауаға сығарып ... мр. Әйткәндәй, ул шунда үҙен хөкөм иткән ... күрҙе. Балнис кейемендә. Барсынбикәне танығас, ... ц сиге булманы тегенең. Барсынбикә иһә уны ... икснсе осрашҡандарында прокурор бит уны ак, зиһенлеләрҙең бында кәрәге юҡ.

ыпбикә, карауатына һүҙылып, күҙҙәрен йомдо. Эйе, ... хаҡы юҡ. һиҙә: был унын ғүмерендәге иң ... h.ш иц зур алышы. Башҡа алыштар ҙа булыр, тормош ... Могәр быныһы — ҙуры. Был алышты Барсынбикә ... килер иң һуңғы алыш итеп ҡабул ҡылыр.

Ғөмүмән, әҙәм балаһы тере сағында ҡылған һәр эмәлен иң һуңғыһы күреп башҡарһа, иҫ китмәле ҙур уңышҡа өлгәшер ине! Ә бит ғәмәлдәрҙең иң һуңғыһы иң сифатлыһы була. Шуға күрә лә Барсынбикә ашыҡмаясаҡ: ул йә ошо ғәмәле менэн үҙен бынан алып сыға, йә ошо дауахананың күккә ашҡан мөрйәле мейесендә көлгә әйләнә. Башҡа юл юҡ. Бәндә булып Ергә килгәс, уның шатлығы ла, көйөнөсө лә, һөйөнөсө лә булырға тейештер. Мәгәр бөгөн уға ныҡлыҡ кәрәк. Бер ҡайҙан да, бер кемдән дә ярҙам килмәҫен ул яҡшы белә. Уға бары үҙ көсөнә, үҙ иманына ышанырға һэм Аллаһ тәғәләнең үҙенә һыйынырға ҡала...

— Уф! Вәләү! Вәләү! — Ғәләүетдин инде нисәнсе төн йоҡоһонан баҫлығып уяна.

— Нимә бар? Ни булды?! — Тауышҡа иләмһсрәп тороп ултырған Вәләүетдин шырпы сыйҙы. — Ни бер төн етһо аҡыра ла ятаһың ул?!

— Баҫтыра бит! Ҡысҡыра!!!

— Кем?

— Кем булһын, Шарик! Шәңгәрәй! Ҡәһәр һуккан Никита...

— Шәңгәрәйҙән ҡурккан йәнемде!? — Вәләүетдин, тороп, ҡаҙан төбөндә ҡалған макаронлы ашты ижау менән һөрпөлдәтә башланы.

— Ҡурҡмаҫһың тегеләй! Ҡәберҙән сығар тип муйынға йәбешә!

— Миңә нимә эштәп йәбешмәй?!

— һин... Әллә... һин ... эсмәйһең бит...

— Эсмәһәм дә һинең ыңғайға ҫиңмай булып бөттөм инде!

— Эй, ҡустым...

— Нигә, дөрөҫ түгелме?! Ҫиңмай булмаһам, һин алйотто тыңдап, тере кешене ҡәбергә тығаммы?

— Ну бит... Уның тере икәнен һине беләп мин түгел, брач әйтә алманы.

— Әллә инде, — Вәләүетдин, туйып, ҡарҡ кикереп, кире урындыҡ ширлегенә ултырҙы, ашыҡмай ғына тәмәке урап, береһен ағаһына тотторҙо, икенсеһен тешенең араһына ҡыҫып, мөрйәне асып, мейес алдына сүгәлэне. Кешс

на күрснср әмэл ҡалманы. Бер Хөсэйен аңцай шикелде.
I ı гына битәрҙәмәй.

Андай ҙа у... Ул да китергә әҙерләнэ. Кисә һөйҙәп гор ю книомдә ауыл өҫтөнән яраплан шикелде утты эҙ ы р ı ап Һарайғыр осоп үтте, ти. Эйәрендәге бы кем тип ıһам, Әптеләхәт, имеш. Әптеләхәт ҡапыл эйелеп мине рҙе ио, һарайғырға менгәштерҙе и һәм вәссәләм... осоп та
ı

Нолоүстдингә был хәбәр тәьҫир итмәй ҡалманы: ул да бит ıı м.шюй арып, арманһыҙ булды. Ғәләүетдинде ıәием тип һағалап йөрөй торғас, ҡуйы сәстәре һирәгәйҙе,
II рҙы, гсштәре ҡойолдо, урты эскә батты, күҙҙәренең нуры ı ғы, норәгенән ҡеүэт китте.

И\, үтте ҡөмөр...

Өйттем мин һиңә... Үҙ юлың менән бар, тинем.

Вәләүетдин ағаһының тәмәке осҡонланған саҡта ҡапыл иҡтырып киткән йөҙөнә ҡараны: йәл уға Ғәләүетдин, һаман ı Иисегерәк йырлай ине ул! Буйға һомғол, беләккә ıı мис! Араҡынан мин көслөрәкмендер, тартып алырмын шайтан тырнағынан, тип уйлағайны Вәләүетдин. Юҡ, ı рҙып ала алманы. Шайтан унан көслөрәк булып сыҡты. Ә р Әйтмәһә лә, Шәңгәрәй рухы уға ла тәкэт таптырмай: гөшөндә гүгел өнөндэ, әле бер, әле икенсе мөйөштэн башын ......слсн сығара, йә көлә, йә илай. Ауылдың олоһо ла, һе пә уға: «һин — үлтереүсе!» — тип бармаҡ менән гор гөп күрһәтә кеүек. Эйе, арыны ул, талсыкты. Аллаһ I.) нчалайым тигән бәндәһен зиһендән яҙҙыра, тигәндәрен томс бар Вәләүетдиндең. Күрәһең, үҙ юлын табырға ҡарышмай, эскесе ағаһын әрсәләп ғүмерен бушҡа, аһыҙға үткәргәне өсөн раббыһы уға яза ебәргән: зиһенен илаı им. Ғүмере буйы тауыҡ та салмаған, серәкэйҙән ı ı иән жәһенән ҡан сығармаған Вәләүетдин көпә-көндөҙ һыплы кешене ҡәбергә тыҡты. Юҡ уға ярлыҡау! үетдин өсөн ул инде яуап бирмәйэсәк. һәр кем үҙ ғәмәле өары сик үҙ ғәмәле өсөн генә яуап биргәнен ул яҡшы .....к>. Ә бит күп әҙәмдәрҙең ғүмере «Теге шулайтҡан и өыл шуны шулайтҡан!» тип сүбәк сәйнәп үтә. Ә бит ŋ ıә: «Йәмәғәт! Мин бит шулайтып ҡуйҙым!» — тип һор ш һалмай, саң һуҡмай. Вәләүетдин кире урынына менеп, ı өнә йомарланып ятып алған ағаһына ҡараны. Эйе,

бынан һуң һинэ үҙ йүнендә үҙеңэ күрергә тура килэсәк, мин үҙемдең тауҙай гонаһым менән башҡаса әҙәм күҙенә күренеп йөрөргә теләмәйем... Хуш, ағайым. Әптеләхәт Хөсәйендс һарайғырға менгәштереп алып киткэн кеүек, минең арттан килеүсе лә табылыр. Шул уйҙар менән Вәләүетдин арҡан алды, уянып өлгөрмәгән ауыл урамы буйлап үргә осҡа — Күктау һырттарына барып тоташҡан Сауҡалы түбәгә юл тотто...

Мирхәйҙәров үҙенең күптәнге уйын тормошҡа ашыра: клуб ҡыйығы эсендә һаҡланған манара ҡоролмаһын ерго төшөрөп, ҡороп ҡарамаҡ.

Колхоз клубты икенсе урынға төҙөргә күитән йыйына, ә Азат үҙе ҡолатышҡан манараны үҙе кире урынына ҡуйырға ниәтләнде! Эйе, хәҙер ул кем олоһо, кем кесеһе. Тағы ла йәшәгән тиклем йәшәмәйәсәк. Атаһы, олатаһы рухтарының хәйер-фатиxaһын алмай тороп, әхирәттә улар ҡаршыһына нисек барып баҫһын?!

Клуб ишеге башындағы көслө ут яҡтыһында Азат ҡоролманың һәр таҡтаһын барлай башланы. Манараныц әүәлге хәлен күреп белгәнлектән, уны бөтә нескәлектәре менән күҙ алдына килтерҙе. Ҡарағас таҡталар әлегәсә ныҡлы, бирешмәгән. Әйтерһең, улар ярты быуатҡа һуҙылған ваҡыт аралығын үтмәгән. Таҡталар һаҡланған да бит, Мирхәйҙәров — кеше, ошо арауыҡта ниндәй генә ташҡындар, боролоштар аша үтмәне, ниндәй генә ялҡында өтөлмәне лә, ниндәй гено уттарҙа көймәне. Партия ҡушыуын үҙ намыҫы ҡушыуы тип аңлап, ҡырын эштәрҙе аҙ ҡылманы. Мәҫәлән, алыҫ Себер урмандарында бер һыныҡ икмәккә зар булып, туң утындай ҡар эсендә ятып ҡалған сабыйҙарҙа уның өлөшө лә бар: кулактарҙы бала-сағалары менән ул да ауылдан һөрөштө; ғилемле булған һәм шул ғилемде халҡына өләшкән, иле өсөн янған-көйгән ауылдаштарын улмы сүпләшмәне?! Терһәк яҡын да, тешләп булмай. Оҙон ҡыштың оҙон төндәрендә бәғерҙе тырнап олоған буран тауышында ул үҙ күңеленең болоҡһоуын да ишетә... Эйе, Ватан өсөн ул ҡан да ҡойҙо, һуғыштан миктэп ҡалған хужалыҡты ла хәленән килгәнсә

решге. Ләкин... әжәл менән күҙгә-күҙ осрашыр мәленә іегә әҙер түгел. Йоҡоһоҙ төндәрендә уй йомғағын һүтә ш ул инде күп нәмәне төшөндө. Үҙ-үҙенде алдау ҙа, ган касырға тырышыу ҙа файҙаһыҙ. Оҙон-оҙаҡ уйларға ҡалмаған. Тормошондағы артыҡ-бортоҡ нәмәләренән отолдо ул, сөнки береһен дә үҙе менән «Теге донъя»ға кигсп булмаясаҡ. Мирхәйҙәров үҙенең был донъяла р иң мөһим эшенә әҙерләнә. Ул башҡа быға тиклем г.шдарынан һәр йәһәттән дә камил булырға тейеш!

Һаумы, ағай!

Атаҡ... был һинме, Вәләүетдин ҡустым? — Ммрхлйрров ҡулына аҡ сүс арҡан тотҡан һонтор иргә есерәк ҡараны. — һы! Убыр сыҡмаҫ төндө... арҡан I... ул нимә эшләп йөрөйһөң ул, ә?!

И.чюүстдин алмаш-тилмәҫ баҫып, ыҡ-мыҡ итте:

Бы-бына һи-һин дә йө-йөрөйһөң бит...

Мин йөрөмәйем, эш эшләйем. Ҡана, эйел әле.

Эйелдем.

Хәҙер арҡанынды һуҙып һал да өҫтөнә таҡталарҙы өй.

Мимештәп?...

Бөгөнгә эш ошоноң менән бөттө. Ҡыйыҡ эсенә ірҙы кире күтәрергә кәрәк.

һы, мин... бушамайым бит әле, ағай...

)шем эйәһе булып торма инде. Таң атҡансы гырып өлгөрөр кәрәк. Үҙемдең көс етеңкерәмәй.

Нимә һуң был?

Мосет манараһы.

Валәүетдин һыҙғырҙы:

Ни бысағыма алып төштөң?

Корәккә, ҡустым, кәрәккә. Заманында уны мин дә щ.....ым. Манара менән ҡуша иман да ҡолар тип кем ан?

Өллә быларҙы кире ҡороп ҡуймаҡсыһың?

Өҫтөнә баҫтың. һин, ҡустым, балта оҫтаһы бит, мужит игерһең, ә?!

Мман, ағай, минеке лә ҡолаған. Минең манараны кем шср икэн?..

Әле ҡайҙа юл тотҡайның?

(ауҡалыҡҡа... аҫылынырға...

Нишләп?!

— Оятымдан... кеше күҙенә күренер эмэл ҡалманы...

— һы, — Азат Мирхэйҙэров, йорон бейэлэйҙэрен аҫтына түшэп, клуб болдорона ултырҙы. — Көйрэтэйек әле, ҡустым...

— Бэй, һин...

Азат Мирхэйҙэров ҡул һелтэне:

— Төрлө саҡ була. Былай, тартмайым. Әле һинс тыңлағас... Шулай Ябраил ғәләйһиссәләм атабыҙ әҙәм ғәләйһис-сәләм эргәһенә килгэн дэ: «Әй, әҙәм! Аллаһы тәғәлә һиңә өс нәмәне биреп ебәрҙе: — аҡыл, оят, иман тип атала улар. Шуларҙың береһен һайлап алһын, тине», тигэн. Әҙәм аҡылды һайлаған. Ябраил оят менән иманға инде кирс китергә ҡушҡан. Былар китмәй ҙә китмәй икән. Иман әйтә ти: «Миңә Раббым аҡылды ташламаҫҡа ҡушты, аҡыл булған ерҙә ҡалырға бойорҙо!» Оят та: «Миңә лә Раббым аҡыл һәм иман булған ерҙә йәшәргә ҡушты!» тигән. Шулай итеп, улар икеһе лә аҡыл булған ерҙә ҡалған.

— Шунан?

— Шунан ни шул: оятың булғас, оятты үлемдән көслө һанағас, иманың да, аҡылың да юҡ түгелдер тиеүем...

— Эй, ағай, — йәшкәҙәгән күҙҙәрен Вэлэүетдин һыуыпсган ҡыҙарған ҡулының һырты менән һыпырҙы. — Әйтеүе еңел дә у...

— Аңлайым. Намыҫ ғазабы үлем ғазабынан көслөрәк булмаһа, мин дә бөгөн түшэгемдэ тыныс ҡына йоҡлап ятҡан булыр инем. Хоҙайҙың иң яратҡан сифаты түҙемдер, сабыр итәйек, ҡустым. Оло кешенең һөйләр хәбәре күп була, һин, Вэлэүетдин, миңә ингеләп йөрө. Ә яҙға, — ул манараға ымланы — бынауҙы ҡороп ҡуяйыҡ. Мужит, беҙҙән һуң да уны берәйһе алып ырғытыр, боҙоҡлоҡ беҙҙең ҡул менән ҡылынмаһын. һәр бэндә үҙ ҡылығы өсөн үҙе яуап бирә — мин шуны аңланым.

Шығыр, шығыр, шағыр-шоғор... Ғәлимәнең йәненә тейә был тауыш, тәҡәтен ҡорота. Уф! Ҡасан тымыр, ҡасан... «Етте! Бэүелтмә шул нәмәнце! — Ғәлимә бишек тирбәткән Сәмәрәнең муйынына барып йәбеште, — туктайһыңмы, юкмы?!» Мәгәр йәш, көслө Сәмәрә бирешмәне, Ғәлимәнец үҙен быуа башланы. Ғәлимә ысҡына алмай, уның тырнаҡтарынан ҡотола алмай. Берҙән-бер юл — бишекте

ірсү. Әйҙә йәһәннәмгә осһон балаһы! Ул шулай итте лэ: п.ш кулы менән сәңгелдәктең бауын өҙә тартты. ілэк түңкәрелде, ләкин унан... йүргәктәр, күлдәктәр п.... ланы. Бала юҡ. Бала, бала ҡайҙа?!»

ыуышына үҙе уянып киткәс тә, баҫлығыуын аңлағас іһенен йыя алмай хитланды Ғәлимә. Төш. Төш икән! Әл . Ҡараңғы бүлмәлә сәғәт һуға, кистән сыҡкан ел, лйлонеп, тәҙрә ҡапҡастарын шығырҙата, мөрйәгә әллә бала илаған, әллә бесәй мыяулаған тауыштар

Ул терһәгенә ҡалҡынды. Күрше бүлмәгә ҡолаҡ

Гып-тын. Ниңә эле Сәмәрәнең хатта тын алғаны гелмәй?! Көндөҙ улар йәнә уның улының «ҡәберенә» ылар, зыярат ҡылдылар. Сәмәрә ауыҙ асып ләм-мим һүҙ іне. Ҡәбер кэртәһенең һалҡын тимеренә күкрәген терәп, иа торҙо. Ә кистән ул әхирәтендә, судья ҡатында, һулды. Унан нисек, ҡайһылай ҡайтҡандыр... Эйе, ныҡ н.....рҙө улар икеһе лә. Зәйтүнә ханым, күптән түгел ирен энлектән, ҡайғыһынан эсте, э Ғәлимә... яңғыҙлыкка ителгән яҙмышын ҡарғаны. Әллә кемдәрҙе һүкте, и шиммҙы ла, Саяфты ла, Ҡыҙрасовты ла телгә алды.

рәкмәҫ ине... Ниңә, ниңә һөйләне ул быларҙы?! Ә бәлки ымәгәндер ҙә?! Уйлаған ғыналыр?! Бәлки... Ул, күнеле болғанғас, урынынан торҙо, һәрмәләнеп барып ут ҙы. Ьушанғас, еңелерэк булып ҡалды. Әсәһенә ярҙам іекте белә Сэмэрэ, белһэ лэ ҡуҙғалмай ята. Ит изгелек яуызлыҡ. Ғәлимэ уның киләсәге, именлеге хаҡына китмәле аҙымға барҙы — ә ул тыныс. Әсәһен хатта бар Ослмэй! Буш сәңгелдэк. Ул Ғәлимәнең инде нисэнсе импөнә инә. Ғәлимэ һиҙә: буш сәңгелдәк инде күпме ......һә, шул саҡлы интектерәсәк.

(лмэрэ! — Тауыш булманы. — Ах, өндәшмәйһең?! п хут үлеп ятһын! Эй-йе... үлеп.. һин минең... е... көтөп ала алмайһың! Мин үлһәм, был өйҙә... Бер рәхәтләнеп уйнаш... итер инең.

І лимэ шоферының өсөнсө көнгө ҡылығын иҫенә рҙө. «Әйҙә, инәйек, йылыныпрһың, әҙерәк һөйләшеп |р|.|рбыҙ. Мин ләһаң бэжегэн ҡарсыҡ түгел әле», — тине клүҙоле егеткә. «Юҡ, рәхмәт, ҡыҙығыҙ өйҙәлер, эллә Илар, — тине ҡарағусҡыл йөҙлө шофер. — Башҡа ..» Эйе, Сәмәрә уға тулы ҡанлы тормош менән

йәшәргә ҡамасаулай. Ул гел ҡамасауланы! Шуның арҡаһында Ғәлимә йүнле-башлы кейәүгә лә сыға алманы!

— Сәмәрә! Үлтерэм мин һине... Үлтерэм! — бите буйлап аккан йәштәренә ихтыяр ҡуйып, Ғәлимә ауа-түнә төп якка атланы. — Эсендә... йәнең юҡ һинең! Баланды ерләнем тимәйһең, артың менән ... төш күрэ-күрә...

Ут яҡтыртты. Бүлмә йыйыштырыулы. Диванға түшәк тә түшәлмәгән.

— Сэмэрэ... Ул юҡ... — Ғәлимә түңәрәк өҫтәл янындағы ултырғыска ялпашты. — Ә был...

Ҡағыҙҙы күргәс, ҡулына алды, күҙлегенә үрелде. «Әсэй, мине эҙлэмэ. Хуш. Сэмэрэ».

Ғэлимәнең башынан эскэн араҡылары эллә ҡайҙа осто. Айныны. Сәмәрәнең кейемдәрен эҙләп шифоньерҙы аҡтарҙы, сумаҙандарын ҡараны. Эйе, ул киткән! Үҙ-үҙенә ҡул һалырға булһа, затлы кейемдәрен алмаҫ ине. Ул киткән...

Япа-яңғыҙ ҡалды Ғәлимә! Әле генә ул был яңғыҙлыкты теләй, саҡыра ине, яңғыҙ ҡалғайны — эсендә бушлыктан, көсөктәрен юғалтыуҙан, сараһыҙлыктан айға ҡарап олоғаи кәнтәй һағышы уянды. Башта башын стенаға һуғып ярғыһы килде — бэргеслэне. Улай ҙа үсе ҡанманы. Кемдэндер үс алғыһы, кемгәлер ҡыйынлыҡ килтергеһе килде. Ҡулдары үҙҙәренән үҙҙәре Саяфтың телефон номерын йыйҙы, сымдың теге яғында йәш ҡатын тауышы ишетелде:

— Ирем йоҡлай. Ғэфү итегеҙ, уята алмайым!

Бер аҙ шаңҡып ултырғас, Ғәлимәнең зиһене яктырып киткәндэй булды. Ҡыҙрасовҡа! Бына кемгә шылтыратасаҡ ул! Ул бит, ул ғәйепле Ғәлимәнең балаһыҙ ҡалыуына! Ул!... — Блокнотын алып, Ҡыҙрасовтың өй номерын тапты. Күптэн тапты ул уның телефонын. Ғорурлығын еңэ алмайынса, шылтыратмағайны.

— Алло!

— Кем эле был? — сымдың икенсе осонда йоҡоло тауыш ишетелде:

— Аккошоң, Ғәлимәң. — Ғәлимә йөрәгенең алкымында типкәнен тойҙо. — Әллә... танымайһың?

— һеҙ... нимәлер бутайһығыҙ!

Ғәлимә Ҡыҙрасовтың тауышынан үҙен танығанын төшөндө. Таныу ғына түгел, ҡурка ла шикелле ул Ғәлимәнән. Ҡыҙрасов менән күптән, киткәне бирле аралашҡандары

ииас, Ғәлимә лэ башта ҡаушай төштө, ләкин үҙен тиҙ ҡулға алды, трубканы һалмаҫ борон телэгэнен әйтеп ··· ·ırҒa ашыкты:

Ьутамайым. Ьөйөнсө алмаҡсымын! Улың үле тыуҙы, Кыҙрасов. Мөхәббәтегеҙ... емеш бирмәне!

Мәҙинә Дауыт менән «Ағиҙел» ҡунаҡханаһына табан ,н аны. Кис матур. Елбэҙәк кенә ҡар яуа. Мәҙинә улының кунған ҡаштарына, керпектэренә үрелеп ҡараны. Был ш ул Әптеләхәткә тағы ла нығыраҡ оҡшаған. Ошондай ırҙә улар ауыл һыртынан үткән оло юл буйлап бара ла Йирн инелэр. һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәҫ ине. Ара-тирә, • шогәндәй булһалар, ҡар бэрешеп уйнап алырҙар ине. Эх!

Иимә, эсэй?

Мин... — Мәҙинә ҡаушаны. — Мин бер нимэ лә йтмэнем, шикелле.

Ә миңә ишетелгән кеүек булды. — Дауыттың гулкынланыуы тауышына күсте. — һиңә бик ҡыйындыр Индс, осэй... Атайым...

Мәҙинә улының өшөгән бармаҡтарын усына алды:

Юҡ, улым, беҙ бәхетле булдыҡ. һин улай уйлама.

Мин атайымдың юлын Тирәклелә дауам итэсәкмен! Уҡып ҡына бөтэйем!

Ьпрок ярһый уның улы, һирэк сиселә. Был юлы уға, Мотйын, Күкһылыуҙы укыу йортонда ҡалдырыу, әсэһе Мспон Офөлә һуңғы кисте үткәреү тәьҫир иткэндер.

Эйе... Мин һиндә, улым, атайындың дауамын күрәм. Ьмм бөтә яклап уға оҡшағанһың. Йәш булһаң да, ут-һыуҙы ла рю өлгөрҙөң. — Мәҙинэ бер аҙға өндэшмәйерәк торҙо. Иш.шан һүҙ башлағанда ул инде үҙен ҡулға алып өлгөргәйне.

Мип, Дауыт улым, һиңә күптән әйтмәксемен: укыуҙы ботклс, гура ауылға, «Алға»ға ҡайтмағаның якшы булыр.

Нишлэп?! — Аптырап алдына килеп баҫкан Дауыт һеисң алыҫка төбәлгән ҡарашын күрҙе. — Нишләп?

Эш бына нимәлә. — Ленин скверына килеп ингәс, М.щшо ккәмйәгә һырыған көрттө һыпырҙы. — Ултырайыҡ сиҡ кына. Тунын йылы.

Ултырайыҡ.

— Мин, улым, һинең һәйбәт агроном булырыңа ла, ерҙс атайың кеүек яратыуыңа ла шикләнмәйем. Әммә... Тирәклего һин икенсе якта эшләп, тәжрибә туплап, бауыр ҡалкыткас ҡына ҡайтырһың. Уға тиклем мин Рауза усында ҡалған орлоҡтарҙы ишэйтә торормон. Тәжрибәне һин дә алып барырһың. Тирәклегә һин рекорд ҡуйырға ғына ҡайтасаҡһың!

— Бына һиңә, иҫке ауыҙҙан яңы һүҙ, э мин...

— Үҙ илендә пәйғәмбәрҙәр булмай, балам! һиңә унда күпме аяҡ саласаҡтар, үҙеңә малайға ҡараған кеүек ҡараясаҡтар. Ситтә һин уңышҡа тиҙерәк өлгэшэсәкһең.

— Улай тиһең... — Әптелэхэте кеүек сабыр тәбиғәтле Дауыт өҙөп кенә ни ҙә булһа әйтмәне. Уның был сифаты оҡшай Мәҙинәгә. Дауытта ул буласаҡ лидер сифаттарын күрэ.

— Шулай, улым. Хәҙерҙән үк шуға әҙер бул.

— Ә үҙең...

— Мин? — Мәҙинә көләмһөрәне. — Тарткан атты егеүсе табылыр, улым. Бөгөн бик күп магазиндар менән килешеү төҙөнөм. Өйҙәге балды килтереү сараһын күрәсәкмен, бәлки, Үҙәк баҙарҙа һатыу итергә кеше лә табырмын...

Спекулянт тигән мөһөр тағыуҙарынан... ҡурҡмайһыңмы?

— Бүренән ҡурккан — урманға утынға бармаған.

— һин матур ғына түгел, батыр әсәй ҙә!

Электр бағаналары тирэһендэ күбәләктэй өйөрөлгән ҡар сэскәлэренэ ҡарай-ҡарай, һөйлэшә-көлөшә улар артабан атланы.

Инде бөтә кейемен ҡар һырыған Дауыт ап-аҡ Ҡарһылыуға эйләнгән Мәҙинәгә эйелде:

— Быны бураны ҡайһылайыраҡ булыр икән, эсэй?!

— Ҡояшлы булыр!

Көнһылыу йоҡоға китер алдынан Әбүбәкер йоҡлаған бүлмәгә инеп сығырға ярата. Абажур менән ҡапланған ут яҡтыһында китап укып ятҡан ағаһын күреү уны һәр саҡ Тирэклегэ алып ҡайтҡандай, шундағы тыуған йортo һауаһына солғандырғандай. Әбүбәкер ағаһы эргәһенә Дауыт

н.| иа килеп ятыр ҙа, кемуҙарҙан улар Көнһылыу менэн һылыуға әкиэт һөйләрҙәр төҫлө... Ана, эле лэ уның ркас ағаһы оҙон керпектәренең уғын китапҡа төбәгән. Ә Юҡ. Гобәмәгән. Китап аша ул икенсе бер нэмәне күҙәтэ. Бәлки, бынау матрешканылыр?

Лгай...

)йс...

Был... ниндәй матрешка ул?

Писек инде «ниндәй»? Ҡәҙимге...

Гүгел.

Ииңә «түгел»?

Сонки һин уға гел ҡарайһың!

Ай ҡараҡай! Кил әле үҙенде... — Әбүбәкер Копһмлыуҙы күтәреп алды ла эргәһенә ултыртты. — Был матрешкаларҙы хэтәр сибэр бер ҡыҙ бүләк итте. Ҡызыкайың Күкһылыуға оҡшаған, шулаймы?

Оҡшаған шул. Мин ул турала Күкэнәйгә лә эйттем. ' рсшкаға һинең портретыңды яһағандар, тинем.

Бына шул матрешканы мин Эрмитаж янындағы киосктан алдым.

Әле генә матур бер ҡыҙ бирҙе тигәйнең...

Ьашта һатып алдым, аҙаҡ...

Ө ул ҡыҙ ҡайҙа?

Белмәйем. Мин уны, Көнөкэс, юғалттым.

Хәҙер нишләмәксеһең?

Ьелмәйем! — Әбүбәкер, китабын ябып, тороп ултырҙы. — Бына ошо матрешкаға ҡарап уфтанырға ҡалды инде

Әсәйгә ... һөйләмәнеңме?

К)к. Лидия Николаевна ғына белэ. — Шунан Әбүбәкер һеҙ генә йылмайҙы. — һин ят инде, Көнөкәс... Иртэгә ... гүгел.

Тыныс йоҡо!

Квнһылыу сығып урынына ятты, мәгәр күҙен йоҡо ... Әсәһен, Күкһылыуҙы, Дауыт ағаһын, Хашим ... и күҙ алдына килтерҙе, һәр береһенә берәм-берәм ... йоҡо теләне. һарайҙағы дүнәнен дә, һәүкәшен дә, ... ҡаҙҙарын да һағынды. Их! Тиҙерәк йэй етһен дә, ... у атының ялына йәбешеп Күктау һырттарына ... юлдан елдэй осһон ине! Ҡапыл уға Әбүбәкер ағаһы

ла йәл булып китте. Бик күңелһеҙ йөрөй бит ул. Лидия Николаевна уға ҡарап хатта башын сайкап ҡуя. Сәбобси белмәй ине Көнһылыу, бына белде: ағаһы, тимәк, ғашиҡ булған. Көнһылыуҙың да ғашиҡ булғаны бар ул: бер йыл буйы Саяфтың Саяр тигән малайын яратып йөрөнө. Аҙаҡ һуғыштылар, шунан онотолдо. Ә бит уның Әбүбәкер ағаһы ул сибәр ҡыҙ менән һуғышмаған! Бәлки, бер ҡасан Д| һуғышмаҫтар. Көнһылыуҙың атаһы менән әсәһе кеүек. Улар бит гел яратышып йәшәне. Эй! Ул ҡыҙ табылһа, Әбүбәкср ағаһы элекке шикелле гел көлөп йөрөр ине, гел шаярыр инс!

Кистән зиһенен биләгән уйҙары Көнһылыуҙы дәрестә лә ташламаны. Күнекмәләрҙе ул көндәгенән һүлпәнерок эшләгәс, укытыусы аптырай биреп тә ҡуйҙы:

— Кунсылу, әллә һин бөгөн насар йоҡланыңмы?

Көнһылыу өндәшмәне, тик тырышыбыраҡ шөғөлләно башланы. Бында укып китер өсөн ул тик «бишлс»гә генә укырға тейеш! Шунһыҙ уны ҡайтарып ебәрәсәктәр. Ә ул, мәктәпте бөткәс, Ваганов исемендәге хореография училищеһына укырға инергә тейеш! Тырыша. Кайһы саҡ бөтәһен дә уҙҙырып та ебәрә, тик гел түгел: бында өс-дүрт йәштән шөғөлләнгәндәр укый, Көнһылыуға шуға ауырға тура килә.

Мәктәптән сыккас, ул метроға төштө лә туп-тура Эрмитажға китте. Төрлө матрешкалар, буялған, сәско төшөрөлгән башка сувенирҙар һатылған киоскты тиҙ тапты. Матрешкалар бында күп ине, тик Көнһылыу портфелендо яткан ишеләре юк. Көнһылыу үҙенең зәңгәр күҙле матрешкаһын сығарҙы:

— һатыусы апай, э һеҙҙә ошоноң ише матрешка бармы?

— О һылыукай! Былар юк инде! Яңы йылға тиклем һаттыҡ беҙ уларҙы!

— Ә ҡайҙан алдығыҙ?

— Әллә... Оноттом инде. Беҙгә тауарҙы төрлө ойошмалар килтерә. Әйтеүе ауыр!

һатыусы иғтибарын башкаларға йүнәлтте, Көнһылыу матрешкаһын тоткан килеш торҙо ла торҙо.

Киоскта эшләгән ҡатын «обед» тигән яҙыу ҡыҫтырып, ҡайҙалыр китте. Көнһылыу башка киосктар буйлап йөрөнн лә, тағы килде. Бәлки зәңгәр күҙле матрешкалар яһаған сибәр апай тағы шундайҙарҙы килтерер!

)й аҡыллым, һин һаман китмәнеңме?!

Киоск һатыусыһының алсаҡ тауышы Көнһылыуға йән • ч щдой булды:

Китмәнем шул... Миңә художник апайҙы мотлаҡ ГйОмрга кәрәк.

Ғәжәп... — һатыусы ҡара ҡалын папканан тегелгән кш ыҙҙар сығарҙы. — Бына накладнойҙар. О, улар бында әллә Күпме! Бындай матрешкаларҙы, яңылышмаһам, сәнғәт м. . . . иуты студенттары яһай ине. Эйе, эйе! Бына бер Нйкмадной. Игнатьева тигән ҡултамға тора. Эйе, ещ . . . ырыусыһы — Игнатьева. Башкаһы миңә билдәле түгел, сибәркәйем. — Ҡатын Көнһылыуға төбәлеберәк ҡараны. — м кайҙан?

Башҡортостандан.

Сибәр ҙә икән үҙҙәре, башкорт ҡыҙҙары!

Рәхмәт һеҙгә!

һатыусы ҡатындан кескәй генә булһа ла мәғлүмәт алыуға өлгәшкән Көнһылыу елдән етеҙерәк хәрәкәтләнеп ҡайтыр игына слдерҙе...

йош Күкбүре, үҙенең өңөн ташлап, Тәңребирҙе шһмның башына, Тәрәнүҙәккә, күсте. Бында, бәлки, ип.кмраҡ булыр, тип уйлағайны. Әммә көндән-көн •I ерәк эш иткән сит өйөр бәлә артынан бәлә, ҡаза артынан мш килә: һунарсыларҙан һуңғы тапкыр ҡасканында ул оер балаһын юғалтты. һыңар көсөгөн эйәрткән Күкбүре р Гмк һаҡ эш итә. Күптән инде ҡорһактары ас, ләкин |.щ баш ҡалкытып, бауыр аҫтына ел индереп йөрөп ргл шөрләңкерэй. Көсөгөн дә тыя. Ара-тирә яңғыраған шартлауҙар, моронона бар булмышын ҡалтырандырырға р итеп килеп бәрелгән дары еҫе баҙата.

I Әммә бурандар нисек ҡапыл башланһа, шулай ҡапыл .... Ялтырап яткан ҡаты ҡар төлкө, ҡуян, сел кеүектәрҙең рен йошерҙе. Селдәрҙең күбеһе ҡар аҫтында ҡалды, н тан һуң башланған саскау һыуыҡтар ҡатырған ҡарҙы и смгырға көстәре етеңкерәмәне. һуңғы көндәрҙә, н габып, ҡарҙы ҡаҙып төшөп, шулар менән тамаҡ шы Һуңғараҡ улары ла бөттө.

Тынды ҡурып алып барған һыуыҡ эсәктәргә үтә, **ашағЫ** килеү теләгеп көсәйтэ. Балаһын юғалтҡандан һуң баш ҡалкытмай дәү ҡарама ҡыуышын төйэк иткэн Күкбүро, ахырҙа түҙмэне, урман ситенэ яҡынлашты. Әммэ... ул көсөгөн эйәртеп, берсэ унға, берсә һулға сабыуылланы – ҡайҙа ла урман түңәрәтеп ялҡын телдәре ләүкене! Шунда унын аслыҡтан томаланған зиһене ҡапыл яҡтырҙы: улар ҡамалған! Сараһыҙлыҡ ҡоршауында ҡалған Күкбүренең **астая** үткәшкән эсендә яралған үкһеү боғаҙын йырта яҙып килеп сығып, Тәнребирҙе буйын янғыратты. Был **ауаздая** һайыҫҡандар пырлап һауаға күтэрелде, ағастарҙы һырығап ҡылау бихисап ут ярсыҡтары булып Күкбүре һәм уныц көсөгө өҫтөнә ҡойолдо.

Элекке заман түгел, юлда берәй нәмә осрап ултырҒып алыр эле тип, Мәҙинә Таулынан Тирәклегә киткән юч **мснәя** атланы. Ҡыҫҡа тире туны ел үткәрмәй, аяғына кейгән **итегс** лә йылы, еңел — Мәҙинэ бер сәғәт — сэғәт ярым эсендә байтаҡ ара үтеп өлгөрҙө.

Көн аяҙ, тирә-яҡ аҡлан нурҙан һуғылған келәмдой ялтырай. Ҡояш нуры менэн ҡушылып, **күҙҙе** ҡамаштыра. Башҡорттоң яланындай киң, тауҙарылай юғары, урмандарылай серле, йылғаларылай наҙлы йырҙарып күңеленән һуҙа-һуҙа атлай Мәҙинә. Эй һағынды ул тыуғап яҡтарын! Эстән генэ артынан машина ҡыуып етмәгэмгл ҡыуанып та ҡуя: етһә, ултырыр ине, ултырһа, Тирәклегә «һо» тигэнсе барып инер ҙә бынау хозурлыҡты, бар булмышыи билэгән һағыныу ҡыуанысын оҙон-оҙаҡ кисерергә тура килмәҫ ине. Был юлдан ул үҙ ғүмерендә аҙ үтмэне. Күпмс хәтирэләр, иҫтәлектәр түшәлгән был ҡарлы, һикәлтәле юлға...

Төйөнсөгөн асып, эҙерәк ҡапҡылап алғас, Мэҙинә үҙено көс-ҡеүәт ҡайтҡанын, инде ҡалған юлды ҡайҙа йүгереп, **кайҙа** атлап йәһәт үтеп бөтөрөн тойҙо. Һау-сәләмәт кеше өсөн иллс саҡырым — алты-ете сәғәтлек кенә юл. һәр хэлдә Мәҙинә, ултыртып алыусы булмаһа ла, ут алыуға Тирәклегә ҡайтып инәсәк.

Гигеҙлек бөтөп, Тәрәнүҙәккә етәрәк, ул шәп килеүҙән ргәнә башланы. Үткән-һүткәндә эсәһе ҡәбере янында шусан булғанлыҡтан, аҙымдарын әкренәйтте. Ҡар ҡаты, мш аиын, батмаҫ. Алыҫтан ҡайтып килә тороп, әсәһе Һоһ.жторсн һаҡлаған ергә сәләм бирмәй китеү оҡшамаҫ. Юлдан ситкә, Тәнребирҙе ярына атларға торғанда ғына Мәҙинә ағастар араһынан ялҡындың ҡыҙыл телеләй бәүелеп торған сепрәктәрҙе күреп ҡалды. Улар күмәк! Улар бөтә һыу ПуИыи уратып алған! Ахыры бүрегә ҡамау ҡорған һунарсылар. Бүренең шәбәйгәнен, мал-тыуарҙы күпләп п.ишнағанын киткәнсе үк ишеткәнлектән, Мәҙинэ аптырамаңы. Ул арала тын һауаны йыртҡыстың йән тетрәтеп ....сбәргән тауышы ярҙы. Мәҙинә поезда кәрәк булыр тип һа п.ш алған бысағының һабын ҡапшаны. Шул саҡ бер-бер ц.| атыу тауыштары ишетелде, уға һөрэнләгән, ҡай млдаған ауаздар ҡушылды. Мәҙинә, йүгереп, ҡыулыҡҡа менде. Атыу тауыштары инде бөтөнләй яҡында яңғыраны. Ҡайһылыр арала урман ситендә ике **бүрснсң** аллы-артлы сабыуыллағаны күренеп ҡалды. Мэҙинә кәҙер яланғас ағастар араһынан саңғыла килгэн һунарсыларҙы ла шәйләне. Хәҙер... Әммә... секундтың • • айһылыр өлөшөндә оло бүре, унын артынса кесерәге урманды уратып алған таҫмалы сым аша һикерҙе. һикергән Вүрспс шундуҡ таныны Мәҙинә: өләсәһенең Күкбүреһенэ ӨКшаған кэнтәй был. Йэй унын менэн Мәҙинә күҙмә-күҙ бер Мҡ гапҡыр осрашты. Тэү күргәнендә унын көсөктәре бишәү ине. хәҙер янғыҙ. Береһен ул Мәҙинэнең күҙ алдында үҙе фланы. Урмандан атылып килеп сыҡҡан һунарсылар I рәнүҙәк буйлап Серекҡүл яғына атылған йыртҡыстар **•рп.шса** бер нисә тапҡыр атып өлгөрҙө, кемелер, Мэҙинәне **Күрсп,** баҙап ҡалды:

Егеттэр! Кеше бар!

Уй, ҡарындаш! Харап итә яҙҙыҡ бит үҙенде!

Млҙинә күҙ менэн ҡаш араһында булып үткэн ваҡиғаларҙан саҡ зиһенен йыйҙы:

Ә бүрелэр ҡасты...

Черт с ним, — мыйыҡлы ир ҡул һелтэне. — Баштуҡ кк тотоп булмаҫын. Аҙау бүре был. Ә бына һиңә тейгеҙһәк... Һин, ҡарындаш, теге Тирэкле һандуғасы **Гүгслме?**

— Эйе, Мәҙинә мин.

Ул арала Мәҙинә тирәләй башҡа һунарсылар ҙа йыйылды. Береһе уны яҡынданыраҡ белә булып сыҡты:

— Мәҙинә ни... бүре емтеге аҫтында, кәбән төбөндә йоҡлап сыҡҡан кеше лә ул.

— Атыу Мәҙинәнең күптәнге знакумдары булып сыға инде былар!

— Күптәнге... — Мәҙинә яңғыҙ ҡәбер яғына күңелһеҙ генә эйәк ҡаҡты. — Был минең... әсәйҙең ҡәбере.

— Шулаймы ни?! — Ирҙәр баш кейемен һалды. Мәҙинәнең күҙҙәренә йәш эркелде. Үҙенде генә түгел, һинсц туған-тыумасанды, нәҫел-ырыуынды белгән кешеләр араһында йәшәү, баҡһаң, үҙе бер бәхет икән.

Өсөнсө бүлек

Тирәклегә яҙ ҡапыл килде. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә ҡар һыуҙары көмөш уҡалай һуҙылған йырғанаҡтарға әйләнде, йылғалар ташты, сыйырсыҡтар ҡағына-талпына ҡышты ҡыуышты, ҡарҙан көндән-көн ныҒыраҡ әрселә барған ҡара тупраҡта ҡарғалар ҡымйышты.

Мәҙинә Таулыла мәғариф бүлеге мөдире менән булған һөйләшеүҙе ҡабаттан күңеленән кисерҙе:

— Тирәклелә балалар баҡсаһы асабыҙ. Музыка уҡытыусыһы булып килер инегеҙме?

— Музыка уҡытыусыһы?! — Мәҙинә «һеҙ шаярт-майһығыҙмы» тигән төҫлө мөдиргә шиксәнерәк ҡараш ташланы. Ғүмере буйы мәҙәниәт-сәнғәт тирәһендә өйөрөлһө лә, кәсебе итеп ул күптән малсылыҡты һайлаған.

— Мин аңлайым... — Мөдир ҙә Мәҙинәгә һаҡсыл ғына ҡарап алды. — һеҙ юғары белемле зоотехник. Ләкин... балаларҙы йыр сәнғәтенә өйрәтеү өсөн Тирәклелә һеҙҙән дә ҡулай кандидатура юҡ. Унан һуң... Яңғыҙ донъя көткән кешегә ваҡыт та ҡәҙерле. Балалар баҡсаһында эш көнө буйы түгел, йәй — ике ай ял. Беҙҙең тәҡдимгә ҡыуанып риза булырһығыҙ тигәйнем... Әлбиттә, мин үҙем һеҙҙе балалар баҡсаһына мөдир итеп тәҡдим итеү яғындамын, ләкин мөдир колхоз председателе менән килешһә генә эшләй ала, ә һеҙҙең мөнәсәбәт...

Лцлайым.

Гимәк...

Мәҙинә яуап менән һуҙмаҫҡа булды:

Мин риза.

Бына шундай ҡарар менән ҡайтты ул ауылына. Иртәнән кпскә тиклем көсөргәнеш талап иткән эштән һуң уның Был яңы шөғөлө үтә лә еңел тойолор инде. Уның ҡарауы, ар лйтмешләй, уҡырға, донъяһын йүнәтергә уның әҙме иакыты ҡаласаҡ! Әгәр теге саҡ эшенә йәбешеп ятһа, урыны осөн көрәшеүгә көсөн сарыф итһә, яңы мөмкинлек чаган да булыр ине. Эште оҙаҡҡа һуҙмаҫтан, Мәҙинә Кпиһылыу менән Күкһылыуҙы уҡытыр өсөн әҙерләгән рналдарын йыйнай, бер папкаға туплай башланы. Элек Мәскәүҙән, әле барғанда Ленинградтан алған музыка буйынса китаптарын барланы. Ҡыҙының яҙмышы хипшмогәндә бындай йүнәлеш алыуына Хашим ҡыуанып бөтә алманы:

һин хәрәкәт ит, бәрәкәт итешермен, тигән ти бит Аллаһ тәғәлә! Ҡайһылай уңай булды! Саяфтың ҡылығына, әләшмәһәм дә, шу тиктем йәнем көйөп йөрөй инем!

Бәхет булмаҫ ине — бәхетһеҙлек ярҙам итте, ти бит урыҫ моҡәле. Эйе, атай. — Китаптарын алдына алып, Мәҙинә атаһы ҡаршыһына килеп ултырҙы. — Проблемалар килеп тыумаһа, мин күп нәмәгә өйрәнә лә, өлгэшә лә алмаҫ инем. Шулар мине яңы мөмкинлектәр эҙләргә өйрәтте. — Мпмишам да булыр. Быйыл йәй умарталар һанын ике Цпкмрға ишәйтәсәкмен!

Бирһен Хоҙай! һиңә ҡарап, минең тағы бер илле йыл .....әгем килә, Мәҙинә!

Ә һин йәшәйәсәкһең! Әбүбәкер менән Дауыттың уҡып ....пүсн, өйләнеүен, бала-сағалы булғанын, ҡыҙҙарындың бөйөк йырсы һәм бейеүсе булып донъяға танылғанын күрсрсц бар!

Ауыҙыңа бал да май, ҡыҙым! — Хашим йәшкәҙәгән күҙҙәрен ситкәрәк борҙо. — Эй балам, донъяның ҡыуанысын ҡабыраҡ аңлауым йөрәкте әрнетә...

Үткәндәр менән йәшәп булмай бит, атай!

— Әйткәндәй, — Хашимдың тауышында шомлапыу ишетелеп ҡалды, — һине Саяф саҡырта ине. Райондан килг ә миңә инеп сыкһын, тип эйтеп ебәргэн.

— Ярар, — Мәҙинә китаптарын ашыкмай ғына кәштәгә теҙә башланы. — Кәрәк булһам, тағы ебәрер кешеһен.

Йэш һауынсы ҡыҙға өйләнеп, тормошон үҙенсә «түнэрэкләп» ҡуйған Саяф, оҙак вакыт эскелектән сыға алмай яфаланғандан һуң, ҡапыл айнып киткәндәй булды: фермаларға, алыҫтағы кашараларға барҙы, бөтэһсно өлгөрөргә, һәммәһен үҙ ҡулына алырға тырышты. Бесәндсн запасын тикшерҙе һәм уны мал ҡара ергә ныклап баҫкансы етерлек тип тапты. Әммә фураж... Көҙ көнө кырып-һепереп бөтэ ашлык хөкүмәткә тапшырылғанлыктан, келәттәрҙә күптән инде елдәр уйнай ине. Әлбиттә, бында хөкүмәттсц үҙенең хатаһы ла етерлек: колхоздарҙан ул игенде бик арзанға һатып ала ла, ҡыйбат хакка ҡатнаш аҙык һата. Үҙсц етештергэн игенде үҙең үк ҡыйбат хакка һатып алып, мал аҫырайһың. Был хәл етештергэн иттең үҙкиммәтен арттырл һәм колхоздың елкэһенэ ултыра, уға «убыточный» тигом мөһөр артынан мөһөр баҫа. Ҡайҙан нимә алырға ла белмәм хәҙер Саяф. Һыйырҙарҙы, һөтөн кэметеп булһа ла, бесом, һалам менән тотоп булыр, ә бына сускаларҙы... Унда бер нисә тапкыр барып әйләнде Саяф. «Урыҫ утары»нда хайуандар ҡырыла ла башланы. Үлгән сускаларҙың итеи быктырып, һаламға ҡушып ашаталар. Имәнес. Был хэлдоп сығырға үҙенең башы етмәҫтэй булғас, ул Мирхэйҙәрои ҡартка барып әйләнмэксе булды. Күпте күргән кук ял бит ул, бэлки бер файҙалы кэңәш бирер.

Мирхэйҙәровты ул тайсаһы эсендәге олатаһынан ҡалған кес кенә өйөндә китап тотоп ултырған хәлендә осратты.

— Әссәләмәғәләйкүм, Азат ағай! Инергә яраймы?

— Вәғәләйкүмэссәләм. Килгэс, инергә лә ярай торғандыр. Ни йомошлап йөрөү, председатель ҡустым? — Ҡарт, күҙлеген сисеп, урындык менән типә-тиң тэҙрә төбөнә һалды

— Ней, мына, хәлегеҙҙе белеп сығайым тип тэ, кәңәш-төңәшкә ярамаҫһығыҙмы тип тә... — Саяф, бүркен сиссп, ишек яктауынан саҡ ҡына ситкәрәк ҡағылған болан

• юнөң тарбағына элде, тунының төймәләрен и ыҙы. — Атай ҡартка барһаң, тыҫлап бөтмәҫ борон ргә ксрешә. Әйтерһең, бер улар ғына дөрөҫ йэшәгән...

Атаң ҡартмы... — Мирхэйҙэров ойоған аяктарын урын ык буйлап һуҙып һыйпаштырҙы. — Моғайын, үҙең ш ас, улдарыңа атаң һөйләгэнде һөйләрһең.

)ллэ инде. Уны мин былай ғына, һүҙ ыңғайына ғына)ш икенсе нәмәлә, Азат ағай: суска фермаһында р \ортэйҙе. Фураж юк, колхоз муйындан бурыска батты. кәмене — һыйырҙар бесән менән генә тора.

һарык нисек?

Ьссән һэйбәт бит. Улар, былай, көр сығып килә...

Кәнишнә, — Мирхэйҙэров, Саяфты аптыратып, ихкә тотондо. — һарыктарҙың бер өлөшөн һатып, акса алырға булыр ине. һарык былай ҙа самаһыҙ күп бит. лр хөкөмәт быны рөхсәт итмәйәсәк. Суска менән дә ук...

Эйе, үлһә үлһен, тик һарайҙан сыкмаһын! — Саяф, Фын-бүртенеп, усактағы утындарҙы ҡағыштырып өйҙө. һеҙ нисек эшләгәнһегеҙҙер — мин арыным. Ҡайһы сак һен күтэрэ һуғып, чабан булып кашарға сығып олаккым килә!

Анһат юл...

Ә нисек йәшәргә? Бынау Горбач донъяны бутаны ла...

(аяф туктап ҡалды. Азат Мирхэйҙэровтың һынсыл ы уны шиндергэндэй итте. — һин дә, ағай, — тине ул р сиктә үҙен аклағандай, — ата коммунист инең, хәҙер укып, тәсбих тартып ултыраһың.

Хөкөм сығарырға ашыкма, ҡустым: минең йәшкә һин нишләр икәнһең?

Ярай, ғәфү ит... — Саяф алға табан эйелә төштө. — ппалар бит аяуһыҙ, урламаһалар, мужит, етер ҙә ине. малына ғына алһалар, ни асыу — һатып эсәләр, а алмашалар...

һин ферманан Мәҙинәне алып хаталандың.

(аяф турайҙы:

Холко бит... Үҙ һүҙле...

Фермала ул урынлаштырған тәртипте башка берәү алмаясак. Унан һуң... башы эшләй бит уның. Килеп ботэ хәлдән дә юғалтыуһыҙ сыға торғайны.

— Унынһы бар инде, — әңгәмәгә Мәҙинә исеме **кыҫылпМ|** Саяфтың кэйефе тағы ла нығыраҡ боҙолдо. Районда ауыи хужалығы бүлегендэ лэ һүҙ ҡуйышҡан кеүек шуны **әйтәләр,** Бер Мэҙинэме әллэ... Ярай, мин китәйем эле, ағай... Аптыраған өйрәк кеүек килеп индем инде. Хушығыҙ, Азат ағай. Шулай ҙа... — ул ишек тотҡаһына йәбешкән кеүек **тор|** бирҙе. — Мэҙинэ килһэ, эшкә алыр инем. Сусҡа фермаһыиа мөдир итеп.

— Хуш, ҡустым, биғэйбә.

Саяф, йэйәү йөрөп ғәҙәтләнмэгэнлектэн, аяҡтарын, ҡол;ш ҡуймайым тигәндәге кеүек, йыш-йыш баҫып, ауыл буйлаи китте. Мәҙинэ йэшэгэн өй тәңгәленэ еткәс, битенэ эҫе ҡ;ш тулҡыны бэрҙе. Ошонан хурлыклы рэүештэ ҡыуылыи сыҡҡанын нисек онотһон? Етмэһэ, улар ҡаршыһында үткэн янғындан ҡалған торонбаштары менән сэнсеррп булып Әптелэхәттең тэжрибэ алып барған өйө ултыра. **Саяф** ашыҡты. Артына әйләнеп тә ҡарамаҫтан идара йортона йомолдо.

Саяф менән ризалашһа-ризалашмаһа ла Мирхэйҙәров, ул сығып киткәс, уйлана төштө. Китабын ҡуйып тороп, тышка сыҡты. Ары һуғылып, бире һуғылып йөрөй торғас, ул Мәҙинэгэ барып ҡайтырға булды. Колхозды бит уныц өлэсэһе, әсэһе һэм үҙе менэн бергэ төҙөнөләр, бергэлэшсп аяҡҡа баҫтырҙылар. Мирхэйҙәровтың йөрәге һыҙлаған кеүск, Мәҙинәнеке лә өҙөләлер. Саяфҡа асыуланалыр, әлбипл Әммэ Саяф бөтэ колхоз да, хөкүмэт тэ түгел: күмәклоп, колхозсылар йыйылышы исеменэн һораһалар, моғайын. Мэҙинэ кире килер. Унһыҙ эштәр көйһөҙ колхозда.

Мәҙинәнең өйөнә етеүгә ҡапҡаны Хашим асты:

— Әйҙә, ағай, үт, — Хашим, киң йылмайып, йорои бейәләйҙәрен ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып, Мирхэйҙәров **менәя** күрешергә була ике ҡулын һуҙҙы. — Күптэн күренгэнең юҡ, үҙем барып хэлевдэ белеп сыҡмаҡ булып йөрөй инем әле...

— Килһәң шәп итә инең. Хәл белеүҙең сауабы ҙур, тп китап. — Мирхэйҙәров, нигеҙ буйындағы эскэмйэгэ ултырып, доға ҡылды. — Шунан, именлекме-һаулыҡмы? Мэҙипл ҡарындаш ни хәлдә?

Щпкөр, шөкөр, Мэҙинэ лэ — аллаға шөкөр.

Нрай, машина алған икәнһегеҙ тип ишеттем. — |ров лапаҫ яғына күҙ һалды.

Йе, бал арыу сыкты бит былтыр. — Хашим гаражға I и **ишеген** асты. — Бына, ошо инде. Ике һыйырҙы н юк, картуф һаттыҡ. Яңғыҙына ҡыйын Мәҙинэнең. ....ойсм тиһэ лә түрәләргә барып ялынырға кәрәк.

Унынһы шулай. — Мирхэйҙәров, гаражға инеп, ианы һыйпаштырҙы. — Афарин! Ҡотло булһын! **Кото** һиңә лә йоҡһон!

Миңә, — Мирхэйҙәров һирәгәйгән, салланған һаҡалын геп, кстер-кетер көлдө. — Миңэ, ҡустым, теге ни... га ксйсм хэзерләнгән, ике еңе, яҡасы юҡ», тигән кеүек. п год үткән инде...

I **цраждан** сыҡҡас, Мирхэйҙәров лапаҫ эсен байҡаштырҙы. Арбаң да, санаң да бар икән. Әллә инде кәсилкә лә I hC?

)йе, колхоздың списать иткән нәмәһенэн әтмәләнем. га калған көнөң — ҡараңғы төнөң бит...

Унынһы шулай. — Бындағы тәртиптән, таҙалыҡтан, һәр нсн урынлы ятыуынан Мирхэйҙәров ҡәнэғэт ине. — һиңә аптырайым, Хашим. Бындай эшлекле и мрынды белһэм, мин һине бригадир иткән булыр

Ярай эле белмәгәнһең, — Хашим көлөмһөрәне. — |||||.ч|, Гүгөн һинең шикелде ҡаҡ таҡтала ҡалыр инем.

Телеңә һалышма инде, — тип йомшаҡ ҡына гулашты Мирхэйҙәров. — Беҙҙең ғүмер ҡайһылай ҙа үтте. < нигә ингәс, танауға бешкән аштың тәмле еҫе бөркөлдө.

( )ллэ ҡыҙым бөгөн атаһының яраткан ашын бешергән? — Кэйҙәров тунын сөйгә элгән ыңғайға Хашим усаҡ һендә аш-һыу менән булашҡан ҡыҙына ҡараны. — Әллә мипсң ҡунаҡ менән килеп инерҙе алдан һиҙгәнһең...

Үтегеҙ. Ҡулығыҙҙы сайығыҙ. Азат ағай, ҡайһылай ı пы йөрөйһөгөҙ!

Мәҙинәнең ҡунаҡсыллығы Мирхэйҙәровтың күңелен и и реп ебәрҙе: моғайын, уртаҡ тел табырҙар.

Ашап, сэй эсеп алғандан һуң Мирхәйҙәров һүҙҙе ҡайҙан башларға белмәйерәк ултырҙы, ахырҙа, уратып тормаҫтан, тураһын әйтергә булды:

— Мин һине, Мәҙинә ҡарындаш, эшкә ҡоҙаларға килдем.

— Ниндәй... эшкә?

— Колхозда, аллаға шөкөр, эш муйындан.

— Мин колхозда эшләнем, ағай. Стажым етерлек - егерме алты йыл.

— Колхоз әҙәм итте бөтәбеҙҙе лә. Ауыр саҡта ташламайыҡ. Мин инде оломон. Һеҙ бит йәш...

— Әҙәм итте тип... — Мәҙинә ҡыҙарҙы. — Кешенең үҙенән торалыр ул әҙәм булыу, йә булмау...

— Әле бына машина алып ебәргәнһегеҙ. Нигә, насармы ни?

— Ҡорт тотмаһаҡ, тырышмаһаҡ, беҙ уны ала алмаҫ инек. Картуф үҫтереп тә ашай алмаған кешеләр бар, ағай. Ана, Ғәләү менән Вәләүгә ҡара — улар ҙа ошо колхозда ағза булып тора.

Мәҙинәнең дәлилдәренә ҡаршы тора алмаған Мирхәйҙәров дөрөҫөн әйтеп ҡотолорға булды:

— Саяф килеп сыҡты, Мәҙинә. Һинең ферманан китеүеңә үкенгәндәй була. Кире алырға итһә... — ул һүҙен әйтеп бөтмәне, Хашимға ҡараны. — Бәндә хаталанмай булмай. Бет асыуын һеркәнән алмайыҡ әле!

— Башҡа ҡайғың булмаһа, уға ҡайғырма, ағай, — Мәҙинә, урынынан тороп, ҡышлау ярангөлдәре гөлт итеп сәскә атып ултырған тәҙрә янына килде. — Мин инде үҙемә эш таптым. Балалар баҡсаһына музыка уҡытыусыһы булып урынлаштым.

Мирхәйҙәровтың эсендә ниҙер өҙөлгәндәй булды: колхозды түгел, районды етәкләр кешегә төҫмө инде шул эш?

— Быны ишетеремде белһәм, һиңә килмәгән булыр инем!

Мәҙинә өмөтө аҡланмауҙан тағы кесерәйә, йоҡара төшкәндәй булған Мирхәйҙәровтың ҡаршыһына ултырҙы:

— Юҡ, ағай. Килеп дөрөҫ эшләгәнһең. Ышанысың өсөн рәхмәт. Тыңлаһаң, мин һиңә бер ҡарһүҙ һөйләр инем. Ҙур бер илдә яман ҙур байлыҡҡа эйә батша булған, имеш. Бер заман ул алтындан карауат эшләткән һәм килгән бер ҡунаҡты шунда һалған. Мәгәр бер генә ҡунаҡҡа ла карауат тамам булмаған: йә башы, йә аяғы һыймай, йә ҡыҫҡа, йә **оҙон,**

ҡунаҡты карауатҡа таман итер өсөн иә ҡырҡкандар, йә ... Ҡыҫҡаһы, бында килгән бер генә ҡунаҡ та был **... тере килеш ысҡына алмаған... Бына шулай, ... ылай йә ҡырҡҡылай торғас, иремде юғалттым, ҡарт ... бөгөнгө көндә ҡайҙалығын да белмәйем. ...мдан саҡ-саҡ тере килеш мәйет яһаманылар. Минең, ... л бәләкәй эштә ҙур юлдан барғаным яҡшы.

Әләйһәң, үҙең беләһең, ҡарындаш... Мине, ҡарт ... ойепкә алма...

һин дә мине ғәйепкә алма, Азат ағай! — Мәҙинә ...иҙәровтың һалҡын бармаҡтарына ҡайнар усын һалды. яҡшы кеше, ағай...

< **вяфтың** өйләнеүе башта Ғәлимәне оторо ярһытты: кем, ул Ғәлимәгә тәҡдим яһарға тейеш ине! Күпме ...анды уны, исемен сығарҙы, мөнәсәбәттәрен ...лаштырыуға өйләнгән булыуын сәбәп итте, э инде ... булғайны — икенсене һайланы. Шаҙра бәрей! ...кош! Сығырынан сыҡҡан Ғәлимә, Тирәкле яғына юл ипроп, Саяф эргәһенә үҙе инеп сығырға булды.

)релэнгән әҙәмдәр, йәш бисә алғас! — тип килеп инде ...һанан уҡ. Ғәлимәне күргәс, Саяф эргәһендә ултырған ... иомэ секретарь ҡатын тиҙ генә сығып тайҙы.

Һаулыҡ та бирмәҫтән биттән алмаһаң, — Саяф ...һыҙ ғына ҡул һуҙҙы. — Кеше бар тип торған юҡ, рөхсәт и... юҡ!

Ярар, уҡаң ҡойолмаҫ! Бына мин бер ҙә уҡам ...оуҙан ҡурҡмайым!

Һии бит ул. Йә, һайра... Ниндәй елдәр ташланы?

Һакыныу елдәре тиергә телем әйләнмәй. һаттың мине, ...сты аҡламаның. — Ғәлимә, ҡулъяулығын сығарып, и ку... төптәренә тейҙереп алды. — Уйнашҡа ышанған ... калған тигәндәре ошо ахыры. Яратмағас, ул нимә тип мнпс иисәмә йылдар өмөтләндереп йөрөнөң?!

ф, урынынан тороп, ҡыҫыр лимон ағасы янына, ...мәнең ҡаршыһына килеп баҫты:

— Ирҙәр берәүҙәрҙе ярата, икенселәргә өйләнә тигәндс ишеткәнең юктыр шул?

— Юҡ һәм ишетергә лә теләмәйем! — Ғәлимә һуңғы йылдарҙа нык ҡына ҡалынайған кәүҙәһен тура тоторға, булмышына мах бирмәгән ҡатын ҡиәфәте бирергә тырышып урынынан торҙо. — Ярай, Ғәлимә кәрәк булыр эле!

— Ғәлимә әле үк кәрәк! — Сәяф уны ҡапыл ҡосағына алды, һарымһаҡ ҡатыш араҡы борҡоған итләс ирендәрено үрелде. — Һинең кәрәкмәгән сағың бармы ни?

— Ялағай, — Ғәлимә башта уны бар көсөнә этерго самаланы, аҙаҡ күптән зарыккан ҡырағай тойғоһонан еңелеп, Сәяфҡа үҙе үк йылыша башланы. — Бөгөн... көтәм.

— Көт, тик... башта, — Ғәлимәне нисек ҡапыл ҡосаҡлаһа, шулай тиҙ ысҡындырып, Сәяф үҙ урынына барып ултырҙы. — Минең хәл итә торған бәләкәй генә мәсьәләм бар, Ғәлимә Мөхәррәмовна.

— Мәсьәлә?!

— Һинең ҡулыңдан килә ул. Минең ни, фураж бөттө. Фондты ашатып бөттөм. Бурыска ла алдым. Ҡыҫҡаһы, — ул Ғәлимәгә ҡарап йән эретерлек итеп йылмайҙы, — һинең ҡатнаш аҙыҡ заводы менән бәйләнеш бар бит инде ул...

— Төлкө. — Ғәлимә Сәяф тынынан еүешләнгән ҡупшы танауын ҡулъяулығы менән һөртөштөрҙө. — Сусҡаһы үло икән тип ишеткәйнем шул.

— Эй! Яҡшы хәбәр таралмаһа ла, йүнһеҙе тиҙ барып ето инде уның... Белмәйем, дөрөҫөн әйткәндә, фермаларҙа полный развал! Эсәләр, эшкә сыҡмайҙар, урлашалар...

— Мәҙинәне... һағынаңмы?

— Да, — Сәяф елкәһен тырнаны. — Бәлки, миңә уны, күҙ алдынан ысҡындырмаҫ өсөн, ҡалпаҡ аҫтынан сығармау кәрәк булғандыр?

— Машина алған тип ишеттем...

— Алған. Йөрөп тә ята.

— Ҡыуанысы оҙаҡҡа бармаҫ тип уйлайым.

Сәяф башын күтәреүе булды — ҡарашы Ғәлимәнең боҙ кеүек һалҡын күҙҙәренә кипсәлде.

— Һин нимә?..

— Мин ысынлап. Баш на баш. Ҡатнаш аҙыҡ һиңә кәрәк бит!

Әкиәт кенә тиҙ һөйләнә...

Ваҡыт һинең өсөн эшләй, минең Наполеоным!

Кушбуй ҡатыш тир һәм һарымһаҡ еҫтәре ҡалдырып, іма сығып китте. Ни әйтергә, ни уйларға белмәгән Сәяф Шәйхе гдинов креслоһында лап төшөп ултырып ҡалды.

Көнһылыу ҡалаға көндән-көн нығыраҡ өйрәнде. Был у ғрауҙар өҫтөндә ултырған ҡаланы ул ғүмер буйы белгән кеүек. Һәр ваҡыт ҡайҙалыр атлығырға торған күңелен арбар нәмәләрҙең күп булыуы уға иҫ китмәле рәхәтлек бирә. Мвктоитән буш ваҡытын, ял көндәрен ул һис әрәм итмәҫкә ГЫрыша. Ленинградтың картаһын һәр саҡ сумкаһында йөрөтә. Үҙенең булған урындарын ҡыҙыл түңәрәк эсенә ала. I ул оик күп әле уның күрәһе ерҙәре! Ә ҡайһы саҡ ул берәй м< ц • ı фгәһендә туктай һәм сәғәттәр буйы уның стеналарына, м.шык баштарына ҡуйылған һындарҙан күҙен ала алмай. Их!

щ.шыу юҡ эргәһендә! Яңыраҡ ул унан хат алды. «Өйрәндем инде мин бында. Бигерәк тә музыка дәрестәре ш. Мине бер профессор апай эргәһенә алып барып йырлатып ҡаранылар. Ниндәйҙер ҙур концертта ı ппгырмаҡсылар», тип яҙған. Эйе, йырлаһа йырлай инде һмлыу! Көнһылыу әлегә ундай уҡ уңышҡа өлгәшә алғаны лммә күнекмәләр еңел бирелә, ул шуға ҡәнәғәт. I инһылыуҙың йыш ҡына өйҙән сығып юғалыуының тағы бер бар: ул теге рәссам ҡыҙҙы эҙләй. Эҙләмәҫ ине, ағаһын ләи.

Вбүбәкер бик үҙгәрҙе, — ти Лидия Николаевна, — Ут ИНС егст, хәҙер нимә?

Быны Көнһылыу ҙа тоя, ярҙам итә алмағанына өҙгөләнә. ш үҙснә лә, Сәяф председателдең Сәяр исемле улы иҫенә іошһә, ҡыйын булып китә, ниңә уның менән һуғышҡанына и го ҡуя. Әле ял. Бөтәһе лә йоҡлай. Ғәҙәттә иртә торған |....и Николаевна бүлмәһендә лә ут юҡ. Көнһылыу шым .....и кейенде, арҡаһына аҫҡан сумкаһына матрешканы һалып шлы па йәһәт кенә сығып тайҙы. Хатта эт тә һиҙмәй ҡалды ......сыкканын. Юғиһә, мине лә алып сыҡ тип йәнгә тейер, һ рылыр ине...

Сәнғәт институтының студенттары йәшәгән дөйөм ятакка илткән юлды, ошо рәүешле йөрөй торғас, ул инде ятлаи бөттө. Метроны сығыр юлда сәскә, йәшел һуған, укроп кеүек нәмәләр һаткан әбей-һәбей янында туктай бирҙе: быларҙы ауылда ҡый үлэне урынына йолкоп ташлайҙар ине, ә былар, балконда ғына үҫтереп, аҡса эшләй. Көнһылыу ҙа иллеләп һауыт миләүшә гөлө ултыртты тәҙрә төбөнә. Тағы ла ултыртасаҡ. Шулар сэскә атһа, ял көндәре алып сығып һата башлаясаҡ. Уның ҡарап торғаны бар: кеше гөлләмәго ҡарағанда гөлдәрҙе күберәк ала. Шулайтып, ул Лидия Николаевнанан «кеҫэ расходы»на аҡса алыуҙан туктаясаҡ.

Дөйөм ятакка барып еткэс, Көнһылыу матрешкаһын сумкаһынан алды ла сәскә үҫтерер өсөн ҡуйылған дэү бетон ваза өҫтөнә ҡуйҙы. Үҙе шундағы эскәмйэгә ултырҙы ла дәреслектэрен ҡарай башланы.

һәр ваҡыттағыса:

— Ой! Матрешка! Сколько стоит? — тиеүселәр күп булды.

— Не продается, — тип яуапланы Көнһылыу. — Сушу.

Яуапты ишеткәс, уның янынан аптырау ҡатыш көләмһөрәп китеп баралар. Ә Көнһылыу ултыра. Яҙ ҡояшы рэхэт кенә итеп арҡаны ҡыҙҙыра, кәрниздәрҙэ ирко күгәрсендәр гөрләшә, муйыл ҡуҙҙәрен тәгәрәтеп, ара-тиро турғайҙар килеп хэлен белеп китә. Уларға ҡараһа, ауыл иҫенә төшә. Тирәклеһе. Сыйырсыҡтар ҙа ҡайтты инде, Хашим олатаһы ҡолғаларға ҡаҙаклап ҡуйған ояларына инеп төйәкләнде инде. Тау битләүҙәренән ағып төшөп, урам буйлап гөрөн булып аккан йырғанаҡтарҙа малайҙар ҡағыз караптарын йөҙҙөрәҙер инде. Саярҙың карабы һәр саҡ шәп йөҙә ине, ул карабына гел «М.К.Ә» тип исем ҡуша ине. Көнһылыу башта ул хәрефтәрҙең нимэ аңлатканын аңламаны, белгэс, оялды, артынан ҡыуып етеп, йыртып ырғытты...

— Ой! Моя... матрешка?! Надо же...

Көнһылыу башын күтәрҙе һәм ҡуңыр сәстәре индэрено төшкән, ғәжәп ҙур зәңгәр күҙле ҡыҙҙың бер матрешкаға, бер уға ҡарап шаҡ ҡатканын күрҙе.

— Матрешка ваша?! — Көнһылыуҙың рәссамды табыу бәхетенән тыны ҡыҫылды. — Таптым! Таптым!

<) чем ты, девочка? — Ҙур күҙле һылыуҡай решканы ҡулына алды. — Голубоглазая матрешка, она у пыла... в единственном экземпляре!

Киттек, — тине Көнһылыу һылыу ҡыҙҙың ҡулына ксно ҡағылып. — Унда һеҙҙе көтәләр!

Кем?!

Барғас күрерһегеҙ!

Һылыуҡай башта Көнһылыуҙы үҙенең бүлмәһенә ирҙы Иртән торғандан бирле тәғәм ризыҡ ҡапмаған п.шыу ҡаршылашманы. Рәссам ҡыҙ дөйөм ятактың бугыҙынсы ҡатында йәшәй булып сыҡты. Бейеклекте яраткан ипһмлыуға был оҡшап ҡалды. Күҙ алдында асылған псште күҙәтеүҙән ул хатта асығыуын онотто.

Гөрлө буяу еҫтәре аңҡыған, рамдар, киндер, кипкән үлэн, лллэ нәмәләр тулы бүлмәлә сәй эскәндә Көнһылыу ҡыҙ менән яҡынырак танышты. Рәссам ҡыҙҙың зәңгәр һүм.ш күҙҙәрендә ваҡ ҡына ҡара төртөктэр күреп аптыраны. рһең дә ниндәйҙер тылсым эйәһе зәңгәр ерлеккә ҡара ыларҙы һырыған... Үҙе тураһында ла һөйләне. Ағаһының кыҙҙы юғалтыуҙан сиргә һабышыуын әйтте. Быны ағанда ҡыҙҙың аҡ йөҙө алланды, ҡупшы танауына тир өктәре бәреп сыҡты.

Мин дә онотманым уны, — тине шунан шым ғына шы менэн.

Мин бында ҡыштан бирле йөрөйөм, — тине у. — Ағайым белмәй ул хаҡта. Күнекмәгә йөрөйөм чарға тура килә.

)Н бахырҡай! — һылыуҡай Көнһылыуҙың сәс ләрен һыйпап алды. — Мин каникулда булдым. Етмәһә, ем.

Тик һеҙ мине оҙатып ҡуйығыҙ инде, зинһар! шуымдың сәбәбен ағайыма бер нисек тә аңлата аҡмын.

Якшы.

һәм бына улар өйҙә. Көнһылыу үрелә биреп төймәгә)стә ҡыңғырау зыңлаған, эттең «һаф!» итеп өрөп шпетелде.

I **[емец** овчаркаһы? — тине һылыуҡай этте күрмэһә лэ.

Ишсктс Лидия Николаевна асты:

Господи... Флорида! Флорида!!!

Йүгереп килеп еткән Әбүбәкер ҙә, ҡыҙ үҙе лә, Көнһылыу ҙа һуштан яҙған Лидия Николаевнаны күреп аптыраушта ҡалды.

Барсынбикә үҙен һуңғы ваҡытта мәйеткә әйләнгәндәй хис итә башланы. Уның тирәһендә кемдәр, нимә эшләйҙәр, йоҡлаймы ул, әллә уяумы, асмы, туҡмы — бөтәһе лә уның өсөн барыбер. Ваҡыт ағыуы ла, ғасырҙар алышыныуы ла бәндәнең ихтыярынан тыш башҡарылған кеүек, уның да хәҙер бер нәмәгә лә ҡатнашы юҡ кеүек. Сабый саҡта бәндо оҡшаған бер нәмәһен ауыҙына ҡаба, олоғайғас алып ҡарай ҙа ситкә һала, ә инде Барсын йәшенә еткәндәр уға хатта ҡарап та ҡуймай икән.

Барсынбикә яҙмышында осрар ҡазалар осрап бөткәндәй. Уны тетрәнергә мәжбүр итерҙәй нәмә ҡалмағандай. Шуға ла тыныс ул хәҙер. Әммә ләкин уның донъяны нисек бар шулай ҡабул итеүе, үткәндәр һәм хәҙергеһе менән килешеүе ҡолдар килешеүе лә түгел: Барсынбикә бер кем алдында ла теҙ сүкмәй. Сүкмәй һәм башҡаларҙы сүктермәй. Әжол ҡаршыһында ғына мөсһөҙ уның рухы. Барсынбикә уныц ҡасан һәм ни рәүешле килеп баҫырын белмәй. Әммә уныц сыныҡҡан, шул арҡала үлемһеҙгә әйләнгән рухы әжәлдс кисектереү ҡөҙрәтенә эйә. Барсынбикәләге донъяуи теләктәр ҡасандыр ялҡын булып янып, аҙаҡ һүрелеп, көлгә ҡалған. Әммә шул көл араһында ла бер осҡон баҙлай: ул да булһа Тирәклегә ҡайтып әйләнеү теләге. Йөрәк башҡайына ҡан һауҙырып донъяға тыуған бәпесен юғалтҡан һәм яңынан тапҡан ерҙәрен, бәғерен ҡанһыратҡан, зилзилә тыуҙырған утлы өйөрмәнең уртаһында ҡап-ҡара ҡойондай өйөрөлгоп урындарын күреү; үҙенән үрсегән тоҡомон барлап, фатиха биреү. Күңеле һиҙә Барсынбикәнең: Роберт Эдуардович уныц янына тағы киләсәк. Бына шул саҡта Барсынбикә уға үҙенсц һуңғы теләген әйтәсәк. «һуңғы» тигән һүҙ күңеленә килеүго Барсынбикә һиҙелер-һиҙелмәҫ тертләгәндәй булды. Бәлки, был уның донъялыҡта ҡылған һуңғы әмәле лә түгелдер, ләкин бөтә ғәмәлдәр ҙә һуңғылай күреп башҡарылғанда ғына көсәйә.

< ' шаҡламай ишектәге йоҙаҡ тағы шалтыраны, Роберт ||>кшич бер яңғыҙы килеп инде:

Исәнмеһегеҙ.

Исән. — Барсынбикә урынынан ҡуҙғалманы.

() быңа минең, — хужа тотлоҡто, тулҡынланыуын ...а оула ишекле-түрле йөрөп алды, — ваҡыт һанаулы ...ан кеүек. Дарыуҙар ярҙамында нимәлер эшләргә мөмкин ...андың барыһын да эшләнем...

Мин һиңә ярҙам итә алам, ләкин... һиңә был эшендән ргә тура киләсәк.

)шсмдән? Ни өсөн?

Һиндәге сирҙәр эшендән, тормошондан риза булмау ...һында килеп тыуған. Йүнәлгәндән һуң кире шул ...ынға сума алмайһың бит инде?!

Ләкин... эшем оҡшай миңә!

Бер ғәйепһеҙ кешеләрҙе бер урынға йыйып, һау ...тарын ауырыуға һабыштырыумы?

Ләкин... Йәмғиәтебеҙҙең именлеге хаҡына...

Ғәҙелһеҙлек ҡанундарына нигеҙләнгән йәмғиәт имен ' алмай.

Ләкин... Октябрь революцияһы ысын мәғәнәһендә ' һом ғәҙел революция ине! Кешелекте упҡындан ...ига күтәрҙе!

һин бөйөк тип атаған осор донъяға нисә бөйөк кешене ...е?

Нисә бөйөк кешене?.. — Хужаның аҡһыл сырайы ...ы төҫкә инде. — Нисә бөйөк кешене тип... Уның • ...рауы беҙҙең илдә хәҙер ярлылар юҡ.

Барыбыҙ ҙа бер сама ярлы. Шулаймы?

Беҙ төп теманан ситләштек.

К)к. Төп мәсьәләгә яңы саҡ яҡынлаша башланыҡ. Ана самаға һыймаған, буласаҡ бөйөктәрҙең башы ошонда ...гел ә әйләндерелә. Уҡымышлы кеше булараҡ, һин ...рҙы минән яҡшы төшөнәһең. Төшөнмәгән булһаң, минең ммда баҫып тормаҫ та инең.

Эйе... — Хужа койка эргәһендәге яңғыҙ ултырғысҡа ...тырҙы - Ләкин мин үҙемдең эшемде... үҙемдең дәүләт ' файҙалы булыуымды инҡар итә алмайым!

һинең ата-эсәң иманлы кеше булған.

Луыл уҡытыусыһы, ауыл врачы ине улар...

— Шулар һиңә мираҫҡа намыҫ ҡалдырған. Эшләгән һәр эшенде улар иманы менән үлсәргә тырышҡанһың, ахырҙа был хәл һиңә сир булып әйләнеп ҡайтҡан...

— Миңә... нишләргә? Ҡатыным... Уны мин бик яратам, ике ҡыҙым... — Роберт Эдуардович битен устары менән ҡапланы. — Ғәфү итегеҙ... Эшемдән китергә риза мин. Әгәр бынан китеү ғөмүмән мөмкин булһа... Үлге килмәй, апай!

— Һиңә кәрәкле үлән бында үҫмәй...

— Ҡайҙа үҫә?

— Мине нисә көнгә ебәрә алаһыщ?

— Ун көнгә, ике аҙнаға. — Роберт Эдуардовичтың хатта тоноҡ ут яҡтыһында йөҙөнөң алланғанын, күҙҙәрендә оскон тоҡанғанын күрҙе Барсынбикә. — Тағы ни һорайһың?

— Үҙең киткәндә... мине бында ҡалдырмайһың.

— Бынан тере килеш сығып булмай!

— Тимәк, үлек хәлендә алып сығаһың.

— Үлгәс... нисек йәшәрһең? Документһыҙ... бер ниһеҙ...

— Уныһы минең эш. Һиңә шөйҡаным теймәҫ, э кәрәк булыуым ихтимал. Асып инер ишегенде ҡаты япмағаныц яҡшы.

— Минең хәлдә һайланып тороу — файҙаһыҙ. Иртәгә машина һине үҙең әйткән ергә алып барып ҡуйыр һәм... ун көндән барып алыр.

— Килештек.

— Хушығыҙ. Хәйерле юл.

- Хуш бул. Һаулыкта күрешергә насип итһен Мәүлә.

Саяф мәктәптән кәйефе ҡырылып ҡайтты. Былай ҙа унын эше, хәл итер мәсьәләләре муйындан: сәсеү етеп килә, орлок юк, техника ремонтланып бөтмәгән... Етмәһә, Саяры... Элекке ударник «ике»гә төшкән. Класс журналынын ҡайһы битен асма — унын улы фамилияһы алдында «икеле»лор теҙелгән.

— Нишләйбеҙ? — тине директор күҙлегенең битараф быялалары аша ҡарап. — Класында ултырып ҡала бит малайың.

Ьслмәйем. — Саяф бөршәйҙе. Дөрөҫөн әйткәндә, ры уиың иң өмөт бағлаған уланы. Әсәһе лэ нык яратты умы Башҡа балаларынан айырып яратты. Унын был кы пығын өйгә үгәй әсә килеү менән аңлатыр инең — укыуы күптән насарайған.

Млкгәптән тура өйөнә йүнәлергә ҡурҡты Саяф: тулыҡ менән малайын имгәтә һуғыр йә... Ҡырҙа йөрөп, шһене асылып, күңеле тынсый биргәс кенә ҡайтып инде. Ҡа ыны алдына ҡуйған аштың тәмен дэ тоймай һөрпөлдәтте тлайҙары йоҡлаған бүлмәгә инде. Саярҙың портфелен асып, көндәлеген ҡараны — ул ғинуар уртаһынан бирле гунплрмлмаған. Эйе... Хәл хөрт. Дәфтәрҙәрен ҡараны — класта яҙған, э өйгә бирелгән эштәрен береһен дә эшләмәгән. Рус гсле дәфтәре... Урта битендәге яҙыуға төштө Саяфтың күҙе Хат. Дәфтәр битенең уртаһына ук Саяр семәрлэп, матурлап «Сәләм хат» тигэн һүҙҙе яҙып ҡуйған. «Ҡәҙерле Көнһылыу! Мин һине шундай һағындым! Төндә тышка сыкһам, күктә янған йондоҙҙарҙан һинең исеменде теҙэм, көндөҙ һинең исеменде ҡояш нурҙарынан үрэм. Яҙғы ашыҡ ындар шауында һинең тауышынды ишетэм, морнап килгән бәпкә үләндәрендә һинең ҡарашынды күрэм. Йырғанаҡтар аккан мәлдә «Көнһылыу» тип яҙып караптар ебәрәм. Яҙғы һыуҙар уларҙы, бэлки, һиңә тиклем ағыҙып илып китер? Һине йэберләгэн, һиңә исем таккан өсөн Хоҙай Миис һинең тауышынды ишетеүҙән мэхрүм итте ахыры. штарҙа гелән «һөйөү — шатлыҡ, һөйөү — бәхет» тип яҙыла, о мин гел илайым. Мин һиңә бындай хаттарҙы күп яҙҙым, Көнөкәс! Үҙем яҙам, үҙем йыртам. Кеше ҡулына һә, үсеклэйэсэктәр, көлэсәктәр. Ә мин һинең исеменде р ксшеләрҙең телгә алыуын теләмәйем. Һин — I пнһылыу! Көнөкәс. Ҡояшлы көн һин, йылы, якты көн! шлы көндәрҙә генә бер аҙ йыуанам — ундай көндәр һиңә и ап була. Сәлэм менән һине ғүмеренән дә артыҡ гусы Саяр».

< аяф, башын эйеп, бүлмәнән сыкты. Дәфтәр тотҡан ı фының дерелдэүен баҫа алмай ыҙаланды. Бына ул — • м Мәҙинәгә булған хистэренэн алйып, Ғәлимәнең |чоуынан ҡотороп, күпме алйотлыҡ эшләне. Гонаһ ы. Саярҙың был хаты — Саяфҡа сығарылған яҙмыш

хөкөмө. Ҡылған енәйәте өсөн хакты ул улының бәхетһеҙ мөхәббәте, ҡыйралған өмөтө менән түләй.

Лидия Николаевна этенең үҙәк өҙгөс шыңшыуын ишеттс. Йәлләмес. Әммә тауыш тағы юғалды, ул йәнә тауҙар, урмандар аша билдәһеҙ алыҫлыкка ынтылды. Ҡаршыһында яулыкты яҙып ябынған ҡатын, гимнастерка кейгэн ир пэйр булдылар. Улар эргәһендә — Әйүп. Ағаһы. Эйе, ул. Тик ул ниңэлер бэләкэй, күлдәк-ыштандан ғына. Бәй, былар бит атаһы менэн эсэһе. «Хэтирэ, ҡыҙым!» — тип ҡул һуҙа әсәһс. Лидияға еңел булып ҡалды: тағы ике-өс аҙым атлаһа, ул ғәзиздәренең ҡосағына ташланасаҡ. Лэкин... эте, эте тынғы бирмәй. Лидия йә уны сығарырға, йә ашатырға оноткан... «Рекс!» Эт тағы йэлләмесерәк олой. Хәҙер, хәҙер...

— Рекс! — Лидия Николаевна күҙен асты. Эргәһендә битенэн бөрсөк-бөрсөк тирҙәр аккан зэп-зэңгәр ерлеккэ ҡара сәсрәгәндәй күҙле ҡыҙҙы күрҙе. — һин кем?

— Флорида.

— Флорида? Ә эт ҡайҙа?

— Ул ишек төбөндә...

— Ул ниңә... сыйылдай? Көсөк булып... Рекс...

— Эйе, ул һеҙҙе саҡырҙы. һеҙ иҫтэн яҙғайнығыҙ.

— Лидия инәй!

Күҙҙәрен йэш томалаған таныш йөҙҙө күрсү Башкирцеваны тамам айнытты.

— Әбүбэкер... һин ниңэ илайһың, улым? Бөтэһе ло яҡшы... Ә Көнһылыу ҡайҙа?

— Мин бында... — Ҡыҙыкай эҫе бәреп торғап бармаҡтарын уның маңлайына терәне. — Мин бер ҡайҙа ла китмәнем, гел ошонда торҙом.

— Көсөк... ул ҡайҙа?

— Көсөк юҡ, ул Флорида. Көсөк булып һине саҡырҙы. Оҙаҡ, бик оҙаҡ саҡырҙы. — Көнһылыу Флоридаға һоҡланыу тулы ҡарашын төбәне. — Мин дә шулай дауалай белһом икэн!

— һеҙ тыныс ҡына ятығыҙ. Әбүбәкер, эҫе сәй килтср. Хәҙер үтеп китер...

— Мин һине... күргәс тә таныным, Флорида.

— Мин бит һеҙҙе белмэйем. — Флорида аҡһыл вирмаҡтарын ҡайнар сәй һалынған стаканға йылытты. — Ломш стсналағы рәсемдә мин үҙем икэнмен тип уйланым. Гик ул ҡыҙ гимнастеркала булып сыкты. һеҙ фронтта I ыш ыҙмы?

— Эйе, һинең йәшеңдэ мин фронтта инем... — ирцева сикэһен өткэн йәш бөртөктэренең тупылдап мендәргә һарҡыуын тойҙо. — Мин һинең сабый сағынды күрҙем. һеҙ Таулыла йәшәнегеҙ. Әсәйеңде лэ белэм. Ә йың... ул минең ағайым. Әйүп Ғэзиз улы Камалетдинов.

— Камалетдинов — Флориданың атаһы?! — Әбүбәкер ıм аптырап Флоридаға ҡараны. — һеҙ башҡорт ҡыҙымы ш Фиорида?!

Фиорида йылмайҙы, юҡ тигэнде белдереп баш сайҡаны.

— Мин рус ҡыҙы... Атайым рус, ә әсэйем... Эйе, ахыры... Кайер, ул да Себерҙә тыуып үҫкән, әле лэ шунда йәшәй. ıиым донъя ҡуйҙы. Беҙ өс балабыҙ.

— Быпдай яңылышыу мөмкин түгел. Флорида, беҙ бит һинең менэн ике тамсы һыуҙай оҡшағанбыҙ. Әсэйең... һпиылағы... Башҡортостандағы тормошон һөйлэмэнеме ни?

— Эйе, беҙ унда... бер аҙ торғанбыҙ. Тик минең атайым Павел ине бит. Павел Игнатьев!

Гамам хәл ингэн Лидия Николаевна мендэренән башын I ıгкы гы; Флориданың ҡулын усына алды:

— Рәхмәт, гүзэлем! Теге донъяға киткэн ерҙэн кире ...арҙың. Ҡайҙан өйрэндең быларҙы?

— **Үҙебеҙҙә...** Себерҙә... Унда бит шамандар эле лә бар. Мим улар араһында, урманда, үҫтем.

— Әсәйеңдең исеме, яңылышмаһам, Мэликә.

— Маша... Ә ауылдағылар, ысынлап та, уға Мэликэ тип ...ша.

— Быпа шулай, балалар. Донъя түңәрәк. һәм бик тығыҙ, — |ц я Николаевна аптырашта ҡалған Әбүбәкер менән I нмһмлыуға ҡараны. — Бөгөн мин икенсегә тыуҙым, ıар! Бокалдарға шампан ҡой, Әбүбәкер!

Флорида түшәгенэн тора башлаған Лидия Николаевнаны ...ссне кире яткырҙы:

— **һеҙгә** ҡуҙғалырға ярамай. Өҫтәл дә, шампан да булыр, р итэйек. Әбүбәкер киоск тәҙрәһе төбөндә ҡалдырып ...>н ;гк розаларҙы мин дә бит... ташламаным.

Мәҙинә һуңғы ваҡытта бал ҡорттары тураһындаил эҙәбиәтте ныклап өйрәнергә тотондо. Уҡыған һайын үҙенен мәғлүмәте аҙ булғанын аңланы, был йән эйәләрснги йәшәйештең бөйөк сере икәненә инанды. «Бал корттарыньн эшлеклелеге һәм бер тәртипкә буйһонғанлығы ғалимдарҙы һаман һоҡландыра. Уларҙың ял көндәре юҡ, һәм ул бер минут эсендә ун сәскәгә ҡуна, шул рәүешле ҡояш ҡалкҡандан байығанға тиклем дүрт мең сәскәнең һутын һур;|

Балдың файҙаһы хаҡында күп яҙыла. Ә бына Мысмр пирамидаларының эсендә бал табылыуы һәм, өс мең **йыЛ** һаҡланыуға ҡарамаҫтан, тәме лә, төҫө лә боҙолмауы...»

Ҡапка асылып ябылған тауыш ишетелгәс, Мәҙинә баип.ш күтәрҙе, тәҙрәгә якын килде. Почтальон икән. Уның тәҙрлы ҡарап йылмая-йылмая инеүенә ҡарап, Мәҙинә балаларынан хат барлығын аңланы.

— һәйөнсө!

Инеүсене Мәҙинә тупһала ук ҡаршы алды:

— Әйҙүк! һөйөнсөһөнә — бер самауыр сәй!

— Сәй ҡасмаҫ, апай, сумкалағын таратып бөтәйем эле. Шунан ул ике конверт сығарҙы. — Балаларығыҙ йыш яҙа, апай!

— Дүртәүҙәр бит! Аҙна һайын берәрҙе яҙһалар ҙа дүр| хат булып китә. Рәхмәт, һеңлем!

Мәҙинә башта йыраҡтағы ҡыҙы яҙған хатты асып уҡый башланы: «һөйөклө әсәйем минең. Мин һәйбәт йәшәйем Уҡыуым бара. Дөрөҫ, ҡайһы бер дәрестәр миңә ауырыраҡ бирелә, ләкин укытыусы миңә күңелде төшөрмәҫкә ҡуша.)и күп ваҡиғалар булды бында, әсәкәйем! Әбүбәкер ағайым, моғайын, өйләнер: улар Флорида менән имтихандарға бер| I әҙерләнә. Әбүбәкер ағайымдың бүлмәһенә бикләнәләр, шумди укыйҙар. Эй, Флориданың кем икәнен яҙырға ине башта! Ул бит теге рәссам ҡыҙ, студентка. Әбүбәкер ағайымдың тсгс саҡ юғалтып, ҡайғынан аҡылынан яҙҙыра яҙған ҡыҙ. Уны мии таптым. Оҙак эҙләй торғас ҡына, элбиттә. Флориданы күргәс, Лидия инәй һушынан яҙҙы. Аҙаҡ терелде, Флорида терел і і е Әсәй, ул ҡыҙ Таулылағы район секретары булып эшләгән, теге һинең портретынды яһаған ағайҙың балаһы булми

ып гы. Әсәһе — Мәликә. Ул Лидия инәйгә бик ныҡ оҡшаған. Шуға бит инде Лидия инәй уны күреү менән иҫенән яҙҙы.

, >юй! Миңә аҡса һалма. Мин хәҙер ял көндәре гөлдәр һата ғаным, өҫтәүенә коляскала ултырған инәйҙең йомоштарына йорөйөм, өйөн йыйыштырам. Ул миңә көн дә аҡса бирә. Минең Һиң1 ауырлыҡ һалғым килмәй. Тағы шуны анланым: эшем күп, Мгнмтым юҡ булһа ғына мин якшы укый алам.

һине, олатайымды, йәнә һарысаны бик һағындым. икул етһә, мин ҡайтыр инем, тик коляскала ғына улшрған Марияны кем ҡарар? Ул бит миңә музыканан і ірестәр ҙә, китаптар ҙа бирә. Йәнә Рексты ла көн дә тышта Ниротргә кәрәк. Лидия инәй бушамай. Профессор кеше бит. Әбүбәкер ағайым да бушамай. Тағы бик күп гөлдәр ултырттым. Цикломендар, азалиялар, розалар... Мин үҙемдең ьын іа укыуым менән бик бәхетлемен, әсәйем! Әсәй, һин |)гың минең менән һуғышкан малайын күрһәң, минән сәләм әйт: мин уға бөтөнләй асыуланмайым!

(олөм менән Көнһылыу ҡыҙың».

КОнһылыуҙың хатын укып бөткәс, Мәҙинәнең күҙҙәренә и им >ркелде. Ул яҙған бөтә ваҡиғалар, тере күренештәр іп, күҙ алдынан үтте. Флорида... Мәликә менән Әйүп I изовичтың ҡыҙы... Ниндәй яҙмыштар, ниндәй урау Юлдар... Яҙмыш юҡ тимә шунан! Ахыры, әҙәм балаһының үҙенән алда яҙмышы тыуа тигәндәре дөрөҫ? Шунан уның л һатып торған нәҙекәй ҡыҙы күҙ алдына килде. Ҡап-ҡара кур кмяраҡ күҙле, бешкән сейәләй иренле, еңел кәүҙәле, йәш ій нескә ҡуллы был ҡыҙыҡай ҡулынан сәскә түгел, рткән һуҙһа ла, алып китерһең! һиңә ауырлыҡ һалмайым, тигән... һеҙҙең донъяла барлығығыҙ миңә йәшәргә орт биреүен аңламайһығыҙҙыр шул әле...

Шунан Мәҙинә Күкһылыуҙың хатын асты:

«Өсәкәйем минең! һөйөклөм! Мин бик һағындым һине! р музыканы яратмаһам, бөйөк йырсы булырға хынпланмаһам, мин бында бер көн дә тормай ҡайтып китер һам і сл-гел һинең янында ғына йәшәр инем. Уҡытыусы миңә: •Тплннт һинеке түгел — халыҡтыҡы!» — ти. Шулай булғас, Уҡымай ҡайтып китһәм, мин уны урлаған булып сығам бит! Шуға күрә укыйым инде. Сәнғәт институтына барып концерт куйҙыҡ. Мин унда «Зөлхизә»не йырланым. Үҙемдә Зөлхизә и геп хис итеп йырланым. Мин дә бит Тирәклене генә

яратһам да, Өфөлә йәшәргә мәжбүрмен. Мин йырлли бөткәндә алда ултырған ағайҙар күҙҙәрен һөртә иис. Сәхнәнән сыҡҡас, мин дә иланым. Эй әсәкэйем, талантлы булыу бер яҡтан рәхәт булһа ла, икенсе яҡтан ҡыйын Д| икән: һиңә гел ҡарайҙар, һәр аҙымынды үлсәп баҫырға, һүҙеңде уйлап һөйләргә кәрәк. Мин бит ҙур ҙа түгел, ә үҙенде һәр саҡ ҙурҙар кеүек тоторға тура килә. Шунан һине күҙ алдыма килтерәм. һинең кеүек булырға тырышам. Ләкип, һин бит, әсэй, үҙең шулайһың. һәйбәтһең. Ә миңә тырышып-тырышып һәйбәт булырға кәрәк. Ҡайһы саҡ: «Ниңә мин дә Көнһылыу кеүек түгелмен икән?» тип уйлайым. Ул бит һис аптырап тормай. Ә үҙенә нишләһә лә килешә. Төҫөбөҙ ҙә, холҡобоҙ ҙа оҡшамаған, ниңә беҙҙе Хоҙай игеҙәк итеп яратты икән? Мин аңламаған нәмәләр күп, бик күп икән! Каникулға ҡайтҡас, эй һөйләшербеҙ инде, әсэйем. Сәләм менән Күкһылыу ҡыҙың».

«Бәндәгә үҙ бөйөклөгөн аңлау һәм шуны ҡабул ҡылыу ауыр» тиер ине Мәҙинәгә Барсынбикә өләсәһе. Хаттаи күренеүенсә, Күкһылыу үҙенең ҙур талант эйәһе булыуын һәм талант алдындағы яуаплылыҡты анлаған. Мәҙинә быға сикһеҙ шатланды. Күкһылыуҙың сәнғәт институтындағы уңышлы сығышы ла һөйөндөрҙө. һәр бөйөклөк бәләкәйҙәи башлана. Күкһылыу атлы йырсы-шишмәкэй дарьяға илтер юлының тәүге саҡрымдарына баҫты. Барыр юлдарында Хызыр Ильяс юлдаш булһын, минең бәләкэсем!

Мирхәйҙәров барып ингәндә, Сәйфулла ҡарт сәйгә ултырып ҡына тора ине:

— һөйҙәмэй йөрөйһөң, әйҙүк ҡорҙаш, — тине хужа, ҡарашы менән ҡарсығына, тағы бер сынаяҡ ҡуй, тигәнде аңлатып. — Күптән күренгәнең юҡ. Ҡышты имен сыҡтығыҙмы?

— Ҡар баҫҡылап китте, былай. — Азат кеткелдәп көлөп алды. — Ҡар аҫтында сысҡан үлмәй бит.

— Уныһы шулай. Әйҙә, етеш, яҡында. — Сәйфулла, ҡунаҡҡа урын биреп, төпкәрәк шылды. — Йылы икмәк, йылы май — иншалла, һыйыр быҙаулап бирҙе.

Хойерле булһын, — Мирхәйҙәров түңәрәк һаҡалын ...иштырҙы, ҡулъяулығы менән йәшкәҙәп торған күҙҙәрен һөртөштөрҙө. — Эсегеҙ әйҙә. Мин — ураҙа.

Ураҙа? — Сәйфулла күтәргән сынаяғын кире ...ты. — Әллә, ҡорҙаш, намаҙ ҙа уҡыйһың?

Уҡыйым. Күптән. Намаҙ уҡымай теге донъяға күсеү, ... хеҙмәт кенэгэһеҙ пенсияға сығыу менән бер бит инде ул...

Ллай...

һ.шлыҡ урынлашты. Сәйфулла өнһөҙ генә сәй Һириолдотте, Азат үҙ уйҙарына бирелде. Теге саҡ, III чи лройҙе ерлэгэндэ, был ата партизан иманға ултырған ... күренә ине. һәр хәлдә Мирхәйҙәровҡа ул шулай ...йолғайны. Хәҙер икеләндерә: уға кәңәшкә килеп Мирхойҙәров яңылышманымы икән?

(ынаяғын ашығып түңкәреп Сәйфулла ҡунаҡты төпкө ... саҡырҙы. Азат үтте. Стеналағы рамдарҙа — Сәйфулланың йәш саҡтағы рәсемдәре, маҡтау ҡағыҙҙары. Миҙалдары ла бар. Ленин менән Сталин портреттары иң ...)ленгән. һүҙҙе ҡайҙан башларға белмәй яфаланды Азат. ... килешмәҫ төҫлө, мәгәр тәүәккәлләмәй ҙә булмай.

Ҡорҙаш, — тине ул шунан, мейескә тыңҡыслап тулты-рылған йәш утындың янып китә алмай уфылдап, бышылдап щыуым тыңлап ултыра биргәс. — Мин һиңә оло бер йомош ... кәңәш тиемме... Ҡыҫҡаһы, эш былай: мин мәсеттең ...ҙ ҡолатҡан манараһын торғоҙоп ултыртырға тип Цпропом.

һы! — Сәйфулла бер ағарҙы, бер буҙарҙы, тик ...шмәне.

Һуң... — Азат ҡулынан блокнотын сығарып, күҙлеген ... Бына бит: «Берәү саң бөртөгө тиклем генә ...лыҡ эшләгән булһа, уның әжерен алмай ҡалмаҫ һәм ... сац бөртөгө тиклем генә гонаһ эшләгән булһа, уның да ... алмай ҡалмаҫ», ти бит Китап. Ә беҙ һинең менән... ... нортона ҡул һуҙҙыҡ! Беҙҙең шул ҡылған ғәмәлебеҙ ...рипсккэ юл башланы!.. Бына тағы...

Ҡорьәнде мин... — Сәйфулла ҡул һелтэне. — Мин ...рҙы бслмэй тиһеңме? Иптэш Мирхэйҙэров, һин бит бик ... ксше инең. Үткэн эшкэ — салауат! Бер Тирэклелэ ... юргеҙеү менән бөтөн Рәсәй халҡының башын бороп ...мы? Ә?! һин теге ел тирмәнен туҡтатырға йөрөгән ...лэй ҡыланаһың!

— Юк, һин төшөнөп етмэйһең, — тулкынланыуҙан тыиы быуылыр сиккә еткән Азат һулышын сак-сак алыи, ултырғысын Сәйфуллаға якынырак шылдырҙы. — Бымн бында, тыңла, нимә тиелгән: «Әй бэндәлэрем! Гонаһ эшлои үҙегеҙгә зарар иткэн булһағыҙ, Аллаһ рэхмэтенән өмөт өҙмэгеҙ. Тәүбә итеп төҙәлгәндә Аллаһы Тәғэлэ гонаһтарҙы ғәфү итә. Аллаһы Тэғэлэ ярлыкаусы, рәхим-шәфкәтле ярлыкаусыларҙың иң олоhо».

— һин, иптәш Мирхәйҙәров, балниска бар. Психтарҙы карай торғанына. Ярай, мин гонаһ кылдым ти. Эйе, раскулачивать иттем, буйһонмағандарын аттым, аҫтым! Лэкин... тәүбәгә килдем тип... уларҙың кыркылған башып кәүҙәләренә киренән ялғап буламы?!

— Ә нигә... ялғарға? Ызнамо, — Мирхәйҙәров та индс унын каршыһына барып баҫты. — һин...

— Мин нимә? Мин дөрөҫөн эйтәм!

— Мин һиңә «а» тием, э һин«б» тиһең!

— Мин дә шуны эйтәм: ауҙарылған манараны торғоҙоу кыркылған, сереп бөткән ана шул баштарҙы кирс кәүҙәләренә йәбештерергэ маташыуға бәрэбэр! Әйтәйек, бср калак балды диңгеҙгә койоу менән һыуҙың тэме үҙгәрәмс, тоҙлонан баллыға әйләнәме?

— Мин һине, корҙаш, — былай ҙа кураныс кәүҙәһе тағы ла нығырак кесерәйеп киткәндәй булды Мирхәйҙәровтың, - коткарырға теләнем. һәр кем үҙе кылғанға Әхирәттә бары үҙе яуап бирә. Хуш...

Тунының төймәлэрен дә эләктереп тормаҫтаи Мирхэйҙәров Сәйфулланың текә тупһаһынан бәпкә үләндорс морон төртә башлаған тышка атланы.

Мәҙинә үҙенең яңы эшенән оло кәнәғәтләнеү тойғоһо кисерҙе. Сабый күкрәктәренән шишмәләй сылтыраған моң унын күнелен күтәрҙе:

Әлиләү генәйем, бәлиләү генәйем,
Әлиләү генәйем, бәлиләү генәйем.
Әсмәбикә тыпыр-тыпыр баҫып килэ генәйем...

Ьллалар күңеленэ халык мондарын һалыу бер сак үҙ итәрен бирмәй калмаҫ, тип уйлай Мәҙинә, йырлай-ырлай эйләнгән балаларға карап. Бер сак был мондар улар йөрәгенән «Тәфтиләү», «Урал», «Азамат» булып урғылыр. \ ар урғылткан шул мондарҙа Мэҙинә кабат терелер. Халык күңелендә терелер өсөн ул халкының, тыуған мондарының үлемһеҙлеге өсөн үлергә тейеш. Иҫкелек калдығын яклай тип халыкты хорға йыйыуҙан мәхрүм иттеләр. Әммә үҙенең пшимда Мэҙинә яңғыҙ булмай сыкты: районның мәғариф ı е мөдире ошо сабыйҙарҙы уға тапшырҙы. Ана янып горған кап-кара күҙле өс йэшлек малай алға сыкты:

— Башкорттар китте һуғышка,
Оҙатып калды күк Урал.
Ат уйнатып алдан бара
Шайморатов генерал!

Сабый күкрэгенән саф, юғары тауыш гэлсэр сыңы булып нш ыраны, асык тәҙрә аша яҙғы бейек һауаға күтэрелде. Мәҙинә уларға карап түмәр башын сәхнә, тирәктәрҙе гамашасы күреп йырлап йөрөгән сактарын хәтерлэнэ. Эйе, йыр булды унын юлдашы, йыр канат куйҙы, серҙәше һэм ркадашы булды. Моңло бала бәхетһеҙ була, тиҙәр ҙә бит, Моңо булмаһа эсендәге ялкындарын нисек һүндерер ине Мәҙинә?! Нисек сығарыр ине...

Ьорөләре тиртә башлаған сирень ботағына турғай килеп кунды. Муйыл күҙҙәрен тәгәрэтеп эстә түңәрәк яһап йәләнгән балаларға карағас, йәнә осоп китте. Шул сак Мәҙинә клуб кыйығына менеп барған һынды шэйләне. Флаг каҙарға менәлер тиер инең, май байрамына иртәрәк. Ғәҙәттә ı флагты май байрамына карата каҙайҙар. Совет власы өсөн түгелгән кан символы шунда тороп, елгә елберҙэп, ямғырҙа күшегеп, уңа, ак төҫкә эйлэнэ. Октябрь байрамы алдынан был ак әлемде йэнэ кыҙылға — яңыһына илшштыралар. Май байрамы еткәнгә тиклем ул да уңа, төҫһеҙләнә. Элек, һуғыштан һуңғы йылдарҙа, был флаг каҙау нпторен, еңел һөйәкле булғанғамылыр, ҙур кинәнес менэн Мирхэйҙәров үҙе башкара ине. һуңғы тиҫтә йылда унын был щоголөн башкалар үтәй. Әммә ул тағы менеп бара! Эйе шул,

Мирхәйҙәров. Унын йәшендәме инде ҡыйыҡ башына үрмәләү! Ана ул менеп етте, кәүҙәһен турайтты.

— Йәмәғәт!

Мәҙинә, тәҙрәләрҙе шар асып, кәүҙәһе менән һонолоп ҡыйыҡҡа ҡараны.

— Был ни... ғәләмәт...

— Йәмәғәт! Заманында мин ошо мәсеттең манараһыи ҡолатыштым! Халыҡҡа дәһрилек юлынан китеү юлын күрһәтештем. Эшләгән эшемә мин бик үкенәм! Үҙем терс саҡта, изге рамаҙан айында ҡылған гонаһымды төҙәтергә... - Шул саҡ ул тигеҙлекте юғалтты, сайҡалды, бөтә көсөнө яңынан турайырға, аяғына баҫырға тырышты, бер ҡулы менән ҡыуарып кипкән ағасты хәтерләткән флагка тотонорға маташты, ләкин ағас һынды, ел иҫкән ыңғайына түбән осто, унын артынса секундтың ҡайһылыр өлөшөндә Мирхәйҙәров клубтың текә ябылған ҡалайы өҫтөнән ҡуҙ эйәрмәҫ тиҙлекто түбән атылды.

— Аһ! — Мәҙинә тәҙрәне япты. Йөрәген тотоп, тышҡа йүгерҙе. — Мирхәйҙәров ағай!

Клуб эргәһендә торған тиҫтәләгән кешенең баштарын эйгәнен, ирҙәрҙең баш кейемдәрен һалғанын күрҙе Мәҙинә.

...Өйөнә кисләтеп ҡайтып ингән Мәҙинә аласығы торбаһының төтөн урғылтыуына аптыраны. Аһ! Атаһы берәй нәмә ҡайнатамы?

Моғайын, ҡарағат ҡыуыҡтарына ҡайнар һыу ҡойорға итэлер, апрелдә ул гел шуны эшләй.

— Атай! — Ишекте асып ингән Мәҙинә усаҡтағы утка һуҙылған шаукал ҡулдарҙы күрҙе. — Аһ!.. Барсынбикә ... өләсәй... был һинме?

— Сеү, балам... тауышланма. Киткәндәр генә ҡайтмай. Мин бит әле... тере!

Барсынбикә Мәҙинәнең өйгә саҡырыуынан баш тартты:

— Ошонда ғына серем итэйем дә, таң менән ҡуҙғалырмын.

— Ҡайҙа?!

— Күктау һырттарына. Табаһы үләндәрем бар, ашығыр кәрәк. Йоҡола саҡтарында ҡаҙып алған яҡшы.

Сәй артында ла Барсынбикә яҙылып һөйләшмәне. Мунсала Мәҙинә уны үҙе йыуындырҙы, мәгәр элекке эскс кейемдәрен кейеүҙән өләсәһе баш тартты:

Нимә кейеп килгәнмен — шунын менән китәм, — тине

ул Минең өсөн борсолмаһаң да була.

Лх, өләс! Күпме һөйләр хәбәрем йыйылған, күпме

һорауҙарым өйөлгән!

Бондә бер ваҡытта ла эсендәген бөткәнсе һөйләй ҙә, һорауҙарына яуап табып бөтә лә алмай. Беҙ бит фани

Цшпяга бер килеүҙә ике ғүмер йәшәй алмайбыҙ.

Үҙгәргәнһең, өләс... — Күҙендә йәштәре мөлдөрәп Мрган Мәҙинә, Барсынбикәнең еңел кәүҙәһен күтәреп, мясмкка атланы. — Ҡайһылай ябыҡҡанһың!

Һлрсынбикә көлөп кенә ҡуйҙы:

Әллә мине... курортта яталыр тип уйлағайныңмы,

кы ҙым?

Мунсанан һуң Барсынбикә гөлйемеш сәйе һораны:

Мына шуны бик эскем килгәйне, — тине ул, оло

Мендәргә ҡырыная биреп ятып. — Йәнә еләк сәйе. Ярай,

уныһын иртән эсермен...

Өйгә инеп, балаларыңдың рәсемдәрен, сиккән

игеүҙәрен күргең килмәйме ни, өләс?

Сигеүҙәрен? — Барсынбикә түшәмгә ҡарап оҙаҡ ҡына

уЙланып ятты: — Мәҙинә... һин мине... күрмәйһеңме әллә?!

Күрәм... — Мәҙинә, сикәләрен ҡайнар йәштәре өтөп

п ып барған хәлдә, ҡарсыҡтың тарамыш аяҡтарын

Косаклаы. — Белмәһәм, еңелерәк булыр ине...

Тыныслан. Үҙенде ҡулға ал. Көсөндө юҡ-барға сарыф

иг м.г Көс һиңә кәрәгер әле...

Ахыры һин, өләс, донъяуи уйҙарҙан, теләктәрендән

гамам азатһың. Ә мин... — Мәҙинә тотлоҡто, — мин, иүрюнһендер...

Эйе, балам... күрҙем.

Бәлки миңә лә шулай кәрәктер ҙә, ләкин балаларым...

Ҡарһүҙ иҫемә төштө. Бер әҙәм, төндө ҡарурманда үткорергә тура килгәнгә күрә, ҡурҡыуынан ағас башына

мен гән. Шул саҡ ағас төбөнә аҡһаҡ төлкө килеп туктаған.

Бына бер саҡ урман хужаһы арыҫлан килеп сыҡҡан — Гсшендә бының болан икән. Арыҫлан, ҡорбанын ботарлап,

йғансы ашаған да китеп тә барған. Арыҫландан ҡалған

калдыҡ-боҫтоҡ менән төлкө лә ризыҡланған. Ағас

башындағы әҙәм: «Сирле, ғәрип хайуанды Аллаһы Тәғәлә

ҙәне, ас ҡалдырманы. Мин ниңә әле көн-төн эшләп

ҡаңғырам? Төлкөгә биргәнде, Мәүлә минә лә бирер», тип уйлаған. Шунан ул ризыҡ көтә башлай. Бер көн үтә, ике, ос көн, ә ризыҡ юҡ. Бер заман ул, аслыҡтан һуштан яҙып, ағастан ҡолап төшә. Шунда төш күрә. Төшөндә бер тауыш: «Әй йүләр, әй ахмаҡ, һин ялҡауланма! Ниңә үҙенде ғәрии төлкө урынына ҡуяһың? Арыҫлан шикелле бул, табышындың артығын башҡалар ашаһын!»

һөйләп бөтөү менэн Барсынбикә йоҡоға талды. Торғас, бөтә кейеменең йыуылып, үтекләнеп эргәһендә ятыуын күрҙе.

— Рәхмэт. Әллә инде йоҡламағанһың да?

— Йоҡо инмәне күҙгә. Атайым Азат ағайҙың мэйетсм көтөшөргә китте. һиңә ризыҡ, йылы кейемдәр әҙерлэнем. Урманда... оҙаҡ булырһың микән?

— Күҙ күрер.

Сәй эсеү менэн Мәҙинә өләсэһен машинаһына ултыртты ла Күктау һырттарына табан елдерҙе.

— Мин ошонда ҡалам.

— Ҡасан килеп алайым?

— Үҙем ҡайтырмын... ваҡыты еткәс.

Шунда айырылыштылар. һэм бына Барсын яңғыҙы. Ҡарҙары әрселеп тә бөтмәгән ерҙән морон төртә башлаған үләндәр ер ҡарынының еҫен тарата. Баш осонда — сикһеҙ күк, э урманда — һиллек. Ах! Ошо тау һырттарын, уның ҡайраҡташтарын, тэкә мөгөҙөнә оҡшаған ҡырҙарының, һуйыр таштар менән серлэшэ-сөкөрләшә аҡкан йылғаларын нисек һағынғайны Барсынбикә! Әгәр Роберт Эдуардовичка биргэп вәғәҙәһе булмаһа, ошонда тау ҡыуышында ғына ҡалыр ҙа, Мөғлифә кеүек үҙен-үҙе йыйыштырып ҡына баҡыйлыҡҡа күсер ине ул. Әммә... ярамай. Вәғәҙә — иман. Әлегә ул элек Ихсанбайы йәшәгэн тау ҡыуышында йәшәр. Ғүмеренә яҙған былдай бәхетте — азатлыкты — ул тәмләп кенэ файҙаланыр, һаумал ҡымыҙ эскән кеүек, тэмлэп кенә, самалап ҡына һемерер.

Ана, уның элек үлән йыйған аҡландары, һағыҙ йыйған ҡарағастары. Барсынбикә татлытамыр үҫкән ҡая башына үрмәләне. Ниндәй рәхәт, ул ошо йәшендә кәүҙәһенең ауырлығын тоймай. Тик бынау ҡарағас... Бәй, ул ҡороған икэн. Олондары менән сатыр яһап ултырған был ағас мэңгелектең үҙе кеүек күренэ торғайны Барсынбикэгэ.

, ләкин ауырға уйламай ҙа. Ҡороғандан һуң аумау, ...ерәмәү матур түгел икән. Үлгэндән һуң күмелмәй яткан Һмндомс якшы?

Ай! — Барсынбикә ҡарағастан саҡ ҡына ситтәрәк, ... араһынан ағарып күренгэн баш һөйәктәрен күрҙе. ...)ehснсң теше аралы... Ишмөхәмәт башы. Ул шулай ине. Икенсеһе... Икенсеһе — ул! Ихсанбай! — Йә Хоҙа!!! — Ауып барған еренән ул ҡарағаска һөйәлде. Бына нимә ... килтергэн уны бында! Барсынбикә фани донъянан ваз кисте, хушлашты, эхирәткә әҙерләнде, ә улының һәм ... чашының ер ҡуйынына тапшырылмаған һөйәктәре ... улы көткән.

I ыиыслана биргәс, ул турайҙы. Үлән тамыры ҡаҙырға тип ... көрәгеп тупраҡҡа батырҙы:

Яткан тупрағығыҙ мамыҡтай йомшаҡ булһын, ...руахтар!

Сығып киткәндең туғыҙынсы көнөнә генэ ҡайтып инде Барсынбикә аласыҡҡа. Мәҙинә уны йәнә мунса төшөрҙә, бала кеүек урап-сырмап, үлән сәйҙәре эсереп, йоҡларға һалды.

Өләс...

Әйт...

һин киткәс, Әбүбәкерҙән хат килде.

Йә! — Барсынбикә башын ҡалҡыта бирҙе. — Нимә ...ҙған?

Өйләнергә... фатиха һораған.

Шунан?

Ул ҡыҙ белэһеңме кем? Камалетдиновтың Флоридаһы.

Камалетдиновтың ҡыҙы? Флорида?! — Барсынбикәнең ...ҫкә баткан урттары ҡыймылдай бирeп ҡуйҙы, лэкин ...ндәшмәне. Бер аҙ яткас ҡына ул йәнә телгә килде. — Мәҙинә, минең арттан машина иртэн иртүк килеп етер. Сәхәр ...ндә. Хәҙер ят, йоҡла...

Мәҙинә сығып киткәс, Барсынбикә түшәгенән тороп ...рҙы, ҡарашын аласыҡ тәҙрәһе аша ҡара болот кеүек ...рған гауҙар теҙмәһенә төбәне. Флорида! Күпме кисереш... юр бәйле ошо исемгә! Барсынбикэ уның телен асты, ...ошо сабыйға йәбешеп өҫкә сыҡты. Хәтер упкын кеүек, ш ла тарта... Үткән ғүмере хаҡында ул аҙ уйланманы: • Ч>, ул яткан урында ваҡыт етерлек. Әммә яҙмыштың ...ңр насеҙенә тағы бер һынау үткәререн көтмәгәйне...

Аласыкка ҡайнар самауырын күтәреп Мәҙинә килси ингэндэ ул эле һаман ятмағайны.

— Иртәлэгэнһең.

— Аш та беште. Бишбармаҡ. һинең яраткан ашың.

— Рәхмэт, балам.

«Рэхмәт» тиһә лә, Барсынбикэ бары үлән сәйе эсте ло, бер-ике калаҡ бал ҡапты.

— Ниңә ашамайһың ул?! — Өлэсәһе алдына ни һалып, ни ҡуйырға белмәгән Мәҙинэ өҙгөлэнде.

— һин көймэ. Бишбармаҡ ашар сағым үткэн. Тағы ярты сәғәттэн мин китәм, Мәҙинэ. Килеп киткәнемде **кешеп** һөйлэмә. Уларға кәрәге юҡ, э үҙеңә артыҡ һүҙ булыр. Шунан... — Барсынбикә усактағы ҡапыл гөлт итеп тоҡанғаи ҡоро-һарыға ҡараны. — Флоридаға килгэндә, ул матур бала ине. Әле лә шулайҙыр. Матур ғына түгел, өлөшлө лә бала ине. Лэкин... быны һин белергә тейешһең: уның олатаһы, Камалетдиновтың атаһы, һинең олатайың Диңгеҙхан тарафынан үлтерелде.

— Ни-мэ-ә?! — Мәҙинәнең һорауы гүйә ууяныи өлгөрмәгән иртәнге һауала аҫылынды.

— Эйе, — Барсынбикэ үҙенә үҙе һөйләгэндэй, алдыпа карап һөйлэнде. — Ҡан ҡоно тора улар араһында, ҡан...

— Лэкин ваҡыт үткэн, быуындар алмашынғап, төйөндэр... — Мәҙинэ саяланып киткән ҡарашын өлэсэһенл төбәне: — **һеҙҙең** заман төйнәгән төйөндәрҙе **үҙегеҙ** үк сисси бөтмэнегеҙме ни?!

— Күрәһең, бөтмэгәнбеҙ... — Барсынбикә үҙенең нәҙек, оҙон, тарамыш бармаҡтарын алдына һалды. — Ошо ҡулдарым менән миңэ әҙме төйөндәрҙе сисергә тура килде! Заман мине... аяманы. Әммэ калған икэн. Ул төйөндэр, беҙҙең заман бәйлэгэн төйөндэр, балаларығыҙҙың балаларына ла ҡалмағайы...

— Әләйһэн, үҙең хәл ит. — Мәҙинә өләсәһе ҡаршыһыни сүгэләне. — Үтенеп һорайым: миңэ ҡалдырма!

— Юҡ... — Барсынбикэ, ике ҡулын да күтәреи, Мәҙинәнең яурынына һалды, урынына ултыртты. Хөкөмдө сығарыуҙы был юлы һиңә тапшырам. Таптан эсо түгел, үҫтергән, — эсә. Әбүбәкерҙе һин үҫтерҙең. Уның өсон һин — эсә хөкөмөндә. Флориданы мин дауаланым, әжерсмо Камалетдиновтан, сәүит власынан, ярлыкау алдым.

Коүюкерҙе үлемдэн Башкирцева ҡоткарҙы Камалетдиновтың ҡарындашы.

Был хаҡта... — Мәҙинә аптыраулы ҡарашын өләсәһенә төбәне.

Белэ инең...

Эйе... — Мәҙинә өлэсәһе ҡаршыһында ташҡа эйлэнгән һындай ултырыуын белде. Машина туктағаны ишетелде — өлэсәһе урынынан торҙо.

Оҙатма, балам. Шулай еңелерәк булыр үҙеңә...

Өлә-әс!

Ьарсынбикәнең усын ейәнсәренең ҡайнар йәштәре Гнчпсреп алғандай булды.

Миңә ваҡыт, ҡыҙым!

Өләс! — Мәҙинә һулҡылдап илап Барсынбикәнең **Цтогенә** ҡапланды. — Саҡ ҡына... йылынды, ҡурсыуывды ишпым инде, өләс!

Йә ярай, ярай... — Ейәнсэре күңеленә «һуңғы тапҡыр!» тигән уй килгәнен, әммә ул **һүҙҙе** ҡысҡырып эйтмәүен ммы Барсынбикэ. Бәндә шулай инде: тыуғандан алып үмеренең ахырынаса шул «һуңғы» һүҙен әйтеүҙән ҡурҡа. Ҡурҡа-ҡурҡа үҙенен һуңғы һулышына яҡынлаша.

Машина күҙҙән юғалды. Мәҙинә, еңел булмаған уйҙарын йөрәгенә ҡыҫып, ҙур тиҙлек менэн алыҫлашҡан өләсәһе ирп.шан ҡарап ҡалды.

Дүртенсе бүлек

Мәҙинә ҡыҙыл кирбестән ике ҡатлы итеп һалынған йорттоң балконына сығып баҫты. Ай тулған. Ай тулғанда һәр ... иоҡо алмай. Уның нуры шундай яҡты, хатта өй Ифоһспдәге сәскэләр айырым асыҡ күренгәндәй, ә инде ... биш йөҙ метр арьфаҡ үҫкән йүкәлэр тотош ...гәндәй. Буран сығыр булһа Күктау һырттары ғына ... тауыш сығара. Әммә был геүләү йомшағыраҡ та, |.1кко хэүеф тә һалмай...

Ҡыҙыҡһыныу үҙенекен итте. Мэҙинэ, ғэҙәттэ башы ... уратып ҡуя торған толомдарын йәш сағындағы кеүек шшоргән килеш, халатын ғына кейҙе лә, йоҡлаған ейән- .1|ррен уятмаҫка тырышып, өйөнән сыҡты һәм ай

нурында тылсымлы әкиэттәй күренгән семәрле ҡапҡаһын тауышһыҙ ғына асып ябып, сәйер геүләү ишетелгән якк| ынғайланы.

— Йә Хоҙа! — Геүләүҙең сәскәлә ултырған, эле килеп бал бөрккән йүкәләрҙән килеүен белгәс һәм ул ауаздың башҡорт тоҡомло бал ҡорттарынан таралыуын төшөнгәс күҙҙәренән шатлыҡ йәштәре бәреп сыҡты: йүкәләрҙең бал бөрккән сағының бер миҙгел генә икәнен анлағандай, ямғыр-фәлән сайҙыртып ҡуйыуҙан ҡурсып, бал ҡорттары бал йыйыу эшенә төндә керешкән! Йүкәләрҙән таралған хуш еҫкә бал ҡорттарының татлы, ҡыуанıслы геүләүе ҡушылғандан йәйге ҡоро һауалы айлы төн тағы ла ғәжәберәк, илаһираҡ тойолғандай. Ошо тылсым тулы төндә сайпылтыуҙан ҡурҡҡандай, Мәҙинә баҫҡан ерендә ҡымшанмай ҙа торҙо. Ҡолағына үрештәге аттар муйынына тағылған доңғорҙар тараткан моңһоу сындар салынды; Аҡъйылғала балыҡ ҡарпыны, һағын юғалтҡан Суктың һағышлы аһәңе яңғыраны, сысҡан андыған өкөнөң үкенеп ухылдағаны, сиңерткәләрҙең уҙышмаҡтап соролдауы төндөң серлелеген, һиллегсн ҡеүәтләне. «Бөтәһе лә йәнле бында, йәмле бында», — тигоп шиғыр юлдары килде Мәҙинәнең күңеленә. Ҡапыл унын йөрәгенә был айлы төн йыр булып яғыла, күңелен болоҡһотоп, моң булып тышҡа бәреп сыға башланы:

Ялан да ғына ерҙән болан килә,
Зөлхизә,
Уйһыу ҙа ғына ерҙән, ай, түтә шул,
Зөлхизә...

Мәҙинә моң ҡөҙрәтенә буйһоноп, йүкәләр эргәһеном үткән берлэм һуҡмаҡ буйлап Аҡъйылға ярына атланы...

Ғәлимә аҙашты. Башы зыңҡый, эскеһе килә, һыу һорар ине — ирендәре бер-береһенә ҡуша йәбешкән. Һыуһыҙлыҡ йәбештергән уларҙы. Ҡапыл ул башын күтәрҙе. Аһ! БыМ лаһаң унын ҡаршыһында ғына ике ҡатлы.аҡ бина ултыра Ишегенең башына «КПСС» тип яҙылған. Тукта, был яҙыу би

исерәк ине. «Партияның Таулы район комитеты» тип яҙылғайны. Ғәлимәнең зиһене яҡтыра төштө, шул бинаға ....ргә ынтылды: унда, Ғәлимәнең кабинетында, графинда һыу бар. Шул саҡ йөрәк ярырҙай шартлау яңғыраны һәм... аҡ Аиим лкрен генә ергә ишелә-сума башланы. Бына унын ишеге ишск башындағы «КПСС» тигән яҙыуы ла ергә һевде. Ә бинаның ике яғында, кәпәстәрен һауаға ташлап, йортто ер Йшоуын байрам иткән әҙәмдәр ҡайнаша. «Горби, Горби!» — |пи ҡысҡырыша ят йыныс кешеләре. Күп тә үтмәне бина ергә һеңде, ҡыйығы өҫтөндәге ҡыҙыл флаг һуңғы тапҡыр ғыпынды, йөрәк өҙгөс тауыш сығарып, атылған ҡош кеүек |ү(мн шыҡыйып, буткалай ҡайнаған тупраҡ эсенә сумды. Ах! I ı имә ни ҙә булһа уйларға өлгөрмәне, эле генә «Горби ҙа Горби!» — тип ҡыскырышҡан кешеләр төркөмө бергә ку....ылды, бер-береһен ҡосаҡлаған ҡайҙа, илаған... Уф!... I шимо күҙҙәрен асты. Уянды. Күргәненең төш икәненә ышаныр бөтә алмайынса, ойоған бармаҡтарын көскә КыПырлатып, ботон семтеп ҡараны. Тәне ауыртыу менән һуапланы. Эйе, күргәне төш икән. Ә төшөндәге тауыштар, гөрһөлдәү, ҡыскырышыу, көлөшөү күрше яҡтан килә. Былар... кем?! Бер нәмә төшөнмәгән Ғәлимә таҡта менән генә еңгән икенсе бүлмәгә — залға — ҡолаҡ һалды.

Иисә баш?

Ун.

Ун баш өсөн... Овчинка выделки не стоит.

һиңә күпме кәрәк?

Давай... егерме!

Егерме?.. Ҡатмарлыраҡ...

Нимә, целка кеүек ломаешься? Первый раз что ли замужем? Меңләгән баш һарыҡты, шитай, бергә осорҙоҡ! Ха-|| ки... Ә аттар?!

Уларҙы бит... Район түрәләре менән бергә ебәрҙек.

Минә без разницы... Кәрәк икән — милицияла крыша

Сам с усам!

Бына, исмаһам, был ир һүҙе!

(**аяф!** Саяф һөйләшә. Икеһе лә иҫерек. Саяф колхоз һыйырҙары менән һатыу итә! Был ни ғәләмәт?! Һауын гурты и ҙа бөтөп бара. Егерме һыйырҙы ебәргәс, атаҡлы Гирәкле фермаһынан нимә ҡала?!

— Саяф... — Ғәлимәнең кипкән ирендәрен көскә асыи өндәшеүен, әлбиттә, стена ашаһындағылар ишетмәне. Көлөштөләр. Стакандарҙың бер-береһенә һуғылыуынан хасил булған быяла сыңы яңғыраны.

— Каналья... эсергә... һыу юкмы ни?!

— Кухняла, — был Саяф тауышы. — Смотри, бабу не разбуди. Там баба, хозяйка.

— Баба... А что? Неплохая, между прочим, закуска. Надеюсь, не твоя собственная?

— Ты че?! Ничейная она... опщая, то есть, апщественная... как туалет...

— Ха-ха! Хор-хорошо сказано... Как туалет. Ха-ха-ха!

Ғәлимә асыу-ярһыуынан тешен шығырҙатты, көсһеҙлегөнән ғәрләнеп, үҙенең сәсенә йәбеште. Ул арала кухня ишеге ҡапыл шар асылды һәм коридорҙан төшкән яҡтыла имәнес ҙур кәүҙә пәйҙә булды.

— Аh! — Ғәлимә унын эсеүҙән шешенгән йөҙөн дә шэйләнэ. — Не подходи!

— Ой! Тут живая душа что-ли? Живая, — ирекәй, аушан-таушан баҫып, Ғәлимә яткан карауатка атланы, сөгөндәй ауыр ҡулын уның күкрәгенә һалды, һуған еҫе аңҡыған ауыҙын Ғәлимәнең битенә яҡынайтты. — Спишь, или... меня ждешь?

— Саяф!

Ирекәй Ғәлимәнең ауыҙын йоҙроғо менән ҡапланы:

— Т-с-с-с!

Ғәлимә башын көскә ситкә борҙо:

— Саяф!

Ишектә Саяф күренде:

— Эй, товарищь, вода не там! Эй, тебе говорят, не там ищешь!

— Не там... Ошибся, матушка, извини, ошибся...

— Бывает, — Саяфтың көрөшкәгә һыу ағыҙғаны ишетелде. — На, пей, браток!

— «Браток!» — Ғәлимә, зыңҡыған башын устары менэи ҡыҫып, тороп ултырҙы. — Туғандар... таптҡан икәнһең...

— Ә бына бынһын... һинән һорамайҙар.

— һорарһың! Кем әле һин... минән һорамаҫҡа?! — Ғәлимә асыу-ярһыу менән аяғына баҫты, өҫтәлдә торғам табаны һабынан эләктерҙе. — А ну марш бынан!

һин нимә?!

Һыуға йомолған дәү ир арты менән ишектән сыға Ошиланы:

Очумела баба!

Үксәгеҙҙе... — таба тотҡан, сәстәре туҙған, ялан аяҡ, ирым шорә Ғәлимәнең килеп инеүе өҫтәл тирәләй ултырған ги ы ике ирҙең ҡотон алды, бөтәһе лә аптырап, аңшайып калды. — Ялтыратығыҙ үксәгеҙҙе! Ну! Кемгә әйтәләр?!

Прҙор торҙо. Ҡайһыһы кепкаһына, ҡайһыһы курткаһына п ге:

Ғәлимә! Был... ни ҡыланыуың?! — Саяфтың ГЫжылдауы ултырғыстар дөбөрҙәгән, Ғәлимәнең шашынып кырған тауышы аҫтында юғалды, бер минуттан инде шиу шыулы мәжлестән иҙәндә аунаған йыһаз, шешәләр, |ҫтолдә һәнәккә сәнселгән колбаса, балыҡ киҫәктәре, імәгән ҡыяр, башлы һуған кеүек нәмәләр генә ятып І ы. Ғәлимә, нисек ҡапыл ҡыҙған булһа, шулай тиҙ Һүрелде, шинде. Хәле бөттө. Етмәһә, араҡыһы эселеп (инмогән шешә магнит кеүек үҙенә тартты. Ҡалтыраған а ры шуға ынтылды һәм, эсемлекте стаканға ҡойорлоҡ гәкәте ҡалмағандай булғас, шешәне ауыҙына килтерҙе. һах ы г ан ҡойолған араҡы уның һулышын иркенәйтте, Гуктап барған йөрәгенә ғәйрәте ҡайтты — тибергә тотондо, иһенендәге майы бөтөп һүнгән шәмдәр әйтерһең яңынан токанды — күҙ алдары яҡтырҙы.

Каналья!

(анфтың яңынан килеп инеүе тамам аяҡка баҫкан шмоне ҡурҡытмай ине инде.

Номэ, сделка килеп сыҡманымы?!

Контәй...

Иплэп! — Ғәлимә йэнэ ҡулына табаны эләктерҙе. — Гмрлклсгә... йәш бисәң янына... ошо табалай ҡара янып китергә итәһеңме?!

Это ты «иплэп»! — Иҫерек Саяф лап төшөп диванға ялпашты. — Кемгэ өргәненде... беләһеңме? Кемдекен эсәһең? > бына былар... — ул ике ҡулын өҫкә күтәрҙе, күҙҙәрен гүшәмгә гекәне. — Күктән төшәме? Алла бабай ебәрәме?!

Араҡы ла, ризыҡ та — һинеке түгел!

Ә кемдеке? Кемдеке?!

Колхоздыҡы!

— Колхоздыкы, хи-хи! — Саяф быуылып, сәсәй-сәсой көлдө. — Колхоздыкы атаң башын! Колхозсылар... бер түгел, ике йыл эш хаҡын ала алмай! Ҡалған hинә...

— Ә кемдекен урлап... hатаhың? Үҙ малындымы?

— Урлап?! — Саяф диванға ҡырын ауған еренән тороп ултырҙы. — пардон, мадам... Аңламаным... hин ниҙелер бутайhың. Яңылышаhың. Ул нисек инде... «урлап»?!

— Мин... — Ғәлимә ҡулындағы табаhын ишек төбөнө hелтәне, үҙе ҡаҡ иҙәнгә стенаға hөйәлеп ултырып алды. — Мин бөтәhен дә ишетеп яттым, Саяф. Теперь ты — мой заложник. Понял?!

— Ах, шулаймы? — Саяф диванға ҡырын төшөп ятыи алды.

Ғәлимә урынынан торорға итте, ләкин, кистән нык төшөргәнлектән, әле эскән араҡыhы бик тиҙ башына киттс, ахыры — аяҡтары тынламаҫ, быуындары тотмаҫ булды.

— Мин... колхозды... таларға... юл ҡуймам, Шәйхетдинов!

— Ха-ха-ха! Елдән килгән, елгә осҡан, мадам!

Саяфтың үҙен иркен тотоуы Ғәлимәне сығырынан сығарҙы.

— Ни-нисек hин, оялмай... Колхоз милкен!

— Оялырға?! — Саяф, ҡалҡынып үҙенә араҡы ҡойҙо, ҡыяр эләктергән сәнескене ауыҙына якын килтерҙе. — Кемдән?! hинәнме?! Колхоз, белгең килhә, талап алынған кеше малынан төҙөлдө. Ана, Мәҙинә кеүек ярлы-ябағаның яңғыҙ hыйырын тартып алыуҙан!

— Ләкин, — кире урынына, стенаға hөйәлеп ултырыи алған Ғәлимә туҙған сәстәре араhынан hөҙөп Саяфҡа ҡараны. — Дөрөҫ түгел! Беҙ ул малды ишәйттек! Хөкөмәт эш хаҡы түләне! Беҙҙең кеүектәрҙән герой яhаны! Миллиондар колхо арҡаhында кеше булды. Хәйерселектән ҡотолдо! Колхозға тел тейҙереү — илгә хыянат итеү! Иманыңа төкөрөү!

— Ә хөкөмәт... ҡайҙа?! — Саяф, стаканды ауыҙына ҡаплап ҡуйҙы ла сытыйҙы, ҡыяр еҫкәне. — Ә, мадам? Нимо ул хөкөмәт? Кем ул?!

— Нисек... ҡайҙа... Мәскәүҙә... — Күргән төшө ҡабат иҫко төшөүҙән Ғәлимәнең башына эҫе ҡапты, тыны ҡыҫылды.

— Алйот! — Саяф, тыңлауhыҙға әйләнгән йыуан бармаҡтары араhына папирос ҡыҫтырып, шырпы сыйырға маташты! — Ун туғыҙынсы Бөтә Союз партия

...ференцияhы, инәйенде ҡунаҡҡа саҡырайым, СССР-ға ла, ...ла үлем хөкөмө сығарҙы! Каналья... Сепрәк баш...

...hин, hин дошман! Х-халыҡ д-дошманы! — Ғәлимә ... түгел бер өйөр ирҙе ҡуркытып өйөнән ҡыуып ...рырға ярҙам иткән ҡара табаға үрелмәксе булды — ...нән килмәне. — М-мин h-hине... разоблачу! П-партия ...йә-йәшәйәсәк! СССР-ҙа б-беҙ ком-му-ни-зм төҙөп ...оарабыҙ. Понял?!

...Әйе, коммунизм, — ниhайәт папиросын токандырып ...Саяф түшәмгә төтөн ҡулсалары осорҙо — төҙөй яҙҙың ...хи-хи... карауатында. — Китергә була торған Саяфты ...Ғәлимә балағына йәбешеп туктатырға була ҡулын hуҙҙы. — ...Саяф... Т-тукта!

Империя өсөн демократия — үлем! Сүбәк баш... ...ми.я... hинең идеолог булып эшләүең... Наҙан, п-пакость...

Ғәлимә киткән Саяфтың арҡаhына ҡукыш тоҫҡаны.

Гулган ай Сәмәрәгә hәр саҡ күңел бойоҡлоғо алып килә. ...и гула башлаhа, тыныслығын юғалта. Донъяны тарhына. ...и.иаса сңел генә үткәреп ебәргән кисерештәре тәрәнәйә. Билдәhеҙ hағышы тора-бара улын юғалткан көндәргә алып ҡайта. Ошондай саҡтарында ул, йөрәгенә түҙә алмайынса, йср иисә тапкыр Таулыға сығып китте. Улының ҡәберенә ... булған hалҡын тимерҙе күҙ йәшенә ҡойондорғандан ... кире әйләнде. Таулыла йәшәгән әсәhенә ул бер ҡасан да hуғылманы. Ҡасандыр аша атлап сығып, төн шаршауы ...эстында яҙмыш ҡосағына ташланған тупhаға кире әйләнеп ...маны. Әҙәм балаhы ваҡыт үтеү менән яҡындары ...п|)|.|иан hалынған яраларҙы онота, ғәфү итә. Сәмәрә иhә ...hен гәфү итә алманы. Улының үлеүендә эсәhенең ғәйебе юк га бит, лэкин... шыкhыҙ, толкаhыҙ бала сағы, үҙенең ...иkhезлеген аңлау, донъяға тыуғаны hәм йәшәгәне өсөн ...hе ...өнhөҙ hәм даими ғәфү үтенеү. Әсәhенә ҡайтыу ...гормошона ҡайтыуға бәрәбәр тойолдо. Сәмәрәнең псиэ ҡайтҡыhы килмәне.

Сәмәрә ординатор кабинетының асмалы тәҙрәhенән ...гелгән төнгө ҡала тауышына ҡолаҡ hалды: трамвайҙар иүрн туктаған, ара-тирэ геүләп үткән машина

171

тауыштарын иҫәпкә алмаһаң, тынлыҡ. Эйе, был дежурствоһы унын тынис үтә. Шәфкәт туташы ла тәжрибәле. Асия менән ун ике йыл бергә эшләйҙәр, бер-береһенең хәлен күҙҙәрена ҡарап аңларға өйрәнгәндәр. Сәмәрәнең яңғыҙаҡ тормошома уның балалары ҡот-кыуаныс өҫтәгәндәй. Бигерәк тә Асияныц оло улы — Байрас. Шуны яҡын күрә Сәмәрә. Улы, тсрс булһа, унын йәшендә, егермелә булыр ине хэҙер. Эйс, Сәмэрәнең шундай ҙур, ир еткән улы булыр ине!

— Сәмэрэ Идеаловна...

Үҙенә өндәшкән тауышҡа Сәмәрэ ишеккә эйләнде:

— Ә, Асия апай... ауырыуҙар нисек?

— Ун икеләге уколдарҙы эшләнем. Тынис әлсго, Температураларын да үлсэнем. Хафаланырлыҡ сэбэп юҡ. Сәй эсеп алайыҡ, булмаһа. Унан аҙ булһа ла ятып ял итегеҙ көндөҙ операция яһанығыҙ бит, арыҡтандыр...

— Зыян юҡ. — Сәмәрә сәғәтенә ҡараны. — Бер. — Унаи йэнэ тышҡа үрелде. — Йүкә сәскә атҡан, Асия апай! Ах!..

— Йүкәләргә бал күктән яуа тигәндәре дөрөҫ микоп, Сәмәрә Идеаловна? — Сэмэрэ эргэһенэ барып тышҡа һонолған Асияның күкрәген тултырып тын алғаны ишетелдс. — Эй яратам да шул йэй көндәрен, йүкә еҫтәрен!

— Балдың ҡайҙан яуғанын белмәйем, Асия апай, ИЛЛІ яңыраҡ бер нәмә укып аптырағайным. Төркиэлэ бер кешспсм бал ҡорттары «Аллаһ» тигән һүҙҙе яҙып кәрәҙгә бал тултырған.

— Осраҡлы хәлме икән?!

— Әллә инде...

— Эй мөғжизэ! Беҙгә билдәле булмаған әллә күпме ccр һаҡлайҙыр әле был ғәләм!

— Беҙҙең эштә, Асия апай, көн дә тиерлек мөғжизә. Үлеп бөткән, дүртенсе стадия рак сирле кешеләрҙең ҡабат аяҡҡа баҫып элеккенэн дә дәртләнеберәк йәшәп китеүен аҙ күрҙекме?!

— Шулай шул. Бәй... — Асия тәҙрәнән түбәнгә әйләнеберәк ҡараны. — «Скорая». Үткәрҙең төндә тынис...

— Бэлки... — Сэмәрә лә ынтылыбыраҡ ҡараны. Йүгерешәләр. У-у, носилка менән индерэлэр.

— Йә сэй эсеп өлгөрмәнең, — Асия Сәмәрәгә йәлләп ҡараны.

Ул арала эске телефон шылтыраны:

Алло! Доктор!

Мин! Тыңлайым!

Лиарияға эләккән. Йэш егет. Егермелэ. Хәле ауыр. кам юғалтҡан.

Хәҙер төшәм.

Ботәһе лә хәрэкэткә килде. Үҙенә һоҡланып ҡараған ıәрҙе юғалтыуға асыуы килгәндәй, түңәрэк ай ҡара ....ы)ссна инеп юғалды.

Аҫҡа төшкэс, Сәмәрә Минһажева әле килтерелгән рыуҙың тарихына күҙ һалды: «Ҡыҙрасов Батыр Заһир улы» Кыҙрасов?! Заһир?! Бэлки... Ул, йөрәгенең ҡапыл ҡаға ҕашлауын тойҙо, аварияға осраған, тотош ҡан эсендэ ятҡан егеткә күҙ һалды. Аллаҡайым! Ниндәй... баһадир! Ә үҙе... щ ҡуйған Ҡыҙрасов. Уның улы... Сәмәрәгә әсәлек бәхете Оүнлк итеп күккэ күтәргән һэм... хыянатсыл түбәнлек менән уны язмыш ҡосағына быраҡтырған кешенең балаһы. Ай \ ı ıа! Сәмәрәнең улының иҫән булыуы һэм ике тамсы һыу Ввуск ошо баһадирға оҡшауы ла бар ине бит! Сәмәрәнең ғүı ыҙ ай буйы йөрәге аҫтында йөрөткән улы ла бит мсовтан яралғайны, унан ҡот алғайны...

Көрәшсе. СССР-ҙың спорт мастеры... — Асияның үҙенә Іщк ҡына ҡағылыуын тойҙо Сәмәрә, — анализ ИИлоколэр. Ҡан группаһы — беренсе. Запаста ул группа юҡ.

')йе, эйе...

Егеттең блокнотынан өйөнөң телефон номерын таптыҡ. гегe... завод директоры Ҡыҙрасовтың улы булып сыкты.

')йе, эйе, — шунан башҡа һүҙ белмәгәндэй, Сәмәрэ

• кптка күтәрелэ башланы. — Егетте операцияға ı ıı p ıaı eҙ. Йәһәт ҡыбырлағыҙ.

Ө... ҡан?!

Ҡан миндә бар. — Бер нисә секундҡа Сәмәрәнең миа. бәлки был операцияны башҡа бер хирургҡа ....ырырғалыр, тигән уй йүгерҙе. Ни генә тимә — унын ı ıры ҡалтырай, йөрәк ҡағыуы йышайғандан-йышая. ıһә. канды үҙе бирә. Әммә ул уйынан шунда уҡ дүнде: табип, минең өсөн бөтә ауырыуҙар ҙа тиң, тигеҙ. ı ынланырға хаҡым юҡ.

Гыиыслана төшкәс, Сәмәрэ Идеал ҡыҙы үҙенең ғәҙәттэге ı ıакин ныҡлы аҙымдары менән операция бүлмәһенә үтте.

Яңы йортҡа күсеү ваҡытты был тиклем дә күп алыр тин уйламағайны Мәҙинә. Шәһәрбаныу өйөнән Әптелэхәт менәп атаһы һалған йортҡа күсеү генә еңел булған икән. Хәйер, ул саҡта Мәҙинә үҙе лә елдән еңел, һыуҙан етеҙ ине. Эй-й-й, үткән ғүмер! Ҡайһы бер монаяттың кәрәге лә юҡ кеүек: күптән сүплеккә ырғытырға ваҡыт. Әммә, төптән уйлаһаң, уларға ваҡыт, яҙмыш, хис-тойғолар, йыуаныс-ҡыуаныстар, ҡайғы-хәсрәттәр уралған. Ана, игеҙәк ҡустыларынан ҡалғап эйберҙәр: фуражка, сандалик... Уларҙы Мәҙинә ғүмере буйы һаҡланы, хәҙер килеп нисек быраҡтырһын? Көнһылыуҙың ук-һаҙаҡтары ла, игеҙәк сабыйҙарына аталары алып ҡайткан уйынсыҡ ат — һарайғыр ҙа бар... Хәтер өҫтөнә хәтер ауа, иҫтәлектәр өҫтөнә иҫтәлектәр ишелә. Былай булһа, Дауыт әйтмешләй, улар ай буйына ла күсенеп бөтә алмаҫ. Иөрәге менән аңлай Мәҙинә: Дауыттың да, килене Нәфисәнең дә был әйберҙәрҙе яңы йортҡа алып киткеләре килмәй. Юҡ, ташларға ҡулы бармай Мәҙинәнең. Барсынбикә өләсәһенең йөн илэгән ҡолғаһы, орсоҡтары һаҡланған. Уларҙы нисек ҡалдырһын Мәҙинә?

Эйе, иҫке өй, ғәзиз тупһа... Ҡасан ғына эле уны һуңғы тапҡыр Әптеләхәте, өләсәһе, атаһы ашаҡлағаны... Улар бынан һуңғы аҙымын башлаһа, Көнһылыуы менән Күкһылыуының үҙ ғүмерендә тәүге аша атлаған тупһаһы булды ул. Ошонан Әбүбәкере менән Дауытын армияка оҙатты, көтөп алды. Ошо тупһаға ап-аҡ ҡаҙ мамыҡтарынап күпертеп яһалған мендәрҙәр ташлап килендәр төшөрҙө. Эйе, эйе... Флорида ла, Нәфисә лә ошо нигеҙгә килен булып төштө. Көнһылыуы менән Күкһылыуының кейәүҙәре лә ошо тупһаны аша атлап йорт эсенә үтте, Мәҙинәгә һаумы ҡәйнәм тип ҡул һуҙҙы. Ошо тупһала, ошо нигеҙҙә ул Дауытының өс улын йәнә кинйәкәү ҡыҙы Тандысаны ҡулына алды, өләсәй булды. Көнһылыуҙың ҡыҙы Диларанын, Күкһылыуҙың ҡыҙы Альбинаның, Әбүбәкерҙең Русланының бишектәрен тирбәтте, оҙон ғүмер, аҡ юлдар теләп йыр йырланы. Ә күпме сирлеләр ошо тупһа аша атлап инде һәм терелеп, аяҡҡа баҫып, үҙ донъяларына, бала-сағa, яҡындарына атлыкты. Эйе, эйе... Әҙме ҡыуаныстары яғылған уның был стеналарға, әҙмс һағыштары, әҙме йөрәк мондары. Хәҙер, өй яланғасланып

был тойғолар бигерәк көсәйә, һағышты тәрәнәйтә. ...цмновтың «Башҡорт мадоннаһы» картинаһы торған ...ыным-асыҡ булып беленеп тора. Әйткәндәй, ул картинаны бсренсе тапҡыр күргәс, Флорида:

Быны яһаған рәссам бурыстарының ҡоло булған. ...гәрен бореп сығыр саҡта быуған. Ниндәй ҡыҙғаныс! — Рәссамдың үҙенең атаһы икәнен белгәс, ҡойолоп төштө: ... талант эйәһе булған бит ул, әсәкәйем!» — тип ис. Ҡунаҡҡа килгән сағында Мәликә лә күрҙе ул һүрәтте. • ...үҙе, баҡшы инәй! Ул һинең теленце асты, Флорида!» — ... кыҙына. Флорида өндәшмәне, әммә әсәһен йомшаҡ ...косаҡланы. Шунда ҡыҙ менән әсә араһында быгаса ... килгән ниндәйҙер аңлашылмаусанлыҡтың һары ... >реп юҡҡа сығыуын тойҙо Мәҙино...

Квҙер ул һүрәт яңы кирбес йортта. Өсөнсө ҡат итеп ...гән көмбәҙ эсендә. Атаһы яһаған «Ҡуңыр буға» панноһын мупда күсерҙелэр. Бик мәшәкәтле эш булды уны күсереү. һышш, артыҡ имгэтмәнеләр. Иркенгә күскәс, панно ...көсәйеп ҡалғандай булды. «Мин уны ҙурайтасаҡмын!» — ... мож килә Әбүбәкер менән Флориданың улы Руслан. ...р: бик дәртле, зирәк малай. Үҙенең Камалетдиновҡа ... Эй-й... был шатлыҡлы көндәрҙе күрә алманы Әйүп ... улы. Мәңгелек төйәгендә — алтын бишегендә — шсе ...гиҫтә йыл йоҡлай. Лидия Николаевнаны — Хәтирәне ...һораууы буйынса, ағаһы эргәһенә ерләнеләр. һаҡ и (уҡ кеүек улар үлгәс кенә табыштылар...

...)йе... Хәтерләй китһәң, күп инде ул... Мал ҡото, ... кигмәне ошо нигеҙҙән. Бөйрәкәйенең тоҡомо үрсемле, Һ... куйы, боло йоғошло булды. Туҫтаҡ күтәреп кешегә шмка сығыуҙың ни икәнен белмәне Мәҙинә. «Яңы йортҡа ...нигеҙҙе, балдар, бәлки мин күрә алмам. Мәгәр шуны ...кеҫемен: был өйҙө ауылдың ҡарауһыҙ ҡалған ҡарттарына ...геҙ», — тигәйне Хашим. Атаһының кәңәшен тотто ...: йортто бөтә кәртә-ҡураһы, емеш-еләк баҡсаһы, ...ртуфлығы менән ауыл советы ҡарамағына тапшырҙы. Бар...ынбикә өләсәһе йәшәгән кесе өйҙә Хөсәйен ҡарт йәшәп ... Кәнәғәт. Өйҙөң стеналарына Һарайғыр һүрәттәрен ни ... Үҙенең эргәһенән бала-сағa өҙөлмәй. Тиҙҙән бында ...гем-еһер, ҡарт-ҡоро туласаҡ. «Алғыш алыу менән и.ми алыу бер түгел», — ти торғайны өләсәһе.

Барсынбикәнең йыраҡ Мэккәгэ китеп шәһит булған рухы, моғайын, Мәҙинәнең был ғәмәленэн ҡәнәғәттер...

Өләсәһен иҫенә алғас, Мәҙинәнең күҙе өрлөк ярығыма төштө: шунда ҡыҫтырғайны ул Барсынбикәнең һуңғы хатын. Өйҙә ултырғыс кеүек нәмә ҡалмаған, Мәҙинэ таяҡ алып, баяғы ҡағыҙҙы төртөп төшөрҙө. һарғайған инде ул хат, төҫөп юя башлаған. Ғәрэп хәрефтәре менән яҙылғанлыҡтан, Мәҙино уны ундан һулға ҡарай уҡый башланы: «Мәҙинә! Мипсң ҡотолор сәғәтем һуҡты, хәҙер минең дүрт яғым да ҡибла. Дүрт яҡка берсә китеп булмай, бәндэ һәр саҡ ике юлдыц береһен һайлай. Миңә лә һайларға тура килә: Тирәклегәмс, әллә Мэккәгэме. Мин икенсеһен һайланым. Беренсеиои, Тирәклегә ҡайтып һеҙҙең бөтәгеҙҙе эргәмдә өйөрөлдөроп, үҙемә ялсы яһап ҡуйғым килмәй. Кешене үҙендең шәхси мәнфәғәтең өсөн файҙаланыу гонаһ эш. Яраткап бәндәләревдең түҙемен һәм көсөн үҙең өсөн сарыф иттереү ҙә килешмәй. Икенсенән, ғүмерем буйы Мәккәгә барып, хаж ҡылып, Аллаһ тәғәләнән ҡурсыу һәм ярлыҡау һорау хаҡында хыялландым. Бәлки, Хаж юлында Тыумәрәс өләсәй татраны менән ташҡа әйләнгән тоҡомдаштарымды осратырмын. Минең ҡулым ҡағылһа, улар ҡабат кешегә әйләнер һәм беҙго әлегәсә билдәле булмаған күп донъя серҙәре асылыр ине. Был хаҡта мине төшөмдә Күкһыу өләс иҫкәртте. Әммә ҡояш яҡтыһынан оҙаҡ йылдар мэхрүм ҡалыу һаулығымды, кәремдс алды. Ниәтем ҙур, барып етэ алырмынмы, юҡмы — билдәһеҙ.

Мәҙинә! һиңә тағы шуны эйтмәксемен: үҙең иҫән, көсоң бар саҡта Әптеләхәт кейәү ҡашынараҡ, Ҡушҡайын түбәһенои аҫтараҡ, шишмәлек буйында, өй һалып сыҡ. Өйҙө кирбестои һал, ҡыйығын көмбәҙ рәүешле яп. Кирбестәрҙе йәбештерср иҙмәгә йәлләмәйенсә йомортҡа ҡуш — өй һинең ейәи-ейәнсэрҙәреңдең балаларының балаларына ҡалырлыҡ булһын. һәр ғаилэнең үҙенең талсыҡкан күңеленә ял алырға, көс йыйырға ҡайтыр урыны булырға тейеш. Беҙҙең тоҡомдоң Мәккәһе ана шул һин һалған йорт булмаҡсы. Тирәкле һинец тыуған ерең генэ түгел, мөхәббәт яралған ерең дә. Мөхәббәт тыуҙырырға һәләтле ер — изге ер. Йорт һала башларҙан алда эргә-тирәһенә, һыу буйҙарына йүкә, ҡайын, мышар, имэн ағастары ултырт. Ул ағастарҙағы үҫергә булған ынтылыш һинең уйынды саф, кәүҙәңде тура тоторға ярҙам итер. Бәндәләргә күп игелектәр ҡылаһың бар һинең. Оҙаҡ

шосәкһең. Үлгәнсе үҙ зиһенеңдә һәм көсөңдә саҡһың. Ошо юлымдан ҡайта алмаһам, мине шәһит ни ә хисапла. Барсынбикә».

Мәҙинә өләсәһенең васыятын онотманы: йорт һалды, ир > шроһенә бынан күп йылдар элек ул ҡушҡан ағастарҙы у лтырт ы. Әммә Мәҙинәнең үҙенең бала сағынан килгэн кылы бар: ул үҙен, хатта бер йотом һөткә, бер ҡабым икмәккә зар-интизар булып йәшәгәндә лә, яҡшы тоҡомло кара юрға менгән, ә тау-яландарҙы ҡаплап уның йылкы көтөүҙәре йөрөгән итеп күҙ алдына килтерҙе. Был хыялға **Һыҫҡараҡ** Әптеләхәт сығарған бойҙай менән арыштың баҫыу гудтырып тулҡынып-сайҡалып ултырған картинаһы өҫтәлде. Ошо хыял уны Рауза усында һаҡланып ҡалған орлоҡтарҙы ишәи юргә, яҡшы сифатлы орлоҡ тупларға мәжбүр итте. **Ишпалла,** Дауыты атаһы юлын ҡыуа. Заман үҙгәреп, катмарланып китеүгә ҡарамаҫтан, Тирәклегә ҡайтып, ең |и,| ғаныл зшләй. Ә бал ҡорттарын ишәйтеүҙән килгэн табыш Мәзинәне етеш, мул тормошҡа алып сыҡты. Ҡыҙҙарын, ұ п ҡарын ҙур-ҙур уҡыуҙарҙа уҡытырға, уларҙы йәшәгән ‖)спдә болло-ҡурлы итергә ярҙам итте.

Буш стеналарға, гөлһөҙ ҡалған тәҙрәләргә ҡарап тора биргәс, Мәҙинә, һуңғы төйөнсөгөн тотоп, тупһа аша атланы: «Хуш бул, өйөм, йәнем-тәнем ереккән төләгөм. Хәйер-фцшхамдан ташламам. һинең нигеҙеңдә кем олоһо — кем һе булған бэндәләреңә Хоҙай хәйерле ғүмер насип ИIһен».

Оисрация өҫтәлендә яткан баһадир кәүҙәле егетте күргэс, ıрәнең ҡулдары өйрәнелгән хәрәкәттәр менән эшкә ıı ıо. Ҡаршыһында торған шәфҡәт туташы былай ҙа аҙ н (оморә Идеаловнаның бөтөнләй йомолоп ҡалыуын ю

(**кальпель!** Тампон! Ҡайсы! — Ике сэғэттән ашыуға ı ıı ıı оиерация ваҡытында Сэмәрәнең ауыҙынан башҡа шпстелмәне.

(әмәрә һөйләшмәне. Әммә уның ошо ваҡыт эсендә . . . . ан алып бөгөнгәсә ғүмере килке-килке, тулҡын-I ын оу ып күҙ алдына килде. Бына ул өйҙә бер үҙе. Әсәһе

ҡайтмай ҙа ҡайтмай. Ҡараңғы төштө. һандыҡ өҫтөнө ултырып көн дә битен йыуа торған сысҡан бөгөн күренмәнс. Бер аҙҙан урындыҡ аҫтында бесәйҙең даһыр-дөһөр иткәнв ҡолаҡҡа салынды. Күп тә үтмәй, ауыҙына ҙур бер сысҡанды арҡыры тешләп килеп сыҡҡан бесәй үҙе күренде. Сәмәро ялан аяҡтары менән иҙәнгә һикереп төштө лә ҡуҙһалғыс менән бесәйҙең башына тондорҙо. Бесәй урынында ямаи аҡырып әйләнде лә тынды. Ауыҙынан ысҡынған сысҡандың ярылған эсенән ниҙәндер һулҡ-һулҡ ҡыбырҙағанын шәйләне Сәмәрә. Күҙ бәйләнеп килгән саҡ булғас, эйелеберәк ҡараны һәм сысҡан үҙе үлһә лә тына алмай тулаған ит киҫәген күрҙе. «Йөрәк» тигән уй сыйҙы униң мейеһен. Нимә мәжбүр ито уны тибергә? Урындыҡ аҫтында күмәк, нескә сыйылдау ишетеп, Сәмәрә шунда инеп китте. Тауыш быйма эсенән ишетелә ине. Унын әле сабый сағында кейеп йөрөгән аяҡ һауытынан. Сәмәрә быйманың эсен ҡаҡты һәм иҙән буйлаи йән-яҡҡа йүгерешкән бармаҡ башындай ғына йән эйәләреп күреп шаҡ ҡатты. «Сысҡандар! Сысҡан балдары!» Ошоларҙы йәлләп тибә икән әсәләренең йөрәге. Үҙе йәшәүҙән туҡтаһа ла тибә! Сәмәрәнең дә бит әсәһе бар! Ул ҡыҙының һыуыҡ өйҙә бер яңғыҙы өшөп, асығып ултырғанын белмәйҙер. Белһо, күптән йүгереп ҡайтыр ине. Бесәй, сысҡан мәйетс һуҙылышып ятҡан өйҙән ул ҡапыл ҡурҡа башланы, әсәһсн тиҙерәк эҙләп тапҡыһы, йылы, йомшаҡ күкрәгенә һыйынғыһы килде һәм, өҫтөнә кейеп тә тормаҫтан, көҙгө тунғаҡ юл буйлап фермаға елдерҙе.

Башта барып ингән ере — быҙауҙар торған һарай булым сыҡты. Аҫтарына һалам түшәлгән, алдарында — хуш еҫле бесән. Йылы һауанан яңы һауған һөт еҫе аңҡый. Өҙөлөп-өҙөлөп ҡарыны асты Сәмәрәнең. Безәүкэйҙәрҙән көнләштс: уларҙы ҡарайҙар, ҡурсыйҙар. Йылына биргәс, Сәмәрэ артабаи китте, әсәһен эҙләне. һауынсыларҙың киске һауынды һауғаи ваҡыты ине — күнәктәргә һөт шыжлай, апайҙарҙыц һәүкәштәренә йә әрләп, йә иркәләп ҡысҡырғаны ишетело. Әсәһен күргәс, Сәмәрә тынысланды, көйөш алып ятып торған ҙур бер һыйырҙың ҡорһағына арҡаһын терәп ултырыи торғайны — йоҡлап киткән.

һыйырҙың үҙ йомошона була торғанына уянып киткәнендә һарай тыныс ине: һәүкәштәр йоҡлай, һауынсыларҙың тауышы ишетелмәй. Төн. Бер кем юҡ.

рә курҡышынан тышҡа атылды. Һарай ишеген асырға етмәгәс, әрнеп илап баҫҡан еренә йығылды. Оҙаҡ иланы, ц.|. Ошогәс, торҙо. Торҙо ла мөйөштәге бесән өйөмөнә и.| Шупда үткәрҙе төндө. Иртәнсәк һауынға килгән |ц

Нимә эштәп ятаң мында?! — тип аптыраны. — Көт, ипырбыҙ. — Йәлләү ҙә, үкенеү ҙә, ҡыҙын юғалтыу ио гойолманы тауышында. Етмәһә: — Бесәй өсөн м к- алырһың әле! — тип янаны.

I >< лһснең эсәһе йыуаш ҡына ҡарсыҡ ине. Сәмәрәне күрһә:

Бар, бар, ҡайт өйөңә. Әсәң орошор. Баланы кеше юшар осөн таба. Ҡул аҫтына инә баштаһалар, әллә кем ил китәләрсе! — тип, ҡыҙыҡайҙы эргәһендә оҙаҡ ины.

(әмәрә унан бер саҡ:

Өләсәй, бәхет ҡайҙа ул? Уны ҡалайтып табып була? — ....һорлпм.

Бәхет бик һирәк кешегә тәтей, — тине ул, күҙенә ....йөрөгән яулығын өҫкә күтәрә биреп. — Аҡ йылан Шупы күрһәң, башындағы яулығынды сисә һалып, ша гүшәр кәрәк. Аҡ йылан шунда мөгөҙөн һала. Тик мотлаҡ аҡ булырға тейеш.

Аҡ булмаһа?

Аҡ булмаһа, һалмай. Аҡ кәрәк.

Шунан бирле Сәмәрә аҡ яулыҡ ябынып йөрөй башланы. һонэрен һайлауына ла, моғайын, шул сәбәпсе р. Тиҙерәк әсәй булғыһы килде. Әсәй булһам, и иелекле булыр, яратыр инем, тип уйланы. Үҙенең оҡшамаған әсәй булыу хаҡында хыялланды.

»м бала саҡ хэтирәләре! Үҙенең бер кемгэ лә кәрәк шеген тойған Сәмәрэ йыш ҡына йылға буйына төштө. п ҡош балаларын, аҡһаҡ-туҡһаҡ бәрәстәрҙе дауалай ины. Ошо рәүешле дуҫтары, серҙәштәре барлыҡҡа Бесәйме ул, әллә сысҡанмы — кем ярҙамға мохтаж, күцсленэ шул яҡын булды.

Бер кондө эсәһе:

\|мк! Бөгөн һин тыуғайның бит! Эй яҙмыш! Яҙмыш ....|де ормош! — тине.

рә быны күңеленә һалып ҡуйҙы. Башҡа балалар кондәрен байрам итәләр: матур кейем кейәләр,

сэстэрен тарап, яңы таçма менән үрәләр. Сәмәрәнең яңы күлдәге юҡ, лэкин иçкене лә матур итеп кейеп була бит. Ул үтеккә ҡуҙ һалып ҡыҙҙырҙы, аҡлы ситсанан тегелгән күлдәген үтекләне. Сәсен генә үрә алмай: бстләгән тип, ҡырып ташланылар. Яңы саҡ үçеп килгән бөҙрәләре үрмәгә етмәй. Әммә аптырайһы түгел: башына үҙе ап-аҡ итеп йыуғап яулығын бәйләне һәм яр башына, үҙе яратҡан тирәк аçтына, барып ултырҙы. Рәхәт! Бынан бөтә туғайлыҡ, алыçтағы Күктау һырттары, уның бейек, күккә ашҡан ҡаялары күренэ. Әсәһе генә:

— Сәмәрә ҡороғоро! Башың бөткөрө, түбәң тишелгере! – тип ҡысҡырмаһа, ул бында көн оҙоно ултырырға риза. Ошолай ултырған саҡтарында ул гел аҡ йыланды уйлай, э ул, күрәһең, был яҡтарға һирәк килә, Сәмәрә тигән ҡыҙ баланыц үҙен көткәнен белмәй...

— Ҡыҙым...

Ҡаршыһында аҡ яулыҡлы, аҡ күлдәкле, көмөрө танаулы, ҡап-ҡара күҙле ҡарсыҡты күргәс, Сәмәрә һиçкәнде:

— һин кем?!

Карсыҡ камзул кеçәһенә тығылды һәм... бер ус кәнфит, йөҙөм, өрөк сығарҙы:

— Аша, балам.

Шунан ул Сэмәрә эргәһенә йөгәнәклэне, үҙенсц ҡолағынан зәңгәр ҡашлы алкаларҙы систе лэ, төкөрөгө меноп Сэмәрэнең ҡолаҡ осон ыуып-ыуып, шуларҙы кейҙерҙе.

— Ай!

— Сабыр ит... Ауыртманы бит? — Шунан ул ҡыҙыҡайҙың арҡаһынан тупылдатып һөйөп алды. — **Саф** алтын улар. Берәүгә лә бирмә.

— Алтын?! — Алтындың бик ҡиммәтле нәмә икәнсн белгэнгә күрэ, Сәмәрә ҡарсыҡҡа үтә лэ аптырап ҡараны. - Әллә һин, инәй, аҡ йыланмы?

— Эйе, — тип көләмһөрәне ҡарсыҡ. — Аҡ йылан. Был һырғаны һиңә кем таҡты, тиһәләр, Аҡ йылан таҡты, тиген. Йәме?

— Йә.

Ҡарсыҡ китеп барҙы. Сәмәрә саҡ ҡына тумбытым ауыртып торған ҡолаҡ остарын һәрмәне — һырғалар үҙ урынында. Аҡ йылан, әбей ҡиәфәтенә инеп, уға фирүчо ҡашлы алтын алҡалар бүләк итеп китте!

кондән башлап ул үҙенең бәхетле бала икәненә ипып йипшәй башланы. Яҡшы укыны, бэхетле кешелэр и ун уйламай — ул кешеләргә гел изгелек итергә ырын......I. Үҙе лә уларҙан гел изгелек көттө. Ә бер көндө ю машинаға милиционерҙар төрткөсләп индергән ыкта ул шул Аҡ йыланды таныны. Ҡарсыҡ та уға илс. Бср минутҡа күҙҙәре осрашты. Ҙур ҡара күҙҙәренең ı ııı ,н ылып китеүенән Сәмәрә ҡарсыҡтың да үҙен таныуын ины. Гик ни өсөн был машина, ни өсөн милиция?! Ҡарсыҡ ымлп шпек ябылыр алдынан Сәмәрә бөтә көсөн йыйып:

Хуш, Аҡ йылан! — тип ҡысҡырҙы.

Карсыҡ погонлыларҙың башы аша уға ҡул болғаны.

< лморә шәфҡәт туташының йөҙөндә борсолоу күрҙе. и оле Сэмәрәнең маңлайын һөртә. Шулай уҡ арыны микән ии Сәмәрә? Йоҡоһоҙ төн, көндөҙ дүрт-биш сәғәт ымында яһаған операция үҙенекен итәме? Әллә ҡан биреүме? Уның йәш, көслө организмы уларға ғына шерлек түгел дә бит... Сәмәрә пациент беләгенә цншми.фылған флаконға ҡараны: ҡан ағып бөтөп килэ. ы флакон. Башҡа юҡ. Беренсе группа ҡан хужаларына ыш а тура килә шул. Уларҙың организмы башҡаны ҡабул и Операция тамамланыуға бара, Сәмәрә һуңғы шовтарҙы һала. Егеттең организмы көслө, моғайын, төҙәлер. Гпрмошто нығыраҡ яратыр, һөйөр, һөйөлөр, кемделер ı ис итер. Ҡыҙыҡ, Ҡыҙрасовты ошо бала бәхетле иткән. н ҡотһоҙ тормошона йән өргән. Камилла Харисовна ııı 11уңлап һөйөндөрҙөмө икән ирен? Ә бит Сэмэрәнең ı пе иткеһе килгәйне Ҡыҙрасовты — баһадир ул бүлэк ıа гслэгәйне. Ҡыҙрасов ул бүләктән баш тартты. Әллә ı үле тыуҙымы икэн уның балаһы?!

Изҙмыштарҙыц төрлөһө үтте Сәмәрәнең күҙ алдынан. рҙәрҙен иң изгеһе табип һәм укытыусы, тип уҡығайны р мпаптан. Был ысынлап та шулай: бары улар йөрәгенә ап яҙмыш, көйөнөс һыя. Шул тиклем яҙмыш инарын кискәндән һуң да улар көсһеҙлэнмәй, йәшәгән !....ııı ксшелеклерэк, кеселеклерәк була баралар. Үҙенең ш булып эшлэү дәүере эсәһен аңларға ла ярҙам итте. ірға һом аҡларға: иң яҡын кешелэрен — балаһын, ата-ірен, ирен йә ҡатынын бәхетле итә алмаған кеше —

ауырыу. Психикаһы сәләмәт булмаған кешеләр гено яҡындарын бәхетле итеүгә һәләтһеҙ...

— Анализ насар. Гемоглобин төшкәндән төшә!

Шәфҡәт туташының тауышы баҙҙан сыҡҡан кеүек. Шулай ныҡ арыны ахыры Сәмәрә. Бирсәткәләрен, халатын систерҙеләр. Ҡулдарын йыуырға итте — бармаҡтары тыңламаны. Ҡултыҡлап ял бүлмәһенә алып сыҡтылар.

— Сәмәрә Идеаловна, эҫе сәй эсегеҙ!

— Егет... — Сәмәрә креслоға ауҙы. Ошо саҡлы тырышҡандан һуң да ул терелмәҫ микән?! Сәмәрә уның һәр ағзаһына үҙ йәнен өрҙө, хатта епкә лә үҙ йәнен ҡушып текте.

— һеҙгә бында инергә ярамай! Доктор ял итә!

— Беләм!.. Индерегеҙ!

Ҡыҙрасовтың тауышы. Ул элекке көсөн, ғәйрәтен юғалтҡан, шулай булһа ла Сәмәрә уның тауышын мендәр араһынан таныр, еҫен меңдәр еҫенән айырыр ине.

— Инһен!..

Ишектән атылып килеп ингән Ҡыҙрасовтың ҡиәфәте ҡот осҡос ине: күҙ төптәре ҡара янып сыҡҡан, сәстәре дауыл бәреп төшөргән ҡош ояһылай туҙған, йөҙө өс көн йоҡламағаи кешснскс ксүск талсыҡҡан.

— Сәмәрә!

— Идеаловна... — Сәмәрэ үҙендә йылмайырға көс тапты. — Миңә бит һаман ун алты түгел.

— Ғәфү итегеҙ, — Ҡыҙрасов уның ҡаршыһына тубыҡланды. — Ғәфү ит, Сәмәрә...

— Мин барыһын да эшләнем. Тик... — Сәмәрә ҡулдарыи үбергә ынтылған Ҡыҙрасовтан ҡасырға иткәндәй, артҡараҡ саңҡайҙы. — Улығыҙ ҡанды күп юғалтҡан. Заказ биреи ҡараныҡ — төн. Группаһы һирәк. Ҡан тағы кәрәк.

— Минеке — өсөнсө группа.

— Ә әсәһенеке?

— Әсәһенекен... белмәйем.

— Камилла Харисовна... бында түгелме ни?

— Бында. — Ҡыҙрасов ҡапыл аяғүрә баҫты, асыҡ тәҙрә ҡаршыһына барып, тәмәке тоҡандырҙы, ашығып, ҡарһаланып төтөн һурҙы. — Бында, ләкин ул... Батырҙың әсәһе түгел.

— Түгел?! — Сәмәрә, арыуын онотоп, аяғына баҫты. - Кем?! Кем уның әсәһе?

Ҡыҙрасов көл төҫөнә инеп ағарған йөҙөн Сәмәрәгә борҙо:

һин.

Мин?!

Һин, Сэмәрә. Бала үле тыуманы. Әсәйең... Ғәлимә... нбыйҙар йортона тапшырған. Ә мин... беҙ... уллыҡҡа алдыҡ.

Минең... баламды... һеҙ... урланығыҙ?! — Сэмәрә ваппын тотоп иҙәнгә сүгәләне. Бөтәһе лә әйләнә, зиһенде Гомалап, томанға әүерелә...

- Сәмәрә! Сәмәрә!

Ьына ул йәнә Ҡыҙрасовты күрә. Унын күҙҙәренән йәш иға Ҡыҙрасов Сәмәрәнең ҡулдарынан үбә:

Һин генә уны ҡотҡара алаһың! Мин уны йәнемдән ртыҡ күреп яратам! Ул минең балам! Минеке!

- Ә мин... минең балам...

Ул һинеке лә, Сәмәрә!

Үҙен ҡулға алырға өлгөргән Сэмәрә кәүҙәһен турайтты. Втсҙ хәрәкәт менэн халатын кейеп, төймәләрен эләктерә Сшшланы:

Батыр... йәшәргә тейеш.

Үҙенең әйткән һүҙенән үҙе ҡурҡҡан Ҡыҙрасов күшеккән Гурғайҙай бөршәйеп креслоға сумды. Баланың Сәмәрәнән ГЫуғанын үҙең әйтеп бирәсәкһең, тип кисә әйтһәләр, ул кәбәргә үлһә лә ышанмаҫ ине. Эйе, ул бит бөтәһенән дә Йошерҙе, хатта Камилланан да. Баланың үҫкән һайын үҙенә ныгыраҡ оҡшауы барыһын да һағайтты. Бигерәк тә ҡайны Мснән ҡәйнәһен борсоно был хәл. «Бэндә бәндәгә оҡшаһа ла бы гиклем оҡшамаҫ. Кейәү быны һөйәркәһенән таптырманы Микән?» — тип ҡыҙҙары күңеленә әлдән-әле шик һалдылар.

шлла, иренә оҡшаған йәш баланы үҙ итһә лә, кеше һүҙе Кошс үлтерә тигәндәй, һипһенмәй, бисәлегенә барыптыр ....с, ҡыҙыҡһыныу һәм көнләшеү менән ҡарамай булдыра шманы. «Ирем кисәге, итем кисәге» ти ҙә ҡуй, — тине быға ч.... Ҡыҙрасов, — һиңә кем балаһын ҡараһаң да барыбер Гүгслме?» «Түгел, — тип яуапланы Камилла. — Шиктәрем- и кистәремдән өҫтөнлөк алыуы бар».

Кыҙрасов-быны Камилла әйтмәһә лә белә ине. Шуға ла Батырҙың тәрбиәһен тулыһынса үҙ өҫтөнә алды. Балалар Оиһсаһшш ла үҙе йөрөттө, мәктәпкә йыйылыштарға ла үҙе

барҙы, бәләкәйҙән спортҡа ылыҡтырҙы, улы көрәш буйынса СССР чемпионы булып киткәндә лә ҡурсыуынан туктамаиы. Гел ҡурҡты ул Батыр өсөн, улы күҙенән осоп барҙы, пионср лагерена ебәрһәләр, көн дә барып хәлен белде, иптәштәрс менән Ағиҙел буйлап һал менән аҡһалар, Ҡыҙрасов та аҡты. Камилла хатта ниндәй аш бешереүен дэ ире меноп кәңәшләште. Өрмәгән ергә ултыртмаһалар ҙа, Батыр эгоист булып үҫмәне. Шаян тәбиғәтле, йор һүҙле егетте иптәшторс, дуҫтары, тренерҙары һәр саҡ хөрмәт итте. Унын менои кәңәшләштеләр, унһыҙ оло юлға сыҡманылар. Мәжлсс йыйһалар, Ҡыҙрасов улын: «Ә был — йәш Ҡыҙрасов! — тип таныштырҙы. Камилланың бала табыуға һәләтһеҙ икәнсп белгән элекке таныштарын иплэп-иплэп тай типтерҙе.

Батырҙың был ғаиләгә килеп эләгеү тарихының асылын белгән ҡайны-ҡәйнәһе бер-бер артлы донъя ҡуйғас, Кыҙрасов иркен тын алды — шаһиттарҙан ҡотолдо. Уларҙын донъянам китеүе Ҡыҙрасовтың мөлкәтен дә ишәйтте: бынамын тигән өс бүлмәле фатир, дача, гараж, еңел машина, алтын-көмөш әйберҙэр, ҡыйбатлы кейемдәр, сит ил йыһаздары — барыһы ла уларға ҡалды. Берҙән-бер вариҫ булараҡ, ошоларға хужа булып алыу ҙа Батырҙы үҙгәртмәне. һауаланманы. Бөто ваҡытын спортҡа биргәнгәмелер, ҡыҙҙар менән гено дуҫлашманы. Был хаҡта һүҙ сыҡһа: «А девушки — потом!» — тип көләп кенә ҡуйҙы. Бүлмәһенә атаҡлы балериналарҙың, йырсыларҙың, башка сәхнэ оҫталарының рәсемдәреп йәбештереүенә ҡарап ҡына Ҡыҙрасов улының ҡатын-ҡыз затына битараф түгел икәнен анланы. Карауатының башында ике һылыу ҡыҙ һүрәтенә күрһәтеп: «Оҡшаймы, атай? — тинс ул бер саҡ. — Береһе — атаҡлы бейеүсе, икенсеһе — йырсы. Уларҙы игеҙәктәр тиҙәр. Икеһе лә Башҡортостандан, эйткәндәй, һин эшләп киткән Таулы районынан!»

«Булмаҫты, — тине Ҡыҙрасов, һүрәткә яҡыныраҡ килеп. — Хәйер, кемделер хәтерләтәләр кеүек тэ... Ә былай улар бер-береһенә оҡшамаған да». Батыр йәнә шаярыуға күсте: «Кэләшең булғас, ошолар кеүек булһын ине ул!» «Ал шуларҙың береһен, һин дә төшөп ҡалған егет түгелһең бит», — тине Ҡыҙрасов шаярыу ҡатыш. «һуңланым, атаҡай, — тип көрһөндө Батыр. — Беренсенән, улар минән күпкә оло, икенсенән, икеһе лә тормошта, өсөнсөнән, улар күбеһенсо сит илдә йәшәй...»

Ҡыҙрасов, ошо артисткаларҙың һүрәтенә ҡарап, улынын шуҡын төшөндө. Үҙе лэ ҡыҙҙарға иғтибарлыраҡ була Вяшланы: йэнэһе ошо игеҙәктәргә оҡшаш ҡатын-ҡыҙ осраһа, у лы менән таныштырмаҡ.

..һәм бына авария. Бер секунд эсендә Ҡыҙрасовтың бөтә юнъяһынын аҫты өҫкә килде. Шулай уҡ Хоҙай унын берҙэн Мр балаһын тартып алырға булдымы?! «Хоҙай» һүҙенең Күцеленә килеүенә ғәжәпләнде: ниңә кешегә ауыр булғанда гына ул һүҙ иҫкә төшә икэн? Ниңә бәндә шундай саҡта Нспинды йә Сталинды түгел, Алланы телгэ алыусан?!

Н исек кенә Алланы, тимәк, яҙмышты инҡар итмәһендәр, яҙмыш, юл уртаһында пәйҙә булған бағаналай, алдыңа тып ЦТсм килеп баҫа. Йөҙгә-йөҙ килер өсөн баҫа. Был юлы ул Кыҙрасов алдына Сәмәрә сүрәтендә килеп баҫты. Бөтә өмөтө касандыр яҙмыш ҡосағына ташлаған ҡатында. Хоҙайға табынғаны булманы Ҡыҙрасовтың, ә бына Сэмәрә алдына и ı ɪәнгәнен һиҙмәй ҙә ҡалды.

(аяф Шәйхетдинов, «Алға»ның алыштырғыһыҙ ирсдседателе, колхозсыларҙың дөйөм йыйылышына ентекле рлонде. Әлбиттә, хужалыҡтың иҡтисады элеккегэ ı фшанда ҡаҡшаны. Тирәкле эргәһендәге башҡа ауылдар, ЯПТырағас, «Алға»нан айырылып, үҙҙәре айырым хужалыҡ гөзөп ҡараны. «Батрак» бригадаларһыҙ тороп ҡалған «Алға»нын эштәре тағы ла нығыраҡ мөшкөлләнде. Тегеләре па бит үҙҙәре генә айырылып сыҡманы: сәсеүлектәр, котоүлектәр, ауыл хужалығы техникаһы — барыһы бүленде. Сайф нисн үҙе лэ бөгөндән күтәреп һуғыр ине — власҡа нИр игән. Хәҙер инде колхоздың киләсәгенэ ышанысы ла юк. н көн-төн Горбачевты, унын бисәһе Раиса Мнм имовнаны һүгә. Илдең, гөрләп торған тормоштоң ҡото үҙә бары уларҙы ғәйепләй.

Млҙпмәнең улы Дауыт менән дә борсағы бешмәй. Унын ı як хужалыҡтарынан ҡайтыуына фатиха биргэненә үкенә. атаһынан да яманыраҡ булып сыҡты. Әптеләхәт әле ш ɪәшә ине, был һорап та тормай. «Каждый суслик — иом! — тип мыҫҡыл итә, — мейес башына менеп ятырға п гүгелме һиңә?» — тип көлә. Эйе, идеалдары күптән

ҡакшаны Саяфтың да. Горбачев партия конференцияһында: «Дөйөм кешелек ҡиммәттәре синфи ҡиммәттәрҙән өстөн торорға тейеш!» — тип сығыш яһағанын белгәс тә төңөлдө. Ул ғынамы? Партия юлбашсыларының сит ил банктарып;| оҙатҡан аҡсалары, виллалары хакында ла имеш-мимеш күп таралды. Үтһыҙ төтөн булмай. Шул ысын булмаһа, бер аяғы менән гүрҙә торған бабайҙарҙы хөкүмәт башына ултыртып мәшәҡәтләнерҙәр инеме? Эйе, улар, коммунизм төҙөйбөҙ тигән булып, халыҡты алдап, байлыҡ йыйған. Үҙҙәренә генә түгел, балаларының балаларына етерлек мөлкәт туплаған. Ә көн-төн тиргә батып колхозды һөйрәгән Саяф нимә йыйҙы? Нимәһе бар уның бөгөнгө көндә? Өйө бар, ярай, тағы икс улына йорт һалып сығарҙы, Нух заманғы машинаһы ла, икс һыйыры. Юҡ, иртәрәк әле уға власты бирергә! Болғансык һыуҙа балыҡ шәп тотола. Тирәклелә ятып тоторға мөмкми булған иң ҙур балыҡты көс түкмәй генә Саяф Шәйхетдинои тоторға тейеш! Атаһы, Сәйфулла партизан, үлер алдынан ука: «Донъя ҡыума, улым, әхирәтте лә уйла!» — тине. Саяф олс үлергә йыйынмай. Ленин менән Сталинға байлыҡ кэрәкмәне. Ул саҡта бөтәһе лә «Рәхмәт кағыҙы» өсөн эшләне, тамак ялына көн-төн һеперелде. Саяф, хужа булып күп йылдар эшләп, аҡсаның ҡөҙрәтен яҡшы төшөндө. Уның өсом колхоздың йәшәгәне яҡшы. Эйе, йәшәһен генә! Бер һәнок бесән сапмайынса, иген үҫтермәйенсә ҡайҙа тағы сөскөрмәй ҙв йәшәп була? Колхозда. Шуға ла был йыйылышҡа яҡшылаи, ныҡлап әҙерләнергә, үҙ һүҙен әйтергә тейеш. Әйтергә һәм... аҫтан ҡырҡырға. Ҡала менән матур бәйләнеше ошолай дауам итһә, Саяф мөлкәтен шөйлә ишәйтеп ҡаласаҡ. Үҙенсм мөлкәтен!

Дауыт иң алыҫтағы «Асъялан» баҫыуына кислэтеп кено барҙы. Ташлы яҡ был. Игендәр һәйбәт кенә сыҡһа ла, әлло ни мандып үҫеп китә алманы. Майҙың икенсе яртыһы, июндең тәүге ун көнө был яҡтарҙа ҡоро килә. Шул бәкәлго һуға. Унан һуң нисәмә йылдар буйына был баҫыуҙарға тиреҫ түгелмәгән. Тупраҡ ярлыланған, кәрһеҙләнгән. Ашатмаһаң, ат та йөрөмәй, ә тупраҡты ас тоторға мөмкин, тип уйлайҙар.

Дауыт атын илленсе йылдар уртаһында, баҫыуҙы ҡоро юрҙән, тупраҡты эрозиянан һаҡлау өсөн ултыртылған нир янында туҡтатты. Хәҙер был посадканы халыҡ «Мнрхәйҙәров шары» тип йөрөтә. Дауыт ул ҡарттың үҙен үнләп хәтерләмәй ҙә, ә бына уның етәкселегендә ултыртылған, хәҙер инде күләгә яһап, иген баҫыуын елдәрҙән ышыҡлап үҫкән был сауҡаларға ҡарата күңелендә тәрән рәхмәт тойғоһо һаҡлай. Ат, уныһы булмаһа, һыйыр егеп, ошо ташлы ергә бураҙналар йырып ултыртҡандар бит уларҙы. Шыйыҡ өйрә эскән ҡорһаҡтарын биштән быуып, киләсәккә өмөт менән ҡарап, ышанып эшләгәндәр, йәшәгәндәр һәм шул иман менән үлгәндәр...

Был яҡтарҙа юл тәпәшерәк биләндәр аша төрлө яҡҡа тармаҡлана: икәүһе — ике ҡалаға, йәнә станцияға һәм Таулыға. Ә инде үҙән буйлап барһаң, Тәрәнүҙәккә барып ыҡһың. Тәрәнүҙәк үҙе Тәңребирҙе һаҙлығына, шырлыҡ яһап үҫкән ерек урманына, улар аша Күктау һырттарына тоташа.

Аҙ һанлы техника, самалы һөрөнтө ерҙәре менән ҡалған колхоздың иҡтисадын нисек көйләргә, тип баш вата Дауыт. Яңы сортлы бойҙай, арыш орлоғон һатыусы хужалыҡҡа ла әйләнергә булыр ине, самаһыҙ йәйелгән штат, кешенең көн үтһен, сабата туҙһын тип эшләүе, техникаһының ҡиммәт, э ауыл хужалығы продукцияһының арзан булыуы уны барыбер пиороҡло яһай алмай. Етмәһә, мал фермаһы иҫкергән, комплекс төҙөй башлағандар ҙа ташлағандар. Эйе, колхоз таралыу, тарҡалыу өҫтөндө. Әсәһе, күмәк хужалыҡтың киләсәге юҡ, ти ҙә бит — тотҡан ерҙән һындырып ҡына ла булмай. Үҙҙәренең яҙмышын, ғүмерҙәрен колхозға бәйләгән ғаиләләр халыҡтың бында ғәйебе юҡ.

Күңелһеҙ уйҙарға бирелгән Дауыттың ҡолағына мал ҡыуған тауыштар салынды. «Ин-нәнде! Ҡайҙа! һәукә! На!» Был яҡта мал гурты юҡ, был ни хәл?! Атына менеп тормаҫтан, Дауыт урман һыҙығы аша тауыш килгән яҡҡа ҡыҫылды. һырты ғына күренеп үҙән буйына саптырып төшкән йөр нисә баш мал, өс һыбайлы салынды күҙенә. Ҙур тиҙлектә, етмәһә, сәселгән иген аша елдергән малдар һәм һыбайлылар \|ц.|ң күңелендә сәйер тойғо уятты.

— Эй! Туҡтағыҙ! Туҡтағыҙ әле!

Ту҄ҡ аманылар. Дауыт кире аты ҡалған яҡҡа йүгерҙе: ипим.гк тапап егермелэп баш мал ҡыуған был һыбайлыларҙы

ул танырға тейеш! Атына менеп, урман һыҙаты аша сып.ш, тегеләр артынан төшөүгә, улар инде байтаҡ юл үтеп, Тәрәнүҙэккә төшөп алған булып сыҡты.

— Әй, һеҙ! Кемгә әйтәләр!

Дауыт, атының ҡорһағына үксәһе менән тибеп, һыртын;| сыбыртҡы шыйырҙы:

— Туҡтағыҙ! Ҡасып ҡотолормон тиһегеҙме?!

Шул саҡ ҡыуғынсыларҙың береһе арттараҡ ҡалды, атыу тауышы яңғыраны. Дауыт уны-быны уйлап өлгөргэнсе, аты мэтәлләп барып та төштө.

Мәҙинә көндө ейән-ейэнсәрҙәре менән өй йыйыштырып үткәрҙе. Көнһылыуҙың, Күкһылыуҙың, Әбүбәкерҙең йәйге каникулға ҡайтҡан ҡыҙҙары-уландары, Дауыттың өс улы, йәнә ҡыҙы — һәммәһе уға ярҙамға ҡушылды. Ғаило ҡомартҡылары булған барса әйберҙе Мәҙинә өсөнсө ҡатҡа - өйҙөң көмбәҙенә урынлаштырҙы. Атаһы яһаған «Ҡуңыр буға» панноһы, Камалетдиновтың «Башҡорт мадоннаһы»нан тыш бында әллә күпме рәсемдәр, дипломдар тупланды. Көнһылыуы менән Күкһылыуының Мәскәү, Ленинград, Кисв, Париж, Лондон, Прага кеүек ҡалаларҙа төшкән фотолармь, әсәһенә һуккан телеграммалары — барыһын ошонда рамлаи элде Мәҙинә. «Ейәндәренә, бүлә-бүләсәләренә тарих һөйллп торорлоҡ булһын, — тип уйланы ул. — Традиция бит усаҡча көл һаҡлау түгел, ә ҡуҙҙы һүндермәү. Ололарға ҡарап, киләсәк быуын өлгө алырлыҡ, олатай-өләсэйҙәренең якты рухтарына торошло йәшәрлек булһын».

— Өләсэй, ә был һинме? — тип һорай Көнһылыуҙыц ҡыҙы Дилара, Хашим олатаһы яһаған паннолағы йәШ ҡатынға текэлеп.

— Мин түгел. Әсәйем. Төҫөн, кэүҙэһен ул ҡатынынаи алған. Ә, былай, ул риүәйәт героиняһы — Тандыса. Таңдыса образында ул мал бағып, илдең ҡотон, бәрэкәтен, ырыҫыи арттырып йәшәгән башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарына дан йырлағам.

— Дан?! Гимнмы?

— Гимн тиергә лэ булалыр. — Мәҙинә, үҙен иғтибар менән тыңлаған ҡала ҡыҙҙарына ҡарап, өндәшмәйерәк торҙо ла, өҫтәп эйтеп ҡуйҙы. — Эйе, гимн. Гимн.

Әсәйем миңэ Урал менән Шүлгән хаҡында гел һөйләй торғайны. — Күкһылыуҙың үҙенә оҡшаған ҡыҙы Альбина инәгә яҡынараҡ килде, зәп-зәңгәр күҙҙәрен уға төбәне. — Улар ҙа ошо ерҙә тыуғанмы?

Ошонда.

Беҙ бик боронғо халыҡ, — тип һүҙгә ҡыҫылды Дауыттың әлегәсә өндәшмәйерәк торған, тауышы ҡалыная ...шған Уралы. — Урал ысын булған. Пәйғәмбәр затлы Ише булған!

Ә былар ниндәй ат? Ниңә улар ҡанатлы?

И... Шуны ла белмәйһегеҙме, — Урал ҡустыларына шелтәле ҡараш ташланы. — Һарайғыр был! Ул оса торған аттар-толпарҙар нәҫеленән булған! Хөсәйен апа әйтә: ......чойҙер үҙгәреш булыр булһа, һарайғырҙың рухы, утлы Юл ҡалдырып, ауыл өҫтөнән һауа ярып кешнәп осоп үтә, ти!

Ҡустылары Зэки менән Салауат та бирешмәне:

Беләбеҙ, беләбеҙ! Унан һуң һарыса булған!

Моҙинә малайҙарҙың башынан һыйпаны, нәҙек кенә ебәк ептәрҙән бәйләнгән биҙәк кеүек йөҙөн ҡаплай башлаған йыйырсыҡтарын тэрәнәйтеп, көрһөнөп ҡуйҙы:

Эйе, һарыса ла булды. Шәп ине ул да! һарайғырға ике тамсы һыуҙай оҡшағайны. Әммә ул, Көнһылыу киткэс, һмртмна башҡа затты мендермәне. Өйөргә ебәрҙек беҙ уны. Хәҙер ҙә бар уның нәҫеле. Хөсәйен апағыҙҙан һораһағыҙ, шғы менән төртөп күрһэтер: «Бына ошо Һарайғыр цжомо — ҡанатлы толпарҙар нәҫеле!» — тиер.

Эй ул күп һөйләй! — Урал үҙенең Әптеләхәт олаһыныҡы төҫлө баҫалҡы һәм һағышлы йылмайыуы менән йылмайҙы. — Беҙҙең элекке өйҙөң баҡсаһында ай \ үҙган төндә, ике малай уйнарға сыға, ти. Күбэләк кеүек, эй осалар, эй баҫтырышалар, ти...

Ике малай?! — Мәҙинэнең күҙҙәренә йәш эркелде. Мәҙинә уларҙың уйнауын бик теләй ине лә бит, тик... ас ларҙа уйын ҡайғыһымы?

Оләсэй, — Күкһылыуҙың Альбинаһы Көнһылыуҙың |р;|һына ҡарап алды. — Беҙ гел уйлайбыҙ, өлэсэй, — ул шын «Башҡорт мадоннаһы»на төбәне, — һин бик сибәр инһың. Ә ниңә һин, олатай үлгәс, яңынан... ну... бына... ниш гапманың?

Бөтәһе лә тынды. Әбүбәкерҙең панноны йүнотси булашҡан улы Руслан да ялт итеп уларға боролдо:

— Мин дә ул турала гел уйланам, өләсәй...

- Ниңә сыҡманым?! — Мәҙинә картина ҡаршыһыпа, ултырғысҡа ултырҙы. — Беренсенән, был картиналағы ҡатын ул мин дә, мин түгел дә. Минең өләсәйем Барсынбикәнс эшләй башлаған булған рәссам. — Ул Әбүбәкер менәи Флориданың улына ҡарап алды. — Ул рәссам һинец олатайың ине, Руслан улым. Әммә беҙ өләсәйем менән бик оҡшағанлыҡтан, быны мин тип ҡабул иттеләр. Ә инде һеҙҙең һорауға килгәндә... — Мәҙинэ йәштәрҙеке кеүек ынйы тештәрен ялтыратып, йылмайып ҡуйҙы. — Мин, балалар, Урал батырҙың Һомайы нәҫеленәндер, моғайын. Уға ла бит, кире ҡатын-ҡыҙға — кешегә әйләнеү өсөн, иренең, Уралдың, ҡағылыуы мотлаҡ булған. Олатайығыҙ үлгэс, мин ҡабат ҡатын-ҡыҙға әйләнә алманым...

— Ә һин һаман да йәшһең, өләсәй! — Альбина уныц муйынына һырылды. — Матурһың!

— һыбай нисек оҫта йөрөйһөң! Мине лә өйрәтерһсц, өләс?! — Дилара уның тубыҡтарын ҡосаҡланы. — Минең Д| бик-бик йөрөгөм килә!

— Өләсәй бит әле ҡарт түгел! — Урал һоҡланыу тулы ҡарашын Мәҙинәгә төбәне. — Беҙҙең өләсәй әле... ҡыҙҙар кеүек! Машинаны ул бөтәбеҙҙән дә оҫтараҡ йөрөтә!

Мәҙинә үҙенең алсаҡ, гәлсәр сыңын һаҡлаған ҡыңғыраулы тауышы менән көлөп ебәрҙе:

— Күҙ тейҙерерһегеҙ, етер, маҡтамағыҙ! — Унап етдиләнде, ейән-ейәнсәрҙәренең һәр ҡайһыһын күҙенән үткәрҙе. — Йөрәк ҡартаймаһа, тән ҡартаймай ул, балалар. Ө йөрәк ҡартаймаһын өсөн... йондоҙҙарға ҡарап йәшәр кәрок! Юғарыға!

Ҡан күп кәрәк. Егетте әжәл тырнағынан бары шул ғына алып ҡаласаҡ. Ә ул — Сәмәрәнең балаһы. Унып туғыҙ ай буйына йөрәк аҫтында йөрөткән бауыр ите. Тәүге һәм һуңғы мөхәббәтенең емеше. Сәмәрә бөгөн һис ҡасан булмағамса бәхетле — уның улы тере! Нисәмә йылдар буйы ул буш ҡәбергә сәскәләр һалған, уның йәнһеҙ тимер кәртәһенә күҙ

йәштәрен түккән... Ни өсөн был аҙымды яһаған әсәһе? Ни өсөн ул ҡыҙын бала һөйөүҙән мәхрүм иткән? Нимә хаҡына? Рәнс яратҡанғамы, әллә... Ҡыҙрасовты... көнләшеүе-һәнме? Ул кнопкаға баҫты — Асия инде.

Лсия, — ун грамлы шприцтар әҙерлә.

Ниңә?

Кәрәк.

Шофҡәт туташының ҡарашынан уның барыһын да аңлағанын төшөндө Сәмәрә.

Шулай кәрәк. Башҡа сара юҡ.

Һуң... — Асияның битенә тимгел-тимгел ҡыҙыл йүгерҙе. — һеҙ... башҡа берәй сестраны саҡырығыҙ. Мин был ишкә...

- Ә Батыр урынында... Байрас булһа... Уға ҡан кәрәк булһа?!

Ләкин һеҙ ике көн элек кенә өс йөҙ грамм ҡан бирҙегеҙ! Бөгөн — тағы ла! һеҙ йөрәк сирле! Был — ахмаҡлыҡ!

- Минең һорауға яуап бирмәнең, Асия апай. — Сәмәрә мм.щ иңбашынан ҡосаҡлап, күҙҙәренә ҡараны. — Байрас булһа, һин үҙең... нишләр инең, Асия апай?!

- Ул бит... балам! Минең балам! Ә был...

— Яҡшы. — Сәмәрәнең йөҙөндә ҡапыл нур уйнаны. — Бвтыр — минең улым!

— Йә Хоҙай! — Шәфҡәт туташының йөҙө көлһыу төҫкә Инеп ағарҙы. — Батыр... һинең... улың?! Ә ни өсөн... мин?!

– һин, Асия апай. Мине һинән дә яҡшы белгэн кеше юҡ. Беҙ бит... әсәләр!

- Ҡулым бармай! Гонаһ алғым килмәй!

Шэфҡәт туташының сараһыҙлыҡ ауаздары яңғыратҡан гауышын Сәмәрәнең кэтғи бойороғо ҡапланы:

— Гонаһы хөкөмдө сығарған кешегә. Ә хөкөмдө мин... үҙемә үҙем сығарҙым: балам йәшәргә тейеш. Ағастың ағасы, ҡурпылары үсһен, йәшәһен өсөн ауа...

Төшөн онота алмай интекте Ғәлимә. «КПСС» бинаһын ер йотоуы иҫенән сыҡманы. Ул бит шуға таянып үҫте,

күтәрелде, персональ пенсияға эйә булды, байлыкта, барлыкта йәшәне. Атаһынан да, эсэһенән дә якын ука партия. Маңлайына шайтан мөһөр баҫкан Горбачевты ул телеэкрандан күреү менән яратмағайны. Үҙен дэ, бисәһен Д| ене һөймәне. һиҙемләүе дөрөҫкә сығып килә: Горбачсн Ғәлимәләр һәм унан алдағылар төҙөгән, нығыткан партияны берәр кирбесләп һүтә. Әгәр ҙә күргән төшө раҫ булһа, Ғәлимл бер ҡурсыусыһыҙ ҡаласаҡ. Ҡулынан мал, власть күптон китте, инде яҡлаусыһыҙ ҡалырмы?

Өшөгәндәй булғас, ул ҡалын юрғанын алып ябынды - йылытманы. Тороп эҫе сәй эсеп ҡараны — барыбер тештэрс тешкә теймәне. Ах, яңылыша бит был мөһөрлө батпга! коммунизм көтөп йәшәгән, эҙергә-хәҙер өйрәнгән халыҡ партия колау менән юҡҡа сығасаҡ. Уйларға, йүнләрго өйрәнмәгән ҡәүем башҡа йылғырыраҡ халыҡҡа ҡол буласаҡ, бил бөгәсәк, ахыр сиктә эскегә һалышасаҡ. Үҙебеҙҙең халыкта ла бар йылғырҙар. Мәҫәлән, Мәҙинә. Бына уныц кеүектәргә баш эйәсәк халыҡ. Көсө етмәне Ғәлимәнец Мәҙинәгә. Тешен һындыра, ҡойроғона баҫа алманы. Барсынбикәһен олактырҙы, Әптеләхәтен дөмөктөрҙө — быға көсө етмәне. Етер ине — Горбачев дәүере килде. Нсй Ҡыҙрасов китеп барҙы, Ғәлимәне властан мәхрүм иттс. Мәҙинә көсәйҙе. Ике ҡатлы итеп, өҫтәүенә, көмбәҙ менэм йорт төҙөттө. Умарталары ғына йөҙләгән баш тиҙәр. Шуныц менән байыҡты. Ҡыҙҙары сит илдэрҙә гастролдәрҙә йөрөй. Дауыты — агроном. Ихсанбай кеүек хэшәрәттән тыуган Әбүбәкеренә тиклем ҙур йырсы, нindәйҙер консерваториялл уҡытыусы булып эшлэй, имеш... Эй ғүмер! Валсыҡ икмәкко зар-интизар булып ултырған ҡараҡай Мәҙинә мерседеси йөрөһөнсө әле! Хәйер, Ғәлимэнең дэ ҡыҙы бар. Йыл да зыяратҡа, улы «кәберенә» килеп китә, тиҙәр. Әсәһенә инмәй, хэлен белмәй. Нindәй тәкәббер, ә?! Барсынбикә тоҡомо бит, бәндә тоҡомона оҡшамаһа, арты ҡыйыш була, ти. У-у... күро алмайым! Күрә алмайым ул тоҡомдо, бүре тоҡомон!

Ғәлимә өйрәнелгән хәрэкэт менән араҡы шешәһепп үрелде, стаканға тотондо — эскеһе килмәне. Баста! Был д| бармай, тимәк, ул ваҡытлыса булһа ла онотолоуҙан мәхрүм.

Ул торҙо, әкрен генә кейенә башланы. Көҙгөгә ҡараны. Унда туҙған бумаланы хэтерләткән башы күренде. Биттэрс сырышҡан, күҙ төптәрендә карағусҡыл тоҡтар, ике битв ...кән грушалай һэленгән, эйәге ослайып сәкәйгән. Ҡот ... кос. Ошо хэлдә барып инһә, Сәмәрә танырмы уны? Ә ул ...итурҙыр инде. Ҡыҙрасов менән бер ҡалала йәшәгәс, осраша ...ргандарҙыр. Бәлки, Ҡыҙрасовҡа тағы ул йә ҡыҙ табып ...онрюндер. Кешеләрҙән һораштырҙы бит Ғәлимә: Км...расовтың үҙенә генә оҡшаған улы бар тинеләр. Эй ...әмыш! Бына кемдәрҙең тупһаһына этәрә! Ғәлимә хәҙер үҙе ч... р күргән ҡыҙының ҡаршыһына барып теҙләнмәксе. Үҙ Цтсрме уны Сәмәрәһе? Иң мөһиме — ғәфү итерме?..

Мәзинә шишмә үҙәненән аҫтараҡ, ышыҡ ҡына урында, гар араһында ятҡан Әптеләхәт менән Хашим ҡәбере нш.щда туҡтаны. Ике ҡәбер араһына ҡуйылған эскәмйәгә ...лтырҙы. Бынан бөтәһе лә ус төбөндәгеләй күренә: ...өҙрәләрендә берәм-берәм ут һүнә — ейән-ейәнсәрҙәре ...арға ята. Ут көмбәҙҙә, йәнә кухняла ҡалды. Көмбәҙҙә — ...ан. Ул олатаһының эшен дауам итә, көнө-төнө шунан РЫҡмай. Ә аҫта — кухняла — Нәфисә килене. Дауытының ...ше. Ире ятмайынса йоҡламай ул. Көтә. Ә Дауыты бөгөн ...ҡланы. Мәҙинәнең дә күңеле тыныс түгел. Күрәҙәлек Итсргә теләге юҡ, шулай ҙа Дауыты бик күңелһеҙ күренә. Шөкөр, үҙе тере, ә аты йығылған. Аттан яҙған яңғыҙ юлсы ... м.| юлдан йондоҙҙарға ҡарап килә. Бирешә торғандарҙан түгел уиың Дауыты. Атаһы кеүек беше.

Ана. Ҡушҡайын төбөндә, ҡалҡыуҙа, яңғыҙ һын пэйҙә и.|. Дауыт. Ҡалкыуҙа тора биргэс, өйөнә йүнәлде. канан инеп китмәҫ элек, Мәҙинә уны үҙ янына саҡырҙы:

Улым...

Әсәй?! һин... нишләп...

Һине көттөм. Имгәнмәнеңме?

Юҡ, ат ҡына...

Ярай, баш һау булһын.

Уныһы шулай ҙа... Әллә кемдәр... егермеләп баш ...оз һыйырын ҡыуып алып китте, әсәй!

Колхоз һыйырҙарын?!

Эйе... Бик белгән кеше күрһэтте буғай юлды. Тәпәшәк н аша туранан, баҫыу аша елдереп, Тәрәнүҙәккә и.......юр. Ә унда үҙең беләһең...

— Эй балам, колхоз шулай таралып бөтөр инде, һин гспл алып ҡала алмаçһың...

— Күрәләтә талатып тороп буламы?!

— Тере ҡалғанына шөкөр ит: аттылар бит.

— Ну. — Дауыт ултырҙы. Олоғая барған һайын **нығыраң** оҡшай ул атаһына. Атаһының йәшенә етеп тә бара инде уның баш балаһы. Эй үткән ғүмер!

— Ә һин нишләп бында? — Дауыт берсә ҡәберҙәрго, берсә, маңлайын йыйыра биреп, әсәһенә ҡараны.

— Нишләп бында, тиһеңме, балам? — Мәҙинә иңсио ябынған аҡ мамыҡ шәлен күкрәк тирәһенә ҡаушыра бирҙе. Бәндә... минең йәштә тик тереләр менән генә йәшәмәй. Шунан ул улының арҡаһына кулын һалды. — Бар, ҡайт. Килен көтә. Мин тағы саҡ ҡына ултыра бирәм.

Дауыт китте. Йүкә сәскә атҡан ваҡыт булһа ла, ҡәбср ситендәге ҡайындан бер япраҡ өҙөлөп төштө. һары төç саҡ-саҡ ҡына яғыла башлаған япраҡты Мәҙинә ҡулына алды, күкрәгенә ҡыçты.

Дауыттың үҙенән алыçлаша барған кәүҙәһенә ҡараи, Мәҙинә ауыр көрһөндө: «һуңғы уҙаман! Үҙе йәшәгәп ҡоролоштоң һуңғы коммунисы. Ҡыйын булыр һинә, Дауыг, батып барған иләмһеҙ ҙур карапты ҡотҡарыуы. Ләкин Мәҙино һине көрәш, бәрелеш юлынан ситкә борғоһо килмәй. Бәндә үҙ юлын үҙе табырға тейеш. Ана, шишмәкәй сылтырай *ул* сылтырай. Киң дарьяға илтер юлды берәүҙән дә һорамай...»

Ял бүлмәһенә үҙ аяғы менән инеп ятты Сәмәро. Талсыҡҡан кәүҙәһен тапчанға һуҙып һалғас, тынысланды, күҙҙәрен йомдо. Бына ишек әкрен генә асылды. Аяк тауышынан таныны — Асия инде. Шәфҡәт туташы.

— Хәле нисек Батырҙың? — Сәмәрәнең ауыҙынан тауыш әллә сыҡты, эллә сыҡманы.

Асия барыбер аңланы. Уның ишеткәнен Сәмәрә күҙҙәрсно ҡарап белде.

— Яҡшы. Батыр күҙҙәрен асты.

Сәмәрә күн тапчанға ниҙендер тупылдап тамыуыи ишетте. Йәш? Күҙ йәштәре? Тик ул кем күҙҙәренән тама? Сәмәрәнекенәнме, әллә Асиянықынанмы?

Ниңә... илайһың?

Яуап булманы. Сәмәрә «сыҡ» тигәнде белдереп ишеккә ымиаиы. Эйе, уға ял кәрәк. Йоҡларға. Балаһының тере **Цкокен** ишеткәс, уға инде бер ни кэрәк түгел. Арыны. Ана уның ҡаршыһына аҡ яулыҡлы ҡарсыҡ килеп баçты. Туҡта! **Карсыкмы** ул, эллә... аҡ йыланмы? Сәмәрә, башындағы аҡ и\ ығын сисеп, Йылан-ҡарсыҡтың алдына түшәне. Яулыҡка **Мигөҙ** килеп төштө. Батша тажы кеүек нур сәсеп торған **Цегөҙ.** Сәмәрә уны өçкә күтәрҙе, башына кейҙе һәм үҙенә шабикә тажылай мөгөҙ бүләк иткән Йылан-ҡарсыҡ **|ртынан** эйәрҙе...

Ғәлимә Сәмәрә эшләгән дауахананы тиҙ эҙләп тапты.

– Сәмәрә Минһажеваны... — Тэү осратҡан аҡ халатлы **Цргә** ул тотлоға-тотлоға шул һүҙҙәрҙе әйтте.

Ирекэйҙең күҙҙәренән ул барыһын да аңлағанын төшөндө.

– Ә һеҙ Сәмәрә Идеаловнаның кеме?

— Әсәһе.

Әсәһе?! — Мыйыҡлы ир йәһәт кенә телефон трубкаһын күтәрҙе. — Слушай, ишек алдына кил. Хәҙер үк! Тиз. Бында бер апай. Сэмәрэ Идеаловнаның әсәһемен, ти. **Волки,** һуң түгелдер... Эйе, эйе! — Ул трубканы һалды. — \н;ш, машина килә. Алып барыр. Бәлки, өлгөрөрһөгөҙ...

«Нимәгә?» тип һораманы Ғәлимә. Ишек алдына килеп ı \ кıаған «Тиҙ ярҙам» машинаһына сығып ултырҙы. «Ҡайҙа барабыҙ?» — тип тә өндәшмәне. Был кешеләр, күрәһең, **|ыҙыныӊ** ҡайҙа икәнен беләләр...

Машина мосолман зыяратының ҡапка төбөндә туктаны. I имок, кемделер ерләйҙәр. Уның ҡыҙы, Сәмәрәһе, ерләүҙә катнаша. Берэй коллегаһы менән хушлашаларҙыр. Эйе, эйе! \.| ыҡ эркелеп ҡайтыр якка ағыла. Моғайын, бер түрә кеше улгондер. Улар үлгәндә халыҡ күп булыусан. Күбеһенең күҙҙәре ҡыҙарған. Илай-илай таралышалар. Тимәк, хужа кеше түгел. Хужаларҙы илап ерләмәйҙәр. Кешенең туғыҙ йомошон йомошлап, унынсыһын йомошлай алмаһаң, дошман булаһың, тип юрғайны Ҡыҙрасов.

Тулҡын-тулҡын ҡапкаға ағылған кеше араһынан хәҙер ('дмлрәһе килеп сығыр. Сәмәрәһе, ҡыҙы. Донъялағы берҙән-

бер яҡын кешеһе. Танырмы уны Ғәлимә? Моғайын, таныр: ул үҫкән һайын атаһына нығыраҡ оҡшаны: зэңгэр күҙҙәр, кар| бөҙрә сэстәр, алмалай алһыу сикәләр... Кешеләр аңыМЫ бөттө. Автобустарға, еңел машиналарға ултырып таралыштылар. Күрәһең, шофер егет уны яңылыш килтерҙе
— Сэмәрә бында булмай сыкты. Ул, яй ғына ҡыбырлаи, ҡайтыр яғына боролдо. Бында күрмәгәс, ҡыҙының фатирына барып инә алмаç. Йөрәге етмэç... Әммә ниндэйҙер көс уны зыярат эсенә этәрҙе. Йөҙләп ҡәбер араһынан дымы китеп га бөтмэгәнен тапты. Ҡәбер тотош тере сәскәләргә күмелгом Тағы веноктар. Улар ҡәберҙең тимер рәшәткәһенә һөйкәлгән Ғәлимә башын күтәрҙе: бейек мэрмәр ташҡа «Минһажснл Сәмәрә Идеал ҡыҙы» тигән һүҙҙәр соҡоп, алтын ялатыЛ яҙылған. Унан өҫтәрәк, рәсемдә, бөҙрә сәстәрен ел туҙғыткап, бәхетле йылмайған Сэмәрәһе.

Бишенсе булек

Ғәлимә, «Тирәкле» тигән һүҙ ҡолағына салынғандай булғас, һөт һатып торған ҡатындар янына туҡтаны.

— Ыста, был беҙҙең Ғәлимә инэй түгелме?

— Шул шикелде, ҡалай ҡартайған...

Ғәлимә башын борҙо, үҙе хаҡында барған хәбәрҙе ишеткәнен йәшермәҫкә булды.

— Ваҡыт әҙәмде түгел, ҡаяларҙы емерә, ташты ашай., Нимә, һеҙ Тирәкле ҡыҙҙарымы?

— Эйе, — береһе оялды шикелле — ҡыҙарып китте. Күптән күрмәгәс, үҙгәргән һымаҡһығыҙ шул, апай.

Ғәлимә яҡыныраҡ килде. Үҙенең ҡасандыр ҡалын булып, хәҙер өтөлгән кеүек туҙған сәс-башынан, тәрбиә күрмәгән өҫ башынан ул инде күптән оялмай:

— Мине мында белеп бөткәндәр ул. Үҙегеҙҙең баҙарға йөрөгәнегеҙ юктыр. Тирәкле бисәләре миңә йә ҡоротон, иа майын, һөтөн биреп китәләрсе ул. Хэйер рәтенән... — Ул тешһеҙ уртын ауыҙ тирәһенә бөрөштөрөп, ирендо|нм ослайтып, таяғына таянған хәлдә ауыл ҡатындарына ҡараЛ тора башланы. Эйе, йөрөгэн аяҡҡа йүрмә әләгә, һорамаып балаға имсәк бирмәйҙәр.

Апай, былайтып йөрөгәнсе, — буйға оҙонораҡ, шуғамылыр ҡаҡсараҡ күренгән ҡатын алдындағы ҡаймаҡ-майының өҫтөнә марляны арыулабыраҡ ябып ҡуйҙы. — Мәҙинә инәйҙең пансионатына барыр ҙа йәшәр инең.

Мәҙинәнең... пансионатына?!

Әллә ишеткәнең юкмы? Бер ун йыллап эшләй бит ин ҫ ул!

һүҙгә икенсеһе ҡушылды:

Эйесе... Былай-ялай һәйбәт унда! Шундай баҡса! Иошелсә-емеш үҫтерәләр, картуф сәсәләр, умарта тоталар.

Мәҙинәгә... әҙер батрактар икэн! — Ғәлимә танауын йыйырҙы.

Юҡ, апай, улар бит үҙҙәре өсөн эшләй, хэлдәренән КИлгәнсе генә. Мэҙинә апай уларға ашнаҡсы, йыйыштырыусы Виргән. Коммуна булып йәшәй улар!

- Кис йырлашып ултыралар. Ул йорттоң эргәһенән үтеп мпсүс күңелде! — Тэпәшерэк ҡатын бер йомарлаҡ ҡорот ı ıып, Ғәлимәнең моҡсайына һалды. — Әйҙә, апай, оҙаҡ Уйламай ғына ҡайт Тирәклегә! Мәҙинә апай изге кеше бит Инде ул, моғайын, ҡабул итер.

һы... — Ғәлимә тыңлауһыҙ аяҡтарын көскә шылдырып, китэ башланы. Шулай ҙа ҡыҙыҡһыныуы енде, ı ıенең осонда әйләнгән һорауҙы бирмәй түҙә алманы. — Мөҙинә... үҙе... бик бирешмәгәнме? Ҡартайғандыр, шәт?

- Эй ул! — Ҡаҡса ҡатын икенсеһенэ ҡараны. — Нигэ, Мәҙинә инәй йәш бит әле ул! Илле бар микэн уға?!

- Илле, — Ғәлимә ауыҙын салшайтты, теге ҡатындар ИШетерлек итеп һөйләнде: — Нишләп инде уға илле ы\ һын?! Минән ике генә йәшкә кесе бит ул! Ҡарт бит инде

...Ғәлимә ҡалтыранып торған ҡулдары менән ҡапҡаһын ВИкләнe: үткән-һүткән уның тайсаһына инеп эсеп сығырға |үоҫләнгән. Ҡапҡаны бикләһәң, емереп инәләр. Төндә тышҡа < ым,|уы ла ҡурҡыныс хәҙер. Өйөнә ингеләп ҡурҡыткан Ваҡтары ла була. Баҫымсаҡка баҡа ла айғыр тигәндәй, көсө еткән береһе рәнйетергә тора.

Баҡсаһында үҫкән ҡыуаҡ-ағастар күләгә яһап тәҙрәһен ышыҡлағанға күрә өй эсе ҡараңғы. Ҡыйыҡтың бер шиферын \ ıған йыл уҡ дауыл ырғыткайны. Хәҙер түбәнән ямғыр үтэ. Ныу гыш яҡтан өйҙөң стенаһын да йыуған, кирбестәр

онталған, хәҙер унан тыш күренә. Ҡышты туңа-туңа сыкты Ғәлимә. Йәй стеналарға үңәҙ үҫһә лә, түҙерлек. Киләһс ҡышты ул нисек үткәрер?

Саяф та алданы. Кешеләр ебәрәм, стенанды эшләп китерҙәр, тине. Юҡ. Күҙен дә күрһәтмәй. Ә үҙе бергв урлашҡан кешеләре менән әҙме эсте ошонда! Кемдәрҙе гемл килтермәне!

Эйе, ғүмере бөтмәгәс, Хоҙай йәнен алмағас, йәпюп Ғәлимә. Хәҙер инде уның кешеләргә түгел, үҙенә лә кәрәгe юҡ. һиҙҙермәй генә килде уға ҡартлыҡ. Әммә ҡаты килдв быуындары ҡатты, хәс тә бүрәнә кеүек ул хәҙер, күҙҙәре, ҡолаҡтары ғына уның ҡасандыр кеше булғаныи хәтерләткәндәй. Ауыр уйҙар солғанышында йәшәй ул. Мәҙинәгә барып йығылыр ине — ғәрләндерә. Уның байым киткәнен, хатта сит илдәр менән сауҙа иткәнен, ауыл урамына асфальт түшәтеп, мәсет, мәҙәниәт һарайы һалдырғанын ишетһә лә, ишетмәмешкә һалыша, күрһә, күрмәмеш була. Бер валсыҡ икмәккә тилмереп көн иткон ҡараҡай ғына, ҡырағай ғына Мәҙинәнең уңыштарын эсенв һыйҙырыуы ауыр. Улай ғына түгел, Мәҙинәнең балалары хаҡында ишетһә лә ҡара яна, ашауҙан, атлауҙан яҙып ятым китә. Радиоһы эшләп торғанда ул шөйлә яңғыҙ түгел ине әле. Шунан Мәҙинәнең Күкһылыуы йырланы бер. Етмәһо, мәшһүр йырсы, бөтә Союз, халыҡ-ара конкурстар лауреаты, тип шаштырҙылар. Түҙмәне Ғәлимә: радионы күтәреп һукты, аҙатс, тынысланa алмайынса, туҡмас таяғы менән бәргесләне, төйгөсләне. Телевизорын да шул рәүешле юкка сығарҙы: Көнһылыу бейегәнен күрһәттеләр. Талпынып, аиҡ бармаҡтарының осона ғына баҫып, артын тумырайтып килси сыҡҡайны — экранға таба менән елгәрҙе. Ярылды телевизор! Быялаһы Ғәлимәнең битен, күкрәген йәрәхәтләп, айҙан ашыу больницала ятты. Ошоларҙан һуң Мәҙинәгә баш эйеп бар.... ҡара! Ғәлимәнең көйөп ҡара торонға әйләнгән күңеле ун [illegible] нисек түҙер?! Ләкин... былай ҙа булмай. Ғәлимә үҙенен ташландыҡ хәлгә килгән өйөндә үлеп ятһа ла бер кем белмәйәсәк. «Килгән бер бәндә ҡаршыһында ишегенде япһаи үҙең өсөн асыҡ ҡалған берҙән-бер ишек — ҡәберең булыр», тигәйне уға ҡасандыр Барсынбикә. Эйе, шулай тигоннс Сәмәрәне күрергә килеп, Ғәлимә өйөнә индермәй ҡыуыи сығарғанында ҡара күҙҙәренең зәһәр уғын төбәп әйткәйне

И [illegible]рағаны юш килде Мәскәй ҡарсыҡтың — Ғәлимә ишегенең цпкаһына хәҙер бер кем тотонмай, тупһаһын берәү Щмҡламай. Эйелгән башты ҡылыс сапмай тигәндәй, •Л гкәнгә -- салауат, һин мине үҙ ҡанатың аҫтына ал инде, [illegible]ирәт!» — тип Мәҙинәгә барырға ла йығылырғамы әллә?! Дөрөҫөн әйткәндә, ҡылған тиклемен дә Саяф ҡылды инде. Ул [illegible] үлгерҙе Әптеләхәтте! Лабораторияһына ла ул ут төрттө! I әлимә, итәк аҫтынан ут йөрөтһә лә, ундай эшәке сараларға барманы. Саяфҡа ышанды. Саяфҡа ул бүрене өңөндә баҫырға Кушты, тегенең хәленән килмәне. Йомшаҡлыҡ күрһәтте. \.нер үҙенең Саяры ла Мәҙинәлә управляющий булып эшләй Гиҙәр. Ғәрлеге ни тора! Ирҙәрҙең ир була белмәүе аптырата. улар арҡаһында Ғәлимә бөгөн оятынан ер тишегенә инеп китерҙәй булып ултыра...

(аяфты ҡарғап бөтөүгә, Ғәлимәнең күҙе өҫтәлгә [illegible] |,яулыҡ урынына йәйелгән гәзиткә төштө. Ельциндың рәсеме торған урынға ғына баҡырса ултыртҡан булған, шуға Күрмәгән. Күрһә, ул гонаһ шомлоғон өҫтәленә күҙ көйөгө Щеп һалып ҡуймаған булыр ине. Ул, ҡалтырана-ҡалтырана, Һүрәтте йыртып алды һәм усаҡ ауыҙына тыҡты, унан шырпы СЫЙып ут төрттө. Янһын! Янһындар! Горбачын да гел үртәй I влимә! Уның барлы-юҡлы ғына йыйынсағы-иғәнәһе лә ш\ иар арҡаһында янды. Үҙ халҡына ҡаршы эшләгән мөртәттәрҙе яндырыу ғына ла аҙ!

Ҡағыҙ остоғо янып бөткәс, Ғәлимәнең ярһыуы бер аҙ баҫылғандай булды. Һыуыҡ һыуға баҙарҙан алып ҡайтҡан КОротон иҙеп эсте лә, тунын ябынып, карауатына кәкерәйҙе.

Улын көткән арала Саяф тәмәке артынан тәмәке ҡабыҙҙы. [illegible] го булды уның Саяр менән уртаҡ тел табырға ынтылған саҡтары. Өлкәне, Нәғиме, бушағыраҡ. Әсәһе шикелле йыр-бсйсү артынан сабырға эүәҫ. Саяр ныҡлы. Тотҡан ерҙән Ындыра торған ғәҙәте лә юҡ. Баҫкан ерендә ут сәсрәтә, тотонһа, таш ҡайната. Институтты ла яҡшы бөттө. Уҡыған [illegible] щрында Саяфҡа ауырлыҡ һалманы, үҙен-үҙе ҡараны. Уҡыуҙы бөткән улын Саяф колхозға экономист итеп ҡуйҙы. Бер йыл да үтмәне, эшен күтәреп һуғып, Мәҙинәгә барып [illegible] ланды. Ялсы булды. Ғүмер буйы түрә улы булып эшләгән

кеше балаһына шул төҫмө инде? Ҡоллоҡ — хурлыҡ бит индв ул. Ә ул шуны үҙе теләп ҡабул ҡылды. Әлбиттә, Саяр насар йәшәмәй йәшәүгә. Тағы кем балаһы әле ауылда «Тойота»м йөрөй? Ғаиләһе булмаһа ла өҫтө-башы таҙа, тәрбиәле Өйөндә юҡ нәмәһе юҡ. Ул яғы — шөкөр. Ләкин бит намыҫ тигән нәмә бар! Саяф ҡартайҙы. Нәғим — бешмәгән. Саяф ҡулынан эстафетаны Саяр алырға, колхозды артабан ул етәкләргә тейеш! Тиҙҙән буласаҡ йыйылышта Саяф улының кандидатураһын әйтһә, тәғәйен, халыҡта ул хуплау табыр ине. Мәҙинә уны сит илгә лә үҙе менән алып йөрөй, инглисcо лә арыу һупалай. Йөрөгән таш шымара тигәндәй, шымарнл инде Саяр. Өлгөрҙө. Хәҙер кеше шундайҙарға ышана, улар артынан эйәрә. Саяр риза булһа, халыҡ ҡаршы сыҡмаясаҡ.

Машина туктаған тауышҡа Саяф асмалы тәҙрәһенон ҡарай һалды: ул, Саяр. Ярай, килгән. Бушамайым тип сәбом тапһа ла бер ни ҡылып булмаҫ ине. Саяф, улының инеп килгәнен күргәс, сәбәләнде, ни ҡуйып, ни алырға белмәгәндәй, бисәһенә ҡыскырҙы:

— Бисә! Самауырывды ултырт!

— Аһ, мин баҡырсаға ҡуйҙымсы ул сәйҙе...

— Атаң башы!

— Аһ...

— Кеше атаһы нигеҙенә инеп самауыр сәйе ло эсмәһенме?! Үҙ әсәһе булһаң...

— Ай алла! Башланы!

Хәбәрҙең ҡәҙимгенән апаруҡ юғары тонға күсеү мәлендо килеп инде Саяр:

— һаумыһығыҙ...

— һаубыҙ, эйе, — Саяф әлеге көсөргәнештән сығыи өлгөрмәгән, ҡыҙарған йөҙөн ыҙалатып йылмайҙы. — Шөкөр, эйе, ҡарттарса...

— Ярай, — Саяр ҡулын йыуып, атаһының йәшбикәһе тотоп торған таҫтамалға һөртөп, өҫтәл артына килсп ултырҙы. — Нимәгә саҡырҙың, атай?

— Саҡырҙым шул, — Саяф йәнә сәбәләнде, — улы алдына йомортҡаһын, ҡаймағын яҡынайтты. — Аша әле, тош ваҡыты бит...

— Ашаным мин. Сәй генә...

— Ней, йыйылышка әҙерләнәм, улым. Кәңәш туплайыҡ, көстө төйнәйек, тинем. Олатайың мәрхүм ошо колхозды

төҙөгикән кеше. Заманында председатель дә, бригадир ҙа бы цды. Мин, үҙең беләһең, ҡара йәшемдән ошонда: көтөү ҙә Квттөм, суска ла бактым. Эйе. Председатель булғанға ғына и п тман! Бер кешенең ғүмере. Бер кирбестән башлап төҙөгән цолхозыбыҙҙы тота килеп икенсе кешегә ни йәнең, ни йөрәгең менән бирәһең?!

Алай, — Саяр атаһын бүлдермәй генә, бер нөктәгә Карап тыңланы. — Бөттөңмө?

Бөттөм тип, — ул сәй һһап ултырған бисәһенә |йләнде. — Бисәкәй, һин ҡош-ҡортонцо ҡарап килмәйһеңме?

Эй, ярай, — арҡырыға ла, буйға ла бер сама йәшбикә •йҙән ишеккә табан «тәгәрәне». — Үҙең сәй һһа, атыу...

- Атай, тел төбөндө дөрөҫ аңлаһам, һин мине урыныңа коҙалайһың...

Шулай, улым. Мин ул хаҡта...

- Ярай, шулай ҙа булһын, ти. Бөгөн колхоздың табышы күпме?

Бөгөн ниндәй табыш булһын? Көләһеңме әллә? Кругом долг!

Күпме инде колхоздың бурысы?

– Саяр, — Саяф, тулкынланыуҙан ҡыҙара бөртеп ырғып Горҙо. — һүҙ ул турала түгел! Бурыс бар инде ул. Яғыулыҡ, электр энергияһы буйынса муйындан батканбыҙ. Эш хаҡы алыу тигән нәмә онотолдо, күпме ер һөрөлмәй, сәселмәй Калды. Ашлама тигән нәмәләр күптән иҫтә-оҫта юҡ. Ләкин... МОЛЮВ — беҙҙең ҡоролоштоң нигеҙе! Социалистик йәмғиәттең умыртка һөйәге! Бына шуны һаҡлап алып Кальрға кәрәк! Идеяны! Нигеҙ булһа, стена өйөү ауыр эш түгел! Баш бар бит һиндә. Халыҡты байға, ярлыға бүлгән капитализмды яҡын ебәрмәҫкә кәрәк! Беҙҙең ата-бабалар Мберенәя ырғып торор шуға юл ҡуйһаҡ!

Аңлашылды. — Саяр сабыр ҡарашын атаһына төбәне. һсҙҙең табыш юҡ. «Мәҙинә»нең йыллыҡ табышы илле ми.илион. Минең эш хаҡым — биш йөҙ доллар.

Биш йөҙ доллар?! — Саяф кире ултырҙы. — Ун биш мең тимәксеһеңме?!

Эйе, ун биш мең. Мин дәһә — управляющий. Мәҙинә Хашимовнаның уң ҡулы.

— Көсөктәре, Дауыттын улдары, үсеп еткәнсе файҙаланыр ҙа Мәҙинә һине, урамға бырактыры|) Капитализмдың законы шулай.

— Бәлки. — Саяр әсәһенеке төҫлө йәнде эретерҙәй алсак йылмайыуы менән йылмайҙы. — Уғаса мин дә бит апарук байыйым — үҙем эш асырмын. Йыйған тәжрибәм, белемсм үҙем менән ҡала бит! Мәҙинә Хашимовна миңә бөгөн үк балыҡ ыҫлау цехы асырға кәңәш бирә. Йыһаз алыу өсөМ кредит алырға ярҙамлашмаҡсы. Тик миңә... үҙ эшем оҡшай!

— Ә намыҫ?!

— Ниндәй... намыҫ?

— Ялсы булырға оялмаған кешелә... «ниндәй намыҫ» имеш... Юҡ ул һиндә! — Саяфтың ярайһы ҡалын йоҙрот төшөүҙән сынаяҡтар сылтырап, ҡалтырап ҡуйҙы.

— Мин бит, атай, урлашмайым! Эшләп ашайым!

— Ә һин урлаш — тик бәндәгә бәндә булма!

— Бөтә донъя, атай, бер законға буйһонған: кемдер эш бирә, кемдер шул эште ала. Эшләгән өсөн аҡса түләйҙәр. Кемдер күберәк, кемдер әҙерәк түләй. Кем күберәк түлой, кеше шул эш биреүсегә яллана.

— Шулай, лэкин... үҙен ихтирам иткән кеше хөкөмәткл эшләй, э түгел... байға!

— Эй атай! — Саяр сәғәтенә ҡараны. — Ундай фекерлоү менән... Әйт эле, атай: нишләп Хөсәйен апа бер ваҡытта ла колхоз председателе булманы? Эш яратманымы, ялкау булдымы?

— Хөсәйен! — Саяф ауыҙын салшайтты. — Ҡалыи Хөсәйенгә председатель булыу! Ул кеҫәһенә килеп инеп яткан аҡсаны ла һанарға эшкинмэй!

— Бына! Үҙең әйтеп бирҙең. Тимәк, кешеләрҙең һәләте, аңы төрлөсә. Бөтә донъялағы байлыкты бер ергә туплап, биш миллиард кешегә тигеҙ итеп бүлеп бир — бер йылдан тағы халыҡ байға һәм ярлыға бүленәсәк! Бәндәне тигеҙләү мөмкип дә түгел, кәрэге лэ юҡ, атай!

— Һы, малай... — Саяф, саңҡая биреп, тир бөрсөкторс бәреп сыҡкан ҡыҙарған йөҙөн һөрттө. — Вәт, малай... Алма ағасынан алыҫ төшмәй тиһэлэр ҙә, һин, малай...

— Эйе, атай, мин атай-ағастан, алай ҙа алыҫыраҡ тәгәрәгәнмен. Юғиһә, һинең күлэгәң ҡаплар ҙа, серер, ағас булып үҫә лә, емеш бирә лә алмаҫ инем.

(аяр сығып киткәс, өй йәнә тып-тын булып ҡалды. Сәғәт Ц{ на наҡыт ашауҙан ауырайған, ҡалынайған тауыш менән • пс һуғып алды. Нәғимә менән өйләнешкән саҡтарында |уыл йоштәре туйға тотоп килгәйне уны. Эйе, ваҡыт тигәнең ЦСШене түгел, тимерҙе лә аямай. Ярты быуат үткэн! Аҙмы Гүмер... Улдары тыуған һайын шатланған булды Саяф. Икәү бу чгастары, бер-береһенә иптәш булырҙар тине, өсәүгә еткәс, ғаған таймаҫ, тип түбәһе күккә тейҙе, дүртәүгә тулғас, уҙҙәре бер нигеҙ булды, инде таяу кәрәкмәйәсәк, тип ГОрурланды, бишенсеһе донъя күргәс, инде быларҙан ибыртҡы ишергэ була — тағатылмаясаҡ, тип ҡыуанысынан ү|ц|с-ҡырлы һикерҙе. Хәҙер нимә? Өлкәне — клуб юлында, (!мры Тарас Бульбаның улы кеүек, дошман яҡҡа күсте, \|илисыһы Афғанда ҡалды — үлеме-тереме икәнен дэ белә Ыманы, дүртенсеһе Мәскәүҙәге путч ваҡытында һәләк булды, кинйәһе ҡалаға тайҙы. Саяфтың ҡарап торғаны — бер Нәим. Бынау Мәҙинәнең этлеге, хәйләкәрлеге! Саяфтың иң шәп улын үҙенә эйәләштерҙе. Эйәлэштереү генә түгел, баҡма ИТте! Саяфты терәгенән яҙҙырҙы! У-у-у...

Бахыр Саяр, Көнһылыуҙы яратыуына түҙә алмай ғына барып ҡапты улар тоҙағына! Шуны бер күрер өсөн йөрөй индс Мәҙинә артынан. Сит илдән ҡайтмай тиҙәр бит Мәзинәнең ҡыҙҙарын. Шуға була эйәреп сығып китә Саяр! һаҡалы биленә еткәнсе өйләнмәй йөрөүе лә шул Көнһылыу •ркаһында. Ә уныһы — күптән кейәүҙә, ирен ҙур бизнесмен ПИҘӨр. Дөрөҫө — капиталист инде. Шуларҙы бит ҡупшылап • иишесмен» тип йөрөтәләр. Эйе, ҡәһәр ғаилә булды. Ауылға балакәй санаға малайын ултыртып, тоҡ йөкмәп килеп ингән Барсынбикә менән Сибәғәттән таралған тоҡом тип кем ит һен! Тананан тибелеп, ҡара ҡанын ҡоҫоп яткан Мэҙинә ине бит быныһы ла. Эй заман! Йолҡоштарың тупһанан түргә менә, мендәрҙе бармаҡ осонда эйләндергәндәр күктэн ергә төшә, шыуышып, тәнтерәкләп гүргә ығыша. «Был донъя ы латҡыс!» — тиергә ярата ине өләсәһе мәрхүмә. «Үҙең алдамаһаң, донъя нисек алдаһын һине?» — тип аптырар ине < !ыф. Бөгөн күрә: ул алданмаҫҡа, ебәрмәҫкә тырышҡан һайын |ОНЬЯ нығыраҡ киреләнэ, арҡырылана. Хәс теге таҡмаҡтағы кеүек унын хэле: әллә тауыҡ сирләгән, әллә бәхет киреләгән.

Эйе-е, ҡото, рәте-сираты китте донъяның. Горбачев ебәрҙе уның йомен. Шул башланы. Ельцин да шул уҡ ҡамырҙан

•I д 471

булып сыкты. Әй сапты Мәҙинә шул йылдарҙа! Демокраши, суверенитет, тип төкөрөк сэсте. Район буйлап концерттар биргән булып үҙаллылыҡ яулашты. Хәҙер күрә Саяф: **Мвҙшм** үҙе өсөн йөрөгән. Партияны бөтөрөп, үҙе капиталист булып алырға хыялланған! Башҡорттоң онотолған кәсепторси тергеҙәм тигэн булып, асмаған эше ҡалманы, асылда үҙе байыны. Бай булғас, мэмәйле бала һөймэгә яҡшы, депутат булып һайланды. Абруйы артты. Йыры өсөн Салауат Юласн премияһын алды. Эйе, бүреһе олоно Мәҙинәнең һуцкы йылдарҙа! Иренең үлеме менән өлэсәһенең бәләһе уиы, нишләптер һындырманы, бары көсәйтте генэ. Күп көс түкте Саяф был бисә менән көрәшеүгә. Барыһы ла бушҡа китермс икән? Юҡ, йыйылышта асасаҡ Саяф унын ысын йөҙөн! Йыйылышта! Туптай ауыр һүҙҙәр яуҙырасаҡ Мәҙинә башына! Мин кем дэ, һеҙ кем тип йөрөмэһен әле кинәнеп. Малайҙар Саяфтың битенэ саптыра ине! Шунын кеүек. Мәҙинәне ул халыҡ алдында рисуай итэсәк! Ҡатын-ҡыҙға ғәләм алдында рисуай булыуҙан да ҙурыраҡ хурлыҡ юҡ. Маҡтаулы ҡыҙ – туйында, тигэндэй, Саяф Мәҙинәне теле менән тапаясаҡ. Саярҙы бөгөп булмаһа, Саяф оло улы Нәғимде тэкдим итэсок етэкселеккә. Иҙел күрмәй итек сисмәйҙәр. Өйрэнер. **Майҙанп** сыҡмай тороп, бил нығынмай. Дауытты һайларға телэүселор ҙә табылыр, әлбиттә. Фермер булып алды бит. Лэкин. Саяфтың төплө һүҙҙәренән, ялҡынлы телмәренән һуң, Мәҙимо балаһынын исемен кем телгә алыр икән? Әммә бында **Саяф** яңғыҙ булырға тейеш түгел. Яңғыҙ ҡарға яҙ килтермой, күмэклэгэн — яу ҡайтарған. Үҙ кешеләренде был маҡсапа оҫта файҙаланыу зарур. Саяф өсөн утка ла һыуға инергә **әҙвр** кешене хэҙер табыу ҡыйын, элбиттә, ә бына Мәҙинәне күро алмағанды... Бар, бар ул ундай кеше! Ғәлимә! Эйе, эйс! Ғәлимә Минһажева.

Саяф, Ғәлимәнең телефон номерын иҫенэ төшөрэ алмағас, блокнотын аҡтара башланы.

Ал таң ата, Сулпан калка,
Сулпан таңды уята.
Һыҙылып таңдар аткан сакта
Илата ла йырлата...

Иоко аралаш ишетелгэн моң уятты Мэҙинәне. Ҡайҙан иисск ишетелде был илаһи тауыш? Ниндәй ҡөҙрәт, көҙрәте һалынған уға... Иҫең дә китер. Ә ниңә ул ҡапыл ... ы? Радионан ишетелгэн булһа, кем туҡтатты? Мэҙинә ... ыны и көнсығышҡа ҡараған тәҙрәнең ҡорғанын күтэрҙе. Эйе... Лл таң ата, Сулпан ҡалҡа, Сулпан танды уята... юхотен ерлэгэс, Мәҙинә үҙе лә таңдарҙы ошо йыр, ошо м ... һағыш менэн ҡаршыланы. Әммэ Мэҙинәнэн сыҡканы күпте күргэн, үҙ яҙмышының ғына түгел, ил яҙмышының, халҡы яҙмышының да һағыштарын туплаған, үҙ эсенә йыйған М(. . . .улып ағыла ине, э бөгөн ишеткәне... Туҡта! Зиһенен ... үгкэн уйҙан Мәҙинә тороп ултырҙы. Халатын кейҙе лә юһеиэн сыҡты: моң эргэлэ генә ишетелде...

Барыһы ла йоҡлай. Тып-тын. Мэҙинә келәм түшәлгэн кыс ... **ан** иплэп кенэ баҫып икенсе ҡатҡа күтәрелде. ... пыҡ. Ейэнсэре Тандыса йоҡлаған бүлмәгә ҡолаҡ һалды. Шииксрт тауыш юҡ. Аптыраны. Инде көмбэҙгэ күтэрелде. I ... унда ҡайһы саҡ таңға тиклем Руслан эшлэй. Шунда **йоҡлап** та ҡала. Эйе, ул бында. Пинжэген бөркэнеп, диванда Күроһең, яныраҡ ҡына йоҡоға талған: сәйнүге эҫе. Вүлмологс тартылған киндер-рамдарҙан, уларҙағы һындарҙан ... ирэт, кос бөркөлэ. Ана унын яныраҡ ҡына тамамлаған ... соскэлэре». Ысыҡтан һығылған ҡылған араһынан игка яңы күҙҙәрен асҡан сәскэлэр төшөрөлгэн. Ялан ... лэре. Руслан уларҙағы наҙҙы, башты әйлэндерер хуш ... һйм киңлекте нисек һиҙгер тотоп алған...

Мэҙинэнең портретын ейэне, баҡһаң, рамлап элеп тэ ... «Етмеш йәшеңә минән бүләк», — тигәйне Руслан. ... ахры, бында эҙерәк мутлашҡан: сәсендэ ысыҡтай ... лраған көмөш тамсыларын иҫәпкә алмаһаң, уға карап ... ксм дэ етмеште бирмэҫ. Күрэһең, ейэненең өлэсәһен ... күргеһе килгэн. Ә күҙҙәре... Оло һынауҙар үтеп тэ ... ли ҡатын ҡарашы, ҡатын йөҙө. Ғазаптарын көскә шдсрси, үҙен һэм балаларын ҡамауҙан алып сыҡкан Г>үре тэүэккэллеге. Үҙэгеңэ, електэреңэ үтэ, тэнде |Г>ырлата был ҡараш. Ул һине үтэнэн-үтэ күрэ, эс- ... инеп, булмышыңцы рентген аша үткәрә. ... һэм фиҙаҡәрлек, аңлы батырлыҡ, быуаттар . . . .колонэн килгэн саялыҡ, рухи камиллыҡ һалынған уларға. II ... ц\ бар. Һөйөү һэм һөйөлөүҙән ҡалған наҙ бар. Көҙҙэрҙэ

лә бит яҙҙарҙан ҡалған яҡтылыҡ һаҡлана. Бында ла **шулаЙ.** Руслан был эшен Әйүп олатаһы яһаған портрет менән йәнош элгән. һәр нәмә сағыштырыуҙа асыла: «Башҡорт мадоннаһы» булмаһа, яңы портреттағы катындың йәшен, моғайын, самалап булмаҫ ине...

Мәҙинә, тетрәнеүе һүрелә биргәс, Русландың әле эшләп яткан киндеренә күҙ һалды. Тандыса?! Был бит уның ейәнсәре. Тик ниңә уның күҙҙәрендә бынау наҙлы яҡтылыҡ? Ул бит әле ҡолонсаҡ! Шаян ғына сабый бит ул Тандыса. Уп етелә генә уның ейәнсәре! Руслан ниҙер... бутай. Тандысанан юрый еткән, ғашиҡ ҡыҙ образы яҙа. Был дөрөҫ түгел! Эйс, рэссамлыҡ фантазияһыҙ булмай, ләкин, ҡолонсаҡтай сабыйҙан еткән ҡыҙ яһау... Ай алла! Әйҙә оҙакҡараҡ һуҙылһын ейәнсәренең бала сағы, ғәмһеҙ көндәре, тыныс йоҡолары. Ниңә әле һүрәт аша уның күңеленә еткән *кы},* ғашиҡ йән образын һалырға?! Руслан акыллы егет. һөйләшергә кәрәк. Йәлләмәһә, хәҙер үк уятыр ине уны Мәҙинә!

Мэҙинә һандуғас һайрауынан уянған иртәнге һауаға сыкты. Көн дә ошо мәлдә ул шишмә һыуында ҡойона. Донъяға именлек, халҡына бәрәкәтле тормош, үҙенә, бала-сағаларына йән һәм тән сихәте теләй. Шишмәкәйҙсц тәрәндән урғылған һалҡын һыуы башта тэнде курып, өтөм ала, аҙаҡ бөтә кэүҙэһенә рәхәт ялҡын ҡаба, йәшәргә, эшләрго булған теләгеп ундарса-йөҙҙәрсә тапҡырға арттыра. Мэҙино йәйен дә ҡышын да, көнөн ошо шишмә башында ҡойоноуҙан башлай. һыу алған күнәгеп шишмә башында үҫкән ағас ботағына элгәс, йүкәләр аллеяһында ҡатын-кыҙ һыны күҙено салынғандай булды. Тандыса түгелме был? Ҡайҙа йүгерҙс икән таң һарыһынан? Йөрәге урынынан ҡупты Мәҙинәнең. Күп тә үтмәй, ат тояҡтары тауышы ишетелде...

...Иртәнге сәйгә улар ундарҙа ғына йыйыла. Уға тиклем һәр ҡайһыһы үҙенә тейешле эштең байтағын эшләп өлгөргән була. Сәй эскәндә хужалыҡтағы көнүҙәк мәсьәләләр хаҡында ла һүҙ сыға. Мәҙинә сәйгә иң алда килеп ултырҙы.

— Кәйеф нисек, килен? — Ул Нәфисәгә ҡараны. Кисә башым ауыртып тора ти инең...

— Кәйеф ни...

Мәҙинәгә Нәфисә ниҙелер йәшерә кеүек тойолдо:

Нимэ, әллә?..

Бөтәһе лә яҡшы... Былай ғына. Теге... Саяр Саяфович **Китәм** тип йөрөй тиме?

Саяр?! Юҡсы... — Мэҙинә көләмһөрәне. — Өйөндәге ıс күршеңдэн һора тигәндәй... Китер булһа, башта миңэ **|йтср** ине. — Килен... ә Таңдыса... йоҡоһоҙлоҡтан **Интекмәйме** шул бала?

Тандысамы? — Нэфисә ҡолаҡтарына тиклем ҡыҙарҙы. Әллә ни булды, ҡәйнәм, шул балаға... Әллэ нишлэне.

Мин, килен, — Мәҙинә «тыңлап тормайҙармы» тигән **Кеүск,** ишеккә күҙ һалды. — Бөгөн йыр ишетеп уяндым. Ул ı ш ыш... һағыш тулы ине. Ә күп тә үтмәй... ат тояҡтары **Гяуышын** ишеттем. Ҡараһам, Бурыл юҡ... Таңдыса менэ бит Б\ рылды?

Ул арала ишек шар асылды. Унан Дауыттың өс улы, ipı караҡ ҡалып Руслан инде, бер аҙҙан Дауыт күренде. Улар \ ı гырыуға мәк сәскәһеләй балҡып, үҙе лә бер ҡосаҡ ялан ı и юләре күтәреп Тандыса пәйҙә булды:

Көтмәнегеҙме? — Бүлмә уның шишмәләй сылтыраған гауышына күмелде. — «Ялан сәскәләре! Ерем тәңкәләре! I шмау-сулпылары! Йэнем биҙэктэре!» Мин йыр сығарҙым, әлэсәй!

I йонсәренең ғәмһеҙ шатлыҡ сәскэн йөҙөнә, саф балалыҡ **бврккән** ҡараштарына күҙ һалғас, Мәҙинә тынысланды. Урал **Менон** ни хаҡындалыр һөйләшә-һөйләшә сәй эскән Русланға **КМрын** гына ҡарап ҡуйҙы.

(**!вяф** килеп киткәс, Ғәлимә төрлө уйҙар өйөрмәһендә ı ı ıы. Эйе, кемгә килергә, кемдән ярҙам һорарға белә был ıı ı ра бәрей! Кеше усы менән ҡуҙ сүплэп өйрәнгән. Йыйылышта һин башлап һөйләрһең!» — ти. Ярай, Ғәлимә **йишлар.** Һөйләр ҙә. Ә һуңынан нимә? Саяф, ярай, **ипкинмәгән** Нәгимен председатель итеп үткәрер. Колхоздың **уҙс** урлағандан ҡалған ғына байлығына йәнә, ул, Саяф, хужа ıр, Ә Ғолимәгә нимә? Күп булһа, бер тоҡ картуф, бер тоҡ ını гейәп, Таулыға машина менән оҙатыр. Аҙаҡ нисек йәшәр I · нимә? Луылдың ярты халҡын эш менән тэьмин иткән, икины ıн хаҡы түләгән, «Ҡарттар йорто» аҫкан, мәсет,

мәҙәниәт һарайы һалдырған, урамдарына асфальт түшәткои, пенсионерҙарына ярҙам күрһәткән Мәҙинәгә таш аткандары өсөн Ғәлимә менән Саяфҡа рәхмәт әйтерҙәр микән? Унан һуц Саяфтың һуңғы йылдарҙа күпме малдың башына еткәнс, ҡаланың шикле кешеләре менән бәйләнештә булыуы бер кемгә лә мәғлүм түгел тиһеңме? Ғәлимә Саяфты яклайым тип, үҙенең дә ул эштәргә ҡатнашлығы барлығын асып һалһынмы?

Саяф табыштарынан Ғәлимәгә өлөш сығармаһа ла, ғәмәлдә уларҙың осрашыуҙары Ғәлимә өйөндә үтте... Юк, Саяф! Был юлы һинең йомро башың эшләп еткермәнс. Бисэһе үлгәс тә көттө уны Ғәлимә. Саяф икенсене һайланы. Ғәлимә уға һәр саҡ йомоштарын үтәү өсөн генә кәрәк булды. Запаста тотто ул уны. Ә үҙе Ғәлимәгә кәрәк саҡта бер килеп күҙен дә күрһәтмәне. Әле тағы, үҙенең йомошо төшкәс, ҡыҙыл теленән ҡыркылып килеп ингән. Ғәлимә инде hanhыз ҡара балта түгел. Кем теләй — шул моҡсайына һалып алып китә алмай. Ошо хәлдән файҙаланып, Ғәлимә Саяфтың үҙен юкка сығарасаҡ. һыйыр тулаһа, аттан яман. Ғәлимә һаҡлык менән генә Ҡушкайын төбөнән тапкан өс «Казбек» папиросын ҡульяулығына төрҙө һәм кеҫәһенә һалды: былары Ғәлимәнең һөйләгәндәренең буш түгеллегенә дәлил булыр. Ишетеү менән күреү бер түгел. Күргәндәре сығырынан сығарасаҡ Мәҙинәне! Ауыл ике лагерға бүленәсәк. Биш бажаны бер бүре ашаған һымаҡ, улар бер-береһенең боғаҙына йәбешәсәк!

һөйөү Саярға көтмәгәндә килде. Ҡапыл тыуған яҙ кеүек булды был: ҡыш ине, бөтә ер тун, һалкын ине, ә инде иртән тороуына гөлдәр сэскэ атты, тамсылар тамды, ҡояш яҡтыһынан күҙҙәр ҡамашты. Шулай килде уға һөйөү. Шатлығынан бейек тауҙарға йүгереп менгеһе, ҡанатланып күккә осҡоһо, умырзаялар күпергән битләүҙә онотолоп яткыһы килде. Эйе, малай сағында тәүләп кисергән хистәре яңынан терелде. Ул саҡта үҙен ялмап алған тойғоһонан үҙе ҡурккайны. Зур һөйөүен бәләкәс кенә йөрәгенә һыйҙыра алмайынса, байғош булып ҡалғайны. Әммә шул һөйөүе үк уны уҡкындан алып, күккә сөйҙө. Көнһылыуҙы бер күреүен

үмергә һанап, Мәҙинәгә эшкә килде. Сит илгә сыккан ...тарында әсәһенән кустәнәс, сәләм алып килгән һылтау менән Көнһылыуҙы күрҙе. Әммә хистәрен тәрәнгә йәшерергә ...үр булды, икенсе төрлө булһа, ошо ҡыҫҡа ...күрешеүҙәрҙән дә мәхрүм ҡалырмын, тип ҡурҡты. Яҙмышына ...орп бара күнде. Көнһылыуҙың ирен дә, балаһын да үҙ итте.

...рҙың ғаиләһенә якын кеше булыуы менән ғорурланды. ...нпһылыуҙы ире өйҙә булмаған саҡтарҙа, һуңлап бөткән ...машаларҙан һуң ҡаршы барып алды, сэскәләр бүләк итте, ...грим, сохнә, тағы әлләниндәй ят еҫтәр аңкытып килеп ...ОМккин сибәр Көнһылыуҙың ебәктәй бармаҡтарын усына ...ынганда иҫерткес йылылыҡ тойһа ла бураҙнаны аша ...аманы. Көнһылыуҙан ул бары бер тапкыр ғына: «Һин ...неме?» — тип һорарға баҙнат итте. «От добра добра не ИЩ... •- тип русса яуапланы Көнһылыу. Шунан һуң улар ...шәхси тормошҡа ҡағылышлы хәбәргә бер ҡасан да ...әнеләр. Башкөллө сәнғәт донъяһына сумған Карменда (унын исевдонимы шундай) башка кисерештәргә урын да юк ...шикелле. Шулай ҙа бер, Вена йылғаһы яры буйлап ...йөрөгәндә, Саяр унын беләгенә һаҡ ҡына ҡағылды: «Хәҙер Һинсц, Көнһылыу, уңыш өйөрмәһендә өйөрөлгән сағың. Бихисап контракттар, саҡырыуҙар. Әммә... бейеүсенең ғүмере ...яҙҙар кеүек, шаулап, донъяны ялмап килә лә китә. Аҙаҡ ул бушлыҡты нимә менән тултырырһың?» — тип һорай ҡуйҙы. мин бушлыҡ ҡалдырмаясаҡмын, — тип йылмайҙы Көнһылыу. — Балам бар. Унан һуң... мин бейеү дәрестәре ...һарасаҡмын. Кармендарҙы бит Кармендар тәрбиәләй!» ...әйтте һуҙҙәрен Көнһылыу. Саярға ҡарамайынса, ...текәлгән килеш, үҙ-үҙенә һөйләгән кеүек итеп. Үҙе ...планһа ла Көнһылыуҙы ғазаплар һорауҙарҙы башҡаса ...бирмәҫкә ант итте шунда Саяр. Көнһылыуҙың ҡатын-ҡыҙ ...рак үҙ ырыҫына тап төшөрмәй йәшәүендә үҙенең дә ...мни булғанға ҡыуана ул хәҙер.

Шулай йәшәне ул быйылғы яҙға тиклем. Әлегәсә ...энмәүенә лә, өйөндә үҙен көткән кешеһе, алдына ултыртып һөйәр балаһы булмауға ла үкенмәне. Әммә ...ыйылғы яҙ Санкт-Петербургка барғанында Мәҙинә Кашимовна уның Тандысаға инеп сығыуын үтенде. ...иһм ...ыу гастролдә булғанлыктан, ишекте Тандыса асты. ...ер, хәҙер генә ул уның Тандыса икәнен аңлай. Ә ул

сакта... ишектә Көнһылыу күренде тип уйланы Саяр. Ҡыҫҡа ғына күлдәк, иңбаштарында өйөрөлөп, тулҡын булып төшком сәс бөҙрәләре, өтөп алырҙай ҡап-ҡара күҙҙәре... Әйтерһең до улар араһына ике тиҫтә йыл ятмаған, әйтерһең дә, һөйөү күбәләгенең ҡанаттары тәүге токанған утҡа өтөлмәгән.

— һин?!

— Мин! — Ҡыҙыҡай уньщ муйынына һарылды. — һағындым, Саяр... ағай...

Ике тиҫтәнән ашыу йыл тыйып килгән хистәр быуаһы йырылды. Ташҡын, һәләкәтле көскә эйә тулҡын, ҡеүәтле көс булып Саярҙың зиһенен томаланы.

— Көнһылыу!

— Мин... Тандыса...

Саяр Тандысаны үҙенән һаҡ ҡына айырҙы:

— Ә һин бик нык... апайыңа оҡшағанһың.

— Мин үҫтем шул инде! — Тандыса көлә-көлә эскә үтте. — Хәҙер мине елкәңә ултыртып алып йөрөмәҫһең микән, Саяр... — ул туҡтап ҡалды. — Ағай...

— «Ағай»?!

— Саяр тиергә оялам, э «ағай» тиергә... һин... һеҙ... оло ла түгел. һеҙ оло, мин... сабый түгел... Инде мин һеҙгә... Саяр тип кенә өндәшә алмам!

Икеһе лә баҙаны. Оҙатҡанда Тандыса моңһоу ине. һөйләшмәне, күҙен гел аҫҡа йәшерҙе. Был нәҙекәй һылыу ҡыҙҙа Көнһылыуҙың йәшлеген, уның дауамын күргән Саяр ҡабат, өр-яңынан ғишҡи кисерештәргә бирелдс. Хәҙер ул ҡайтты. Йэйге ялға ҡайтты Таңдыса. Элеккесэ Саярҙың конторaһына:

«Сәләм балдар иле батшаһына!» тип шарылдап килеп инмәне. һыбай ярышырға ла саҡырманы. Осраҡлы рәүештә шишмэ башында осрашҡас, ҡыҙарҙы. Ниндэйҙер сәбәп табып, китеү яғын ҡараны. Ғазаплана хәҙер Саяр, өҙгөләнә. Көнһылыуҙы юғалтыу хәсрәтен ул ошо ҡыҙ менэн баҫҡайны. Ҡулдарында бәүетеп йоҡлатыр, үбеп уятыр ине. Сәскәләр йыйҙылар, һыуҙарҙа йөҙҙөләр — икеһенә лә рәхәт ине! Ир туғандары менән үпкәләшһә: «Саярға әйтәм!» — тип ҡурҡытыр ине Тавдыса. Уйнаһа, «һин минең кейәүем икән ти», — тип уйнатыр ине. Көнһылыуға ике тамсы һыу кеүек оҡшаған сабыйҙың кеме булырға ла риза ине Саяр. Ә хәҙер... ул ни ҡылырға ла белмәй. Шишмәнең аҡҡанын күрмәмеш

ы ып үтеп китер ине — сарсаған. Етмэһә, уның һыуһынын Мндырыр эсмэлек тик ошо шишмәлск икәнен белә. Иксчсенән, Тандыса менән яҡынайыуға булған бәләкәй генә ншлра ла Мәҙинә Хашимовна ғаиләһе тарафынан Саярға Күрһәтелгән изгелеккә ҡаршы ҡылынған яуызлыҡ рәүешендә ҡабул ҡылынасаҡ. Аралағы ике тиҫтә йэш айырмаһын Саяр ло бер ҡасан да аша атлай алмаясаҡ. Бер юл ҡала: ырға. Башты алып, сығып китергә!

Йәшел келәм булып ятҡан арыш баҫыуынан күҙен ала Лмай оҙаҡ ултырҙы Дауыт. Бынан, тау башынан, ул тип-Гиеҙ күренә. Июндең тәүге яртыһында ике-өс һөрә ямғырҙар уып үтте. Бойҙай ҙа, арпа ла, һоло ла матур сыҡты. Ҡыш буйы тиреҫ сығарыу бушҡа китмәне: һабаҡтар ирәбе, тиҙ Калҡынды. Өс йыл элек айырылды ул «Алға»нан. Саяфтың КОЛХОЗ баҫыуы тәжрибә полигоны түгел, тип ҡыҫыуынан КИлеп сыҡты был. Атаһынан ҡалған орлоҡтарҙы ишәйтте Дауыт, камиллаштырҙы. Әсәһе өр-яңы комбайн, «Беларусь» гракторы, йөк машиналары алып биреште. Хэҙер бөтә районға етерлек яҡшы сортлы бойҙай һәм арыш һата ала Дауыт. Күптәр үҙҙәренең өлөшөнә төшкән пай ерҙәрен кушты. Уңыш йыйып алғас, уларға игенләтэ түләй Дауыт. Яғыулыҡ, электр энергияһына түләү, эшселәргә эш хаҡы биреү өсөн ул һыйыр ҙа, ат та үрсетә. Ҡымыҙҙан порошок Һау цехы асты, картуфтан «Чипцы»лар етештереп һата, тауыҡ үрсетә, он тарта, икмәк тә бешерә. Колхоздан айырылып сығыу ваҡытында еңел булманы, әммә эш ййланды. Хәтерендә был аҙымды яһар алдынан әсәһе менән Һөйләшкәйнв.

һин, улым, ситкэ сығып йөрөп кил, — тине ул. — Башҡа ил халҡы ла икмэк ашай бит, улар нисек иген игә икөн?

Кешенән күсереп йәшәп булмай бит, әсәй, — тине Дауыт уңайһыҙланып.

- Нинә, һин үҙең уҡығанда аҙ күсерттеңме?

Мин контрольныйҙарҙы гел «биш»кә эшләнем. Шуға күсерҙеләр.

— Мин дә шуны әйтмәксемен: күсерһәләр ҙә бит отличниктарҙан күсерәләр. Сит илдәрҙә фермср хужалыҡтары ҙур-ҙур илдәрҙе туйҙыра!

Кәңэшен тотто әсәһенең Дауыт, сығып йөрөп килдс. Ундағы тәртипкә хайран ҡалды. Бөтә эш компьютерға күскән. һәр баҫыу түгел, һәр һыйыр тураһында мәғлүмәт унда тупланған.

Оҙаҡ уйланды Дауыт, хужалығын яңынан ҡороу хаҡында якты хыялдар, үҙенә ышаныс, киләсәккә өмөт менән ҡайтты. Үҙен оҙайлы командировкаға ебәргән әсәһенә рәхмәт әйтеп бөтә алманы. Күпме ғүмере түрәләргә теге йәки был хәҡиҡәтте аңлатырға тырышыу, кәрәкмәгән бәхәс менәи үткән! Атаһы селекция юлы менән сығарған арыш менән бойҙай, ғөмүмән, уникаль сорт икән! Уларҙың һабағы эйелмәү генә түгел, аҡһым миҡдары ла юғары. Ҡунаҡ аз ултырыр, күп һынар тигәндәй, сит илдәр буйлап үҙенең уи көнлөк сәйәхәтендә Дауыт күпте күрҙе, күпте төшөндө. Килеп тыуған ҡатмарлы шарттар арҡаһында ер эшенән ситләшмәүенә ҡыуанды. Ул ерҙәге иң боронғо, иң изгс һөнәргә тоғро ҡалды! Барсынбикә өләсәһенә рәхмәт, икмәк тураһындағы тәүге изге орлоҡтарҙы Дауыт күңеленә ул сәсте. Еләктәнме, сейәнәнме ҡайтып килгән саҡтарында улар гел баҫыу ситендә туҡтап ял итер булдылар. Барсынбикә аҡ ҡына төргәгеН сисэ лә Дауыт менән Әбүбәкергә берәр һыныҡ икмәк һона: «Валсығын төшөрмәй генә ашағыҙ», — ти. «Ә нигә, өләсәй? Төшһә нимә була?» «Икмәктең бәләкәй гено валсығы ла һеҙҙән оло, гонаһ була», — тип яуаплай Барсынбикә, ейәндәренә алмаш-тилмәш яратып ҡарап. «Ә һинән? — тип ныҡыша Дауыт. — Валсыҡ һинән оломо, кесеме?» «Оло, — ти өләсәһе. — Икмәк бар тереклектән, бар ниғмәттән оло. Донъяла унан оло һис нэмэ юҡ. Сөнки уны Ергә Аллаһ үҙе төшөргән. Кешегә ризыҡ итеп. Шунан Лахар тигән һабансыны, Ашнан тигән сэсеүсене ебәргән. һөрөрго һәм сәсергә ҡушҡан». «Ә миңә Мәҙинә әсәйем, иң алда моң барлыҡҡа килгән, тип әйтте, — тип һүҙгә ҡушыла сиңерткә сырылдауынан ҡолағын айырып ала алмаған Әбүбәкер. — Хатта һәр планетаның үҙ йыры, үҙ моңо бар тип әйтә Мәҙинә әсәй!» «Мин дә юҡ тимәйем, тик шул мондо ишетеү өсөн тамағындың туҡ булыуы кәрәк бит әле! — ти Барсынбикә. —

Өҙәм күңеленең бер яртыһы икмәк булһа, ИКИНИ яртыһы йыр».

Ксше ғүмерендэ, уйлап ҡараһаң, осраҡлы бер нәмә ла Юҡтыр. Олатаһы Хашимдың бөтмөр, нжадп кеше буЛЫуЫ ла Цоғонто яһаны Дауытҡа. Үҙенең «Куцыр буга»Һын мнлор өсөн ул тэбиғи материалдар йыйҙы. Олатаһы МОНОН йср| ҡылға-тау-таш араһында йөрөргә эүоҫ Дауыт та һәр млмлгл был иимәгэ кэрәк булыр икән, тии ҡарарги иНрлидг Кистәрен олатаһы эргэһендэ ултырып шуларҙы ЙЫШЛЫ, ...ге, йәбештерҙе. Ошо рәүешле күпмс «ракета» ОСОрол ю Күпме самолет. Атаһы уларға әҙер уйынсыгх һатып алмаған барыһын да үҙ ҡулдары менән әтмэләнслор. Эшләп бөтһөлвр Кыуандылар, көнө буйы үҙҙәрен еңеүсс ТИП КИС ИКСП иөрөнөләр. Ултырып, ныҡышмалы эшлорго ӨЙрӘТТе уны конструкторлыҡ. Эштән ҡурҡмағас, армияла уғв КЫЙЫН булманы. Ә инде яраланыу, үлгэн ерҙән терслсү күҙ менән каш араһында булды. Бер хэлдән икенсе хәлгә күсеүҙен йәһәт п.пмкарылыуын аңланы шунда Дауыт. Үлемдом ҡурҡырға Кәрәк түгел икэнен белде ул шунда. Үлем әллэ номо түгел, ә бына тормошондан, эшендән, ғаиләндән, балаларындан Квнәғәт булып йәшәү еңел түгел. Унын өсөн кос түгергв кәрәк. Көсөндө башҡаларға йәллэмэй биргәндә ГСН9 КИЛь һиңә уңыш — иллегә етеп килгәндә шуны аңланы Дауыт.

Ул урынынан торҙо, һэлмәк аҙымдар менән атына карай |Тланы. Тавдысаһы ялға ҡайтҡан, ә унын әле ҡыҙы менән Һвйләшеп ултырғаны ла юҡ. Үҫкән унын ҡыҙы. Ҡаиыл Күргәс, Көнһылыуҙыр тип уйланы хатта. Эйе, уныц КИНЙӘкәүе инде кейәүгә бирерлек булып килә — ғүмер үтмәй ти сен шунан...

— Өләсәй, э ниңә миңә исемде Тандыса тип ҡуштығыҙ? — тип һорағаны хэтерендэ Тандысаның.

Хашим олатайың ҡушты һиңә был исемде, — тине Моҙинә өләсәһе. — Риүәйәт героиняһы исеме. Тандыса кеүек ......рухлы, сәләмәт булһын тигәндер.

Гаңдыса олатаһын бик ярата ине. Хәҙер инде Хашим |.| Таидыса өсөн үҙе легенда. Ғүмерең буйы бер ҡатын-

ҡыҙға, хатта үҙенә түгел, рухына табынып йәшәһенсе олс кеше!

Олатаһын ерләгәндә Тандысаға биш йәштәр самаһы ғына ине. Ул саҡта донъя төҙөлөш, ниндәйҙер үҙгәреш менон ҡайнап тора ине. Йыш бәхәсләштеләр, ашыҡтылар, әйтерһец, поездан йэ караптан тороп ҡалалар. Ағаларының һәр саҡ үҙ тормошо, үҙ шөғөлө булды, эсәһе бушаманы, иртәнән киско саҡлы кухнянан сыҡманы. Мәҙинә өләсәһе лэ һирәк ҡайтым инде өйгә. Ауыҙында Тандыса аңламаған һүҙҙәр булды: баҙар, конкуренция, инвестиция, кредит, инфляция, тағы әлло нәмәләр. Тандыса шул саҡтарҙа үҙен ояһынан яңылыш колап төшкән турғай балаһына оҡшата ине: оса ла белмәй, э үҙе, бахыр, осорға, үҙ йүнен үҙе күрергә мәжбүр. Осорға өйрәнмәһә, бесәйгэ ем буласаҡ. Уларҙың ғаиләһендә Саярҙың пәйҙә булыуы ҡоткарҙы уны яңғыҙлыҡтан. Оҙон буйлы, ҡупшы кейенгэн был кешегә ул тиҙ өйрәнде, эҫенде.

— Саяр! — тип ҡысҡырып булды уны күреп ҡалһа. — Әйҙэ уйнайыҡ!

— Әйҙә, — булыр ине яуап. — Ә нимә уйнайбыҙ?

— Бүре менән бэрәстәр. һин бүре икән ти, ә мин кэзә.

Саяр уға бер ваҡытта ла юҡ тимэне, ҡуй тимәне. Тандыса уны ат итеп атланып та, егеп тэ йөрөнө — ни ҡыланһа ла, Саяр күндәм риза булды. Ситкә китһә, бүләктэр, күстәнәстәр алып ҡайтты, сирләһә, эргәһенән китмәне. Саяр уның сәс бөҙрәләрен дә, кара күҙҙәрен дэ яратты. Айырым бер наҙ, һаҡсыллыҡ менән ҡағыла ине уларға. Тандыса уға бер кемгә лә һөйләмәҫ серҙәрен дә һөйләр булды.

Эйе, Саяр менэн етәкләшеп үҫте ул. Дэресте лэ бергә әҙерлэнеләр. Үҙе күп йөрөгәс, Тандысаға ул сит илдәр, ят ғөрөф-ғәҙәттәр хаҡында һөйләне. Әммә бер көндө, йоҡола сағында, Тандысаның ҡолағына әсәһе менән өләсәһенең һөйләшкәне салынды:

— Саярҙы әйтәм, кеше балаһына кеше был тиклем эҫенер икэн, ҡәйнәм. Командировканан ҡайтып килешләй, төн тип тормай, индереп сыҡты күстәнәсен...

— Эйе, — Мәҙинә өләсәһенең көрһөнгәне ишетелде. — Ахыры Саяр күңелен Тавдысаға баҫты. Көнһылыуҙы бик ныҡ яраткан булған икән... Мин шуны уйлап йөрөйөм, килен: беҙҙең Тандысаға ла ситкә китеп уҡырға ваҡыт түгелме?

— Ситкэ?! Тандыса бит... сабый ғына!

Ун алтынсы йәш! Ҡыҙ бала өсөн был сабый йәше түгел, килен! Үҙең һуң килен булып төшкәнендә нисәлә Иисц?

Ун етслә. Аһ! Ысын шулай икән!

Ҡайның мәрхүмде осратҡанымда миңә лә шул сама ЦНС, о инде әсәйем мине ун алтыла ҡулына алған.

Аһ, аһ! Бынағайыш... Атаһы ни тиер икән, ҡәйнәм?!

— Ни тиһен? һөнәргә өйрәтергә ваҡыт Тандысаны. Кенһылыуҙа йәшәр. Дилара бар. Иҡтисад колледжына инер. Млтематикаһы көслө бит, уҡыһын.

- Флорида килендәрҙә йәшәһә лә була инде...

Унда ла мөмкин. Әбүбэкер был турала үткән күрсшкәндә үк һүҙ ҡуҙғатҡайны.

Кәйнәм, — әсәһенең тауышы уңайһыҙланыбыраҡ ы кгы. — Тандысабыҙ бит... ҡыҙ ҡорона инде!

- Шөкөр, шөкөр. һәр нэмэнең үҙ миҙгелендә килгәне •рыу.

Гандыса уларҙың хәбәрен зиһененә һендереп, ни ҙә булһа уйларға, һығымта яһарға ла өлгөрмәне — ул инде Санкт-I ктербург ҡалаһының сауҙа-иҡтисад техникумының талибәһе ине. Киткәндә хатта Саяр менән хушлашып та өлгөрмәне, бөтәһе лә йәшен тиҙлегендә килеп сыҡты. Аҙаҡ, Питерҙа (аярҙы күргәс, ҡосағына һыйынғас, ни тиклем һағыныуын аңланы Тандыса! Саяр этәрмәһә, ул ошо ҡосаҡта мәңгегә ка гырға, йэ эреп юҡҡа сығырға эҙер ине.

Шунда ул ни өсөн төндә ирендәренең «Саяр» тип бышылдауын, болоҡһоуҙарының, юҡһыныуҙарының сәбәбен аңланы. Һағыныу менән бергә оялыу килде. Хәҙер ул Саярға күтәрелеп ҡарарға ла ҡыймай. Ә үҙе ҡайҙа барһа ла Саярҙы Күҙәтә. Эҙләй. Саярҙы ул эскән сынаяғынан да көнләшә: уға уның ирендәре ҡағылған. Шулай уҡ мөхәббәт килде микән Гандысаға?! Юҡ, юҡ! Булыуы мөмкин түгел! Саяр бит... ағай Квше! Ағай кеше йәр була тиме ни?!

Өлэсәй, инергә яраймы?

— Әйҙә, әйҙә! Бәй, Руслан, үҙем күтәреләйем янына, тип Гора инем! — Мәҙинә дивандан ҡалҡынды, ейәненә ҡаршы

атланы. — Эшләйһең дә эшләйһең! Арып китмәйһеңме ул, ә?!

— Юҡ, мин ял итеп тә алам. Бөгөн күлгә барҙыҡ һыу инергә, балыҡ тоттоҡ.

— Таңдыса... барҙымы?

— Барҙы! Ул хәтәр шәп йөҙә икән! Өләсәй, бына нимә: мин Таңдысаның портретын яһай башлағайным. Милли кейем кейҙергем килә! «Милли кейемдәге ҡыҙ» тип атар инем. Таңдыса шундай колоритлы! Иҫ китмәле портрет буласаҡ!

— Мин ҡарап төштөм инде. Ә милли кейемде... табырмын. Тик һин унан ниңәлер ғашиҡ ҡыҙ һүрәте яһай башлағанһың.

— Эйе, — Русландың ҡарашында аптырау сағылды. — Ул ысынлап та ғашиҡ. Быны бары һуҡыр ғына күрмәҫ. Шуға ла эшләйем мин уның һүрәтен. Уның ошо ғашиҡ миҙгелен тотоп алғым килгәйне! Тимәк, уңыш бар!

— Ул бит... сабый ғына... — Мәҙинә эҫергәнеп тәҙрәне асты. — Аңлайһыңмы: сабый ул.

— Уға тиҙҙән ун ете йәш, өләсәй!

— Ах! Ярай... Тағы ниҙәр эшләмәксеһең? Ҙур рам әҙерләгәнһең... — Мәҙинә төҫө, бар булмышы әсәһенә — Флоридаға — оҡшаған ейәненә иркәләп ҡараны. Эсенән үҙе: «Әлдә был никахҡа фатиха биргәнмен. Бына ниндәй матур бала тыуҙы», — тип уйлап алды. Мәҙинәгә ейәненең ҡала тип атлығып тормауы, ергә ерегергә, тәбиғәткә яҡыныраҡ булырға тырышыуы ла оҡшай. Башҡорт, рус, инглиз телдәрен яҡшы белә. Уйсан ғына түгел, фекерле лә.

— Мин, өләсәй, «Ер ҡото» тигән картина ла яҙмаҡсымын. Васнецовтың «Три богатыря» тибындағы эш. Минең һүрәттә өс иң хөрмәтле башҡорт урын алырға тейеш!

— Ҙур эш уйлағанһың. Кемдәр инде улар?

— Кемдәрме? Уртала — Салауат. Әйткәндәй, өләсәй, һинеңсә кем ул Салауат? Башҡорттар яуға бик күп тапҡырҙар күтәрелгән бит, ә иң ҙурлағандары — ул, Салауат Юлаев.

— Ул хаҡта мин дә күп уйландым, улым. Эйе, Салауат етәкләгән яуға тиклем дә күтәрелгән халыҡ, унан һуң да... Эйе, восстание енелеү менән бөткән, күп ҡорбандар алып киткән. Мәгәр шул көрәш булмаһа, халыҡта көрәшсе рухы ҡалмаҫ ине. Халыҡ азатлыҡ, үҙ ирке өсөн көрәштән туҡтаһа,

Һоро массаға әүерелә. Салауат тоҡандырған көрәш рухы тере булған өсөн дә беҙ тәүгеләрҙән булып автономия яуланыҡ, азаҡ, бик ҡатмарлы шарттарҙа, республикаға үҙаллылыҡ ...лыҡ. Салауат үҙе — старшина улы. Бай, билдәле шәхес ба...һы. Халҡын яратыу, уға хеҙмәт итергә тырышыу тойғоһо ...пм үҙ мәнфәғәтенән аша атлатҡан!. Халыҡ уны үҙенең бөйөк ...ы итеп таныған, пәйғәмбәр дәрәжәһенә күтәргән. Ә ҡалған ике фигуран кемдәр була?

Улармы? — Руслан уйсан ҡарашын өҫтәлдәге сәскә ишләмәһенә төбәне. — Ошо букеттан иң матур сәскә һайлап ...ыу еңел булмаған кеүек...

Ул арала ишектә Нәфисәнең башы күренде:

— Һине бер ҡарсыҡ һорайсы, ҡәйнәм. Ашығыс йомошом бар, тисе...

— Хәҙер төшәм! — Мәҙинә ейәненең бөҙрәкәй башынан һыйпаны. — Һинең ул картинаны яҙырыңа мин һис шикләнмәйем, улым!

Мәҙинә үҙенә килгән ҡатынды ҡапыл ғына танымаһы.

— Һеҙ... минәме?

- Һиңә... — Таяҡҡа таянған, шешенгән, йыйырсыҡтар баҫҡан йөҙлө ҡатын уға ҡарап йылмайғандай итте. — Әллә ысынлап та танымайһың инде, әхирәт?

- Ғәлимә! — Мәҙинә ҡаушаны. Күрешергә була ҡул һуҙырға итте, ләкин, Ғәлимә ҡымшанмай ҙа торғас, ул уйынан кире ҡайтты. — Иҫәнме, Ғәлимә, иҫәнме. Ниндәй ...ҙәр ташланы? — Мәҙинә ағас аҫтына, күләгәгә ымланы. — Ултырайыҡ.

Ғәлимә эскәмйәнең бер осона ултырғас, Мәҙинәгә ҡарамай ғына:

- Ҙур өй һалып сыҡҡанһың, — тине.

- Эйе. Хәҙер бындай өйҙәрҙе күптәр һала инде.

Теге өйөндә ҡарттарға биргән икәнһең. — Ғәлимәнең үҙенә һынсыл ҡараш ташлағанын тойҙо Мәҙинә.

Эйе, унда ҡарттар йәшәй. Атайымдың теләген үтәнем уларға бирҙем.

Эй зама-ан... Донъя баш түбән килде! Ә, Мәҙинә? ...ә... яңылышаммы?

Мәҙинә өндәшмәне. Ул инде күптән бер кем менән дә бәхәсләшмәй. Ғәлимә кеүек «ата коммунистар»ҙы ла күп күрҙе. Берәүҙәре партбилеттарын тәүгеләрҙән һалды. Саяф кеүек, болғансыҡ һыуҙан балыҡ тотоу эшенә кереште; икенселәре, Ленин идеяларына тоғролоғон маяҡ итеп, оппозицияға баҫты, һәләмә кейемдәр кейеп, тейешһеҙгә рәнйетелгән «ҡорбан» образын алды. Ғәлимә, күрәһең, ошо икенсе төркөмгә инә: төҫ-башы, килеш-килбәте шуны һөйләп тора. Мәҙинә сәғәтенә ҡараны:

— Ғәфү итегеҙ: биш минуттан миңә кешеләр килә. Таулыға асфальт юл һалдыра башланым. Подрядчиктар бына-бына килеп етергә тейеш, Ғәлимә ханым. Йомошоғоҙ... миндәме?

— Асфальт! ? Юл?! һинең ... хәлеңдән киләме шул?

Мәҙинә урынынан торҙо:

— Таулыға юл һалыу... Ниңә хәлемдән килмәһен? Мин бит Айға күпер төҙөргә йыйынмайым.

— Ала-ай... Ә һине Саяф ... бәреп төшөрөргә итә!

— Бәреп? Ҡайҙан!

— Белмәйем, — Ғәлимә, тешһеҙ урты менән сәйнәгәндәге кеүек хәрәкәт яһай-яһай, Мәҙинәгә ҡараны. — Йыйылышта ул һинә ҡаршы сығыш яһарға итә, Мәҙинә!

— Рәхим итеп яһаһын!... — Мәҙинә, күҙҙәрен ҡыҫа төшөп, әңгәмәсеһенә төбәлеберәк ҡараны. — Ә һин, Ғәлимә, ниңә әле мине иҫкәртергә булып киттең?

— Мин һиңә, Мәҙинә, бер ҡасан да дошман булманым! Бына! — Ғәлимә ҡалтыранған ҡулдары менән кеҫәһенән бысраҡ ҡулъяулыҡҡа төрөлгән ниҙелер һөйрәп сығарҙы. — Бына!

— Папиростар?!

— Эйе! Мин уларҙы Ҡушҡайын төбөнән тапҡайным! «Казбек»! Уны ауылда тик Саяф тарта! Ул етте иревдең башына! Ҡайындарҙың береһен ул бысты!

Мәҙинә, һеңгәҙәп, эскәмйәгә кире ултырҙы: ошо папиростар кеүек иҫкергән, ваҡыт ашаған, туҙған Ғәлимәгә унан ни кәрәк икән? Бер талай өндәшмәй ултырғандан һуң Мәҙинә шул уйын һорау итеп бирҙе:

— Минән һиңә ни кәрәк, Ғәлимә?

— Миңә? — Ғәлимә уға яҡыная төштө. — Ҡанат аҫтына ал мине, эхирәт! Яңғыҙым мин! Сәмәрәм үлде! Эргәңә ал,

карттар йортона! Мин унда булдым! Унда шундай... Йылы! Слсколәр, гөлдәр, раузалар! Минең... барыр ерем юҡ...

Мәҙинә үҙенең аяғына йығылырға әҙер Ғәлимәнән **ситкәрәк** китергә, әле ишеткән-күргәнен тиҙерәк онпторға Пуламы, арткараҡ сигенде, күҙ алдына ҡыйырһытылған **өләсәһе,** мөгөҙөнә һәнәк менән.сәнселгән Бөйрәкәйе, аммиак лшап елендәре шешеп, эстәре тауҙай күпкән һыйырҙары **килде,** Камалетдинов ҡәбере эргәһендә ошо ҡатын ауыҙынан сыҡкан бысраҡ **һүҙҙәр** ҡолағына ишетелде. Мәҙинәнең кешегә үслошкәне лә, этлек ҡылғаны ла, үткәндә хәтерләп, кенә **кыуғаны** ла юҡ. Әммә изге хәтирәләр һаҡлаған өйөндә ул был оҙомдең бысраҡ йәнен бер ҡасан да күрергә теләмәҫ ине.

— Рауза еҫен еҫкәгеһе килгән кеше дегәнәк сәсмәй, **Ғәлимә!**

– Ғәфү ит... Һөйләшәйек... Аңлашайыҡ!

Мәҙинә туктаманы. Мәскәүҙә уңышлы кеше булырға **өйрәнеү** тренингтарының береһендә ул тере **ҡуҙҙар** түшәлгән плты метр оҙонлоғондағы «юл»ды яланаяҡ атлап үтте. Шул **сакта** Мәҙинә үҙендә иҫ китмәле еңеллек, **үҙен ҡыҫып** торған **барлык** ҡоршау-бығауҙарҙан мәңгегә ҡотолоу хисен кисерҙе. **Әле** лә, бысраҡ ҡулъяулыҡ тотҡан ҡулын һуҙған Ғәлимәне ҡалдырып алға ынтылғанында, ул шул саҡтағы еңеллекте **тойҙо.** Әлдә ул Ғәлимә, Саяф, Ихсанбай ишеләрҙе бер-береһен һатырға, бысратырға, берсә изге, берсә иблис ҡиофәте алырға мәжбүр иткән ваҡ-төйәктән, бахырлыҡтан **һәм** байғошлоҡтан һәр саҡ өҫтөн булып ҡала алды. Әшәкелек \ı а йәбешмәне.

һабантуйҙы ошо аҙнаның шәмбе көнөнән ҡалмай уткәрергә булды Мәҙинә. Дауыт менән дә кәңәшләшкәс, һәр кем үҙенә тәғәйен әҙерлек эшенә тотондо: сабышҡа сығыр лпар билдәләнде, һабаларҙа ҡымыҙ күперҙе, табаларҙа бауырһаҡ-сәксәк шыжланы, тәкәләр һимертеүгә ҡуйылды. **Бүләктәрҙе** лә гел яҡшынан әҙерләне: ат сабышында еңгәнгә тай, көрәштә ал бирмәгәнгә — һыуыткыс, йыр, ҡурай **буйынса** беренсе урынды алғанға — Анталияға путевка. **Һабантуй** эүәлге ише бер көн бармаясаҡ: халыҡ донъяһын **онотоп,** яйлап, өс көн, өс төн байрам итһен. Юғиһә, көрәште

ҡараһаң, ат сабышын күҙәтеп булмай, сабыш ҡараһаң, йыр бәйгеһен күрмәй ҡалаһың. Был өс ярыш һәр көндөң үҙәк сараһы буласаҡ. Ошонда «Иң матур йорт»ҡа, «Иң татыу ғаилә», «Иң тәүфиҡле бала» конкурсына йомғаҡ яһаласаҡ. Башҡа уйындар, ярыштар — бөтәһе лә үҙ сираты менән яйлап үтергә тейеш. Күп алдырҙы бүлэкте Мәҙинә. Бер кем дә буш ҡул ҡайтмаһын. Осанан шыуғаны, аяҡтан атлағаны — һәммәһе ҡатнашһын. Үҙен күрһәтһен, башҡаларҙы ҡараһын.

Үҙенең ейәндәре лә әҙерләнә һабантуйға. Салауат менән Зәки ат сабышында ҡатнашырға итә. Улар эргәһендә фармандарын бирә-бирә Хөсәйен өйөрөлә. Ҡарттар йортонда уны Ҡорбашы тип йөрөтәләр. Баҙары юғары Хөсәйендең. Әле лә, үҙен берәйһе саҡырһа:

— Хөсәйен псим нада! — тип шыта. Салауат менән Зәкигә аттарҙы өйөрҙән үҙе барып килтереште — ул яңылышмай, тик был егеттәрҙең ҡайһыныһы еңер? Урал, моғайын, көрәшкә әҙерләнәлер: уйсан, күп һөйләшмәй. Спорт залынан сыҡмай шөғөлләнә. Тандыса ғына өндәшмәй. Өй тирәләй гөлдәр ултырта, эсәһенә булыша. Бер йылмая, бер моңая. Эйе, уның ейәнсәре йөрәк майҡайҙарын һыҙҙырып ҡыҙ ҡорона ингән...

Көнһылыуҙы, Күкһылыуҙы, Әбүбәкерҙе, йәнә Флориданы ғаиләләре менән саҡырҙы Мәҙинә. Бәлки, килә алырҙар. Күкһылыу инде күптән Италияла йәшәй. Альбинаһы ла үҙенең юлынан китте — йырсыға уҡый. Ире — музыкант. Мәликә хәҙер Флоридалар менән йәшәй. Ул, моғайын, килер. Русланды ла һағынғандыр — тәүге ейәне бит. Килһә, һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәҫ инде: әҙме иҫтәлектәр бәйләй уны Мәҙинә менән, әҙме кисерештәр.

Өс көн дауамында барасаҡ йыйын үткәреү — уйын ЭШ түгел. Әле юл төҙөүселәр янында булырға, әле цехтар буйлаи йүгерергә тура килһә лә, Мәҙинәнең башында гел һабантуй. Енеүселәр өсөн фейерверк та эшләйәсәк. Уларға арналған тамаша һабантуйҙың һуңғы төнөндә ун биш минут буйы күк көмбәҙен аллы-гөллө төҫ менән яҡтыртып торасаҡ. Был йәштәрҙең артабанғы тормошо өсөн кәрәк: йөрәктәренә еҫсү рухы инеп алһа, ул инде бер ҡасан да ташлап китмәйәсәк, пЛ алға, гел яҡтыға, гел бейеклеккә һәм бөйөклөккә әйҙәйәсәк!

I олимәнең нисек килһә, шулай юҡ булыуы аптыратты аяфты. Хәйер, еңел холоҡло ҡатындарға ышаныс юҡ та бит инде ул. Әгәр Ғәлимәгә ҡарата ихтирамы булһа, теге саҡ, Катыны үлгәс, Мәҙинә баш тартҡас, уға тәкдим яһаған булыр ине. Иәш ҡатын йәш тал менән бер, нисек теләйһең, шулай б...... булыр, тип йәшкә өйләнгән булғайны Саяф. Эйе, ире ни кушһа, шуны эшләй бисәһе, мәгәр кәңәшкә ярарлыҡ гүгел. Нимә һораһаң да: «Үҙең беләһең, атаһы», — ти. Ә (аяфтың белгәненән белмәгән сағы күберәк. Кәңәш һорарға ураған һайын күршенә йүгереп булмай. Эйе, аяманы уны кэмыш, йәлләмәне. Әле бына йыйылышҡа барырға әҙерләнә. Ү ҙе ийыына, ә үҙен армияһыҙ генерал кеүек хис итә. Королде Свитаһы яһай, тиҙәр. Саяф яңғыҙ. Ғәлимә күҙен дә күрһәтмәне. Карап бата башлаһа, ҡомаҡтар ташлап ҡаса, тиҙәр бит. Күрәһең, «Алға»ның батыуы ошо. Партбилетын күтәреп һуккан мәлендә лә әле ул колхоздың киләсәгенә Ышаиа ине. Мендәрҙәң түгел миллиондарҙың өмөтөнә, ышанысына әйләнгән колхоз-совхоздар шулай уҡ бөтөүгә тусар ителдеме? Эргәһендә үҙен ярты һүҙҙән аңлар, таяныс булыр кеше булмағас, Саяф Шәйхетдинов Мәҙинә һәм Дауытка әйтер өсөн әҙерләгән һүҙҙәренең яртыһын да әйтә алмаҫ микән инде? Етмәһә, иртәгә — һабантуй. Уны үткәреү сып ымдарын тулыһынса Мәҙинә үҙ өҫтөнә алған. Таулыға юл гөҙөтә башланы. Шашты был бисә! Юлһыҙлыҡ арҡаһында, әлбиттә, колхоз ныҡ йонсоно. Бәкәлгә гел һуҡты. Әммә ул «Мәҙинә» генә йырып сыға торған эш түгел: башҡаларҙа яклау габырмы? Әлбиттә, Сяаф үҙенең сығышында был башланғысты хуплар. Киреһен һөйләп торһа, халыҡ уның Нәгименән йөҙ борасаҡ. Эйе, Мәҙинә Сяаф өсөн ҡаты сәтләүек булып сыҡты. Күпме тырышһа ла, яра алманы. Бәлки, уның тархандар тоҡомо Барсынбикәнең ейәнсәре булыуы дөрөҫтөр ҙә: Себергә һөрөлгән хәлле кешеләрҙең гы уі а н яҡтарына ҡайтҡан балалары ла барыбер ярлы йәшәмәне бит. Илден умыртҡа һөйәге борон-борондан урта КМле крәҫтиән менән ныҡ булған. Улар, күрәһең, кроҫтиәнден башы эшләгән, булдыҡлы өлөшөн тәшкил иткән.

)пс, ул хаҡта ла уйлағаны бар Сяафтың. Ихсанбай ҙа, бер Мартся булһа ла, көслө кеше ине. һыйыр екһә екте,

һөрөлмәй, сәселмәй яткан бер ҡарыш ер булманы, орлоҡһоҙ ҙа интекмәнеләр, һуғыш мәлендә астан да ҡырылманылар. Аңлауҙар килә лә бит ул Саяфҡа — һуң инде. Енелеүен танырға уның көсө етмәй. Заманында Мәҙинәгә үлеп ғашиҡ булмаһа һәм уның өйөнән ҡыуылып сыҡмаһа, бәлки Саяф та әҙерәк хаталаныр ине, кәмһетелгән ир тойғоларына өҫкә сығырға юл ҡуймаҫ ине.

һабантуй хәстәре, эске күтәрелеш, байрам кәйефе менән һуғарылған халыҡ клубҡа дәррәү йыйылды. һәр ваҡыттағыса президиум һайланылар. Яҙмыштан үҙгәрештәр көткән халыҡ сабыр ғына урындарына ултырышты. Мәҙинә лә, Дауыт та килде йыйылышҡа. Саяф, әлбиттә, саҡырманы. Мәҙинәнең үҙенең килгеһе килде: элекке колхозсыларҙың яртыһы тиерлек уларҙа эшләй. Бер үк һыуҙы эсәләр, бер ерҙә үҫкән икмәк менән туҡланалар.

Бер яҡ ситкә ултырған Мәҙинәгә халыҡ ҡарап-ҡарап ҡуйҙы, Саяф уны өҫкә, сәхнәгә саҡырыр, тип уйланылар, шикелле. Саяф ҡырын ғына күҙ һалды, мәгәр күрмәмешкә һалышты.

Ғәҙәттәгесә, йыйылыш Саяф Шәйхетдиновтың отчет докладынан башланды. Күпме ер һөрөлгән, күпме бойҙай, арыш, һоло, арпа, борсаҡ сәселгән, — һанап сыҡты. һауын һыйырҙар гурты тотоу колхозға ауырға тура килгәс, эре малды тик ит өсөн аҫрауға күсеүҙәрен һөйләне. Өс мең баштан алты йөҙгә тороп ҡалған эре мөгөҙлө малдың кәмеү сәбәптәрено анализ яһап торманы. Халыҡ докладты торараштай ҡатып тыңланы. «Элекке тәртип, — тип уйланы Мэҙинә. — Яҙмышына үҙе хужа булмаған ҡол позаһы!» Шунан Саяф оҫта ғына итеп һүҙҙе икенсе яҡҡа борҙо. «Иптәштәр, — тине ул, тулҡынланыуын йәшерә алмайынса, — колхоздың элеккс күрһәткестәргә өлгәшә алмауы, хөкүмәткә муйындан бурысҡа батыуы бер кемгә лә сер түгел. һуңғы йылдарҙа фермср хужалыҡтары барлыҡҡа килеү бәкәлгә һуҡты! Улар үҙҙәре генә айырылып сыҡманы, ерҙәрен бүлдереп алды. Шулай итеп, бер колхоз эсендә удел кенәзлектәр барлыҡҡа килде. Көстәр тарҡалды, колхозға ышаныс китә башланы. Күберәк эш хакы түләгән булып, халыҡтың эшлекле, алдынғы өлөшөн үҙ яғыщ

ауҙарырға маташтылар. Итәк аҫтынан ут йөрөтөп, кешеләрҙең колхозға ышанысын емереп, иманын ҡаҡшаттылар! Был эштә бигерәк тэ Мәҙинә Ирназарова һәм уның улы Дауыт Ирназаров әүҙемлек күрһәтте. «Мәҙинә» исемле фсрмср хужалығы төҙөп алып, улар халыҡ араһында илдең умыртҡа һнйәген тәшкил иткән колхоз ҡоролошона ҡаршы ҡороҡкослоҡ эшс алып бара! Улар хатта минең, үҙенең илле йылдан ашыу умерен ошо колхоз өсөн биргән кешенең, балаһын тартып алып, күп аҡса менән әүрәтеп, үҙҙәренә ҡол яһарға оялманьшар! Иптәштәр! һиҙгерлекте юғалтмағыҙ. Ниндәй ҙә булһа аҙым яһарҙан алда, уның ахыры ни менән бөтөрөн уйлап ҡарағыҙ. Колхоз беҙҙе үҫтерҙе, әҙәм итте — эскән ҡойоғоҙға гөкөрмәгеҙ. Эйе, бөгөн беҙгә ауыр. Был һынауҙы беҙ бирҙәм, гатыу булһаҡ ҡына үтэ алабыҙ. Дошман нисек кенә көслө, мәкерле булмаһын, сәләмәт фекерле кешеләр күп. Үҙемә а ғмашҡа миндә лә ул бар — Нәғим. Колхозды артабан етәкләр етәксе ролендә мин уны күрәм. Атанан күргән — уҡ юнған. Нәғим минең йөҙөмә лә, ҡыҙыл партизан олатаһы Сәйфулла рухына ла тап төшөрмәҫ! Мәмәйгә, тэтәйгә алданып, иманығыҙҙы — колхозды һатмағыҙ! Минән теләк тә, васыят та шул. Ә Саярҙан мин һеҙҙең алдығыҙҙа баш тартам — ул бөгөндән минең улым түгел!»

Саяфтың сығышына ҡул сапманылар. Халыҡ нисек ҡатып ултырһа, шулай ултырыуын белде. Иртәгә — һабантуй. Халыҡтың байрамса кәйефе ныҡ ҡырылды. Мәңге өндәшмәй йөшөп булмай. Саяф һөйләгәндәрҙэ етмеш, улай ғына түгел иеңәр йыл ҡоллоҡта йәшэгән халыҡтың ғәйебе юҡ.

Мәҙинә күтәрелде. Өсәр мең доллар түләп, уңыш фпшнгтарын үтте, сәйәхәт ҡылды, илдәр, ҡитғалар тормошо менән танышты. Ә был кешеләр? Нисәмә йылдар эш хаҡы алмай эшләйҙәр һәм шуға ризалар. Мәҙинә һүҙ һорап ГОрмайынса сәхнәгә үтте. Саяф ниҙер әйтергә, туҡтатырға Гелвп ауыҙын асҡан һайын, районда килгән вәкил туҡтатты:

Һөйләһен! Рәхим итегеҙ, Мәҙинә Хашимовна!

Хөрмәтле ауылдаштар! Ҡасандыр, бик боронғо заманд арҙа, ерҙә йәшәгән барлыҡ әҙәм аллалар кеүек булған: көслө, аҡыллы, матур һәм камил. Сөнки кешене Аллаһ тәғәлә үҙенә оҡшаш итеп яратҡан! Мәгәр, миллион йылдар аралығында КСШС төрлө сәбәптәр менән деградацияға дусар ителгән. Бик һирок бәндәләренә генә асҡан үҙенең йөҙөн Илаһи — беҙ уларҙы

пәйғәмбәрҙәр тибеҙ. Лэкин ваҡыт бөтәһен дә үҙгәртә! Беҙ хәҙер, әгәр теләһэк, бөтәбеҙ ҙә бай ҙа, матур ҙа, көслө лә була алырыбыҙҙы аңланыгк! Бөтә донъя үҙгәргәндә, иктисад, белем, мәҙәниәт өлкәһендә уңышҡа ирешкәндә, беҙ генә башын ҡомға тыккан страус рәүешендә тороп ҡала алмайбыҙ. Эйе, бөгөн мин егермеләп предприятиеның етэксеһемен. Бөгөн миндә етештерелгән йыһаз иң бай, иң нәзәкәтле офистарҙы биҙәй! Ә ҡасан ғына эле үҙебеҙ Финляндияға ағас һата һәм унан ун ете тапҡыр артыҡ түләп йыһаз һатып ала инек! Эйе, бөгөн «Мәҙинә» бал ҡорто продукцияһынан ғына илленән ашыу төрҙәге косметика, дарыу, биоөҫтәмәләр етештерә! Минең фермаларҙа бөгөн иң әҙерлекле белгестәр эшләй, улар барыһы ла көслө, азат, бай күңелле, уңышҡа өлгәшкән кешеләр! Тирәкле халҡының да күп өлөшө эшләй миндә. Уларҙың берәй ваҡыт тормоштарынан зарланғанын ишеткәнегеҙ булдымы? Тирәклелә һуғылған келәмдәр, бында баҫылған быймалар, бында эшкәртелгән тире — донъяның күп илдәренә тарала һәм юғары сифатлы тип баһалана.

«Мәҙинә» яһаған ҡымыҙҙан порошокты сит илдәрҙә ингаляция аппараттарында файҙаланалар. Үҙебеҙҙең баһаны белергә ваҡыт, иптәштәр!

Ә инде мин штатҡа кешене бик һайлап алам икән һәм уны ҙурайтмайым икән — был социалистик ҡоролоштоц ғына түгел, капитализмдың да төп ҡануны. Американағы иц яҡшы менеджер исемен алған «Дженерал электрик»тың етәксеһе Джек Уилч идарала эшләгәндәр һанын ун алтынан икәүгә ҡалдырғас һәм ике йөҙҙән ашыу бюрократты эштэи ҡыуғас, бөтэ Америка «аһ» итә. Әммә ошо саранан һуң ғына «Дженерал электрик», иркен һулыш алып, тауға йылдам үрләп китә! Миңә ҡалһа, Саяф Сәйфуллович, сығыш яһарға ентекле әҙерләнгән. Ләкин ул колхоз тормошон көрсөкко терәгән бөтә сәбәптәрҙе лә асып бирә алманы. Уйлам ҡарағыҙ: беҙ алтмыш кеше менән йырып сыға алмаған эштс Дауыт бөгөн һигеҙ кеше менән башҡара. Экономисы ла, зоотехнигы ла, агрономы ла, бухгалтеры ла — компьютер. Шунда бөтәһе лә бар! Икенсе сәбәп — урлашыу. Колхоз бөтһә, урлашырға урын ҡалмай. Әгәр Шәйхетдиновтан һуңҡы йылдарҙа кэмегән малдың һәр башына отчет һорай башлаһаң, яуапты ул бер ҡайҙан да таба алмаясаҡ. Һәм уны һораусы ла юҡ — бысраҡҡа күмәкләп батҡанһығыҙ.

Эйе, мин бөгөн пландар ҡорам! Хыялланам, янам! Мин бөгөн Тирәкленән Таулыға тиклем асфальт һалдыра башланым. Ауыл урамдарына асфальт йәйҙергәйнем, халыҡ |_урндан ҡотолдо, иртәнге нурҙар таҙа быялалар аша һәр вйгэ гөшэ хэҙер. Газ үткәртеүгә лә ҙур өлөш индерҙем, һыу иоҙер шулай уҡ торбалар аша килэ. Мәсет төҙөттөм, яңы спорт комплексы менән бергә Мәҙәниәт һарайы һалдырып нтам. Ошо изге эштәр миңә көс бирә. Аллаһ тәғәләнең Ерҙә беҙҙекенән — Кешенекенән — башҡа ҡулдары юҡ, әммә беҙ иашлаған һәр изге эшкә унан фатиха бар! Иманым камил — юл төҙөләсәк. Бөгөн бөтә донъя Интернетҡа тоташҡанда ҙур [онъяға алып сығыр, ҙур иҡтисад менән тоташтырыр юлды ярты сәғәт урынына дүрт сэғəттә үтеү — алйотлоҡ. Колхоздын йәшәүенә бер ҡаршылығым да юҡ. Кеше табыныр аллаһын һәм барыр юлын үҙе һайлай. Тик ул юл бәхет юлы, мул тормош һәм Матурлыҡ юлы булһын. Мин, хөрмәтле ауылдаштар, барығыҙҙы ла иртәгә һабантуйға саҡырам. һабантуй өс көн, өс төн барасаҡ. Байрам итэйек,бер-бсребеҙгә йөрәгебеҙҙе, күңелебеҙҙе асайыҡ, һөйләшәйек, юцошләшәйек. Ерҙә тормош беҙгә тиклем дә барған, беҙ киткәс тә дауам итер. Беҙҙең бурыс — үҙебеҙ йәшәгән араны матур һәм файҙалы ҡылыу. Итәғәт ҡылып, мине тыңлауығыҙ өсөн рәхмәт! Инде миңә һәм улыма китергә рөхсәт итегеҙ: куиаҡтар килеү өҫтөндә — ҡаршы алырға кәрәк. Ғәфү итегеҙ, ппы бер нәмәне әйтергә онота яҙғанмын, — Мәҙинә Саяфҡа карап алды. — Һеҙ Саяф Сэйфуллович, Саярҙан баш тарта икәнһегеҙ. Ә мин уны бөгөндән үҙ ғаиләмә алам: ейәнсәрем I аңдысаны биреп, кейәү итәм!

Залда әлегә тиклем тып-тын ултырған халыҡ гөрлотеп кул саба башланы. Сәхнәнән төшөп килгән әсәһенә Дауыт Мғүрә баҫып, ҡул һуҙҙы, ҡултыҡлап алды. Клубтан улар шул КИЛеш сығып киттелэр.

Өлэсэй!

Һамдыҡҡа эйелгән Мәҙинә ейәнсәренең бәхеттән өҙөлөр ККҠӘ етеп үҙенә өндәшеүенә билен турайтты. Тандысаның үҙен косаҡлап шашып үбергә тотоноуына йыуаш ҡына Шрыулашты.

— Һай, ҡыҙыҡай! Өндәшмәй йөрөүең арҡаһында егеттән ҡолаҡ ҡаға яҙҙың бит! Башын алып сығып китергә йөрөй ине бит Саяр!

— Рәхмәт һиңә, өләсәй! Саяр бөгөн эргәмә үҙе килде! «Мин һинең менән Ер сигенә сығып китергә ризамын» тине. Атайым «йәшһең» тип орошор тигәйнем...

— Атайың Саярҙы бик хөрмәт итә. Унан һуң, һин Питерға киткәс, бик эсе боша ине. Ә Саярҙы беҙ беләбеҙ. Олатайың менән минең ара ла егерме йәш ине. Матур йәшәнек, мөхәббәтле булдыҡ. Күрәһең, беҙҙең заттың бәхетс шулайҙыр. Тәүге асҡан ишекте фәрештәләр аса — бәхетле бул инде, балам!..

— Өләсәй, ә мин һабантуйҙа йырларға булдым.

— Һин?! Йырларға?!

— Эйе, өләс! Бәлки, Анталияға путевка миңә эләгер? Әгәр шулай булһа, Саярҙы минең менән ебәрерһеңме? өләсәй?

—Ебәрермен... Туй сәйәхәте шул булыр. Тик... никахығыҙҙы теркәргә йәшең етмәгән, тиерҙәр микән?

— Уның ҡарауы, тойғоларымдың йәше күккә ашҡан!

— Эй бала, — Мәҙинә йәшкәҙәгән күҙҙәрен һөрттө. — Ошоларҙы һиңә кейҙермәк булып торам.

— Күлдәк, камзул, ҡыҙыл итек, ҡашмау, сулпылар. Ҡайһылай матур улар, өләсәй!

— Кей әле, кей, былар беҙҙең нәҫелдең туй кейемс. Барсынбикә өләсәңә улар Күкһыу өләсәһенән ҡалған. Унам һуң Күкһылыу—Гөлбаныу өләсәң кейгән уларҙы. Тик был кейемдә әсәйемә кейәү ҡуйынына инергә насип булманы. Заман шундай ине. Заман болғаныштарында аҙашҡан улар мөхәббәте. Аҙаҡ мин кейҙем. Олатайың Әптеләхәт, мине тәү күргәндә мин ошо кейемдәрҙә кейгәйнем. Туйымда мии ошоларҙы кейеп ултырҙым. Камзулдың һәр тәңкәһенә күҙ нурҙарым менән «яратам» тип яҙып сыҡтым тигәймс олатайың... Шунан алып ул һандыҡ төбөндә һаҡланды. Саф ҡытай ебәгенән тегелгән был күлдәк. Уҡаларына алтым ялатылған, тәңкәләр — көмөштән, сулпы ҡаштары бриллиант. Ә итеге ниндәй! Ҡайҙарҙа ғына йөрөмәнем — мәгәр был дәрәжәлә сифатлы күндән тегелгән аяҡ **кейемв** күрмәнем.

- Ай, өләсәй! Мин быларҙы кейһәм, Саяр танымаҫ та **инде!**

Килде минең яныма Саяр. Һөйләшеп ултырҙыҡ. Был **Квҙерле** оло бүләккә мин тиң түгелмен, Мәҙинә Хашимовна! **Гандыса** бит — йондоҙ, ә мин бары ерҙәге бер таш ҡына, **гине.**

— Һин ни тинең, өләс?!

Яҡшылап ҡараһаң, ерҙәге ташта ла бихисап йондоҙ) имай, тик улар балҡыһын өсөн ҡояш нурының булыуы шарт **гинем.** Ә мөхәббәт — ул үҙе Ҡояш! Ҡояш булмаһа, алтын да ıоаи таштан бер нәмәһе менән айырылмаҫ ине.

— Өләсәй, һин аҡыл эйәһе!

- Ай алла! Собханалла! — Мәҙинә башкөллө кейенеп алған Тавдысанан ҡарашын айыра алмайынса ситкәрэк ıитайҙы. — Йә, Хоҙай! Һин хур ҡыҙы, Тандыса!

- Ошолар һиңә һыйҙымы икән, өләс?!

Мәҙинәнең күҙҙәренә йәш эркелде. Эй ваҡыт! Хакимдар! **Кыуып** етеп тә, тотоп та булмай. Хәҙер һәм ошонда ғына **бәхетле** була ала кеше. Үткән дә, киләсәк тә бәндә карамағында түгелдәр...

Күкһылыу менән Көнһылыуҙың ғаиләләре генә килә алмаһа ла, ҡунаҡтар тирә-яҡтан күп йыйылды. Флорида **менән** Әбүбәкер ҙә, Мәликә лә килделәр. Ҡунаҡтар өсөн **Мәҙинә** өс тирмә ҡорҙортто. Унан тыш һәр фермер, атаһы урынына колхоз председателе булып һайланған Нәғим дә **Гирмә** ултырттылар. Русландың һүрәттәренән, ялан **ЦМрттарына** ярашлы итеп, күргәҙмә лә ойошторҙо Мәҙинә. **Һабантуй** башланғансы халыҡ шунда ҡайнаны. Таныш ер-**Ьыуҙы,** бергә аралашып йәшәгән кешеләрҙе киндерҙә күреү итеп бөтөрә алмаҫлыҡ тәьҫораттар уятты. Халыҡ үҙенә, үҙе йәшәгән ергә ситтән, тарих күҙлегенән ҡарағандай булды. Үҙенең бөйөклөгөн һәм мәңгелеген танып тетрәнде.

Ксйсмдәр сағыу, барыһы ла тырышҡан. Мәҙинә гәзит аша **Мрәшселәргә,** йырсыларға, ҡурайсыларға һабантуйға **Мкырып** мөрәжәғәт иткәйне. Күп килгәндәр. Хатта Башҡортостандан ситтә яткан өлкәләрҙән дә килгәндәр. Бил ҙәрен биштән быуғандар, көрәшкә әҙерләнгәндәр.

Туғандар, ҡәрҙәштәр осраша. Һөйләшәләр, көлөшәләр, ҡосаҡлашалар, илашалар. Күңелдәрҙең өлгөргән ҡымыҙҙай тулышҡан сағы. Мәҙинэ күҙҙәре менән Тандысаны эҙләне. Ана ул Саяр эргәһендә тора. Етэкләшкәндәр. Саярҙың йөҙөндә — нур, эйтерһең, йөҙ ҡояш бергә йыйылған. «О, мөхәббәттең илаһи көсө! Бахырҙы батыр, батырҙы Илаһи дәрәжәһенә күтәргән ҡеүәте! Бөгөн ул үҙе Илаһи. Ә Тандыса — йондоҙ. Сулпан йондоҙо. Уларҙың бөгөнгө рәүешен күрер өсөн генә донъяға тыуырлыҡ!»

Бер-ике минуттан башланасаҡ һабантуй. Музыканттар аккорд алғас, Мәҙинә мәшһүр «Урал» йырын башлаясаҡ. Уның аҡ ебәк кейгән һынының ике яғына теҙелгән егерме ҡурайсы оҙатыуында башҡарасаҡ йыры күркәм һәм тантаналы байрамдың башланыуын хәбәр итәсәк. Мәҙинәнең елән салғыйҙары, көмөш ука йүгергән сәстәре менән уйнаған ел унан йомшаҡ ҡына итеп һорағандай, һынау алғандай:

— Ҡайҙа үҫтең, һылыу?
— Уралда!
— Ни исемле илдә?
— Башҡортостанда!
— Ергә ниңә килдең?
— Данларға!
— Ниҙе?
— Илемде, күгемде, еремде һәм халҡымды.
— Көсөң ҡайҙан?
— Изге ғәмәлдәрҙән.

Ул арала ҡурай моңо ағылды. Бал ҡорто күселәй геүләгән халыҡ ҡапыл тынды. Мәҙинә үҙенең быуаттар төпкөлөнән ишетелгәндәй күкрәк тауышы менән йырҙарҙың йыры — халҡының гимны «Урал»ды башланы.

Мәскәү—Учалы—Сибай—Өфө,
1992—2004 йылдар.

БЕР СЫРАҒЫ ҠЫРҠҠА ТОРОРЛОҠ

Гаңсулпан Ғарипова үҙенең тәүге йыйынтығы, тәүге \икойәләре менән үк башҡорт прозаһына тамам өлгөргән, үҙен-сөлекле, эҙләнеүсән, үҙ-үҙенә нык талапсан һүҙ оҫтаһы, күркәм фекерләү маһиры килеүен вәғәҙә иткәйне. Яҙыусы үҙ маҡсатына иреште. Уның «Мөнрәй-мөнрәй килә Бөйрәкәй», «Башҡынайым калды йәш кенә», «һандуғастың һайрар ғүмеркәйе», «Йондоҙҙар гөндә тоҡана» һәм «Ҡояшлы бурандар» кеүек биш өлөштән трған, дөйөм исем менән «Бөйрәкәй» тип аталған романы башкорт прозаһында яңы һүҙ, яңы күренеш булды.

«Бөйрәкәй» романы ҙур тарихи ваҡиғаларҙы, шулар менән бергә үрелеп, уларҙың уртаһында ҡайнаған халыҡ яҙмышын, то-гош милләттең рухи донъяһын, кешеләрҙең үҙ бәхете, үҙ оулмышы өсөн тормош стихиялары менән көрәшен сағылды-рмусы, жанр ҡыҫандарына һыйып бөтмәүсе ҙур әҫәр. Шуға күрә уны роман-эпопея тип атау кәрәктер.

Әҫәрҙә егерменсе быуаттың милләт иңенә төшкән бола-Сюлғаныштары, ижтимағи үҙгәрештәре, үҙгәртеп ҡороуҙары, калыкты иҙеү, ҡыйырһытыу ығы-зығылары Сибәғәт, Фәүзиә, I олбаныу, Ихсанбай, Сәбилә, Әптелхәт, Мәҙинэ һәм башҡа ı геройҙарҙың яҙмыштары аша һүрәтләнә. Роман-эпопеялағы кеше олошөнә төшкән һәр яҙмыш картинаһы Таңсулпан тарафынан олпат, мәшһүр һүҙ оҫтаһына хас стиль менән һынландырыла. И ҙмыш сыуалыштарын укый бараһың, шунда ук күңелең менән күро бараһың. Уй, тойғоға һәм башҡа рухи кимәлдәргә нык гәьҫир итерлек телмәр сараларына һоҡланмау мөмкин түгел. I ҫәрҙә халыҡ телмәренең тәбиғи яңғырашы, моңо, стилистик үҙенсәлеге берсә инрәп, берсә һыктап, берсә йырлап торған һымаҡ. Был һүҙ асылын, мәғәнә биҙәктәрен, нескәлеген барлыҡ күңеле менән тойған яҙыусының ғына ҡулынан киләләр, моғайын. Бының сәбәптәре, минеңсә, әҙибәнең тормош, яҙмыш, Ношөйеш төшөнсәләрен, улар менән бәйле хәл-ваҡиғаларҙы ҡатын-ҡыҙ йөрәге менән кисерә, баһалай алыу оҫталығына Кайтып ҡалалыр.

«Бөйрәкәй» романы быға тиклемге күҙ өйрәнгән, күнел Куиеккән әҫәрҙәргә һис тә оҡшамаған. Әҙибә әҫәрендәге образдарҙын холоҡ-фиғелен «бынығы шулай, тегеһе тегеләй» гип төртөп күрһәтмәй, ә һүрәтләй, тасуирлай. Был да яҙыусы

стиленең үҙенсәлегелер, яңылығылыр. Әҫәрҙә һәр кемдең йәшәйеше, күңел донъяһы, рухи булмышы тетрэндергес. Хәл-ваҡиғалар ҙа һүрәтләү, күркәм образлылыҡты сағылдырыу саралары менән үҫтерелеп бирелә. Кешеләрҙең сеймәлгән яҙмыштарында башҡорт халҡының, донъяһынын төрлө тарихи, социаль һәм сәйәси шарттарҙа йәшәү рәүешенең хәсрәт даръяһы ята. Ул даръяның кисеүҙәре юҡ. һәр кем уны үҙ аҡылы, кешелек сифат-һыпаты, рухи ҡеҙрәте менән генә йырып сыға алалыр.

Таңсулпан Ғарипованың әҫәрҙәрен уҡығанда хис-тойғола ла ниндәйҙер бер айырымлыҡ, үҙенсәлек һиҙелә. Сәнғәт әҫәренең кеше күңеленә тәьҫир итеү ҡеүәһе лә ана шундалыр, минеңсә: көслө тэьҫораттар нисектер икенсе, күркәм һәм ул ғәҙәти кисерештәрҙән айырыла, яҙыусы фантазияһының нықышмалы эшмәкәрлеге, һөҙөмтәһе, күркәмлеге тетрәндерә, ярһыта, рухи камиллыкка кимәлдәргә ҡөҙрәт өҫтәй.

Тормош – ҙур арауыҡтағы хәл-ваҡиға. Тормошта күпме яҙмыштар, ғүмер юлдары киҫешә. Яҙмыштар ҙа кешенең күңел донъяһына мөнәсәбәтле. Һәр кемдең йәшәү рәүешенә тормош үҙ төҙәтмәләрен индерә. «Бөйрәкәй»ҙә һүрәтләнгән сюжет та, геройҙарҙың яҙмыштарынан көс алып, ҙурая, киңәйә, ҡатмарлана бара. Биш өлөштән торған ҙур эпик ҡоласлы романда әҫәрҙең йөкмәткеһен асыуҙа һәр характер, һәр образ үҙ өлөшөн индерә, һәр кемдең тәҡдиренә яҙғаны, авторҙың һүрәтләү оҫталығы, образлы фекерләүҙең нәфис көс-ҡеүәте менән үрелеп, уҡыусыны һәр саҡ көсөргәнештә тота. һәр геройҙың күргәне һәм күрәһеләре автор тарафынан бик етди уйланылған, әҫәр туҡымаһына үҙенсәлекле төҫ, биҙәк, ғәм һәм мәғәнә бирерлск йөкмәткегә үрелгән. һәр образ, әҫәр нағышында хикмәтле бер йондоҙ булып, эстетик зауыҡ сығанағына әүерелгән.

Башҡорт халҡының йәшәү рәүеше, ғөрөф-ғәҙәте, юрау-һынамыштары әҫәрҙең йөкмәткеһен, әһәмиәтен, мәғәнәһен күтәрә. Улар ниндәйҙер кимәлдә хәл-ваҡиғаларҙы һүрәтләүҙо, һынландырыуҙа өҫтәлмә һүрәтләү сараһы булараҡ ҡулланыла. Йола канундары әҫәрҙәге образдарҙың рухи донъяһын, рухи кимәлдәрен асыуҙа, характерҙарҙың асылын кәүҙәләндереүҙо үҙенсәлекле мәҙәни биҙәк, этномэҙәниәттең сағыу бер һыҙаты. Әҙибә-психолог булараҡ, Таңсулпан Ғарипова образдар сылбыры аша халкыбыҙҙың билдәле бер тарихи миҙгелендәге тотош донъяһын асырға, хикәйәләргә тырыша. Быңдай осраҡю яҙыусы халкыбыҙҙың боронғо тәрбиәүи (этнопедагогика)

. вр**аларына** ла етди иғтибар бирә. Этно-мәҙәни берәмектәрҙә халкыбыҙҙың донъяға ҡарашы, аңы, аҡылы, мифологияһы **гупланған.** Былдай аҫыл һәм аҡыл гәүһәрҙәре әҙәби оҫорзең халыҡсанлығын, мәғәнәүи тәрәнлеген дә күрһэтэ.

«Бөйрәкәй»ҙә художестволы фексрҙең яңы бейеклекко **үҫтерелеше** яҙыусының психологияһынан килә. Ҡатын-ҡыҙ, **бигерәк** тә башҡорт ҡатын-ҡыҙының психологияһында Йәлхизәләр, Ғилмиязалар, Бәндәбикәләр, Маянһылыуҙар рухиәте **ҫта.** Ана шуның өсөн дэ уйһыуҙарҙан, уйылдарҙан, ятыуҙарҙан **килгән** тәрән яҙмыштарҙы тағатыу ҡәҙимге йәшәп килгән **яҙыусылыҡ** ҡанундарына ярашлы мөмкин дә түгел. Бында соцреализм төшөнсәһен кәүҙәләндереүсе революция, колхозла-**шыу,** репрессия, һуғыш кеүек яҙмышыбыҙға тағылған ығы-зығы-ылыҡ ябай тел менән ҡабартылмай. Әҫәрҙәге геройҙарҙың яҙмышы донъяуи хәл-ваҡиғаларға мөнэсәбәте, баһаһы аша һүрәтләнә, гелмәрҙең бай һүрәтләү саралары менән хикәйә ителә.

«Бөйрәкәй» романы - башҡорт халҡының яҙмыш даръяһы, **ı взап** менән хәсрәт араһындағы йәшәйеш эпопеяһы. Ул ябай роман, беҙ өйрәнгән трилогия түгел. Заман һулышы менән **йәнләндерелгән** яңы замандың эпосы тип ҡарарға мөмкиндер

«Ҡатын-ҡыҙҙыщ сырағы ҡырҡ, береһе янмаһа, береһе яныр» ш халыҡ аҡылы. Таңсулпан әҙибәнең әҫәрҙәрен нисә сыраҡ **балкыталыр?** Әммә шуныһына инанам: уның бер сырағының **гктыһы** ҡыркка торорлоҡ. Үҙгәртеп ҡороу осоро әҙәбиәтенең **гвцын** «Бөйрәкәй» тигән роман-эпопеяһы уятты. Китап уҡыусыларҙа нәфис әҙәбиәткә икенсе ҡараш, бөтөнләй икенсе **гиптағы** фекер йөрөтөү кеүәһе (ижади фекерләү һәләте) уянды. **Бының** менән Таңсулпан тигән әҙибә бәхетле, уның йөҙөндә әҙәбиәтебеҙ, әҙәбиәтебеҙ йөҙөндә халкыбыҙ бәхетле. Әҙәбиәтебеҙ **үҫешендә** яңы һынылыш яһауҙа уның «Бөйрәкәй»е ҙур бер аҙым **булды.** Бөгөнгө ауыр заманда, зиһендәр буталғанда, кешелеклек **Гешөнсәһе** сайралғанда, өмөтһеҙлөк хөкөм һөргәндә уның төплө мәғәнәле, тәрән йөкмәткеле романы күҙҙәребеҙҙе асты, күңелебеҙгә рухи көс өҫтәне, өмөт орлоҡтары сәсте.

Рафаэль Аҙнағолов,
филология фәндәре кандидаты

ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Беренсе өлөш

Мөңрәй-мөңрәй килә Бөйрәкәй 5

Икенсе өлөш

Башҡынайым ҡалды йәш кенә 157

Өсөнсө өлөш

Һандуғастың һайрар ғүмеркәйе 283

Дүртенсе өлөш

Йондоҙҙар төндә тоҡана 437

Бишенсе өлөш

Ҡояшлы бурандар 600

Литературно-художественное издание

Гарипова Тансулпан Хизбулловна

БУРЕНУШКА

Роман-эпопея

(на башкирском языке)

Редакция мөдире *Ф. Исхакова*
Мөхәррире *Ә. Әсәҙуллина*
Рәссамы һәм биҙәлеш мөхәррире *А. Мөхтәруллин*
Техник мөхәррире *З. Сыңғыҙова*
Корректорҙар *Л. Мирғәлиева, Ә. Илекәева*
Компьютерҙа эшкәртеүсе *Ю. Әбсәләмов*

Нэшр. лиц. №04380; 26.03.01. Йыйылырға бирелде 25.12.03.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 07.06.04. Формат 84x108 1/32. Ҡағыҙ форматы. Офсет ҡағыҙы.
Таймс гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма таб. 40.32. Шартлы буяу отт. 40,74.
Иҫәп-баҫма таб. 37,76. Тиражы 2000. Заказ № Д 471.

Башҡортостан Республикаһынын «Башҡортостан "Китап" нэшриәте» дәүләт унитар предприятиеһы.
450001. Өфө, Левченко урамы, 4а.

«Башҡортостан» республика дәүләт нэшриәте типографияһында баҫылды.
450079. Өфө. Октябрьҙен 50 йыллығы урамы, 13.